ЗӘЙНӘБ БИИШЕВА

# ЕМЕШ





ЗӘЙНӘБ БИИШЕВА

# ЕМЕШ

(Яктыға)

РОМАН

*(Ҡайтанан эшләнгән баҫмаһы)*

ӨФӨ. БАШҠОРТОСТАН
КИТАП НӘШРИӘТЕ, 1977 й.

С (Башк)
Б 43

**Биишева Зәйнәб**

Б 43 Емеш. Өфө. Башҡортостан китап нәшриәте, 1977 йыл.
560 бит.

«Емеш» — Зәйнәб Биишеваның меңәрләгән уҡыусылар күңелендә тәрән урын алған «Яҡтыға» трилогияһының һуңғы китабы. Автор романда йәш Совет власе дошмандарына ҡаршы көрәштә яңы шәхестең формалашыуын, халыҡтың ауыр тормошон социалистик нигеҙҙә үҙгәртеп ҡороуҙы тасуирлай.

Б $\frac{70303 - 329}{М\ 121(03) - 77}$ 61 — 77 С (Башк)

© Башҡортостан китап нәшриәте, 1977.

# БЕРЕНСЕ БҮЛЕК

...Юҡ, түбән ҡалмаç был йән:
Яралмыштан ғали булған ул.

Ғ. Туҡай

## I

Тыумыштан уҡ үҙ иркенә тапшырылған Емеш бик иртә уйсан, күҙәтеүсән, һынаусан булып үçте. Уның өсөн үҙен әйләндереп алған барлыҡ тәбиғәт күренештәре лә, кешеләр ҙә, хайуандар, ҡош-ҡорттар, бөжәктәр барыһы ла оло бер йомаҡ, белеп, асып бөткөһөҙ тылсымлы сер. Ҡескәй ҡыҙ күпме баш ватһа, ул сер шул хәтле ҡатмарлыраҡ, аңлайышһыҙыраҡ, хатта хәүефлерәк була бара һымаҡ. Бигерәк тә кешеләр, уларҙың тормошо, ҡылған эштәре, тыуым һәм үлем хәлдәре үҙҙәренең мәғәнәһеҙлеге һәм рәхимһеҙлеге менән аптырата уны. Әгәр инде ул үҙе хаҡында уйлана башлаһа, төптө аҙап ҡала: кем ул? Ни өсөн тыуған, ниңә йәшәй? Ниндәй сәбәп, ниндәй хәжәтлек был оло донъяға, үҙенең камиллеге менән дә, кеше яҙмышына ҡарата булған йәнһеҙ тәкәбберлеге менән дә иç китәргес был тормошҡа, саң бөртөгөндәй итеп сығарып ырғытҡан икән уны?! Мең аҙап менән йәшәү, үлеү, унан теге донъяла тағы ла мәңгелек аҙапҡа тарыныу өсөнмө икән ни?! Ҡемгә, ниңә кәрәге булған быйдай ғәҙелһеҙлектең?!

Емеш тереләр хаҡында ғына түгел, үҙе күреп белгән, тәрән хөрмәт иткән, инде күбеһе донъя ҡуйған кешеләр хаҡында уйларға ла ярата. Уларҙың яҡты йөҙөн, яҡшы һүҙен, саф, изге күңелен ҡыуанып хәтерләй. Ә инде үҙе яратҡан был һәйбәт кешеләрҙең теге донъяла ла бындағы кеүек мең аҙапҡа дусар булыу ихтималын күҙ алдына килтерһә, уның йөрәге тетрәп китә, уның күңелен әсе өмөтһөҙлөк солғап ала: «Ни эшләргә һуң, былай булғас, ҡалай итергә?!»

Киләсәк... Ҡайҙалыр бик алыҫтан, күкһел томан артынан саҡ-саҡ ҡына күҙгә сағылып ятҡан алыҫ, ят... Шуға ла ахыры харап мауыҡтырғыс киләсәк... Дөрөҫ, ул да аңлайышһыҙ ҙа, бер ни ҙә вәғәҙә лә итмәй... Бәлки, шул билдәһеҙлеге, аңлайышһыҙлығы менән кескәй ҡыҙҙың күңелен бик йыш биләйҙер ҙә әле ул... Эйе, киләсәк — уның өсөн өмөт, бәхет сығанағы. Ул хаҡта уйлаһа, Емеш үҙен-бер сиреккә үҫеп киткәндәй тоя. Сәскәле, ҡояшлы яҙ һымаҡ тойола уға киләсәк... Был уның иң бәхетле хыялы. Ә бына үҙенең бөгөнгө хәле хаҡында уйларға һис кенә лә яратмай. Сөнки ул кеше тигән оло йән эйәһенә хас тормош түгел бит! Аслыҡ, яланғаслыҡ, яңғыҙлыҡ кеүек йөрәк өшөткөс ауырлыҡтарҙан, тағы ниндәйҙер бәхетһеҙлек өҫтәлеү, үҙеңдең кәрәкһеҙлегеңде, йәшәүеңдең мәғәнәһеҙлеген тойоу аҙаптарынан тора бит уның бөгөнгөһө... Былар хаҡында уйлау — йәшәмәү тигән һүҙ булыр ине. Эйе, эйе, йәшәмәү, рәхимһеҙ яҙмыш алдында теҙ сүгеү, ауырыу һәм үлемгә тантана итергә юл ҡуйыу булыр ине. Юҡ, Емеш быны теләмәй. Хәҙер инде, балиғ булғас, теге донъяла ожмах ҡошо ғына булып йәшәү мөмкинлегенән мәхрүм була торған йәшкә еткәс, ул инде үҙ өлөшөнә төшкән яҙмыш емешен сиктән тыш әсе, хатта ағыулы булһа ла, аҙағына хәтле татып ҡарарға тейеш. Кем белә, ул емештең бәлки татлы булыуы ла бар ҙабаһа!.. Йәшәргә һәм өмөт итергә кәрәк. «Шайтан ғына өмөттән мәхрүм» ти торғайны бит Ҡарасәс инәй... Емеш бит — кеше. Ә кеше өмөтлө булырға тейеш. Өмөтһөҙ тормош ул — тамуҡ! Унан килеп бар булған өмөт тә бушҡа сығып тормайҙыр әле?! Бойомға ашҡандары ла булалыр!.. Тик уйың-аҡылыңды биләгән яҡты өмөтөң, уға ирештерерҙәй ҡайнар дәртең, талмаҫ тырышлығың ғына кәрәктер, моғайын... Бына уның һауығырмын тигән өмөтө үтәлде ләбаһа. Ә бит уны йәшәмәҫ, был ауырыуҙан ҡотола алмаҫ, тип уйлағайнылар: «Тапма, уның өҫтәүенә һары ауырыуы... Етмәһә, аслыҡ... Шундай арыҡ, кескәй ҡыҙ еңеп сығыр хәлдәрме ни был?!» тигән өмөтһөҙ һүҙҙәрҙе ул бит һаташыу аралаш бик йыш ишетә ине. Тик ул бер үҙе генә быға ышанмай ҙа, быны теләмәй ҙә ине... Үҙенең һауығыуына саҡ ҡына ла шикләнмәне Емеш. Үҙенә тағы — ваҡытһыҙ үлеү тигән ҡот осҡос ғәҙелһеҙлекте лә кисерергә тура килер, тип башына ла килтерә алманы. Эйе, ул йәшәргә теләне. Һәм шуға ышанды. Шулай итеп, тапма ауырыуы

ла китте, үлем дә сигенде. Ә урамда яҙ! Былтыр, тап ошондай ҡояшлы яҙғы бер иртәлә, ул башы ауырып, бөтә тәне һыныгып килеп уянғайны. Арҡа буйҙары сымырҙап өшөп тә тора ине шикелле... Шулай ҙа ул көндө Емеш ҡыҙҙар менән Оҙонғол буйына ҡуянтубыҡ ҡаҙып ашарға китте. Аҙаҡ көскә-көскә генә өйгә ҡайтып етте... Унан бирле һәр көнө айға торош итер ауыр йыл үтте... Эйе, дарья шикелле осһоҙ-сикһеҙ, аждаһа шикелле рәхимһеҙ йот йыл... Хәҙер бына тағы яҙ... Алланың бирмеш ерен тагы яҙ ҡояшы йылыта... Тик бына Таиба ҡоҙағыйы ғына Емеште һаман сығармай ыҙалай: «Сабыр ит. Ерҙе ҡояш нығыраҡ ҡыҙҙырһын, яҙғы ташҡын ер йөҙөнән сүпсарҙы, сир-сырхауҙы йыуып алып китһен әле», ти. Нисек уның, шундай яҡшы күңелле кешенең, һүҙен тыңламайһың. Йөрәгең һайрар ҡош булып урманға атлыҡһа ла, сабыр итәһең шул... Етмәһә, Таиба ҡоҙағыйы тағы үҙенең тылсымлы һандығын асты. Унан, улының китаптары араһынан, Емеш быға са бер ҡасан да уҡымаған хикмәтле китап алып бирҙе. «Әбүғәлисина» тип атала ул. Шуны ташлап Емеш нисек тышҡа сығып китһен? Боронго бик ҙур аҡыл эйәһе Әбүғәлисинаның бер саҡ хикмәтле китаптар тултырылған серле мәмерйәлә йыл әйләнәһенә ғилем өйрәнеп ятыуы, унан сыҡҡас, гипноз ярҙамында иҫ киткес мөғжизәләр эшләүе, яуыз хандарҙың, мәкерле вәзирҙәрҙең йөҙҙәрен асып, иҙелгән-кәмһетелгәнгә бәлә-ҡазанан ҡотолорға ярҙам итеүе, кешеләргә күп яҡшылыҡтар эшләгәне өсөн үҙен эҙәрләгән яуыз йәндәрҙән теләһә ҡош булып күккә осоп, теләһә балыҡҡа әйләнеп диңгеҙгә ташланып ҡотола алыуы кеүек гәжәп мажаралы хәлдәр хаҡында яҙылғайны был китап.

— Эй-й, ҡарасы инде! Кеше ҡайһылай ҙа көслө була ала икән дәһә!.. — тип ҡыуана-һоҡлана уҡый уны Емеш. Аслыҡтан, сирҙән талған тәненә ниндәйҙер тылсымлы көс-хәл өҫтәлгәндәй, үҙендә лә Әбүғәлисина шикелле барлыҡ яуызлыҡты, боҙоҡлоҡто еңерҙәй, кешеләрҙе бәхетле, шат йәшәтерҙәй яҡшылыҡтар эшләрлек көс барлығын тойоп, ярһып-ашҡынып уҡый. Ҡайһы саҡта ул хатта үҙенең бары тик кескәй генә етем ҡыҙ икәнен онотоп, тиҙерәк үҫеп етеү, Әбүғәлисина шикелле гипнотизер булыу хаҡында ысынлап хыялланырға керешеп китә. Кисә Таиба әбей уға Закирҙең һандығынан тағы бер йоҡа ғына китап алып бирҙе. Ҡағыҙҙары һарғайып, биттәре төшкөләп бөткән был китап та әмәлгә ҡаршы тап

ана шул гипноз көсөнә эйә булырға өйрәткәйне. Хатта нисә төрлө һәм ниндәй күнегеүҙәр эшләр өсөн дәрестәр ҙә бирелгәйне. Иң мөһиме, Емеш, уны уҡығас, гипнотизер булыр өсөн кескәй саҡтан уҡ үҙеңдә ҡаты ихтыяр, көслө холоҡ тәрбиәләргә кәрәклеген белде: «Тырыш, егәрле, гәҙел, тоғро, баҫалҡы һәм яҡшы күңелле булырға... Кешеләргә һәр саҡ яҡшылыҡ ҡына теләргә... Бөтә кешене лә, дуҫты ла, дошманды ла ғәфү итә белергә...»— тип ҡат-ҡат уйлап, яйлап уҡыны ул был китапты ла.

«Бөтә кешегә лә яҡшылыҡ теләргә?! — тип ниндәйҙер ярһыу ҡыуаныс менән яҡтырып ултырҙы. — Бөтә кешегә лә... Бер кемде лә айырмайынса!..» Һәм тап ошо ерҙә уның был ярһыу ҡыуанысы юҡә күмере шикелле ҡапыл һүрелеп тә ҡуйҙы: «Мөмкинме икән улай? — тигән шик килде уның күңеленә. — Мин улай була алырмынмы? Асыуҙы һәр саҡ тотоп тыйып торорға? Бөтә кешене лә берҙәй ғәфү итергә?! Белмәйем... Ана бит, былтыр көҙ Моратшаны боҙло һыу менән ҡойондорҙом даһа! Башынан аяғына хәтле лыс һыу булып, күҙҙәрен асыулы уйнатып, әле булһа ҡаршымда баҫып тора һымаҡ бит ул! Эйе, асыуҙы тыйып тотоп тороу, моғайын, иң ауырылыр. Бигерәк тә донъяла Моратша кеүек, уның атаһы менән ҡартатаһы кеүек яман кешеләр күп саҡта... Былай булғас, Емеш үҙенең үгәй әсәһе Сәрбиямалға ҡарата ла күңелендә асыу һаҡламаҫҡа тейеш була лабаһа! Үҙеңдең ҡәҙерле атайыңа көн күрһәтмәгән, уның үлеменә шул хәтле оятһыҙ рәүештә кинәнгән яуыз кешене нисек ғәфү итмәк кәрәк?!.

Ғәҙел, тоғро, эшсән һәм яҡшы күңелле булыу — кешемен тигән һәр бер кешегә хас ҡылыҡтар инде улар. Емеш шундай ул. Шулай булып ҡалыр. Ҡаны, йәне менән шундай ул. Ул башҡаса була алмай ҙа... Ә бына асыуҙы һәр саҡ тотоп, тыйып тороу, яҡшы менән яманды берҙәй ғәфү итеүҙе ул, моғайын, бер ҡасан да булдыра алмаҫ... Шулай булғас, күрәһең, уға гипнотизер булырға ла тура килмәҫ инде... Ә уның был тылсымлы көскә эйә булғыһы бик тә килә ине бит... Көслө, үҙ ихтыярлы, яугир кеше булырга... Кешеләргә тик яҡшылыҡ, бәхет, шатлыҡ яулашып ҡына йәшәргә... Эй-й... бәлки, мин бында ҡайһы бер ишараларҙы аңлап етмәйемдер: яманлыҡҡа ҡарата йөрәгеңдә һүрелмәҫ үс йөрөтмәй тороп, яҡшылыҡты яҡлап буламы икән ни?!»

Емеш ауыр һораулы ҡарашын кескәй генә тоноҡ тәҙрә күҙгөнәге аша алыҫҡа төбәп тынып ҡалды. Ә унда, алыҫта, алтын ҡояш, зәңгәр күк, йәшел тау балҡып ята ине. «Яҙ етте... Яҙ!.. — тип талпынып ҡуйҙы хәҙер ҡыҙыҡай. — Ауыл ҡот осорғос төштән уянды. Дейеү батшалар менән алышып Ҡаф тауҙары артында йөрөгән Алпамыша батыр ҡыуанып иленә ҡайтты. Тик бында, ауылында, һылыу-һылыу ҡыҙҙарҙы, гонаһһыҙ сабыйҙарҙы, батыр, тоғро уҙамандарҙы берәм-берәм йотоп ятҡан «Аслыҡ» тигән ун ике башлы аждаһаға осраны... Батырҙың йөрәгендә бик ҡаты үс-асыу урғып ташып китте. Шунан ул булат ҡылысын ҡындан һурып алды ла аждаһаның ун ике ауыҙлы ҡомһоҙ башын бер һелтәүҙә ҡыйып төшөрҙө... Үҙенең ауылдаштарын тамам үлеп, ҡырылып бөтөүҙән ҡотҡарҙы», — тип, ҡыҙыҡай күңелендәге ярһыу ҡыуанысты үҙе ятаҡан әкиәт ҡалыбына һалып уйларға кереште. — Шунан инде бына һалҡын ҡыш сигенде, ташҡа әйләнгән боҙ түңгәктәре ирене, ер битенән шаян йырғанаҡтар йырлап аҡты, ҡояштың шәфҡәтле нурҙары һәр бер бәләкәс тәҙрәнән ынтылып ҡарап, һәр емерек өйгә инеп, өндәшеп йөрөй хәҙер: «Әй, кем тере ҡалған, тор, тышҡа сыҡ! Яҙғы туйға катнаш! Һин бит мине түҙемһеҙлек менән көттөң. Теләктәр теләп, нәҙерҙәр әйтеп көттөң... Йөҙләгән, меңләгән ҡорбандар биреп, үҙенең иң ҡиммәтле хазинаңды-гүмереңде ҡорбан итеп көттөң! Уян, тор, сыҡ!..»

Емеш уйҙарын ошо ерҙә ҡырт киҫеп туҡтатты, «Әбүгәлисина»ны тәҙрә төбөнә һалды ла ҡабаланып иҙәнгә төштө.

— Мин урамға сығам, ҡоҙағый! Мин һап-һау бит инде хәҙер... — Уның тауышында, рөхсәт һорауға ҡарағанда, бынан ары, өмөтһөҙ йоморҡкаларҙы баҫып өтәләп бөткән ҡаҙ шикелле, яфаланып ултырмаясағын белдереү өнө яңғырап китте.

Таиба әбей менән уның өлкән килене Өммөгөлсөм, гәзәттәренсә, Хамматты һағынып, уны зарығып көтөп йәшәүҙәре хаҡында шым ғына һөйләшә-серләшә түрьяҡта сәй эсеп ултыралар ине был ваҡытта. Уларҙың өнһөҙ ҡараштары инде Емешкә төбәлде: «Ҡарасы, нимә ти бит?! Аҡылы-иҫе бармы икән был ҡыҙҙың?! Шул хәлдә, шул төҫтә... Ҡайҙа бармаҡсы була икән?!»

Өлкәндәрҙең икеһенең башына ла ошо бер үк һорау килһә лә, күрәһең, өндәшмәй ҡалыуҙы хуп күрҙеләр.

Емеш тә бүтән бер һүҙ ҙә өҫтәмәне. Хәлһеҙлеккә ҡарағанда, йәшәү, яҙ шатлығынан тыны ҡурыла-ҡурыла, ҡабаланып, өйҙән сыҡты. Нисек шулай итмәһен, унда, ишек алдында, уны изгелеккә, иркәлеккә йомарт сағыу ҡояш көтә, уға һаулыҡ та, йәшәү өмөтө лә алып килгән ләйсән ямғырлы яҙ илай-көлә ҡаршылап тора. Бер яҙҙан икенсе яҙға хәтле уны тешһеҙ бүреләй йолҡҡолап аҙаплаған тапма ауырыуы ла, тап ошо яҙҙың мөғжизәле, терелткес ҡеүәтенән өркөп, Емештең күбәләктәй йәненә ҡанығыуҙан туҡтаны лабаһа! Әлбиттә, атаһы мәрхүмдең дуҫы большевик Никита биргән дауа ла ярҙам иткәндер... Ашхана асып тамаҡты туйҙырып та аяҡҡа хәл индергәндәрҙер был йәшәгер өлкәндәр... Йә, ҡалай ғына булмаһын, Емеш хәҙер үҙен ерҙә иң бәхетле кешеләрҙең береһе итеп тоя. Ул һауыҡты. Ул яҙҙы күрҙе!.. Хәҙер бына үҙен мәңгелеккә ғашиҡ иткән Оло Эйек буйына барып та етәсәк, уның ҡеүәтле, ярһыу тулҡындарын, һандуғастар төйәге бөҙрә талдарын, кәкүк тибрәткән мөһабәт тирәктәрен күрәсәк... Эй-й... ҡандай ҙа оло бәхет бит был ерҙә йәшәүе!..

* * *

Емештең һауығып урамға сығыуына иң ныҡ ҡыуанған кеше, һис шикһеҙ, уның йән дуҫы, әхирәте Шәүрә булғандыр.

— Үәт, әхирәт тә тороп сыҡты! Үәт мәрәкә булды! — тип, ҡулдарын сәпәкәләй-сәпәкәләй, һыңар аяғында һикергеләп ҡаршы алды ул Емеште. — Беҙ тағы бергә уйнарбыҙ, югерешербеҙ, Оҙонғол буйына барырбыҙ, яҙғы уйындар ҡорорбоҙ, эйе бит, әхирәт?! Оҙаҡламай бөтә тирә-яҡ ауылдар Наҡаҫ йылғаһы буйына, «Ҡарға бутҡаһына» сығасаҡ. Беҙ ҙә... Эйе бит, әхирәт?! — тип, Емешкә ауыҙ асып һүҙ әйтергә бирмәй тәтелдәне Шәүрә. Ҡауҙы муйыны шикелле арыҡ оҙон муйынын нәфис һуҙып, Оло Эйек ҡамышы шикелле нәҙек аяҡтарын еңел тыпылдатып, ҡыуаныстан хатта бейей-бейей туҡтамай тәтелдәне. — Беләһеңме, ошо арала егеттәр, ҡыҙҙар Бәйембәт буйына күл йыуаһы йыйырға сығырға тора. Унда ла, йылдағы кеүек, яҡын-тирә ауылдан бөтә ҡыҙҙар, егеттәр килә, ти... Һинең менән беҙ ҙә... Үәт, мәрәкә була инде, эйе бит, әхирәт?!.

Емеш, өнһөҙ генә йылмайып, керпек ҡаҡмай әхирәтенә текләп торҙо. Эйе, Шәүрә, уның шикелле мәкерле ауырыу кисермәһә лә, элекке төҫөндә түгел ине. Танымаҫлыҡ булып ябыҡҡан, йонсоғайны ул да. Тауышында ла, элекке ғәмһеҙ тыныслыҡ урынына, ниндәйҙер көйһөҙ сабырһыҙлыҡ өндәре яңғырап ҡала. Ә ул, быны һис тә аңларға йәки Емештең шул хәтле хәлһеҙлегенә бошоноуын белдерергә теләмәгән һымаҡ, ярһый-ярһый һөйләүен дауам итә. — Тиҙҙән беҙ ҙә төҙәлербеҙ... төптө элекке кеүек булып алырбыҙ... Эйе бит, әхирәт?! Хатта элеккенән дә һәйбәтерәк, һылыуыраҡ...

— Әйҙә Оло Эйек буйына барайыҡ, — тип, әкрен генә уның ярһыу һүҙен бүлде Емеш. — Быйыл ул бик ҡаты ташҡан, иң текә Ҡыҙыл Ярҙы ла баҫҡан тиҙәр...

Ҡыҙҙар, тәҙрәләре арҡыс-торҡос ҡаҙаҡланған һәр бер өй тәңгәлендә бошоноп-уфтанып туҡтай-туҡтай, ул өйҙәрҙең ситән ихаталарында ғәмһеҙ сырылдашҡан турғайҙарға, өй арттарында ап-аҡ сәскәгә күмелеп ултырған муйыл ағастарына, инде бер кемгә лә кәрәге булмаған йәшел һуҡмаҡтарына моңайып-ҡайғырып ҡарай-ҡарай, яй ғына урам буйлап киттеләр. Яҡтылыҡ һәм нәшеллек тантана итә әйләнә-тирәлә, күңелде лә яҙҙың серле ярһыуы һаман көслөрәк солғай бара. Емеш хатта был минутта үҙенең йәнен-тәнен биләгән күтәренке ҡыуаныс тойғоһона һөрөм яғырҙай ниндәй ҙә булһа берәй яманлыҡ донъяла йәшәүен башына ла килтерә алмай башланы. Ысынлап та, ошо хәтле нурлы, шәфҡәтле яҙҙа яуызлыҡҡа ниндәй урын булһын?!

Шулай ҙа бар икән шул әле! Бына ҡуҡырайып урамға сыҡҡан яңы өйө янында йыуан аяҡтарын кереп, күк буяулы таҡта ҡапҡаһына арҡаһын ныҡ терәп, Сәрбиямал баҫып тора. Ҡейенгән-яһанған, төпкә батҡан сысҡан күҙҙәренән Емешкә бик ныҡ таныш асыу һәм яуызлыҡ, йоморо битенән ялтыр май бөркөлә. Ҡыҫып ҡуйылған ҡапҡаға ышыҡлана биреп, Әхмәтша ла ҡыҙҙарға йоторҙай булып ҡарап тора. Ул да һимеҙлектән һытыла яҙған ҡыҙыл йөҙлө, уҫал, тәкәббер ҡарашлы... Әйтерһең, был ҡот осҡос аслыҡ та, зәһәр һыуыҡ ҡыш та, бөлдөргөс һуғыш та булмаған был донъяла... Емеш, уңайһыҙланып, керпектәрен түбән төшөрҙө, йөрәгенең бик йыш, сабырһыҙ тулап китеүенән башы әйләнеп, сайҡалып ҡуйҙы. Эй-й, улар бер ҡасан да Емеште күрмәһендәр ине... Емеш тә уларҙы... Ләкин, әмәлгә ҡаршы, Оло Эйек

буйына Емеш бит фәҡәт уларҙың өйө янынан, асыулы-үсле ҡараштары аҫтынан ғына үтә ала... Башҡаса юл юҡ.

Бына Сәрбиямал ҡыҫҡа ҙур ҡулдары менән үҙенең яҫы янбаштарына шап иттереп һуғып алды:

— Хи-хи!.. Ҡара әле, ҡара, бынауы сиған балаһы тағы тороп баҫҡан!.. Валлаһи тип әйтәм, был сиғандың йәне етелер... ысын-ысын... Ул бит элек тә, миндә торған саҡта ла, әллә нисә тапҡыр шулай үлем тырнағынан ысҡынып ҡалды... Бына бит тағы терелгән!..

Ҡапҡа артынан Әхмәтшаһы ла нимәлер мығырҙаны. Шунан улар, йәнәһе һындары ҡатып, хихылдашып алдылар. Унан Сәрбиямал, күрәһең, бер ни өндәшмәй уҙа һалып китергә тырышҡан ҡыҙҙарға ишеттерер өсөн, тағы ла ҡысҡырыбыраҡ һөйләнергә тотондо.

— Беләһеңме, бер саҡ уның өҫтөндәге күлдәге янып китте... Өр-яңы ситса күлдәктән бер ни ҙә ҡалманы. Ә уның тәненә хатта бер осҡон да теймәгән... Икенсе бер ваҡытта, тап ошондай яҙғы ташҡында, Оло Эйеккә батты ул... Батты ла сыҡты ла... Тағы үлмәй ҡалды... Тик, ҡәһәр һуҡҡыры, минең иң һәйбәт ялтыр ҡалай биҙрәмде генә һыу төбөндә ҡалдырып әрәм итте... Әйтәм бит, берәй байҙың ҡәҙерле балаһы булһа, әллә ҡасан дөмөгөр ине. Ә бына уны үлем алмай. Етем йәне — ете ҡат тип, тиктәҫкә генә әйтмәгәндәр ҙә... Дөрөҫ шул... Ә был етемәк бәрәстең йәне ете ҡат ҡына ла түгелдер әле... Хи-хи...

Ҡыҙҙар, хәлдәре еткәнсә, йәһәтерәк атларға тырыштылар. Әммә, ауылды уҙып бер-ике аҙым атлауға, ҡаршыларына тағы Моратша килеп сыҡты. Ул йылға буйынан ҡайтып килә ине. Ул да, ғәҙәтенсә, Емешкә сәнскеле һүҙ әйтмәй уҙа алманы:

— Һаумы, һөлдә? Ҡуләгә, нихәл, тим?! — тип, мыҫҡыллап иҫәнләште ул. — Емеш, ҡуләгәгә әйләнгәнһең бит!.. — Шунда уҡ таҡмаҡ та әйтеп ебәрҙе:

Гөлйемеш түгел, Емеш.
Емеш бер һөлдә, имеш!..

— Үәт, әй, бөтәһе лә һиңә бәйләнәләрсе, ҡороғорҙар! — тип, әсенеп нәфрәтләнде Шәүрә. — Был ямандарға ни етмәй икән тағы?!

«Минең уларҙы үтәнән-үтә күреп тороуым оҡшамай уларға... Күрә алмауым да уларҙыҡынан һис тә кәм түгел шул...» — тип яуап ҡайтарғыһы килде Емештең Шәүрәгә. Ләкин бөтөнләй икенсе һүҙ әйтте:

— Эй-й, ҡайһылай рәхәт, яҙ етте бит әле, әхирәт!.. Ғүмерҙә лә күрмәгән-белмәгән ҡыуаныслы яҙ!.. Һинең менән миңә лә шул яҙҙы күреп ҡыуанырға яҙған бит әле быға!

Ямандарҙың абалауына ҡарап әхирәтенең кәйефе ҡырылмауын күргәс, Шәүрә тағы кескәй бала шикелле ҡулдарын сәпәкәйләп, һикергеләп алды.

— Эйе шул! Яҙ! Рәхәт!..

Һәм улар, әле генә йомортҡанан сыҡҡан себештәр шикелле ялбыр, еүеш, хәлһеҙ булыуҙарына ла, ямандарҙың теш ҡайрап маташыуҙарына ла ҡарамаҫтан, ысын бәхеттән ярһый-ҡыуана ары киттеләр. Алда уларҙы шаулы Оло Эйек буйы, ҡеүәтле яҙ ташҡыны, матурлыҡ һәм мәңгелек донъяһы көтә ине...

* * *

Быйылғы яҙ менән йәй барлыҡ ярлы-ябаға өсөн, шул иҫәптән Емеш өсөн дә, ғәжәп йомарт һәм шәфҡәтле булды. Алсаҡ, сағыу ҡояш нурҙары, меңләгән-меңләгән дала, туғай сәскәләренең хуш еҫтәрен үҙенә һеңдергән саф һауа, Оло Эйектең яңы һауған һөт шикелле йылы шифалы тулҡындары — бөтәһе бергәләп мөғжизә тыуҙырҙы,— юғалтылған һаулыҡты көнләп түгел, сәғәтләп кире ҡайтарҙылар. Ғәҙәттән тыш һутлы, мул булып үҫкән йыуа, ҡуҙғалаҡ, ҡаҡы, ҡымыҙлыҡтар, Шәүрә өмөт иткәндән дә һәйбәтерәк итеп, Емештең тәненән ауырыу һарыһын ҡыуҙы; Үрьяҡ туғайҙы ҡыҙыл сәкмән булып япҡан ер еләге, Ҡыҙҙар тауы итәгендә ҡыҙарып бешкән сейә, Оло Эйек таллығында тулышып бешкән ҡара ҡарағат, ҡыҙыл, аҡ ҡарағаттар бер-бер артлы бешә, өлгөрә тороп, уға йән, йәм өҫтәне; ҡыҙған ҡырсынташтарында йөрөү, ҡаймаҡ шикелле йомшаҡ, эҫе һары ҡомда аунау, шаян тулҡындар менән ярышып йылғаны арҡылы-буйға иңләп йөҙөү Емеш өсөн иҫ киткес тылсымлы байрам, алыҫта юғалып ҡала яҙған, ваҡыты менән бөтөнләй һүнде тип уйларға мәжбүр иткән ғүмерҙең еңеү тантанаһы булды. Сәләмәтлек менән бергә уға ҡыҙыҡһыныусан, күҙәтеүсән ғәҙәте лә, әйләнә-тирәгә булған тиңһеҙ һөйөү, һоҡланыу тойғолары ла әкренләп кире ҡайтты. Һәм ул тағы донъяны, ул нисек булһа, шул рәүештә генә күреп түгел, ә үҙенең тынғыһыҙ хыялы аша

уҙғарып, әкиәт, йыр, шиғыр биҙәктәре менән биҙәп күрергә, ысынбарлыҡ менән тылсымлы донъя тулҡындары бәрелешкән үтә ҡатмарлы тормош дарьяһы өҫтөндә аҡсарлаҡ кеүек талпынып йәшәргә кереште. Был яҡтан әхирәте Шәүрә лә унан ҡалышмай ине. Улар ауыр ысынбарлыҡ һәм татлы хыял донъяһында һәр саҡ йәнәш, һәр саҡ бергәләп йөҙҙөләр. Тап шуға ла ахыры, айырата татлы ла, ҡыҙыҡлы ла ине уларҙың тормош сәйәхәте.

* * *

Көҙ. Тағы ла йомартыраҡ, тағы ла байыраҡ көҙ етте. Баҫыуҙар быгаса күрелмәгән уңышлы бойҙай башаҡтары менән алтынланды. Оҙонғол буйында ҡарбуз, ҡауындар аунап ятты. Быгаса хатта картуфты ла ул хәтле теләп сәсмәгән кешеләрҙең баҡсаларында ла помидор, ҡабаҡ, ҡыяр, сөгөлдөр, кишер кеүек йәшелсәләр йыйып алып бөткөһөҙ булып бешеп өлгөрҙө. Ҡайҙа ҡарама байлыҡ, муллыҡ аңҡып тора ине хәҙер тирә-яҡта. Эйе, Оло Эйек буйҙарында ер шулай иҫ киткес уңдырышлы шул ул. Тик йыбанма, эшлә генә. Ул һиңә бер бөртөктө мең бөртөк итеп ҡайтарырға әҙер. Сөнки был ерҙәр егет ҡулы теймәгән йәш ҡыҙ кеүек кенә бит әле. Быгаса уны яратып, ҡәҙерләп, ҡурсалап һаҡланылар ғына. Уның йәшәү һутын бер кем дә әле ҡомһоҙланып һурмаған. Илсеғол кешеләре был ерҙе яҙ көнө — яҙын йәш ҡыҙ кеүек һылыу, көҙөн — аҡыллы ҡарт шикелле йомарт, ә ҡышын — аяғында үрә баҫып торған яугир батыр шикелле ҡаты ҡуллы булған өсөн үлеп яраттылар. Уны шул хәлендә мәңге һаҡлау өсөн үҙҙәренең ҡанын да, йәнен дә аяманылар. Тик улар унан, исмаһам, үҙҙәре астан үлмәҫлек кенә булһа ла, файҙа күреү хаҡында уйлап та ҡараманылар. Уларса, кеше лә, хайуандар ҙа, ҡош-ҡорттар ҙа бер үк Ер-әсәнең балалары, уның матурлыгының өлөштәре. Шулай булгас, ошо матурлыҡ эсендә иректә йөҙөп йәшәһәң етә икән тип иҫәпләнеләр. Ә бактиһәң, бер матурлыҡ менән генә лә йәшәп булмай икән!.. Бактиһәң, ер үҙен эшкәрткән, ойоп ятырға юл ҡуймаған игенселәрҙе ярата икән. Илсеғоллоларга был ҡот осҡос йотлоҡ ошо хәҡиҡәтте яҡшы аңлатты. Һәм улар яҙҙан дәррәү тотондолар. Һөҙөмтә көткәндән дә артыгыраҡ булды. Хәҙер бында һәр өйҙән яңы бешкән бойҙай ик-

мәте еҫе аңкып, талсыҡҡан йөрәктәрҙә йәшәү шатлығы уятып, ҡыуандырып тора.

Шулай итеп, Таиба әбейҙең аҡыллы юрауы аҡланды: Илсеғол кешеләренә был йылды шатлыҡ артынан шатлыҡ эйәреп кенә килеп торҙо. Бына инде фронттан Иштуған, Айһылыу, Хаммат, Әхәттәр ҙә ҡайтты. Иштуған хатта үҙе хыял иткән теләгенә лә иреште — уҡытыусы булып алды. Емештең бәхете лә хәҙер башынан ашып китте һымаҡ. Бүтән теләр теләге лә ҡалманы һымаҡ хатта. Шулай ҙа кешенең ынтылышының сиге бармы ни?!.

## II

Емешкә үҙҙәренең хәҙерге тормошо бик оҡшай. Улар — ағаһы, еңгәһе, уларҙың бер йәшлек кенә улдары Салауат — дүртәүләп, Сәлимә мәрхүмдең өйөндә йәшәйҙәр. Хаммат ағай уларға был өйҙө үҙе бүләк итте.

— Барыбер буш тора. Үҙ өйөгөҙҙәге кеүек иркенләп йәшәгеҙ, — тине ул, моңһоу ғына йылмайып. Унан ышанысլы тауыш менән өҫтәп ҡуйҙы: — Бер саҡ үҙегеҙ бына тигән шәп өй ҙә һалып ебәрерһегеҙ әле. Һин бит, Иштуған, хәҙер элекке кеүек ниндәйҙер бер «килмешәк» түгел. Ә уҡытыусы! Яңы донъяны ҡорал менән яулап алып ҡайтҡан һалдат та етмәһә. Шулай булғас, иҫке, емерек өйҙәр, бөлгән ауылдар урынына өр-яңы өйҙәр, өр-яңы ауылдар төҙөүҙе башлап йөрөүселәрҙең иң алдынғыһы һин булмай кем булһын тағы! Дөрөҫ әйтәмме, ҡустым?..

— Дөрөҫ, ағай, дөрөҫ, — тип яуап ҡайтарҙы Иштуған. Уның тауышында ла ашҡыныу һәм дәртләнеү өндәре яңғырап китте. — Тик һинең был өмөтөңдө, ағай, эштә генә аҡлайһы ҡалды!

— Аҡларһың, — тине Хаммат, тағы ла ышаныбыраҡ. — Һис шикһеҙ.

Граждандар һуғышынан улар әле яңы ғына ҡайтҡандар. Яңы ғына тыныс эшкә тотоноп торалар. Ә Емештең ағаһы менән еңгәһенә ҡарап ҡыуанып та, һоҡланып та бөтә алмаған сағы. Нисек үҫкәндәр, үҙгәргәндәр улар! Быға саҡлы улар Емештең күҙ алдында аптыранған, ҡурҡынған, саяланып һуңғы сараға тотонған йәш кенә ике ғашиҡ булып баҫып ҡалғандар ине бит. Ә хәҙер егерме өс йәшлек Иштуған, атаһының йәшлек йылдарына оҡ-

шап, киң яурынлы, ҡеүәтле, ҙур кәүҙәле, аҡыллы, ҡыйыу ҡарашлы һылыу ир булып етешкән. Ҡарлуғас ҡанаттары шикелле һирпелеп киткән ҡалын ҡара ҡаштары араһына тәрән ике-өс һыр төшөргә лә өлгөргән!.. Өҫтөндәге кейеме лә уның теге саҡтағы моңһоу күҙле кәңгер ауыл малайының кейеменә һис тә оҡшамаған... Аяғында элек Собхан старшина менән Һатыбал ғына кейә торған шығырҙауыҡлы ялтыр ҡара штиблет, иҫкерәк тә, ҡыҫҡараҡ та булһа ла, ҡара күн куртка менән күн кепка ла уға ҡалай килешә! Тик бына ҡалын ҡара сәстәре генә үтә етеүерәк. Кепка аҫтынан әтәс ҡойроғо шикелле тырпайып сығып торалар... Бер уйлаһаң, быныһы ла йөҙөнә ятып тора бит әле...

Ә инде Емештең Айһылыу еңгәһенә килгәндә, ул, элеккесә, ауылда бер һылыу: зифа буйлы, аҡыллы, егәрле... Етмәһә, бик-бик ҡыйыу ҙа, шаян да, хатта үҙе, өлкәндәр һымаҡ, үтә баҫалҡы ла, етди ҙә... Улдары Салауат хаҡында һөйләп тә тораһы юҡ. Нисек кенә ғәжәп булмаһын, Емеш уны бөтәһенән дә нығыраҡ яратты ла ҡуйҙы. Ул матур ҙа, йәшенән иртә аҡыллы ла, ҙур ҙа. Ә көлөүе, уйнауы, йоҡлауы — бөтәһе лә Емеш бер ҡасан да күрмәгән илаһи матурлыҡтың төптө үҙе генә лә инде!..

Емешкә хатта был өр-яңы матур ғаиләлә үҙе лә, нисектер, икенсерәк, аҡыллыраҡ, матурыраҡ була бара һымаҡ тойолоп ҡуя... Айһылыу еңгәһенең әсәһе Бибисара абыстай ҙа ошо хаҡта ҡабатлап ҡына тора:

— Бына бит, әҙәмгә күпме кәрәк?! Бигерәк тә баласағаға!.. Тамағы — ашҡа, өҫтө — кейемгә туйһа, шул еткән, — ти ул үҙенең ғәҙәттә Емеште екһендерә торған тупаҫыраҡ, бәйләнсегерәк ҡалын тауышы менән: — Емеш ҡоҙасаны әйтәм әле, төптө әҙәм булып алды лабаһа! Айһылыу еңгәһе һә тигәнсе әҙәм итте лә алды шул. Һарыға һабышып бөткәйне бит. Тәнендә сыҡмаған йәне генә ҡалғайны. Әле танырлыҡ та түгел. Тамағы — ашҡа, өҫтө — кейемгә туйғас ни...

Әлбиттә, Бибисара абыстайҙың был һүҙҙәрендә дөрөҫлөк бар. Емештең ауырыуҙан тамам ҡотолоуында ашауҙың да, кейемдең дә әһәмиәте ҙур булды. Әммә кеше үҙен ысын бәхетле итеп тойһон өсөн, туя ашау менән йылы кейенеү генә етәме ни? Уға йән аҙығы ла ҡояш, һыу, һауа шикелле үк кәрәк тәбаһа! Бәхет, шатлыҡ кәрәк! Йәшәүендең мәғәнәһеҙ түгеллегенә, ҡояш аҫтында һинең дә кәрәкле урының барлығына ышаныс та кәрәк

бит! Емешкә, күрәһең, бына ошоларҙың береһе лә етмәгәндер быҒаса. Ә хәҙер, ағаһы — йорт хужаһы, ғаиләнең варисе, Байгилделәр нәҫелен дауам итеүсе Иштуған ҡайтҡас, бөтәһе лә теүәлләнде, үҙ урынына ултырҙы ла ҡуйҙы. Ошонан һуң инде, моғайын, Емештең күңеле лә өмөт һәм бәхет менән яҡтырып китте. Хәйер, бер Емештең күңеле генәме ни, хәҙер бит бынауы нисәмә йыл буш торған өй ҙә, Сәлимә еңгә мәрхүм булғандан һуң тәүтапҡыр ҡалай яҡтырып, умарта күсе шикелле ҡайнап тора лабаһа! Унда инеп-сығып торған кешенең иҫәбе-һаны юҡ тиһәң дә хата булмаҫ. Иштуған өйҙөң бер мөйөшөнә кескәй генә өҫтәл ултыртып, ҡыҙыл сепрәк ябып, ҡағыҙ-ҡәләмдәр һалып ҡуйҙы. Был урынды ул берсә «ҡыҙыл мөйөш», берсә «справка өҫтәле» тип атап йөрөтә. Яңы килгән газета-журналдарҙы, совет кешеһенең хоҡуҡтары, вазифалары, ғаилә һәм бала-сағаң уҡыу-уҡытыу эштәре хаҡында яңы закондар, яңы ҡағиҙәләр, яңы әхлаҡ тәртиптәре хаҡында һөйләгән кескәй-кескәй генә китаптарҙы, мәҡәләләрҙе Иштуған шул өҫтәлгә һала бара. Ауылдаштары кәңәш һорап килгәндә шуларҙы уҡып ишеттерә. Ошо өҫтәл артында ултырып ул берәүҙәргә ғариза яҙып бирә, икенселәргә, бигерәк тә ҡарсыҡтарға, катындарға, малай сағындағы шикелле, улдарына, ирҙәренә хаттар яҙып, хаттар уҡып бирә.

Хәҙер инде был өйҙә генә түгел, урамда ла быҒаса күрелмәгән күтәренкелек, күңеллелек хөкөм һөрә. Бына әле уларҙың өйөнән алыҫ түгел, урамда йәштәр йыйылған. Улар Ғаббас мулланың элекке емерек мәҙрәсәһен төҙәтәләр.

— Унда яңы мәктәп буласаҡ, — ти Иштуған ағаһы Емешкә. — Хатта һин дә шунда уҡырһың әле, — тип тә өбәрә. Йәштәрҙең эшенә элекке балта оҫтаһы, Иштуғандың фронтташ дуҫы Әхәт етәкселек итә. Иштуған да бүтән эштәрҙән ҡалған ваҡытын шунда эшләп уҙғара. Бик ашыға ул. Яңы уҡыу йылын нисек кенә булһа ла шул төҙәтелгән, яңыртылған мәктәптә башлағыһы килә. Уның уйынса был бина мәктәп кенә түгел, ә ауылдағы бөтә аң-белем үҙәге булып алыр. Өйөндәге «ҡыҙыл мөйөш»тө лә тиҙерәк шунда күсерергә ашҡына ул. — Өр-яңы эште — яңыртылған өр-яңы бинала башларға ине! — ти ул йыш ҡына. Шулай итер ҙә: «Тырышҡан — ташҡа ҡаҙаҡ ҡаҡҡан», тип бушҡа ғына әйтәләрме ни?!

Һәр көндөң, һәр сәғәттең тип әйтерлек үҙенә яңы һүҙ, яңы аң, йәшәүҙең яңы мәғәнәһен алып килеп тороуы Емеште лә нык ҡыуандыра. Уның рухын, тормош тәжрибәһен байыта. Уйсан һәм һынаусан холоҡло Емештең иғтибарынан бер генә яңылыҡ та ситкә ҡаҡлыҡмай. Бигерәк тә элек-электән һүҙҙәргә, уларҙың яңғырашына, мәғәнәһенә артыҡ иғтибарлы ҡыҙҙың күңелендә улар яңы уй, яңы фекер уята, аңын сосландыра бара. Ә бит өр-яңы, быға тиклем ишетмәгән һүҙҙәр көндән-көн өҫтәлеп кенә тора. Әйтәйек, элек, бынан бер нисә йыл элек, батша төшкән көндәрҙә, революция тыны бөркөлөү менән кешеләрҙең, бигерәк тә Емештең атаһы Байгилде ағайҙың, Тимербайҙың, хатта ул саҡта әле үҫмер генә булһа ла, Иштуғандың телендә лә «Ленин», «революция», «совет», «большевик» кеүек һүҙҙәр үтә йыш ҡабатлана ине. Унан оҙаҡламай «ҡыҙылдар», «аҡтар» тигән һүҙҙәр килеп сыҡты. Хәҙер бына улар тағы әллә ни хәтле яңы һүҙ алып ҡайттылар. Был яҡта бер ҡасан да бер кем дә әйтмәгән һүҙҙәр: «ликбез», «батрак», «кулак», «социализм»... Әлбиттә, улар әле бөтәһе лә Емешкә бик алыҫ, аңлайышһыҙҙар. Уның ҡарауы уйланырға урын бар... Бына әле лә ул, үҙенең кескәй саҡтан яратҡан әкиәтен көйләй-көйләй, Салауаттың сәңгелдәген бәүетеп ултыра.

Әбей менән бабай ғыр-ғыр йоҡлай,  
Яндарында бер бәпес һикереп төшөп уйнай.  
Арандағы биш кәзә мырт-мырт көйшәй,  
Һарайҙағы сыбар тай сыр-сыр кешнәй,  
Соландағы ҡутырлы көсөк ләүек-ләүек өрә...

Шул уҡ ваҡытта «ҡыҙыл мөйөш»тә нимә хаҡында-лыр ҡыҙыу-ҡыҙыу бәхәсләшкән Иштуған менән Хамматтың һүҙенә ҡолаҡ һалырға ла онотмай. Уның ҡолағына тағы ниндәйҙер яңы, ят һүҙҙәр сағыла: «клуб», «протокол», «собрание», «потребкооперация»... «Ой, ҡалай мәҙәк һүҙҙәр! Әйтәйем тиһәң, тел генә әйләнмәй, — тип уйлап ала Емеш, мөңрәүҙән туҡтап. — Собрание тигәнен элек сход тиҙәр ине шикелле... Элек ирҙәр бүрәнә өҫтөнә йыйылып, сәүкә шикелле саңҡылдаша-саңҡылдаша ла, сходҡа барҙым, тип ҡайта торғайны бит, шул инде, — тип уйлап алды Емеш. — Байҙар бер яҡлы, ярлылар бер яҡлы булып әрләшә торғайнылар. Шәүрә менән мин дә барып тыңлап тора инем. Харап мәрәкә

була ине. Һуғыша башлаһалар ғына яман була торғайны. Хәҙер «собрание» лә шулай буламы икән?»

«Протокол», «потребкооперация» тигән һүҙҙәрҙән Емеш бер ни ҙә аңламаны. Шуға күрә эстән әйтеп ҡарау менән генә сикләнде. «Братакул. Батребкапирация... Ҡалай мәҙәк! Нимәне шулай атайҙар икән һуң улар?» Ләкин бер ҡасан да бер кемгә лә һорау биреп, яуап алып өйрәнмәгән шул ул. Ә уйларға, төшөнөргә тырышырға бераүгә лә тыйылмай. Шулай уҡ Емешкә лә. Етмәһә, Иштуған ағаһы менән Хаммат ағаһы ашыға-ҡабалана ниндәйҙер ҡағыҙҙар, папкалар күтәреп, йәһәтләп сығып та китте.

— Айһылыу, бөгөн мин һуң ҡайтырмын. Собрание. Унан ликбез!

Ниҙер тегенеп, түрбашяҡта ултырған Айһылыу һүҙһеҙ генә йылмайып оҙатып ҡалды уны. Өй эсе ҡапыл тын, моңһоу тойолоп китте. Тик оҙаҡҡа түгел. Бына, нимәгәлер ҡаты һуҡранып, аһылдай-ухылдай Бибисара абыстай югерә-атлай килеп инде.

— Эй алла-бисмилла, бынауы кейәүҙе әйтәм, көндө лә, төндө лә, ял тигәнде лә белмәй ҙәбаһа!.. Ҡасан килмә — кеше. Ҡайҙа ҡарама — кеше! Ә һин шул арҡала берҙән-бер ҡыҙыңа килә алмай зар-интизар булаһың. Йә, шул булдымы эш?!

Айһылыу ҡул эшен ситкә ҡуйып урынынан торҙо:

— Бик ваҡытлы килдең, әсәй. Уҙ. Хәҙер самауырҙы яңыртам, — тине Айһылыу тыныс ҡына. — Салауат та йоҡланы. Иркенләп сәй эсеп алырбыҙ.

«Салауат та йоҡланы?!»

Емеш, һиҫкәнеп, уянып киткән һымаҡ булды. «Аһа, ңҫәүән, һаман бәүетеп тик ултырамсы...»

Бибисара абыстайҙың кәйефе, ысынлап та, яҡшы түгел ине. Ул Емеш яғына, екһенгәндәй итеп, ҡырын-мырын ҡарап алды. «Бына бит, үҙенә ишетергә һис тә кәрәкмәгәнгә бынауһы ла тыңлап ултырасаҡ»,— тип аңланы Емеш был ҡараште. Әммә, ниңәлер, ҡапыл ғына тороп сығып китә алманы. Абыстайҙың да, күрәһең, аулаҡ ҡалыуҙы көтөргә түҙеме етмәне. Түрьяҡҡа уҙып ултырғас та, ғәҙәтенсә, үпкәле тауыш менән һүҙ башланы:

— Йә, шуны әйтәм әле, ата-әсәңдең берҙән-бер ҡәҙерле балаһы була тороп, ташҡүлсәйем, ас-яланғас тигәндәй, бынауындай тауыҡ кетәгендәй өйҙә йәшәп ятсы инде, ә? Үҙебеҙҙең һарай кеүек йортҡа ҡайтмай, бы-

науы ташландыҡ тупаҡ өйҙә! Әҙәм көлөр бит! Йә, уйлап ҡара, ҡасып киттең — түҙҙек. Беҙ теләмәгән кешене иш иттең — түҙҙек. Атлы казак һымаҡ атҡа менеп әрмис булып йөрөнөң — түҙҙек. Хәҙер, теләһәгеҙ, бөтә йорт-еребеҙ, мал-тыуарыбыҙҙы тотош һеҙгә биреп, атайың менән икебеҙ бер мөйөшөгөҙҙә һыйынып йәшәргә лә ризабыҙ. Ә һеҙ шул яҡшылыҡтарҙы аяҡ аҫтына һалып тапайһығыҙ. Өйгә ҡайтмайһығыҙ. Бына, мин әйтте тиерһең, Айһылыу, бының ҡоһорон бер күрерһегеҙ һеҙ. Теләмәйем... ҡарғамайым. Үҙ балама яманлыҡ теләргә телем бармай! Әммә тоям. Ҡоһорон күрерһегеҙ... Аңларһығыҙ... Әммә, һуң булыр...

— Ҡуйсәле, әсәй, килгән һайын бер һүҙ, — тине Айһылыу күңелһеҙ генә. — Уны һөйләүҙән ни файҙа?!

— Һин аңлаһын тип һөйләйем. Кейәү менән һөйләшһен, тим. Юҡһа, бынауы ейәнем йәлке. Йә, ошо йәшенән туйғансы һөт-ҡатыҡ эсмәй үҫһен әле!.. Унан ниндәй ир заты сығыр?! Ә бит өйҙә, үҙебеҙҙә, ҡаймаҡ, май һоғоноп ҡына йыуаса кеүек алһыу йөҙлө булып үҫер ине, балаҡай...

— Йә, әсәй, сәй һыуына, — уны тағы һаҡ ҡына бүлдерҙе ҡыҙы. — Эсәйек әле...

— Һөйләшмәнеңме, балам? — тип һаман ныҡышты әсә.

— Әсәй, тим, йә бүтән һүҙ һөйләшәйек әле, йәме.

— Бүтән һүҙ тиген, ә? Һинең бынауындай талымһыҙлығыңды күреп торғанда, әсәйеңдең башына ҡалай итеп бүтән һүҙ килһен? Эй-й, ғәрлеге ни тора бит, ғәрлеге...

Айһылыу инде бер ни тип тә яуап ҡайтарманы. Ә Бибисара абыстай, сабырһыҙ баш сайҡап, тағы шул бер һүҙен ҡабатланы:

— Я алла, үҙең уйлап ҡара, кеше алдында оят бит, кеше алдында...

Емеш өсөн быңдай һөйләшеү яңылыҡ түгел ине. Улар Сәлимә еңгәнең өйөндә йәшәй башлағаны бирле, һәр көн тип әйтерлек, ҡабатлана был һөйләшеү. Тик һәр саҡ, ҡалай башланһа, шул көйө осланмаған хәлдә тороп ҡала. Күп ваҡыт Айһылыу бер ни ҙә өндәшмәй. Әсәһе үҙе һөйләй, үҙе яна-көйә лә арып тына. Быңдай саҡта Емешкә ҡоҙағыйы хатта ҡыҙғаныс булып китә.

«Ниңә ағайым яратмай икән уларҙы?.. Айһылыу еңгәне күрәләтә ата-әсәһенән шулай бөтөнләй айырыу

яраймы икән ни? — тип аптырана ул. Бына ғәләмәт, сакырһалар ҡунаҡҡа ла бармай. Мәзиндәр, абыстайҙар менән һөйләшер һүҙем юҡ, ти. Ниңә улай итә икән? Кәзә мәзин олатай анау Ғаббас мулла олатай кеүек ямап түгел дәбаһа. Бибисара абыстай ҙа тик шул бер сарылдаҡ ҡына...» — тип, үҙенсә уй йөрөтә. Ләкин бөгөн Емештең был хаҡта артыҡ уйланып торорға теләге юҡ ине. Ул, ҡустыһы уянмаһын тип, ипләп кенә иҙәнгә төштө, мейестә тумарлап ятҡан үле күмерҙәрҙе берәм-берәм тотоп ҡарап, йомшаҡ юкә күмерен табып алды, унан соҡалтанан ҡомған алып тупһаға сыҡты.

Көҙгө салт аяҙ һалҡын көн ине. Ҡояш тауға һарҡып бара. Ишек алдын баҫҡан алабута, кесерткән ҡыяҡтарында ҡырау ынйылары йымылдап ята. Шаҡылдап туңған суғырмаҡ ер өҫтөнә лә боҙҙан уҡа ауҙар һуҙылған. Эйе, көҙгө ҡояш сағыу йылмайһа ла, кинәндереп йылытмай шул инде ерҙе...

Емеш ҡарашын ҡобараһы осҡан көҙгө ер өҫтөнән усындағы күмер киҫәгенә күсерҙе:

«Нимә эшләргә? Һынап ҡарарғамы, юҡмы?.. Ысынмы икән?.. Әллә ағайым юрый ғына әйттеме икән?»

Емеш әле үҙен күмер киҫәге тотоп ошолай уйланып торорға мәжбүр иткән кисәге бер дәрестe баштан-аяҡ ҡайтанан күҙ алдынан үткәрҙе.

Унның ағаһының, Иштуғандың, ҡылығы шулай: ул бер ҡасан да уҡыусыларына көндәлек дәрес биреү менән генә сикләнмәй, ә үҙе белгән, тойған, йәнен-йөрәген ярһытҡан бөтә яҡшы, файҙалы аң-белем, ғәҙәт, ҡылыҡты ла балаларҙың күңеленә һеңдерергә, уларҙың донъяға ҡарашын камилләштерергә тырыша. Шуға ахыры ул дәрестән тыш, граждандар һуғышы күренештәренән, ҡала тормошонан, эшселәр донъяһынан ҡыҙыҡлы, хикмәтле ваҡиғалар һөйләп ташлай, илдә булып ятҡан ҙур ваҡиғалар менән таныштыра, революция ялҡындарынан ҡиммәтле осҡондарҙы берәм-берәм сүпләп алып, үҙенә йотлоғоп ҡарап ултырған ошо бер төркөм һәләмә кейемле, ләкин үтә һиҙгер, зирәк аҡыллы балаларға өләшеп сыҡҡандай итә. Кисә лә ул, бер дәресен шулай киңәйтеп, һаулыҡ, таҙалыҡ мәсьәләләренә бәйләп алып китте. Йортто, өйҙө таҙа тотоу, битте, ҡулды һабынлап йыуыу кеүек иң ғәҙәти, ябай ҡағиҙәләр хаҡында һөйләне. Унан ниндәйҙер ябай күҙ менән күреп булмай торған ғәжәп бер донъяға, микробтар донъяһына

барып инде. Емеш өсөн был әңгәмә бығаса үҙе белгән әкиәттәрҙең иң ҡыҙыҡлыһы, иң ғәжәбе булды.

«Микробтар?! Әллә был Иштуған ағайым теге Бибисара абыстай әйткән ендәрҙе шулай атаймы икән? Ен дә бит күҙгә күренмәй. Ә үҙе, ҡағылһа, кешене ауырыта, ти. Ана бит Хәлим ағай йығылған да аяғына ер ене ҡағылған, ти. Шуға сатан булып ҡалған, ти. Юҡ та, енде әйтмәйҙер ҙә. Ендең оҙон-оҙон ҡойроғо, кәкере мөгөҙө була, ти. Микробтарҙың ҡойроғо була, тип әйтмәне лә ағайым...» — тип, баш ватып тыңланы уны Емеш. Башҡаларға ла, күрәһең, был әңгәмә оҡшаны. Хатта тик тормаҫ Шәүрә лә тып-тын тыңлап ултырҙы. Тик әңгәмәнең аҙағы ғына Емештең күңелен ҡайтарҙы. Ни өсөн тиһәң, ағаһы тоҡ-томалға уның тештәренә бәйләнде лә ҡалдысы...

— Микробтарҙан һаҡланыр өсөн ҡулдарҙы йыш йыуып торорға кәрәк. Бигерәк тә ашау алдынан йыуырға... — тип әҙерәк тынып торҙо ла: — әйткәндәй, тештәр ҙә таҙа йөрөткәндә яраталар, — тип туп-тура Емешкә ҡараны. Бына, әйтәйек, Емеш, һинең тештәрең матурҙар. Тығыҙлап ебәк епкә теҙгән инйы һымаҡтар...

«Был ағайым нимә әйтмәксе була икән?» — тип, Емештең йөрәге жыу итеп ҡалды, керпектәре түбән бөгөлөп төштө. «Үәт аҡылһыҙ...»

Иштуған, баяғыса, һалмаҡ ҡына дауам итте:

— Ләкин күренеп тора, һин уларҙы таҙартмайһың...

«Ҡара, нимә тип минең тештәремдә күргән булды инде был ағайым? Бүтәндәрҙең теше юҡмы икән ни уға ҡаҙалырға? — тип ағаһына бөтөнләй үпкәләп китте Емеш. — Йә, нимә тип ауыҙымды асып, аңшайып ултырҙым әле мин?» — тип үҙенә лә һуҡранды.

— ...Ә таҙартһаң, улар инйы кеүек йымылдап торорҙар ине. Аңлайһыңмы, Емеш? — тип, көлөмһөрәп, бөтөрөп ҡуйҙы һүҙен Иштуған.

Емеш эстән генә тағы һуҡранды. «Әйтерһең, таҙартылмаған теш миндә генә...»

— Беҙҙә бер кем дә теш таҙартмай ул, — тине Шәүрә, шаян йылмайып. — Нимәкәй менән таҙартаһың уны? Самауырҙы таҙартҡан шикелле ҡатыҡлап кирбес онтағы менән йышырғамы ни?

— Эйе, таҙартмайҙар шул... — тип уйлана биреп торҙо Иштуған. — Ни менән таҙартырға тиһеңме, Шәүрә,— тип, уйсан ҡарашын уға күсерҙе. — Теш таҙарта торған

онтаҡ була. Паста ла һатыла... Тик улар әлегә беҙгә килеп етмәгән шул... — Унан, ҡапыл йәнләнеп: — Шулай ҙа сараһын табырға була! — тип ҡуйҙы. — Күмерҙе барығыҙ ҙа беләһегеҙ бит!

— Аһа, бына бығәләш, күмерҙе лә белмәҫкә, — тине Шәүрә, тағы иҫе китмәй генә көлөп. Ул Иштуған менән бөтөнләй тиңдәш булып һөйләшә, уҡытыусы ла быны, күрәһең, тәбиғи итеп ҡабул итә ине. Хәйер, уның үҙ уҡыусыларынан өлкәнлеге лә уҙа барһа биш-алты йәш ине бит. Күбеһенсә ун ике-ун биш йәшлек балалар уҡый бит мәктәптә.

— Иң йомшаҡ күмер — юкә күмере, — тип дауам итте Иштуған.

Ғәҙәттә, хыял һәм әкиәт донъяһының серле моңһоулығына сумып, ауыр һәм ҡатмарлы ысынбарлыҡты онотторға яратҡан, бөтә нәмәне әкиәт итеп ҡабул итергә әҙер торған Емешкә таҙалыҡ хаҡындағы был артыҡ тормошсан дәрес оҡшамай башланы. Ә Иштуған ҡарышҡан шикелле һаман шул күмер хаҡында һөйләне.

— ...Юкә күмерен мейестән алып, көлөн өрөп таҙартаһың да, сынаяҡ аҫтына һалып, әйтәйек, балғалаҡ менән иҙәһең. Ул бер йомшаҡ онтаҡҡа әйләнә. Бына шул онтаҡҡа бармаҡты манып алаһың да тешкә ышҡыйһың...

Шәүрәнең йондоҙ кеүек яҡты шаян күҙҙәрендә тағы мут осҡон баҙлап китте.

— Ҡором ярамаймы, Иштуған ағай? Беҙ аулаҡ өйгә йыйылғанда ҡором менән бит буяша беләбеҙ ул. Былай булғас, йоҡосо әхирәттәрҙең тештәрен дә буяп ҡуйырға була. Хи-хи...

Бөтәһе лә, күңелләнеп, көлөп ебәрҙе. Тик Иштуған ғына етди төҫтә ҡалды.

— Ярамай, — тине, ҡаты итеп. — Ҡором менән бит буяшыу ҡырағайлыҡ! Ҡором — күҙ өсөн зарарлы.

Шунан ул, ошо «зарарлы» тигән һүҙҙән, тағы микроб һүҙенә күсеп китте. Хатта микроскоп хаҡында ла төшөнсә биреп маташты.

— Ябай күҙгә күренмәй торған микробтарҙы мең, ун мең тапҡырҙар ҙурайтып күрһәтә торған ҡоралға микроскоп тиҙәр...

«Мең, ун мең тапҡыр?! — тип иҫе китте Емештең. Уға дәрес тағы ҡыҙыҡҡа әйләнде. Эй күрһәң ине шул нәмәкәйҙе!..»

— Микроскап — матур Әсҡәп! — тип шаярҙы Шәүрә. — Ҡалай мәрәкә исем, эйе бит, әхирәт?..

Иштуған, ҙур аудитория алдында лекция һөйләгән кешеләй, етди, һалмаҡ тауыш менән дауам итте:

— Һеҙҙең күбегеҙ тиф ауырыуын уҙғарҙы. Ул ауырыуҙы ла бит микробтар тарата, — тине. Унан тағы ауырыу йоҡмаһын өсөн ниндәй саралар күрергә, зарарлы микробтарҙан ҡайһылай һаҡланырға кәрәклек хаҡында һөйләп алып китте. Емеш тағы ағаһына икеләнеп ҡараны:

«Ысынды һөйләйме икән был ағайым? Ауырыу ҙа бит инде, үлем шикелле үк, тыумыштан кешенең маңлайына яҙылып ҡуйылған. Шулай булғас, унан ҡалай һаҡланмаҡ кәрәк?!»

Иштуған микробтар хаҡындағы һүҙҙән тағы әйләнә-тирәләге тормошҡа күсте.

— Зарарлы микробтарҙың, әйтәйек, бына беҙҙең Ғаббас мулла кеүек күҙгә күренә торғандары ла була, — тине ул, мут ҡына йылмайып. Балалар дәррәү көлөп ебәрҙеләр. — Күҙгә күренгән ундай микробтар тағы ла хәтәрерәк. Улар кешеләрҙең йөрәгенә инәләр, рухын ағыулайҙар. Микробтарҙың һәр төрөнә ҡаршы көрәш асырға кәрәк. Шул саҡта ғына кеше рәхәт йәшәр.

Дәресте Иштуған ҡайтанан тештәргә күсеү менән бөтөрҙө:

— Йәгеҙ, иртәгә бөтәгеҙ ҙә һабынлап йыуынып, тештәрегеҙҙе таҙартып килегеҙ әле. Ҡайһылай булыр икән? Әгәр һәйбәт сыҡһа, бынан ары гел шулай эшләрбеҙ...

Емеш тешен таҙартып, битен-ҡулын йыуып бөткәс тә, алыҫтан насар күреүе арҡаһында сәскә атҡан көнбағыш һымаҡ күренгән ҡояшҡа текләп оҙаҡ ҡына тупһала торҙо. Ниңәлер өйгә ингеһе килмәй ине уның. Ә бүтән барыр урыны ла юҡ. Кешегә йомошһоҙ инеп йөрөр ғәҙәте лә юҡ уның. Ә бына ҡояшҡа ҡарап китер ҙә китер ине лә бит... ләкин белмәй, ҡайҙа барып етер ине икән ул? Ҡайҙа барып етерецде белмәй тороп, юлға сығыу ярай-мы ни?!.

Эңер ҙә төшөп килә. Тиҙҙән мәктәптә өлкәндәр уҡыуы башланасаҡ. Әллә шунда барырғамы икән? Ағаһы тәү уҡыта башлаған саҡта Емеш унда бер тапҡыр барғайны ла. Эйе, быҫҡаҡ ямғыр һибәләп тора ине ул кистә. Мәктәпкә егермеләгән кеше йыйылғайны. Улар араһында үҫ-

мерҙәр ҙә, урта йәштәгеләр ҙә, хатта ҡарттар ҙа бар. Емеш, ишектән ингән ерҙә туҡталып, алмаш-тилмәш уларға текләп торҙо.

Бына иң алғы партала бала һымаҡ бер ҡатлы Хәлим ағай, еҙ мыйығын һыпырғылай-һыпырғылай, дәфтәргә хәрефтәр яҙып маташа.

— А-а-аш...

Унының ғүмер буйы байҙарға йорт һалып, келәт бурап кәкерәйеп ҡатҡан бармаҡтары ҡәләм тоторға харап ипһеҙ. Шулай ҙа ул тырыша. Партаға саҡ һыйып ултырған да, ҡәләмде йомшаҡ ҡына тотоп, ҡағыҙға баҫа. Әммә ҡәләм осо, ҡарышҡан шикелле, әленән-әле шартлап һынып ҡына тора.

— Ҡайһылай ҡыйын икән дәбаһа был хәреф яһауы,— тип шаярған була Хәлим ағай. — Ҡескәй генә «а» тигән нәмәне оҡшатып яһар өсөн генә лә йөҙ йәшәр ҡарағас бүрәнә күтәргәндәгеләй ҡара тир сыға.

Алтмыш йәшлек Урыҫ Иҙрис тә ҡалтыранған айыу бармаҡтарына ҡәләмде нисек тә иппләберәк тоторға тырышып аҙаплана.

— Ҡарт көнөмдә булһа ла, күҙемде асып, китап тигән серле донъяға сәйәхәт ҡылмаҡ булдым бит әле мин, иҫәр. Барып сығырмы икән, улым Иштуған? Ҡара әле, улым, бынауы хәрефте ап-арыу һыҙып ҡуйҙым түгелме һуң, ә? — тип, берсә икеләнеп, берсә өмөтләнеп һөйләнә. — Их, шабаш, уҙған бит ғүмерҙәр... ҡараңғылыҡта ла һуҡырлыҡта, — тип көйөнөп тә ала. — Николай батшаға ни, мин әйтәм, беҙҙең шул наҙан булыуыбыҙ кәрәккән инде. Һуҡырҙы ни, ҡайҙа теләйһең — шунда бороп, ҡайһы еренән теләһәң — шунан бөгөп була бит! Еңел шул... Һай, аңһыҙлыҡ-аңһыҙлыҡ!

Ҡарттар шулай көйгәләкләнә башлаһа, ғәҙәттә, Иштуған дәресте тиҙ генә үҙгәртеп ебәрә. Был кисте лә ул, Урыҫ Иҙрис олатай көйөнә башлағас, газетанан төрлө яңылыҡтар уҡырға тотоноп китте. Борон-борондан әкиәт-хикәйәт һөйләтеп йәки ҡыҙыҡлы китаптар уҡытып тыңларға ратҡан был халыҡ ихлас ҡыҙыҡһыныу менән тынып ҡалды. Зарҙар бер аҙға онотолдо. Иштуғанға шул ғына кәрәк ине. Ул тағы уҡыу-яҙыу өйрәтергә күсте. Шулай фажиғә тип әйтерлек аҙаплы ла, һуҡырҙы күҙле итеү шикелле үк ҡыуаныслы ла ине был өлкәндәрҙе уҡытыу!

Шулай ҙа Емештә ул, ни өсөндөр, ауыр тойғо ҡалдырҙы. Күрәһең, һәр нәмә үҙ ваҡытында ғына яҡшы булалыр. Ә былай өлкәнәйгәс аҙапланып өйрәнеп ултырыуы ауыр, ауыр. Юҡ, кискс мәктәпкә бүтән барғыһы килмәй Емештең. Өйгә лә ингеһе килмәй.

Емеш өшөп, ҡош тәне ҡалҡҡан ҡабарынҡы беләктәрен һыпырғылап, тағы бер аҙ тупһала тапанып торҙо. Шул саҡ уның янына ғына, тупһаға тып итеп уҡ килеп ҡаҙалды. Ҡауырһын ҡанатлы, ҡурғаш башлы селек уҡ. Емеш тертләп китте: «Малайҙар уғы! Был кем? Ниңә, ниндәй малай атты?»

Уҡтың һабағына ҡағыҙ киҫәге уралғанын күргәс, тағы ла нығыраҡ аптыраны. Иплән кенә ҡағыҙын алып тағатып ҡараны. Унда иң тәүҙә, кәкере-бөкөрө эре хәрефтәр менән «Емеш!» тип яҙып ҡуйылғайны.

«Емеш, ҡараҡай!»

«Был ни ғәләмәт тағы?» — тип ҡабатланы ҡыҙ. Йөрәге атылып сығырҙай булып тулап китте. Ул, ҡабаланып, яҙыуҙың аҙағына күҙ ташланы. «...Һине яратып, бер күрергә йән атып, Моратша тип белерһең...»

Эйе, Сәхибә туташтан өйрәнеп ҡалған иҫәр ҡылығын һөйрәп йөрөүсе Моратшаның мөхәббәт хаты ине был. Оялыу һәм ғәрләнеү тойғоларынан ут янып киткән Емеш, ни әйтергә, ни уйларға белмәй аптыранып, тағы ла оҙаҡ-оҙаҡ тапанып торҙо. Хат яҙған юнһеҙ малайҙы өҙөп-йолҡоп ташларҙай булып, тирә-яҡҡа ҡат-ҡат күҙ йөрөтөп сыҡты. Әммә бер ерҙә бер кем күренмәй, бер ни ишетелмәй ине. Сәмләнеүҙән ни эшләргә белмәгән Емеш хатты, саяланып, ваҡ киҫәктәргә тураны, уҡты өс-дүрткә һындырҙы ла кәртә яғына, сүплеккә алып барып ырғытты. Унан күңеленә лә, ҡулдарына ла, ерәнгес шылағай йәбешкән һымаҡ ытырғанып, югерә-атлай өйгә инеп китте. Ә Моратша, Емештең йәненә тейә алыуына кинәнеп, оҙон һирәк тештәрен йылтыратып көлөп тороп ҡалды. Ул ситән ярығынан баянан бирле ҡыҙҙы күҙәтеп тора ине.

## III

Емеш үҙе былай һөйләнсәк булмаһа ла, дәрестә ҡатнашырға, таҡтаға сығырға бик ярата. Уҡытыусы үҙен ситләтеп үтһә, эстән генә хатта үпкәләп тә ҡуя. Әммә бөгөн уның тирә-яҡҡа күтәрелеп ҡарағыһы ла килмәне.

Моратшаның кисәге хаты бөтә кешегә билдәлелер, уның бөтә тын алышынан был сер тышҡа сығып торалыр һымаҡ тойоп, тымшайып тик ултырҙы. Етмәһә, кисә күмер онтағы менән таҙартҡан тештәре лә үтә аҡ булып, ҡара күлдәккә һалынған аҡ ямау кеүек, ялтырап тора һымаҡ ине. Шулай булғас, ауыҙҙы нык ҡымтып ултырыуҙан башҡа ни сара?

Әммә ғәҙәтенсә дәрескә ихлас бирелеп китеү менән был уңайһыҙлыҡ онотолдо. Емеш тиҙҙән бүртәйеберәк торған ҡарағусҡыл ирендәренең нисек асылып китеүен дә, ваҡ тығыҙ тештәренең, ысынлап та, ынйы бөртөктәре һымаҡ йымылдап тороуын да иҫләмәҫ булды.

Иштуған ағаһы бөгөн уларға революция хаҡында, кешене бәхетле итеү өсөн барған оло көрәш хаҡында, Ленин хаҡында һөйләне.

«Ленин!..» Был исемде Емеш тәүтапҡыр Тимербай ағаһынан ишеткәйне. Атаһы Байгилде ағай иҫән ине әле ул саҡта. Урамда, бүрәнәләр өҫтөндә, сход бара ине. Кешеләр, ни өсөндөр, бер-береһенең өҫтөнә ташланырҙай булып, ҡысҡырып һөйләшәләр, шаулашалар. «Ленин», «революция» тигән кеүек Емешкә һис тә аңлашылмаған, әммә ҡорос һымаҡ нык тойолған һүҙҙәрҙе әле береһе, әле икенсеһе ҡабатлай. Хатта Емештең, ғәҙәттә, бик аҙ һүҙле атаһы Байгилде ағай ҙа был һүҙҙәрҙе ярһып, ҡысҡырып әйтте. Етмәһә, ул тағы бик мәҙәк яңы һүҙҙәр ҙә ҡушып ебәрҙе: «контр-р-революция», «буржуазия...»

«Ленин» һүҙен Тимербай ағай айырата ярһып, дәртләнеп әйтә ине... Батшаны тәхетенән яңы ғына ҡолатҡан саҡ ине был.

Бына шул саҡта Тимербай ағаһы һөйләгән Ленин Емештең күҙ алдына тап атаһының бынауы белеше Никита һымаҡ ябыҡ, бәләкәс буйлы, көрәктәй ҙур етен һаҡаллы, зәңгәр күҙле рус крәҫтиәне булып килеп баҫҡайны. Ул да, тап ошо сходтағы Никита шикелле: «Ер!», «Икмәк!», «Ирек!» тип бөтә кешенән көслөрәк һөрән һалып, батша, байҙарға, баярҙарға ҡаршы һуғышып йөрөйҙөр һымаҡ ине.

Ә бына бөгөн Иштуған һөйләгән Ленин Емешкә икенсерәк тойолдо. Етмәһә, стенала уның портреты лә эленеп тора. Ана, теремек, һөйкөмлө күҙҙәре йылмайып ҡайҙалыр алыҫҡа төбәлгән. Моғайын, үҙе төҙөйәсәк өр-яңы донъяны күҙ алдына килтереп, һоҡланып ҡарап тора-

лыр... Иҙелгән, кәмһетелгән бөтә кеше өсөн, Емеш, Шәүрә, Байрас кеүек балаларга ла бәхет килтерәсәк һәйбәт тормошто күрәлер...

Ленин портретен мәктәпкә Баҙыян еңгә бүләк итеп бирҙе.

— Иштуған ҡәйнеш, һин һуғыш майҙанынан беҙгә иң ҡәҙерле ҡомартҡы, беҙҙең онотолмаҫ Тимербайыбыҙҙың күҙ нуры түгелгән хеҙмәтен алып ҡайтып бирҙең, — тине ул, илап-ярһып. — Бынан ары ул мәктәптең иң күренекле урынында эленеп торһон... Бөтә кеше өсөн берҙәй яҡтыртып, — тине.

Шунан Иштуған уны рамлатып, быялалатып, балаларҙың ҡаршыһына, стенаға элеп ҡуйҙы. Шунан ауылда төрлө һүҙ таралып китте. Берәүҙәре, бындағы ғәҙәт буйынса, ысын булған хәлгә үҙҙәре уйлап сығарған төрлө өҫтәмәләр ҡуша-ҡуша матур әкиәт уйлап сығарҙы:

Лениндең был портретен төрлө тары бөртөктәренән теҙеп, юлда, походта Тимербай үҙе эшләгән, ти. Ленинде ул бик яратҡан, ти. Ленин дә уны яратҡан. Хатта каторганан үҙе килеп ҡотҡарған, ти... Эйе, эйе, килгән дә, Тимербай ятҡан зиндандың тутығып бөткән тимер ишеген шар асып ебәргән, ти.

— Тимербай мырҙам, ҡараңғыла сереп ятыу етер һиңә. Яҡтыға сыҡ. Тирә-юнеңә әйләнеп ҡара. Донъяла үҙең теләгән урыныңды һайлап ал! — тип әйткән, ти. Бына шул көндән алып Тимербай Ленин күрһәткән юлдан китергә, кәрәк икән шул юлда ҡорбан булырға ер үбеп ант иткән, ти. Аҡтыҡ һулышынаса антына тоғро булып ҡалған, ти.

Ә ямандар яуыз ғәйбәт таратты:

— Иштуған мәктәпкә тәре ҡуйған. Балаларҙы шуға ҡаратып суҡындыра икән! Балаларығыҙҙы уҡырға йөрөтмәгеҙ, мосолмандар!

Күптәр балаларын уҡыуҙан ала башланы. Ғаббас мулла хатта баҙнатланып Иштуғанды әрләп тә сыҡты.

— Һин динһеҙ. Балаларҙы ла диндән яҙҙыраһың! — тип ҡысҡырынды ул, йәшел таяғын иҙәндә туҡылдатып: — Был минең мәҙрәсәм. Мин унда дин уҡытырға тейешмен. Сәүит миңә дин таратырға рөхсәт бирҙе! — тип кеҫәһенән һарғайып бөткән бер ҡағыҙ ҙа сығарып күрһәтте. Иштуған уға тыныс ҡына:

— Олатай, был совет мәктәбе. Мин совет уҡытыусыһы. Минең мулла менән һөйләшер һүҙем юҡ. Бынан ары

мәктәптә эҙең булмаһын,— тип иҫкәртеп сығарып ебәрҙе.

— Мин тағы килермен әле! Күрһәтермен әле мин һиңә күрмәгәнеңде! Был минең мәҙрәсә! Ҡолағың быны яҡшы ишетһен, аллаһыҙ! — тип ҡысҡырына-ҡысҡырына сығып китте мулла.

Был ваҡиғанан һуң Иштуған бер нисә тапҡыр өйҙәргә йөрөп сыҡты, йыйылыштар уҙғарҙы. Иҫке замандың ҡайтмаҫҡа китеүе — яңы заман килеүе хаҡында аңлатты.

— Балалар — яңы заман кешеләре — аңлы, белемле булырға тейеш. Уҡырға тейеш, — тип төшөндөрөргә тырышты.— Ҡараңғылыҡта бөтә ғүмер ыҙа сиктек. Етәр!— тине.

Был хәл көҙ, Иштуған яңы ғына уҡыта башлаған саҡта булды. Ә бөгөн ул Ленин хаҡында айырыуса яғымлы, аһәңле итеп һөйләй һымаҡ. «Ленин!..» Был исемде әйткәндә унының күҙҙәрендә бығаса Емеш бер ҡасан да күрмәгән ниндәйҙер ғәжәп яҡты, эске нур балҡып китә. Уның былай ҙа киң күкрәге тағы ла ныҡ ғырыҡ яҙыла, тауышынан, хәрәкәтенән бөткөһөҙ көс, ҡеүәт, дәрт сатҡылары һирпелә башлай. Ул үҙе лә шул һөйләп торған оло ваҡиғаларҙың төп ҡатнашсыһы, донъяның аҫтын өҫкә килтергән тарихи түңкәрелештең йәнле шаһите генә түгел, ә ерҙә тик яҡшылыҡ һәм ғәҙеллек кенә хөкөм һөрһөн өсөн, Ленин менән йәнәш тороп көрәшеүсе баһадирҙәрҙең береһенә әйләнә һымаҡ. Иштуған һөйләгән хәҙерге Ленин дә Емештең күҙ алдына, элеккесә, Тимербай ағаһынан ишеткәндәгесә, көрәк һаҡаллы, яҡты күҙле рус крәҫтиәне булып ҡына түгел, бәлки, теләһә, ҡылысын бер һелтәүҙә донъялағы бөтә батшалыҡты ҡыйрата һуға, теләһә, һә тигәнсе, бөтә ярлы-ябағаны иҫ киткес муллыҡ, тигеҙлек хөкөм һөргән ғәжәп бер донъяға алып барып сығара торған, аҡ толпарға атланған йәш, ғәйрәтле бәһлеүән булып, еңелмәҫ һәм үлмәҫ тылсымлы көскә эйә булған ҡаһарман булып килеп баҫа. Иштуғандың Ленине Емешкә хатта бер саҡ атаһынан ишеткән «Һары ат менән Буҙ ат» әкиәтен дә хәтерләтеп ҡуя.

«Атайым әйткән анауы Тоғро батыр ошо Лениндең үҙе түгелме икән? Ялған батырҙы еңеп, Буҙ атына атланып, ергә төштөмө икән әллә ул хәҙер?! — тип уйлап ала Емеш. — Эй, тиҙерәк кенә үҫергә лә Тоғро батырҙы үҙ күҙҙәрең менән күрергә, уға эйәреп йондоҙҙарға осорға ине...» — тип ашҡына.

Иштуғандың хикәйәттәре ҡыҙҙың күңелендә шул хәтле оло өмөт уята, ул хатта бер саҡ Ленинде, һис шикһеҙ, үҙ күҙҙәре менән күреүенә, уның бер саҡ, Тимербай ағаһына ҡараған кеүек, уға ла һөйкөмлө йылмайып ҡарауына, «Эй, ҡыҙыҡай, үҫеп еттеңме ни? Яҡшы. Әйҙә, тормошта үҙеңә тороп итер урыныңды билә! Бынан ары уны һинән бер ҡасан, бер кем дә тартып ала алмаç. Ялған батырҙы мин үлтерҙем инде!..» тип әйтеүенә көн кеүек ышана башлай.

«Эй-й, йәһәтерәк үҫергә, ҙурайырға ине! — тип ярһый Емештең күңеле. — Тиҙерәк уҡырға, күпте белергә ине!..»

Тап шул саҡта, уның хыял ҡанатын көйҙөрөп, мәктәпкә тағы Ғаббас мулла килеп инде. Сәкмәненең оҙон салғыйҙарын ялпылдатып, ҡамыт аяғын кәлт-көлт баçып, Иштуған янына уҙҙы.

— Әссәләмәғәләйкүм, мөғәллим. Иçәнме? Бына мин тағы килдем. Тағы шул мосолман балаларына дин уҡытыу хаҡында, — тип, теге ваҡыттағы бер һүҙен ҡабатланы. — Минең ҡулда сәүиттән рөхсәт бар!

Емештән бер ҙә кәм ярһымай, бөтә донъяһын онотоп, Ленин хаҡында, революция хаҡында, кеше бәхете өсөн изге көрәш хаҡында юғары уйҙар менән йәшәп торған Иштуған, хатта ҡапыл-ғара ни әйтергә белмәй, аптырап ҡалған, хатта уны танымай, был көтөлмәгән «ҡунаҡҡа» үҙенән ни кәрәклеген аңламай торған һымаҡ тойолдо. Унан бөтә йәнен-йөрәген утлы асыу солғап алды: «Ни эшләп ул бында йөрөй? Үҙ заманы уҙғанын аңламаймы икән ни был?! Хәҙер беҙҙе, йәштәрҙе, үҙенең йәшел таяғы менән туҡмап, ҡурҡытып юлдан алып ташлай алмаçын белмәйме икән ни?!. Әйе, бер саҡ тап бына хәҙерге кеүек ояһыҙ рәүештә Сәлимә еңгәйҙең өйөнә баçып ингәйне бит ул. Ул саҡта... Үҙе старшинанан ҡала беренсе урында торған саҡта... ә хәҙер... кем уға, бындай ҡылыҡҡа юл ҡуя хәҙер?!. Кем биргән уға бындай рөхсәт ҡағыҙын?»

Ошо ваҡыт Иштуған ҡапыл Хаммат ағайҙан ишеткән бер һүҙҙе хәтерләне: волость үҙәгендә элеккеләр күберәк урынлашып алған. Хатта мәғариф бүлегендә лә элекке хәҙрәт ултыра. Беҙҙең ауылға таныш Сәхибә туташтың атаһы. Дини дәрәжәһенән баш тартҡан, әлбиттә. Бәлки, шул хәҙрәт биреп яталыр бындай ҡағыҙҙарҙы.

Һәлки, ул хәҙрәт бына ошо Ғаббас мулла кеүектәргә ярҙам итер өсөн совет работниге төҫөнә ингәндер?! Эйе, иҫкелек, һөрһөгән иҫкелек, үҙенең быуаттар буйы бизләп килгән өҫтөнлөгөнән еңел генә баш тартырға уйламай, күрәһең. Алда, күрәһең, ауыр көрәштәр тора әле. Ауыр, оҙаҡ, түҙемле көрәш...

Ахыр Иштуған, муллаға тағы бер ҡат иғтибар менән ҡарап алды ла, ҡоро ғына тауыш менән:

— Һаумы, мулла әфәнде. Ни йомош? — тип ҡуйҙы.

Балалар миҙер көтөп тынып ҡалды. Емеш тә үҙен шундай көтмәгәндә күктән ергә ауып төшкәндәй тойоп, һабырһенеп, муллаға төбәлде: «Беҙҙе тағы теге йылдағы шикелле мәктәптән ҡасырмаҡ буламы икән ни был?!»

Мулла әлеге иҫкереп, туҙып бөткән ҡағыҙын тағы Иштуғанға һуҙҙы.

— Бына, ҡара!.. Бөтәһе лә законлы. Сәүит власе үҙе рөхсәт итте миңә дин уҡытырға! Ә һин ирек бирмәйһең! Һин үҙеңде сәүиттән өҫтөн тип беләһеңме? Һинең өсөн хөкөм юҡ тип уйлайһыңмы? Бар. Табылыр! — тип, һаман сығырынан сыға барҙы мулла. — Хаталанаһың, мөғәллим! Һиңә лә хөкөм табылыр! Күрерһең!..

— Был хаҡта беҙ үткән осрашыуҙа һөйләшеп бөткәйнек, мулла әфәнде, — тине Иштуған баяғыса үтә етди, ҡоро тауыш менән. Унан балаларға ҡарап: — Бөгөнгө дәрес ошоноң менән тамам. Һеҙгә ҡайтырға мөмкин,— тип өҫтәне.

Балалар ҡыуанып-шаулашып парта артынан сыға башланы. Ғаббас мулла асыуына сыҙамай ҡысҡырып ебәрҙе:

— Мөғәллим, был ни эшләүең?! Мин дин уҡытырға килдем! Ишетәһеңме?!

Иштуған һаман тыныс, ләкин кире ҡаҡҡыһыҙ тауыш менән тағы бер ҡат:

— Был совет мәктәбе! — тип иҫкәртте. — Мулла әфәнде, мин тағы бер ҡат әйтәм, бынан ары һеҙгә мәктәпкә килеп, дәрес боҙоп йөрөргә ярамай, — тине лә, һүҙ бөткәндә аңлатып, балалар артынан ишеккә йүнәлде.

— Һин, кем, мөғәллим, сәүит ҡағыҙын һанға һуҡмайһың икән! Мин һиңә хөкөм табырмын! — тип ярһыны мулла. — Табырмын!

Емеш, Шәүрә, Байрас урамда бер аҙға хәтле өсәү йәнәш барҙылар.

— Ата ҡаҙ һымаҡ ҡаңғылдап килде лә индесе бынауы мулла олатай, — тип һуҡранды Емеш. — Үәт, ҡалай уҫал!.. Мин унан ҡурҡам.

Шәүрә был ваҡиғанан да көлкө тапмай ҡалманы.

— Эй-й, мәҙәк, мулла олатай шундай асыуланған, хатта танауы, ата күркә суҡышына оҡшап, сосорап төшкән. «Ҡоҙор-ғоҙор-ғоҙор!» тип күркелдәп ебәрһә, бигерәк тә мәрәкә булыр ине, эйе бит, әхирәт?

Байрасты ваҡиғаның бөтөнләй икенсе яғы ҡыҙыҡһындырҙы.

— Ишеттегеҙме, Иштуған ағай ҡалай ғына һөйләште уның менән?! — тине ул, һоҡланып. — «Был — совет мәктәбе. Муллаға урын юҡ», — тип ҡырт киҫте лә ҡуйҙы бит, ә?! Шулай ҡурҡмай-өркмәй, ыҡ-мыҡ итеп тормай. Һәйбәт!

— Элекке заман булһа, мулла олатай нимә эшләтер ине икән уны?! — тип һуҙып ҡуйҙы инде Шәүрә лә. — Хәйер, Иштуған ағайым элек тә берәүҙән дә ҡурҡмай ине. Ҡурҡаҡ булһа, Айһылыу апайҙы Һатыбалдың танау аҫтынан алып ҡаса алыр инеме ни? Эйе бит, әхирәт?

Байрас ғорур тауыш менән:

— Минең атайым әйтә, беҙҙең Иштуған ул бына тигән егет, ысын кеше, ти, — тип ҡуйҙы. — Аңлайһығыҙмы — ысын кеше!

Байрастың был һүҙе ҡыҙҙарға бик мәҙәк тойолдо.

— Ҡит, биғәләш, ысын кеше булмай, юрый кеше булалыр шул! — тип көлөп ебәрҙе Шәүрә. — Һинең атайың, моғайын, Иштуған бынамын тигән егет, тип әйткәндер. Аңланыңмы?! Ә һин...

Емеш тә уйынлы-ысынлы:

— Ҡеше икән ул — ысын була. Әгәр ысын түгел икән, ул — кеше түгел, — тип раҫланы.

— Әй, Байрас, һин ниндәй, ысын кешеме йәки уйынсыҡ кешеме? — тип үсекләне һаман Шәүрә.

— Мин ысын кеше буласаҡмын, — тип һаман баяғыса ғорур һәм ҡаты итеп ҡабатланы Байрас. Уның тауышында ҡыйыу үҙһүҙлелек яңғырап китте. — Ҡыҙыҡайҙар, һеҙ көлмәгеҙ. Был һеҙгә егет һүҙе булыр!

Ҡыҙҙар, көлөшә-сулаша, суғырмаҡ юл буйлап йүгерешеп киттеләр.

— Емеш, кис мәктәпкә кил! — тип ҡысҡырып ҡалды Байрас. — Шәүрә, һин Емеште ҡалдырмай алып кил!

Шәүрә югереп барған ыңғайға ҡысҡырып яуап бирҙе:
— Ярар. Барырбыҙ! Барырбыҙ бит, әхирәт?
— Әллә.
— Әллә тимә. Барайыҡ. Комсомолға яҙылғандар бөтәһе лә бара. Харап мәрәкә була, — тип һөйләй-һөйләй, Шәүрә Емеш менән бер аҙға хәтле йәнәш югереп барҙы. — Әхирәт, һин ниңә комсомолға яҙылмайһың? — тип тә һораны.
— Әлләсе, — булды Емештең яуабы тағы.
— Һин яҙылһаң, мин дә яҙылыр инем, әхирәт. Әхәт агайым да, һаман комсомолға инмәйһең, тип асыулана. Комсомолға бер ҡыҙ яҙылһа, бүтәндәр ҙә инер ине, ти... Яҙылайыҡ, әхирәт!
— Мин уның ни икәнен дә белмәйем әле...
— Эй бигәләш, уның нимәһен белмәҫкә? Кис йыйылып уйнаған йәштәрҙе комсомол тиҙәр инде ул.
Емеш әхирәтенең арҡаһына шаярып төртөп ебәрҙе лә ары югереп китте.
— Һин үҙең бигәләш! Белдеңме?!
Шәүрә кинәнеп көлөп ҡалды:
— Әхирәт, мин һине бөгөн кис барыбер алып китәм! Бына күрерһең.

## IV

Әле күптән түгел генә ташландыҡ ятҡан иҫке мәҙрәсә йорто хәҙер гөр килеп тора. Унда көндөҙ балалар, кисен өлкәндәр уҡый. Йыйылыштар, кисәләр уҙғарыла. Һөрһөп бөткән иҫке мәҙрәсә йорто хәҙер, теләһә-теләмәһә лә, яңыса балҡып, тотош ауылды яҡтыртып тора. Бына бөгөн дә тышта ҡаты ғинуар селләһе хөкөм һөрөүгә, мөрйәлә әсе елдәр сеңләп илап тороуға ҡарамаҫтан, мәктәптә йылы, яҡты. Ауылдың бөтә йәштәре тип әйтерлек унда йыйылған. Хатта, бығаса әхирәте Шәүрәнең ялыныуына ла, Байрастың саҡырыуына ла ҡолаҡ һалмаған Емеш тә бөгөн бында килгән: «Исмаһам, һыңар күҙ менән генә ҡарап булһа ла күрергә, унда ниндәй мәҙәктәр булғанын белергә кәрәк тәһә!..» тип уйлаған да килгән. Ләкин ул барыбер әҙерәк һуңға ҡалған. Ул килеп ингәндә, мәктәп йәштәр менән шығырым тулған тип әйтерлек ине.
Был кисте уларга тағы Бибисара абыстай килгәйне.

— Емеш, бар. Мин бөгөн үҙем өйҙә ултырам, — тине Айһылыу еңгәһе.

Әллә Бибисара абыстайҙың йәнде биҙҙереп бөткән бер төрлө зарынан, әллә әсе һыҙғырып, өҙлөкһөҙ ҡыйыҡта өҙләгән ғинуар еленән биҙеп, Емеш был юлы киреләнмәне, Шәүрә менән сығып китте.

Эйе, ҡыштың үтә һалҡын, сарға кисе ине был. Сатнап-сәсрәп торған ҡорос ҡар табанды ялмап ята, әсе ел битте, ҡулды көйҙөрә, ҡоро һауа тынды ҡура...

Югерә-атлай килһәләр ҙә, ныҡ ҡына өшөргә өлгөргән ҡыҙҙарҙы йәштәр менән шығырым тулы мәктәп, әскелтем йылы бөркөп, яғымлы ҡаршыланы. Ғәҙәттән тыш йәнле, шаулы ине мәктәп.

Емеш, бындағы ғәҙәти булмаған яҡтылыҡҡа, шаушыулы күңеллелеккә хайран ҡалып, ишек төбөндә туҡталып ҡалды. Әҙерәк күҙ эйәләшкәс, ишек яҡ стена буйындағы яңғыҙ партаға барып ултырҙы. Бүтән парталарҙы стена буйына ҡатлап өйөп, уртала иркен генә майҙан эшләнгәйне. Бер төркөм йәштәр, ҡулға-ҡул тотошоп, шул майҙанда йырлай-йырлай әйләнеп йөрөйҙәр ине.

— Күрәһеңме, кружок уйнайҙар! — тип, дөрөҫөн әйткәндә, үҙенә лә бик үк аңлашылып етмәгән яңылыҡтар хаҡында ярһый-ашҡына аңлатырға кереште Шәүрә. — Беләһеңме, улар Марсализаны йырлайҙар, — тип, бик белдекле булып өҫтәп ебәрҙе. — Иштуған ағай өйрәтте, үәт!

— Марсализа түгел, Марсельеза... — тип уйсан ғына төҙәтте уны Емеш. — Мин ағайымдың дәфтәрендә шулай яҙылғанын күреп ҡалғайным... Уның әкрен генә йырлап йөрөгәнен дә ишеткәнем бар...

Шәүрә, әхирәтенең төҙәтеүен ишетмәгән дә һымаҡ, ярһып һөйләүендә булды.

— Иштуған ағай өйрәтте беҙгә Марсализаны, үәт. Матур көй, эйе бит? Ул әле беҙгә бүтән бик күп яңы көйҙәр ҙә өйрәтте. Әгәр һин кисен мәктәпкә йөрөһәң, ул көйҙәрҙе әллә ҡасан отоп алып бөтөр инең... Комсомолға ла яҙылыр инең. Ә һин өйҙә ултыраһың... Яңғыҙ үҙең!

«Яңғыҙ үҙем?! — тип, аптыраған һымаҡ итеп, эстән генә ҡабатлай Емеш. — Шулай уҡ яңғыҙ үҙемме икән ни мин? Мин үҙемә бер ҡасан да яңғыҙ һымаҡ түгелмен дәһә?!. Яңғыҙ?! Ә минең уйҙарым һуң?! — Ул эстән генә йылмайып алды: — Эй-й, уйҙар донъяһында кеше яң-

ғыҙ буламы ни? Ҡандай иркен, йәнле, ҡыҙыҡлы донъя лабаһа ул!..»

— Йә, ниңә томтайып тик тораһың инде, әхирәт?! — тип, унының еңенән тартты Шәүрә. — Беләһеңме, Байрас көн һайын мине йөҙәтеп бөтә: «Әхирәтеңде ниңә алып килмәйһең? Ниңә ул өйҙә ултыра?» — ти...

Ул арала, ҡыҙҙарҙы күреп, Байрас үҙе лә йүгереп килеп етте.

— Бына шәп булған! — тине ул, ҡыуанып. — Емеш тә килгән. Әйҙәгеҙ, түңәрәккә тотоноғоҙ!

Ул Емеште етәкләп алмаҡсы булғайны ла, ҡыҙ ҡулын артына йәшерҙе.

— Юҡ, юҡ. Мин, мин... уйнамайым...

— Әйҙә, Емеш!

— Әхирәт, тим, әйҙә инде! — тип, Шәүрә менән Байрас ҡат-ҡат ялындылар. Ә Емеш уларҙың һүҙен ишетте лә, ишетмәне лә, ул аптыранып, алйып, хатта сихырланып ҡатып ҡалғайны. Бығаса Емеш бер ҡасан да күрмәгән утыҙлы лампа менән яҡтыртылған киске мәктәп уға әкиәт батшаһының һарайы кеүек күренде. Уйындар, йырҙар, бейеүҙәр, үҙәкте өҙөп барған өр-яңы көйҙәр бөтәһе лә уға әкиәт донъяһы кеүек матур, ғәжәп тойолдо, уның иғтибарын күҙ етмәҫ алыҫлыҡҡа, хыял донъяһына эйәртеп алып китте. Ә Шәүрә менән Байрас Емештең кире ғәҙәтенән еңеүҙән тамам төңөлөп, ҡайтанан түңәрәккә барып баҫтылар. Йыр тағы ла көслөрәк, аһәңлерәк яңғырап китте. Тәржемәләп алынған булғанлыҡтан, һүҙ төҙөлөшөндә бер тиклем ҡытыршылыҡтар ҡолаҡҡа сағылып ҡалыуға ҡарамаҫтан, йыр көйө һәм ғорур революцион мәғәнәһе менән Емештең күңелен тотош биләп алды.

...Атты таң, нурлы таң илебеҙгә,
Хөрриәт ҡояшы балҡыны.
Яҡты байрам көнө килде беҙгә,
Яңы шатлыҡлы донъя тыуҙы... —

тип дәртләнеп йырланы йәштәр. Ә Емеш үҙе өсөн ят, алыҫ, әммә нимәһе менәндер уның йөрәген ярһытып биләп алған был яңы йырға төшөнөргә, аңларға, отоп алырға тырышып тыңланы ла тыңланы.

Йыр артынан йыр алмашынды. Бөтәһе лә яңы ине Емеш өсөн. Бигерәк тә күмәк йырҙар. Бығаса бит Илсеголда кешеләр яңғыҙ үҙе генә моңайып-зарығып йырлай

торғайны. Ә хәҙер... Бына тағы бер яңы йыр! Ҡалай ғорур, мөһабәт яңғырай ул. Емеш хатта уның йыш ҡабатланған бер куплетен отоп алырға ла өлгөрҙө шикелле.

...Был булыр иң ахырғы,
Иң ҡаты, ҙур жиһат.
Булыр һәм бәйнәлмиләл
Бәни инсан азат!..

«...Бәни инсан азат...» Был һүҙҙәр Емешкә тулыһынса аңлашылып та етмәй етеүен. Шулай ҙа ғәжәп яҡын, матур тойола. Ни өсөн? Моғайын, иркенлек, тигеҙлек хаҡында, бығаса бер кем күрмәгән, ишетмәгән ғәжәп бер яңы тормош хаҡында. Иштуған һөйләгән бәһлеүән Ленин хаҡында һөйләйҙер, бәлки, был йыр Емешкә?! Шуға күңелгә бигерәк яҡындыр ул.

Бына Байрас менән Шәүрә уның янына тағы югереп килде.

— Әйҙә, инде, Емеш, ялындырма!

— Әйҙә, әхирәт. Ҡайһылай мәрәкә бит уйнауы!

Емеш, күҙҙәрен ҙур асып, дуҫтарының һүҙен аңламаған һымаҡ аптырап ҡараны. Күңеле менән күктә осҡан Емешкә Байрастың да, Шәүрәнең дә һүҙҙәре ҡайҙандыр бик алыҫтан килгән һымаҡ булды. Шәүрә быны үҙенсә аңланы:

— Аһа, уның нимәһенә аптырайһың? Ана бит, Сабира, Сәмиғәләргә хәтле уйнап йөрөй. Заһира ла ҡалмаған. Һин кемдән кәм? Әйҙә, әхирәт, әйҙә!..

— Их, киреһең дә һуң һин, Емеш! — тине Байрас, тамам йәне көйөп. — Йә, беҙ киттек!

Улар, хатта етәкләшеп, тағы уртаға югерҙеләр. Тағы ярһып, дәртләнеп бейергә, йырларға керештеләр.

Шәүрә инде әхирәтен бөтөнләй онотоп, итек күтәрмәләрен тыҡылдата һуға-һуға, сәстәрен өлтәнләп бейене. Тик Байрас ҡына ара-тирә Емешкә үпкәле ҡараш ташлап алды.

«Эй киреһең дә инде!» — тип аңланы быны Емеш. — «Асыуланды...» — тип уйланы. Шунан уға ҡапыл күңелһеҙ булып китте. Ул үҙенең яңғыҙ ултырып ҡалыуынан тәүтапҡыр уңайһыҙлыҡ тойҙо. Әйтерһең, арбанан ырғып ҡалған кәрәкһеҙ бер төйөнсөк ине ул хәҙер.

«Эй, мин дә Шәүрә кеүек шулай ҡыйыу булһам ине...» — тип үкенеп уйлап алды ул. Уның да Байрас менән, ошо түңәрәктәге бөтә йәштәр менән ҡулға-ҡул то-

тотоноп, йырлап әйләнгеһе килде. Күңелендә хатта быға тиклем таныш булмаған ниндәйҙер көнләшеүгә оҡшаш тойғо ла уянып ҡуйҙы.

Ә Шәүрә, үс иткән шикелле, үҙенең бәләкәс, тос ҡына матур аяҡтары менән Байрас алдында тағы ла сорарак туҡылдата баҫып әйләнде, йондоҙ кеүек яҡты, ирке итеп уның күҙҙәренә ҡараны.

«Кара әле бынауы Шәүрәне. Әхирәтте... Байрасты, моғайын, яраталыр ҙа әле ул...» — тип уйлап алды Емеш. Уның инде тамам эсе бошоп китте. Байрасты Емеш тә бит бик яҡын күрә!.. Ул булмаһа, Илсеғолда ғына түгел, хатта бөтә донъяла бер йәм булмаҫ кеүек тоя... Әгәр ҙә берәү унан:

— Донъяла иң матур, иң батыр, иң ғәҙел малай кем? — тип һораһа, һис тә икеләнеп тормайынса, — Байрас! — тип әйтер ине ул. Юҡ, ҡысҡырып әйтергә баҙнат итә алмаҫ ине, уйлар ғына ине. Бына бит әле лә ул Байрасты ни хәтле яҡын күрһә, шул хәтле унан ҡасырға тырыша. Ни өсөн улай икән? Ҡурҡамы, әллә яҡын күргәнемде белеп ҡуйыр тип оялып ҡасамы? Моғайын, шулайҙыр... Ә һуң Емеш элек, бәләкәй генә саҡта уҡ, үҫә һалырға ла Сәлимә еңгә кеүек һылыу килен булырға ашҡына ине бит әле? Байрасты яҡын күргән өсөн, бынауы уҫал бейсм тип даны сыҡҡан Таиба әбейгә килен булырға ла риза ине хатта. Әммә хәҙер Емеште киленлек ҡыҙыҡһындырмай шул инде... Хатта бынауы иң матур малай ҙа — Байрас та кәрәкмәй һымаҡ. Донъяға кеше килен йәки кейәү булыр өсөн генә тыумайҙыр ҙабаһа!

Емеш, ҡырҡа боролоп, ҡарашын икенсе яҡҡа күсерҙе. Түңәрәк уйыны һаман дауам итте. Бөгөн, Емешкә бөтә һөнәрҙәрен күрһәтеп таң ҡалдырырға ниәт иткәндәй, йәштәр, арыу-талыуҙы белмәй, йырлайҙар ҙа бейейҙәр ине. Емешкә бигерәк тә бая тәү күргән кружок тигән уйын оҡшаны: бөтәһе бергә тотоношоп күмәкләп йырлап әйләнәләр, унан туҡтап, уртаға берәүҙе саҡырып сығаралар. Ниндәй һөнәре бар, шуны эшләп күрһәтергә ҡушалар уға: йырларға, бейергә, шиғыр һөйләргә, бик тә булмаһа, әтәс булып кикерекләргә... күңелле, ирмәк. Һөнәрен күрһәткән кеше уртала баҫып ҡала, ҡалғандар тағы йырлап әйләнәләр. Тағы туҡтайҙар, тағы кемдәрҙер уртаға сығаралар. Кружокта ҡатнашыусылар бөтә һөнәрҙәрен күрһәтеп бөткәнсе шулай дауам итә.

Кружокта әйләнгәндә, күмәкләп гел генә революцион

йыр йырлайҙар. Ә уртаға сығарылған кеше ниндәй йырҙы яҡшы белә, шуны башҡара.

Бына Емештең йәнс һөймәгән Моратшаны кемдер уртаға тартып сығарҙы. Унһыҙ ҙа арыҡ, оҙон битен сирғылап:

— Ниндәй наказ бирәһегеҙ, бөтәһен дә үтәйем, — тип йомтайып ҡарап тора ул.

— Әтәс булып ҡысҡырырға!

— Кәзә булып баҡырырға, — тип мәрәкәләйҙәр уны. — Моратшаның бүтән һөнәре юҡ уның.

«Ҡыҙҙарға хат яҙа торған һөнәре лә бар ул һөмһөҙҙөң, — тип екһенеп уйлап алды Емеш. — Мөхәббәтһеҙ, моғайын, үҙен берәйһе яратыр тип, өмөт тә итәлер әле ул?!.»

Моратша, үңәсен һуҙып, килбәтһеҙ ҡағынып, әтәс булып ҡысҡырып ебәрҙе. Бөтәһе лә кинәнеп көлдөләр. «Эй әҙәм аҡтығы, ҡулынан килмәгәс, исмаһам, тик кенә торһа ни була икән?» — тип тағы ла нығыраҡ йәне биҙеп эстән генә әрләп алды уны Емеш. Теге яҙыулы уҡтан һуң Моратшаға айырата асыулы ине ул.

Наказды үтәгәс, Моратша уртала ҡалды. Башҡалар тағы йырлап әйләнделәр. Бынында Мәжит Ғафуриҙең «Ҡыҙыл байраҡ» тигән шиғырын көйгә һалып йырланылар.

...Эй ҡыҙыл байраҡ,  
Нур бир йыһанға.  
Әйҙә, эшселәр,  
Алға һәм алға!..

Был шиғырҙы Емеш яттан белә ине. Таиба ҡоҙағыйы Закирҙең ҡомартҡылары һаҡланған һандыҡтан алып биреп уҡытҡайны уны. Бәлки, шуғалыр, йыр уға айырата яғымлы, яҡын тойолдо. Ул, күңеленән ҡушылып, йырлап торҙо.

Бына ул йырҙы ла йырлап бөттөләр. Моратша уртаға Шәүрәне саҡырып наказ бирҙе:

— Бейе! Нисек булдыраһың, шулай бейе!

Шәүрә, шуны ғына көткәндәй, ел-дауылдай өйөрөлөп, иҙәнде емерә баҫып тыпылдап, ҡыр кәзәһе шикелле етеҙ юрмәләп бейеп китте. Әмәлгә ҡаршы, Заһира ла ҡумыҙҙы үтә ярһып, матур итеп уйнап торҙо.

Тағы йырлап әйләнделәр. Шәүрә Байрасты һайланы. Шундай ҡыйыу, матур көлөп ҡарап, Байрастың ҡулынан тартып уртаға сығарҙы ла:

— Байраска «Ерән ҡашҡа»ны йырларға! — тип навал бирҙе.

— Шәүрәкәйҙе йырла!

— Әрмене! — тип шаулаша бүтәндәр. Байрастың һәйбәт йырлауын бөтәһе лә beләләр. Ә ул ниңәлер уйсан, хатта моңһоу һымаҡ булып уртала тын ғына баҫып торҙы.

«Эй-й «Ерән ҡашҡа»ны бигерәк һәйбәт йырлай бит ул», — тип ярһып уйланы Емеш тә. Элек ул Байрастың был йырын ситән аша йыш ҡына тыңлай торғайны бит...

Ләкин Байрас бөгөн «Ерән ҡашҡа»ны түгел, ә «Шәүрәкәй»ҙе йырланы.

Шәүрә килен кейгән еләнендең
Итәк осҡайҙары ла мунсаҡлы.
Айға ла ғына көнгә тиңләмәйем,
Һылыулығың, Шәүрәм, шул саҡлы!

Емешкә ҡапыл ауыр, ҡыйын булды. Йөрәге өрккән колонсаҡ шикелле дерелдәп китте. «Шәүрәгә атап йырлай! Шәүрәне ярата! — тигән ауыр уй иçенә килде. Һәм ул шунда уҡ уны яҡшы уй менән баҫырға тырышты. — Нисек яратмаһын, ти?! Үҙе матур. Етмәһә, исеме лә нindәй бит?! Йыр кеүек иркә яңғырай бит был исем — Шәүрәкәй! Юҡһа — Емеш?! Был исемдең йырға ҡушырлығы бармы ни?..»

Ләкин Емештең көйөнөүе оҙаҡҡа һуҙылманы. Бәхеткә ҡаршы, бөгөн бында уның өсөн бөтәһе лә яңы, бөтәһе лә ҡыҙыҡлы ине. Бына уның ағаһын да уртаға саҡырҙылар. «Уй, ағайым йырлай ҙа, бейей ҙә белмәй шикелле ул?.. Нимә эшләр икән?! — тип тынысһыҙланды хәҙер Емеш. — Үәт ҡыҙыҡ була инде!..»

— Шиғыр уҡы! Декламация һөйлә! — тип шаулашты

Емешкә был шиғыр ҙа Закирҙең шул уҡ һандығынан таныш ине. Шулай ҙа хәҙер ул ағаһының һөйләүендә,

Айға урлап, нурҙа уйнап,
Күкрәгемде нурланым.
Ит ғәфү, әй, ай, тинем мин,
Нурҙарыңды урланым.
— Һис зарар юҡ, ал, — тине ай.—
Ал да нур сәс халҡыңа.
Мин дә бит төн хаҡына
Алдым ҡояштың нурҙарын.

Емешкә был шиғыр ҙа Закирҙең шул уҡ һандығынан таныш ине. Шулай ҙа хәҙер ул ағаһының һөйләүендә

бөтөнләй яңы, үтә лә һәйбәт булып яңғыраны. Емеш уны күҙҙәрен йомоп, шиғыр ыңғайына талғын ғына тирбәлеп тыңлай. «Эй-й, ниндәй һүҙҙәр!..» Туҡта, кемдер яҡында ғына уның исемен әйтте түгелме? Емеш, тертләп, артына боролоп ҡараны. Унда, партаның арҡаһына ике ҡуллап тотоноп, татлы йылмайып Моратша тора ине.

«Үәт һорнайған. Ни тип килеп баҫҡан булды икән?» — тип уйланы Емеш. Ҡарашын тиҙ генә уйын барған яҡҡа күсерҙе. Моратша сигенергә ашыҡманы. Оҙаҡ ҡына уның янында әйләнгеләне, унан, аңғармаҫтан, уның алдына ғына кескәй ҡағыҙ киҫәге төшөрҙө.

— Уҡы әле, йәме...

Емеш дүрткә бөкләнгән был дәфтәр битенә, аптыранып, бер аҙ ҡарап торҙо ла йыртҡылап усына йомарланы: «Ҡайҙа ташларға икән?.. Утҡа яғырға ине!..»

Сәхибә туташтан уҡыған саҡта мөхәббәт хаттары яҙышыуҙы хөрриәт тип аңлап ҡалғаны бирле, Моратша ҡыҙҙарға хат яҙып йөҙәтә. Хатта Иштуғандың, был ҡылыҡ ҡыҙҙарҙы уҡыуҙан биҙҙерер, ата-әсәләрҙә мәктәп хаҡында насар фекер уятыр, тип төшөндөрөп ҡарауы ла уға аҡыл бирмәне. Ул башта Тимербай ағайҙың ҙур ҡыҙы Сабираға, унан Шәүрәгә яҙып йөҙәтте. Хәҙер инде Емешкә яҙырға тотондо. Емеш уның был килбәтһеҙ һәм аҡылһыҙ хаттарын үҙенең дәфтәре араһынан да, китабы эсенән дә, хатта утынлыҡтан да табып йөҙәне. Йәнәһе, Емеш, утын ала сыҡҡанда, алып уҡыһын. Хәҙер килеп хаттарын уҡ менән атып ебәрергә йәки туп-тура ҡулға бирергә лә баҙнат итә башланы.

— Емеш, мин бит һине яратам. Хатта уғымды һындырһаң да, өҫтөмә боҙло һыу һипһәң дә асыулана алманым, — тип бышылданы Моратша, парта артынан тороп. — Әйт әле, ниңә һин миңә шул хәтле асыулы?!

«Нимә эшләргә? Һорнайған, килбәтһеҙ малай ҡабат яҙырға баҙнат итмәһен өсөн, ни әмәл итергә тип, — саяланып баш ватты Емеш хәҙер. — Их, анауы ваҡыттағы кеүек, ҡулымда мөлдөрәмә тулы боҙло һыу булһа, әле лә бер ни уйламай башынан аша ауҙарып ебәрер инем дә бит!..»

Емеш тамам аптыранып урынынан торҙо. Ҡемдәндер ярҙам эҙләгәндәй, тирә-яҡҡа күҙ йөрөтөп сыҡты, ниҙер әйтергә, нимәлер эшләргә теләне. Ләкин бер ни ҙә уйлап сығара алманы. Шул саҡ ҡапыл ишек асылып кит-

те, ҡабаланып Хаммат килеп инде, бармаҡ менән генә ымлап Иштуғанды саҡырып алды, бышылдап ниҙер әйтте. Иштуған ашыҡ-бошоҡ кейенде лә, борсоулы тауыш менән:

— Комсомолдар, минең арттан! — тип югереп сығып та китте. Шәүрәнең ағаһы Әхәт менән Байрас та, башҡа комсомолдар ҙа унын артынан югереп сыҡтылар. Күҙ асып йомғансы мәктәптә ҡыҙҙар ғына тороп ҡалды. Хәйер, баяғыса парта арҡаһына йәбешеп, Емештең артында Моратша һаман баҫып тора ине әле. Тик уны күргән, иғтибар иткән кеше генә юҡ ине.

— Әйҙә, әхирәт, ҡайтайыҡ,— тип, Шәүрә Емеш янына килде.

— Нимә булды икән? Ағайымдар ҡайҙа китте икән? — тип хафаланды Емеш. — Уй, ҡурҡам бит әле. Уларға бер-бер хәл булмаһа ярар ине.

Сторож Урыҫ Иҙрис утты һүндереп, мәктәпте бикләп ҡалды.

— Ҡайтығыҙ, балалар. Ҡурҡмағыҙ. Бер ни ҙә булмаҫ. Берәй ашығыс эш килеп сыҡҡандыр, — тип тыныс ҡына һөйләнде ул. Ләкин Емешкә был күпте күргән ҡарт һалдаттың тауышында ла тынысһыҙланыу барлығы тойолдо.

«Уй, нимә генә булды икән!»

Был төндө Айһылыу ҙа, Емеш тә йоҡламай уҙғарҙылар. Һәр ҡайһыһы үҙенсә ут йотоп, тәҙрә янында өнһөҙ ултырҙы.

Таң алдында Иштуған ҡайтып инде. Айһылыуҙың «Ҡайҙа булдың?» — тигән һорауына:

— Күптән эҙләй инек... Теге самогонсыны тәки эләктерҙек, — тип яуап ҡайтарҙы ла: — Аһ-һ... арыт-т-ты... — тип урынға ауҙы. Һәм шунда уҡ йоҡлап та китте. Айһылыуҙың бүтән һорауҙары ла, иркә йәки үпкәле һүҙҙәре лә яуапһыҙ ҡалды.

Агаһы ҡайтҡас, Емештең дә йәне тынды. Айһылыу ҙа шәмде һүндерҙе. Таңғы буран ғына һаман тынмай, өй әйләнеп һыҙғырынып йөрөнө.

## V

Иртәгеһен ауыл арттырылған, ҡабартылған йәки насар ниәт менән боҙоп күрһәтелгән төрлө һүҙ менән шау-гөр килде. Берәүҙәре:

— Комсомолдар Шымбай ҡарттың йортона баҫып ингән! Был ни тигән эш?! Былай булһа, бөгөн уны, иртәгә һине килеп баҫмаҫтар тип ышанып буламы ни?! — тип, ҡырмыҫҡа иләүенә таяҡ тығырға маташты. Икенселәре:

— Иллә-мәгәр шәп булған. Сәрби менән Әхмәтша Шымбай ҡарттың мунсаһында самогон ҡайнатып, ир-ат аҙҙырып ята ине. Әле инде ҡарттың ҡарағас ҡоймалары ла йәшереп ҡала алмаған. «Бәлә — кеше башынан йөрөй. Теләһә, ете диңгеҙ кисеп тә килеп етә» тип белмәй әйтмәйҙәр шул... Тотҡандар үҙҙәрен. Бүтән ҡайната алмаҫтар. Миҫкә-һәскәләренә хәтле ватҡылап, сарпаҡлап ырғытҡандар, ти. Шәп иткәндәр. Ата-баба ҡыланмағанды ҡыланмаһындар үҙҙәре! — тип кинәнде.

— Эскеселек менән булашыуҙы сәүит законы тыя икән дәһә?! — тип аптыраусылары ла булды. — Ҡара һин уны! Эсеүҙе лә, тартыуҙы ла хилаф күрә ти! Ҡалай һәйбәт! Тап беҙҙеңсә ләбаһа!..

— Комсомолдар тегеләрҙең самогонын түгеп, ҡайнатҡыстарын ҡыйратып ташлағас, Сәрби тутай сәстәрен йолҡҡолап, үкереп илай, ти. Ни хәтле байлыҡты осорҙолар бит, ҡорогор хамсамулдар! — тип ҡысҡыра, ти. Түктермәҫкә, боҙҙормаҫҡа теләп, тартҡылашып маташа, ти. Ә тегеһе, Әхмәтшаһы, аҫтан һөҙөп ҡарап тик тора, ти... Бер ҙә ҡаршылыҡ күрһәтмәй, ти. Ҡайнатып ятҡанда ғына тотолғас ни, артын ҡыҫып тора, ти, шул яуызың!

— Бынауы Шымбай ҡартты әйт әле һин... Йәше етмештән уҙған, үҙенең һаман күҙе тоноп йөрөй бит. «Элек ер һатып урыҫтарҙан эсеп ҡайта ине. Хәҙер ҡайҙан алып эсә икән был?» — тип аптырай инек. Баҡтиһән, үҙенең ҡара мунсаһы араҡы шишмәһенә әйләнгән икән! Үәт, ҡартлас! — тип нәфрәтләнеүселәр ҙә аҙ булманы.

Был көндө Бибисара абыстай ҙа килеп Айһылыуға тик ошо хаҡта ғына һөйләп ултырҙы.

— Мин кейәү өсөн хафаланам... Ул беҙҙе мәзин тип, һанға һуҡмай йөрөһә лә, барыбер уны ҡурсыйым... Бынауы Әхмәтша унын был эшен шул көйө генә ҡалдырыр тиһеңме? Үс алмай ҡуямы һуң ул! Берәй яйын табып, кейәүҙең башын ашамаһын, тип ҡурҡам. Йә инде, белә тороп, Шымбай ҡарт тоҡомо менән булаш, имеш! Ул бит ете ҡат ер аҫтында йылан көйшәгәнен ишеткән, йылан ите ашаған ерән төлкө! Ишеткәнең барҙыр бит, халыҡта ир кеше иллелә ил ағаһы була, алтмышта аҡ-

һаҡалға, етмештә ерән төлкөгә әйләнә, тигән һүҙ бар. Ә был Шымбай ҡарт етмештә генә түгел, тыуыр-тыумыштан ерән төлкөгә әйләнгән яһил бит инде ул. Иштуған кеүектәрҙең генә башын ашағанмы ни ул! Эй-й, белмәйһегеҙ шул, белмәйһегеҙ... Йәшһегеҙ шул әле, йәшһегеҙ... Иҫе-аҡылы бар кеше Шымбай ҡартҡа барып бәйләнәме? Самогон түгел, теләһәләр бәүелдәрен эсеп күбенеп ятһындар ине!..

Әсәһенең был шомло һүҙҙәре Айһылыуҙы тәрән уйға ҡалдырҙы. Емештең күңеленә билдәһеҙ ҡурҡыныс һалды. Тик Иштуғандың ғына һис тә иҫе китмәне. Ғәҙәттәгесә ярһып эшләүен дауам итте. Һуңғы көндәрҙә ул, бигерәк тә уҡыу-уҡытыуҙан тыш, йәштәр көсө менән берәй концерт ойоштороп, хатта бәләкәс кенә пьесалар уйнап ҡарау уйы менән янып йөрөй ине. Әлбиттә, был осорҙа Илсеғол кеүек кескәй ауыл өсөн булмаҫ хыял кеүек күренә был күптәргә. Хатта уның йән дуҫы Әхәт тә, кәләше Айһылыу ҙа уның был эше барып сығыуға ышанып етмәй. Шулай ҙа Иштуған һалдат сағында ҙур ҡалаларҙа күп кенә концерттәр ҡараны лабаһа. Тимәк, бер аҙ тәжрибәһе бар. Етмәһә, хатта бер тапҡыр Островскийҙең «Ғәйепһеҙ ғәйеплеләр» драмаһын күргәс, үҙе лә шул пьесала төп ролде уйнап ҡарау теләге менән ярһып йөрөгәйне. Әле лә ул һаман:

— Эх, бына шул пьесаны күрһәтергә ине беҙҙең халыҡҡа ла! — тип яна. Ләкин яныу бер, мөмкинлек икенсе нәмә шул. Үҙеңдән аша атлап үтеп китеп буламы ни?!

Эйе, пьеса ҡуйыу хаҡында уйларға ла мөмкин түгел ине әле. Берҙән, бының өсөн йәтешле пьесалар юҡ, икенсенән, булһа ла, уны кем менән уйнайһың? Дөрөҫ, йәштәрҙән Иштуғандың үҙе кеүек үк донъя күргән, концерт, спектакль нимә икәненә төшөнгән Әхәт, Айһылыу бар. Фронтташ дуҫтары Әхәт менән Айһылыу уны был囘 эштә лә төп башына ултыртмаҫтар. Ҡулдарынан килгәнде ботәһен дә эшләрҙәр. Ләкин барыбер ике-өс кеше менән эш сығарып булмаҫ шул бында... Дөрөҫөн әйткәндә, Иштуғандың үҙенең дә тәжрибәһе юҡ табаһа! Ҡеше уйнағанды күреү генә етәме ни?

Иштуған шулай уйланып, оҙаҡ баш ватты. Хаммат ағаһы менән дә, Әхәт менән дә, хатта Айһылыу менән дә кәңәшләште. Ахыр килеп, һынамаҡ өсөн, йәштәр, уҡыусылар көсө менән берәй концерт ойоштороп ҡарарға булды. Ауылдаштарында уйын-көлкө, йыр-бейеүгә

һәүәҫлек тә, оҫталыҡ та етерлек икәнен белә ине ул. Йәштәр араһында ғына түгел, өлкәндәрҙән дә халыҡтың классик көйҙәрен ғәжәп һәйбәт башҡарыусылар, сәсәндәр, ҡумыҙҙа, ҡурайҙа уйнаусылар, бейеүселәр етерлек ине был ауылда. Дөрөҫөн әйткәндә, йырлай-бейей, һөйләй белмәгән кешене табыуы ҡыйыныраҡ булыр ине... Шулай булғас, ошо тәбиғи байлыҡты ҡәҙерләп йыя, һайлап ала, ойоштора ғына белергә кәрәк тәһә!.. Һәм Иштуған йәне-йөрәге менән теләп ашҡынып эшкә тотондо. Ахыр килеп, үҙе ҡасандыр Ырымбурҙа, эшселәр клубында күргән татар һәм башҡорт эшсе йәштәренең концертенә оҡшатырға тырышып программа төҙөнө. Яңғыҙ һәм күмәк бейеү номерҙәрен әҙерләүҙе үҙенең тереме, илгәҙәк дуҫы Әхәткә — ауылдың иң оҫта бейеүсеһенә тапшырҙы. Ә йырлау, шиғыр һөйләү, көләмәс һүҙ оҫталарын ойоштороуҙы үҙ өҫтөнә алды. Иң ҡыйыны бындай номерҙәрҙе әҙерләү булаһын белә ине ул. Сөнки бығаса кеше алдына сығып йырлау түгел, бер ауыҙ һүҙ әйтергә ҡыймай оялып тороусан кешеләрҙе сәхнәгә сығып баҫырлыҡ хәлгә килтерергә кәрәк бит. Эйе, еңел түгел. Эйе, бында үҙалдына һәр кем йырлай. Йырһыҙ йәшәмәй. Йырҙың-моңдоң баһаһын да белә. Ә бына кеше алдында йырларға, бигерәк тә ҡатын-ҡыҙ, ояла. Хатта ғәйеп күрә. Уларға был ҡараштың хаталығын аңлатырға, күңелдәренә сәхнәгә сығып йырларҙай дәрт һәм ҡыйыулыҡ һалырға кәрәк бит. Эйе, кәрәк. Халыҡ йөрәгенең аҫыл таштарын ҡояшҡа сығарып йымылдатып күрһәтер саҡтар етте бит хәҙер.

Иштуған хатта был концертка үҙенең һеңлеһе Емеште лә ҡатнаштырырға теләй ине. Сөнки уның шиғыр, йыр яратыуын белә. Ҡескәй генә сағынан уҡ үтә моңло итеп үҙалдына гел йырлап йөрөгәнен дә хәтерләй ине. Бер саҡ ул Емешкә «Анам ҡәбере янында» тигән шиғырҙы уҡып күрһәтте. Был шиғырҙа Емеш кеүек ҡескәй бер ҡыҙҙың үлгән әсәһен һағыныуы, әсәһенә тап Емештең күңелендә ятҡан кеүек моң-зарын һөйләүе бирелгәйне. Шиғыр ҡыҙға бик ауыр тәьҫир итте. Әйтерһең, ул тап Емештең күкрәгендә йәшәгән, ләкин әйтелмәгән әсе һағышы хаҡында яҙылғайны.

— Был шиғырҙың көйө лә бар, — тип хәбәр итте Иштуған. — Бер саҡ ҡалалағы эшселәр клубында һинең кеүек бер ҡыҙ йырлағайны уны. Әсәһенең ҡәбере янында йырланы. Мин уны шунда отоп алдым...

Емеш ҡото осоп ағаһына ҡараны:

— Абау, ҡәбер янындамы?! Ҡурҡмаймы?!

— Ниңә зыяратҡа барһын? Сәхнәлә тим дәбаһа. Юрый ғына яһалған ҡәбер янында тим... — тип аңлатырға тырышты Иштуған. — Былай ғына... Юрый ғына... Емеш тағы ла нығыраҡ аптыраны:

— Сәхнә нимә һуң ул, ағай? Мин бер нәмәкәй ҙә аңламайым да ул... Ундай һүҙҙе ишеткәнем дә юҡсы...

Иштуған ауыр ғына көрһөнөп ҡуйҙы: «Ысынлап та, был тыумыштан һуҡыр кешегә һөттөң төҫөн аңлата алмаған һымаҡ булып сыға түгелме һуң?» Шулай ҙа сигенергә йыйынманы.

— Аңларһың... Аҙаҡ аңларһың, һылыу. Хәҙер һин йырҙы тыңла! — тине лә әкрен генә моңло итеп йырлап ебәрҙе. Емеш йотлоғоп тыңланы. Иштуған ҡарындашына төбәп ҡараны:

— Йә, оҡшаймы һиңә был көй?

— Оҡшай! — тине Емеш, тәьҫирләнеп.— Бик оҡшай. Ағай, тағы бер ҡат йырла әле...

Иштуған тағы бер ҡат йырланы. Унан:

— Йә, һин шулай йырлай алырһыңмы? — тип һораны.

Емеш, үҙенең эске кисерештәренә ҡолаҡ һалып, оҙаҡ ҡына тынып торҙо. Эйе, был шиғырҙың һүҙҙәре лә, көйө лә ғүмер буйы үҙенең йөрәгендә ҡабатланып йөрөгән кеүек яҡын ине уға.

— Йырлармын, — тине ул, өҙөп. — Ул бит минең күңелемдә үҙенән-үҙе йырланып тора һымаҡ...

— Улай булһа, йә, йырлап ҡара, һылыу!

— Ҡуйсы, оялам да, ағай.

— Ә мәктәптә, сәхнәлә!

— Бәлки, унда, кәрәк булғас, баҙнатым етер...

— Көйөн отоп алдыңмы һуң?

— Мин уны гел йырлап йөрөгәнмен һымаҡсы...

— Булды. Йырларһың.

Иштуған еңел һулап һикереп торҙо. Уның башҡа «артистәр» менән дә шулай айырым-айырым һөйләшеп, эшләшәһе бар бит әле.

Шул көндән алып был йыр Емештең иҫенән бер генә минутҡа ла сыҡманы. Уның үҙ моңо, үҙ йөрәк зары булып һәр саҡ ҡолағында яңғырап ҡына торҙо. Яңғыҙ ҡалған саҡтарында Емеш уны тауышланып та йырланы. Был йырҙы йырлаған һайын ул, үҙен әсәһе менән һөй-

ләшкән һымаҡ тойоп, йыуанып китә ине. «Тик бына уны кеше алдында ғына писек йырларға? Оят та, ауыр ҙа булыр. Етмәһә, үҙеңде тыя алмай, ысын илап ебәрһәң?.. Әллә йырлай алмайым тип әйтергәме икән ағайыма? Килешмәҫ шул. Уға бит һүҙ бирҙем. Үҙ һүҙеңдән үҙең баш тартыу кешелекме ни?!»

Шундай төрлө тынысһыҙ уйҙар менән уҙғарҙы Емеш был көндәрҙе. Ахыр бына тәүге концерт көнө килеп етте. Ҡесаҙна кисе ине. Илсеғол йәштәре, эңер төшкәс тә, берәмләп тә, төркөм-төркөм булып та мәктәпкә ағыла башланы. Ул бөгөн, күҙ асып йомғансы тигәндәй, клубҡа әйләндерелгән, сәхнә эшләнгән, шаршау ҡоролған, парталар урынына эскәмйәләр ултыртылған. Иштуған менән Айһылыу алдан уҡ югерҙе.

— Емеш, һуңлама! — тип иҫкәртеп китте Иштуған.— Һин бит бөгөн артистка! Ҡара, беҙҙе һемәйтмә!

— Ярар, — тип ҡалды Емеш. Ә үҙенең йөрәге атылып сығырҙай булып тулай ине. Бер ҙә генә йәһәт әҙерләнә, өйҙән сығып китә алмай ыҙаланды. Ә ҡасан инде ул көскә йыйынып, баҙнатланып барып ингәндә, мәктәп халыҡ менән шығырым тулғайны. Алғы эскәмйәләрҙең береһендә, ике яғына ике ҡыҙын алып, Тимербай ағайҙың ҡатыны Баҙыян еңгә ултыра. Шәүрәнең әсәһе менән атаһы ла бар, Өммөгөлсөм еңгә менән Хаммат ағай ҙа бында. Хатта Хисбулла менән Бибеш тә килгән.

«Уй, шул хәтле кеше алдында ҡалай ауыҙ күтәреп йырлап тормаҡ кәрәк?!» Емеш, ҡаушап, ишек төбөндә туҡталып· ҡалды: «Әллә ҡасып сығып ҡына китәйемме икән?!.»

Шул саҡ уның янына Шәүрә югереп килеп етте:

— Үәт, әхирәт тә килде. Әйҙә, әйҙә, анауында барып ултырайыҡ. Мин икебеҙгә урын алып ҡалдым, — тип, Емештең ай-вайына ҡуймай, тартҡылап алға алып китте. — Бына ошонда һәйбәт бит?

Бында бөтә әйләнә-тирә, әкиәттәге тылсымлы таяҡ менән ымлағандай, күҙ асып йомғансы танымаҫлыҡ булып үҙгәргәйне.

Емеш тәүге аптырау һәм ҡаушауҙан арынып өлгөрмәне, уларҙың маңлай ҡаршыһында ғына эленеп торған сигеүле ҡыҙыл шаршау әләгә-тартыла бер яҡҡа шыуышып китте. Уның күҙ алдына таҡталарҙан теҙеп эшләнгән кескәй генә бер ҡалҡыулыҡ килеп баҫты.

— Сәхнә, — тип аңлатты Шәүрә. — Бөгөн Әхәт ағайым яһап ҡуйҙы, үәт. Шаршауҙы таныйһыңмы?

Эйе, Емеш уны таный ине. Айһылыу еңгәһе уны ҡыҙ сағында төрлө кизеләрҙән биҙәкләп һуҡҡан... Ләкин Емештә хәҙер шаршау ҡайғыһы юҡ ине. Ул хатта әхирәтенең элек-электән шулай, һәр яңылыҡты унан алда белеп хәбәр итә торған ғәҙәте барлығына ҡыуанырғамы, көнләшергәме өлгөрмәне, сәхнә уртаһына Иштуған ағаһы сығып баҫты, матур, һөйкөмлө итеп йылмайҙы, хатта баш эйеп тә алды. Бөтәһе шау-гөр килде. Һәр кем үҙе өсөн өр-яңы булған был ваҡиғаға һис тә тартынып тормай үҙенсә баһа бирергә ашыҡты.

— Аһа, ҡара әле беҙҙең Иштуғанды, ҡалай һыланып-һыйпанып ебәргән!

— Ҡәмитте Иштуған үҙе күрһәтәме икән ни?

— Булмаҫ тимә. Мөғәллим була алғанды, кәмитсе булып килештермәҫ тиһеңме әллә?

— Аҙҙырырға ла, яҙҙырырға ла килештермәксе, күрәһең.

— Йә, бушты ләпелдәмә. Ниндәй аҙғынлыҡ булһын бында?

— Бисәләр, һеҙ бытылдап бөтәһегеҙме?

Иштуған, халыҡтың тынысланыуын көтөп, һаман шулай ягымлы ғына йылмайып ҡарап торҙо. Унан, әллә ниндәй, бөтөнләй яңы, яңғырауыҡлы, дәртле тауыш менән:

— Иптәштәр! — тип өндәште. — Иптәштәр, ағайҙар, еңгәйҙәр, инәйҙәр, оләсәйҙәр, бабайҙар, олатайҙар, ҡарттар, йәштәр, бәпестәр! — тип шаярып теҙеп китте. Ҡешеләр күңелле көлөп, тағы шаулашып алды. — Бөгөн беҙ һеҙгә Илсеғол йәштәренең һөнәрен күрһәтәбеҙ. Йәғни моҫолән, концерт бирәбеҙ! — тип белдерҙе. Ҡонцерт тигән һүҙҙең мәғәнәһен төшөндөрөргә, концерт ваҡытында нисек ултырырға, нисек тыңларға кәрәклекте аңлатырға тырышты. Унан тағы ла күтәренкерәк тауыш менән: — Ҡонцертебеҙҙең беренсе номерендә — хор! — тип иғлан итте. — «Матәм маршы» — революционерҙәр йыры. Уны элек көрәш юлында ҡорбан булған революционерҙарҙе күмгәндә йырлағандар. Хәҙер бөтә майҙандарҙа, клубтарҙа, байрам мәлендә урамдарҙа яңғырай был революцион йыр. Уны юлбашсыбыҙ Ленин үҙе лә яратып йырлай икән.

Бына тағы шаршау ябылды. Тағы әләгә-тартыла асылып китте. Был юлы сәхнәлә бер төркөм йәштәр, уҡыусы балалар өйкөлөшөп баҫып тора. Алғы рәттә Байрас, Шәүрә, Моратша, (ҡайһы арала сығып баҫҡан?) Сабира, Сәмиғә. Хатта Заһира! Артҡы рәттә Әхәт, Айһылыу, Иштуған.

Йырҙы үтә моңло күкрәк тауышы менән Иштуған башлап ебәрҙе.

Туғандар, шаһиттәр, ҡорбан
булдығыҙ,
Ғәзиз халыҡ өсөн тартышҡанда...

Башҡалар берҙәм йырға ҡушылды. Тирә-яҡ тып-тын булып ҡалды. Үҙҙәре өсөн өр-яңы формалағы был мөһабәт һәм ғорур моңдо бөтәһе лә тын да алмай онотолоп тыңланы. Ә Емеш әллә аптырап, әллә ҡыуанып, үҙалдына:

«Ленин яратҡан йыр!» — тип һуҙып ҡуйҙы. Уның өсөн был башҡа һыймаҫтай, аҡыл етмәҫтәй яңылыҡ ине. Сөнки уның тоғро батыры — Ленин ғәҙәти кешенән бик-бик юғары тора. Уның башҡа ябай кешеләргә хас ғәҙәттәре булыуын, ниндәйҙер йыр яратыуын, йырлауын ул башына ла һыйҙыра алмай һәм быны теләмәй ҙә ине. Шул уҡ ваҡытта был уны сикһеҙ ҡыуандырған да һымаҡ булды: Ленин — иң көслө, иң изге күңелле олпат кеше — иң ябай кеше кеүек йыр ҙа ярата, хатта йырлай ҙа икән дәһә! Ошо ваҡыт уның хәтеренә ҡасандыр Ҡарасәс әбейҙән ишеткән бер һүҙ килеп төштө: «Дан өсөн, мал өсөн түгел, байҙарҙан бүләк талым итеп тә түгел, ә йырҙы ысын күңелдән яратҡан, бөтә йәне-йөрәге менән йырлаған йырсы — иң кешелекле, иң саф йөрәкле кеше...» — тигәйне ул.

Емеш уйға бирелеп, онотолоп ултырған арала хор тәүге йырҙы йырлап бөтөп икенсеһенә күсте.

— Салауат маршы! — тип иғлан итте Иштуған. Һәм тағы йырҙы үҙе башлап ебәрҙе:

Батша, баяр иленән
Яу ебәреп ҡырҙырған.
Ҡатын-ҡыҙын ҡол итеп,
Баярҙарға һаттырған.
Диңгеҙ булып беҙҙең ҡан
Башҡорт илен буяған.
Яндырылып ауылдар,
Башҡорт илен ут алған.

Эй батырым, яуға бар.
Шуның үсен бөгөн ал.
Ир Юлайҙың балаһы,
Дошманыңды ҡыр ҙа һал!

Яңғыҙ номерҙәрҙән Емешкә иң оҡшағаны Әхәттең, Шәүрәнең бейеүе, Байрастың йырлауы, Иштуғандың шиғыр һөйләүе булды. Әлбиттә, Заһира ла ҡумыҙҙы бик оҫта тартты. Ләкин Емешкә ул оҡшаманы. Күрәһең, уның ата-олатаһына ҡарата булған екһенеү Емешкә ҡумыҙҙы яратырға ҡамасауланы. Ә инде Урыҫ Иҙристең элеге-баяғы үҙе менән йәштәш балалайкаһында «Һай, Дунай»ҙы, үҙе уйнап, үҙе йырлауы концертка көтөлмәгән күңеллелек, йәнлелек индерҙе.

— Һай ҡартың, йәшәгере!

— Борон эсһә йәки Собхан старшинаға асыуы килһә генә дыңғырҙата торғайны был ғәләмәтен. Хәҙер апайыҡ көйө лә өҙҙөрөп уйнап ебәрә ләбаһа Иҙрис олатай!

— Йәшәргән ҡартың, йәшәргән! — тип ҡыуанып хупланы уны тамашасы. — Тағы уйна әле, Иҙрис олатай! Урыҫ таҡмаҡтарын әйттереп ебәр! — тип күтәрмәләне.

Был йылдарҙа, ысынлап та, үҙендә йәшлек теремеклеге тойған Иҙрис ҡарт, балалайкаһын сая дыңғырҙатып, русса частушкалар әйтте. Уның частушкалары элек-электән балаларса бер ҡатлы, әҙәпле шаян әйтемдәрҙән генә тора, хатта ныҡ ҡына иҫерек саҡтарында ла шул саманан уҙып китмәүе менән һәйбәт ине. Был юлы ҡарт гәҙәттәге бер ҡатлы частушкаларға:

Мировой поҗар горит,
Буржуазия бежит,
Ай люли, ай люли,
Ай люли, ай люли... —

тип, хәҙерге замандың иң таралған таҡмаҡтарын да ҡушып ебәрҙе.

— Һай йәшәгере!

— Бирешмә, йәштәрҙән уҙҙырып ебәр, олатай! — тип хуплап, күтәрмәләп тыңланы уны халыҡ.

Тамашасының ысын йөрәктән сыҡҡан йылы, яҡты тойғоһо менән ҡанатланған ҡарт тағы ла ирәбеләнеп, балалайкаһын дыңғырҙатырға, күңелле частушкаларын сәсергә кереште. Күренеп тора, ул ысын күңел йәшлеген, һуңлабыраҡ булһа ла үҙен килеп тапҡан яңы бәхет, хәҙер, хөрмәт шатлығын кисерә ине.

Шулай итеп, ахыр бына Емешкә лә сират етте. Иштуған уны етәкләп сәхнә артына алып инде, Айһылыу еңгәһе уға сабата кейҙерҙе, аҡ алъяпҡыс бәйләне, яулыҡ ябындырҙы.

— Һин, Емеш, хәҙер етемәк татар ҡыҙы булдың, — тип мәрәкәләне. Иштуған ағаһы уны сәхнәгә, һоро сәкмән ябып ҡәбергә оҡшатып яһалған түмгәк янына алып барып баҫтырҙы.

— Был һинең әсәйең ҡәбере икән, ти. Һин бер купецтә ялсылыҡта йәшәйһең, ти. Әсәйең янына ауыр тормошондан зарланырға килгәнһең, ти... — тип, Емешкә тағы бер ҡат үҙенең ролен аңлатты. — Аҙаҡтан, әсәй мине лә үҙ яныңа ал, был донъяла мин бүтән йәшәй алмайым тигән юлдарҙы йырлағас, юрый ғына илаған булып, ҡәбер өҫтөнә ауырға кәрәк. Шунан шаршау ябыла тип әйткәйнем, онотманыңмы? — тип ҡат-ҡат һорашты. Емештең өндәшер хәлҫ юҡ ине: «Аңланым» тигәнде белдереп, баш ҡына ҡағып торҙо. Ҡурҡыу, оялыу, тағы әллә ниндәй ят, ауыр тойғоларҙан унығ аяҡ быуындары ҡалтырай, күҙҙәренә йәш эркелә ине был минутта. Концерт менән артыҡ ныҡ мауыҡҡан ағаһы быны аңламайҙа, күрмәй ҙә ине.

Бына тағы шаршау асылып китте. Иштуған:

— Хәҙер Емеш һылыу һеҙгә «Анам ҡәбере янында»-ны йырлай, — тип белдерҙе лә сәхнә артына сығып та китте. Тамашасы менән күҙгә-күҙ ҡарашып, «ҡәбер» янында Емеш бер үҙе торҙо ла ҡалды. Алда, бик яҡында Зөбәржәт еңгә менән Баҙыян еңгә ултыра. Улар, ниңәлер, Емешкә хафаланып та, йәлләп тә ҡарай һымаҡ. Ғөмүмән, йәлләгәнде яратмаған Емешкә был тағы ла ауыр тәьҫир итә. Тик бынауы Урыҫ Иҙрис олатай ғына күк мыйығын һыпыра-һыпыра, ҡәнәғәт йылмая һымаҡ. Емештең быуынына әҙ генә хәл ингәндәй булды. Туҡта, анауында икенсе рәттә генә ултырған апаһы менән еҙнәһе уға хатта ҡурҡынып текләй түгелме һуң? Эйе шул. Бибеш апаһының хатта ҡото осоп киткән һымаҡ. Бәлки, Емеш ҡәбер янында баҫып торғанға ҡурҡҡандыр?! Бәлки, Емештең ошо ерҙә йығылып үлерлек хәлдә тороуын аңлайҙыр ул?!.

Емеш ҡарашын залдан «ҡәбергә» күсерҙе. Иштуған ағаһының әйтеүе буйынса, ул башта йырларға, унан илап йығылырға тейеш. Ә ул хәҙер үк илап йығылыр төҫлө. Нисек итергә икән?..

— Йә, башла инде, Емеш! — ти сәхнә артынан сабырһыҙ бер тауыш. Был — Иштуған. — Башлай һал, тим!

Емеш, тауышын көскә сығарып, йыр башланы.

Эй анам, моңло анам, зарлы анам,
Был ҡәберҙе күрһә күҙем,
Өҙөлә үҙәгем, янам...

Беренсе юлдарҙы йырлағандан һуң, ул баҙнатлана төштө. Ә бер аҙҙан инде бөтә нәмәне онотто. Уның өсөн зал да, кешеләр ҙә, хатта үҙе лә юҡ, фәҡәт үҙәк өҙгөс йыр ҙа, моңһоу ҡәбер генә йәшәй ине был донъяла.

Емештең сиктән тыш тәрән ҡайғы сағылған йөҙө лә, һыҡтау ҡатыш ҡалтырау менән яңғыраған моңло тауышы ла, күрәһең, шул хәтле тәбиғи сыҡты, хатта залда бөтәһе телһеҙ ҡалып тыңлап ултырҙы. Ҡуптәрҙең күҙенә йәш эркелде. Тик Емеш инде бер ни ҙә ишетмәй, бер ни ҙә күрмәй ине. Ул етем ҡыҙ ролен уйнамай, ә үҙ хәлен бөтә йәне-йөрәге менән кисерә ине был минутта. Бына йырҙың аҙағы яҡынлашты. Ләкин уны аҙағына хәтле йырлап бөтөрөргә ҡыҙҙың көсө етмәне.

...Мин етем, моңло етемде,
Бар кеше хурлай, ҡаға.
Илай-көйләй моңланам,
Әсәм, йөрәктән ҡан тама! —

тигән юлдар менән бергә ул үкһеп илап ҡәбер өҫтөнә ауҙы. Ашығып шаршауҙы яптылар. Әле генә себен осҡаны ла ишетелерлек итеп тынып ултырған тамашасылар, ауыр көрһөнөп, тағы һөйләшеп-шаулашып алдылар:

— Ҡарасы, үҙәкте өҙҙө лә ҡуйҙы лабаһа!

— Әйтмә лә, ҡуйсы инде. Ҡуйсы...

— Ҡитсе, кит, шул тиклем дә моңло бала булыр икән был Емеш!

— Тауышы ниндәй бит, тауышы! Таш йөрәктәрҙе лә иретерлек тәбаһа!.. Һәр кем йырҙан алған тәьҫирен шунда уҡ әйтеп ҡалырға ашыҡты. Ә был ваҡытта Емеш һаман үкһеп «ҡәбер» өҫтөнән тора алмай ята ине. Йырҙың уңышы менән ҡанатланған Иштуған көлә-ҡыуана ҡарындашының янына йүгереп килде.

— Вот артистка! Төптө артистка икәнһең һин, Емеш! Бөтә кешенең иғтибарын яуланың да ҡуйҙың бит! Йә, һылыу, тор. Ятма инде! Шаршау төштө бит! — тип кү-

ңелле йәнләнеп һөйләнде. Шул саҡ өҙә баҫып сәхнәгә Бибеш килеп менде. Илап та, оялып та һаман тора алмай ятҡан Емеште ҡулынан һелкетә тартып торғоҙҙо.

— Тор, ни эшләп ятаһың былай хур булып!

Емеште араларға маташҡан Иштуғанды этәреп үк ебәрҙе.

— Кит, йәнһеҙ! Ниңә бөтә кеше алдына меҫкен итеп, етем итеп сығарып ҡуяһың уны?

— Ни эшләп меҫкен булһын? — тип ғәжәпләнде Иштуған. — Артистка лабаһа ул! Күрҙеңме, халыҡ ҡалай яратып тыңланы. Хатта илаштылар ҙа!..

— Ҡуй, йәнһеҙ, таш бәғер! — тип ҡабатланы Бибеш, тағы ла ҡатыраҡ асыуланып. — Бер ни ҙә аңламайһың, күрмәйһең икән дәбаһа һин?! — Унан һаман башын күтәреп кешегә ҡарарға ҡыймай торған Емеште етәкләп, ингәндәге кеүек үк өҙә баҫып, сәхнәнән төшөп китте.

— Әйҙә, һылыу, беҙгә ҡайтайыҡ. Үҙебеҙҙә торорһоң. Тапҡандар кемдән кәмитсе яһарға!..

«Әллә ысынлап та кәрәкһеҙ номер булдымы икән был? — тип аптырап тороп ҡалды Иштуған. — Ысынлап та, һылыуымдың етемлеген иҫенә төшөрөп ҡайғыһын яңырттыммы икән әллә? Хәйер, үҙе етемлекте белмәгән бала был ролде шул хәтле ысын күңелдән башҡара алыр инеме ни?»

— Йә, ниңә ҡатып ҡалдың? Халыҡҡа концерт ошоноң менән бөттө, тип әйт. Таралһындар, — тип уның уйын бүлде Айһылыу. — Бер юлға етәр.

— Юҡ, шундай күңелле башланған концертте былай күңелһеҙ күренеш менән бөтөрөү килешмәй, — тине Иштуған, үҙһүҙлеләнеп. — «Интернационал» менән тамамлайбыҙ! Егеттәр, ҡыҙҙар, сәхнәгә!

Был юлы хатта Хаммат ағай ҙа хорға, йәштәр араһына килеп баҫты. Бөтә мәктәпте яңғыратып ғорур, мөһабәт революцион йыр яңғырап китте:

Ҡуҙғал, уян, ләғнәт ителгән
Ҡолдар һәм астар донъяһы!

«Интернационал»ды Иштуған мәктәптә көн һайын тип әйтерлек йырлатҡанлыҡтан, уның һүҙен дә, көйөн дә балалар һәм йәштәр бик яҡшы белә ине. Йыр ҡеүәтле һәм мөһабәт яңғыраны.

## VI

Емештең уҡырға йөрөмәй башлауына ике-өс аҙналап ваҡыт уҙып китте. Теге концерттән һуң Иштуған уны өгөтләп тә, асыуланып та ҡараны, булманы. Бына бөгөн дә, тағы шул хаҡта һөйләшергә тип, Бибештәргә килде. Өйгә инеү менән бер үк һорауын ҡабатланы:

— Бибеш, ниңә Емеште уҡырға ебәрмәйһең? Емеш, ниңә һин уҡырға бармайһың?..

Әсәһенең итәгендә иркәләнеп ултырған Һөйөндөк кенә сикһеҙ ҡыуанып һикереп торҙо. Иштуған ағаһыныңботонан ҡосаҡлап алды.

— Ағай, сисен. Миңә ағас ат яһап бир! Яһайһыңмы, ағай, ә? — тип һырпаланды.

Һөйөндөктөң уйынсыҡ хайуандар яратыуын белгән, шуға күрә ағастан, йәки ҡағыҙҙан йә ат, йә кәзә бәрәсе яһап биреп уның күңелен яулаған Иштуған был юлы уға һис тә иғтибар итә алманы. Бибеш менән Емештең уҡыуҙы шулай һанға һуҡмауына уның артыҡ эсе бошоп килгәйне бөгөн. Әле инде был эс бошоу хатта асыуға әйләнеп үк китте. Сөнки Бибеш менән Емештең өндәшмәҫ гәзәте уны был юлы тамам сығырҙан сығарҙы.

— Мин кемгә әйтәм, Емеш? Ниңә өндәшмәйһең? — тип ныҡышты ул. — Уҡығың килмәйме ни һинең?..

Емеш һаман түбән ҡарап, өндәшмәй тик торҙо. Ә үҙе эстән генә: «Аһа, уҡығыһы килмәй тиме ни кешенең?! Бына иҫәүән! Бик уҡыр инем дә бит... унда ғәрләнмәй хәҙер нисек барайым?» — тип әсенеп уйланды. Уның өсөн, ҡырт киҫеп, Бибеш яуап ҡайтарҙы:

— Бармаҫ. Минең һылыуым булһа, үҙен етем итеп, меҫкен итеп йәлләгән ергә аяҡ баҫмаҫ! Әйттем бит, йәлке булып, кешенән йәлләтеп йәшәмәҫ.

— Шулай тип уйлайһың инде һин һаман, ә? — тине Иштуған, тамам бошоноп, — дөрөҫ уйлайым тип ышанаһың инде, ә?

— Дөрөҫ булмайса!..

— Йә, һеҙҙең менән һөйләшеп бер ни сығарып булмаҫ, ахыры, — тип Иштуған өмөтһөҙ ҡул һелтәп, килгәндәге кеүек үк, ҡапыл сығып та китте. — Ҡарышҡандар! Үҙ бәхетенә төкөргәндәр!

— Һөйләшмә һуң! — тип, һаман киреләнеп тороп ҡалды Бибеш. — Кем һиңә һөйләш ти?!

— Иштуған ағайым ағас ат яһап бирмәне, — тип

мыжыны һөйөндөк. — Әсәй, һин ниңә асыуланаһың?.. Ниңә Иштуған ағайым мине яратманы?

Емеш ни уйларға, ни әйтергә лә белмәне. Ҡалай ғына уйлаһа ла, килешмәç һымаҡ ине.

Урамға сыҡҡас, Иштуған ҡапҡа төбөндә бер аҙ тапаныл торҙо. Унан түбән осҡа боролоп китте. «Хаммат ағайға кәңәш итеп ҡарарға кәрәк. Бәлки, Бибеш менән ул һөйләшер?..»

Хамматты ул ишек алдарында осратты. Ул ниҙер ҡырып-юнып утынлыҡта эшләп маташа ине.

— Һай, егетең үҙе лә тап булды, — тип ҡыуанып китте Хаммат. — Һинең менән кәңәшләшәһе бар ине. Бик файҙалы бер эш хаҡында.

— Һөйләшәйек һуң... Улай файҙалы ла булғас... — тип артыҡ тоҡанмай ғына яуапланы Иштуған. — Беҙҙең һөйләшеп-кәңәшләшеп алыр эштәр күп тә ул. Тик нәтиҗәһе генә ҡалай булыр...

Үҙенең яңы пландары менән ярһыған Хаммат унын тауышындағы бошонҡолоҡ өнөн абайламаны.

— Беләһеңме, Иштуған, яңы ауыл төҙөргә мөмкин! — тип, һаман ярһый биреп һөйләп китте. — Оло Эйектең иң матур бер бөгөлөнә сығып ултырабыҙ ҙа, ерҙе бергәләп эшләү артеле төҙөп ебәрәбеҙ. Аңланыңмы? Яңы ауыл — яңы артель! Хөкүмәт машиналар ҙа, аттар ҙа, сәсеү орлоҡтары ла бирәсәк! Бына шундай мөмкинлек бар. Бөгөн волостә, кәңәшмәлә ишетеп ҡайттым. Йә, һин быға нисек ҡарайһың? Шәп бит, ә?

— Ерҙе бергәләп эшләү артеле ойоштороу өсөн яңы ауыл булып сығыу мотлаҡ кәрәкме икән ни? — тип баçынҡы тауыш менән һорап ҡуйҙы Иштуған. — Ни өсөн үҙ ауылыңды ташлап сығырға кәрәк икән? — тип уйланды. — Минеңсә, беҙҙең өсөн бындай эштең кәрәге һис тә юҡ... Беҙҙең ауыл былай ҙа Оло Эйектең иң матур бөгөлөндә ултырмаймы ни? Унан килеп беҙҙең ауыл ул хәтле айырылып сығып икенсе ауыл төҙөрлөк бик ҙурмы ни?!

Волостән яңы тормош төҙөүҙе — яңы ауыл төҙөүҙән башлау ниәте менән янып ҡайтҡан Хаммат Иштуғанға аптырап текләп торҙо: «Ни өсөн ул шундай ҡыуаныслы яңылыҡты былай һалҡын ҡаршылай әле?!»

— Тимәк, һин хупламайһың?

— Эйе, хупламайым, — тине Иштуған, һаман бошонҡоланып. — Мин ауылдан бүленеп сығырға ҡаршы.

— Ни өсөн? — тип аптыраны Хаммат. — Бигерәк тәһицә, әлегә йорто-ҡураһы булмаған кешегә?! Яңы ерҙәяңы йорт ҡороусыларға хөкүмәт үҙе иң беренсе ярҙам ҡулын һуҙырға торғанда!?.

— Бында һүҙ минең хаҡта бармай, Хаммат ағай,— тине Иштуған, баяғыса бошонҡо тауыш менән. — Мин мәктәп, балалар, йәштәр хаҡында уйлайым.

— Тап бына улар хаҡында уйлағанға күрә лә бөтә яңылыҡты яҡларға кәрәк тәбаһа, мырҙа, — тип, шат йылмайып, Хаммат уның һүҙен бүлде. — Һәр бер яңы башланғысты, аңланыңмы, Иштуған?!

Иштуған оҙаҡ ҡына уйланып торҙо. Унан тағы шул үҙ һүҙен һөйләне:

— Беҙҙең ауыл былай ҙа бәләкәс. Бүленгәс, тағы ла кесерәйер. Комсомол йәштәр сафы ла икегә бүленәсәк...

— Алдынғы йәштәрҙең бөтәһе лә беҙҙең менән яңы ауылға сығыр тип ышанам мин.

Иштуған аптыраған һымаҡ итеп баш сайҡап ҡуйҙы.

— Алдынғылар үҙҙәре айырылып сыҡҡас, артта ҡалғандар, анһыҙҙар араһында кем эшләр? Кем уларҙы үҙ артынан эйәртер? Уларҙы яҙмыш ҡосағына ташлап ҡалдырырғамы ни?!

Хаммат ихлас ҡысҡырып көлөп ҡуйҙы:

— Ҡара һин уны! Ысынлап та, һинең был һуңғы фекерең хаҡында уйлап ҡарарға кәрәктер, моғайын! Тимәк, һин бүленеүгә риза түгел?

— «Айырылғанды айыу ашар, бүленгәнде бүре ашар», тигән бит боронғолар, — тип яуап ҡайтарҙы Иштуған. — Мин ауырыраҡ, ҡатмарлыраҡ шартта, төрлө-төрлө кешеләр булған ерҙә эшләргә теләйем. Тормош шунда тулыраҡ, көрәш йәнлерәк, мәғәнәлерәк булыр һымаҡ, — тине Иштуған, тәрән уйланып. — Унан мин шуны аңламайым, ни өсөн әле беҙгә үҙебеҙҙең яңы тормошто, совет тормошон ҡайҙалыр ситкә алып сығып, йәшереп тигәндәй төҙөргә икән? Ошонда, халыҡ араһында, бөтә кешенең күҙе алдында төҙөргә, иҫке ауылды нигеҙенән алып яңыртырға кәрәк тәһә беҙгә. Яңылыҡты донъя нисек төҙөлгәнен бөтә кеше үҙ күҙе менән күреп торһон, сағыштырһын, ышанһын, яратһын, өйрәнһен.

— Ҡара һин уны! Һин миңә тотош бер лекция һөйләп ташланың бит әле, мырҙа, — тип, тағы ихлас көлөп ал-

ды Хаммат. — Ысынлап та, дөрөç уйлайһың ахыры һин был хаҡта?

— Үҙең уйлап ҡара, ағай, — тип дауам итте Иштуған, йәнләнә барып. — Былай ҙа кескәй ауылыбыҙҙы икегә бүлгәс, бөтөнләй мәктәпһеҙ ҡалыу ихтималы ла бар бит. Әп-әҙ балаға мәктәп асып торорға хөкүмәттең аҡсаһы артып барамы ни?

— Уныһы ла дөрөç!

— Ул саҡта мине ҙурыраҡ ауыл мәктәбенә күсереп ҡуйыуҙары ла бар. Тимәк, минә барыбер яңы ауылда «үҙ оямды» ҡороу мөмкин булмаясаҡ. Ҡәрәкмәй ҙә. Мине, Хаммат ағай, хәҙер ундай нәмәләр мауыҡтырмай. Дөрөç, бер саҡ, егет саҡта: «Их, ер-һыуым булһа, үҙ йортом... эйәрләр атым булһа... Мин дә бай булыр инем. Ул саҡта мин дә Айһылыуға туп-тура яусы ебәрә алыр инем», — тип аҙарынып йөрөгән саҡтар бар ине лә, — тип уйсан ғына йылмайып алды Иштуған.— Заманы шул ине. Беҙҙең кеүек ауыл малайҙарының шунан да ҙурыраҡты теләр хәле бар инеме ни? Әле инде, үҙең беләһең, донъя бүтәнсә ҡыҙыҡ. Донъяға ҡараш та, теләктәр ҙә нисегерәк ҡолас йәйә хәҙер! Үҙең беләһең бит, ағай!

— Ә ерҙе бергәләп эшләү ширкәтен төҙөүгә нисек ҡарайһың? — тип һораны хәҙер Хаммат. — Һәйбәт эшме икән?

— Уға мин ҡуш ҡуллап риза. Бергәләп төҙөрбөҙ, — тине Иштуған, инде тамам күңеле күтәрелеп. — Мин бит инде һәр йыйылышта тип әйтерлек был хаҡта халыҡҡа аңлата киләм. Ә инде һәйбәт эшме, түгелме — уныһы беҙҙең үҙебеҙҙән, ойоштороусыларҙан торасаҡ.

— Дөрөç! — тип, күңелле йылмайып раçланы Хаммат. — Һин еңдең, Иштуған. Бер кемде еңдермәгән ҡарт көрәшсене бер һелтәнеүҙә күтәреп ырғыттың да ҡуйҙың! Молодец!

— Хаммат ағай, минең дә һинең менән кәңәшләшәһе бар ине бит әле, — тип, Иштуған һүҙҙе икенсегә борорға ашыҡты. — Емеште әйтәм, уҡырға йөрөмәй бит!

Хаммат йомшаҡ ҡына көлөп алды:

— Теге, «Анам ҡәбере»нән һуңмы? Ишеткәйнем. Күңел ҡылы үтә нескә күренә ул ҡыҙҙың. Уның менән һағыраҡ булырға кәрәк ине. Моңло ҡыҙ. Хатта минең, ҡарт һалдаттың, күҙенән дә йәш сығара яҙҙы бит ул йырлағанда.

— Уныһы шулай, — тип тағы күңелһеҙ генә дауам

итте Иштуған. — Телендән ысҡындымы — ҡулың менән тотоп ала алмаҫһың, тиҙәрме. Хәҙер инде үкенеүҙән бер файҙа ла юҡ. Булған эш булған. Тик бына ҡыҙҙы ҡалай итеп уҡырға йөрөтөргә икән? Бына бәлә ҡайҙа.

— Етемдең күңел яраһына тейеүҙә һаҡ булырға кәрәк ине шул, — тип уйланып торҙо Хаммат та. — Хәҙер уға ҡалай ярҙам итергә?.. Нисек аңлатырға? Бер ҙә быға башым етмәҫ һымаҡ.

— Әллә, ағай, һин уның менән һөйләшеп ҡарайһыңмы?

— Ни һөйләйһең һин, Иштуған?! Емеш кеүек ауыр холоҡло баланың күңелен йомшартырҙай, кирелеген һындырырҙай, уның йөрәгенә ятырҙай һүҙҙе ҡайҙан табырға миңә?! Бигерәк тә Сәлимә үлгәндән һуң, тупаҫланып бөткәнмен бит инде мин. Йылы, йомшаҡ һүҙҙәрҙе онотҡанмын... Юҡ, бала менән һөйләшә белмәм мин, Иштуған!..

— Бәлки, Бибеш менән, киленең менән һөйләшерһең, ағай? Ул бит Емеште ебәрмәй тота!

— Бибеш килен менән һөйләшеү ҙә еңел булмаҫ, — тине Хаммат, үҙенә хас булмағанса, икеләнеп. — Шулай ҙа беҙгә Емеш хаҡында етди уйларға ваҡыттыр, моғайын. Байгилде ағай, ирек өсөн, һәйбәт тормош өсөн көрәштә баш һалды бит! Шулай булғас, уның кескәй ҡыҙы хаҡында уйлау, уны уҡытыу, тәрбиәләү сараһын күреү беҙгә, тере ҡалғандарға, фарыз...

— Эйе, Емеш уҡырға тейеш, — тип тағы бер ҡабатлап ҡуйҙы Иштуған. — Беҙ нисек тә бының сараһын табырға тейешбеҙ!

* * *

Был һөйләшеүҙән һуң тағы бер аҙ ваҡыт уҙҙы. Ә Емеш һаман өйҙә ултырҙы. Теләһә лә, күңеле шул яҡҡа тартылып торһа ла, барманы. Һаман шул элеккесә: «Етем булып, меҫкен булып илап яҫҡас, инде ғәрләнмәй ҡалай кеше күҙенә күренәһең?!» — тип уйлап йөрөй бирҙе. Хатта Шәүрә менән Байрас килеп тә уны үҙҙәре артынан эйәртә алманы. Уға хәҙер тағы элеккесә, Сәрбиямалда йәшәгән саҡтағыса, бөтә кеше бәхет тигән тылсымлы ҡойма эсендә кинәнеп йәшәй, ул бер үҙе уның артында аҙашып йөрөй һымаҡ тойола башланы. Яңғыҙлыҡ, уйсанлыҡ тағы уның иң һөйгән, тыныс төйәгенә әүерелде.

Әммә бер аҙҙан Иштуған тағы килде. Хаммат менән улар Емеште балалар йортона бирергә тигән ҡарарға килгәйнеләр. Атаһының дуҫы Никита ла быны хупланы.

— Балалар йортонда ул яңы тормошта яңыса йәшәргә өйрәнер, — тине ул. — Кешеләр араһындағы яңы мөнәсәбәткә төшөнөр. Тик Бибеш кенә быға төптө ҡаршы төштө.

— Мин уны бер ҡайҙа ла ебәрмәйем, — тип, саяланып ҡысҡырҙы ул Иштуғанға. — Ишетәһеңме, бирмәйем мин уны һиңә!

— Бибеш, улай ярамай бит. Емеш уҡырға тейеш, — тип иплəп аңлатырға тырышты Иштуған. — Аңлайһыңмы, уҡырға тейеш! Тик ҡалай итеп уҡытырға? Һиндә торһа ла, миндә торһа ла, Емеш уҡый алмаясаҡ. Ул бит кире. Уны нисек мәжбүр итәһең? Өндәшмәй еңә лә ҡуя бит ул. Шулай бит, Бибеш?

— Үҙһүҙлелек, кире ҡайтауыллай белмәүлек беҙҙең бөтәбеҙҙә лә етерлек ул, — тип килеште Бибеш был юлы. — Атайым шундай кеше ине бит беҙҙең...

— Ҡайһы саҡта, хатта яңылыш булһа ла, үҙ һүҙебеҙҙе һүҙ итергә тырышабыҙ, — тине Иштуған, бошоноп. — Бына нәмәһе яман!

— Бәлки, шулайҙыр ҙа... — тип тағы килеште Бибеш, — әммә был барыбер үҙ һүҙең булмауҙан артыҡ...

Иштуған һүҙ көрәштермәҫкә тырышты.

— Теге элекке Ташлы баяры имениеһендә балалар йорто асылған икән. Етем балаларҙы аҫырайҙар икән унда. Ашаталар, кейендерәләр, уҡыталар... Хаммат ағай кисә унда булған. Емеште лә шунда биреп уҡытырға һөйләшеп ҡайтҡан. Бөгөн мин уны шунда алып китәм.

— Аңлайым, — тине Бибеш, ҡустыһының һүҙен ҡырт киҫеп. — Ҡалай йәнһеҙ һин, Иштуған! Ҡыҙ баланы, йәлләмәй, ҡайҙалыр олаҡтырмаҡсы булаһың!

— Унда Емеш кеүек балалар йәшәй, — тине Иштуған, һаман тыныс, сабыр булырға тырышып. — Әгәр ошо шартта, ошо ҡылығында ҡалһа, Емешкә йәшәүе еңел булмаҫ. Мин аңлайым, Емешкә әсәйҙән үтә йәш ҡалыу, Сәрбиямал тәрбиәһендә иҙелеү айырата ауыр йоғонто ҡалдырған. Аңла, Бибеш, Емеште уҡытыу ғына түгел, кешегә ышанырға, кешене яратырға өйрәтергә лә кәрәк.

Иштуған һынаусан ҡарашын был һөйләшеүҙе иғтибарлы тыңлап торған Емешкә күсерҙе. Һәм мөмкин тиклем йомшаҡ, ябай тауыш менән:

— Балалар йортона бараһыңмы, һылыу? — тип һораны.

Емеш керпектәрен түбән төшөрөп, оҙаҡ ҡына өндәшмәй торҙо:

«Унда, исмаһам, минең иҫәүәнләнеп илап ятҡанымды күргән кеше лә булмаҫ... Етем тип йәлләүсе лә. Һәйбәт булыр...» — тип уйлап алды, унан ағаһының күҙенә тура-тура күтәрелеп ҡараны:

— Барам.

Бибеш үҙ ҡолағына үҙе ышанмай:

— Нимә тиһең һин, алйот?! — тип ҡысҡырып үк ебәрҙе. — Нимә әйткәнеңде аңлайһыңмы һин?!

— Барам тинем бит, апай! — тип, тағы баяғыса ҡырҡа раҫланы Емеш. — Уҡығым килә лә минең...

Түрьяҡта йөн иратып ултырған Таиба әбей көтмәгәндә һүҙгә ҡушылды:

— Иштуған ҡоҙа дөрөҫ әйтә, Емеш ҡоҙасаға уҡырға кәрәк. Ҡоҙаса үҙе лә уҡыйым тип торғас, уҡыһын.

Бибеш был көтөлмәгән хәлгә нисек ҡарарға, ни әйтергә белмәй, берсә Емешкә, берсә бейеменә аптырап ҡараны.

— Ҡарасы, нимә һөйләйҙәр былар?!

— Булды,— тип ҡыуанып һикереп торҙо Иштуған.— Бот рәхмәт, ҡоҙағый. Бына, исмаһам, аҡыллы кеше! Аңлап та алды. Былай булғас, Емеш һылыу, әҙерлән! Мин аҙ егеп киләм. Хәҙер үк Ташлыға китәбеҙ!

Емеш, көтмәгәндә ҡыуанып, теремекләнеп китте. Ҡабаланып, шатланып:

— Ҡитәбеҙ?! Ташлыға китәбеҙ! Ҡитәбеҙ, апай! Ҡоҙағый, китәбеҙ! Һөйөндөк мырҙа, Йәнеш һылыу, китәбеҙ! — тип көлә, таҡмаҡлай юлға әҙерләнә башланы.

Таиба әбей, ҡыҙҙың ҡапыл танымаҫлыҡ теремек, шат булыуына ҡарап, сабыр ғына йылмайып ултырҙы. Ә үҙенең күҙҙәрендә, ни өсөндөр, йәш тамсылары йымылдаша ине. Һөйөндөк тә, нимәлер аңлаған һымаҡ:

— Ҡитәбеҙ, китәбеҙ! — тип, ҡулдарын сәпәкәйләп, Емеш артынан һикергеләп йөрөнө. Бәләкәс Йәнеш, бер нәмәгә лә иҫе китмәй, сәңгелдәгендә тәпәйҙәре менән һауап ята бирҙе. Бибеш кенә үтә бошонҡо төҫ менән, бер һүҙ өндәшмәй, мейес буйында баҫып торҙо.

«Ҡитәбеҙ!..» Был һүҙҙе Емеш үҙ ғүмерендә тәүтапҡыр әйтә ине шикелле. Әйе, быға саҡлы ул бер ҡасан да бер ҡайҙа ла китмәне шул. Ә хәҙер: «Ҡитәбеҙ... Ҡитәбеҙ!..»

Иҫ киткес мауыҡтырғыс та, бер тиклем хәүефле лә булып яңғырай был һүҙ Емештең күңелендә. Ниндәйҙер әйтелмәгән мәғәнә, көтөлмәгән киңлек, иркенлек, яңылыҡ, тағы әллә ниҙәр, әллә ниҙәр бар һымаҡ был һүҙҙә!.. Ҡитәбеҙ!..

Емеш өҙә-йолҡа сәс тарарға, йыуынырға-кейенергә кереште. «Ҡитәбеҙ, — тип ҡабатланды һаман был тылсымлы һүҙ уның күңелендә. — Ҡитәбеҙ!..»

Емешкә һаман аптырап ҡарап торған Бибеш тә, был хәлдең ҡотолғоһоҙ булыуына тамам ышанып, самауыр ҡайнатырға кереште. Инде бөтөнләй икенсе, йомшаҡ тауыш менән:

— Исмаһам, юлға сәй эсеп сығырһығыҙ, — тине.

Таиба әбей ҙә эшен ситкә ҡуйып түрҙән төштө.

— Асыҡҡанда, ҡоҙаса, ҡапҡыларһың, — тип ҡорот, ҡаҡ, ҡыҙыл эремсек һалып төйөнсөк әҙерләне. Ул арала ауыл санаһына һөлөк кеүек һылыу ат егеп Иштуған да килеп етте.

— Бына, Емеш, һинең өсөн Хаммат ағай үҙенең туры атын, ауыл санаһын, хатта толобон да биреп ебәрҙе, — тип, ҡыуанып хәбәр итте. — Бүре толоп эсендә май кеүек ireп кенә барһын, Емеш һылыу, тине!

— Хәйерлегә булһын. Бөтәһе лә йәтешләнеп алдына килеп кенә тора, — тип ҡыуанып һөйләнде Таиба әбей. — Ҡоҙаса киткәс, мин уны юҡһынып торормон әле... Үҙ баlам кеүек яҡынайып киткәйне ул миңә. Шулай ҙа китеүенә ҡыуанам. Уҡыр, әҙәм булыр...

Бибеш инде бер ни ҙә өндәшмәне, өнһөҙ-һүҙһеҙ генә һеңлеһен юлға әҙерләште. Ә Емештең ярһыуы, тулҡынланыуы төҫөнә сығып, ике бите ал янып китте. Ҡерпек остарында ынйылай йымылдап ике тамсы йәш дерелдәне; үҙһүҙлеләнеп бөртәйеберәк торған ҡалын ғына ирендәре, бер ҙә асылмаҫтай булып, ҡаты ҡымтылдылар; уның бөтә йөрөш-торошонда билдәһеҙ ҡыуаныстан бигерәк, ниндәйҙер көс еткеһеҙ ауыр хәлгә дусар ителгәнлек, түҙергә, еңеп сығырға ҡырҡа ҡарар иткәнлек һиҙелеп тора ине.

Бына уның китәһен ишетеп, Байрас, Шәүрә, Моратша, хатта Заһира ла югереп килеп еткән. Емеш, өнһөҙ-һүҙһеҙ генә булһа ла, әлснән-әле улар яғына ла ҡараштырып алды. Уға өйҙән, апаһы, ҡоҙағыйы, туғандары янынан ғына түгел, ошо үҙ тиҫтерҙәренән айырылып китеү ҙә бик-бик ҡыйын булыр төҫлө тойола башланы.

Айырыуса Шәүрә менән Байрасты ҡалдырып китеү... Хатта бынауы һорнайған Моратша менән уҫал Заһира ла бик ҡәҙерле һымаҡ тойолдо хәҙер. «Әммә китергә тигәнһең икән, үкенмәй, үкһемәй кит!» — тип ярһып тип-те уның йөрәге. «Сер бирмә!» Эйе, хәҙер инде Емеште был ҡарарҙан кире сигендерерлек тә, алып ҡалырлыҡ та көс юҡ ине. Һәм ошо хәл уға айырылышыуҙың бөтә моңһоу яҡтарын ҡыйыу кисерергә көс бирҙе. Шулай ҙа «Китәбеҙ!..» тигән һүҙҙе әйтеүе еңел булһа ла, китеүе ул хәтле еңел түгел икән шул! Бигерәк тә ҡасандыр бер әйләнеп ҡайтырһыңмы, юҡмы икәнен белмәгән саҡта!.. Бына ағаһы Емеште санаға йәтешләп, урап ултыртты. Туғандары, дуҫтары, сана янына баҫып, уны оҙатырға көтөп торҙолар. Бибеш апаһының күҙҙәрендә хафаланыу, ҡайғырыу, кескәй һөйөндөктә төшөнмәү тойғолары сағыла. Таиба әбейҙең төҫөндә лә бошоноу бар. Ә Шәүрә менән Байрас төптө алйып, уңайһыҙланып ҡалған һымаҡ.

Емештең тамағына ниндәйҙер ҙур бер төйөр килеп ултырған кеүек булды. Әйтерһең, уның күгәрсендәй йәне, тәненән осоп сығып, бында, тыуған-үҫкән ерҙә тороп ҡалмаҡ булып, тамаҡҡа килеп тығылды. Күҙҙәрен дә ниндәйҙер күк томан ҡаплап алғандай булды. Ләкин иламаны. Бынан ары ул бер ҡасан да иламаҫҡа тип, үҙен нык тыйып ҡуйғайны хәҙер. Ә шулай ҙа ауыр, бик ауыр икән был һүҙҙе тотоуы!..

«Емеш кеше яратмай, — тимәксе Иштуған ағаһы. — Кешене яратырға өйрәтеү кәрәк уны», — ти... «Эй, белмәй әле ул!.. Эйе, Емештең бөтә донъяны ла, бар кешене лә ҡалай өҙөлөп яратыуын белмәй әле ул... Белмәй!»

Бына Иштуған да санаға ултырҙы.

— На, турыҡай! — тип ҡайыш дилбегәне әҙ генә ҡаҡып ҡуйҙы. Күңелле шығырҙап, сана ҡуҙғалды. Емештең күҙҙәре тағы ла бер тапҡыр апаһының йәш тулы матур күҙҙәре менән осрашты.

— Хуш, апай... — тине Емеш ирендәре менән генә.

— Һау бул, һылыу!.. — тип бышылданы Бибеш.

— Һау бул, әхирәт! Онотма!

— Хуш-ш!.. Емеш!..

— Һау булығыҙ?!.

— На, хайуан!..

Туры ат, ихлас елеп, уларҙы ауылдан бик тиҙ алып сығып китте.

Емеш, башына кемдер шаңҡыта һуҡҡан шикелле иҫәңгерәп, бер аҙға хәтле уйлай ҙа, һөйләшә лә алмай барҙы. Бәхеткә ҡаршы, был хәл оҙаҡҡа һуҙылманы. Уның ҡыҙыҡһыныусан, күҙәтеүсән ҡылығы был юлы ла ярҙамға ашыҡты. Иң элек уның иғтибарын ауыл осонан уҡ башланып киткән икһеҙ-сикһеҙ ҡар далаһы, ҡыйғас төшкән ҡояш нурҙары аҫтында уның меň төрлө төҫ менән йымылдаған йондоҙ сәскәләре биләп алды.

«Ҡем шулай матур яһап һибә икән был көмөш йондоҙҙарҙы?! Хоҙай үҙеме икән ни?! Әллә фәрештәләренән яһатамы икән?! Ни өсөн ҡарҙы улай матурлап ыҙалаҡалар икән, бахырҙар? Барыбер яҙ еткәс ирепюҡҡа сығалабаһа!..» — тип, ғәҙәтенсә, бөтә нәмәне аллаға, фәрештәгә алып барып теркәп уйланып китте ул. Тәбиғәт күренештәре, ер һәм бөтә ғаләм хаҡында ағаһынан ишетеп кенә белгән өҙөк-өҙөк яңы ҡараштар бәләкәйҙән уның мейеһенә һеңгән иҫке ҡараштарҙы алмаштырырға, әлбиттә, етерлек түгел ине әле.

Сана тынғы белмәй көмөш йондоҙҙар араһынан шыуышты. Ҡар күбәләктәре һалмаҡ ҡына ергә ябырылды. Ҡояш күренмәй башланы. Ләкин уның йылы һипкене бөтә әйләнә-тирәгә бәрелеп тора һымаҡ. Шундай тымыҡ, яғымлы көн ине был.

Бына алда Илсеғол шикелле үк кескәй бер ауыл көрт аҫтынан саҡ-саҡ күренеп ята. Уны үтеүгә ҡара урманлы, һикәлтәле юл башланды. Ат юртҡан ыңғайға сана бәрелә-һуғыла һаман алға шыуышты.

— Көплө урманы ошо була инде, — тип аңлатты Иштуған. — Элек Тимаш баяр башҡорттарҙан баҫып алған урман.

Емешкә был урман күптәнге таныш ер, күңелгә яҡын урын һымаҡ тойолдо. Сөнки ул күреп түгел, ә ишетеп бик күптән белә ине был ерҙәрҙе.

...Бер саҡ Хәбир батыр ошо урманда байҙарға тынғы бирмәй һуғышып йөрөгән. Батша һалдаттары был урманды нисәмә тапҡыр һөҙөп сыҡҡан, әммә Хәбир батырҙы таба алмаған. Ҡалын урман уның үҙен дә, иптәштәрен дә йәшереп һаҡлаған, бер кемгә лә бирмәгән. Әгәр Хәбир батыр, Ғаббас муллаға ышанып, Илсеғолға барып сыҡмаһа, уны бер кем дә тота алмаҫ, ошо көндә лә йәшәр ҙә йәшәр ине. Эйе, эйе... Мәрхүм Ҡарасәс инәһе үҙе шулай һөйләне бит Емешкә. Ул бит бер ҡасан да бушты һөйләмәй ине...

Ҡасандыр бер саҡ Хаммат ағай менән Сәлимә еңгә лә ошо урманда Тимаш баярға бесән эшләп, ураҡ урып йөрөгән. Сәлимә еңгәнең аяҡ эҙҙәре әле лә яталыр әле был ерҙәрҙә. Күҙгә күренмәһә лә, кеше уҙған ерҙә эҙ ҡалмай булмаҫ инде... Ҡала! Атайым да Ырымбурҙан ҡайтҡанда бигерәк тә Көплө урманын йәйәүләп уҙыуы ҡыйын булды, тип һөйләй торғайны. Урманда ямғыр йыш яуа. Юл батҡаҡ була, ти ине. Шулай булғас, бында атайымдың да эҙҙәре барҙыр. Атайымдың аяҡ эҙе ҡалған ошо урында минең дә эҙем ҡалһын ине. Туҡта әле, атайым да, Сәлимә еңгә лә йөрөмәгән ерҙәр бармы икән? Уларҙың эҙҙәре ҡалмаған ерҙәргә лә барып сыҡмаммы икән мин? Эй-й, ошо китеүҙән китһәң дә китһәң, ер сигенә барып етһәң ине... Унда ла үҙеңдең эҙеңде ҡалдырһаң ине!..

Емештең ҡышҡы юл шикелле оҙон, осһоҙ-ҡырыйһыҙ уйҙарын Иштуғандың ҡыуаныслы тауышы бүлде.

— Ана, һылыу, Ташлы!

— Ташлы?!

Емеш толоп эсенән һуҙылып ҡараны. Был ваҡытта ҡояш та болот «толобон» сисеп ырғытҡайны. Емешкә, бөтәһенән элек, алтын нур аҫтында йәшел көмбәҙҙәре балҡып торған бик дәү сиркәү күренде. Уның тирә-яғында һибелеп ятҡан тәпәш өйҙәр, Емештең алыҫтан насар күргән күҙҙәренә салынманылар ҙа. «Ташлы тигәндәре шул сиркәүме икән ни? — тип аптырап уйланды Емеш.— Абау, ул сиркәүҙә шайтандар күп була ти бит... Ҡурҡмайынса мин унда нисек йәшәрмен?!»

Бына юлсылар, урманды уҙып, йәнә аҡланға сыҡтылар. Емеш хәҙер сиркәүҙән алыҫ түгел, үрҙәрәк, тау өҫтөндә, ҡар бөркәнгән ҡарағайҙар араһында, бейек аҡ йорттар барлығын да төҫмөрләне.

— Элекке баяр йорттары ана шул ул, — тип аңлатты Иштуған. — Балалар йорто шунда урынлашҡан.

Емешкә был үтә дәү, бейек йорттар матур булыуға ҡарағанда, ҡурҡыныс һәм ҡырыҫ күренде. Уның күңелендә тағы ниндәйҙер хәүефле, шомло уйҙар урғылды. Емеш үҙен шул йорттар эсендә аҙашып юҡҡа сығыр төҫлө тоя башланы. «Ағай, ҡурҡам, мин унда бармайым!»— тип ҡысҡырғыһы, илағыһы, хатта хәҙер үк, ошо минутта уҡ һикереп тороп дилбегәгә йәбешкеһе, атты кире борғоһо килде уның. Тик быларҙың береһен дә эшләмәне. Тағы баяғы, юлға сыҡҡан саҡтағы шикелле уйлау,

һөйләү һәләтен юғалтып, тынып ҡалды. Ҡара тиргә төшкән туры ат, бышҡыра-мышнай сананы һаман алға, тау өҫтөндәге аҡ йорттарға табан һөйрәне.

«Юл тар, көрт бейек, атты кире бороп булмай. Барһын әйҙә, барһын... алып барһын... — тип уйлап ҡуйҙы ахыры Емеш, яҙмышҡа буйһоноп. — Ни булһа ла алып барып еткерһен».

— На, хайуан! — тип атты йәһәтләне Иштуған. — Тиҙерәк ҡуҙғал!

## VII

Элек, бәләкәс кенә саҡта, үгәй әсәй ҡулында ыҙа сигеү өҫтөнә, әйләнә-тирәләге барлыҡ тормош түҙеп торғоһоҙ ауыр ҙа, ҡурҡыныс та, хатта биҙҙергес тә тойолған саҡтарҙа, Емеш булмаҫ хыялдарға бирелергә ярата торғайны:

— Эй-й, йәшел туғайҙарҙа, ағын йылға буйҙарында йәки тауҙар араһында балалар үҙҙәре генә йыйылып йәшәһә ине. Балалар һәр саҡ шат, шаян булырҙар, туйғансы уйнарҙар, бейерҙәр, йырларҙар ине. Иҫкән ел кеүек, ҡош кеүек... бал ҡорто кеүек ирекле булырҙар ине. Бер кем дә уларҙы ҡаҡмаҫ, һуҡмаҫ ине...» — тип ярһыпталпынып тибер ине уның йөрәге. Әммә уның хыялында тыуған бик «бәхетле донъя», үҙенең үк тынғыһыҙ аҡылы килтереп ҡуйған тормош проблемаларына бәрелеп, шунда уҡ селпәрәмә килә: «Уйнау-уйнау ҙа бит. Ашамай-эсмәй тороп булмай ҙабаһа?!. Ул балаларҙы кем ашатыр, кем кейендерер? Утынды, һыуҙы кем алып килер? Урман айыу, бүре, юлбаҫар кеүек яман йәндәр менән тулы бит ул. Кем һаҡлар, кем яҡлар балаларҙы уларҙан? Уның хыялында тыуған тормошта йәшәгән балалар Емештең үҙе кеүек үк кескәйҙәр генә бит әле. Юҡ, күрәһең, өлкәндәрҙән башҡа йәшәп булмаҫтыр... Әйҙә инде улар бергә йәшәһендәр. Тик бик-бик ялынып-ялбарып алланан, өлкәндәрҙе шәфҡәтлерәк ит, уларҙың күңеленә изге уйҙар ғына һал, яманларын, мәкерлеләрен үҙеңә ал, — тип теләргә, үтенергә кәрәктер, бәлки...»

Ә бына хәҙер бында, балалар йортонда, ҡасандыр һис тә бойомға ашмаҫтай тойолған шул яҡты хыял әкиәттәге тылсымлы таяҡ тыуҙырған мөғжизә кеүек Емештең алдына килде лә баҫты. Улар төрлө ауылдан, төрлө милләт халҡынан йыйылған күмәк балалар баяр

йортонда, етмәһә, тап Емеш хыял иткәнсә бик матур йортта балалар үҙҙәре генә йәшәйҙәр. Етмәһә, урман, ҡырсынлы, ағын йылға буйында... Әлбиттә, өлкәндәр ҙә бар бында. Улар балаларҙы ҡарайҙар, тәрбиәләйҙәр, уҡыталар. Ә башҡаса балалар үҙҙәре генә. Уларҙы бер кем дә әрләмәй, туҡмамай. Бөтәһен дә бер төҫлө итеп кейендергәндәр. Бында маҡтансыҡ бай балалары ла, илаҡ етемәктәр ҙә юҡ. Шуныһы бигерәк тә һәйбәт. Әммә, ни өсөндөр, был тормош та Емешкә һис тә күңелле тойолмай. Хатта моңһоу ҙа, ҡайғылы ла һымаҡ... Уға тағы нимә етмәй икән?!

Емеш инде тыумыштан уҡ тип әйтерлек тамағы ас, өҫтө яланғаслыҡҡа иҫе китмәҫкә өйрәнгән. Ул быға артыҡ иғтибар иткән кешене хатта яратмай ҙа. Уныңса, был хаҡта күп уйлау — кешене түбәнһетә, кәмһетә генә.

«Шул тамаҡ өсөн кеше ни хәтле ыҙа сигә, ниндәй үлеш, ҡырылышҡа бармай? — тип бошоноп уйлай ул ҡайһы саҡта. — Әгәр инде ашамай төптө лә йәшәп булмай икән, исмаһам, уға иҫең-аҡылыңды бәйләп ҡуймаҫҡа тырышырға кәрәк тәһә! Ғүмерлек ас, яланғас йәнеңдең ҡоло булырға ярамай ҙабаһа!» Емеште иң элек, бөтә нәмәнән элек, кеше үҙе ҡыҙыҡһындыра: ниндәй ул? Яҡшымы, яманмы? Ул ни өсөндөр кешегә һәр саҡ йәки бик ҡурҡып, шикләнеп, йәки үтә яратып, һоҡланып ҡарай. Уныңса, кеше йә Сәрбиямал, Әхмәтша, Собхан старшина, Ғаббас мулла кеүек яман, ҡурҡыныс була, йәки Ҡарасәс инәй, Таиба инәй, Емештең атаһы Байгилде, Хаммат, Тимербай ағайҙар... кеүек ғәжәп һәйбәт, изге йөрәкле була. Ундайҙарҙан кеше йөрәгенә йәйғор шикелле матур кешелеклелек, изгелек нуры һеңеп ҡала. Быларҙан тыш Емеш, әлбиттә, урта-марҙа кешеләр, меҫкен кешеләр барлығын да белә. Ләкин ундайҙар Емеште ҡыҙыҡһындырмай. Туҡта, балалар йортонда Емеш ниндәйерәк кешеләрҙе күрҙе һуң әле? Ул бит инде бында икенсе ҡыш ҡышлай. Яңы ғына килгән бала түгел. Бәлки, тиҙҙән бынан бөтөнләй ҙә китер. Ҡайҙа китер? Нисек ҡайҙа?! Уларҙы ни өсөн әҙерлек курсында уҡыта башланылар тиһең? Әлбиттә, ҡайҙалыр артабан уҡырға ебәрәсәктәр. Эй-й, тиҙерәк шул көн етһен ине.

Әле бит яҙ башы ғына. Яҙғы ял көнө. Тышта ҡойоп ямғыр яуа. Йәшен йәшнәй, күк күкрәй. Шуға ахыры бөтә ҡыҙҙар ҙа ятаҡта. Улар бер бүлмәлә күмәк йәшәйҙәр. Шулай ҙа бүлмә күңелһеҙ, ҡыҙҙар яй ғына ҡуҙға-

лалар, шым ғына һөйләшәләр. Йөҙҙәрендә ҡайғылы кисереш эҙҙәре бөгөн айырата асыҡ сағылып тора һымаҡ. Улар бит бөтәһе лә һуғыш, аслыҡ йылдарының ҡайғылы балалары. Эйе, рәхимһеҙ йылдар ата-әсәләрен дә, бала саҡтарын да тартып алған. Емештең үҙе кеүек инде бөтәһе лә. Ҡайҙа ҡарама, кемгә күҙ ташлама, моңһоу, күңелһеҙ. Берәүҙәре бер ни күрмәй, бер ни белмәй, ҡайғылы тынып койкаһында ултыра, берәүҙәре балаға хас булмаған моңло тауыш менән әкрен генә көйләй-мөңрәй ниҙер ямай, тегә, ниҙер яһай, ҡайһылары, бер-береһенә һыйынып ултырған да, әкрен генә серләшә, һөйләшә... Күренеп тора, әллә ҡасан һөйләшеп, моңлашып бөткән, туйҙырған, екһендергән бер һүҙ — етемлек!.. Әлбиттә, югереп, шаярып йөрөүсе моңһоҙҙар ҙа, бирелеп китап уҡыусылар ҙа, ниҙер яҙыусы, һүрәт төшөрөүселәр ҙә бар. Тик улар — аҙсылыҡ, булмәлә хөкөм һөргән дөйөм бошонҡолоҡ, күңелһеҙлекте үҙгәртә аламы ни улар ғына...

Бына ятаҡҡа уларҙың өлкән тәрбиәсеһе — һөйләнсәк, шаян ҡылыҡлы, югерек күҙле, һәр саҡ татлы, хәйләкәр йылмайып тороусан йәйенке ауыҙлы, тәпәш буйлы ирекәй килеп инде.

— Ҡамил абзый!

— Ҡамил абзый килде! — тип, ҡыуанып һикереп торҙо ҡыҙҙар. Өйөрөлөп-сөйөрөлөп бейергә, югерешергә, сырылдашырға тотондолар.

— Ҡамил абзый, нимә уйнайбыҙ?

— Нимә хаҡында һөйләйһең, Ҡамил абзый? Ҡыҙыҡ бер әйбер һөйлә әле.

— Киске ашҡа нимә бешерәләр икән?

Ғәҙәтенсә, Ҡамил абзый һис тә генә аптыраныһ ҡалманы:

— Юҡты-барҙы уйнайбыҙ. Булғанды, булмағанды һөйләйем. Ә киске ашҡа һеҙҙең алға, балалар, тылсымлы ашъяулыҡ йәйәсәктәр. Нимә һорайһың, шул алдыңа килер... Тик шарты — һорай белергә кәрәк!

— Нисек һорарға, Ҡамил абзый? Өйрәт!

— Мәҫәлән: «Ашъяулыҡ, ашъяулыҡ! Һин мине батшалар ашай торған аҙыҡ менән һыйла!» — тиһең. Һәм донъяла ниндәй тәмле-татлы, майлы-баллы аҙыҡ бар, бөтәһе һинең алдыңа килеп ятасаҡ! Әйҙә, рәхим ит, аша! Күңелең күпме теләй — шул хәтле аша! Тик шуны бел — ул аҙыҡтарҙың теләгән бер кешенең ҡалағына эләкмәй, ауыҙына инмәй торған ҡылығы бар...

— Улай булғас, беҙ ас ҡалырбыҙ ҙабаһа, Ҡамил абзый?!

— Һеҙгә, асҡаҡ ҡыҙҙарға шулай кәрәк тә!

Ҡыҙҙар һындары ҡатып көләләр, шаяралар, шаулашалар. Ҡамил абзый ҙа кинәнеп көлә, шаяра, хатта ҡайһы саҡта ҡулдарына ирек биреп тә ебәрә: ҡайһы ҡыҙҙарҙы ҡағып-һуғып ебәрә, ҡайһыларын тубығына ултыртып һөйә-һыйпай, ҡытыҡлай. Тағы шау-шыу, сырылдашыу. Бүлмә һаман-һаман йәнлерәк, шаулыраҡ, күңеллерәк була бара.

Ҡамил абзыйҙың тышҡы күренеше лә һәйбәт кенә: костюм, галстук, елкәһенә төшөп торған ҡара сәс... Бөтәһе лә тап заманса. Әммә, ни өсөндөр, ул Емешкә мулла булырға әҙерләнгән элекке шәкертте хәтерләтә. Уның йөрөшө-торошо, шаярыу, һөйләшеү, ҡыланыу ғәҙәттәре бөтәһе лә уға, нисектер, ят, яһалма, хатта, мәкерле тойола. Уның ысын күңелдән шаярыу-көлөүенә лә, изге ниәтле булыуына ла ышана алмай. Улай ғына ла түгел, хатта унан ҡурҡа, хәүефләнә лә. Шуға ахыры Ҡамил ағай бүлмәгә килеп инеү менән йәһәт кенә ятаҡтан сығып тайырға ашыға. Әле лә ул бына, дәрес әҙерләп ултырған еренән йәһәт кенә тороп, бер ни күрмәгән, ишетмәгән һымаҡ, үҙалдына ғына ҡарап ишеккә юнәлде.

— Һай, ҡыр кәзәһе! Ҡасып та бара! — тип, ҡанһыҙ, нәҙек бармаҡтары менән янап, шаярып ҡалған булды Ҡамил абзый. — Туҡта әле... Мин һине! — тип, ҡысҡырып көлөп ебәргән булды. — Иллә ҡыр кәзәһе лә инде, ай-һай!..

Уның һөйләүе, көлөүе, шаярыуы, хатта ниндәйҙер ауырыу, йонсоу, шырыш йылмайыуы ла Емешкә бөгөн айырата яһалма, ялған, хатта ҡаресле тойолдо. «Ул яман кеше... — тигән ҡырҡа ҡарарға килде Емеш бөгөн. — Әй, ерәнгес тә инде! Унан һаҡланырға кәрәк!..»

Ә ни өсөн, ниңә яман? Был хаҡта Емеш бер ни ҙә белмәй ҙә, уйламай ҙа ине. Үҙенә генә хас, үҙенә генә билдәле булған һиҙенеү, тойоноу менән йәшәргә өйрәнгән. Ә уның был тойоуы, нисек кенә ғәжәп булмаһын, һәр саҡ тип әйтерлек үҙен аҡлап та килә...

* * *

Тышта һаман ҡойоп ямғыр яуа. Йәшендәр асыулы ялтылдай, ер тетрәтеп күк күкрәй. Ҡескәй саҡта Емеш йәшендән сикһеҙ ҡурҡа ине. Өйҙөң ҡараңғы мөйөшөнә

йәшенеп, берәй нәмә бөркәнеп ултыра торғайны. Хәҙер ҙә ул бик ҡурҡа. Күк күкрәгән, йәшен ялтылдаған һайын, әле лә уның йөрәге ҡурҡыуҙан атылып сыға яҙа. Шулай ҙа, күрәһең, ул яман кешенән ныҡыраҡ ҡурҡалыр ахыры. Юҡһа, ул ошондай көслө йәшен аҫтында яңғыҙы йөрөп ятмаҫ ине. Хатта күкрәп сәскә атҡан бынауы һылыу алма ағастары араһында ла ҡурҡыр, ятаҡҡа ҡасыр ине...

* * *

Ахыр килеп ямғыр ҙа үтте. Йәшенле ҡара болотто Көплө урманы үҙенә тартып алды. Күктә ҡояш балҡып сыҡты. Алма, сейә ағастарының аҡ күбәләк кеүек леберҙәшеп торған аҡ сәскәләрендә эленеп ҡалған ямғыр тамсылары ынйы бөртөктәре булып йымылдашырға кереште, сәскәләргә, уларҙың татлы һуттарына булған мәңгелек ғишҡын йырлай-көйләй, егәрле бал ҡорттары, иңкештәр дәррәү быҙылдап килеп етте; ҡайһы бер сәскәләр ҡыуаныстан шул хәтле ярһып, үҙҙәренең тылсымлы аҡ таждарында сабырһыҙ талпынып киттеләр ҙә, яй ғына өйөрөлә-кәйелә, йылы, еүеш ергә төшөп яттылар. Терелткес ямғыр тамсылары менән шулай йомарт ҡойондоролған ерҙән күтәрелгән йылы саф һауаға, хуш еҫле сәскәләр еҫенә ҡыуанып ярһыған һабан турғайҙары йырлай-гөрләй ҡояшҡа табан осоп китте. Яҙ, йәшен, ямғыр, ҡояш, ҡоштар, сәскәләр... Яҙғы уяныш, терелеш! Йәшәү! Бар донъяның биҙәнгән, төҙәнгән, ҡыуанған сағы! Тик ниңә һуң быларҙың береһе лә Емештең күңелен асмай икән? Ниңә ул ҡанатланмай хәҙер? Эсе генә боша, моң-зары ғына арта һымаҡ.

Моғайын, ул Оло Эйек буйын үтә лә һағынғандыр. Уның сәскә баҫҡан туғайҙарын, хатта бөгөнгө кеүек йәшенле ямғыр алдынан баш өҫтөндә айырата сәңкелдәшеп-ҡарҡылдашып шау-гөр килеп оса торған ҡарғаларын, сәүкәләрен дә бик ныҡ юҡһыналыр уның күңеле...

«Эй-й, йәһәтерәк ҡайтып китергә ине! Ҡасан ул көн етер?! — тип түҙемһеҙләнеп уйланып ала ул. Шунда уҡ үҙенә-үҙе аптырап та ҡуя: — Ниңә улай ашығам икән? Былай ҙа ғүмер ел кеүек елеп кенә тора ла! Бына бит, бер айҙан мин бында булмаясаҡмын. Курсты тамамлармын да китермен...»

Ошо ваҡыт, ниңәлер, уның хәтеренә Ҡарасәс әбей иҫенә төштө. Берәй һүҙ йәки хикәйәт һөйләр булһа ул [illegible] генә көрһөнөп ала ла:

— Әй-й, ғүмер тигәнең аҫтыртын ир кеүек икән ул. Ситмәй-һиҙҙермәй генә һинең йәшәү һутыңды һура, йөрөтә һулыта ла үҙе лә китә икән. Илап та, ялынып та, йәлләп тә уны кире ҡайтарып алып булмай икән, — тип башлап китер ине. — Бер генә секундҡа булһа ла туҡталһа, артына боролоп ҡараһасы. Һинең өлөшөңә төшкән осҡондай ғына бәхетле бер секундты ҡабатлаһасы. Юҡ шул, булмай, ҡабатланмай... Ай-һай, бик тә аҡыллыһыҙ ҙа, йәнһеҙ ҙә нәмә был ғүмер тигәнең... Йә, уйлап ҡарағыҙ, ҡайҙа, нимәгә шул хәтле һөрлөгә-йығыла елә ул, ә?! Алда, бәйгеләге кеүек, ҡиммәтле бүләк әҙерләп ҡуйғандармы ни уға?! Нисек кенә ашыҡһаң да, ҡабаланһаң да, сапһаң да, юртһаң да, атлатып ҡына барһаң да тигәндәй, барыбер ахырында бөтәңә лә шул бер үк «бүләк» түгелме ни?.. — тип Емешкә аңлайышһыҙ [illegible] бороп та алып китә. Емешкә мәҙәк тойола. «Ошо Ҡарасәс инәйем ҡайһы саҡта туҙға яҙмағанды һөйләй ҙә ҡуя. Сапҡанға ла, атлағанға ла нисек бер бүләк булһын ти?!» — тип эстән генә көлөп ала. Сөнки ул әле бәләкәс, Ҡарасәс инәһенең «бүләк» һүҙен ул туранан-тура ғына аңлай ине. Ә Илсеғолда өлкәндәр күберәк кинәйә менән һөйләшергә, мәҡәлдәр, әйтемдәр әйтергә, йыр, әкиәт теле менәнерәк һүҙҙәрен биҙәп ебәрергә оҫталар. Уларҙың һүҙ мәғәнәһен аңлар өсөн, һөйләшеү тәртибенә төшөнөргә, аҡыл йөрөтөү оҫталығын байҡай белергә кәрәк ине. Бигерәк тә Ҡарасәс инәй кеүек сәсәндәр телен аңлар өсөн... Дөрөҫ, әле лә Емеш бик ҙур түгел. Әле лә уға Ҡарасәс инәһенең «бүләк» һүҙенә ниндәй мәғәнә һалып әйтеүе барып уҡ етмәй. Әммә хәҙер ул инде белә — көн тигәнең дә, йыл тигәнең дә бик тиҙ уҙа икән. Бына бит кисә ғына һуң әле ул йәшһеҙ генә илай-һыҡтай, ҡыуана ҡолә тигәндәй, тәүтапҡыр оҙон юлға сығып киткәйне. Шул көнгә хәҙер күпме ваҡыт уҙып та өлгөрҙө!

Тәүтапҡыр ауылынан, туғандарынан, әхирәттәренән айырылып киткәйне Емеш ул көндө. Ай-һай, ауыр булғайны. Хатта шул көндө уның тамағына килеп ултырған һыҙлаулы бер төйөр әле булһа үҙен һиҙҙереп тора һымаҡ. Эйе, ауыр ине, алда өмөтлө-өмөтһөҙ билдәһеҙлек кенә йәшәй, әйләнә-тирәлә бөтәһе лә яңы, аңлайышһыҙ һымаҡ ине әле. Тик баш осонда шул бер ҡояш

ҡына һаман элеккесә ғәмһеҙ, үҙгәрешһеҙ көйө ҡалғайны шикелле. Эйе, ҡышҡы ҡояш йә болот артына ҡаса, йә йылыһыҙ сағыу балҡып, әле генә далаға ҡунған ҡар елбәҙәктәрен мең төрлө төҫкә мансып, йондоҙҙар яһап уйнай, йәки уларҙан күҙ ҡамаштырғыс төрлө ебәк таҫмалар үреп, юл буйлап һуҙып алып китә. Емештең күңелендә Ҡарасәс инәйҙән ишеткән моңһоу бер йыр ҡабатланды:

...Ҡайҙа барһаң да бер ҡояш,
Күбәләктәй йәнгә көс.

Ә соңғорло-соңғорло ҡышҡы юл уны һаман алыҫҡа, билдәһеҙ ерҙәргә саҡыра, сана, тотош далаға һибелгән сағыу ҡар йондоҙҙарын ярып, һаман алға шыуа...

Бына бит инде шул көнгә йылдан ашыу ваҡыт уҙып та киткән!.. Бер йыл тигәнең, ай-һай, бик күп тә, ҡәҙерле лә ғүмер икән дәһә! Быны хәҙер Емеш тә аңлай...

...Уйлап та ғына торһаң, иҫ китерлек,
Уйламай ҙа ғүмер итерлек...

Бына һиңә кәрәкһә, һис көтмәгәндә тағы шул Ҡарасәс инәйҙең бер йыры Емештең иҫенә килеп төштө! Емеш аптыранған һымаҡ итеп тирә-яғына ҡарап алды. Элекке баяр баҡсаһының аҡ сәскәләргә күмелгән бейек алмағастары солғап алғайны уны: «Ниңә мин гел шулай, Ҡарасәс инәй булып уйлайым икән? Әйтерһең, мин түгел, ә ул уйлай? Бәлки, уның йәне минең күкрәгемә инеп, йәшәп ҡалғандыр, ә? Ҡешенең йәне үлмәй тиҙәр ҙәбаһа!.. Һеҙ нисек уйлайһығыҙ, алмаҡайҙар?.. Әйтегеҙ әле?!»

Емеш аптыраныш, аҙарынып, алмаш-тилмәш уларға ҡарап, оҙаҡ яуап көтөп торҙо. Күҙҙең яуын алып торған аҡ сәскәләргә төрөнгән һылыу алмағастар тағы ла иркә, шат йымылдаштылар ғына. «Матурһығыҙ ҙа бит. Әммә, нисектер, ситһегеҙ шул инде. Эй һеҙ, ҡупшы баяр алмағастары! Һеҙгәме һуң етем йөрәгенең тибешен аңларға?!»

Ҡыҙҙың алдында ғына үтә ғорур төҙ баҫып торған ҡарт алмағас үҙенең үтә бай ҡупшы сәскәләре менән күҙ сағылдырғыс йымылдап, тағы ла татлыраҡ, матурыраҡ йылмайҙы. Емеш һаман баяғыса үҙенә лә, әйләнәтирәгә лә тәрәнерәк төшөнөргә тырышып уйлана-уйлана ары китте.

Бәләкәс саҡта Емеш, алыҫта күгәреп күренгән тауҙар ерҙең ситтәре, күктең көмбәҙе лә шул тауҙарға тоташып, ҡапланып торалыр, тип уйлай торғайны... Югереп шунда еткеһе, тауҙың иң бейек түбәһенә менеп, был күпкән ҡорһаҡлы буталлы сәйгүн шикелле, зәңгәр күкте тотоп, һыйынан ҡарағыһы килә торғайны: эҫеме икән, әллә һалҡынмы икән ул?!.

Ә хәҙер бына Емеш ундай күк тауҙарҙы нисә тапҡыр арҡылын үтте инде. Оҙаҡламай тағы юлға сығасаҡ. Тағы ла оҙонораҡ, алыҫыраҡ, билдәһеҙерәк, ярһытҡысыраҡ юлға. Моғайын, Емештең ул юлы шундай текә, хәтәр, ҡырыҫ тауҙар аша үтер. Бәлки, ул юлдың осо-ҡырыйы ла булмаҫ. Балалар йорто ла бик-бик алыҫта ҡалыр. Хуш, иҫән-һау бул, Ташлы!.. Ә бит ул бында төптөшы ғына, кисә генә килгән кеүек. Эйе, ярһый-тулҡына, ул кисә генә был йорттоң тупһаһынан көскә күтәрелеп ингәйне һымаҡ... Ә тағы беренсе башлап ошонда мәктәп ишеген асып ингән көн һуң?! Был көн, моғайын, ғүмергә уның күңелендә иң оло ҡыуаныс булып һаҡланыр.

Уйының ошо ерендә Емеш, уйсан ғына йылмайып, тағы туҡталып торҙо. Уның хәтеренә ирмәк бер көн килеп төштө, уны бер саҡ өсөнсө кластан дүртенсегә күсереп ултырттылар. Әле балалар йортона килгәненә бер ай самаһы ғына ваҡыт үткән. Ул әле үҙ класына ла эйәләшеп етмәгән. Тағы яңы класс, яңы балалар! Етмәһә, бында ул ҡыҙҙарҙан бер үҙе генә булып сыҡты. Ҡыҙҙар араһында йәш яғынан унан өлкәндәр ҙә етерлек булһа ла, улар түбән кластарҙа уҡыйҙар ине әле.

Емеш класта гел малайҙар ғына булыуын күргәс, көскә-көскә генә кире югереп сығып китмәне. Үҙен саҡ тыйып, ишек төбөндә туҡтап ҡалды. Тирә-яҡҡа күҙ һалды: «Эһә, анауында, иң артта буш бер парта бар икән...»

Ҡыҙ бер кемгә лә ҡарамай-өндәшмәй шунда уҙҙы. Малайҙар һүҙһеҙ генә ҡарашып алдылар. Күрәһең, ҡырҡ малай араһына бер ҡыҙ килеп инеүе уларға ла сәйер тойола ине.

Дәрес башланыр саҡ етмәгәйне әле. Бына алғы партанан ике малай тороп баҫты. Береһе тәпәш буйлы, теремек күҙле, көләс йөҙлө һөйкөмлө малай — Хөрмәт. Ул Башҡортостандың урманлы яҡтарынан килгән. Икенсеһе — нәҙек оҙон буйлы, аҡ йөҙлө — дала малайы Сабир.

Малайҙар шаяра-көлә ҡыҙ янына килделәр, уның ҡабарынҡы сәстәренән тотҡолап ҡаранылар.

— Ҡара әле, үҙе турғай кеүек бәләкәс кенә, ә толомдары үҙенән ауырҙарҙыр, валлаһи!

Емеш өндәшмәне лә, ҡуҙғалманы ла. Малайҙар, тағы ла баҙнатлана төшөп, уның ике яғынан партаға ултырҙылар. Әммә быға ҡыҙ сыҙап ҡала алманы. Икеһен ике яҡҡа этәреп сығарҙы:

— Ҡитегеҙ! Мин бер үҙем ултырам!

— Ни өсөн?

— Малайҙар менән бер партала ултырмайым!

— Ҡара һин уны! Бына ул ҡалай икән! — тип күңелле көлөп ебәрҙе Хөрмәт.

— Бына ул ни өсөн беҙҙең класҡа күскән икән! — тип Сабир ҙә шарҡылдап көлдө.

— Ҡараҡай, мин һинең менән бер партала ултырырға теләйем, — тип белдерҙе Хөрмәт.

— Ҡараҡай, тимә. Ҡыр кәзәһе, тиген. Ҡамил абзый уға шундай ҡушамат биргән! — тип өҫтәне Сабир. — Бик шәп исем: төптө ҡыр кәзәһе икән!..

Емеш ситлеккә эләккән ҡошсоҡ кеүек аҙап ҡалды. Был ҡыҫымдан ысҡынырға ла, иларға ла, ни ҙә булһа тағы әйтергә лә хәле ҡалманы. Шаяндар, тағы ла ныҡыраҡ баҙнатланып, тағы уның ике яғынан ултырып алдылар.

Тап ошо ваҡытта уға бер ағай ярҙамға килеп етте. Бында уны бөтә балалар ҙа вожатый ағай тип йөрөтәләр. Оҙон буйлы, үтә ҡаҡса, арыҡ егет. Битен баҫҡан эре ҡара шаҙралар ҙа хатта уның илһамлы, мөләйем ҡуңыр йөҙөнөң үтә яғымлы, нурлы булыуына зарар итә алмаған. Емеш уны белә. Ул һәр саҡ бер көтөү бала эйәртеп, оҙон-оҙон баҫып, югерә-атлап йөрөй. Ҡайҙалыр ашыға, ниҙер эшләй, балалар менән төрлө уйындар ойоштора. Уларҙы урам буйлатып йырлатып алып йөрөй. Ул үҙе лә күптән түгел генә ошо балалар йортонда тәрбиәләнгән. Аслыҡ йылда ата-әсәһе, туғандары астан үлеп бөткәс, кемдер уны ярым шешенгән хәлдә бында алып килеп тапшырып киткән. Балалар йортонда уны аслыҡтан ҡотҡарып, көскә аяҡҡа баҫтырып ебәргәндәр. Ә бына хәҙер ул Өфөлә уҡып, балалар йортона эшкә ҡайтҡан. Һәм шулай итеп «вожатый ағай» булып киткән.

Емештең муйынына ла ҡыҙыл галстук тағырга өлгөрҙө инде ул.

— Бына, тәнәй, һин дә пионерка булдың! Һиңә хәҙер ништәп бойоғорға? Күкрәк киреп йөрө! — тип, үҙенең ҡыуаҡан диалектендә йомшаҡ ҡына һөйләнде. — Һин хәҙер етем ҡыҙ түгел, ә ерҙең төп хужаһы, вот! — тип кинәнеп көлдө. — Төшөндөңмө? — тип ныҡышып һораны. Ҡыҙ уға ышанып йылмайҙы. Ул Ҡамил ағай шикелле күңелдә шик-шөбһә уятмай. Киреһенсә, бөтә балалар ҙа уны яраталар, вожатый ағай, тип, артынан ҡалмай югереп йөрөйҙәр. Ә хәҙер бына ошо ягымлы «вожатый ағай» Емешкә бик ваҡытлы ярҙамға етеште. Юҡһа уның ҡырағай, ҡырыҫ холҡо менән тағы берәй ярамаған эш эшләп ҡуйырға ла, ҡайтанан уҡыуҙан ситкә тибәрелергә лә мөмкин ине бит.

— Ништәп әле һеҙ тәнәй менән булашаһығыҙ! — тип һораны ул уйынлы-ысынлы, ҡалын ғына тауыш менән.— Һәгеҙ әле, ҡустылар, тороғоҙ әле, мин һеҙҙе анауы бүлмәгә алып барып биктәп ҡуяйым әле, — тип, күңелле генә йылмайып, бер ҡулы менән Хөрмәттең, икенсеһе менән Сабирҙең яурынынан тотоп тартты. Тегеләре бер ҙә ҡарышмай торҙо.

— Ҡайһы бүлмәгә, вожатый ағай? — тип, мутланып, тәҙрә үтә күренеп торған туалет яғына ымлай Сабир.— Һисауа бүлмә күренә.

— Тап шунда, һеҙҙең өсөн бик яраҡлы, кәрәкле бүлмәгә, — тип, сабыр ғына тауыш менән яуап бирә вожатый. — Аттаныҡ!

— Аттаныҡ! — тип ҡабатлап, вожатыйҙың ҡыуаҡан диалектенән көлөп-мәрәкәләп мутлаша һаман Сабир.

— Мин дә аттайым, — тип мутлана Хөрмәт тә. Малайҙар шаулашып-көлөшөп, вожатый артынан коридорға сығалар. Емешкә вожатый ағайҙың инде шаярып түгел, ә етди тауыш менән:

— Һеҙ, малайҙар, ҡыҙ кеше менән булашмағыҙ. Яңғыҙ ҡарлуғасты өркөтмәгеҙ, — тип иҫкәртеүе ишетелеп ҡала. — Бына тиҙҙән улар күбәйер, батырайыр, шунда шаярырһығыҙ... — ти ул, көлөмһөрәп.

— Вожатый ағай, ул саҡта бит беҙ ҡартайырбыҙ. Шаярғыбыҙ килмәҫ, — тип мәрәкәләй Хөрмәт.

— Ништәп ҡартайырға? — тип, һаман шул баяғы ярым шаярыу тауышы менән, ысын күңелдән аптырап һорап ҡуя вожатый. — Ҡешеләр быуаттар буйы үҙҙәрен баҫып ятҡан йоҡоларынан көскә уянып торҙолар. Ҡөскә ҡалҡынып оло юлға сыҡтылар. Ә һин, ҡустым, ҡарта-

йыу хаҡында һөйләйһең. Юҡ, ҡартайыу ҙа, үлеү ҙә буш хәбәр! Беҙ — революция балалары — мәңге йәш йәшәр быуын! Аңдайһығыҙмы? Ә һин, ҡустым, ҡартаябыҙ, имеш!

— Аңланыҡ! — тип, күңелле көлөшөп яуапланылар малайҙар. — Ҡартаймаясаҡбыҙ!

Емеш тә эстән генә йылмайып ҡуйҙы: «Иллә мәрәкә лә кеше беҙҙең вожатый ағай!..»

«Шулай итеп, ауыр ҙа, мәҙәк тә булған был көн дә артта ҡалды, — тип еңел генә көрһөнөп ҡуйҙы хәҙер Емеш. — Был яҡшы кеше — «вожатый ағай» ҙа, ҡайтанан Өфөгә, уҡырға китеп барҙы. Был юлы рабфакка... Тиҙҙән мин дә китермен. Эй-й, был ғүмер тигәнең һиҙҙермәй-белдермәй генә уҙа ла уҙа икән ул, — тип, тағы бер тапҡыр Ҡарасәс инәйҙең моңһоу ғына көрһөнөп әйтә торған һүҙен хәтерләне. — Үтә шул. Бай ҙа, батша ла, хатта пәйғәмбәр ҙә уны тотоп, туҡтатып ҡала алмай. Шулай булғас, уны елгә елгәрмәҫкә, ялтартып үткәреп ебәрмәҫкә тырышырға тейештер ул кешемен тигән кеше. Һинең һәр көнөң, һәр минутың кешеләр өсөн, йәшәр кешеләр өсөн ниндәй ҙә булһа бер изге мая һалып ҡалдырырлыҡ итеп йәшәүгә ни етә?!. Әммә ҡыҫыр теләк менән генә ирешеп булмай уға. Арыу-талыуҙы, алдыялды белмәгән, үҙе хаҡында оноткан, кешегә ҡарата йөрәгендә һүнмәҫ-һүрелмәҫ изге нур йөрөткән кешеләр генә ирешә был ндай оло бәхеткә!..»

— Бына шулай тип әйтә торғайны беҙҙең Ҡарасәс инәй! — тип, алмағастарға текә ҡарап ҡабатлап ҡуйҙы Емеш. Һәм ҡапыл, дөйөм ятаҡ яғына ҡырҡа боролоп, йәһәтләп атлап китте. — Ҡамил абзыйға ҡарап торорға яраймы ни?! Ҡайтырға, эшкә ултырырға кәрәк! Унда дәрес көтә ләбаһа мине!

## VIII

Август айының эҫе бер көнө ине. Балалар йортоноң баҡсаһындағы һауа арыш икмәге, әрем, бешеп еткән алма, тағы әллә ни хәтле йәнгә яҡын башҡа хуш еҫтәр менән аңҡып тора. Ә баҡсаның ҡояшта ҡыҙған тимер ихатаһына һөйәлеп, ҡапҡа янында Емеш менән Хөрмәт баҫып тора. Уларҙың күҙ ҡараштары ҡаршылағы һырт аръҡыры бормасланып ятҡан оло юлға төбәлгән. Уларҙы бынан алып китер өсөн шул юлдан бына-бына кемдер

килеп сығырға тейеш. Сөнки хәҙер уларға бында эш ҡалманы, үҫтеләр, уҡынылар, әҙерләнделәр. Инде артабан уҡырға, алға атларға ваҡыт. Тик йәһәтерәк ауылға ҡайтырға ла уңан... Тик бының өсөн уларҙы килеп кемдәр алып ҡайтырға тейеш тәбаһа! Кем килер икән һуң? Ҡасан?! Һәм улар иртәнән бирле ошонда, ҡоймаға һөйәлеп, тауыш-тынһыҙ ғына торалар ҙа торалар. Көтәләр. Ғәҙәттә, шаян, теремек холоҡло Хөрмәттең йөҙөндә лә бөгөн ниндәйҙер ярһыу түҙемһеҙлек, бошонҡолоҡ сағылып ҡала.

— Илап ебәрмәһәң ярар ине! — тип үртәгеһе килә уны Емештең. — Һин, бахыр малай, күренеп тора, өйөңдө үтә лә һағынғанһың шул. Күҙеңдән йәш мөлдөрәп атылырға тора! — Ләкин йәлләне, үртәмәне. Етмәһә, ҡапыл сиркәү ҡыңғырауҙары ҡолаҡ ярғыс тауыш менән доңғорҙап китте.

— Ниңә сиркәү ҡағалар икән? — тине Емеш уйсан ғына. — Байраммы, ҡайғымы һөйләй был зың?!

— Ана, мәйетте алып инәләр! — тип, Хөрмәт ҡапыл теремекләнеп, ҡыҙыҡһынып китте. — Әйҙә барып ҡарайыҡ!

— Әйҙә!

Улар кемуҙарҙан сиркәүгә табан югерешеп төшөп киттеләр.

Ташлы урамының иң ҡалҡыу урынына баяр йорто ҡаршыһына һалынған ғәжәп ҙур, матур сиркәү үҙенең ғәҙәти булмаған тышҡы күренеше менән дә, ҡыңғырауҙарының аңлайышһыҙ серле доңғорҙауы менән дә Емештең күңелендә һәр саҡ билдәһеҙ шом, тотоп тыйғыһыҙ ҡыҙыҡһыныу уятып ебәрә. Ул үҙе лә аңламаҫтан, ғибәҙәт ваҡытында ла, мәйетте күмеү йолаһы мәлендә лә ҡурҡа-өркә шунда югерә. Ағас табутҡа һалып, маңлайына, түшенә май шәмдәр ултыртып, ҡағыҙ сәскәләр менән биҙәп һалынған мәйеттең шар асылған быяла күҙҙәренән ни ҙә булһа аңларға, үлем тигән бик ябай, ләкин ауыр күренештең серенә, үлгән кешенең хәленә төшөнөргә тырышып, башы әйләнгәнсе, күҙ алдары ҡараңғыланғансы ҡарап йөрөй. Аҙаҡ төндәр буйы ҡурҡып һаташып сыға ине. Шаян Хөрмәт тә бындай күренеш менән үтә ҡыҙыҡһына. Әммә Емеш шикелле юғалып, онотолоп ҡалмай. Әгәр сиркәү тирәһендә сыуалып йөрөгәндә, уҡытыусы йәки тәрбиәселәрҙән берәйһе күренһә, ул иң элек абайлап ала.

— Емеш, шылдыҡ! — тип, балалар йорто яғына югерә, Емеш тә унан ҡалышмай ине. Ләкин бөгөн Емеш, сиркәү янына килеп еткәс, туҡтап ҡалды.

— Ҡуй, инмәйек,— тине. Унан тотто ла кире әйләнеп югерҙе. Хөрмәт унан ҡалырға теләмәне. Улар хәҙер ағай менән һеңле кеүек татыуҙар, дуҫтар ине. Хатта һуңғы ваҡытта бер партала ултырып уҡый башлағайнылар.

Балалар йортоноң ҡапҡаһы янында улар Сабирҙе осраттылар. Ул, ғәҙәтенсә, дуҫтарын төртмә теллеләнеп ҡаршыланы.

— Эй, күмер һатам, күмер! Һалабаш һатам, һалабаш! Ништәп ҡайҙалыр туҙышып йөрөйһөгөҙ!

Ул Хөрмәтте, урман яғы башҡорттарынан булғаны өсөн, шулай мәрәкәләргә ярата ине. Хөрмәт тә Сабиргә урман яғы башҡорттарының ялан яҡтарына әйтә торған дуҫтарса төртмә көләмәсен әйтеп ҡалырға онотманы.

— Фу, тиҙәк еҫе килә, тиҙәк! Һалам яғам — өй ыҫлатам, ер төтәтәм! Тиртун кейеп туңып ятам! Ха-ха!

Был юлы Хөрмәттең тапҡырлығы Емеште ҡыуандырҙы. Ул ҡыйыуланып Сабиргә ҡараны.

— Һин, ҡамыт аяҡ малай, ҡайҙа тиҙәк тибеп йөрөнөң?

— Бумала баш, ҡырағай, ҡарағаш, мин үҙем баяр баҡсаһында алма ашап йөрөнөм, — тип Сабир эре генә үҙенең эсенә һуғып күрһәтте. — Бында, ағайыңдың ҡорһағында, кәмендә ун алма ята. Их, тәмле алмалар! Телеңде йоторлоҡтар!

— Емеш, әйҙә беҙ ҙә алма ашайыҡ, — тине Хөрмәт, инде етди тауышҡа күсеп. — Һуңғы тапҡыр бит. Китәбеҙ бит инде.

Сиркәү, әллә нисә төрлө тауыш сығарып, тағы ла көслөрәк доңғорҙай башланы. Үҫмерҙәр, өрккән бәрәстәр шикелле, ырғый-һикерә артабан югерҙеләр.

* * *

Алма баҡсаһы Емешкә яҙ көнө күргәндәге шикелле түгел ине инде. Ул саҡта Емештең күҙ алдына сихырлы төш һымаҡ, әкиәттәге ен батшаһы ҡыҙының серле һарайы янында үҫкән тылсымлы баҡса һымаҡ булып килеп баҫҡайны бит ул... Бына ҡояш һүрән генә ҡыҙҙыра. Сейәләр, алмалар, ап-аҡ сәскәгә күмелеп, тынып ултыра. Аҡ, һары күбәләктәр, бал ҡорттары, иңкештәр тағы

әллә ни хәтле төрлө бөжәктәр сәскәләрҙән сәскәләргә ҡунып байрам итә, сәскә елпеүестәр иренеп кенә һирәк-һаяҡ ергә яуа... Сәскә еҫтәре менән тулышҡан йылы, татлы һауа күкрәкте киңәйтеп, йәнде ярһытып күккә осора. Һине йәшәүҙең ләззәтен тәрән татырға, уйланырға, уфтанырға һәләтле яһай.

Әле инде улай уҡ түгел. Алмаларҙы ла, сейәләрҙе лә малайҙар бешер-бешмәҫтән өҙөп-йолҡоп ашап бөткән. Ботағы һынған алмағастар, башы мөнтәлгән сейәләр, халыҡ әйтмешләй, Хужа Насретдиндең йолҡонған ҡошона оҡшап, яланғасланып ҡалған. Бына әле лә Хөрмәт менән Сабир баҡсаға инеү менән кемуҙарҙан алма ағасына үрмәләп менеп киттеләр ҙә иң оста ғына ҡалған алмаларҙы тупылдатып ергә төшөрә башланылар.

— Емеш, ҡараҡай, аша!

— Итәгеңә йый. Был һиңә беҙҙән күстәнәс булыр!

— Нишләп ашамайһың, ҡыр кәзәһе! Беҙ бында кем өсөн тырышабыҙ!

Емеш бер алманы алып тешләп ҡараны ла ташланы.

— Әсе.

— Эй-й, һин алманың тәмен беләһеңме ни? — тип шаяртты Сабир.

— Йә-йә, минең яҡташҡа бик үк бәйләнмә, — ти Хөрмәт, тауышын вожатый ағайға оҡшатырға тырышып. — Ул бит яңғыҙ ҡарлуғас ҡына әле.

— Ҡартуф ашай белмәгән ауыҙ менән алманың тәмен белеп буламы ни! — тип ҡарыулашты Сабир. — Эй, ҡараҡай, һиңә әйтәм!

— Барыбер бәйләнмә! — тип ҡырт киҫте Хөрмәт, — улайға китһә, картуфты алманан тәмлерәк күрәм.

— Һай, бөрсә! Бәләкәс кенә бөрсә. Әсе тигән була лабаһа! — тип, тағы ла үҙһүҙләләнеп дауам итте Сабир. — Дуҫтарҙың яҡшылығын баһаларға кәрәк тәһә! Ырғытып бәрергә түгел.

— Әсе шул. Әсе-әсе! — тип ҡабатланы ла Емеш баҡсанан йүгереп сығып китте. Малайҙар, алмалар шикелле тупылдап, ағас башынан һикереп төштөләр.

— Туҡта, Емеш!

— Ҡараҡай, ништәп ҡасаһың?

Йүгерешеп-ҡыуышып ҡайтып ингән үҫмерҙәрҙе ҡапҡа төбөндә Хөрмәттең еҙнәһе ҡаршы алды.

— Әйҙә, ҡәйнеш, алып ҡайтырға килдем.

Емеш, ҡапыл, ауыр көрһөнөп ҡуйҙы:

— Эй-й, Хөрмәт тә ҡайтып китә. Ә минең ағайым һаман юҡ.

— Тәнәй, һин ҡайһы ауылдан? — тип һорап ҡуйҙы Хөрмәттең еҙнәһе. — Алыҫтанмы?

Емеш өсөн ашығып Хөрмәт яуап бирҙе:

— Илсеғолдан, Оло Эйек буйынан ул.

— Бәй, күрше ауылдан икән дәбаһа. Беҙ Оло Эйек аша йөрөйбөҙ, тәнәкәй,— тип, ҡыуанып яуап бирҙе еҙнә кеше. Күрәһең, ул, Емештең күҙенә ҡарап, бик-бик ҡайтҡыһы килгәнен аңлап алды. — Йә, тәнәкәй, һин дә әҙерлән. Алып ҡайтам. Беҙ Ирмән ауылынан. Илсеғол аша ята беҙҙең юл, — тип тә өҫтәне.

Шул һүҙҙе әйтергә ҡыйыулығы етмәй торған Хөрмәт:

— Үәт, шәп була! — тип һөйөнөп китте. — Ҡайттыҡмы, яҡташ?!

Емеш берсә шатлыгы йөҙөнә ҡояш булып балҡып сыҡҡан Хөрмәткә, берсә уның яҡты йөҙлө, яҡшы һүҙле еҙнәһенә ҡарап алды. Икеһенең дә әйткән һүҙе ысын йөрәктән икәне көн кеүек асыҡ ине. Нисек шундай кешеләргә ышанмайһың?! Етмәһә, ауылын, туғандарын үтә һағыныу ҙа, күрәһең, Емешкә ҡыйыулыҡ бирҙе. Ул ҡайтырға риза булды. Төш ауыуға улар юлға сыҡтылар.

Хуш, Ташлы, хуш, балалар йорто, хуш, бала саҡ!

* * *

Ауылына яҡынлаша барған һайын Емеште бер һорау йышыраҡ борсоно: «Кемгә ҡайтып төшөргә икән? Ағайымдарғамы әллә апайымдарғамы?»

Юл буйы үҙенә тынғы бирмәгән был һорауға Емеш ауыл осона килеп ингәс кенә яуап тапты.

— Ағайымдарга. Анауында торалар улар, — тип, Сәлимә мәрхүмдең өйөнә күрһәтте. Айһылыу еңгәһе генә өйҙә булып сыҡты. Ул Емеште ҡыуанып ҡаршы алды. Һөйөп, ҡосаҡлап күреште. Таныш булмаған юлдаштарын сәй эсергә саҡырҙы. Юлаусыларҙы сәй менән һыйланы. Көн кискә һарыҡҡас, улар ҡайтыу юлына сыҡтылар. Хөрмәттең еҙнәһе, Емеш менән хушлашҡанда, яғымлы итеп:

— Йә, тәнәкәй, һин иҫән-һау ҡайтып еттең инде. Әгәр теләһәң, көҙ, Хөрмәтте ҡалаға илткәндә һине лә алып китермен, — тине.

Емеш оялсан йылмайҙы ғына. Уның өсөн еңгәһе яуап бирҙе:

— Алып ҡайтыуың өсөн дә ҙур рәхмәт инде. Ҡалаға ...аһы үҙе алып барыр инде...

— Йә, хушығыҙ. Сәйегеҙ, һыйығыҙ өсөн рәхмәт, — тине Хөрмәттең еҙнәһе. — Муйыл, ҡарағат бешкән саҡта, беҙгә ҡунаҡҡа килегеҙ. Беҙҙең урманда уларҙы бит күнәкләп түгел, йөкләп йыйып була...

— Рәхмәт.

Урман арбаһы шығырҙап-сыйылдап ҡапҡанан сыҡты. Арбаның артында ултырған Хөрмәт ишетелер-ишетелмәҫ кенә:

— Хуш, ҡараҡай! — тине лә ниндәйҙер көлдөргөс бер хәрәкәт эшләне. Йәнәһе: — Бирешмә, бойоҡма! — тигәнде аңлатты. Ҡыуаныстан һаман илағыһы килеп торған Емеш тә күңелле йылмайып ҡуйҙы:

— Хуш бул, малаҡай! — Һәм улар тыҡрыҡҡа инеп юғалғансы ҡарап торҙо, ярһып еңгәһен ҡосаҡланы: — Бына, еңгә, мин дә ҡайттым! — тине. Унан, ҡыуанысы эсенә һыймай, ғәҙәтенсә, илап ебәрҙе. Илап бөткәс, бик оҙаҡ битен һалҡын һыу менән йыуҙы. Бер аҙ тынысланғас, еңгәһе уны сәй янына саҡырҙы.

— Бая, кеше барҙа ашаманың, эсмәнең. Йә, хәҙер иркенләп тамаҡ ялғап ал!

Кескәй генә йыйнаҡ өй, йырлап ултырған йылтыр еҙ самауыр, күк буталлы ваҡ ҡына сынаяҡтар, сәскәле батмусҡ, ҡомалаҡ еҫе аңҡып торған йомшаҡ бойҙай күмәсе — бөтәһе лә әйтеп биргеһеҙ яҡын, сикһеҙ һағындырған нәмәләр — бөтәһе лә Емештең ярһыу йөрәгендә күтәргеһеҙ ҡыуаныс тойғоһо уятып, тамағына йәш булып килеп тығылалар. Уға, былай ҙа һөйләшеүгә ауыр кешегә, ауыҙ асып бер һүҙ әйтергә ирек бирмәйҙәр. Айһылыу, бикәсенең үтә тулҡынланыуын һиҙмәгәндәй, тыныс булырға, үҙ ғаиләһе тормошонан төрлө яңылыҡтар һөйләп уны ла баҫылдырырға тырышты:

— Беҙҙең Салауат ҙур үҫте. Төптө үҙаллы малай булып алды, — тип йомшаҡ ҡына йылмайып хәбәр итте ул. — Һөйөндөк ағаһын бик ярата. Хәҙер ҙә уларҙа әле. Һөйөндөк тә бик һәйбәт. Мырҙаһын ҡыйырһытмай. Бергә уйнайҙар. Татыуҙар. Ағайың инде ул, элеккесә, йәмәғәт эше тип көнөн-төнөн сабыуын ғына белә. Үҙенең ярыҡ ҡына муйынына бер юлы ун ҡамыт кейергә яра-

та, — тип, тағы тын ғына йылмайып алды Айһылыу. Емешкә ул элекке кеүек үк матур күренмәне. Арыған, йонсоған һымаҡ. Уның ҡарауы алсаҡланып, илгәҙәкләнеп киткән. Шуға ахыры ул еңгәһен был юлы тағы ла ныҕыраҡ яратты.

Сәйҙең аҙағына Иштуған да ҡайтып килде.

— Бәй, Емеш ҡайтҡан даһа! — тип, ҡыуанып та, аптырап та китте ул. — Ҡем менән, нисек ҡайтып төштөң? Мин иртәгә үҙем барып алырға торһам әле.

— Йә, ҡапыл ғына һорауҙар менән күмеп ташлама инде ҡарындашыңды, — тип, көләмһөрәп ҡуйҙы Айһылыу. — Башта кешеләрсә иҫәнләш!

— Һаумы, ағай, — тип Емеш тороп баҫты.

— Һаумы, һаумы, ҡарындаш, — тине хәҙер Иштуған. Һәм шатлыҡтан ярһып, көлә-шаяра һеңлеһен төрлө яҡтан ҡарап сыҡты. — Ҡарасы, беҙҙең бәләкәс кенә һеңлебеҙ төптө ҙур ҡыҙ булған да ҡуйған дабаһа! Ҡара һин уны, буйға ла үҫкән, кейемдәр ҙә төптө бүтән... Ысынлап та, әллә һин, һылыу, теге ваҡытта мин алып барып ҡалдырып киткән бәләкәс ҡыҙыҡай түгелме?! Танырлыҡ түгелһең дәһә!

Емеш, оялсан йылмайып, өндәшмәй торҙо.

— Ҡитсе, Иштуған, был ни ҡыланышың, оялттың дабаһа Емеште,— тип, Айһылыу тағы бикәсен яҡланы.— Үҫмәй әллә, йыл ярым аҙ ғүмерҙер шул! Йә, сәйгә ултыр!

— Туҡта әле, Айһылыу, һылыуымды күргәндәй булайым, — тип, иркә бала шикелле киреләнеп, Иштуған тағы һеңлеһенең тирә-яғынан уратып сыҡты. — Әйтәм бит, бөтөнләй башҡа! Һис тә беҙҙең бәләкәс Емеш тимәҫһең!

Өҫтөнә килешле генә итеп тегелгән аҡ кофта, ҡыҫҡа ғына ҡара юбка, аяғына һары төҫлө «ара» ботинкаһы кейеп ебәргән, етмәһә, муйынына пионер галстугы таҡҡан. Емеште, әлбиттә, таныуы еңел түгел ине хәҙер. Берҙән генә үреп, күкрәгенә төшөрөп һалған сәс толомо менән уйнап, ағаһының ғәҙәти булмаған бәйләнсек-мәҙәк ҡыланыш менән ҡаршылауына һис тә иҫе китмәгән һымаҡ, тыныс ҡына йылмайып тороуында ла ниндәйҙер яңылыҡ, бығаса Емешкә хас булмаған ҡыйыулыҡ күренде Иштуғанға.

— Ысын... Танымаҫлыҡ!— Шул уҡ ваҡытта былар бөтәһе лә уға шул хәтле килешле, тап уның холҡона хас та

һымаҡ ине. — Валлаһи, башҡа ерҙә осратһам, танымаҫ инем! — тип ҡабатланы Иштуған, һаман ярһый барып. — Мөғжизә ләбаһа был! Аңлайһыңмы, Айһылыу?!

— Йә, Емеш, ултыр, бикәс. Сәйең һыуына, — тине Айһылыу һаман тыныс ҡына. Унан ирен ҡултыҡлап алды:

— Әйҙә, йыуын... Мин һиңә башыңдан аша бер биҙрә һыу ҡояйым. Юҡһа, ашлыҡ һуғам тип, үҙең сүмәләгә әйләнгәнһең бит, һөмһөҙ, был көйө өйгә индерерлекме ни һине! Етмәһә, ҡарындашыңа дегәнәк кеүек йәбешкәнсең! — тип мәрәкәләп, ирен этә-төртә тышҡа алып сығып китте.

Иштуған да көлә-шаяра ҡарыулашты:

— Дөрөҫ түгел, Айһылыу. Мин бит былай ғына. Артыҡ ҡыуанғанға ғына. Ике ҡыуаныс бер юлы килгәнгә генә.

— Тағы башҡа ҡыуанысың да бармы ни әле һинең? — тип бүлдерҙе уны Айһылыу. — Ни өсөн мин уныһын белмәйем? Хәйер, хәҙер бит мин өй ҡатыны ғына. Һин яңғыҙ, минән башҡа ҡыуанаһың, тимәк?!

— Ниндәй ҡыуаныс тиһеңме?! — тип, Иштуған ҡатынына күңелле йылмайып ҡараны. — Хәҙер әйтәм. Берҙән, Емеш ҡайтанан тыуған!..

— Уныһын мин үҙем дә беләм, — тип, үпкәле тауыш менән ҡарыулашты Айһылыу. — Емештең үҙгәргәнен күрерлек, тойорлоҡ күҙ ҙә, аҡыл да үҙемдә бар әле хәҙергә. Ә бына һине тамам иҫерткән икенсе ҡыуанысыңды һис тә белә алмам һымаҡ.

— Айһылыу, етәр һиңә! — тип, етди тауышҡа күсте Иштуған. — Ул рәүешле һөйләшеүҙе минең яратмағанды беләһең бит һин!

— Ярар, улайһа, үҙең һөйләп бир икенсе ҡыуанысыңды, — тип килеште Айһылыу. — Йәһәтерәк йыуын. Емеш көтә бит унда!..

— Минең икенсе ҡыуанысым шул: быйыл беҙҙең ерҙе берҙәләп эшләү ширкәте ағзалары борон Илсеғолдоң ярлыһы түгел, хатта бай тигәне лә күрмәгән хәтле иген алды! Үҙең беләһең бит, уңыш нисек төшә?! Йыйып алып, һуғып ҡына өлгөр! Был бит беҙҙең йоҡоһоҙ төн, тынғыһыҙ тырышлыҡ емеше! Был — һинең менән мин дә ҡатнашып, көрәшеп алған яңы тормош емеше бит, Айһылыуым, минең фронтташ дуҫым!

Иштуған ҡатынын ҡыҫып ҡосаҡлап, уның талынҡыраған, әммә һаман элеккесә матур, аҡыллы күҙҙәренә яратып ҡараны ла илһамланып һығымта яһап ҡуйҙы:

— Был бит әле башланғысы ғына! Алда, киләсәктә, күпме ҡыуаныстар, уңыштар көтә бит әле беҙҙе! Аңлайһыңмы һин мине, иҫәрҡәй?!

— Һинең был изге хыялдарыңдың тормошҡа ашыуын ғына теләйек, — тине Айһылыу, тын ғына йылмайып. Артыҡ ярһыған ирен тағы ҡултыҡлап алды. — Әйҙә, сәй эсә инәйексе!

Бибеш апаһын, уның бөтә ғаиләһен, үҙенең әхирәттәрен, бер остан икенсе осҡа хәтле тотош ауылды, йәшел Оло Эйек буйҙарын, хәҙер, ошо минутта тотош бер юлы күрергә ашҡынып, йән атып торған Емеш ағаһы менән еңгәһен көскә көтөп алды. Әйтерһең, уның йөрәге ошо минутта киҫәктәргә сарпылып, күкрәгенән атылып сығырға әҙер ине. Шуға ла ул сәй эсеп бөтөү менән йүгереп өйҙән сыҡты, ҡапҡаның тыш яғында туҡтап, тирә-яҡҡа ҡарап торҙо: «Ниндәй яңылыҡ, ниндәй матур үҙгәреш бар икән уның ауылында?!» Әммә ауылдың тышҡы күренешенә ҡарап, унда булып ятҡан үҙгәрештәрҙе, ағаһын шул хәтле ярһытҡан яңылыҡтарҙы төҫмөрләүе ауыр ине. Сәрбиямалдың, күкрәгең һауалы кереп, урамға ҡуҡырайып сығып ултырған тимер түбәле өр-яңы өйөн иҫкә алмағанда, һаман шул һалам йәки ҡабыҡ башлы кескәй генә өйҙәр, киң, таҙа, тын урам...

— Бөтәһе лә элек нисек булған, һаман шулай...— тип әллә бошоноп, әллә ҡыуанып көрһөнөп ҡуйҙы Емеш. — Бына тап элекке кеүек, мәсет менән мәктәп янына бер көтөү кәзә йыйылып көйшәй-көйшәй ҡояшта ҡыҙына... Ә бынауы һаҫыған ҡола тәкә лә тап элеккесә өйөрөн ҡурсалап, тыбырсынып йөрөй... Һәр өй тәңгәлендә түшәлеп ятҡан ҡаҙ көтөүҙәре лә тап элеккесә... Һыңар аяғына баҫып ойоп торған ата ҡаҙҙар ҙа тап шул саҡтағыса... Эй-й, Емеш яндарынан уҙған саҡта, уның яланғас аяҡтарын күгәрткәнсе суҡып ҡалырға ҡалай ярата торғайны бит улар!.. Белһәң ине, улар хәҙер ни эшләрҙәр икән? Элеккесә уны ҡыуырҙармы икән? Әгәр ҡыуһалар, ни эшләргә? Элеккесә ҡурҡып, йүгереп ҡасырғамы?!

Емеш әҙ генә уйланып алды. Унан хатта ҡысҡырып әйтеп ҡуйҙы:

— Юҡ, ҡасмайым! «Һәр бер эт ҡурҡаҡты, көсһөҙҙө тешләргә ярата, — ти торғайны Ҡарасәс инәй. — Шуға

ине — ҡурҡаҡ, көсһөҙ булмаҫҡа тейеш!» Бынан ары мин бер ҡасан да ҡурҡаҡ, көсһөҙ булмаҫҡа тейеш! — тип уйын ҡырҡа йомғаҡлап ҡуйҙы. Һәм ул ҡаҙҙар, кәзәләр көтөүенә һис тә иғтибар итмәҫкә, улар яғына ҡарамаҫҡа, йөрәгенең ҡурҡыуҙан сымырҙауын ишетмәҫкә тырышып, урамдың уртаһынан үрге осҡа китте. Унда уны апаһы менән бәхетле осрашыу көтә ине.

## IX

Икенсе көндө Иштуған менән бергә Айһылыу ырҙынға ашлыҡ һуғырға китте. Емеш тә бармаҡсы ине лә, ағаһы ла, еңгәһе лә ҡаршы килде.

— Һин ял ит, — тине Айһылыу. — Әхирәттәреңде күр.

— Эсең бошһа, мунса яҡ, — тине Иштуган. — Мунса инге килгән, күптән йыуынған юҡ. Тимәк, Емеш, һиңә өйҙә лә эш етерлек.

— Йыуынмаҫһың шул. Үҙең мине артель эшенә лә өгөн йонсотҡас, — тигән булып, шаярып ҡына үпкәләп алды Айһылыу. — Юҡһа бит минһеҙ баҫыуҙа иген һәләк була!

— Уныһы ла дөрөҫ. Хәҙер, яңы тыуған артель яҙмышы баҫыуҙа хәл ителгән мәлдә, бар кеше лә һалдат. Э һин бит, һылыуым, ысын һалдат та, — тип һаман шаяртты Иштуған. Унан тағы ла күңеллерәк итеп: — Ә кисә һуң кем өйҙә ултырҙы? — тип көлдө. — Мең төрлө сәбәп табып тороп ҡалдың бит!..

— Көсләшеп тигәндәй тороп ҡалғайным шул, — тип тын ғына йылмайып ҡарыулашты Айһылыу. — Һиңә әйтмәҫ эшем, сырхауым бар ине. Әгәр шулай ҡалмаһам, Емеште кем ҡаршылар ине.

— Йә, ярар, — тип, уларҙың уйнап булһа ла игәләшеүен бүлде Емеш. — Өйҙө лә йыйыштырырмын, мунса ла ягырмын. Тик һеҙ көтөү ҡайтыуға өйҙә булығыҙ. Төнгә ҡалмағыҙ. Төндә мин бер үҙем өйҙә ҡурҡам.

— Бына һиңә үҫкән ҡыҙ! — тип көлдө Иштуған, — һаман ендән ҡурҡаһыңмы ни?

— Эйе, — тигәнде аңлатып, Емеш баш ҡаҡты.

— Емеш, мунса яғып ыҙаланма. Ағайың барыбер таң етмәй баҫыуҙан ҡайтмай ул. Йыуынмай ул. Туҙанға батып йөрөүҙе ярата! — тип һаман мәрәкәләне Айһы-

лыу. — Ул баҫыу эштәре бөтмәй тороп йыуынмаҫҡа ҡәһет иткән!

— Дөрөҫ түгел!

Улар көлөшә-югерә өйҙән сыҡтылар. Емеш күҙ ҡарашы менән уларҙы ҡапҡаға хәтле оҙатып ҡалды. Унан ең һыҙғанып өй йыйыштырырға кереште.

Башта өйҙәге бөтә кейем-һалым, урын-ерҙе ҡояшҡа сығарып элде. Унан тәҙрә таҙартты, туҙан һөрттө, иҙәндә туҡмас таҡтаһы кеүек һап-һары итеп ҡырып йыуҙы. Унан аласыҡҡа сығып сынаяҡ, тәрилкә, һауыт-һабаны тоҙ менән ышҡып йылтыратып ултыртты. Ҡатыҡ менән ҡыҙыл кирбес онтағын ҡушып бутап, еҙ самауырҙы алтын кеүек итеп ышҡып йыуҙы. Аҙаҡ кипкән урын-ерҙе ҡағып-һуғып индереп, урын-ерҙе йыйып матурлап эште бөтөргәс, үҙе йыуынып-кейенеп дәфтәр бите ҙурлыҡ ултырма көҙгө ҡаршыһына килеп баҫты.

«Ағайым мине танырлыҡ түгелһең тигән буласы. Улай түгелмен дәбаһа! Һаман шул бер ҡараҡай Емешмен бит инде», — тигән булып, көҙгөнән үҙенең ебәк кеүек йылҡылдап, тулҡынып торған ҡара сәстәрен, бөгөлөп киткән оҙон керпектәрен, үҙһүҙлеләнеп, аҙ ғына бүртәйеп торған ҡарағусҡыл ҡыҙыл ирендәрен, бешеп еткән әнис алмаһы шикелле алһыуланып торған нәфис биттәрен ҡат-ҡат ҡараны. Моңһоу ғына йылмайып торған ҙур ҡара күҙҙәренә текләп үҙенең хәҙерге хәленә төшөнөргә, үҙендәге үҙгәреште Иштуған ағаһы аңлағанса итеп аңларға тырышты. Ахыр, бер ниндәй ҙә күҙгә күренерҙәй үҙгәреш тапмағас, күңелле шаярып:

— Ҡитсе, ағайым бушты һөйләгән буласы, — тип, көҙгөнө арты менән әйләндереп ҡуйҙы. Үҙе шунда уҡ йәнә көҙгөнөң ал яғына югереп сыҡты. Тағы үҙенең ҡарҙай аҡ ҡыҫҡа еңле кофтаһын, тубыҡтан бик ныҡ үрҙә итеп тегелгән ҡара юбкаһын, сағыу ҡыҙыл галстугын ентекләп ҡарарға кереште:

«Ҡейемдә тиһәң... дөрөҫ бит, үҙгәреш бик ҙур, — тип килеште был юлы. Бәлки, былай кейенеү уңайһыҙҙыр ҙа... Уңайһыҙ?! Бәлки, миңә хәҙер элекке күлдәгемде, камзулымды кейеп, сәс тәңкәләремде, сулпыларымды тағып йөрөргә кәрәктер?!»

Емеш, шулай уйланып, аҙ ғына икеләнеп торҙо. Унан ихлас көлөп ебәрҙе.

— Эй, иҫәүән! Элекке кейемдәрем ярайҙыр шул миңә? Ағайым дөрөҫ әйтә, бик ҙур үҫкәнмен дәһә мин! Эйе

шул. Бөтөнләй, бөтөнләй еткән ҡыҙ булғанһың даһа һин, Емеш!..

Ул тағы бер аҙ көҙгө алдында әйләнеп-тулғанып торҙо. Унан моңланып, әллә ҡыуанып уйланып алды: «Хатта ҙураймаһам да, мин инде ул «боронғо» кейемдәремде кеймәҫ инем. Юҡ, кейә алмаҫ инем. Үткәнгә кире ҡайтыу юҡ!..»

Уға үҙенең хәҙерге кейемдәре менән элекке кейемдәре араһында төпһөҙ упҡын барлыҡҡа килгән һымаҡ тойолдо. Әйе, был упҡынды аша атлап кире сығырға ла, моңһоу бала саҡҡа ҡайтырға ла юл юҡ ине хәҙер.

«Әйҙә, шулай булһын, бик һәйбәт!» — тине Емеш үтә ҡәнәғәт тауыш менән. Унан әкрен генә йырлай-йырлай өйҙән сыҡты.

Бер, ике, өс!
Беҙҙә ҡыҙыл көс!
Эшсе дошманы буржуйҙан
Беҙ алырбыҙ үс!

Күптән түгел вожатый ағай өйрәткән йыр ине был. Был йыр ҙа, ҡыҙыл галстук та әле Емеш өсөн өр-яңы, ят әйберҙәр һымаҡ, сөнки үткән яҙ ғына килде бит ул вожатый ағай. Килде, балаларҙы йыйҙы, Емешкә ауыр ишлашылған телдә нимәләрҙер һөйләне. Унан, теләүтеләмәүен һорап та тормай, уларҙы исемлеккә яҙҙы. Сафҡа теҙҙе. Шунан бөтәһенең дә муйындарына ҡыҙыл галстуктар таҡты ла сыҡты.

Аҙаҡ бик ғорур ғына итеп:

— Һеҙ хәҙер пионер булдығыҙ! — тип белдерҙе. — Пионер, эшсе, крәҫтиән эше өсөн әҙер бул! — тигән саҡта, салют биреп: — Һәр ваҡыт әҙер! — тип әйтергә өйрәтте:

Бынан аҙаҡ һәр көн тип әйтерлек уларҙы, сафҡа теҙеп, «Бер, ике, өс»тө йырлатып, урамда алып йөрөнө.

«Эшсе, крәҫтиән эше өсөн әҙер бул!» тигән һүҙҙең мәғәнәһе хаҡында Емеш йыш ҡына уйлап ҡараһа ла, ныҡлап төшөнә алманы, әлбиттә. «Ниндәй эш өсөн? Ҡалай әҙер булырға?» Ләкин был төшөнмәү уға сафҡа теҙелеп, бер-икегә баҫып, йырлап йөрөүҙе, ҡыҙыл галстук тағыуҙы, бөтә бала менән бер юлы: «Һәр ваҡыт әҙер!» — тип салют биреүҙе яратырға һис тә ҡамасауламаны. Киреһенсә, пионер һүҙе лә, пионер эше лә үҙенең яңылығы, ҡайҙалыр билдәһеҙ алыҫлыҡҡа, юғарыға саҡырып тор-

бит хәҙер. Беҙ хәҙер яңғыҙ түгел. Артир беҙ хәҙер, ҡыҙым.

— Артель, — тип әйтәләр уны, инәй, — тип төҙәтте Емеш һаҡ ҡына. — Артель.

— Эйе шул, артир, — тип ҡабатланы әбей. Унан бик ҙур ҡыуаныс менән үҙҙәренең хәҙерге тормоштары хаҡында һөйләп алып китте. — Бына шулай итеп минең Хәсбиямалым шул артиргә яҙылды. Һинең ағайың, Иштуған, хатта үҙе беҙгә, өйөбөҙгә килеп өгөтләп яҙылдырҙы. — Һин, Хәсбиямал ҡарындаш, артиргә самай кәрәкле кеше, ти. Эйе, төптө шулай тине. — Иң кәрәкле кеше, ти, быға маҡтап, өгөтләп яҙҙырҙы. Хәҙер бына, ҡыҙым, беҙ икмәкте ауыҙ тултырып ашайбыҙ. Икмәге лә ниндәй бит әле, бойҙай икмәге! Хуш еҫле аҡ күмәс! Аллаға шөкөр, ҡартайған көндө булһа ла туя икмәк ашарға насип булды.

Утынды ла шул артир алып килеп бирә ул. Тик әйт кенә. Әммә ошондай ҡыҙыу эш мәлендә минең һораным уларҙың маҙаһына тейгем генә килмәй. Унан һуң беҙгә йәй көнө күпме утын кәрәк. Бер ҡосаҡ алып ҡайтһам, көнө буйына етә!

Бибекәй әбей ҡәнәғәт йылмайып әҙ генә тынып торҙо ла тағы һөйләп китте:

— Бына шулай, ҡыҙым, беҙ хәҙер элекке ярлы-етемдәр түгел. Минең хәҙер хәстәрле уландарым да, кәрәк икән атым да, санам да бар. Хоҙай тәғәлә был артир тигәненә оҙон ғүмер генә бирһен инде. Мең рәхмәт яуһын ул артиргә.

Емеш әбейгә ғәжәпләнеп ҡарап торҙо. Ул бер ҡасан да уның бындай һөйләнсәк, алсаҡ сағын күргәне юҡ ине. Бибекәй әбей, ҡыҙҙы тағы ла аптыратырға теләгәндәй, һаман теремекләнә, йәнләнә барҙы. Быйылғы һәйбәт йылды тағы бер ҡат маҡтап алғас, һәр йылдың үҙ атамаһы булыуы, ниндәй йылда ниндәй уңыш алыныу хаҡында һөйләп алып китте.

— Быйыл ҡуй йылы, ҡыҙым. Туҡлыҡ йылы! — тип, мут ҡына йылмайып алды. — Йылдар ҙа бит, ҡыҙым, байға, ярлыға бүленә. Бына шул иң бай, һимеҙ ҡуй йылы!..

— Ни өсөн ҡуй йылы була? — тип көлдө Емеш. — Кем биргән уға, инәй, бындай йылды?

— Кем биргән тип ни, боронғоларҙан ҡалған шундай

хикәйәт бар бит: имештер, һәр йылды, алтынсы март көндө ер өҫтөнә яңы йыл килә, ти.

— Беренсе ғинуарҙа яңы йыл башлана бит, инәй!

— Юҡ. Борон яңы йыл беҙҙә ғинуарҙан түгел, ә марттан башланған.

— Ә-ә...

— Имештер, бер саҡ дөйә, сыҫкан, юлбарыҫ, һыйыр, куян, ылыу, йылан, йылҡы, ҡуй, мышы, тауыҡ, эт, сусҡа кеүек бер килке януарҙар ошо алтынсы март көндө урманда бергә йыйылғандар ҙа бәхәсләшә башлағандар, ти. Йәнәһе, һәр ҡайһыһы килеп ятҡан йылды иң алдан мин күрәсәкмен тип әйтә икән, ти. Арала иң маҡтансығы дөйә булып сыҡҡан, ти. «Минең буйым бөтөнөгөҙҙән дә бейек, муйыным оҙон, яңы йылды минән дә алда күреүсе булмаясаҡ тигән, ти. — Бахыр, һин шул төймәләй генә көйөңә нәмә күрермен тип бәхәсләшәһең икән?» — тип сыҫкандан айырата мыҫкыллап көлгән, ти.

— Өлөшөмә тейгәнде күрермен әле, дөйә ағаǃ Минең өсөн эсең бошмаһын, — тип әйткән ти сыҫкан. Үҙе мыйыҡ аҫтынан ғына йылмайып ҡуйған, ти. Йәнәһе — ҡарарбыҙ әле!.. — тимәксе, ти. Үәт, шунан береһе артынан береһе теҙелеп, яңы йылдар килә башлаған, ти. Ә теге сыҫкан һиҙҙермәй генә дөйәнең аяғы буйлап ҡолағына менгән дә ултырған, ти. Шулай итеп, етеп килгән яңы йылдың иң тәүгеһен сыҫкан күргән, ти. Ә дөйә, ҡолағы кымырйығанға түҙмәй башын болғап, бер ни ҙә күрмәй ҡалған, ти. Шул саҡтан алып иң тәүгә йыл сыҫкан йылы булып килә, ти. Тик шуныһы, сыҫкан йылында, йотлоҡ уҡ булмаһа ла, уңыш шәп булмай. Шуға халыҡ был йылды яратмай.

— Шунан, инәй? — тип Емеш ҡыҙыҡһынып китә. — Тағы ниндәй йыл була? Икенсе йылды кем күргән?

— Икенсе яңы йылды, — тип һалмаҡ ҡына дауам итә Бибекәй әбей, — ни хәтле генә һәлкәү булмаһын, иң элек һыйыр күреп ҡалған, ти. Ана теге аслыҡ йыл, егерме беренсе йыл, һыйыр йылы ине бит ул, ҡыҙым. Һыйыр йылында ҡаты йотлоҡ була... Һыйырҙан һуң яңы йылды юлбарыҫ күргән, ти. Юлбарыҫ йылында иген шәп үҫә. Шуға күрә боронғолар: «Юлбарыҫ йылында барын сәс, һис юғында тары сәс», — тип әйтеп ҡалдырғандар, балаҡай... Бына шулай, ҡыҙым, беҙҙең ата-бабалар бик борондан уҡ ҡайһы йылда нимә сәсергә икәнен белгәнләр. Улар беҙҙең кеүек аңһыҙ булмағандар шул. Беҙ бит

ошо сәүит килеп күҙҙе әҙерәк асмаһа, төптө тома һуҡыр булып бөткәйнек таһа!

Емеш тағы ла ғәжәпһенеп, хатта һоҡланып ҡараны әбейгә. Ул бит Бибекәй әбейҙе ҡайғынан өнһөҙ-һүҙһеҙ ҡалған бахыр итеп кенә хәтерләй. Шәмсиә еңгә үлгәс, мәрттән «ҡайтҡас» ул хатта алйыған һымаҡ та булғайны бит. Унан һуң Емеш Ҡарасәс әбейҙән башҡа ауылда сәсән ҡарсыҡ булманы, юҡ та, тип ышана. Әкиәттәр, легендалар, халыҡ тормошонан төрлө тарихтәр һөйләй белеүсе, моңло, оҙон көйҙәр йырлаусы уның менән бергә бөттө, тип ҡайғыра ине. Бактиһәң, шишмә ҡоромаған икән дәһә!.. Зәңгәр күк аҫтында, күләгәлә, тыныс, имен генә йәшәп ята икән дәһә! Бибекәй әбей ҙә, бәлки, тәүтапҡыр үҙен ихлас тыңлаусыны осратҡанға рухланыптыр, һөйләүен дауам итте.

— Шулай итеп, юлбарыҫтан һуң килгән яңы йылды, теге ҡылый күҙ ҡуян күреп ҡалған, ти, суҡынған. Ҡуян йылы ла һәйбәт түгел. Уңыш насар була. Ҡуяндан һуң яңы йылды югерек ылыу күргән.

— Ылыу нимә һуң ул, инәй? — тип аптырай Емеш, сөнки был һүҙҙе лә тәүләп ишетә.

Бибекәй әбей түп-түңәрәк күҙҙәрен ғәжәпһенеп Емешкә төбәй.

— Ылыуҙы ла белмәйһеңме?! Эй бахыр.

— Белмәйем шул. Ишеткәнем дә юҡ, инәй.

— Һыу өҫтөндә батмай югереп йөрөй торған оҙон ботло, себен һымаҡ бөжәкте күргәнең бармы?

— Эйе, күл өҫтөндә. Ҙур серәкәйгә оҡшаңҡыраған,— тип уйланып торҙо Емеш. — Күргәнем бар. Бәлки, шулдыр. Тик уны атайым лыу ти ине шикелле.

— Лыумы, ылыумы, барыбер түгелме? Һүҙҙең йәбешкәһе унда түгел, ә бына шул энә осондай ғына себенден дә йылға хужа була белеүендә...

Бибекәй әбей, ҡапыл һағайып, яр аҫтына табан эйәге менән ымлап күрһәтте:

— Анауында, ҡыуаҡ араһында, кемдер әрбән-һәрбән итеп ҡалды түгелме? Ҡайһы имгәге йөрөй икән унда?

— Ҡайҙа? — тип Емеш тә шикләнеп ҡуйҙы.— Ҡемде күрҙең, инәй?

— Анауы осҡат, муйыл шырлыҡтары башланып киткән ерҙә генә. Әллә кем боҫоп торған һымаҡ күҙемә сағылып ҡалдысы. Уға бында ни кәрәк икән?!

Емеш алыҫтан насар күргән күҙҙәре талғансы ҡарап торҙо. Әммә бер ни ҙә күрмәне. Хикәйәтте иң ҡыҙыҡ урында өҙөп, өбейҙең иғтибарын алған ниндәйҙер ҡарасҡыға асыу итеп, ул яҡҡа арты менән боролоп уҡ ултырҙы.

— Шунан, инәй, ылыуҙан һуң кем күрә яңы йылды?

— Ысынмы, бер ни ҙә күренмәйме ни, ҡыҙым? — һаман шөбһәләнде өбей.— Күҙҙәрем насар күрә башлаған икән ни?! Яҡшы күрә инем. Ошоғаса иң нәҙек ... лә епте үҙем үткәрә инемсе.

— Моғаҙ... Емеш. Өбейҙе ... ҡыуаҡтарҙы ел ҡаҡҡандыр, — тине артабан һөйләткеһә... терәк тынысландырғыһы, хикәйәтте ... килә ине уның.

— Бәлки, шулайҙыр ... Әммә ел дә юҡ бит әле,— тип һаман икеләнде өбей. Шулай ... хикәйәтенә боролоп ҡайтты. — Шунан ни бына ылыу йылынан һуң йылан йылы килә. Йылан йылы ла бик ауыр, һалҡын килә. Айырата мал-тыуарға ауырлыҡ төшә. Ә бына йылҡы йылы ... мала ла, кешегә лә бик ауыр була. Йылҡы йылынан һуң, ҡуй йылы килә. Әйттем бит, быйыл ана шул ҡуй йылы тип. Ҡуйҙың үҙе кеүек, йылы ла һимеҙ була, ҡыҙым, — тип оло ҡәнәғәтләнеү менән тағы бер ҡабатлап ҡуйҙы өбей. — Киләһе йыл — мышы йылы буласаҡ. Ул да һәйбәт йыл. Унан аҙаҡ килгән тауыҡ йылы менән эт йылы ла яман булмай...— Бына шулай итеп теге януарҙар һәр яңы йылды һәр береһе күреп, бүлешеп алып бөткәндәр, ти, ҡыҙым. Ҡайһы йылды кем кем артынан күргән, шул рәүешсә гел ҡабатланып торһон тип һүҙ ҡуйышҡандар, ти. Бына шунан бирле һәр ун ике йылға бер уларҙың йылы ҡабатланып килеп тора, ти.

— Ни өсөн ун ике генә йыл булһын? — тип ғәжәпләнә Емеш. — Йылдарҙың иҫәбе-һаны юҡтаһа!

— Дөрөҫ түгел, — тип ҡырт киҫә Бибекәй өбей. — Йылдар барыһы ун ике генә, уларҙың һәр ҡайһыһы ун ике йылға бер әйләнеп килеп кенә тора. Бөтә быуат буйы шулай булыр. Беҙҙең ата-бабалар шулай тигән. Әйе, ҡабатланып торасаҡ. Эй-й, бер минең ғүмеремдә генә лә улар нисәмә тапҡыр әйләнеп ҡайттылар. Һинең ғүмерең эсендә лә, ҡыҙым, был йот йылдар, туҡ йылдар, йыны һыуыҡ йылдар, ауырлыҡтар, еңеллектәр, һөйөнөстәр, көйөнөстәр әйләнеп килеп кенә торорҙар. Быны алдан

белеп, һәр береһенә әҙер булырға кәрәк, ҡыҙым. Ул саҡта улар һине аңғармаҫтан килеп баҫмаҫтар. Аңлайһыңмы, ҡыҙым!

Емеш, әбейҙең әкиәтеп кире ҡағырға ла, тулыһынса төшөнөп етергә лә хәле етмәй, оҙаҡ тынып торҙо. Ахыр әкиәттәге бер етешһеҙлекте хәтерләп, ҡыуаныстан ҡысҡырып уҡ ебәрҙе.

— Инәй, һин йылдар ун ике тинең. Ә урманда йыйылған хайуандар ун өс ине ләбаһа!

— Хайуандар, йәнлектәр ун өс кенә лә түгел, иҫәпһеҙ-һанһыҙ ине улар, — тип тыныс ҡына аңлатырға кереште Бибекәй әбей. — Тик йылдар ун ике генә ине шул. Ниндәй хайуан бөтәһенән алда яңы йылды күрергә өлгөргән — шул бүләк итеп яңы йыл алған, — тип, әкрен генә йылмайып дауам итте. — Һин, ҡыҙым, бына ни өсөн дөйәгә йыл теймәгән, тип һора!

— Эйе шул! Ни өсөн, ә, инәй? — тип, тағы ғәжәпләнә Емеш, дөйәнең йылһыҙ ҡалыуын әле генә хәтерләп.— Һөйлә әле, инәй!

— Нимәһен һөйләп тораһың инде уның, — ти әбей, кинәйәле генә йылмайып. — Маҡтаныуын маҡтанған да бит, һорнайған оҙон муйынын һуҙып, аңшайып торған да ҡалған, ти. Бер йылды ла алдан күрә алмаған, ти. Алдан күрмәгәс, уға йыл тәтемәгән ти шул.

— Бахырҙар.... — тип ҡуйҙы Емеш тә.

Бибекәй әбей тағы уйсан ғына йылмайып дауам итте:

— Үәй-й... Дөйә ни шул, бахыр, минең кеүек асыҡ ауыҙ бер нәмә бит инде ул. Минең дә үҙ тиңдәремә ҡарағанда муйыным да оҙонораҡ, күҙем дә үткерерәк булғандыр ҙа, бәлки, әммә хоҙай тәғәлә таң алдында бәхет өләшкәндә, гел өлөшһөҙ тороп ҡалдым. Башҡалар бәхет ҡошон тотоп алып ҡына торҙолар, ә миңә уның, исмаһам, ҡауырһыны ла эләкмәне.

Ул, яҡты түңәрәк күҙҙәрен аҡыллы мөлдөрәтеп, Емешкә йылмайып ҡараны:

— Ҡыҙым, һинең муйының да бик үк ҡыҫҡанан булмаҫ төҫлө. Бәлки, теге осҡалаҡ бәхет ҡошон һин тотоп ала алырһың. Тик ҡара, алдан-ала маҡтанма! Юҡһа, дөйә шикелле буш боғаҙ булып тороп ҡалыуың бар.

Емеш, бер ни ҙә өндәшмәй, әбейгә иғтибар менән текләп торҙо. Ә тегеһе көтмәгәндә һүҙҙе тағы уның өҫ-башына күсерҙе.

— Ындай мәрйә кейемен, ҡыҙым, һиңә кем теген кейҙерҙе?

— Тегендә, балалар йортонда, бирҙеләр,— тип күңелһеҙ генә яуапланы Емеш. Күрәһең, уға үҙенең кейемһалымы хаҡында һөйләшеү һис тә оҡшамай ине. Ә Бибекәй әбейҙең башында был уңай менән мең һорауға әйләнде:

— Бирҙеләр тиген, ә! Буш бирҙеләрме ни?

— Буш булмайса.

— Ҡара һин уны, сәпсим буш бирҙеләр ҙә ҡуйҙылар тигенсе, ә?

— Унда бөтә баланы ла буш ашаталар, буш кейендерәләр.

— Ҡарасы инде, күрәһең, унда берәй мәрхәмәтле бай барҙыр шул, ҡыҙым. Һай, алланың рәхмәте яуғыры.

Бошоноп торған Емеш хатта пырхылдап көлөп ебәрҙе.

— Ниндәй бай булһын, инәй! Совет хөкүмәте үҙе ҡарай бит хәҙер етемдәрҙе.

— Ҡарасы инде! — тип тағы ла нығыраҡ аптыраны Бибекәй әбей. — Ҡалай һәйбәт. Ҡалай изге эш!.. Етемде, ярлыны буш ашатып, буш кейендереүҙән дә изге эш булырмы? Мең рәхмәт яуһын, урыны ожмахтың түрендә булһын инде был Сәүиттең! — тип, хөкүмәтте лә үҙенсә изгелекле бай итеп күҙ алдына килтереп, теләк теләргә кереште, унан тағы Емештең өҫ-башына тотонд. — Һүҙ юҡ. Ҡейендергән, ҡараған, үҫтергән — бик тә һәйбәт. Шулай ҙа бына нисек әйтһәң дә мәрйә кулдәге кейҙереүҙәре генә хилафыраҡ. Ниңә улай итте икән? Эй-й, һиңә үҙебеҙҙең еткән ҡыҙҙар кейеме нисек килешер ине бит! Елән, ҡашмау, селтәр, тим, ә?! Эй-й, беҙгә, ярлы-етемгә, ҡайҙан алырға һуң уларҙы?! Унан һуң, ҡыҙым, бынауы ҡыҙыл сепрәге нимәкәй икән һуң ул? Ни өсөн тим дә...

Бибекәй әбей Емештең галстугын тегеләй ҙә былай ҙа әйләндереп, һыйпап-һыйпап ҡараны. Тешһеҙ ирендәрен нығ ҡымтып, оҙаҡ-оҙаҡ уйлап, төшөнөргә тырышып торҙо:

— Күкрәксәләре шул төҫләмө икән ни хәҙер, ҡыҙым?

Емеш күңелле көлөп:

— Эйе шул, инәй, күкрәксә был! — тине.

— Күкрәксәне түште ҡаплар өсөн, күлдәк эсенән

кейәләр уны, ҡыҙым. Һин яңылыш кейгәнһең улай булғас!

— Был, инәй, тыш яҡтан кейә торған күкрәксә!

— Ә-ә, улай икән. Ярай, ҡыҙым, заманыңа килгән икән, әйҙә, юпке-күптеһен дә кей, күкрәксәһен дә тыштан таҡ, һиңә хәҙер ни ҡыланһаң да килешер саҡ! Бер уйлаһаң, эш кейемдәме ни? Ә шул кейем аҫтында ниндәй йөрәк тибә? Шуныһы мөһим. Иң изге кейем аҫтында ла иң мәкерле, яуыз, ҡара йөрәктәр йөрөгән хәлдәр булыуын белмәйбеҙме ни беҙ?! Шулай булғас, ҡыҙым, һин минең, алйыған ҡарт кешенең, һүҙенә ҡолаҡ һалма. Ғәйеп итмәйем, йәшлекте ғәйеп итеп буламы ни?! Унын, йәшлектең тим, унһыҙ ҙа`бик ҡыҫҡа бит ғүмеркәйе! Һай-й, ҡыҫҡа шул...

Бибекәй әбей асыҡ йөҙ, яҡшы күңел менән шундай һығымта яһап ҡуйҙы ла ашығып тороп баҫты.

— Эй-й, оҙаҡлап киттем дәһә! Хәсбиямалым эштән ҡайтыуға күмәс бешереп ҡуйырмын тигәйнем дәһә. Ҡамырым артып бөткәндер әле, — тип йәһәтләп утынын күтәреп алды. Емештең утынды өйҙәренә хәтле алып барып бирергә теләүен ҡырҡа кире ҡаҡты.

— Ярай, ҡыҙым, һин бит әле генә ҡайтҡанһың — ҡунаҡһың. Ҡунаҡты, беләһең, беҙҙә эшкә ҡушмайҙар,— тине. — Һин бына кискә, Хәсбиямал ҡайтыуға, беҙгә кил. Яңы бешкән күмәс менән һыйлармын үҙеңде!

— Бәлки, барырмын да әле, — тип ҡалды Емеш. — Тик һин, инәй, бөгөнгө кеүек ҡыҙыҡлы әкиәттәр һөйләрһеңме икән?

— Һөйләрмен, ҡыҙым, һөйләрмен, — тине Бибекәй әбей, ихлас итеп.— Тыңлай белгән кешегә һөйләй белеп була.

Емеш уны ауылға инеп киткәнсе күҙе менән оҙатып ҡалды.

«Ҡара һин уны, балыҡ күҙ Бибекәй инәйҙең дә теле асылған! Ҡалай ҡыҙыҡ һөйләшә белә икән дәбаһа!» — тип һоҡланып уйлап алды Емеш. Уның күңеле асылып, күҙ алды тағы ла яҡтырып киткән һымаҡ булды. Әйтерһең, ул ошо минутта Баймаҡ шахтерҙары шикелле, ер ҡуйынынан ат башындай алтын тапҡайны. Тик уларҙың алтынын элек бай шунда уҡ тартып алған... ҡурҡытып, алдап. Буш хаҡҡа. Ә Емеш тапҡан ат башындай хазинаны бер кем дә, бер ҡасан да тартып ала алмаясаҡ. Ул Емештең күкрәгендә мәңге һаҡланасаҡ.

Был уйҙан күңеле тағы ла күтәрелгән ҡыҙ югерә-һикерә текә Ҡыҙылъярҙан түбәнгә, үрге туғайға төшөп китте. Ул бит бөгөн үҙе яратҡан бөтә ерҙәрҙә булырға, ялан аяҡлы бала саҡтың моңһоу эҙҙәренән тағы бер ҡат үтергә теләй ине. Унда яр ситенән, ҡуйы ҡыуаҡтар араһынан тар һуҡмаҡ үтә. Емеш белә — был юл уны һөйгән төбәктәренә алып барып еткерәсәк. Ул, бала сағындағы шикелле, күңелендә тыуған үҙ йырҙарын әкрен генә мөңрәй-көйләй, ошо һуҡмаҡ буйлап китте. Ниндәйҙер билдәһеҙ татлы ҡыуаныс, наҙлы моң менән земләгән йөрәге уны алға саҡырҙы, шым, тын ғына һаман алға әйҙәне: әйләнә-тирәлә ул өҙөлөп һағынып ҡайтҡан, төштәрендә күреп зарыҡҡан йәндәй яҡын ерҙәр ята. Һәр бер ҡыуаҡ, һәр бер тирәк әсә кеүек һөйкөмлө, яғымлы, нурлы. Эй-й, Емештең өлөшөнә лә ҡандай оло бәхет төштө бөгөн! Бына бит, ул тағы үҙен үҫтергән тәбиғәт ҡуйынына килеп һыйынды!

Шулай ҙа, ниңәлер, уның күңеле бик үк тыныс түгел ине. Нимәлер уға ғәҙәттәгесә иркенләп моңһоу уйҙарға бирелергә, әйләнә-тирәнең матурлығына ихласлап һоҡланырға, тәбиғәттең тылсымлы ҡосағында онотолорға ҡамасаулай һымаҡ. «Был нилектән икән?» — тип, туҡтала биреп, үҙ-үҙенә һорау биреп ала ул. Тирә-юнгә күҙ ташлап, нимәгәлер ҡолаҡ һалып туҡтап тора. Тора-бара уға үҙ артынан кемдер йәшенеп, эҙәрләп килгән һымаҡ була башланы. Бына ҡайҙалыр ҡоро сыбыҡ шартлап һынды, тал сыбыҡ һелкенде, тоноҡ, мыжыҡ тауыш ишетелгәндәй булды. Ә ҡасан ул бөтөнләй ҡаушап, туҡтап ҡалһа, тирә-яҡ тып-тын була. Хатта ел дә иҫмәй, ҡош та осмай һымаҡ. Бөтә ерҙә тынлыҡ, именлек хөкөм һөрә. Емешкә уңайһыҙ булып китә:

— Эй ҡурҡаҡ, бәпес! — тип көлөп ҡуя Емеш үҙ-үҙенән. — Бибекәй инәй күңелгә бер хәүеф һалғас, миңә етә ҡалды инде!

Унан, тынысланып, юлын дауам итте. Тик атлап, яйлап түгел, ә шәп итеп югереп китте. Күҙ асып йомғансы Оло Эйектең матур бер бөгөлөнә барып сыҡты. Бында береһенән-береһе бейек, төҙ, һылыу булып үҫкән уҫаҡлыҡ ине. Емештең иң яратҡан урыны. Бигерәк тә көҙ көнө, әбей сыуағы ваҡытында, бөтә ерҙе алтын япраҡтар ҡаплап алған саҡта ярата ине Емеш был ерҙе. Әле булһа хәтерендә, атаһы бар саҡта, улар ошонда түгелгән япраҡтарҙы йыйып йөрөгәйнеләр. Ул йылда Сәрбиямал

теге элекке иҫке өйөн ҡайтанан яптырғайны. Шунда, түбә тупрағын яңыртҡанда, тупраҡ аҫтына япраҡ түшәтте. Эйе, Йәнеш менән Емеш уҫаҡ япраҡтарын йыйып тоҡтарға тултыралар, шунан Иштуған уларҙы, ҡул арбаһына тейәп, өйгә алып ҡайтып китә. Ул әйләнеп килгәнсе, Йәнеш менән Емеш, терпе кеүек ҡыштырҙап, япраҡтарҙан күбә өйәләр, унан шул япраҡтар өҫтөндә аунап-һикереп уйнайҙар. Емешкә ул япраҡтар ҡояштың ергә төшөп ял итергә ятҡан нур саҡкылары һымаҡ тойола. Улар шундай йылыҡайҙар, ялан аяҡтарҙы уға төрһәң, бөтә тәнгә иҫ киткес рәхәтлек, йылылыҡ тарала.

— Йәнеш, былар уҫаҡ япраҡтары түгел, ә ен ҡыҙының сигелгән алтын юрғаны! — тип ҡыуана Емеш.— Алтын ептәрҙән туҡып эшләнгән юрған!

— Һиңә рәхәт. Һин бөтә нәмәне әкиәткә әйләндерәһең. Шуның менән мауығып йәшәйһең, — ти Йәнеш, өлкәндәрсә моңайып. Унан әҙ генә уйланып торғас: — Бәлки, шулай кәрәктер ҙә. Шулай еңелерәк булалыр...— тип өҫтәй.

«Ысынлап та, шулай еңелерәктер, бәлки? Үҙеңде әкиәт менән тынысландыраһың, өмөтләндерәһең дә, йәшәй бирәһең...» — тип уйлап алды хәҙер Емеш. Һәм үҙенең был һорауына яуап эҙләгәндәй, тағы тирә-яҡҡа күҙ ташлап торҙо.

Бөгөн япраҡтар ергә ҡойолмаған әле. Һәр ҡайһыһы үҙенсә ҡояш булып, һуңғы осошҡа әҙерләнгәндәр генә. Матур ҙа, моңһоу ҙа көҙгө уҫаҡлыҡта. Туҡта, ҡайҙалыр тағы нимәлер ҡыштырҙап китте түгелме? Һай, ҡурҡаҡ! Бынау хәтле иркендә, әллә ҡайҙан, алыҫтан уҡ бөтә нәмә күренеп торған һирәк уҫаҡлыҡта кем, нимә йәшенеп йөрөһөн?!

Ҡыҙ көлә-көлә ары йүгерҙе, киң, матур аҡлан барып тоташҡан текә яр ситенә барып баҫты.

— Эй-й! — Йәйен ятҡылығына килеп сыҡтым! — тип ярһып ҡысҡырып ебәрҙе. — Төпһөҙ, сөмөкәй урындар бит бында!

Оло Эйектең шаршы тулҡындары был урында, әйтерһең, арып туҡтап ҡала. Уның ағышы ғына түгел, хатта төҫө лә үҙгәреп китә бында. Ҡараһыу йәшкелт булып, хатта ҡайһы саҡта күңелгә хәүеф һалырлыҡ күм-күк булып өйөрөлөп ята. Йылға был урында төптө үҙенә башҡа, ниндәйҙер серле, мөһабәт тормош менән йәшәй башлай, хатта унда йәшәүсе балыҡтар ҙа, ҡоштар ҙа

үҙенә башҡа, үҙенә генә хас һымаҡ. Мыйыҡлы йылға үгеҙҙәре — йәйендәр, йәй йөрөгән тай кеүек йылғыр, зифа суртандар, шамбылар, ҡыйғас ҡанат, һылыу аҡсарлаҡтар...

Бына ҡыҙылғанаттар, күкйөндәр, алабуғалар көтөү-көтөү булып талғын ғына йөҙөп йөрөй, сабаҡтар ҡайнаша, мөһабәт тынып ҡалған йылға өҫтөнә көмөш саҡтылар сәсрәтеп, бер өҙлөкһөҙ балыҡ ҡарпый. Арғы яҡ ҡырсында өйрәктәр баҡылдаша, ҡаҙҙар ҡаңғылдай. Эй-й, ни хәтле матурлыҡ, ниндәй иркенлек, рәхәтлек!

Әммә Емештең уларға ҡарап оҙаҡ һоҡланып торорға ваҡыты юҡ. Уның әле йөрөп-күреп сығаһы ерҙәре күп. Етмәһә, бынауы күңелендәге шик, һәр аҙымда ҡыштырҙау булып ишетелеп, кинәнеп йөрөргә ирек бирмәй ыҙалата. Йә был Бибекәй инәй, юҡты, булмағанды күреп, ниңә Емештең күңеленә шөбһә һалды инде? Уның былай ҙа ҡурҡаҡ икәнен белмәнеме икән ни? Бына тағы ҡайҙалыр ҡоро ағас һынды һымаҡ! Әйтерһең, кемдер ысынлап та күҙәтеп, ҡыуып йөрөй ҙә башланы кеүек... Бәлки, ысынлап та, бая, Ҡыҙылъяр аҫтында, ҡыуаҡ араһында Бибекәй инәй күргән билдәһеҙ нәмә эҙәрләйҙер уны! Уй, тағы яҡында ғына ниҙер ҡыштырҙаны шикелле?!

Емеш ҡуяндай һиҫкәнеп ары югереп китте. Оҙаҡламай йылғаның алыҫ бер бөгөлөндәге иҫ киткес матур киң ҡырсынлығына барып сыҡты.

Был урынды Емеш элек-электән сикһеҙ ярата, берәй мөмкинлек табып килә алһа, аҙаҡ Сәрбиямалдан үҙенә туҡмаҡ эләгерен дә онотоп, көндәр буйы уның эҫе, йомшаҡ ҡомонда аунап уйнай ине. Әле лә ул иҫ киткес ләззәт менән уның тулҡынланып ишелеп ятҡан һары ҡомона баҫты, сағыу ҡояш аҫтында мең төрлө нур һирпеп йымылдаған ҡырсынташтарына һоҡлана-һоҡлана йылғаға табан китте. Ғәҙәттәгесә, бында уны аҡсарлаҡтар сыр сыуы ҡаршыланы. Улар тын ғына барған уйсан ҡыҙҙың баш осонда сабырһыҙ әйләнделәр, ҡайһы бер үтә ҡыйыуҙары хатта уны суҡырға-тибергә, үҙ биләмәләренән кире бороп ебәрергә самалап та ҡаранылар. Әммә ҡыҙ эҫе ҡомға кинәнеп баҫа-баҫа һаман йылғаға табан атланы. Ысынлап та, юҡҡа ғына борсола бит был һылыу аҡсарлаҡтар. Емеш хәҙер түгел, элек, бәләкәс саҡта ла, уларҙың ошонда ҡырсынташтар араһына һалын-

ған йомортҡаларын бик-бик ратһа ла, тейсү түгел, хатта тотоп та ҡарамай торғайны. Сөнки Ҡарасәс инәһе уға: «Ҡоштоң йомортҡаһын тотһаң, ҡош ояһынан биҙә. «Кеше еҫе килә» ти ҙә ояһын ташлай. Меҫкен ҡошсоҡтар, моронламаҫ элек үк, кешенең яуызлығынан һәләк була», — тип һөйләй ине. Емеш хатта шул тыумаҫ элек үк үлемгә дусар ителгән ҡошсоҡтарҙы йәлләп, кешегә күрһәтмәй генә илап та ала торғайны. Бына хәҙер ҙә ул, көҙ көнө ҡырсынташтар араһында йомортҡалар ятмаҫын белһә лә, яңылыш баҫып уларҙы һытып ҡуймайым тип, ғәҙәт буйынса һаҡ ҡына атлап бара. Ә аҡсарлаҡтар һаман сыулашып уның түбәһендә әйләнә. Уны йылға ситенә хәтле оҙатып баралар. Ә йылға өҫтөндә улар тағы ла күмәгерәк. Бында улар балыҡ аулайҙар. Һай һыуҙа балыҡ яҡшы ҡаба, күрәһең, сабаҡтарҙы әленән-әле эләктереп кенә торалар. Был ерҙә, ҡырсындың ослайып эскә инеп киткән ерендә, йылға икегә айырылып, яҡшы ат кеүек ярһып, уйнаҡлап аға башлай. Элек Емеш менән Шәүрә ошо шаршыла һыу инеүҙе ҡыҙыҡ күрә торғайнылар. Ҡырсында, ҡомда хәлең бөткәнсе ҡыҙынаһың да югереп барып һыуға һикерәһең, бәләкәс кенә аяҡ-ҡулыңды йыш-йыш сәпелдәтеп йөҙә башлайһың. Шаршы ла шаян, ҡыҙҙарҙы сатай-ботай ағыҙып алып китә, хатта аҫҡа, һыу төбөнә һөйрәп алып китмәксе лә булып ҡуя. Бындай саҡта Емештең йөрәге жыу итеп ҡала. Был шаян, әммә мәкерле тулҡындар иркенә бирелеп, һыу төбөнә сумып китә яҙған саҡтары ла була, шулай ҙа был ләззәтле ҡурҡыуҙы ни өсөндөр тағы-тағы кисерергә ярата ине.

Хәҙер бына тап улар йөҙөп үтергә яратҡан шаршының башланып киткән урынында бер ҡауҙы, һыңар аяғын күтәреп, суфыйҙарса йыуаш ҡына һөҙөп ҡарап һыуға теклэп тора. Әйтерһең, бер ни белмәй татлы серем итә. Әммә был бер ҡарауҙа ғына шулай. Алдына берәй ғәмһеҙ балыҡ ҡына килеп сыҡһын! Уның «йоҡоһо» шунда уҡ күккә оса. Оҙон муйыны уҡ булып һыуға атыла, күҙ асып йомғансы балыҡ ҡауҙының бөрләтәүендә була. Унан тағы үҙенең изге суфыйлығына ҡайта. Ни әйтәһең — шулай йәшәй.

Күрәһең, был оҙон аяҡ «балыҡсыға» ла бында балыҡ яҡшы ҡаба. Был шарлауыҡта бағыр, бәрҙе балыҡтары етерлек шул. Үҙҙәре тәмлеләр ҙә, еңел дә тотолалар.

Емеш йылға өҫтөнә оҙаҡ-оҙаҡ ҡарап торҙо. Был ерҙәрҙең сихри матурлығы уға алыҫта, күк томандар артында ҡалған зарлы-моңло бала сағын, ҡабатланмаҫ гүзәл сабый ваҡыттарын хәтерләтте. Шул уҡ ваҡытта уның күңелендә билдәһеҙ моң, бошоноу тойғолары ла уятты. Ул «уф!» тип ауыр көрһөнөп ҡуйҙы ла ҡайтыу яғына боролдо. Тағы баяғы яр буйынан уҙған һуҡмаҡ менән Хәбир батыр тирәге янына хәтле бер туҡтамай йүгереп үтте. Был тирәк яғы ла уның бала саҡтан иң яратҡан, хәҙер үтә һағынған урыны ине. Оҙонғол башынан алыҫ түгел ҙур аҡланда яңғыҙы ултырып ҡалған был алты ҡоласлы мөһабәт тирәк янына Емеш менән Шәүрә йыш килә, бигерәк тә яҙын берәр ҡосаҡ ҡаҡы, ҡуҙғалаҡ йыйып йәки берәр сеүәтә еләк тиреп арығас, уның төбөндә ултырып ял итә торғайнылар. Тирәк үҙенең бейеклеге, ботаҡтарының ҡеүәтлелеге, олононоң йыуанлығы менән дә, башынан үткән дәһшәтле, ҡанлы тарихе менән дә Емештең күңелен үҙенә тарта. Емеш, уға ҡарап торған саҡта, ҡасандыр ошо тирәккә бәйләп, тап менән бәргеләп үлтерелгән Хәбир батырҙың күҙҙәренән атылған үс оҫҡонон күргән, уның көрәшкә саҡырған ғорур тауышын, уны аҙаплаусыларҙың йылан булып ыҫылдауҙарын ишеткән һымаҡ булып тертләп китә торғайны. Һәм һәр саҡ ошо мөһабәт тирәкте халыҡ батырынан ҡалған тере ҡомартҡы итеп табынғыһы килә торғайны. Бына әле лә ул ошо тойғо менән уның янында шым туҡтап ҡалды. Өнһөҙ баш эйеп, уйланып торҙо. Уйҙары элекке шикелле моңһоу ғына түгел, ә шатлыҡлы ла ине был юлы. Күрәһең, Байрас, һаман элеккесә, яҙ һайын уның осондағы ҡыҙыл байраҡты яңыртып элә. Ана бит, өр-яңы, яңы ғына аҡҡан ҡан төҫлө. Хәбир батырҙың ҡаны төҫлө. Ул бит халыҡ өсөн, ирек өсөн һәләк булған батырҙың иҫтәлеге булып мәңге шулай елберҙәп торһон өсөн, уҙған хәтәр көндәрҙе һөйләп, килер бәхетле йылдарҙы ҡаршылап торһон өсөн элгән. Байрас үҫеп, ҡурайын китһә, бүтән малайҙар уны һәр яҙ яңыртырҙар. Ул мәңге шулай, тап бына хәҙерге кеүек, ялҡындай асыҡ ҡыҙыл булып янып торор. Батырҙың ауылдаштары шулай ҡарар иткән. Шулай булыр ҙа.

Тәрән уйға сумып торған ҡыҙ ҡапыл тертләп яҡтына ҡараны. Унда, яҡында ғына, кемдер уһылдаған кеүек тойолдо уға.

— Нишләйҙер уҫал уһылдау!.. Бәлки, мин һаман элек-

кесә, Хәбир батырҙы аҙаплаусыларҙың йылан булып ыҫылдауын ишетәмдер, ә?! Юҡ, туҡта, анауында, ҡыуаҡ араһында, кемдер, нимәләр бар һымаҡ табаһа!»

Емеш ҡото осоп ситкә һикерҙе. Йән-фарман югереп, Оҙонғолдоң текә ҡабағына менеп китте. Ул бында менергә теләмәгәйне, ҡайтыу юлына сығырға йыйынғайны. Ә хәҙер бына ул ҡайтыр һуҡмаҡта кемдер йәшенеп, көтөп тора һымаҡ, шуға ул ҡурҡып ҡабаҡ башына менеп китте. Әммә, күрәһең, тағы бушҡа. Бына бит ул хәҙер бынан, ҡабаҡ башынан әле генә үҙе йөрөгән ерҙәргә ҡарап тора. Һәр бер ҡыуаҡты, һәр бер соҡорҙо иғтибарлап ҡарап сыҡты. Шикле бер ни ҙә күренмәне. Бөтә ер тыныс ине.

«Эй тилекәй, ҡурҡаҡ ҡуян! — тип Емеш тағы үҙенән көлөп алды. — Бер ни ҙә юҡ та! Нимә булһын?! — тип, тағы үҙен-үҙе йыуатты: — Йә, уйламағанда килеп менгәс, Оҙонғол башын да күреп ҡайтайым инде»,— тип, үҙҙәре яҙ көнө ҡар һыуына сығып, уйнап-көлөп йөрөй торған урындар буйлап моңһоу ғына атлап китте. Ә түбәндә, ҡуйы ҡыуаҡ артында, Сәрбиямал асыуҙан шашып ҡоторондо: «Вәт һин уны сиған балаһын! Вәт мөртәт! Ҡыуып еттем, тотоп алдым тигәндә генә, ҡулдан шыуып сыға ла ысҡына ла ҡуя бит! Их, тотоп алһам, нимә эшләтергә белер инем аллаһыҙҙы! Алланың ҡаты ҡәһәре төшкөрө!» — тип әрләп, ҡарғап пыр туҙҙы. Унан һуңғы тапҡыр ҡыҙҙы бая тәүтапҡыр үҙен Бибекәй әбей абайлап ҡалған ҡыуаҡ аҫтында көтөргә булып ауыл яғына боролдо. Хәҙер ул тамам арыған-аһылдаған, асыуы тағы ла яманыраҡ ҡуҙғалғайны уның. Ул бит ҡыҙ артынан бик оҙаҡ ҡыуып йөрөнө. Емеш уларҙың өйө янынан Оло Эйек буйына үткәс тә, ни өсөндөр, үҙҙәренең арт ҡапҡаларынан ҡаса-боҫа сығып, ул да Оло Эйек яғына югерҙе.

Ниндәй маҡсат менән? Емештең уға ни хәжәте бар? Был һорауҙарға ул, моғайын, үҙе лә асыҡ ҡына яуап бирә алмаҫ ине, бәлки. Күрәһең, башта ябай ҡыҙыҡһыныу уны был юлға этәргәндер. Ғәжәп бит, етемлектә, юҡлыҡта интегеп, үҙ ҡулында донъяны ҡуйырға тейешле Емеш әҙәм булып йөрөп ята лабаһа! Был ниткән эш?! Улай ғынамы, шул сиған балаһын уҡыталар, ашаталар, кейендерәләр! Етмәһә, оялмай ҙа сәпсим мәрйә булып кейенеп тә ебәргән. Моғайын, теге кафыр Хәбир кеүек суҡынғандыр ҙа әле ул! Атаһы ла дин тотмай ине бит уның. Эйе шул, алланы ла, батшаны ла бар тип тә бел-

мәç ине кафырың! — тип сәпсей-ҡарғай ҡайтты Сәрбиямал. — Атаһына күрә балаһы инде, ни әйтәһең?!

Әлбиттә, башта Сәрбиямалды был тиклем үк яуыз ниәт түгел, ә ябай ҡыҙыҡһыныу өйөнән алып сығып китте. Ул әле, әйтәйек, Емеште тотоп алһа, үҙенең нимә эшләрен, уны ни эшләтерен дә уйламағайны. Әммә ул Ҡыҙылъяр аҫтына, ҡыуаҡлыҡҡа инеп боҫҡас, ҡыҙҙың, унын уйынса, бынауы алйыған, балыҡ күҙ Бибекәй менән шундай шат, яғымлы итеп һөйләшеп ултырыуын, етмәһә, үҫеп, үҙаллы кеше булып барыуын яҡындан ҡарап күргәс, уның яҡшылыҡты, ҡыуанысты белмәç туң күңелендә көнсөлөккә оҡшаш ниндәйҙер уçал асыу ҡатыш ҡыҙыҡһыныу тойғоһо тағы ла көсәйеп китте. Етмәһә, был тышҡы ҡиәфәте, кейем-һалымы менән элекке үҙенә генә түгел, ауылдағы бүтән бер ҡыҙға ла оҡшамаған өр-яңы, ят Емеш ни менәндер уны ебәрмәй үҙенә тарта ла, өркөтә лә һымаҡ ине. Бына ул Емешкә эйәреп уçаҡлыҡҡа ла етте, ҡырсынлыҡҡа ла барып төштө. Ләкин уға яҡын барып өндәшергә, һөйләшергә теләмәне. Ҡайҙалыр шунда күләгәлә, шырлыҡта йәшенеп күҙәтеүҙән уҙа алманы. Күрәһең, Емештең күңелендә үҙенә ҡарата мәңге һыуынмаç әсе нәфрәт тойғоһо йәшәүенә төшөнә, шул уҡ ваҡытта үҙ күңелендә лә был кескәй ят ҡыҙға ҡарата ҡаты асыу, яман күрә алмау тойғоһо ҡабара барғанын да тоя ине ул. Емеш хәҙер ябай етем ҡыҙ ғына түгел, ә Сәрбиямалдың үҙен дә, уның йәндән артыҡ күреп көткән донъяһын да һәләк итә торған ниндәйҙер билдәһеҙ яңы тормоштоң ҡотолғоһоҙ баçып килеүен раçлаусы йәнле шаһит булып та теңкәһенә тейә ине. Тора-бара уның Иштуғанға булған ҡаты асыуы ла Емешкә килеп өçтәлде. «Ҡомсомолдар менән баçып инеп, нисәмә һумлыҡ самагунымды ергә түктерҙе. Һатыу-алыуға рөхсәтем була тороп, байырға ирек бирмәй, лафкама өçтө-өçтөнә налог һалдырып ыҙалай. Ширкәт төҙөп, бөтә ярлы-ябағаны байға ҡаршы ҡоторта! Етмәһә, миңә «шпиманка» тигән әллә ниндәй ят ҡушамат таҡты!» — тип күңеленән теҙә-теҙә һаман Емеш артынан эйәрҙе Сәрбиямал. Уның асыуы ҡабарғандан-ҡабарҙы, ҙурайҙы, ҡот осҡос көскә әйләнде. Ахырҙа: «Был динһеҙҙе, кафырҙы быуып үлтерергә кәрәк!» — тигән һығымтаға килде ул. Был ҡот осҡос ҡарарға килгәндә, Сәрбиямал ҡырсында быйыл ғына үҫеп сыҡҡан ҡуйы бөҙрә талдар араһында боçоп ултыра ине. Ә болан балаһы кеүек ыр-

ғып-һикереп йөрөгән Емеш артынан тағы ҡыуып Хәбир тирәге янындағы ерек араһына йәшенгән саҡта уның асыуы тыйырлыҡтан уҙғайны. Шуға ахыры, ул тамам түҙемен юғалтып, тауышланып уҡ ҡабатлап ҡуйҙы: «Быуып ташларға кәрәк кафырҙы!» Ә Емеш, был тоноҡ мөңгөрәүҙән тағы өркөп, Оҙонгол ҡабағына менеп китқәс: «Ҡайтырһың. Әллә ҡайҙа бармаçһың барыбер!» — тип эстән генә бармаҡ янаны ла кире боролдо. Ҡыҙылъяр ҡабағы аçтына барып, баяғы осҡат ҡыуаҡтары араһына инеп боçто. «Бында бер яҡтан йылға, икенсе яҡтан ҡыуаҡлыҡ, бер кем дә күрмәç. Бысҡылдарға ла өлгөрмәй ҡалыр!» — тип кинәнеп, хатта йылмайып ҡуйҙы. Ул инде ысынлап уҡ, бөтә яҡлап баçып, еңеп килгән үҙенә төптө ацлайышһыҙ был ят яңы тормоштан ошо уңай менән әҙ булһа ла үс алырға ла, шул уҡ ваҡытта бер кафырҙы дөмөктөрөп, хоҙай ҡаршыһында нык ҡына ҡаҡшап киткән теге донъя эштәрен төҙәткеләргә лә өмөт итә ине хәҙер. «Ул ҡәһәр һуҡҡыр ҡыҙыҡайҙы тотоп алыуы еңел булмаç булыуын. Ул бит әрһеҙ йән. Күрәһең, уны шайтан үҙе һаҡлап йөрөйҙөр. Ә минең яҡта аллаһы тәғәлә үҙе!» — тип сәкәй танауын күтәреп, үҙен дәртләндереп алырға ла онотманы.

Емеш, Оҙонғол башына менгәс, үҙен ҡурҡытҡан-өркөткән бөтә нәмәне онотоп, ялан аяҡлы бала сағының һөйгән төбәгендә ял итте. Яҙ һайын, ырҙын артлап, ала ҡарлы юлдан югереп килгәндә өшөп ҡып-ҡыҙыл булған аяҡтар бында үләндәр шыта башлаған парлы ҡара тупраҡта кинәнеп йылынып китә. Шунан ҡыҙҙар кемуҙарҙан югерешеп уйнарға керешәләр. Арығансы, йөрәктәр тарһылдап ҡыçылғансы югерешәләр, унан Сағылтау битендәге ҡайынлыҡтан сиҙәм ер буйлап ағып төшкән терегөмөш кеүек саф югерек ҡар һыуҙарын күнәктәргә мөлдөрәмә тултырып алалар ҙа йырлай-йырлай ҡайтып китәләр. Ҡар һыуҙары, яҙ ҡыуанысынан шашып, Оҙонгол йырғанағы буйлап Йөрәктау өçтөнә, унан Оло Эйеккә шаулап ағып төшәләр, ҡыҙҙарҙы тағы-тағы килергә саҡыралар. Ә Йөрәктау башындағы суҡ ҡайын, ярһыу шарлауыҡтарға ла, яҙғы сыр-сыуға ла иçе китмәй, һаман тыныс, моңһоу ғына тынып ултыра бирә. Емеш уға текләп оҙон-оҙаҡ уйланырға ярата торғайны.

Емешкә был уй ҡапыл икенсе бер ҡайынды хәтерләтте. Уны Хаммат ағай һуғыштан тәү ҡайтҡан йылда Сәлимә мәрхүмдең ҡәберенә ултыртҡайны. «Үçтеме

икән? Әллә корономо икән?» Кәберлек бынан алыҫ түгел ине. Емеш ниндәйҙер шомло ла, ылыҡтырғыс та тойғо аҫтында кәбер янына югерҙе. Нәфис, ап-аҡ олонло, алтынға мансыла башлаған ҡуйы япраҡлы йәш ҡайынға карап үҙ күҙҙәренә үҙе ышанмай һоҡланып торҙо: йәш ҡайын, ҡуйы ботаҡтарын тын ғына суҡландырып, кәбер өҫтөндә ойоп ултыра. Әйтерһең, ниҙер ишетә, кемдеңдер зарын тыңлай. Емешкә ул хатта ҡайын түгелдер, ә Сәлимә еңгәнең үҙелер, оҙон толомдарын һүтептаратып, кәбере өҫтөнә сығып ултыргандыр кеүек тойола башланы. Шуға ахыры ҡайын уға үтә лә ҡыҙғаныс тойолоп китте. «Эй-й, ҡышҡы ыжғыр бурандарҙа ҡалай өшөйҙөр ул, бахыр, ҡандай нәҙекәй генә, хәлһеҙ генә бит уның ботаҡтары, — тип йәлләне. Ҡараңғы төндәрҙә кәберлектә ел-дауыл, йәшен аҫтында һығыла-бөгөлә нисек кенә йәшәй икән, бахыр, яңғыҙ ҡайын, моңһоу ҡайын...» — тип өҙәләнде. Уның ике бите буйлап эҫе йәш тамсылары тәгәрләп төштө, йөрәген ниҙер әсеттереп семтеп алды, аяҡ быуындары хәлһеҙләнде. Донъя тоноҡланып киткән һымаҡ булды.

Ул ҡото осоп кире югерҙе. Оҙонғол ҡабағынан тәкмәсеп тигәндәй югереп төштө. Хәбир тирәге янынан уҡ кеүек атылып үтте, яр буйлап уҙған тар һуҡмаҡты бер тынала елеп уҙҙы, ахыр, тамам тыны бөтөп, бая Бибекәй әбей менән һөйләшеп ултырған Ҡыҙылъяр аҫтында туҡтап ҡалды. Күрәһең, бер ҡурҡыныс икенсеһен оноттурҙо, ул тап ошо урында үҙенең артында ғына Бибекәй әбей ниндәйҙер ҡараҫҡы күргән осҡат ҡыуаҡлығы барлығын да хәтерләмәне, етмәһә, алда Ҡыҙылъяр аръяғындағы киҫеүҙән сығып килгән һыбайлы ни өсөндөр уның иғтибарын үҙенә тартты. Уның күңеле бөткөһөҙ шатлыҡ менән тулыша, тулҡына башланы: «Байрас түгелме икән? Эй, ул булһа, мине күрһә ине! Таныр инеме икән? Ә мин?..»

Емештең уйы ошо ерҙә ҡырт өҙөлдө. Ҡемдер, көтмәгәндә, суҡмар шикелле ауыр йоҙроҡ менән башына шаңҡыта һуҡты. Ул арала булмай галстуктан тотоп быуырға ла кереште.

— Эй динһеҙ! Сиған балаһы, ниңә эт муйынсағы тағып алдың? Йәнеңде йәһәннәмгә ебәрәм бит хәҙер! Имаңыңды уҡы!..

«Был ул... Үгәй әсәй... Ни өсөн!!.» Емештең мейеһен ярып үткән һуңғы уй ошо булды.

* *
*

Был көндө Байрас, үҙ эшенән бик ҡәнәғәт, эшсән булып, нисектер, айырата дәртләнеп, ҡанатланып ҡайтып килә ине. Күңеле яҙғы көн кеүек яҡты, аяҙ, алда әлегә бик үк таныш булмаған, әммә мауыҡтырғыс яңы тормош, яңы хыялдар, яңы шатлыҡтар төҫмөрләнә. Һуңғы ваҡытта ул йыш ҡына үҙен донъяла иң бәхетле кешеләрҙең береһе итеп тоя башлай. Бөгөн уның тап шундай тойғо кисергән көндәренең береһе. Ысынлап та, атаһы граждандар һуғышынан да иҫән-һау тип әйтерлек ҡайтып килде. Иң ҡыуаныслыһы — ул туп-тура уларға, үҙ ғаиләһенә ҡайтып төштө. Шуның өҫтәүенә Байрас үҙе лә хәҙер өлгөрөп еткән йәш егет — комсомолец. Уны хатта күптән түгел Илсеғолда ойошторолған ячейканың секретаре итеп һайлап та ҡуйҙылар. Бына ул бөгөн иртәнсәктән алып волкомда кәңәшмәлә булды. Унда волостәге комсомол ойошмаларының яҙғы-йәйге эштәренә йомғаҡ яһанылар, көҙгө-ҡышҡы эш өсөн пландар раҫланылар. Илсеғол ячейкаһының эшен ҡайһы бер мәсьәләләрҙә бүтән ячейкаларға өлгө булырлыҡ тип таптылар. Халыҡ араһында аң-белем таратыу эшен айырата хупланылар. Халыҡты сәйәси яҡтан тәрбиәләү, агрономия буйынса аң биреү, уҡый-яҙа белмәү, зарарлы ғөрөф-ғәҙәттәргә йәбешеп ятыу кеүек иҫкелектәргә ҡаршы көрәшеү, газета-журналдар таратыу, комсомол-йәштәр көсө менән кисәләр, өмәләр үткәреү... тағы шундай бик күп эштәрҙә улар ап-арыу уңышҡа өлгәшкәйнеләр. Тик иң мөһим бер эштә — комсомолдарҙы, йәштәрҙе ситкә ебәреп уҡытыуҙа ғына улар башҡаларҙан ныҡ ҡалыша ине.

— Илсеғолдан ошоғаса бер студент тә юҡ. Бәлки, һинең үҙеңде Өфөгә, рабфакка ебәрергә кәрәктер? — тинеләр уға волкомда. Беҙгә үҙ кешеләребеҙҙән белемле кадрҙар әҙерләргә кәрәк!

— Уйлап ҡарармын, — тине Байрас. — Кәңәшләшермен...

«Атайым, Иштуған ағайым ни әйтер бит әле? — тип уйлап ҡуйҙы үҙалдына. — Булдырып булырмы икән һуң?» — тип икеләнеп тә алды.

Кәңәшмәнән һуң ул үҙенең эше буйынса ла, атаһының йомоштары буйынса ла төрлө учреждениеләргә инеп йөрөнө. Төш етеүгә генә эштән арынып ҡайтыу юлына

сыкты, шунда ғына үҙенең бик ҡаты асығыуын, эсенең һурылып ауыртыуын тойҙо.

«Эх, исмаһам берәй тәлгәш кенә ҡарағат күренһәсе, ә?!»

Ул, атын яйға ебәреп, оҙаҡ ҡына тирә-яҡтағы ҡыуаҡтарға ҡаранып барҙы. Әммә был юлы, ҡарышҡан шикелле, ҡарағат ҡыуаҡтары күҙгә салынманы. «Һиңә кәрәкмәгәндә аҙым һайын аяҡҡа уралып ята улар. Ҡараһы, ҡыҙылы, ағы. Ниндәйен йәнең теләй. Ә хәҙер, әйтерһең, юрамал боҫоп бөткәндәр!» — тип һуҡранып алды Байрас. Унан үҙенең ҡарағат ҡыуаҡтарына мыжып барыуын мәҙәк күреп ҡысҡырып көлөп ебәрҙе. «Осрамаһындар. Бик яҡшы. Шулай кәрәк һиңә. Иртәнсәк әсәйең бар булған нәмәһен үҙе ашамай һинең алдыңа ҡуйып, аша ла аша, тип торғанда, ҡабаланған булып, сығып китмәҫ инең!» — тип үҙен үсәп алды. «Йә, етәр, тамаҡ хаҡында уйламайыҡ. Ә бүтән берәй күңеллерәк нәмәгә күсәйек. Әйтәйек, ҡыҙҙар хаҡында. Һөйкөмлө ҡыҙыҡай Емеш хаҡында. Эйе, дөрөҫ, уның хаҡында!..» — тип уйлана торғас, ысынлап уҡ асығыуын онотоп ебәрҙе.

Емештең кисә кисләтеп кенә ҡайтып төшөүен Байрас беләһе ине, сикһеҙ ҡыуанғайны, шунда уҡ Иштуғандарға йүгереп барырға, күрергә, үҫкәнме, үҙгәргәнме, онотмағанмы, эреләнмәгәнме... белергә теләгәйне. Әммә баҙнат итә алманы. Әлегә һәр кемдең йөрәгендә ултырған ләғнәтле иҫке йола уға ла ирек бирмәне. Нисек инде һин, егет кеше, тоҡ-томалға ҡыҙ янына йүгереп барып инергә тейеш?!. Туған-ырыуы, күрше-күләне ни әйтер? Ни уйлар? Нисек ҡарар?.. Нисек, нисек?

Бына шулай бара алманы. Ә иртәнсәк волосҡа китергә кәрәк булды...

Уйының ошо ерендә Байрас тағы күңелле көлөп ҡуйҙы. «Һай, егетең! Бына һин нисек һөйәһең икән уны!?. Башта ҡыйыулығың етмәне, аҙаҡ эш ебәрмәне. Хатта ҡарының аслығын да унан элегерәк хәтерләнең түгелме?! Ах, выжданһыҙ, бүкән! Етмәһә, уны һөйәм, имеш, тип, үҙ-үҙеңде ышандырып йөрөгән булаһың бит әле. Уны ғына, уның бер үҙен генә, имеш! Башҡа ҡыҙҙарға, хатта улар үҙҙәре күҙгә килеп барһалар ҙа, ҡарамаған да кеше булаһың бит! Эйе, ысын, ҡарағың да килмәй башҡаларға... Ә хәҙер килеп бына онот та ҡуй, имеш!..»

Байрас, үҙ-үҙенә тамам асыуланып, теҙгенде ҡапыл тартып алды ла өҙәңге менән аттың ҡабырғаһына ҡаҡты:

— На, күк айғыр!

Ат күңелле елдерҙе. Ә инде Байрастың күңелен ҡапыл ниндәйҙер борсоулы, тынғыһыҙ һағыш солғап алды. Бик тиҙ, шошо минутта уҡ Емеште үҙ янында күргеһе, күҙҙәренә төбәлеп ҡарағыһы килде: «Ҙурайҙымы икән? Матур ғына була торғайны, хәҙер ҡалай икән? Ҡайһы бер ҡыҙҙар бәләкәс саҡта ҡурсаҡ кеүек кенә була ла, үҫкәс... Әна, Шәүрә. Юҡ, Емеш улай булмаҫ. Ул... ул матур ғына ла түгел, хатта ул... Туҡта, ул ҡалай һуң әле? Ысын, ул төптө бүтән, үҙенә башҡа, үҙе берәү, ысынлап шул, төптө үҙенә бер башҡа ҡыҙ бит ул, Емеш! Әллә миңә генә шулай тойоламы икән? Гел шулай минең күҙ алдымда үҙенә башҡа берәү булып баҫып тора бит ул... Эйе, эйе, берҙән-бер... Шундай һөйкөмлө... Йәнемде тартып, ылыҡтырып тороусы алмашһыҙ йән...»

Уйының шошо урынында Байрас: «Их, күрһәң ине йәһәтерәк! Ҡасан, ҡайҙа күрә алырмын икән? Уның үҙен яңғыҙ сағында ғына күрергә ине, — тип тамам сабырһыҙланып китте. — Осратырмынмы һуң мин уны?! Берәй яҡҡа китеп барманымы икән ул тағы?! — На, күксәй, йәһәтерәк елдер! Ҡайта һалайыҡ! Юҡһа, күңелде әллә ниндәй шиктәр кимерә башланы. Емеште бөтөнләй юғалттыммы әллә мин? Ниңә йөрәгем ҡапыл үтә сабырһыҙ һыҙланып китте һуң әле?!»

Байрас өҙәңгеләрен тағы ла ҡаҡты. Ат инде сабыуға күсте. Асыҡҡан эсенең өҙөлөп ауыртыуын да тойманы хәҙер Байрас. Берәй ҡарағат бөртөгө ҡабып алыу теләге лә онотолдо. Елә-саба кисеүгә килеп төштө. Югерә-югерә арып, Ҡыҙылъяр аҫтына килеп туҡталған Емеш уны тап шул саҡта күреп ҡалды. «Анауы һыбайлы Байрас түгелме икән? Эй-й, ул булһа, мине күрһә...»

## X

Иштуған был көндәрҙә бөтә ваҡытын тип әйтерлек мәктәпкә бирҙе. Уны ремонтларға, йылытырға, ҡышлыҡ утын менән тәьмин итергә кәрәк ине. Шул уҡ ваҡытта хәҙер ауылда көҙгө эштәрҙең иң ҡыҙыу осоро ла. Бынан ике йыл элек, граждандар һуғышынан ҡайтҡас, Хаммат, Иштуған, Әхәттәр ойошторол ебәргән ерҙе бер-

талап эшләү артелендә лә эштәр етерлек. Бөлдөргөс һуғыш, аслыҡ йылдарының сарпаҡлы ярсыҡтары өйөлөп ятҡан ерҙәрҙә быйыл артель күрелмәгән ашлыҡ үҫтергән. Бәлки, күмәк көс сиҙәм ерҙәрҙе һөрөп сәсергә мөмкинлек биргәнгәлер йәки дәүләттән яҡшы орлоҡ алғанғалыр, әлбиттә, яуым-төшөм дә үҙ ваҡытында булғанғалыр инде, уңыш ғәжәп шәп булды шул быйыл. Бойҙай баҫыуҙары, халыҡ әйтмешләй, алтын тулҡынлы диңгеҙгә әйләнеп, күҙҙең яуын алып ята. Инде уны юғалтыуһыҙ йыйып алырға, Ер-әсәнең йомартлығына, изгелегенә торош итерлек хөрмәт һәм тырышлыҡ күрһәтергә кәрәк. Иштуғандан был эштә лә мәктәптән кәм тырышлыҡ талап ителмәй. Унан килеп, артель уларҙың күптән түгел генә юктан бар булған уртаҡ балалары бит. Иштуған уны үҙенең төп эше менән берҙәй күреп ярата, уның өсөн ысын күңелдән яна-көйә, ҡыуана. Әле бына бөгөн ул, Байрас менән бергәләп, ырҙындан келәткә ашлыҡ ташып йөрөй. Шунда бер ыңғайҙан артель ағзаларының хеҙмәт көндәренә тейешле ашлыҡтарҙы ла ташып бирәләр. Был эштең күп кенә ауыр яҡтары булһа ла, Иштуған унан ҙур ҡәнәғәтлек таба. Әле ҡасан ғына әллә ни ҙә бер ҡаҙаҡлап он һатып алып ашаған ғаиләләргә ботлап, центнерләп бойҙай алып килеп биреү уның күңелендә бөткөһөҙ ҡыуаныс уята. Артель ағзалары хеҙмәт көнөнә быйыл һигеҙәр кило саф бойҙай алалар! Хөкүмәт быйыл артелдән бер грамм да ашлыҡ алмай. Әйҙә, артель көс йыйһын. Орлоҡ өсөн, мал аҙығы өсөн бүлеп ҡалдырһын да, ҡалған ашлыҡты ағзаларға бүлеп бирһен, ти. Һәм Иштуғандар шулай эшләнеләр ҙә. Эйе, ярлы-батрак кинәнеп икмәк ашаһын, Совет власеның кемде ҡайғыртыуын белһен!

Тәбиғәт тә изге эшкә көс биреп тора һымаҡ: көндәр аяҙ, ҡояшлы был арала. Артель ағзалары баҫыуҙан, ырҙындан ҡайтмай эшләйҙәр. Иштуған менән Байрас артель ағзаларына ашлыҡ ташыу тағы ла ҡыуаныслыраҡ, тантаналыраҡ булһын, дөйөм байрам төҫө алһын өсөн, аттарының маңлайҙарына, шлеяларына ҡыҙыл суҡтар элеп, дугаларына кескәй генә ҡыңғырауҙар тағып ебәрҙеләр. Тәртә остарына ҡыҙыл флагтар элделәр. «Әйҙә был көн ошо кескәй еҙ ҡыңғырауҙар тауышы шикелле, шат яңғырап, матур иҫтәлек булып ҡалһын. Сағыу ҡыҙыл флагтарҙың нуры күңелдәрҙе мәңге яҡтыртып торһон», — тинеләр улар. Был эштең шатлыҡлы ғына түгел,

Илсеғол кешеләренә генә хас, мәҙәк яҡтары ла бар. Әйтәйек, артель ағзаларының береһенең дә иген келәте юҡ. Алып килгән ашлыҡты ҡайҙа һалырға ла белеп булмай.

Бына Иштуған менән Байрас, бөгөн икенсе тапҡыр йөктәрен ауыр шығырҙатып, элекке балта оҫтаһы Хәлим ағайҙар ишек алдына килеп инделәр. Шәүрәнең әсәһе Зөбәржәт еңгә генә өйҙә ине.

— Еңгә, давай, бойҙайыңды ҡабул итеп ал! — тине Иштуған, үтә ҡыуаныслы тауыш менән. — Һеҙҙең ғаиләнән эшләүселәр күп булғас, иң күп ашлыҡ та һеҙгә тейә. Шәп бит, еңгә, ә?

— Шәплеген шәп тә, тик ҡайҙа ҡуйырға инде был ашлыҡты, — тип аптырап ҡалды Зөбәржәт еңгә. — Төптө лә урын юҡ бит әле.

— Бушты һөйләмә, инәй. Йәһәт кенә бушатып китәйек. Ҡайҙа һалдыраһың? — тип ашыҡтырҙы Байрас. — Беҙгә ашығырға кәрәк. Әле күпме кешегә ашлыҡ ташыйһы бар.

— Ҡитсе, китсе, урын бөттө лә ҡуйҙы лабаһа, — тип һаман аптыраны Зөбәржәт еңгә. — Һике аҫтына ла һалдыҡ. Шаршауымды ла, хатта үҙемдең күлдәктәремде лә тоҡ итеп тегеп бөттөм, ысын, табаҡ-һауыт, сиЛәк-сүмес береһе лә ҡалманы тиһәң дә буш булмаҫ. Инде быныһын һис бер ҡуйыр еребеҙ юҡ. Ҡире алып китегеҙ ҙә ҡуйығыҙ инде, балалар!

— Еңгә, был һеҙҙең хеҙмәт көнөнә тейгән иген. Беҙ уны кире алып китә алмайбыҙ, — тине Иштуған.

— Бер уйлаһаң, ул хәтле ашлыҡты беҙ нимәкәй эшләтәйек?! — тип аптыраны хәҙер Зөбәржәт еңгә. — Етмәһә, һалыр урын да булмағас...

— Нимә эшләтергәме? Бик булмаһа, һатып байрамға үҙеңә яңы күлдәклек алырһың, инәй, — тип мәрәкәләргә тырышты Байрас. — Ҡыҙыңа ла яңы күлдәк, яңы шаршау һатып алырһың...

— Атаҡ, һатырһың тисе? Беҙ һиңә күпестер шул, — тип йәберһенеп китте Зөбәржәт еңгә. — Нәҫел-ырыуҙа булмағанды ни...

Илсеғол халҡының һатыу, сауҙа итеүҙе үҙе өсөн ситят ҡылыҡ итеп, хатта кешемен тигән кешенең эше түгел итеп ҡарай торған ҡылығын яҡшы аңлаған Иштуған еңгәһен тынысландырырға ашыҡты.

— Байрас юрый ғына әйтә ул, еңгә. Ашлыҡ һеҙҙеке.

Кайҙа ҡуйһағыҙ ҙа ҡуйырһығыҙ. Беҙгә хәҙер тиҙерәк бушатып китергә генә кәрәк. Бүтәндәрҙең ашлығын да ташып бирергә ашығабыҙ!

— Алып-һатып табыш итеү яман. Ә үҙ ҡул көсөң менән тапҡанды һатып, кәрәк-ярағыңа тотоноу насар түгелдер ул, инәй, — тип нығышты Байрас. — Унан, һеҙҙең ғаилә ҙур бит. Ә ҡыш оҙон. Был иген таҡы-тоҡо ғына булып ҡалыр әле.

— Уныһы шулай ҙа, ҡайҙа ғына һалайым һуң? — тип һаман аптыранды Зөбәржәт еңгә. — Беҙҙең ул хәтле ашлығыбыҙ булыр тип кем уйлаған һуң. Алдан белһәң, алдан үреп булһа ла, келәт эшләп ҡуйыр инек тә бит. Талдан, ҡабыҡтан алаптар ҙа эшләп була ла бит.

— Әгәр беҙ һәр ерҙә былай һатыулашып, өгөтләп торһаҡ, эш барып сыҡмаҫ,— тип ҡырт киҫте Байрас хәҙер. — Улай булһа, ошонда, ергә, ишек алдығыҙға ауҙарып китәбеҙ, — тине Байрас, түҙемдән сығып. — Хәлим олатай аҙаҡ үҙе рәтен табыр.

— Теләһәгеҙ ни эшләтегеҙ, — тип ҡабатланы Зөбәржәт еңгә, ҡулдарын аптыраулы йәйеп. — Бүтәнсә әмәлем юҡ.

— Беҙҙең дә бүтәнсә әмәл юҡ, — тип, бошоноп йылмайҙы Иштуған. — Давай, Байрас, ер ҡоро, ергә бушатайыҡ! Ҡискә хужалары ҡайтҡансы бер ни ҙә булмаҫ әле.

Улар мәрйен бөртөктәре шикелле баҙырайып ятҡан ике йөк бойҙайҙы, әсенә-һыҙлана, ишек алдына, үлән өҫтөнә, ауҙарып киттеләр.

— Хәҙер бына Баҙыян инәйҙәргә ташый башлайбыҙ. Уларҙа ла шундай уҡ хәл — һалыр урын юҡ. Ә хеҙмәт көндәре бик күп, — тип, бошоноп һөйләнде Байрас та.— Берәһенең дә келәте юҡ. Бер уйлаһаң, әгәр беҙгә шул хәтле ашлыҡ алып килһәләр, һалыр урын булыр инеме икән? Юҡ бит! Был дөйөм бәлә инде беҙҙә.

— Ярай, мырҙа, был ҙур бәлә түгел. Бөтәһе лә бер юлы ғына булмай, — тип, Иштуған уны тынысландырырға тырышты. — Мул тормошҡа өйрәнеү ҙә бик еңел генә килмәй икән. Әкренләп беҙ ҙә яҡшы игенселәр булып китербеҙ әле. Беҙҙең дә, элекке байҙарҙыҡы шикелле, бөтә кәрәк-яраҡ әйберҙәребеҙ алдан әҙерләнгән булыр. Шул иҫәптән иген келәттәре лә... — тип тағы уйсан ғына йылмайып ҡуйҙы Иштуған. — Йә, атыңды ҡыуалай һал, мырҙам!

— На, юртаҡ!

— Юртаҡ! — тип быныһында Иштуған ҡысҡырып уҡ көлөп алды. — Һинең көрән юртаҡ менән һә тигәнсе ер шарын әйләнеп сығып булыр ине, Байрас!

— Була шул. На!..

Йөктәрҙе бушатҡансы кинәнеп ойоп торған көрән бейә теләр-теләмәҫ кенә урынынан ҡуҙғалды, Иштуғанға көрән бейәнең ҡылығы күптән таныш инде. Элек Сәрбиямалдың берҙән-бер аты ине бит ул. Хәҙер, байығас, ул уны Хәлим ағайға һатҡан. Шунан көрән бейә Хәлим ағайға иш булып ерҙе бергәләп эшләү артеленә килеп ингән. Хәлим ағай атын ярата, хатта:

— Минең көрән бейә үҙемә оҡшаған, түҙем, сабыр. Теләһә кем менән бергә йәшәй, бергә эшләй ала. Күпме йөк һал, һуҡранмай тарта, — тип маҡтанып та ҡуя. — Тик һин уны ҡабаландырып, ҡыуалап ҡына маҙаһыҙлама. Ҡыуғыларға ул бит себен түгел — юртырғамы, юҡмы икәнен ул үҙе белә, — ти.

Ысынлап та, көрән бейә, артелгә берләшеүгә ҡарап та, егеүселәрҙең алмашынып тороуына ҡарап та, ҡылығын үҙгәртмәне. Әйтәйек, ҡайһы бер аттар үҙ хужаһынан бүтән кешегә баш бирмәй йөҙәтте, һабанға ҡушарлап еккән атты яратмай сығынсыланы. Ә көрән бейәнең бер нәмәгә лә иҫе китмәне. Элек ҡалай һалмаҡ баҫып йөрөһә, шул көйө ҡалды. Әле лә Байрастың дилбегә ҡаҡҡылауына, сыбыртҡы шартлатыуына һис тә иғтибар итмәй, яй баҫып, көнө буйы эшләне лә эшләне. Шулай ҙа, Иштуған еккән салт күк айғыр өшәнеп, ҡара тиргә төшкәндә, көрән бейәнең арҡаһы дымланманы ла.

— Урыны менән сабырлыҡ та бер һөнәр икән, — тип көлдө Иштуған. — Ҡөстө һаҡлап оҙаҡҡа һәм күпкә еткереү файҙалыраҡ,— тигән һығымта яһарға мәжбүр итә түгелме һуң был көрән бейә?

Байрас та көлөп ҡуйҙы.

— Ул әле таңға хәтле йөк ташытһағыҙ ҙа бирешмәм тимәксе.

Иштуған арыған, ләкин бик ҡәнәғәт төҫ менән берсә аттарға, берсә егет булып етергә өлгөргән Байрасҡа һөйөп, йылмайып ҡараны.

— Юҡ инде, бөгөнгә етер. Төн иртәнге эш өсөн көс йыйырға бирелә бит ул. Шулай бит, мырҙам.

Ул, ҡасандыр Тимербай ағаһы һөйләшкәнсә, ҡайһы берҙә мырҙам һүҙен ҡулланып ебәрергә ярата ине хәҙер.

Иштуған менән Байрас, дөйөм кәртәгә алып барып аттарын туғарғас, әкрен генә ауыл яғына атланылар. Эңер ҡараңғылығы аҫтында күкһелләнеп ятҡан ауыл уларҙы яңы бешкән тәмле икмәк еҫе, көтөү ҡайтыу сәғәтенең йәнле сыр-сыуы менән ҡаршыланы.

Өсәр-дүртәр ботло тос бойҙай тоҡтарын көн буйына берсә арбаларға тейәп, берсә артель ағзаларының өйҙәренә алып барып бушатып ныҡ арыған булһа ла, Иштуған үҙҙәренә боролоп инер алда аҙ ғына туҡтап торҙо.

— Ҡара әле, мырҙа, — тип Байрастың баҙыҡ ҡарашлы, аҡыллы ҡуңыр күҙҙәрен, яҙыҡ маңлайын күрергә тырышып, ентекләп ҡарап алды. Байрастың тирле яурынына сат йәбешеп ятҡан кәбәктәрҙе ҡаҡҡылап ҡуйҙы. Унан уйсан, хатта оялсан ғына һымаҡ итеп: — Мин һиңә бик ҙур рәхмәт әйтергә тейешмен бит әле! — тип ҡуйҙы. — Һинең ҙур изгелегең өсөн... Емеш өсөн...

— Һис тә тейеш түгел, Иштуған ағай, — тине Байрас, ҡапыл нисектер уңайһыҙланған тауышҡа күсеп. — Минең урында бүтән берәү булһа ла шул уҡ эште эшләр ине.

Иштуған, әллә уңайһыҙланып торған Байрастың күңелен күтәрер өсөн, әллә ысынлап та был күренеште ҡыҙыҡ күреп, ихлас көлөп алды:

— Ҡара әле, Байрас, нисек һуң һин, көсөң етеп, шул ун ботлоҡ тос ҡатынды күтәреп һыуға ырғыта алдың икән? Шуны һис тә аңлай алмайым.

— Белмәйем, хәтерләмәйем... Ҡыҙыулыҡ менән булғандыр инде... — тип, тағы ла юғалыбыраҡ торҙо Байрас. Күрәһең, уға Иштуған менән Емешкә бәйләнешле һүҙ һөйләшеүе ҡыйын ине. — Мин ул хаҡта уйлап өлгөрмәгәнмендер. Йән әсеүе менән... Үҙемдең нимә эшләгәнемде тоймай ҙа ҡалғанмындыр...

Улар оҙаҡ һүҙһеҙ торҙолар. Иштуған үҙенең нескә тойғоларҙы асып һалырға, күңелдә янғанды тышҡа сығарып күрһәтергә өйрәнмәгәнлеге хаҡында үкенеспме, ғантырапмы, уйланып алды. Бына бит шул ғәҙәте арҡаһында ошоғаса Байрасҡа Емеш өсөн мең-мең рәхмәт әйтергә, был егетлегенде онотмам, тип белдерергә бик теләһә лә, һаман яйын килтереп әйтә алмай ыҙаланып йөрөнө бит ул. Әйтә башлағас та, артабан ни әйтергә белмәй, туҡтаны ла ҡалды. Шулай инде, бында, Илсеғолда, кешеләр «йөрәктә һаҡланған ғали тойғолар һүҙ ҡалыбына һыймай, һүҙгә әйләндереү менән хатта буш,

ҡоро яңғырауға, яһалмалыҡҡа әүерелә» тип, һүҙгә үтә ҙур һаҡлыҡ менән ҡарап тәрбиәләнгән. Ҡешенең йөрәгендәген теленән, һүҙенән түгел, ә күҙ ҡарашынан, хәрәкәтенән, эшенән белергә өйрәнгән...

«Ҡоро һүҙ — ҡуңалтаҡ итек!» Йөрәгендә ғали тойғолар булмайынса, матур һүҙҙәр һөйләп йөрөүселәрҙе бында шулай тип атайҙар бит. «Ҡеше нисек кенә телгә оҫта булмаһын, нисек кенә татлы һүҙҙәр сәсеп йөрөмәһен — уның барыбер ҡуңалтаҡ итек шикелле ҡороға ҡурпылдап йөрөүе күренеп тора тип иҫәпләйҙәр. Шуға, ахыры, үҙен хөрмәт иткән, үҙ һүҙенә яуаплылыҡ тойған һәр бер кеше һүҙҙе бик ныҡ уйлап, ашыҡмай-ҡабаланмай ғына һөйләй, һүҙҙе борсаҡ кеүек сәсеп йөрөргә яратмай...» — тип үҙенең хәҙерге хәлен аҡларға тырышты. Ләкин был уға барыбер ҡәнәғәтлек килтермәне: «Байрастың был ҡыйыу егетлеген күтәрмәләп ебәрерҙәй, шул уҡ ваҡытта ялған яңғырамаҫтай, тос һүҙ табырға ине ләбаһа!» Әммә уға ил аҡһаҡалдарына, сәсәндәргә хас оҫталыҡ етмәй шул әле... Байрас та, бынан бер аҙна элек Оло Эйек ярында булып үткән ваҡиғаны ҡайтанан кисереп, Иштуған биргән һорауға яуап табырға тырышты. «Нисек булды һуң был? Нисек ул шул хәтле дәү, ауыр ҡатынды күтәреп һыуға ырғыта алды? Хәҙер уға кем дә булһа тоҡ-томалға был эште ҡабатларға ҡушһа, моғайын, булдыра алмаҫ ине... Эйе, төптө булдыра алмаҫ ине... Әгәр улай икән, нисек һуң ул саҡта?! Ниндәй ғәжәп көс уны бәһлеүән иткән?..»

* *

«Анауы һыбайлы Байрас түгелме икән? Эй, ул булһа, мине күрһә ине...» Емештең был аҙаҡҡы татлы хыялы өҙөлгән саҡта, Байрас атын йән-фарман саптырып, Ҡыҙылъяр башына килеп менде. «Ҡайҙалыр, ниндәйҙер әсе тауыш сағылып ҡалды. Берәйһе ярҙан ауҙымы, һыуға баттымы?» — тип хафаланып тирә-яҡҡа күҙ ташлап торҙо. Унда Сәрбиямал ниндәйҙер кескәй, нәҙекәй генә баланы бүрәнә кеүек баҫып ятып, сүместәй йоҙроҡтары менән төйгөсләп ята ине.

«Әллә Емеште туҡмаймы был яуыз?!» — Байрас күҙ асып йомғанса эйәрҙән ергә һикерҙе, унан үрге туғай яғына югерҙе. Һәм, бер ҙә ике уйлап тормаҫтан, Сәрбиямалды һелкетә күтәреп алып һыуға ырғытты:

— Бар, ҡаҙал шунда! Унан ҡыҙ янына йүгереп килде. Ерҙә, бөтөнләй түҫө ҡаҫҡан, хәрәкәтһеҙ хәлдә Емеш ята, борһаланып бөткән ҡыҙыл галстугы муйынынан аҡ кофтаһына ағып төшкән ал ҡан кеүек күренә...

Байрастың ҡапыл тыны ҡурылғандай булды, хәле бөттө һәм ул тауыш-тынһыҙ ғына ҡыҙ янына бөгөлөп төштө. Ә Сәрбиямал, бата-сума тырмашып йөҙә торғас, һары мәтеле ярҙан тая-шыуа ярға килеп сыҡты ла яу һалып ҡысҡыра башланы:

— Ҡарауыл! Үлтерәләр!.. Изге кешеләр, яҡшы кешеләр, килегеҙ, ҡотҡарығыҙ, бисара бәндәне! Алла бәндәһен!..

Әлбиттә, уны ишетер ҙә, тыңлар ҙа кеше юҡ ине яҡ-яҡта. Бөтә кеше лә был ваҡытта ҡырҙа, баҫыуҙа. Тирә-йүндә үҙе Емештән үс алырға уңайлы тип ҡыуанған йәнһеҙ тынлыҡ хөкөм һөрә ине. Ә үҙе хәҙер, был төҫөндә, ҡурҡыныс булыуға ҡарағанда, үтә көлкө лә, хатта баһыр ҙа ине. Ҡыҙыл һары мәте шыйғалағы ҡатыш һыу шыбырҙап ағып торған киң, оҙон күлдәге, асыуҙан аҡайған ҡорос саҡҡылы күҙҙәре менән ул ниндәйҙер ҡот осорғос ҙур әрмәндене хәтерләтә һымаҡ, хатта тап шул әрмәнде булып баҡылдай ҙа һымаҡ... Әммә Байрастың уға ҡарап көлөр ҙә, көйөнөр ҙә әмәле юҡ. Уның алдында тал сыбыҡтай нәҙекәй, өнһөҙ Емеш ята. «Нимә эшләргә? Нисек ярҙам итергә уға?!»

Байрас, үҙ-үҙен онотоп:

— Емеш, Емеш һылыу! — тип, ҡабатлай-ҡабатлай, уның тамағын быуып торған ҡыҙыл галстукты сисеп алды, кофта төймәләрен ысҡындырҙы, битенән, сәстәренән һыйпап ҡараны. Ҡыҙ һаман шул бер көйө ята бирҙе.

«Үлгән!.. Үлтерелгән!.. Тын алмай...» — кеүек хәүефле уйҙар уның мейеһен йәшен тиҙлегендә ярып үтте. Ул ҡурҡыуҙан, ҡайғынан тамам аптырап, ни эшләргә белмәй, ҡыҙға теклəп ҡатып ҡалды. Уның ҡаны ҡаҫҡан йөҙөндә үтә ныҡ ҡара булып ҡыйғасланып киткән ҡаштары, ҡуйы оҙон керпектәре, тулҡынлы ҡалын ҡара сәстәре, ныҡ ҡымтылған ҡабарынҡы ирендәре — бөтәһе лә, бөтәһе лә тап элекке кеүек, әммә шул уҡ ваҡытта ул төптө бүтән дә кеүек хәҙер. Хатта таныш та түгел һымаҡ. Күрәһең, был йылдар эсендә ул үҫеп, өлгөрөп еткән. Тағы ла матурыраҡ булып киткән. Өҫтөндәге кейемһалымы ла бөтөнләй бүтән. Шулай ҙа барыбер ул, хатта ошо үлек хәлендә лә, Байрасҡа донъялағы бөтә бул-

ған ҡыҙҙарҙан матур ҙа, яҡын да тойола. Эйе, Байрас ярата уны! Бик ярата!..

— Емеш! Гөлйемеш һылыу! — тип, тауышһыҙ ғына ҡабатланы һаман уның ирендәре. — Уян, тор, һылыу! Үлмә!..

Ахыр ул ҡыҙҙы бала кеүек итеп күкрәгенә ҡыҫып күтәрҙе лә ауыл яғына табан атланы. «Беҙ хәҙер, һылыу, өйгә ҡайтырбыҙ. Айһылыу еңгә шәфҡәт фәрештәһе ләбаһа! Ул ярҙам итер. Һин терелерһең, һылыу!..» — тип ҡабатланы ул күңеленән. «Терелергә, йәшәргә тейешһең һин, Емеш! Аңлайһыңмы, һылыу?!»

Бәхеткә ҡаршы, Айһылыу өйҙә ине. Ырҙындан иртәрәк ҡайтҡайны ул бөгөн. Уның бит ҡунағы бар — бикәсе ҡайтҡан даһа! Өй аштарын һағынып ҡайтҡандыр бит ул. Тәмле-татлы бешереп ҡунаҡ итергә кәрәк бикәсте! Ә яҙмыш уға бына ниндәй хәтәр бүләк әҙерләп ҡуйған! Шулай ҙа Айһылыу юғалып ҡалманы. Уға, Байрас әйтмешләй, шәфҡәт фәрештәһе булып күп йыллыҡ фронт юлы үткән кешегә, беренсе ярҙам ҡағиҙәләре яҡшы таныш ине. Ул башта Емеште уңайлап һалды, нишатыр спирте еҫкәтте, яһалма тын алдырҙы.

— Еңгә, әйтә һал инде, тереме, үлеме?! Йәшәрме ул, еңгә?! — тип, сабырһыҙланып, әленән-әле үҙен ҡаты борсоған бер һорауҙы ҡабатланы Байрас. — Мин берәй ярҙам итә алмайыммы, еңгә?! — Был минутта ул «кеше ни әйтер, ни уйлар» тип ҡурҡып тороу йолаһын бөтөнләй онотҡайны. Уны хәҙер бер генә нәмә — Емештең яҙмышы ғына биләп алған. Шуға ул хәҙер үҙенең үтә ныҡ ҡайғырыуын да, борсолоуын да, Емешкә ярҙам итерҙәй кеше — Айһылыу еңгәгә булған сикһеҙ рәхмәтен-хөрмәтен дә йәшерә алманы. Улай ғына ла түгел, ҡулынан килгәнсә үҙе лә ярҙам итергә тырышты. Ҡыҙҙың кескәй, ҡабарынҡы ҡулдарын, боҙ тамсылары кеүек һалҡынайған нәфис бармаҡтарын үҙенең ҙур, йылы усарында йылытты, ботинкаларын сисеп, аяҡтарын йылы юрғанға ураны...

Ахыр ҡыҙ иҫенә килде, күҙен асты, берсә еңгәһенә, берсә Байрасҡа аптырап ҡарап, тәрән итеп тын алды. Аҙаҡ, күрәһең, тамам тынысланып, оялсан ғына йылмайып ҡуйҙы. Был йылмайыуҙа оло бәхет тә, сикһеҙ ҡыуаныс та, кеше рухының тиңһеҙ матурлығын да тойған Байрас, шатланыуҙан ни эшләгәнен белмәй, күҙ асып йомған арала Айһылыу еңгәһен биленән ҡыҫып күтәреп

алды ла, ҡҙән уртаһында зыр әйләндереп, Емеш ҡаршыһына килтереп баҫтырҙы.

— Емеш, күр, һылыу! Бына ул беҙҙең алтын ҡуллы, иң йәнле шәфҡәт фәрештәбеҙ!

— Үәт алпамыша! — тип, көлөп, уны ситкә этәрҙе Айһылыу. — Ниңә һин, ҡамыр батыр, минең һөйәктәремде һындыраһың!

— Еңгә, ғәфү ит, асыуланма!.. — тине Байрас, ниңәлер үҙе ҡолағына хәтле ҡыҙарынып. — Үҙем дә тоймай ҡалдым. Ҡыуаныстан шашып...— Һәм үҙе шунда тышҡа атылды.

— Күрҙеңме!.. — тип, серле генә йылмайып, Айһылыу бикәсенә боролдо.— Егетте аҡылдан яҙҙыра яҙҙың бит!..

Емеш, ошо минутта йөрәген үтә ярһытып, тулҡынландырып ебәргән билдәһеҙ ҡыуаныс тойғоһон еңгәһенә белдереүҙән оялып та, илап ебәреүҙән ҡурҡып та күҙҙәрен йомдо. Уның өсөн донъя был минутта иҫ киткес матур ҙа, ҡот осорғос ҡурҡыныс та, мәкерле лә кеүек ине...

* *
*

Байрас, тел менән һөйләп биреүе ауыр булған был нескә теманы ситләп үтергә тырышып, тағы бер аҙ һүҙһеҙ тапанып торҙо ла, һөйләште рәсмирәк яҡҡа бороп ебәрергә булды.

— Сәрби тутай ҡоторона, — тине ул, ризаһыҙ тауыш менән. — Бөтә ауылға, Байрас билемде биртендерҙе, тигән һүҙ тарата. Ҡыҙҙарҙан биртек йыйҙырып ашай. Ҡыҙҙарына ла әйтер инем:

> — Билем-билем биртенгән,
> Биртек ите һорайым.
> Ҡайпым улы ҡартайған,
> Ҡаты-ҡото һорайым, —

тип һамаҡлап, өй буйынса ҡаты-ҡото йыйып йөрөйҙәр... Уларға ни мәҙәк кенә булһын...

Иштуған тағы күңелле көлөп ебәрҙе.

— Бәлки, һин ысынлап та ҡаты тотонғанһыңдыр, мырҙа?!

Күрәһең, ул да һүҙҙең былдай әйләнеш алыуына шат ине. Сөнки ул бит үҙе лә нескә тойғоларҙы ҡысҡырып

һөйләргә яратмай ҙа, белмәй ҙә ине. Шуға ла ахыры Байрасҡа рәхмәт әйтеүҙе лә ошоғаса һуҙҙы шикелле. Ә бит ул ваҡиғаға аҙнанан артыҡ ваҡыт уҙып китте. Емеш инде һауығып йөрөй башланы. Күрәһең, ул, етди туҡмалыуҙан, быуылыуҙан түгел, бигерәк тә ҡурҡыуҙан һуштан яҙған булғандыр. Әгәр Байрас барып өлгөрмәһә... Уйлауы ла хәтәр. Әлбиттә, Иштуғандың күңелендә һеңлеһен ҡотҡарып ҡалған өсөн мең-мең рәхмәттәр йәшәй. Байрас та быны бер һүҙһеҙ аңлап тора.

— Ә ул ҡыҙға ҡаты тотонмағайнымы ни?! — тип, ҡапыл ҡыҙып һорау менән яуап бирҙе Байрас. — Үлтерә яҙҙы лабаһа!..

Унан үҙалдына, һаман шулай ярһып уйлап ҡуйҙы: «Емеш үлем хәлендә булғанда, мин ни ҙә булһа бүтән кеше хаҡында уйлай алыр инемме ни?..» Ахыр, баҫыла төшкәс, ҡыйыуһыҙ ғына йылмайып, Иштуғанға күтәрелеп ҡараны:

— Дөрөҫөн әйткәндә, мин уны ҡалай күтәреп алыуымды, ҡалай ырғытыуымды үҙем дә белмәйем, Иштуған ағай. Белһәм, бәлки, көсөм дә етмәҫ ине.

— Эйе... Ҡаһарманлыҡ шулай килеп тыуа, күрәһең... Алдан уйланып, план ҡоролоп эшләнмәйҙер ул подвиг, мырҙам. Ҡыйыулыҡты ла, көстө лә тормош шарты үҙе тыуҙыра шул.

— Минеңсә, һүҙ инде был хаҡта түгел, ағай, — тип, Байрас Иштуғандың һүҙен ҡоро ғына бүлдереп ҡуйҙы.— Минеңсә, беҙгә хәҙер был яуыз ниәтле эште язаһыҙ ҡалдырмау хаҡында һөйләшергә кәрәк.

— Эйе, дөрөҫ. Был хаҡта бергәләп кәңәшләшергә кәрәк.

— Ә беҙ, комсомолецтәр, был яңы тыумыш купец бисәне судҡа бирергә ҡарар иттек.

— Судҡа?

— Эйе, беҙ ғариза яҙҙыҡ. Тик бына Емеш кенә ҡул ҡуйырға теләмәй. Судлашып йөрөргә теләмәйем, — ти ҙә ҡуя.

— Бәлки, ул хаҡлылыр? Бәлки, яуызлыҡ, иҫкелек менән көрәште судтан башларға кәрәкмәйҙер беҙгә? Һин нисек уйлайһың, Байрас?

Иштуған үҙенең өлкәнәйеп, етдиләнеп киткән кеүек күренгән уҡыусыһына иғтибар менән текләп ҡалды.

— Бәлки, башта үҙебеҙҙең хаҡ һүҙҙе көрәшкә егергә кәрәктер? Беҙҙең заманға хас булмаған уның ғәҙәтенең,

гомүмән, йәшәү юлының ярaҡһыҙлығын халыҡҡа һөйләргә, аңлатырға, ә?.. Юҡһа киреһенсә килеп сығырға ла мөмкин бит. Әйтәйек, Емеш ҡул ҡуйһа, йәғни судҡа бирһә, Сәрбиямал халыҡ күҙе алдында ғәйепленән гәйепһеҙгә әйләнеп ҡуймаҫмы? «Бына улар минән, үгәй әсәләренән, ҡалай үс алалар?!» — тип меҫкенләнәсәк бит Сәрбиямал. Ул бит белә, беҙҙең халыҡ ышаныусан, кешене йәберләүсене лә, йәберләгәнде онотмай кенә ҡыуып йөрөүсене лә берҙәй үк насар күрә. Эйе, кенә ҡыуыусыны — яуыҙлыҡты эшләүсе менән бер дәрәжәлә күрә бит беҙҙең халыҡ. Шулай булғас, Сәрбиямалдың халыҡ күҙе алдында күтәрелеп, йәберләүсенән йәберләнеүсегә әйләнеп китеүе бик мөмкин. Ә был беҙҙең эш өсөн файҙаһыҙ буласаҡ. Халыҡты уны ситкә тибәреүе бик тиҙ, ә бына үҙеңә тартыуы, яңылыҡҡа ылыҡтырыуы улай уҡ аңһат түгел. Халыҡты өркөтөп ҡуймайыҡ, тим. Аңлайһыңмы, мырҙа?

Байрас үҙенең остазына аптырап ҡарап алды:

— Былай булғас, ағай, һин дә Емештең фекерен хуплайһың буламы ни инде? Һис тә аңлай алмайым.

Иштуған оҙаҡ ҡына уйланып торҙо. Унан, нисектер, еңел һулап:

— Емештең яуыҙлыҡҡа, аңһыҙлыҡҡа ҡаршы көрәштә ғаризалар яҙыуҙан башларға теләмәүе миңә оҡшай, — тип ҡуйҙы, — ул үҙенсә хаҡлы...

Иштуған, киске офоҡтоң алһыу яҡтылығына күҙ ташлап, йөҙө яҡтырып, тынып торҙо. Унан тағы Байрасҡа бороло ҡараны.

— Уйларға кәрәк, мырҙам. Эйе, уйлап эш итергә кәрәк. Көрәшеү — алдан һалып ҡуйған таҡыр юлдан тәгәрмәс булып тәгәрләү түгел ул. Һәр аҙымды яһарҙан алда ҡайҙа, ҡалай баҫыуыңды уйламай булмай. Яҙа баҫып, тәртәне һындырып ҡуйыуың бар. Шулай ул, мырҙа? Нә, хуш. Иртәгә бит беҙгә тағы ла күберәк тоҡ ташырға кәрәк буласаҡ. Әҙерәк ял итеп алырға кәрәк.

Ул йәһәтләп ҡапҡанан инеп китте. Байрас, Емеш күренмәҫме тип, тәҙрәгә ҡарай-ҡарай яй ғына ары уҙҙы. Иштуған ағаһы менән һөйләшеп торғанда, уға Емеш ҡайҙалыр ошонда, яҡында ғыналыр кеүек, уны күрәлер, ишетәлер кеүек тойолғайны. Әммә, нисек кенә теләһә лә, уны күрә алманы. Ә ул, Емеш, ысынлап та тәҙрә үтә ҡарап, уны күреп торҙо. Тик ул Байрас ҡарап уҙғанда оялып, йәшенеп ҡалды. Байрас бошоноп ҡайтып китте.

* * *

Был кисте Оло Эйек буйынан килгән гармун тауышы айырата ярһыу ҙа, моңһоу ҙа яңғырай һымаҡ ине. Емештең иң яратып бейегән көйө «Шәл бәйләнем» дә нисектер үтә яғымлы ине бөгөн. Был Байрастың тауышы — быны ул уйнай. Гармун тауышы аша ул берсә ярһыу, берсә шаян, берсә моңһоулы-һағышлы йыр булып уны, Емеште, янына саҡыра, уйнай-көлә, һыҡтай-илай уға үҙенең тәүге саф мөхәббәте хаҡында мәдхиә һөйләй...

Емештең йөрәге тетрәп китте, ауыр керпектәре күҙен ҡапланы, кескәй сынаяҡ, уның ҡулында дерелдән, эсе сәйҙе сайпылта яҙҙы. Емеш бөтә көсөн йыйып тыныс, ғәмһеҙ булырға, етеп килгән ҡыҙға йола буйынса тейешле тыйнаҡлыҡты аҙағынаса һаҡлап ҡалырға тырышты. Әммә йөрәгең ут булып дөрләп янғанда, бөтә йәнең-тәнең сихырлы моң һыҙылған Оло Эйек буйына тартылғанда, был еңел түгел ине. Етмәһә, еңгәһе, үс иткәндәй, гел Байрас хаҡында ғына һөйләне.

— Беҙ әле көскә киске сәйгә ултырҙыҡ. Ә бынауы Байрасты әйтәм, ҡайһы арала тамағына ашарға ла, ҡайһы арала гармун күтәреп сығырға өлгөргән! Минеңсә, ул хәҙер көндөҙ аяҡтан йығылғансы эшләй, кисен таңғаса гармун уйнай, — тип күңелле йылмайып иренә ҡарай ул. — Күрәһең, донъяла йоҡо тигән, ял тигән нәмәнең дә булыуын төптө онотҡан...

— Йәшлек, — ти Иштуған уйсан ғына. — Йәшлек арыу-талыуҙы беләме ни? Бигерәк тә йөрәгеңдә йыр, ҡулыңда гармун булған саҡта...

— Эй-й, ҡалай ҙа матур уйнай бит әле! Әйтерһең, йөрәкте семтеп-семтеп ала! — тип, тағы ла серлерәк итеп, инде Емешкә төбәп ҡарай Айһылыу.— Байрас йәштәрҙе, комсомолдарҙы шулай уйнап үҙ янына йыйнап ала ул, шаян!.. Киске уйынға, тим... Бәлки, һин дә сығырһың, бикәс?.. Бөгөн бит ауылда һинең аҙаҡҡы кисең...

Гармун, ярһып, дәртләнеп, «Шәл бәйләнем»де өҙҙөрҙө. Өҙөлөп-һыҡтап һаман Емеште үҙ янына саҡырҙы.

— Эйе, таңдан юлға сығабыҙ, — тип ағаһы ла уйынға сығыуға ҡаршы килмәгәнен белдерҙе. — Алыҫ юлға, оҙаҡҡа...

Китеү ҡыуанысы, айырылыу һағышы менән тағы ла ныҡыраҡ көсәйгән йөрәк ярһыуы Емештең йөҙөнә ал нур булып бөркөлдө. Уға ағаһы менән еңгәһенең һынаулы күҙ ҡарашы аҫтында артабан да ҡалыу мөмкин түгел ине. Ул, бер нәмәгә лә иҫе китмәгән, тыныс кеше булырға тырышып, яй ғына торҙо, өҫтәл янына барып, ныраҡ китап-ҡағыҙ аҡтарҙы. Әммә китапты күрмәне. Еңгәһе менән ағаһының һүҙен ишетмәне. Сөнки күңеле лә, күҙе лә күптән инде ситтә, Байрас янында ине уның. Шулай ҙа үҙенең ашҡыныуын һаман һиҙҙергеһе килмәне, ниндәйҙер һүҙ табырға, һөйләшергә тырышты. Шул саҡ уның хәтеренә ҡыҙыл галстугы килеп төштө. Емештең уны бер көнгә ваҡиғанан һуң күргәне юҡ ине.

— Минең галстугым ҡайҙа икән, еңгә?

Айһылыу һүҙһеҙ генә Иштуғанға күҙ ташланы.

— Мин уны йыйып ҡуйҙым. Иҫтәлек булып ятыр. Һин хәҙер пионерка булырға ҙур. Комсомолға инерһең, — тине Иштуған, өҙөп-өҙөп. — Ун дүрт йәшкә хәтле генә пионерҙә торалар.

Емеш ҡып-ҡыҙыл булып оялып китте. Уға уңайһыҙ ине. «Абау, ун биш йәшем тулып үткән көйө пионерка булып йөрөгәнмен дәһә! Эй бигәләш! Вожатый ағай ҙа бигәләш булған икән! Мине бәләкәс тип белдеме икән ни?»

— Йә, бар инде, Емеш! — тип, уның уйын бүлде Айһылыу,— әхирәттәрең көтә-көтә арығандыр. Унан, ваҡыт та бит көтөп тормай.

— Оҙаҡ йөрөмә. Таңдан китәбеҙ, — тип ҡабатланы Иштуған.

Емеш, күкрәгенә һыймай дөпөлдәгән йөрәк тибешен аяуһыҙ баҫып, ҡабаланмай ғына өйҙән сыҡты.

* *
*

Оло Эйек буйында, Ҡыҙылъярҙың иң текә ҡабағында, бәхетле, ярһыу йәшлек урғыла. Байрас, ярҙан аяғын һалындырып, аръяҡҡа ҡарап ултырып алған да ярһыпдәртләнеп гармун һыҙҙыра, ә уйсан ҡараштары ҡайҙалыр алыҫҡа, билдәһеҙ нөктәгә төбәлгән... Йәштәрҙең ҡайһылары әкрен генә гармунға ҡушылып йырлай, ҡайһылары гармунсы янына, ергә һуҙылып төшөп ятҡан да, уйсан, тын ҡалып, йыр тыңлай, ҡайһылары тыйнаҡ ҡы-

на шаярып ҡыҙҙар менән һүҙ көрәштерә. Ҡыҙҙар ҙа уларҙан ҡалышмай. Егеттәрҙең бер һүҙенә биш һүҙ менән ҡарыулашырға әҙер торалар, шыңғыратып көлөшәләр, ҡайһы саҡта йыр һуҙып та ҡуялар. Улар Емештең йәштәштәре, әхирәттәре. Бөтәһе лә тип әйтерлек үҫкән, еткән. Бөтәһе лә тик тормаҫтар, шаяндар, ҡылансыҡтар, төҙөүҙәр. Әленән-әле егеттәр яғына оялсан, серле ҡараш ташлап алалар, бер-береһенең ҡолағына бышылдап ниҙер әйтәләр, унан кинәнеп, ҡыуанып, шыңғыратып көлөп ебәрәләр. Егеттәр ҙә үҫкән, уяуыраҡ, теремегерәк булып киткән. Һәр ҡайһыһы ҡыҙҙар алдында матурыраҡ, ҡыйыуыраҡ, йор һүҙлерәк булырға тырыша. «Эй-й... — тип үҙ күҙенә үҙе ышанмай ситтән генә ҡарап тора Емеш. — Бөтәһе лә үҫеп еткән! Хатта бынауы һорнайған, мөхәббәтһеҙ Моратша ла, нисектер, төптө бүтән булып, үҙгәреп киткән һымаҡ...— тип уйлай Емеш, нимәгәлер бошонған һымаҡ итеп. — Бөтәһе лә, бөтәһе лә үҫкән. Еткән. Бала саҡ уҙған. Мин дә улар шикелле үҙгәрҙемме икән ни?! Еткәндәр! Ә үҙҙәре шаттар. Ҡыуаналар! Уларҙың барыһына ла күңелле. Ә бит бала саҡ бынан ары бер ҡасан да, бер ваҡытта ла ҡайтмаясаҡ!..»

Емеш ҡыйыуһыҙ ғына тағы яҡыныраҡ килде. Һиҙҙермәй генә тағы бер ситтәрәк туҡтап ҡалды. Ә Байрас, уның яҡынайыуын тойғандай, тағы дәртлерәк көйгә күсте. Ләкин ғәҙәттә үтә уяу булып, яҡтырып тороусан күҙҙәре һаман моңһоу, уйсан көйө ҡалды. Ундай Байрасты Емеш тәүтапҡыр күрә ине шикелле... Ул күҙен алмай оҙаҡ-оҙаҡ Байрасҡа текләп торҙо. Берсә яратып, һоҡланып, берсә, ниңәлер шикләнеп, хатта ҡурҡҡан һымаҡ итеп текләне... Ҡайһы саҡта хатта үҙенең бында ни өсөн тороуын, былай ситтән текләп тороуҙың килешеп етмәүен онотоп та ебәргеләне. «Эйе, Байрас уға хәҙер үтә яҡын да, алыҫ та, хатта хәтәр ҙә һымаҡ... Ни өсөн улай икән?!»

Ахыр килеп уға иптәштәренең һаман уны абайламауы, үҙенең һаман ситтә баҫып тороуы, бик уңайһыҙ тойола башланы. Әлбиттә, ул үҙе ғәйепле. Шул хәтле шым булып, йәшенгән һымаҡ итеп килгәс ни...

Емеш ҡапыл кире боролдо: «Уй, ҡалай уңайһыҙ булды!.. Ҡайтып ҡына китәйемсе... Бында минһеҙ ҙә күңелле бит!» — тип сәбәпһеҙгә хәтере ҡалып уйлап алды. Хатта илағыһы килеп китте. «Минһеҙ ҙә күңелле», тигән уйҙан үтә ауыр булды уға. «Нисек инде унһыҙ бик күңел-

не булырға тейеш? Һис юғы бер егеткә унһыҙ бик үк күңелле булмаҫҡа тейеш ине ләбаһа!»

Емеш шулай икеләнеп торған арала, Байрас уйынын иң юғары нотаға күтәреп туҡтатты ла ҡапыл һикереп торҙо. Гармунын ергә ҡуйҙы.

— Әҙерәк ял итәйек... — тип, бошоноп ҡына көрһөнөп алды. — Арытып ташланысы, дуҫтар...

Һәм тап шул саҡта Емеште күреп, югереп килде.

— Һай, бына Емеш тә килде! — тип, шаулап ҡыуанып китте ул. — Үәт, рәхмәт! Йә, ҡулынды бир! Бер ҡыҫайым, исмаһам!

Емеш, егеттең асыҡтан-асыҡ шулай шатланыуына нисек ҡарарға, үҙен нисек тоторға кәрәклеген уйларға ла өлгөрмәне, Байрас уның ҡулын үҙенең ҡыҙыу устарына ҡыҫып тотоп та алды. Һәм шулай уҡ етеҙ һәм кире ҡаҡҡыһыҙ хәрәкәт менән ҡыҙҙың усына кескәй генә ҡағыҙ киҫәге һалып йомдороп ҡуйҙы.

— Уҡырһың!.. — Емеш үҙенең ҡолаҡ янында ғына егеттең эҫе тынын тойҙо. — Һис һүҙһеҙ уҡырһың! Һәм яуап бирерһең, яраймы?!

Емеш тағы бер ни уйларға өлгөрмәне, ә ул инде уны етәкләп, түңәрәк уртаһына алып барып индерҙе. Һәм үтә шат, теремек тауыш менән:

— Йәгеҙ, дуҫтар, бейейек! — тип ҡысҡырҙы. — Ҡыҙҙар, йәгеҙ, үҙебеҙҙең яратҡан таҡмаҡты әйтегеҙ! Минең дә бейегем килә!

Егеттәр, ҡыҙҙар, шул бойороҡто көтөп кенә торғандай, дәррәү түңәрәккә теҙелделәр. Күмәк тауыштан сыҡҡан ярһыу таҡмаҡ тотош Оло Эйек буйына яңғырап китте.

Шәл бәйләнем, шәл бәйләнем,
Шәлем түңәрәк түгел.
Осоп барып күрер инем,
Йәнем күбәләк түгел...

Байрас, бәлки, тиҙҙән айырылышыу сәғәте етәһен белгәнгәлер, был кистә үтә ярһыу ҙа, ҡыйыу ҙа булды. Емеште үҙ янынан бер ҡайҙа ла ебәрмәне. Түңәрәк уртаһына алып уның аяғын ергә тейҙермәй әйләндерҙе, бөтәһенән ярһыуыраҡ, шаянырак итеп өҙлөкһөҙ таҡмаҡ әйтте.

Оло Эйек буйында тыуған иҫәпһеҙ-һанһыҙ был ябай, шаян таҡмаҡтар Емешкә иҫ киткес сихри бер моң бу-

лып, быѓаса ул белгән, ул ишеткән йырҙарҙың иң-иң гүзәле, уның рухын биләп алған тиңһеҙ бәхет-шатлык тойғоларын һөйләй алған берҙән-бер көс кеүек тойолдо. Етмәһә, бая Байрас биргән кескәй ҡағыҙ киҫәге лә уның йөрәген үтә йыш, ярһыу тибергә мәжбүр итә ине. Усын көйҙөрөп, йөрәген яндырып, йөҙөнә эҫе нур бөркөп тора һымаҡ. Һәм ул үҙенең нисек әле был ҡағыҙҙы киреләнмәй, икеләнмәй генә түгел, ә ниндәйҙер бөткөһөҙ кинәнес, ҡыуаныс менән алыуына һис тә төшөнә алмай ыҙаланды. «Нисек былай булды һуң? Ниңә Емеш уны алды? Ниңә ташламаны? Ниңә ниндәйҙер сиктән тыш яҡын, ҡөҙрәтле нәмә һымаҡ күреп ҡәҙерләп юбкаһындағы кескәй генә кеҫәгә йәшереп ҡуйҙы? Бер саҡ Моратшаның уҡ менән атып биргән хатын ул шунда уҡ йыртҡылап ырғытҡайны лабаһа? Ниңә Байрастың хатын ташларға уның көсө етмәй? Улай ғына ла түгел, ниңә кескәй генә ҡағыҙ киҫәге уның йөрәгендә тау хәтле тулҡын тыуҙыра?»

Таҡмаҡ артынан таҡмаҡ яңғырай, ярһыу дәрт менән ҡанатланған күмәк бейеү дауам итә. Арыу-талыуҙы белмәй бейеп әйләнәләр, йән һөйгәнен барған һайын ҡыйыурак уртаға саҡыралар... Түңәрәк уртаһына сыҡҡан саҡта Шәүрә һәр саҡ Байрасты, ә Байрас Емеште саҡырып ала. Берәүҙән дә тартынмай, Емешкә яратып сикһеҙ һөйкөмлө итеп ҡарай, күкрәгенә ҡыҫып, орсоҡ кеүек өйрөлтөп, бейеп әйләндерә. Ә Емеш, ниндәйҙер бөтөнләй таныш булмаған көслө ихтыярға баш эйеп, ярһыу хистәр ҡанатында аяғы ергә теймәй оса ғына.

Күмәк бейеү бөткәс тә Байрас Емеште үҙ янынан ебәрмәй, бала кеүек етәкләп, үҙ янына алып барып ултыртты.

— Хәҙер һин ҡасып китә алмаҫһың. Ошонда ултырып, көтөп торорһоң! — тип шыбырҙаны ул. Уның тауышында кире ҡаҡҡыһыҙ бойороҡ өнө яңғыраны. — Ә мин гармун тартып алайым. Әйҙә, дуҫтар йырлаһындар. Аңланыңмы, һылыу?

Ул ярһып гармун телдәренә баҫты. Йөрәк өҙгөс дәртле моң яңғырап китте.

Был кисте Илсеғол йәштәре ғәҙәттәгенән оҙағыраҡ та, берҙәмерәк тә йырланылар. Бына тирә-яҡты эңер ҡараңғыһы тамам ябып алды. Аръяҡтан, бейек тирәктәр артынан, майға ҡурылған туй йыуасаһындай ҡыҙарып, бик дәү ай ҡалҡты, ә көньяҡтан, Сағылтау артынан,



һиҙҙермәй, өндәшмәй генә ҡалын ҡара болот күтәрелеп сыҡты, һауа йылынып, дымланып китте. Талғын, йомшаҡ ямғыр еле иҫте. Емешкә был көҙ түгел, ә йылғала ташҡын тулҡындар ҡайнаған, туғайҙа һандуғастар һайраған, далала гөлдәр сәскә атҡан яҙғы сихри бер төн булып тойолдо. Эйе, был уның йәшлегенең иң тәүге, иртә яҙы ине. Бөтәһе лә ғәҙәттән тыш яңы, бүтәнсә булған, бәхет тә, ҡыуаныс та, моң да ярҙарынан ташып сыҡҡан. Аһ, ҡайһылай ҙа ҡыуаныслы ла, ҡыҫҡа ла булды һуң әле ул! Бына инде таралышырға ла ваҡыт етте. Дуҫтарҙан, әхирәттәрҙән айырылышырға... Бәлки, бөтөнләйгәлер ҙә?!.

Емеште Байрас өйҙәренә хәтле оҙатты. Хушлашырға ла, айырылышырға ла көстәре етмәй, улар ҡапҡа янында бик оҙаҡ һүҙһеҙ тынып торҙолар. Хәҙер бында икәүҙән-икәү генә ҡалғас, Байрасты ла ниндәйҙер ҡыйыуһыҙлыҡ солғап алды. Үҙенең йөрәгендә ҡайнаған тойғоларын һөйләп бирерҙәй бер генә һүҙ ҙә таба алмай тынып ҡалды ул. Һөйөү шатлығы ла, айырылышыу һағышы ла уның өсөн тел менән һөйләп тә, ниндәй ҙә булһа ым менән аңлатырлыҡ та тойғолар түгел ине... Ә Емеш тотошо менән үҙенең тиңһеҙ кешелек бәхете иркенә инеп сумғайны. Уға бер ни ҙә һөйләү кәрәкмәй ине. Уға Байрасы ошонда, янында булғас, еткән. Донъяла Байрас бар. Уға бүтән бер ни ҙә кәрәкмәй.

Бына күк йөҙө бөтөнләй томһаланып китте. Сағылтау артынан күтәрелеп сыҡҡан баяғы ҡара болот күк йөҙөн тотош ҡаплап алды. Тулған ай ҙа, сағыу йондоҙҙар ҙа йәшенде, ер өҫтө тағы ла ҡараңғыраҡ, ҡырыҫыраҡ булып китте.

Байрас ҡыймай ғына Емештең беләгенә тейҙе, кескәй генә нәфис ҡулдарын үҙенең йомшаҡ, ҡайнар устарына алып, йылытып торҙо.

— Емеш, һин өшөйһөң. Бар, һылыу, ҡайт... Ваҡыт...— тип шыбырҙаны. — Юлға сығыр алдынан әҙ булһа ла ял ит...

Үҙе китмәй тағы бер аҙ тынып торҙо. Унан тағы ниндәйҙер йөрәк өҙгөс моңһоу тауыш менән:

— Йә, хуш, һау бул, һылыу... Онотма!.. — тине лә, ҡапыл йүгереп, ҡараңғыға инеп юғалды.

«Туҡта, китмә!.. — тип ҡыҫҡырырға теләне Емеш. — Тағы әҙ генә янымда тор!»

Бер кемдән дә оялмай, тартынмай үкһеп-үкһеп илағыһы, уның артынан югергеһе килде... Әммә ул быларҙың береһен дә эшләмәне. Байрас инеп юғалған төн ҡараһына текләп, ҡапҡа төбөндә торҙо ла торҙо.

Тылсымлы был төн дә һиҙҙермәй генә уҙып китте. Ҡөнсығышта, талғын ғына buҙарып, таң һыҙылды. Оло Эйек буйын ҡуйы күк томан ҡапланы. Таң атты, ҡояш сығырға яҡынлашты. Ошо ваҡыт Емеш ҡапыл хатты хәтерләне. Ҡабаланып кеҫәһенән алды, күҙенә яп-яҡын килтереп ҡарау менән: «Яратам!..» тигән оло бер һүҙҙе күрҙе. Емештең башы әйләнеп, күҙ алдары ҡараңғыланып китте. Ул, күҙҙәрен йома биреп, был ғәжәп һүҙҙең ҡөҙрәтле моңон, үҙ йөрәгенең шул моң ыңғайына нисек тулҡыныуын тыңлай-тыңлай, әкрен генә тирбәлеп торҙо. Унан, бер аҙ тынысланғас, йөрәгенең сабырһыҙ ярһыуы бер аҙ баҫылғас, хатты артабан уҡыны: «Емеш, һине мин шашып, өҙөлөп яратам. Һине, яңғыҙыңды ғына яратам... Бөтә ғүмерем буйына яратасаҡмын... Хатта, хатта... Һине бүтән күрә алмаһам да... Һин хатта мине яратмаһаң да...» Хатты аҙағына хәтле уҡырға ҡыҙҙың йәнә хәле етмәне. Тағы йөрәге шатлыҡтан ярһып тулап типте, тағы башы әйләнде, йөрәгендә уянған һөйөү хисенең тылсымлы моңо ыңғайына тағы яй ғына тирбәлеп, ойоп торҙо. Үҙенең йөрәк түрендәге нескә хистәргә төшөнөргә, яңы, ят бөгөнгө хәлен тейешенсә аңларға, баһаларға тырышты.

«Яратам...» Ниңә һуң әле был ябай ғына һүҙ уны бөгөн был хәтле ярһыта? Байрасҡа, Емешкә хәтле лә меңмең ҡат әйтелгән ғәҙәти һүҙ... Ни өсөн һуң ул тик бөгөн генә Байрас менән уның йөрәгендә генә тыуған кеүек яңғырай?.. Бәлки, ул бөгөн бер ҡасан да булмаған яңы, тылсымлы яңғырашын тапҡандыр? Эйе, эйе, быға са ул, моғайын, йәнһеҙ, йөрәкһеҙ буш һүҙ генә булғандыр... Әле генә, Емеш өсөн генә йөрәк тетрәтерлек тылсымлы көскә әйләнгәндер ул!

Ысынлап та, был һүҙҙе ул тәүтапҡыр ғына ишетмәй ҙәбаһа! Бер саҡ Моратша уҡ осона урап атҡанда был һүҙ Емештең асыуына ғына тейгәйне. Балалар йортонда ла бер шаян малай әйткәйне уға был һүҙҙе. Ул саҡта был һүҙ мәҙәк, көлкө генә тойолғайны... Ниңә һуң был һүҙ хәҙер, Байрас әйткәндә, уның йөрәген был хәтле елкендереп, күккә осороп алып китте икән?! Бына бит, әле лә уның йөрәге күкрәгенә һыймай талпына, ҡайғы-

һыҙға өҙөлөп һыҙлана, ситлектәге ҡош кеүек зарыға. Был ни ғәләмәт? Әллә мөхәббәт ошо буламы икән?..

Емеш был төндө йоҡоһоҙ уҙғарҙы. Ләкин арыманы. Иртәнсәк тамағына ашаманы, әммә асыҡманы. Әйләнә-тирәлә ни барын, ни юғын юнләп күрмәне, хатта үҙенә төбәп әйтелгән һүҙҙәрҙең дә күбеһен ишетмәне. Әйтерһең, ниндәйҙер сихри бер арбау тәьҫиренән ҡотола алмай йөҙәне. Ул арала китер саҡ та етте. Иштуған артелдең иң сабан атын — көрән бейәне егеп килде.

Башҡа ваҡытта булһа, Емеш: «Эй, юл йән көйҙөргөс була икән! — тип уйлар ине. — Уға ултырғансы, йәйәү барғаның яҡшы түгелме?!» Ләкин хәҙер ул быны күрмәне лә, ҡалаға үҙен ниндәй ат алып барыуына иғтибар ҙа итмәне. Хәҙер уның өсөн Байрас менән айырылышыу һағышынан башҡа бер нәмәнең дә әһәмиәте юҡ ине. Хатта уны ҡалаға уҡырға китеү ҙә ҡыуандырмай ине шикелле инде...

Артель председателе Хаммат ағай, әлбиттә, яҡшыраҡ ат бирмәксе булғайны. Әммә Иштуған алманы.

— Уттай эш ваҡытында көрән бейәне биләү ҙә уңайһыҙ әле. Яңғыҙым булһам, йәйәү генә китер инем,— тине.

Көн һаман томһалана, шәмәрә барҙы. Ҡалын болоттар ҡатлауы түбә өҫтөндә хәрәкәтһеҙ аҫылынып торҙо. Күрәһең, оҙаҡ яуырға йыйына ине был ямғыр. Ә бит кисә кис кенә ниндәй аяҙ, йылы ине. Ҡандай тиҙ үҙгәреүсән был донъя! Емеш бошоноп ҡына юлға әҙерләнде. Бына уны оҙатырға еҙнәһе менән Бибеш апаһы, Таиба ҡоҙағыйы ла килеп етте. Тап теге йылдағы кеүек, ҡоҙағыйы Емешкә бер тоҡсай күстәнәс алып килгәйне. Ҡорот, ҡаҡ, ҡыҙыл эремсек, бауырһаҡ... Уларҙан да тәмле, уларҙан да ҡәҙерле тағы ниндәй күстәнәс була?

Үҙенең шалҡан кеүек аҡ тығыҙ беләктәре, мейес кеүек дәү, көслө кәүҙәһе, асыҡ, яҡты ҡарашлы йөҙө менән элек кескәй Емеште таң ҡалдыра торған Таиба әбей хәҙер уға бик ҡарт, хәлһеҙ, гәҙәти бер ҡарсыҡ булып күренде. Уның ҡасандыр Емешкә себен кеүек күренгән эйәк осондағы йөнлө миңе, күк күгәүен хәтле булып, ҡарт, арыған йөҙөнә ҡайғылы моңһоулыҡ өҫтәп тора һымаҡ. Ҡоҙағыйы был юлы Емешкә һүҙгә лә һаран ғына күренде. Ул Емештең арҡаһынан йомшаҡ ҡына ҡағып:

— Үәт, ҡоҙаса, һин дә Ырымбурҙы күрәһең... Минең Закирем дә, мәрхүм, Ырымбур тиһәң, йәнен бирер ине... Үҙ ауылынан артыҡ күреп яратыр ине ҡолонсағым шул

ҡаланы... — тип бер-ике һүҙ әйтте лә тынды. Уның ҡарауы, Бибеш апаһы бик һүҙсән, хатта төртмә телле булды бөгөн.

Әйләнгән һайын Емешкә урынһыҙ һорауҙар биреп йөҙәтте. Ә ҡыҙҙың илағыһы ғына килә. Шатлыҡтан, моңһоулыҡтан, тормоштоң көс еткеһеҙ тулылығынан, тослоғонан үкһеп-үкһеп илағыһы килә... Үҙенең әле нығынып етмәгән нәфис күкрәгенә төрлө яҡлап шул хәтле рәхимһеҙ, талапсан баҫымсаҡ яһаған, моңайтҡан, ҡайғыртҡан бөтә нәмәнән туйғансы илап ҡотолорға ине уға...

— Уҡыйым тигән булаһың инде һин дә?.. — тип әллә ниндәй ят тауыш менән хихылдап көлә Бибеш. — Атабабаң бисер булмағанды — һин булырһың әле! — Емеш тә ахыр юғалып ҡалмаҫҡа, көсһөҙ, хәлһеҙ күренмәҫкә тырышты.

— Әйе, апай, уҡырға булдым. Тик бисер булмайым. Ә Иштуған ағайым кеүек уҡытыусы булам.— Шунан Бибеш, күрәһең, тағы ла төрткөслөрәк һүҙ әйтеп ҡалырға ашыҡты. Тағы ла ҡысҡырыбыраҡ көлөп:

— Һинән, томһайғандан, ниндәй мөғәллимә сыҡһын? Ҡит, әҙәм көлдөрөп, бушты һөйләп торма, исмаһам, — тине.

Емешкә былай ҙа ҡыйын ине. Апаһының был әсе һүҙенән һуң ул хатта илап ебәрә яҙҙы. Тик иламаны. Сөнки уны тирәләп, тап теге ваҡыттағы шикелле, оҙатырға килгән дуҫтары ҡарап тора ине. Моратша, Шәүрә, Сәмигә... Бөтәһе лә аптырашып ҡалған һымаҡ. Етмәһә, Байрас. Емеш ҡыймай ғына уның яғына күҙ ташланы. Байрас аптырап һәм ҡаушап бер ни әйтергә лә, уның янына килергә лә ҡыймай юғалып тора ине. Емештең үҙендә лә ынтылыу ҙа, ҡаушау ҙа етерлек. Китеү ҡыуаныһын, тыуған ерҙән, һөйгән дуҫтарҙан айырылышыу моңһоулығын күтәреү ҙә бик үк еңел түгел икән. Айырылышыу, бығаса үҙеңдең бөтә рухи донъяңды тыуҙырған, күтәрмәләгән бөтә нәмәне ташлап китеү... Ә алда алыҫ, оҙон юл, ят, сит, әммә ҡотолғоһоҙ үҙенә тартыусан яңы тормош ята... Ниндәй генә хәлдәр осрамаҫ тиһең ул юлда... Үҙһүҙле, ныҡыш булһа ла, кескәй ҡыҙ Емеш ни генә уйлай алһын да, ни әйтә алһын был хаҡта. Күпте күргән, күпте белгән өлкәндәр ҙә, әйтәйек, Емеш тәрән хөрмәт иткән шул уҡ Таиба әбей ҙә, алда ни булырын әйтә алырмы ни? Юлсыларға хәйерле юл теләүҙән башҡа сара юҡ бит инде...

Емеш тойғолар һәм уйҙар менән тулы ҡарашын уңғаһулға ташлап һүҙһеҙ генә хушлашты ла бесән тултырылған арбаға менеп ултырҙы.

— На, хайуан! — тип, күңелле ҡысҡырып, дилбегә ҡаҡты Иштуған. Күҙен йомоп, рәхәт ойоп торған көрән бейә теләр-теләмәҫ кенә урынынан ҡуҙғалды. Оҙон күкрәкле урман арбаһы тая-ҡыйшая Емеште ишек алдынан алып сығып китте. Оҙатыусылар өйкөлөшөп урамға эйәреп сыҡтылар ҙа, юлсылар күҙҙән юғалғансы, өнһөҙ-һүҙһеҙ ҡарап торҙолар.

## XI

Сентябрь айының ҡырыҫ бер көнө ине был. Ер ҙә, күк тә берҙәй үк һоро сәкмән бөркәнгән, өҙлөкһөҙ һибәләп быҫҡаҡ ямғыр яуа. Юлдың иҙелмә балсығы шыйылдап, тәгәрмәстәргә уралып, сат йәбешеп ята, әйтерһең, тыуған тупраҡ тәүбашлап оло юлға, етмәһә, ҡалаға табан юлға сығырға баҙнат иткән үҙһүҙле ҡыҙын ебәрмәй тотоп ҡалырға теләп ҡырталаша.

Нисек кенә булмаһын, бер урында тапанып тороуҙан, атлап булһа ла барыу яҡшы икән дәбаһа. Бына бит, бөтәһе лә әкренләп артҡа ҡала: иң элек ауыл артынан уҡ башланып киткән иген баҫыуҙары, һары ҡамылдар, туңға һөрөлгән ерҙәр, кипһен өсөн ҡырҡып һабағына ҡабат кейҙереп ҡуйылған табаҡ башлы көнбағыштар, суҡтарын һалындырып, бошонҡо тынып ҡалған ҡайындар артта тороп ҡалды. Сағылтау һыртына менгәс, аҫта, бик алыҫта, йәшел хәтфә еләнгә баҫылған уҡалы таҫма шикелле кәкерсәкләнеп ятҡан Оло Эйек йылғаһы үҙенең бөтә матурлығы, мөһабәтлеге менән Емештең күҙ алдынан һуңғы тапҡыр йымылдап юғалды. Улар тауҙы артылып киттеләр.

«Ҡалды... Йәмле Оло Эйек буйҙары ла ҡалды...» — тип һыҙланып типте Емештең йөрәге. Ә көрән бейә тау түбәнгә баш бирмәй саптырып төшөп китте. Тояҡтарҙан, тәгәрмәстәрҙән сәсрәгән ҡуйы мәте, борсаҡ кеүек тыпылдап, юлсылар өҫтөнә яуҙы.

— Сабан аттың һөнәре шул инде уның, үргә табан тартмай, түбәнгә табан һарҡыу тотмай, — тип һуҡранды Иштуған. Емеш, битенә сәсрәгән мәтеләрҙе лә тоймағандай, тауыш-тынһыҙ бара бирҙе. Уйҙары үтә тарҡау ине шул Емештең. Нисек шулай булмаһын. Донъя-

һы уның, кескәй ҡыҙҙың, өҫтөнә әленән-әле яңы һынау-ҙар поҙарып ҡына тора бит. Аптырарһың, әллә ул Емеш-тең түҙемлеген ҡат-ҡат һынамаҡсы, әллә үҙенең яҡшы-ллы яҡтары әҙәм балаһына ҡалай йоғонто яһауын бар-лампаҡсы? Ҡалай ғына булмаһын, Емеш шат. Яҡшыға-мы, иманғамы, яҙмыштың был арала үҙенә ҡарата ар-тык иғтибарлы булып китеүе өсөн дә, бөтә булған хикмәтле яҡтарын уның аша һынау үткәргәне өсөн дә, бөтәһе өсөн дә шат. Һынаһын, Емеш барыбер сер бир-мәҫ! Әйҙә, хикмәтле оҙон юлдар уралтып-уралтып алыҫ-тарға, тауҙар, урмандар артына ла алып китһен, ул барыбер шат. Тик уның тынғыһыҙ күңелен бер ерҙә та-пандырып ялҡытмаһын, яңынан-яңы, матурҙан-матур ерҙәргә алып барып сығарһын, һәйбәттән-һәйбәт илдәр, матур-матур кешеләр күрһәтһен. Емеш барыбер күреп тә, белеп тә ялҡмаҫ. Уның яҡтыға, яҡшыға булған ҡан-мас ынтылышы бөтәһен дә һыйҙырыр, тынғыһыҙ йөрәге бөтәһенән дә йәшәү уты татыр.

Ямғыр һаман көслөрәк һибәләй. Түбә өҫтөндә һоро болоттар ҡатламы һаман ҡуйыра. Көрән бейә атлар-атламаҫ ҡына ойоп бара. Иштуғандың әленән-әле:

— На, хайуан! — тип ҡеүәтләүен бар тип тә белмәй. Әйтерһең дә, ул бер кире әҙәм: «Бөтмәҫ һеҙҙең эшегеҙ. Ҡабаландың ни ҙә, ҡабаланманың ни?.. Барып еттең ни ҙә, етмәнең ни? — тип үҙенсә фәлсәфә һатып: — Теләй-һең икән, ошо йөрөшөмә күн дә ултыр, күнмәйһең икән, ултырма», — тип ҡарышып бара бирә. Ә Емештең етәһе ерго тиҙерәк, йәһәтерәк еткеһе килә. Ана бит, алда ла, янда ла ҡара урмандар, береһенә икенсеһе өҫтәлгән күк тауҙар күренә. Уға бит шул урмандарҙы, тауҙарҙы йәһә-терәк үтергә, барған һайын офоҡтоң киңәйеүен, донъя-ның икһеҙ-сикһеҙгә әйләнеүен күреп ҡыуанырға кәрәк. Их был көрән бейәне... Бер ни аңларға ла, белергә лә теләмәй шул...

Емеш, тилмереп ғәмһеҙ атҡа ҡарай: «Эй, барыр юлың гел-гел түбәнгә, һарҡыуға табан ғына булһа ине. Һә тигәнсе барыр ҙа етер инең. Ҡалай рәхәт булыр ине. Тик ул һарҡыу ҡайҙа алып барып төшөрөр ине икән һуң? Соҡорға? Икһеҙ-сикһеҙ тәрән соҡорға? Унан бер ҡасан да ҡабат сығып булмаҫ ине. Бигерәк тә беҙҙең көрән бейә менән. Юҡ, юҡ, улай кәрәкмәй. Иң яҡшыһы — ке-шенең ҡайһы яҡҡа китергә теләһә, ер шул яҡҡа ауышып, һарҡыулапып ҡына торһон ине. Ул саҡта бөтә кеше лә,

яҡшы атлыһы ла, насар атлыһы ла берҙәй елдерер ҙә йөрөр ине. Ҡалай һәйбәт булыр ине!..» — тип ҡасандыр атаһы менән икәүләп Яҡуп ауылына китеп барған саҡта уйлап-уйлап та осона-башына сыға алмаған бер уйын иҫенә төшөрә. Унда ла ошо көрән бейәне еккәйнеләр, шикелле... Күрәһең, Емештең юл бәхете ошонандыр.

Бер уйлаһаң, ниңә бошона һуң әле Емеш? Яйлап булһа ла китеп баралар ҙабаһа! Бына бит яңынан-яңы сит, ят ерҙәр һаман артта ҡала бара. Оло Эйек буйҙары ла әллә ҡайҙа, бик алыҫта, күк тауҙар артында, тороп ҡалды. Ҡәкерсәк-бөкөрсәк батҡаҡ урам уртаһында бик дәү матур сиркәүе булған бер нисә ҙур рус ауылын, һирәк-һаяҡ ҡына лапаҡ өйҙәрҙән торған башҡорт ауылдарын күреп үттеләр. Ҡөплө урманына килеп ингәс, юл тағы ла тайғаҡ, һикәлтәле булып китте. Баш осонда һаман шул бер төҫлө һөмөрө ҡойолған ҡарағайҙар, йөҙ йәшәр ҡара имәндәр аҫылынып торҙо. Емеш тә уларға ятһынып, шикләнеп ҡараны. Был һиңкелдәткес урман юлын уҙғансы ул бер ни уйлай алманы, хатта юл өҫтөнә эйелеп, урманды томһалатҡан ҡарт имәндәрҙе, зифа ҡарағайҙарҙы яратманы ла, һоҡланманы ла. Был урманға бәйләнешле үҙе белгән көрәш тарихтәре лә, атаһының, Сәлимә еңгәһенең эҙҙәре тураһындағы элекке уйҙары ла биләй алманы уның иғтибарын. Эйе, көҙ көнө урман юлынан да күңелһеҙ, ауыр юл юҡ икән шул... Шулай ҙа, бая әйткәнсә, атлап булһа ла барыу барыу икән ул. Көрән бейә юлдың әле бер, әле икенсе яғына шыуып китеп бәреләһуғыла барған оҙон арбаны тарта-тарта, урманлы тәрән уяҙҙан асыҡ һырт өҫтөнә алып сыҡты. Алда ялан ерҙәр, бойҙай түшәлгән турпыша шикелле ҡыҙғылт һары Юшатыр далаһы йәйрәп ята ине. Өҫтән баҫып торған һоро болоттар ҙа, юлды бөркәгән ҡара урмандар ҙа ҡалды. Көн яҡты, күк бейек һымаҡ ине был яҡта. Хатта тауға яҡынлашҡан ҡояш та ғәҙәттәгенән ҙурыраҡ, яҡтыраҡ күренде Емешкә. «Ниндәй иркенлек! Ниндәй рәхәтлек!..» — тип талпынды хәҙер уның йөрәге. Тыуған ерҙе, яҡын дуҫтарҙы ҡалдырып китеү моңһоулығы ла таралып киткән һымаҡ булды. Күкрәгенә ниндәйҙер билдәһеҙ ҡанатлы ҡыуаныс тулды. Юҡ, билдәһеҙ тип әйтеү дөрөҫ булмаҫ. Емеш донъяның икһеҙ-сикһеҙ киңлеге тыуҙырған бындай ҡанатлы ҡыуанысты ғүмерендә икенсе тапҡыр кисерә шикелле. Эйе, тәүгеһе күптән булғайны уның. Емеш бәләкәс ине әле ул саҡта. Йәнеш тә ҙур

түгел ине. Бер яҙҙы аталары ни өсөндөр уларҙы урман эсендәге алыҫ бер туғанына, Ишбикә инәләренә алып барып ҡалдырып китте. «Тиҙҙән килеп алырмын», — тине. Әммә бик оҙаҡ көттөрҙө.

Әйләнә-тирәһен тотош ҡалын ҡара урманлы бейек тауҙар ҡаплаған кескәй генә бер ауыл ине был. Ирмән буйылы тип атайҙар ине, шикелле. Тауыҡ кетәгендәй ваҡ ына өйҙәр, өҫтәренә урман ябырылып тороуға ҡарамаҫтан, түбәһе ябыуһыҙ ҡыйыҡтар... Ир-ат тигәнең бында төптө күренмәй. Улар, ҡыуғын өсөн Ырымбур байҙарына бүрәнә ҡырҡып, күмер яндырып, ҡарама бөгөп, тыныш-йәйен урмандан ҡайтмай. Бисә-сәсә киндер һуғып, быйма, кейеҙ баҫып, тары төйөп, ҡымыҙ яһап өйҙә йөрөй. Бала-сағa емеш-еләк йыйып, кәзә-һарыҡ, быҙау көтөп, урман, тау-таш араһында йөрөй. Ҡайһы саҡта Емеш менән Йәнеш тә улар менән бергә ил ҡыҙырып ҡайта ине. Шундай ҡыҙырыштарҙың береһе әле булһа Емештең хәтерендә һаҡлана. Был көндө улар, ҡыҙҙар менән тау йыуаһы эҙләп йөрөй торғас, Емешкә түбәһе күккә олғашҡан кеүек күренгән уғата дәү бер тауға барып сыҡтылар.

— Оҫҡонло тауы ошо ул. Уның түбәһендә, ҡая таштар араһында, оҫҡонло тигән тау йыуаһы үҫә. Ут кеүек эсе. Ауыҙҙы өтөп ала, — тип аңлатты ҡыҙҙар уларға. — Шулай әсе булһа ла, беҙ уны ауыҙ тултырып ашай алабыҙ, — тип маҡтандылар. — Ә һеҙ уны күргәнегеҙ ҙә юҡ. Һеҙ һаҫыҡ күл йыуаһын ғына ашайһығыҙ, — тип мыҫҡылланылар. Унан кемуҙарҙан ҡыр кәзәләре шикелле мырын-мырын һикерешеп, тауға менеп тә киттеләр. Тауының ҙурлығынан да, бейеклегенән дә ҡурҡып, Емештең өнө быуылды. Аяҡ быуындарының хәле бөттө. Аҙым һайын тайып, сөрсөләп, көскә тауға үрмәләне. Ләкин яртыһына барып еткәс, башы әйләнеп, ҡарт ҡайынды ҡосаҡлап ергә ятты. Аҫҡа ҡараһа, ҡот осҡос упҡын, өҫкә ҡараһа, емерелеп төшөрҙәй булып аҫылынып торған яман текә ҡая уның тамам ҡотон алды. Емеш үргә лә китә алмай, түбән дә төшә алмай ине хәҙер. «Үләм!.. Йығылып үләм!..» — тип, күҙҙәрен сырт йомоп ятты ул. Йәнеш уның ҡулынан тартты:

— Йә, һылыу, тор. Ана ҡыҙҙар ҡаяға менеп тә китте. Таш араһынан йыуа йыйып йөрөйҙәр. Ә һин ятып ҡалдың! Оят түгелме? Әйҙә инде!.. — тип ялынды. Емеш һаман ҡуҙғала алманы. Тик Йәнештең: — Бына ҡыҙҙар

көтмәй ҡайтып та китерҙәр. Икебеҙ аҙашып ҡалырбыҙ әле. Айыу ашар әле үҙебеҙҙе... — тип илай башлауы ғына уға ҡурҡыуҙы еңер көс бирҙе. Улар, тая-йығыла, ҡыҙҙар артынан киттеләр. Тауҙың төньяғы һөҙәгерәк ине. Төшөүе Емешкә ул хәтле хәтәр булманы.

Был тау ауылын Емеш һис тә үҙ итә алманы. Көндәрҙең иң оҙон ваҡыты булыуға ҡарамаҫтан, бында ҡояш бик һуң күренә, иртә бата ине. Әйтерһең, ҡояш бында, иренеп кенә яман ҡара тау артынан тороп, ауыл өҫтөнә арлы-бирле генә ҡарап ала ла, йәм тапмай, шунда уҡ, тағы тау артына төшөп, йоҡларға ята. Шуға күрә көндәр һәр саҡ ҡыҫҡа, ә төндәр икһеҙ-сикһеҙ оҙон һымаҡ була бында...

— Ҡайтҡым килә. Үҙебеҙҙең ауылды һағындым, — тип илай башланы бер саҡ Емеш. — Ниңә атайым килеп алмай икән беҙҙе?!

— Һағынып-һарғайып ауырыуға һабышырһың йә,— тине Ишбикә инәй бер көндө. — Йәйәүләп булһа ла һеҙҙе үҙем алып барып ҡайтмаһам, булмаҫ.

Ишбикә инәйҙәрҙең аты юҡ ине. Үҙе әйткәнсә, ул бер көндө иртүк, йәйәүләп, юлға сығырға йыйынды. Оҙон арыҡ кәүҙәһенә ҡолғаға элгән һымаҡ күренгән киң һары сатин күлдәк кейҙе, башына өр-яңы аҡ таҫтар ураны. Күлдәк өҫтөнән йәшел бикәсәп камзул, аяғына аҡ туланан сигеп эшләнгән сарыҡ кейеп, ҡулына йоморо башлы имән таяҡ тотоп алды. Унан ҡыҙҙарға тешһеҙ ауыҙы менән күңелле йылмайып ҡараны:

— Бына, һеҙҙең өсөн нух заманынан бирле һандыҡ төбөндә ятҡан затлы әйберҙәремде кейҙем, балалар. Һәйбәтме?.. Йә, әйҙәгеҙ, бумала баштар, киттек!

Шунан бер-ике һыныҡ сөсө икмәк менән бер баш ҡорот һалынған кескәй генә тоҡсайҙы ҡултығына ҡыҫтырып, кәңгер-көңгөр баҫып, өйҙән сығып та китте. Ҡыуаныстарынан ни эшләргә, ни әйтергә белмәй торған Емеш менән Йәнеш яланаяҡ уның артынан йүгерҙе.

Юл башта гел тауҙар, урмандар араһынан барҙы. Һауа бында тап баяғы Көплө урманындағы шикелле еүеш, һалҡын, үләндәр ысыҡлы ине. Ҡыҙҙарҙың кескәй генә ялан аяҡтарынан юлдың еүеш мәтеһендә ике теҙем мәҙәк кенә эҙ ҡала бара. Юл ситендәге оҙон үлән ысығына бәрелеп, күлдәк итәктәре тубыҡтарына хәтле еүешләнә, Ишбикә инәйҙең сарығы ла ҡурпылдап һурыла,

тайын ыҙалата ине. Бына бер саҡ улар юлдың Ҡыҫыҡ тигән урынына килеп еттеләр. Һулдан киң тәрән Энәк йылғаһы йәйрәп ята, уңдан ҡырланып күккә һуҙылған ҡая тау. Ҡыҫыҡтан атлы кешеләр ҡара-ҡаршы килеп уҙа алмай. Берәһе уҙғанды икенсеһе алыҫта көтөп тора. Ә йәйәүлегә тотҡар юҡ. Атла ла атла. Шулай ҙа, был Ҡыҫыҡты уҙғанда, Емештең йөрәге тап Оҫҡонло тауына менгән саҡтағы кеүек ҡурҡынып ҡыҫылды. Ҡаялар уның өҫтөнә аяуһыҙ емерелеп төшөр кеүек тойолдо. Нисәлер тау, урман уның күңеленә шундай хафа һалыусан бит...

Ҡыҫыҡты уҙып, күпмелер барғас, Ишбикә инәй Емештәргә тәпәшерәк тауҙар ҡуйынында ятҡан ҙур, матур башҡорт ауылының көньяғындағы мәмерйәне күрһәтте.

— Был мәмерйә ерҙе үтәнән-үтә тишеп сыҡҡан тип һөйләй ине боронғолар! Әгәр ошо мәмерйәгә ҡолап төшһәң, ерҙең икенсе яғына бараһың да сығаһың, ти, — тип көткелдәп көлдө.

— Ерҙе үтә сыҡҡас, кеше ни эшләй икән?! Ырғытылған таш кеүек осоп тик йөрөймө икән, инәй? — тип төпсөндө Емеш. — Инәй, кеше ҡайҙа осоп барып етер ине икән?

— Ғаләм киң... Ә кеше унда бер осҡон ғына... Ҡалай осорға ла, ҡайҙа осоп барып етергә лә урын етерлектер унда, моғайын, — тип, тағы ғәмһеҙ генә көлөп алды Ишбикә инәй. — Тик бына унда ҡолап, ерҙең арғы яғына осоп сығырға теләүселәр генә бер ҙә күренмәй. Күрәһең, бер кемдең дә баҙнаты етмәй...

«Минең дә баҙнатым етмәҫ ине... — тип ысын күңелдән бошоноп ҡуйҙы Емеш. — Әй-й, ерҙең теге яғында ни барын ҡалай ҙа белгем килә бит әле!..»

Йәйге көндөң үтә ҡыҙыу мәле ине. Юлсылар, мәмерйәне ҡарағас, юл ситенә ултырып әҙерәк тамаҡ ялғап алғас, бик оҙаҡ яланғас арҡа буйлап барҙылар. Бында, арҡа өҫтөндә, һауа үтә ҡоро, тирә-яҡта ҡыҙған әрем, кипкән мәтрүшкә еҫтәре аңҡып тора. Ҡояш түбәне аяуһыҙ ҡыҙҙыра. Ялан табанды кипкән ҡоро үлән төпһәләре рәхимһеҙ сәнскеләй. Сәнскәк үләндәргә яңылыш баҫып ҡуйһаң, табанға тулып сүп ҡаҙала... Емеш менән Йәнеш, юл өҫтөнә ултырып, йыш-йыш аяҡ табандарын сүптәрҙән таҙартып алалар. Бер тапҡыр хатта Йәнештең табанына еҙәй энәһе лә ҡаҙалып ҡуйҙы. Бында яла-

наяҡ йөрөгән һәр бер бала еҙәй инәһе ҡаҙалыуҙың нимә икәнен яҡшы белә инде. Ҡорос энә кеүек ҡаты, етмәһә, ҡытыршы була бит ул! Аяҡҡа инһә, сыҡмай йөҙәтә. Уны инде үҙең генә алып ташлай алмайһың.

— Ниндәй таш бәғере юлға еҙәй ағасы ташлап киткән, йәлсемәгер! — тип һуҡрана-һуҡрана Ишбикә инәй еҙәй инәһен Йәнештең табанынан булавка менән соҡоп сығарып алды. Унан ҡаны һаман туктамай бызырлап торған урынға бер ус тупраҡ һипте лә: — Йә, ямауы үҙеңдә әле. Уңалыр. Бар, югер, — тине. Шунан Йәнеш, югермәһә лә, аҡһай-туҡһай атлап китте. Бер аҙҙан хатта аҡһауын да онотто, сөнки уларҙың алдына ғына буҙ турғай килеп төштө лә бик мәҙәк итеп юл буйлап юрмәләй башланы. Емеш менән Йәнеш, ана тотам, бына тотам тип, уның артынан эйәрҙеләр. Ә буҙ турғай, улар тотам тип ынтылған ғына саҡта, «пыр-р-р!» итеп осоп киткән булды ла тағы ергә төштө.

«Сип-сип!» — тигән булып, сәнсә ҡойроғон кәймелдәтеп, тағы юл буйлап юрмәләне. Ҡыҙҙар уның артынан тағы ҡыуҙы.

— Был тирәлә ояһы бар инде уның, мәхлүктең, — тип аңлатты Ишбикә инәй. — Шуға һеҙҙе уйнатып, албырғатып, ояһынан алыҫыраҡ илтеп ташламаҡ була ул, мәхлүк...

Шулай бик күп кенә барғас, буҙ турғай, Емештең тотам тип ынтылған ҡулы аҫтынан ғына «сип-сип!» тип сипылдап, һауаға, бик бейеккә осоп күтәрелде лә, үрлетүбәнле талпынып, кирегә осоп китте. Ҡабат юлға төшмәне. Тап шул саҡта Емештәр ҙә был оҙон арҡаның көньяҡ сигенә барып сыҡтылар. Аҫта, бик-бик алыҫта, иҫ киткес матур, икһеҙ-сикһеҙ иркен булып, Оло Эйек буйҙары йәйрәп ята ине. Емеш бөтәһен, хатта шаян буҙ турғайҙы ла онотоп, телһеҙ ҡатып торҙо. Ул тау ҡыуышынан ғәжәп матур тылсымлы батша һарайына барып сыҡҡан әкиәт батыры кеүек тойҙо үҙен. Уның бөтә йәнен-тәнен ниндәйҙер икһеҙ-сикһеҙ иркенлек, күтәренкелек, бөйөклөк тойғоһо солғап алды.

— Ҡалай яҡты һуң беҙҙең яҡтар, инәй! — тип ҡуйҙы ул, сикһеҙ ҡыуанып. — Күҙ сағыла хатта. Әллә, инәй, был яҡта ҡояш та бүтәнме икән?!

— Һай, ҡыҙым, бик тә йәмле шул беҙҙең Оло Эйек буйҙары! — тип Ишбикә инәй ҙә, ҡаш өҫтөнә ҡулын ҡуйып, бик оҙаҡ ҡарап, ләззәтләнеп торҙо. — Уҡалы,

тәңкәле йәшел хәтфә елән шикелле йымылдап ята шул... Эй-й... Минең ғүмеркәйҙәрем, ҡыҙым, ҡара урман төпкөйҙәрендә зарығып ҡына үтте шул... — тип уфтаныбп алды. Хатта ҡалтырауыҡлы үтә нәҙек ҡарт тауыш менән:

Урал ғына тип үк тә әйтәһегеҙ,
Уралығыҙ ҡыҙырым сауҡа икән.
Күрмәгәндә генә, һай, зауыҡ икән,
Күрҙениһәң, зауҡың да ҡайта икән,—

тип оҙон һуҙып йырлап та алды.

Ул да, күрәһең, ҡарт булһа ла, һаман үҙенең тыуыпүҫкән ерен, Оло Эйек буйын, һағына, ҡара урмандарға, ҡырыҫ тауҙарға һаман эйәләшә алмай ине...

* *
*

Бына әле лә Емеш, урмандар араһынан ялан яҡҡа, Юшатыр буйҙарына барып сыҡҡас, тап шул көндәге шикелле, иркенлек, киңлек тыуҙырған ҡанатлы ҡыуанысты тағы бер ҡат кисерҙе. Дөрөҫ, ҡылған баҫҡан Юшатыр далаһы, Оло Эйек буйҙары шикелле, Ишбикә инәй әйткәнсә, уҡалы, тәңкәле йәшел хәтфә елән кеүек йымылдап уҡ ятмай. Әммә иркенлектә уның иге-сиге юҡ.

«Бына ғәжәп, — тип аптырап уйланы Емеш хәҙер.— Ниңә дала киңлеге, күңелгә ҡанат ҡуйып, күккә осора? Ниңә тау, урман матурлығы ергә баҫа икән кешене?! Әллә был миңә генә шулай тойоламы икән? Шулайҙыр. Ҡояшлы иркен далаларҙы яратам шул мин. Урманды теге Ирмән ауылында, Оҫҡонло тауында йөрөгән саҡтарҙа уҡ яратмағайным... Моғайын, урманлы ерҙә тыуып-үҫкән кешегә, ялан яҡтар оҡшамайҙыр. Эйе, тыуған ерҙән дә матурыраҡ урын бармы ни донъяла!..»

— Көн кисләй. Тағы бер ун-ун биш саҡрым барабыҙ ҙа берәй ауылға инеп ҡунырбыҙ. Атты ял иттерербеҙ,— тип бүлдерә Иштуған һеңлеһенең уйын. — Юшатыр буйында, Мөлкәмән тауы аҫтында, бер матур ғына ауыл ята. Шунда барып йығылһаҡ...

Артта күҙҙән юғала барған Ташлыға, уның ҡояш нурҙары аҫтында көнбағыш сәскәһе шикелле һарғайып күренгән сиркәү көмбәҙҙәренә ҡарай-ҡарай, күңелендә уянған яңы тойғоларға төшөнөргә тырышып барған

Емеш ағаһының һүҙен ишетмәне. «Ташлы ла ҡалды... Бөтәһе лә ҡала бара... — тип уйланы. — Ниңәлер һәр ҡайһыһы йөрәккә моң һалып ҡала. Ҡалған һәр бер кеше, һәр бер урын яҡын да, йәлке лә һымаҡ. Хатта бынауы Ташлы ла».

Бына ҡояш бөтөнләй тауға ятты. Былай ҙа бер генә ҡыуаҡ та күренмәгән икһеҙ-сикһеҙ дала ҡояштың ҡыя нурҙары аҫтында тағы ла киңерәк, йәйенкерәк булып китте. Көрән бейә, тыныс ҡына бышҡырынып, һалмаҡлап атлауында булды.

— Харап ырамлы атлай ул,— тип хуплап ҡуйҙы уны Иштуған. — Ана, Мөлкәмән тауы ла күренә. Юшатырҙың анауы бөгөлөндә ятҡан ауылда беҙ туҡтайбыҙ...

Емеш һаман бер һүҙ ҙә өндәшмәне. Иштуған, уның иғтибарын яуларға тырышҡандай:

— Ана, тегенән, Юшатырҙың уң яғынан, Көйөргәҙе йылғаһы ағып төшә, — тип өҫтәне. — Ул да, Юшатыр шикелле бәләкәс кенә булһа ла, үтә балыҡлы. Кистән мурҙа һалып ҡуйһаң, таң атҡансы бер күнәк балыҡ тулған була. Юшатырҙың бағыр, бәрҙе балыҡтары, ҡом төрткөстәре, баштарын ҡомға төртөп, һыу төбөндә апасыҡ күренеп яталар. Теләйһең икән, әйҙә, ҡул менән, йәки мәскәүләп тот та ал. Көйөргәҙе буйы батша заманында Шотт тигән немец баяры ҡулында булған. Ул ошо киң далаларҙа меңәр-меңәр баш көтөү йөрөткән. Көйөргәҙелә, Туғыҙтимерҙә араҡы заводтары тотҡан. Халыҡтың азатлыҡ өсөн көрәшен аяуһыҙ баҫтырғаны өсөн, батша уға башҡорт еренән ике мең дисәтинә иң яҡшы ерҙе бүлеп биргән. Революция булғас, Шотт сит илгә ҡасып киткән. Хәҙер уның бөтә ере халыҡҡа ҡалды. Их, хәҙер был далаларҙы бергәләп, тотош һөрөп ташларға ла межаһыҙ, ямдарһыҙ иген диңгеҙенә әйләндерергә ине тиҙерәк... На, көрән бейә!

Улар ауылға ҡараңғы төшөүгә көскә барып еттеләр. Ялан срендә күренеп ятҡан ауыл да бик алыҫ була икән.

* *
*

Икенсе көндө таң атыуға улар тағы юлда булды. Кисәге быҫҡаҡ ямғырҙың был яҡта эҙе лә күренмәне. Көн салт аяҙ. Ҡояш, диңгеҙҙә ҡойонған аҡсарлаҡ кеүек, бөтә сафлығы менән балҡып тора. Юл ситендәге ҡурпы ҡыяҡтарында, күҙ йәшендәй мөлдөрәп, ысыҡ бөрсөктәре

ити. Диңгеҙ кеүек тулҡынып ятҡан аҡ ҡылғанлы икһеҙ-сикһеҙ далала бер генә ҡыуаҡ та, бер генә ағас та күренмәй. Ялан, ялан, ялан...

«Бына ҡалай була икән ул ялан яҡтары!.. — тип ғәжәпләнеп уйлана Емеш.— Ә мин Сабирҙең мине урман ағы тип, күмер, ҡайыр тип үсекләүенә үпкәләй инем. Былай булғас, уның өсөн Оло Эйек буйҙары ла урман яҡтары була икән шул! Ә беҙ Урал төпкөлөн урман яҡтары тибеҙ. Ҡарағай, ҡарағас үҫкән ҡара урманлы, таулы ерҙәр. Унда кешеләр ашлыҡ та, картуф та сәсмәй, күмер үртәп, тәртә, дуға бөгөп, арба, сана яһап көн күрә... Аҙна һайын иләк-силәк, тәртә-ҡамыт, көрәк, һәнәк тейәп баҙарға бара, биш-ун ҡаҙаҡ он, әсмүхә сәй, бер баш шәкәр һатып алып ҡайта. Йәки яҙҙан көҙгәсә ҡыуығында йөрөй: «Ас та түгел, туҡ та түгел, бер өйрәнгәс, үп тә түгел». Эйек буйҙары урман яғы халҡынан шулай тип көлә. Уларҙы дуҫтарса кәмһетеп, үҙҙәрен уларҙан бер аҙ өҫтөн һәм алдын итеп ҡарай. Ә баҡтиһәң, ысын ялан яҡтары өсөн Оло Эйек буйы ла шул уҡ урман яғы икән.

Ялан яғы... Ҡарасы, уның хатта еренең төҫө лә башҡаса. Аҡһыл һары. Ҡөл төҫлө. Оло Эйек буйында ер ҡара һағыҙ кеүек бит! Майланып, уҡмашып тора!..

Эй-й, әгәр балҡып торған аяҙ көн булмаһа, бик күңелһеҙ булыр был дала ерҙә лә».

Иштуған, Емештең уйын дөрөҫләгән һымаҡ, арбала ултырған ерҙән сыбығы менән юлға төртөп күрһәтә:

— Күрәһеңме, ер ниндәй? Ап-аҡ. Татырлы булғанға шулай ул. Бында мал ныҡ көрәйә. Бойҙай яҡшы үҫә. Был яҡтың халҡы бай, игенле. Беҙҙең яҡҡа ҡарағанда бында халыҡ уҡығаныраҡ та, уңғаныраҡ та. Ҡалаға яҡын булғанғамы икән?

Инде Емештең иғтибарын алыҫта, ҡаҡ түбәләс башында үрмәксе кеүек тырпайып торған нәмә үҙенә тарта.

— Ағай, анау әүернә һымаҡ нәмә нимәкәй икән ул?

— Ел тирмәне, — тип аңлата Иштуған. — Алда, бара биргәс, уларҙы яҡындан да күрерһең әле. Бында ауыл һайын тип әйтерлек ел тирмәне бар. Яланда, тау башында ел шәп була бит. Бына шул елде он тартырға эшкә ҡушҡандар.

— Ел тирмәне, — тип ҡабатлап ҡуя Емеш. — Мин уны әкиәттә генә була икән тиһәм... Беҙҙең яҡта тирмән һыу менән йәки пар менән эшләй ҙәһә!..

— Беҙҙә бит мул һыулы ағын йылғалар күп, шуға ел тирмәненең кәрәге юҡ.

Улар йәнә тынып ҡалдылар. Ҡөрән бейә, мышнай-бышҡыра, һаман шулай ашыҡмай ғына атлауын белде. Иштуған да, күрәһең, уны ҡыуалап ялҡты, дилбегәне бер ыңғайға һалып, әкрен генә һыҙғыра-мөңрәй, тик кенә барҙы.

«Ҡөрән бейәнең атлауы ырамлы, тигән була ағайым, — тип инде бошоноп уйланды Емеш. — Ҡайҙан ырамлы булһын? Бер аяғын алға баҫһа, икенсеһен артҡа баҫа һымаҡ. Эй-й, был икһеҙ-сикһеҙ ялан яҡтарын беҙ нисек уҙып бөтөрбөҙ ҙә, ҡасан барып етербеҙ?» Унан тағы уйы менән Илсеғол яҡтарына ҡайтып китте. Эйе, был бөтә ере бер төҫлө, аҡ ҡылған баҫҡан ҡарт далаларға күпме ҡарап барһаң да, яңылыҡ та, күңелде ауларҙай берәй ҡыҙыҡлы нәмә лә табырға мөмкин түгел ине шул. Бында юлды ҡыҫҡартыр өсөн берҙән-бер сара — уй. Юлдың үҙенән дә оҙон, үҙенән дә яңылыҡҡа бай уй ине. Емеш тә шуға уйҙарына эйәреп, тағы тыуған яҡтарға ҡайтып китте...

Ҡиң тигеҙ дала юлы уларҙы һаман-һаман яҡтығараҡ, иркенгәрәк етәкләне. Алда тағы ла киңерәк, ҡояшлыраҡ далалар, ҡырҙар, төптө таныш булмаған ауылдар көтәлер Емеште. Ләкин ни өсөндөр, улар ҡыҙҙы хәҙер тәү юл сыҡҡандағы кеүек үк ҡурҡытмай, ә ярһыта, тулҡынландыра ғына. Барған һайын күңелгә ҡанат үҫтерә, осорға саҡыра. Өмөтлө, яҡты, ләкин әлегә бик үк асыҡ булмаған ҡыуаныс биләп ала бара Емештең күңелен. Дөрөҫ, бала сағының айырылмаҫ юлдашы булған моңһоу уйҙар ҙа әле бик тиҙ генә уны ҡалдырып китергә ашыҡмайҙар. Бына әле бөгөн дә, иртәнге һалҡындан ҡурылып бөгөлгән килеш, бик оҙаҡ шундай моңһоу уйҙар тәьҫирендә барҙы. Үгәйһетелгән моңһоу бала саҡ та, күп яғы менән Емештең йөрәгендә үҙ булып китә алмаған балалар йорто ла артта ҡалды. Емеш инде ул йылдарға бер ҡасан да әйләнеп ҡайтмаҫ. Хатта уйы менән дә ҡайтмаҫҡа теләр, бәлки? Әле лә Емеш ул йылдар хаҡында уйларға теләмәне. Ниңә күңел яраларына ҡат-ҡат тоҙ һибергә? Бер ҡасан да ҡабатланмаҫ өсөн моңһоу күк томан эсенә инеп юғалған бит инде ул йылдар. Әйҙә, шунда тыныс ҡына ята бирһендәр. Ауыр булһа ла, үтә һағышлы булһа ла, Емеш ул йылдарҙы бер ҡасан

ла ауыр итеп иçкә алмаç. Ғүмеренең иң гүзәл сәхифәләре итеп мәңге һаҡлар йөрәк төрендә. Уның насар яҡтарын онотторға тырышыр, һәйбәт яҡтарын һәр саҡ үҙе менән бергә алып йөрөр. Ә бөгөн? Бөгөн Емеш уйы менән Илсеғол яҡтарына ҡайтып китһә лә, бала сағы хаҡында ла, балалар йортонан ҡайтҡас, ауылда уҙғарған бер аҙна ваҡыт хаҡында ла түгел, ә күҙ асып йомған арала ғына булып үткән сихри бер кис хаҡында, шул кистең сихри йөрәге Байрас хаҡында ғына зарығып уйланды.

Иштуғандың хәтеренә ошо юлдан атаһы менән икәүләп йәйәү үткән бер көн килеп төштө. Ҡара көҙ ине. Мул итеп ҡар яуып иреткән дә, ҡаты туңдырған. Бөтә дала боҙ сахраһына әйләнгән. Дағаһыҙ ат та, тимерһеҙ сана ла йөрөй алмай. Тимерле сана менән дағалы ат бит инде күбеһенсә байҙарҙа, купецтәрҙә генә. Ә байҙар йәйәүле ярлыны ултыртамы ни?! Шулай итеп, уларҙың, юлда берәйһе ултыртып алыр әле, тигән өмөт менән йыуаныуҙары бушҡа ғына булды. Уларға Илсеғолға хәтле тая-йығыла нисәмә көн йәйәүләргә тура килде. Был йылда улар Оло Эйек, Һаҡмар буйлап ҡыуғын ҡыуып барҙылар ҙа Ырымбурҙа таҡта ярыу заводында эшләп ҡалдылар. Бына шунан көҙ еткәс кенә өйгә ҡайтырға сыҡтылар. Бик күптән булған хәл инде был. Иштуған ул саҡта малай ғына ине. Беренсе донъя һуғышының тәүге йылы ине шикелле?.. Эйе, Иштуғандың атаһы мәрхүм, шул юлда һыуыҡ тейҙереп, үпкәһен шештереп ҡайтҡанға, бик оҙаҡ һалдатҡа ярамай торҙо. Шуның өсөн Сәрбиямал уны:

— Сихут. Эшкинмәгән. Һалдатҡа ла алмайҙар бит һине, эшкинмәгәнде! — тип битәрләй ине.

Шулай, Иштуған ҡасандыр был юлдан тәүтапҡыр атаһы менән бергәләп йәйәү уҙғайны. Унан Айһылыу менән икәүләп Ҡаширин отряде составында, ат уйнатып, ҡылыс ялтыратып үтте ул был юлды... Әле инде бына Емеш менән... Ҡыҙыҡ, ҡалай ғына үтмәй кеше бер үк юлдан? Әле күпме үтәһе барҙыр... Эйе, юл бит йөрөр өсөн һалынған. Тағы бик күп йөрөргә, үтергә яҙһын. Тик яман уй, ҡара теләк менән үтергә генә яҙмаһын. Ҡалғандары ла, баштағы юлдар кеүек үк, ауыр булһа ла яҡты булһын. Саф йөрәк, изге теләк менән үтелгән юлдар ғына гүмерлеккә хәтерҙә һаҡланырға хаҡлы бит ул.

Ысынлап та, уйҙар оҙон юлды ҡыҫҡартыусы ғәжәп сара икән. Бына инде Оло Эйек, Юшатыр буйҙары ғына түгел, алыҫта, бик алыҫта, күкһел томан эсендә, күгәреп ятҡан Яйыҡ, Һаҡмар туғайҙары ла күптән артта ҡалды. Һары ҡом баҫҡан икһеҙ-сикһеҙ дала — Ырымбур далаһы башланды. Бында күҙгә салынырлыҡ бер генә нөктә лә юҡ. Көҙгө дала айырата бер төрлө һәм буш икән. Бөтә әйләнә аҡ ҡылған баҫҡан икһеҙ-сикһеҙ тигеҙлектән тора. Алыҫҡа күҙ төбәп оҙаҡ ҡарап торһаң, дала ваҡ тулҡындар менән сыбарланған диңгеҙ өҫтөн хәтерләтә.

— Ул монар, — тип аңлата Иштуған. — Далала аҙашҡан кеше шул монарҙы һыу тип эҙләп ҡыуа-ҡыуа сарсап, хәлдән тайып үлә торған булған, ти, борон.

Ҡояш, ысынлап та, далала көҙ булыуына ла ҡарамаҫтан, үтә сағыу ҙа, айырата дәү ҙә күренә Емешкә. Һары саң менән ҡапланған тип-тигеҙ киң юл ат тояғы аҫтында сыңлап ята. Иштуған, күрәһең, ҡалаға яҡынлашҡанға күңеле күтәрелептер, һөйләнсегерәк булып китте. Әле бер, әле икенсе нәмәгә Емештең иғтибарын йүнәлтте.

Ырымбурға яҡынайған һайын юлсылар күбәйә барҙы. Арбалы, кырандаслы кешеләр менән бөтә юл тулған. Әммә иң күп үткәне бында ҙур, бейек тәгәрмәсле, бер тәртәле арба. Уға дуғаһыҙ-ниһеҙ генә бик шәп пар ат егеп ҡуйылған. Аттар юртҡан ыңғайға арбаның тимер ҡоршаулы көслө тәгәрмәстәре өҙлөкһөҙ шыңғырҙап, үҙенә хас бер көйгә таҡмаҡлап бара һымаҡ. Емешкә хатта был арбала ултырып барған кешеләр ҙә башҡаларға ҡарағанда көслөрәк тә, матурыраҡ та күренде. Бейек папаханы ҡырын һалып, ҡыҙыл косоворотканың иҙеүен ысҡындырып ебәреп, көлөшә-шаулаша уҙа ине улар. Папаха аҫтынан сығып торған ҡап-ҡара оҙон сәстәре лә, ата өйрәк ҡойроғо шикелле итеп, кәкерәйтеп бороп ебәргән терпе мыйыҡтары ла үҙҙәренә бик килешеп тора ине.

— Арба түгел, ә бричка, — тип аңлатты Иштуған. — Был яҡта казачийҙәр күберәк бричка егәләр. Ҡалаға ҡарбуз-ҡауын ташыр өсөн ул бик уңайлы. Уға алтмыш-етмеш бот әйбер һалып була.

— Ағай,— тип Емеш ҡапыл Иштуғандың һүҙен бүлде, — ҡара әле!.. — тип аптырап, юл өҫтөнә күрһәтте.

Унда, үтә йомшаҡ һары саң өҫтөндә, сынаяҡ аҫтынан да ҙур, түп-түңәрәк эҙҙәр ята. Ниндәйҙер ят хайуан,

оҙон-оҙон баҫып, һалпаңлап үткән инде бынан. Ҡалай шыма, матур ғына эҙҙәр һалып ҡалдырған! Әллә берәйһе юрый шулай саҡ ҡына кәмей башлаған ай һүрәте төшөрөп барғанмы был юлға?! Емеш быға са үҙе бер ҡасан да күрмәгән был серле эҙгә ғәжәпләнеп, хатта бер тиклем ҡурҡынып ҡараны. Иштуған кинәнеп көлдө.

— Был «бапаҡ» бынан яңы ғына уҙған. Оҙаҡламай үҙен дә күрерһең, — тине. Ысынлап та, күп тә үтмәй, улар бер ауыл осонда, юлсылар төшә торған йорттоң ҡапҡа төбөндә, бәйле торған дөйәне күрҙеләр.

— Ана шул «бапаҡ»тың эҙе ул, — тип тағы көлөп алды Иштуған. — Күрәһеңме, уның боттары бағана кеүек. Ә табаны иркәләгән бесәй табаны шикелле йомшаҡ... Әлдә туҡтағандар әле. Юҡһа, үтә ырамлы атлай ул дөйә. Уны ҡыуып етергә ҡайҙа ул беҙгә.

Емеш, дөйәне элек-электән ишетеп белһә лә, Бибекәй әбейҙең йылдар хаҡындағы хикәйәтенән һуң хатта уның ҡылығы менән таныш булһа ла, үҙен тәүтапҡыр күрә ине. Ысынлап та, уның ғорур күтәрелгән бәләкәс кенә башы, эйәр кеүек ятҡан ике үркәсе, йоморо, йөнтәҫ тояҡтары, ғөмүмән, бөтә торошо, бер генә яңы йылды ла алдан күрә алмай һемәйеп ҡалған аңра, аңшайған хайуан икәнен һөйләп тора һымаҡ күренде уға. «Һай, һөмһөҙ, оҙон үңәс!» — тип Емеш уны күңеленән асыуһыҙ ғына әрләп алды. Унан: «Үҙе шундай шөкәтһеҙ мәхлүҡ булһа ла, күҙҙәре аңлап, аҡыллы итеп ҡарай бит әле, бахырҙың», — тип йәлләп тә ҡуйҙы.

— Беҙгә лә, ошонда туҡтап, атты ял иттереп алырға кәрәк булыр, ахыры, — тине Иштуған. — Ҡалаға төнһөҙ етеп булмаҫ.

Емеш дөйәне яҡын барып, тағы ла яҡшылап күрергә ниәтләп ҡуйҙы. Әммә, көрән бейә лә, ахыры, Емеш шикелле, дөйәне тәүләп күрә ине. Иштуған дилбегә тартып ни хәтле бороло рға тырышһа ла, ул өркөп ситкә тартты. Хатта Иштуғанға баш бирмәй сабып китеп, арбаны урам уртаһындағы ҡоҙоҡ бураһына бәреп ҡыйрата яҙҙы.

— Сабан ат тәртә һындырыр тигәндәре ошо була инде, — тип һуҡранды Иштуған. Улар, ауылдың икенсе осондағы юлсылар йортона төшөп, ат ашатып сыҡтылар. Бынан ары Емештең иғтибарын тотош яулап алған яңы нәмә — унда ла, һулда ла ялтырап ятҡан аҡ эҫкерттәр булды. Бында бөтә дала шундай эҫкерт менән тулы ине.

— Нимә икән инде быныһы? — тип тағы аптырап

ҡараны Емеш ағаһына. — Ундай ашлыҡ булмай ҙабаһа?!

Иштуған ҡулындағы сыбыртҡы һабы менән алда барған йөктәргә тоҫҡап күрһәтте.

— Ана, күрәһеңме?

Көс еткеһеҙ эре аҡ ҡарбуздар тейәлгән бричкалар каруанының алда осо-аҙағы күренмәй ине.

— Аҡ эҫкерттәр — ана шул ҡарбуздар өйөмө ул. Был яҡта шулай күп итеп ҡарбуздар үҫтерәләр ҙә ҡалаға ташып һаталар.

Емеш, иҫе китеп, тынып барҙы. Хәҙер, бигерәк тә Ҡарғалыны уҙып, Ырымбурға яҡынлашҡан һайын, юлсылар менән айырата сыулап, мыжғып торған юл уны тамам ғәжәпкә ҡалдырҙы. Берәүҙәре буш арба, буш бричкаларын шыңғырҙатып атлай-юрта кирегә үтә, берәүҙәре ауыр йөктәрен шығырҙатып ҡала яғына шыуыша. Тирә-яҡ ат ҡыуған, һөйләшкән, көлгән, арыған аттарҙы әсе һүгенеп сыбыртҡы менән һыҙырған тауыштар менән шау килеп тора. Аттар ғына түгел, бында хәҙер дөйәләр ҙә йыш күренә. Хатта оҙон ҡолаҡтарын ҡайсылап, ишәктәр ҙә килеп сыға. Емеш тә, хатта көрән бейә лә, күрәһең, аптырауҙан үҙҙәре өсөн төптө аңлашылмаған ығы-зығынан тамам арып, һеңгәҙәп бара. Көрән бейәнең инде хәҙер дөйәләрҙән өркөргә лә хәле етмәй.

Бына даланың үтә сағыу дәү ҡояшы, юлсылар өҫтөнә алтын нурҙарын һибә-һибә, ҡом диңгеҙе эсенә һеңеп юҡ булды. Унан офоҡҡа һуҙылып ҡалған ал таҫмалар, бик оҙаҡ һүнмәй йымылдап, төн ҡараһын далаға үткәрмәй торҙолар. Ахыр килеп, төн еңде. Дөм ҡара ҡанатын дала өҫтөнә япты. Ә бер аҙҙан уларҙың алдында Емеш бер ҡасан да күрмәгән, иҫ киткес ғәжәп бер күренеш асылды. Әле генә күҙгә төртһәң күренгеһеҙ ҡараңғы һәм хәтәр һымаҡ булып киткән дала ҡапыл мең төрлө нур сәсеп йымылдай, балҡый башланы. Әйтерһең, күктең бөтә йондоҙҙары ергә яуып, далаға һибелеп ятты. Әйтерһең, сабан көрән бейә, төн етеү менән тылсымлы арғымаҡҡа әйләнеп, Емеште күк донъяһына осороп алып менеп китте.

Тора-бара йондоҙҙар ябырылған был серле дала тағы ла киңәйҙе, яҡынайҙы, йондоҙҙары ҙурыраҡ, яҡтыраҡ була барҙы. Емеш менән Иштуған да, төндә «арғымаҡҡа әйләнгән» сабан көрән бейә лә ҡалтыр арбаһы

менән бергә һаман алға, ҡотолғоһоҙ рәүештә йондоҙҙар диңгеҙе эсенә йотола барҙы... Үтә ярһыу һәм сихырланыуҙан Емештең хатта тыны ҡурылды.

— Ағай! — тип бышылданы ул, көскә тауышын сығарып. — Ағай, беҙ ҡайҙа барабыҙ? Ниндәй йондоҙҙар улар?!

— Ҡалаға етәбеҙ! — тине Иштуған, тыныс ҡына. — Ырымбурға!.. Күрәһеңме, уның электр лампалары ҡалай балҡып, йымылдап яна! Электр лампаһы! Ул бит инде беҙҙең өйҙәрҙәге һөрөмлө кәрәсин лампаһы түгел! Бына күрерһең әле!..

Емеш ҡапыл күктән, йондоҙҙар араһынан, ергә, ысынбарлыҡҡа ҡолап төштө: «Электр лампалары?!» Был һүҙҙе Емеш тәүләп ишетә: «Бынауы даланы тотош һырып алған йондоҙҙарҙы шулай атайҙармы икән ни?! Эй-й, ҡала тигәндәре шулай буламы икән ни?!» — тип таң ҡалып барҙы ул. Ә мең-мең ут күҙле тылсымлы төнгө ҡала, уның күңелендә хәүефле һәм аңлайышһыҙ борсоу ҙа, тотоп тыйғыһыҙ ҡыҙыҡһыныу ҙа уятып, һаман-һаман яҡыныраҡ шыуышты.

## ИКЕНСЕ БҮЛЕК

### I

Ярһымаһа күкрәк, йәшнәп, күкрәп,
Телдәреңдә ялҡын яна алмай.
Аһ ормаһаң һыҡтап, тетрәп-тетрәп,
Ҡулдарыңдан алтын тама алмай.

Ш. Бабич

Ҡала. Диңгеҙ кеүек икһеҙ-сикһеҙ киңлеккә йәйелгән Һаҡмар, Яйыҡ далаларының йомарт ҡуйынында, ҡылғанлы, күк монарлы тынлыҡта ирәйеп ятҡан кескәй ҡала. Уның хаҡында Емеш һәр көн, һәр сәғәт тигәндәй, ишетеп үҫте. Хыял менән ысынбарлыҡты, уйнапмы, уйлапмы, буташтырып ҡабул итергә өйрәнгән ҡыҙҙың күҙ алдына ул берсә әкиәттәге мәрмәр һарай булып, берсә тирә-яҡтағы барлыҡ һылыу-һылыу ҡыҙҙарҙы йотоп ятыусы мең башлы аждаһаға әүерелеп, йәки иң батыр, иң матур егеттәр үҫеп етешә торған тылсымлы тау булып килеп баҫа, йәки үҙенең ҡанлы тарихе менән уның һиҙгер йөрәгендә дауыллы һағыш уятып ебәрә ине. Ҡасандыр был ҡала хаҡында Ҡарасәс инәһе һөйләгән һағышлы хикәйәт әле булһа Емештең ҡолағында сыңлап тора һымаҡ: «Был хәл бик борон, әбей батша заманында булған. Хәҙер ошо ҡала ултырған ер өсөн ҡан ҡойошло ҡаты һуғыштар барған. Бында һәр баҫым ер беҙҙең ата-баба ҡаны менән мул һуғарылған... — тип һөйләне ул үҙенең әкрен, көйлө тауышы менән. — Әбей батша башҡорт болаларын баҫтырырға уңайлыраҡ булһын өсөн һалдырырға булған был ҡаланы. Ә тегеләр шуға ҡаршы төшкән. Шунан инде һуғыш-ҡырылыш киткән. Оҙаҡҡа һуҙылған мәғәнәһеҙ ҡаты һуғыш... Шулай булмайынса... Бер яҡтан әбей батшаның ут күҙле, ҡорос ҡоралы һалдаттары... Ә икенсе яҡтан уҡ-һаҙаҡ менән генә ҡоралланған беҙҙең ата-бабалар... Әй-й... ҡоро бер батырлыҡ, ғәйрәтлелек менән генә ҡорос стенаны тишеп буламы һуң инде... Тик үлеш-ҡырылыш ҡына булған инде шунда...

Шулай итеп, бола баçылғас, ҡала төҙөлгән. Беҙҙең ата-бабалар ҙа ошо ҡалала, был урында, Уралдан бер ҡомартҡы ҡалһын тип, Ҡаруанһарай төҙөгәндәр. Уның тирә-яғына, Уралда үçкән һәр төр ағастан бер төп алып барып, бик ҙур баҡса үçтергәндәр. Хатта, баҡсаның эсенә Уралдан тупраҡ ташып, Урал еренең төçөн биреп, тауҙар, йылғалар эшләгән улар. Тап Урал һыртына оҡшатып яһалған ҡалҡыулыҡтан, хас ысындағы шикелле, Иҙел, Һаҡмар, Яйыҡ йылғалары ағып сығып ятыр булған. Ер аçтынан тимер торба уҙғарып яһағандар, ти, ул йылғаларҙы. Йырға инеп ғүмер-ғүмергә йәшәп ҡалған күк Ирәндек менән Талҡаç күлен яһарға ла онотмағандар, ти, хатта Ҡаруанһарай менән уның баҡсаһы ошоғаса был ҡалала иң-иң матур урын булып тора, ти...»

Өлкәндәрҙән ишетеп, Емеш ҡасандыр Йәмәлкә батыр менән Салауат батырҙың да Ырымбурҙы дер һелкетеп һуғышып йөрөүҙәрен белә. Ошо ҡаланан алыç түгел Йәмәлкә тауы барлығы ла уға билдәле. Батша ғәскәрҙәренә ҡаршы, ярлы-ябағаны яҡлап, айырата ғәйәр һуғышҡан өсөн ололап, башҡорттар был тауға шулай урыç батырының исемен биргәндәр, ти...

Хәбир батыр, зимагор Закир хаҡында телдән төшмәй йөрөгән хикәйәттәр аша ла бик таныш был ҡала Емешкә. Үҙенең атаһы Байгилде ағайҙың, яҙ һайын Ырымбур байҙарына ялланып, Оло Эйек, Һаҡмар, Яйыҡ буйлап ҡыуғын ҡыуа-ҡыуа ошо ҡалаға килеп етеп күп ваҡыт ошонда таҡта ярыу заводында ҡалып эшләп йөрөгәне өсөн тағы ла ныҒыраҡ таныш һәм яҡын һымаҡ уға. Эйе, уның атаһы һуғышҡа киткәндә лә, ҡайтҡанда ла ошо ҡала аша үткән бит. Иштуған ағаһы ла байҙарға, аҡтарға ҡаршы һуғышты ошо ҡала далаларынан башлап киткән... Эйе, күптән, бик кескәйҙән таныш һәм яҡын ҡала был уға. Дөрөçөрәге, үтә таныш та, бөтөнләй ят та. Ысынлап та, бынауы бейек-бейек йорттар, бөхтә, йыйнаҡ урамдар, бульварҙар, көҙгөләй ялтырап ятҡан асфальт тротуарҙар, ығы-зығы килеп ҡайнашып йөрөгән иçәпһеҙ-һанһыҙ кешеләр... Уның бай хыялы ла тыуҙыра алмаçтай яңы, ят күренештәр түгелме ни?! Эйе, бында килеп етер алдынан башланған ете ят, ғәжәп яңы донъяның дауамы бит был! Емеште кисә кис ҡараһыу зәңгәр ҡанатын йәйеп ергә төшөп ятҡан йондоҙло аяҙ күк булып ҡаршылағайны был ҡала. Әле инде, уны тағы ла ныҒыраҡ ғәжәпләндерәйем тигән һымаҡ, ҡояшта

балҡыған тылсымлы һарайҙарын берәм-берәм уның юлына сығарып теҙә башланы. Эйе, күп ишетелгән, әммә бер нисек тә күҙ алдына килтерергә мөмкин булмаған серле төбәк икән ул ҡала тигәндәре! Уның ҙурлығына, матурлығына, йәнлелегенә һоҡланып та, ғәжәпләнеп тә бөтөрлөк түгел икән! Ҡарындыҡ тәҙрәле, тупаҡ өйлө кескәй генә емерек ауылдарҙан башҡаны күрмәгән Емеш өсөн генә, бәлки, шулайҙыр, уның өсөн генә, бәлки, кеше даһилегенең, аҡыл көсөнөң илаһи кәүҙәләнеше булып күренәлер ул?! Эй-й, шулай ҙа!.. Туҡта әле, ысынлап уҡ Емеш ҡалала йөрөймө?! Әллә, ғәҙәтенсә, берәй тылсымлы төш кенә күрәме?! Ысын шул! Емеш тап ошонда, ҡаланың шаулы урамында йөрөп ята бөгөн! Ошонда уҡыясаҡ та бит әле ул! Ышанһаң ышан, ышанмаһаң, ҡат та тор. Бына шуға ла ул, үҙе лә һиҙмәҫтән, әленән-әле аптырап, туҡталып тора.

Күрәһең, был йылдарҙа «таш ҡала», «асфальт урам» кеүек һүҙҙәрҙең шиғырҙарҙа йыш осрауы юҡҡа ғына түгелдер? Емеш кеүек ҡаланы тәү күреп таң ҡалған ауыл балалары яҙалыр был шиғырҙарҙы? Әгәр шағирә булһа, бөгөнгө кисерештәрен һөйләп, Емеш тә, бәлки, берәй йыр сығара алыр ине!..

Әйткәндәй, ҡасан ғына һуң әле ул, табандарын йырттыра-сыйҙыра яланаяҡ югереп йөрөгән саҡта, берәй яҫмыҡ ташҡа барып баҫһа, «эй-й, бөтә юлыңа ошондай шыма таштар ғына түшәлгән булһасы! Ҡалай рәхәт булыр ине!» тип уфтанып ала торғайны. Әле инде бына уның аяҡ аҫтында таҫма шикелле һуҙылған таҡыр юл. Атла ла атла. Бер ҙә арымаҫһың. Табаның да ауыртмаҫ, быуының да талмаҫ... Ләкин, әмәлгә ҡаршы, Емештең аяҡ табандары был көндө, ниңәлер, бик тиҙ ауыртты, быуындары талды. Тора-бара уның хатта һоҡланырҡыуаныр хәле лә ҡалмай башланы. Йәһәтерәк Ҡаруанһарайға барып етәһе, ҡасандан бирле өҙлөкһөҙ: «Ҡаруанһарай, Ҡаруанһарай!..» — тип йән атып лепелдәгән йөрәкте әҙ генә булһа ла баҫылдыраһы ине ләбаһа! Тик бынауы ағаһы, ҡарышҡан һымаҡ, уны һаман ҡала буйлап йөрөтә лә йөрөтә!.. Бына бит улар шулай осо-башы күренмәгән таш урамдар буйлап йөрөй торғас, ниндәйҙер «Йәшел баҙар» тигән ергә лә барып сыҡтылар. Бында Емештең күҙенә иң элек күренгән нәмә — аҡһыл йәшел тышлы көс еткеһеҙ ҡарбуздар булды. Улар, бөтә баҙар майҙанын биләп, күбә-күбә булып яталар ине.

— Юлда килгәндә, ниндәй аҡ эҫкерттәр ул? — тип һорағайның. Бына ошо ҡарбуз өйөмдәре ине улар. «Иләк ҡарбузы» тиҙәр. Бөтә Ырымбур тирәһе үҫтерә,— тип аңлатты Иштуған. Биш тингә иң ҙурыһын һатып алды. Ҡаланың ҡом буранлы эҫе һауаһынан да, арыу-талыҫырлэнеүҙән дә тамағы кипкән Емеш, ҡып-ҡыҙыл ҡарбуз телемдәрен ашағас, әкиәттәге тереклек һыуын эскән кеүек, күҙен асып ебәрҙе, быуындарына хәл инеп китте. Бынан ары улар күлдәй тәҙрәләренең эсенә ғәләмәт матур төрлө әйберҙәр ҡуйылған ҡатлы-ҡатлы йорттар теҙелгән урамдар буйлап киттеләр. Емеш һәр тәҙрәлә туҡтарға, бөтәһен дә ентекләп ҡарарға, күрергә теләне. Әммә ағаһы, оҙон-оҙон баҫып, бер нәмәгә лә иҫе китмәй, атлай бирҙе.

«Аҙ ғына туҡтаһасы, бынауы матур нәмәкәйҙәрҙе ҡарарға бирһәсе!»

Әллә ағаһы уның уйын ишетте инде, ҙур бер тәҙрә янында туҡтап ҡалды. Унда төрлөсә баҫтырып ҡуйылған ғәжәп матур аяҡ кейемдәре күренеп тора ине.

— Ҡара әле, Емеш, туфлиҙәр!

— Туфлиҙәр?!— тип ҡабатланы Емеш. Унан: «Эй-й...— тип һуҙып уйланып торҙо, — ҡаталарҙы шулай атайҙармы икән ни?! Ҡаталар ҙабаһа былар! Ҡемдәр генә кейә икән уларҙы? Батша ҡыҙҙарымы, бай ҡыҙҙарымы? Ҡалай ғына атлап йөрөйҙәр икән уларҙы кейгәс? Ҡитсе, шул хәтле лә бәхетле кешеләр була икән донъяла?!» — тип уйланы.

— Әйҙә инәйек әле, — тине ағаһы. Туфлиҙәргә иҫе киткән Емеш ишетмәне. Иштуған уның яурынынан ҡаҡты. — Әйҙә, тим.

Прилавка артында, туфлиҙәр янында, шаҡ ҡатып бик һылыу бер ҡыҙ тора. Ҡыҙҙың аяғында беҙ үксәле, осло башлы аҡ туфли, сәстәре һап-һары, күҙҙәре зәп-зәңгәр, ә ирендәре сейә ҡыҙыл...

Емеш уға аптырап та, әҙерәк ҡурҡып та күҙ осо менән генә ҡарап алды:

— Ошо апай һатамы ни уларҙы? Ағай, ниңә бер ни ҙә өндәшмәй тик тора ул?

— Ҡайһы апай?

— Бынауысы...— Емеш әйәге менән генә ымланы.

Иштуған көлөп ебәрҙе.

— Ниңә тоҡ-томалға көләһең, ағай?

— Манекен бит ул!

— Нимәкәй?

— Ташҡурсаҡ ул,— тине Иштуған көлөүҙән тыйыла алмай. Ул һеңлеһенең алыҫтан насар күреүен белмәй ине. Шуға, ахыры, уның манекенде тере кеше итеп ҡабул итеүен мәҙәк тойҙо.

Емеш бер ни аңламай ағаһына тағы ла ныҒыраҡ аптырап ҡараны. Ул арала булмай, шул манекендән кәм биҙәнмәгән тере ташҡурсаҡ ҡайҙандыр килеп сыҡты ла былар ҡаршыһына туҡтаны:

— Һеҙгә нимә тәҡдим итергә? — тип һораны. Иштуған бер ҙә аптырамай:

— Беҙгә туфли кәрәк ине,— тип эре генә яуап бирҙе.

Сәстәрҙе сәйер күпертеп, ҡаштарға, керпектәргә һөрмә тартып ебәргән ҡыҙыл иренле ҡыҙ, зәңгәр күҙҙәрен йымылдатып, берсә Емешкә, берсә Иштуғанға ҡараны. Яғымлы, иркә тауыш менән:

— Кем өсөн? Ниндәй размер? — тип, ҡына яғылған осло тырнаҡтарын еңел генә прилавка өҫтөндә бейетеп алды.

— Размерен белмәйем. Минең һеңлем әле ундайҙы тәүләп кейергә йыйына,— тип йылмайып өндәште Иштуған да.— Анауы кескәй ҡара туфли, моғайын, уға таман булыр.

Емештең йөрәге, өркkән ҡолонсаҡ кеүек, тулап китте: «Миңәме?! Шундай туфлиме?! Өнмө, төшмө был! Ҡарасы, ысын дабаһа!» Теге ҡыҙ нәҙек кенә күтәрмәле, үтә бәләкәй ҡара туфлиҙе Иштуғанға алып бирҙе.

— Утыҙ өсөнсө размер.

— Йә, кейеп ҡара әле, һылыу,— тип Иштуған туфлиҙе һеңлеһенә һондо. Ә Емеш көтөлмәгән ҡыуаныстан аптырап та, шул хәтле матур туфлиҙәргә ҡағылырға баҙнат итә алмай ҙа ҡатып торҙо.

— Һеңлең телһеҙме әллә, егет? — тип йылмайҙы теге ҡыҙ. Емештең сәменә тейгән был һүҙ уға көс бирҙе. Ул ҡабаланып туфлигә үрелде. Балалар йортонда бирелгән иҫке ботинкаларын ашыға-кабалана сисә башланы. Ә улар, бауҙары ялғаулы булғанғамы әллә Емеш үтә сабырһыҙ ҡыланғанғамы, сиселмәй ыҙаланы. Әммә ул, нисек итһә итте, ботинкаларҙы сисеп, туфлиҙәрҙе кейеп алды. Үҙ күҙҙәренә үҙе ышанмай, ҡара тиргә төшөп, аяҡтарына текләп ҡараны.

«Ҡалай матурҙар! Алтынбикә күрһен ине уны хәҙер. Был туфлиҙәр Тимербай ағайым бер саҡ уға теккән итектәрише генәме ни?!»

Һатыусы менән Иштуған да, күрәһең, Емештең аяҡтарына һоҡланып ҡаранылар.

— Тап-таман. Нәҡ уның өсөн тегелгән, — тине ҡыҙ.

— Ҡыҫмаймы, һурылмаймы? — тип һораны Иштуған.

— Тап-таман! — тип ашығып ҡыҙҙың һүҙен ҡабатланы Емеш. Шул хәтле матур аяҡ кейеменең ҡыҫыуы йәки һурылыуы мөмкинме һуң?!

Һатыусы ҡыҙ туфлиҙәрҙе ҡағыҙ ҡумтаға һалып бирмәксе ине лә, һеңлеһенең уларҙан бер генә минутҡа ла айырылғыһы килмәүен күргәс, Иштуған:

— Ярар, кейеп алһын,— тине.

Емеш, осар ҡош кеүек талпынып, тыпылдата баҫып магазиндән сығып китте. Бер аҙға хәтле ҡайҙа баҫҡанын, ҡайҙа йөрөгәнен тоймай, бер ни күрмәй онотолоп барҙы. Әммә көтөлмәгән ҡыуаныс та, бейек күтәрмәле аяҡ кейеме менән атлап өйрәнмәгәнлек тә уны тиҙ арытты. Шулай ҙа ул сер бирергә тырышманы. Бөтөнләй атлай алмаҫлыҡ хәлгә килгәс кенә:

— Ағай, ботинкаларымды кейеп алайымсы, былай туфлиҙәрем тиҙ туҙыр,— тине.

Иштуған йылмайып ҡуйҙы, сөнки ул һеңлеһенең аяҡтары тупырҙауын күптән үк һиҙеп килә ине.

— Һин уларҙы өйҙә, йорт эсендә, генә кейерһең, байрамдарҙа ғына...

Бая матур туфлиҙәр янында йәмһеҙ, бахыр ғына күренгән ҡуңыслы һары ботинкаһын кейеп алғас, Емешкә тағы йән инде. Оҙаҡламай улар йәнә бер баҙарға барып сыҡтылар. Ни өсөндөр «Ҡамыр баҙары» тип аталған был майҙанда бик күп тауар лавкалары теҙелеп киткәйне.

Иң элек бында Емештең иҫ-аҡылын алған күренеш — ерҙә ултырып һатыу итеүсе ике кеше булды. Улар бөтә тауарҙарын балаҫ өҫтөнә теҙеп һалғандар. Төрлө-төрлө быяла һиҙәптәр, төймәләр, быяла ҡашлы ҡаптырмалар, йөҙөктәр, балдаҡтар, тағы әллә ни хәтле йылтырауыҡлы бүтән ваҡ-төйәктәр ҡояш нуры аҫтында йымылдашып, күҙ ҡамаштырып ята. Уларҙың береһен икенсеһенән айырып күреп бөтөү ҙә ҡыйын. Күҙ арбағыс йылтырауыҡ был нәмәләр янында аяҡ бөкләп ултырған ике кешенең

берене киң яғалы ап-аҡ күлдәк өҫтөнә еңһеҙ ҡара камзул, башына ҡара хәтфә түбәтәй кейеп, мулла шикелле мендәр өҫтөнә менеп ултырған, быжыр битле, тәпәш буйлы кеше — үтә йылғыр, алсаҡ ҡыланып, балаҫҡа таратып һалған әйберҙәр араһынан ниҙәрҙер алып һата ла керләнгән ҡыҙыл янсыҡҡа шыңғырҙатып көмөш аҡсалар төшөрә, бушаған урынға шунда уҡ тағы берәй ялтырауыҡ өҫтәп ҡуя. Еп кеүек тар ғына ҡалдырып ҡырылған ҡара мыйығын, әленән-әле һыйпаҡлап, кешеләргә мөләйем йылмайып ҡарай. Ә икенсеһе — дәү кәүҙәле, ҡыҙыл ерән йөҙлө йәшерәге һатмай ҙа, һөйләшмәй ҙә. Тик әсе тауыш менән әйләнгән һайын:

— Подходите, покупайте! Все по десять, только десять! — тип ҡысҡырып бер төҫлө яңғыраған бәйләнешһеҙ һүҙҙәрҙе теҙеп: — Ассимиляция, диссимиляция, только товар ликвидация! — тип өҫтәп ҡуя.

«Бахыр,— тип йәлләй Емеш,— һөрәнләмәй тик кенә ултырһа, булмаймы икән ни был әҙәмгә?»

— Былай аңшандап йөрөһәк, беҙ бөгөн бер эшкә лә өлгөрмәйбеҙ. Йә, әйҙә киттек,— тип уның уйын бүлә Иштуған.

— Ҡалай мәҙәк. Нимә тип һөрән һала ул, ағай?

Иштуған кәйефһеҙ генә аңлатма бирҙе:

— Уны зазывал тиҙәр, йәғни һатып алыусыларҙы саҡырыусы. «Килегеҙ, һатып алығыҙ. Нимә алһағыҙ ҙа — ун тин генә. Бик арзан ғына», ти... Алдап ултыралар шунда халыҡты. Нэпмандар шашҡан ҡалала. Революция йылдарында, ҡояштан ҡасҡан тиреҫ ҡорто шикелле, йәшенеп бөткәйнеләр, әле тағы баш ҡалҡытып сыҡҡандар икән. Был хәтле үрсемле булырҙар икән, мәлғүндәр. Йә, ярай, ары киттек!

Бынан ары улар ике яҡтан таҡта лавкалар теҙелеп киткән тар ғына урамдан үттеләр. Купецтәр, лавкаларынан йығылып төшөрҙәй булып, үткән-һүткәнде ҡармаҡлап торалар. Берәүҙәре:

— Эй, егет, кил, үҙемдән ал. Ситсаның, кесейәнең иң шәбе миндә генә. Арзан бирәм, буш бирәм. Үтеп китмә!— тип лавкаһына саҡыра. Икенселәре, сыр-сыу килеп, алыусы менән һатыулаша:

— Юҡ, улай арзан була. Үҙемә унан ҡиммәткә төшкән тауар. Тейер хаҡын бир ҙә ал,— тип өҙөшә. Өсөнсөләре, нимәнелер һатырға-алырға килешеп, шап-шоп ҡул

һуғыша, дүртенселәре, әсе һүгенеп, араҡы лавкаһы янында аунап ята...

Был ят күренеш Емештең күңелендә билдәһеҙ хәүеф, ерәнеү, ҡыҙғаныу, тағы ниндәйҙер уңайһыҙланыу һымаҡ тойғолар уята. Ҡаланы тәү күреүҙән алған ҡыуанысლы һүкланыуын һыуыта яҙа.

— Ағай,— тип шыбырҙай ул,— йөрөмәйек. Йәһәтерәк китәйек бынан!

— Һиңә күлдәклек ситса алмаҡсы инем бит әле,— тип бошондо Иштуған.— Ә был нэпмандар бер тин өсөн йән һатырға әҙерҙәр.

— Ярар, ҡуй, кәрәкмәй,— ти Емеш, екһенеп. Ағаһы уның һүҙенә ҡолаҡ һалмай тағы арыраҡ, эскәрәк үтте. Был ерҙә һатыу-алыу эше менән бер ҡатар палаткаларҙа кескәй цирк һәм карусель урынлашҡайны. Цирк эсендә әсе тауыш менән граммафон тәтелдәй, танау урынына сөгөлдөр яһап ҡуйған аласа күлдәкле клоун уға ҡушылып төрлө мәҙәк таҡмаҡтар әйтә, халыҡты кәмит ҡарарға саҡыра, икенсе береһе, велосипедкә ултырып, циркты әйләнеп үтә.

— Эскә инһәгеҙ, артистең велосипедтә арҡан буйлап түбәлә йөрөүен күрерһегеҙ,— ти клоун. Тағы ниндәйҙер ғәжәп акробатик мөғжизәләр күрһәтеләсәген вәғәҙә итә. Баҙарсыларҙың ҡайһы берҙәре, бигерәк тә ауылдарҙан килеүселәр, уның ҡыланыуын, һүҙен ирмәк итеп ҡарап тора бирәләр ҙә «ҡайҙа китмәгән бер тин көмөш!» тип, циркка инеп китәләр. Ә көмбәҙҙе уратып йәйелгән таҡта өҫтөндә аласа кейемле клоун, шайтан кеүек һикеренеп, үтә йәмһеҙ, һөмһөҙ ҡыланып, һаман бейеп, әйләнеп йөрөй, баҙарсыларҙың иғтибарын яуларға, аҡсаларын ауларға тырыша.

— Инәйекме беҙ ҙә? — ти Иштуған, йылмайып.— Күрәһеңме клоунды, ҡалай шаян!

— Ҡуй, кәрәкмәй,— ти Емеш.— Мин унан ҡурҡам.

Улар тағы ары китәләр. Карусель, рәхим итегеҙ тигән шикелле, улар барып етеүгә туҡтап ҡала. Иштуған көлә-көлә ағас атҡа менеп атлана.

— Емеш, коляскаға ултыр!

Тағы кемдәрҙер югерешеп каруселгә менә, ҡайһы ишәккә, ҡайһы атҡа атлана, ҡайһы берҙәре Емеш урамда күреп иҫе киткән фаэтонға оҡшаған уйынсыҡ коляскаларға ултыра. Карусель зыр әйләнеп китә. Емешкә был уйын бик оҡшай, һауала осҡан ҡош кеүек ҡанат-

ландырып ебәрә. Ләкин оҙаҡҡа түгел. Шунда уҡ уның иғтибарын иҙән аҫтында каруселдә әйләндереп йөрөүселәр биләп алалар. Ҡара тиргә төшкән ҡот осҡос йонсоу кешеләр. Етмәһә, бөтәһе лә һуҡыр икән дәбаһа!

— Ағай, төшәйек! — тип ҡысҡырып ебәрә Емеш.— Тиҙерәк, йәһәтерәк!

— Тик кенә ултыр. Туҡтағас та, төшөрбөҙ,— тип тыйҙы Иштуған,— балаланма.

Емеш өсөн был уйын бөтә ҡыҙығын юғалтты. Ул коляскана ауып төшөрҙәй булып күҙҙәрен йомоп ултырҙы. Ярай әле әйләнеү оҙаҡҡа һуҙылманы. Ҡарусель туҡтауға, ул ергә һикерҙе, хатта үҙе лә һиҙмәҫтән башы һуҡҡан яҡҡа йүгереп китә башланы.

— Ҡайҙа йүгерәһең?! — тип туҡтатты ағаһы,— бына диуана!

— Күрмәйһеңме ни, каруселдә һуҡырҙар әйләндерә! Ғәриптәрҙе ат итеп егеп, ҡамсылап сапҡан кеүек булдыҡ табаһа! Уй аллам, ниндәй оят!

Иштуған күңелһеҙ генә йылмайып ҡуйҙы.

— Һуҡырҙарҙың да ашағыһы килә шул, һылыу... Эшләгәндәре үҙҙәре өсөн генә булһа, бер хәл ине әле. Ҡарусель янында баҫып торған ҡаҙан ҡорһаҡты күрәһеңме? Ана шуның өсөн ҡара тир түгергә мәжбүр бит әле улар...

Емеш тағы ла сабырһыҙланды.

— Етер. Китә һалайыҡ, ағай! Мин... Мин теләмәйем... ҡурҡам...

Ысынлап та, ғүмерендә тәүге күргән был баҙар тигән урын үҙенең үтә шау-шыулы ығы-зығыһы менән бөгөн тамам Емештең теңкәһенә тейергә өлгөргәйне. Әле күргән хәл уны бөтөнләй ҙә ҡурҡытты, биҙҙерҙе, күңеленә билдәһеҙ хәүеф һалды. Тормоштоң әсе ысынбарлығы уға һәр саҡ шулай ауыр тәьҫир итә ине. Ул бынан ары бер ҡасан да үҙенең бындай урынға аяҡ баҫмаясағын асыҡ тойҙо. Күңеленә оҡшамаған кешенән йәки урындан шулай бөтөнләйгә биҙә торған ғәҙәтле ине ул.

— Дөрөҫ әйтәһең, етер,— тип Иштуған да ҡул һелтәне.— Күлдәклекте, бәлки, хөкүмәт магазиненән табырбыҙ. Иртәгә үҙем ҡарап ҡарармын әле.

Бынан ары улар туп-тура техникумға ҡарай юл тоттолар.

Тимер юл станцияһына табан һуҙылған киң төҙөк урам буйлап аҙ ғына барғас та, ғәжәп матур ҙур баҡса йәшәреп ята. Уның шәм кеүек төҙ бейек тополдәренән дә

бейегерәк булып, зәңгәр бушлыкҡа ярты айын һуҙған аҡ манара күренә.

— Ҡаруанһарай тигәндәре ана шул инде,— тине Иштуған,— күр, ҡыуан!..

Эй Ырымбур ҡала, сәхрә дала,
Күккә тейеп тора манара...—

тип әкрен генә йыр һуҙып та алды. Унан, әҙерәк тынып барғас, йырҙың аҙағын хәтерләпме әллә үҙе уйлап ҡушыпмы:

Иҫкелекте емереп, яңылыкҡа,
Яҡтылыҡҡа бара замана,—

тип бөтөрөп ҡуйҙы. Ысынлап та, хәҙер «каруанһарай» һүҙе быҒаса ҡараңғылыҡта иңрәгән башҡорт ауылдары өсөн иҫкелекте емереп, яңыны, яҡтыны төҙөүсе өр-яңы, революцион педагогтар етештереүсе тылсымлы тимерлек һымаҡ ҡабул ителә ине был яҡта.

— Эй-й, Ҡаруанһарай! — тип һуҙып ҡуйҙы Емеш тә. Артыҡ тулҡынланыуҙан хатта ҡайҙа баҫҡанын тоймаҫ булды.— Эй-й, Ҡаруанһарайға етеп барабыҙ ҙабаһа! Уй-й, ҡалай ғына барып инермен дә, нисек кенә уҡып китермен икән! — тип бөткөһөҙ өмөт, хыял, ҡыуаныс һирпелгән күҙҙәрен ағаһына төбәне.

Был һүҙҙәр әллә үтә әкрен әйтелделәр, әллә Емештең уйынан ғына үттеләр, Иштуған, һис тә иғтибар итмәй, оҙон-оҙон баҫып атлауын белде. Емеш тә бүтән өндәшмәне.

Ағаһы кеүек оҙонораҡ аҙым яһарға, ырамлыраҡ атларға, хыял ҡанаттарына атланып, тиҙерәк, йылдамыраҡ барып етергә тырышып, ашҡынып бара бирҙе. Ә көҙ көнөнә хас булмаған үтә ҡыҙыу ҡояш уның яланбаш түбәһен аяуһыҙ ҡыҙҙырҙы, ерҙән юрмәләгән шаян дала еле әленән-әле һары саңды күтәреп алып, уның ғәжәпһенеп, ғәҙәттән тыш ҙур асылған күҙҙәренә һибеп ҡасты, тирә-яҡта ят тормош зыу килде. Бына һуйырташ түшәлгән киң төҙ урамдан юрға аттарын бейетеп, һығылмабилле фаэтондарын кәймелдәтеп, һылыу-һылыу бисәләр, йыуан, мөһабәт ирҙәр уҙып китә: «Теге, экиәттәге ел-ел арба, бәлки, ошолор, бәлки, уға ултырып күккә осоп та, ете диңгеҙ кисеп тә булалыр?» — тип хыялланып оҙата Емеш фаэтондарҙы.

— Һылыу, йәһәтерәк атла. Барып урынлаша һалырға кәрәк тәбаһа! — тип сабырһыҙлана Иштуған. Ҡыҙ,

уйынан айнып, ағаһын ҡыуып етә. Ләкин оҙаҡҡа түгел. Уның иғтибарын урам ығы-зығыһы тағы биләп ала. Әмәлгә ҡаршы, баяғы магазиндә Емештең иҫен китәргән туфлиҙәрҙе кейеп, теге фаэтонға егелгән йылғыр ҡара юрғалар шикелле бейетә баҫып, береһенән-береһе һылыу, төҙөү ҡатын-ҡыҙ үтеп-һүтеп тора. Емеш:

— Ҡитсе, китсе, быларҙы шул хәтле матур итеп кем биҙәп ебәрә икән?! Хас ташҡурсаҡтар бит! — тип һоҡланырға өлгөрмәй, урамдың икенсе бер бөгөлөнән пионерҙәр колоннаһы күренә.

— Дамбыр-домбор, дамбыр-домбор, дым-дым!

— Ҡарасы, ағай, барабан ыңғайына ҡалай бер тигеҙ өҙә баҫып киләләр!

Пионерҙәрҙең аҡ күлдәк өҫтөнә тағылған ҡыҙыл галстуктары ялҡын булып тулҡына. Иң алда, барабансы янында килгән оҙон ботло, һары сәсле малай, әленән-әле шундай дәртле, сая итеп борғо ҡысҡыртып ебәрә:

— Ту-ту-ту-ту, ту-ту-ту-ту, ту-ту-тут! Ту-ту-ту-тут!

Уның артынса алғы теҙемдәге дүрт малай сағыу тауыш менән йыр башлай. Колонна дәррәү күтәреп ала. Улар өлкәндәрсә ярһыу революцион йыр менән урамды ҡап уртаға ярып үтәләр.

Смело мы в бой пойдем
За власть Советов!
И, как один, умрем
В борьбе за это!

Емеш уларҙы күҙҙән юғалғансы ҡарап оҙата:

— Үәт, исмаһам, быларҙы пионерҙәр тиһәң дә ярай! Эйе бит, ағай?!

— Йә, атла инде! — тип уның һүҙен бүлә Иштуған. Ләкин ҡыҙҙың иғтибарын шунда уҡ күк блузалы йәштәр төркөмө биләп ала. Улар ҙа урам яңғыратып йырлап уҙалар.

...мы синеблузники —
Профсоюзники...

Уларҙың икенсе йыры Емештең күңеленә айырата һеңеп ҡалды:

Наш паровоз, вперед лети,
В коммуне остановка.
Иного нет у нас пути, —
В руках у нас винтовка.

Йырҙың мәғәнәһе уға әле бик үк асыҡ аңлашылмаһа ла, дәрте, аһәңе менән сикһеҙ яҡын тойолдо уға.

— Агай, ҡалай тиҙ баҫып баралар! — тип ҡысҡырып һоҡланды ул. — Хатта анауы һығылмалы бил фаэтондар ҙа уларға юл биреп тора!..

— Ҡала хеҙмәтсәндәре Октябрь байрамына әҙерләнә. Демонстрация ваҡытында йөрөргә өйрәнәләр,— тип аңлата Иштуған.— Бына бер саҡ һин дә шулай йырлап йөрөрһөң әле ошо урамда. Тик хәҙер йәһәтерәк ҡуҙғалайыҡ. Былай алан-йолан ҡаранып йөрөһәк, Ҡаруанһарайҙың ҡапҡаһы ябылып та ҡуйыр әле!

— Ҡуйсы, ябыламы икән ни?! — тип ҡурҡып китте Емеш. Иштуған, мутланып:

— Яйлап йөрөһәк, ябылыр ҙа шул,— тип өҫтәне.

— Улай булғас, югерәйек, ағай!

Емеш, инде бер ҡайҙа ла ҡарамаҫҡа тырышып, югерә-атлай китте. Оҙаҡламай улар уңдан да, һулдан да баҡсалар менән солғанған ҡапҡаға барып еттеләр. Семәрләп эшләнгән ҙур тимер ҡапҡа, ҡунаҡсыл хужаның күңеле шикелле, шар асыҡ тора. Ҡаруанһарай П хәрефенә оҡшаған ике ҡатлы бик ҙур йорт икән. Йорттоң һәр ҡабырғаһы Илсеғол урамынан оҙонораҡ булыр. Ялан кеүек киң, таҡыр ишек алдының ҡап уртаһына түбәһе көмбәҙләп эшләнгән ғәжәп матур түңәрәк йорт — мәсет һалынған. Уның көмбәҙенең аллы-ҡыҙыллы, күкле-йәшелле быялаларында ҡояш нурҙары мең төрлө нур сәсрәтеп уйнай. Ишек алдында китап тотҡан ҡыҙҙар, егеттәр тулып йөрөй.

Емеш, ахыры, үтә ҡыҙыҡһыныуҙан быуыны талып, тағы туҡталып ҡалды. Иштуған ипләп кенә уның еңенән тартты.

— Әйҙә был яҡҡа.

Ҡапҡанан ингәс, йорттоң ике башында ла ғәжәп ҙур, матур бер иш ишектәр ҡунаҡсыл киң асылып тора. Иштуғандар, алыҫтан уҡ күренгән баяғы бейек манара янынан үтеп, һул яҡ ишеккә боролдолар. Үҙенән биҙәк төшөрөп эшләнгән киң тимер баҫҡысҡа зыңҡылдата баҫып, Иштуған алдан атланы. Емеш, дауыллы тәьҫораттарҙан тамам арып, баҫҡыстың ҡабырғаһынан һуҙылған шундай уҡ семәрле ҡанаттарға тотона-тотона барҙы, ләкин икенсе ҡатҡа менеп етер алда ҡаршыла үҙенә ике тамсы һыу кеүек оҡшаған кескәй ҡыҙҙы күргәс, ул бөтөнләй аптырап, туҡталып ҡалды. Ҡөскә тауышын сығарып:

— Уй, был кем икән?! Минең кеүек тағы берәү бармы икән әллә был донъяла?! — тип бышылданы. Ул арала

булмай, Иштуған ағаһына оҡшаған кешене лә күрҙе. Емеш, тыны бөтөп, бынығында: — Ағай-й! — тип ҡысҡырып ебәрҙе.— Ағай, кемдәр улар?!

— Ҡайһылар?

— Анауы, беҙгә ҡаршы килгәндәрсе...

— Һай, диуана, әллә үҙеңде танымай ҙа башланыңмы? — тип көлдө Иштуған. Унан һеңлеһенең бындай ҙур көҙгөнө тәүләп күреүен хәтерләп:— Көҙгө бит ул. Үҙебеҙҙе көҙгөлә күрәбеҙ,— тип аңлатты.— Уғата ҙур шул. Ҡул кеүек. Иҙәндән түшәмгә хәтле. Ҡиңлеге лә ярты стенаны биләгән.

Емеш, берсә шундай ҙур көҙгөләрҙең булыуын аҡылына һыйҙырырға тырышып, берсә үҙенең хаталаныуынан уңайһыҙланып, тынып ҡалды.

— Беләһеңме, Емеш,— тип, нисектер, тағы ла мутыраҡ йылмайып, һылыуына ҡараны Иштуған.— Әле күптән түгел генә ошо ерҙә тарбайып губернатор баҫып торған. Эйе, эйе, революцияға хәтле бында бит губернатор йәшәгән. Ә хәҙер бына беҙ торабыҙ. Ғәжәп бит, ә? Дөрөҫ, беҙҙең өҫ-баш губернаторҙыҡынан хөртөрәк тә хөртлөгөн... Шулай ҙа, беҙ ул ҡараған көҙгөгә ҡарамаҫлыҡ кешеләр ҙә түгелбеҙ, ә? Шулай бит, һылыу?!

Юғарынан ниндәйҙер ҡалын тауыш ишетелде:

— Нимә һөйләйһегеҙ? Кемде эҙләйһегеҙ?

— Беҙ техникумдың канцелярияһын эҙләй инек тә,— тип яуап бирҙе лә Иштуған, йәһәтләп күтәрелә башланы. Көҙгөнөң һул яғында, коридорға инә торған ишек төбөндә, өҫтөнә килешле генә иҫкерәк шинель, башына йондоҙло папаха кейгән киң яурынлы урта буйлы бер кеше, бик яҡын туғанын күргәндәй, тотош яҡтырып, ҡунаҡсыл ҡаршылап тора ине.

— Кемде күрәм?! — тип аптырап китте Иштуған.— Был һеҙ... иптәш комиссар...

— Комиссар түгел мин хәҙер, иптәш Ирьегетов. Ошо техникумдың директоры булам,— тип ишек янында торған кеше, ҡосағын киң йәйеп, һөйкөмлө йылмайып, Иштуғанға табан атланы.

— Иптәш Ғимранов!

— Ирьегетов!

Улар, көлөшә-ҡыуаныша ҡосаҡлашып, арҡаларынан тыпылдата һөйөшөп, күрештеләр.

Ашығып хәл һораштылар, полкташтарын иҫкә алдылар.

— Йә, нихәл, комиссар? Сәләмәтлек... яра...
— Теге һинең ауылдаш бәһлеүән... Фамилияһы кәүҙәһенә хас егет?
— Хаммат ағаймы?
— Тап үҙе — Батыров... Унан Никита Иванович. Улар ҡайҙа хәҙер? Иҫән-һауҙармы? Ни эш бөтөрәләр?
Емеш, үҙен ниндәйҙер бәхетле· бер осраҡлыҡ арҡаһында батша һарайына барып ингән етем ҡыҙ кеүек тойоп, тауыш-тынһыҙ ҡатып торҙо. Иштуған да, үҙенең элекке полк комиссарын, әле ҡасан ғына Петроград өсөн булған ҡаты һуғыштарҙа революцион телмәрҙәре, һуғыш ваҡытындағы шәхси батырлыҡтары менән башҡорт ҡыҙыл ғәскәрҙәре араһында тәрән хөрмәт ҡаҙанған боевой иптәшен осратҡанға шатланыуҙан, ни һөйләп, ни әйтерен белмәне. Ахыр үҙенең артыҡ тулҡынланып китеүенән уңайһыҙланып, көлә-көлә артына боролдо:
— Бына, иптәш комиссар... иптәш Ғимранов, уҡырға бер ҡыҙ алып килдем,— тип һеңлеһен етәкләп алға сығарҙы. — Емеш тигән ҡыҙ була был. Минең һеңлем.
— Бик һәйбәт иткәнһең. Һаумы, ҡарындаш?
Ғимранов яғымлы йылмайып Емешкә ҡараны. Уның тештәре тығыҙ, ап-аҡ, маңлайы киң, ҡалын ҡаштары сәйер кирелеп тора, ҙур ҡара күҙҙәре лә, ҡаш ыңғайына оҙонсаланып, кирелеберәк киткән һымаҡ. Йылмайғанда, күҙ ҡырыйында ваҡ ҡына саталы һыҙаттар барлыҡҡа килә. Төҫкә-башҡа ҡаҡса ғына, ләкин баҙыҡ, тура ҡарашлы, асыҡ йөҙлө.
Өлкән кешеләр менән һөйләшеп, күрешеп өйрәнмәгән ҡыҙ аяҡ остарына теклəп тик торҙо.
— Күреш. Һай, диуана!
— Йә, оялтма. Өйрәнер әле. Уҡырға килергә батырсылыҡ иткәс тә бик шәп.
Ирҙәр, һөйләшә-көлөшә, оҙон коридор буйлап төпкә, канцелярияға табан киттеләр. Емеш, тирә-яҡта ары-бире ҡайнашып йөрөгән ҡыҙҙарға, егеттәргә һоҡланып та, бер аҙ көнләшеп тә ҡарай-ҡарай, улар артынан эйәрҙе: «Эй хоҙайым, мин дә шулар кеүек үк уҡып, ошонда йөрөп ятырмынмы ни?!»

## II

Был көндәрҙә уҡыуҙан саҡ ҡына бушаһа, Байрастың башында гел бер уй әйләнде: «Емешкә хат яҙырға ине бит әле. Их, ҡыҙҙарға хат яҙыуҙан да ҡыйын нәмә юҡ-

тыр, ахыры. Бигерәк тә йөрәкте тел менән һөйләп тә, ҡағыҙға яҙып та аңлатыуы мөмкин булмаған һөйөү хисе биләп алған саҡта...

Ысынлап та, нисек яҙырға? Нимә яҙырға? Әллә Емеште уҡырға оҙатҡан көндәрҙә кисергән айырылышыу һағышын яҙырғамы? Әллә бында балалыҡ дуҫын — Алешаны осратып ҡыуаныуы хаҡындамы? Йәки Өфөнөң һәләк тә ҙур, матур ҡала булыуын, унда уҡып йөрөүҙең ни хәтле оло бәхет икәнлеген тасуирләп ҡарарғамы?»

Байрас, ҡәләм тотҡан ҡулын ҡағыҙ өҫтөнә һалған килеш, асыҡ тәҙрә аша тышҡа, алтын япраҡҡа төрөнгән ҡаршылағы мөһабәт тирәккә теклэп тынып ҡалды.

Ҡандай яҡты, йылы көн. Бөтә әйләнә-тирә ғәжәп саф, үтә күренмәле еләҫ нур эсендә йөҙә... Ә ул көндө... Емеш менән айырылышҡан көндө, ҡарышҡан һымаҡ...

Байрас уйы менән бынан ике ай элек булған йонсоу бер көнгә ҡайтып китте. Емеште оҙатҡан көн ине был. Бына оҙон күкрәкле урман арбаһы ҡарыша-тартыша көскә ҡуҙғалып китте, оҙатыусылар уға эйәреп урамға сыҡтылар. Тимерһеҙ тәгәрмәстәрҙең ҡалтая-салышая быҫраҡ ярып үрге осҡа табан шыуышыуын бошоноп ҡына ҡарап торҙолар. Бибеш әленән-әле ауыр көрһөнөп алды. Ҡулдарын ирҙәрсә артҡа ҡайырып, мөһабәт кәүҙәһен тотош алға эйелткән Таиба әбей баҫалҡы ғына тауыш менән бер һүҙҙе ҡабатланы.

— Юлдары ғына уң булһын ине балаҡайҙарҙың.

Шәүрә, Заһира, Моратшалар үҙ-ара шым ғына ниҙер бышылдашты, көлөштө. Байрас ҡына өнһөҙ-һүҙһеҙ бер ситтә баҫып торҙо.

Бына юлсылар ауыл осондағы иң һуңғы өйҙәрҙе лә уҙҙылар. Сағылтау һыртына табан борғаланып һуҙылған оңғорло-соңғорло тар юлға төштөләр...

— Әйҙә, килен, самауыр ҡайнатып, ҡаты итеп сәй эсеп алайыҡсы. Эс бошҡанды баҫа ул,— тине Таиба әбей. Алпан-толпан баҫып, ҡапҡанан инеп китте. Дебет шәлгә урап күтәргән Йәнеште күкрәгенә ҡыҫып һөйә-һөйә, Бибеш тә бейеме артынан эйәрҙе. Моратша, һыҙғыра-көйләй, урам буйлап китте. Шәүрә менән Заһира, Байрасты үсекләргә, мәрәкәләргә тырышып, тағы бер аҙ һөйләнеп торҙолар.

— Егеттең балтаһы һыуға төшкән бит!

— Ила, Байрас, илаһаң, еңелерәк була ул!

— Янма-көймә, егет. Оло Эйек буйында һылыу ҡыҙҙар етерлек! Эҙлә — табырһың!..

Байрас, әйтерһең, бер ни ҙә ишетмәне лә, тойманы ла. Ҡыҙҙар унын һайын сәмләнделәр. Ҡөҙгө ләпәкәй себен шикелле әсерәк, уҫалыраҡ тешләргә тырыштылар.

— Эй, һауалағы торнанан ҡулдағы сәпсек яҡшы, тиҙәр түгелме һуң, егет!

— Ҡанаты ҡайырылған ҡоштоң талпыныуында ни мәғәнә?

— Ни хәтле һауаланһаң да, һауаға үрелеп менә алмауың бар, Байрас!

Ҡыҙҙарҙың көлөшөүенә ҡәртсәһенең хәстәрле тауышы килеп ҡушылды.

— Улым, сәй эсергә ин!

Байрас ҡәртсәһенең һүҙен дә аңламаны йәки, аңлаһа ла, өндәшә алманы. Сөнки был минутта уның тамаҡ төбөнә ниндәйҙер ҙур бер төйөр килеп ултырғайны. Әгәр ул ни ҙә булһа өндәшә ҡалһа, был төйөр күҙ йәшенә әйләнеп, түгелеп китер һымаҡ ине уға. Шулай йыл кеүек минут үтте. Ахыр уның башына өмөтлө-өмөтһөҙ саялыҡ килде: «Туҡта, мин Емеште тағы бер ҡат күреп ҡала алам дабаһа!»

Был уй уны ҡойон шикелле ҡуҙғатып алып китте. Бер нисә минут үтеүгә, бығаса Ҡәзә мәзиндән башҡа кеше аяҡ баҫмаған манара башында тора ине Байрас.

Ҡөрән бейә, һалмаҡ ҡына атлап, һыртҡа үрелеп бара. Емеш арбаның артына ҡарап ултырған, күрәһең, ауылды аҙаҡҡаса күреп барырға теләгәндер... Байрасты күрмәйме икән? Их, ниңә инде манараға күҙ һал, мин һине шунан ҡарап торормон, тип ҡолағына ғына әйтеп ҡалманым икән?!

Байрас, сәмләнеп, кеҫәһенән ҡулъяулыҡ алды ла манара тәҙрәһенән елберҙәтеп болғаны. «Их, күрһә ине... Белһә ине...»

Оҙаҡламай юлсылар һыртты артылып та киттеләр. Ә Байрас бынан һуң да юлдан күҙен ала алмай бик оҙаҡ ҡарап торҙо. Ә быҫҡаҡ ямғыр һибәләне лә һибәләне. Әйтерһең, ерҙе һағышлы күҙ йәше менән йыуҙы. Ауыр булды Байрасҡа. Әйтерһең, йөрәгенең бик ҡәҙерле бер өлөшө юҡҡа сыҡты. Әйтерһең, ҡояш бүтән бер ҡасан да балҡымаҫҡа болот аҫтына инеп йәшенде. Әйләнә-тирә буш һәм һалҡын булып ҡалды. Нимә ҡылырға һуң хәҙер уға? Әллә ошонда, манара эсендә, кеше күрмәгән ерҙә,

үкһеп-үкһеп иларғамы, әллә Емештең артынан йүгерергәме?!. Әйткәндәй, нимә булды һуң Байрасҡа?!

Ҡапыл уның аяҡ быуындары йомшарҙы, үҙе лә һиҙмәҫтән, ултыра төштө, күҙҙәренән эҫе йәш тамсылары түгелеп китте. Байрас уларҙы тыйманы: «Бында, ҡараңғы манара эсендә, уны кем күрә?!.»

Илап туйғас, күңел дә бушаған, тамаҡ төбөндәге төйөр ҙә йомшарған кеүек булды. Ул, ҡыйыҡ эсендә гөлдөрҙәшеп йөрөгән ҡуштан күгәрсендәрҙе өркөтөп, алпан-толпан баҫып түбән төштө, хазинаһы урланған һандыҡ кеүек бушап ҡалған күңелендә тыуған үкенесле уйҙарға ҡолаҡ һала-һала урам буйлап китте...

«Их, егет булғаныңды әйтер инем, һөйөүеңде юнләп белдерә лә алмай ҡалғас, әйҙә йөрө инде илап-һыҡтап. Емеш илаҡ кешене ярата мы ни ул?! Ул, ҡыҙ кеше була тороп та, илауҙы белмәй... Их...»

Бик күп уйланды был көндө Байрас. Икенсе көндө лә, ниндәйҙер әсенеү, үкенеү, юҡһыныу тойғоларын кисереп, ҡайҙа барғанын, нимә эшләгәнен белмәй йөрөнө.

Көн аяҙығайны. Оло Эйектең текә ярына баҫып, йылға өҫтөнә оҙаҡ-оҙаҡ ҡарап торҙо. Йылғаның күкһелләнеп ятҡан тымыҡ урынында ҡыҙылғанаттар, алабуғалар үтеп-һүтеп йөрөй. Яр ситендәге шарлауыҡта, ҡырсынташтарға морон терәп, ҡомтөрткөстәр, бәрҙеләр ял итә. Байрас малай саҡта уларҙы мәскәүләп тоторға бик оҫта ине. Күпме ҡыуаныс була торғайны ул саҡта. Ә хәҙер улар барыһы ла айырылыу һағышы хаҡында ғына һөйләйҙәр. Байрас йүгереп Ҡыҙылъяр аҫтына төштө. Ҡасан ғына һуң әле ошо урында Емеште үгәй әсәһе Сәрбиямалдың аяуһыҙ тырнағынан ҡотҡарып алғайны ул. Бала шикелле һөйөп, күтәреп, күкрәгенә ҡыҫа-ҡыҫа, ауылға алып ҡайтҡайны...

Ул тағы яр башына менде. Емеш һауыҡҡандан һуң, улар ошо ерҙә тәүге һәм һуңғы тапҡыр осраштылар. Йәштәр киске уйынға йыйылғайны. Байрас ярһып гармун тартты. Ҡыҙҙар, егеттәр бейене, йырланы. Шунда бер арала, иптәштәренә һиҙҙермәй генә, ул Емештең усына кескәй генә ҡағыҙ һалды. Унда серле бер һүҙ, эйе, йөрәк менән берҙәй ҡәҙерле бер һүҙ яҙылғайны: «Яратам!» Емеш уны уҡынымы икән? Асыуланманымы икән миңә? Кем белә, бәлки, ул да яраталыр?..

Байрас, ҡапыл ниҙер хәтерләп, йүгерә-атлай ҡайтып китте. Сәрбиямалдар менән үҙҙәренең араһындағы бейек

ҡойма янына килде. Ҡасандыр, тулҡынланып торған ҡара сәстәрен таратып ебәреп, ағас тараҡ менән тарап ултырған кескәй Емеште күрерҙәй булып, йән атып ҡарап торҙо. Ләкин хәҙер унда өйрәк кеүек тайпаңлап саҡ атлап йөрөгән Сәрбиямалдан, йәшел күҙен һөҙөп, һеләүһен шикелле ялтаңлап ҡалған Әхмәтшанан башҡа бер кемде лә күрергә мөмкин түгел ине. Эйе, яҙмыштың усал шаярыуы арҡаһында ҡоҙғон ояһына килеп эләккән бөркөт балалары, ҡанат үҫтереп, бейек осоп киткәндәр шул хәҙер...

Байрас, башын түбән эйеп, аласыҡ янындағы түмәргә барып ултырҙы. Оҙаҡ уйлана торғас, бик күптән, граждандар һуғышы барған йылдарҙа ине шикелле, атаһы әйткән бер һүҙ иҫенә килеп төштө:

— Их улым, улым, заманалар үҙгәрә... Һәйбәт замандар килә. Миңә, һинең кеүек кенә сағымда, әсәйем ерәән туҡмап кәләш алып биргәйне... Мин һине улай итмәм. Уҡытырмын, кеше итермен. Байҙарҙы, контрҙарҙы туҡмап ҡына бөтәйек әле. Ауылда өр-яңыса мәктәп асып ебәрербеҙ. Атайың елкә менән татып төшөнгән хәҡиҡәтте һин китаптарҙан уҡып белерһең... Бәхетле булырһың һин, улым. Ҡәләште лә ҡасан теләйһең, кемде яратаһың — шуны алырһың. Их улым, улым. Әйтәм бит, бәхетле заманға тура килдең һин...

Байрас уның һәр һүҙен йөрәк түрендә йөрөтә. Әммә ҡасандыр тәсбих шикелле изге яңғыраған был һүҙҙәр хәҙер уның өсөн ҡараңғы төндә далала йымылдаған быжылдауыҡтар һымаҡ ҡына тойолдо: «Алыҫтан йымылдай, ләкин йылытмай. Яҡын килеп тотоп ҡарайым, тиһәң, күҙгә күренмәй...»

Бер кисте, Байрас шулай, ауыр, өмөтһөҙ уйланып, онотолоп ҡалған саҡта, уның янына атаһы килеп ултырҙы ла тап теге ваҡыттағы шикелле яурынынан ҡосаҡлап алды һәм шундай ябай, яғымлы итеп:

— Уҡырға киткең киләме? — тип һораны. Түш кеҫәһенән кескәй генә ҡағыҙ алып, улына һуҙҙы: — Бына, уҡып ҡара әле.

Байрас нисек ҡанатланып һикереп торғанын һиҙмәй ҡалды.

— Өфөгә! Рабфакка! Ысынмы был, атай?

— Ундай ҡағыҙҙы бушҡа яҙмайҙар,— тине атаһы тыныс ҡына.— Ә мине волкомға эшкә саҡыралар,— тип өҫтәне.

— Ҡем итеп, атай?

— Волкомға. Секретарь. Бик яуаплы эш. Шулай ҙа, партия ҡушҡас, барырға тура килә... — тип, һәр һүҙҙе өҙә-өҙә әйтеп, уйланып һөйләнде Хаммат. Унан ҡапыл улына һынаулы ҡарап, күңелле итеп көлдө лә арҡаһынан ҡағып алды. — Ә һин әсәйең өсөн борсолма. Мин уны үҙем менән алып китәсәкмен...

Байрастың был көндәге ҡыуанысының иге-сиге булманы. Уны хәҙер Емешкә яҙып аңлатырға ла һүҙ етмәҫ төҫлө. Бәлки, кәрәге лә юҡтыр.

Байрас Өфөгә тәү күреүҙә үк ғашиҡ булды. Әллә, ҡояшҡа битен ҡуйып, тау өҫтөндә наҙланып ятҡанғамы, Ағиҙел, Ҡариҙел, Дим һымаҡ халыҡ күңелендә йыр булып яңғыраған йылғалар ҡосағынан үҫеп сыҡҡанғамы, әллә үҙ республикаһының башҡалаһы булғанғамы, Өфө уға үҙе тыуып-үҫкән Илсеғолдай яҡын, ҡәҙерле ине хәҙер. Ваҡыты булған һайын, уның йәшеллеккә сумған урамдарына сығып йөрөргә, кино, театрҙарын, уҡыу йорттарын барып күрергә ярата ул. Әле бына бөгөн дә улар, Алеша менән икәүләп, бик оҙаҡ урам ҡыҙырып ҡайттылар. Ял көнө булғанғамы әллә көҙҙөң сағыу ҡояшлы сағы булғанғамы, байрамса кейенгән шат, көләс йөҙлө халыҡ урамда гөр килеп тора ине. Байрастар ҙа яй ғына үҙәк урамдарҙың береһе буйлап тимер юл станцияһына табан киттеләр. Уңға-һулға боролоп йөрөй торғас, тотош бер кварталды биләп ятҡан төрмә янына барып сыҡтылар. Шомло тынып ятҡан тәҙрәһеҙ йорттар, текә ҡоймалар күңелгә аңлайышһыҙ хәүеф һалдылар. Егеттәр, уларға ҡарап, уйланып торҙолар. Их, халыҡ бәхете өсөн үҙ ғүмерен һәләкәт аҫтына ҡуйған күпме батыр көрәшселәрҙең Себергә, каторгаға табан аҙаплы юлдары ошо төрмәләр аша үтмәгән! Башҡорт халҡының арыҫландай ярһыу, ғорур улы Салауат Юлаевтың һуңғы йырын да ишеткән, ялҡынлы революционер Иван Якутовтың аҙаҡҡы минуттарын да күргән өнһөҙ йорттар. Күпме йыллыҡ аһ-зар, дәһшәт һәм вәхшәт һеңгән бит уларға!..

— Был стеналар Россияны «халыҡтар төрмәһе» тип атарлыҡ хурлыҡлы йыртҡыслыҡтар эшләнгән ҡараңғы быуаттарҙың ҡара шаһите булып торалар инде,— тип ҡуйҙы Алеша, уйсан ғына итеп.— Ҡараңғы тарихтең ҡара шаһиттәре...

— Был төрмәне динамит менән шартлатып, ер менән тигеҙләп ҡуйырға кәрәк ине,— тип ҡыҙып күтәреп алды

Байрас.— Бынан ары халыҡтың иң яҡшы улдарын бер кеше лә унда ябып язалай алмаясаҡ бит. Шулай бит, Алеша?

— Ундай һығымта яһарға ашыҡмайыҡ, дуҫ,— тине Алеша һаман баяғыса уйсан, етди тауыш менән.— Улар түгел беҙгә хеҙмәт итер.. Яңы тормоштоң дошмандары түгел ни әле?..

Байрас бүтән һүҙ әйтмәне. Улар Карл Маркс урамы буйлап Агиҙел ярының ҡояш байышы яғына барып сыҡтылар. Сағыу ҡояш аҫтында алтын нурға ҡойоноп емелләнеп ятҡан һарылы-йәшелле туғай буйҙарына һоҡланып ҡарап торҙолар. Алеша Чапаев дивизияһының Өфөнө аҡтарҙан ҡотҡарыу ваҡиғаһынан бер эпизод һөйләп алды. Ул унда связной булған. Һуғыш барышында уға төрлө урындан Иҙелде бер нисә тапҡыр йөҙөп сығырға тура килгән. Байрас, уның һаран ғына хикәйәһенән ниндәйҙер дауыллы саялыҡ тойоп, һоҡланып, хатта көнләшеп тыңланы: «Бына бит, минең менән йәштәш кенә, ә һалдат булырға ла, революция өсөн, атаһы менән йәнәш баҫып көрәшергә лә өлгөргән. Әле бына уҡыуҙа ла өс курсҡа ғына!» Шул уҡ ваҡытта ул үҙен дә сикһеҙ бәхетле тойҙо. Нисек шулай булмаһын, янында шундай һәйбәт дуҫың булыуға ни етә?! Ауыр юлды ярып, ул алдан атлай. Һин, уны маяҡ итеп, артынан эйәрәһең. Йәнәш барып баҫырға, хатта кәрәк икән, үҙең алға төшөп, юл ярып китергә, ул башлаған юлды дауам итергә тырышаһың. Шулай ярышып-сәмләнеп алға ынтылаһың.

Алеша менән Байрас йыш-йыш һөйләшеп алалар. Оҙон буйлы, эре һары һипкел баҫҡан ҡаҡса йөҙлө, асыҡ зәңгәр күҙле Алеша, атаһына оҡшап, мыҡты, баҙыҡ кәүҙәле Байрас янында үтә йәш, хатта ҡайһы саҡта бала ғына һымаҡ та күренеп ҡуя. Ләкин был тәү ҡарауҙа ғына шулай. Дөрөҫөндә, йәшләй үк утты-һыуҙы үтеп, сынығып үҫкән был егет үҙенең синфи аңы, белеме менән күптәрҙән юғары тора. Рабфактың комсомол ячейкаһында бер нисә йыл алмашсыһыҙ секретарь булып эшләп килеүе лә, моғайын, ошоноң өсөндөр. «Эйе, Алеша йәштәрҙе үҙ артынан эйәртә белә».

Тәҙрә ҡаршыһындағы мөһабәт тирәктән бөртөкләп ҡына осоп торған алтын япраҡтарҙы ергә оҙата-оҙата, Байрас ошолар хаҡында уйлап ултырҙы: «Бәлки, Емешкә тәүге хатты Алеша тураһында яҙыуҙан башларға кә-

рәктер? Әйтәйек, беҙ нисек осраштыҡ, нисек уҡыйбыҙ, нисек татыу йәшәйбеҙ. Ул ҡалай үҫкән, үҙгәргән...

Әллә Алешаның атаһы Никита Иванович хаҡында яҙырғамы? Ул бит Емештең атаһының йән дуҫы, көрәштәше булған. Хәҙер улы менән ярышып совет-партия мәктәбендә уҡып йөрөй. Үҙе шундай йор һүҙле, көр күңелле кеше.

— Мылтыҡты һалдым да ҡулға китап алдым. Инде Мәскәүҙәге Ҡыҙыл профессураны тамамламай туҡтамаясаҡмын. Әйҙә, элекке батрактың хәҙер профессор булғанын күреп, сит ил буржуйҙарының күҙҙәре баҡырайһын әле,— тип кинәнеп көлә ул.

Бына бит сәсенә сал ингән, ә ниндәй дәрт менән йәшәй!..

Ысынлап та, Емешкә лә быны белеү насар булмаҫ ине.

Шулай ҙа... былар бит инде һөйгән, һағынған ҡыҙыңа яҙа торған һүҙҙәр түгел».

Ул, ярһып, тәҙрә ҡаршыһына барып баҫты. Һарылы-ҡыҙыллы япраҡтарға төрөнөп наҙланып ял иткән ҡала урамына оҙаҡ-оҙаҡ ҡарап торҙо. Шул ваҡыт уның күҙ алдына тағы дуҫы Алеша килеп баҫты. Үткән шәмбе кисте клубта студенттәрҙең концерте булды. Ә Байрас бүлмәлә Максим Горькийҙең «Әсә» романын уҡып ятты. Бер аҙҙан Алеша ла ҡайтып инде. Уның йөҙө яҡты ла, уйсан да ине.

— Концерт оҡшаманымы ни? — тип һораны Байрас.

— Аулаҡта рәхәтләнеп хат яҙып алайым әле тип ҡайтҡайным. Һин бар икәнһең дә, шайтан алғыры! — тип мәрәкәләне Алеша.— Ҡайһы бер хаттарҙы яҙғанда уйҙар, тойғолар менән икәү генә ҡалғы килә бит ул, дуҫ, эйе бит?!

— Мин һиңә ҡамасауламайым. Уҡыйым бит,— тине Байрас, китабына эйелде. Уның уйнап һөйләшкеһе килмәй ине был минутта.

— Улай тимә, дуҫ. Һин миңә бер ҡасан да ҡамасауламайһың, аңланыңмы? — тине Алеша. Баҫалҡы ғына йылмайып, түш кеҫәһенән бер фото алып һондо.— Мә, ҡара. Һылыумы?

Фотонан ҡыҫҡа сәсле, кепка кейгән йәш кенә бер ҡыҙ йылмайып ҡарап тора ине.

— Матурмы? — тип ҡабатлап һораны Алеша.

— Һөйкөмлө,— тине Байрас тыйнаҡ ҡына.— Үтә лә һөйкөмлө...

— Ҡазанда университеттә уҡый. Уның атаһы беҙҙең яҡта врач ине. Шунда танышҡайным мин ул ҡыҙ менән,— тип, ғорурлыҡ менән хәбәр итте Алеша.— Беләһеңме, ул да атаһы шикелле врач булмаҡсы...

— Ҡара һин уны!.. Исеме кем?

— Валя. Их, рабфакты тамамларға ла уның янына уҡырға китергә ине!..— тип ярһып китте Алеша.— Беләһеңме, мин ошо уйҙан хатта ҡайһы саҡта хыялый була яҙып ашҡынып йөрөйөм...

— Һин уйлағас, эшләрһең,— тип ҡуйҙы Байрас, ауыр ғына көрһөнөп.— Бына мин генә ул...

— Ә һин улай түгелме ни?! Һөйләмә бушты!

Аҙаҡ Алеша тап бына ошонда, Байрас баянан бирле хат яҙа алмай аҙапланған өҫтәлдә, ваҡ, матур хәрефтәр менән әллә нисә бит хат яҙҙы. Йылмая-ҡыуана яҙҙы ла яҙҙы. Әйтерһең, һөйгәне менән ҡапма-ҡаршы һөйләшеп ултырҙы. Эйе, тап шулай булды ул көндө... Ә мин... хәҙер?!. Эй, туң баш! Шулай уҡ яҙа алмаммы икән ни?!

Байрас баш сайҡап ҡуйҙы: «Их, булдыҡһыҙ...» Унан йәһәтләп ҡайтанан өҫтәл янына барып ултырҙы, эре хәрефтәр менән бер нисә һүҙ яҙып конвертҡа һалды: «Әгәр һөйһә, күңелдәген ҡағыҙға һалыуы еңел түгеллеген үҙе лә аңлар...»

## III

Ярлы-етем балаларҙы аслыҡ тырнағынан ҡотҡарып ҡалыу маҡсаты менән ашығыс ҡына ойошторолған балалар йортонда уҡытыу-тәрбиә эштәре тейешле кимәлдә түгел ине әле. Шуға, ахыры, унда йылдан ашыу ғына торып киткән Емештең аңына ул әллә ни үҙгәреш индерергә өлгөрмәгәйне. Үҙен әйләндереп алған тәбиғәт һәм тормош күренештәренә ҡарата кескәйҙән күңеленә һеңгән ярым дини, ярым мәжүсилек төшөнсәләренән арынып етмәгән ҡыҙ өсөн бында, техникумда, һәр дәрес, һәр көн ғәжәп бер яңы асыш ине. Бына әле лә ул тын алырға ла онотоп, уҡытыусыға текләп тынып ултыра. Ҡөмөрөрәк оҙон буйлы, таушалған һоро костюмле, сал сәсле география уҡытыусыһы, һөйәксел ҡулдарын артҡа ҡаушырып, һөйләй-һөйләй парталар араһында йөрөп ала ла ҡапыл туҡталып, балаларға күҙ ташлап, тынып тора.

Шул саҡ уның киң маңлайына тәрән һыр ята: «Һеҙгә, етер-етмәҫ белем менән төпкөлдән килгән аңһыҙ баласағаға, быны нисек төшөндөрөргә?!.» — тип бошоноп китә, ахыры. Унан тағы ихласланып, берсә ҡаршы стенала элеүле торған донъя картаһына, берсә өҫтәлдәге зәңгәр глобусҡа еңелсә төрткөләп, тағы-тағы һөйләргә, аңлатырға тотона. Ул — география фәне буйынса күп кенә китаптар, дәреслектәр яҙған ғалим кеше — дәресте йәнле алып бара: «Ошо хәтле баш етмәҫ нәмәләр хаҡында шундай ябай, тыныс аҡыл менән һөйләп ышандырыр өсөн, йә бик сәсән, йә күҙ бәйләүсе булырға кәрәктер ул», — тип үҙенсә һығымта яһап тыңлай Емеш. «Былай булғас, ер яҫмыҡ түгел икән дәһә?!.» — тип ғәжәпләнә. Үҙе ғүмер буйы яратып, һоҡланып туймаған ай, ҡояш, йондоҙҙарҙың һис тә ул уйлағанса булып сыҡмауына хатта үкенеп тә ҡуя. Эйе, быға саҡлы бит улар хаҡында ул дини аңлатманы ғына белә ине. Ҡасандыр алла ерҙе, бөтә ғаләмде ете көн эсендә яратҡан, ете ҡат күктә — ете тамуҡ, ете ожмах бар. Кешеләр, ахыр заман еткәс, донъяла ҡылған эштәренә ҡарап шуларҙың береһенә эләгеп, мәңге тере йәшәйәсәк, тип нык ышанған, хатта ни хәтле ауыр булһа ла, һыҙланмай-һуҡранмай, бөтә ғүмерҙе изге эштәр менән генә үткәреп, исмаһам, теге донъяла булһа ла, бәхеткә ирешергә — ожмахтан урын алырға ниәтләп ҡуйған ҡыҙ, дәресте тамам аптырап, хатта бер тиклем ҡурҡып, өмөтһөҙләккә бирелеп тыңланы. Үлгәс булһа ла бәхеткә ирешеү теләге лә юҡҡа сыға лабаһа былай булғас?! Ә уҡытыусы, уның икеләнеүҙәре менән бәхәскә керешкән һымаҡ, ер, күк есемдәре хаҡындағы дини төшөнсәләрҙе тәүбашлап кире ҡаҡҡан бөйөк астроном Коперник хаҡында, инквизиторҙар тарафынан утта яндырылған бөйөк аҡыл эйәһе Джордано Бруно, күк донъяһын өйрәнеүҙә тәүбашлап телескоп ҡулланған, шуның ярҙамында айҙа ла, ерҙәге кеүек, тауҙар, далалар барлығын күргән бөйөк философ астроном Галилей һәм башҡалар хаҡында таң ҡалдырғыс хикәйәттәр һөйләп ташланы.

«Күрәһең, динселәр бөтә ерҙә лә шулай ҡаресле булаларҙыр... Беҙҙең Ғаббас мулла ла үҙенең ҡустыһын — Хәбир батырҙы яҙалап үлтерткән бит! — тип инде эстән генә көрһөнөп ҡуйҙы Емеш.— Бына ышан һин уларға?!»

Дәрестең икенсе сәғәтендә уҡытыусы, бая һөйләгәндәренән уҡыусыларҙың башында ни ҙә булһа ҡалдымы,

тип белергә теләне, күрәһең, класс журналына күҙ ташланы. Уҡыусылар, минән һорамаһа ярар ине тигәндәй, шымып, боҫоп ҡалған һымаҡ булды. Емештең йөрәге лә, үҙенән һорауҙы ла, һорамауҙы ла теләп, йыш-йыш тибә башланы. Бына уҡытыусы ашыҡмай ғына күтәрелеп ҡараны. Һәр йөҙҙә туҡталып үтте. Ахыр сабыр ғына тауыш менән:

— Хөрмәт Таңгилдин,— тип өндәште.— Йә әле, һин һөйләп ебәр әле, көн менән төн ҡалай барлыҡҡа килә? Уны тип ниндәй ваҡытҡа әйтәбеҙ? — тип һораны. Хөрмәттән һуң ул тағы журналға ҡараны:

— Сабир Рәхмәтов, һин һөйләп ебәр, ерҙең шар рәүешендә булыуын ниндәй дәлилдәр менән иҫбат итеп була?

Сабир менән Хөрмәт Емештең Ташлынан, балалар йортонан бергә килгән иптәштәре, икеһе лә теремек, зирәк малайҙар ине. Әле ниңәлер ыҡ-мыҡ итеп торғандай булдылар. Күрәһең, ихлас тыңламағандарҙыр. Ә бына Емештең дәресте ихлас бирелеп тыңлай, әкиәт, легендаларҙы бер ишетеүҙә отоп алған шикелле, дәресте тотошлай хәтерендә ҡалдыра торған һәләте бар. Әле лә ул уҡытыусы һөйләгән һәр һүҙҙе, хатта үҙе эстән килешеп үк бөтмәгәндәрен дә, яҙлыҡтырмай отоп ҡалды. Етмәһә, ул бит әле, әкиәт һөйләргә яратҡан шикелле, дәресте һөйләп бирергә лә бик ярата. Тик ниңәлер унан йыш һорамайҙар. Бәлки, ике аҙнаға һуңлап килгән өсөндөр, бәлки, дәресте белеүенә лә ышанып етмәйҙәрҙер. Бынауы география уҡытыусыһы хатта уға бер тапҡыр өндәшкәне лә юҡ бит әле.

Емеш түҙмәне. Ҡул күтәрҙе. Уҡытыусы уға төбәп һынаулы ҡарап алды.

— Йә һуң, һөйләп ебәр, ҡарындаш,— тине. Журналға ҡарап алғас: — Гөлйемеш Ирьегстова һөйләй,— тип класҡа белдерҙе. Емешкә ҡапыл өҫтөнә эҫе һыу бөркөлгәндәй ҙә, бүлмә тотош ҡайҙалыр йөҙөп киткәндәй ҙә тойолоп ҡуйҙы. Әммә оҙаҡҡа түгел. Ул ашыҡмай ғына аяғүрә баҫты, аҙ ғына уйланып алды. Унан һис тә ҡаушымай, борғоланмай, үҙ һүҙе менән дәресте һөйләп бирҙе.

— Һәйбәт, бик һәйбәт, тап кәрәген һөйләнең, Гөлйемеш, ултырырға мөмкин,— тине уҡытыусы, кинәнеп. Бына дәресте нисек тыңларға кәрәк,— тип хатта маҡтап та ҡуйҙы.— Ултыр, ҡарындаш,— тип ҡабатланы. Ләкин

ҡыҙ ултырырға ашыҡманы, ҡыҙарына биреп, оялсан ғына йылмайып, көтөлмәгән һорау биреп ҡуйҙы:

— Былай булғас, ожмах ҡайҙа була һуң инде, ағай? Унда... Күктә... Ер, ай, йондоҙҙар әйләнеп йөрөй торған бушлыҡ ҡына булғас, тим дә...

Класс, көлә-көлә, уның һүҙен төрлө тауыш менән күмде:

— Һай, дәресте аңлаған был ҡыҙ!?

— Ожмах юҡ ул!

— Кәрәкмәй ҙә!

— Беҙ уны ерҙә үҙебеҙ төҙөрбөҙ!

— Эйе, коммунизм тип атарбыҙ уны!

Емеш көлмәне. Ниңә, күңелдә төйөн итеп һаҡлағансы, һорап асыҡлау яҡшы түгелме ни тигәндәй, ирендәрен бүртәйтеп, тағы ла үҙһүҙләнеберәк, текә ҡарап тора бирҙе; уҡытыусы ла көлмәне. Уның аҡыллы, сабыр йөҙөнә етди хәстәрлек кенә сыҡты. Эйе, уға — география уҡытыусыһына — үҙ фәнен социаль темаға, дингә ҡаршы көрәш темаһына бәйләмәй үтеү мөмкин түгел шул...

Был дәрес Емештең күңелендә йәшенле дауыл ҡуҙғатып ебәрҙе. Эйе, ер хаҡында, бөтә ғаләм хаҡында уның күңелендә йәшәп килгән иҫке төшөнсәләрҙе теткеләп ырғытыуынан, өр-яңы төшөнсәләрҙең күңелгә баҫып инеүенән, иҫке менән яңының кеше өсөн ҡаты көрәшеүенән килеп тыуған ярһыулы дауыл ине был.

«Ер йөмөрө. Ул ҡояш тирәһендә әйләнеп йөрөй. Ай ҙа, йондоҙҙар ҙа, хатта ҡояш та тик ҡатып тормай. Бөтәһе лә әйләнә, аға, үҙгәрә. Тәбиғәттә тып-тын торған бер нәмә лә юҡ.

Бына бит, күпме аҡыл эйәләре ҡасан уҡ ерҙең шар рәүешендә булыуын, ҡояш тирәһендә хәрәкәт итеүен раҫлау өсөн көрәшкән, кәрәк икән, хатта үлемгә барған. Ә Емеш был хаҡта бөгөн тәүләп ишетә! Донъяла әле уның ишетеп бер төшөнә инмәгән тағы күпме ғилем барҙыр! Ҡасан һуң Емеш уларҙы белеп бөтөр ҙә ҡасан башҡалар шикелле йәше менән генә түгел, аңы-белеме менән дә сабыйлыҡтан сығыр? Ашығырға, көндө-төндө белмәй уҡырға, өйрәнергә, бөтә нәмәне аңларға, төшөнөргә кәрәк!.. Эй-й, күпме ғүмер тома һуҡыр йәшәлгән икән дәһә!..»

Бынан һуңғы дәрес рус теле ине. Бүлмәгә Людмила Матвеевна килеп инде. Бер кемгә лә ҡарамай ғына:

— Һаумыһығыҙ? — тип, йәһәтләп түргә уҙҙы. Студенттәр, аяғүрә баҫып:

— Һаумыһығыҙ, Людмила Матвеевна! — тип бер тауыштан сәләмләп ҡаршыланы уны. Ә Емеш, әллә инде был уҡытыусы төҫө-башы, кейем-һалымы, йөрөш-тороשо менән башҡаларҙан ныҡ ҡына айырылып торғанға, әллә был дәрес үҙе өсөн үтә яңы ла, аңлайышһыҙыраҡ та булғанға, йыш ҡына шулай уның алдында юғалып ҡала, хатта әйтәһе һүҙен дә онотоп ҡуйғылай ине. Әле инде бигерәк тә, ахыры үҙен үтә тулҡынландырып ебәргән баяғы дәрес тәьҫиренән ҡотолоп етмәгәнгәлер, ул студенттәр ыңғайына һикереп торорға ла, сәләмләргә лә өлгөрмәне. Уҡытыусыға текләп, телһеҙ ҡалып тик ултырҙы. Ә Людмила Матвеевна, күрәһең, ашығып туп-тура дәрескә ингәндер, тышҡы кейемдән ине. Бына ул йылҡылдап торған ҡаракүл туныын, шундай уҡ бүркен матурлап элеп ҡуйҙы. Хәҙер-хәҙер күтәрелеп осоп китергә ятҡан аҡ томан шикелле еңел, ҡабарынҡы ебәк косынкаһын да таҫлап һалды, ҡара лаклы кескәй генә сумкаһының еҙ төймәһен сыртлатып асып, бармаҡтарының осо менән генә эләктереп, унан ҡарҙан аҡ, томандан еңел ебәк яулыҡ тартып сығарҙы, уны өскөлләп бөкләп, матур ҡырлы танауының үтә күренмәле алһыу япраҡтарына, япып торған бит остарына саҡ-саҡ ҡына тейҙергеләп торҙо, елкә өҫтөнә тәгәрмәсләндереп төрөп ыҡйылы аҡ һөйәк ҡаптырмалар менән тотторолған, былай ҙа бик шыма, йыйнаҡ сәстәрен саҡ-саҡ ҡына һыйпаштырып алды. Уның һәр хәрәкәте шундай күркәм, кейеме килешле. Хатта бынауы ябай ғына ҡара юбка, аҡ ебәк кофта, бейек күтәрмәле ҡара замша ботинка ла уның өҫтөндә үҙенә башҡа бөхтәлек, матурлыҡ менән айырылып тора, һәм ул ошо тышҡы күренеше менән генә лә Емештең иҫен-аҡылын китәрә. Улай ғына ла түгел, Емеш үҙен уның ҡаршыһында, нисектер, баҫылып, күмелеп ҡалған, хатта юҡҡа сыҡҡан кеүек тоя башлай.

«Моғайын, ул башҡа кешеләргә хас булған бөтә ваҡлыҡтарҙан, түбәнлектәрҙән юғары торалыр, ашау-эсеү, йоҡлау, асыуланыу... бөтәһе лә яттыр уға», — тип һоҡлана ла, талапсан ҡоро, ҡырыҫ тауышынан ниңәлер ҡурҡа ла. Бына әле лә уҡытыусы тап шул Емеш уны күнеленән ниң ғали дәрәжәгә күтәргән төҫтә улар алдына килеп баҫты. Ләкин күҙ ҡарашында бөгөн дә үтә ҡырыҫ талапсанлыҡ, һауалы өҫтөнлөк кенә сағыла һымаҡ. Күк

төпкөлөнән йылтыраған бик алыҫ, ят йондоҙ кеүек тойола был ҡараш Емешкә. Тап ошо тойғо уға был ғәжәп матур йән эйәһен аңларға ла, яратырға ла ҡамасаулай ине.

Людмила Матвеевна — урта йәштәрҙәге үтә етди ҡатын, революцияға хәтле үк гимназияларҙа күп уҡытҡан, революциянан һуң хатта иң артта ҡалған башҡорт балаларына рус телен уҡытырға үҙе теләп тотонған, намыҫлы һәм тырыш педагог. Бына әле лә ул «сказуемое» тигәндә, Емештең ҡолағы зыңлап китерлек итеп, «з» хәрефенә, «подлежащее» тигәндә «д» хәрефенә айырата ныҡ баҫым яһап, ал ҡыҙылға буялған ирендәрен сәйер бөккөләп, бик тырышып дәрес бирә. Ләкин быларҙың береһе лә Емештең аңына етмәй. Ул һаман керпек тә ҡаҡмай уҡытыусыға текләп, һәр хәрәкәтен тикшереп, төшөнөргә тырышып уйланып ултыра бирҙе. Әмәлгә ҡаршы, тап шул саҡта уҡытыусы уға:

— Емеш, тор. Таҡталағы һөйләмде уҡы ла эйә менән хәбәрҙе әйтеп бир, — тип бойорҙо. Емеш ҡыҙарып-бүртенеп тик торҙо. Сөнки алыҫтан насар күрә торған күҙе таҡталағы яҙыуҙы айыра алманы. Людмила Матвеевнаның ҡоро ҡарашлы асыҡ зәңгәр күҙҙәрендә уҫал асыу тоҡанып китте.

— Эй, йоҡосо! — тип екерҙе ул. — Дәрескә йоҡлар өсөн килдеңме ни?!

Табыныу дәрәжәһенә етеп һоҡланған был кешенән ҡыҙ шундай тупаҫлыҡты ла, ғәҙелһеҙлекте лә көтмәгәйне, күрәһең, ҡаты йәберһенде. Үҙенең етемлек ғәҙәте буйынса киреләнде. Күҙен йома биреп текләп ҡарағас, таҡтаға: «Мин уҡырға килдем» тигән ябай ғына һөйләм яҙылғанлығын, бында эйә менән хәбәрҙе әйтеп биреүе лә ҡыйын түгеллеген аңлаһа ла, өндәшмәне, ҡарышты.

— Насар! Ишетәһеңме, һиңә «насар» тигән билдә ҡуям, — тип екерҙе Людмила Матвеевна. Ҡына яғылған алһыу нәфис бармаҡтары менән Емештең фамилияһы ҡаршыһына «насар»ҙы бик матур итеп яҙып ҡуйҙы. — Аңлайһыңмы һин, аңгыра бәрәс, нимә ул «насар»?! — тип текләне.

Был минутта уның матур зәңгәр күҙҙәрендә ҡаушауға оҡшаш күләгә сағылып китте. Күрәһең, уға ла был ҡырағай, ҡырыҫ ҡыҙҙы аңлауы ла, һөйләшеүе лә еңел түгел ине.

Емеш һаман өндәшмәне. Хатта ниндәйҙер ғәмһеҙ тынысланып менән текә ҡарап, тумтайып ултыра бирҙе. «Юҡ, мин йоҡосо ла, аңғыра ла түгел. Насар ҙа уҡымам. Һау булһам, бер кемдән дә кәм булмам! — тип, үҙһүҙле ғорурлыҡ менән дөпөлдәне уның йөрәге. — Тик хәҙер йәһәтерәк тәнәфес кенә етһен ине лә, одеял аҫтына йәшенеп кенә, туйғансы илап алһаң ине...»

Ҡыҙҙың теләген ишеткәндәй, коридор яңғыратып ҡыңғырау зыңлап китте.

## IV

Насар билдәһе алғас, үтә бошоноп йөрөгән Емештең күңелен ҡояш кеүек балҡытып ебәргән ике һөйөнөс булды бөгөн: беренсеһе — хат! Ҡемдән бит әле — Байрастан!

«Емеш!

Мин Өфөлә! Рабфакка уҡырға индем. Атайым волком секретаре булып китте. Әсәйемде лә үҙ янына күсереп алды. Ә мин Өфөлә!

Шәп бит, ә, Емеш?!» — тип ҡыҫҡа ғына яҙған да хатының ахырын, таҥ бәләкәс саҡтағы шикелле, Емеште үсекләп бөтәрөп ҡуйған:

> Бибеш, Йәнеш, Гөлйемеш!
> Гөлйемеште Байрас өҙөлөп
> Һағына, ярата, имеш!..

Ул элек тә шулай был үсекләүенең аҙағын күңеле теләгәнсә үҙгәртеп ебәрә, Емешкә ни өсөндөр «Гөлйемеш, илаҡ, имеш, йәки шаҙра, имеш» тигән һымаҡ иң бәләкәс саҡтағы бер ҡатлы үсекләүҙәре оҡшай ине уның. Ә хәҙер бына, ғәжәп шикелле: «Байрас һағына, ярата, имеш» тигән һүҙ уға иң һәйбәт йыр кеүек тойолдо. Ниңе-йөрәгенә билдәһеҙ ҡыуаныс өҫтәне... Күрәһең, Байрас Емешкә бик-бик яҡындыр. Юҡһа, ҡош телендәй ябай бер хат тауҙай шатлыҡ алып килмәҫ ине. «Эй-й, Байрас, ниңә һин бында, Ырымбурға, килмәнең икән? Бергә уҡыр инек! Бергә булыр инек...»

Ул ҡабаланып хатты Таиба әбей, Закир ҡоҙаңдың тоҫо итеп тоторһоң, тип бүләк иткән «Мең дә бер кисә» китабына һалды ла мендәре аҫтына тыҡты: «Уй, нимә уйлайым, бигәләш!..»

Емештең икенсе ҡыуанысы ла бәләкәй түгел ине. Уны икенсе әҙерлек курсына күсерелеүен әйттеләр. Былай ул беренсе әҙерлек курсында ине. Тимәк, хәҙер ул

ике әҙерлекте бер йылда үтәсәк. Алты йыл урынына биш йыл уҡыясаҡ. Был бит көтөлмәгән бәхет! Яңы эш, яңы тырышлыҡ өсөн бер йыл янға ҡала!

Шулай ҙа тағы яңы класс, яңы кешеләр... Ҡырыҫ ҡылыҡлы Емешкә өйрәнеп алыуы еңел булмаҫ, әлбиттә. Әммә, баҫҡан ерҙә тапаныуға ҡарағанда, бер аҙым булһа ла алға атлау яҡшы түгелме ни?!

Емеш, ҡыуанып та, баҙнатһыҙланып та яңы курстың ишеген тәүтапҡыр асып ингәс, ҡайҙа табан атларға белмәй, ишек янында туҡтап, тирә-яҡҡа күҙ ташлап торҙо. Бүлмә артыҡ ҙур ҙа, үтә яҡты ла күренде. Бер тиҫтер теремек малайҙар, ҡыҙҙар сәүкә балалары шикелле сырылдашалар ине. Емеш белә: быйыл икенсе әҙерлек курсында күбеһенсә балалар йортонан килгән үҫмерҙәр уҡый. Быға саҡлы уҡырға хәлле һәм аңлы ғаиләләрҙең балалары килеп тулыусан булған. Ә быйыл, элекке полк комиссары Ғимранов директор булғас, тирә-яҡҡа махсус кешеләр ебәреп, ауылдарҙан, балалар йорттарынан ярлы-етем балаларҙы эҙләп табып, йыйып ала башлаған. Хәҙер Емеш тә тап үҙ тиңдәре араһына килеп керҙе. «Бәй, Хөрмәт менән Сабирҙе лә бында күсергәндәр икән! Ҡара һин уларҙы, шымып ҡына артта ултыралар. Күрәһең, ят класта тәү көндө уларға ла еңел түгелдер...»

Емешкә алғараҡ ултырырға кәрәк ине. Артҡа ултырыу, алыҫтан насар күреү арҡаһында, күптән генәме һуң әле уны нисек урынһыҙ рәнйеттеләр! Ул быны һис кенә лә онота алмаҫ инде. Уның шулай кескәй генә яҡшылыҡты ла, яманлыҡты ла онота алмай ыҙалана торған ғәҙәте бар шул. Үҙенең әлегә ҡыҫҡа ғына ғүмерендә ул ҡағыу-һуғыуҙы күп күрҙе, онотто, әммә кескәй генә кәмһетеүҙе, йәберләүҙе онотоорға, ғәфү итергә уның көсө етмәне. Бәлки, кескәй саҡтан көсө еткән һәр кем уны йәберләргә, кәмһетергә тырышҡан өсөн шулай булып киткәндер ул! Әле лә ул шулай булып ҡалыр, ахыры. Кешенән күргән яҡшылыҡ та, яманлыҡ та уның күңелендә йәнәш йәшәй бирә. Айырма тик шунда: тәүгеһе, ҡояш кеүек, йылы нур бөркөп, икенсеһе, ҡарлы ямғыр шикелле, ҡырыҫ һыуыҡлыҡ биреп йәшәй. Шуныһы ҡыҙыҡ: уларҙың һәр икеһе уның йөрәгенә тағы ла ныҡышыбыраҡ яҡтыға, яҡшыға ынтылырға көс бирә, тотоп тыйғыһыҙ сәм өҫтәй...

Емештең ҡарашы урта рәттә, алдан икенсе партала ғына ултырған Шәмсиәгә төштө. Харап алсаҡ, һөйлән-

...ок кыҙ ул Шәмсиә. Ятаҡта Емеш уға ҡыҙыҡһынып ҡарап торғаны ла бар. Тик өндәшергә, һөйләшергә генә [illegible]ат итмәне әле. Туҡта, ул да Емешкә ҡарай түгелме һуң? Эйе шул, ана бит, ымлап, үҙ янынан урын да күрһәтә...

Емеш, ҡыйыуланып, уның янына килде.

— Ултыр, — тине ҡыҙ, ихлас йылмайып.

Емеш ултырҙы. Яңы дуҫына иғтибарлап ҡараны. Шәмсиә һирәгерәк ап-аҡ тештәрен күрһәтеп йылмайҙы ла ерән керпекле шешмәгерәк күк күҙҙәрен Емешкә төбәп ҡараны, ниңәлер сағыу тауыш менән көлөп ебәрҙе. Емешкә уның был ҡыланышы ирмәк тойолдо, әйтерһең дә, ул: «Әйҙә, тоҡ-томалға көлөшәйек, мәҙәк булһын!» — тип ҡоторта ине. Шәмсиә тағы ла ихласыраҡ көлә башланы. Ахыр Емеш тә түҙмәне, үҙе лә һиҙмәҫтән, уға ҡушылды. Шунан улар күҙҙәренән йәш сыҡҡансы көлдөләр. Был күренеште ҡыҙыҡ күреп, парта янына йыйылған малайҙар ҙа көлөшә-шаярыша башланы. Яңы курсташтар менән тәү танышыу шулай көтөлмәгәнсә, ирмәк килеп сыҡты.

Дәрес башланыр саҡты белдереп ҡыңғырау шылтырағас ҡына, малайҙар, ҡыҙҙар урындарына таралды. Тик шул саҡта ғына Шәмсиә:

— Ошонда ғына ултырырһың, йәме, — тип Емештең ҡолағына шыбырҙаны. — Бында минең ауылдашым Нәфисә ултыра ине. Бөгөн уның башы ауырта. Дәрескә килмәне.

— Ә ул килгәс? — тип һораны Емеш.

— Килһә, анауы шаҙра малай янына ултырыр, — тине, — шул шаҙра Шараптың янына ултырғыһы килә уның, — тип тағы шыңғыратып көлөп алды. Емешкә тағы ла еңелерәк булып китте. Шулай ҙа кеше урынына ултырыуҙың уңайһыҙлығын әйтмәй ҡала алманы.

— Улай килешмәҫ шул...

— Килешер, — тип ҡырт киҫте Шәмсиә. — Нәфисәнең әллә ҡасандан бирле шунда күскеһе килә, тим дәһә. Мин генә ебәрмәй торам, — тине. Мут йылмайып, тына биреп торғас: — Шаянһың, уҡырға ҡамасаулайһың тип, мине яратмай ул. Ә һин шаян ҡыҙҙан ҡурҡмайһыңмы?

— Юҡ. Мин бер кемдән дә ҡурҡмайым, — тип ебәрҙе Емеш. Уның был яуабы үҙенә лә, Шәмсиәгә лә, ахыры, ҡыҙыҡ тойолдо. Улар тағы көлөштөләр.

Оҙаҡламай дәрескә, лаклы ҡара шиблетен шығырҙатып, техникум директоры Ғимранов килеп инде. Уның өҫтөндә ҡара тройка, ҡарҙан аҡ күлдәк, ҡара күбәләк галстук. Ғәжәп килешле жилет кеҫәһенән көмөш сәғәт сылбыры ла күренеп тора...

— Ул «Синфи көрәш тарихе» тигән дәрестән инә, — тип бышылданы Шәмсиә. — Харап шәп һөйҙәй.

«Аһа, был теге комиссар ағай... директор ағай ҙабаһа! Тик ул иҫке генә шинелле, дәү кәпәсле ине ләбаһа! — тип аптырап уйлап алды Емеш. — Башҡа уҡытыусыларҙан кәм йөрөмәйем тип, бүтәнсә кейенеп алдымы икән ни?!»

Ғимранов, һалмаҡ, мөһабәт атлап, өҫтәл ҡаршыһына килеп баҫты. Уның бер-береһенән алыҫ урынлашҡанға, ахыры, сәйер кирелеп торған ҙур ҡара күҙҙәре мөләйем ҡарайҙар, хәрәкәте тыйнаҡ, сабыр.

— Йә, иптәштәр, нисек, эштәр барамы? Дәрескә әҙерләнеп буламы? — тип, йылмая биреп башланы ул тәү һүҙен. Емешкә уның тығыҙ, ап-аҡ тештәре ҡара мыйыҡ аҫтынан көмөшлө уҡа кеүек йымылдап ҡалған һымаҡ булды.

«Ысынлап та, ағайым менән беҙ тәү күргәндә, уның өҫтөндә шинель, башында йондоҙло дәү кәпәс ине... Һуғыштан яңы ҡайтҡан сағы булғандыр, моғайын, үтә йонсоу ҙа күренә ине. Ә хәҙер ҡалай фыртым булып киткән!..» — тип тағы уйланып алды Емеш. Үҙенең төпсөнөүсән ғәҙәтенсә, уҡытыусыны ниндәйҙер тәбиғәттән тыш ғали йән эйәһе итеп күрергә тырышып, уның кейеменә, тышҡы ҡиәфәтенә таң ҡалып ултыра торғас, хатта директорҙың дәресте ҡалай башлап ебәреүен дә абайламай ҡалды. Шулай ҙа оҙаҡҡа түгел. Директорҙың арыҡ кәүҙәһенә, үтә аҡһыу йөҙөнә һис тә хас булмаған ҡалын, баҙыҡ тауышымы әллә һөйләгән дәресенең ҡыҙыҡлығымы Емеште тиҙҙән үҙ артынан эйәртте. Эйе, ағай ниндәйҙер кешегә оҡшаш маймылдар, тәүтормош кешеләре, уларҙың йәшәү өсөн көрәштәре, тәүге ғаилә, ырыу, йәмғиәт барлыҡҡа килеүе кеүек Емешкә бығаса һис тә таныш булмаған нәмәләр хаҡында һөйләй ине. Ҡыҙ үҙенең ҡылығына был юлы ла тоғро булып ҡалды. Дәресте:

«Китсе, китсе, булмаҫты ни, ул хәтле замандағын ҡайҙан белмәк кәрәк?!» — тип икеләнә-уйлана тыңланы. Шулай ҙа был дәрес уға үҙе белгән иң ҡыҙыҡлы әкиәт-

тәрҙән дә ҡыҙыҡлыраҡ тойолдо. Тик кешенең ниндәйҙер маймылдан килеп сығыуына ғына уның ышанғыһы килмәне. Уға диндең кешене тәбиғәттән тыш ғали йән эйәһе итеп һүрәтләүе оҡшай ине.

Тәнәфес ваҡытында уның янына Хөрмәт югереп килде.

— Емеш, ниңә тәнәфескә сыҡмайһың? — тип һораны. Емеш өндәшмәне лә, урынынан да ҡуҙғалманы. Унан Хөрмәт:— Йә, был курсҡа күсеү оҡшаймы?— тине. Емеш тағы уға төбәп ҡарап ҡына ҡуйҙы. Күңелендә уянған яңы тойғоларҙы кешегә әйтеп биреү түгел, үҙе лә төшөнөп етмәй ине әле ул. Күршеһе менән ҡыҙыҡһынып сыҡмай ултырған Шәмсиә лә:

— Ни эштәп һин бер ҙә һөйҙәшмәйһең ул? — тип Емешкә көлөп ҡараны. — Тештәреңде күрһәтергә ояламһыңмы ни?

Хөрмәт артынан килеп еткән Сабир дуҫының арҡаһына төрттө.

— Әйҙә, сығайыҡ. Нимә һүҙ әрәм итеп өндәшеп торорға. Ҡараҡайҙың телһеҙ икәнлеген белмәйһеңме ни?

Малайҙар сығып киткәс, Шәмсиә терһәге менән күршеһенең ҡабырғаһына төртә биреп алды:

— Һин телһеҙме ни? Ниңә һөйҙәшмәйһең?!

— Түгел. Уйлап ултырам.

— Нимәкәй уйҙайһың?

Емешкә был ҡатай ҡыҙының ҡыуаҡан диалектендә шундай йомшаҡ, яғымлы итеп һөйләшеүе оҡшаны. Шәмсиәнең үҙе шикелле шаян йылмайып:

— Нимәкәй уйҙайһың тиһеңме? — тип ҡабатлап һораны.

— Шулай тим дәһә! — тине Шәмсиә, түҙемһеҙләнеп.

— Иртәгә был урынға эйәһе килер. Мин ҡайҙа күсермен икән? Шәмсиә менән ултырғым килә ине бит әле, тип уйлап ултырам, — тине Емеш, мутланып..

Был юлы ҡыҙ шыңғыратып көлөп үк ебәрҙе:

— Ҡара, һин шаянһың да икән! Бына һиңә «телһеҙ»!

Икенсе тәнәфестә Шәмсиә менән Емеш янына тар балаҡлы, килешле ҡара буҫтау костюм кейгән, нәҙек оҙон буйлы, ялтыр ҡара күҙле алсаҡ бер егет килеп туҡтаны.

— Нихәл, ҡыҙыҡайҙар? — булды уның тәү һүҙе. Шәмсиә, бер ҙә аптырап тормай:

— Һаубыҙ әле, Зиннур ағай, — тип яуапланы.

— Һау булғас, яҡшы, — тине Зиннур, ҡуңыр бөҙрә сәсен һыпыра биреп. Һүҙҙе нисек башларға белмәгәндәй, аҙ ғына уйланып торҙо. Унан Емешкә ҡарап: — Һылыу, һин комсомолға инмәгәнһең бит әле, — тип ҡуйҙы. — Ә бит ваҡыт. Бына Шәмсиә күптән комсомолка.

Был көтөлмәгән тәкдимгә ҡапыл-ғара яуап тапмай, Емеш ҡыҙарынып тик торҙо. Шәмсиә дуҫын араларға ашыҡты:

— Инер әле, Зиннур ағай. Быйыл ғына килде бит әле ул. Өйрәнә генә.

— Барыбер. Комсомол ағзаһы булырға кәрәк, — тип ҡабатланы Зиннур. — Күрәһең бит, тиңдәштәрең бөтәһе лә комсомолкалар.

Емеш һаман өндәшмәне, сөнки был ҡоро һүҙ уның мотлаҡ комсомолка булырға тейешлеген раҫлау өсөн генә етмәй ине. Зиннур уға тағы һынаулы ҡарап торҙо ла:

— Уйла, һылыу. Был хаҡта һинең менән тағы һөйләшермен әле, — тип, китеп барҙы.

Икәү генә ҡалғас. Шәмсиә дуҫының ҡабырғаһына терһәге менән йомшаҡ ҡына төртөп алды:

— Кит бынауы, өндәшмәй тик торасы! Зиннур ағай бит ул, ячейка секретаре. Икенсе курс студенте! Ә һин — алйот!

— Комсомолка булғас, сәсте лә ҡырҡтырырға кәрәк, тиҙәр бит! — тип аптырап ҡуйҙы Емеш.

— Ҡырҡтырһа нимә булған? Ишу рәхәт. Бына, күрмәйһеңме?

Шәмсиә малайҙарса ҡыҫҡа итеп ҡырҡылған ерән сәстәрен һелкеп алға төшөрҙө. Унан башын ҡапыл артҡа ташланы. Сәстәре елкә яғына төшөп ятты.

— Күрҙеңме, таралды ла ҡуйҙы. Тараҡ та кәрәкмәй.

Уның был ҡыланышы ғәжәп мәҙәк сыҡты. Шаян күҙҙәре лә, йылтырап, тағы көлөшөргә саҡырып тора ине. Әммә Емеш көлмәне. Уны был минутта сәс ҡырҡтырыуҙан да ауырыраҡ бер һорау борсой ине: «Туҡта әле, комсомолка динһеҙ булырға тейеш тәбаһа! Ә Емеш улай була алырмы? Аллаға, дингә ышанмағас, күңел бушап ҡалғас, кеше нисек була икән? Ышаныуҙан, өмөттән мәхрүм булған кешегә йәшәүе тағы ла ауырлашмаймы икән?» тигән кеүек ҡатмарлы һорауҙар ҡыҫымында йәшәй. «Һаман икеләнә бит әле ул!.. Шулай булғас, унан ниндәй комсомолка сыҡһын?!.»

— Йә, инәһеңме?

Емеш, тағы бер аҙ тынып, уйланып торғас, ғәйепле тауыш менән:

— Ингәс бит, алла юҡ тип тә әйтергә кәрәк. Ә мин әйтә алмайым әле... — тип ҡуйҙы.

— Эй, иҫең киткән икән! — тип ғәмһеҙ көлөп алды Шәмсиә. — Тыштан «юҡ» тиһең дә, эстән «бар» тип уйҙай ҙа йөрөйһөң уны. Һинең эсеңде кем инеп тикшерә!

Емеш дуҫына шелтәле ҡарап алды: «Былай булғас, бынауы ғәмһеҙ яҡты сырайың да, шат көлөүең дә алдатҡыс ҡынамы ни һинең?!» — тип һорағыһы килде. Ләкин өндәшмәне. Ашығып курс бүлмәһенә табан атланы, дәрес башланыр саҡ етә ине. Шәмсиә көлә-көлә унын сңенә йәбеште:

— Эй, алйот, нимәгә бүртәйҙең тағы? Йә, инәһеңме комсомолға?

— Әгәр бер саҡ камил инанһам, инермен, — тине Емеш был юлы. — Ә былай, һин әйткәнсә, эстән бер, тыштан икенсе кеше була алмайым мин.

— Харап икән! — тине Шәмсиә һаман шул ғәмһеҙ, көләгәс тауыш менән. — Мин генәме ни... Бөтәһе лә...

— Ҡит! — Емеш дуҫын хатта этәреп үк ебәрҙе. — Етәр, һөйләмә бушты!

## V

Йылдар, елдәр ҡаяны ла онтай. Шулай булғас, нисәмә йылдар һәлмәклеген үҙ иңендә күтәргән кеше нисек баҫылмаһын?! Ҡасандыр инә бөркөт шикелле уяу ҡарашы, көслө эшсән беләктәре, матур, мөһабәт һыны менән күптәрҙән айырылып торған Таиба әбейҙе лә нык ҡына баҫты ул. Тән ҡуранысланды, бойороҡло ҡырҡыу тауыш йыуашайҙы, үткер яҡты ҡараш һүрәнләнде. Ҡулдарҙы артҡа ҡуйып, алға нык ҡына эйелеп, әкрен генә йөрөй ул хәҙер.

Йәшлек — ҡояшҡа, алыҫ зәңгәр күккә ҡарап атларға яратҡан, үргә, йондоҙға ынтылып, үрелеп үҫкән йәшлек — бик алыҫта ҡалды шул. Ҡартлыҡ — ергә төбәлгән, ергә ҡарай кире сүгә башлаған осор — уға ла килеп етте. Эйе, шулай әкренләп сүгә-сүгә, ергә бөтөнләйгә һуҙылып ятырға ла күп ҡалманы, ахыры... Ысынлап та, нисә йәш һуң әле уға?!

Ҡарт кешенең йәшен, әгәр үҙе әйтмәһә, һорап тороу килешмәй. Кешенең ғүмере был яҡтарҙа ғәҙәттә сабый саҡ, үҫмер саҡ, йәшлек, ир ҡорона етеү, ҡартлыҡ тип миҙгелләп кенә иҫәпләнә.

Әлбиттә, һәр быуындың үҙенә генә хас матурлығы, ауырлығы һәм вазифалары, тәртибе, ғөрөф-ғәҙәттәре бар. Кем уны халыҡта ҡабул ителгән шул дөйөм ғәҙәттәргә тоғро булып йәшәп үтә — шул бәхетле. Бына Таиба әбей ҙә ғүмер миҙгелдәрен намыҫлы, тоғро теүәлләп, ана шул һуңғы быуынға — ҡартлыҡҡа килеп етте хәҙер. Бының аръяғына һиңә нисә йәш икәнен теүәл белеүҙең һис тә әһәмиәте ҡалманы. Шуға күрә бер кем дә уның йәшен һорамай ҙа хәҙер. Һораһалар ҙа, белмәҫ ине. «Ҡартлыҡ! Әйткәндәй, быға нисә йәш икәнде теүәлләп өҫтәүҙең ни әһәмиәте бар? Ҡартлыҡҡа еткәнһең икән, шөкөр ит тә йәшәй бир. Йыллап иҫәпләп ғүмерҙе ҡыҫҡартма!» — Шулай уйлайҙар бында.

...Иҫәпләп тә торһаң, иҫ китерлек,
Иҫәпләмәй ғүмер итерлек...—

тип бушҡа ғына йырлағандармы ни боронғолар?!

Эйе, ҡартлыҡтың үҙенә хас ҡыуанысы ла бар. Был — намыҫ менән йәшәлгән ғүмер.

Таиба әбей үҙ ғүмеренән риза; йән аямай эшләне, кешегә тура ҡарап йәшәне, көслө алдында теҙ сүкмәне, көсһөҙҙө рәнйетмәне.

Ҡартлыҡтың йәнә үҙ биҙәге лә бар. Был — балалар. Таиба әбей ошо яҡтан да мәхрүм түгел. Арыҫландай уландар үҫтерҙе. Ейәндәрен, ейәнсәрҙәрен күрҙе. Үҙенән һуң да әле уның көслө рухы балалары күңелендә йәшәүҙе дауам итер... Шулай булғас, нисек кенә ғәжәп булмаһын, үҙенә генә хас бәхете лә, өмөтө лә бар ҡартлыҡтың.

Бына шуларҙың барыһы бергәләп ҡартлыҡҡа аҡыллы баҫалҡылыҡ, сабырлыҡ, изгелекле күңел тыныслығы ла алып килә икән.

Таиба әбей ҙә ғүмеренең тап бына шундай тымыҡ эңер осорон кисерә был йылдарҙа. Ул — бәхетле һәм ҡәнәғәт. Әле бына бөгөн өлкән улы Хаммат ҡунаҡҡа алырға килгәс, уның ҡыуанысы икеләтә артып китте. Өндәшмәһә лә, бик һағынғайны; улын да, киленен дә, ейәнсәрҙәрен дә күргеһе килгәйне. Әсәһенең уйын белгән кеүек, улы бөгөн елдереп килде лә етте.

— Әсәй, йыйын, үҙебеҙгә ҡунаҡҡа алып ҡайтам, — тине. Унан улы менән улар донъя хәлдәре хаҡында әкрен генә һөйләшә-серләшә ишек алдындағы ҡарт тирәк төбөнә сәй эсергә ултырҙылар. Таиба әбей, әлбиттә, гәрәттәгесә, бөтәһенән элек, өлкән улының ғаилә хәле менән ҡыҙыҡһынды: «Нисек йәшәйҙәр, һаулығы нисек, бәхетлеме улы хәҙер?» Әммә был һорауҙарҙы уға туп-тура биреп буламы ни, һорап та яуап алмаҫҡа мөмкин бит... Шуға күрә әсә уралтып-уралтып һүҙҙе шул яҡҡа борорға тырышты. Алыҫтан урап алып килеп, тура яуап алмаҡсы ине.

— Улым, ниңә яңғыҙ ғына килдең? Килен үпкәләмәҫме... Өйҙә ҡалдырып киткәс тим дә... Хәтере ҡалыр ҙаһа! — тип һүҙ башланы ул һаҡ ҡына.

Хаммат өндәшмәне: «Һе, хәтере ҡалыр?! Хәтере ҡала беләме ни уның?..» — тип уйлап, яурынын ҡыҫып ҡына ҡуйҙы. Ысынлап та, үпкәләй ҙә, асыулана ла белмәй бит был Өммөкәй... Тәрегә генә бит ул шулай өнһөҙ-һүҙһеҙ табыналар. Мин тәре түгел дәбаһа!..»

— Хаммат, улым, шуны әйтәм әле, — тип, һалмаҡлап ҡына тағы һүҙ ҡуҙғатты Таиба әбей. — Бына һуғыштан ҡайтыуыңа бик күп тә ваҡыт үтмәне. Ҡайтҡанда бик сырхау инең. Үтә ләябыҡ, үтә лә йонсоу... Әле инде, аллаға шөкөр. Сәпсим элекке төҫөңә ҡайта яҙҙың. Тәнеңә ит ҡунды, йөҙөңә ҡыҙыллыҡ югерҙе. Аллаға шөкөр, еребеҙҙең шифалы һыуы, һауаһы, килендең ихлас тәрбиәһе аяҡҡа баҫтырҙы үҙеңде. Тик бына, ни эшләптер, күңелең генә һаман бойоҡ һымаҡ тойола миңә. Сәлимә киленде онота алмайһың, ахыры. Әммә, үлгән артынан үлеп булмай бит... Мин, улым, һине ҡайһы саҡ аңлап та етмәйем... Нисек улай, үҙеңә бысаҡ күтәргән кешене...

Хамматтың йөҙөнә ҡаты ризаһыҙлыҡ сыҡты һәм һаҡ ҡына, әммә ҡаты әйтеп әсәһенең һүҙен бүлде.

— Йә, ярар инде, әсәй. Ниңә юҡҡа баш ватаһың. Үҙең әйтмешләй, ошондай ҡыуаныслы көндә...

— Әсәндең баш ватыуын теләмәһәң, улым, аңла, Өммөкәй киленде тиңһенмәй рәнйетмә. Бына шул! — тип, ҡырҡыу итеп өҙөп әйтте Таиба әбей ҙә. Унан, улы ни тип яуап ҡайтарыр икән, тип көтә бирҙе лә, һүҙ булмағас, үҙе дауам итте. — Бынамын тигән улың, Байрасың, ир етеп килә. Ҡатының һиңә тағы бер юлы ике ҡыҙ табып бирҙе. Береһенән-береһе матур ике ҡыҙ... Һи-

нән бәхетле кем бар донъяла?! Йә, әйт, һүҙем дөрөҫ түгел, тиген! Бәхетле түгелмен, тиген?!

Өлкән улының ғаиләлә хәҙер бәхетлеме, түгелме икәнлеге хаҡында һуңғы ваҡытта йыш ҡына баш ватҡан Таиба әбей һынаулы ҡыйғыр ҡарашын Хамматҡа төбәне.

— Йә, әйтеп ҡара?!

Хаммат, әсәһенә күтәрелеп ҡарамай, ғәҙәтенсә күҙен ҡыҫа биреп кенә йылмайып ҡуйҙы.

— Бәхетле, әсәй, бәхетле. Килене дә һәйбәт. Мине ярата. Ҡәҙер-хөрмәт итә...

— Һин үҙең? — тип һораны Таиба әбей. Хаммат инде уйсан, моңһоу ғына йылмайып:

— Мин үҙем дә... — тип ҡабатланы. Әсә ауыр көрһөнөп баш сайҡап ҡуйҙы.

— Эй балалар, балалар!

Күрәһең, улының асыҡ һөйләшмәүенә лә, үҙенең уға бәхетле икәнлеген төшөндөрөп бирерлек көслө һүҙҙәр таба алмауына ла эсе бошто уның. Хаммат та, күрәһең, уйланып ҡалды: «Йә, ниңә инде уға бәхетлелеген ҡатҡат төшөндөрөп торорға? Ул үҙе белмәйме ни быны. Уны бит иҫке ғаиләһенә бер кем дә көсләп ҡайтарманы. Уның өсөн хәҙер үҙенә Байрасты бүләк иткән ҡатындан да яҡын, унан да ҡәҙерлерәк кеше бармы ни?.. Тимәк, ул — бәхетле.

Дөрөҫ, теге йылда, больницанан сыға һалғас та, ул ғаиләһенә туп-тура ҡайта алманы. Йөрәк яраһы ҡара ҡан һауып торған саҡ ине бит. Сәлимәнең янып торған сөм-ҡара күҙҙәрен, берсә үтә шаян, берсә йыр кеүек моңһоу, яғымлы тауышын, дала сәскәһендәй хуш еҫле ҡалын толомдарын онотоу, уның урынында ниндәй ҙә булһа башҡа бер ҡатынды, хатта балаларҙың әсәһен булһа ла күрергә теләү мөмкин инеме ни?! Ләкин йылдар үҙенекен итте. Тән яраһы ла, йөрәк яраһы ла уңала төштө... Йөрәк тауышына ғына түгел, аҡыл тауышына ла ҡолаҡ һалырға өйрәнде Хаммат. Шунан күңелгә лә еңелерәк булып китте һымаҡ...

Етмәһә, замана ла, йәш тә икенсе. Хаммат хәҙер үҙ кисерештәрендә генә ҡаҙынып йәшәй алмай. Унан хәҙер уйҙар ҙа, теләктәр ҙә бүтәнсәрәк — киңерәк, ҡоласлыраҡ. Әйтәйек, бына ул ике йыл буйына иң ауыр, иң ҡатмарлы һуғыш майҙаны булып, ҡулдан-ҡулға күсеп, һуңғы сиккә етеп бөлгән ауылдарҙы ҡайтанан торғоҙоу, быуаттар буйы ҡараңғылыҡта тонсоҡҡан халҡына бөйөк

революцияның терелткес һулышын еткереү, алға, яктыға етәкләү бурысын ғына алып ҡарайыҡ. Былар бит бөтәһе лә үҙлегенән үҙҙәре генә эшләнә торған эштәр түгел. Бөтәһенән алда Хамматты, үҙ күҙҙәре менән Ленинде күргән, ауыр революцион көрәш юлы үткән большевикте көтә бит был эштәр. Уларҙы ла һығылмай-бөгөлмәй үтәйһе, ауылды яҡтынан-яҡтыға етәкләйһе бар бит Хамматтың! Эйе, алда бит уны тағы ла ауыр, ләкин хөрмәтле эштәр көтә.

Күкрәгенә һыймай ташып барған яҡты теләктәре, бөйөк идеалдары бар хәҙер Хамматтың. Бынан ары ҡалған ғүмерен шулар өсөн йәшәргә теләй Хаммат, яҡты тормош өсөн аяуһыҙ көрәшкә әҙер булған кешене нисек бәхетһеҙ тип әйтеп була? Юҡ, Хаммат бик бәхетле кеше хәҙер...»

Таиба әбей улының уйланып тынып ҡалыуын үҙенсә аңлап, тағы баш сайҡап алды.

— Һай, балалар, балалар... Юҡҡа ғына йырҙа ла: «Йөрәк баштарына һары һауҙырған, йөрәк ярып сыҡҡан да бала икән...» — тип йырламайҙар икән шул...

— Улай булғас, йә, әсәй, юҡ-бар менән баш ватмай, тыныс ҡына сәй эсеп ултырайыҡ, — тип күңелле йылмайып ҡараны Хаммат. — Уйламайбыҙ. Бөттө! Шулай бит, әсәй!

Әммә көтмәгәндә әсәһе ҡуҙғатып ебәргән уйҙарҙан еңел генә ҡотола алманы. Хәҙер уның иғтибарын уртансы ҡустыһы Хисбулла биләп алды. Ул ғәҙәтенсә һүҙгә ҡатнашмай, тыныс ҡына ашап, эсеп ултыра. Хаммат уға ҡыуаныслы көнсөлөк менән оҙаҡ теклэп ултырҙы. Ул хәҙер элеккегә ҡарағанда ныҡ ҡына уяуланған, ҡараштары баҙыҡланған, төҫөнән, бөтә үҙен тотошонан ниндәйҙер яңылыҡ, теремеклек, һаулыҡ бөркөлөп тора ине.

«Ҡара һин уны, элекке шәкерттән бер ни ҙә ҡалмай бара лабаһа!.. Бындай ҡиәфәттә... бәлки, хәҙер Сәлимә һылыу ҙа унан ҡасмаҫ ине, бәлки... — тигән уй башына килгәс, ауыр ғына көрһөнөп, күптән бәке теймәгән һаҡал-мыйығын һыпырғылап ҡуйҙы. — Эйе, Сәлимә булһа.. Бәлки, мин дә былай йөнтәйләнеп йөрөмәҫ инем... Ах, шайтан алғыры, һыланырға-һыйпанырға күңел төшмәй түгелме һуң әле? Бына бит Хисбулла ҡалай ялтырап тора!.. Эйе, бәхет тигән нәмә ҡайтанан тыуҙыра ла ала икән шул әҙәм балаһын...»

Ысынлап та, тар ҡара салбар, гимнастерка кейгән, билде ҡайыш менән быуып ебәргән Хисбулла хәҙер шәкерт сағына ҡарағанда күп йәш тә, матур ҙа күренә. Бибеш үҙенә бер күтәрелеп ҡараһа, йәки һөйөндөк «атай!» тип өндәшһә, уның йөҙөндә ғорур яҡтылыҡ балҡып, былай ҙа балаларса иркә ирендәре үҙлегенән үҙҙәре йәйелеп көлөп ебәрә, хатта ғәҙәттә ҡыйыуһыҙ, әкрен тауышы ирҙәргә хас баҙыҡ, ҡыйыу булып китә. Бына ошолар бөтәһе бергә Хисбулланы йәш, теремек кешегә әйләндерә. Ә Хамматҡа килгәндә ул ысынлап та ныҡ ҡына үҙгәргән, баҫылған шул. Дәү кәүҙә ҡуранысланған. Ҡейем иңенә һыймай тышҡа бәреп торған тығыҙ көрәшсе мускулдары бушанған. Ҡасандыр ярһыу дәрт, мөхәббәт уты менән янған шат, шаян күҙҙәрендә хәҙер тәрән кисереш һәм ултыраҡ аҡыл ғына сағыла. Шулай ҙа тотош алғанда Хаммат та бирешмәгән. Үҙе уйлағанса уҡ ҡартаймаған да. Ә нисектер яңыраҡ, камилерәк төҫкә генә ингән. Уның һүҙҙәрендә, үҙен тотоуында кешенең күңелен тотош яулап ала торған ихтыяр көсө, ғәйрәтлелек, үткерлек тағы ла артҡан. Эйе, иркенләп, шаулап ағып китергә өлгөрмәгән тау йылғаһы шикелле ярһыу, иле өсөн, халҡы өсөн йәшәүгә лә, үлемгә лә әҙер торған арымаҫ-талмаҫ һалдат әле ул хәҙер ҙә...

* * *

Ошо кисте Хаммат әсәһен үҙҙәренә, Яҡуп ауылына алып ҡайтып китте.

— Ҡунаҡ булырһың. Теләһәң, бөтөнләй ҙә беҙҙә генә торорһоң, — тине. — Бик шат булырбыҙ.

Шулай итеп, хәҙер бына нисә көн инде Таиба әбей волость үҙәгендә ҡунаҡта йөрөй. Былай Яҡуп ауылы әллә ни ҡасҡан ер түгел дә инде түгеллеген. Шулай ҙа улы бында килеп волком секретаре булып эшләй башлағаны бирле уның тәүләп кенә килеүе, уларҙың яңы ерҙәге яңы тормошон тәүләп кенә күреүе. Яңы тип, әллә ни яңылыҡ та, үҙгәреш тә күренмәй ҙә былай...

Хамматтың һәр көндө ашыҡ-бошоҡ ҡына ашап, ултырыш, йыйылыш, кәңәшмә, тағы әллә нәмәләр тип, өйгә ҡайта алмай, янып эшләп үткәреүен генә иҫкә алмағанда, бөтәһе лә элеккесә. Торған ерҙәре — элекке Батыйма тутайҙың кеше төшөрөү йортондағы кескәй генә бер бүлмә. Иҫке генә өҫтәл, ултырғыс, тутығып бөт-

кән тимер карауат. Ҡыҫҡаһы, Илсеғолдағынан хөртөрәк шартта йәшәйҙәр. Әсәһе өсөн Хаммат шул бүлмәнең бер стенаһы буйына урындыҡ эшләтеп ҡуйған булған бит әле. Әле бына ошо урындыҡта улар төшкө сәй эсеп ултыралар. Бүлмәнең ишек яҡ мөйөшөндәге ҙур рус мейесендә өйөрөлөп, ялҡынланып ҡайын утын яна. Ҡилене Өммөгөлсөм ике таба менән шул ҡыҙыу утта ҡабартма бешереп ала ла, ҡауырһын менән май һөртөп, иренең, бейеменең алдына ҡуя, яғымлы йылмайып:

— Ҡабартма йылылай ашаһаң ғына һәйбәт була. Ашай һалығыҙ әле, — тип ҡыҫтай. Ҡабарып бешкән аҡ йомшаҡ ҡабартмаларҙы тәрилкәләргә һалып ҡыҙҙарына ла бирә. Ләкин Алсәскә менән Гөлсәскә лә ашау ҡайғыһы юҡ. Улар, бесәй балалары шикелле, иркәләнеп, аталарының тубығында ултыралар.

— Ҡамасауламағыҙ атайығыҙға, — ти Өммөгөлсөм ҡыҙҙарына. — Шуларҙы үтә иркәләтәһең дә үҙеңде ыҙалатып бөтәһең, — тип иренә шелтәле ҡараш ташлай. Ә үҙенең ялҡынға алһыуланған йәшәреп киткән йөҙөндә әсә ғорурлығы балҡый.

— Улар мине бер ҡасан да ыҙаламай, — ти Хаммат та, бәхетле йылмайып. — Атай ашаған саҡта иркәләнеп тә ҡалмағас...

— Уныһы шулай ҙа инде... — ти Өммөгөлсөм дә баҫынҡы ғына тауыш менән. — Ҡис ҡайтҡаныңды көтә-көтә, сабыйҙар арып йоҡлап китәләр, иртәнсәк эшкә киткәнеңдә уяна алмай ҡалалар...

Хаммат әсәһенә яҡтырып ҡарай:

— Бына шулай йәшәйбеҙ, әсәй.

— Үҙегеҙгә оҡшағас, ярай инде, — ти Таиба әбей һалмаҡ ҡына. — Һәр кеше — үҙ осороноң балаһы. Донъяһы нисек ҡуша — шулай йәшәй.

— Дөрөҫ һөйләйһең, әсәй. Беҙ ҙә тап шулай тибеҙ. Кеше — әйләнә-тирәһендәге тормоштоң емеше! Шунан уҙып, бер ҡайҙа ла китә алмай.

— Эйе, һәр заман кешене үҙенсә үҙгәртә шул, — тип ауыр ғына көрһөнөп ҡуя Таиба әбей. — Бына һине генә алайыҡ. Элек, егет сағыңда, көрәштә алдынғылыҡ алыуҙы дәрәжә һанай инең. Көрәштә еңеп сығыуҙан да ҙур дан юҡ ине һинең өсөн. Һабан туйҙарында һине еңер батыр табылмаҫ ине. Шулай ине бит?

— Эйе, шулай ине, әсәй, — тип көрһөнөп ҡуя Хаммат. — Хатта ышаныуы ла ҡыйын.

— Аҙаҡ һуғышҡа киттең. Һуғышыу, еңеү булды бар белгән эшең... — тип, баҫалҡы ғына дауам итте Таиба әбей. — Эйе, яу сабыуҙы әллә ни күрҙең. Ярманға ҡаршы ла, аҡтарға ҡаршы ла һуғыштың. Моғайын, бөтә Рәсәйҙе арҡыры-буй гиҙеп сыҡтың. Һынмаған ҡабырғаң, өҙөлмәгән тарамышың ҡалманы тигәндәй... Ә һин һаман һуғыштың...

— Ә шулай ҙа еңеү менән ҡайттым бит, әсәй, — тип күңелле көлөп ҡуйҙы Хаммат. — Беҙгә бүтән нимә кәрәк?!

Әсәй кеше, әйтерһең, улының һүҙен ишетмәне лә, һаман баяғыса әкрен, уйсан дауам итте:

— Әй, унан бирле ни саҡлы йыл үтте. Оло Эйек нисә ташып, нисә ҡайтты... Ҡеше балаһы ла, дан үлсәүе лә, батырлыҡ баһаһы ла үҙгәрҙе... Шуға бына һин хәҙер бөтә волоскә баш булып ултырыуҙы дан һанайһың... Шуның өсөн тыуған ауылыңды ташлап, йорт ереңде туҙҙырып, сығып киттең... Ҡалай итәһең... заманы шул...

Хаммат, күҙҙәрен генә көлдөрөп, әсәһенә оҙаҡ ҡарап ултырҙы:

— Дөрөҫ һөйләйһең, әсәй. Шулай ҙа бер генә һүҙеңә төҙәтмә индерәһе килә — дан өсөн түгел, ә халыҡҡа хеҙмәт өсөн, волостә Совет власен нығытыу өсөн, һайлап ҡуйҙылар бит мине, әсәй. Коммунист кеше мин. Партия һалдаты. Ә һалдат, үҙең беләһең, ҡайҙа ҡуялар, шунда хеҙмәт итергә тейеш.

— Дөрөҫөн генә әйткәндә, мин ҡарт кеше хәҙер, балам. Күп нәмәне аңлап та етмәйемдер... Шулай ҙа, улым, һинең үҙеңдән дә, эшеңдән дә ризамын. Бәхилмен. Хоҙай һиңә һаулыҡ, илгә именлек кенә бирһен...

— Шулай булһын, әсәй.

Хаммат сәйҙән һуң бер аҙ ваҡыт, ҡыҙҙарын яурынына ултыртып, иҙән буйлап йөрөнө. Алсәскә менән Гөлсәскә буҙ турғай кеүек сутылдашты. Таиба әбей, ысын күңелдән һөйөнөп, балаларына кинәнеп ҡарап ултырҙы. Ә бит бынан өс йыл элек кенә ул ҡаты көйөнгәйне, шомланғайны. Ни өсөн, тиген? Килене игеҙ бала тапҡан өсөн, бына инде, алйот!

— Ҡуйсы, нәҫел-нәсәптә булмағанды ни... Бесәй шикелле, игеҙәктәр табып ни... Ҡана, ҡарайым әле... — тип, ул бер көндө сәңгелдәккә эйелде. Ике баланы ла, биләүҙәрен сисеп, юргәктәрен таратып, ентекләп ҡарай башланы.

— Бейем, ни эшләтәһең? — тип хәлһеҙ генә һораны Өммөгөлсөм. — Өшөтөрһөң бит бәпестәремде.

— Ҡайһыһы үлерлек икән тип ҡарайым, — тине Таиба әбей, ҡаты итеп. — Игеҙәктәрҙең береһе үлергә тейеш, юҡһа атаһы йәки әсәһе үлә тигән һүҙ бар борондан...

— Ҡуйсы, бейем, юҡҡа юрап тормасы, — тип Өммөгөлсөм илай башланы. — Мин... Улың менән икәүләп уларҙы шул хәтле көтөп алдыҡ... Берҙән-бер ҡыҙыбыҙ үлгәс, атаһы: «Беҙгә ҡыҙ кәрәк, ҡыҙ һөйгөм килә», — тип йәнемде ҡыйҙы... Ә һин, бейем, нисек телең барып үлһен тиһең?! Был һүҙеңде, зинһар, улың алдында әйтә күрмә. Хәтере ҡалыр. Йөрәгенә ауыр алыр. Былай ҙа һаулығы бик шәп түгел бит хәҙер. Һуғышта алған ҡаты йәрәхәттәре лә етерлек... Беҙ ҙә бында йөрәгенә яра һалмайыҡ, бейем...

— Йә, етер. Күп һөйләшеп өҙлөгөп ҡуйырһың, — тине Таиба әбей, һаман ҡоро итеп. Баштарын төрлө яҡҡа борғолап имергә эҙләп ятҡан кескәй йәнле йоморсаҡтарҙы ҡайтанан юргәктәренә төрөп, килененең янына һалды.

— Мә, имеҙ сырылдаҡтарыңды. Яратмайым шул ҡыҙҙарҙы. Аллаға шөкөр, үҙем ҡыҙ-мыҙ, ҡый-мый табып аҙапланманым.

— Ҡуйсы, бейем, улай тимәсе... Алла ҡыҙ бирмәне, тиген.

Өммөгөлсөм көлә-ҡыуана бәпестәрен күкрәк һөтө менән туйҙырырға кереште...

Ә хәҙер инде Алсәскә менән Гөлсәскәгә өсәр йәш. Өммөгөлсөмдөң үҙенә оҡшап, һары сәсле, аҡ йөҙлө, теремек булып үҫеп киләләр. Әсәләре уларҙы тотош бер төҫтән кейендереп ҡуйған. Билдән бөрөп, күпертеп тегелгән ал кесейә күлдәк, ҡара бәрхәт камзул, балаҡ остары семәкәйләп сигелгән ҡыҙыл сатин ыштан, ҡулдан баҫҡан йомшаҡ аҡ быйма.

Ҡыҙҙар бик телдәрҙәр, шаяндар. Күп һөйләйҙәр, күп көләләр, көнө буйы югерәләр, турғай шикелле сутылдашып ҡына торалар. Ә инде аталары өйҙә булғанда, береһенән-бере көнләшеп, уның итәгенән төшмәйҙәр.

— Атай, атаҡайым! — тип, өҙөлөп, артынан ҡалмайҙар. Таиба әбейгә, оло-оло кәүҙәле, аҙ һүҙле, тос йоҙроҡло малайҙар ғына үҫтереп өйрәнгән әсәгә, был ҡыҙ балалар ҡайһы саҡта йәнле ҡурсаҡтар һымаҡ ҡына кү-

ренә. Ҡайһы саҡта уларҙы ни өсөндөр үҙ балалары кеүек йәки ейәндәре Байрас менән Һөйөндөк кеүек яҡын уҡ күреп етмәүенә аптырап та ҡуя. «Бигерәк иркәләр шул. Үҙем иркәлек, наҙлылыҡ күреп үҫмәгәнгә, аңламайымдыр, ахыры, уларҙы, — тип аҙаҡ үҙен йыуата. — Улай тиһәң, Бибеш килендең Йәнешен дә яратам дабаһа!.. Юҡ, барыбер һаман шул игеҙ булғандары өсөн, күңелемә хәүеф һалып ҡына торғандары өсөн, ситләтәм инде, күрәһең, сабыйҡайҙарымды. Хәйерле генә булһын инде, хәйерле булһын», — тип шомланып та ҡуя.

Әле лә бына шундай төрлө тойғоларҙан баҫылып, улының ҡыуанысын һүҙһеҙ генә күҙәтеп ултыра.

— Әсәй, арып киттең шикелле? Ятып тор. Өммөкәй, урын һалып бир, — тип, Хаммат урындыҡҡа килеп ултырҙы. Ҡыҙҙарын елкәһенән төшөрҙө.

— Алсәскә!

— Ә!

— Гөлсәскә!

— Ә!

— Йәгеҙ, оләсәйегеҙҙе яратығыҙ әле!

Ҡыҙҙар, ҡаҙ бәпкәләре шикелле сырылдашып, оләсәләренә югерҙеләр. Ярышып, итәгенә менеп ултырҙылар. Икеһе ике яҡтан ҡосаҡлап, уның өсөн тартыша башланылар.

— Оләсәйем минеке!

— Юҡ, минеке!

— Оләсәйем мине ярата!

— Юҡ, мине!..

Хаммат, көлә-көлә, уларҙы ҡалдырып сығып китте.

— Киске ашҡа мине көтмәгеҙ. Һуң ҡайтырмын! — тигән һүҙе саҡ-саҡ ҡына ишетелеп ҡалды.

«Ҡасан ғына ҡайтһаң да, ҡайҙа ғына йөрөһәң дә, ризамын. Тик иҫән-һау ғына бул», — тип моңһоу ғына уйланып оҙатты уны Өммөгөлсөм. Унан, ике ҡыҙын бер юлы итәгенә алып, күкрәгенә ҡыҫты.

— Бына ошолар инде, бейем, минең ҡарлуғастарым. Бөтә ҡайғымды ошолар баҫты. Байрасымды һағыныуҙы ла ошолар оноттора... Унан һуң, — Өммөгөлсөм, әҙ генә туҡталып, бейеменә мәғәнәле ҡарап алды, — атаһы менән беҙҙең араны ҡайтанан яҡынайтыусы ла ошо ике ҡыҙ булды бит, бейем. Үҙең беләһең... Ниндәй хәлдәрҙән, ни хәтле күңел яраларынан һуң...

Әммөгөлсөм бәхет йәше менән тулышҡан күҙҙәрен тағы ҡыҙҙарына күсерҙе.

Танба әбей ҙә ейәнсәрҙәренә һоҡланып, бөтә йөрәктән ҡыуанып ҡарай ине был минутта. Хатта ҡасандыр уларҙың бёрёһенә үлем теләүен тағы бер ҡат хәтерләп ҡурҡып ҡуйҙы:

«Алла һаҡлаһын! Һау ғына булһындар... Икәү бергә тиң үҫеп, ата-әсәһенә ҡыуаныс булып йәшәһендәр ҡолонсаҡтар...»

## VI

Ноябрь. Ләкин әле ҡыш юҡ. Ырымбурҙа ул, гүйә, ырым-йорто кейенгән етем балаларҙы өшөтөп ыҙаламаҫ өсөн, һуңлап килә, иртә китә.

Емеш, баҫҡыстың икешәре аша бер юлы югерә-һикерә тышҡа сыҡты ла, аяҙ күктең ҡабырғаһына йәбештереп ҡуйылған еҙ тас кеүек тоноҡ ҡына йымылдаған көҙгө ҡояшҡа арҡаһын ҡуйып, йәм-йәшел япраҡтарын бөртөкләп кенә ергә тамыҙып ултырған моңһоу сирендәргә ҡарап, оҙаҡ ҡына уйланып торҙо:

«Көҙ ҙә үтеп бөтөп бара. Әй-й, ҡуй инде. Таң ата ла кис була. Тиҙҙән ҡышы ла килеп етер, уныһы ла уҙып китер. Бөтәһе лә килә, китә, үҫә, үҙгәрә. Ә бына ул, Емеш, һаман бер урында тапанып тик тора түгелме һуң?! Үҫмәй тә, үҙгәрмәй ҙә һымаҡ. Эйе шул, ошоғаса Зиннур ағайҙың һорауына ла яуап биргәне юҡ табаһа әле уның!

Шәмсиәнең:

«Комсомолға инәһеңме, юҡмы? Әйт инде, алйот!» — тигән тауышы ла һаман уның ҡолағында сыңлап ҡына тора.

Әлбиттә, Емеш бер саҡ комсомолға инәсәк. Ләкин аңлағас, төшөнгәс. Үҙен комсомолка тип шикләнмәй һанарлыҡ дәрәжәгә еткәс.

Ул ярһып тирә-яҡҡа күҙ ташлап алды.

Ә бит донъя уның өсөн хәҙер бигерәк тә тотош бер серле йомаҡҡа әйләнде ләбаһа! Аптыратҡыс, алйытҡыс, ярһытҡыс серле йомаҡ! Емеш үҙенең ҡараңғы зиндандан әле генә күҙ ҡамаштырғыс ҡояш аҫтына килеп сыҡҡан әсир кеүек тоя бит хәҙер. Эйе шул, бөтәһен дә күреп, аңлап, төшөнөп өлгөрә алмай, күҙе сағылып тора бит әле уның...

ләп күрһәтә. Әллә улар ауылдан яңы ғына килгән был бәләкәс ҡырағай ҡыҙҙың шиғыр яҙырға баҙнат итеүен һис тә килештерә алманылар, әллә мәҙәк күрҙеләр. Ә Емешкә сикһеҙ ҡыйын булды: «Ниңә яҙҙым, ниңә?! Бынан һуң бер ҡасан да яҙмаç инем. Тик онотһондар, үртәмәһендәр генә ине!»— тип, эстән генә аҙарынып, янып-көйөп йөрөнө. Ярай әле оҙаҡ үртәмәнеләр. Күрәһең, бер ни тип тә яуаплашмаған кеше менән булышыуҙың ҡыҙығы булманы. Шулай ҙа бына бит Емешкә уны хәтерләү әле лә еңел түгел. Ул ашығып ҡарашын икенсе стенаға күсерҙе. Бындағы лозунгылар уны эшкә, көрәшкә саҡыралар ине.

«Пролетариат диктатураһының төп принцибе булған эшсе, крәҫтиән элемтәһен нығытайыҡ!»

«Ленин васыяттарын тоғро үтәйек!»

«Яңы әлифба — мәҙәниәтте алға ебәреүҙә ҙур аҙым буласаҡ».

Иҫке эшләпә кеүек йәмшәйеп бөткән һоро репродуктор, әсе сыйылдап, ҡыҙҙың иғтибарын үҙенә тартты.

— Шыж-быж-ж... концерт... Ғәзиз Әлмөхәмәтов... Ҡара юрға...

Емеш ҡыуанып тыңларға әҙерләнде. Быға са ла ул, ошо радио аша ишетеп, был йырсының дала шикелле икһеҙ-сикһеҙ иркен, моңло тауышына хайран ҡалып ултырғаны бар ине.

Өлкә газеталар көҙ башында: «Өфөлә радиостанция төҙөлдө. Уның тапшырыу көсө 800 саҡрым алыҫлыҡҡа етә. Башҡортостандың һәр ауылында бынан ары Өфөнө генә түгел, Мәскәүҙе лә тыңларға мөмкин буласаҡ. Был республикабыҙҙың мәҙәни тормошонда тағы бер ҙур аҙым булып торасаҡ»,— тип хәбәр иткәс тә ҡуйылғайны был репродуктор. Күңелдәрҙе байрам шатлығы солғап алғайны ул көн. Ысынлап та, бынауы залда ултыр ҙа Өфөлә йәки Мәскәүҙә һөйләгәнде, йырлағанды ишет тә ҡуй! Мөғжизә бит! Аҡыл етмәç эш!

Башта студенттәр, сихырланған шикелле, репродуктор янынан китә алмай йөҙәнеләр. Һәр ҡайһыһы тыңлап ҡына түгел, ҡапшап, төрлөсә борғолап ҡарарға ла тырышты. Ахыры артыҡ тырыштырҙылар: хәҙер репродуктор, һөйләүгә ҡарағанда, күберәк шыжылдап-быжылдап тора. Әле лә ул сыйылдауҙан, һыҙғырыуҙан уҙманы. Емеш, ҡул һелтәп, алдында ятҡан «Башҡортостан»ға эйелде. Ҡескәй генә блокнотын, ҡәләмен әҙерләп янына

һалды. Ул нимә генә уҡыһа ла, хатта доклад, лекция тыңлаһа ла, үҙенә оҡшаған урындарҙы яҙып барырға тырышты. Уның өсөн бөтә нәмә кәрәкле, бөтә нәмә яңы ине хәҙер. Әле лә ул башта газетаның тәү битенән ВКП(б)-ның Башҡортостан өлкә конференцияһында һөйләнгән докладтарҙы уҡыны.

Газетаның ҡатын-ҡыҙ тормошо хаҡындағы хәбәрҙәрен айырата ҡыҙыҡһынып, әле булһа ҡараңғылыҡта иңрәгән үҙенең тиңдәштәре өсөн һыҙланып уҡый ине Емеш. Бөгөн дә йөрәкте семтеп-семтеп ала торған бер нисә хәбәр бар ине:

«Икенсе Ҡараҡыпсаҡ волосендә Ҡасимов тигән кеше өпкө көндә лә өс бисә менән тора...»

«Бөрйәндә ун биш йәшлек Ғәйшәне ағаһы бер ат, бер һыйыр, бер кәзә бәрәбәренә икенсе бисәлеккә һатты...»

Йәнде йылыта торған хәбәрҙәрҙән Емешкә:

«ВКП(б)-ның XIII Башҡортостан өлкә конференцияһына Түбә алтын руднигенән Йәнбикә апай делегатка булып килде...» — тигәне айырыуса ҡыуаныс бирҙе: «Башҡорт эшсе ҡатыны — делегатка!»

Эске һәм тышҡы хәлдәр бүлеген дә Емеш ҡыҙыҡһынып уҡыны.

«Большевик» коммунарҙарының уңышы», «Чемберленгә беҙҙең яуап», «Йәштәр пулеметтан атырға өйрәнә», «Атаҡлы француз яҙыусыһы Анри Барбюс Мәскәүгә килде» кеүек төрлө хәбәрҙәр ингән бүлектәр һәр тармаҡта яңы, яҡшы тормош өсөн данлы көрәш барыуы хаҡында һөйләп, Емештең күңеленә бөтмәç-төкәнмәç ғорурлыҡ һәм дәрт өçтәне. Уның үҙен дә йәшәргә, көрәшергә өндәне. Ә инде газетаның баш мәҡәләһендәге:

«Коммунизм йәмғиәтендә синыфтар һәм дәүләт власе булмаç... Ауыл менән ҡала араһында ҡаршылыҡтар бөтөр. Фән, техника, сәнғәттең тулышып сәскә атыуына ирек бирерлек шарттар тыуыр. Унда икмәк өсөн ҡайғырыу, көслөләргә баш эйеү мәжбүриәтенән азат булғанға, кеше асын мәғәнәһендә ирекле һәм бәхетле булыр...» — тигән һүҙҙәр уны тәрән уйландырҙы ла, ҡанатландырҙы ла.

«Бына бит ниндәй тормош көтә алда! Их, йәһәтерәк шул көндө күрергә ине! Йәһәтерәк уҡырға, белергә лә, шул көндәрҙе тиҙләтеү өсөн, иң һыҙғанып көрәшкә тотонорға ине!»

Бынан ары Емеш «Яңы ауыл», «Татарстан» газеталарын, «Сәсән», «Белем», «Фән һәм дин» журналдарын ҡарап сыҡты. Унан тағы китапханаға юнәлде.

«Бөгөн нисек тә рус телендә китаптар һорап алам!»— тип уйланы ул. Һәм, ғәҙәтенсә, ниндәйҙер эске тулҡынланыу, ҡыуаныу тойғолары менән баҙыҡ атлап унда барып инде.

Ҡамилә апай бөгөн дә уны мөләйем ҡаршыланы. Емештең китаптарға, сихри ҡомартҡыларға осраған дәрүиш шикелле, ниндәйҙер ҡырағай ҡыҙыҡһыныу менән тотоноуын йылмайып күҙәтеп торҙо. Ахыр ягымлы, күкрәк тауышы менән:

— Что тебе дать, һеңлекәш! — тип һораны.

Емешкә уның шулай рус һүҙе ҡатнаштырып, ҡаты мишәр телендә һөйләшеүе бик ят та, ирмәк тә тойола, ҡайһы саҡта уның һөйләшеүенә яҡшыраҡ төшөнөр өсөн, китапханала ул кәрәгенән оҙағыраҡ та мыштырҙап тора. Ләкин бөгөн ул, бынан ары рус телендәге китаптарҙы уҡый башларға тип ҡырҡа ҡарар итеп килгәнгә, ахыры, үтә ярһыу ҙа, ҡыйыуһыҙыраҡ та ине. Ул, апайҙың үҙенә мөрәжәғәт итеүен ишетмәне лә, абайламаны ла. Китаптарҙың береһен һалып, икенсеһен алып, ҡыйыуһыҙланып тора бирҙе. Ҡамилә апай тағы өндәште:

— Ну, дорогая, һайланыңмы?

Емеш ниндәйҙер сая ҡыйыулыҡ менән уның алдына өс китап һалды.

Китапханасы апай, күҙҙәрен киң асып, күҙлек аҫтынан Емешкә төбәлде:

— Ошоларҙымы? Ты с ума сошла?!

Ҡыҙҙың йөрәге жыу итеп китте. Әммә сигенергә уйламаны.

— Эйе, ошоларҙы.

Ҡамилә апай китаптарҙы тағы бер ҡарап сыҡты. «Путешествие к центру земли», «Психология», Энгельс әҫәрҙәре....

— Дорогая, ошоларҙы аңлармын тип уйлайһыңмы? Пойми, эти книги еще не для тебя! — тип көләмһерәп тә, аптырап та тағы ҡыҙға төбәлде.— Энгельсте уҡымаҡсы! Вот тебе, философ! — тип, хатта үҙенә хас булмаған тауыш менән көлөп тә ҡуйҙы.

Күптән китап алһалар ҙа, сығып китмәй тегендә-бында ҡағылып, буталып йөрөгән Сабир менән Хөрмәт тә пырхылдап көлөп ебәрҙе.

— Философ! — Емеш улар яғына әйләнеп тә ҡараманы. Үҙһүҙлеләнеп, Энгельстең мәҡәләләр йыйынтығын Камилә апайҙың ҡулынан тартып тигәндәй алды ла «Маймылдан кешегә әйләнеүҙә хеҙмәттең тотҡан урыны» тигән яҙыуға төртөп күрһәтте.

— Бына ошо хаҡта белгем килә.

Унан Жюль Вернде лә үҙ алдына һалды:

— Ерҙең үҙәгендә нимә барын да белгем килә...

Китапханасы был сәйер ҡыҙға уның әҙерлеге әлегә был китаптарҙы уҡырға етерлек түгеллеген төшөндөрөп маташыуҙың файҙаһыҙлығын аңланы, күрәһең:

— Ладно, тогда быныһын да ал,— тип, хатта ул һайлаған «Психология» китабын да һондо.— Әйҙә, уҡып ҡара.

Емеш, ашҡынып, китапхананан сыҡты.

— Странная девочка,— тип ғәжәпләнеп ултырып ҡалды Камилә апай.— Көсһөҙ күҫәк күтәрер! На самом деле был ҡыҙыҡай срҙзы күҫәк күтәрергә уйлай түгелме һуң? — тип көлөмһөрәп һөйләнеп ҡуйҙы. Ә Емеш, күҙенә ал-ҡара күренмәй, ярым ҡараңғы оҙон коридор буйлап йүгерҙе: «Йәһәтерәк ятаҡҡа ҡайтайым, уҡып ҡарайым, шулармынмы икән?!»

Сабир менән Хөрмәт был ваҡытта беренсе ҡатҡа төшә торған баҫҡыста — икеһе ике яҡтан боҫоп тора ине. Емеште ошонда, ҡараңғыла, тертләтеп мәрәкә яһарға, әле генә китапханасы апайҙан ишеткән һүҙ менән уны үсекләргә ине малайҙарҙың ниәте.

Ярым ҡараңғы баҫҡысҡа килеп еткәс тә, ҡыҙ йөрөшөн әкренәйтмәне. Үҙенең бөтә йәнен-тәнен солғап алған ырһыуҙан, ҡултығына ҡыҫҡан тылсымлы китаптарҙан башҡа донъя барлығын бөтөнләй онотҡан ҡыҙ үҙен баҫҡыста көтөп торған малайҙарҙы ла абайламаны. Ә уларға ҡыҙҙы тертләтеп тә, үсекләп тә ҡыҙыҡ итергә кәрәк ине. Бына улар боҫҡан ерҙәренән бесәй кеүек атылып сыҡтылар ҙа икеһе ике яҡтан:

— Эй, философ! — тип, ҡысҡырып көлөп ебәрҙеләр. Ә Емеш баҫҡыстан яҙа баҫты ла дөбөр-шатыр тәгәрәп төшөп китте. Өс китабы өс яҡҡа ырғыны. Малайҙар башта ҡаушап ҡалдылар, унан кемуҙарҙан түбәнгә йүгерҙеләр. Был саҡта ҡыҙ, стенаға йәбешә-тотона, көскә тороп килә ине.

— Емеш, ҡайһы ерең ауыртты? — тип борсолоп һораны Хөрмәт.— Ныҡ ауырттымы, һылыу...

— Һай, ҡырағай, өркәк тай! — тип бошоноп шелтәләне Сабир.— Беҙ бит былай ғына, юрый ғына, ә һин...

— Ҡитаптарым,— тип ыңғырашып ҡуйҙы Емеш.— Уй, китаптарым...

— Ҡитаптарыңмы? Хәҙер!

Хөрмәт уларҙы йыйып, өрөп-ҡағып, ҡыҙҙың ҡулына тотторҙо.

— Мә, һылыу...

Уның тауышында үкенеү ҙә, йәлләү ҙә, ғәфү үтенеү ҙә бар ине. Ике ҡулды кеҫәгә тығып, иҫе китмәгән төҫ менән һөҙөп ҡарап торһа ла, Сабирҙең да күңеле тыныс түгел ине. Эйе, уйындан уймаҡ сығыуын көтмәгәйне бит ул.

Емеш китаптарын ҡултығына ҡыҫтырҙы ла, бүтән бер ни ҙә әйтмәй, юлында булды. Уның, берҙән, аяғы, ҡабырғаһы ауырта, икенсенән, ниңәлер, үкһеп-үкһеп илағыһы килә ине. Малайҙар ҙа, уңайһыҙланып, йыуашайып, тышҡа сыҡтылар. Аҡһай-аҡһай яй ғына китеп барған ҡыҙҙы күҙҙән юғалғансы ҡарап торҙолар.

— Аяғы һынмаһа ярар ине,— тип ысын күңелдән бошондо Хөрмәт.— Ҡалай яман ҡоланы.

— Аяғы һынһа, кеше баҫа алмай бит ул,— тип тынысландырҙы Сабир. Унан Емештең ҡылығына тағы йәне көйҙө.— Был хәтле лә ҡыр кәзәһе булыр икән. Йә, ни тип йығылып киткән булды инде? Их, һыҙырып, аҡылға өйрәтер кешеһе юҡ шул.

Сабир менән Хөрмәт балалар йортонан уҡ дуҫтар. Уйында ла, уҡыуҙа ла, хатта ашханаға ла бергә йөрөй улар. Емеш менән булашырға, уны үсектерергә лә берҙөй үк әүәҫтәр. Ләкин әле инде уларҙың уйҙары аймылышты. Хөрмәт Емеште йәлләп, үҙенең ҡылығы өсөн үкенеп уйланды. Ә Сабирҙең, киреһенсә, ҡыҙға асыуы килде. Юҡтан ғына ҡурҡып, баҫҡыстан йығылып китеүе лә, хатта оҙаҡ аҡһап барыуы ла, бөтәһе лә уның йәненә тейҙе. Ә инде уларҙың был яраҡһыҙ ҡылыҡтарына ла, аҙаҡ өҙәләнеүҙәренә лә берҙәй үк иғтибарһыҙ, хатта әйләнеп тә ҡарамай китеп барыуы уның бөтөнләй асыуын ҡабартты.

— Нимәгә шул хәтле һауалы был Емеш?! — тип сәмләнеп һөйләнде ул.— Харап, бай ҡыҙы тиерһең!

— Бай ҡыҙҙары хәҙер һауалы булмай, ти бит өлкән ағайҙар. Беләләрҙер,— тип күңелһеҙ генә көлөмһөрәп ҡуйҙы Хөрмәт.— Уларға хәҙер ышыҡланыр өсөн егеттең

байрак тигән елкәһе бик кәрәк, ти... Эйе, ысын, ятаҡта шулай һөйләшкәндәрен ишеттем... Ә Емеш ул үҙенсә бер ҡыҙ инде...

— Нисек үҙенсә?

— Нисек тип әйтәйем, үҙенсә булғас, үҙенсә. Бүтәнсә...

Сабир үртәнеп ҡул һелтәне.

— Ҡуй әле, йәнде көйҙөрөп бушты бытылдап торма. Ҡыҙҙар улар барыһы ла себен теймәç сер итер... Харап икән, уйнатырға ла ярамай, имеш!

Буй-һыны менән дә, үткер теле менән дә курсҭа берәнсе егет буласағы күренеп торған был һары сәсле, ҡыйыу ҡарашлы, үҙһүҙле матур малай, күрәһең, Емештең үҙенә иғтибарһыҙ булыуы, бигерәк тә бында килгәс, уны бар тип тә белмәүе өсөн ысынлап уҡ ғәрләнә ине. Әле инде уның йөрәге, Емештән был һауалылығы өсөн хатта үс алыу талап итеп, күкрәгенә һыймай тулап типте. Ҙур күңыр күҙҙәрендә ҡырағай ут уйнаны:

— Их, өйрәтер кешеһе юҡ! — тип тағы бер сәмләнеп ҡуйҙы.— Аҡылға ултыртыр инем мин уны!..

О бит Сабирҙең үҙендә лә ҡырағайлыҡ та, һауалылыҡ та етерлек ине. Етмәһә, уның холҡона Емеш менән Хөрмәткә таныш булмаған кенә ҡыуыу, үс алыу тойғоһо ла хас ине шикелле. Хәйер, уларҙың ниндәй кеше булыуын алдан әйтеүе ҡыйын, әлбиттә. Хөрмәт тә, Сабир ҙә үҫмерҙәр генә бит әле.

## VII

Былай ҙа ҡар етерлек ине. Әле инде аҙна буйы ҡотороңған февраль бураны ауылды бөтөнләй тип әйтерлек күмеп ташланы: Ләпәк өйҙәрҙең мөрйәһе генә күренә. Урамға хәтле шулай яуһа, йырып йөрөр әмәл дә ҡалмаç. Бер уйлаһаң, яуһын әйҙә. Ҡар түгел — икмәк яуа лабаһа!

Өйөк төбөнән ҡапҡаға, унан урам уртаһына хәтле юл ярып сыҡҡас, Иштуған, көрәгенә таянып, оҙаҡ ҡына тирә-яҡҡа күҙ ташлап, төрлө уйҙарға бирелеп торҙо. Яңы һауған һөт күбәктәре шикелле йомшаҡ өрпәк ҡар бөрсөктәре наҙланып ҡына ергә ҡуна, әле генә көрәп тазартылған юлды ҡайтанан күмә. Ҡыҙыл яр башында малайҙар сыр-сыу килеп сана шыуа.

«Уйнаһындар. Йомшаҡ ҡар өҫтөндә айыу балалары шикелле аунаған малай саҡтар бер кемгә лә мәңгелеккә бирелмәй бит»,— тип моңһоу ғына уйланып алды. Ҡултығына папка ҡыҫтырып, яй ғына үтеп барған Баҙыян еңгәне Собхан старшинаның бер саҡ мәктәп хеҙмәтен үтәгән, хәҙер ауыл Совете менән ширкәт идараһы урынлашҡан өйөнә инеп киткәнсе күҙе менән оҙатып ҡалды: «Ауыл Совете рәисе. Совет власе... Етмәһә делегатка! Бына һиңә Баҙыян еңгә! Ысынлап та, әле ҡасан ғына аш-һыу бешереү, мал-тыуар ҡарауҙан башҡаны белмәгән ябай ауыл ҡатыны инде дәүләт күләмендә эш алып бара. Нисек тә эшләй бит әле! Тап хужаларса, аҡыллы, аңлы хужаларса. Бер уйлаһаң, аптырарлыҡ та. Уның әле грамота яғы шәп түгел, әлбиттә. Иштуған уға әле аҙ-маҙ яҙырлыҡ, ижекләп тигәндәй газета-журнал уҡырлыҡ ҡына белем бирә алған. Шулай ҙа Баҙыян еңгә инде Илсеғолда иң аңлы ҡатындарҙың береһе. Үҙен тормоштоң ҡоло итеп түгел, ә ысын хужаһы итеп тота белә ул хәҙер. Иң мөһиме — үҙе дөрөҫ тип ҡабул иткән яңы хәҡиҡәткә бүтәндәрҙе лә ышандырыу, үҙ артынан уларҙы ла эйәртеү һәләте бар унда. Күрәһең, электән килгән баҫалҡы һәм ултыраҡ аҡылы, тормош күренештәренә, кешеләргә ҡарата булған төплө ҡарашы уға хәҙерге ҡатмарлы шарттарҙы ла аңларға ярҙам итәлер. Ул бит ҡыйыу, яҡты өмөтлө аҡыл эйәһе ике кеше менән оҙаҡ ҡына йылдар йәнәш йәшәне. Уның береһе — Тимербай ағай, икенсеһе — Ҡарасәс әбей ине. Тормоштоң бөтә яҡтарына дөрөҫ төшөнөргә, кешеләрҙе танырға, уларҙың ҡайғыһын, шатлығын аңларға өйрәнде уларҙан. Дөрөҫ, ҡайһы саҡта бик ауыр булып, тормош күтәргеһеҙ йөк булып елкәгә атланған ваҡыттарҙа ул ире менән бейемен «сабыйҙар» тип атай, уларҙың яҡты өмөттәрен сабыйлыҡҡа һанай ине.

— Донъяның аҫты-өҫкә килеп, тирә-яҡта бәхетһеҙлек тә хаҡһыҙлыҡ ҡына хөкөм һөргән бер мәлдә, ниндәйҙер яҡты киләсәккә, матур тормошҡа өмөт тотор өсөн, йә диуана йәки төптө алйот булырға кәрәктер,— ти ине ул.

— Яҡшыны өмөт итергә кәрәк, ә яманы уның үҙе лә көттөрмәй килер,— тип йомшаҡ ҡына кире ҡаға ине Ҡарасәс әбей килененең был фекерен.— Яҡшыны, яҡтыны өмөт итеүҙән дә кешене мәхрүм итергә ярамай ҙабаһа, килен!

Бер ҡараһаң, улар диуана булмағандар икән шул: кешене кеше иткән ғәзел, яҡты замандың килерен тойғандар, ышанғандар. Үтә ҡараңғы көндәрҙә лә шул ышаныс менән йондоҙ кеүек яҡтырып йәшәгәндәр. Шулай булғас, улар өмөт иткән бәхетле көндө күргән Баҙыян еңгә нисек киң баҫып йөрөмәһен хәҙер?! Был көндө бит уның өсөн ире Тимербай — йырсы, иждадсы Тимербай, өмөт итеп, инанып ҡына түгел, көрәшеп, ҡанын-йәнен биреп яулаған! Тик бына ҡыҙҙары ғына артабан уҡырға теләмәнеләр. Дүртенсе класты тамамланылар ҙа: «Әсәйебеҙҙе яңғыҙ ҡалдырып, ситкә китеп йөрөмәйбеҙ»,— тинеләр. Ә Тимербай ағай уларҙы уҡытырға теләй ине. Хәйер, былай ҙа юғалып ҡалмаҫтар. Үҫә, нығый барған ширкәт уларға үҙе оло мәктәп булыр. Эшләрҙәр ҙә, үҫерләр ҙә...»

Был уйҙарға эйәреп, ни өсөндөр Иштуғандың күҙ алдына айырым кешеләрҙең яҙмыштары, тарихи боролош заманы килтереп ҡуйған ҙур, ҡатмарлы мәсьәләләр килеп баҫты. Аслыҡ йылдан һуң Илсеғолда төҙөлгән ерҙе бергәләп эшләү ширкәте көсәйеп, йылдан-йыл нығынып бара. Берәүҙәрҙең уға мөхәббәте, икенселәрҙең асыуы арта. Дөрөҫ, Илсеғол кескәй ауыл. Унда бигерәк тә хәҙер, революция йылдарында, граждандар һуғышы ваҡыттарында, ике яҡҡа бүленеп, ҡаты бәрелештәр үткәргәндән һуң, тормош хәле яғынан ауыл кешеләре бер төрлөрәк булып ҡалды. Күренеп торған үтә бай ҙа, бөлөп бөткән үкһеҙ ярлы ла юҡ һымаҡ хәҙер. Ләкин уға ҡарап тормоштоң ҡатмарлылығы кәмейме ни? Бына Шымбай ҡартты ғына ал. Уның ҡаресле икәнлеге, яҡшы кешеләргә ҡаршы һәр саҡ аҫтыртын этлек эшләп йөрөүе һәр кемгә билдәле. Ширкәткә ҡарата ла уның яҡшы уйҙа түгеллеге, мөмкинлек тапһа, уны тарҡатырға үҙенең күп йыллыҡ тәжрибәле отҡоу көсөн йәлләмәйәсәге асыҡ. Әммә һин уны ҡулаҡ тип тә, дошман тип тә атай алмайһың. Сөнки ул ялсы тотмаған. Ләкин ғүмер буйы байҙарға ярап, яҡшыны быуып, яманды күтәрмәләп йәшәгән. Хәтта әле лә ошо кәсепте дауам итеүҙән өмөт өҙмәгән һиллыҡ бер йән. Ә бит ширкәт ҙурайған, халыҡтың аңы артҡан һайын, уға ындай мөмкинлек бөтә барасаҡ. Бының өсөн Шымбай ҡарт берҙәм хужалыҡты ғәфү итерме ине! Әлбиттә, юҡ.

Ширкәтте тора-бара күмәк хужалыҡҡа әйләндереү ҡыйын буласаҡ. Эштәр ҡатмарлана ғына бара. Етмәһә,

Шундай сакта Хаммат ағай ҙа янда түгел бит әле. Бер уйлаһаң, уның тағы ла яуаплы эшкә күсерелеүе ҡыуанысլы хәл. Тик бына хәҙер Иштуғанға көндәлек эштә кәңәшсе булырҙай кеше лә ҡалманы тиерлек. Дөрөҫ, Әхәт бар. Әммә ул дыуамалдың үҙенә етәксе, кәңәшсе кәрәк. Ә бит заманы ниндәй? Эйе, ошо арала волоскә барып, Хаммат ағай менән ҡайһы бер эштәр хаҡында кәңәшеп ҡайтмай булмаҫ. Бәлки, үҙе лә килеп сығыр әле...

— Һай-йт! На, ҡара юрға!

Иштуған, ашығып, артына боролдо. Унда үҙенең дә, атының да майы тышҡа бәреп ялтырап торған Әхмәтша юрттырып бара ине.

— Ҡалағамы? Юлың уң булһын, купец!

Әхмәтшаның йөҙөндә һалҡын йылмайыу ҡатып ҡалды. Ул көрткә батҡан ауыр йөклө сананы ҡабаланып тартып маташҡан атының арҡа буйына сыбыртҡы менән һыҙыра һуҡты:

— Уңыуы ҡоро‌һон ул юлдың...

«Бына быларҙы ла аңла»,— тип уйланы Иштуған.— Күпме ауыр задание һалына, сауҙа итеп маташыуҙың урынһыҙлығы аңлатыла, улар һаман үҙенекен итә. Сәрбиямал бит инде ул, тилекәй, ғүмер буйы шулай байбисә булыу менән хыялланды. Йәпәһе, сауҙагәр, байбисә!

Иштуған бит нисә тапҡыр уның менән һөйләшергә, сауҙаны ташлау кәрәклеген аңлатырға тырышып ҡараны. Намыҫлы хеҙмәт менән йәшәй башларға өндәне.

— Көнләшәһеңме? Мин бай булғанға, шәп торғанга эсең көтөрҙәйме? — тип эре һуҡтырып ҡаршыланы уны Сәрбиямал.— Минең хоҙай биргән бәхетемде тартып алмаҡсы булаһыңмы? Зимагур! — тип екеренде.

«Ниңә мин уның менән һөйләшеп торам әле? Кем ул миңә? Әйҙә, сәнселеп китһен!» тип үҙ-үҙен тынысландырырға тырышты Иштуған. Ләкин бер аҙҙан тағы барҙы. Ошо бисә ҡасандыр ғәзиз атаһының ҡатыны булып торғанғамы әллә үҙҙәренең ауыр бала сағы уның ҡулында үткәнгәме, яҡын күренә ине. Хатта байлыҡ ҡоло булмаһа, был егәрле, тырыш, эшсән ҡатындың тормошо бөтөнләй яҡшы юлдан китә алыр ине тип ышана ла ине Иштуған. Шуға, ахыры, әле бына Әхмәтшаның китеүен күргәс: «Беҙҙең төп бурыс — аңлатыуҙан тора лабаһа... Тағы бер һөйләшеп ҡарарға кәрәк әле», — тип уйлап ҡуйҙы Иштуған.

Күлдөксән генә йүгереп сығып, тупһанан ҡысҡырған Айһылыу уның осһоҙ-ҡырыйһыҙ уйын өҙҙө:

— Ништуған, сәй эсергә ҡайт!

* * *

Сәрбиямал, ябалаҡ шикелле суҡайып, иртәнән бирле тауарҙары арһында ултыра. Уның өй алдын ғына бүлеп ҡалған кескәй лавкаһында метрлы тауар ҙа, сәй-шәкәр ҙә, муйынса, йөҙөк-беләҙек тә — бөтәһе бергә буталып ята. Хужабикәнең үҙ һүҙе менән әйткәндә: «Аллаға шөкөр, йәнең ни теләй — шул бар». Алыусылар ҙа инәлтмәй, инеп-сығып ҡына тороусан бында. Ҡайһы берҙәре ярәк-яраҡ алырға, ә ҡайһы берҙәре былай, ҡыҙыҡһынып, үҙ араларынан сыҡҡан тәүге купецте, Илсеғол кенеләренә ят булған яңы байҙы, күрер өсөн генә лә инеп күҙ һатып тороусан.

Бөгөн ниңәлер кеше һирәк инә. Көн буран булғанға, ахыры, Сәрбиямалдың үҙен дә йоҡо баҫа. Ғәҙәттә уйға бирелеү, үткәнде иҫкә алыу кеүек ҡылығы булмаһа ла, касандыр Ҡарасәс әбейҙән ишеткән мәҙәк бер хикәйәтте йоҡо аралаш хәтерләп тә ала.

Был уның тәүбашлап ҡалаға йөрөп кәсеп итә генә башлаған сағы, герман һуғышының һуңғы йылы ине. Сәрбиямал, ауылдың бүтән байҙарына эйәреп, ҡалаға ит, он алып барып һата. Унан сәй, шәкәр, кәрәсин, тоҙ кеүек нәмәләр тейәп ҡайта. Юлы уңып, табышы арыу булһа, кәйефе күтәрелеп, кешеләргә яҡты йөҙлө, яҡшы һүҙле булып китә. Тап бына шундай кәйефле бер сағында, уларға Ҡарасәс әбей килеп инде. Уның шулай сабыртмай ғына килеп сыға торған ғәҙәте бар ине. Әбейҙе Сәрбиямал бик ихлас ҡаршы алды. Геүләтеп самауыр ҡуйып ебәрҙе. Майлы ҡоймаҡ та бешеп өлгөрҙө. Борсаҡ хәтле генә итеп ваҡланған шәкәр ҙә, хатта үтә йоҡа телгән хуш еҫле әнис алмаһы ла сәй янынан урын алды. Ә Ҡарасәс әбейҙең һәйбәт сәй янында тел тешләп ултыра торған ғәҙәте юҡ. Әленән-әле көләмәс һүҙҙәр, мәҙәк ваҡиғалар табып ҡына тора ул. Ғәҙәттә Сәрбиямал уны, юҡ-бар бытылдап йөрөүсе ҡарсыҡ, тип иҫәпләгәнгә, гөрөф-ғәҙәт ҡушҡанға ғына ихлас тыңлаған кеше булып ултыра торғайны. Әммә бөгөн әбейҙең мәҙәк хикәйәттәре араһында береһе Сәрбиямалға бик оҡшаны.

Үҙенә хас булмағанса кинәнеп көлә-көлә тыңланы был хикәйәтте. Дөрөҫөн әйткәндә, хикәйәт ул хәтле мәҙәк тә, көләмәс тә түгел ине. Уның бөтә ҡыҙығы һөйләүсенең оҫталығына бәйләнгән. Шуға күрә был бик үк күңелле булмаһа ла, ғибрәтле яғы булған хикәйәт тә сәсән Ҡарасәс әбейҙең һөйләүендә хатта Сәрбиямал кеүек ҡоро күңелле кешене лә көлдөрөрлөк булып сыҡҡайны.

— Борон заманда ҡалала ике татар купеце күрше йәшәгән, ти, — тип һалмаҡ ҡына башлап киткәйне Ҡарасәс әбей был хикәйәтен. — Шуларҙың береһенә дуғалай күкрәкле, уҫлаптай йоҙроҡло, харап егәрле бер башҡорт егете күсер булып ялланған, ти. Егет купецтең атын да ҡарай, күсере лә була, утынына-һыуына ла бара, тюк-тюк тауарҙарҙы, мендәрҙәй еңел күтәреп, лавкаға ла ташый икән, ти. Әйтеп тораһы юҡ, бер үҙе әллә нисә хеҙмәтсенең эшен башҡара ла ҡуя икән, ти. Быны күреп, икенсе купецтең эсе көтөрҙәй башлаған, ти.

«Миңә лә шундай талымһыҙ эшләй торған хеҙмәтсе кәрәк тәбаһа. Туҡта, был егетте берәй төрлө арбап үҙемә алып булмаҫмы?! Күршегә һиҙҙермәй генә ҡылын тартып ҡарарға кәрәк», — тип уйлаған, ти, был купец. Шулай яйын эҙләп йөрөй торғас, бер кисте был егетте үҙенең лавкаһына саҡырып индергән, алсаҡланып хәл-әхүәл һорашҡан, хатта үҙ кешеләй итеп, егеттең арҡаһынан ҡаҡҡылап та алған, ти. Теге егеткә ни, бахырға, мин әйтәм, күпме кәрәк?! Үҙенең ата-әсәһе шикелле, яҡшы һүҙ, яҡты йөҙгә ирей ҙә төшә икән был да. Бик тә бер ҡатлы икән, ти, бахырың. Купецең уның был яғын бик тиҙ шәйләп алған, ти.

— Һәйбәт егет һин, һәйбәт. Тик бына хужаң нисек икән һинең? Һәйбәт кешенең ҡәҙерен белә торған кешеме икән? — тип ҡылын тартҡылап ҡарай, ти, бының.

— Хужам да һәйбәт, һуҡмай-ҡаҡмай, яман һүҙ әйтмәй. Харап алсаҡ, мөләйем кеше. Тик бына тамаҡ ҡына туйып етмәй. Шуныһы ҡыйыныраҡ. Мин бит уға шул тамаҡ хаҡына ғына ялланғайным... — тип әйтеп һалған, ти, егет. Был зарҙы ишеткәс, купецтең эсенә йылы төштө, ти. «Былай булғас — ҡаптың, энекәш!» — тип эсенән генә кинәнеп, көлөп алды, ти.

— Дөрөҫ! Дөп-дөрөҫтө әйтәһең, егет! — тип устарын бер-береһенә шапылдата һуғып та ҡуйҙы, ти. Унан һәр һүҙҙе оҙон һуҙып: — Ул һине, моғайын, ир-тә-эн бер, ки-и-с бер, ир-тә-ә-эн бер, ки-и-с бер генә ашаталыр

әле? — тип тә һораны, ти. — Шулай бит, һүҙем хаҡ бит! — тип егеттең күҙенә секерәйеп ҡараны, ти.

— Шулай, — тип баш ҡаҡҡан булды, ти, теге бахыр, өлкән сабый.

Купец баҫҡан ерендә зыр өйөрөлөп китте, ти. Унан бик сцел, йәһәт итеп:

– Ә миндә булһаң, иртә лә бер, кис тә бер, иртә лә бер, кис тә бер ашар инең. Һис тә ас булмаҫ инең. Шулай бит! — тип әйтте, ти. «Ир-тә-ән бер... кис-с бер...» тип оҙон-оҙаҡ һуҙып әйтеү менән «иртә лә бер, кис тә бер» тип йыш-йыш әйтеүгә ҡарап мәғәнә үҙгәрмәүен абайларға өлгөрмәгән теге ғәмһеҙ сабый, тағы: «Шулай»,— тип баш ҡаҡты, ти. Уйларға түгел, ә ҡушҡанды ғына эшләргә, яйы килгәндә ныҡ ҡына ашарға яратҡан был егеткә кешеләрҙең бер төрлө уйлап, икенсе төрлө һөйләп торған ҡылығы әле таныш түгел икән. Йәнәһе уның күңелындағы кеүек, кешеләр нисек уйлай, шулай һөйләй, имеш, тип ышана икән, ти, был егет.

Шулай итеп, тегенең оҫта һүҙ уйнатыуына алданып, егет күрше купецкә эшкә күсте, ти. Әммә бында ла уны «иртән бер, кис бер генә» ашаталар, башҡа ваҡытта тын да алдырмай эшләтәләр, ти...

Дөрөҫ, башта был хикәйәтте Сәрбиямал мәҙәк кенә итеп тыңлағайны. Әле инде уйлап ҡараны ла үҙенсә һығымта яһаны: «Атаҡ, һөйләшә белеү ҙә ҙур һөнәр икән дәһә! Һөйләшә белгән кеше, алйоттоң ғына түгел, аҡыллының да ҡайһы саҡта башын әйләндерә ала икән. Әйткәндәй, кешенең башын әйләндерә лә белмәһәң, һинән ниндәй юнле купец сыҡһын?!»

Был һығымта уның ҡоторсоҡ күҙҙәренән йоҡоно һыпырып алғандай итте. Сәрбиямал дауыл осорған ҡамғыктай өйөрөлөп лавкаһында зыр әйләнеп алды. Ҙур яҫы устары менән берсә прилавкала ятҡан тауарҙарын, берсә үҙенең Батыйма тутайға оҡшатып кейеп ебәргән ҡабырыҡкы өҫ-башын ләззәтле һыйпаштырып ҡуйҙы. Был минутта уны айырата ҡомһоҙ эш, хәрәкәт, сауҙа теләге солғап алғанын тойғандай, лавкаға ике ир килеп керҙе. Сәрбиямал ир затын айырата илгәҙәклек менән ҡаршы алыусан ине. Әле лә уларға бары тик шырпы менән тәмәке генә кәрәк булыуға ҡарамаҫтан, һәлмәк янбаштарын мимылдатып, бер баҫаһы урынға биш баҫып, өйөрөлөп йөрөнө. Сөм-ҡара бәләкәс күҙҙәрен төптән йылтыратып

— Рәхим генә итегеҙ. Ала ғына күрегеҙ, — тип тегеләргә алмаш-тилмәш майлы ҡараш ташлап торҙо. — Тағы нимә бирәйем? Рәхим итегеҙ, — тип өҙәләнде.

Ирҙәр сығыуға көләшә-һөйләшә ике ҡатын килеп инде. Улар, йәшлектәрен ситтә батраклыҡта үткәреп, йотлоҡтан һуң ғына ауылға ҡайтып донъя көтә башлаған ағай-энеле Мөҡим менән Хатиптең ҡатындары ине. Сәрбиямал уларҙы ла үтә ихлас тәтелдәп ҡаршы алды.

— Йә, киленкәйҙәр, ни алаһығыҙ? Әйтегеҙ, йәнегеҙ ни теләй, барыһы ла бар. Аллыһынан-баллыһынан, алмаһынан-хөрмәһенән тигәндәй... Эйе, йырҙа әйтелгәнсә:

Алмаһы ла бар беҙҙә,
Хөрмәһе лә бар беҙҙә.
Йәнең теләгән зат биреп
Хөрмәт итәйем һеҙгә, —

тигәндәй... Алланың биргәненә шөкөр, барыһы ла бар.

Апһындарҙың өлкәне — Мәҡимдең ҡатыны Нәғимә — аҡ борсаҡ төшкән күк сатингә төртөп күрһәтте.

— Бынауы төҫтән күлдәклек алайыҡ тип йөрөйбөҙҙә бит... Бигерәк ҡыйбат һорайһың шул. Арзанырак бирһәң, апһыным менән икәү бер иштән тектереп киймәксе инек.

— Ҡыйбат тип ни, тейер хаҡы шул ғына. Унан да кәмгә бирһәм, үҙемә ни табыш ҡала?

— Хитровтар лавкаһында арзанырак та алып булатиҙәр ҙә бит, беҙ ни урыҫса белмәгәс...

— Йә, барыбер ошонан арзан тауарҙы бер ҡайҙан да таба алмаҫһығыҙ, — тип өҙөп һатыулашты Сәрбиямал.— Үҙ мосолманыңдан алмай, кафыр Хитровтарҙан алып тормаҫһың инде! Гонаһынан ҡурҡырһың, мосолманҡайым.

Алыусының дини тойғоһона сиртеүгә хәтле барып еткән татлы тел, күрәһең, үҙенекен итте — апһындар икеһе бер төҫтән күлдәклек үлсәтеп алдылар. Аҡса тигән ҡанһыҙ шайтанды тейешенсә ауыҙлыҡларға ла, иҫәп-хисапты юнләп белергә лә әле өйрәнеп етмәгән ошондай бисә-сәсәләрҙең башын ҡаңғыртып, берҙе бишкә арттырған саҡтарҙа Сәрбиямалдың бөтә йәнен ҡомһоҙ кинәнес солғап алыусан. Әле лә ул аҡсаларын бер һалып, бер алып, хатта лавкаһында сит кешеләр барын да онотоп, ләззәтләнеп торҙо. Теремек, шаян ҡылыҡлы Нә-

гимәнең иғтибарынан был, әлбиттә, ситтә ҡалманы. Ул бер ҡатлы, көләкәс тауыш менән:

— Аҡсаны был тиклем яратырға ҡайҙан өйрәндең һин, Сәрбиямал еңгә? — тип һорап ҡуйҙы. Унан яуап та көтмәй, көлөп, артабан дауам итте. — Минең атайым мәрхүм: «Борон заманда йәшәгән бер ниндәйҙер аҡыл эйәһе: — Нәфсе башта үрмәксе ауы хәтле генә була. Унан арҡан хәтлегә әйләнә. Ул башта — ят, унан — ҡунаҡ, һуңынан — хужа була, — тип әйткән, имеш. Шуға күрә нәфсене шаштырырға ярамай, имеш»,— тип һөйләй торғайны. Һин, еңгә, шул нәфсе ҡоло булып китеүҙән бер ҙә ҡурҡмайһыңмы ни?

Ул Сәрбиямалдың йымылдап торған йәшел атлас күлдәгенә, оҙон суҡлы ебәк аҡ шәленә, майы тышына сығып торған тос, йоморо ҡулдарына ҡарап алды ла шаяң көлөп ебәрҙе:

— Хас теге Батыйма тутай булып алдың бит, еңгә. Ништәһеңдер, һинең үҙеңде лә бит хәҙер «Сәрби тутай» тип йөрөтәләр. Мин әйтәм, өлкән ҡатын ҡорона ингән кешенең исемен боҙоп «Сәрби» тип ҡыҫҡартып ебәреү яраймы һуң инде. Был бит инде, нисек кенә әйтһәң дә, түбәнһетеү, кәмһетеү була лабаһа! Әммә ни эшләмәк кәрәк, ҡушаматты ла үҙең теләгәнсә генә ҡуштырып булмай икән шул, еңгә, шулай бит? Етмәһә, ҡайһы бер уҫалдары «Сәрби тутай» тигәнгә «мин-мин» тип тә өҫтәп ебәрә, еңгә! «Мин-мин Сәрби тутай», тиҙәр, суҡынғандар. Имәһе һин, Сәрбиямал еңгә, «мин дә мин, минеке лә минеке» тип кенә һөйләшәһең, имеш! Мин әйтәм, Сәрбиямал еңгәнең быға иҫе китә буламы һуң? «Тутай» булғас, «тутай» инде! Ни эшләтерһең?! Ә бүтән бисәләрҙең береһенең дә, мин әйтәм, тутай булырға ҡулдарынан килмәй бит! Көнсөлөктән һөйләйҙәр, көнсөлөктән! Ҡеше бит ул шулай инде, юҡ булһаң, бирә алмай, бар булһаң, бүрә алмай, шулай бит, еңгә?!

Сәрбиямал Нәғимәнең тел төбө асылда ҡайҙа барғанын һиҙеп торһа ла, уны һалҡын сабырлыҡ менән тыңланы. Һуңғы йылдарҙа ул артыҡ йыуанайып, түмәр ҡапартаға оҡшап китеүен иҫкә алмағанда, тышҡы ҡиәфәте менән бик аҙ үҙгәрҙе. Ул әле лә шул өйрәк шикелле самһоҙ, йылғыр хәрәкәтле, өлгөр ҡуллы етеҙ бисә ине. Ә быны тауышындағы, һөйләшеүендәге айырманы ер менән күк араһы тиһәң дә хата булмаç. Хәҙер ул бер ҡасан да, бер кемгә лә тауышын күтәрмәй, элек етем ба-

лаларына өндәшкәндәге кеүек тупаҫ тауышты унан хәҙер ишетә алмайһың. Бөтә кеше менән дә ул хәҙер йомшаҡ ҡына һөйләшә. Тик күҙе генә һаман элеккесә ҡорос саткылар сәсрәтеп, ҡайҙалыр ситтә, һаҡта тора. Бигерәк тә һатып алыусыға, йәки аҡсаға ҡараған саҡта, ҡапыл тоҡанып, ағыулы уҡ шикелле йөрәкте өшөтөп ебәрә. Эйе, тап шулай: бына хәҙер-хәҙер атылып китерҙәр, ҡорбанына ҡаҙалырҙар, йәнен алырҙар төҫлө...

Эйе, Сәрбиямалда хәҙер бер үк ваҡытта ике кеше, дөрөҫөрәге ике шайтан йәшәй. Уның береһе — арбай, икенсеһе — саға. Һәр икеһе өлгөрөп килгән яңы байға тоғро хеҙмәт итә ине.

Әле лә ул бына Нәғимәнең кинәйәле һүҙҙәренә ҡарап һис тә мөнәсәбәтте киҫкенләштерергә ашыҡманы. Аяҡты тарбағыраҡ баҫып, тасылдатып иҙәнгә бер төкөрөп алды ла, танауҙы сәкәйтеп:

— Нисек итәһең? Купец булдым шул, үәт! — тип тып баҫып ҡуйҙы. Унан түшен-башын һыйпаҡлап, үҙ хәленән үтә ҡәнәғәт төҫ менән: — Күрә алмайҙар, килен, күрә алмайҙар. Бәхетемдән көнләшәләр,— тип Нәғимәнең һүҙен ҡабатланы. — Бәхетем булғас, үтә таҙарып та киттем шул... Йән тыныслығы, бәхет шулай итте. Элекке, анауы килмешәк Байгилденең ҡырым сиреүе балаһын туйҙырып торған саҡтағы кеүек эт көнөндә йәшәһәм, ит ҡуныр инеме ни? Алланың биргәненә шөкөр, йәнем тыныс. Әхмәтшам ни... Ҡәҙерләп, һөйөп-үбеп кенә торғас ни. Май йомғағым, тип кенә һөйә бит ул мине! Шәмсиәһен тартай кеүек арыҡ булғанға ташланым, ти бит ул... — тип тәтелдәне. Шул уҡ ваҡытта һатыу итеүҙе лә онотманы. Апһындар алдына шау биҙәк йәшел кешмир яулыҡ сығарып һалды.

— Йә, килендәр, бынауы матур яулыҡты ла алып ебәрегеҙ. Ҡалай килешер. Ун йылға йәшәреп китерһегеҙ. Арзан ғына бирәм...

Тап ошо яулыҡ өсөн ҡыҙыу һатыулашыу барған саҡта лавкаға Иштуған килеп инде.

— Һаумыһығыҙ, апайҙар, еңгәләр!

Сәрбиямал уның сәләменә яуап бирмәне. Уны күҙ ҡарашы менән сағып үлтерерҙәй булып, ҡомһарып китте. Ул закон буйынса үҙенә һалынған бөтә төр һалымдарҙы ла, нэпмандарға булған барлыҡ ҡыҫымдарҙы ла ауылда яңылыҡ урынлаштырыу өсөн көрәш алып барған Иштуғандан күрә, уның ҡотҡоһонан килеп сыҡҡан

шәхси бәхетһеҙлек тип ҡабул итә. Шуға күрә уны тере-лей өҙгөләп ташларҙай булып йәшәй ине.

Иштуған Нәғимә янына килеп баҫты:

— Һин дә, еңгә, купец лавкаһына йөрөйһөң икән дә.

— Йөрөргә тура килә шул, ҡәйнеш. Ҡалай итәһең.

— Тиҙҙән кооперация магазин асасаҡ.

— Беҙҙәме? Ҡит, булмаҫ. Ғүмерҙә булмағанды ни?

— Ниңә булмаһын? Илсеғол магазин асмаҫтай ауыл-мы ни?

— Түгел дә ул.

Сәрбиямал Иштуғанға тағы ла секерәйеберәк ҡа-раны.

— Асҡас һөйләрһең. Күрербеҙ. — Нәғимәгә татлы йылмайып өндәште:— Йә, яулыҡты алаһығыҙмы, килен?

— Ҡыйбатыраҡ шул, — тине Нәғимә, икеләнеп. — Бик алғым килә лә бит...

— Арзаныраҡ бирһәң, уйлап ҡарар инек әллә, — ти-не икенсеһе. — Былай аҡсабыҙ етмәй шул...

— Атаҡ-атаҡ, ҡыйбат була тиме ни! Ошондай кеш-мир яулыҡҡа ла аҡса йәлләп торғас. Ҡит бынан! Ҡара, алмаһағыҙ, үкенерһегеҙ! Аҙаҡҡыһы. Ҡабат быңдай яу-лыҡтарҙы эшләмәйҙәр, ти. Атаһы шулай тип ҡаланан ишетеп ҡайтҡан. Сәүит булғас, бисәләр яулыҡһыҙ йөрө-һә лә ярар, тип әйтәләр, имеш, ти.

— Аһа, ысынмы икән? Ҡайҙан ишеткән тиһең, еңгә?

— Ҡаланан тим дәһә. Ырымбурҙың үҙенән. Йә, төр-ҙөкмө?

— Һай, ахмаҡ! — тип ҡуйҙы Иштуған, тамам асыуы килеп. — Ауыҙың һөйләгәнде ҡолағың ишетәме һинең, юҡмы?! Төптө ялғанды бытылдап тораһың дабаһа!

Унан ҡатындарға боролдо:

— Еңгәләр, алмағыҙ яулығын! Унан бер нәмә лә ал-мағыҙ. Бына тиҙҙән кооперация магазине асабыҙ. Шун-да бөтәһе лә булыр. Алырһығыҙ! — тине. «Байыу хыялы менән ағыуланған кеше ысын байҙан да ҡомһоҙораҡ була, күрәһең... Ә мин уны аңлатыу юлы менән был уй-ҙан дүндермәк булам. Ахмаҡлыҡ табаһа был!» — тип сөмләнеп уйлап алды.

Сәрбиямал уға ниндәйҙер бик әсе һүҙ менән яуап ҡайтарырға йыйынып:

— Ә һин... — тип ауыҙын асҡайны ла, Иштуған тағы ла ҡырҡыуыраҡ итеп:

— Сәрби тутай, һин дә аңла: кооперация магазинс тиҙҙән һинең үрмәксе ауыңды өҙөп ырғытыр! — тине лә ишекте шарт ябып сығып та китте.

Сәрбиямалдың ҡоторсоҡ күҙҙәренән бик оҙаҡҡа хәтле йөрәк өшөткөс һалҡын ҡорос саҡҡылар сәсрәп торҙо: «Ух, балшәүник! Ер йотҡоро! Ҡулыма бер килеп эләгерһең эләгеүен!» — тип, эсенән зәһәрләнеп янай ҡуйҙы.

## VIII

Ҡыҙҙар ятағы — иркен, ҙур бүлмә — яҙғы туғай шикелле төрлө тауыш менән гөрләп тора: һөйләшеү, көлөшөү, югерешеү, йыр һуҙыу, мандолин сиртеү бөтәһе бергә ҡушылып, йәшлек тигән ғәжәп бер донъяны тәшкил иткән бында. Йәшлек, тынғыһыҙ, тыйғыһыҙ йәшлек! Эй-й, һинән дә көслө, һинән дә матур нимә бар донъяла?!

Бөгөн шәмбе кис булғанға, ҡыҙҙарҙың күбеһе бүлмәлә. Башҡа көндәрҙә улар был ваҡытта кластарҙа дәрес әҙерләй, киноға, театрға бара, йыйылыштар үткәрәләр, лекциялар тыңлайҙар йәки үҙҙәре концерт бирә, спектакль ҡуя. Ә бөгөнгө кис һәр кемдең үҙенеке — ҡалай теләйһең, шулай үткәр.

Емеш тә койкаһында китап уҡып ята. Уның урыны иң түрҙә, тәҙрә янында! Күлдәй ҙур тәҙрә! Күпме теләйһең — шул хәтле айҙы, йондоҙҙарҙы күҙәт: иҫһеҙ-сикһеҙ зәңгәр бушлыҡта талғын ғына ай йөҙә, эңер сулпаны балҡый, арҡысаҡ, өлкәр, етегән йондоҙҙары емелдәп үтә... Йыһан киңлегенә хайран ҡалып ҡарап ята-ята, Емеш ҡайһы саҡта үҙенең ябай ер кешеһе икәнен дә онотоп китә, хыялы менән йондоҙҙарға барып олғаша. Тормоштоң ауырлығына, ғүмерҙең ҡыҫҡалығына, үлемдең ҡотолғоһоҙлоғона ышанмай башлай: ғаләм мәңгелек... Уның бер остоғо булған кешенең дә мәңгелек булыуы мөмкин дәһә?!

Һәр саҡ шундай ҡатмарлы тойғолар уята Емештә был урын. Дөрөҫ, күп ҡыҙҙар һыуыҡ тип тәҙрә янынан ҡаса, мейескә яҡыныраҡ урынлашырға тырыша. Ҡайһы берҙәре шулай ҙа өшөп, койкаларын ҡушлатып, одеялдарын ҡатлап бергә ята. Ләкин Емеш һыуыҡты таймай. Аҡ простыня ябылған һалам түшәк менән һалам мендәр уның өсөн урындың йомшаҡтан да йомшағы, простыня ҡатлап ябылған йоҡа ғына байка одеял — йылының да йылыһы. Нисек шулай булмаһын, был бит инде туңған

тәҙрәле, ҡырау атҡан ишекле ул үҫкән серек өй түгел. Бында, бурандың тыны ла һиҙелмәгән һайбәт бүлмәлә, ниндәй һыуыҡ булһын?! Эйе, урындың кәттәһе тейгән уға. Бына бит, әгәр күкте күҙәтеп туяһың икән, йөҙтүбәң әйләндең дә китап уҡырға тотондоң. Хатта ай яҡтыһында ла уҡып була! Тик бына аяҡтарын һындыра яҙып йығыла-тәгәрәй алып ҡайтҡан бынауы китаптарҙы уҡыуы уға, ни өсөндөр, ҡыуаныс, ләззәт биреүҙән бигерәк, көс.еткеһеҙ ауыр эш һымаҡ тойола башланы. Бына нисәнсе көн инде, ул дәрестән ҡалған ваҡытын шуларға бүлергә тырыша: «Һис юғы уҡып ҡарарға кәрәк тәһә! Аңлап булырмы-юҡмы икәнен белергә...» — тип, өндәй ул үҙ-үҙен. Әммә шунда уҡ китапҡа һуҙылған ҡулы утҡа пешкән кеүек кире тартыла: «Аңламауыңды белеүе ауыр булыр ҙа...» Ахыр, бөгөн килеп, уға бер аҙ ҡыйыулыҡ килде. Ул ҡарамай ғына тумбочканан бер китапты һонолоп алды. Тәүге битен асып оҙаҡ-оҙаҡ текләп ултырҙы: «Психология — кешенең психикаһын, аңын өйрәнә торған фән. Кешенең психикаһы, аңы ул — һиҙеү, тойоу, төшөнөү һәм фекерләү аша объектив реаллекте сағылдырырға һәләтле булған иң камил матдә... Ысын мәғәнәһендә фәнгә нигеҙләнгән психологияға төшөнөр өсөн иң элек материалистик философия белеменә эйә булырға кәрәк...» — тигән кеүек ҡатмарлы, ауыр һөйләмдәрҙе ҡат-ҡат уҡып ҡараны. Унан өмөтһөҙ баш сайҡап, китапты кире һалып ҡуйҙы:

«Мишәр апай белеп әйткән. Ҡайҙа ти инде ул миңә бындайҙарҙы аңларға?!» — тип бошоноп ятты. Унан Жюль Верндең «Ерҙең үҙәгенә сәйәхәт» тигән әҫәрен уҡырға кереште. Был китап та, уҡыусынан рус телен яҡшы белеүҙән тыш, география, геология, минералогия фәндәре менән танышлыҡты, физиктәр, химиктәр, палеонтологтар менән эңгәмәләшә алырлыҡ белеме булыуҙы талап иткәнлектән, Емештән ай кеүек алыҫ тора ине. Дөрөҫ, үҙһүҙле профессор Отто Лиденбрук та, уның яҡшы күңелле туғаны Аксель дә, ниндәй генә ҡатмарлы һәм ҡурҡыныслы шарттарҙа ла сығырынан сыҡмай торған һалҡын тәбиғәтле, батыр һунарсы Ганс та уға оҡшаны, бер янар тау кратеренән төшөп, икенсе кратерҙән лава менән бергә ер өҫтөнә ырғытылған саҡта ла юғалып ҡалмаған батырҙарҙың ер аҫты сәйәхәте, бигерәк тә ер аҫты диңгеҙендә күргән мөғжизәләре уны таң ҡалдырҙы. Шулай ҙа, күп һүҙҙәре аңлашылмау арҡаһында,

китаптан тиҙ һыуынды: «Йә, аҙаҡ тағы бер уҡып ҡарармын әле», — тип быныһын да ситкә ҡуйҙы. Унан Ф. Энгельстең «Маймылдан кешегә әүерелеүҙә хеҙмәттең тотҡан урыны» тигән әҫәрен ҡулына алды. Емеш кескәй генә сағынан уҡ үҙ йәшенә хас булмаған күренештәр хаҡында уй йөрөтөргә, өлкәндәр генә башҡара алырҙай эштәргә тотонорға ярата ине. Шуға ахыры күп ваҡыт ул үҙе лә, уның тирәһендәге кешеләр ҙә, бигерәк тә эш талап иткәндә, уның бала икәнен бөтөнләй онота торғайны. Ошо ғәҙәт, ахыры, уны бында ла әлегә үҙ аңы һыйҙыра алмаҫтай китаптарға баҙнатлы тотонорға ярҙам итә ине. Бына ул әле лә, быны аңларға минең йәшем дә, белемем дә етмәй бит тип икеләнеп тормаҫтан, уҡырға керешеп китте. Нисек кенә ғәжәп булмаһын, мауығып, ғәҙәтенсә, уйланып, бәхәсләшеп:

«Ҡасандыр, бынан мең-мең йылдар элек ерҙә кешегә оҡшаған маймылдар йәшәгән. Башта әкренләп, турайып баҫырға өйрәнгән... Ҡулына таш, таяҡ тотоп, аҙыҡ табырға белә башлаған — был уның маймылдан кешегә әйләнеүҙәге тәүге аҙымы булған... Эйе, ҡулы менән эшләргә өйрәнә башлаған маймыл! Дөрөҫөн генә әйткәндә, тап бына шул эш, хеҙмәт кешенең үҙен барлыҡҡа килтергән дә инде...» тигән кеүек тәрән философик фекерҙәр ҙә үҙенә ап-арыу аңлашылыуына ҡыуана-аптырай уҡыны. Күрәһең, бында килгәне бирле күҙҙән үткәргән бик күп китаптар, тыңланған лекциялар, дәрестәр уның аңын яҡшы уҡ киңәйтергә өлгөргәйне. Ысынлап та, элек бит ул кеше хаҡында фәҡәт дини-мифик әкиәттәрҙе генә белә, уларға һис шикһеҙ ышана. Адәм, Хауа, Ҡабил-һабил, Әҡлимәләрҙең яҙмышы, ер йөҙөндәге тәүге мөхәббәт, тәүге енәйәт ваҡиғалары менән йән атып мауыға ине. Был әкиәттәр үҙҙәренең серле романтикаһы, кешеләр араһындағы мөнәсәбәттәрҙең киҫкенлеге менән уны һәр саҡ таң ҡалдыра. Бигерәк тә кешенең ҡасандыр күктә, ожмахта йәшәүе, ергә аҙап өсөн генә ебәрелеүе, ҡасан да булһа бер саҡ, ул фәрештә дәрәжәһенә етеп, ҡайтанан яҡшырып, таҙарынып күккә, ожмахҡа ҡайтасағы Емештең күңелендә яҡты өмөт уята, уны яҡшылыҡҡа, камиллеккә, сафлыҡҡа саҡырып ҡына тора һымаҡ ине. Әле инде бына Энгельс яҙған был китап ул ятҡан, һис шикһеҙ, ышанған серле тормошто бөтөнләй юҡҡа сығара. Уны әкиәт тип кенә аңлата! Быға нисек ҡарарға? Нисек ҡабул итергә?! Тыуғандан бирле күңелгә һеңеп

килгән тылсымлы ышанысты алып ташлаһас, йөрәк бөтөнләй бушап, йән тамам аҙыҡтан мәхрүм булып ҡалмаҫмы һуң?! Етмәһә, кеше — маймылдан яралһын, имеш?! Бигерәк тә һыпатһыҙ ҙа бит әле ул маймыл тигәндәре!..

Етмәһә, ул кешенең ҡасан да булһа, хатта бынан мең-мең йылдар элек булһа ла, маймылға оҡшаған булыуын һис тә генә теләмәй ине. Ул бит бығаса үҙе ишеткән һәр бер нәмәне күктәр бейеклеге менән үлсәргә гәҙәтләнгән, бөтә бәхет, шатлыҡ, бар ғәҙеллек, хаҡлыҡ тик күктә, ожмахта ғына тип ышанып килгән. Шуға ахыры әле үҙе өсөн үтә ҙур яңылыҡ булған был хәҡиҡәт хаҡында оҙаҡ уйланып, кисереп ятты. Кеше ғүмеренең ерҙә яралып, ерҙә бөтөп ҡаласағын, кешене кеше иткән, башҡа хайуандарҙан айырған төп нәмә лә хеҙмәт кенә булыуын раҫлаған был бөйөк хәҡиҡәткә инде аҡылы менән төшөнһә лә, йөрәге менән ҡабул итә алмай ыҙаланды. «Ҡарасы, йыуатҡыс ялғандан айырылыуы ла бик еңел түгел икән дәһә!..» — тип үҙалдына шым ғына йылмайып алды ҡыҙ. — Әммә айырылырға тура килерҙер. Сөнки Емештең үҙенең кескәй генә тормош тәжрибәһе лә динде, динселәрҙе яҡламай бит! Ғаббас мулланың ҡылған яуызлыҡтары ла, Бибисара абыстайҙың кеселекһеҙ, өмөтһөҙ дини әкиәттәре лә, Сәрбиямалдың һәр саҡ алла исеменән алып барған алыш-бирештәре лә... Ысынлап та, былар бөтәһе лә аңһыҙ кешеләрҙе тамуҡ, ут менән ҡурҡытып баш эймәкле итеп тотоуға йүнәлгән түгелме һуң?! Дин дә, дини әкиәттәр ҙә кешегә бәхетһеҙлектән башҡа бер нәмә лә килтермәй, ахыры...

Уф, уйлай-уйлай башым тубалға әйләнде шикелле! Туҡтасы, бер аҙ уйламай торайымсы! Ул, китабын ябып, салҡан әйләнеп ятты.

«Бына шулай, тик кенә ятырға ла ятырға», тип күҙҙәрен сырт йомдо. «Эйе, уйламайым, уйлап уйҙың осона барып сығырһыңмы ни? Уйҙың иге-сиге юҡ бит уның... Ғүмер кеүек оҙон... Эй-й, ғүмер оҙонмо ни инде ул?.. «Аҡҡан һыу кеүек... — ти торғайны уны Ҡарасәс инәй.— Шылтыр-шылтыр-шылтыр... Аҡты-китте. Күрмәй ҙә, туймай ҙа ҡалдың...» Уй, минең ғүмерем дә уҙып бөтөп бара лабаһа! Ун алты йәш! Әйтергә генә анһат! Ә мин һаман бер ни белмәгән, бер ни күрмәгән ҡырағай ҡыҙ! Аһ, тағы уй! Ҡуйсы! Үҙ уйыңа ғына түгел, тирә-яғыңдағы

тормошҡа ла әҙерәк ҡолаҡ һалырға кәрәк тәбаһа!.. Урманда йәшәмәйһең бит һин, бигәләш ҡыҙыҡай!..»

Емештең шулай уйлауы булды, киске ятаҡтың сая шауы уның ҡолағына бәреп тә инде. Бына кемдер ҡурай уйнай: «Ашҡаҙар!» Емеш ҡарамаһа ла белә. Был — Зиннур ағай. Оҙон буйлы, көләс йөҙлө, майлаған кеүек йылтыр ҡара сәсле. Ә күҙҙәре... Ҡурай уйнағанда уның күҙҙәре ниңә шулай моңло булып китә икән?! Ә бит ул шундай шат, илгәҙәк ағай. Йыйылыштарҙа һөйләй башлаһа, теле-телгә йоҡмай ярһып китә. «Оҫта оратор, ялҡынлы комсомолец!» тип һоҡлана ҡыҙҙар уға. Эйе, уны юҡҡа ғына ячейка секретаре итеп һайламағандар шул. Теремек ул, теремек! Тик бына ҡурай уйнай башлаһа, Емеште илатмай туҡтамай. Әле бына кисә лә, эшселәр клубында техникум уҡыусылары ҡуйған концертта лә, Емеш уны иң артҡы рәттә боҫоп ҡына илай-илай тыңлап ултырҙы. Илай тип, һыңҡылдап иламай инде ул. Тик бына ҡурай моңона ҡушылып, уның күҙенән йәштәр аға ла аға. «Һоҡланыу, ҡыуаныу, әҫәрләнеү йәштәре үтә татлы була икән дәһә!..»

Зиннур һирәклəп булһа ла Дәүериә янына инеп ултыра. Ҡайһы саҡта улар икәүләп ятаҡта ла тотош бер концерт биреп ташлайҙар. Дәүериә скрипкала, Зиннур ҡурайҙа. Айырым да, ҡушлап та уйнайҙар улар. Дәүериә скрипка уйнаған саҡта ла илай Емеш. Ҡыҙыҡ: кешеләр музыка уйнай, ә уның күҙҙәренән тауыш-тынһыҙ йәш түгелә! Ҡурай ҙа, скрипка ла үтә моңландырып ебәрә шул уны. Бына әле лә шулай...

Емештең күҙҙәрендә шатлыҡ һәм һоҡланыу йәштәре йымылдай. Ул йөрәктең гүзәл тибеше булып яңғыраған был моңдо ярһымай тыңлай алмай шул...

Ҡыҙ тын, мул булып тәгәрләп сыҡҡан күҙ йәштәрен ҡулының һырты менән һыпырып алды ла тороп ултырҙы. Аҡлан кеүек киң ятаҡтың төрлө мөйөштәренә күҙ йөрөтөп сыҡты. Бөтә ерҙә шәмбе кискә генә хас йәнлелек, күнеллелек бара ине. Бына Зиннур тын ғына һыҙҙырып ҡурай уйнап тора. Дәүериәнең йөҙө шундай һөйкөмлө... Ҡатай ҡыҙы Шәмсиә лә ауылдашы Нәфисә менән көлөшә-көлөшә ниҙер һөйләшеп, койкала ултыра. Дөрөҫөрәге, үҙенең көләс, ҡыйыу күҙҙәрен Нәфисәгә тура төбәп, Шәмсиә һөйләй, Емештең ҡолағына уның: «Пат менән Паташон. Эй, нисек мәҙәк бейейҙәр! Паттың оҙон боттары... Ҡәүҙәләре... һоҡланғыс бейеү! Мин ундай мә-

ҙын бейеүҙе ғүмеремдә лә күргәнем юҡ!» — тигән өҙөк-өҙөк һүҙҙәре ишетелеп ҡала. Һөйләй торғас, ул хатта һикерен тороп, Паташон булып ҡыланып та ала. Нәфисә кинәнеп көлә.

«Шәмсиә бәхетле, киноны ҡарай ҙа, аңлай ҙа», — тип көнләшкәндәй итеп уйлап ҡуйҙы Емеш. Үҙенең көҙ, уҡырға килә һалғас та, киноға барып бер ни күрмәй, берни аңламай ҡайтыуын хәтерләп уфтанып алды.

Студком, бер төркөм студенттәргә билет биреп, киноға алып барғайны ул көндө.

Емеш ул саҡта үҙенең алыҫтан насар күреүенең сәбәбен белмәй ине әле. Шуға күрә бөтәһен дә үҙенең арттылығына, аңһыҙлығына япһарып ҡаты кисереп ултырғайны. Ысынлап та, экранда ул көҙгө болот шикелле өйөрөлөп торған ҡара-ҡоранан башҡа бер ни ҙә күрмәне. Ә тирә-яҡта бөтә кеше кинәнеп көлдө. Шәмсиә бигерәк тә Емештең йәненә тейергә теләгәндәй: «Чаплинде, Чарли Чаплинде ҡара! Нисек мәҙәк ҡылана! Үҙе түптө белмәй ҙә бит әле. Ә һинең һынынды ҡатыра!» — тип һөйләнә-көлә ҡараны.

«...Шәмсиә, моғайын, әле лә яңы күргән берәй фильмдә һөйләй торғандыр. Ана бит ерән керпекле, ерән сәсле булыһа ла, шул хәтле матур күренеп, яҡтырып ултыра!.. Ә бына тегеһе, Нәфисәһе, төҫкә ысынлап уҡ матур. Уның битендә лә, кәүҙәһендә лә килмәгән урын юҡ. Оҙон керпекле зәңгәр күҙҙәр, ҡыйылып торған ҡаштар, бейеп китергә торған төҙ, матур аяҡтар — бөтәһе лә килгән. Тик ул барыбер миңә Шәмсиә хәтле үк матур ҙа, яҡын да күренмәй, ниңә икән?..»

Емеш шулай уйланып ултыра торғас, ахыры, көнләшә лә башланы. «Ҡит, шул нимә аңлай? Уға ни тип һөйләнеп була икән был Шәмсиә?» — тип ҡарашын ситкә күсерҙе. Нәфисә ниңәлер бүтәндәр эшләгәнгә, йәки бүтәндәр һөйләгәнгә ҡул ҡуйып ҡына йәшәй торған буш һәм моңһоҙ ҡыҙ булып күренә уға. Ә ундайҙар Емеште ылыҡһындырмай.

Бүлмәнең мейес яҡ стенаһы буйында ла бөгөн йәнлелек. Иң йылы урында, мейескә һөйәп ҡуйылған койкала Сәхибә туташ роман уҡып ята. Уның койкаһына ере бизәкле өр-яңы йөн одеял ябылған, баш аҫтында ла һалам яҫтыҡ түгел, ә ҡабарып торған ике ҡат мамыҡ мендәр.

«Өйөнәһ алып килгәндер. Ата-әсәле кеше бит!»

Сәхибә туташ хәҙер үҙенең элекке уҡыусыһын — Емеште танымаймы әллә танып та белдерергә теләмәйме, өндәшмәй. Емеш уны тәү күреүҙә үк таныны. Дөрөҫ, ул нык үҙгәргән: нисектер нәҙекләнеп, йәшәреп киткән. Бәлки, сәсен ҡырҡтырып, тубыҡтан юғары юбка, күкрәге асыҡ кофта кейеп ебәргәнгә йәш күренәләр, бәлки, ысынлап та, йәшкә оло түгелдер. Ана бит, уҡыуҙа ла Емештән әллә ни уҙып китмәгән. Беренсе төп курста. Һау булһа, Емеш тә киләһе йыл шул курста уҡыясаҡ. Эйе, уҡыуҙа уның артынан ҡыуып барасаҡ! Ә бына кейем-һалымда... Ҡайҙа инде Емешкә уның артынан ҡыуыу?! Ә бит матур кейем, бынауы килбәтһеҙ Сәхибә туташты ла ысынъяһау итеп ҡуя лабаһа!

Оҙаҡламай Зиннур сығып китте. Дәүериә койкаһында ниҙер тегенергә ултырҙы. Күп тә үтмәй ятаҡҡа, эйелә-бөгөлә, Емер Яшинский килеп инде. Ул да егеттәр араһында иң һәйбәт кейемлеләрҙән. Өҫтөндә биллекле ҡара күн тужурка, башында йәшел эшләпә, күҙендә алтын ситле пенсне...

Килеп инде лә, эшләпәһен ҡулына алып, уңға-һулға сәләм биреп, йылмайып торҙо. Ҡыҙҙар уны, ғәҙәттәгесә, мәрәкәләп сыр-сыу килеп ҡаршыланы:

— Эй, Емербай килде, Емербай! — тип һикереп торҙо Нәфисә. — Әйттем бит, килер ул, килер, тинем бит!

— Үҙе — Емер, үҙе — йәшен, үҙе дауылдан һуң йәшнәй, — тип таҡмаҡланы Шәмсиә, шыңғыратып көлөп. — Ятыр саҡ етә, Сәхибә апай көтә. Емер саҡ килеп етә!.. Хи-хи...

Ғәҙәттә тыйнаҡ холоҡло Дәүериә лә был юлы баҫалҡы ғына йылмайып:

— Шиғыр яҙаһы, эй, яңылыш әйттем, берәйһенә таҡмаҡ сығараһы булғандыр, — тип төрттөрөп ҡуйҙы. Әммә Яшинскийҙең төлкө битен хәтерләткән осло йөҙөндәге татлы йылмайыу ҙа, эсе үткәшеп торған ялпаҡ, йоҡа кәүҙәһенең һығылмалылығы ла кәмемәне. Һәр кемгә ниндәйҙер мәғәнәһеҙ, тоҙһоҙ яуап табып, һәр койка янында тигәндәй һығыла-бөгөлә туҡталып, ул Сәхибә туташ янына үтте. Уныһы ҡалын ирендәрен бөрөштөрөп тороп ултырҙы. Яшинскийгә үҙ янынан урын бирҙе. Тегеһе үтә татлы йылмайған йоҡа ирендәрен ҡолағына хәтле йырып ебәрҙе.

Емер инеү менән сырылдашып урындарынан ҡуҙға-лып киткән Шәмсиә менән Нәфисә Емеш янына килеп ултырҙы. Шәмсиә, ағас тапчанды емереп төшөрөрҙәй итеп аяҡтарын бәүелтә-бәүелтә, буштан-бушҡа ҡытҡыл-лап көлөргә тотондо, ә Нәфисә күҙ ҡойроғо менән генә Сәхибә туташ яғына ымлап:

— Ҡарағыҙ әле, ҡалай һыйынышып ултыралар, оят-һыҙҙар, — тип бышылданы.

Емеш өндәшмәне. Шәмсиә тағы ла шыңғыратып кө-ләп ебәрҙе:

— Беләһеңме, Нәфисәнең эсе көтөрҙәй... Яшинский-гә ғашиҡ булған бит ул, тилекәй!

Емеш был юлы ла бер ни ҙә әйтмәй, ҡыҙҙарға тулты-рып ҡарап ҡына ҡуйҙы. Бындай һөйләшеү оҡшамай ине уға. Әммә Шәмсиә менән Нәфисәнең икеһенең дә тап шуның хаҡта һөйләшкеләре килә ине шикелле.

— Ғашиҡ булырһың да. Беҙҙең курста бөтәһе лә дет-домдан килгән шпаналар ғына. Был, исмаһам, әҙәм рә-үешле егет! — тип Нәфисә һаман шаярҙы.— Буйы-һыны тиһеңме, өҫ-башына кейгәне тиһеңме. Уны ла анауы ҡо-роғор мулла ҡыҙы әүерәтеп ҡуйҙы бит, әй!

— Майлы йылмайыуы тиһеңме, бесәй кеүек йомшаҡ баҫып йөрөүе, дәресте белмәй уҡытыусы алдында күҙҙә-рен асалаҡ-йомалаҡ итеп тороуы тиһеңме, — тип мыҫ-ҡыллы ялғап алып китте Шәмсиә. — Бөтә булмышы ме-нән ҡылйыуғыс инде, ни әйтәһең!

Был юлы Емеш тә түҙмәне. Көләп ҡуйҙы. Ысынлап та, был Емер Яшинский уларҙың курсында сыйырсыҡ-тар араһына килеп ингән һайыҫҡан кеүек айырылып тора лабаһа! Ул курстан күсмәй үҙ тиңдәштәренән то-роп ҡалған етеү егет. Әйткәндәй, был курста ундайҙар бар нисә: ҡарға ҡанаты шикелле шырт сәстәрен күҙенә тиклем оҙонайтып үҫтергән ҡыҫыҡ сикәле, ас яңаҡлы Сафа, мәсет ҡартына оҡшаған, таҡыр башлы Яппар, гөлкөләй сос, шыма егет Хәләф...

Улар бөтәһе бер звенола уҡыйҙар. Яҙыусы, шағир булып ҡыланырға яраталар. Дәрес әҙерләү ваҡытын те-ләһә ни һөйләп, болғаңлап йөрөп үткәрәләр. Емешкә уларҙың, бигерәк тә Емерҙең, ҡыланышы үтә сит, ят һәм шыҡһыҙ күренә. Шәмсиә лә уларҙы яратмай: «Яман-дар», — ти. Тик Нәфисә генә быны тоймаҫҡа ла белмәҫ-кә тырыша. Әле лә Шәмсиәнең Яшинский хаҡындағы һорғмо һүҙенә ул ысынлап ҡаршы төштө:

— Һеҙ көлмәгеҙ әле, ҡыҙҙар. Беләһегеҙме, ул ниндәй ғаиләнән сыҡҡан?

— Ҡайҙан беләйем мин уны? — тине Шәмсиә. — Ул бит минең ауылдашым түгел.

— Белмәйһең шул, ә көләһең. Ул бит, бахыр, беҙҙең шикелле үк етем бала, ти. Бынауы кейемдәрен шахтала эштәп алған, ти. Үҙе дәһри, ти. Шуға уны бында уҡырға килгәс тә дәһриҙәр ойошмаһына етәксе итеп ҡуйғандар, ти. Беләһеңме, дәһри нимә? — Аллаһыҙ! Шуға ул үҙенең мулла ҡушҡан исемен дә, фамилияһын да алмаштырған, ти. Ул бит элек Әбделмөьмин Әбделмөслимов булған, ти. Хәҙер — Емер Яшинский! Вот! Дәһри кешегә, етмәһә, шағир кешегә, шундай исем килешә лә бит!

Нәфисәнең был һүҙҙәре Емештең күңелендә Емергә ҡарата билдәһеҙ шикте көсәйтте, Шәмсиәне көлдөрҙө генә.

— Бик шәп икән! Харап икән һинең был Яшинскийең! — тип мыҫҡылланы Шәмсиә ауылдашын. — Ҡем һөйҙәне һиңә был әкиәтте?

— Үҙе, — тине Нәфисә, өҙөп. — Бер көндө комсомол йыйылышында үҙе һөйҙәне бит! Ишеттең бит!

— Миненсә, Әбделмөьмин Әбделмөслимов та, Емер Яшинский ҙә берҙәй үк һөйкөмһөҙ яңғырай. Эйе бит, Емеш?

— Ике исеме лә тап үҙе кеүек...

— Эй, һеҙҙең менән һөйҙәшкәнсе! — Нәфисә ҡул һелтәп һикереп торҙо ла бейей-һикерә ятаҡтан сыҡты. Күп тә үтмәй Сәрүәретдинде ҡултыҡлап алып инде лә үҙенең койкаһына ултыртты. — Сәрүәретдин ағай! — тигән булып, йәнәһе, иркәләнеп, уның алдында бейеп әйләнде. Ҡарпыш ҡолаҡтарынан, һирәк сәстәренән тартҡыланы. — Ағай, һин йырсылыр. Йырла әле. Муйыны оҙон кеше йырсы була, ти, ул! — тип мыҫҡылланы. Тегеһе, шамбы ауыҙын килбәтһеҙ йырып, Нәфисәнең ҡырмыҫҡа биленән ҡосаҡларға маташты.

— Яшинскийҙе көнләштермәк була инде был тилеҡәй, — тип көлдө Шәмсиә. — Эй, эс ауырыуы!

— Беләһеңме, кем ул Сәрүәретдин? — тип ҡуйҙы Емеш, йәне көйөп. — Мәхдүм. Уның атаһы Әхмәҙулла мулла минең әсәйемдең ҡанын ағыҙып бөтөп үлтергән, үәт...

— Ҡитсе, ысынлапмы икән?!

— Ётмәһә, уның Нәфисәнән биш артыҡ ҡатыны бар. Гөлйыһан! Тап теге элекке еҫле һабын ҡағыҙындағы «Гөлйыһан» кеүек һылыу...

— Ысынмы?..

— Ә Гөлйыһан Закир ағайҙы яратҡан... Үлеп... Өҙөлөп... Шунан уны ошо килбәтһеҙгә көсләп һаттылар... Закир ағай ҡалай ҙа матур егет ине! Уны күрһәң, һин дә ғашиҡ булыр инең!

— Ҡайҙа һуң ул хәҙер?

— Үлгән... Үҙ-үҙен атҡан да үлтергән...

Емештең көтмәгәндә шулай һөйләнсәкләнеп китеүенә ҡыуанған Шәмсиә үҙенә таныш булмаған был ике матурҙың фажиғәле мөхәббәте хаҡында ҡыҙыҡлы хикәйәтыңларға йыйынғайны ла, Емеш:

— Кит, ошо әҙәм аҡтығын бында ни тип уҡырға алдылар икән? — тине лә, тамам кәйефе боҙолоп, томһайҙы ла ҡалды. Шәмсиә, әңгәмәне дауам итергә тырышып:

— Ул бит элек инеп ҡалған. Элекке директор шундай мулла, бай балаларын йыйып ятҡан, ти, бында. Уны шуның өсөн эштән алып, Ғимранов ағайҙы ҡуйғандар, ти, бит быйыл. Ғимранов ағай, техникумды ундайҙарҙан таҙартасаҡбыҙ, бынан ары гел эшсе, крәҫтиән балаларын ғына аласаҡбыҙ, тип әйтә, ти, — тип бик белеп хәбәр итһә лә, — ни өсөн үҙен үлтергән һуң ул Закир тигән ағай? — тип тура һорау биреп ҡараһа ла, Емеш ул һүҙгә ҡабат ҡайтманы. Тик тағы ла бошоноп:

— Йәһәтерәк сәғәт ун етһен ине лә, шул һөмһөҙҙәр сығып китһен ине, — тип кенә ҡуйҙы. Сөнки бынауы ҡылйыуғыс Яшинскийҙе лә, һөйкөмһөҙ Сәрүәретдин мәхлүмде лә, хатта Сәхибә менән Нәфисәне лә күргеһе килмәй башланы уның. Бәхеткә ҡаршы, оҙаҡламай ҡыңғырау шылтыраны. Тимәк, ун етте. Инде ятаҡта бер генә ситт кеше лә ҡалмай сығып китергә тейеш. Емеш ҡыуанып һикереп торҙо.

— Шәмсиә, әйҙә!

— Әйҙә!

Улар таҫтамал, һабын, теш порошогы кеүек әйберҙәрен йәһәт-йәһәт кенә алдылар ҙа, башҡа ҡыҙҙарҙан элек өлгөрөргә ашығып, аҫҡы ҡатҡа, йыуыныу бүлмәһенә юғерҙеләр. Йоҡо алдынан һалҡын һыу менән аяҡ-ҡулды, битте-башты һабынлап йыуып ятыу бындағы ҡыҙҙарҙың яратҡан ғәҙәте ине. Ә Емеш инде бындай йыуы-

ныуҙан һуң Оло Эйекте арҡыры-буй йөҙөп сыҡҡандағы кеүек кинәнес тоя. Бына әле лә, билдән ала йыуыныл, ҡаты таҫтамал менән һөртөнөп ебәргәс, тәне рәхәт ҡыҙып, башы кәрәкһеҙ уйҙарҙан арынып, еңеләйеп китте. Оҙаҡламай ҡыҙҙар йоҡларға ятты. Ятаҡ дежурныйы утты һүндерҙе.

— Тыныс йоҡо, ҡыҙҙар!

— Тыныс йоҡо!

Емеш кескәй саҡтан уҡ ут һүнгән мәлде яратманы. Сөнки төндә ул ен-пәрейҙәр, дейеүҙәр, унан башҡа тағы әллә ни хәтле билдәһеҙ йән эйәләре менән тулы ҡот осҡос хәтәр, серле бер мәл итеп күҙ алдына килтерә, шул арҡала йоҡола баҫлығып, һаташып ыҙалана ине. Әле инде, үҙе һиҙмәһә лә, ен-пәрейҙәргә ышанмай башлағанғамы әллә төн менән көндөң тәбиғи бер күренеш булыуын төшөнөп алғанғамы, ул хәҙер ут һүнгәнгә ҡайғырмай, йоҡоһо ла тынғыһыҙланмай. Етмәһә, бында тәҙрәләр ҙур булғас, ут һүнһә лә, бүлмә ҡараңғылыҡҡа суммай, ҡыҙҙың койкаһынан көмөш ай, алтын йондоҙҙар күренә, уларға ҡарап тын ғына уйланырға, көндөҙгө айырата күп, ҡатмарлы тәьҫораттарҙан бер аҙ арынырға, рәхәт тынып ял итергә мөмкинлек тыуа. Бына әле лә ул, ике ҡулын баш аҫтына һалып, уйсан ҡараштарын төпһеҙ күккә төбәп, тынып ята. Ә унда, Емештең күңелен һәр саҡ үҙ артынан эйәртеп, билдәһеҙ донъяға алып инеп китә торған тылсымлы күренеш — тулған ай, йымылдаҡ йондоҙҙар, осҡонло Ҡош Юлы... — Барыһы ла талғын ғына йөҙә, аға, әйләнә... Бына Емеш тә улар араһында. Ул да кескәй генә бер осҡон, нурлы осҡон... Ул да йөҙә, оса, әйләнә... Ҡайҙа, ни өсөн? — Билдәһеҙ. Бәлки, ҡояшҡа табан осалыр ул?! Эйе, кем белә, бәлки, ул да, бына шулай кескәй генә нурлы осҡон булып, бер саҡ ҡояшҡа ла барып етер, уның иң-иң кескәй бер остоғона әйләнер, шунан һуң инде ҡояш менән бергә мәңге яҡтырып, ер өҫтөнә терелткес нур бөркөп, балҡып торор... Ҡартайыу ҙа, үлем дә булмаҫ уның өсөн...

Емештең татлы хыялын өҙөп, ишек ҡаҡтылар:

— Йоҡлағыҙ! Һөйләшмәгеҙ!

Ҡыҙҙар менән малайҙар ятағы араһында ултырған төнгө дежурныйҙың тауышы был.

— Ҡыҙҙар, етер һеҙгә! — тип иҫкәртте ятаҡ дежурныйы ла. — Ул ниткән бөтмәҫ бышылдашыу?!

Күрәһең, ҡыҙҙар, ятҡас та тыныслана алмай, һаман әкрен генә һөйләшә-көлөшә ине. Аранан береһе ипләп кенә дежурныйға өндәште:

— Эй, дуҫҡай, йоҡлап булмай бит әле. Ярһыған йөрәктәрҙе Дәүериәнән дауалатайыҡ булмаһа. Дәүериә, бәпем, уйнарһыңмы, ә?

Был тауышты тағы бер нисәһе ҡеүәтләне.

— Уйнаһын ине. Тын да алмай тыңлар инек. Йоҡлап та китер инек...

— Уйна, Дәүериә, йөрәккәйем, әкрен генә уйна. Һин уйнаһаң, дежурныйҙар ишетһә лә, өндәшә алмай тынып ҡала торғандар.

Дәүериә — үтә аҡ йөҙлө, сөм-ҡара күҙле, баҫалҡы ғына татар ҡыҙы. Уны ятаҡта бөтә ҡыҙҙар ҙа яраталар, хөрмәт итәләр. Уны хатта Емеш тә тәү күреүҙә үк яратты, скрипка уйнауына таң ҡалды, күңеле менән уны фәрештә дәрәжәһенә күтәреп ҡуйҙы. Шулай ҙа, әле бына ул уйнарға булғас, үҙе лә күктән, йондоҙҙар араһынан йәһәт кенә ергә төштө, уны, ер ҡыҙы булғаны өсөн яратып, тыңларға әҙерләнде. Башҡа ҡыҙҙар ҙа тып-тын булдылар. Ҡайһы саҡта шулай скрипка моңо аҫтында тирбәлеп йоҡлап китергә яраталар ине улар. Дәүериә үҙе лә күгелйем ай нуры түгелгән төнгө тынлыҡта, әкрен генә һыҙҙырып, скрипкала бер-ике көй уйнап алырға ихлас ине. Ул һис тә ялындырмай һалҡын иҙәнгә яланаяҡ тороп баҫты, скрипкаһын эйәк аҫтына ҡыҫтырҙы, смычогын ҡылдар өҫтөндә еңелсә генә тибрәтеп алды, унан әкрен, ләкин сәмле дәрт менән сихри моңдар донъяһын тулҡынлырып ебәрҙе. Эйе, әкрен, һалмаҡ, әммә йөрәктәрҙе тетрәтерлек, йәнде-тәнде әсир итерлек ине уның уйнауы. Дәүериә, башҡорт ауылында тыуып-үҫкәнгә, ахыры, халыҡ көйҙәрен яҡшы белә, бөтә нескәлегенә еткереп башҡара. Ә инде Емешкә килгәндә, был көйҙәр уға фәҡәт Дәүериәнең уйнауында ғына шундай ҡабатланмаҫ моң, һағыш менән яңғырайҙар, улар тик шул скрипкала уйнар өсөн генә ижад ителгәндәр кеүек тойола башлай.

Әле лә бына ул Дәүериәнең шундай әкрен, моңло итеп «Буранбай» көйөн һыҙҙырыуын йотлоғоп тыңлап ята. Күңелендә үлемһеҙ йырҙың зарлы сәхифәләре ҡабатлана:

Табаҡ та ғына табаҡ, һай, аҡ ҡағыҙ,
Буранбайҙың яҙған да хаттары.
Буранбайҙың яҙған хатын да уҡып,
Зар илайҙар ауылдың ҡарттары...

Был илаһи моң берсә уның күҙ алдына батша заманында каторгала иңрәгән арыҫландай ирҙәрҙең аҙаплы һындарын алып килеп-баҫтыра, ауыр бығауҙарының шомло сыңлауын ишеттерә, берсә кешене ай нурҙарына үрелтеп күктәргә ашырыусы, океан тулҡыны итеп ярһытыусы, күк тауҙар ғорурлығын, күбәләктәр матурлығын, гөл-сәскәләр һутын, һандуғастар ярһыуын, яҙ елдәренең, тау шишмәләренең сафлығын тын ятаҡҡа алып килеүсе, йөрәктәрҙе бәхет ҡанатында осороп елкендереүсе ҡөҙрәтле көскә әйләнә.

«Эй-й!.. Була икән донъяла шул хәтле лә һәйбәт кешеләр!— тип ҡабатлай Емеш күңеленән.— Ҡалай яҡшы кеше һин, Дәүериә апай!» — тип илай-һыҡтай уны ҡосаҡлап һөйгөһө килде. Тик үҙе һаман хәрәкәтһеҙ ята бирҙе. Хатта ҡуйы керпектәре аҫтынан мул түгелеп сыҡҡан күҙ йәштәрен дә һөртмәне. Улар бит ләйсән шикелле шифалы, татлы йәштәр ине.

Бына инде скрипка Зөлхизә һылыуҙың зая уҙған йәш ғүмере хаҡындағы тауҙар легендаһын һөйләй-көйләй тағы бер аҙ илап-һыҡтап торҙо ла, яҙғы тамсы шикелле тамсылай-тамсылай, туҡтап ҡалды. Бүлмәлә тәрән тынлыҡ урынлашты. Бер кем бер һүҙ өндәшмәне, хатта яңылыш ҡына ҡуҙғалып ҡуйыусы ла булманы. Эйе, был минутта кеше һүҙе көсһөҙ ҙә, кәрәкһеҙ ҙә ине шул.

Дәүериә скрипкаһын футлярена һалды ла ипләп кенә урынына ятты. Ул да бер һүҙ ҙә өҫтәмәне. Нимә тиһен? Әйтәһе һүҙен скрипка ҡылдары аша бәйнә-бәйнә һөйләп бирҙе бит инде ул. Дуҫтарына иң ҡәҙерле йән аҙығы бүләк итте. Ул, ҡәнәғәт йылмайып, күҙҙәрен йомдо.

«Тыныс йоҡо һиңә, һөйөклө Дәүериә! Тыныс йоҡо һеҙгә, яҡшы күңелле, вайымһыҙ ҡыҙҙар!»

Күптән тынып ҡалған скрипка тауышы, ҡайта-ҡайта сыңлап, үҙенең еңеүле тантанаһын күңелдәрҙә дауам итте. Тулған ай ҙа, гүйә, ары китә алмай, ғәжәпһенеп бүлмә эсенә текләп торҙо. Әйтерһең, ул да әле тирә-яҡты баҫып киткән ярһыулы моң эйәһен тағы бер ҡат күрергә, ҡөҙрәтле бармаҡтары менән хикмәтле ҡылдарға сиртеүен тағы бер тыңларға теләне. Ә Емештең күҙҙәрендә һаман йәш йымылданы. Башында:

Скрипка — йөрәк...
Сихри ҡылдар
Йөрәк ҡандарынан яһалған.
Шуға йөрәк уға ҡушылып йырлай,

Ҡушылып күккә аша,
Ҡушылып һыҡтай,
түгә аһ-зарҙар... —

тигән шиғри юлдар тыуҙы. Ул, хатта, шым ғына тороп, тәҙрә төбөнә төшкән ай яҡтыһында был юлдарҙы ҡағыҙға яҙып та ҡараны. Унан: «Эй-й, күңелдә урғылғанды ҡағыҙға һалып буламы һуң?! Һүҙҙең көсө етәме ни уға?! — тине лә сәмләнеп урынына ятты.

«Иртәгә байрам түгел — йоҡларға кәрәк!» — тип үҙ-үҙенә киҫәтте һәм шунда уҡ тәрән, татлы йоҡоға сумды.

## IX

Илсеңғол байҙары элек, күрше Мраковка байҙарына оҡшарға тырышып, иген, ит келәттәрен ауыл осона сығарып эшләткәндәр. Собхан старшинаның ҡарағас бүрәнәләрҙән һалынған ҙур-ҙур келәттәре ауылдың осонан Оло Эйеккә хәтле теҙелеп киткән. Шуларҙың иң ҙурыһын, Сәрбиямал лавкаһына ҡаршы ғына ултырғанын, кооперация магазине асыу өсөн ҡулайлаштырыу ниәте менән бөгөн комсомол-йәштәр өмәһе ойошторолдо. Ял көнө булғас, Иштуған да, бөтә уҡыусыларын эйәртеп, биленә балтаһын ҡыҫтырып, өмәгә килде. Балта, бысҡы, сүкеш тотоп, ҡаҙау күтәреп үҙ теләге менән өмәгә килеүсе өлкәндәр ҙә бар ине. Былай ғына, итһеҙ-һыйһыҙға ғына йыйылған яңыса өмәне мәҙәк күреп тә, элекке Собхан старшинаның ҡалын бүрәнәле бай келәте нисек бөтөнләй икенсе төҫ алыуын үҙ күҙҙәре менән күреп, ҡарап торор өсөн йыйылғандар ҙа етерлек. Хатта, үҙе кеүек үткән быуат төпкөлөнән аҙашып тигәндәй был көнгә килеп еткән иҫке балалайкаһын тотоп, ҡарт һалдат Урыҫ Иҙрис тә бында тора. Уның һоро айыу шикелле тарбаҡ йоморо кәүҙәһе нисектер турайыбыраҡ киткән, ялбыр аҡ ҡаштары аҫтынан төптән йымылдаған төҫһөҙ күҙҙәренә йәшлек саяһы ҡайтҡан һымаҡ. Күренеп тора, уға йәштәрҙең был эше оҡшай, берҙәмлеге, эшсәнлеге һөйөндөрә. Шуға, ахыры, ул әленән-әле балалайкаһын күңелле дымбырҙатып ебәрә. Ғәҙәтенсә руссалап:

Один косит один воз.
Восемь косят один воз.
Ой-ли, косари!
Вай-ли, косари! —

һамаҡ шаян таҡмаҡтар әйтеп, йәштәрҙе көлдөрөп ала.

Ә инде уның ҡарттарса нәҙек, сыйылдаҡ тауыш менән, әммә һәр һүҙҙе асыҡ, баҙыҡ әйтеп, һамаҡлап ебәргән бер йыры ҡарап тороусыларҙың ғына түгел, эш менән мауыҡҡандарҙың да иғтибарынан ситтә ҡалманы:

...Башҡорт тигән ир-батырҙар
Төйәк иткән ер бит был.
Зөлхизәләр, Сәлимәләр
Төйөрөм үҫкән ер бит был.

Һай-ли, гөл генә,
Йәмле Әйек буйҙары,
Йәмле Әйек буйҙарында
Йәшәй Ленин уйҙары,
Эшләй Ленин улдары.

Алтын-көмөш, гәүһәр, яҡут,
Нағышлаған ер бит ул.
Арыҫлан ир, аҡ толпарҙар
Тыуып-үҫер ер бит ул.

Һай-ли, гөл генә,
Йәмле Әйек буйҙары,
Йәмле Әйек буйҙарында
Йәшәй Ленин уйҙары,
Эшләй Ленин улдары...

— Олатай, төптө сәсән икәнһең дәһә! Ҡасан сығарҙың әле был йырҙы?

— Ошонда, — тине Иҙрис ҡарт, Иштуғанға ғорур ҡарап. — Бына шулай, халыҡ өсөн тип тырышып эшләп йөрөүегеҙгә ҡарап торҙом да йырланым да ебәрҙемсе. Әллә оҡшамайым, улым?

— Бик оҡшай. Рәхмәт, олатай. Һәйбәт йыр менән беҙҙең эште күтәрмәләп тороуың өсөн рәхмәт, — тине Иштуған, ҡыуанып.

— Төптө йәтеш килеп сыҡҡан, олатай.

— Тағы берҙе әйттереп ебәр әле, олатай!

— Булмаһа, «Һай, Дунай, вай, Дунай»ҙы ла иҫкә төшөрөп ал! — тип башҡалар ҙа, ҡартты мәрәкәләп, йырҙы күтәрмәләп ҡуйҙылар.

Эш дауам итте. Келәттең ал яҡ стенаһына ике ҙур тәҙрә эшләнде, күтәрмәһе киңәйтелде, хатта семәрле тотонғостар эшләнде, эсенә иҙәндән түбәгә хәтле кәштәләр, киң, һәйбәт прилавкалар яһалды. Малайҙар келәт тирәһен ҡарҙан, сүп-сарҙан таҙартты, ҡыҙҙар, өйҙәренән эҫе һыу алып килеп, келәттең эсен тотош йыуып-таҙартып

сыктылар. Ҡышҡы көндөң бит-ҡулды әсе семтеүенә, ҡояштың тау артына йәшенеп барыуына ла ҡарамаҫтан, йыйылған халыҡ һаман келәт тирәһенән китә алмай, эшләүселәрҙе төрлөсә күтәрмәләп-мәрәкәләп тороуында булды:

— «Атаһына ҡарап ат һайла, әсәһенә ҡарап ҡыҙ һайла», тип белеп әйткәндәр шул. Бынауы Баҙыян киленден Сабираһын әйтәм әле, ҡалай төйөрөм эшләй! Әсәһе кеүек, тотҡан ерҙән өҙөп кенә бара бит!

— Ҡара әле, Хәлим ағай, йәшең алтмышты ҡыуып бара. Ә үҙең йәштәр өмәһендә йөрөйһөң. Был ни ғәләмәт?

— Ул бит бында төп атаман! Унын кеүек плотник ҡайҙа бар?!

— Хәлимдең Әхәте менән Хәсәненең ҡулында ла балта бысҡы уйнап ҡына тора бит!

— Уныһы дөрөҫ. Атайҙарынан ҡалышмайҙар. Тик бына Иштуған был эшкә ҡайҙан өйрәнгән? Ҡарағыҙ, күтәрмәне нисек матурлап ҡуйҙы!

— Ул бит һалдат. Һалдат һәр саҡ алдан!

Хәлим ағай сәкмәненә ҡунған бысҡы онтағын, юныстаптарын һыпырғылап төшөрҙө лә:

— Башланған эш — бөткән эш! Үәт бит. Эшләнек тә бөттөк, — тип, аҡһай-туҡһай, келәттең эсен-тышын тағы бер ҡарап сыҡты. — Үәт бит, күмәк көс ни эшләтә, ағайене?! — тип, сумыра кейгән бәрән бүрекле ҙур башын ҡәнәғәт сайҡап ҡуйҙы.

— Рәхмәттең иң ҙуры һиңә инде, Хәлим ағай, — тине Иштуған. — Шундай оҫта етәкселегендә йәштәргә лә эшләүе еңел булды.

— Вот быныһын дөрөҫ әйттең, Иштуған, — тине Иҙрис карт, кинәнеп. — Хәлим ҡусты бит ул плотниклектә ут һыу үткән кеше. Ниндәй мыжыҡ Собхан старшина ла уның эшенән хаҡты кәметерҙәй йөй таба алмай ыҙалана торғайны. Шулай бит, Хәлим ҡусты?!

Хәлим ағай, ерән мыйығын ҡойроҡландырып бора биреп, мут ҡына көлөп ҡуйҙы:

— Бүтән оҫтаны признать итмәҫ ине. Шулай ҙа эш ялҡыуы ярым-йорто түләү сараһын күрер ине яуызың, — тип өҫтәне.

Эшһеҙ тапанып тороусылар араһынан кемдер тоноҡ тауыш менән:

— Бөгөн төптө бушҡа ла эшләнең бит әле, — тип мығырлап ҡуйҙы.

Ҡояш байып, ҡараңғы төшә башлаған саҡ булғанға, Хәлим ағай был тауыштың эйәһе кем булыуын абайламай ҡалды. Шулай ҙа яуабын әйтте.

— Бушҡа булһа ни, байға түгел бит. Үҙебеҙгә.

— Һай, телеңдән һөйөнгөрө! — тип йәштәрсә сағыу ҡысҡырып ебәрҙе Иҙрис ҡарт, һәм балалайкаһын күңелле дымбырҙатып, баяғы йырын йырлай-йырлай, ҡайтыу яғына боролдо.

...Һай ли, гөл генә,
Йәмле Эйек буйҙары,
Йәмле Эйек буйҙарында
Йәшәй Ленин уйҙары,
Эшләй Ленин улдары...

Бала-саға сыулашып уның артынан эйәрҙе. Әкренләп келәт яны һил булып ҡалды. Йәштәр ҙә, өлкәндәр ҙә таралышты. Иштуған менән икеһе генә ҡалғас, Әхәт келәтте хужаларса тағы бер ентекләп ҡарап сыҡты. Ишеген йоҙаҡлап алды. Ҡәнәғәт тауыш менән:

— Волость потребкооперацияһы мөдире Әбделмөслимовты әйтәм, «Һеҙҙең ауылда йәтешле йорт юҡ. Магазин асып булмай», тип эште һуҙып килә ине. Әле ни тиер икән был бюрократ, — тип көлөп ҡуйҙы. Шунда уҡ етди итеп өҫтәне: — Иртәгә үк волоскә сығам. Һөйләшәм. Инде лә ялтарта алмаҫ.

— Нэпмандарҙы күп шаштырҙы. Үҙенең ҡайһы заманда йәшәүен аңларға ваҡыттыр уға, — тине Иштуған. Эйелеп балтаһын алды. — Беҙгә лә өйгә ҡайтырға кәрәктер? Һин быға нисек ҡарайһың, председатель иптәш?!

Күтәрмә тирәһендә һаман ниҙер төҙәтеп маташҡан Әхәт иғтибарһыҙ ғына өндәште:

— Өлгөрөрһөң әле!

Иштуған тағы мәрәкәләне:

— Өлгөрөрһөң, өлгөрөрһөң... Беләһеңме, Айһылыу нисек көтә-көтә ғүмер итә! Ярай ҙа һин буйҙаҡ: «Атың юҡ ҡуранда, ҡайғың юҡ буранда!..» Ҡиттем!

— Утыҙға етеп килгәндә, буйҙаҡ йөрөү ҙә анһат түгел, дуҫ! — тип, уйынлы-ысынлы көрһөнөп, Әхәт тә уға эйәрҙе. — Кооперация магазине асып ебәрһәк, ну илла Сәрби тутайҙың йәне көйөр ине, ә?!

Былай ҙа теремек ғәҙәтле Әхәт, бөгөнгө эш һөҙөмтәһенән күңеле күтәрелеп киткәс, арыу-талыуҙы тоймай, әле тағы әллә ни хәтле эшләргә, һөйләргә, бәхәсләшергә,

ҙәрәк икән көрмәкләшергә әҙер ине. Ул дуҫына мут ҡына ҡарап алды.

— Әйткәндәй, Иштуған, һин Сәрби тутай менән һөйләшеп, аңлатып, нәп юлынан дүндерергә, яңы юлға күндерергә өмөт итә инең шикелле? Һөйләштеңме әле? Барып сығамы шул?

Иштуған ҡул ғына һелтәне. Өндәшмәне. Үҫмер саҡтарындағы шикелле, береһе оҙон буйлы, уйсан, һалмаҡ ҡылыҡлы, икенсеһе төптән йыуан сыҡҡан мыҡты кәүҙәле, үтә теремек, ярһыу холоҡло ике дуҫ яй ғына атлап киттеләр. Был йылдарҙа физик эштән нык ҡына алыҫлашҡанға, ахыры, бөгөн яҡшы уҡ арыған, талсыҡҡан Иштугандың күңеле хәҙер һөйләшеүҙән бигерәк уйсанлыҡҡа тартты. Иҫке йыртыҡ тун, ҡыптыр итек кейеп, туна-туңа, ошо урамды көнгә биш ураған үҫмер ике малай, ниҙәлер, тап бөгөнгөләй, уның күҙ алдына килеп баҫты. Әйе, тормоштоң ҡатмарлы күренештәре, яман-яҡшы, көрәш-тартыш кеүек оло төшөнсәләре хаҡында ҡыҙыпҡыҙып бәхәсләшергә яраталар ине улар бәләкәс саҡта ла. Бергәләп уйларға, тартышырға, кәрәк икән бергәләп көрәшкә ҡотонорға...

Иштуған бер саҡ шулай үҙҙәренең батша-байҙарға ҡаршы нисек көрәшкә тотоноу, нисек байҙар иҙеүенән ҡотолоу хаҡында хыялланып, ошо урамда туңғансы йөрөүҙәрен, ер өсөн, ирек өсөн көрәшкә үҙҙәрен өлгөрөп еткәнгә һанап, тик ул көрәш тигән нәмәнең ҡайһы еренән, ҡалай тотоноп китергә әмәлен генә белмәй оҙаҡ бәхәсләшеүҙәрен, ахыр килеп, Тимербай ағайға югереп барып шеүҙәрен хәтерләп, тын ғына йылмайып ҡуйҙы. Имеш, беҙ көрәшкә әҙер. Юлын өйрәт кенә!

Тимербай ағай ике ярһыу үҫмерҙең ҡыҙып-ҡыҙып һөйләгән һүҙен быйма төпләүҙән туҡтамай ғына тыңланы. Аҙаҡ уларға оҙаҡ ҡына ҡарап торҙо. Ауыр ғына көрһөнөп, баш сайҡаны.

— Йәшерәкһегеҙ шул әле, мырҙалар, йәшерәкһегеҙ... Аҡһыған, яңғыҙ-ярым тамған тамсынан яҙғы ташҡын тыумай бит ул... Бына тиҙҙән яҙ етер, ярҙай боҙҙарҙы ватырып ташлар, шул саҡта түҙемһеҙ яңғыҙ-ярым тамсылар ҙа, ташҡынға ҡушылып, оло диңгеҙгә табан ағырға юл асылыр... Юҡһа, ул иртә тамсылар яҙ ҙа яһай алмаҫ, үҙҙәре лә файҙаһыҙға юҡҡа сығыр... — тине.

Ул, әсәһе Ҡарасәс инәй шикелле үк, бер ҡасан да тура бәрен әйтмәҫ ине. Уның һүҙҙәре һәр саҡ кинәйәле,

тәрән мәғәнәле булыр, тыңлаусыны уйларға, һәр һүҙгә етди мөнәсәбәттә булырға өйрәтер ине. Шуға ла уның һүҙҙәре үтемле була торғайны шикелле. Әммә был юлы инде, үҙҙәрен өлгөрөп еткән көрәшселәр итеп тойғанғамылыр, уның ҡыялап әйтеүе егеттәргә оҡшаманы.

— Эй, ағай, һин әллә нәмә һөйләйһең дә. Беҙҙе бөтөнләй балаға һанайһың, — тип Иштуған хатта үпкәләп өндәште. Әхәт тамам ҡыҙып китте:

— Беҙ кинәйә менән һөйләшкәнде аңламайбыҙ ул. Һин, ағай, беҙҙе тура һөйләп кенә өйрәт, — тине.

— Ә көрәш ул уйынсыҡ түгел, мырҙалар. Уяу баш менән тотонмаһаң, бик тиҙ билде һындырып ҡуйырға ла була, — тип яуап бирҙе Тимербай ағай.

— Уяу баш ҡалай була? — тип ныҡышты Иштуған.

— «Иртә ҡысҡырған кәкүктең башы ауырта» тигән мәҡәл дә шул хаҡта һөйләй... — тине Тимербай ағай.

Был һөйләшеүҙән егеттәр уны әле үҙҙәрен малайға һанауын, уларҙың көсөнә лә, һүҙенә лә ышанып етмәүен аңланылар. Сәмләнделәр, үҙҙәренең синфи көрәш өсөн өлгөрөп еткән егет булыуҙарын раҫларлыҡ ниндәй ҙә булһа берәй етди эш эшләргә кәрәклек тураһында баш ватып, тағы бик оҙаҡ ошо урамда тапанып йөрөнөләр.

— Иштуған, давай, теге Хәбир батыр кеүек, Тимаш баярҙың имениеһенә үрт һалайыҡ, ә? — тине Әхәт.

— Улар Хәбир батырҙы туҡмаған кеүек итеп, беҙ ҙә Собхан старшина менән Һатыбалдың икеһен тотоп туҡмап ташлаһаҡ, нисек булыр, — тине Иштуған.

— Старшинаның үҙен үлтереп, бөтә малын Иҙрис бабайға тартып алып биргәндә, шәберәк булмаҫмы?

— Юҡ, моғайын, көрәште былай башларға ярамайҙыр,— тип икеләнде Иштуған.

— Ә ҡалай һуң?! — тип ҡыҙҙы Әхәт. — Ҡул ҡаушырып, иректең, бәхеттең күктән төшөүен көтөп ятырғамыни?!

— Белмәйем. Шулай ҙа Тимербай ағай яңғыҙ-ярым көрәшеүҙән мәғәнә юҡ. Дәррәү... Күмәкләп... Бергәләп... Ныҡ уйлап... тигәнде аңлатты түгелме һуң?!

...Бына шулай, һуҡыр кеше кеүек, һәрмәнә-һмгәкләй барып баҫты Иштуған менән Әхәт көрәш юлына. Ысынлап та, каторганан ҡайтҡан Тимербай ағай улар өсөн берҙән-бер эйәреү өлгөһө ине. Улай ғына ла түгел, кескәй саҡтан уҡ уның аһ-зарлы йырҙарын, ҡурай моңдарын,

бигерәк тә «Хәбир батыр» кеүек ғибрәтле хикәйәттәрен тыңлап, яратып үҫкән малайҙар ине бит улар...

Ә һуң Себерҙән ҡайтҡас һөйләгән хикәйәттәре, нинդәй һәйбәт кешеләрҙең каторгала ыҙа сигеүҙәре, ҡалаларҙағы ҡанлы ваҡиғалар, алтын ситлектә бикле торған бәхет ҡошон ҡотҡарыу өсөн алтын ситлек өҫтөндә ултырған ике башлы сәмреғошто төртөп ауҙарырға кәрәклек хаҡындағы кинәйәле хикәйәләре уларҙы көрәшкә дәртләндермәнеме ни? Ун ете йәштә ҡулға ҡорал алып, йәш Совет власен һаҡлап ҡалыу өсөн көрәш юлына баҫырға шулар әҙерләмәнеме ни уларҙы?!

Эйе, шунан оҙаҡламай революция ташҡыны был яҡтарға ла килеп етте. Әхәт менән Иштуғанды ла үҙ ағымынан эйәртеп алып китте. Илсеғолдоң ошо ҡыҫҡа ғына урамын йөҙ ҡат тапап, яҡты хыялдар менән дәртләнеп, ярһып йәшәгән иң ябай ике йәш үҫмер Ырымбур далаларынан Петроградҡа, Варшаваға хәтле һуғыш юлын үттеләр. Даһи Лениндең үҙ ауыҙынан рәхмәт һүҙе ишетеү бәхетенә ирештеләр, ил, халыҡ бәхете өсөн көрәшеп йәшәү — ир-егеттең изге бурысы икәнен кескәйҙән үҙҙәренең күңелдәренә һеңдереп килгән Тимербай ағаларының хуплауын, һоҡланыуын күреп ҡыуандылар. Эйе, һынатманылар егеттәр. Ысын көрәшсе булыуҙарын ғәмәлдә раҫланылар.

Ҡанлы һуғыш йылдары күптәрҙе мәңгегә алып китте. Ә бына уларҙы, йәштәрҙе, ағалары, аталары башлаған изге эште дауам итер өсөн тигәндәй, һаҡланы. Иштуған менән Әхәт яу ҡырҙарынан иҫән-һау ҡайтты. Ләкин тыныслыҡҡа, байрамға түгел. Көрәш әле лә дауам итә. Иҫке менән яңы, яҡшылыҡ менән яманлыҡ араһында барған үтә ҡатмарлы һәм ауыр көрәш майҙанында ла улар, бына тағы яурынға-яурын терәп, йәнәш атлап баралар. Тағы бөгөнгөсә, бергәләп уйлайҙар, кәңәшәләр, бәхәсләшәләр, ҡал итәләр... Бер уйлаһаң, ҡалай ҙур бәхет тәбаһа был! Ҡайҙа барһаң да, ни эшләһәң дә, янында һәр саҡ яҡшы күңелле тоғро дуҫың, көрәштәшең тора!..

Былай оҙаҡ һөйләшмәй барыуҙы йәне һөймәгән Әхәт, түҙемен юғалтып, дуҫының ҡабырғаһына төртә биреп алды:

— Ҡара әле, әллә аяғүрә йоҡлап киттең инде?

— Юҡ та...

— Ҡара әле, Иштуған, бер көндө Сәрби тутай лавкаһына инеп сыҡҡаныңды күреп ҡалдым бит мин... Апты-

раным. Теге йылда Айһылыуҙы урлап ҡасҡаны бире аяҡ баҫҡаның юҡ ине шикелле?

Иштуған алыҫ үткәндәргә инеп киткән уй донъяһынан ауырлыҡ менән генә сыҡҡанға, ахыры, күңелһеҙ генә ҡарыулашты:

— Баҫырға ла кәрәкмәгән. Ғүмер буйы кем булырға маташҡан, шул булған ул хәҙер. Ҙурмы, бәләкәсме, сауҙагәр барыбер сауҙагәр булып ҡала икән. Әгәр ҡулына эләкһәң, ул тауарҙы ғына түгел, башыңды ла һатыр. Бер ҙә ике уйлап тормаҫ...

— Ә мин ни тинем? — тип уның һүҙен бүлде Әхәт. — Сәрби тутай кеүектәргә аңлатыу юлы менән йоғонто яһарға маташыу балалыҡ, тимәнемме? Әһә, һин дә аңлаған икәнһең!

Иштуғанға Әхәт бигерәк тә ширкәткә рәис булып алғаны бирле артыҡ һулға бөгөүсән, урынһыҙ киҫкенлек күрһәтергә әҙер тороусан булып киткәндәй күренә. Әхәтсә, Иштуған һалдат ҡатылығын юғалта, үтә һаҡ була бара кеүек тойола ине. Шуға ул әле дуҫының ошо ҡыланышын иҫенә төшөрөргә тырышып, тағы бер ҡат:

— Аңлағанһың икән бара торғас! — тип кинәнеп ҡуйҙы.

— Аңланым, — тине Иштуған һаман күңелһеҙ генә. — Үҙем дә белмәйем, ниңәлер уны нәп һаҙлығынан тартып сығарғым килә ине... Бәлки, ҡасандыр уның менән бер ҡыйыҡ аҫтында йәшәгәнгәлер...

Әхәт ҡыҙып китте.

— Сәрби тутайҙарҙы, Шымбай ҡуштандарҙы ауылдан һөрөргә кәрәк уларҙы. Юҡһа бында аҫтыртын ҡотҡо таратып яталар, тимәй инемме? Ә һин һаман аңлатыу, тәрбиәләү... Халыҡ ни әйтер... Халыҡ нимә әйтһен? Уның ни әйтерен көтөргә түгел, ә үҙең нимә теләйһең, шуны әйтергә, өйрәтергә кәрәк хәҙер. Аңланыңмы?!

Иштуған, дуҫына танымаған һымаҡ аптырап, хатта ғәжәпһенеп ҡараны:

— Элек буржуйҙар, уларҙың табанын ялап йәшәүсе уҡымышлылар: «Халыҡ — һарыҡ ул. Ҡайҙа ҡыуһаң, шунда барһын. Уның эше шул», — тигәндәр. Әллә һин дә шулай тимәксеһең инде, әй?

Әхәт был иҫкәртеүҙе әллә ишетмәне, әллә аңламаны, һаман ҡыҙып-ҡыҙып һөйләүен белде.

— Үткән йыл мин Алмабикә әбейҙең икенсе өйөн дә тартып алып, үҙен ауылдан ҡыуайыҡ тигәндә лә, һин

ҡарыны төштөң. «Старшинаның бөтә байлығы ваҡытында конфисковать ителгән. Ә был өй Иҙрис ҡартҡа тейеш. Шунда ул ҡарындашы Алмабикәне лә тота, — тинең. Етмәһә: — Унда ҡыҙ бала Алтынбикә бар. Иҙрис ҡарт уны үҙ ҡыҙы кеүек күрә, ярата. Уларҙан айырылыуы ҡартҡа ҡыйын булмаҫмы», — тип, күңелдең нескә яғына сиртеп ҡуйҙың. Ә ул Алмабикә әбей, беләһеңме, миңә үҙебеҙҙең бөтә ғаилә менән уға эшләп уҙғарған зая ғү-мерҙе иҫкә төшөрөп, йәнде көйҙөрөп кенә тора.

Ишбулган Әхәткә тағы оҙаҡ ҡына ҡарап торҙо ла, әле генә уйланып йәһәтерәк өйөнә, ҡатыны янына ҡайтҡыһы килеп барыуын тамам онотоп, бәхәсләшергә тотондо:

— Беҙгә тойғоға йәки шәхси екһенеүгә таянып ҡына эш итеү килешмәй. Беҙ унан юғары булырға тейешбеҙ.

— Миненсә, байҙарҙың үҙҙәрен бөтөрөү генә етмәй. Уларҙың тамыр-томорон да ҡоротоорға кәрәк. Шунһыҙ шул тормошто алға ебәреүе ҡыйын буласаҡ, — тип һаман ҡыҙа барҙы Әхәт.

— Һин, аңлатыуҙан бөтөнләй баш тартырға, теләгән бер ерҙән бөгөргә, һындырырға, тиһеңме ни?

— Әлбиттә, шулай!

— Ә һин ул тамыр-торморҙоң үтә тәрәнлеген, осо-башы ҡайҙа барып, ҡайҙа төртөлөрөн белеп бөтөрөңә ышана алаһыңмы?

— Ышанмайынса?!

— Уйлап ҡара. Бына шул Иҙрис олатайҙы ғына ал. Ғүмерен батша офицерҙарендә денщик булып уҙғарған. Ауылға ҡайтҡанда ҡартлығы һәм ярыҡ балалайкаһынан башҡа бер нәмәһе лә булмаған. Бында уның ата-әсәһе күптән үлеп, барлыҡ мал-тыуары Собхан старшина ҡу-лына килеп эләккән. Хәтерләйһеңдер, беҙ бәләкәй саҡта ул унда күсер булып эшләй ине.

— Хәтерләмәйсә! Айһылыуҙы урлап ҡасҡанда ул бит бына старшинаның иң яҡшы юртаҡтарын эйәрләп биреп ебәргәйне, — тип ҡуйҙы Әхәт, инде баҫыла төшөп. — Эх, шундай толпарҙар ине бит, әй! Ел дә ҡыуып етмәҫлек ине!

Ишбулган да йәшлектең онотолмаҫ иҫтәлеге булып йө-рөктә һаҡланған был көндәрҙе хәтергә төшөргәс, эңер ҡараңғыһы баҫып килгән тоноҡ офоҡҡа күҙ ташлап уй-лап биреп барҙы ла һүҙен дауам итте:

— Бына шул Иҙрис ҡартты әйтәм әле, беҙ белгәндә, ысынлап яҡшылыҡ, ғәҙеллек тигән нәмә йәшәүенә тамам [illegible], айныҡ саҡта кейәүенә баш эйеп хеҙмәт иткән,

эсеп алһа, ситтән уға йоҙроҡ күрһәтеп, урамда балалайка дымбырҙатып:

...Эх, мои родители,
Вы меня не любите... —

тип сабыйҙар таҡмағы әйтеп йөрөүҙән башҡаны белмәгән бер кеше ине бит.

— Беләм.

— Ә хәҙер илгә ирек килде, хаҡлыҡ, ғәҙеллек урынлашты, тип ҡыуанып йәшәй. Бәхетле. Шуға ул хәҙер эсмәй ҙә, болармай ҙа... Ишеттек бит, бая ниндәй йыр сығарып йырлап ебәрҙе? Күңелендә ышаныс ҡояшы балҡымаһа, ундай йыр сыҡмай ул, дуҫ!

— Туҡта, һин ниңә быларҙы миңә һөйләйһең әле?— тип тағы сабырһыҙлана башланы Әхәт. — Әйтерһең, мин ситтән килгән бер кеше. Әйтерһең, мин Иҙрис ҡартты йәберләргә йыйынам!.. Мин бит...

— Һин һүҙҙең йәбешкәһен көт, — тип ҡоро ғына бүлдерҙе уны Иштуған. — Һин хәҙер ҙур кеше. Ширкәт рәисе. Мин дә — уҡытыусы. Икенсе төрлө итеп әйтһәк, беҙ хәҙер Совет власеның ошо ауылдағы ышаныслы вәкиле. Хатта терәге тип әйтергә лә мөмкин. Шулай булғас, беҙгә яңылышырға ярамай. Әгәр беҙ халыҡ менән һаҡһыҙ ҡыланабыҙ, уны үҙебеҙҙән ситкә тибәрәбеҙ икән, социализм идеяһына тап төшөрәбеҙ тигән һүҙ. Социализм тигән бәхетле тормош хеҙмәтсән халыҡ өсөн төҙөлә бит ул. Шулай булғас, уның үҙенең ихлас ҡатнашлығы менән генә төҙөлөргә тейеш, минеңсә. Теге-был һаҡһыҙ аҙым менән халыҡты ситкә тибәрһәк, уны көсләп ҡушып ҡына эшләтеп, уңышҡа ирешеп була тип уйлаһаҡ, беҙ яңылышыр инек...

— Шунан һуң?

— Шунан һуңмы?— Иштуған, өҙөлөп ҡалған фекерен йыйып алырға тырышып, оҙаҡ ҡына тынып ҡалды. Унан, ҡапыл туҡтап, Әхәткә теклəп ҡараны. Тегеһе лә, ҡулдарын салбар кеҫәһенә тығып, киң баҫып туҡтаны ла Иштуғандың былай ҙа арыҡ йөҙөнә тағы ла аҡһыулыҡ өҫтәп торған оҙон керпектәре өҫтөнә сәйер булып йәйелеп ятҡан ябалаҡ ҡар бөртөктәренә көлөмһөрәп ҡараны.

— Эйе, шунан ни әйтмәксеһең?

— Ә, эйе, бына шул Алмабикә әбейҙең, элек бай, хәҙер иң ярлы әбейҙең, тамыр осо ла, теләйһеңме һин, юҡмы, ошо батрак Иҙрис ҡартҡа килеп тоташа бит әле. Шул

тамырҙы һиненсә ҡырт өҙһәк, ҡарттың беҙгә булған ышанысы ҡаҡшамаҫмы, тип һорамаҡсы инем бит әле һинән. Ҡарт кенендә булһа ла, хаҡлыҡҡа, ғәҙеллеккә юл тапҡан тигән яҡшы өмөтөнә күләгә төшөп ҡуймаҫмы, тимәксе инем?

— Былар ҙа, ахыры, көн күрһәтмәҫ, тип уйлар, тиһеңме?

— Шулай уйлауы бик мөмкин бит.

Әхәт сәмләнеп ҡул һелтәне.

— Йә, ҡуй әле. Артыҡ нескәртә башланың да! Һин ышанһаң дә, Иҙрис ҡарт ҡарындашым тип өҙөлһә лә, Алмабикә әбейҙең иҫе китмәҫ әле. Бына күрерһең! Мөслим ауылының бер кулагына Алтынбикәһен һатырға йөрөй, имеш, тип һөйләйҙәр. Ҡыҙына эйәреп үҙе лә шунда китмәксе, ти. Унда, урман төбөндә, байҙарға, кулактарға әле лә хөрриәт, имеш, ти...

— Улай үҙе китһә, бик һәйбәт. Артына көл, — тине Ишмуған тыныс ҡына. — Ҡитә генә күрһен!

— Һай аҡыллы баш! — Әхәт ҡысҡырып көлөп алды ла ашығып кире боролдо. — Йә, мин дә ҡайтайым әле. Шарала ла эштәр етерлек! Әле тик һинең бер көндө Сәрби тутай лавкаһынан сығып килеүеңде күреүемде әйтер өсөн генә, унан һинең аңлатма эшеңдән ниндәй һөҙөмтә булды икән, тип белмәксе лә булып ҡына эйәргәйнем...

Ул тағы бер тапҡыр ҡысҡырып көлдө лә боролоп китте. Ишмуған да әкрен генә ҡайтыу яғына атланы.

«Бер уйлаһаң, Әхәт дөрөҫ әйтә. Тәрбиәгә килмәҫтәй бит элементтәргә аңлатып маташыу файҙаһыҙ. Әммә халыҡ күңеле, халыҡ фекере менән иҫәпләшмәү, уның рухи донъяһын иғтибарға алмау, халыҡ яҙмышын хәл иткәндә, ноуамаллыҡ күрһәтеү ярай торған эш түгелдер. Эйе, халыҡтың быуаттар буйы йәшәп килгән тормош төшөнсәләрен яманлыҡ, яҡшылыҡ тураһындағы аңын һанға һуҡмау ҙа беҙҙең файҙаға хеҙмәт итмәҫ...» — тип уйланы ул. Үҙенең бер яҡ тамыры ла, ҡатыны яғынан, Ҡәзә мәҙинә барып тоташыуы хәтеренә килгәс, аптырап, ауыр сина көрһөнөп ҡуйҙы: «Их Айһылыу, Айһылыу... Ниңә һин мәзин ҡыҙы булдың икән?! Ләкин бит тыуыуҙы ла, мөхәббәтте лә планлаштырып, бер идеяға буйһондороп бөтөп булырмы һуң?»

— Атаһы, ниңә шулай бойоғоп ҡына киләһең?!

Ишмуған, тертләп, ҡапыл күтәрелеп ҡараны. Тупһала,

аҡ айыу балаһы шикелле булып ҡарға аунап бөткән Салауатын етәкләп, Айһылыу көтөп тора ине.

— Берәй нәмәгә эсең боштомо әллә?

— Юҡ. Нимәгә эсем бошһон? Ҡәйефем харап шәп!

Иштуған, үҙ һүҙҙәренең бик үк дөрөҫлөктө сағылдырмауынан уңайһыҙланып, ҡолаҡ остары ҡыҙа башлауын һиҙҙермәҫ өсөн, шаяртып, ҡатынына ҡар йомарлап ырғытты.

— Мә, ал биште. Юҡҡа юрап торғаның өсөн!

— Ә һин әле улаймы! — Айһылыу тупһанан ергә һикерҙе. Ялп-йолп килеп, иренә ҡар йомғаҡтары яуҙыра башланы. — Бына һиңә, бына! Өйҙә тора алмағаның өсөн! Мә, тағы!

Улар, балалар һымаҡ сәмләнеп, арығансы, ҡулдары биттәре уттай янып, күңелдәре күтәрелеп киткәнсе, көлөшә-ҡыуыша ҡар бәрештеләр.

## X

Дәрес бөткәс, студенттәр кемуҙарҙан ашханаға югерҙеләр. Емеш менән Шәмсиә лә, һаман көлөшөп, тәҙрә янында торҙолар. Бер-береһенә һиҙҙермәһәләр ҙә, ҡыҙҙар менән бергә ҡайтҡылары килеп, ахыры, Сабир менән Хөрмәт тә коридор буйында йөрөйҙәр ине.

«Емештең күңеле күтәренке... Ҡиноға саҡырып-саҡырып барманы. Циркка барырмы икән?» — тип уйлай Хөрмәт, ә Сабирҙең үҙенсә йәне көйә: «Ниңә шул ҡырыҫбикә менән баш ватам әле? Бына, алйот! Ҡәрәге бар! Нимәнән мәрәкә тапҡандыр был тилекәйҙәр?» Ә ҡыҙҙар, моғайын, көлөүҙәренең сәбәбен үҙҙәре лә белмәйҙер. Былай ғына, йәшлектән, күңел тулы яҡтылыҡтан, ярһыуҙан... Әйткәндәй, ҡайһы саҡта мут һүҙле Шәмсиәгә Емеште илатҡансы көлдөрөү бер ни тормай. Бына әле лә ул, шешмәк күк күҙҙәрен түңәрәкләндереп, әхирәтенә ҡарай ҙа сәтәкәй бармағын күрһәтә.

— Һин бит ошолай сәтәкәйҙе ҡыбырҙатҡанға ла көләһең, эйе бит! Йә, көл әле! — Емеш тыйыла алмай көлә. — Ә ҡайһы саҡта ауыҙыңды баҫрау менән баҫтырыҡлап ҡуйғандармы ни? Сәтәкәйеңде ҡыбырҙатыу түгел, маймыл булып мимылда, барыбер өндәштереп булмай. Ни эштәп улай икәнһең һин, ә?

— Белмәйем, — ти Емеш. Тағы көлә.

Әле һаман иҫ китмәгән төҫ күрһәтергә тырышҡан

егеттәр барған һайын был яҡҡа йышыраҡ күҙ ташлап йылмайҙылар. Ахыр, Сабир, кеҫәһенән ҡулын алмай ғына, дуҫының ҡабырғаһына төртә.

— Бар әле шуларҙы бөгөн циркка саҡыр.

Үҙе лә күптән шул уйҙа йөрөһә лә, Хөрмәт сер бирергә ашыҡмай.

— Барамы ни ул Емеш. Беләһең бит...

Сабир буйға ла бейегерәк, яурынға ла киңерәк. Тә-ңгәбер холҡо менән дә яҡшы күңелле Хөрмәттән ныҡ айырыла, хатта дуҫтар араһында башлыҡ һымағыраҡ булып йөрөй. Шул уҡ ваҡытта тырышып уҡыу, кинотеатр, цирк яратыу, әҙәбиәтте күп уҡыу яғынан улар үҙара бик оҡшашҡандар ҙа.

— Бар, һөйләш. Ҡыҙҙар бит улар юрый ғына ялындыра.

Хөрмәт, яурынды ҡыҫып, аҙ ғына бейеп-өйөрөлөп алды ла, баҙнатлы булырға тырышып, ҡыҙҙар яғына атланы.

— Әйҙәгеҙ, бөгөн циркка барабыҙ, — тип ул Шәмсиәгә ҡарап өндәште. — Беләһегеҙме, «Ҡыҙыл маска» менән «Кара маска» күрәсәкбеҙ!

— Барабыҙ, барабыҙ! — тине Шәмсиә.— Цирк ҡарарға мин һәләк әүәҫ ул. Барабыҙ бит, ә? — тип, сабыйҙарса ҡыуанып, әхирәтенә ҡараны.

Күҙҙәрендә әле булһа баяғы көлөү осҡоно уйнап торған Емеш, уңайһыҙланып, керпектәрен түбән төшөрҙө.

— Әлләсе...

— Сабир менән беҙ кисә үк билет алып ҡуйғайныҡ, — тип арттырып ебәрҙе Хөрмәт. — Билеттәрҙе юғалтмайыҡ инде.

— Емеш, барайыҡ! — тип Шәмсиә лә ныҡыша башланы. — Ҡалаға килеүеңә бер ҡыш үтеп бара. Ә үҙеңдең бынағаса циркты күргәнең дә юҡ.

Емеш, аяҡ остарына ҡарап, уйланып тора. Әйткәндәй, күҙҙән бирле бөтә ҡала ҡотороноп цирк ҡарай. Сөнки уның аренаһында «Ҡыҙыл маска» аҫтында ниндәйҙер билдәһеҙ батыр өҫтөнлөк итә. Ә хәҙер бына тағы «Ҡара маска» тигәне килеп сыҡҡан. Ошо хаҡта һәр көн ишетә тороп, бер тапҡыр ҙа ҡарамау яраймы? Етмәһә, Шәмсиә лә йәлке... Уның бит Сабирға күҙе төшөп йөрөй... Барғыһы килә...

— Йә, томһайған, ни эштәп тағы өндәшмәҫ булдың? Әллә бая көлгәндә телеңде тештәп өҙҙөңмө? — тип һа-

ман шаяра Шәмсиә, ә күҙҙәрендә ялыныс сағыла. Хөрмәт тә:

— Емеш, барабыҙ бит, ә? — тип сабырһыҙланып ыңғай яуап көтөп тора.

— Барабыҙ. Тик шарты бар, — ти Емеш, йылмайып, дуҫтарына күрәтерелеп ҡарай.

— Ниндәй шарт? Йә, әйтә һал, — тип тағы ла түҙемһеҙләне Хөрмәт.

— Емеш булһа — шартһыҙ булмаҫ, — тип көлә Шәмсиә. Емеш шат, шаян, хатта уйынсаҡ бөгөн. Шулай ҙа, шартынан баш тартырға йыйынмай.

— Мин билетте үҙем һатып алам... Шуға риза булһағыҙ, барам, — ти.

Бындай шартты көтмәгән Хөрмәт ҡолағына хәтле ҡыҙарынып китте.

— Ниңә һин шул хәтле йәберләйһең кешене, Емеш?!

— Шулай ғына бара алам, — тип ҡабатланы ҡыҙ, үҙһүҙлеләнеп. — Башҡаса бармайым.

— Ярар инде, һинеңсә булһын, — тип Хөрмәт күңелһеҙ генә ризалашты. — Тимәк, ашағас та, югерәбеҙ?

— Югерәбеҙ, — тип раҫланы Шәмсиә. — Ҡапҡа тышында көтөгөҙ. — Хөрмәт, Сабир янына киткәс, Емешкә аптырап ҡараны. — Ни эштәп һин шулай, ҡырыҫ? Йә бер тапҡыр Хөрмәт һине үҙ аҡсаһына алып барһа, ни булыр тиһең? Хас та инде аҡсалы, бай ҡыҙ тиерһең!

— Беләһеңме, Ғабдулла Туҡай нимә тигән? — Емеш башын ғорур күтәрҙе:

> Сәғәҙәт тауына менһәң, үҙең мен,
> Ни ярҙам килһә лә килһен үҙеңдин.
> Тимәҫ һис кем минең арҡамда менде, —
> Хәҙер юпләп сәләм дә бирмәй инде...

Бына шулай. Мин бер кемгә лә бурыслы булырға теләмәйем.

— Алйот һин, Емеш, бындай ваҡ мәсьәләгә ҡарата яҙғанмы ни Туҡай ул шиғырҙы?!

— Ваҡ мәсьәлә булмай, — тине Емеш, үҙһүҙлеләнеп. — Ә мин һәр саҡ Туҡайҙың ошо кәңәше менән йәшәргә теләйем, белдеңме?! Унан һуң... Унан һуң, егеттәр менән ҡушлап йөрөү әллә нисек... Уңайһыҙ... Оят...

Шәмсиә тағы шыңғыратып көлөп ебәрҙе.

— Әйтәм бит, һин әллә ниндәй диуана ҡыҙыҡайһың тип! Дөрөҫ шул, үәт әй, сүптән сүмәлә хәтте мәғәнә сығарырға тора бит әле! Кит, яратмайым улайғас һине!

— Яратаһың, һин мине тәү күреүҙә үк яраттың. Беләм!

— Беләһең, маҡтансыҡ!

— Беләм шул!

Әхирәттәр етәкләшеп, көлөшә-бәхәсләшә, ашханаға йүнәлделәр.

* * *

Цирк бинаһы үҙенең формаһы, ҙурлығы, тамашасыларҙың күплеге менән Емештең иҫен китәрҙе. Шул уҡ ваҡытта ул, нисектер, таныш, күргән, белгән урын һымаҡ та тойолдо. Ҡайҙа, ҡасан? Төштә күрҙеме әллә ул быны?.. Юҡ, күрмәне. «Спартак» китабынан, гладиаторҙар көрәшкән майҙанды хәтерләтте был урын уға.

Емеш, хайран ҡалып, әйләнә-тирәгә күҙ йөрөтөп сыҡты. Уға бында бөтәһе лә яңы, бөтәһе лә ҡыҙыҡлы ине. Шәмсиә лә бик шат. Көлә-көлә һөйләй, бөтә ҡыланышы менән Сабирҙең иғтибарын яуларға тырышҡандай итә. Сабире лә уның ҡолағына ниҙер бышылдай, көр тауышын тағы ла ҡалынайта төшөп, кинәнеп көлә. Ә Емешкә иғтибар ҙа итмәй. Теге ваҡытта уны ҡурҡытып баҫҡыстан йығып төшөргәне бирле ҡырын ҡарарға, һөйләшмәҫкә тырышып йөрөгән була. Әйтерһең, бында Емештең гәйебе бар. Йөрөһөн. Өндәшмәһен. Емешкә барыбер. Хатта рәхәтерәк тә, һөйләшергә ул үҙе лә әүәҫ түгел. Бигерәк тә егеттәр менән. Нимәгә кәрәк улар. Ҡыҙҙарға улар менән яҡын мөнәсәбәттән ни еңеллек? Ҡатын булыу, балаға батыу, тотҡонлоҡҡа ҡабыу. Емеш бик күп кисерештәр аша саҡ килеп тапҡан азатлығын кемгәлер, ниндәйҙер тойғолар өсөн ҡорбан итергә тормай әле. Уға былай ҙа донъя һәйбәт. Беләһе, күрәһе, өйрәнәһе нәмәләр иҫәпһеҙ-һанһыҙ...

Ә Хөрмәттең кәйефе юҡ. Берҙән, Емештән билет өсөн аҡса алырға мәжбүр булды. Икенсенән, бына бит ул, Сабирҙән, Шәмсиәнән арыраҡ барҙы ла ултырҙы. Бер уйлаһаң, Сабир дөрөҫ әйтә шул — үтә ҡырыҫ, әллә ниндәй таш йөрәкле ҡыҙ был Емеш. Холҡона ҡарағанда, хатта ҡул ғына һелтәрлек. Әммә Хөрмәт ниңәлер ҡул һелтәй алмай ҙа ҡуя. Шул ҡыҙ янына барғыһы, уға ҡарағыһы, хатта ул тиҫкәре булған һайын, әрһеҙләнеп, уның менән һөйләшкеһе килеп кенә тора. Был ни? Һөйөү-

ме икән ни? Мөмкин түгел! Хөрмәт әле быҒаса бер кемдә лә һөйөп ҡарамаҒан, уның ҡалай булырҒа тейешлеген дә төшөнөп етмәй әле. Емешкә ҡарата күңелендә йәшәгән йылы тойҒоно ул ошоҒаса яҡташ булыуҙан, балалар йортонда бергә тәрбиәләнеүҙән тип уйлай. Хатта Сабирҙың ҡайһы саҡта: «Эй, Ғашиҡ! Аҡылыңды йый!»— тип иҫкәртеүенә үпкәләп тә ҡуя. «Ниндәй Ғишыҡ тураһында һөйләйһең һин, ахмаҡ!» — тип асыулана. Ә инде үҙе, Емеш әгәр ут эсенә һикер тиһә, һис тә уйлап тормай һикерергә әҙер. Был ни Ғәләмәт?!

* *
*

Цирк түбә көмбәҙе аҫтында канатта йөрөү, ергә аяғы теймәй осҡан аҡбуҙ атта елеү, дүңгәләктәр араһында тейен шикелле һикереп уйнау кеүек теүәллек, етеҙлек һәләтлеге күрһәткән күңелле номерҙәрҙән башланды. Уларҙы Емеш әҙәм балаһының осҡорлоҒона таң ҡалып, яратып ҡараны. Тора-бара ул хатта егеттәр менән ҡушлап килеүҙең уңайһыҙлығы хаҡында ла онотто. Әммә икенсе бүлектә, француз көрәше башланыу, береһенән-береһе итләс, килбәтһеҙ ярым яланҒас көрәшселәрҙең, ниндәйҙер хайуан тауыштары сығарып ырылдай-уһылдай, бер-береһен иҙгеләргә, аяҡ-ҡулдарын, муйындарын борҒоларҒа тотоноуҙары менән, был ҡыуанысла тойҒо тағы екһенеү, биҙеү менән алмашынды. Күптән түгел уҡылҒан «Спартак» китабы тағы хәтеренә килде. Ул хатта үҙендә ҡотороноп ҡул сапҡан тамашасыларҙың, гладиаторҙарҙы көрәштереп, һуғыштырып, уларҙың ҡан ҡойоу, үлтерешеү трагедияһынан илаһи ләззәт табып ултырҒан ҡол биләүселәрҙе күргәндәй булды. Үтә уңайһыҙланып, иптәштәренә ҡарап алды.

Хөрмәт, аренаҒа атылып төшөрҙәй булып, йәне-йөрәге менән бирелеп ҡарай, кемделер ҡеүәтләй, кемгәлер еңеләү теләй, шашып ҡул саба. Сабир эскәмйәнең артына ҡайҡая биреп һөйәлгән дә, ирендәрен мыҫҡыллы ҡыйшайтып, тынып ҡалған. Әммә уның да күҙҙәрендә ҡыраҒай саялыҡ балҡый. Тимәк, уға ла көрәш оҡшай. Шәмсиә хаҡында әйтеп тораһы ла юҡ. Ул да, Хөрмәт шикелле, шашып, көлә-көлә ҡул саба.

Һары ҡом һибелгән түңәрәк майҙанда көрәш оҙаҡ дауам итте. Береһе ҡара маска, икенсеһе ҡыҙыл маска

кейгән ҡыҙыл тәнле, айыу кеүек килбәтһеҙ ике әҙәм, йыртҡыс тауыштары сығарып, сыйылдай-уһылдай һаман айҡашты. Емеш инде, тамам екһенеп, күҙҙәрен йомдо. Уның шулай, күргеһе килмәгән саҡта, күҙҙе сырт йомоп ятыла торған ғәҙәте лә бар.

Цирк бөткәндә, бик һуң ине. Ай батҡан, йондоҙҙар балҡып ҡалҡҡан.

— Уй, ҡалай ҡараңғы! Йәһәтерәк ҡайтайыҡ, — тине Емеш, сығыу менән. — Югерәйек.

— Килешмәй,— тип туҡтатты уны Шәмсиә.— Урамда югереп йөрөргә беҙ бала-саға түгел дә.

— Ашыҡһаң-ашыҡмаһаң да, бөгөн дәрес әҙерләргә барыбер һуң, — тип өҫтәне Сабир.

Емешкә иптәштәре менән килешергә тура килде. Улар яй ғына атлап киттеләр.

— Ҡыҙыл маска тағы еңдермәне! Уны еңерҙәй батыр юҡ ул, — тип һүҙ башланы Хөрмәт.

— Еңелһә ништәй? — тип ҡыҙыҡһынды Шәмсиә.

— Еңелһә, уның исем-фамилияһы билдәле була. Башҡа көрәшселәр шикелле маскаһыҙ йөрөй.

Сабир ярһыған дуҫының елкәһенән ҡыҫып ҡосаҡлап алды.

— Әллә үҙең көрәшсе булып еңеп ташлайһыңмы шуны? Былай үҙеңдә көрәшселек һәләте барға оҡшай. Йоҙроҡтар сүмес, яурындар дуға...

— Көрәшсе булырға иҫәп юҡ юғын. Шулай ҙа, ҡыҙыл масканы кемдер еңгәнгә хәтле, циркка йөрөргә тура килә инде, — тип ярым шаярып яуап ҡайтарҙы Хөрмәт.— Мин кешеләрҙең ап-асыҡтан көс һынаушыуын яратам. Көрәшселәр — намыҫлы, ҡыйыу кешеләр. Еңһә лә, еңелһә лә үҙе. Кемдеңдер ярҙамы менән түгел.

— Әйткәндәй... — тип ҡуйҙы Емеш ҡапыл. — Хөрмәттең был һүҙендә ниндәйҙер дөрөҫлөк бар бит. Ысынлап та, көслө кешеләрҙең туранан-тура майҙанда көс һынашыуы һәйбәт тәбаһа! Боронғо батырҙар һуғыш майҙанында шулай ҡара-ҡаршы осрашып көс һынаша торған булғандар. Алышта кемдең батыры еңгән — шул яҡ еңеүсе һаналған. Ә һалдаттарҙы бер-береһенә ҡаршы ебәреп, йылғалай ҡан түктереп, арттан ҡамсылап тороп түгел...

Емеш, үҙенең уйлап ҡына ҡуя торған ғәҙәтен боҙоп, ярһып һөйләп китеүенә аптырап, туҡталып торҙо. Шулай ҙа бер аҙҙан тағы өҫтәне:

— Әммә цирк майҙанындағы көрәш миңә барыбер оҡшамай. Бынан ары мин бер ҡасан да бында килмәйә сәкмен, яратмайым циркты, ә һин, Шәмсиә?

Шәмсиә үҙ нәүбәтендә Сабиргә һорау менән ҡараны.

— Мин циркты ла, киноны ла яратам. Ҡулымдан килһә, көн дә йөрөр инем. Ә һин?

Сабир, ғәҙәтенсә, ауыҙын бер яҡҡа ҡыйшайта бирен йылмайып ҡына ҡуйҙы. Уның ҡарауы Хөрмәт, кино һүҙен ишетеү менән, турғай шикелле ҡанатланып китте.

— Ҡиноны яратам, тиһеңме? Улай булғас, иртәгә давай барайыҡтар. «Октябрь»ҙә «Робин Гуд» башлана. Робин Гудты Дуглас Фербенкс уйнай. И-их, «Багдадский вор»ҙа уның уйнағанын күрһәгеҙ ине һеҙ!.. — тип, хатта телен тасылдатып ҡуйҙы. Унан, актерҙың уйнауын нисегерәк иптәштәренә һөйләп аңлатырға белмәй, тынып ҡалды.

«...Ысынлап та, ҡайҙа ғына булмай ул Бағдад ҡарағы, нимә генә күрмәй?! Ул сихырланған осһоҙ-ҡырыйһыҙ ҡара урмандарҙы, ялҡын ялмаған тәрән соҡорҙарҙы осоп үтһенме, мең төрлө сер йәшергән ҡараңғы диңгеҙ төпкөлдәрен ҡыҙырып сыҡһынмы?.. Йәки сәскәле яҙғы дала шикелле төрлө-төрлө сыбар кейемле, сыр-сыулы халыҡ менән тулы Персия баҙарҙарын гиҙһенме, тылсымлы серҙәр, мөғжизәләр менән тулы быяла һарайҙарға барып инһенме, иҫәпһеҙ-һанһыҙ яуызлыҡты, боҙоҡлоҡто еңеп, яҡшылыҡ һәм ғәҙеллек урынлаштырһынмы... Эйе, бөтә нәмә килә уның ҡулынан. Бер ниндәй кәртә лә туҡтата алмай уны юлынан. Их, шундай булһаң ине!»

Сикһеҙ шаян, йылғыр ҡылыҡлы, һис бер ауырлыҡ алдында ла аптырамаҫ, сигенмәҫ, ҡыйыу һәм яҡшы күңелле Бағдад ҡарағына әйләнгән Дуглас Фербенкс Хөрмәттең күңелен ысынлап ярһыта ине был көндәрҙә. Әммә тылсымлы әкиәт геройы кисергән бөтә был мөғжизәләрҙе һөйләп-аңлатып буламы һуң?! Уны һөйләргә түгел, күрергә генә кәрәк!..

Сабир тынып ҡалған дуҫының яурынына ҡулын һалды.

— Әллә, дуҫ, берәй кинотеатрға эшкә инеп алаһыңмы? Үҙең дә көн һайын кино ҡарарһың. Беҙгә лә буш күрһәтерһең.

— Шәп булыр ине, әй. Тик кем булырға икән? Директормы, билет һатыусымы?

— Ҡарауылсы булһаң да ярар.

Хөрмәт был юлы ла аптырап ҡалманы.

— Уйлап ҡарармын, дуҫ. Алһалар, жалованье лә һорамаҫ инем. Ҡөнгә өс тапҡыр кино күрһәтһәләр, етер ине, — тине.

— Ҡарының ашарға һораһа, ништәрһең? — тине Шәмсиә. Хөрмәт уйсан ғына өҫтәп ҡуйҙы:

— Йән аҙығы булғас, етмәйме ни уға, ҡорһаҡҡа...

— Дөрөҫ шул... Йән аҙығы булғас, етмәйме ни?! — тип хупларға ашыҡты Емеш тә. Сабир былай ҙа ҡалын тауышын тағы ла ҡалынайта төшөп ҡысҡырып көлдө.

— Һай, сабыйҙар, будто аслыҡтың нимә икәнен белмәйҙәр? — Унан, дуҫының арҡаһынан һөйөп, шаян, кинәйәле тауыш менән: — Эшкә инмә, дуҫ! — тип өҫтәне. — Ғашиҡ кешенән ниндәй ҡарауылсы сыҡһын?!

— Бушты бытылдама!

Бығаса ғәмһеҙ-уйһыҙ булырға тырышып килгән Хөрмәт, үҙе лә аңламаҫтан, дуҫының беләгенән ҡыҫып тотоп алды. Сабир ауыртыуҙан хатта ҡысҡырып ебәрҙе.

— Ҡиноға ғашиҡ, тим дәбаһа мин! Ебәр, шайтан! Тимер ҡул!

Емеш, ҡыр кәзәһе шикелле, өркөп тороп югерҙе. Шәмсиә уның артынан төштө.

— Туҡта, алйот! Ҡайҙа ҡабаланаһың?!

Егеттәр үҙҙәре генә ҡалғас, Сабир дуҫына аптырап өндәште:

— Ҡара, ҡара... Әллә һин ысын уҡ ға...

— Етер, Сабир, — тип үҙенә хас булмаған ҡырҡыу тауыш менән уны бүлдерҙе Хөрмәт. — Аңлайһыңмы, кешелә яман телгә һалып сәйнәүҙе күтәрә алмай торған тойғолар була... Бигерәк тә ул тойғо әлегә бер яҡтан ғына булғанда...

Ҡаруанһарай баҡсаһына етер алда Емеш туҡтаны. Баҡса буйы ҡараңғы, тын. Был ерҙән Емеш хатта көндөҙ ялғыҙ үтергә лә ҡурҡа. Бына Шәмсиә лә уны ҡыуып етте. Бер ни булмаған кеүек, көлөшә-һөйләшә килгән егеттәр ҙә күренде. Емеш еңел һулап ҡуйҙы:

«Шундай саҡта эргәңдә ысын дуҫтарҙың булыуы ҡалай яҡшы...»

Эйе, был йәһәттән Емештең бәхете бар. Ауылда кескәй генә саҡтан уны Байрас ҡурсалап алып йөрөнө. Бер кемдән дә йәберләтмәне... Балалар йортонда саҡта ла, бында ла Хөрмәт... Уның менән бына шулай, бер кемдән ҡурҡмай, теләгән ергә барырға, хатта алыҫ, хәтәр юл-

дарға сығырға ла риза булыр ине Емеш. «Моғайын, бала саҡта, йәш саҡта ғына булалыр бындай керһеҙ дуҫлыҡ. Ниндәй һәйбәт нәмә был йәшлек тигәнең... Эйе, ысыҡ тамсыһындай саф, тау йылғаһындай шаян, умырзаялай ғүмерһеҙ йәшлек!..» — тип, ғәҙәтенсә, ошо минутта йөрәгендә уянған ҡыуанысты тойғоға хас һүҙҙәр табырға тырышып, уйланып барҙы Емеш.

— Әй, ҡараҡай, ниңә туҡтап ҡалдың?

Сабирҙең яһалма ҡырыҫ тауышы Емештең уйын өҙҙө. Ул тертләп:

— Ҡурҡам... — тип ҡуйҙы.

— Ниҙән?

— Белмәйем.

— Тағы белмәй. Һай, Емеш, һин дә шаян булып сыҡтың, — тине Сабир, инде кинәнеп көлөп.

— Ысынмы?!

— Емештең был бер ҡатлы һорауынан Шәмсиә лә көлөп ебәрҙе:

— Иллә сәйер ҙә ҡыҙыҡай һин, Емеш!

— Шулаймы? — тип шаярҙы һаман Емеш тә. — Белмәй инем. Әлдә әйтеп бирҙегеҙ әле.

— Хәҙер белдеңме?

— Белдем — сәйер кеше.

— Бара торғас, Шәмсиә менән беҙ икәүләп, исмаһам, һиңә бер нәмә белдерҙек әле, — тип көлдө Сабир. Ҡыҙҙар ҙа көлдөләр. Төнгө баҡса шыңғырап, йәштәрҙең тауышын ҡеүәтләп торҙо. Ғәҙәттә, шаян, теремек Хөрмәт кенә инде һүҙгә ҡушылмай, күңелендә урғылған яңы, ят тойғолар хаҡында тәүтапҡыр етди уйланып тынып барҙы. Ул бөгөн, ике кеше аша ултырһа ла, Емештән үҙенә ниндәйҙер иҫ киткес татлы йылылыҡ һипкене бәрелеүен, йөрәгенең өҙөлөп-һыҙланып шул яҡҡа тартылыуын тойҙо. Эйе, эйе, бығаса ла ниндәйҙер күҙгә күренмәгән серле ептәр менән үҙенә тарта ине ул Хөрмәтте. Ә бөгөн бөтөнләй һөйләп аңлатҡыһыҙ яҡын, һөйкөмлө, донъяла тиңе булмаған матур бер ҡыҙ булып күренде лә ҡуйҙы. Шунан Хөрмәт, үҙенең был хәленә иптәштәре лә төшөнә башлауҙан шикләнеп, иғтибарын майҙанға күсерергә, күҙенә Емештән башҡа бер ни күренмәһә лә, көрәште кинәнеп ҡеүәтләүселәр төҫөнә инергә тырышты. Ә йөрәк... һаман һыҡтаны ла һыҡтаны... «Бәлки, Сабир әйткәндәй, ғашиҡ булыу ошолор?! Кем белә, бәлки, ысынлап та, мөхәббәт уты тоҡанғандыр уның йөрәгендә?!»

## XI

Иштуған бөгөн кис тә ғәҙәттәгенән оҙағыраҡ ултырҙы. Башта иртәнге дәрескә әҙерләнде, уҡыусыларҙың яҙыу, арифметика дәфтәрҙәрен тикшерҙе. Илсеғолда хәҙер, Хаммат киткәс, берҙән-бер коммунист булып ҡалған Иштуған партияның ауылға ҡарата булған сәйәсәтен көн дә ентекләп өйрәнеп, уға, һис шикһеҙ, таянып, мәктәптән тыш та ҙур эш алып бара ине. Әле лә ул, бер ауылда ғына түгел, ә тотош волость күләмендә эшләргә тейешле кешеләй булып, газеталарҙан өҙөктәр күсерә-күсерә, эш планы төҙөп ултырҙы.

«Халыҡтың аңына тик тәрбиәүи юл менән генә тәьҫир итергә. Комсомол һәм комсомол булмаған йәштәр араһында мөнәсәбәтте яҡшыртырға. Батрактарҙы ойоштороу, уларҙы батрачкомға индереү, уларға үҙ хоҡуҡтарын, бурыстарын аңлатыу эштәренә иғтибарҙы көсәйтергә. Ярлыларҙы, урта хәллеләрҙе үҙ артыбыҙҙан эйәртеү, уларҙы ойоштороу, машина көсөнә, агрономия ғилеменә таянған алдынғы коллектив хужалыҡ төҙөү өсөн бөтә көстө һалырға».

«Илебеҙҙә халыҡтың 80 проценте крәҫтиән булған хәлдә, социализм төҙөү фәҡәт партияның ауылға ҡарата сәйәсәтен дөрөҫ үткәреү арҡаһында ғына мөмкин буласаҡ».

«Кооперация мәсьәләһендә етешһеҙлектәр күп әле. Уларҙы тикшереп, төҙәтеп барырға, кооперацияла ярлы-батрактар өсөн махсус фонд булдырырға».

— Йә, һин шул шәмеңде быҫҡытыуҙан туҡтайһыңмы бөгөн, юҡмы? Өйҙө һөрөм баҫты лабаһа! — тип һуҡраныҡ, ҡатыны уның уйын бүлдерҙе лә тағы йоҡлап китте. Кескәй Салауат та, тос аяҡтарын юрған өҫтөнә һалып, уянмай йоҡлай ине. Тик Иштуғанды ғына һаман йоҡо алманы. Эш планын төҙөп бөткәс тә, ятҡыһы килмәне. Көтмәгәндә уйҙары уны Емешкә алып барып төкәтте. Ул уйһан ғына йылмайып баш сайҡап ҡуйҙы: «Етем тормошта үҫ ҡырыҫ булып үҫте шул... Бына бит ҡышҡы каникулға ла ҡайтманы. «Аҙ ваҡыт өсөн ҡайтып йөрөгәнсе, китап уҡырмын», — тигән хат ҡына ебәрҙе лә, эш тә бөттө. Һағынмаймы икән ни? Ҡамасауlармын тип ҡурҡамы икән әллә?.. Аңламаҫһың...

Бер ҡыш ҡалала уҡый бит. Үҫкәндер, үҙгәргәндер...»

Ул ҡарындашын күҙ алдына килтерергә, унан, ҡылы-

ғына төшөнөргә тырышып, тарҡау ғына уйланып ултырҙы. Уның хаттарын ҡараштырҙы. Емештең хаттарын ул, ниңәлер, айырым папкаға йыйып бара ине. Берәм-берәм алып ашыҡмай ғына уҡый башланы.

«Ниндәй бәхет — мин студентка! Уҡыуҙа — йәшәйем. Ә ҡалған яғында һаман шул мин инде. Ҡарасәс инәй, мәрхүм: «Ҡайһы кеше бәхет эҙләп ситкә китә. Әммә, ҡайҙа барһаң да, үҙеңдең ҡара һаҡалың үҙең менән бергә йөрөй инде ул», — ти торғайны. Ҡара һаҡал, тимәк, ҡара яҙмыш.

Донъя белгән барлыҡ яҡшы кешеләр шул ҡара яҙмышты ерҙән ҡыуыр өсөн көрәшкәндәр, көрәшәләр. Хатта шул уҡ Ҡарасәс инәй үҙе лә, уның улы Тимербай ағайҙа, минең атайым да шул юлда ҡорбан булғандар. Бынан ары беҙ — уларҙың балалары — ҡара яҙмышһыҙ йәшәһендәр тип, баш һалғандар бит улар!

Эйе, ҡара яҙмышҡа алмашҡа яҡты, аҡ яҙмыш килә! Ашығып, ҡабаланып, үҙ юлындағы бөтә кәртәләрҙе ватып-емереп килә. Хәйерле юл уға, хәйерле юл!..»

Иштуған ҡыуаныслы йылмайып баш сайҡап ҡуйҙы: «Ҡара һин уға, ни тип яҙа бит, ә? Ҡалайыраҡ яҙып ебәрә бит, ә?!» Унан тағы ашыҡмай ғына уҡырға кереште.

«...Дәрестән ҡалған бөтә ваҡытымды китаптар уҡып уҙғарам. Китап — ул минең өсөн быға саҡлы төшкә лә инмәгән өр-яңы донъя! Иҫ киткес гүзәл, тылсымлы донъя!..»

«...Үҙебеҙҙең техникум китапханаһында булған татар, башҡорт телендәге китаптарҙы уҡып бөттөм. Рус телендә уҡырға теш батмай әле. Инде ни эшләргә?! Башты ҡайҙа ҡуйырға?!»

«...Ғ. Туҡай, Ш. Бабич шиғырҙарын ҡат-ҡат уҡып, ятлап бөттөм шикелле инде.

Улар минең күңелемә ниңәлер айырата яҡындар...»

«Ағай!

Һин, Шәүрә Ленин мәктәбенә уҡырға инде. Хәҙер ул Стәрле ҡалаһында йәшәй, тип яҙғас, сикһеҙ ҡыуандым.

«Төҫкә һылыу ҡыҙ бәхетһеҙ була, тип әйтә минең әсәйем. Мин бәхетһеҙ булырмын...» — тип ҡайғыра торғайны Шәүрә. Ә бына хәҙер уның өҫтөнә бәхет тауы ауып төшкән! Күтәрә белһен генә!..»

«Сыуаҡай инәйҙең уйнатыпмы, ысынлапмы һөйләүенә ҡарағанда, мин тыуғас та, яҡты донъяны күрергә ашҡынып, һаҡлыҡ менән генә башты борғолап, тирә-юнде ҡарай башлағанмын, унан мунса шикелле кескәй ләпәк өй-

ән, мейес соҡалтаһында бызылдаған һуҡыр лампанан башка нәмә күренмәгәс, «яҡты донъя тигәндәре, ташҡа үлсәйем, ошомо икән?» тип ғәрләнеп, ахыры, илап ебәргәнмен, имеш...» Ҡыйыҡһыҙ кескәй өй, һүнәм-һүнәм, һеҙҙе бөтөнләйгә ҡараңғыға күмәм, тип ултырған елпелдәк һөрөмлө лампа, тышта ажғыр ғинуар бураны... әйе, донъя мине көләп ҡаршыламаған, һөйөп үҫтермәне. Уның ҡарауы, хәҙер минең түбәмдә күҙ сағылдырғыс тылсымлы яҡтылыҡ, әйләнәмдә күҙ түгел, уй байҡап бөтмәҫ киң, иркен оло донъя балҡып ята. Күпме теләйһең, шул хәтле ҡара, һоҡлан, өйрән, бел. Рухыңды уның баһалап бөткөһөҙ ҡиммәтле йәүһәрҙәре менән биҙә, терелткес нуры менән йәнеңдең яраһын дауала, байыт... Эй-й, белһәң ине, ағай, ниндәй бәхетле мин хәҙер!..

Бына ошо оло бәхет хаҡында ауылдағы әхирәттәремә һөйләгем, уларҙы ла уятҡым, йәһәтерәк яҡтыға, бәхеткә ынтылырға саҡырғым килә минең. Улай ғына ла түгел, бөтә донъяға һөрән һалғым килә минең был оло бәхетем хаҡында! Шул теләк менән мин йыш ҡына ҡәләм-ҡағыҙға тотонам. Уй, тойғо, көйөнөс, һөйөнөстәремде шиғыр йәки хикәйә итеп ҡағыҙ битенә төшөрөргә лә әхирәттәремә уҡытырға теләйем. Әммә был ифрат та ауыр икән. Изге хистәр, мөҡәддәс тойғолар күңелдә янар тау булып урғылһа ла, ҡағыҙға төшкәс төҫһөҙләнә лә ҡуя икән. Шулай ҙа, ағай, мин һиңә бер «Урман ҡыҙы...» тигән хикәйәмде ебәрәм. Уҡып ҡара әле. Нисек икән?»

Иштуған был хикәйәне алғас та уҡып сыҡҡайны инде. Был уңай менән һеңлеһенә яҙыр фекерҙәре лә әҙер ине. Ләкин, нисектер, яҙырға һаман ваҡыт тапманы. Ә бөгөн, бәхеткә ҡаршы, йоҡо ла юҡ, төн дә тымыҡ. Самай яҙышып ҡына ултырырлыҡ. Һәм ул хикәйәне тағы бер ҡат күҙҙән уҙғарҙы ла:

«Хикәйәң миндә шундай фекер уятты: теләгең изге. Дауам ит. Дөрөҫ, һәр бер шиғыр йә хикәйә яҙған кеше яҙыусы булып китмәй. Шулай ҙа яҙыу менән шөғөлләнеү, Емеш, һиңә файҙалы буласаҡ. Үҙаллы уй, фекер йөрөтөргә, уны яҙып аңлатырға өйрәтәсәк. Ә киләсәктә уҡытыусы булаһы кешегә был бик кәрәкле сифат....» — тип Емешкә ҡыҫҡа ғына хат яҙҙы.

«Ҡем белә, бәлки, һинән, ҡараҡай, ысынлап уҡ яҙыусы ла сығыр. Яҙыусы булыу өсөн, бер уйлаһаң, мөгөҙлө булыу шарт түгел дә!..» — тигән уйын яҙыуҙы әлегә кәрәкһенмәне.

Емештең хаттары араһында кескәй генә ике инсценировка ла бар ине. Береһендә нэпмандар, икенсеһендә муллалар боҙоҡлоғо һүрәтләнгән. Иштуған уларҙы хаттар араһынан алып, көндәлек эш папкаһына һалды:

«Тиҙҙән һигеҙенсе март етә. Бер аҙ төҙәтәйем дә сәхнәгә сығарайым әле мин быларҙы, — тип ҡәнәғәт йылмайып ҡуйҙы. — Әйҙә, ауылдаштар уларҙың мутлыҡтарын белһендәр!..»

Күптән уянып, иренә аптырап ҡарап ятҡан Айһылыу:

— Ат-аҡ, төн уртаһында бер үҙең ни ҡыҙыҡ табып йылмайып ултыраһың? — тип һораны.

— Һин йоҡламайһыңмы ни әле?

— Йоҡом туйып уяндым...

— Һин Емештең хаттарын уҡып бараһыңмы?

— Ҡайһы берҙәрен...

— Ғәжәп сәйер кеше беҙҙең Емеш...

— Һин дә сәйер бит. Иртәгә тауҙай эшең көтә. Ә һин...

Иштуған сәмләнеп шәмде өрөп һүндерҙе:

— Һинең белгәнең йоҡо...

## XII

Әхмәтша менән Сәрбиямал үҙҙәренең күцелдәре шикелле саң баҫҡан тар тәҙрә быялаһы аша әленән-әле урамға асыулы ҡараш ташлап, ер аҫты геүләүен ишеткәндәй, һүҙһеҙ тынып ултыралар. Бындай хәл уларҙа хәҙер йыш була. Бигерәк тә 8 Март байрамына арналған кисәне ҡарап ҡайтҡаны бирле, улар, Иштуғанды бөтә комсомолдары менән бергә табала ҡурып ашарҙай булып, тиреләренә һыймай йөрөйҙәр. Сөнки улар сәхнәлә йөрөгән теге йыуан ҡорһаҡлы, ас күҙле нэпман менән сәрелдәк нэпманканы төптө үҙҙәренән көлөү тип ҡабул иткәйнеләр. Ысынлап та, Иштуған, Емештең өйрәнсек ике инсценировкаһын бик йәтеш берләштереп, Илсеғол ерлегенә яҡынайтып, ҡыҙыҡлы комедия эшләгән дә, сәхнәгә ҡуйған бит. Нэпмандарҙың бер тин табыш өсөн нисек сөсө теллеләнеп өҙөшөүҙәре лә, аҡса тигәндә, кешелек сифатын юғалтып, хатта үҙ-ара күҙ соҡошорға әҙер тороуҙары ла, ғөмүмән, уларҙың бөтә һөйләш-ҡыланыштары ла бындағы бөтә кешегә үтә таныш та, мәҙәк тә булып сыҡҡайны. Нэпман ролен уйнаған Әхәт менән нэпманканы уйнаған Сабира тамашасының күҙенән йәш сыҡҡансы көлдөрҙөләр. Бүтәндәрҙе теге донъя

менән ҡурҡытып-өркөтөп йәшәһә лә, үҙен хәмерҙән дә, кеше ҡатындарына ҡул һуҙыуҙан да мәхрүм итмәгән, хатта үҙ маҡсатына етеү юлында иң ҡанһыҙ яуызлыҡтан да тартынмаған уҫал, хәйләкәр мулла ролен башҡарыусы Иштуған да күптәрҙең күҙ алдына Ғаббас мулланың йәш саҡтағы этлектәрен бик йәтеш килтереп баҫтырҙы. Халыҡ уны ла күлә-күлә ҡараны. Шулай итеп, һигеҙенсе март кисәһе фәһем алырлыҡ та, ял итерлек тә булып үтте. Тик Әхмәтша менән Сәрбиямал ғына шул көндән алып үҙҙәренә бигерәк урын таба алмаҫ булдылар. Юҡ-ҡа-барға бер-береһенә бәйләнделәр, юҡ өсөн талашып-һуғышып китергә әҙер торҙолар. Бына әле лә Әхмәтша, йәшкелт күҙҙәрен уттай бызлатып, тоҡ-томалға ҡысҡырып ебәрҙе:

— Ниңә лавканы иртә яптың, һәпрә!

— Һатып алыусы булмағас, ни тип һерәйеп ултыраһым унда?! — тип ҡысҡырҙы Сәрбиямал. Унан зарланып һөйләп китте: — Бынауы дөмөккөр Иштуғандар кәпирәт лавкаһы асабыҙ, имеш, тип бөтә кешене аҙҙырып ебәрҙеләр ҙәбаһа! Күрмәйһеңме ни, старшинаның келәтенән бына тигән лавка йорто эшләп ҡуйҙылар ҙа бит инде! Әле лавкалары асылмаған, бала-саға, бисә-сәсә, ир-ат саҡ ҡына бушаһа, шуның янынан китә алмай бит хәҙер. Көңгөр-ҡаңғыр һөйләшәләр, көлөшәләр, булмаған лавкаларына ҡарап ҡыуанышалар. Ҡайһы берҙәре хатта, йәнәһе, мин ишетһен дә, эсе көйһөн тип инде:

— Үҙ лавкабыҙ була. Әйҙә, купестәр ярышып ҡараһындар әле беҙҙең кәпирәт менән! — тип беҙҙең яҡҡа ымлап ҡуялар. Күрә алмайҙар бит, күрә алмайҙар. Бай булғанды, бар булғанды күрә алмайҙар!.. Әй, ярыҡ ҡорһаҡтар!

Ул, иренән йәлләтергә теләп, ҡоторсоҡ күҙҙәренән ике бөртөк йәш тә һығып сығарҙы.

— Үҙең уйлап ҡара, шуға сыҙап, нисек көн буйы лавкала ҡағайып ултырайым? Бушҡа, бер тин дә табыш итмәгәнгә?! Мин әйтәм, әле урынын ғына әҙерләгәндә шулай, ә лавкаһы асылгас, ни булыр? Кем беҙҙең лавкага инер?!

Әхмәтшаның, иллегә етеп барһа ла, бер генә йыйырсыҡ та һырламаған майлы йылтыр йөҙө таштан юнып эшләнгән һын кеүек тыныс һәм йән өшөткөс һалҡын ине был минутта. Ныҡлы тарамыш тәне лә атылырға торған уҡ кеүек тартылып таш кеүек ҡатып ҡалғайны. Сәрбия-

малға иренең бындай хәле бик ныҡ таныш. Ул ниндәйҙер уҫал, сая ниәт менән баш ваткан саҡта ғына шундай хәлгә инеүсән. Һәм ул, әлегә үҙенә билдәле булмаған был уҫал ниәтте тиҙләтергә, иренең йыртҡыс асыуын тағы ла ярһытырға тырышып, һаман тәтелдәне:

— Бөләбсҙ инде, бөләбеҙ. Әле бит патент хаҡын тағы икеләтә арттырҙылар. Налогтың береһен түләһәң, икенсеһен унан да ҙурыраҡ һалалар. Былай барһа, елкәгә тоҡ йөкмәп сығып китергә генә ҡала бит!.. Я алла, ҡалай түҙергә быға?! Тапҡан-таянғандың барыһы ҡомһоҙ ҡаҙна кеҫәһенә инеп бөтөрмө икән ни шулай?! Әй, тим, һин нисек уйлайһың, ниңә өндәшмәйһең, исмаһам?!

Әхмәтша, күҙҙәрен зәһәрле ялтыратып:

— Былар бөтәһе лә һаман шул Иштуғандар, Әхәттәр, Хаматтар этлеге, — тип мығырҙап ҡуйҙы. — Ҡисә төндә мин Мөслим ауылында булып үттем. Унда беҙҙән биш тапҡыр байҙар һаман боронғоса тып-тыныс йәшәп ята. Һатыу ҙа итәләр, өйөрләп мал да көтәләр. Налог та сәпсим аҙ уларҙа...

— Ҡарасы! Нисек улай икән һуң? Унда ла ошо ҡорогор өәүиттер ҙәбаһа! Ни өсөн һуң беҙҙә былай?!

— Әйттем бит, беҙҙә коммундар, комсомолдар күп...

— Ә уларҙа?

— Берәү ҙә юҡ. Ишетәһеңме, берәү ҙә!..

— Ҡарасы! — тип кинәнеп китте Сәрбиямал. — Бәлки, беҙҙә лә шулай булып китер әле!

— Булыр, булмай ни, бынауы Иштуған барҙа! — тип тағы ла зәһәрлерәк мығырҙап ҡуйҙы Әхмәтша. — Ул бит бер яңғыҙы ун коммунға тора!

— Әйтмә лә, беҙҙең башҡа төшкән бөтә бәлә шунан ғына бит ул. Үс ала бит, үс ала! Бөтәһен беҙгә ҡаршы һөсләтеп ята, дөмөккөрө!

— Ә һуң Әхәте... Етмәһә хәҙер бынауы Хамматты волостә иң баш коммун яһап ҡуйҙылар. Бынан ары Мөслим ауылындағы байҙарға ла көн булмай башлар әле, бына күрерһең... Берәй сара күреп өлгөрмәгәндә...

Улар тағы бер аҙ тынып ултырҙылар. Оҙаҡламай эңер төштө. Өй эсен томһа ҡараңғылыҡ баҫты. Сәрбиямал унан да ҡараңғыраҡ тауыш менән иренең ҡолағына бышылданы:

— Әй, тим... шуларҙы... эт балаларын, берәй төрлө итеп йыйыштырып ҡуйып булмаймы һуң?!

Әхмәтшаның йәшел күҙҙәре уҫал янып китте, тештәрен ҡоторған бүре шикелле шығырҙатып ҡуйҙы, әммә ләм-мим өндәшмәне.

* * *

Көслө март еле төнгә табан айырата ажарланып китте. Түбә ҡалайын, тәҙрә ҡапҡастарын йолҡҡоланы, һәлмәк ҡар суҡмарҙарын бер-бер артлы түбә тимеренә килтереп бәрҙе, өй мөрйәһенән эскә ҡарап әленән-әле әсе һыҙғырып торҙо. Әйтерһең, кемделер үртәне, ҡарт тауыш менән сыйылдап көлдө. Тәҙрә ҡапҡастарын ябып, ауыр ҡормалар ҡороп ҡуйылған өй эсе бынан тағы ла яман томһаланды. Ҡунаҡтар урындыҡта, мендәр өҫтөндә, аяҡтарын бөкләп, яҡынайып килгән яҙ менән ҡырыҫ ҡыштың тыштағы аяуһыҙ алышыуына ҡолаҡ һала-һала, һәр ҡайһыһы үҙ уйына сумып ултырҙылар.

Ғаббас мулла, үҙен сәхнәгә сығарып рисуай иткән Иштуғандан Әхмәтша йәки Шымбай ҡулы менән үс алып булмаҫмы тип, бөгөн уларға һуңлатып ҡына килеп ингәйне. Әмәлгә ҡаршы, Әхмәтша менән Сәрбиямал уны бик хуп күреп ҡаршы алдылар. Шымбай ҡарт та бик ваҡытлы килеп етте.

«Собханалла... эштәр уң булырға оҡшай, — тип кинәнеп кәзә һаҡалын һыпырып ҡуйҙы мулла. — Әхмәтшаны күндереп булһа, кәрәген бирер ине ул хәсистең!..»

Иштуғандан үс алыу, халыҡҡа уның йоғонтоһон туҡтатыу хаҡында күптән баш ватҡан Әхмәтша менән Шымбай ҡарт был юлы муллаға хеҙмәт итергә түгел, ә уның үҙен файҙаланырға самалайҙар ине. Шуға ла Сәрбиямал өлтөрәп йөрөп аш-һыу әҙерләне. Әхмәтша ихласлап һыйланы. Шымбай ҡарт, кеткелдәп көлә-көлә, табынды күтәрмәләп, төрлө һүҙ-хәбәр һөйләп ултырҙы. Аштан һуң:

— Эһем-эһем... мин әйтәм, ҡалай килештереп кәмит күрһәтә башланы әле был Иштуған, — тип һүҙҙе кәрәк яҡҡа бороп ебәрҙе. — Аҙна һайын, мулла ҡорҙаш, һинең электе мәҙрәсәлә хәҙер уйын, йыйылыш бит! Етмәһә, кәмит күрһәтеп ташлай бит был килмешәк! Һай, замандар! Бына эштәр ҡалайыраҡ булып китте, ә?! Шулай бит, хәҙрәт?!

Ғаббас мулла ғәжәпһенеп тә, ҡыуанып та уға ҡарап ҡуйҙы. Сөнки ул Шымбайҙың «хәҙрәт» тип, уның йән еренә юҡҡа ғына һуҡтырмауын аңлай ине. Эйе, бар ине шул

Ғаббас мулланың да шәп сағы. Нисек кенә булмаһын, хатта ҡустыһы Хәбирҙең ҡаны иҫәбенә булһа ла, «хәҙрәт» дәрәжәһен алырға йән атып йөрөгән сағы... Шымбай ҡарт та быны яҡшы хәтерләй бит ул!.. Уның был теләккә ирешә алмағанын белә...

Хәҙер Ғаббас мулланы Шымбай ҡарттың «хәҙрәт» һүҙен ниңә хәтерләүе айырата ҡыҙыҡһындыра: ниндәйҙер маҡсат менән уға ярамһаҡланыу өсөнмө әллә уның хатта хәҙер ҙә «хәҙрәт» дәрәжәһенән баш тартмаҫын һиҙеп, үсәп әйтәме?!

Әммә ул Шымбай ҡарттың кеселекле ҡыланып түбән ҡараған күҙенән дә, хәйләкәр баш эймәкле йөҙөнән дә бер ни аңлай алманы, шуға, ахыры, ауыр көрһөнөп:

— Шулай, замана беҙҙең ҡулдан бөтәһен дә тартып алды... — тип кенә сикләнде.

Шымбай ҡарт утҡа тағы ла мулыраҡ кәрәсин һибергә ашыҡты:

— Ҡеһ-кеһ-кеһ!.. — Кисәге ғәләмәтте әйтәм әле, мулла, һин үҙең күрҙеңме икән? Ҡалайыраҡ итеп сәхнәгә сығарып баҫтырҙы бит Иштуған үҙенде! Ғәләмәт! Төптө һин үҙең икәнһең тип торам... Үәт һин уны!

— Ни, кем, Шымбай ҡорҙаш, күрмәнем. Ишеттем,— тине Ғаббас мулла. — Мин, изге башымды гонаһҡа батырып, шайтан уйынын ҡарап йөрөй булам, тиме?! Аллам һаҡлаһын! Мин һиңә лә аптырайым, Шымбай ҡорҙаш. Нисек бынауы аҡ һаҡалың, хөрмәтле йөҙөң менән кәмит ҡарап йөрөйһөң! Нисек хоҙайҙан ҡурҡмайһың?!

— Хоҙай бит ул, мулла ҡорҙаш, күктә, бик алыҫта. Ә беҙгә ерҙә — кешеләр араһында йәшәргә кәрәк бит әле. Шулай булғас, йөрөргә лә, күрергә лә, белергә лә тура килә. Ҡалай итәһең...

Ғаббас мулла уға шелтәле ҡарап алды:

— Йә, белдең дә, ти. Шунан нимә?!

Шымбай ҡарт, мулланың һорауын ишетмәгән дә кеүек, уның яраһына тоҙҙо һаман мулыраҡ һибергә тырышты.

— Мин уны башта ысынлап уҡ, мулла, һин үҙең икәнһең тип торҙом. Валлаһи, шул хәтле оҡшатҡан. Сапаны, сәлләһе, таяғы... хатта һәлпәйгән кәзә һаҡалы ла һинеке! Үәт ғәләмәт!.. Һис айырғыһыҙ... Һөйләшеүенә хәтле тап һин. Үәт каммун!.. Ысын, тауышыңа хәтле оҡшатҡан, шайтан балаһы! Ҡеһ-кеһ-кеһ!.. — тип шыйылдаҡ, йылан тауышы менән һаман кеткелдәне.

Әхмәтша ла атаһының һүҙен эленән-эле ҡеүәтләп ултырҙы.

— Дөрөҫ шул, теге үзбәк сапаның да, йәшел таяғың да, сәлләң дә һинеке. Әллә үҙең биреп торҙоңмо, олатай, кейем-һалымыңды?

— Ҡеһ-кеһ-кеһ!.. — тип тағы мыҫҡыллы көлөп алды Шымбай ҡарт. — Шулай, кәмиттең иң шәбе һин булдың, мулла. Бөтә кеше һинән һыны ҡатып, эс тырнап көлдө. Ҡеһ-кеһ-кеһ... һай, иблес!

Ғаббас мулла, ҡартлыҡтан йәшкәҙәп, салышайып торған күҙҙәрен кәпесләтеп, үҙенең ни өсөн килеүен оното яҙып, тынып ултырғас:

— Был бит, ни, ысын булһа, Әхмәтша энекәш, Шымбай ҡорҙаш, халыҡты хаҡ тәғәләнең илсеһенә ҡаршы аяҡландырыу була! — тип сәрелдәп ҡуйҙы. — Әхлаҡҡа һыймай торған эш бит был! Аҙғынлыҡ! Юлдан яҙғанлыҡ!

— Шулай, аҙҙырҙы, юлдан яҙҙырҙы был Иштуған! — тип инде бошоноп киткән булды Шымбай ҡарт. — Тәҡәтте ҡоротто был. Һин шуны әйт әле, мулла, шуға бөтәһе кинәнеп, ауыҙ йырып ултыра. Беҙҙең халыҡҡа, ни, уға аллаң ни ҙә, муллаң ни, уға һин кәмит кенә күрһәт... ҡыҙыҡ булһын да, ул эсен тырнап көлһөн. Шул еткән уға, наҙанға!..

— Дөп-дөрөҫ. Мин ни хәтле тырышманым, ни хәтле генә хәләл көсөмдө сарыф итмәнем, уларҙы барыбер изге юлға күндерә алманым. Ҡәмит ҡарауҙы йәки ҡурай уйнатып һикереп төшөп бейеүҙе элек-электән мәсеткә барыуҙан артыҡ күрә бит ул бәдбәхеттәр!.. — тип Ғаббас мулла тамам янып-көйөп китте хәҙер. — Ни эшләмәк кәрәк, йәмәғәт, ни эшләмәк кәрәк?!

Шымбай ҡарттың йомоҡ күҙҙәрендә тағы ла уҫалыраҡ ут тоҡанды.

— Ни эшләмәк кәрәк, тиһең, мулла? Аптырайһың, ә? — тип ҡабатланы ул тағы мыҫҡыллы тауыш менән.— Теләһәң, мин һиңә әйтеп бирә алам...

— Әйт әле, ҡорҙаш, һин бит миңә ҡарағанда тәжрибәлерәк тә, аҡыллыраҡ та... — тип ыңғырашты мулла.— Минең башым тамам ҡатҡан. Бер ни ҙә уйлап сығара алмайым...

— Минеңсә, иң яҡшыһы, — тип Шымбай ҡарт кәкере һуҡ бармағын бөгөп ҡуйҙы. — Иштуғандың кәмит ояһының көлөн күккә осороу!.. Юҡһа ул бөгөн һине, иртәгә

мине... йәғни үҙенсә булмаған бөтә хөрмәтле кешене, кәмиткә әүерелтеп, рисуай итеп бөтәсәк!..

Мулла ҡорҙашына оҙаҡ текләп ҡараны. Ул үҙе лә тап шундай уй менән килгән бит. Әммә тура әйтеүгә ҡарағанда, быларҙың үҙҙәренән уйлатыуҙы хуп күргәнгә, аптырағанға һалышып:

— Йә, хуп... Ҡалайтып көлөн күккә осораһың ти уның? Аллаһы әкбәр тигәнгә генә осоп китмәç бит әле ул, ҡәһәр һуҡҡыры! — тип мәрәкәләгән булды.

— Үрт һалырға кәрәк. Һис кисекмәçтән, — тине Әхмәтша, ҡырт киçеп.

— Кем уны эшләһен? Кемдең йәне икәү?! — тип меçкенләнде мулла.

Шымбай ҡарт, уның ҡолағына яҡын килеп, йылан булып ыçылданы:

— Быны һин генә эшләй алаһың, ҡорҙа-аш!..

Ғаббас мулла, Шымбай ҡарт быны уйнап әйтәлер, тип уйлап өнө быуылып, сыйылдап көлөп ебәрҙе.

— Бәс-с, шулай иттек, ти, клубты, йәғни мәçәлән, минең әлекке мәҙрәсәне яндырҙыҡ та, ти, ә теге, Иштуған төҙөп ятҡан ширкәт тигән әкәмәтен нисек итербеҙ һуң? Уныһы бит клуб ише генә булмаç, эйе, йәғни мәçәлән, ширкәтте бит яндырып ҡына юҡ итеп булмаç... Ни эшләрбеҙ?.. Эй ҡорҙаш, яман туфан бит был! Бөтә донъяны баçып, һине, мине ағыҙып алып китә торған ҡәһәрле туфан ҡупты бит донъяһында!..

— Ширкәте ул төҙөләр ҙә, емерелер ҙә, — тип тағы һүҙгә ҡатнашты Әхмәтша. — Уныһы әлегә һүҙҙә генә тип әйтерлек. Ә клуб бына ғәмәлдә. Уның кеше күңеленә һалған вәсүәсәһе бик ҙур. Ныҡлап тамыр йәймәç элек, уны йолҡоп ырғытыу кәрәк булыр...

— Бындай эште хаҡ тәғәлә хуплар, иншалла, изге ниәтегеҙгә хоҙайҙан булышлыҡ һорап доға ҡыласаҡмын, — тип белдерергә ашыҡты мулла. Сөнки ул бит тап ошо хаҡта һөйләшергә килгәйне. Баҡтиһәң, һүҙ башлап та торорға кәрәкмәне. Былар үҙҙәре үк әйтеп бирҙеләр. — Ярабби, изге бәндәләреңә хыҙыр-ильясты юлдаш ит, — тип һүҙҙе тамамларға ашыҡты мулла. Битен ике ҡуллап кәзә һаҡалының осона хәтле һыпырып ҡуйҙы. — Амин!

— Туҡта, ашыҡма әле, мулла, — тип Шымбай ҡарт уның доғаһын ҡылырға күтәрелгән ҡулын тотоп түбән баçты. — Был юлы һинән доға түгел — эш көтөлә...

Мулла ғүмерендә тәүтапҡыр, хәйләһенең барып сыҡмаҫын һиҙенеп, аптырап ҡалды. — Һеҙ ни, кем, Шымбай ҡорҙаш, минән көләргә булдығыҙ, ахыры, — тип, хатта нәберһенеп үк китте, йәһәтләп урындыҡтан төшә лә башланы. — Ҡайтайым әле мин...

Әхмәтша йөҙө ҡомһарып тынып ҡалды. Шымбай ҡарт мулланың елән итәгенән тотоп, ҡаты ғына артҡа тартты:

— Ултыр! Әле һүҙ бөтмәгән. Үҙең беләһең, мулла, халыҡ минең хаҡта: «Шымбай ҡарт ер аҫтында йылан көйшәгәнен дә ишетә», — тип юҡҡа ғына әйтмәй. Ҡеһ-ҡеһ... ҡалай итәһең, дөрөҫтө һөйләй халыҡ. Беләм шул... — тигән булып хатта ауыр ғына көрһөнөп тә ҡуйҙы. — Бына бит әле һинең Хөснөлхағыңдың терелегәп дә, ҡайһы төндәрҙә үҙегеҙҙә булып китеүен дә белеп тик торам...

— Ялған! — тип сыйылдап ҡысҡырҙы Ғаббас мулла, ҡалтыранып. — Төптө ялған!.. Һин ни, кем, Шымбай ҡорҙаш, нисек алланан ҡурҡмай ялған һүҙ һөйләй алаһың?!

Шымбай ҡарт, уның сәбәләнеүенә һис тә иғтибар итмәй, артабан һөйләне.

— Теге ваҡытта, йоттан алда, беҙҙең тирәлә йәшелдәр бунтын күтәреүселәрҙең береһе ул булыуын да беләм. Хәҙер ошо көндә: «Йәй етһен, урман ҡуйырһын әле, үҙебеҙ белербеҙ...» — тигән һүҙҙе таратыусы ла, халыҡты аҫтыртын болаға өндәүсе лә ул түгел, тип тана алмайһың һин минең алдымда, мулла ҡорҙаш...

— Ялған, ялған! — тип өнө быуылып сәрелдәне Ғаббас мулла. — Яла!..

— Ялған, тиһәң, хәҙер бәйнә-бәйнә һөйләп бирәм. — Шымбай ҡарт уға тағы яҡыныраҡ шыуып ултырҙы. — Теге Сергей Хитровтың Апанасы менән икеһе...

— Юҡ, юҡ! — тип ҡалтыранған ҡулдарын баш осона күтәрҙе Ғаббас мулла.— Һөйләмә, һөйләмә, етер, беләм...

— Бүтәндәр ишетмәһен, тиһәң, йә, ҡолағыңа ғына һөйләйем... Белмәй тигән шигең ҡалмаһын...

Шымбай ҡарт мәйет төҫөнә инеп буҙарынған мулланың ҡолағына улы Хөснөлхаҡтың, Апанас менән бергәләп, ни өсөн ҡасып йөрөүе, халыҡ араһында Советкә, күмәк хужалыҡҡа ҡаршы йәшерен ҡотҡо алып барыуы хаҡында бәйнә-бәйнә һөйләй башланы. Хөснөлхаҡтың ҡасан, нисек өйҙә булып китеүен дә теүәл әйтте.

— Уларҙың төп төйәге Мөслим ауылында икәне лә

миңә билдәле, — тип, шыйылдап бөтөрөп ҡуйҙы ул һүҙен. — Бына шулай, мулла хәҙрәт!

Мулла, һыуға батып барған кеше шикелле, аяҡ-ҡулын мәғәнәһеҙ сатай-ботай болғап сәбәләнде. Ахыр, күрәһең, тамам түҙемдән сығып, өнө быуылып ҡысҡырып ебәрҙе:

— Йә, минән һеҙгә нимә кәрәк, хәсистәр?! Ниңә мине былай язалайһығыҙ!

Шымбай ҡарт һаман шул шомло ыҫылдау менән бер һүҙҙе ҡабатланы:

— Клубтың көлөн күккә осор! Үҙ ҡулың менән түгел, Хөснөлхаҡың эшләр. Аңланыңмы?.. Тик мин дә, Әхмәтша ла өйҙә юҡ көндө. Юҡһа, беҙҙән күрерҙәр. Ә һин алла бәндәһе... һинән бер кем дә шикләнмәҫ.

— Шымбай ҡорҙаш, булмай!.. Минән был эш булмай... Мине ундайға өндәмә, — тип мулла илай яҙып ялыныуға күсте. — Үтенәм, алла хаҡы өсөн, мине ундай бәләгә тарындырмағыҙ, — тип ыңғырашты.

— Улай булһа, Хөснөлхаҡ хаҡында нимә эшләйбеҙ? Миңә уның ҡайҙа, нимә эшләп йөрөүен сәүиткә барып әйтергәме ни? Кеһ-кеһ-кеһ!..

Мулла инде бер ни тип тә яуап ҡайтара алманы. Тәпегә ҡыҫылған сысҡан шикелле, күҙҙәрен асалаҡ-йомалаҡ яһап, ҡалтыранып ултыра бирҙе.

— Ярай, килештек. Берәй кисте Хөснөлхаҡ килер ҙә, эшләр ҙә... Үҙең был эшкә ҡул тығып бысранып тормаҫһың, шулай бит, ҡорҙаш? Булды, һүҙ ҡуйыштыҡ! — тип һығымта яһап ҡуйҙы Шымбай ҡуштан.

— Клубтың көлөн күккә һин осор. Беҙ башҡа яғын ҡарарбыҙ... — тип өҫтәне Әхмәтша. Унан, ирәбеләнеп, бисәһенә һөрәнләне:

— Сәй әҙерлә! Тамаҡ кипте...

Сәрбиямал, бер ни ишетмәгән, белмәгән кеше һымаҡ, татлы йылмайып, мыймылдата баҫып йәһәтләп ашъяулыҡ йәйҙе. Ҡоймаҡ, йыуаса, май, бал — бөтәһен ҡунаҡ алдына алып килеп теҙҙе.

— Һаран кешегә сәй:

> Һалаһығыҙ әсемтеп,
> Ултыраһығыҙ ебетеп,
> Һалығыҙ һеҙ бер ус,
> Сығырмын мин нибус,
> Түгел бит мин борос! —

тип әйтер ти, — тип тәтелдәй-һөйләнә, ғәҙәтенсә, ҡунаҡтың күҙ алдына килтереп, сәйгүнгә күп итеп бөртөк сәй

һалды. — Бына шул сәйҙең кәңәшен тотоп, мин дә һалдым бер ус. Эскегеҙ килгәндер, нибус, — тип ҡара көйҙөрөп сәй яһарға кереште. Инде тағы һәр ҡайһыһы үҙ эсенә йомолоп, тымып ҡалған ирҙәр теләмәй генә сынаяҡтарға үрелде.

## XIII

Март айының үтә дәү ҡояшы, офоҡҡа еткәс, ҡып-ҡыҙыл иләккә әйләнеп, алһыу күк томан селтәре эсендә оҙаҡ ҡына наҙланып ятты ла иреп күҙҙән юғалды. Һалҡын ел, көндөҙ ирегән ҡарҙарҙы ҡаҡҡылай-тишкеләй, дала буйлап елеп китте, өрпәк ҡарҙан селтәр яһарға кереште. Эңер ҡараңғыһы баҫа башлаған өй эсе ҡотһоҙланып киткән һымаҡ булды. Иртәнге дәрескә әҙерләнеп, уҡыусыларҙың яҙыу дәфтәрҙәрен ҡарап ултырған Иштуған, эшен бер ситкә этәреп, тәҙрә үтә тышҡа төбәлде. Уның уйы үҙенә тынғы бирмәгән кисәге хатҡа күсте.

Уны урман яҡ ауыл советтәренә үтеп барышлай Илсеголда туҡтап киткән Хаммат яҙып ҡалдырғайны. Күрәһең, дәрес ваҡыты булғас, инеп, мәшәкәтләп тормайым тигәндер.

Иштуған, ҡабаланып, китаптар араһынан хатты эҙләп алды. Тағы бер ҡат күҙ йөрөтөп сыҡты.

«Иштуған, Илсеғолда ятыу етер һиңә. Беләһеңме, боронғолар «атына күрә йөгөн һал» тигәндәр. Һине мәғариф бүлегенә мөдир итеп алырға уйлайбыҙ. Риҙаһыңмы? Хәбәр ит. Оҙаҡлатма».

Иштуған һаман уға асыҡ ҡына яуап таба алмай аҙаплана. Нисек кенә уйлаһаң да, үҙ ауылыңды тиҙ генә ташлап китеү ҡыйын. Халҡың да һине үҙ итеп, күҙ терәп тора. Унан һуң волоскә күсеүгә Айһылыу нисек ҡарар? Яйын табып, уның фекерен дә белергә кәрәк булыр. Шундай ҙур, яуаплы эшкә үҙенең көсө, белеме, тәжрибәһе етерме?

— Бөгөн ҡайҙа китәһең?

Көтмәгәндә бирелгән был һорауға Иштуған ғәжәпһенеп ҡатынына ҡараны. Ҡулдарын артҡа ҡуйып, мейескә һөйәлеп торған ҡатыны уға ниңәлер үтә нәҙек тә, арыҡ та күренде. Тәненә һыланып торған аҡ етен күлдәге эңер яҡтыһында уны, күләгәгә оҡшатып, үтә күренмәле яһаған һымаҡ, тауышында ла таныш булмаған ниндәйҙер үпкә бар һымаҡ ине.

— Ниңә, мин ҡайҙалыр китергә йыйынаммы ни? — тине Иштуған, аптырап.

— Һинең китмәгән сағыңды белмәйем. Шуға бөгөн һаман сығып югермәй ултырыуыңа ғәжәпһенәм...

Айһылыуҙың тауышында был юлы ла ниндәйҙер ризаһыҙлыҡ, үпкә өнө сағыла ине. Иштуған баҫалҡы ғына итеп:

— Уныһы дөрөҫ, — тип ҡуйҙы. — Минең һәр көн, һәр кис ниндәй ҙә булһа эшем була. Ә бына бөгөн юҡ. Теләһәң, бер ҡайҙа ла китмәҫкә мөмкин!

— Нисек улай әле? Ғәжәп!..

— Һис тә ғәжәп түгел. Берҙән, бөгөн киске уҡыу юҡ. Беләһең, киске уҡыуҙы мин көн аша уҙғарам. Икенсенән, Әхәттән — ширкәт председателенән башҡа йыйылыш уҙғарырға яратмайым. Бына шуға күрә өйҙә. Аңланыңмы инде, һылыуым?

— Әхәт ҡайҙа һуң?

— Ҡалаға киттеләр. Ширкәт өсөн ауыл хужалығы машиналары алып ҡайтасаҡтар. — Быныһы һәйбәт. Тик мине бер нәмә аптырата әле...

— Нимә? Һине аптыратыр ҙа нәмә бар икән!..

— Бар шул бына! — тип раҫланы Иштуған. — Беләһең, Әхәттәр менән бергә Әхмәтша ла китте. Үҙенең атысанаһы менән «һеҙгә ярҙамлашырға теләйем», тип әйтә, ти. Әхәт ни, кеше күңелле нәмә: «Бик һәйбәт. Беҙҙең аттарға, исмаһам, еңелерәк булыр. Ярҙам итәм тип торған кешегә, рәхмәттән башҡа нимә әйтеп була», — тип ирене лә китте, ти...

— Дөрөҫ иткән. Ниңә ярҙамды кире ҡағырға? — тине Айһылыу ҙа, инде етди тауышҡа күсеп. — Ҡешеләргә туңып ҡалған бүкән итеп кенә ҡарарға яраймы ни? Һинеңсә генә бит ул бөгөн яман кеше ғүмергә яман булырға тейеш... Бәлки, ямандың да, заманына ҡарап, яҡшы яҡҡа үҙгәргеһе килә торғандыр?

— Улай тип ҡарамайым да инде, Айһылыу, һин уныһын арттырып ебәрәһең дә, — тип ул ҡатынына ентекләп ҡараны. Ысынлап та, бөгөн ҡатынының төҫөндә ризаһыҙлыҡ, тауышында һүҙ көрәштерергә әҙерлек күренә ине. Иштуғандың йәне көйөп, ҡырҡыуланып өндәште: — Ә бына шулай ҙа нэпмандарға мин ышана алмайым. Бигерәк тә Әхмәтша кеүектәргә. Уның беҙгә яҡшы ниәт менән ярҙам итергә теләүенә, үлтер, ышанмайым...

— Әллә тағы. Дөрөçөн әйткәндә, миңә нимәгә? Әхмәтшаның ни уйлап ширкәткә ярҙамға тотоноуы хаҡында уйламаһам, бүтән уйым юҡыр шул? — тип Айһылыу тағы киреләнде. — Үҙ уйҙарымдың да осона-башына сыға алмайым әле.

Иштуған аҡышмай ғына тороп ҡатыны янына килде. Эйәгенән тотоп, күҙҙәренә текләп ҡараны:

— Һин әллә нәмә һөйләйһең? Ни булды һиңә?! Нимәгә үпкәләнең?

Айһылыу моңһоу ғына йылмайып ҡуйҙы:

— Эй алла, мин һиңә үпкәләй алһам икән...

— Үпкәләр урыны булһа, үпкәлә, һылыуым. Тик әйтеп, аңлатып...

— Үпкәләй ҙә, асыулана ла алмайым шул мин һиңә. Ә бит кәрәк ине... Бик кәрәк ине һиңә үпкәләргә!

Иштуған ҡатынын нәҙекәй биленән ҡосаҡлап күкрәгенә ҡыçты, күҙҙәренә текләп, уйына төшөнөргә тырышты.

— Ни өсөн? Һинең алдыңда бер генә ғәйебем барын да белмәйем. Булһа, әйт, бәлки, мин ғәйебемде күрмәйемдер.

— Һөйләп кенә бөтөрөрлөкмө ни!.. Унан һуң ҡасан һөйләргә? Һинең ваҡытың бармы ни?

— Улай тимә әле. Миңә ауыр була. Һөйлә, бына хәҙер үк һөйлә. Тыңлайым.

Айһылыу, тәрән көрһөнөп, баш сайҡаны.

— Ҡалай анһат...

— Йә, ултырайыҡ әле, һылыу!..

Иштуған ҡатынын һөйә-иркәләй тәҙрә эргәһенә алып килеп ултыртты.

— Бына шулай, хәтереңдәме, йәш саҡтағы шикелле, ҡосаҡлашып ҡына ултырабыҙ ҙа, һин һөйләйһең... Мин һинең тауышыңды тыңлай-тыңлай ял итәм... Донъяның бөтә ауырлығын, яманлығын онотам. Ерҙә минең өсөн фәҡәт һин бер үҙең генә ҡалаһың. Аңлайһыңмы, һылыуым? Эх... ысынлап та, күптән, бик күптән бит инде мин шундай күңел ялын онотҡанмын. Бәлки, рухым ярлыланып, тупаçланып бөтөргә лә өлгөргәндер был ваҡыт эсендә. Бәлки, һинең эсең шуға ла бошалыр, һылыуым! Йә, һөйлә инде!..

Айһылыу бала шикелле кесерәйеп иренә һыйынды.

— Нимәһен һөйләйһең уның? Йә, үҙең әйтмешләй, йәш саҡтағылай, яурынды-яурынға терәп, тәҙрә үтә тыш-

ҡа, алыҫҡа-алыҫҡа ҡарап, өндәшмәй генә ултырайыҡ. Уйланып-моңланып ҡына. Иҫеңдәме, бына шулай. Шунан бөтәһе лә аңлашылыр, бөтәһе лә үтер...

— Әй иҫәркәй, иҫәркәй...

Улар тәҙрә үтә алыҫҡа, ал нурға мансылған яҡты офоҡҡа, текләп тынып ҡалдылар. Иштуған үҙенең үтә ҡатмарлы, ләкин бик кәрәкле эштәре хаҡында уйланы. «Айһылыуҙы ла аң-белем эшенә тартырға кәрәк ине»,— тип тә уйлап алды. «Тик бынауы тубырсыҡтай кескәй малайҙы, Салауатты, кемгә ҡалдырып йөрөр ул? Баланы кем тәрбиәләр? Бибисара абыстаймы? Юҡ, уның Салауаты абыстай тәрбиәһендә булмаҫ! Юл ҡуйырға ярамай быға!..»

Иштуған ҡапыл, ниҙәндер һиҫкәнеп китеп, ҡатынының яурынынан тотоп, күҙенә төбәлде:

— Әйткәндәй, Салауат ҡайҙа әле?!

— Әсәйемдәрҙә.

— Ниңә гел шунда ебәрәһең уны?

— Һөт-ҡатыҡ эсеп ҡайтһын, тим... Һөт-ҡатыҡһыҙ бала сәләмәт булып үҫәме ни?!

«Һөт-ҡатыҡ... һөт-ҡатыҡ...» Иштуған, ҡанаты ҡайырылған ҡош кеүек, бойоғоп ҡалды. «Балаға һөт-ҡатыҡ кәрәк тәбаһа!.. Ә ул, Иштуған, атай кеше, берҙән-бер улына һөт-ҡатыҡ та бирә алмаймы ни?! Үкенескә ҡаршы, әлегә юҡ. Ләкин был бит ваҡытлы хәл. Булыр, бөтәһе лә булыр Салауаттың! Эйе, һөт-ҡатыҡ ҡына түгел, бөтәһе лә! Бөтәһе лә уныҡы буласаҡ... Бәхет-шатлыҡ төйәген — социализм йәмғиәтен үҙ ҡулы менән төҙөп бүләк итәсәк бит уға Иштуған! Тик бына ауыр йылдар үтеп китһен, ил баш-күҙ алһын ғына...»

Айһылыу иренә булған һыуынмаҫ мөхәббәте хаҡында уй йөрөттө. Эйе, үҙенән ғәжәп ҙур рух көсө, түҙемлелек, ҡыйыулыҡ, хатта көсөнән килмәҫтәй ҡорбан талап иткән оло мөхәббәте хаҡына бөтәһенә түҙҙе Айһылыу, бөтәһен ҡорбан итте. Хатта шул мөхәббәт тип, ауыр һалдат тормошон башынан кисерҙе, хәҙер инде бына шуның хаҡына уҡ Сәлимә мәрхүмдең ҡороған нигеҙендә йәшәп ята. Ата-әсәһе уларҙы яратып, саҡырып, хатта бөтә мөлкәтен вәғәҙә итеп торһалар ҙа, Айһылыу тыуған йортона бара алмай. Сөнки Иштуған уның ата-әсәһен яратмай. Улар Иштуған өсөн фәҡәт мәзин дә абыстай ғына... Йә, уларҙың ни ғәйебе бар? Заманаһы шул булған бит ул саҡта. Хәҙер булһа, уның атаһы, ма-

нараға көнөнә биш ҡат менеп, етмәһә Ҡәзә мәзин тигән көлкө ҡушамат алып йөрөр инеме ни? Эйе, йөрөмәҫ ине... Йөрөмәй ҙә бит... Ҡейәүе, ҡыҙы менән бергә булыр өсөн ул, бахыр, кәрәк икән коммун булырға ла әҙер. Ләкин Иштуғанға быны нисек аңлатаһың?!

Эйе, Иштуғанға булған ярһыу мөхәббәте хаҡына Айһылыу атаһын, ҡартайған әсәһен дә ташланы. Ә ул шуларҙы аңлаймы?! Хәйер, уның был хаҡта уйларға ваҡыты бармы ни?! Мәктәп, клуб, ликбез, кооператив, ширкәт тип, көн-төн сабыуын ғына белә, бер генә көн дә, бер генә кис тә өйҙә тормай. Аяғүрә ашай, аяғүрә йоҡлай тип әйтерлек. Революция!.. Шуның менән барыһы ла теүәлләнгән уның өсөн. Ә бит йәшлек — йәшәүҙе талап итә ләбаһа! Ләкин ул, Айһылыу, йәшәйме һуң?! Улай тиһәң, йәшәү ҡайһылай булырға тейеш икән? Тағы ниндәй түҙемлектәр талап итер икән унан был тынғыһыҙ мөхәббәт?! Мөхәббәт һәм ҡорбан... Бәлки, йәшәү шул үҙелер, ә?!

Айһылыу, күкрәгенә һыймай ярһыған был сабырһыҙ уйҙарын ауыҙлыҡларға тырышып, оҙаҡ ҡына тынып ултырҙы.

«Ә ул, һөйлә, ти... Һөйләп буламы ни был уйҙарҙы?! Әгәр ҡасан да бер үҙҙәре генә, йөрәкте ярып, тышҡа урғылып сыҡмаһалар...»

Иштуған һуңғы ваҡыттарҙа, бигерәк тә ауылға ҡайтҡаны бирле, ҡатынын ниндәйҙер уйҙар борсоуын тойһа ла: «Ата-әсәһенең янында тора алмағанғалыр... Өйрәнер, үтер», — тип тынyслана ине. Ләкин бөгөн уға был борсоноуҙа ниндәйҙер тәрәнерәк сәбәптәр ята һымаҡ тойолдо. Тик ниндәй сәбәп булыуы мөмкин тағы? Ул, күпме баш ватһа ла, был һорауға яуап таба алманы. Ҡатыны үҙе һөйләр, тип көттө. Булманы. Ахыр уны был уйсан тынлыҡ екһендерҙе. Эңер ҡараңғылығы солғап алған өй ҙә бик томһа күренә башланы. Ул ҡатынын тағы бер күкрәгенә ҡыҫып, маңлайынан үпте лә һикереп торҙо.

— Етте. Әйҙә, Таиба ҡоҙағыйҙарға барып ҡайтайыҡ. Бибеште лә байтаҡтан күргән юҡ.

Айһылыу ҙа, күрәһең, ауыр уйҙар ҡосағынан ысҡыныуға шат ине.

— Әйҙә, — тине, теремекләнеп. — Мин дә уны һағындым. Ҡилеп тә сыҡмай, исмаһам. Был хәтле ҡырыҫ булыр икән...

— Ҡырыҫлыҡтан түгел. Эше күп Бибештең. Мал-тыуар, бала-саға. Үтә талапсан, етди бейем. Әйтеүе генә

анһат... Ярай һин быларҙың бөтәһенән дә азат,— тине Иштуған ярым шаярыу тауышы менән. — Шулай ҙа әле риза түгелһең.

— Азат?! — тип уйсан ғына көлөп ҡуйҙы Айһылыу ҙа. — Тик ул азатлыҡҡа барыбер ниҙер етешмәй һымаҡ...

— Етешер. Бөтәһе лә булыр, һылыуым, бына күрерһең! Әҙерәк кенә сабыр итә белергә кәрәк тә.

Улар йәһәт-йәһәт кейенделәр ҙә югерә-атлай өйҙән сыҡтылар. Тышта уларҙы һөйгән йөрәктәргә бөткөһөҙ бәхет өҫтәй торған епшек ҡар еҫе, йомшаҡ талғын ел ҡаршы алды.

* *
*

Улар барып ингәндә, Бибеш менән Хисбулла мунсаға киткәйне, улдары Һөйөндөк тырышып-тырышып ағас юна, кескәй Йәнеш йоҡлай, Таиба әбей дебет аялап ултыра ине. Ҡунаҡтарға ул бик һөйөндө, шунда уҡ Айһылыуға үҙенең ҡул эшен күрһәтергә тотондо.

— Ҡара әле, ҡоҙаса. Һәйбәт бит, ә? Һин таныйһың бит дебетте! Ҡыҙ сағыңда ауылда беренсе оҫта инең бит. Шәлде һинән дә һәйбәт бәйләүсе юҡ ине. Хәҙер бына беҙҙең Бибеш килен шулай. Үлтереп бәйләй ҙә ҡуя инде, ҡойоп ҡуямы ни! Әле ул бына ошо тәүге дебеттән миңә шәл бәйләп бирмәксе. Бейем, һиңә иң һәйбәте булһын, ти.

— Ебәк кеүек, — тип маҡтаны Айһылыу. — Төҫө лә ҡарағусҡыл һоро икән. Бик матур шәл булыр.

— Бөгөн көн буйы килен менән икәүләп кәзә тараныҡ. Шунан ул мунса яҡты. Балалар менән беҙ тәүге мунсаға индек. Бик арыҡкайны, харап килеште, — тип кинәнеп һөйләнде Таиба әбей. — Бигерәк егәрле лә инде беҙҙең килен. Уның эшенә ҡарап йән кинәнә. Уға ҡарап, ихтыярһыҙҙан үҙеңдең шундай йәш сағыңды бәйнә-бәйнә күҙ алдына килтерә башлайһың...

Иштуған килеп инер-инмәҫтән, Һөйөндөк уға:

— Ағай, ҡара әле, мин уҡ яһаным, — тип кәкере сыбыҡ күрһәтте. — Үҙем яһаным, үәт!

— Яҡшы. Тик әҙ генә төҙләйһе бар, — тине ағаһы, уҡты төҙәп ҡарағас. — Ҡана, бысағыңды бир әле.

Малай ғорур ҡыуаныс менән ағаһы янында тәтелдәп торҙо:

— Ағай, һин ҡурай ҙа яһай беләһеңме?

— Беләм.

— Миңә яһап бир, ә?
— Ярар. Тик, мыртый, ҡурайҙы бит уны егет кешетиң уйнай?
— Мин егет тә, биш йәш бит миңә!
— Улай икән дә! Тик бына егет кешегә нимәләр кәрәк икәнен беләһеңме һуң?
— Белмәйем әле.
— Белмәһәң, тыңла: егет кешегә, бөтәһенән элек, батыр йөрәк кәрәк. Бер булдымы?
— Бер булды.
— Унан уҡ-һаҙаҡ кәрәк. Ике булдымы?
— Ике булды.
— Унан эйәрле ат кәрәк. Өс булдымы?
— Өс булды.
— Унан ҡурай кәрәк. Дүрт булдымы?
— Дүрт булды. Тағы нимә кәрәк, ағай?
Иштуған, мут йылмайып, бер аҙ тынып торҙо.
— Тағымы? Ҡәләш кәрәк. Биш булдымы?
— Ҡәләш нимә була ул, ағай?
— Уныһын ана еңгәңдән һора, мыртый.
— Үҙем беләм! — тип шәпләнеп көлдө Һөйөндөк. — Ҡәләш — ҡыҙ була. Уәт!
Ә Таиба әбей, ейәненең ҡулынан һелкетә тотоп алып, артына бер-ике сәпелдәтә һуғып ебәрҙе.
— Ҡит, юнһеҙ.
Һөйөндөк, артын ыуалап, аҙ ғына ҡыҙарынып тора бирҙе лә, әле түбә таҡтаһына, әле мөйөштә элеүле торған бүре толопҡа төҙәп, тағы уҡ атырға кереште. Таиба әбей:
— Һай, юнһеҙ, ошо нәмә төптө Закир ағаһына оҡшаған да ҡуйған. Бына бит, гонаһ шомлоғо, белмәгән этлеге юҡ! Йә, ни һөйләп тора бит! Закир мәрхүм дә шулай, һин бер яҡтан тыйып, сыбыҡлап тораһың, ул икенсе яҡтан шаярып һөйләп торор ине... — Таиба әбей, ейәне ыңына ҡул һелтәп, асыуһыҙ ғына тағы бер: — Һай, юнһеҙ! — тип ҡабатланы ла, ашығып, самауырына тотондо — һүнеп тә бара. Яңыртайым әле. Мунсасылар ҙа ҡайтыр.
Айһылыу дебет аяларға ултырҙы. Иштуған, ошоғаса етҙлеген, эшсәнлеген юғалтмаған, сабыр холоҡло был аҡыллы әбейгә ҡарап, ни өсөндөр Бибеш хаҡында уйланы.
«Тап бейеменә оҡшап бара.Егәрлелеген әйтәһеңме, эшкә үлеп барыуын әйтәһеңме, донъяны үҙе көтөүен ала-

һыңмы — бөтә яҡтан Таиба әбей. Үҙһүҙле, ҡаты ихтыярлы булыу яғынан да төптө бейеме булған хәҙер. Их, әгәр уның ошо һәйбәт сифаттарын дөйөм эшкә, аңлы тормошҡа ылыҡтырып булһа ине!..»

Оҙаҡламай, ҡыҙарып-бешеп, мунсанан Хисбулла менән Бибеш ҡайтып инде.

— Бәй, ҡәйнеш килгән дәбаһа! Килен дә бында икән! Ҡалай һәйбәт булған. Был арала саҡырып алырға ла форсат тапмай торола ине, — тип ҡыуанып күреште Хисбулла. — Ә беҙ, ҡунаҡ барын белмәй, яйлап йөрөйбөҙ тағы.

Бибеш, оҙон керпектәрен ҡағып, ситтән генә иҫәнләште.

— Маҡтап йөрөйһөгөҙ икән. Әҙер мунсаға тап булдығыҙ, — тине. — Барығыҙ мунсаға.

Иштуған, тәү күргән һымаҡ, апаһына һоҡланып ҡараны. Мунсала сабынып, еләк кеүек ҡыҙарынып ҡайтҡан Бибеш уға бөгөн айырата һылыу күренде. Уның бөтә ғорур торошонан, зифа һынынан, баҙыҡ ҡарашлы, яҡты күҙҙәренән, ҡыйылып киткән ҡара ҡаштарынан йәшлек, сәләмәтлек нуры бөркөлә, тирә-яҡҡа яҙғы хуш еҫ тарала кеүек ине.

Түрьяҡҡа уҙып, тулҡынлы ҡалын сәстәрен тарап үрергә керешкән Бибеш көлөп ҡуйҙы:

— Ниңә шулай текләп ҡарайһың? Әллә апайыңды танымайһыңмы, мырҙа?

— Таныйым да, танымайым да, — тине Иштуған, уйсан йылмайып. — Дөрөҫөрәге, танырға маташам...

— Йә, бар, мунсаға барып сабынып сығығыҙ. Аҙаҡ, сәй эскәндә, ҡолағыңды бороп, үҙемде танытырмын, — тип мәрәкәләне Бибеш. — Йә, килен, бараһығыҙмы, юҡмы? — тип түҙемһеҙләнеп Айһылыуға һирпелеп ҡараны. — Ниңә ҡуҙғалмайһығыҙ һаман?

Уның бөтә йөрөш-торошонда, кешегә булған мөнәсәбәтендә элекке Бибешкә хас булмаған бойороҡ өнө, һүҙҙе кире ҡаҡҡыһыҙ үтәтеү өсөн генә әйтеү ҡылығы күренеп тора ине хәҙер.

Хуш еҫ сығып торһон өсөн мәтрүшкә ҡушып бәйләнгән май япрағы менән сабынып-йыуынып ҡайтҡас, һөйләшә-һөйләшә оҙаҡ итеп сәй эстеләр. Һүҙ күберәк берҙәм хужалыҡ хаҡында барҙы.

— Еҙнә, беҙ ерҙе бергәләп эшләү ширкәтенә яңы аҡ-

талар ала башланыҡ, — тип һүҙ башланы Иштуған. — Оҙаҡламай уны колхозға әйләндереп ебәрәсәкбеҙ...

Хисбулла әкрен генә:

— Шулай тип ишеткәйнем шул, — тине.

— Бынан ары һәр ауылда ошондай ширкәттәр ойоштороласаҡ, улар ҙа әкренләп колхозға әйләнәсәк...

— Бер ҙә һәр ауылда түгел, — тип ҡырт киҫте Бибеш. — Беҙҙең Илсеғолда ғына, һин генә төҙөйһөң, тиҙәр уны!

— Дөрөҫ, хәҙергә волостә беҙ башлап төҙөйбөҙ. Тиҙҙән бөтә ауылда ла буласаҡ, — тип тыныс ҡына дауам итте Иштуған. — Йә, еҙнә, һин ҡасан яҙылаһың? Унда һинең кеүек эшсән кешеләр бик кәрәк бит.

— Әлләсе... Был хаҡта уйлап ҡараған юҡ бит әле, ҡойнеш. Хаммат ағайым да күргән һайын шул һорауҙы бирә лә ни... — тип икеле генә яуап ҡайтарҙы Хисбулла. Үҙе, йыуаш ҡына көләмһерәп, Бибеш яғына ҡараны. — Апайың ни әйтер бит әле.

— Яҙылырға уйламайбыҙ ҙа. Мин кеше араһында буталып йөрөргә теләмәйем, — тип Бибеш тағы ҡырт киҫте. — Үҙем өсөн үҙем эшләйәсәкмен.

Ә инде киске уҡыуға йөрөү, уҡыу-яҙыуға өйрәнеү кәрәклеген әйткәс, Бибештең яуабы Иштуғанды тағы ла ныҡыраҡ аптыратты:

— Һин, мырҙа, минән дә бисер яһамаҡсыһыңмы әллә? Ҡемдең эше юҡ — шул уҡыһын. Минең былай ҙа эшем етерлек. Ана, уҡытам тип, Емештең башын аҙаштырып ебәрҙең бит! Хәҙер ҡайтып күренгәне лә юҡ. Шул етмәйме ни һиңә?!

— Емеш уҡый, уҡыр, — тине Иштуған, ышаныслы итеп. — Бына күрерһең — бәхетле булыр.

— Бәхет уҡыуҙа ғына була торған булһа... — тип һаман ҡарыулашты Бибеш. — Ҡемдең бәхетле, кемдең бәхетһеҙ булырын алдан әйтеүе ҡыйын ул!..

Иштуған, бошонҡо ҡарашын апаһына төбәп, тынып ҡалды: «Ҡалай үҙгәргән һуң был Бибеш! Ҡасан ғына һуң әле өнһөҙ-һүҙһеҙ бала ине. Әле инде бына үҙһүҙле, кирә холоҡло ҡатын... Бына ғәжәп, үҙ туғаның менән дә көрәгенсә аңлашып, уртаҡ тел табып булмай... Ҡалай итеп был Бибеште усаҡ-мейескә генә табынып йәшәүҙән ҡотҡарырға?»

Айһылыу менән Иштуған ҡайтырға сыҡҡанда, төн уртаһы ауғайны, ай батҡайны. Улар, дөм һуҡыр төнгә

күҙ өйрәнә төшһөн тип, тупһала торҙолар, унан югерешеп урамға сыҡтылар һәм шунда уҡ икеһе бер юлы туҡталып та ҡалдылар. Алда, урамдың ҡап уртаһында, кәбәндәй ут һауаға күтәрелеп тора ине.

— Яна?!

— Ҡлуб яна!

— Мәктәп яна!

Эйе, һис шикһеҙ, шул, Илсеғол йәштәре мәктәп һәм клуб хеҙмәтен үтәрлек итеп ремонтлап, төҙәтеп алған элекке иҫке мәҙрәсә йорто яна ине.

Иштуған менән Айһылыу һөрән һалып урам буйлап югерҙеләр:

— Пожар!.. Пожар!.. Пожар!..

Тиҙ арала урамды сыр-сыу, шау-шыу ҡаплап алды. Ирҙәр көрәк, һәнәк, ҡатын-ҡыҙ көйәнтә-күнәк тотоп ут сыҡҡан яҡҡа югерҙе. Бөтәһе үҙ ирке менән, барлыҡ көсөн һалып, ут һүндерергә егелде. Ирҙәр ҡар, боҙ ырғытты, ҡатын-ҡыҙ һыу ташыны. Ләкин бөтәһе лә бушҡа булды. Йорт, шатырҙап-сатнап, яҡ-яҡҡа утлы ярҡалар ырғытып яныуында булды.

Иштуған югереп килгән ыңғайға ишеккә ташланды. Ул ҡайнап торған ут эсендә ине. Ҡире боролдо, ялҡын әле ялай биреп кенә торған тәҙрәне ҡыйрата һуғып, эскә һикерҙе.

— Иш-ту-ған!.. Янаһың! — тип, йән әсеүе менән ҡысҡыра-ҡысҡыра, Айһылыу янғын тирәһендә югергеләне. Ул арала булмай, икенсе тәҙрәне ватып, Иштуған һикереп сыҡты, югереп килеп ҡатынына ниндәйҙер төргәк тотторҙо. Унан тағы күҙ асып йомған арала ялҡын эсенә инеп китте, Айһылыуға тағы ҡысҡыра-ҡысҡыра өй уратып югереүҙән бүтән сара ҡалманы.

— Иштуған, аһ, Иштуған!

Уның аҙарыныуына кинәнгәндәй, ялҡын тағы ла ажарланып китте. Инде бына ҡыйыҡ та янып бөттө, мөйөштәр ҙә ҡыйшая башланы.

— Аһ, Иштуған, һәләк булдың бит!..

Бына, ҡултығына гармун ҡыҫтырып, ут эсенән Иштуған йәнә күренде. Ҡемдәрҙер уның өҫтөнә күнәк-күнәк һыу ауҙарҙы, кемдәрҙер уны уттан алыҫыраҡ тартып сығарҙы...

Иштуған үҙ янында ғына:

— Ут эсенә, ялҡынға инеп китеүеңде һис тә хупла-

майым, улым, — тигән хәстәрлекле тауыш ишетте. — Мәктәпһеҙ генә түгел, мөғаллимһеҙ ҙә ҡала яҙҙыҡ таһа!
Был Иҙрис ҡарт ине. Ул да, башҡа ирҙәрҙән ҡалышмай, ут һүндерешеп йөрөй ине. Ҡөйәнтәһенә күнәктәр элеп маташҡан Нәғимә еңгә лә үҙенең сағыу тауышы менән:
— Өҫтөңә үҙем ике күнәк һыу ауҙарып өлгөрмәһәм, мин шәм шикелле янып бөтә инең бит! Үәт алйот! — тине лә тағы мәкегә югерҙе.
Инде тотош ялҡын тауына әйләнгән йорт шул мәлде гөрһөлдәп емерелеп төштө. Тирә-яҡты ут көлтәләре баҫты. Тап ошо йөрәк тетрәткес күренештән һуң ғына аңына килгән һымаҡ, Иштуған:
— Айһылыу ҡайҙа икән, олатай?! — тип ҡото осоп ҡысҡырып ебәрҙе һәм дауыл осорғандай югереп китте.— Айһылыу, һин ҡайҙа?!
Ә уныһы был ваҡытта, бала шикелле һыҡтай-илай, һаман югереп йөрөй, былай ҙа аҡһыу ябыҡ йөҙөнә, ҡурҡыуҙан шашҡан күҙҙәренә ялҡындан хәтәр ҡыҙыл шәүлә төшкән, ә теле һаман бер һүҙҙе ҡабатлай:
— Иштуған, Иштуған!.. Бөттө. Бөттө!
Иштуған ҡатынының beләгенән һелкетә тотоп туҡтатты.
— Бөтмәне әле. Башлана ғына әле! — тип мәрәкәләргә теләне. Әммә барып сыҡманы. Ул үҙе лә теше-тешкә теймәй дерелдәй ине. Бер аҙҙан Айһылыуҙың ҡайғыһы ҡотороңҡо ҡыуаныс менән алмашынды.
— Иштуған, йәнем! Нисек ҡотолдоң? — тип, ҡалтыраған ҡулдары менән иренең көйгән сәстәренән, күмерләнгән еүеш кейемдәренән һыйпай-һөйә, уның терелегенә ышанырға тырышты. — Йә инде, бынауы юҡ-бар нәмәне алып сығам тип, һәләк була яҙҙың дабаһа!
Иштуған ҡатынының ҡулынан тартып тигәндәй төргәкте алды.
— Беренсенән, был юҡ-бар нәмә түгел — ҡыҙыл флаг! — Мәктәптең, комсомол ячейкаһының байрағы! Икенсенән, ул байраҡ эсендә нимә, ҡапшабыраҡ ҡара әле...
— Нindәйҙер ҡаты әйбер?
— Бына шул-шул — портрет! Ленин портреты! Теге, Тимербай ағай тары бөртөктәренән теҙеп эшләгән... Беләһең бит, ниндәй ҡомартҡы!
— Нисек белмәйем, ти...

— Бына, шул-шул... Шулай яндырып һәләк итер өсөн эшләгәнме ни уны Тимербай ағай, шуның өсөн фронт буйынса һаҡлап йөрөттөммө ни мин уны? Етмәһә, бынауы шаршау — һинең ҡыҙ сағыңдан ҡалған берҙән-бер ҡомартҡың. Үҙебеҙҙең йәшлекте, йәйғор кеүек нурландырып, шул шаршауға сиккәйнең бит һин... Хәтерләйһеңме?.. Гармун да бит беҙҙең өсөн ҡиммәтле нәмә. Уны бит үҙебеҙ белер-белмәҫ көйө «Ғәлиәбануу»ҙы уйнап ҡына тапҡан аҡсаға һатып алдыҡ. Ә ул беҙгә йәштәрҙе уҡыуға, клубҡа ылыҡтырыуҙа күпме ярҙам итте?! Байрас бер һыҙҙырып уйнап ебәрһә, йәштәр түгел, ҡарттар ҙа йыйылып китә ине бит клубҡа!

— Шулай ҙа уның өсөн ут эсенә ҡабат инеп китеүең бер ҙә оҡшаған эш булманы инде, — тине Айһылыу үпкәле тауыш менән.—Мине уйламаһаң, үҙеңде иҫләмәһәң, исмаһам, улыңды — Салауатыңды уйлар инең!..

Иштуған ҡатынының боҙ тамсылары кеүек һалҡын бармаҡтарын үҙенең ҡайнар устарына йомарлап тотто.

— Мин кейемем еп-еүеш көйө янам...

Айһылыу, ҡапыл тертләп, иренә боролдо:

— Аһ, кейемең янып бөткән бит! Һинең тәнең дә янғандыр. Шуны иҫләмәй ҙә торамсы!.. Әйҙә, йәһәтерәк ҡайта һалайыҡ!

Ҡулдарында ла, арҡаһында ла үҙәккә үтеп әсетеп торған урындар булһа ла, Иштуған тыныс булырға тырышты.

— Бер ни ҙә юҡ. Ҡурҡма. Шулай ҙа... Ҡайттыҡ, һылыу. Ҡарап тороу менән хәҙер «көлдән күмәс яһап булмаҫ...»

Алыҫта, күк тауҙар һыртын алһыу таҫмалар менән биҙәп, әкрен генә таң һыҙылды... Матур алһыу таң. Ләкин йөрәктәге тынғыһыҙ бер һорау Иштуғанға уны абайларға бирмәне. Мәктәп, клуб хеҙмәтен үтәп килгән берҙән-бер йортто юғалтҡан өсөн дә, тәндәге янған урындарҙың һыҙлауы өсөн дә әсенгән йөрәк яраһына ҡушылып, әйтерһең, ул һорау һаман ҙурая, күбенә бара ине: «Ҡем эше булыр был?!»

## XIV

Ҡом буранлы, шаулы ҡала алыҫта ҡалды. Өрпәкләнеп ятҡан эҫе һары ҡом ҡаплаған таҡыр дала юлы кисә Емеште ҡайтыу яғына алып сығып китте. Ә бөгөн инде

һары саң баҫҡан киң таҡыр юлдары, мең төрлө төҫ менән йымылдаған сәскәле уйһыулыҡтары, түбәләс һайын ҡапырайып ҡарап ҡалған ел тирмәндәре менән яҙғы һылыу дала ла артта ҡалды. Алда күкһел тауҙар һыҙылып күренә башланы. Урал һырттары, йәмле Оло Эйек буйҙары һаман яҡынайҙы.

Иң тәүбашлап яҙҙы ҡаршыларға, иң беренсе булып уны дауылап йырларға ашҡынып, диңгеҙҙәр аша осоп ҡайтҡан кескәй сыйырсыҡ шикелле сабырһыҙ талпынған йөрәгенә сыҙай алмай Емеш уфтанып ҡуйҙы. Һиҙҙермәҫкә, һиҙмәҫкә тырышһа ла, бик-бик һағынған икән шул!.. «Ҡалай ҙа матур икән тыуған яҡтар! Бигерәк тә татлы икән уның һауаһы!» — тип уйлана-уйлана ҡарап килә ул тирә-яҡҡа. Шулай ҙа уны маҡтап та, яратып та, сәскә, ер, ысыҡ еҫе аңҡыған дымлы һауаһын еҫкәп тә туя алмай. Ә бит ҡайтмаҫҡа ниәтләп йөрөй ине. «Йәй көнө кирбес заводында эш була, тиҙәр. Шунда беҙ ҙә берәй эш табырбыҙ. Ҡышлыҡ өҫ-башты ҡайғыртырбыҙ», — тигәйне әхирәте Шәмсиә. Ағаһынан да, Байрастан да: «Ҡайт, ҡайт!» — тип хаттар килеп торһа ла, Емеш үҙе лә, ҡайтмаҫҡа тип, күңелен ауыҙлыҡлап ҡуйғайны. Шунан, көтмәгәндә, Байрастан тағы бер хат килеп төштө:

«...Алеша менән икәүләп иртәгә юлға сығабыҙ, һине алып ҡайтыр өсөн, Ырымбурҙа туҡтайбыҙ. Әҙерләнеп тор!»

«Байрас килһә, ай-вайға ҡуймай алып китеүе хәҙер көн кеүек асыҡ. Инде ҡалай итергә?!»

Ул хатты күкрәгенә ҡыҫып, бик оҙаҡ койкаһында уйланып ятты. Унан ниндәйҙер сая ҡарарға килгән сағында тына була торған етеҙлек менән һикереп торҙо. Сәсен тараны, өҫ-башын рәтләне һәм югереп тигәндәй ятаҡтан сыҡты ла туп-тура «Йәшел баҙар» яғына югерҙе. Хөрмәт менән Сабир яҡташтарҙы шунда табып, ҡайтып киттеләр, Емешкә лә күпме ялындылар... Эй иҫәркәй, шулар менән ҡайтып ҡына китһә ни була инде!.. Ә ул ҡайтманым тип тороп ҡалды. Бына бөгөн әйҙә үҙең ылау эҙлә инде. Ҡисә Хөрмәттән, бөгөн Байрастан ҡасып ҡотолорға булғас... Эй ҡырыҫ ҡыҙ, ҡырыҫ ҡыҙ!..

Баҙар тигән урынды тәү күреүҙә үк күңеленә һеңеп ҡалған екһенеү тойғоһон көскә баҫып, ул башта көрәкһәнәк, иләк-силәк кеүек әйберҙәр һатылған рәттән үтте. Бер ҙә таныш йөҙ күренмәгәс, бал, май, йомортҡа кеүек ашык-түлек һатыусыларҙы ҡарап йөрөй башланы. Оҙаҡ-

ламай унын иғтибары ағас тәпәндәрҙән көскә-көскә умырып алып бал һатып торған урта йәштәрҙәге бер ағайға туҡталды. Үтә ҙур кәүҙәле, көйәнтә яурынлы, терпе мыйыҡлы был ағай, нисектер, өнһөҙ-һүҙһеҙ генә сауҙа итә. Бәлки, бүтәндәрҙән арзан һаталыр йәки балы шәптер, алыусылар унын янында өйкөлөшөп кенә тора. Сауҙаһы һәйбәт бара, әммә ағайҙын йөҙө ниңәлер үтә ҡараңғы, киң, ҡуйы ҡаштары төйөүле, ҡарсыға ҡарашлы сөм-ҡара күҙҙәре хатта ваҡыт-ваҡыт асыулы янып китә һымаҡ.

«Был ағай бик уҫал, ахыры... Үҙе беҙҙең яҡҡа, урман яғы башҡорттарына оҡшап тора ла тороуын. Улар шулай олпат кәүҙәле, үткер ҡарашлы булалар...»

Ағай үҙенә иғтибар итерме, ҡарындаш, һиңә нимә кәрәк, тип һорармы, тип өмөт итеп ҡыҙ бер ситтә оҙаҡ ҡына тапанып торҙо. Теге ағай унын яғына бер-ике тапҡыр ялт-йолт ҡаранып алды, тик бер һүҙ ҙә өндәшмәне. Ахыр, ҡыйын булһа ла, Емеш унын янына үҙе барҙы. Ҡыйыу булырға тырышып:

— Һин ҡайһы яҡтыҡы, ағай? — тип һораны.

— Бәй, мин һине сиған ҡыҙылыр тип торһам... — тине ағай, ҡашын яҙмай ғына. Бүтән һүҙ өҫтәмәне. Һаман шул ҡараңғы сырай менән бал һатыуында булды. Емеш эстән генә йылмайып ҡуйҙы.

«Моғайын, был ағайҙын балға асыуы киләләр. Ҡумыҡҡан юкә балы тәпәндән сыҡмай ыҙалай ҙабаһа! Шул юҡ нәмә менән һатыу итеп тороуына йәне көйәлер унын. Ысынлап та, шундай олпат, етди кешенең эшеме ни инде был?! Кем белә, бәлки, Емеш шикелле үк унын да был баҙар тигән нәмәне йәне һөймәйҙер?..»

Алыусылар һирәгәйгән бер арала, Емеш уға тағы яҡыныраҡ килде.

— Мин Илсеғолдоҡо. Оло Эйек буйынан. Бәлки, беләһеңдер, ағай?

— Бәй, белмәҫкә ни, — тине ағай һаман шул ҡараңғы йөҙ менән. — Беҙ, Ирмән ауылдары, ҡалаға унын аша йөрөйбөҙ ҙә.

Ирмән ауылдары?! Емештең йөрәгенә йылы инде. Уға бала сағынан уҡ таныш ул яҡтар! Мөһабәт тауҙары, хәтәр ҡыҫыҡтары, серле мәмерйәләре менән тылсымлы әкиәт булып күңеленә һеңеп ҡалған ерҙәр... Ҡасандыр, бик күптән, Ишбикә инәһенә эйәреп, Ирмән ауылынан Илсеғолға хәтле яланаяҡ йүгергән, тауҙар, урмандар ара-

ның үтеп, һырт өҫтөнән Оло Эйектең киң, яҡты туғайҙарына күҙ ташлағас, сихырланған кеүек ҡатып торған саҡтар әле булһа бөгөнгөләй күҙ алдында тора лабаһа уның!

— Ағай, мине Илсеғолға алып ҡайтмаҫһыңмы икән?

— Апҡайтырмын.

— Ҡасан?

— Бөгөн. Һатып бөткәс тә.

— Улай булғас, ағай, мин хәҙер әйберҙәремде алып киләйемме?

— Кил.

Шулай юлға сығып китте Емеш. Ҡисә улар ниндәйҙер бер рус ауылына килеп ҡундылар. Бөгөн инде бына оҙаҡламай Илсеғолда буласаҡтар. Ана бит күк тауҙар, томанлы үҙәндәр һаман-һаман яҡыная бара. «Их, осоп ҡына барып етһәң ине. Ҡанаты булһа ине кешенең...» — тип түҙемһеҙләнеп килә Емеш. Тыуған яҡтарға яҡынлашҡан һайын, йөрәге сабырһыҙлана, күкрәгенән тарһынып зарыға һымаҡ. Ә тирә-юнь һаман үҙгәрә, танышыраҡ, яҡыныраҡ була бара. Тик бына күк ат менән ағай ғына һаман шул бер көйө. Ат бер алым менән һалмаҡ ҡына юрта, ағай, көн эҫе булыуға ҡарамаҫтан, өҫтөнә көрән тула сәкмән, башына ҡолаҡсын бүрек кейеп алған да, елкәһен көҙөрәйтеп, бер килеш бара бирә. Һөйләшмәй ҙә, өндәшмәй ҙә, исмаһам, йырлап йәки һыҙғырып та ебәрмәй. Тик ара-тирә дилбегәһен ҡаҡҡылап:

— Өс-өс-с! Өс-өс-с! — тип өсөлдәп тик бара. «Күрәһең, урман яҡтары атты шулай ҡыуалыр,— тип уйлап ала Емеш. — Ә, бәлки, был ағай ат ҡыуыуҙы ла үҙенсә уйлап сығарғандыр?..»

Арбаның артына ғына ултырып килгән ҡыҙ уның киң, ҡеүәтле арҡаһына, туҙыуы еткән ҡолаҡсын бүркенә ҡарап шикләнеп ҡуя.

«Нисек мин ҡурҡмай ошо ете-ят ағайға ултырып киттем икән? Бына бығәләш! Хөрмәттән, Байрастан ҡасам тип әллә ниндәй яман кешенең ҡулына эләгеүем бар лабаһа!.. Ысынлап та, был ниндәй кеше икән? Ниңә ул шулай ҡараңғы йөҙлө? Хатта бит минең Илсеғолда кем ҡыҙы булыуымды ла, ни эшләп ҡалала йөрөйөм, ниңә ҡайтам, береһен дә һорашманы ла. Әле инде мин нисек ултырып киләм, киләмме, юҡмы, берәй боролошта ҡоман ҡалмағанмынмы, уның эше юҡ...»

Емеш хатта йәберһенеп ҡуйҙы. «Әйтерһең, мин тере кеше түгел!..» Унан тағы уйын тыныс ҡына дауам итте. «Шулай уҡ был донъяла бер нәмә лә ҡыҙыҡ та, ғәжәп тә түгелме икән ни уға?!

Бәлки, уның берәй ҡайғыһы барҙыр. Шуға донъяһына күтәрелеп ҡарағыһы килмәйҙер уның. Йәки үҙенең бөтмөшө шулдыр. Ысынлап та, ҡайғылымы, уҫалмы? Белһәң ине... Һорашһаң ине... Эй-й, донъяла кешеләр ҡалай төрлө-төрлө булалар! Берәүҙәре төбөндә аҡ таштары күренеп ятҡан ағын йылға кеүек, ә берәүҙәре... тымыҡ күл һымаҡ... Бар, бел һин уның күңел төбөндә нимә ятҡанын!..»

— Ана Илсеғол...

Ағай артына әйләнеп ҡарамай ғына шулай тине лә, яурынын тағы көҙөрәйтә биреп, дилбегәһен ҡаҡҡылап ҡуйҙы.

— Өс-өс, өс-с-с, өс!..

— Уй, ҡайтып еттек!

Емеш, ҡыуаныстан осоп китерҙәй булып, алға ынтылып ултырҙы. Унда, түбәндә, йәшел туғайҙар ҡуйынында, көмөш билбау шикелле йылмайып, Оло Эйек борғаланып ята, уның иң матур бөгөлдәренең береһенә һыйынған кескәй ауылдың тупаҡ өйҙәренән дымлы зәңгәр һауаға иренеп кенә аҡ төтөн һуҙыла.

— Һай, хозур ерҙәр!.. Тыуған төйәктәр!..

Шулай ҡайтып төштө Емеш. Ылаусы ағай уның юл өсөн биргән аҡсаһын да алманы. Таиба әбейҙең, ҡапҡаны шар асып, инергә, һис юғы сәй эсеп, тамаҡ ялғап китергә саҡырыуына ла:

— Ҡайтып етергә кәрәк, — тип ҡырт киҫте. Емеш менән Таиба әбей уны, түбән осҡа, Эйек кисеүенә төшөп киткәнсе, ҡарап, оҙатып ҡалдылар.

— Ҡем һуң был диуана кеше?

— Белмәйем.

Улар, был аҙ һүҙле юлсы китеп юғалған яҡҡа тағы бер аҙ ҡарап, тынып торҙолар. Таиба әбей, һалмаҡ ҡына баш сайҡап:

— Алла бәндәһе икән. Була ул шундай әҙәмдәр — кешегә изгелек эшләй, алмашына бер ни ҙә там итмәй. Шуға күрә өнһөҙ-һүҙһеҙ генә ҡулынан килгән изгелекте эшләй ҙә йөрөй. Эй-й, бөтә кеше лә шулай булһа, еңел булыр ине әҙәм балаларына йәшәүе. Бына бит иҫән-һау

ялын ҡайтып еткергән, рәхмәт яуғыры. Алланың ҙур рәхмәте төшкөрө... — тип һөйләнеп торҙо.

Емештең күңелендә лә был билдәһеҙ сәйер ағайға ҡарата рәхмәт һәм хөрмәт тойғоһо ҡабынды. Ул да, ҡоҙағыйына эйәреп:

— Үҙе лә иҫән-һау ҡайтып етһен, — тип ҡуйҙы.

Өйҙә Таиба әбей яңғыҙы ғына ине.

— Еҙнәң балалары менән ҡайҙалыр сығып киткән. Моғайын, Иштуған ҡоҙаларҙалыр,— тип хәбәр итте ул.— Апайың бисәләр йыйылышына китте. Әле генә, һин ҡайтып төшөр алда ғына...

— Ҡара әле!.. Бибеш апайым да йыйылышҡа йөрөй башланымы ни, ҡоҙағый? — тип аптырап та, ҡыуанып та һораны Емеш.

— Тәүләп кенә барыуы әле, — тине Таиба әбей, иҫе китмәй генә. — Бик тә барырға ҡуштылар. Теге Баҙыян ецгәң, беләһеңдер, ул бит хәҙер сәүит, Нәғимәне өйгә ебәргән. Нәғимә ни ундайға «ике ҡанат — бер ҡойроҡ» инде ул. Ай-вайына ҡуймай алды ла китте. Әйҙә, йәһәт бул, ти. Сәүит ҡушты, иллә ҡалдырма, үҙең менән алып кил, тип әйтте, ти. Шулай булғас, ҡалай бармаһын? Китте. Бына шундай эштәр беҙҙә хәҙер, ҡоҙаса... — Берәһе — сәүит, икенсеһе делегат... Бисәләр харап беҙҙә...— Ул асыуһыҙ ғына көлөп алды. — Шулай Бибеш килен дә хәҙер, ҡатын ҡорона етеп, әҙәм араһына инеп бара шул, — тип әҙ генә көрһөнөп ҡуйҙы: — Ярар, йөрөһөн. Күрһен. Һөйләшһен. Моғайын, яңғыҙ-ярым йәшәр саҡ түгелдер хәҙер...

Емеш ҡасандыр олпат кәүҙәһе, ҡырҡыу тауышы, аҡыллы, тос һүҙҙәре менән йә бер аҙ ҡурҡытып, йә үтә ныҡ ҡыҙыҡһындырып, үҙенең иғтибарын яулап ала торған был ҡарсыҡтың йөҙөндә-һүҙендә, хатта тауышында ла ҙур үҙгәреш барлығын, уның, нисектер, үтә сабыр аҡыллы, баҫалҡы, хатта бер тиклем ғәмһеҙ тауыш менән өҙөп-өҙөп, яйлап ҡына һөйләшеүен абайланы, ныҡ ҡына ҡартайып китеүен дә күрҙе. Шулай ҙа был хәлгә иғтибарын тотош туплай алманы. Бер-ике сынаяҡ сәй эсте лә сығып китергә йыйынды.

— Ҡоҙағый, ҡайҙа йыйылдылар икән? Клуб булмағас, тим дә...

— Әлеге шул Собхан старшина өйөндә, шикелле. Волостән бисәләр башлығы килгән, тиме шунда... — тип ҡалды Таиба әбей.

Урам тып-тын, һауа бөркөү ине. Емеш һәр өйгә, өйҙәр янындағы һәр муйылға, өйәңкегә күңеленән баш эйә-эйә, кем дә булһа күренмәҫме тип, көтә-көтә барҙы.

...Һәр сәхәр ваҡытында
Ҡалҡып кидәр, ди.
Йә сәни, йә бәни
Сайран идәр, ди... —

тигән һымаҡ аңлайышһыҙ, сәйер йырҙары менән балаларҙың күңелен биләгән моңһоу күҙле, арыҡ ҡара шәкерт Улъябайы булған иҫке мәҙрәсәне, уның ҡояшлы йылы нигеҙ буйында көйшәп ятҡан кәзәләрҙе, шаян кәзә бәрәстәре менән ярышып һикереп-уйнап йөрөгән үҙенең ялан аяҡлы кескәй сағын хәтерләп туҡталып торҙо. Шул мәҙрәсә мәктәп, клуб хеҙмәтен үтәй башлағас, үҙенең шунда етем ҡыҙ ролен уйнап, илап йығылыуы ла иҫенә төшмәй ҡалманы. Шулай ҙа апаһы өсөн булған шатлыҡ еңде: «Йыйылышҡа киткән бит, ә!..»

Дөрөҫөн әйткәндә, Бибеш бөгөн йыйылышҡа тәүләп китһә лә, үҙе лә һиҙмәҫтән, әкренләп яңы тормошҡа ылығып килә ине инде. Баҙыян еңгә уны ла дөйөм эшкә тартыуҙы, ғәҙәттәгесә, иң элек сепаратор артеленән башларға булды. Бибеш менән һөйләшер кешеһен дә тапты — Нәғимә. Унынса ошо асыҡ йөҙлө, йор һүҙле илгәҙәк ҡатын ғына Бибеш менән һөйләшер ҙә, килешер ҙә кеүек ине. «Былай бит йыйылышҡа йөрөмәй, Иштуғанды тыңламай. Уның менән нисек эш итергә лә ауыр», тип уйланы ул. Нәғимәне бер саҡ үҙ янына саҡырып алды:

— Ҡара әле, килен, сепаратор артеленә Бибеште лә тартырға кәрәкмәҫме? Һин быға нисек ҡарайһың? — тип һораны.

— Бик дан булыр ине лә бит, — тине Нәғимә, бер аҙ уйланып. Унан шарҡылдап көлөп ебәрҙе. — Ул бит ҡыр кәзәһе. Өркөргә йәки төкөргә генә тора бит ул!

— Ә һин уны ылыҡтыр. Ҡулға өйрәт, — тине Баҙыян еңгә, ҡырт киҫеп. — Был һиңә делегаткалыҡ йөкләмәһе. Аңланыңмы?

Ошо һөйләшеүҙән һуң, Нәғимә Бибештең юлында әленән-әле осрап ҡына торҙо. Бер көндө Сәрбиямалдарҙан сепараторҙа һөт айыртып ҡайтып барған сағында, юл ыңғайын килтереп, бер аҙ эйәреп тә барҙы.

— Бибеш, Сәрби тутай һинән һөттө буш айырталыр ул? — тип, аңғармаҫтан ғына һорап һүҙ башланы.— Ни әйтһәң дә, үгәй булһа ла, әсәйең булғас, тим дә...

— Айыртыр... — тип ҡуйҙы Бибеш томһа ғына. — Айға ике ҡаҙаҡ май бирһәң айырта. Уны ла аҙ күрә әле. Сепараторын көн дә йыуып, таҙартып китергә ҡуша. Иҙәненә яңылыш ҡына һөт тамһа, ажғырып өҫтөңә менеп китергә тора...

— Байҙар шулай инде ул... — тине Нәғимә лә ашыҡмай ғына. — Мин үҙем элек, берҙән-бер һыйырымдың майын балаларымдың ауыҙынан өҙөп, шулай Ғаббас мулла сепараторына йөрөй инем. Хәҙер үҙебеҙҙең обший сепаратор булғас, айға ярты ҡаҙаҡ ҡына түләйем. Уның аҡсаһы ла үҙ файҙабыҙға китә.

— Нисек ярты ҡаҙаҡ ҡына?! — тип ғәжәпһенеп ҡуйҙы Бибеш. Ул Иштуған, Әхәт, Баҙыян еңгәләрҙең ярлыҡтем бисәләрҙе ойоштороп сепаратор артеле төҙөүҙәре хаҡында ишеткеләһә лә, уның яҡшы эш булыуына күңеле менән ышанмай ҙа, шуға уның менән ҡыҙыҡһынмай ҙа йөрөй ине. Әле лә Нәғимәгә ышанырға ла, ышанмаҫҡа ла белмәй оҙаҡ ҡына текләп торҙо:

— Ысынды һөйләйһеңме һин, еңгә?

— Аһа, шигең булһа, әйҙә инеп башҡа бисәләрҙән һорашып сыҡ, — тине Нәғимә. — Әйткәндәй, беҙҙең өй тәңгәленә лә килеп еткәнбеҙ. Әлегә айырым өй булмағас, сепаратор беҙҙең өйҙә эшләп тора...

Бибеш, инергәме-юҡмы тигәндәй, тағы әҙ генә икеләнеберәк торҙо, унан, өҙә баҫып, Нәғимә артынан эйәрҙе. Улар барып ингәндә, Нәғимәнең тап-таҙа итеп йыйыштырылған яҡты иркен өйөндә өр-яңы ҙур сепараторҙа Бибекәй әбейҙең Хәсбиямалы һөт айыртып ултыра ине. Бибеш туп-тура уның янына барҙы:

— Ысынлап та, ярты ҡаҙаҡ ҡына май түләйһегеҙме, әй?

— Ысын булмайсы...

— Ә?!

Сепаратор гөжләүе аҫтында һөйләшеүе ҡыйын ине. Бибеш тәҙрә янындағы өҫтәл эргәһенә үтте. Унда ятҡан газета-журналдарға, ваҡ-ваҡ ҡына төрлө-төрлө китаптарға текләп торҙо.

— Ана, шул айға бер түләгән ярты ҡаҙаҡ майҙың аҡсаһы ла үҙ файҙабыҙға китә, тигәйнем бит. Бына күр инде. Ошо өҫтәл дә, уның өҫтөндәге кәрәкле китаптар ҙа шул аҡсаға алынған, — тип ҡысҡырып һөйләй-һөйләй Нәғимә лә Бибеш янына килеп баҫты. — Баҙыян еңгә әйтә, ошо арала Өфөнән тағы бер сепаратор һорап ала-

быҙ әле, ти. Күмәгәйҙек бит. Бөтәһе лә хәҙер сепаратор артеленә инә. Ай һайын ике ҡаҙаҡ май түләй-түләй бай түпһаһына йөрөргә бисәләрҙең башына тай типмәгән дә!

— Бибеш еңгә генә бына һаман шул Сәрби тутай сепараторына йөрөп ыҙалана, — тип һөт айыртып бөткән Хәсбиямал да һүҙгә ҡатышты. — Үҙе алыҫ. Әллә ҡайҙа, урамдың бер башынан икенсе башына йөрөргә кәрәк. Үҙе ҡиммәт. Бында бит үҙ өйөңдәге кеүек. Һөт тә айыртабыҙ. Гәзит-журнал да ҡарайбыҙ. Күмәк йыйылып китһәк, хатта бейеп-йырлап та алабыҙ. Харап мәрәкә була. Шулай бит, Нәғимә еңгә?

— Әйтерең бармы!

Бибеш был юлы Нәғимә менән Хәсбиямалдың һәр һүҙен иғтибар менән тыңланы. Күңеленән үлсәп-самалап ҡараны. Әммә үҙе бер һүҙ ҙә әйтмәне. Ә бер нисә көндән, сепаратор артеленә ағза итеп алыуҙы һорап, үҙе килде.

Бибеш өсөн яңы тормоштоң әлифбаһы шулай башланды.

Емеш барып ингәндә, ауыл Совете йорто ҡатын-ҡыҙ менән туп-тулы ине. Түрҙә, ҡыҙыл сепрәк ябылған өҫтәл артында, Бибекәй әбей менән Зөбәржәт еңгә лә ултыра. Күрәһең, уларҙы ла президиумға һайлағандар. Улар янында үтә арыҡ, оҙон буйлы ят ҡатын да бар. Теге ҡоҙағый әйткән «бисәләр башлығы» ошолор... Баҙыян еңгә яҫырып ниҙер һөйләп тора. Ул, күлдәк өҫтөнә Тимербай ағайҙың ҡара пинжәген кейеп, яулыҡты өскөлләп бәйләп ҡуйған.

Емеш: «Ҡарасы, төптө килештереп алған даһа еңгәм, бына һин уны! Үҙгәргән!.. Яҡты ҡарашлы, көр тауышлы... Етмәһә, кофта, юбка ла кейеп ебәргән!..» — тип күңелле генә уйланып, артҡы рәттәге эскәмйәгә барып ултырҙы. «Апайым күренмәҫме икән?» — тип яҡ-яғына күҙ ташлап алды. Ләкин уның алыҫтан насар күрә торған күҙенә апаһы салынманы. Күрәһең, Бибеш тә һеңлеһенең килеп инеүен абайламаны: «Йә, йыйылыш бөткәс, күрешербеҙ инде», — тип уйланы. Ә Баҙыян еңгә, бала лары менән һөйләшкән хәстәрле әсә шикелле, сабыр, һалмаҡ тауыш менән үҙенең делегаткалыҡ эшенән, ҡатын-ҡыҙҙарҙың өлкә съезында күргән-белгәндәренән хисап бирә ине бөгөн.

— Өфө тигәндәре — харап та ҙур ҡала, имеш. Ул өйҙәр ҡатлап-ҡатлап, өҫтө-өҫтөнә һалынған. Ҡеше тиһәң,

хас та йылҡы өйөрө кеүек, лерләшеп, югереп кенә йөрөй.

Съезҙға, минең кеүек, яңы ғына әлепте таяҡтан айыра башлағандар ҙа, харап уҡымышлылар ҙа килгән. Мин дә теле-телгә йоҡмай шәп һөйләүсе бисәләрҙән бер ҙә ҡалышманым, тиһәм дә дөрөҫ булыр. Һүҙ һорап алдым да теге трибуна тигән нәмәкәйҙең артына сығып та баҫтым. Униһы, трибуна тигәне, ҡыҙыл буҫтау ябылған оҙон бер йәшник инде шунда. Үәт, шунан тороп, хас та уҡымышлы кешеләй булып, тасылдатып һөйләргә керештем. Һөйләмәй ни, һүҙ биреп торғас ни, ни йәнең түҙеп өндәшмәй ултыраһың, шулай бит, әхирәттәр?

— Эй-й, шулай булмаған ҡайҙа ул?!

— Һөйләмәй ни, һин кемдән кәм, төҫөң-һының ҡойоп ҡуйған, теленә һандуғас ҡунған тигәндәй... — тип залдан уны дуҫтарса мәрәкәләп, күтәрмәләп ҡуйҙылар. Баҙыян еңгә йәнә ҡалҡынып китте.

— Беҙҙең, тим, Илсеғол ҙур булмаһа ла, делегаткалар төркөмө бар, тим. Әленән-әле йыйылыштар уҙғарабыҙ. Уҡытыусыбыҙ бик шәп кеше, беҙгә докладтар, лекциялар һөйләй, әңгәмәләр үткәрә, тим.

Уҙған йыл, Наркомзем сепаратор биргәс, артель ойоштороп ебәрҙек. Байҙарҙың танауына сирттек, тим. Тегеләр ҡул сабалар. Сабырҙар шул, дөрөҫөн һөйләйем бит, әйе бит, әхирәттәр? Бер ҙә бушты лаҡылдамайым.

— Ул сыйыз тигән нәмәкәйендә матур-матур ирекәйҙәр бер ҙә булманымы ни, еңгә? Атаҡ, улай ни, бисәләр генә булғас ни... — тип мәрәкәләп алды Нәғимә. — Ни йәме лә, ни ҡыҙығы тигәндәй... хи-хи...

— Һин, килен, юҡҡа шыҡырҙап ултырма. Беҙ унда ирҙәр ҡарарға йыйылманыҡ, — тине Баҙыян еңгә, ҡырҡа өҙөп. — Унан башҡа ла эштәр етерлек. Ана тегендә, инглиз тигән халыҡтар йәшәгән ерҙә, Шимбирлин тигән бер буржуй беҙгә бик яман теш ҡайрап ята, ти, әле. Һуғышмаҡ була, ти. Һуғышып, теге Николай батшаны тәхетенә ҡайтарып ултыртмаҡ итә, ти. Ә һин матур ирекәйҙәр, тиһең! Бына, бисура.

— Матур ирекәйҙәр хаҡында уйлау яҙыҡтыр шул, еңгә.

— Бисура итерһең Нәғимәне, — тип, ҡатындар төрлөсә һүҙ ҡыҫтырып, тағы мәрәкәләшеп алдылар. — Ул бит үҙенең һылыулығын белә, һылыу ирҙәрҙе лә онотмай.

Баҙыян еңгә тынып тыңлап тора бирҙе лә тағы ла етдиерәк тауыш менән дауам итте:

— Хәҙер, ана шул Шимбирлин тигән хас дошманға яуап бирер өсөн, ҡорал күп кәрәк. Ә ҡоралды аҡсаһыҙ, алтын-көмөшһөҙ эшләтеп булмай. Бына шул, ил тыныслығын, именлеген һаҡлау өсөн, бисәләр, ҡыҙыл ғәскәргә ҡорал кәрәк. Үәт, беҙ ни хаҡта һөйләштек унда, съезда, Нәғимә килен! Аңланыңмы инде?

— Аңламайынса тағы.

— Аңлағас, бик һәйбәт. Ошо арала беҙҙең комсомолдар халыҡтан иғәнә йыясаҡ. Әгәр донъялар имен булһын, ирем өйҙә торһон, тиһәң, Нәғимә килен, һин дә, үрмесеңә таҡҡан һәлмәк талир тәңкәләреңде биреп, ҡорғаусылыҡҡа мая индерерһең.

— Китсе, бушты ни, сулпымды өҙөп биреп ни, — тине Нәғимә, һаман көлөмһөрәп, — кәрәк тә ул... үҙемә...

— Иреңдең һуғышҡа китмәүен, илеңде Шимбирлин баҫып алмауын теләһәң, бирерһең дә.

Ҡатындар, докладсының тоҙло һүҙенә кинәнеп, тағы шаулашып көлөп ебәрҙеләр. Унан тағы баяғыса, һүҙ ыңғайында тыуған уй-фекерҙәрен йәки мәҙәк һүҙҙәрен шунда уҡ әйтә-әйтә, артабан тыңланылар. Уларға бигерәк тә теге үтә арыҡ, оҙон ҡатындың һөйләүе мәҙәк тойолдо. Шунда уҡ, һис тә тартынмай, уны башынан аяғына хәтле тикшереп тә сыҡтылар.

— Ҡалай мәрәкә итеп, тел осо менән генә һөйләй бит әле, бахыр.

— Ҡаланан килгәнме икән әллә?

— Шулайҙыр, сираҡтары бигерәк тә нәҙек кенә бит...

— Әйтмә лә, һалам сираҡ менән ҡалай баҫып йөрөй икән?!.

— Сиркәтәүмен тимәгән, өйрәтә килгән бит әле! Хи-хи!..

Волостән, ҡатын-ҡыҙ бүлегенән килгән ҡатындың, әлбиттә, белеме лә, Баҙыян еңгәләге шикелле, халыҡсан аҡыл эйәһелек тә, күренеп тора, бик юғарынан түгел. Етмәһә, халыҡ менән халыҡса һөйләшеү, аңлашыу рәтен дә оноҡҡан йәки уны бер ҡасан да белмәгән. Ул, ике һүҙҙең береһендә «значит» менән «конечно»ны ҡыҫтырып, бутай-бутай бик оҙаҡ һөйләне. Көҙгө юл шикелле ҡытырмаҡлы, томһа был һүҙ ағымын йыйып алып, еүеш таҫтамал кеүек итеп һыҡҡанда: «Бисәләр, йәшелсә, картуф сәсергә кәрәк» тигән бер тулы һөйләм килеп сығыр ине, әлбиттә. Ул һөйләм дә Илсеғол бисәләренә ҡағылмаҫ ине. Сөнки уларҙы уҙған ҡаты йотлоҡ картуф сә-

ергә лә, йәшелсә үҫтерергә лә бик һәйбәтләп өйрәткәйне инде.

Волость вәкиленең картуф сәсеүҙең файҙаһы хаҡында һөйләүе тора-бара бисәләрҙе, күрәһең, ялҡытты. Әкренләп, мәрәкә һүҙҙәр ысҡындырып ултырыу ҙа бөттө, һөйләүсенең тышҡы ҡиәфәте лә, теле лә, күренеп тора, ҡыҙыҡһындырмай башланы, ҡайһы берәүҙәр, кеше алдында ауыҙ күтәреп иҫнәп ултырыуҙың ғәйеп икәнен белһәләр ҙә, яулыҡ осона ғына йәшереп, иҫнәп тә ҡуйғыланы. Аҙыр, мейес артынараҡ инеп ултырған ерҙән кемдер күтәрелеп баҫты:

— Бер һүҙ әйтәйем әле.

«Аһа, Бибеш апайым даһа?! — тип тамам аптырап китте Емеш. — Нимә һөйләмәксе икән? Әле ағайым ҡаған ғына, Бибеш ширкәткә инергә теше-тырнағы менән ҡаршы тора, бер нәмәгә ҡатнашмай, бер ергә йөрөмәй, тип яҙғайны. Әле инде ниндәйҙер һүҙ әйтмәксе. Баҙыян сиғәмдән өлгө ала, күрәһең».

Бибеш үҙенең зифа һыны, һөрмәле сөм-ҡара күҙҙәре менән яҡтырып докладсыға шаян ғына ҡарап алды ла баҙыҡ итеп:

— Туҡта әле, апай, — тип өндәште. — Саҡ ҡына сабыр ит әле. Мин һиңә бер һорау бирәйем әле!

Докладсы ҡатын был көтөлмәгән хәлгә аптырапмы, асыуланыпмы, ысынлап та туҡтап ҡалды. Бибеш һаман шул һалмаҡ шаян тауыш менән:

— Һин, апай, баянан бирле беҙгә кәртүк сәсегеҙ ҙә кәртүк сәсегеҙ, тиһең. Күрәһең, үҙең уны яратаһыңдыр,— тип ҡуйҙы. — Тик һин шуны ғына әйт әле, кәртүк ашаған һин һимеҙме лә, кәртүк ашамаған мин һимеҙме?!.

Бибештең был һүҙе йоҡлап ултырған бисәләрҙе дауыл кеүек урындарынан ҡуҙғатып ебәрҙе. Улар тағы, бала-саға шикелле шаянланып, геү килеп көлөшөргә, һөйләшергә тотондо:

— Үәт әйтте, исмаһам!

— Һин матурмы ла, мин матурмы, тип тә ебәрһәсе!

— Һай, телеңдән һөйөнгөрө! Картуф сәсмәгән мин... тип ебәрә бит әле. Сәсмәҫһең һин, Таиба әбей сәстермәй ҡуйыр һинән?

Бибеш, күҙҙәрен көлдөрөп, бисәләргә тағы әҙерәк ҡарап торҙо ла ултырҙы.

«Бына һиңә Бибеш!.. — тип тағы ла нығыраҡ аптырап

уйланды Емеш. — Ҡалай уҫал бисә булып алған!.. Тамам болартып ебәрҙе бит!»

Был мәҙәк күренештән һуң бисәләр тиҙ генә тыныслана алманы. Һаман көлөштөләр, шаулаштылар. Нисек шулай булмаһын, телһеҙ-һүҙһеҙ йөрөгән Бибеш сыҡһын да һорау бирһен әле! Етмәһә, нисегерәк ти бит әле!

Вәкил ҡатын, күҙҙәрен уҫал алартып, өҫтәл һуҡты.

— Ҡулак һүҙе был! Бындай телде ҡыҫҡартырға кәрәк!.. — тип ҡыҙып-ҡыҙып әллә ниҙәр һөйләргә керешә.

Шул саҡ артҡы рәттән Емеш тороп баҫты. Ашыҡмай ғына президиум яғына бара башланы. Ҡатындар берәм-берәм уның яғына боролдо:

— Бәй-бәй, был кем?

— Гөлйемеш түгелме һуң?

— Ҡитсе, булмаҫ та!

— Эй-й-й... Танырлыҡ та түгел дәбаһа!

Бибеш, һеңлеһен ҡапыл күргәнгәме әллә үҙенең һүҙенән оялыуҙанмы, телһеҙ ҡалып ултырҙы. Емеш ашыҡмай, «һүҙ бирегеҙ әле» тип һорамай ғына барҙы ла барҙы. Ахыр ул, сәхнәгә менеп, ярһыған вәкилдең янына уҡ барып баҫҡанда, бүлмә инде, серәкәй бызылдауы ла ишетелерлек булып, тынып ҡалды. Емештең килеп сығыуы ла, һөйләргә йыйыныуы ла, өҫ-башы ла көтөлмәгән күренеш ине.

Ҡыҙ үҙенә төбәлгән йөҙҙәргә, һынаулы күҙҙәргә иғтибар менән ҡарап алды ла етди тауыш менән:

— Апайҙар, еңгәйҙәр, — тип өндәште. — Бында һис тә шаулашыр урын юҡ бит. Вәкил апай картуф сәсеүҙең кәрәклеген һеҙгә аңлатырға теләй икән, бик яҡшы. Аңлатһын. Әгәр инде һеҙ быны былай ҙа, үҙебеҙ ҙә беләбеҙ, тиһегеҙ икән, белгәнде ҡабат хәтергә төшөрөүҙән берәй ерегеҙ кәмейме ни? Юҡ бит. Ҡартуфты бығаса ла сәскәнбеҙ. Бынан һуң тағы ла яҡшыраҡ, һәйбәтерәк итеп үҫтерербеҙ. Ярай, әйтеүеңә рәхмәт, тип кенә ҡуйырға кәрәк. Шулай бит, дөрөҫтө әйтәм бит? Бибеш апайым да картуф сәсергә кәрәклекте инкар итмәҫ...

Бибештең ике бите ут яныр китте. Ләкин бер һүҙ ҙә өндәшә алманы. Башҡа ҡатындар тағы һөйләшеп алды:

— Дөрөҫ шул.

— Эшләмәгән эш түгел дә инде, эшләрбеҙ.

— Ярар, һылыу, сәсербеҙ ҙә, эшләрбеҙ ҙә. Братакул тигән нәмәкәйгә шулай тип яҙып ҡуйығыҙ.

— Әйтмә лә...

— Улай булғас, мин тауышҡа ҡуям, — тине Баҙыян әле. — Кем быйыл картуф, йәшелсәне тағы ла шәп итеп үстерербеҙ ти, шул ҡул күтәрә.

Бөтәһе лә ихлас ҡул күтәрҙе.

Мәсьәлә ыңғай хәл ителгәс, Емеш вәкилдең ҡолағына ғына:

— Апай, беҙҙең халыҡ әрләп, ҡурҡытып һөйләшкәнде күтәрмәй ул... — тип әйтте лә сәхнәнән төштө. Бибештең ғынында урын юҡ ине. Етмәһә, ул оялған да, ҡаушаған да һымаҡ күренә. «Ярар, йыйылыштан һуң, аулаҡта аңлашырбыҙ әле», — тип уйланы Емеш. Апаһына йылмайып бер ҡараны ла артҡа, үҙ урынына үтте. Ҡатындар уны тағы күҙ яҙлыҡтырмай оҙатты. Ҡалала уҡып, үҙгәреп, үҫеп ҡайтҡан элекке етем ҡыҙ Емеш бөгөн уларҙың ҡаршыһында ҡыҙыҡһыныу, ғәжәпһенеү, хатта ғорурланыу сығанағына әүерелде.

Йыйылыш бөткәс, ишек төбөндә генә ултырған Емеш иң тәүбашлап тышҡа сыҡты. Ҡасандыр Собхан старшина: «Әй, иблес, ат ек!» — тип, тарбайып баҫып, Иҙрис картҡа ҡысҡырып торған тимер япмалы күтәрмәнең селтәрле-һырлы тотҡосона тотона-тотона, ашыҡмай ғына түбән төштө, бәләкәс сағында, Шәүрәләр яғынан таҡта ярығы үтә ҡарағанда үҙенә хан йәйләүе кеүек күренгән киң ишек алдының урта төшөнә барып баҫып, апаһының сығыуын көтөп торҙо. Ләкин уға апаһын, ә Бибешкә һеңлеһен тиҙ генә күрергә тура килмәне. Өйҙән сыҡкан бер ҡатын, Емеш янында туҡтап, тиҙ арала уны тотош ҡамап алды, һәм үҙ тәьҫораттарын шунда уҡ әйтә-әйтә, ентекләп ҡарарға, тикшерергә кереште. Берәүҙәре:

— Бына һиңә етем Емеш!

— Үәт һин уны, сәпсим ҡала ҡыҙы булып ҡайтҡан даһа!

— Етем-еһерҙе сәүит ни эшләтеп ҡуйҙы!

— Бына һиңә телһеҙ Емеш! Анауы сибек кенә нәмәнең ауыҙын ябырлыҡ итеп һөйләне лә ташланы лабаһа! Уҡығас ни... Теле асылғас ни... — тип уның эске үҫешенә һоҡланды. Икенселәре ҡыҙҙың буй-һыны, төҫө-башы менән ҡыҙыҡһынды:

— Эй-й, бер йылда танымаҫлыҡ булып үҫкән дә ҡайтҡан.

— Ҡаҙна һәйбәт ашата, күрәһең.

— Һылыулығын ҡара! Кәртинкәме ни...

— Әйтмә лә. Тик бынауы күпте-юпке кеймәгән булһа, бигерәк тә һылыу булыр ине лә бит.

— Эйе шул, селтәр, ҡашмау кейҙереп ебәрһәң, ә?

Өсөнсөләре телгә генә түгел, ҡулға ла ирек бирҙе:

— Һылыу, ҡана бир әле, күрәйем әле аяғыңа кейгән бынауы уйынсыҡ кеүек кенә нәмәкәйҙе! — тип, Нәғимә еңгә уның былтыр Иштуған ағаһы алып биргән француз туфлиен һалдырып уҡ алды. Шунан уны устан-усҡа күсереп, ҡарап сыҡтылар.

— Ҡитсе-китсе, ошондай ҙа аяҡ кейеме була икән шул!..

— Быныҡ менән ҡалай баҫып йөрөмәк кәрәк!

Емеш, үҙен йәнһеҙ әйбер кеүек итеп, баштан-аяҡ ҡарап, һыйпаҡлап тикшереп сығыуға һис тә ҡаршылыҡ күрһәтмәй, баҫалҡы ғына йылмайып, тик торҙо. Ғәжәпме ни, ул бит үҙе лә былтыр ғына, тап улар кеүек бөтә нәмәгә аптырай торған сабый ине ләбаһа!

Шулай ҙа уның йөҙөнә һирпелгән алһыу ҡыҙыллыҡҡа, танау өҫтөнә сыҡҡан бөрсөк-бөрсөк тирҙәргә ҡарап, уға был ҡыҫымды күтәреүе еңел үк түгеллеген аңларға мөмкин ине. Иң һуңғы булып өйҙән сыҡҡан Баҙыян еңгә быны шунда уҡ аңлап алды:

— Эй бисәләр! — тип уйынлы-ысынлы асыуланып өндәште. — Етәрегеҙ һеҙгә! Күрмәйһегеҙме ни, ҡыҙҙы бөтөнләй оялтып, ҡыҙартып ташлағанһығыҙ.

Ҡатындар һаман таралмай маташҡас:

— Әй оятһыҙҙар! Апаһына, Бибеш киленгә, һылыуын күрергә лә ирек бирмәйһегеҙ ҙәбаһа! — тип көлдө. — Ана ул ҡасандан бирле сират көтөп бер ситтә тора!

Ҡатындар теләмәй генә таралышты. Ишек алдында, күҙгә-күҙ ҡарашып, ике туған ғына тороп ҡалды. Улар, үтә һағынышыу, ҡапыл ҡыуаныу тойғоһонанмы әллә бер-берерһендә, әйләнә-тирәләге тормошта булып ятҡан ҙур үҙгәреш, алға китешкә аптырапмы, ни тип тә һүҙ башлап китә алмай торҙолар. Ысынлап та, ҡасан ғына һуң әле, ҡойма аша ҡарап, ошо йорт эсендәге тормошҡа хайран ҡалып ултырған кескәй Емеш инде ҡалала уҡып ҡайтҡан. Элек ошо йорттоң улы бай, ҡупшы егет Һатыбалға ул, таҡта ярығы аша ҡарап, һоҡланып, сихырланып, хатта балаларса ғашиҡ булып ултыра ине. Ә хәҙер уның үҙенә кешеләр һоҡланып, аптырап, яратып ҡарай...

Ә Бибеш һуң? Ҡескәйҙән генә көсләп һатылған Бибеш хәҙер зифа һыны, көләс йөҙө менән йыйылышта сы-

тып һүҙ әйтә! Дөрөç, бик үк урынлы ла, йәтешле лә сыҡмаһы уның һүҙе. Бер уйлаһаң, уның йыйылышҡа килергә, сығып ниндәйҙер һүҙ әйтергә баҙнат итеүе генә лә могжизә түгелме ни?!

Ың тәүбашлап Емеш телгә килде:

— Апай-й!..

Бибеш һеңлеһен ҡосаҡлап күкрәгенә ҡыçты:

— Һылыуым!

# XV

Һанаулы көндәр уғата тиҙ үтеүсән була шул. Бына Емештең йәйге каникулы ла уҙып китте. Оҙаҡламай юлдар уны тағы ҡалаға ҡарай алып сығасаҡ. Ә ауылда әле йәй дауам итә. Оло Эйек туғайы һаман әле йәм-йәшел, урамда ҡаҙ үләндәре күпереп ята, сабынлыҡтарҙы йәш үрәне баçып киткән... Тик шулай ҙа моңһоу инде. Көҙгөнө һиҙелә: ҡоштар тынған, ҡырҙа ашлыҡтар урылған, кәбәндәр ҡойолған. Ырҙындарҙа ғына йәнлелек хөкөм һөрә. Унда эштең ҡыуаныслы сағы. Ширкәт ағзалары быйыл да мул уңыш алалар.

Емештең еҙнәһе ширкәттә булмағас, улар эште айырым эшләйҙәр. Ҡайтҡандың иртәгеһенә үк Емеш апаһы менән икәүләп утауға сыҡты. Башта картуф күмделәр, унан көнбағышҡа тотондолар. Утау бөтөр-бөтмәçтән, бесәнгә төштөләр. Яҙ көнө тотош һыу баçып ятҡан Оло Эйек туғайлығында бесән, ат инһә, юғалырлыҡ булып, үçкәйне. Ҡарағуралы сабынлыҡтар ҙа шәп ине. Шулай итеп, улар ҙа унлаған кәбән бесән эшләнеләр. Ә ширкәттәгеләрҙә бесән тағы ла күп булды.

— Малға ике йылға етерлек аҙыҡ эшләнде быйыл,— тип ҡыуанды Бибеш.

— Бәрәкәте менән бирһен хоҙай, — тине Таиба әбей. — Бәрәкәте китһә, күрмәй ҙә ҡалаһың ул...

Һуңғы көндәрҙә Бибеш менән Емеш иртәнән кискә хәтле ырҙында көнбағыш һуҡтылар. Таиба әбей, ейәндәрен ҡарап, кәбән күләгәһендә ултырҙы, ҡайһы саҡ көнбағыштың таҙалығына, туҡлығына һоҡланып, ырҙын табағы янында уралды.

— Шул хәтле тос. Көнбағыш майы етерлек була быйыл, аллаға шөкөр. Ҡабаҡ та уңған. Бәпестәргә ҡыш буйы көнбағыш майында йөҙҙөрөп ҡабаҡ буткаһы, ка-

бак бәлеше бешереп ашатырһың, килен! — тип сабыр ғына һөйләнеп торҙо. Унан, нимәгәлер әсенгән һымаҡ булып, биленә таяна-таяна, ситкә китеп барҙы... — Үҙем дә эшләһәм, ырамлыраҡ булыр ине лә, әллә ниңә быйыл бер ҙә ҡулым эшкә бармай тора әле. Хәйерле булһын инде.

Ахыр, бына Емештең китер көнө лә етте. Иртәгә ул юлға сығасаҡ. Шуға бөгөн апаһы ла ҡыр эшенә китмәне. Мунса инделәр, таҙа кейемдәр кейҙеләр. Әле апаһы аш бешерә, Емеш тәҙрә янында ҡулдан, машина кеүек һырып, Йәнешкә күлдәк тегеп ултыра. Үҙе әйләнгән һайын урамға күҙ ташлап ала.

— Ҡайһылай ҙа һәйбәт тегәһең, — тип һоҡлана Таиба әбей уның эшенә. — Машинала теккән кеүек ваҡ, тигеҙ... Был хәтле лә ҡулдарың эшкә килешеп торор икән, ҡоҙаса!

Емеш моңһоу ғына йылмая. Уның уйында тик Байрас ҡына: «Ҡөтөү ҡайтырға ла күп ҡалманы. Ниңә һаман килмәй икән?.. Минең китеремде белмәйме икән ни? Үҙе ҡасан китә икән!..»

— Ниңәлер эсең бошҡан кеүек, — тип апаһы ла уға текләп ҡарай. — Әллә киткең килмәйме?

Емеш тағы ла йылмая ғына:

— Ниңә килмәһен...

Ысынлап та, ниңә бошона һуң әле Емеш? Әллә тыуып-үҫкән ерҙәрҙе ҡалдырып китеүе тағы ҡыйынмы? Әллә Байрастан айырылыу йөрәкте һыҙлатамы?.. Әй хоҙайым, ҡалай аҙ күрештеләр һуң әле улар, хатта, яңғыҙ ҡалып, туйғансы бер һөйләшә лә алманылар. Эйе, аҙ осраштылар... Хәйер, осрашҡанда ла һөйләшер һүҙ тапманылар ҙа инде. Ниңә икән? Байрасты күреү менән, Емеш телһеҙгә әйләнә лә ҡуя шул. Ул да шулай һымаҡ. Йышыраҡ бергә булғанда һөйләшеп тә китерҙәр ине, бәлки... Тура килмәне шул... Атаһы волостә эшләгәс, Байрас күп ваҡыт Яҡуп ауылында булды. Комсомол эшен юлға һалабыҙ тип, Алеша менән бергә бөтә волосте арҡырыбуй йөрөп сыҡты. Эштән бушаған арала, атҡа атланып, Илсеғолға елеп килһә, Емеш ҡыр эшендә булып ҡалды, йәки өйҙә булһа ла, өлкәндәр алдында, ҡыйыуһыҙ ғына күҙгә-күҙ ҡарашып алыуҙан уҙып ни һөйләшәһең?!

Шулай йәй үтеп тә китте... Туҡта, анауы өйҙәр янынан ғына югерә-атлай килгән ул түгелме һуң? Эйе шул, Байрас! Ана ҡапҡа янына килеп туҡтаны. Сыҡһын тип көтәләр. Аулаҡта хушлашҡыһы киләлер уның да... Сы-

ырғамы икән ни? Апайым нимә уйлар? Ҡоҙағый ни әйтер? Еҙнәм күреп ҡалһа!.. Оят бит әле...

Емеш үҙ уйынан үҙе ҡысҡырып көлөп ебәрә яҙҙы: «Былай уйлай башлаһаң, шәл бөркәнергә генә ҡала түгелме һуң?!»

Ул ҡабаланып иҙәнгә төштө.

— Апай, мин Оло Эйек буйҙары менән хушлашып ҡайтайым әле.

— Бәй, һорап тораһың тағы. Мин үҙем үк, ниңә китеп көнөң еткәндә лә өйҙә ултыраһың, һылыу, тип һорамаҡсы инем әле, — тине Бибеш, ихлас итеп. — Бар, күңелең булғансы уйнап-көлөп ҡайт.

Емеш, йөрәгенең ярһыуын тыя алмай, атылып тышҡа сыҡты, югереп ҡапҡа янына барҙы.

— Байрас-с!..

— Емеш!..

Улар, бер-береһенә һөйөп ҡарап, сәбәпһеҙ көлөшөп торҙолар. Унан, һаман шулай оялсан ғына көлөшә-ҡараша, түбән осҡа ҡарай киттеләр. Юл, ғәҙәттәгесә, Оло Эйек буйына юнәлде. Бында, донъя мәшәҡәтенән бушаған саҡтарҙа, яр башынан аяҡ һалындырып, йылға өҫтөнә күҙ ташлап, йырлай-һөйләшә серләшеп ултырыу йәштәрҙең генә түгел, ҡарттарҙың да борон-борондан килгән яратҡан ғәҙәте бит. «Ағын йылға ҡайғы-хәсрәтте ағыҙып алып китә», — тиҙәр ҡарттар. Ә йәштәргә ул һөйөү һағышына серле моң, һынмаҫ ҡанат өҫтәй...

Емеш менән Байрас та бына әле, шул серле моңдан иҫереп, йылға өҫтөнә ҡарап торалар.

— Мин Оло Эйектең бына ошо көҙгө яҡтылығын яратам. Күрәһеңме, төбөндәге ҡырсынташтарына хәтле йымылдап ята, — тине Байрас. — Балыҡтар ҙа һимерткән тай кеүек йылғырҙар...

«Ә мин яҙғы ташҡын сағын... Үтәнән-үтә күренмәгән, ярһыу... хәтәр сағын...» — тип уйланы Емеш. Әммә өндәшмәне. Байрас көтә бирҙе лә әкрен генә йырлап ебәрҙе:

Ҡарайып та ята, һай, тәрән күл,.
Өҫкәйендә үҫкән томбойоҡ.
Һинең күңелкәйең шатмы, дуҫҡай,
Минең күңелкәйем бик бойоҡ.

Унең йырлауын Емеш бәләкәс саҡтан уҡ ярата ине. Әле инде, әйтерһең, йөрәген бөтөнләй тетрәтеп ебәрҙе. Ҡаушауын күрһәтмәҫ өсөн, ситкә боролоп тынып ҡалды. Байрас ҡыйыр-ҡыймаҫ ҡына тағы:

— Емеш! — тип өндәште. — Ҡайтҡаны бирле юплап күрешкән дә юҡ... Оло Эйек яғын Сағылтауға менеп ҡарайбыҙмы әллә, Емеш?!

Улар бик оҙаҡ һүҙһеҙ барҙылар. Ҡасандыр Емеш яратып яңғыҙ гиҙгән берләм юл менән яр буйлап урьяҡҡа, Хәбир батыр тирәгенә барып еттеләр. Оҙонғол яры башына барып менделәр, зыярат янынан уҙғанда, Сәлимә мәрхүм ҡәбере өҫтөндә үҫкән һылыу ҡайынға ҡарап, әҙ генә туҡталып торҙолар.

— Сәлимә еңгәнең үҙе кеүек һылыу ҡайын... — тип моңһоу ғына көрһөнөп ҡуйҙы Емеш. — Йә, ниңә үлде инде ул? Йәшәргә лә йәшәргә ине бит әле уға...

— Мөхәббәт... — тине Байрас, нисектер, өлкәндәрсә итеп, — кешене йәшәткән дә, үлтергән дә мөхәббәт бит ул... Бер саҡ һин дә белерһең әле...

Емеш тағы уға ҡарап ҡына ҡуйҙы. Егет баҙнатлана төштө:

— Беләһеңме, ҡыҙыҡай, һиңә бит минең үпкәм бик ҙур...

Ҡыҙҙың оҙон керпектәре һирпелеп китте. Ләкин ҡаушауын белдермәне. Көләмһерәп, аяҡ остарына ҡарап бара бирҙе. Яуап булмағас, егет тағы:

— Беләһеңме ни өсөн? — тип һораны. Уға ла яуап алмағас: — Берҙән, хаттарымдың, исмаһам, берәһенә лә яуап яҙманың, — тине. — Икенсенән, яҙ көнө көтмәй ҡайтып киттең. Миңә ауыр булыр тип, аҙ ғына ла уйламанныңмы ни, ә?.. Беләһеңме, хатта Алеша ла асыуланды һиңә! Ә мин йәй буйына һиңә ошо үпкәмде әйтеү яйын да таба алмай йөҙәнем бит... Ә хәҙер... һуң инде... Һин тағы китер ҙә ионоторһоң...

Емештән һаман бер һүҙ ҙә ала алмағас, Байрас үҙенә хас булмаған бошонҡолоҡ менән тағы моңайып йырлап ебәрҙе:

Бара ла ғына инем юл буйлап,
Юлым алып китте һыу буйлап.
Зиһенһеҙ ҙә егет түгел инем,
Зиһендәрем бөттө һине уйлап...

Емештең биттәре генә түгел, ҡолаҡтарына хәтле ут янды. Ләкин ул һаман бер ниндәй ҙә һүҙ таба алманы. Ни тиһен? Нисек аңлатһын? Дөрөҫөн генә әйткәндә, ни өсөн шулай эшләүен ул бит әле үҙе лә асыҡ ҡына аңлап етмәй...

Сағылтау өçтөнән ҡапыл ҡалын ҡара болот күтәрелеп сыҡты. Йәшен уттары, болотҡа ғүмерһеҙ алтын кәкерсәктәр яһап, күктә даһыр-доһор елеп үтте. Оҙаҡламай ере тамсылар ерҙе дөмбәçләргә кереште.

Байрас Емештең бәләкәс саҡта йәшендән ҡурҡа торғанлығын гәҙәте барын белә ине. Бына хәҙер ҙә, ул, әллә йәшендән ҡурҡып, әллә өшөп, ҡыҙҙың ҡобараһы оса башлауын күргәс, тиҙ генә пинжәген сисеп уның яурынына һалды.

— Ошолай яҡшыраҡ булыр.

— Ә һин үҙең?

— Миңә былай ҙа эçе...

— Ҡуй, кәрәкмәй... һин күшегеп барғас...

— Улай булғас, икебеҙ ҙә ябынайыҡ. — Байрас ҡыҙҙың яурынынан ҡыйыуһыҙ ғына ҡосаҡлап, үҙенә тартты. — Бына ошолай, икебеҙгә лә етер...

— Ҡуй...

Емеш оялып, ситкә китте.

— Улай булһа, мин дә киймәйем, — тине Байрас, пинжәген ҡулына тотоп алды. Улар ялан уртаһында күшегеп торҙолар.

Ҡапыл күтәрелеп сыҡҡан йәшенле ямғыр дөһөрҙәпшатырҙап уҙып та китте. Ҡисләүгә һарҡҡан ҡояш, көнбайышынан дә сағыуыраҡ балҡып, болот аçтынан сыҡты. Емеш туфлиҙәрен һалып ҡулына тотто ла ҡыяҡтарына төшкән ямғыр тамсыларында йәшелле-ҡыҙыллы нур уйнатып көлөп ебәргән йомшаҡ ҡурпыларға кинәнеп баçты.

— Киттек!

— Киттек!

* * *

Сағылтау башынан Оло Эйек буйы бик алыçтан күренеп ята. Бөгөлөп-һығылып аҡҡан йылға, бейек-бейек тирәктәр, юкәлектәр, бөгөл һайын һыйынған кескәй ауылдар... Бөтәһе лә шундай матур, күҙ ҡамаштырғыс гүзәл күренә, йәштәрҙең күңеленә айырылышыу ауырлығы, мөхәббәттең үлемһеҙлеге тыуҙырған тылсымлы моңһоулыҡ һала...

Ә арьяҡта, ҡуйы таллыҡтарҙан ары, аҙым һайын тип әйтерлек бесән эçкерттәре, кәбәндәр менән сыбарланған йәшел туғай. Шул кәбәндәр араһында Емеш һалғандары

ла бар. Улар ҙа әле генә үтеп киткән, бәлки бер ҡасан да ҡабатланмаҫ йәй хаҡында һөйләп, күңелде һыҙлатып ҡуя.

Йәштәр, тыуған ер матурлығына һоҡланып, оҙаҡ-оҙаҡ алыҫтарға күҙ ташлап, тынып торҙолар. Ҡояш байыу яғына ятты, Оло Эйек өҫтөнән ҡуйы аҡ томан ҡалҡып сыҡты, боҫоп, ергә һырышып ҡына тауға үрмәләй башланы. Бына инде Оҙонғол йырынын да һыйпап үтте. Сағылтау битләүендәге имән сауҡаларҙы ла бөркәп алды, оҙаҡламай уның иң бейек түбәһенә, бешеп ярылған иләк ҡарбузы шикелле ҡыҙарып, офоҡҡа ятҡан ҡояшҡа бит ҡуйып, Емештәр баҫып торған үркәскә үрмәләргә кереште, күҙ асып йомған арала егет менән ҡыҙ ҡуйы аҡ томан эсендә күмелеп ҡалды. Тирә-яҡта бер ни күренмәҫ булды. Әйтерһең, улар күктә, болоттар араһында йөҙөп баралар ине хәҙер.

— Абау, ҡалай яман... — тип Емеш ҡурҡынып Байрасҡа ҡараны. — Тәнгә йылан кеүек урала...

— Нимә ҡурҡыныс?! — тип аптырап һораны Байрас. Уйҙары таркау булғас, аңламай ҡалды.

— Томанды әйтәм дә...

Байрас шул саҡ, үҙе лә аңғармаҫтан, ҡыҙҙы биленән ҡосаҡлап алды ла күкрәгенә ҡыҫты. Емеш ҡысҡырырға ла, ҡаршылыҡ күрһәтергә лә өлгөрмәй ҡалды. Етмәһә, ниңәлер ҡапыл аяҡ-ҡулдары хәлһеҙләнеп, өнө быуылып киткәндәй ҙә итте, ул, бөтөнләй быуынһыҙланып, егеттең ҡосағынан ергә шыуып төштө. Был хәл, күрәһең, егетте лә аңына килтерҙе. Ул ҡурҡып ҡыҙ янына сүгәләне.

— Ни булды, һылыу?!

— Ҡурҡам...

— Ҡемдән? Минәнме ни?!

— Белмәйем...

— Ҡурҡма, йәме, һылыу. Ҡабат теймәйем... Мин бит үҙем дә аңламаҫтан ғына...

— Уй-й... Оят! — тине Емеш, ҡыҙарынып. Устары менән битен ҡапланы.

— Оялырлыҡ бер ни ҙә булманы бит, һылыу, — тип көлә-көлә Байрас уны тағы ҡосаҡларға ынтылғайны ла, ҡыҙ һикереп торҙо ла түбәнгә ҡарай югерҙе. Егет уны тау аҫтында, томан аръяғында ғына ҡыуып етте.

— Ниңә ҡасаһың, Емеш?

Ҡыҙ был ваҡытта бер аҙ тынысланғайны, егеткә күтәрелеп ҡарар хәлгә килгәйне.

— Ҡасмайым, — тине ул, ҡыйыуһыҙ ғына көлөп. — Югерәм. Әйҙә, ҡыуып ет!

Байрас, уның ҡулынан тотоп, күҙҙәренә ҡарарға тырышты.

...Ҡыуып та ғына етһәң, бер үберһең.
Етә алмаһаң, шаһит үлерһең, —

тимәксе булаһыңмы ни һин дә, һылыу?!

Йыр Емешкә артыҡ ҡыйыу һәм әҙәпһеҙ тойолдо. Оҡшаманы. Шуға ул өндәшмәне, егеткә шелтәле генә ҡарап алды ла артабан югереп китте.

— Шулай тиһәң, хәҙер ҡыуып етәм!

— Етмәй тор! — тине Емеш ниндәйҙер сая тауыш менән. Һәм егетте бик алыҫта ҡалдырып китте. Ул бала саҡтан уҡ әллә ажар һыуыҡтарҙа яланаяҡ югереп ҡыш сыҡҡанға, әллә үгәй әсәйҙең ҡушҡан бер эшен нисек тә һөйөтерәк эшләп, әрләү-тиргәүҙән ҡотолоу өсөн, һәр саҡ югереп кенә торғанға, хатта атлап йөрөүҙе белмәй, ҡабаланлы уйнағанда әхирәттәрен еткермәй торғайны. Был гәҙәтен, ҡалаға барғас та, ташлай алмай ыҙаланды ул. Ишек алдында, ятаҡ, уҡыу бүлмәләре, ашхана араһында югереп йөрөнө, урамға сыҡҡанда ла тоҡ-томалға югереп китеп, иптәштәре араһында уңайһыҙ хәлгә ҡалғыланы. Ә хәҙер бында ялан иркен, күңел ярһыу, теләгәнсә югерә бир.

Шулай улар ауылға килеп еткәнсе югерештеләр. Байраска ҡыҙҙы ҡыуып етергә лә, йырҙағы һымаҡ үбергә лә тура килмәне.

О иртәгеһен Емеш тағы юлға сыҡты. Берсә ҡыуанып, берсә һыҙланып, тыуған ерҙәрен, һөйгән Байрасын тағы ҡалдырып китте. Уның күңелен һандуғастай ярһытҡан, ҡанатландырған да, һөйөндөргән дә, билдәһеҙ үтә оло ҡыуанысы менән бер аҙ ҡурҡытҡан да тәүге саф мөхәббәт күпмегәләр тағы өҙөлөп ҡалды...

## ӨСӨНСӨ БҮЛЕК

Зарыҡҡан күңел
Оса киңлеккә.
Ай-ҡояш менән
Бергә тиңлеккә.

Д. Юлтый

I

Бөгөн комсомолдың асыҡ йыйылышы булыуын, унда ВЛКСМ горкомынан «Комсомол әхлағы» хаҡында доклад һөйләү өсөн революцион рухта яҙылған шиғырҙары менән танылған бер шағир килеүен белдергән иғланды күргәс, Емеш шатланып китте. Шиғырҙары аша күптән таныш авторҙың үҙен күреү ҡыҙыҡһындырҙы уны. Шуға ахыры, үҙе әлегә комсомолка булмаһа ла, клубҡа иң алдан барып ултырҙы. Башҡалар ҙа ғәҙәттәгенән йәһәтерәк йыйылды. Оҙаҡламай, ҡултығына папка ҡыҫтырып, сәхнә артына ячейка секретаре Зиннур, йылтырап бөткән ҙур полевой сумка тотҡан баяғы шағир-лектор үтте. Уныһы ҙа ләпәк башын тағы ла ләпәйтә төшөп, оҙон боттарын алпан-толпан баҫып, һаман баяғыса әҙәпле, ярамһаҡлы ҡыланып Емер Яшинский ҙә улар артынан эйәргәйне. Ул эйеләә-бөгөлә лектор шағирға ниҙер һөйләйкөлә. Уның төлкө йөҙөндә ярамһаҡланыу, тантана итеү, маһайыу кеүек ят, сит сифаттар уйнай. Емеш екһенеү, ситһенеү тойғоһо менән ҡарашын йәһәт кенә Емерҙән шағирға күсерә. Ә ул, танылған, яратылған шағир, киреһенсә, уңайһыҙланған, тартынған, хатта оялған һымаҡ, етмәһә, Емер Яшинский янында үҫмер малай кеүек кескәй һәм ҡураныс. Уның өҫтөндә лә Яшинскийҙеке шикелле шәп кейемдәр түгел: иҫке ҡара шинель, шундай уҡ иҫке ботинка, башында оҙаҡ кейелгәне күҙгә сағылып торған ҡара кепка. Ғөмүмән, тышҡы күренеше менән ул залда ултырған студент егеттәрҙән төптө айырылмай тип әйтерлек. Шулай ҙа ниңәлер унан күҙҙе алғы килмәй. Ҡескәйерәк йоморо ҡара күҙҙәре шундай аҡыллы ла, баҫалҡы ла, шул уҡ ваҡытта үтә иғтибарлылар ҙа...

Емеш уны сәхнә артына инеп киткәнсе күҙ яҙлыҡтырмай ҡарап ҡалды. Бына Зиннур йыйылышты асты. Президиумга шағир менән Емер Яшинский ҙә һайланды. Тағы шулай баяғыса эйелә-һығыла иң алға, шағир янына барып ултырҙы. Ҡолға шикелле оҙон боттарын киреп, маңлайын сирып, башын килбәтһеҙ ләпәйтеп эленән-эле докладсыға эйелеп ҡараны, аҡыллы башланып, тағы ниҙер бышылданы.

«Өҙәм аҡтығы! Ҡалай ҡыланған була бит, эшкинмәгән!» — тип Емеш уны эстән генә әрләп алды. Ул ошо Яшинскийҙе бөтә йәне-йөрәге менән күралмай ине. Уның һәр ҡыланышы, йөрөшө-торошо, һүҙе, көлөүе лә ят һәм иһалма тойола уға. Хатта уны яһбай, ысын кеше итеп түгел, ә кемдеңдер ролен башҡарыусы, кем булыптыр һәр саҡ уйнап йәшәүсе бер күләгә һымаҡ күреп тә ҡуя ул. Тик кемдең? Емеш, әлбиттә, быға яуап бирә алмай. Бер курста булһалар ҙа, ул хатта Яшинский менән һөйләшеп тә ҡараганы юҡ, уның хаҡында яҡшы ла, яман да тип, бер дәлил дә килтерә алмай. Шулай ҙа уны йәне һөймәй.

Уның элек-электән шулай үҙенә генә хас билдәһеҙ һиҙенеү аша кешеләрҙе яҡшыға йәки яманға бүлә, берәүҙәрен юғары дәрәжәгә күтәреп хөрмәтләй, икенселәрен, шомло хәүеф тойоп, ҡаса, ҡурҡа, яратмай торған ғәҙәте бар ине. Һәм ошо тойоуы күп ваҡыт аҡлана ла торғайны. Бер саҡ балалар йортонда үтә илгәҙәк тәрбиәсе Камил ағайға ҡарата уның күңелендә шундай уҡ сәбәпһеҙ кырыҫ ҡараш тыуғайны. Күптән түгел Хөрмәт уға: «Камил ағайҙы хөкөм иткәндәр. Йәш кенә бер ҡыҙҙы көсләгән», — тип әйткәс, төшөндө: тимәк, күңеле дөрөҫ һиҙенгән — ул яман кеше булған!..

Хәҙер килеп Яшинскийгә ҡарата ла шундай уҡ дәлилһеҙ екһенеү бар уның күңелендә. Шулай ҙа берәү, уның был ҡырыҫ ҡарашын кире ҡағырға, Яшинскийҙе һәйбәт кеше тип раҫларға тырышһа, барыбер ышандыра алмаҫ ине. Уны яҡшы кеше тип нисек кенә раҫларға тырышмаһын, Емеш һаман үҙ уйында ҡалыр ине. Бына әле лә ул үҙе төрән хөрмәтләгән шағир янында Емерҙең маймыллашып ултырыуынан екһенеп ситкә ҡараны. Артҡа боролоп, кемделер эҙләгәндәй, зал өҫтөнә күҙ йөрөтөп сыҡты. Зал тып-тын ине. Бөтәһе лә ҡыҙыҡһынып президиумға төбәлгән. Шағирҙең сығышын көтәләр, ә ул бына төптө әҙәбиәт хаҡында түгел, әхлаҡ хаҡында һөйләйәсәк. Был

да ҡыҙыҡлы. Ул бөгөн бында ҡаланың комсомол вожаҡтарының береһе сифатында килгән.

Шағир ҡыйыуһыҙыраҡ ҡына атлап трибунаға сыҡты. Сумкаһынан конспектен алып күҙ алдына һалды. Иггибарлы, баҫалҡы йылмайып залға ҡарап торҙо, унан ашыҡмай ғына һүҙ башланы. Уның тауышы артыҡ көслө лә, ялҡынлы ла түгел, ләкин һүҙе аңлайышлы ине. Емеш ашығып блокноты менән ҡәләменә тотондо. Ғәҙәтенсә, был докладтан да үҙенсә мөһим һанаған урындарҙы вак матур хәрефтәр менән яҙып барҙы: «Әхлаҡ — ул синфи күренеш. Ул һәр саҡ билдәле бер синыфтың мәнфәғәтен күҙәтә».

«Социализм дәүере әхлағы халыҡҡа, пролетариатка хеҙмәт итергә тейеш. Ул фәнгә, тарихҡа хилаф булған бөтә төр буржуаз әхлаҡты кире ҡаға, ысын мәғәнәһендә хеҙмәтсән синыф мәнфәғәтен күҙәткән әхлаҡ тәртиптәрен урынлаштыра».

«Әгәр кеше үҙенең вазифаһын яҡшы үтәһә, әйтәйек, уҡытыусы икән, бөтә көсөн һалып балаларға белем бирһә, уларҙы коммунизм рухында тәрбиәләһә, был — йәмғиәткә хеҙмәт, был — әхлаҡлылыҡ. Киреһенсә, вазифаһын насар башҡара, башҡаларҙың яҡшы эшенә аяк сала, йәмғәт эшен тарҡата икән, быны беҙ әхлаҡһыҙлык тип атайбыҙ».

Докладсы һүҙ ыңғайында йәштәр араһында енси мөнәсәбәт, мещанлыҡ, обывателлек мәсьәләләренә лә туҡталды. Емеш бынан да үҙенсәләп яҙып алыр урын тапты:

«Енси энергия — кешенең ижади энергияһына нык бәйләнгән булғанлыктан, иртә енси мөнәсәбәткә инеү йәш кешенең аҡыл һәләтенә, зирәклегенә зарар килтерә».

«Йәмәғәт мәнфәғәте менән йәшәмәү, бөтә нәмәнән үҙ мәнфәғәтеңде юғары ҡуйыу — мещанлыҡҡа керә. Бер үҙ биҙәнмәҫ тә, еҫле май ҙа һөртмәҫ, оҙон сәс тә йөрөтмәҫ, эсмәҫ-тартмаҫ, әммә үҙенең эске донъяһы менән тамам етешкән мещан булырға мөмкин...»

Был һүҙҙәрҙе яҙғас, Емеш Яшинский яғына шелтәле ҡараш ташлап алды:

Ә ул: «Оҙон сәс йөрөтөү — мещанлыҡ!» — тип нисәмә тапҡыр минең толомомдан тартып китте. Бына һин уны, ҡылйыуғыс!

Йыйылыш концерт менән тамамланды.

Бында ла Яшинский ҡыҫылмай ҡалманы: йоҡа һары сәсен бер алға, бер артҡа һелкеп ташлай-ташлай, кем

дендер килмәгән ерен, килешмәгән кейемен эләктереп, урам ғәйбәтенә оҡшаған бер нисә шиғырын, дөрөҫөрәге, йыртыҡ йырын уҡыны:

...Мещанкаларҙың үксәһе
Беҙ кеүек осло икән.
Бара алмай. Йығылып ҡала.
Революция елдәре,
Ай-һай, бик көслө икән!..

* * *

Киске аштан һуң студенттәр уҡыу бүлмәһенә йыйылдылар. Һәр кис бында килеп өс сәғәт буйы дәрес әҙерләү бөтә студент өсөн дә мәжбүри, ләкин күбеһенсә был мәжбүри сәғәтте һәр кем үҙенсә уҙғара: берәүҙәре тырышып-тырышып дәрес әҙерләй, икенселәре тел сарлай, өсөнсөләре ҡыҙҙарҙы сырылдата... Ә бөгөн, ахыры, көндөҙгө йыйылыштың тәьҫиренән студенттәрҙә айырата йәнлелек хөкөм һөрә: ҡайһылары мещанлыҡ, обывателлек, әхлаҡһыҙлыҡ темаһына бәхәс алып бара, ҡайһылары, бигерәк тә ҡыҙҙар, докладсының күҙен-һүҙен, кейемен тикшерә, ә Яшинский бик ҙур эш башҡарған ҡиәфәт менән курс бүлмәһенә һыймай инеп-сығып йөрөй йәки бик олпат, етди төҫ алып, йәнәһе, тәрән, мәғәнәле уйға сумып ултыра, «күрҙегеҙме, ағағыҙ кем менән йәнәш йөрөй, ә?!» тигәнде аңлатып, эре генә тамаҡ ҡырғылап ҡуя. Үҙенә иғтибар итеүҙе баштарына ла килтермәй, уны күрмәй ҙә белмәй ултырған Шәмсиә менән Емеш өҫтәле тирәһендә лә йыш-йыш әйләнгеләп ала. Шәмсиәне кыуаҡан диалектендә һөйләшеүе менән үсекләп тә ҡараған була.

— Ништәп эштәп ултыраһың әле, ҡыҙыҡай!

— Йөрөмә әле, килбәтһеҙ! Турһыҡ! — ти Шәмсиә, көлөп. — Үҙ эшеңдә бул!

— Ә Нәфисә мине турһыҡ тимәй. Эйе бит, Нәфисә?

— Эйе шул, — тип көлә Нәфисә лә. — Һин турһыҡ түгел, ә сапан. Гел-гел кәрәкмәгән ерҙә һалынып тораһың!..

— Шулай шул — сапан! — тип элеп ала Шәмсиә. — Нисек кенә киймә, барыбер тәндә килбәтһеҙ һалпаңлап тора. Ха-ха!

Емеш китаптан күҙен дә алмай, көлмәй ҙә. Күрәһең, бындай иғтибарһыҙлыҡ Яшинскийҙең сәменә тейә. Ул, әйтенсә, уның оҙон толомонан тотоп тарта:

— Емеш, оҙон сәс йөрөтөү — барыбер мещанлыҡ! Ишет: — Быны мин, Емер ағайың әйтә!

Емеш был юлы ла уның һүҙен ишетмәне, үҙен күрмәне. Был ваҡытта ул «Коммунистәр партияһы Манифест»е буйынса ағымдағы сәйәсәт занятиеһендә һөйләр өсөн тезис әҙерләп ултыра ине.

Бөгөн кис ул бик яҡшы эшләне: дәрестәрен әҙерләне, ә ваҡыт бар ине әле: «Тағы нимә эшләргә икән?» — тип уйлап алды ул. Шул саҡ уның хәтеренә, ошо арала рус телендә ниндәй китаптар уҡыуын дәфтәренә яҙып ҡуймағанлығы иҫенә килеп төштө: Островский — «Гроза», Пушкин — «Дубровский», «Капитанская дочка», Грибоедов — «Горе от ума», Чехов — «Человек в футляре», Гоголь — «Тарас Бульба», Серафимович — «Железный поток», М. Шагинян — «Гидроцентраль», А. Фадеев — «Разгром»... тип оҙаҡ ҡына яҙып ултырҙы: «Әҙ уҡылған, тағы күберәк уҡырға кәрәк!..» — тип күңеленән һығымта яһап ҡуйҙы. Дәрес әҙерләү өсөн бирелгән киске өс сәғәт ваҡыт һаман үтеп бөтмәгәйне әле. Ул кисә төндә ай яҡтыһында, тәҙрә тупһаһына һалып, ҡәләм менән сыйғылап ҡуйған хикәйәһен дәфтәргә күсереп ҡуйырга булды. Хикәйәһен ул «Тылсымлы төн» тип атағайны.

Яшинский уның яҙыуына эйелеп ҡараны:

— Ялбыр баш, һин ниңә әкиәт яҙып ултыраһың?! Дәрес әҙерләргә кәрәк! Нимәгә һиңә яҙып-боҙоп маташырға?

— Юҡ, ул әкиәт түгел, ә һинең кеүек үк шиғыр яҙа! Дегәнәк хаҡында шиғыр! — тип һаман төртмә теллеләнә Шәмсиә. — Бер һырыһа, төшмәй ыҙалай торған дегәнәк хаҡында!

Емеш дәфтәрен ябып ҡуйҙы ла, был «дегәнәктең» ҡасан төшөрөн түҙемһеҙлек менән көтөп, тынып ҡалды.

Ахыр килеп, Емер Яшинский уларҙың өҫтәленән китте. Ҡыҙҙар үҙ эштәренә тотондо: Шәмсиә Нәфисәгә ике, өс билдәһеҙ һан булған алгебра мәсьәләләрен ҡалай эшләргә өйрәтте, ә Емеш хикәйәһен артабан күсерергә кереште.

* * *

«Ай, тылсымлы ай... Күпме йөрәктәр бағынмаған, күпме ҡараштар төбәлмәгән уға?! Ниңә һуң шул хәтле күңелдәрҙе үҙенә тартыусан икән ул? Ниңә бөтәһе лә үҙенең иң тәрән йөрәк серҙәрен уға һөйләй икән?..



Ир-ат күҙе төшөрлөк булдың инде, уйнап-көлөп, йөҙөндә күрһәтеп йөрөү килешмәй, тип тар бүлмәгә ырғытылған шәреҡ ҡыҙы һәр төн тәҙрә ҡаршыһына барып ауыр ҡорманы асҡан, моңһоу ҡара күҙҙәрен айға төбәп, үҙенең тотҡон тормошо тураһында уйлаған, хыялында тыуған билдәһеҙ, әммә сикһеҙ яҡын да, яҡшы ла, батыр ҙа бер йәндең күҙҙәренә оҡшатып Айҙы яратҡан, таңғаса уға ҡарап, моңайып торған...

Килер... Һис шикһеҙ, килер ҙә был ҡеүәтле батыр, бөтә булған сынйырҙарҙы өҙә, кәртәләрҙе емерә торған тылсымлы бер һүҙ әйтер — «һөйәм!» тиер. Һәм ҡыҙҙы алыҫҡа, иркенлеккә, азатлыҡҡа алып осор...» Төндөң тылсымлы юлдашы Ай уға һәр кис ошо һүҙҙе ҡабатлаған... «Шулай булырға тейеш тә... Юҡһа нисек, ни өсөн йәшәргә?!»

Ер йөҙөндәге барлыҡ шағирҙәр иң матур, иң саф йырҙарын Ай нурҙарына мансып йырлаған. Ҡарт Уралдың сәскәле хәтфә түшәлгән икһеҙ-сикһеҙ киң йәйләүҙәрендә дан алған олпат ҡурайсылар ҙа, тын кистәрҙә болоттарға олғашҡан ҡарағастар төбөндә ултырып, үҙҙәренең иң һөйгән көйҙәрен, кеше йөрәген ҡол итерҙәй моңдарын Айға арнап уйнағандар. Күңелдәренең иң саф, иң наҙлы серҙәрен ҡурай моңо аша уға һөйләгәндәр. Шулай ғүмер буйы кешеләр иң түбәнге баҫҡыста торғандарынан алып иң ғали юғарылыҡҡа күтәрелгәндәренә хәтле Ай нурын һөйгән, һөйөлгән, Айҙы маҡтап, уны ҙурлап мәдхиәләр йырлаған, унан ниндәйҙер йәшерен, сихри моң тапҡан, ләкин был мондоң серенә бер ҡасан да төшөнә алмаған. Ай һаман шул моңло күҙҙәрен ергә төбәп ҡараған да ҡараған... Мең, миллион йылдар буйы ошондай серле минуттар, ай нурҙарына мансылып, йәшен таштары шикелле йымылдап бер өҙлөкһөҙ алға, билдәһеҙлеккә, тәгәрләй биргән...

* * *

Йәйге томра төн. Ғаләм тынып йоҡлай. Ерҙе күкрәгенә ҡыҫып тынып ҡалған оло диңгеҙ уртаһында ниндәйҙер серле сәбәп менән елкәнле карап та туҡтап ҡалған. Төн ҡараһы күгелйем күлдәк кейгән, диңгеҙ өҫтө ҡараһыу күк пәрҙә ябынған, ә күк йөҙөндә бер генә болот та күренмәгән. Алтын уҡтар булып атылған сағыу, шаян йон-

йондоҙҙар уртаһында ғорур һәм мөһабәт булып тулған Ай яңғыҙы йөҙгән дә йөҙгән. Ул әле күптән түгел генә диңгеҙ эсенән бик ҙур көмөш табаҡ булып ҡалҡып сыҡҡан, унан моңһоу күҙҙәрен тултырып карапҡа ҡараған, ә был ваҡытта карапта Айҙың мәңгелек йәшерен серен, һис шикһеҙ, белеп ҡалырға, уның менән күҙгә-күҙ ҡарашып серләшергә дәрт иткән диуана бер шағир ҙә хыялға сумып ултыра икән.

Бар тәбиғәт шағир менән Айҙың серләшеүен тыңларға йыйылған...

Ай бит ул, ҡайһы бер кеше кеүек, үле йөрәк түгел, бер һирпелеп ҡарау менән үк, шағирҙең йөрәген, теләген аңлаған, үҙе һөйләйәсәк серҙе уның баһалай алырына ышанған, һәм быға са бер кемгә лә асмаған мәңгелек серен уға һөйләп тә биргән.

* * *

Әйе, бынан миллион-миллион йылдар элек Ҡояш-әсә үҙенең кескәй балаһын — Айҙы ла, өлкән балалары Марс, Сатурн, Ер һәм башҡалар менән бер ҡатар айырып сығарған.

— Ир еткерҙем. Инде үҙалдыңа көн күр, — тигән. Шулай итеп, кескәй Ай, Ер апаһының итәгенә тотоноп, башҡа планеталар менән бер ҡатар әсәһе Ҡояш тирәһендә әйләнеп йөрөй башлаған. Тағы миллион-миллион йылдар үткән. Был бер төрлө, бер төҫлө әйләнеш йәш һылыу Айҙы тамам ялҡытҡан. Шунан ул, ялынып-ялбарып, Ҡояштан үҙенә ниндәй ҙә булһа яңылыҡ өҫтәүҙе, тормошона үҙгәреш индереүҙе һорай башлаған. Ҡояш кескәй балаһының зарын ишеткән. Уға Тереклек тигән егет менән Мөхәббәт тигән ҡыҙҙы бүләк иткән. Бына шул көндән алып Айҙа Ҡояштың үҙендә лә булмаған бәхетле һәм ҡыуанысла тормош башланып киткән. Тереклек менән Мөхәббәт бер-береһен өҙөлөп һөйгән, яуызлыҡ, хаҡһыҙлыҡ, хыянат тигән төшөнсәләрҙе белмәгән. Шуға уларҙың һөйөүе, бер-береһенә булған тойғоһо үлемһеҙ һәм саф булған.

Был ике йәштең ҡартаймаҫ һәм һыуынмаҫ һөйөүен тойған һайын, Айҙың йөҙө яҡтыра, көләсләнә барған. Йәһәндә үҙенән дә яҡтыраҡ йөҙлө планетаның булыуын теләмәгән Ҡояш та хатта бынан көнләшә: Айҙан Терек-

лек менән Мөхәббәтте тартып алыу хаҡында уй йөрөтә башлаған, ә Ай үҙенең бер ҡатлылығына барып, тағы ла яҡтыраҡ балҡып ҡыуанған, хатта бер саҡ Ҡояшҡа:

— Һин ни хәтле сағыу янма, Мөхәббәт менән Тереклектән мәхрүм булғанға, йәмең юҡ. Ҡыҫыр балҡыуҙа ни йәм булһын?! — тип әйтеп тә һалған.

— Ә-әй, һин шулай һөйләшәһеңме ни әле әсәң менән?! — тип асыуланған Ҡояш. — Былай булһа, һин ҡыҫыр ҙа балҡый алмаҫһың! — тип янаған.

Шунан һуң күп тә үтмәй, ул Айҙан Тереклекте тартып алырға булған:

— Әйҙә, Мөхәббәт бер үҙе һиндә һағынып-һарғайып ғүмер итһен. Уға ҡарап һинең йөҙөң дә ҡайғынан һарғайһын! — тигән.

Әйткән — эшләгән. Бына бер саҡ Айҙан һауа киткән. Уның артынан диңгеҙҙәр ҡороған, быҡаса ут бөркөп ажғырып торған вулкандар һүнгән, Ай йөҙөнән яҡтылыҡ юғалған, уның бите ҡот оскос тәрән, ҡороған диңгеҙ соҡорҙары, дәһшәтле өңрәйеп торған һүнгән вулкан мәмерйәләре менән сыбарланған. Әле генә гөрләп торған тормош әкренләп юҡҡа сыҡҡан. Был дәһшәтле күренешкә хайран ҡалған Тереклек менән Мөхәббәт ҡайҙа барырға, ни эшләргә белмәй, етәкләшеп, ары-бире югергәндәр, ҡараһалар, күҙҙәре күрмәҫ, ҡысҡырһалар, тауыштары ишетелмәҫ булған.

— Ах, Мөхәббәт, ҡалаһың! — тип Тереклек һөйгән ҡыҙын һуңғы тапҡыр ҡосаҡлап алған, ләкин тап шул саҡта улар менгән тау ярылып киткән дә һуңғы вулкан өйөрмәһе Тереклекте йыһан бушлығына алып осҡан, ә Мөхәббәт, иҫтән яҙып, һыуынған вулкан мәмерйәһенә ауған. Шуның менән барыһы ла бөткән. Айҙа ҡараңғылыҡ, тынлыҡ, йәнһеҙ һалҡынлыҡ ҡына тороп ҡалған...

Ҡояш тантана иткән. Ул үҙ һүҙен итте — Айҙан Тереклекте тартып алды, Мөхәббәтте һыуынған вулкан төбөнә ырғытты. Бынан һуң ул Айға нурҙы самалап ҡына үҙе биреп торасаҡ. Бынан һуң Ай тотош уның иркенә буйһонасаҡ.

Эй-й, ситтән килгән нур менән күпмегә яҡтырып була! Үҙ эсеңдә йылы булмаһа, күрше йылыһы йәнде йылытамы ни?! Шулай итеп, Ҡояштан килгән самалы нурҙар бынан ары Айҙың бейек тау баштарына ғына килеп етә торған булып ҡалған, ә уның ҡасандыр диңгеҙ төбө булған соҡорҙарына, һыуынған вулкан мәмерйәләренә —

Мөхәббәт иңтән ауып йығылған урындарға улар бер ҡасан да барып етмәйҙәр, шуға ла беҙгә гел ҡараңғы һәм моңһоу булып күренәләр икән...

Бына шул фажиғәле ваҡиғанан һуң Ай һәр төн, күҙҙәре талғансы, беҙҙең Ергә текләп Тереклекте эҙләй икән. Шуға үтә моңһоу ҙа, ҡайғылы ла икән уның йөҙө.

Дөрөҫ, һирәкләп булһа ла, ҡайһы бер төндәрҙә Айҙың моңло йөҙө, ҡапыл яҡтырып, ҡыуанıслы балҡып киткеләй. Был ваҡытта ул Ерҙәге Тереклекте үҙендәге Тереклеккә оҡшатып ҡыуанып ҡуя икән. Тик был ҡыуаныс оҙаҡҡа бармай, уның йөҙөндәге шатлыҡ эҙҙәре бик тиҙ юғала, сөнки уның үҙендәге Тереклек менән Мөхәббәт яҡшылыҡтан, ҡыуаныстан башҡаны белмәй инә бит, ә Ерҙә ул бит капитал, палач, дар ағастары тигән ҡот осҡос күренештәрҙе, хәйлә, ялған, ғәҙелһеҙлек кеүек йән өшөткөс ҡылыҡтарҙы үҙенә иш иткән! Юҡ, юҡ, бындай Тереклекте һөймәй Ай! Ер йөҙөндәге хаҡһыҙлыҡтарға тыныс ҡына ҡарап тора алмай, йәһәт кенә ҡырын ҡарап үтеп китә йәки ҡуйы болоттар артына йәшенә. Шулай үҙенең изге күңелле Тереклеген һағынып, һарғайып, моңайып үтә Айҙың ғүмере. Шул уҡ ваҡытта уның йөҙөнә Мөхәббәт, ғорур матурлыҡ та хас, сөнки ул үҙендәге Мөхәббәт менән ғорур. Унда бит үлемһеҙ Мөхәббәт йәшәй. Ул һөйгәне Тереклекте һағына-һарғая, көтә-өмөтләнә, һаман йәш, һаман матур, саф көйө йәшәй унда Мөхәббәт.

Шуға күрә лә, Мөхәббәт унда йәшәгәнгә лә, Ерҙәге ғашиҡтар Мөхәббәт эҙләгән саҡта Айға төбәләләр. Үҙҙәре лә һиҙмәҫтән ундағы үлемһеҙ Мөхәббәттән йөрәктәренә нурлы сафлыҡ алалар икән...

Бына шундай фажиғәле хәлдәрҙе башынан кисергән бөгөн дә, моңло-зарлы, ғорур һәм наҙлы булып ҡалған шул ул Ай...

* *
*

Тулған Ай тынғыһыҙ шағиргә үҙенең ошо мәңгелек серен һөйләгән дә диңгеҙгә сумып киткән. Томра төн үткән. Уның серен шағир менән бергә йотлоғоп тыңлап тынып ҡалған бар тәбиғәт ҡайтанан хәрәкәткә килгән: күк диңгеҙ талғын ғына тирбәлеп киткән, өҫтөнә кейгән төнгө күгелйем күлдәген ал-ҡыҙыл төҫкә алмаштырған, йыраҡтан таң еле ҡалҡып сыҡҡан һәм, уйнай-көлә, ка-

раптың елкәндәренән сая ҡаҡҡылап алға алып киткән, ә шағир, ҡайнар устарын яңағына терәп, һаман Айҙағы Тереклек менән Мөхәббәттең фажиғәле яҙмышы хаҡында уйлаған, Ай һөйләгән ғибрәтле хикәйәтте тағы-тағы уйынан үткәргән. Оҙаҡламай, алтын яллы ут арғымаҡҡа атланып, диңгеҙ төбөнән тәкәббер Ҡояш та күккә күтәрелгән. Иҫ киткес шат, ғорур балҡып шағиргә ҡараған.

— Әй, ҡеүәтле һәм мәкерле әсә!.. — тип теҙләнгән шағир, ҡалтыранып. — Ергә үҙең бүләк иткән Тереклек менән Мөхәббәттең бәхетенән дә көнләшеп ҡуйма һин тағы! Алла һаҡлаһын, алла һаҡлаһын!..

* * *

Емештең эш менән мауыҡҡан саҡта йыш ҡына тирәяҡта ни барын, ни юғын онота, бер ни ишетмәй ҙә, күрмәй ҙә торған ғәҙәте бар. Әле лә ул хикәйәтенә шул хәтле бирелде, бүлмәләге шау-шыуҙы ла ишетмәне, хатта ипләп кенә арттан килеп ҡарап торған Хөрмәтте лә абайламаны.

— Емеш, бир әле, уҡып ҡарайым, — тип бышылдағас ҡына, артына әйләнеп уны күрҙе. Уңайһыҙланып, ҡыҙарынып китте. Былтыр өлкән ҡыҙҙар көлкөгә һабыштырғандан һуң, шиғыр йәки хикәйәләрен йәшереп, үҙе өсөн генә яҙа ине ул.

— Ҡит, бынауы йәшенеп уҡып торғансы...

— Бир инде, барыбер яртыһын уҡыным бит, — тип ялынды Хөрмәт. Емеш тағы иғтибарлы ҡарап алды:

— Ҡөлмәҫһеңме? Берәүгә лә күрһәтмәҫһеңме?

— Үҙем генә уҡыйым да бирәм.

Ҡыҙ, икеләнеп, тағы уйланып алды ла дәфтәрен ябып Хөрмәткә һондо:

— Мә, уҡы ла килешмәгән урындарын үҙемә генә әйтерһең, йәме.

Емештең яҙмаларын уҡырға күптән ҡыҙыҡһынып йөрөгән Хөрмәт, атҡа атланған кеүек шатланып, үҙ урынына, Сабир янына, китте.

Емеш уға ынтыла биреп ҡалды. Унан, үҙенең был ҡылығынан уңайһыҙланып, тиҙ генә алдына ҡараны. Өҫтәлендә, күптән уҡып бөтөүҙе көтөп, Лев Толстойҙың «Хажимурат»ы ята ине. Ул ашығып китапты асты, ләкин тиҙ генә уҡырға керешеп китә алманы. Ҡитап эсендә ятҡан бер хат уның иғтибарын биләп алды хәҙер. Был

араһының хаты ине. Ҡисә алғайны уны Емеш. Алғас та, бер нисә ҡат уҡып сыҡҡайны. Әле лә уны тағы бер ҡат күҙҙән үткәрмәй булдыра алманы, сөнки хатта кеше ғүмерһены, кешеләр араһындағы мөнәсәбәт хаҡында һүҙ бара ине:

«...Алмабикә әбей ҡыҙы Алтынбикәне Мөслим ауылының бер байына икенсе бисәлеккә һатты ла үҙе лә эйәреп китте. Иҙрис олатай, күрәһең, шул йәнһеҙҙәрҙе туған иткән, яҡын күргән... Бик ҡайғырҙы. Күк һаҡалы ҡар кеүек аҡҡа әйләнде... — тип моңһоу ғына тауыш менән һөйләп яҙған был хатын Иштуған. — Ә мин бер саҡ уға, Алмабикә әбейгә, Иҙрис ҡартҡа туған булған өсөн, кешелекле мөнәсәбәт талап итеп, Әхәт менән хатта һүҙгә килешкәйнем, — тип уйсан ғына көлөп ҡуйған. — Әхәттең шул саҡта әйткән һүҙе тап килде: Алмабикә әбей, бахыым ҡарт көнөндә яңғыҙ ҡала бит тип, һис тә йәлләп тормаһы. Яйы сығыу менән, ташланы ла китте...»

Хаттың аҙағын күтәренке күңел менән тамамлаған:

«Әммә беҙ уны, ҡарт һалдатты, яңғыҙ итмәйбеҙ. Ширҙәт аҙыҡ-түлек бирә. Уҡыусылар, комсомолдар, утынын-һыуын алып килеп, өйөн, үҙен ҡарашып тора...»

Эйе, был хатта Емеште тәрән уйланырға мәжбүр иткән ике хәҡиҡәт ярылып ята ине шул. Бер яҡта уға кескәйҙән бик таныш — кешелекһеҙлек. Иҫке донъяның кешене кешегә дошман иткән ҡанһыҙ законы. Икенсе яҡта кешене кешегә дуҫ, туған иткән яңы, яҡты мөнәсәбәт. Унан тирә-яҡҡа өмөт, бәхет саҡкыһы һирпелә. Тимәк, Иҙрис олатай хәҙер бер ҡасан да япа-яңғыҙ булмаясаҡ!..

Емеш, шат йылмайып, китабына эйелде: «Уй, сәғәт үтеп бара. Уҡып бөтөргә кәрәк тәһә!..» Шул саҡ, дәрес бөтөрләү мәле уҙыуын белдереп, ҡыңғырау ҙа шылтырап китте. Ҡыҙ йәһәт кенә китап-дәфтәрҙәрен алып, югереп тышҡа сыҡты: «Әй-й, ҡалай һәйбәт!..» — тип тымыҡ саф һауаға һоҡланып, әҙ генә туҡтап торҙо, унан:

— Емеш, йоҡтарға ваҡыт! — тип үҙенең арҡаһына һуғып ҡасҡан Шәмсиәне ҡыуып китте.

— Ашыҡма әле, ҡыҙыҡай!

Тонгө саф һауа уның тауышын элеп алып кирегә борол ҡабатланы:

— Ашыҡ, ҡыҙыҡай!..

Ҡыҙҙарға мәҙәк булды. Улар ҡыуыша-көлөшә ятаҡҡа инеп юғалдылар.

## II

Кешенең хәтере, бер уйлаһаң, тиңкәре нәмә ул: әйтәйек, ҡайһы саҡ бер әйберҙе теләп тә иҫкә төшөрөп булмай, ә ҡайһы берҙәрен, нисек кенә тырышһаң да, онота алмайһың. Теге мәктәп яныу ваҡиғаһын онотор өсөн, Иштуған әллә ниҙәр бирер ине, юҡ, онотолмай. Һәр көн тип әйтерлек, уның инде көлө лә ҡалмаған урынынан үткән һайын, һөрөмө танауына бәрелгән һымаҡ була, был яныуға бәйләнешле аңлайышһыҙ ваҡиғалар иҫкә килеп төшә, шул янғын булған дәһшәтле төн ҡабат-ҡабат күҙ алдынан үтә башлай. Бына әле лә, дәрескә китеп барышлай, ул йәһәтерәк эшкә барып етергә кәрәклеген дә онотҡан һымаҡ, шул ерҙә туҡталып, уйланып торҙо. Үткән яҙ булған хәл, ә кисәге кеүек хәтерҙә. Эйе, был янғындан тәнгә алған яра күптән уңалды, ә йөрәктең яраһы һаман уңалмай. «Кем эше булды был?» тигән шикле һорау йәнгә тынғы бирмәй. Ғәйеплеләр табылманы бит! Әле инде бынауы иғлан күңелдәге шикте тағы ла ҡуҙғатып ебәрҙе. Ул кеҫәһендә ятҡан газетаны ҡапшай биреп ҡуйҙы: «Быны нисек аңларға? Ни өсөн әле ул үҙ ирке менән бындай эшкә бара? Берәй ғәйебен ябып ҡалыу ниәте менән түгелме? Мәктәп, клуб хеҙмәтен үтәп килгән элекке мәҙрәсә йортон үртәп ебәреүгә бәйле яғы юҡмы был аҙымдың».

Эйе, ул янғын эште ныҡ ҡына ҡыйынлаштырҙы. Хәҙер бит бөтә эшкә бер йорт — Собхан старшинанан ҡалған өй бит. Бәләкәс, уңайһыҙ йорт. Хәҙер Иштуған унда көндөҙ бер үҙе дүрт класты уҡыта, кисен өлкәндәрҙе уҡырға, яҙырға, хисапҡа өйрәтә, йыйылыштар, кисәләр ҙә шунда үтә. Еңел түгел, әлбиттә...

«Шулай ҙа кем эше булды икән был?!» Иштуған ҡапыл тертләп сәғәтенә ҡараны ла йүгереп тигәндәй мәктәпкә йүнәлде. Нисек кенә ауыр булмаһын, хеҙмәт тигән оло маҡсат менән ярһыған йәш йөрәктәрҙе сигендерер көс бармы ни?»

* * *

Бына әле бөгөн дә, күңелдә бик үк тыныс булмаһа ла, тормоштоң ҡатмарлы ҡаршылыҡтары йәнде әсетеп торһа ла, Иштуған дәртләнә-ярһый киске уҡыу алып

барын. Унан үҙе волость китапханаһынан алып килгән китаптарҙы өләште. Унда шиғыр, хикәйә китабы ла, социалистик законды йәки агрономия ҡағиҙәләрен аңлатҡан китаптар ҙа, дини хөрәфәттәргә ҡаршы көрәш темаһына яҙылған кескәй-кескәй генә китаптар ҙа бар ине. Быпан аҙаҡ өлкәндәрҙең әңгәмә барышында тыуған төрлө һорауҙарына ихласлап яуап бирҙе, әммә үҙенең төш неҫәһендә йәненә тынғы бирмәй ятҡан баяғы газета хаҡында телгә алып һөйләргә һис тә уңайлы ваҡыт таба алмай ыҙаланды. Етмәһә, ауыл Советы председателе делегатка Баҙыян еңгә үҙенең үтенесен килтереп өҫтәне:

— Йә әле, мырҙа, үҙ башыңдан кискән берәй ғибрәтлеме йәки ҡыҙыҡлымы хәлде һөйләп ал әле. Бер ҙә ҡайтты килмәй, йоҡо ла алмай башланы. Белгән һайын белгe, күргән һайын күрге килә тигәндәй...

— Беҙ бит, Иштуған, ниндәйҙер мөғжизә менән күҙе асыла башлаған һуҡырҙар кеүек... яҡты донъяны тәүләп күрәбеҙ һымаҡ. Шулай булғас, беҙ уны яҡшыраҡ күреп, аңлап бөтөргә, етмәһә, йәһәтерәк тә, күберәк тә күреп өлгөрөргә теләйбеҙ шул... — тип Иҙрис ҡарт та Баҙыян еңгәнең теләген ҡеүәтләне. — Берәй файҙалы, ғибрәтле кисса һөйләп ебәр. Тышта епшек ҡар яуа. Сирҡаныс. Йылы өйҙә ултырыуы рәхәтерәк тә... Шулай бит, дөрөҫтө әйтәм бит, балалар?!

Ул йәше етмешкә етеп килһә лә теремек һәм үтә ҡыҙыҡһыныусан ине.

Башҡалар ҙа уның һүҙен ҡеүәтләне:

— Ысын дабаһа! Һөйлә. Нимә хаҡында һөйләһәң дә, тыңлайбыҙ.

Илсеғолда, күпте күргән, күпте белгән кешене һөйләтеп, тыңлап ултырырға яраталар. «Күп йәшәгән ни белгән? Күпте күргән — шул белгән», ти халыҡ бынан. Әмәлгә ҡаршы, һәр быуындың үҙенә күрә күпте күргән, күпте белгән кешеһе табылып тора. Әйтәйек, бер саҡ ауылда иң күп күргән, күп белгән кеше Урыҫ Иҙрис ине. Кистәрен урамда бүрәнә өҫтөндә йәки берәй өйҙөң кәзәһер һырышҡан емерек нигеҙе буйында ҡарт һалдаттың ивек бөклөп ултырып һөйләгән хикәйәттәрен өлкәндәр түгел, йәштәр ҙә йотолоп тыңлай ине. Тора-бара уның хикәйәттәре лә, үҙе шикелле үк, сал ҡылғанға әйләнде — донъя һуғышынан яңы һалдаттар ҡайтты. Бигерәк тә Себерҙән, каторганан, большевик булып ҡайтҡан Тимербайҙың тәрән мәғәнәле, тормошсан хикәйәттәре йәштәр-

ҙең генә түгел, ҡарт һалдат Урыҫ Иҙристең дә иғтибарын биләп алды...

Әле инде бына күпте күргән, күпте белгән ирҙәрҙең береһе Иштуған булып ҡалды. Илсеғоллолар уның хикәйәттәрен тыңлай хәҙер. Иштуғандың хикәйәттәре лә яҡшы кешеләр, ҡаһарман ирҙәр, ғәҙел көрәшселәр хаҡында бара, сөнки бында бер кем дә ҡурҡаҡ, һатлыҡ, йылғырбай кешеләр хаҡында ауыҙ күтәреп һүҙ ҡуҙғатыуҙы кәрәкле һанамай, ә батыр хаҡында, яҡшы кеше хаҡында һөйләй башлаһаң, һары май шикелле иреп китә. Йөҙөнә ғорур һоҡланыу сыға, ҡалҡына, ҡанатлана... Шуға, ахыры, хикәйәселәрҙең һүҙе, нигеҙҙә, гел шундай бөркөт йөрәкле, арыҫлан ирҙәр хаҡында бара. Әлбиттә, батырлыҡ һәм яҡшылыҡ хаҡында кешене ышандырырлыҡ, рухландырырлыҡ итеп һөйләүе еңел түгел. Әгәр хикәйәтсенең һүҙендә кескәй генә ялған өн ишетелһә лә, уны ҡабат тыңлаусы булмай. Шуға күрә батырҙар, бигерәк тә халыҡ бәхете өсөн баш һалған ҡаһармандар, хаҡында һөйләгәндә, хикәйәтселәр һәр һүҙҙе тел осонан түгел, тау-таш аҡтарып алмас эҙләгән шикелле, йөрәктең иң тәрән төпкөлөнән эҙләп, һайлап алып, һәр фекерҙе уйлап, үлсәп һөйләйҙәр. Был хикәйәттәрҙең көсө лә ошо ябайлыҡта, тормошсан дөрөҫлөктә ята ла шикелле.

Иштуған әле йәш. Уның һөйләү, тыңлаусыларҙың күңелен биләү оҫталығы ла, бәлки, етерлек түгелдер, ләкин уның хикәйәттәре һәр саҡ асыҡ маҡсатҡа йүнәлтелгән булыуы менән әһәмиәтле. Ул инде уҡыусыларына Ленин хаҡында ла, үҙенең боевой командирҙәре Ҡаширин, Блюхер хаҡында ла, ялҡынлы оратор комиссар Ғимранов хаҡында ла, Тимербай ағайҙың граждандар һуғышы ваҡытында күрһәткән батырлыҡтары хаҡында ла күп һөйләне. Бөгөн уның ауылдаштарына еткерәсәк һүҙе бөтөнләй башҡа нәмә хаҡында ине.

Ул ашыҡмай ғына кеҫәһенән баяғы газетаны алды. Мут ҡына йылмайып:

— Улай булғас, мин һеҙгә ҡыҙыҡлы бер иғланды уҡып ишеттерәйем, — тине. — Тыңлағыҙ!

«...Мин, икенсе Ҡара ҡыпсаҡ йорто (Йылайыр кантоны) Илсеғол ауылы муллаһы Сафаров Ғаббас, ошо йылдың апрель айынан алып муллалығымды ташлайым, — тип һалмаҡ ҡына итеп уҡып та китте. — Мәсетте мәҙәни йорт итергә, йәғни клуб итергә бирәм. Сәләм ауы-

лы муллаһын, Яҡуп ауылы муллаһын, Мраковка побын социалистик ярышҡа саҡырам...»

Был йылдарҙа мулла, мәзиндәрҙең бындай иғландары бик ҡына күренгеләй башлаһа ла, күрәһең, быны бер кем дә Ғаббас мулланан көтмәгәндер, бөтәһе лә аптырап, шикләнеп, хатта шомланып ултырҙылар. Артыҡ оҙаҡҡа һуҙыла башлаған тынлыҡты башлап Баҙыян еңгә боҙҙо:

— Былай булғас ни, мәктәп тә, клуб та була икән!

— Ниңәлер, бер ҙә ҡолаҡҡа ятмай әле был эш, — тине Иҙрис ҡарт. Унан, нисектер, аптыранған һымаҡ итеп: — Ғаббас мулланың үҙ ирке менән быны эшләүенә ышанғы ла килмәй. Мәсетте клуб итеү, ниңәлер, минең күңелгә һис тә ятмай ҙа һымаҡ... — тип өҫтәне.

— Олатай, һин бит былай ҙа мәсеткә йөрөмәйһең,— тип мәрәкәләне Иштуған. — Клуб йәки мәктәп итһәк, киләһең йөрөрһөң.

Иҙрис ҡарт, тағы ла етдирәк тауышҡа күсеп:

— Ул ҡарт төлкө мәсетте биреп торор ҙа: «Тартып алдылар! Диндән яҙҙырҙылар!..» — тип һөрән һалыр әле, бына күрерһегеҙ, — тип ҡуйҙы. — Халыҡты аң-белемгә ҡаршы аяҡландырыр. Ундай этлекте булдыра торған кеше ул. Һин, Иштуған улым, был хаҡта алдан ныҡ уйламай, кәңәшләшмәй, үҙ белдегең менән берәй бәләгә тарып ҡуйма!..

«Ысынлап та, әле ҡасан ғына, дин уҡытам тип, мәктәп даулап йөрөй ине. Әле инде муллалыҡтан баш тарта!.. Нимә мәжбүр итте икән уны был юлға?! Әллә ҡарттың бүрке янамы?!» — тип Иштуған да шикләнде, әммә нисек кенә булмаһын, ҡыуанысын йәшерә алманы:

— Серек мәҙрәсә урынына ҡарағай еҫе аңҡып торған әрҙәнсы йорт! Унда бит михрап урынына бына тигән сәхнә эшләп буласаҡ!.. Мәктәп тә, клуб та була!

— Хәйерлегә булһын, хәйерлегә, — тип һаман шомланды Иҙрис ҡарт.

Баҙыян еңгә:

— Йә, иртән уйларға ла ҡалһын әле, — тип мәрәкәләп, ҡыҫыла-ҡыҫыла, парта араһынан сыҡты. — Ҡайтайыҡ. Йоҡлайыҡ. Иртәнсәк күҙ күрер...

Иҙрис ҡарт та партаны ҡаты шығырҙатып тороп баҫты.

— Дөрөҫ, иртән күҙ күрер, — тип арып ҡына көрһөнөп ҡуйҙы. — Йоҡларға ваҡыт, балалар!

Башҡалар ҙа уларға эйәрҙе. Бөтәһе лә, нисектер, башҡа ваҡыттағыса шаулап, көлөшөп һөйләшмәй, тын ғына таралышты. Күрәһең, был яңылыҡ уларға үтә лә көтөлмәгән, хатта башҡа һыйҙырмаçлыҡ хәл һымаҡ тойолдо.

* * *

Иштуған ҡайтып ингәндә, Айһылыу ятмағайны әле. Кәрәсин лампаһы яҡтыһында ойоҡ бәйләп ултыра ине.

— Хаммат ағай ҡайтҡан. Һине күрергә килгәйне, — тип ирен яңы хәбәр менән ҡаршыланы ул. — Минең янға барып сыҡһын әле, тине...

— Шулаймы ни?! — тип ҡыуанып китте Иштуған һәм китап, дәфтәрҙәрен өçтәлгә ырғытты ла сығып та югерҙе.

— Мин хәҙер! Хәҙер генә барып ҡайтам!

«Йә, исмаһам, сәй ҙә эсмәне. Ни тип инеүе менән әйтеп торам икән? Иçәр инде, иçәр, — тип үҙ ҡылығына көйөнөп ҡалды Айһылыу.— Иренә күрә — ҡатыны инде... Ни эшләйһең?!»

Төн уртаһы етеп килеүгә ҡарамаçтан, Иштуған Хамматты ишек алдында, елкәһенә шинель һалып бүрәнә өçтөндә ултырган ерҙә осратты. Ул нимә хаҡындалыр борсоулы уйланып тынып ҡалған һымаҡ ине. Иштуған, пçәнлек-һаулыҡ һорашҡандан һуң, артабан һүҙҙе ҡалай башлап алып китергә белмәй аптырабыраҡ торҙо ла ахыр үҙен борсоған хәл-әхүәл хаҡында һүҙ ҡуҙғатып ебәрҙе.

— Был йылдарҙа әллә нисек аңлайышһыҙ ваҡиғалар күбәйә башланы бит әле, Хаммат ағай?!

— Тәүҙә мәктәпте үртәнеләр. Әле килеп, ни уй менәндер, мәсетте клубҡа тәкдим итәләр, эйеме? — тине Хаммат.

— Шулай шул! Игланды күргәнһең икән, ағай.

— Күрҙем.

— Шуға, аптырап, һинең менән һөйләшергә тип югереп килгәйнем әле...

Хаммат мәғәнәле генә көлөп ҡуйҙы:

— Күрәһең, беҙ төшөнөп етмәгән яҡтары ла бар икән мулланың...

— Былай булғас, көтмәгәндә беҙгә бына тигән йорт бүләк иттеләр. Тимәк, мәктәп тә, клуб та булды. Шулай

ы был аҙымды яһарға мулланы мәжбүр иткән сәбәпте беләге килә. Ниңәлер, күңелдә шик тыуҙыра был. Уның ысын ниәт менән быны эшләүенә һис тә ышанып булмай.

— Мин уны бөгөн күреп һөйләштем, — тине Хаммат.

Иштуған, ҡыҙыҡһынып, яҡыныраҡ шылып ултырҙы:

— Шунан, ағай?! Нимә ти?!

— Муллаң танымаҫлыҡ үҙгәргән. Илгәҙәк, хатта, беләһеңме, йор һүҙле булып киткән...

— Ғәжәп...

— «Боронғолар, йығылһаң да, тирәктең иң бейегенән йығыл, тигәндәр. Мин дә манаранан ҡолап төшөргә булдым, ти, көлә. Заманы шуны талап итә икән — барыбер ҡоларға бит, ти. Етмәһә, волоскә барам әле, берәй ергә мөғәллим итеп тәғәйенләүегеҙҙе һорайым»,— тип ебәрә.

— Ҡара һин уны...

— Бына шулай, мырҙа, бер ҙә ике уйлап торма. Комсомолдарыңды йыйып, манараһын осора һуҡ та мәсетенә ин дә ултыр. Минән һиңә кәңәш шул. Давай, эшкә тотон!

Уның күтәренке кәйефе Иштуғанға ла күсте. Ул, хәрбиҙәрсә тып баҫып, һикереп торҙо. Уйынлы-ысынлы честь бирҙе.

— Есть, эшләргә, Хаммат ағай!

— Ултыр әле, һөйләшәһе һүҙҙәр бар, — тип Хаммат уны туҡтатты...— Волостә лә эштәр ҡатмарланып тора әле, мырҙа...— тип етди тауышҡа күсте.— Ҡайһы бер ауылдарҙа ҡотҡо таратыусылар бар. Берҙәм хужалыҡ мәсьәләһе, күрәһең, бөтәһен дә аяҡҡа баҫтырҙы... Дуҫтарҙы ла, дошмандарҙы ла, һәр кем был мөһим мәсьәләне үҙенсә хәл итергә теләй...— тип, өҙөк-өҙөк кенә әйтеп ултырҙы. Унан ҡапыл Иштуғанға күтәрелеп ҡараны. Хөсөлхаҡты һин беләһең, Ғаббас мулла уны, йәше етһә лә, шиндәйҙер юлдар менән герман һуғышына ебәрмәй аҫыраны, ә революция булғас, халыҡты Советкә ҡаршы айҡландырып йөрөнө. Закирҙең башын әйләндереп, Вәлиди яғына алып сығыусы ла ул булды. Батыр һуғышсы ине бит ул Закир, әммә күп нәмәне төшөнмәй ине. Алданды... Ерле-юҡҡа һәләк булды...

Иштуған, төн булһа ла, Хамматтың йөҙөн күрергә, әйтәһе һүҙен яҡшыраҡ аңларға тырышып, текләп тыңланы.

— Мраковка ауылының иң бай кулагы Сергей Хитрофтың Апанасы ла, урядник Алексейҙең улы Митрофан

да граждандар һуғышы ваҡытында теге яҡта булдылар. Аҙаҡ улар ҙа, Хөснөлхаҡ кеүек, эҙһеҙ юғалдылар. Ҡайҙа йөрөйҙәр улар?! Нимә эшләп йөрөйҙәр? Аңһыҙ халыҡты албырғатып, аптыратып, шундайҙар йәшерен-боҫорон эш итмәйме?.. Беҙ белмәйбеҙ, бәлки хәҙер колхозға ҡаршы тап шулар яман эш алып баралыр...

Хаммат, тирә-яҡҡа ҡолаҡ һалып, оҙаҡ ҡына тынып ултырҙы. Ҡетәктә йоҡоло тауыш менән генә тәүге әтәс ҡысҡырып алды, кәртәлә, ситәнде шытырҙатып, ат ыш-ҡынды, кәзәләр, һыйырҙар мөңрәште. Һарыбай — бик өл-кән һунар эте, тирә-яҡтың иmenлеген белдереп, Хамматтың аяғы аҫтында тыныс ҡына ята бирҙе. Әйтерһең, ул да хужаһын иғтибар менән тыңлай ине.

— Күптән түгел ошо һорау мине урман хужалығына алып барҙы. Элекке аҡ офицер Әбделхәбир Әбделмөслимов ошо хужалыҡта баш булып тора. Хөснөлхаҡ, Апанас, Митрофан кеүек төшөп ҡалғандар уның тирәһенә һыйышҡан икән тигән хәбәр алынғайны... Ҡолхоз өсөн арба, сана, кәрәк-һәнәк кеүек хужалыҡ әйберҙәре эшләүҙе юлға һалырға йөрөүсе вәкилдәр, тип унан алған документтәр менән йөрөп яталар, имеш...

— Шул ысын булып сыҡтымы?! — тип, түҙемһеҙләнеп, уның һүҙен бүлде Иштуған. — Вот, ҡәһәр һуҡҡырҙар, ә?!

Хаммат ашыҡмай ғына баш ҡаҡты:

— Эйе, дөрөҫләнде. Аҡ офицер ҡулға алынды. Тик бына тегеләрҙең эҙенә төшә алған юҡ әле... Һаҙға һеңгән кеүек юҡ булдылар...

— Ул Әбделмөслимов ҡайһы ауылдан икән? — тип тағы түҙемһеҙләнде Иштуған. — Бик таныш фамилия кеүек.

— Теге тау-урман араһында ятҡан Мөслим ауылынан. Унда бөтә кеше тип әйтерлек шул фамилияла йөрөй икән...

— Күргән ауылым түгел. Ишеткәнем генә бар.

— Мин дә, волкомда эшләй башлағас ҡына, тәүләп күрҙем был ауылды. Инде унан ҡайтҡан да юҡ, — тип Хаммат серле генә көлөп алды. — Уны яҡшылап белергә, танышырға ла бик күп көс һалырға кәрәк буласаҡ, ә таҙартыр өсөн, ай-һай, башты һалып ҡуйылмаһа...

— Ниңә улай тиһең, ағай?! — тип борсолоп китте Иштуған. — Шулай уҡ яман ауылмы ни?!

— Мин унда йөрөй башлағаны бирле шуны аңланым, — тип тағы ла әкренерәк тауыш менән һөйләп китте Хаммат. — Был Әбделмөслимовтарҙың тамыры волостә бик тәрән таралған икән. Улар үҙҙәренә ҡаршы кешеләрҙе ҡалай йыйыштырып ҡуйырға ла яҡшы беләләр һымаҡ... Биргәнгә алданмаҫтай, ситләп өркөткәнгә төшөнмәҫтәй кешеләрҙең йәшәүен улар яратмай кеүек. Миңә шулай тойола.

— Шулай уҡ көслөмө ни унда контрҙар? Ни өсөн улай?! — тип тағы ла нығыраҡ аптырап китте Иштуған. — Ниңә ошоғаса һаҡланған улар?

— Тап бына шундай һорауҙар алып барҙы ла мине унда. Мөслим ауылы волостә иң ҙур, иң бай ауыл булып сыҡты. Оло юлдан алыҫта, төпкөлдә, ел-ямғыр теймәй тыныс ҡына йәшәп ятҡан ике-өс йөҙ хужалыҡтан торған ауыл. Күпселеге — байҙар, муллалар. Революцияға хәтле бында әллә нисәмә мәҙрәсә булған. Унда иң ҡара реакцион мулла, мәзиндәр әҙерләнгән. Ауылдың иң ҙур сауҙагәрҙәренән береһе Ғәбделсәләм Әбделмөслимов ярлы халыҡты иҙеүҙә ҙур хеҙмәт күрһәтеп, батшанан маҡтау грамотаһы алған кеше. Ауылда иң ҙур таш магазиндәр уныҡы булған. Уның улы — Дәүләт думаһы ағзаһы Әбделйыһан Әбделмөслимов — 1905 йылғы революцияны баҫтырыуҙа актив ҡатнашҡан.

Мөслим ауылы, хәҙер нисек тә тау ышығына һыйынып, тауыш-тын сығармай ипләп кенә йәшәп ятыуҙы хуп күрһә лә, заманында губерна күләмендә таныҡлы булған. Хатта бында Ырымбурҙың губернаторы менән архиерейе лә килгеләп киткән. Әбделмөслимовтар уларҙың юлдарына келәмдәр түшәп ҡаршы алғандар. Шулай шәп йәшәгәндәр Әбделмөслимовтар...

Революция булғас, уларҙың ҡайһы береһенә көн бөткән, әлбиттә. Әйтәйек, дума ағзаһы менән старшина шунда уҡ хөкөм ителеп атылған. Һуңғы йылдарҙа тағы бер нисә Әбделмөслимов ауылдан һөрөлгән, ләкин Әбделмөслимовтар әле булһа ауылды ҡулда тота. Октябрь революцияһына ун йәш тулып килә. Шундай ҙур ауылда партия ағзаһы ла, комсомол да юҡ.

— Ниңә һуң улай? — тип тағы ла аптыраны Иштуған. — Ниңә уларға революция еле ҡағылмаған һаман?!

— Тап ошо һорау мине үҙебеҙҙең волостәге партия, совет ойошмаларына бик ентекле ҡараш ташларға мәжбүр итте, — тип һалмаҡ ҡына дауам итте Хаммат. — Во-

лость потребкооперацияһының башында ултырған Әбделғасим Әбделмөслимов та шунан түгелме икән, тип уйлайым әле. Эшенә ҡарағанда, шул тоҡомдан булырға оҡшай... Ҡооперация ойошмаларына етәксе эшкә ярлы батрактан, партия, комсомол ағзаһынан бер кеше лә ҡуйылмаған булыуы ла шуны раçлай һымаҡ.

Ул да элегерәк, мин барғанға хәтле, йыш ҡына:

— Динде дәүләттән айырыу дөрөç түгел. Байҙарға тиң хоҡуҡ бирергә кәрәк, — тип тә сығыш яһай торған булған.

— Хәҙер?

— Хәҙер ни унаң да ҡыҙыл кеше юҡ: «Байҙарға, кулак ялсыларына үлем!» — тип һөрән һалырға ярата хәҙер.

Хаммат, уйсан ғына йылмайып, тынып ҡалды.

— Беҙҙең волостә ундайҙар бар шул әле, — тип Иштуғандың да эсе бошоп китте. — Элекке кулак Хитровтың улы Николай ҙа тәфтишсе булып эшләй бит! Шуға ла, моғайын, беҙҙең мәктәпте үртәүселәр асылмай ҡалғандыр әле...

— Шулайыраҡ шул, мырҙам, үҙебеҙҙең кадрҙар әҙерәк. Бынауы волость башҡарма комитетенең председателен генә ал — аңһыҙ. Ҡул ҡуя ғына белә... Һайлап ҡуйғас, йөрөй инде, мәхлүҡ... Етмәһә, үҙ дәрәжәһенән бик ҡәнәғәт булып, ата күркәләй ҡабарынып йөрөгән була әле ул. Танау аçтында нимәлер эшләнеп ятыуын белмәй, хатта белергә лә теләмәй. Ҡыçҡаһы, Әбделмөслимовтар өсөн иң ҡулай кеше.

Әйткәндәй, мин был арала волостә налог эштәренең һәм башҡа төрлө һалым эштәренең торошо менән ныҡлап таныша башланым әле. Бында ла иç киткес ғәҙелһеҙлектәр бар... Налогтар ярлы һәм урта хәллеләргә тейешенән күберәк, ә кулактарға, нэпмандарға әҙерәк һалынып килә икән! Нисә шулай булмаһын, налог агенты булып Степан Хитров эшләй. Өçтәүенә, волостә етәксе работниктәрҙең бик йыш алмашынып тороуы ла бында кулактарға иркенләп йәшәргә ыңғай шарттар тыуҙырған. Һуңғы бер нисә йылда ғына мин етенсе секретарь бит! Ниңәлер, бик йыш алмаштырғандар. Ҡайһылары, күрәһең, эштең ҡатмарлылығын күреп, үҙе киткән...

Хаммат, көлөп, Иштуғандың арҡаһына ҡулын һалды:

— Шулай итеп, волость башҡарма комитетендә шына аңһыҙ, грамотаһыҙ кеше ултырғанда, һин бына Илсе-

юлға йәбешеп ятаһың... Яуаплыраҡ, ауырыраҡ эшкә егелергә вакыт инe бит һиңә лә!..

Ниғтуған өндәшмәне. Хаммат та оҙаҡ ҡына тынып ултырҙы. Унан тағы ауыр ғына һуҙып:

— Бына шулай эштәр, мырҙам! — тип ҡуйҙы. — Волостә коммунистәр аҙ. Ярлы-батрак тейешенсә ойошторолмаған, ә синфи дошман йоҡлап ятмай... — Мин эште шуға ла бөтәһенән элек һәр ерҙә ярлы-батрактарҙы ойоштороу, уларҙа синфи аң тәрбиәләүҙән башлауҙы тейеш таптым, — тип дәртләнә төшөп тағы һөйләп китте. — Катын-ҡыҙҙар араһында шәл бәйләү, ирҙәр өсөн һунарсылар, балыҡсылар артеле ойоштороу — былар бөтәһе лә халыҡты әкренләп коллектив хеҙмәткә өйрәтә башлау бит. Инде күп кенә ауылдарҙа, Илсеғолдағы кеүек, коллектив хужалыҡтарға халыҡты ылыҡтырыу эштәрен дә башлап торабыҙ, хатта Мөслим ауылында ла быға са Әбделмөслимовтар ҡапҡаһы алдынан уҙырға ҡурҡып торған ярлы-батрактар менән дә уртаҡ тел табып була башланы. Күптән түгел шул ярлы-батрактар ярҙамында бер төркөм кулактар ауылдан һөрөлдө, байлыктары батрактарына бүлеп бирелде, ярлыларға, урта хәлделәргә урынһыҙ артыҡ һалынған налогтар ҡайтанан ҡаралғас, халыҡтың йөҙө лә, теле лә ап-арыу асыла төштө, ләкин алда һынауҙарҙың иң ауырҙары тора, ә көстәр, үҙең күрәһең, әҙерәк, мырҙам. Шуға ла бөтәһен тотҡан бер ерҙән һындырып ҡына ла булмай. Яйлабыраҡ, абайлабыраҡ эш алып барырға тура килә. Шуға бына Хитровтар ҙа, Әбделмөслимовтар ҙа йөрөп ята.

— Әллә, ағай, Мөслим ауылына теге шул Әбделғалимдең тамырына төшөнөргә китеп бараһыңмы? — тип Ниғтуған һүҙҙе үҙен үтә ҡыҙыҡһындырып ебәргән яҡҡа борорға тырышты. — Бәлки, ул да шунан сыҡҡан бер кулактыр, ә?

— Мин, әлбиттә, унда бер нисә ҡат булдым. Әле лә шунда китеп барам, әммә уның кемлеген, ҡайҙан булышын асыҡлай алғаным юҡ әле... — тип, ниңәлер, уйсан ғына йылмайып ултырҙы Хаммат. — Ул үҙе, Ирмән ауылынанмын, тип йөрөй... Хәйер, уға ҡалһа, кәрәк икән, Ҡыйтан ауылынанмын, тип тә йөрөр. Уға бит еңел йәшәргә лә кешеләр өҫтөнән үҙенсә хөкөм йөрөтөргә генә мөмкин булһын!

— Уныһы ла дөрөҫ...

Хаммат, бүрәнә өҫтөнән тороп, уйланып йөрөп алды.

Иштуған да тороп баҫты. Улар, күҙгә-күҙ ҡарашып, оҙаҡ ҡына тынып торҙолар. Унан Хаммат һаҡ ҡына:

— Ҡара әле... — тип йәнә һүҙ башланы. — Теге Хөснөлхаҡтар, Апанастар был тирәгә лә килгеләп йөрөмәйме икән? Әйтәйек, шул уҡ муллаға... Шымбайға... күҙ-ҡолаҡ булығыҙ... Һаҡ торорға кәрәк... Ошо арала ғына Мраковкала ауыл Советы секретарен төндә, урамда атып киттеләр бит. Бик актив комсомолец ине... Ишеткәнһеңдер?

— Ишеттем... — тине Иштуған күңелһеҙ генә. — Тағы шул Хитров тикшергән, енәйәтсе табылмаған... Берәй һунарсының кейеккә атҡан дробе яҙлығып уға барып тейгәнгә оҡшай, тигән һығымта яһаған, имеш, ти...

— Эйе... Яңы, ышаныслы тәфтишсе ебәреүҙәрен һорап өлкәгә яҙғайным да... Яуап алған юҡ әле... Ә, эйе, ҡара әле, мырҙа, мин һине бына нәмә хаҡында һөйләшергә саҡырғайным бит әле... Әлбиттә, эштең ауырлығынан ҡурҡҡан өсөн, таянырҙай кешеләр аҙ булған өсөн зарланырға теләгәндән түгел... Ә һин бит коммунист кеше. Волостәге хәл өсөн һәр коммунист яуаплы... — тип әйтер өсөн. — Аңланыңмы?

— Аңланым, ағай.

Улар, сыулашып ҡысҡырырға керешкән әтәс тауыштарына ҡолаҡ һалып, тағы бер аҙ тынып торҙолар. Унан Хаммат һалмаҡ ҡына баш сайҡап ҡуйҙы:

— Таңды аттырҙыҡ. Йә, хуш, мырҙа.

— Һау бул, ағай.

## III

Техникумда әҙәби түңәрәк булыуы, шиғыр, хикәйә яҙыусылар шунда йыйылып бер-береһенең яҙмаларын тикшереүе, һәйбәт табылғандары ҡулъяҙма әҙәби журналға — «Йәш быуын»ға тәҡдим ителеүе хаҡында Емеш былғаса ишетеп кенә белә, үҙенең дә бер саҡ ошо түңәрәктең эшендә ҡатнаша башларын хыял итеп, дәртләнеп йәшәй ине. Бөгөн, үҙен тәүтапҡыр түңәрәк йыйылышына саҡырғас, ҡыуанып бөтә алманы, унда барыр сәғәтте еткерә алмай йөҙәне.

Йыйылышты түңәрәк етәксеһе Емер Яшинский асты. Тамағын ҡат-ҡат ҡырып, бик эшлекле төҫ менән өҫтәл артында бер аҙ борғоланып торҙо. Маңлайын сирып, төҫөнә, тауышына ниндәйҙер тантаналы, янаулы, өркө-

төүлә он бирергә тырышып, көсәнеп торҙо. Унан сыйылдап:

— Иптәштәр, ҡәләмдәштәр! Көн тәртибендә бик етди мәсьәлә — «Тәүгеләр» исемле йәшерен журналды тикшереү, — тип һүҙ башлап ебәрҙе. — Именно шулай, тикшереү, баһа биреү, значит, кәрәк икән, яза биреү, — тип, комсомолер янаған һымаҡ, тағы бер аҙ тынып торҙо. Емеш, аптырап:

«Аһа, йәшерен журнал да буламы икән ни? Ул ни тигән эш икән? Ниңә йәшерен икән?» — тип аптыранып уйлап алырға ла өлгөрмәне, Яшинский йоҡа ғына бер дәфтәрҙе тотоп, өҙә-йолҡа төкөрөк сәсеп артабан һөйләргә тотондо. Арыш һаламы кеүек тура, йоҡа сәстәрен бер яҡҡа, бер артҡа һелкеп, тар маңлайын сира-сира, аҙапланып, хаҡлыҡ өсөн, ғәҙел эш өсөн янып-көйгән тоғро көрәшсе төҫөн алырға тырышып һөйләне.

— Иптәштәр, бына күрәһегеҙ, был, значит, «Тәүгеләр» тигән журнал. Мин уны Хөрмәт Таңгилдиндең мендәр аҫтынан табып алдым...

— Шымсы!

Емеш ҡапыл артҡа, ҡырҡыу тауыш килгән яҡҡа, ҡараны. Эйе, был Хөрмәттең тауышы! Ана ул ҡайһылай асыулы һәм ярһыу! Ғәҙәттә, шундай уйсан аҡыллы күҙҙәре нәфрәт менән Яшинскийға төбәлгән... Хөрмәттең ундай асыулы сағын Емештең бер ҡасан да күргәне юҡ ине ләбаһа!..

Яшинский тауышын тағы ла баҫынҡыраҡ итә төштө, тағы ла изге теләклерәк, ғәҙел эш өсөн янған кеше төҫөн алып, артабан һөйләп китте:

— «Тәүгеләр», «Беренсе дәфтәр» тип яҙылған. Значит, журнал! Значит, был журнал. Дәфтәрҙең бит исеме, һишы булмай. Был журнал ячейканың да, студкомдың да органы түгел. Значит, йәшерен... Хөрмәт Таңгилдин был журналға үҙенең һәм эшнәләренең яҙмаларын йыйған!

Ошо урында Яшинский тағы оҙаҡ, мәғәнәле тынып торҙо, хатта, ниндәйҙер ҡәнәғәт, тантаналы төҫ алды. Унан аптырап, нәфрәтләнеп тә, уңайһыҙланып та тынып ҡалған Емеш яғына мәкерле, яман уйлы ҡараш ташлаған һымаҡ булды. Ҡыҙҙың йөрәге билдәһеҙ хәүефтән ҡыҫылып китте. Эйе, бығаса бер ҡасан да татылмаған етмет сирҡаныс бер шик-шөбһә солғап алды уның күңелен.

Донъяла аҙ ғына йәшәгән, әммә күпте кисерергә өлгөргән был ҡыҙға кеше йөрәген рәнйеткән бөтә тойғо ла таныш һымаҡ. Аслыҡ-яланғаслыҡтан интегеү тиһеңме, кәмһетелеү-ситләтелеү тиһеңме, хатта һис ғәйепһеҙгә туҡмалыу тиһеңме... Әммә был?! Юҡ, был... Үтә ят, ерәнгес һәм сирҡанғыс... Юҡ, бындай кисереш Емешкә әлегә таныш түгел. Әй-й, бер ҡасан да тоймаһын, белмәһен ине бындайҙы... Әммә бына бит тойорға, белергә тура килә. Ана бит Емер һөйләй!.. Эй хоҙай, был ни эш?! Нимә әйтергә теләй был ҡылйыуғыс?

Емер Яшинский, уның шул уйын ғына көткән шикелле, тағы ла зәһәрлерәк йылмайып Емешкә төбәлде лә:

— Бында яҙылған әҫәрҙәр араһында иң зарарлыһы — Ирьегетованың «Тылсымлы төн» тигән хикәйәһе! — тип белдерҙе. Сәйәси яҡтан хата, социалистик реализмға ҡаршы хикәйә!..

Емеш үҙен ҡапыл зәһәрле йылан саҡҡан кеүек тойҙо. Башы әйләнеп, күҙ алдары ҡараңғыланып китте, әммә йығылманы. Асыҡ аңын да, иғтибарын да юғалтманы. Киреһенсә, үтә осҡорланып киткән күңеленә Яшинскийҙең артабанғы һүҙҙәре утлы күмер менән яҙыла барҙы:

— Ниндәйҙер хыяли хикәйә, — тип, шомло һәм шикле йылмайып дауам итте Яшинский. — Значит, ай, ҡояш һөйләшә — был бит мистика! Етмәһә, мөхәббәт! Был бит — мещанлыҡ, обывателлек! Эйе, шулай, мещан һаҙлығын аңҡытҡан хикәйә был, иптәштәр! Шунан, телен ҡарағыҙ, теленә иғтибар итегеҙ — әҙәм көлкөһө бит! Әҙәби әҫәрҙең теле шулай буламы?! Шуның өҫтәүенә, значит, иптәштәр, «пәйғәмбәр», «алла һаҡлаһын» кеүек дини лөғәт, төрлө архаизмдәр ҡулланып, автор беҙҙе үткән серек тормошҡа һөйрәмәксе! Пессимизм, символизм йоғонтолары ярылып ята бында. Беҙ, значит, шанлы пролетар балалары, ошоға юл ҡуя алабыҙмы? Хаҡыбыҙ бармы?! Бөтә донъяла революция яһау хаҡында һүҙ барғанда, ниндәйҙер тылсымлы мөхәббәткә саҡырған, значит, исеме есеменә мыуафиҡ булған «Тылсымлы төн»-дәрҙең тамырын ҡоротмай тороп, мировой революция яһап буламы?!

...Бында, күрәһегеҙме, Емеш үткән ҡараңғы тормошто данлай, шуны һағына, уға шул тонсоҡторғос тын, томра тылсымлы төн кәрәк! Томра, тын төндө идеаллаштыра! Значит, был зарарлы әҫәр. Беҙҙең пролетариат этикаһына хилаф әҫәр! Юҡ, иптәштәр, значит, беҙ быға

ҡаты отпор бирергә тейешбеҙ. Мин, ҡаты сара күрер өсөн, был йәшерен журналды ячейкаға тапшырырға тәҡдим итәм!

Яшинский артынса Сәхибә тороп баҫты. Ул да әҙәби түңәрәк ағзаһы икән дәбаһа. Хәйер, Емеш уның баллы шиғырҙарын «Йәш быуын» журналында күргеләп тә торғайны шул.

Сәхибә лә, Яшинскийҙән бер ҙә ҡалышмай, һүҙ баш-ларҙан алда, бик аҡыллы ҡиәфәт менән тыңлаусыларға мөләйем ҡараш ташлап, ҡыланып, иркәләнеп торҙо. Уның ҡасандыр Емешкә мал ялаған тоҙҙо хәтерләткән төҫһөҙ күҙҙәре бөгөн, ниңәлер, щат мызылдай, нәҙек би-ленә хас булмаған үтә ҙур күкрәге түҙемһеҙ һелкенә ине. Һутлы ҡалын ирендәрен төрлөсә борғолап, үҙенсә бик наҙлы йылмайып тороуы ла был юлы Емешкә айырата һөйкөмһөҙ күренде.

«Әй хоҙайым, яуыз ниәтеңде татлы йылмайыу аҫтына йәшерергә маташыуҙан да ерәнесерәк нәмә бармы икән донъяла?» — тип әсенеп уйлап алды Емеш, ә тегеһе, уның күңелендә үҙенең ошо яғымһыҙ ҡыланышын мәңгеләш-төрөп ҡалдырырға тырышҡан һымаҡ, ситтәренән еүеш-ләнеп торған һутлы ҡыҙыл ирендәрен тағы ла борғолап, мөйөшләндереп һөйләне лә һөйләне. Етмәһә, буржуаз культураның «сәнғәт — сәнғәт өсөн» тигән хата ҡарашын беҙ кире ҡағабыҙ. Әҙәбиәт халыҡҡа, пролетариат сыны-фына хеҙмәт итергә тейеш тигән партиялы һүҙҙе, күҙ ҙә йоммай, боҙоҡ теләккә ҡулланып, бысратып тора:

— Минең аңлауымса, Гөлйемештең хикәйәһе ана шул «сәнғәт — сәнғәт өсөн» тигән хата ҡараштан сығып яҙыл-ған. Был хикәйә сыныфҡа хеҙмәт итә аламы? Юҡ, әлбит-тә! — ти. — Яшинский иптәш бик дөрөҫ әйтте: шиғриәт, әҙәбиәт донъяһына аң-тоңдо белмәгән көйө тығылып инеүе — шиғриәт донъяһын, мин әйтер инем, ваҡлау, түбәнһетеү, хатта кәмһетеү була. Һәр кем үҙ урынын белергә тейеш. Быны мин бигерәк тә Гөлйемешкә ҡарата әйтер инем... — тип ебәрә.

Сәхибәнән һуң сәүкә ҡанаттары кеүек ҡара шырт сәстәре араһынан ҡылый күҙҙәрен йымылдатып, Сафа-на, таҡыр башлы Яппар ҙа ҡысҡыра-баҡыра «Тылсым-лы тун» хикәйәһен теттеләр.

Емештең күңеленә бигерәк тә төлкө шикелле еңел һайыҡлы, гәҙәттән тыш оҙон осло эйәкле Хәләфтең сығы-шы нык һеңеп ҡалды. Ул, эре һары һипкел баҫҡан ялпаҡ

танауын мыршылдатып тарта-тарта, түҫө билдәһеҙ керпекһеҙ күҙҙәрен Емешкә секерәйтеп текләй ҙә:

— Йә, шул да булдымы хикәйә?! — тип һирәк һары тештәрен тотош күрһәтеп көлә. — Валлаһи, көлкө бит был, иптәштәр. Шулай бит?! — тип, түҫһөҙ ирендәрен ҡоймаҡ кеүек йәйеп, бөтәһенә алмаш-тилмәш ҡарап сыға. Ҡемгәлер ярарға, кемдәрҙелер үҙе менән бергәләп Емештән көлдөрөргә маташа. Үҙе, күрәһең, сығышым оҡшаймы-юҡмы тип, башлыҡтары Яшинскийгә йыш-йыш ҡарап ала. Уныһы, хуплауын аңлатып, ҡәнәғәт йылмайып ҡуя. Хәләфтең мәғәнәһеҙ һәм һис бер дәлилһеҙ, нигеҙһеҙ асыҡтан-асыҡ яуыз ниәткә ҡоролған оҙон-оҙон сығышын һис кенә лә бүлдермәй, кинәнеп, хуплап дауам иттерә.

«Эй хоҙай... Быларға минең ни зарарым тейҙе икән?! Ниңә был хәтле рәнйетәләр?! Донъя тармы икән ни был әҙәм аҡтыҡтарына?!» — тип, аҙарынып, аптыранып тыңлай Емеш. Өйрәнсек бер хикәйәне шундай ҙур итеп күтәреп, унан ниндәйҙер зарарлы һыҙаттар эҙләп маташыуҙың кемгә кәрәге, ни өсөн кәрәклеге уға аңлашылмай, ә инде кешенең мендәр аҫтын аҡтарып йөрөү кеүек әшәке ҡылыҡ уны бөтөнләй ерәндерә ине. Ғәҙәттә, бындай осраҡта Емеш нәфрәтләнеүҙән телһеҙ ҡала. Бындай боҙоҡ күңеллелекте ни тип атарға ла, нисек аңларға, аңлатырға ла һүҙ таба алмай әле ул. Уға нәфрәтләнергә, унан ерәнергә генә көсө етә әле уның. Шуға, ахыры, ул, әле был яла яғыусыларға һүҙ әрәм итеп, яуап бирен торорға ла теләмәне. Тик Хөрмәт кенә улар менән аҙаҡҡы сиккә хәтле алышты. Яҡшылап та, асыуланып та, нәфрәтләнеп тә аңлатырға тырышты:

— Был бит журнал түгел, иптәштәр. Күрәһегеҙ — дәфтәр. Минең дәфтәрем. Ул дәфтәргә мин үҙемдең шиғырҙарымды яҙып барам. Аңлайһығыҙмы, тәүге шиғырҙарым улар. Шунда, күңелемә оҡшағас, Емештең хикәйәһен дә үҙенән рөхсәтһеҙ күсереп алғанмын. Бына шул ғына! Ә һеҙ... Йә, әйтегеҙ әле, Яшинскийҙең кеше артынан шымсылыҡ итергә, рөхсәтһеҙ мендәр аҫтына тығылырға ни хаҡы бар?! — Беҙҙең ауылда булһа, бының өсөн уны «ҡараҡ» тип атап булыр ине... Ат урлаусыны, «ҡараҡ», тиҙәр, ә бит был кешенең күңел хазинаһын урлаған! Минеңсә, был ат урлауҙан яманыраҡ! — тип ҡыҙып-ҡыҙып ҡарыулашты ул.

Хөрмәттән һуң һөйләүселәр араһында уның фекерен хуплаусылар ҙа, мөхәббәтте мещанлыҡ ҡалдығы тип

тау дөрөҫ үк булмаҫ, тип ҡыйыуһыҙ ғына булһа ла әйтергә баҙнат итеүселәр ҙә табылды, әммә Яшинскийҙең, «пәйғәмбәр», «алла һаҡлаһын» кеүек һүҙҙәр ҡулланып, Емеш иҫке идеологияны алға һөрә тигән раҫлауын кире ҡағырға бер кемдең дә башына килмәне йәки бер кемдең дә ҡыйыулығы етмәне.

Өҙәби түңәрәк комсомолец Хөрмәт Таңгилдинде «Тәүгеләр» тигән йәшерен журнал сығарыуҙа, унда Емеш Ирьегетованың «Тылсымлы төн» тигән серек идеялы хикәйәһен урынлаштырыуҙа ғәйепләне, эште артабан тикшереү һәм ҡаты сара күреү өсөн протоколды ячейкаға тапшырырға булды.

Шуның менән был йән биҙҙергес йыйылыш тамамланды. Бөтәһе лә таралды. Яшинский менән Сәхибә, бик файҙалы эш башҡарған кешеләрсә, ҡәнәғәт көлөшә-һөйләшә сығып китте. Тик Емеш кенә урынынан һаман ҡуҙғала алмай, башын түбән эйеп, тауыш-тынһыҙ ултыра бирҙе: «Туҡта әле, нимә булды һуң был? Ни өсөн йәберләнеләр?! Дөрөҫ, хикәйә эшләнеп бөтмәгән. Бер ҡат ҡына яҙып сыҡҡан өйрәнсек хикәйә, әммә уны Емеш яратып, изге тойғолар менән яҙғайны лабаһа? Ни өсөн уға Емештең уйына инеп тә сыҡмаған бәләләрҙе таҡтылар? Ниңә аҡты ҡара тип раҫланылар?! Ошомо ғәҙеллек?! Емеш бит, бында килгәс, яңы тормош менән бергә ғәҙеллекте, хаҡлыҡты таптым икән тип, төптө ышанғайны лабаһа?!

Әле килеп былар тоҡ-томалға уның өҫтөнә йыуынды һыу һипкәндәй итте лә ҡуйҙылар. Бөтә изге теләктәренән көлдөләр. Ай-һай, саф күңеленә ҡара тап йәбештерһәләр, һәләк тә ауыр була икән! Ғәйепһеҙ көйө ғәйеп күтәреүсе үлемдән дә әсе ләбаһа! Белмәгәйнем... Белмәгәйнем...»

Емештең йөрәге өҙөлөп төшөрҙәй булып һыҙланы, башында бер өҙлөкһөҙ ауыр уйҙар ҡабатланды, ә күҙҙәренә ҡайнар йәш эркелде, ләкин ул иламаны, үтә ауыр булып киткән башын беләктәренә һалып, өҫтәлгә ятты ла тыйылырға, тынысланырға тырышты. «Илап, меҫкенләнеп, кеше һөйөндөрөүҙән ни файҙа?» — тип уйланы. Мәрхүм Ҡарасәс инәһенең яратҡан бер йырын да хәтерләне:

...Дуҫтарымдан минең дошманым күп,
Сер бирмәйек үлеп тә китһәнсе...

Унан тағы бик оҙаҡ уйланып, тынып ултырҙы: «Туҡта, был йыр үткән замандыҡы лабаһа! Ниңә һуң әле Емеш уны был минутта хәтерләй? Ошо эшкинмәгән Яшинскийҙәрҙең һүҙенә ҡарап, ул үҙен ул замандағыса яңғыҙ һәм бәхетһеҙ итеп тойорға хаҡлымы? Хаҡы бармы?! Юҡ, әлбиттә, был бит Яшинский кеүек ике йөҙлөләр эйе генә... Хаҡлыҡ бит улар ҡулында түгел хәҙер...»

Был уйҙан ул ап-арыу тынысланды. Быуындарының хәле ҡайтҡандай, йөрәгенең сәнсеп-сәнсеп һыҙлауы баҫыла төшкәндәй булды. Инде тороп ятаҡҡа ҡайтып ятырға ла мөмкин ине. Тап шул саҡта Хөрмәт югереп килеп инде, ҡыҙҙың ҡаршыһына барып баҫты.

Ул бая, йыйылыш бөткәс тә, асыуынан хатта Емеште лә онотоп, ҡайҙа баҫҡанын белмәй, алдан сығып югергәйне. Яланбаш, күлдәксән көйө һалҡын һауала ҡайҙа барып бәрелергә белмәй югереп йөрөй торғас, ярһыуы баҫылды, күрәһең, Емештең бүлмәлә яңғыҙ тороп ҡалыуы иҫенә төштө. Шунан ул тағы уҡтай атылып кире югерҙе. Һәм бына, ғәйепле башын түбән эйеп, ҡыҙҙың ҡаршыһына килеп баҫты.

«Инде уға ни әйтергә, нисек йыуатырға? Үҙенең ғәйепһеҙлеген ҡалай аңлатырға? Бына бит, иң ҡыйыны ҡайҙа уның? Емеш бынан һуң уны бөтөнләй ҙә күралмаҫ инде...»

Бәйгелә сабышып ярһыған арғымаҡтай аһылдап, үҙен ҡайҙа ҡуйырға белмәй торған Хөрмәткә Емеш ғәҙәттә булмағанса тыныс ҡына ҡарап тик ултыра бирҙе.

«Их, исмаһам, әрләһен ине, «алйот!» тиһен ине. Еңелерәк булыр ине миңә!»

Ләкин Емеш һаман бер ни ҙә әйтмәне, нисек кенә ауыр булһа ла, һүҙҙе Хөрмәттең үҙенә башларға тура килде.

— Яҡташ, — тине ул ялыныслы тауыш менән. — Яҡташ!..

Ул шулай Емеште үтә яҡын күргән, һөйөп-иркәләп, һылыу тип әйткеһе килгән саҡта, юрый тауышына ҡоролоҡ, ғәмһеҙлек бирергә тырышып, яҡташ тип өндәшә, шуның менән үҙенсә һөйөүен белдереп, кире ҡағылыуҙан ҡотолоп ҡала ине, әммә был юлы яҡташ һүҙен ул шундай итеп әйтте, хатта Емеш өсөн ул әллә ниндәй татлы һөйөү һүҙҙәренән дә йылыраҡ, изгерәк булып яңғыраны.

— Яҡташ, бошонмайыҡ әле. Ячейкала унда бына тигән комсомолецтәр, Яшинскийҙәр түгел. Тикшерерҙәр, асыҡларҙар, хаҡлыҡты тапарға юл ҡуймаҫтар. Бик булмаһа, мин партячейка секретаре Ҡамилә апайға, директорының үҙенә — Ғимранов ағайға барырмын. Хаҡлыҡты барыбер табырмын.

Ул, баҙнаты етеп, хатта Емештең сәстәренән ипләп кенә һыйпап та ҡуйҙы:

— Йә, бер һүҙ әйт инде!.. Исмаһам, бер генә һүҙ, яҡташ?! Йәнгә йылы бирерҙәй бер генә һүҙ!?.

Емештең ҡуйы керпектәре күбәләк ҡанаттары шикелле сабырһыҙ һирпелеп китте. Ғәҙәттә уйсан, баҫалҡы ҡарашында әсе ирония сағылды. Һәм ул үтә һалҡын, тыныс итеп:

— Ундай һүҙҙе ҡайҙан табырға? — тип һораны. — Өйрәт!..

— Теләһәң, беләһең һин... Табаһың һин, Емеш!..

— Ә минең хикәйәмде яҡлап маташырға кәрәкмәй,— тип ҡырт киҫте Емеш. — Ысынлап та, эшкинмәгән нәмә бит ул, ә һин уны, етмәһә, күсереп алған булғанһың. Кит, көлкө!

— Һин шулай тип уйлайһыңмы, яҡташ? Дөрөҫ түгел! Бында мәсьәлә һинең хикәйәнең йәки минең шиғырҙың ипсек булыуында тормай. Беҙҙең арала студенттәрҙең мендәр аҫтын аҡтарып йөрөүселәр бар, ә был — ҡәбәхәтлек тип атала! Аңланыңмы, яҡташ? Мин бындай ҡәбәхәтлеккә юл ҡуйылмаҫҡа тейешлек хаҡында һөйләшәсәкмен. Етмәһә, күҙ ҙә йоммай, аҡты ҡара тип раҫлауҙы ул. Йә инде, минең шиғыр дәфтәрен — йәшерен журнал, тип раҫлайҙар! Оялмайҙар ҙа! Түңәрәк үҙ ҡулында булғанда, этлек эшләп ҡалайым тиҙер был Яшинский. Шуға отпор бирмәҫкәме?

Емеш ауыр ғына көрһөнөп ҡуйҙы.

— Һөйләп кенә ҡәбәхәтлекте бөтөрөп булһа...

Хөрмәттең күҙҙәрендәге бошонҡолоҡ тағы ла артты:

— Өндәшмәй түҙеү менән яуызлыҡты еңермен тип уйлайһыңмы ни һин, яҡташ?

— Мин әле ни уйларға ла белмәйем...

— Улай булһа, әйҙә, киттек. Юҡһа һуң бит. Ашхана ябылыр.

Емеш теләмәй генә урынынан торҙо.

* *
*

Ашханала һәр курстың үҙ өҫтәле, үҙ дежурныйы бар. Дежурныйҙар көн буйына повар ярҙамсылары хеҙмәтен үтәйҙәр, ә аш ваҡытында официант булып алалар. Емештәрҙең курсынан бөгөн Сабир дежурный. Ул, аҡ алъяпҡыс бәйләп, ендәрҙе һыҙғанып ебәргән. Өҫтәлгә һәр студент өсөн тәрилкә, ҡалаҡ, сәнске — бөтәһе лә әҙерләп ҡуйылған. Ҡабарып бешкән ап-аҡ икмәк тәрилкәләргә өймәләм итеп телеп һалынған, сеүәтәләрҙән тәмле аш еҫе борҡола. Ашханаға ингән бер студент өҫтәл янына килеп ултырыуы менән, дежурный уның тәрилкәһенә аш һала, кухнянән икенсе, өсөнсө блюдаларҙы алып килеп бирә, бушаған тәрилкәләрҙе йыйып ала бара. Шул арҡала ашханала бер кем дә сыуалып йөрөмәй, тәртиплелек һәм ғаиләгә хас үҙ-ара ихтирамлылыҡ хөкөм һөрә.

Бына шымып ҡына Хөрмәт менән Емеш тә килеп ултырҙы. Дуҫтарының күңелһеҙ хәлен ишетеп белергә өлгөргән Сабир, һуңлап килдегеҙ, тип шелтә лә яһаманы, ғәҙәтенсә, Емеште Ҡырыҫбикә тип тә үртәмәне. Киреһенсә, уның тауышында ниндәйҙер хәстәрлек, яғымлылыҡ һиҙелә ине.

Бына ул тәрилкәне мөлдөрәмә тултырып Емештең алдына һурпа алып килеп ҡуйҙы.

— Һин яратҡан аш бөгөн, Емеш! Әгәр аҙ булһа, бына үҙең өҫтәп һалып аша, — тип сеүәтәне уның алдына яҡынырaҡ шылдырып ултыртты. Ысынлап та, бөгөн Емеш яратҡан аш: итле туҡмас. Бында аҙнаның ете көнөндә ете төрлө аш бешә. Борщ, щи, һөтлө дөгө өйрәһе, макарон, вермишель һалған аштар... Һәр ҡайһыһы ғәжәп тәмле һәм туҡлыҡлы итеп бешерелә. Шулай ҙа, Емешсә, уларҙың береһе лә итле өй туҡмасына етмәй. Тик байрамдарҙа бешерелә торған билмән йәки былауҙы ғына инде ул тәмлелек яғынан итле туҡмастан өҫтөн ҡуймай булдыра алмай ине, ләкин бөгөн ул иң яратҡан ашының тәмен тойманы, ҡалаҡҡа тотонғоһо, икмәккә үрелгеһе килмәй ыҙаланды. Етмәһә, ҡаршыһына ғына бынауы ҡылйыуғыс Яшинский килеп ултырҙы.

«Әҙәм аҡтығы! Шағир, имеш! Бөтә уйы, теләге әҙәбиәтте ҡайғыртыуҙан, уның сафлығын һаҡлауҙан тора, имеш! — тип йәне биҙеп уйланды Емеш. — Ә үҙе курстан күсә алмай ултырып ҡалған бит әле, һорнайған! Шуны ни тип әҙәби түңәрәккә* етәксе иттеләр икән? Етмәһә,

үҙенең эшнәләрен дә эшәкелеккә өйрәтеп ҡуйған бит әле. Аныуы Хәләф кеүектәрен...»

Хөрмәт, әйтерһең, Яшинскийҙе күрмәне лә белмәне. Күҙҙең хәҙер яҡшатланып, тар маңлайын ҡарталандырып йылмайып маташыуы ла, «әй, «Тәүгеләр» журналының мөхәррире!» тигән булып мәрәкәләп маташыуы ла Хөрмәттең иғтибарынан ситтә ҡалды. Әйтерһең, Яшинский ултырған ер уның өсөн буш урын ине. Башҡаларҙан ла уға иғтибар итеүсе булманы. Бүтән ваҡытта ла ул күбеһе балалар йортонан килгән бер тиҫтер үҫмерҙәрҙән торған был курста ят һәм сит кеше һымаҡ йөрөй, ә төңөнгө эшенән һуң ашханала хатта ғәҙәттәге эйәрсәндәре лә уға һырышмаҫҡа тырыша һымаҡ ине.

Хөрмәт, урман ҡырҡып ҡайтҡан кешеләй, икмәкте ҙурыра тешләп, ашты өҫтәп һала-һала ашаны. Алдындағы тәрилкә бушап ҡалғас, ғәжәпһенгән кеүек ҡаршыһында баҫып торған дежурныйға күтәрелеп ҡараны:

— Сабир дуҫ, «социализмде» өҫтәп ебәр әле!

Бында студенттәр үҙҙәренең хәҙерге мул тормошон шаярып та, ҡыуанып та «социализм» тип атай. Бигерәк тә ҡабарып бешкән аҡ йомшаҡ икмәкте күпме теләйһең шул хәтле ашау уларҙың күбеһе өсөн, ысынлап та, быға тиклем төштәрендә лә күрмәгән бәхет — социализм ине, әлбиттә.

— Асыуҙан күпме ашағанды белмәйем, ахыры! — тип Хөрмәт тағы икмәккә үрелде.

— Һин башҡа ваҡытта ла ашау тигәндә бер кемде лә алдын сығармай инең дә ул! — тип Сабир, баҫалҡы ғына, мәрәкәләп, уның алдындағы тәрилкәгә йәнә бер буханка икмәкте телгеләп һалды.

— Ныҡ аша, дуҫ, һин берәй ваҡыт теге цирктағы исемле көрәшселәрҙе йығырлыҡ батыр булып етешергә тейешһең бит.

— Юҡ, цирк көрәшсеһе булмай ул. Чарли Чаплин була ул Хөрмәт,— тип Шәмсиә лә мәрәкәләүгә ҡушылды.

— Шуға икән дә ул Чаплин ҡатнашҡан фильмдәргә, акыр ақсаһы булмаһа, кәпәсен һатып булһа ла югерә!

— Юҡ, ул бит Паташон ролен уйнамаҡсы. Тик Пат булырҙай берәй оҙон ботло иптәш кенә табып алаһы бар! — тип башҡалар ҙа уны мәрәкәләүгә ҡатнашып китте.

— Паташон да, Чаплин дә булырға тура килмәҫ, ахыры, — тип ауыр ғына көрһөнөп көлдө Хөрмәт. — Миңә,

пожалуй, һәр бер ике йөҙлө, татлы телле йылғырбайҙар-ҙың томшоғон емерә һуғып йөрөүсе баһадир булып алырға тура килер. Шунһыҙ ярамай...

Хөрмәттең был яуабынан бөтәһе лә кинәнеп көлдөләр. Ашхана йылы, ашау мул, күңел көр. Йәшлеккә күпме өҫтәлмә кәрәк?! Уйнап-көлөүгә, шаярырға кескәй генә һылтау ҙа етә.

Емеш уҡырға тәү килгән йылда бында ла тормош ауыр ине. Студенттәргә көнгә бер кило арыш икмәге, бер тапҡыр кәбеҫтә һурпаһы бирелә, шуның өҫтәүенә, һемәктән ағыҙып, теләһәң күпме ҡайнар һыу эсергә мөмкин ине. Күп ваҡыт был һемәк янында лампа ла янмай. Шул арҡала Емеш бер саҡ, кружкаға ағыҙам тип, ҡайнар һыуҙы беләгенә ағыҙып ебәргәйне. Әгәр шул кисте, көтмәгәндә, ятаҡҡа китапханасы Ҡамилә апай килеп инмәһә, белмәйем, Емеш ни эшләр ине икән?! Ҡамилә апай килеп тә инде, һыҙланыуға түҙмәй мөйөштә, үҙенең койкаһында, ыҙаланып ултырған Емеште күреп тә өлгөрҙө.

— Ниmә булды? Ах, вот что!

Шунда уҡ, Шәмсиәне ашханаға югертеп, сей картуф алдырҙы, уны әрсеп, йыуып, ҡырып, янған урынға япты.

— Вот шулай, быныһы йылынһа, картуфты тағы ҡырып ябырһың, — тип дуҫының янында ни ярҙам күрһәтергә белмәй аптырап торған Шәмсиәгә кәңәш бирҙе. — Аңланыңмы? Давно бы так, бешкәс тә... Ул ваҡытта бешкән урын күберсемәҫ тә, былай уҡ һыҙламаҫ та ине.

Беләктең янған урыны ҡара янып, өрөлөп ҡалҡты, әммә һыҙлау баҫылды. Эй-й, ниндәй генә рәхмәт әйтһәң дә аҙ. Мәңге йәшәһен ул Ҡамилә апай...

Ә хәҙер студенттәрҙең көнкүреше бөтөнләй башка. Үҙҙәренең хәҙерге тормошон «социализм» тип юҡҡа ғына атамай бит улар. Әйткәндәй, ашау-кейеү, ятыу-тороу хаҡында ҡайғың булмауҙан да ҙур бәхет юҡ икән! Әйҙә, уҡы, үҫ, теләгәнсә рухыңды байыт, киләсәктә үҙең кешеләрҙе шулай һөйөндөрөрлөк хеҙмәткә әҙерлән!

Эйе, студенттәрҙең тормошо хәҙер бөтөнләй икенсе. Быйыл стипендия ла артты. Айға алты һумдан ун һумға етте, әммә эшкә йәнен-йөрәген биреп, үҙе хаҡында онотоп эшләгән директор булмағанда, был аҡсаға студенттәрҙең тормошо наҡыҫ булыр ине.

Техникумдың хәҙерге директоры Ғимранов килгән йылда уҡ был хаҡта бик етди уйланы. Революциянан һуң

Башҡорт хеҙмәтсән халҡына ҡайтарып бирелгән Ҡаруан-Йорайҙа, башҡорт хеҙмәтсән халҡының балалары өсөн асылаған беренсе уҡыу йортонда, балаларҙың бығаса төштәренә лә инмәгән шарттар тыуҙырыу хаҡында хыялланды. Үҙенең ошо изге ниәтен тормошҡа ашырырға ярҙам итерҙәй кешеһен дә тапты. Был — техникумдың хужалыҡ эштәре мөдире Закир ағай ине. Быжыр ҡыҙыл йөҙлө, ҡара мыйыҡлы, мыҡты кәүҙәле был ағай — Ғимранов менән граждандар һуғышында окопташ булған кеше. Инде хәҙер ул, аяғына хром итек, өҫтөнә ҡаракүл яғалы пальто, башына ҡаракүл бүрек кейеп, бөтөнләй тыныс тормош кешеһе булып йөрөй. Уның күҙ ҡарашы яғымлы, хәрәкәте эшсән, етеҙ.

Бына ошо Закир ағай студенттәргә ҡыш буйына етерлек аҙыҡты көҙҙән баҙарҙан арзан хаҡ менән һатып алып әҙерләп ҡуя. Хөкүмәттән наряд килгәнен көтөп ятмай. Техникум янында йәшелсә баҡсаһы булдырып ебәрергә лә онотманы ул. Баҡсала студенттәр сиратлап эшләй. Картуф, ҡыяр, помидор кеүек йәшелсә аҙыҡтары, күпме теләйһең, барыһы ла үҙҙәренеке.

Студенттәрҙе бындай юл менән аҫырауҙың инструкцияға һыймауын «күреүсе», был хаҡта юғарыға хәбәр итергә ашығыусы •әҙәмдәр ҙә табылды, әлбиттә. Шул арҡала тәфтиш комиссияһы ла йыш килеп торҙо. Әммә кемдең инде, әгәр ул ысын кеше булһа, студенттәрҙе ҡайтадан пәскә ултыртығыҙ, тип әйтергә теле барһын?!

Шулай «социализм» дауам итте. Ғимранов менән Закир ағай ашау мәсьәләһен ыңғай хәл иткәс, стипендиянан артҡан аҡсаға ярлы-етем студенттәрҙең өҫ-башын бөтәйтергә лә мөмкинлек таптылар. Шул иҫәптән Емеш тә эске күлдәктән алып пальтоға хәтле кейемле булды. Дөрөҫ, Емештәрҙең курсындағы күпселек ҡыҙҙар, егеттәр итәге менән еңе бер тигеҙ булған бер төҫ ҡыҫҡа пальтолар кейеп ебәргәс, бик үк йәмле лә булманы. Юғары курстағылар, шаярып, уларға «фу-фу» тигән исем дә тағып ебәргәс, ул пальтоларҙың шөкәтһеҙлеге тағы ла артты һымаҡ, әммә «йылы һөйәк һындырмаҫ» тип бушҡа ғына әйткәндәрме ни? Ысынлап та, өҫтә пальто, аяҡта ботинка, йәнең теләгәнсә тышта йөрө! Инде сағын тунған тәҙрәле серек өйҙә яланаяҡ, яланбаш ултырып уҙғарған Емеш өсөн был инде бәхеттең иң бейек түбәһе. Уға бынан да артыҡ тағы нимә кәрәк булыуы мөмкин?!

Шулай ҙа бөгөн уның тамағына аш бармаһы. Ул һиман үҙен ни өсөн шулай хаҡһыҙға рәнйетеүҙәрено, уның үҙалдына, үҙе өсөн генә һыҙғылаған өйрәнсек яҙмаларына ҡайһы берәүҙәрҙең сат йәбешеп тырнашыуҙарына тошөнә лә, аңлай ҙа алмай ыҙалана ине. Хөрмәттең йоҡиғына дәфтәрен өҙә-йолҡа, яңғырауыҡлы һүҙҙәр сәсеп торған Яшинский ҙә, ҡалын ирендәрен еүешләтеп, дөрөҫ фекер әйтергә, аҡыллы, белдекле һәм үтә ҡыҙыл булып күренергә көсәнгән Сәхибә ҭуташ та уның күҙ алдынан китмәй аптыратты.

«Эй-й, шундай кешеләр менән мәңге лә осрашмаһаң, ундайҙарҙы белмәһәң ине!..»

Емеш ҡарашын Хөрмәткә күсерҙе. «Ә был, бахыр, йоморо күҙҙәрен шундай сабый балаларса мөлдөрәтеп, беҙҙең ғәйепһеҙлекте раҫларға тырышҡан була бит әле. Яманға яҡшының нимә икәнен аңлатып буламы ни?!»

— Берәү ҡалағын ауыҙына алып барып еткергәс онота ла ҡуя...

Емеш, тертләп, артына боролдо. Унда, шаян йылмайып, Шәмсиә баҫып тора ине. Емеш, уңайһыҙланып, һикереп торҙо.

— Ҡиттек! — тине Шәмсиә, шыбырҙап.

— Ҡайҙа?!

— Театрға! Миндә контрамарка бар! Зиннур ағай бирҙе.

— Нимә ҡуйыла икән?

— «Любовь Яровая!» Барабыҙмы?

— Барабыҙ! — тине Емеш, үтә ныҡ шатланып.— Ҡайҙа булһа ла киттек... Тик малайҙар барамы?

— Мин икебеҙгә генә алдым.

— Һәйбәт булған. Минең бөгөн бер кемде лә, бер кемде лә күргем дә, һөйләшкем дә килмәй, беләһеңме?!

— Мине ләме?

— Һин ул иҫәпкә инмәйһең.

Улар югерә-атлай ашханаңан сыҡтылар. Тышта Шәмсиә дуҫын ҡултыҡлап алды.

## IV

Мәсет йортон мәктәпкә әйләндереү мәсьәләһе ҡаршылыҡһыҙ үтте. Ауыл йыйылышында Иштуған башта дин һәм дини йорттар хаҡында Эске эштәр халыҡ комиссариатының аңлатмаһын уҡып ишеттерҙе. Унда, диндә дәү

...йыртып айырыу хаҡында 1918 йылда сыҡҡан декреткә ...ныи, әгәр дини йорттарҙы, договор төҙөп алып, файҙаланырға теләүсе диндарҙар йәмғиәте булмаһа, хөкүмәттең уны мәктәп, клуб, китапхана йортона әйләндерә алыуы хаҡында әйтелгәйне. Илсеғол мәсетенә килгәндә, мулла үҙ теләге менән унан баш тартҡан. Шулай булғас, ...ай ике һүҙ булырға мөмкин? Эйе, бында ҡаршы әйтеп торор урын юҡ ине.

— Ярар, мәктәп өсөн йорт кәрәк бит. Мәсет барыбер буш тора, — тинеләр ҙә, эш тә бөттө. Йыйылыштан һуң ...өттең мырҙаһы дүртенсе класс уҡыусыһы пионер Хәсән, тейен шикелле үрмәләп, манараға менеп китте. Был ...лде тамаша күреп тә, шомланып та урамға һибелгән халыҡ алдында манараға ҡыҙыл флаг элеп ҡуйҙы. Кешеләр, берсә бына-бына ҡоларҙай булып, манараның ялтыраҡ ҡалайы буйлап түбән төшкән Хәсәнгә, берсә талпынып ... елберҙәгән ҡыҙыл флагҡа ҡарап, хайран ҡалып торҙолар: «Бына бит айҙы алды ла ырғытты... Йәшен дә һуҡманы үҙен, зил-зилә лә ҡупманы...» Йоморо быжыр битенә килешеп торған сәкәй танауын бөрсөк-бөрсөк тирҙәр сыбарлаған Хәсән, ергә төшкәс, уҡытыусыһының ҡаршыһына барып баҫты. Сая тауыш менән:

— Флаг эленде, ағай! — тип ҡабаланып хәбәр итте. — Пионер Хәсән ҡушылған эште үтәне!

— Күрәм, һәйбәт!— Иштуған уның арҡаһынан ҡағып алды. — Элек Байрас шәп була торғайны бейеккә үрмәләргә. Хәҙер һин. Унан һинә алмашҡа тағы бер тейен ...үек етеҙ малай үҫеп етешер. Ул да һәр яҙ манара башына ла, Хәбир батыр тирәгенә лә менеп ҡыҙыл байраҡты яңыртып торор. Шулай бит, мырҙа?

Хәсән баш ҡағып ҡуйҙы:

— Эйе шул, ағай.

Урамға сығып тулған кешеләр һаман таралманы, ...ар әле балаларға, әле манараһында ҡыҙыл байраҡ елберҙәгән мәсеткә ҡарап торҙолар. Ниндәйҙер ҡотолғоһоҙ һәм аңлайышһыҙ яңылыҡтың ҡеүәтле аҙымынан ла, моңсо ҡаҡшамаҫтай булып йөрәктәргә һеңгән дини тойғоларҙың инрәүенән дә баштары шаңҡыны уларҙың. Былай Илсеғол кешеләре мәсеткә элек-электән йыш йөрөүселәрҙән түгел, хатта уларҙың күпселеге дини йолаларҙы юнләп белмәй ҙә. Шулай булһа ла, уларға мәсеттән айырылыу бер ни түгел тип әйтеүе дөрөҫ булмаҫ ине.

Юк, был улар өсөн аңлауы үтә ауыр булған, ата-баба күрмәгән ваҡиға ине.

Иштуған ҡыуаныстан йөҙө яҡтырып балаларға ҡарады:

— Бына һеҙгә яңы йылы мәктәп тә булды. Хәҙер тырышып, бик тырышып уҡырға ғына ҡалды...

— Уҡырбыҙ! — тип бөтәһе өсөн пионер Хәсән яуап бирҙе.— Тырышырбыҙ!

Бынан ары улар, тигеҙ сафҡа теҙелеп, урамда йырлап йөрөнөләр.

...Алға; иптәштәр,
Алға, бөйөк идеалға!
Иркенлек, тигеҙлек байрағы
Елберҙәһен алда!

* * *

Был көндө Иштуған ғәҙәттәгенән күп иртә торҙо, ауыҙын бешерә-бешерә ҡабаланып сәй эсте, йәһәтләп китап дәфтәрҙәрен папкаға тултыра башланы. Мәктәпкә балаларҙан алданыраҡ барып, Май байрамына әҙерлек планы төҙөргә уйлай ине ул.

— Ғүмергә ҡабаланды. Әйтерһең, донъяның артынан ҡыуып етмәксе! — тип күңелһеҙ генә йылмайҙы Айһылыу. — Ҡойроғонан тотоп алмаҡсы...

— Ҡойроғонан түгел, ялынан тотоп туҡтатмаҡсы булам мин уны, — тип шаярҙы Иштуған. — Ялынан тотоп алырға ла елкәһенә менеп атланырға. Унан был донъя тигән сығынсы арғымаҡты, ҡайҙа теләйем, шунда борорға! Аңланыңмы, һылыу!

Ул көлә-көлә йүгереп сығып китте. Аяғы ергә теймәй мәктәпкә барып етте, ләкин уны бөгөн бында ғәжәп бер хәл ҡаршыланы: йорттоң йоҙағы ватылмаған, ә эстә ҡара таҡта сарпаҡлап ярып ташланған, мейес емерелгән... Парталар өҫтөн туҙан баҫҡан... Ҡемдер төндә асҡыс яратып ингән, иркенләп яуызлыҡ эшләгән, йоҙаҡлап сыҡҡан!.. Ҡем?!

Иштуған аптырап оҙаҡ ҡарап торҙо ла атылып тышҡа сыҡты. Ҡайҙалыр йүгерерҙәй, ошо минутта хас дошманды табып алырҙай, быуып үлтерерҙәй булды. «Ләкин ҡайҙан, нисек?! Уҡыусылар килһен әле... Бергәләп...»

Ул талсығып киткән һымаҡ булып күтәрмәгә ултырҙы, «иртә торһаң, ит бешә, һуңға ҡалһаң, бит бешә», ти

торғайнылар. «Бына һин уны, иртә торған көйө бит беште лобаһа!» — тип күңелһеҙ генә уйланып алды. Ысынлап та, аяҙ көндә йәшен һуҡҡан кеүек көтөлмәгән хәл бит был! Ә бит ниндәй ҡыуаныслы ине был көндәр: ергә шундай һәйбәт, дәррәү яҙ килде. Апрелдең тәүге аҙнаһында ғына сат йәбешеп ятҡан ҡар өйөмдәре бер нисә көн эсендә иреп, ағып бөттө. Ҡара һағыҙ шикелле, үҙләнеп, боҫорап ятҡан йылы ер өҫтөнә, йәш ылыҫтар һымаҡ, энәгә тишеп ҡаҙ үләндәре шытып сыҡты. Әллә үтә көләсләнеп килгән яҙ шатлығынан, әллә бөтә ҡояш нурын үҙ эсенә йыйған иркен мәктәптә уҡытыуҙың рәхәтлегенән, Иштуған үҙен, әле генә тәхеткә менгән йәш батша шикелле, ғорур һәм бәхетле тоя ине был яҙҙы. Их, ниңә был тиҫкәре тормошта гел шулай ҡайғы менән шатлыҡ йәнәшә йөрөй, фажиғә менән комедия уҙыша, яҡшылыҡ менән яманлыҡ алыша, кәйефһеҙлекте тотоп тыйғыһыҙ ҡыуаныс алмаштыра. Йәки киреһенсә... Әле лә бит бына Иштуғандың күңелен һуйырташтай ауыр уй биләгән, ә тирә-яҡта яҙ, уның хәҙерге эске кисерешенә һис тә хас булмаған көләс яҙ тантана итә. Офоҡтан әле генә күтәрелеп килгән яҙ ҡояшының иркә нурҙары, уның күҙҙәрен сағылдырып, ҡаршылағы өйҙөң тәҙрә күҙәнәктәрендә бейей, һуңғы тамсылар югерешә-ашыға ҡыйыҡтарҙан тағарап төшә. Ҡарабаш турғайҙар, сыр-сыу килеп, муйыл ботағында тирбәлә... Етмәһә, бына нигеҙ буйында әсәһенең ҡуйынында ойоп ятҡан аҡ ҡойроҡло ҡара бәрәс тороп, кирелеп-һуҙылып алды ла һырғаларын йәлпелдәтә йәлпелдәтә Иштуған янына килә. Ҡашҡа һылыу башын уның тубығына һалып иркәләнә. «Мә-ә-ә!» — тип өҙөп генә өндәшеп тә ала. Әйтерһең, ниңә шулай бошоноп ултыраһың, тимәксе була.

— Их, шаян! — ти Иштуған, күңелһеҙ генә йылмайып. — Кил, алдыма ят. Һеҙ бит бәрәстәр, бейектә, йылыла йоҡларға яратаһығыҙ.

Бәрәс, шул һүҙҙе генә көткән кеүек, тып итеп һикереп уның тубығына менде, дүрт аяғын да бөкләп, иркәләнеп алдына ятты. Тегеһе уның моронлап килгән йомшаҡ ҡына мөгөҙ төбөн һыйпағас, ғәйәт ҙур ләззәт менән күҙҙәрен йомоп, мырт-мырт көйшәй-көйшәй ойоп китте. Иштуғанға донъя тағы шундай тыныс, һәйбәт, кешеләр бөтәһе лә эскерһеҙ яҡшы һымаҡ тойолоп ҡуйҙы. Тап шул саҡта, эре-эре баҫып, ҡаршы ҡапҡанан ҡыҙыл ҡанатлы, ҡара түшле ҙур бер әтәс урамға сыҡты ла, ситән башына

ла менеп тормай, «ҡо-ғо-ғу-у-у-ҡ!» тип ҡарлығып ҡысҡырып ебәрҙе. Ҡәзә бәрәсе тертләп уянып китте. Иштуған:

— Фу, шайтан алғыры! — тип һикереп торҙо. — Нисә һуң был эшләмәгән сәғәт шул хәтле яй үтә?! — тип һуҡрана-һуҡрана, тағы мәктәпкә инеп китте. Оҙаҡламай балалар ҙа йыйылды. Уларҙан һорашыу ҙа, ауыл Советенә, активкә мөрәжәғәт итеү ҙә бер ни ҙә бирмәне. Был этлекте эшләгән кешене белгән-күргән берәү ҙә табылманы. Тәфтишсе Хитровтың килеп йөрөүе тағы һөҙөмтә бирмәне. Ысынлап та, был һинең эшең тип, тотоп йәбешерлек бер дәлил дә юҡ ине. Бынан һуңғы ике көндә Иштуған уҡыусылары менән бергәләп емерелгән мейесте төҙәтте, яңы ҡара таҡта эшләне, ҡыҙҙар иҙән-парталарҙы ғына түгел, тәҙрәләрҙе лә, көҙгөләй ялтыратып, йыуып сыҡтылар. Уҡыуҙар тағы үҙ яйы менән дауам итте, ләкин оҙаҡҡа түгел. Бер нисә көндән Иштуғанды тағы ла ҡатыраҡ аптыратҡан ваҡиға булды. Ул дәрескә китергә йыйынып ҡына торған саҡта, иртәнсәк, уларға ҡәйнәһе Бибисара абыстай килеп инде. Иҫәнлек-һаулыҡ та һорап тормаҫтан:

— Ҡейәү балаҡай, Айһылыу ҡыҙым, ишеттегеҙме, мулланы иҫһеҙ-оҫһоҙ итеп туҡмап ташлағандар бит! — тип хәбәр һалды. Унан илай-һыҡтай: — Бөгөн таңда, үҙ йортонда. Хәҙер хәл өҫтөндә ята, ти... Һай, ғибрәт, һай, афәт! Быны, кейәү, һинең эшең тип һөйләйҙәр! Иштуғандың камсамондары туҡмаған, тиҙәр!.. Былай булһа, һин ҡайның менән ҡәйнәңде лә туҡмата башларһың әле!.. Ниндәй заманға килеп еттек бит!.. Алла бәндәләренә көн бөттө бит!.. Заман ахыры етеүе ошолор инде, ошолор, я алла! — тип теҙҙе. — Йә, ни өсөн? Мулланың ни ғәйебе бар? — тип ныҡышты.

Иштуған, кемдәрҙеңдер сүп өҫтөнә сүмәлә өйөргә, тамсынан күл яһарға маташыуына ҡарап юғала торған кеше булмаһа ла, был юлы етди аптырап ҡалды, ә ҡәйнәһе уның һайын ныҡышты:

— Был дөрөҫмө, кейәү? Һин... һинең камсамондарыңмы?!.

— Бушты һөйләп тормағыҙ әле, — тине ахыр Иштуған, тамам йәне көйөп. — Комсомолецтәр ниңә кеше туҡмаһындар. Хулигандармы ни улар? Етмәһә, һеҙ ҙә шуға ышанғанһығыҙ. Тимәк, ҡәйнәм һеҙ ҙә, үҙегеҙҙең кейәүгә ҡарата бик үк яҡшы уйҙа түгел икәнһегеҙ.

— Мин бит кешенән ишеткәнде һөйләйем, — тип инде тауышын бер аҙ һүрелтә төштө Бибисара абыстай. — Һотәһе лә шулай тип һөйләй. Тәүҙә, ҡурҡытып, мәсетенән баш тарттырҙылар. Унан мәсеттең мейесен үҙҙәре емереп, ҡара таҡтаһын үҙҙәре ватып, бәләһен уға япмаҡсы булғандар. Ахыр килеп, бына үҙен бөтөргәндәр, тиҙәр. Һай, ғибрәт, һай, афәт!

Бибисара абыстай шулай һөйләнде-көйөндө лә килгәндәге кеүек елпелдәп сығып та китте. Иштуған аптырауллы ҡарашын түрьяҡта өнһөҙ-һүҙһеҙ шәл бәйләп ултырған ҡатынына күсерҙе. Үтә етди һәм борсоулы ине.

— Ишеттеңме, аңланыңмы, тим? Кемдер беҙҙең комсомол йәштәренә яла яғырға, беҙҙең эшкә аяҡ салырға бик яман тырыша башланы, ләкин кем? Кемдең этлеге булыр икән был?!

Ҡатыны уға текләп кенә ҡараны ла өндәшмәне. Иштуған сәмләнеп ҡул һелтәне лә югерә-атлай өйҙән сыҡты.

...Ҡара һин уны, берәүҙәр, ҡулынан килгәнсә тырышып, халыҡҡа хеҙмәт итәйем тип йөрөй. Күңелендә кешегә яҡшылыҡ эшләргә теләүҙән башҡа уй юҡ, ә бына шул, баҡтиһәң, кемгәлер оҡшамай. Кемдер аяҡ салмаҡсы. Яҡшы ниәтеңдең көлөн күккә осормаҡсы. Әлбиттә, был синфи дошман эше. Эйе, мәкерле яман синфи дошман ҡулы йөрөй бында! Ләкин кем? Бына бит Иштуғанға әле бына ваҡыт эсендә нисәнсе тапҡыр был ләғнәтле һорау алдында аптырап ҡалырға тура килә. Был яуызлыҡтарҙың төбөнә төшөргә бик ваҡыт табаһа!.. Әммә ҡалай итеп?..

Иштуған ашығып ауыл Советенә барып инде, ләкин унда председатель булмағас, Баҙыян еңгәнең өйөнә китте. Тышта, күтәрмәлә, Ҡарасәс әбейгә оҡшап, нәҙек оҙон буйлы, һары сәсле булып етеп килгән Сәмиғә һикергеләп уйнап тора ине.

— Ниңә иртә үк бейергә тотондоң, сиңерткә! — тип уйынлы-ысынлы шелтә менән өндәште Иштуған. — Әсәйең өйҙәме?

— Өлләсе.

— Нисек инде өлләсе?

Сәмиғә, зәңгәр күҙҙәрен шаян көлдөрөп, тағы һикергеләп алды:

— Өлләсе!

Кер йыуып торған еренән ҡулындағы һабын күбектәрен алъяпҡысына һөртә-һөртә, өйҙән Сабира сыҡты.

— Кит, оятһыҙ, тапҡан кем алдында ҡыланырға! — тип һенлеһен ситкә этәрҙе, үҙе тыйнаҡ, етди тауыш менән: — Һаумыһығыҙ, ағай? — тип өндәште.

Әсәһенә оҡшап, баҙыҡ кәүҙәле, яғымлы ҡуңыр күҙле Сабира ла сәсен тура ярып, икенән үреп ебәргән, өҫтөнә өр-яңы һары сатин күлдәк кейеп, билен сигелгән ҡыҙыл алъяпҡыс менән быуып ҡуйған. Ҡыҙҙарҙың икеһенең дә йөҙҙәре асыҡ, күңелдәре көр. Иштуған, үҙенең ни өсөн килеүен онотҡандай булып, уларға һоҡланып ҡарап торҙо:

«Әсәй кеше балаларҙы етем итмәй шул! Тимербай ағайым һөйөнөрлөк итеп тәрбиәләй. Шуныһы һәйбәт».

— Ағай, һин әсәйемде һорай инеңме? — тип Сабира уның уйын бүлде.— Ул бит волостә. Кисә кис кенә китте. Йыйылыш була, тигәйне.

— Ә, эйе, дөрөҫ шул. Бөгөн унда делегаткалар йыйылышы булырға тейеш, — тип хәтерләне Иштуған. Ашығып Әхәтте эҙләп китте. Ул тирләп-бешеп сәй эсеп ултыра ине. Ғаббас мулла ваҡиғаһын, күренеп тора, ишетмәгәйне әле.

— Әйҙә, мөғәллим, түрҙән уҙ, — тип асыҡ йөҙ менән ҡаршыланы. — Нисек былай иртә үк килеп сығаһы иттең? Маҡтап йөрөйһөң икән. Майлы ҡоймаҡҡа тап килдең, — тип мәрәкәләне. Зөбәржәт еңгә тағы бер тәрилкәне өймәләм итеп ашъяулыҡҡа майлы ҡоймаҡ алып килеп ултыртты.

— Йә, уҙып кит түрҙән. Үҙең, рәхмәт яуғыры, иң тәүбашлап ширкәт төҙөп, ярлы-ябағаны икмәк-тоҙло иттең. Бойҙай күмәсен ҡайыра тешләп ашайбыҙ хәҙер, аллаға шөкөр, ә үҙең бер тапҡыр ҡунаҡҡа ла килмәйһең. Уҡытыусы ҡунаҡҡа йөрөргә мулла түгел бит ул, ти ҙә ҡуя инең. Исмаһам, тура килгәндә сәй эсеп сыҡ, Иштуған.

— Еңгә, бик ашығыс эш килеп сыҡты бит әле, — тине Иштуған, тыныс булырға тырышып. — Ҡоймаҡ ашауҙы миңә түгел, Әхәткә лә һуңғараҡ ҡалдырып торорға тура килер, һин үпкәләмә инде, йәме... — тип Зөбәржәт еңгәне йыуатты. Үҙе уға һиҙҙермәй генә ишек яҡҡа ымланы. Әхәт:

— Дөрөҫ әйтә, әсәй... Беҙ аҙаҡтан... — тип ҡабаланып һикереп торҙо. Урамға сыҡҡас, хәүефләнеп:

— Нимә бар? — тип һораны.

— Ишетмәнеңме ни?

— Нимәне?!

— Ғаббас мулла үлем хәлендә ята, ти. Кемдер бөгөн төнлә туҡмаған... Комсомолдарға, беҙгә япмаҡсылар, ти...

— Китсе, булмаҫ та... — тип Әхәт аптырауҙан хатта туҡтап ҡалды. — Уны туҡмауҙың кемгә кәрәге булһын?!

— Ана, ҡара... — Иштуған мулланың өйө яғына күрһәтте. — Тимәк, ысын, күрәһеңме, ҡапҡаһы төбөнә кешеләр йыйылған... Инеп-сығып торалар.

— Бәлки, беҙгә лә унда барырға, үҙен күреп һөйләшергә кәрәктер? — тип уны бүлдерҙе Әхәт. — Бәлки, бөгөнгө буш хәбәрҙер? Йәки ул үҙе шундай ҡотҡо таратып ятамы?! Халыҡты беҙгә ҡаршы аяҡландырыу өсөн, тим...

— Дөрөҫ, барайыҡ, күрәйек, — тине Иштуған. — Тик ялған һәр саҡ алдан саба, дөрөҫлөк ашыҡмай ғына уның артынан эйәрә, тиҙәр бит. Ул, дөрөҫлөк тигән нәмә, ҡарап-икеләнә ҡасан килеп еткәнсе, был ялған беҙҙең башты арыу ғына ҡаңғыртыр әле...

Улар, һәр ҡайһыһы был хәлде нисек аңларға ла белмәй уйланып, оҙаҡ ҡына һөйләшмәй барҙылар. Ғаббас мулланың тирәктәр, муйылдар араһына сумған бейек мағур йорто, яҙғы ҡояш аҫтында йымылдап, нимәгәлер үтә ҡәнәғәт булып, маһайып ултырған һымаҡ күренде Иштуғанға. Ул йәне көйөп:

— Ғүмеремдә уның ҡапҡаһын аша атлап ингәнем булманы. Күңелем тартманы. — Ингем дә, һөйләшкем дә, күргем дә килмәне шул ерән төлкөнө! — тип ҡуйҙы.

— Ни эшләйбеҙ һуң? — тине Әхәт тә күңелһеҙ генә.— Хәҙер инергә лә, һөйләшергә лә кәрәк.

— Кәрәк, — тип килеште Иштуған. — Инергә, һөйләшергә. Тәфтишсе килеүен көтмәй, үҙебеҙгә тикшерергә, дөрөҫөн белергә. Ғәйбәткә, ялаға урын ҡалдырмаҫҡа. Етәр!

Улар барып ингәндә, мулланың баш осонда мәзин йәсин уҡып ултыра, тирә-яҡта әбей-һәбейҙәр тын ғына илаша, ҡорғандары төшөрөлгән ярым ҡараңғы өй эсен шомло тынлыҡ баҫҡан...

Иштуған, йөрәк өшөткөс был күренештән ҡул һелтәп ҡасырға теләү тойғоһон көскә баҫып, мәзин янына барып ултырҙы. Уныһы, уҡыуҙан туҡтап, кейәүенә аптырап ҡараны.

— Нисек киләһе иттең? — тип бышылдап һораны. Иштуған мөмкин хәтле иғтибарлы, хәстәрле тауыш менән:

— Мулла олатай менән һөйләшеп, бының кем эше икәнен белергә ине, — тине.

— Ул бит хәл өҫтөндә ята, — тип мәзин тағы ла аптырап китте. — Ул бит аңына килмәне. Башына һуҡҡандар бит. Етмеш йәшлек ҡартҡа күпме кәрәк...

— Ғәжәп... Кем туҡманы икән?

— Кем белһен... Төндә, ҡомған тотоп тәһәрәткә сыҡҡанда, ишек алдында туҡмағандар. Оҙаҡ инмәй торғас, ҡарсығы эҙләп сыҡһа, тупһа янында иҫһеҙ ята, ти...

— Бер ҙә иҫкә килмәнеме икән, ҡайным?

— Килмәне шул...

— Бәлки, врач алып килергә кәрәктер, ә?!

Мәзин мулланың ҡул тамырын тотоп ҡараны.

— Һуң балам... Тамыры ятҡан...

Әхәт менән Иштуған һөйләшә-кәңәшә урам буйлап киттеләр.

— Иҫкә килмәне ти бит?

— Килмәне, ти. Ғәжәп, ул саҡта комсомолдар туҡмаған тигән һүҙҙе ҡайҙан алдылар икән? Ысынлап та, кем, ни өсөн туҡманы икән уны?

— Белмәйем. Бәлки, ул үҙе һуңғы тапҡыр сәхнәнән берәй фажиғәле роль уйнап төшөргә булғандыр? Хәтерләйһеңме, теге саҡта беҙгә, башҡорт ҡыҙылармеецтәренә, Петроградта «Гроза» тигән фажиғәле тормошто күрһәткәйнеләр...

— Һин урынһыҙ шаяраһың, — тине Иштуған, бошоноп. — Һиңә етди булырға ваҡыт.

— Минең урында һин ни эшләр инең?!

— Белмәйем, бер ни аңламайым, — тине Иштуған, уйланып. — Һуғышта рәхәт ине. Ҡулыңда мылтыҡ. Алдыңда дошман. Ат та йыҡ! Ат та йыҡ! Ә бында ҡайҙа дошман, ҡайҙа дуҫ икәнен дә белеүе ҡыйын була башланы. Берәй мөйөштә үҙеңде лә бәреп йыҡмаҫтар, тип уйлама... Бына бит, Ғаббас мулла тирәһендә күтәрелгән шау-шыуҙың дошман эше икәнен күңел һиҙеп тора, ә бына фәлән кешенең эше тип әйтергә дәлил юҡ. Бар һин уны аңлап, аңлатып ҡара! Эйе, йомғаҡ-йомғаҡ!.. Йә, осон тап!?

— Туҡта әле, беҙ, тарҡау уйҙарға бирелеп, төп мәсьәләнән ситкә киттек түгелме, мөғәллим? — тип Әхәт уның һүҙен бүлде. Ул һуңғы ваҡытта дуҫына шаяртып та, хөрмәтләп тә «мөғәллим» тип өндәшергә ярата ине. — Беҙгә бит хәҙер үк волоскә хәбәр итергә кәрәк тәбаһа! Кил-

һындар, тикшерһендәр. Ғәйепләне халыҡ алдына сығарып баҫтырһындар. Шулай бит, мөғәллим?

— Шулай ҙа бит... Тағы шул «тикшереүсе» Хитров килер. Йомғаҡты тағы ла ныҕыраҡ сейәлтеп, осон алыҫыраҡ йәшереп китер. Их, бына өлкәнән килһен ине тикшереүсе!

— Барыбер хәбәр итергә кәрәк. Бындай эште беҙ үҙебеҙ генә тикшереп хәл итә алмайбыҙ.

— Дөрөҫ, ат эйәрлә лә волоскә сап. Хәбәр ит. Тикшерһендәр. Ә мин мәктәпкә киттем. Дәрес башлар саҡ етә.

Улар, ашығып, икеһе ике яҡҡа юнәлде.

## V

Спектакль Емештең йөрәгенә шифалы дауа булды. Көндөҙ әҙәбиәт түңәрәгендә булған кисерештәр шундай ныҡ, түбән булып артҡа сигенде. «Любовь Яровая» спектакле тәьҫирендә, әйтерһең дә, ул ҡайтанан тыуҙы, донъя ваҡлыҡтарынан юғары күтәрелде. Уның шулай ялғанды, көсһөҙлекте сиктән тыш ауыр кисерә, шул уҡ ваҡытта, ни кескәй генә мөмкинлектәргә тотоноп булһа ла, улар һалған сирҡаныс йоғонтонан тиҙерәк, йәһәтерәк ҡотолорға, күңел күген донъяның күреп туймаҫ матурлыҡтарын, яҡшылыҡтарын ғына сағылдырып торорлоҡ аяҙ һәм саф итеп һаҡларға тырышыу ғәҙәте был юлы ла тантана итте. Бындай саҡта ул кемгәлер онотолоу дәрәжәһенә етеп һоҡлана, унда күргән иң яҡшы, яҡты сифаттарҙы үҙендә лә булдырыу теләге менән дөрләп яна башлай. Әле лә тап шулай булды: Любовь Яровая — революция өсөн янып йәшәгән, көрәшкән, еңгән, хатта үҙенең изге идеалына ирешеү юлында мөхәббәтен дә ҡорбан иткән оло йөрәкле ҡатын образы хәҙер Емештең йәненйөрәген биләп алды. Уның һәр һүҙе, хәрәкәте, кисереше, шинель кейеп, билен ҡайыш менән быуып йөрөүҙәре, наганын шундай мәргән ата белеүе — бөтәһе-бөтәһе иҫ киткес яңы һәм матур, ғәжәп күренде уға. Хатта ҡасандыр, «гүмерҙәре былай ҙа бик ҡыҫҡа ғына бит уларҙың, ирҙән көҙгә хәтле генә йәшәйҙәр бит улар» тип, сәскәләрҙе лә баҫып иҙергә йәлләй торған Емеш был юлы Яровая атып үлтергән аҡ офицерҙе һис тә йәлләмәне. Киреһенсә: «Ирем тип, уға революцияны быуырға юл ҡуйып торһонмо ни?!» — тип Яроваяны ысын күңелдән яҡланы.

Емешкә шулай ҡыйыу, ғәҙел холоҡло, маҡсатҡа ирешеү юлында сигенеү, икеләнеү, ҡурҡыу белмәҫ кешеләр оҡшай. Улар уның тынғыһыҙ рухын тотош биләп ала, изге көрәшкә, батырлыҡҡа әйҙәй, ә инде был спектаклдә ундай кеше ҡатын-ҡыҙ ҙа булғас, уны икеләтә ярһытып, ҡатын-ҡыҙҙың да ҙур идеалдар менән янып йәшәргә, ил, халыҡ бәхете өсөн көрәш юлында ҙур батырлыҡтар күрһәтергә, эйе, тап шулай аяуһыҙ һәм батыр көрәшергә һәләтле булыуына ышанысын тағы ла арттырып, ҡанатландырып ебәрҙе.

«Эй, ниңә мин дә иртәрәк тыумағанмын икән? Революция өсөн көрәшкән бынауындай батыр ҡатындарҙың береһе булһамсы мин дә! — тип янып-ярһып уйланды ул хәҙер. — Мин дә бер кемдән дә кәм булмаҫ инем. Дуҫты дошмандан айыра белер инем мин дә».

Был спектакль бик оҙаҡ Емештең күҙ алдынан китмәне. Ҡайҙа барһа ла, Любовь Яровая образы уның күҙ алдында баҫып торҙо. Саҡ ҡына аулаҡ ҡалһа, бөтә донъяһын онотоп, хатта Яровая булып йәшәй башланы. Бына әле лә ул, көн кисләүен, ятаҡҡа ҡайтыр, йәки ашханаға барыр саҡ етеүен дә онотоп, ишек алдында ары-бире йөрөй. Уның аяғында иҫке ҡара ботинка, өҫтөндә ҡыҫҡа пальто. Пальтоның оҙон киң еңдәрен тәгәрмәсләндереп төрөп ҡуйған. Ҡалын ике сәс толомон алға төшөрөп, күкрәгенә һалған. Ҡескәй нәфис ҡулдары ҡаты йомарланған, уйсан, моңһоу күҙҙәре ҡыйыу, теремек ҡарашлы булып киткән. Ҡескәй төҙ аяҡтар ныҡ, өҙә баҫа, һын ғорур һәм баҙыҡ... Был — Емеш — Яровая. Эйе-эйе, Любовь Яровая булып йөрөй ул был ваҡытта... Уның өҫтөндә лә пальто түгел, ә һоро шинель, ысын һалдат шинеле, ә кеҫәһендә... Кеҫәһендә наган! Эйе, наган! Революция дошмандары үтә алмаҫ!.. Емеш — Яровая бында, һаҡта тора!

Бына ул ҡапыл, тертләп киткән һымаҡ булып, күкрәгендә ятҡан толомон һыйпап ҡуйҙы. Төҫөнә ҡыҙыллыҡ йүгерҙе: «Туҡта, Яроваяның сәсе ҡыҫҡа ине шикелле?! Оҙон сәс менән революционерка була алыр инеме икән? Бындай оҙон толомло булһа, уға кепка, шинель килешер инеме икән? Килешмәҫ ине. Оҙон сәс тә, моғайын, иҫкелек, артталыҡ билдәһе генәлер. Мин шул артта ҡалған ауыл ҡыҙы булғаным өсөн сәсемде ҡырҡтырырға йәлләп йөрөйөмдөр, моғайын? Ә Яровая ниндәйҙер толом өсөн дә ваҡланып торор инеме? Әлбиттә, юҡ! Ҡайҙа һуң миңә

Яровая булырға?! Ошонда бер үҙем толом йөрөтәм. Анауы Сәхибә туташҡа хәтле ҡандай матур сәсен ҡырҡтырған! Ә мин... Их, шул толом өсөн һаман комсомолға ла инмәгәнмен бит, исмаһам, ә улар — Сәхибә туташтар, Емер Яшинскийҙәр минең тетмәмде тетәләр!.. Мещанка! — тип, үсеп ирендәрен сапылдатып, ҡыйыш йылмаялар... Ә мин... Шәмсиә әйтмешләй, диуана!..»

Әле .генә Яровая булып ғорур баҫып йөрөгән аҙым өкренәйҙе. Ҡыҙ, йәне көйөп, тирмән ташы кеүек ауыр, килбәтһеҙ булып торған еңдәренең төрөүен төшөрҙө. Оҙон ең уның кескәй нәфис ҡулдарын тағы үҙ эсенә йотто. Ҡүңелен бошонҡолоҡ солғап алды, ләкин оҙаҡҡа түгел. Бер аҙҙан ул уйы менән тағы спектаклгә ҡайтты. Уның күҙҙәре тағы алыҫтарға төбәлде, әйләнә-тирәлә ни бары, ни юғы онотолдо — ул тағы Яроваяға әйләнде, ҡулды «шинель» кеҫәһенә тығып, наганды ҡапшай-ҡапшай ҡыйыу һәм матур большевичка булып, ғорур һәм киң баҫып йөрөй башланы. Ҡаруанһарайҙың ишек алды уның өсөн икһеҙ-сикһеҙ киң һәм хәүефле көрәш майҙаны инде хәҙер...

* *
*

Яҙғы тымыҡ көн ойоп йоҡларға ятты. Ер өҫтөн киске һалҡын ҡурып алды, энә эҙләгәндәй, үтә түбән эйелгән һоро күктән ваҡ ҡына осло ҡар энәләре һибәләргә кереште. Улар Емештең сәсенә, керпектәренә, ҡаштарына көмөш бәхрәмә булып яттылар, ә ул һалҡынды ла, ҡарҙы ла, эңерҙе лә тоймай һаман йөрөнө лә йөрөнө. Хөрмәттең һөнәш килеп баҫыуын да, үҙенә һоҡланыпмы, яратыпмы ҡарауын да абайламаны. Тегеһе лә өндәшер һүҙ тапманы. Бер ҡараһаң, һөйләйһе хәбәре лә Емеш өсөн һөйөнсөлө түгел. Көн буйы газета сығарыу менән булып арып та киткән һымаҡ. Уны айға ике тапҡыр сыға торған «Ҡыҙыл юл» стена газетаһына секретарь итеп һайлап ҡуйғайнылар быйыл. Бөтә газетаны бер тигеҙ матур, таҙа итеп яҙып сығыуы еңелдән түгел шул. Етмәһә, бөгөнгө газетала уның күңеленә төптө ятмаған нәмәләр ҙә бар: һаман да шул Яшинский этлеге. Әле ҡасан ғына Хөрмәт менән Емеште урынһыҙға йәберләне. Инде бына тигән кешене — Дәүериә апайҙы сәйнәргә керешкән! Белмәйем, был редактор тигән ағайҙың күҙе ҡайҙа ҡарайҙыр, нимә күрәлер?! Унда бит әле Емештең оҙон сәстәренән, бер

көнгө хикәйәһенән көлөп яҙған шиғыры ла бар ине. Ярай әле редактор уныһын газетаға индермәне. Юҡһа хәҙер Емеш шул өс тинлек таҡмаҡ өсөн күпме бошонор, күпме көйөнөр ине?! Ә ни өсөн Емеш сәсен ҡырҡырға йәлләй икән?

Хөрмәт, үҙе лә абайламаҫтан, ҡыҙҙың күкрәгендә ятҡан толомон ҡапыл ҡулына урап тота биреп торҙо. Емештең ҡар ынйылары һырыған керпектәре дерелдәп китте.

— Һин дә минең толомдарымды күралмайһың, ахыры?

— Эйе...

— Улайһа, ниңә уға үреләһең?

Хөрмәт толомдарҙы ебәрҙе лә күңелһеҙ генә тауыш менән:

— Яҡташ! — тип өндәште. — Ҡара әле, яҡташ, минең һиңә бер кәңәшем бар...

Емеш инде шаян йылмайып егеткә ҡараны:

— Кәңәшең?! Ҡайҙан килгән кәңәшсе?!

Ләкин уның ысынлап та бошонҡо булыуын күреп, етди тауышҡа күсте.

— Һөйлә һуң. Эсеңде нимә бошора? Ни кәңәш бирмәксеһең?

— Бошора шул... — һүҙ башлап китә алмай бер аҙ тынып торҙо Хөрмәт. Унан тағы ҡыҙҙың толомон ҡулына алды, уға ҡунған ҡарҙы усы менән һыйпап иретте, ахыр, ниндәйҙер эске ярһыу менән тағы: — Яҡташ! — тип ҡабатланы. — Яҡташ, әйҙә, һеҙҙең ятаҡҡа инәйек тә, мин үҙем һәйбәтләп кенә һинең сәсеңде подкружок ҡырҡып ҡуйайым!

— Ни өсөн?!

— Бөтә ҡыҙҙар араһында минең яҡташым ғына боронғоса оҙон сәс менән йөрөмәһен өсөн...

— Алйот!

Емеш толомон егеттең ҡулынан һелкетә тартып алды ла өҙә баҫып китеп барҙы.

— Подкружоклыларҙы яҡташ ит! Миңә яҡташһыҙ ҙа бик һәйбәт.

Хөрмәт баҫҡан урындә ҡатып ҡалды. «Ни эшләргә инде был ҡыҙ менән? Йәлләй шул... Ярата шул... Яратмаҫлыҡмы ни? Беҙҙең яҡта бит сәс толомо ҡыҙҙарҙың иң шәп матурлығы һанала. Шуға, моғайын, ҡыҙҙар кейәүгә барғанға хәтле ошо матурлыҡтарын шәл аҫтына

[illegible]ермәйҙәр ҙә. Сәстәңкәләр, сулпылар тағып, биҙәй-бирәй ялаңбаш йөрөйҙәр. Ҡилен булғас инде, ҡашмау кейәләр. Ҡашмау ҙа толомдо йәшереп бөтмәй. Эйе, ҡалын оҙон толом — матурлыҡ билдәһе шул беҙҙең яҡта. Шулай булғас, Емештең кирелеге миңә аңлашыла ла бит, хатта үҙемә лә ул ошо толомдары менән айырата һөйкөмлө күренә, шикелле. Иң тәүге шиғырымды ла мин уның толомдарын маҡтап яҙғайным бит, әммә был бит иҫке ҡараш! Комсомол кешегә былдай ҡараштa булыу яраймы ни?! Илдә социализм төҙөргә, бөтә донъяла революция яһарға, халыҡты коммунизм йәмғиәтенә табан етәкләргә тигән оло бурыстар алға саҡырып торғанда, ул толомдары хаҡында шиғыр яҙып маташыу көлкө түгелме ни?.. Күрәһең, мин үҙем дә бик үк өлгөрөп еткән комсомолец түгелмендер? Ана бит, Емеште үсектереп ҡайтарып ебәрергә генә эшкә аштым, ә Зиннур ағай, аңлатыу — беҙҙең төп ҡорал, Емеш менән һөйләшергә, уға нимә яҡшы, нимә насар икәнен аңлатырға кәрәк, тигән була. Иң яҡшыһы ҡайсы алып йөрөргә лә Емеш ҡайҙа барай, шунда толомон ҡырҡырға ла алырға кәрәктер. Юҡ, юҡ... Был бит кешене хурлау була. Элек бит намыҫын һаҡламаған ҡыҙҙың толомон кейәүе шулай ҡырҡыр булған. Бындай хурлыҡтан һуң ҡыҙ, әлбиттә, йәшәмәгән. Йә һыуға ташланған, йә ҡаянан осҡан...»

Хөрмәт йөрәгенең сабырһыҙ дөпөлдәүенә ҡолаҡ һалып тынып торҙо.

«Емештең сәсенә ороноп ҡара! Ул ғәрлегенән нимә эшләмәҫ?! Ҡайҙа югерҙе һуң әле ул?.. Ятаҡҡа ҡайтманы, шикелле? Моғайын, стенгазетаны уҡырға ингәндер? Уны әле генә элеп сыҡҡанды белә бит...»

Хөрмәт атылып юғары ҡатҡа менде. Аһылдап, Емештең артына килеп баҫты.

— Газета һәйбәтме, яҡташ?

Уныһы күҙен тултырып бер ҡараны ла уҡыуында булды.

Ҡыҙҙың ҡарашы йөрәк тетрәткес ваҡиғала — Сакко менән Ванцеттиҙең электр ултырғысында язалап үлтерелеүе хаҡындағы хәбәрҙә туҡталып ҡалғайны: «Сакко менән Ванцетти һуңғы сиккә хәтле батыр көрәшсе булып ҡалдылар: ғәҙелһеҙлеккә протест йөҙөнән аслыҡ иғлан итеп, егерме һигеҙ көн бер ни ҡапмай торҙолар. Ҡот осҡос язалы үлемде лә иҫ киткес тыныс һәм ғорур ҡабул иттеләр...»

Емеш, өлкә газеталарҙы уҡып, был хаҡта күптән белһә лә, халыҡ бәхете өсөн үҙ ғүмерен ҡорбан иткән батыр көрәшселәрҙең һуңғы минуттарын һөйләгән был аянысл хәбәрҙән күҙен ала алмай бик оҙаҡ әсенеп, тынып торҙо:

«Әй-й, йәнһеҙҙәр! Ҡайҙа ла шул яҡшыны яман быуа икән был донъяла! Тиҙерәк донъя революцияһы булһын ине, исмаһам. Хеҙмәтсән халыҡтың ауыр тормошон еңеләйтергә теләгән өсөн генә кешеләрҙе үлем язаһына дусар итеүҙәр бөтөр ине».

— Бынауыны уҡының мы? — тип Хөрмәт «Сит элементтәргә техникумда урын юҡ!..» тигән хәбәргә төртөп уның уйын бүлде.

Бындай темаға яҙылған хәбәрҙәрҙе лә Емеш һуңғы ваҡытта газеталарҙа йыш осрата, ләкин уларҙы ҡайҙалыр бик алыҫта булып ятҡан ниндәйҙер аңлайышһыҙ, осраҡлы хәл тип кенә ҡабул итә ине. Хәҙер килеп «Ҡыҙыл юл» да шул хаҡта яҙа! Ул ҡабаланып хәбәргә күҙ йөрөтөп сыҡты.

«Ит сауҙагәре сатан Сафа ҡыҙы Дәүериә, етем баламын тип алдап, стипендия ашап ята. Техникумдан уны селек һепертке менән ҡыуып сығарырға кәрәк...»

«Ауыл малайы».

Хәбәрҙең аҫтына Емер Яшинскийҙең шиғыры урынлаштырылған.

Дәүериә — тын икән,
Үҙе купец ҡыҙы икән.
Иҫке тормошто һағынып,
Скрипка һыҙа икән.

Сит элемент балаһы
Йөрөмәһен арала.
Аяҡ эҙе булмаһын
Бында түгел, ҡалала.

Ҡорос ҡуллы пролетар
Балалары уҡыһын.
Купец, мулла хәҙер көлдән
Борсаҡ сүпләп ултырһын.

Ҡаты аптырауҙан Емештең башы зыр әйләнеп киткән һымаҡ булды. Мейеһендә ут ҡойоно ҡүтәрелде. «Дәүериә апай — сит элемент! Тимәк, ул яман кеше?! Улай булғас, ни өсөн һуң Емеш уны шул хәтле яҡын, шул хәтле һәйбәт кеше итеп күрә? Ә Яшинскийҙе йәне һөймәй? Ни өсөн? Әллә Емеш шул хәтле аңрамы, аңһыҙмы? Яман



менән яҡшыны, үҙ кеше менән сит кешене айыра алмайғы әллә ул? Былай булһа, Емеш үҙе кем була һуң? Ул бит бығаса кешеләрҙе яҡшыға-яманға, матурға-йәмһеҙгә айырып ҡына өйрәнгән. Әйтәйек, уның фекеренсә, Дәүериә — яҡшы кеше. Яшинский — яман. Ә былай булғас, [illegible]енсә уйларға кәрәк булә лабаһа! Шуны Емеш булдыра алырмы?! Ҡешеләрҙе, яҡшы йәки яман булыуына ҡарамаҫтан, кемдән тыуыуына ҡарап ҡына, был сит элемент йәки үҙ элемент, тип баһаларға өйрәнерме? Әй, бик тә ҡатмарлы икән дәбаһа был тормош тигән нәмә! Бәлки, һәр ни ҙә уйламай, кисермәй, кем нимә әйтһә, шул дөрөҫ икән, тип тик йөрөргә кәрәктер, ә?.. Әйе шул, ни эшләп һуң әле мин бөтә нәмәгә төшөнөргә, үҙемсә баһаларға тырышам икән?!

Ләкин бит ул ҡасан ғына һуң әле бер китаптан, «Донъяла һәр ваҡыт яманланып йәки һәр ваҡыт маҡталып ҡына торған кеше булмай. Шуның өсөн кеше фекеренә эйәреп йөрөүҙән дә хата юл юҡтыр», тип уҡығайны.

«Аһ!..» — тип тертләп ҡуйҙы Емеш. — Ах, был Буд[illegible]ның һүҙе ине бит! Ысынлап та, бәлки, мин төптө синфи аңһыҙ ҡыҙыҡайҙыр, ә?!»

Ул үҙе янында һаман өнһөҙ-һүҙһеҙ баҫып торған Хөрмәтте лә онотоп ишеккә ташланды. Икенсе ҡаттан дөбөршатыр югереп төштө. Тышҡа сыҡҡас та, һалҡындан тыны ҡурылғансы, ишек алдында югереп йөрөнө. Ятаҡҡа ингәндә, уйы тағы теге хәбәргә ҡайтты:

«Туҡта әле, үҙ йөрәгең һәйбәт булмай тороп, кеше йөрәгендә һәйбәт тойғолар уятып буламы икән? Юҡтыр, булмайҙыр. Ә бит Дәүериә апайҙың скрипкала уйнауы кеше күңелен фәрештә дәрәжәһенә күтәреп, сафландырырға һәләтле ләбаһа!.. Шулай булғас...»

* * *

Дәүериәнең койкаһы, ғәҙәттәгесә, матур итеп йыйыштырылған көйө тора. Үҙе юҡ. Ғөмүмән, ятаҡта ҡыҙҙар бик аҙ, хатта Шәмсиә менән Нәфисә лә күренмәй: «Былар ҡайҙа китеп бөткән?»

Емеш үҙ койкаһы яғына, мөйөшкә, уҙҙы. Тәҙрә төбөндә ятҡан китаптарының әле береһен, әле икенсеһен алып ҡараны. Башҡа ваҡыттағыса, уҡыуға бирелеп, күңелһеҙ

уйҙарҙан арынырға теләне. Ҡисә кис кенә уҡый башлаған «Давид Копперфильд» көтөп ята ине уны. Эмиль Золя, Жюль Верн, М. Горький әҫәрҙәрен уҡығас, күңелендә уянған: «Эй, миңә лә яҙып ҡарарға ине!..» — тигән татлы хыял уянғайны. Диккенсте уҡый башлағас, был хыялы тағы ла көсәйгәйне, хатта күңелендә ниндәйҙер өмөткә, ышанысҡа оҡшаш тойғолар барлыҡҡа килде. Эйе, үткән төндө ул, ошо татлы хыял ҡанатында тирбәлеп, сикһеҙ оло бәхет менән уҙғарғайны.

«Их, йәшлек, зауыҡлы, наҙлы йәшлек, һин, бәлки, һәр эште булдыра алған менән түгел, ә булдырырға үҙеңде мотлаҡ һәләтле итеп тойоуың менән матурһыңдыр ҙа!..»

Әле инде бына ул үҙ күңелендә шундай яҡты һәм ҡыйыу тойғолар уятып ебәргән һәйбәт китабын да ҡулына ала алманы. Ниндәйҙер билдәһеҙ, ҡараңғы уйҙар иркенә бирелеп, койкаһына һуҙылып төшөп ятты. Бер аҙҙан тағы ашығып һикереп торҙо, өҫ-башын төҙәтте:

«Был ваҡытта клубта репетиция башлана торған!.. Концертҡа әҙерләнәләр бит! Дәүериә апай, моғайын, шундалыр!..»

Ул үҙенә хас булмаған сабырһыҙлыҡ менән урынынан һикереп торҙо, тағы өҫкө ҡаттан аҫҡа хәтле түкмәсә яҙып йүгереп төштө. Әйтерһең, ул ҡайҙалыр китеп юғаласаҡ бик ҡәҙерле, иң яҡын кешеһен һис юғында алыҫтан, ситтән генә булһа ла тағы бер күреп ҡалырға ашҡына ине.

Клубҡа барыр өсөн тағы икенсе ҡатҡа йүгереп менергә, баяғы хәбәр урынлашҡан стена газетаһы янынан уҙырға, оҙон коридор буйлап йүгерергә кәрәк... Яңы эңер төшкән саҡ, коридорҙа әле лампочкалар яндырылмаған, әммә йыр, моң өсөн ҡараңғылыҡ бармы ни?! Ана бит, клуб яғынан килгән тетрәткес моң бөтә тирә-юнде баҫып алған! Студенттәрҙең ҡыллы оркестре техникум комсомол ячейкаһы шефлыҡҡа алған эшселәр клубында концерт бирергә әҙерләнә. Ошонда — ҡаланың элек күпселегендә талау, урлау, үлтереү кеүек ҡырағай төшөнсәләрҙе иң ябай хәл тип һанаған кешеләр — чегодайҙар йәшәй тип дан алған, төндә түгел, көндөҙ ҙә унан яңғыҙяры уҙырға ҡурҡыныс һаналған районында — аң-белем эше алып бара хәҙер техникум комсомолдары. Концертҡа халыҡ ябырылып килә. Клуб шығырым тулы була. Концерттән алда студент йәштәр эшселәрҙе ҡыҙыҡһындырған темаға доклад һөйләйҙәр, әңгәмә үткәрәләр.

Унан шиғыр, йыр, бейеү һәм физкультура номерҙәре китә. Техникумдың күк блузасылар хоры революцион йырҙар йырлай, төртмәле әйтемдәргә ҡоролған күренештәр башҡара, ҡайһы саҡта драма түңәрәге бында «Аҫылъяр», «Ғәлиәбаныу», «Беренсе театр» кеүек пьесаларҙы ла ҡуйып ебәрә.

Емеш өсөн былар бөтәһе лә яңы, бөтәһе лә ҡыҙыҡлы. Ул ҡыуанып, хатта бер тиклем көнләшеп ҡарай уларҙы. Әллә үҙенең күңеле лә йыр, моң менән тулы булғанға, ҡыллы оркестр уйнағанда йәки халыҡ көйҙәре йырланғанда, ул һис тә иғтибарһыҙ ғына үтеп китә алмай. Бына әле лә тап шундай, унын күңелен әсир итә торған, моң тарала. Рояль, скрипка, мандолина, ҡурай тауыштарынан ҡушылған сихри моң ҡыҙҙың йөрәген тетрәтә, елкеңдерә, яҡтыға, яҡшыға, күҙ күреме еткеһеҙ бейеклеккә осороп алып китә.

— Аһ! «Таштуғай»ҙы уйнайҙар! Таштуғай...

Күңеленән ҡушылып йырлай-йырлай, Емеш клубҡа табан атлай.

...Таштуғайҡай, һинең ҡамышыңды
Еҙ ҡурайҡай итеп тартайым.
Ялан еркәй, һинең кәкүгең юҡ,
Үҙ Уралҡайыма ҡайтайым...

«Ниндәй моң! Тыуған ергә тиңһеҙ һөйөү ята бит был йырҙа! Тыуған ерҙе, тыуған илде өҙөлөп һағыныу зары! Эй, был тойғо ҡайһылай яҡын, таныш хәҙер Емешкә лә. Тыуған ер, һандуғаслы, кәкүкле Оло Эйек буйҙары, сәскәле далалар, емешле туғайҙар, экиәткә, йырға, тарихкә бай әбейҙәр, мөхәббәткә туйымһыҙ һылыу ҡыҙҙар, егеттәр... Байрас... Шәүрәкәй, Сабира, Заһира. Эй, ҡайһылай ҙа яҡын һеҙ йөрәккә, ҡайһылай асыҡ, аңлайышлы һеҙҙең һәр ҡайһығыҙ. Ниндәй яҡты, күркәм, матур һеҙҙең йөрәгегеҙ! Эй һағындым, бик-бик һағындым дабаһа мин һеҙҙе, балалыҡ дуҫтарымды! Ҡайтып китер инем дә, йөрөп күрер инем дә, һөйөп-яратып туймаҫ инем дә... Тик аңларһығыҙмы һуң һеҙ мине элекке кеүек?»

«Таштуғай» уйналып бөттө. Оркестр әҙ генә тынып, ҡылдарҙы сирткеләп, тигеҙләп торҙо ла инде теремек «Ком бураны»н һыҙҙырып ебәрҙе. Көйгә эйәреп, Емештең күңелендә был йыр ҙа ҡабатланды.

«Ком бураны, ком бураны, Ырымбурҙың урамы...»

Емеш шулай, күңеленән йырлай-йырлай, шым ғына клубҡа инеп ултырҙы. Репетиция дауам итә. Матрос

кейемдәре кейеп, «Барыня» көйөнә оҫта бейеүсе Шәмсиә менән Нәфисә лә бында, күк блузасылар хорында ҡатнашыусы ҡыҙҙар, малайҙар ҙа йыйылған, сырыш маңлайын тағы ла ҡарталандырып, үҙенсә ғәжәп бер һында Яшинский ҙә сәхнәлә һерәйеп тора. Күрәһең, тағы шул үҙенең ниндәй ҙә булһа берәй тоҙһоҙ таҡмағын уҡырға йыйына.

Емеш, унан екһенеп, ҡарашын йәһәт кенә оркестр яғына күсерҙе. Әсә ҡанатының йылыһына һыйынған ҡаҙ бәпкәләре шикелле, роялде уратып баҫҡан музыканттарға берәм-берәм күҙ йөрөтөп сыҡты. Зиннур менән Дәүериәнән ҡарашын ситкә ала алмай йөҙәне. Уларҙың йөҙөнә, күҙҙәренә ҡат-ҡат ҡарап, күңелдәрендә ни барын уҡырға, рухи хәлдәренә төшөнөргә тырышты, ләкин уларҙа, ғәҙәттәгесә, уйынсыларға хас ярһыу дәрт, бәхет тойғоһонан башҡа бер ни ҙә тапманы.

«Дәүериә апай газетаны күрмәгән йәки, күрһә лә, иҫе китмәгән».

Был уйҙан Емештең үҙенә лә еңелерәк булып китте. «Эйе, тап бына шулай, унын кеүек тыныс, сабыр булырға кәрәк тә. Юҡһа, һәр нәмәгә бөтөрөнһәң, үҙең дә бик тиҙ юҡҡа сығыуың бар!» — тигән уй башына килгәс, ул тағы ла тыныслана төштө. Унан, ярһып китеп: «Эй-й, Яшинский нисек кенә таҡмаҡламаһын, Дәүериә апайҙың ҡулынан серле скрипкаһын тартып ала алмай ҙабаһа! — тип ҡуйҙы. — Эйе шул, бер уйлаһаң, Дәүериә апай — иҫ киткес бәхетле кеше. Шулай булып ҡалыр ҙа. Ул бит ошо илаһи уйын ҡоралы менән кешеләрҙең йәнен, рухын байытырға хеҙмәт итер, йән аҙығы, рух күтәренкелеге өҫтәп, уларға ауыр һәм ҡатмарлы тормош юлын еңелерәк үтергә ярҙамлашыр, күңелдәрҙә һәр саҡ яҡшы тойғолар уятып, йәшәүҙе йәмләр...»

Инде Емештең күңеле бөтөнләй ҙә күтәрелде. Ул тотош бирелеп музыка тыңларға кереште. Бынан ары уның уйҙары үҙенең дә, әгәр мөмкинлеге булһа, ниндәй ҙә булһа берәй музыка ҡоралында уйнай алыу-алмауы хаҡында барҙы. Ҡескәй саҡта ҡумыҙҙы ҡулына алыу менән нисек уйнап ебәреүен хәтерләне. «Их, әгәр шул саҡта минең дә скрипкам йәки мандолинам булһа, өйрәнмәҫ инемме ни?! — тип сәмләнеп тә алды. — Хәҙер ҙә өйрәнер инем әле, әммә ҡайҙа һуң?» Йырҙы бит Емеш нисек ярата! Көйҙәрҙе тәү ишетеүҙә үк отоп ала. Ауылда тауышын да моңло, тиҙәр ине, ләкин оялсанлығы Емешкә

үрмнең һөнәрҙәрен бында кемгә лә булһа белдерергә һис ю мөмкинлек бирмәй шул. Эй ҡыйыуһыҙлыҡ! Емеш, был ...ҡта уйлай башлаһа: «Йә, теге хикәйәң, шиғырың менән ...үр булған кеүек, сәхнәгә сығып та хур булғың киләме ...?!» — тип үҙенә ҡаты иҫкәртә лә бөтә ярһыу тойғоһон күкрәгенең тәрән төпкөлөнә йәшереп тә ҡуя. Унан тыш... ...ан ҡарағанда бер ни менән дә ҡыҙыҡһынмаусы, томһа, ...тта бер тиклем йоҡоло кеше һымаҡ күренеп йөрөй бирә. ...йе, Емештең йөрәгендә янғанды бер кем дә белмәй шул. Б...мәһен. Бәлки, шулай яҡшыраҡтыр ҙа. Эстәге утыңды улай бик йомарт тышҡа сығарып ебәрһәң, бөтә кешенең ...йҡауына һалһаң, йөрәк ни эшләргә тейеш? Бик тиҙ бу...ш, йылыһыҙ баҙлаған төнгө баҙлауыҡ кеүек булып ...лмаҫмы!.. Туҡта, туҡта, мин ни уйлайым, ҡабынып, ...ҡынланып китергә яткан усаҡты ҡөл менән күмеп, ...ҫырып ҡуйһаң, нимә эшләй? Быҫҡып ята бирә лә бө...нләй һүнеп үк ҡуя түгелме һуң?!

Емеш шулай, төрлөсә уйлана-аптырай, репетиция бөт...кәс, клубта ултырҙы. Унан, киске дәрес әҙерләргә дәф...тәр-ҡәләмдәрен алып килергә тип, ятаҡҡа ҡайтырға ...ыҡты. Шул саҡ уны тағы коридорҙа Хөрмәт осратты.

— Емеш! Туҡта әле!

— Ни булды тағы?! Бөгөн, ҡайҙа барһам да, юлыма ...ып итеп сығып ҡына тораһыңсы...

— Улай тимә, Емеш. Ҡыуанысым эсемә һыймай. Мә, ҡара, һин дә ҡыуан!

— Нимә ул?

— Танымайһыңмы ни? Дәфтәрең бит. «Тылсымлы топ».

— Ә нимәгә ул миңә? Йыртып ташла!

Емеш, бошоноп, китеү яғына боролдо.

— Мин ул дәфтәрҙе күреү түгел, иҫемә лә төшөргөм килмәй, белдеңме?!

— Улай тимә, — тип ялынды Хөрмәт. Ҡыҙҙың беләгенән тотоп алды. — Уҡып ҡара башта!

— Шул эшкинмәгән хикәйәнеме? — Емеш үҙенә хас булмаған тауыш менән ҡысҡырып көлдө.— Әйттем дәһә, күргем дә, иҫкә алғым да килмәй тип! Аңламаныңмы ни?!

— Хикәйәне түгел, бына Ғимранов ағайҙың яҙыуын уҡып ҡара?

— Ғимранов ағайҙың яҙыуын? Бер ни ҙә аңламайым...

Емеш дәфтәрҙе Хөрмәттең ҡулынан тартып тигәндәй алды.

— Ахырын ҡара, ахырын, — тип иçкәртте Хөрмәт. — Шунда белерһең...

Ысынлап та, хикәйәне кемдер уҡып сыҡҡан, ҡайһы урындарын ҡыҙыл ҡәләм менән төҙәткеләй барған, аҙаҡҡы биткә шул уҡ ҡыҙыл ҡәләм менән: «Емеш һеңлем! Һин яҙыш. Яҙыусы булырға тейешһең һин!» — тип яҙып, Ғимранов ҡул ҡуйғайны.

Был юлдарҙы уҡығас, Емеш бик оҙаҡ аяҡ баçҡан урынын тоймай юғалып торҙо: тулҡынланыуҙан ике бите ут янып, яҡташына күтәрелеп ҡараны.

— Ҡитсе, ысынды яҙҙымы икән ул? Әллә юрый, күңеле булһын был ҡыҙыҡайҙың, тип кенәме икән?!

— Юрый яҙырға ул баламы ни?! — тине Хөрмәт, етди итеп. — Унан был бит уйнап һөйләр һүҙ түгел, ә уйлап...

Көтөлмәгән ҡыуаныстан ярһыған Емеш:

— Йә, һөйлә әле! Нисек булды һуң был, Хөрмәт? — тип уның һүҙен бүлде. — Ысынлап та... Шундай өмөтлө һүҙ әйтергә... Йә, һөйлә инде!..

— Мин теге көн әҙәби түңәрәк йыйылышынан һуң, Яшинскийҙең ҡәбәхәтлегенә сыҙай алмай, Ғимранов ағайға барып индем... — тип ашыҡмай ғына хәбәр итте Хөрмәт. — Бына шулай-шулай булды, был ниткән эш, ағай? Ҡайҙа хаҡлыҡ?! Ҡайҙан дөрөçлөк табырға, былай булғас?! — тип ярһып һөйләп бирҙем.

— Шунан?!

— Һинең хикәйәңде лә, үҙемдең шиғырҙарҙы ла биреп сыҡтым. Әле бына ул мине ошонда коридорҙа күрҙе лә: «Минең янға ин әле, ҡустым», — тине. Ни әйтер икән тип, ҡурҡа-ҡурҡа ғына уға эйәрҙем. Кабинетенә барып индем...

— Шунан?

— Шул. Беҙҙең яҙмалар уға оҡшаған. Әле үк былай яҙа алғас, тырышһағыҙ, күп уҡыһағыҙ, өйрәнһәгеҙ, икегеҙҙән дә киләсәктә яҙыусы етешеүе мөмкин, ти.

— Ҡитсе, ысын шулай уҡ тиме?!

— Тик шуны аңлағыҙ: яҙыусы булыу — кеше рухының тәрбиәсеһе булыу тигән һүҙ. Кешегә уның рухы аша йоғонто яһау, уны үҙ артындан алға етәкләү... Әгәр белгең килһә, яҙыусы ул — философ та, тикшеренеүсе лә, өйрәнеүсе лә. Уның өйрәнәһе фәне — кеше хаҡында! Яҙыусының эше кешенең рухи донъяһын ҡайтанан ҡорорға, байытырға, кешегә хас юғарылыҡҡа күтәрелергә

буйһоноштырырға тейеш. Бының өсөн иң элек үҙеңә йәнең-йөрәгең, рухың менән дә, белемең, эшең менән дә шул юғарылыҡҡа күтәрелергә кәрәк, ти. Марксизм идеологияһын йөрәгеңә һеңдерергә кәрәк... Сөнки беҙҙең яҙыусылар бит, бөтәһенән элек, пролетариатҡа, коммунистик идеалға хеҙмәт итергә тейештәр,— ти.

— Һинең менән шулай етди итеп һөйләштеме?! — тип аптыраны Емеш. — Ҡарасы, ә?

— Эйе, шулай оҙаҡ һөйләшеп ултырҙы ул минең менән, — тип дауам итте Хөрмәт. — Тағы нимәләр яҙыуыбыҙ, киләсәккә планыбыҙ тураһында ла һораштьr. Емеш, бүтәнсә яҙышмайым, тип әйтә, тигәйнем, «был, халыҡ һитмешләй, беткә үсегеп, тунды утҡа яғыу булыр ине», тине...

Емеш яҡташына шатланып һәм һоҡланып ҡараны, хатта уны ошо минутта сикһеҙ яратып, ҡосаҡлап үпкеһе килде, әммә халҡының быуаттар буйы килгән ғөрөф-ғәҙәтенең ҡаты тәртиптәре уны был юлы ла үҙ тырнағынан ысҡындырманы. Ул тик үтә ярһыу итеп:

— Ҡалай һәйбәт малаҡай әле һин, Хөрмәт! — тип көнө әйтә алды. Ә Хөрмәт ҡыҙарынып китте лә үпкәле тауыш менән:

— Һинең өсөн мин малаҡай ғына шул... — тип көрһөнөп ҡуйҙы.

Емеш, уның нимәгә ишара яһауын аңламағанға һалышып:

— Ә бүтәнсә?!. Ҡыҙыҡай тимәм дә! — тип шыңғыратып көлөп ебәрҙе. Был минутта уның бер туҡтауһыҙ көлтәһе-шаярғыһы, хатта, ғәҙәтенә хилаф булһа ла, туҡтамай һөйләшкеһе килә ине. Уның шатлығы Хөрмәткә лә күсте. Улар, оҙон коридорҙы яңғыратып көлөшә-көлөшә, йүгертән сыҡтылар.

## VI

Волостән килгән тәфтишсе Хитров менән фельдшерҙең мәйетте ентекләп ҡарауы ла, ваҡиға булған кис хаҡында тирә-яҡтан һорашыу ҙа һөҙөмтә бирмәне. Тикшереү барышында актив ҡатнашҡан Иштуған менән Әхәттең билдәле булғанға өҫтәрлек дәлил таба алманылар.

«Иштуған мәктәптең мейесен емертеүҙе, ҡара таҡтаһын ватҡылауҙы мулла ҡотҡоһо менән эшләнгән, ти икән... Шуға комсомолдарынан туҡматып, мулланан үс алған икән...» кеүек зәһәрле һүҙҙәр шып-шым ғына тара-

лыуында булды. Унының кемдән башланып, ҡалай таратылыуын аңлауы ла ҡыйын ине.

— Халыҡты йыйып һөйләшергә кәрәк, — тип ҡабатланы Иштуған.

— Бөгөн үк, хәҙер үк йыябыҙ уны, — тине Әхәт. — Ширкәткә яңы ағзалар ҡабул итеү хаҡында ла һөйләшәһе бар бит.

Ошо кисте Илсеғол ярлылары яңы мәктәптә йыйылыш уҙғарҙы. Ҡайтанан сығарылған мейестән яңы балсыҡ еҫе сығып торһа ла, мәктәп йылы, бөхтә ине. Стеналар төрлө лозунгылар, плакаттар менән биҙәлгән. Ҡаршы стеналағы Ленин портреты, Иштуған граждандар һуғышы майҙандарында йәндәй һаҡлап йөрөткән, ут эсенән алып сыҡҡан ҡәҙерле портрет, мәктәпкә айырата йәм биреп тора. Ян стенаға Лениндең кооперацияға ҡарата әйткән һүҙен ул башҡортсаға тәржемә итеп яҙҙырып элгән: «Кооперация — крәҫтиәнде коммунизмгә алып бара торған юл. Крәҫтиәндәрҙе берләштереүҙең иң уңай формаһы — кооперация. Сөнки кооперация ауыл хеҙмәтсәндәренең хосуси мәнфәғәтен дөйөм йәмәғәт мәнфәғәте менән бик йәтеш бәйләп алып барырға мөмкинлек бирә».

Ҡаршыға, түбә таҡтаһынан аҫтараҡ, «Бөтә донъя юҡһылдары, берләшегеҙ!» тигән лозунг эленгән.

Көн тәртибендәге беренсе мәсьәләне:

— Бөгөн беҙ, иптәштәр, ауылыбыҙҙың үткәне, бөгөнгөһө, киләсәге хаҡында бергәләп һөйләшергә, аңлашырға йыйылғанбыҙ. Үткәнде күп һөйләп тормайым, сөнки уның әсе тирен елкәлә татыған кешеләр — элекке ярлыбатрактар, һалдаттар йыйылғанбыҙ. Бөтәбеҙ ҙә Совет хөкүмәте ярҙамында көн күрә башлағанбыҙ, — тип һөйләне Иштуған. — Яңылыҡ та, яҡшылыҡ та, үҫеш тә шыма ғына бармай икән шул. Унының юлында мең ҡаршылыҡ ята икән. Моғайын, шул ҡаршылыҡтар, ауырлыҡтар алдында сигенмәй, еңелмәй алға атлаған кеше генә үҙен ысын көрәшсе тип һанарға хаҡлылыр... — тип дөйөмөрәк фекерҙәргә бирелеп тора биргәс, ҡыҙып-ҡыҙып Илсеғол хәлдәренә күсеп китте.— Иҫке мәктәпте яндырыу ҙа, мәктәптең ҡара таҡтаһын ватҡылап, мейесен емереп сығыу ҙа, ахыр килеп, мулланы туҡмап үлтереү ҙә — ниндәйҙер үтә яуыз, йәшерен дошмандың эше ул.

Халыҡ араһында ризаһыҙлыҡ, шик-шөбһә тыуҙырыуҙы, еңеп килгән яңы тормош яҡлыларҙың сафын ҡаҡшатыуҙы маҡсат итеп ҡуйып эш алып бара дошман. Ком-

мунистәр ундай мәкерле юл менән эш итмәйҙәр. Террор — беҙҙең көрәш методы түгел. Коммунистәр бер ҡасан да ундай юлды ҡулланманылар һәм ҡулланмаясаҡтар. Быны аңларға кәрәк, иптәштәр...

Мин ышанам, тиҙҙән дошмандың йөҙө асылыр, яуыз ниәте сик ҡуйылыр. Һеҙҙең менән беҙ бергәләп, күмәкләп, иркен йәшәрбеҙ был теләккә...

Иштуғандан һуң сығып һөйләгән Баҙыян еңгә һиҙгерлекте көсәйтергә, дөйөм эште һаҡларға саҡырҙы.

Хәлим ағай байҙарҙың хәҙер айырата мәкерле булып китеүен әйтте. Иҙрис ҡарт халыҡҡа таянып эш күрергә кәңәш бирҙе: «Илгә таянған — эйелмәҫ», — тине.

Көн тәртибендә икенсе мәсьәлә булып ерҙе бергәләп эшкәртеү ширкәтен колхозға әйләндереү, уға яңы ағзалар ылыҡтырыу мәсьәләһе тора ине. Был хаҡта Әхәт һөйләне.

— Берҙәм хужалыҡҡа ҡаршы яман уй менән отҡо таратыусыларға беҙҙең эшебеҙ, уңышыбыҙ үҙе яуап бирә. Элек бит беҙҙең Илсеғолда иң бай тигәндең дә бында эш ҡоралы булмай торғайны. Бынауы сәскес, урғыс, һуҡҡыс машиналар, күп төрәнле һабандар, тимер тырмалар — бөтәһе лә ошо ширкәт аша килде бит. Халыҡты аслыҡтан ҡотҡарыусы ла ширкәт булды. Йә, бынаса кемдең ашлығы яңыға етә ине? Хәҙер һәр кемдә бер ике йыллыҡ запас ята. Берҙәм хужалыҡ ағзалары тиҙән йорт-ер төҙөкләндереү, мәктәп, клуб һалыу кеүек ҙур эштәр хаҡында уйларға ла батырсылыҡ итә башлаясаҡ... Бер саҡ беҙҙең баҫыуҙарҙа трактор ҙа геүләп йөрөр әле бына, күрерһегеҙ!.. Был алыҫ хыял түгел, әгәр ысын киләсәк! Партия һәм хөкүмәт бөтә көс менән берҙәм хужалыҡҡа ярҙам итә, ярлы-батрактың тормошон һаман-һаман яҡшыртыу хәстәрен күрә. Шулай булғас, ерҙе кәзәләнеп, иҫке, хәйерсе тормошто алға һөрөп маташыу ниңә кәрәк? Кәрәкмәй, әлбиттә! Бәхет тә, киләсәккә ышаныс та берҙәм ҙур хужалыҡта ғына тыуасаҡ. Шулай булғас, яңғыҙаҡ тормошто ташларға кәрәк уны, ағайҙар! — тип янып-ярһып һөйләне ул да. Бөгөн үк, ошонда уҡ берҙәм хужалыҡҡа яҙылырға саҡырҙы. — Һәммәһенән элек, батрактар, ярлылар яҙылырға тейеш! — тине.

Йыйылышты алып барыусы Иштуған ауыл хужалығы артелененең ширкәттән айырмаһын, өҫтөнлөгөн, уның ағзаларының вазифаһын, бурысын һөйләп бирҙе.

Йыйылыш тып-тын булып тыңланы, әммә, «минс яҙығыҙ», тип ҡул күтәреүсе күренмәне. Һәр кем, күрәһең, икеләнеп, уйға талып ултырҙы. Нисек кенә булмаһын, был эш үтә ҡапыл да, айырата яңы ла шул улар өсөн. Әле ҡасан ғына ярым күсмә хәлендә йәшәгән, ата-баба заманынан мал аҫырап, үҙенсә көн күргән кеше ҡалай итеп тотһон да бер ҡул һелтәүҙә бына тигән игенсе лә, етмәһә, колхозсы ла булып китһен инде. Әйтеүе генә анһат! Бында уйланыр урындар етерлек ине, әлбиттә. Ғүмерендә юған күрмәй, далала сабып йөрөгән арғымаҡты тотоп, еккегә өйрәтеү һымаҡ бит был! Юғанҡамыт кейгәс, арғымаҡ үҙен нисек тоясаҡ?! Эйе, уйларға ла уйларға шул әле.

— Йә, ағайҙар, һөйләп ебәрегеҙ, — тип Иштуған тотош йыйылышҡа мөрәжәғәт итте. — Ҡемдең ниндәй уйфекере, кәңәше бар?

Әле, һүҙ алып, тәртип менән һөйләүгә күнегеп етмәгән халыҡ сходтағы шикелле шаулашып алды:

— Нимәһен һөйләп тораһың, әлегә артелдең эше арыу бара...

— Алдағыһын алла белә...

— Ҡырҡ ата балаһы берләшеп көн иткәнде бер ҙә күргән юҡ бит әле... Шикләндерә...

— Эйе ләбаһа, эшләгеҙ әле, ҡарап ҡарайыҡ әле.

— Ашыҡҡан ашҡа бешкән, ти. Ниңә ашығырға?

Иштуған түҙмәне.

— Эштең алда ла һәйбәт барыуы үҙебеҙҙән тора, — тип иҫкәртте. — Ата-баба: «Ҡырҡ кеше бер яры, ҡырын кеше бер яры», — тип борондан уҡ ҡырҡ кешенең бергә булыуын хуплауын әйтеп ҡалдырған бит. Тимәк, ҡырҡ кешенең берләшеп, уңышҡа ирешеүенә ышанған. Йә, Мөҡим ағай, һин нисек уйлайһың? Һинең урының бит күптән артелдә.

Эйе, Мөҡим — элекке батрак. Аслыҡтан һуң ғына ауылға ҡайтып, донъя көтә башланы. Хөкүмәт уға ат, һыйыр алырға, өй һалырға көтәсәккә аҡса биреп торҙо. Шулай хәлле генә йәшәп китте... Мөҡим ултырған урынында сабырһыҙ ҡуҙғалып ҡуйҙы. Бүркен алға этәреп, елкәһен һыйпап алды:

— Мырҙа, үҙең беләһең, ҡартайып барғанда ғына йортло-маллы булынды. Хәҙер килеп шул аттан, һыйырҙан да яҙайыммы ни? — тип тирә-яҡҡа бошоноп ҡарап ҡуйҙы. — Нәғимә еңгәң ни әйтер бит әле. Минең бисә

...маhыҙ сая бит ул. Бар, ширкәтең менән йәшә, тип ҡы... ...сығармаҫ тимә. Юҡ, мин донъяны тағы бер аҙ үҙем ...нә көтөп ҡарамаҡсымын әле...

— Ай-һай, сарға бисә Нәғимә еңгә, Мөҡим ағай дө... ...ҫтө әйтә.

— Мөҡим ағай, һин уны йәш бисә тип үтә иркәләй... ...шикелле.

— Арғымаҡ юғәнгә тиҙ өйрәнә. Һин уны юғәнләп, ...ерәк дөмбәҫләп тә ал.

— Эйе, һылап-һыйпап ҡына торма. Бисәләр ирҙең ...ты ҡуллыһын ярата ул!

Төрлө яҡтан һүҙ ташлап, Мөҡимде шулай мәрәкәләп ...дылар, ә Иштуған ҡарашын Мөҡимдең ҡустыһына ...күсерҙе.

— Ә һин, Хәтип ағай?

Ул да, тап ағаһы шикелле, күптән түгел генә мал... ...уарлы булып, донъя көтә башлаған батрак ине.

— Миңә ни, ағайым ни тиһә, шул инде... Минең дә ...алдыма донъя көткөм килә бит әле, — тип ағаһы яғы... ...саҡ ҡына ҡарап алды. Унан, ҡыйыулана төшөп: — ...е, үҙ ирке менән кемдең малынан-йортонан яҙғыһы ...илһен? — тип өҫтәне.

— Берҙәм хужалыҡҡа яҙылыу — малһыҙ ҡалыу тү... ...л, ә донъяны бергәләп көтөү генә бит ул, ә бергәләп ...шләү, бергәләп донъя көтөү еңелерәк була лабаһа, — ...тип Иштуған тағы аңлата ғына башлағайны, артҡы эс... ...мйәнән кемдер асыулы тауыш менән:

— Иштуған, һинең үҙеңдең бер ҡасан да атың да, ...р һыуың да булманы. Әле лә юҡ. Атайың зимагур бул... ... Үҙең дә шул юлды ҡыуаһың. Беҙҙе лә йорт-ерһеҙ ...яң булырға өндәмә әле, ҡустым, — тип ҡысҡырҙы.

Был — ғүмерен Ғаббас муллала ялсылыҡта уҙғарған, ...шоғаса уға тоғро хеҙмәтсе булып ҡалған Биктимерҙең ...уышы ине.

Иштуған уға ни тип яуап бирергә икәнен уйларға өл... ...рмәне, Биктимер менән йәнәш ултырған Хисбулла ҡул ...күтәрҙе.

— Мине яҙып ҡуй, ҡәйнеш, шунда. Мин берҙәм ху... ...лыҡтың файҙаһын күреп-һынап беләм. Шуға яҙы... ...м, — тип ап-арыу баҙыҡ тауыш менән әйтеп ташла... ... — Яңғыҙ-ярым тартып, донъяны алға алып барыуы ...к ауыр, ә күмәкләгән — тау күсергән, ти.

Хисбулланың һүҙенән һуң йыйылыш геү итеп китте. Ҡемдәрҙер хупланы, кемдер көлдө, һөйләште, күршеһе менән фекер алышты. Иштуған да башҡаларҙан кәм аптырамай ине. «Апайым менән һөйләшеп килгән, күрәһең... Бәлки, үҙе шулай хәл иткәндер? Молодец, еҙнә! Туҡта, Мөҡим ағай ҡул күтәргәндәй булды түгелме һуң? Эйе, шулай...»

— Мөҡим ағай, һин һүҙ һорайһың түгелме?

— Иштуған ҡустым, былай булғас, яҙ мине лә! Хисбулла ҡорҙаш белмәй яҙылмайҙыр әле.

— Мине лә яҙып ҡуй шунда! Ағайымдан ҡалышып булмаҫ. Халыҡтан айырылып тороп ҡалырға, алланың ҡашҡа тәкәһе түгел дә мин. Ни күрһәк тә, бергә күрербеҙ.

Был — Хәтиптең тауышы ине. Иштуған, ҡыуанысынан көлә-көлә, ҡағыҙға эйелде. Боҙ ҡуҙғалды — күптәр, аңлау, төшөнөүгә ҡарағанда, күршегә йә туғанға эйәреп, ағым ыңғайына ыңғайланы. Уларҙы ойоштороусы Иштуған, Әхәттәр ҙә берҙәм хужалыҡтың нисек булырға тейешлеген, уның бөгөнгөһөн, киләсәген тулыһынса белеп, төшөнөп эш итәләр, тип әйтеүе дөрөҫ үк булмаҫ ине. Уларҙы ләғнәтле иҫке тормошто емереү, уның урынына бығаса төшкә лә инмәгән өр-яңы, бай, матур берҙәм тормош ҡороу теләге, шул саҡта бөтә кешенең бер тигеҙ, аңлы, белемле һәм бәхетле буласағы рухландыра, үҙ эштәренең хаҡлығына, изгелегенә булған тәрән ышаныс бөткөһөҙ көс, дәрт биреп, алға етәкләй, башҡаларҙы ла үҙ арттарынан эйәртергә көс бирә.

* * *

Иштуған менән Әхәт йыйылыштан һуң да, бөгөнгө йыйылыш хаҡында ҡыуанып, ярһып һөйләшеп-кәңәшеп, алдағы эштәргә план ҡороп бик оҙаҡ ултырҙылар, улар шәмде һүндереп, мәктәпте бикләп сыҡҡанда, күрәһең, бүтәндәр өйҙәренә ҡайтып ятып бөткәйне. Төн уртаһы күптән еткәйне. Урам тып-тын, өйҙәрҙә ут күренмәй, ә күктә, өйкөм аҡ болоттар араһында, ярты ай йөҙә, ерҙә көндөҙгө шәреләрҙе ҡаплаған ҡытырмаҡ боҙҙар аяҡ аҫтында сатнап, сайралып ята. Төньяҡтан иҫкән һалҡынса ел өйкөм болоттарҙы, һөт күбеге кеүек күпертеп, ҡыуып алып йөрөтә ине.

— Һауа боҙолорға самалай!.. Тағы буран булыр, ахыры, — тип тирә-яҡҡа күҙ ташлап торҙо Иштуған. — Ну быйыл ҡарҙы етерлек өйҙө лә инде.

— Эйе... Йә, ҡайттыҡмы?

— Юҡ әле... Әҙерәк йөрөп алырға кәрәк...

Улар, бер көндө Хаммат иҫкәртеп киткәндән һуң, был кына төн урталарында ауылды бер нисә ҡат әйләнеп, ҡарап сығалар, шик-шөбһәле өйҙәрҙе оҙаҡ-оҙаҡ күҙәтеп йөрөйҙәр ине. Әле инде бынауы һуңғы ваҡиғалар бөтөнләй уларҙың йоҡоһон алды: «Тимәк, дошман эргәлә, арала, ул һәр сәғәт, һәр минут тағы ла ниндәйҙер яуызлыҡ эшләргә әҙер. Уны табырға, белергә, тоторға кәрәк!..»

Ошо тынғыһыҙ уй менән улар инде хәҙер һәр төн урамды биш урайҙар. Һәр шылт иткән тауышҡа ҡолаҡ һалып, һәр мыҙлаған утты ҡарап, тикшереп үтәләр. Әле лә улар, өйҙәренә тура ҡайтмай, тауыш-тынһыҙ ғына урамды бер-ике урап үттеләр. Шымбай ҡарт менән Әхмәтша йортон күҙәтеп, аяҡтары туңғансы боҫоп торҙолар, ләкин бушҡа ғына. Был йорттарҙа бөтөнләй үлек тынлығы хөкөм һөрә ине.

Был йөрөү бөгөн дә һөҙөмтәһеҙ булды. Өшөп, арып бөткән дуҫтар таң алдында өйҙәренә ҡайттылар.

## VII

Студенттәр йыйылышы. Улар ҙур синфи мәсьәлә хәл итергә йыйылған. Көн тәртибендә: техникумды сит элементтәрҙән таҙартыу.

Зал ғәҙәттәгенән тын, һәр ерҙә, һәр хәрәкәттә етди киеренкелек һиҙелә, ә тышта шундай сағыу көләс ҡояш балҡый. Яҙ хәбәрсеһе март унда тантана итә, өй ҡыйығындағы ҡарҙарҙы иретеп, кәрниздәрҙе боҙ тамсылары менән суҡлай, унан, шул тамсыларҙан көмөш борсаҡ тезеп, ергә һибәләй, «тап-топ, топ-тап, тас-тос!» тип тамсылар, һәр ҡайһыһы үҙенә хас тауыш сығарып, ерҙе сәләмләй. Ер аңлай — улар бөтәһе лә бер үк ҡыуаныс ағымында һөйөнсөләй: «Яҙ етә, яҙ!»

Тамсыларҙың был һөйөнсөһө тәҙрә янында ултырған Емештең ҡолағына ла ап-асыҡ ишетелә:

— Ниндәй ҡыуаныс! Яҙ!.. Яҙ!..

Ләкин Емештең эсе боша. Хатта Байрастың уңыштары ла уның күңелен аса алмай... Ә бит ул хат бына

бында, йөрәк янында ғына... Әйтерһең, Байрас үҙе эргәлә генә һөйләп торған кеүек...

Емеш ҡултығына ҡыҫтырған ҡалын дәфтәрен асып, уның эсенән конверт алды. Бөгөн нисәнсе тапҡырҙыр тағы хатҡа күҙ ташланы.

«...Емеш һылыу!

Быйыл мине комсячейканың секретаре итеп һайланылар. Быға са Алеша ине. Быйыл, һуңғы курста булғас, секретарлек нагрузкаһы унан алынды.

Беләһеңме, Емеш, Алеша киләһе йыл Ҡазан университетенә инмәксе. Мине лә ундағы татар-башҡорт хәрби мәктәбенә инергә димләй. «Һин бөтә торошоң менән командир булырға оҡшап бөткәнһең», ти. Ул мәктәп командирҙәр әҙерләй икән...

Бик ҡаты һайлап алалар, йөҙҙән берәү эләкһә, бик шәп, ти. Мин, ни булһа ла, бәхетте һынап ҡарарға, күҙгә комиссиянан уҙырға ниәтләп торам. Һин ниндәй кәңәш бирәһең? Командир егет оҡшармы һиңә?..

Емеш, мин һинән хат алмауға күнегеп бөткәнмен инде... Шулай ҙа ҡайһы саҡта эс бошоп китә. Бер яҡтан ғына булған яратыуҙың ғүмере ҡыҫҡа булмаҫмы, һинең башты унда берәйһе әйләндереп ҡуймаҫмы?..»

Ҡыҙ хатты уҡып бөтмәй конвертенә кире һалды ла тағы уйланып, бошоноп ултырҙы. Дәүериәнең яҙмышы уны бөтәһенән дә нығыраҡ борсой ине был минутта. Ысынын ғына әйткәндә, Емеш уны хатта яҡындан белмәй ҙә бит! Хатта һөйләшеп тә ҡарағаны юҡ. Ул ғашиҡ ҡына. Тылсымлы скрипкаһы менән үҙенә ғашиҡ иткән бит уны Дәүериә. Үҙе быны хатта боймайҙыр ҙа әле... Шулай уҡ Емеш бөгөн йәне-йөрәге менән хөрмәтләгән кешеһен, илаһи моң шишмәһе — серле скрипканың телен асыусы, шул моң менән кеше йөрәгендә тормоштоң матурлығына, ҡабатланмаҫлығына, мәңгелегенә, мөхәббәт һәм бәхеттең ғәлилегенә тәрән ышаныс уятыусыны юғалтырмы ни?!

Был тормош ниңә шул хәтле ғәҙелһеҙ? Ниңә ул кешенең иң ҡәҙерле тойғоһон утлы сүкеш менән ҡыйрата һуғып тора икән?!

Йыйылышты студком председателе Сәләмов ағай алып бара. Оҙон буйлы, ас яңаҡлы, һүлпән тауышлы был ағай Емешкә хәҙер айырата тыныс, ғәмһеҙ, ят күренде.

«Кеше яҙмышы, бигерәк тә үҙе менән бер курста уҡыған кешенең яҙмышы, хәл ителгәндә лә былай булғас,

төптә йәнһеҙҙер ул!..» — тип бошоноп уйланды. Үтә сабыр, тыйнаҡ, етди күренгән был ағайға Емеш элек тә, яҡшы кешеме, яман кешеме был тигәндәй, ситтән генә ҡыҙыҡһынып ҡарап-ҡарап ала ине. Әммә уның ниндәй кеше булыуына һис тә төшөнә алмай ине.

Бына ул ғәҙәттәге тыныс, хатта ғәмһеҙ тип әйтерлек һалҡын тауыш менән Дәүериә өҫтөнән килгән материал хаҡында хәбәр итте. Хаттарҙы уҡып ишеттерҙе. Унан:

— Йәгеҙ, иптәштәр, үҙ фекерегеҙҙе әйтегеҙ. Дәүериәне бөтәбеҙ ҙә яҡшы беләбеҙ бит, — тине лә урынына ултырҙы.

Сәләмовтың шул хәтле моңһоҙ ҡиәфәте был юлы ҡыҙға бигерәк тә оҡшаманы: «Ни эшләп ул үҙе бер ни ҙә әйтмәне, ниңә? Дәүериәне әрәм итергә ярамай, иптәштәр, тип, исмаһам, ыңғай бер юнәлеш тә бирмәне?! Уның һүҙе үтә бит. Бында уны күпселек хөрмәтләй. Һәр хәлдә уның һүҙенә ҡолаҡ һалыусы күп булыр ине...»

Емештең тынғыһыҙ уйын бүлеп, сәхнәгә Яшинский һикереп менде. Өҙөлөп китерҙәй нәҙек тауыш менән:

— Иптәштәр! — тип ҡысҡырҙы. — Иптәштәр, туғандар, дуҫтар! Юҡһылдар! Үҙегеҙ күреп тораһығыҙ, беҙҙең мәҙәниәт фронтында бик ҙур таҙартыу үткәрәһе бар!

Был һөйләмде лозунг кеүек итеп ҡысҡырып әйтеп һалғас, үҙенән үтә ҡәнәғәт булып, блокнотына ҡараны.

— Иптәш Бухарин әйтә, беҙҙең күсеү дәүерендә иң мөһим бурыстарыбыҙҙың береһе — хеҙмәт ялпыһының үҙ эсенән, йәғни беренсе нәүбәттә эшсе синыфынан сыҡҡан кешеләрҙән белгестәр әҙерләү булырға тейеш, ти. Бына, мәҫәлән, мин үҙем, эшсе егет булараҡ, кантон мәғариф бүлегенең развёрсткаһы менән килдем. Ә бына, йәғни мәҫәлән, 1922—1923 йылдарҙа развёрсткаһыҙ алыу булғанлыҡтан, техникумға зарарлы элементтәр килеп эләккән. Бына, мәҫәлән, шундайҙарҙың береһе, күрәһегеҙ, Дәүериә...

Яшинский, гүйә, үҙенең бығаса булған ҡылыҡтарынан да уҙғарып ебәрергә тырышып сирыла-ҡылана, ҡот осҡос йәнһеҙ ауыр һүҙҙәр менән Дәүериәне тетеп сыҡты. Уның үҙенән, скрипка уйнауынан, хатта баҫалҡы, оялсан холҡонан да мещанлыҡ, сит элементлек табып, кинәнеп көлдө. Ахырҙа һүҙен үҙенсә бик ярһыу итеп:

— Бынан ары техникумға сит элементтәр алынмаһын. Алынғандары ла сығарып ташланһын. Купец ҡыҙы Дәүериәләргә совет мәктәбендә урын булмаҫҡа тейеш! — тип

ҡысҡырып тамамланы ла үтә етди, ҡәнәғәт төҫ менән, уңға-һулға баш эйеп, сәхнәнән төштө.

«Йә, шуға, килбәтһеҙгә, ни тип һүҙ бирә икән бынауы Сәләмов ағай? Эй, мин булһам, уны сәхнәгә лә мендермәҫ инем», — тип, балаларса бер ҡатлы уйлап, көйөнөп ултырҙы Емеш.

— Тағы кем нимә әйтә? — тип, председатель залға күҙ ташланы.

Бына кемдер ҡул күтәрә. Яппар бит! Яшинскийҙең эйәрсәне. Ул ни барыбер шул уҡ һүҙҙе һөйләр инде, тип тынысһыҙланды Емеш. Эйе, Яппар ҙа, таҡыр башын һыйпай-һыйпай, Дәүериәне техникумдан сығарырға кәрәклекте иҫбат итергә тырышты.

Унан тағы кемдер ҡул күтәрҙе. Юҡ, ҡул күтәреп кенә ҡалманы, һикереп үк торҙо, сәхнә яғына югерҙе. Бынына һы — Хәләф ине. Теге ваҡытта әҙәбиәт түңәрәгендәге килбәтһеҙ ҡыланышы менән ғүмергә онотолмаҫлыҡ булып Емештең һарыуына ултырып ҡалған йылғыр Хәләф! Бына ул тап шул саҡтағылай, эре һары һипкел баҫҡан ялпаҡ танауын мыршылдатып тартып алды. Керпекһеҙ күҙҙәрен секерәйтеп залға төбәне, былай ҙа үтә тар маңлайын сирып, еп бәйләме кеүек итеп ҡалдырҙы.

— Иптәштәр, Емер Яшинский иптәш беҙҙең дөйөм фекерҙе әйтте лә һалды! — тип былай ҙа йәйпәк, йоп-йоҡа ирендәрен киреп торҙо. Бөтә ҡиәфәте менән кемгәлер, ни өсөндөр, ярап, күренеп ҡалырға маташып, бер үк фекерҙе йөҙгә бормаслап, сәйнәп ыҙаланды. Ахыр, Яшинскийҙән дә арттырып:

— Бөтһөн сит элементтәр! Йәшәһен бөтә донъяла пролетар революция! — тип һөрән һалып, ғорур атлап сәхнәнән төштө.

— Тағы кемдең һүҙе бар?

Ғәҙәттә үтә актив һәм шаулы була торған йыйылыш һаман көсөргәнешле тынлыҡ һаҡланы. Күрәһең, кеше булған, эсендә йәне булған кешегә бындай саҡта тиҙ генә һүҙ әйтеүе анһат түгелдер. Яшинскийгә эйәреп, сығарыу яғын күтәрмәләү ҙә ҡыйын. Алда кеше яҙмышы тора. Яҡлап һөйләү өсөн дә ҙур ҡыйыулыҡ кәрәк. Быға кем нисек ҡарар бит?!

Тынлыҡ артыҡ һуҙыла башланы.

— Йә, иптәштәр, активерәк ҡатнашайыҡ, — тип иҫкәртте Сәләмов. Тағы ҡуҙғалыусы күренмәне. Емешкә

был йылдай оҙон тойолдо. «Туҡта, былай булһа, Яшинскийҙең һүҙе үтер ҙә ҡуйыр ҙабаһа! Нимә эшләргә?!»

Ул, артҡы эскәмйәнән ҡалҡа биреп, ҡул күтәрҙе:

— Мөмкинме?

Сәләмов һонолоп ҡараны. Ғәмһеҙ йөҙөнән ғәжәпһенеүгә оҡшаш күләгә югереп үтте. Шулай ҙа ул әлеге шул һалҡын ғәмһеҙ тауыш менән:

— Емеш Ирьегетоваға һүҙ бирелә, — тип белдерҙе. Әйтерһең, был ҡыҙ ғүмерендә тәүтапҡыр түгел, ә быға са ла йыйылыштарҙа актив ҡатнашып килгән кеше ине. Сәләмовтың баяғы эс бошорғос тыныс етди тауышы был юлы Емешкә бик һәйбәт тәьҫир итте, үҙенә ышаныс көс өҫтәгәндәй булды һәм, шуға, ахыры, баҙнатлы атлап, туп-тура сәхнәгә уҙҙы, ә залда ултырғандар бөтәһе лә ҡыҙыҡһынып ҡыҙға төбәлде. Шәмсиә хатта аптырауҙан ҡысҡырып уҡ ебәрҙе:

— Ҡара әле, Нәфисә, беҙҙең «телһеҙ» Емешебеҙ һүҙ һөйҙәмәксе! Нимә эштәп улай ҡапыл батырайҙы икән ул, әй?!

Хөрмәт хафаланып баш сайҡаны:

— Вот, әй, нимә һөйләргә уйлай икән?!

— Бәй, һүҙ тапмаҫтай ҡыҙмы ни ул? — тине Сабир.— Һүҙ һорай — значит, әйтер һүҙе бар.

Хөрмәт Сабиргә текләп ҡараны: юҡ, көлмәй. Юрый әйтмәй. Унын тауышында был юлы Емешкә ҡарата хуплау ишетелә.

— Ғәжәп, ғәжәп! — тип баш сайҡаны Хөрмәт. — Был ҡыҙыҡай ниндәй эш ҡылмаҡ була! Аптырарһың?..

Быға са иң актив ҡатнаша торған, йыйылыш һайын иң алдан сығып һөйләй торғандар ҙа тынып ултыра лабаһа! Күренеп тора, Яшинский менән фекерҙәш булырға ла, унын менән сәкәләшергә лә бер кем дә ашыҡмай, ә Емештең йөрәге, киреһенсә, Яшинский һөйләгән өсөн дә түҙгеһеҙ булып ҡабынып китте. Башҡа кеше икенсерәк тел менән шул уҡ фекерҙе әйтһә, бәлки, ул һүҙ һорарға ҡыймаҫ та ине, ә инде бынауы селәүсен кеүек шыуғалаҡ, борғос йәндең үҙен шул хәтле иркен, хужа итеп тотоуы, кеше яҙмышына шул хәтле еңел ҡарауы уны бөтөнләй түҙемдән сығарҙы: «Яманға өҫтөнлөк итергә юл ҡуйып ултырыу кешелекме ни?!»

Емеш сәхнәгә сыҡҡас, Сәләмов уға батырлыҡ өҫтәргә тырышҡандай йылмайып ҡараны. Хатта йомшаҡ ҡына итеп:

— Һеңлекәш, алғараҡ, бына бындараҡ уҙ, — тип урын да күрһәтте, әммә Емеш быларҙың береһен дә абайламаны. Күңелен ярһыу уйҙар солғап алғанда йәки, уҡытыусы алдына баҫып, дәрестән имтихан биргәндә әйләнәтирәне тотош онота, шул арҡала һөйләйһе уй-фекерен бик яҡшы туплай ала торған ғәҙәте Емеште был юлы ла ҡотҡарҙы. Ул әле лә үҙенең һиҙгер йөрәген ошо минутта тулҡынлатҡан уй-фекерен, әйтәһе һүҙен йыйнаҡ ҡына итеп тиҙ генә уйлап алды, ә әйтәһе һүҙе уның күп түгел ине:

— Минеңсә, Емер Яшинский дөрөҫ һөйләмәне, — тип өҙөп башланы ул һүҙен. — Минең аңлауымса, Дәүериә апайҙы сит элементкә кертеп булмай. Ҡескәйҙән йәне өшөп, туңып бөткән беҙҙең кеүек балаларҙы ҡайтанан терелтеүҙә беҙҙең кемебеҙ, ҡайһыбыҙ уның хәтле хеҙмәт күрһәткәне бар?! Уның скрипка моңдары беҙҙең күңелдәргә рух аҙығы биреп кенә ҡалмай, һәр аҙнала күпме эшсенең ялын биҙәй, күпме кешене клубҡа, аң-белемгә, яңыға ылыҡтыра? Ҡыллы оркестрҙең йөрәген өҙөп ырғытһаҡ, унан нимәбеҙ ҡалыр?

Инде кеше булыу яғынан алып ҡарайыҡ. Бөтә яҡтан — тыштан да, эстән дә матур кеше бит ул Дәүериә апай. Шундай кеше сит элемент булғас, беҙҙең үҙ кешебеҙ ҡалай булырға тейеш һуң? — Емеш үҙ йөрәгенең сабырһыҙ тибешен баҫырға тырышып, аҙ ғына тынып торҙо. Унан тағы ла ҡыйыуыраҡ тауыш менән: — Мин Яшинский иптәштең тәкдименә ҡаршы. Дәүериә апай — ул эшлекле, баҫалҡы, изгелексән кеше. Ул бынамын тигән совет уҡытыусыһы буласаҡ,— тип өҙөп-өҙөп әйтте лә, килгәндәге шикелле үк ашыҡмай, тирә-яҡҡа ҡарапмай, яй ғына артҡа, үҙ урынына, үтте. Уның тыныс йөҙөнә, баҙыҡ аҙымына ҡарап, ошо минутта бының йөрәге атылып сығырҙай булып тарһылдайҙыр, тип уйларға мөмкин түгел ине.

Йыйылыш әкренләп йәнләнде. Күптәр Дәүериәнең башта үҙенән һөйләтеүҙе хуп күрҙеләр.

— Ни өсөн ул социаль хәлен йәшергән? Нисек развертка алған?

Дәүериә ҡыйыуһыҙ ғына сәхнәгә менде. Уның өҫтөндә оҙон еңле аҡ кофта, ҡара юбка, подполка ҡырҡылған ҡара сәсе шыма итеп тарап ҡуйылған. Үтә аҡ, саф битенә яҡты биреп, йондоҙҙай балҡып торған сөм-ҡара асыҡ

күҙҙәрендә тәрән әрнеү, моң ята. Эй-й, үҙең белмәгән гәйеп өсөн ғәйепле булыуҙан да ауыр нәмә бармы икән?

Дәүериә ҡалтыранған тауыш менән:

— Дөрөҫ, минең атайым ит менән һатыу иткән, — тип һүҙ башланы. — Әлбиттә, ҙур сауҙагәр булмаған. Ҙур сауҙагәрҙәрҙең айырым ит сабыусылары була. Атайым итте үҙе сабып һатҡан. Бер саҡ ит сапҡанда, ул, нисектер, битен яралаған. Шул яранан ҡаны зарарланып үлгән... Был ҡайғыны күтәрә алмай, әсәйем дә үлеп китте. Мин етем ҡалдым. Ул саҡта миңә бары һигеҙ йәш ине. Олатайым менән оләсәйем әле лә иҫәндәр. Шуларҙа үҫтем. Ауыл Совете миңә, етем, тип справка биргән... Техникумға киткәндә, документемде олатайым әҙерләне... Мин ул саҡта, нисек кенә ғәжәп булмаһын, үҙемдең сит элемент тип аталырға тейешлегемде белә инемме ни? Документте әҙерләгән олатайым да, әлбиттә, быны белмәгәндер... Ә инде ни өсөн етем тип алданың тигән һорауға мин аптырайым ғына. Атаһы-әсәһе үлгән баланы етем тиҙәр бит инде. Мөмкин булһа, иптәштәр, миңә уҡып сығырға, халыҡҡа хеҙмәт итергә ирек биреүегеҙҙе үтенер инем... Бөтә көсөмдө һалып, тырышып эшләр инем...

Дәүериәнән һуң байтаҡ студенттар сығып һөйләне, ләкин президиумға ултырһа ла, комсомол ячейкаһы секретаре Зиннур ғына бер ни ҙә өндәшмәне.

«Йә, үҙе шул ҡыҙҙы яратып йөрөй... Ә яҡламай ҙа...»— тип екһенеп уйланды Емеш, аҙаҡ тағы, «моғайын, уға яҡлауы ҡыйындыр, килешмәйҙер», тип күңеленән Зиннурҙы ғәфү ҙә итте. Тора-бара Сәләмовҡа ла уның ихтирамы арта башланы. Сәләмов, һаман баяғыса, баҫалҡы һәм эшсән рәүештә тикшереүҙе дауам итте. «Ыңғай» һәм «ҡаршы» һөйләүселәрҙе берҙәй үк ихлас тыңланы, хатта президиумда ултырған директор Ғимранов та, Камилә апай ҙа Сәләмовтың тикшереүҙе эшсән һәм аҡыллы алып барыуын хуплап, ҡәнәғәт булып ултырған һымаҡ күренде хәҙер Емешкә.

Тикшереү оҙаҡ барҙы. Эйе, кеше яҙмышын хәл итеүгә еңел генә ҡарау, өҫтән-мөҫтән генә тикшереп үтеү хас түгел ине бында.

Йыйылыш күпселек тауыш менән Дәүериәне техникумда ҡалдырырға, уны сит элемент һанап, ситләтеп ҡарамаҫҡа тигән ҡарарға килде.

Еңел һулап ҡуйҙы Емеш. Әйтерһең, бөгөн ошо йыйылышта уның үҙ яҙмышы хәл ителде.

Бынан ары тағы ике студент тикшерелде. Быларҙың береһе Иҫәнбәттән, Әхмәҙулла мулланың улы Сәрүәретдин мәхдүм, икенсеһе Сәхибә туташ ине. Улар хаҡында ла урындан хаттар килгән. Был хаттар аша урындағы ярлы-ябаға элек тә типтереп йәшәгән, әле лә ел-ямғыр теймәй көн күргән юғары синыф балаларының хеҙмәтсәндәр өсөн асылған уҡыу йортонда кинәнеп уҡып йөрөүҙәренә асыу белдерә, уларҙы уҡыуҙан ҡыуып сығарыуҙы талап итә ине.

Был юлы ла Яшинский иң ҙур активлек күрһәтте. Сәхибә туташ хаҡында һүҙ барғанда, ул хатта ваҡыты менән әҙәплелектең иң ябай ҡағиҙәләрен дә онотоп ташланы. Сәхибә туташтың йөрөшөнән дә, торошонан да, хатта уның һөйләшеүенән дә «сит элемент»лек тапты.

— Сәхибә кеүектәрҙе сәнскеле һепертке менән һепереп түгергә кәрәк! — тип ҡысҡырҙы.

Йыйылыш бер һүрелеп, бер күтәрелеп дауам итте. Ахыр Сәхибә менән Сәрүәретдин мәсьәләһе лә хәл ителде.

Сәхибәнең атаһының, революция булыу менән, муллалығын ташлап, мәғариф органдарында эшләп китеүен, әгәр алдынғы йәштәр араһына ныҡлап ылыҡтырып, совет рухында ҡайтанан тәрбиәләгәндә, Сәхибәнең дә яҡшы уҡытыусы буласағын иғтибарға алдылар. Уға техникумды тамамларға мөмкинлек бирергә булдылар. Сәрүәретдин мәхдүм хаҡында ике төрлө һүҙ булманы. Уның насар уҡыуы, мулла балаһы булыуы өҫтөнә ҡатынына, балаларына ҡарата булған мөнәсәбәте хаҡында яҙылған хат йөрәк тетрәткес ине.

«...Уның үҙенә теймәҫлек матур, аҡыллы ҡатыны, алма кеүек ике балаһы бар, ә ул йәй ҡайттымы, шул ҡатынын, бала-сағаларын язаларға тотона. Ҡатынын, мине яратмайһың, һин элек, ҡыҙ сағында, фәлән кешене ятратҡанһың, шуны онота алмайһың, тип, сәсенән һөйрәп йөрөп туҡмарға керешә. Ҡатынын язалауҙа ҡағыҙға яҙып аңлатыуы уңайһыҙ булған яман юлдар ҡуллана. Әсәһен язалағанды күреп, балаларының ҡоттары осоп бөткән. Шул йыртҡыслығы менән һыу һылыуындай ҡатынын күләгәгә әйләндерҙе, балалары ла һөлдәгә ҡалды...»

«Эй-й Гөлйыһан, Гөлйыһан... Йәй йөрөткән тай кеүек, уйынсаҡ ҡыҙ ине бит, бахыр!» — тип ысын күңелдән әсенде хәҙер Емеш. Сәрүәретдин мәхдүмде техникумдан сығарырға тигән тәҡдимгә ихласлап ҡул күтәрҙе.

«Пөрөмәһен, әҙәм аҡтығы. Ниндәй уҡытыусы сыҡһын ундан»

Бына ғәжәп! Ҡешенең бәләһенә, бәхетһеҙлеккә төшө-үенә һөйөнөү Емештең быға саҡлы булған әхлағына хилаф эш ләбаһа! Ә ул хәҙер һөйөнә: «Уға шул кәрәк», — ти. Күрәһең, Емеш тә үҙгәрә. Уның да холҡо ҡатылана. Бына бит әле ул, үҙенең был яңы ҡылығын аңлағас та, үкенмәй. Ни өсөн? Сөнки ул бит хәҙер «Любовь Яровая»-ғы кеүек көрәшсе булырға теләй, ә көрәшсе — дуҫтан дош-манды айыра белергә тейеш.

* * *

Йыйылыш тамамланды. Емеш шундай ҡатмарлы, ҡыйыу уйҙар, ғәҙеллек тантана иткән өсөн булған ҡыуа-нысты тойғолар баҫымында яй ғына ашханаға йүнәлде. Киске аш ваҡыты етеп кенә түгел, үтеп бөткәйне был ваҡытта. Төшкө аштан һуң күп тә тормай башланған йыйылыш шулай оҙаҡҡа һуҙылғайны.

Сабир, Хөрмәт, Шәмсиә лә ашханаға бара ине. Шәм-сиә, дуҫының биленән ҡыҫып ҡосаҡлап, мут йылмайып, күҙенә ҡараны.

— Танымай ҙа торам. Был һинме, әхирәт?! — тип мә-рәкәләп өндәште. — Ҡалай телдәр булып киткән! Бөтә йыйылышты аптыраттың да ҡуйҙың дабаһа! Нисек ҡы-йыулығың етте, әй?

— Белмәйем, — тине Емеш, үҙе лә ысын күңелдән аптырап. — Күрәһең, һөйләмәй булдыра алмағанмын-дыр...

Ғәҙәтенсә, һауалы, хатта бер тиклем мыҫҡыллы та-уыш менән Сабир ҙә һүҙгә ҡатышты.

— Беҙҙең Емеш элек-электән шулай үҙенең ни эш-ләгәнен белмәй ҙә ҡуя. Аҡылға бик үк камил түгел, ахыры, ул.

Хөрмәт Сабирҙең ҡабырғаһына төрттө.

— Һин ни һөйләйһең, Сабир?!

Сабир, Емеште сығырҙан сығарырлыҡ һүҙ таптым, сәменә тейҙем, тип уйлап, ахыры, көлөп ебәрҙе. Ул, ниңәлер, һаман шулай Емеште үртәүҙән, уның сәменә те-йеүҙән тәм таба ине.

— Ниңә, әллә һин, Хөрмәт, уны аҡыллыға һанайһың-мы? — Сабир тағы көлдө. Емештең ҡырыҫлығы, үҙенә иғтибарһыҙлығы уның йәненә тейә, шуға мөмкин булған

ерҙә уға үтмәҫ уҡ менән сәнскеләп тороуҙы үҙенең бурысы һанай һымаҡ ине. Әле лә шундай мөмкинлекте файҙаланмай ҡала алманы. Эсенән Емештең ҡыйыу сығышын хуплаһа ла, тыштан быға көлкө төҫ бирергә тырышты, ләкин Емеш был юлы ла сығырынан сыҡманы, хатта Сабирҙең һүҙен кире ҡағырға ла йыйынманы. Бер аҙ уйланып барғас:

— Сабир мине аҡылһыҙ тип, моғайын, дөрөҫ әйтәлер, — тип раҫлап ҡуйҙы. — Ысынлап та, ҡайһы саҡта минең айныҡ аҡылым артҡа сигенә лә ниндәйҙер билдәһеҙ көс хәрәкәткә этәрә, хатта мин быны үҙем дә һиҙмәй ҡалам...

Был урында Емеш, ҡасандыр Моратшаның өҫтөнә боҙло һыу ҡойоп ебәреүен хәтерләп, тертләп китте.

— Эйе, эйе, үҙем дә һиҙмәй ҡалам шул... Аҙаҡ аптырайым. Быны мин ни өсөн шулай эшләнем әле, тим. Белмәйем.

— Ҡит, бушты һөйҙәмә, — тине Шәмсиә. — Дәүериә апайҙы һин белеп тә, урынлы ла яҡланың. Беҙҙең бөтәбеҙ уйлағанды әйттең дә бирҙең.

Сабир һаман бәйләнде:

— Ҡем һуң ул — һеҙ?

— Беҙ — студенттәр.

Инде Сабир Шәмсиәгә лә төртмә телен еткерҙе:

— Беҙҙең Шәмсиә шулай һәр саҡ йәмәғәт исеменән, бөтә студенттәр исеменән һөйләргә ярата ул. Үҙ фекере генә тос булмаҫ тип шикләнә.

Емеш был юлы Сабиргә аптырап ҡараны:

— Һин икенсе төрлө уйлайһыңмы ни? Минең сығышты хупламайһыңмы ни һин?

Тегеһе тағы ла һауалыраҡ ҡыланып, ҡулдарын кеҫәһенән алмай ғына барҙы ла, ҡыҙҙарға һиҙҙермәй генә Хөрмәткә күҙ ҡыҫып алғас:

— Егетмен тигән кешенең үҙ фекере булырға тейеш, — тип ҡуйҙы. — Ҡыҙҙар фекере менән йөрөһә, ул ниндәй егет була?! Бигерәк тә Ҡырыҫбикәнең фекере менән...

— Ҡырыҫлыҡта Сабир һин үҙең дә Емештән кәм түгел, — тип бүлдерҙе уны Шәмсиә. — Күнеленде белеүе лә ауыр...

Сабир һүҙҙе ыңғайға борорға ашыҡты.

— Йә, ярар, юрый һөйләгәнде ысынға һабыштырып бармағыҙ, — тип етди тауышҡа күсте. — Йәгеҙ, Емеш-

тең йәмәғәт эшенә актив ҡатнаша башлау ҡыуанысынан борой ергә барайыҡ!

— Киноға! — тип ҡыуанып күтәреп алды Хөрмәт. — «Зигфрид», «Мисс Мэнд» тигән шәп кинолар бара!

— Барайыҡ, — тип ҡушылды Шәмсиә лә.

— Ярай, — тип Сабир ҙә килеште. Хөрмәт Емешкә ҡараны:

— Һин яҡташ?

— Мин дә барам, — тине Емеш. — Тик шарты...

— Ярай, ярай, беләм, — тине Хөрмәт. — Беләбеҙ...

— Аҡылы юҡ тип әйттем бит! — тип тағы кинәнде Сабир. — Ә һеҙ уны аҡыллы тип мине ышандырмаҡсы!

— Диуана ул! — тип инде Шәмсиә лә кинәнеп көлөп ҡуйҙы. — Бигерәк сәйер кеше бит һин, Емеш.

— Эйе шул. — Емеш үҙе лә көлдө. — Сәйер, бик сәйер, әммә мин бүтәнсә була алмайым, хатта теләһәм дә, булдыра алмаç инем.

— Әйттем бит... — тип Сабир тағы ниҙер әйтеп шаяртмаҡсы ине, Хөрмәт уны тиҙ генә бүлдерҙе:

— Йә, дуç, яҡташыбыҙға ҡаҙалып ҡына торма инде...

— Бөттө, бөттө. Ошондай баһадир яҡлаусыһы булған ҡыҙға ҡаҙалып та, ары бара алмаçһың, — тип шаярыуын дауам итте Сабир. Унан, Шәмсиәнең елкәһенән ҡосаҡлап, ары атланы.

— Әйҙә, ҡыҙыҡай, унда беҙҙе «социализм» көтә.

Шәмсиә, көлә-шаяра, йәнәш атлап китте.

«Сабирҙе ярата, ахыры? Йөҙөнә ҡалай балҡыу сыҡты! — тип уйлап ҡалды Емеш. — Ә тегеһе кемде ярата икән? Ниңә ул мине шул хәтле күрә алмай?.. Бәйләнә лә бәйләнә... Һөйгән кеше бәхетлелер... Ниңә мин бер кемде лә һөймәйем? Әллә һөйөргә теләмәйемме? Ҡурҡаммы? Ә һуң Байрасты?! Эй-й, күрергә ине... Ҡалай икән ул хәҙер? Бер йыл бит! Танымаçлыҡ булғандыр инде...»

Йәшлектең аҙығы ла, дарыуы ла — мөхәббәт. Үлемесле ауырыуҙан һау ҡала, иң ауыр ҡайғыны еңел кисерә, кеше етмәç ауырлыҡтарҙы, тауҙай кәртәләрҙе йырып уҙа ул мөхәббәт көсө менән. Мөхәббәт — йәшлекте күңел төрпөлегенән, тойғо ярлылығынан һаҡлай...

Емештең әле Шәмсиәнең ҡыуаныслы көлөүенән ниндәйҙер оло бәхет, шатлыҡ тойоуы ла, Байрас хаҡындағы йөрәк серенә тотоноуы ла йыйылышта алған ҡайһы бер шыҡһыҙ уйҙарҙан күңелде таҙарта һалырға, мөхәббәт тигән оло бәхеттең тылсымлы бишегендә ял итергә те-

ләүҙең бер төрө ине, ахыры. Эйе, тап шулай, йәш күңел мөхәббәт юғарылығына күтәрелеп, кешеләр араһындағы мөнәсәбәттең ҡайһы бер йәмһеҙ күренештәренән арынырға ашҡына ине.

Тыңлаусан бала шикелле тын ғына йәнәш атлап барған Хөрмәт тә, ахыры, был минутта тап шундай йән аҙығына шат ине. Ул да, Емештең ҡайҙалыр алыҫҡа, бик алыҫҡа төбәлгән уйсан күҙҙәренә ҡарай-ҡарай, үҙенең хәленә төшөнөргә, һуңғы ваҡыттарҙа бер ҙә күңеленән сыҡмаған һорауға яуап табырға тырыша: «Ни өсөн ул ошо ҡырыҫ, аҙ һүҙле ҡыҙҙы, үҙе уның ҡулынан етәкләп алырға ла баҙнат итмәгән ҡыҙҙы, үлеп, өҙөлөп ярата? Ниңә Емеш шул хәтле таш йөрәк икән?! Әллә ул да берәйһен шулай, минең кеүек, йәшерен генә һөйәме икән? Берәйһе өсөн ул да янып-көйәме икән? Шуға үтә моңһоумы икән әллә уның күҙҙәре? Их, белһәң ине, аңлаһаң ине уның йөрәген?!»

Улар һәр икеһе, тик үҙ уйы менән генә һөйләшә-һөйләшә, ашханаға барып инделәр.

* * *

Сабир менән Шәмсиә Емештәрҙе тыш яҡта, ишек янында, көтөп алдылар:

— Барабыҙмы? — тине Сабир. — Хәҙер үк китәбеҙме?

— Хәҙер үк, ошонан уҡ! — тип Сабирҙе үртәп шаярҙы хәҙер Емеш тә. Уның күңеле ап-арыу күтәрелгәйне.

— Ашығайыҡ, — тип иҫкәртте Хөрмәт. — Ййлаһаҡ, һуңғы сеансҡа ҡалыуыбыҙ бар.

Улар, кемуҙарҙан югерешеп, урамға сыҡтылар. Көн кисләп, эңер төшөп килгән саҡ. Көньяҡтан еләҫ яҙ еле иҫә. Бик дәү ҡыҙыл ҡояш тар ғына ҡара таҫма булып офоҡ буйлап һыҙылған хәрәкәтһеҙ болот аҫтынан күҙен ҡыҫып, аяҙ зәңгәр күккә төбәлгән. Йәш йөрәктәрҙе һәр саҡ серле ярһыу, билдәһеҙ моң менән солғап ала торған яҙғы кис яҡынлаша. Ҡала көндөҙгөнән күп йәнле, күптәр парлашып, кейенеп, төҙәнеп, урамда йөрөргә сыҡҡан. Ресторанға, пивнойға ашығыусылар ҙа юҡ түгел. Емештәрҙең алдында ғына башына ҡаракүл бүрек, өҫтөнә аҡ елән кейгән кәзә һаҡаллы бер ҡарт бара. Уға оҙон суҡлы аҡ ебәк шәл ябынған, һары сатин күлдәк, йәшел камзул кейгән, ҡарттың үҙе кеүек үк арыҡ, еңел һөйәкле ҡарсыҡ

эйәргән. Ҡарсыҡтың ҡыҙыл сәмсәле ситек менән резина галош кейгән ҡамыт аяҡтары баҫҡан һайын кәлт-көлт итеп, мәҙәк йәлпелдәп ҡала. Мосолман ире, ҡатынын эйәртеп, һис шикһеҙ, ҡунаҡҡа бара. Ҡатын йәнәш барырға хаҡһыҙ. Ул кәмендә өс аҙым арттан эйәрергә тейеш. Был күренеш Емештең ирек һәм тиңлек талап иткән горур күңелендә ирҙәргә ҡарата ниндәйҙер екһенеү, ситһенеү уятып ҡуя.

Кискә ҡала урамындағы халыҡтың көндөҙгөләргә ҡарағанда төҙөүерәк, матурыраҡ булыуы ла уның иғтибарынан ситтә ҡалмай: «Ҡурәһең, кисен байҙар күберәк йөрөй?» — тип уйлай ул. Ләкин, был уйҙы кире ҡағырға ашыҡҡандай, яндан рус, башҡорт, татар, ҡаҙаҡ телендә һөйләшкән бик күп йәштәр төркөмө лә уҙып тора. Студенттар ҙә күп йөрөй икән кис. Емеш, үҙенең ҡалаға бик һирәк сығыуын хәтерләп, эстән генә бошоноп ала, ә Сабир был юлы, нисектер, бик алсаҡ, һөйләнсәк булып китте. Гәҙәтенсә, был һөйләнсәклеге тағы шул Емеш менән бүләшеүҙән башланды.

— Ҡарағыҙ әле, уйлап-уйлап торам да шундай фекергә киләм. Беҙҙең Емеш бик уҫал икән дәбаһа! Былай булһас, ул, моғайын, комсомолға ла инер хәҙер.

Ҡолаҡланып, офоҡта янғын сығарып торған ҡояшҡа ҡарап, Емеш аҙ ғына уйланып алды. Унан үҙенә хас булмаған саялыҡ менән:

— Инермен дә шул! — тип ҡырт киҫеп яуапланы. — Инергә кәрәк тә. Анауы мөхәббәтһеҙ Яшинскийҙәр комсомол булғанды... Мин кемдән кәм?!

Хөрмәт Емештең ҡуйы керпек аҫтына йәшенгән күҙҙәрен күрергә тырышып, эйелеп ҡараны. Ҡалын толомонан йомшаҡ ҡына һыйпап алды.

— Тимәк, һин хәҙер комсомолға инәһең, сәсеңде лә ҡырҡтыраһың, эйе бит, яҡташ?

Емеш уға ихлас йылмайып ҡараны:

— Ҡырҡтырырмын да. Бер уйлаһаң, хикмәт оҙон сәстәме ни?

— Дөрөҫ! Емеш ҡайтанан тыуған бөгөн! — тип, ҡул сабып, ҡысҡырып көлдө Сабир. — Ҡарттар әйтмешләй, ғүмерең ҡыуанысҡа булһын.

— Шулай булһын!

Емеш тағы әҙерәк уйланып, инде бик дәү алтын табаҡҡа әйләнеп, офоҡта ятҡан яҙғы ҡояшҡа ҡарап алды ла баяғынан да ышаныслы, етди тауыш менән:

— Дөрөҫ әйтәһең, Сабир. Мин бөгөн яңынан тыуҙым,— тип раҫланы. Унан, ярһып: — Беләһеңме, ни өсөн? — тип һораны ла, яуап та көтөп тормаҫтан, ҡыҙыу итеп һөйләп китте.— Хаҡлыҡтың, ғәҙеллектең тантана итеүенә кескәйҙән үк ҡаҡшаған ышанысым кире ҡайтты. Эйе-эйе! Донъяла ғәҙеллек, кешелеклелек барлығына тамам ышандым. Әгәр ул булмаһа, бөгөн Дәүериә апай ни эшләр ине?! Ана, мәңгелек ҡояштың да, шуға ҡыуанып, бөгөн ерҙе ҡалдырып киткеһе килмәй тора. Ҡарағыҙ, ҡандай көләс, шат бөгөн уның йөҙө, сөнки кешеләрҙең ғәҙел һәм саф тойғоларына ул да ҡыуана бит! Аңлайһығыҙмы, дуҫтар?! Эй мәрхәмәтле нур шишмәһе, беҙ һине бер ҡасан да көйөндөрмәбеҙ, һин дә беҙҙе үҙеңдең терелткес изге нурҙарыңдан бер ҡасан да мәхрүм итмә. Һинең нурлы яҡты йөҙөңә ҡарап, һаман алға, яҡтыға, яҡшыға табан атларға, һаман бейеккә, юғарыға, сафлыҡҡа, шатлыҡҡа күтәрелергә булыш һин беҙгә, изге ҡояш!..

Дуҫтары, өндәшмәҫ ҡыҙҙың көтмәгәндә шундай һүҙсән һәм ярһыу булып китеүенә тағы ла нығыраҡ ғәжәпләнеп тә, офоҡта серле нурҙар уйнатып, ялҡынланып янған ҡояштың мөһабәтлегенә һоҡланып та, тынып ҡалдылар, ә Емеш, һаман баяғыса ярһыу һәм күңелле итеп, ҡояш менән һөйләшеүен дауам итте:

— Ниңә һин шул хәтле иғтибар менән текләйһең беҙгә, әсәбеҙ ҡояш? Ниндәй киләсәк вәғәҙә итәһең? Ниҙәр аңлатырға, нимәләр иҫкәртергә уйың бар? Һөйлә, байымаҫ элек әйтәһе һүҙеңде әйтеп ҡал! Аҙаҡ, байығас, һуң булыр!..

— Әйтәһе һүҙеңде әйтеп ҡал!

— Аҙаҡ һуң булыр! — тип дуҫтары ла шаярып ҡабатланылар.

— Билет ҡалмаҫ! Югерҙек! — тип бойороҡ бирҙе Хөрмәт.

Улар ашыға-ҡабалана кинотеатрға юнәлделәр.

## VIII

Көн буйы боҫоп, тәҙрә үтә урамды күҙәтеп ултырған Шымбай ҡарт бер шешә араҡыны төп күтәрә һуҡты ла, шыйылдап көлә-көлә, үҙалдына һөйләнеп ятты:

— Ҡеһ-кеһ-кеһ!.. Үтте. Был юлы ла үтте. Йәнде усҡа алып ултырыуым бушҡа ғына булды. Мулла әйтмәгән

Әйтә алмаған. Шул, шул!.. Әйтә алмаҫ та шул. Ул әйтһә, минең дә әйтер һүҙ барын белә бит!.. Ай-һай, әгәр әйтһә, был Әхәт менән Иштуған хәҙер килеп инеп, яғаһан алырҙар ине. Законды ла көтөп тормай, йәнеңде йәһәннәмгә ебәрерҙәр ине. Ҡеһ-кеһ-кеһ!.. Ах, коммундар, йә, сабырмай тороғоҙ әле. Тағы бер аҙ яғалашып алайыҡ әле, маҙаҡ булһын әле, кеһ-кеһ-кеһ...

Эштәр былай нисауа ғына бара ине бит. Клуб янды — ғәйеплеһе табылманы... Мәктәптең мейесе емерелде — эҙһеҙ үтте... Шулай һәйбәт кенә барғанда, бынауы иҫәр Ғаббас мулла үҙенән шикләнерҙәр тип, күрәһең, бер кемгә әйтмәй, кәңәшмәй, муллалыҡтан баш тартты ла ҡуйҙы лабаһа! Етмәһә, мәсетте һибә итте. Йәнәһе, үҙ башынан себен осорҙо. Сәүит яҡлы кеше булды! Булмай тор әле... Ҡеһ-кеһ!.. Булмай тор әле, йәме! Беҙ бит әле теребеҙ. Иҫәнбеҙ. Үҙ урынын онотоп киткәндәрҙе бик шәп кенә өйрәтә лә беләбеҙ. Ҡеһ-кеһ... Һай, эсең көйгөрө... Әлбиттә, Әхмәтша, уҫал малай, әҙерәк арттырыбыраҡ ебәргән дә ебәреүен... Башына теймәгәндә лә ярар ине лә, бахырҙың... Ҡеһ-кеһ. Йә, ярар, бынан ары аҡыллыраҡ булыр, кәңәшһеҙ эш йөрөтмәҫ... Ҡеһ-кеһ-кеһ!.. Әйтмәгән, ә?..

— Нимә, алйот кеүек, үҙалдыңа үҙең мығырҙанып ятаһың? — тип унын һүҙен бүлде Ғәйшә әбей. — Мулла тере булһа, әйтер ине. Үлгән бит ул...

— Ә-ә... Улаймы ни!? Бик хуп, бик мәғҡүл, кеһ-кеһ...

— Кит, иманһыҙ! Тор, һөйләнеп ятма. Төшкө тамаҡҡа әҙерләнем! — тип Ғәйшә әбей аяҡ осона уҡ килеп баҫҡанда, Шымбай ҡарттың йөҙөнән үтә ҡәнәғәт йылмайыу китмәгәйне әле.

— Йәшәйбеҙ бит әле! — тип кәйефле һөйләнә-һөйләнә тороп ултырҙы. — Ҡеһ-кеһ-кеһ!.. Йәшәйбеҙ! Яғалашабыҙ! Шулай бит, әбей?!

Ҡарттың кәйефе яҡшылығын күргәс, Ғәйшә әбей, баҙнатланып:

— Кит, иманһыҙ! — тип ҡабатланы ул, йөрәге атылып сығырҙай булып ҡалтырап, ҡурҡып китһә лә. — Төптө мортот! Ҡот осҡос кеше һин, бабай! Илле йыл бер түшәктә ятып, илле тинлек тә төшөнә алманым һиңә!.. Эсеңдә әллә ниндәй шайтан йәшереп, шуның менән серләшеп ғүмер иттең! Улыңды ла үҙеңдең ҡара юлыңа баҫтырҙың, ә мин ғүмер баҡый һеҙгә сит, ят булдым. Эй аллам, исмаһам, мине йәһәтерәк үҙ яныңа саҡырып алмайһың да

бит... Бындай ҡара тормоштан арыным инде мин, арыным...

Шымбай ҡарттың тәрән һырҙар менән ҡапланған ҡотһоҙ йөҙөндәге иблес йылмайыуы ҡапыл ҡот осорғос зәһәрле асыу менән алмашынды.

— Йә, йә! — тине ул, гәҙәттәге йөрәк өшөткөс ыҫылдауға күсеп. — Мине белмәүең, аңламауың — бәхетең! Уның аръяғы минең эш! Төшөндөңмө, сепрәк баш?!

— Төшөндөм, ҡарт, төшөндөм! — тип инде бала шикелле тәтелдәне Ғәйшә әбей. Ҡерле аҡ кешмир яулыҡ бәйләгән бәләкәс кенә башын яурын араһына йәшерҙе. — Бөттө, атаһы, бөттө!..

Улар артабан өнһөҙ-һүҙһеҙ генә сәй эстеләр. Өй эсе ҡараңғы һәм тын булып ҡалды. Халыҡтың ерен буш хаҡҡа алырға ярҙам иткән өсөн Ырымбур байҙары бүләк иткән өлкән көмөш самауырҙың эс бошорғос шыжылдауы менән мейес артындағы сиңерткәләрҙең йән биҙҙергес сырылдауы тынлыҡҡа тағы ла йән биҙҙергесерәк сирҡаныс шом өҫтәне.

Сәйҙән һуң Ғәйшә әбей йәһәт кенә сынаяҡ, һауыт-һабаны йыйып, аш өйөнә сығырға ашыҡты. Шымбай ҡарт ауыр самауырҙы көскә күтәреп барған ҡарсығы артынан зәһәрле шыйылдап ҡалды.

— Эй, ҡара, Зәһираны ныҡ тот! Ул ҡыҙ ҡулдан ысҡынып барғанға оҡшай. Комсомолға яҙыла ҡалһа, минән яҡшылыҡ көтмә!..

«Үҙең тот. Һин бит бөтә донъяның тотҡаһы! — тип ҡарыулашҡыһы килде Ғәйшә әбейҙең. — Һин бит беҙҙең алла ла, мулла ла!..» Ләкин өндәшмәне. Сөнки өндәшмәү — уның берҙән-бер йәшәү шарты ине.

Аулаҡ ҡалғас, Шымбай ҡарт йәнә, ҡулдарын баш аҫтына ҡуйып, салҡан төшөп ятты. Йәнә үҙенән бик ҡәнәғәт булып, төнгө ваҡиғаны ентекләп күҙ алдынан киҫерҙе.

«Клубты көлгә әйләндереү мәсьәләһе тап алдан һөйләшкәнсә эшләнде. Оҫта, бик ваҡытлы. Шәп башҡарҙы Хөснөлхаҡ был эште, көтмәгәнсә шәп! Әхмәтша ла, мин дә өйҙә юҡ саҡта эшләүе бигерәк тә шәп булды. Тап һөйләшкәндәгесә сыҡты! Беҙгә ҡарата шик-шөбһәгә урын ҡалманы...

Быныһы өсөн рәхмәт Ғаббас ҡорҙашҡа! Бик ҙур рәхмәт. Әйҙә хәҙер уның урыны көрси тигән иң шәп ожмахтың түрендә булһын. Йәлләмәйем... Ҡөнләшмәйем.— Ҡеһ-

кеһ... Әммә мәсет өсөн нисек уның ҡабырғаһын һанамайһың?! Үәт, ҡарт төлкө!..

Шулай ҙа... был ҡартты, әгәр хәҙер үлеп ҡотолмаһа, Сәүиттең үҙенән бөтөнләй йыйыштыртып ҡуйғанда ла шәп булыр ине. Хөснөлхағы хаҡында әйтеп... Ул саҡта... Беҙҙең дә йән тыныр ине. Был ҡоҙоҡтан да ҡоро сыҡҡан ни, тим... Юҡһа уның, ҡурҡаҡтың, бер саҡ теле сиселеп, беҙҙең башты ашап ҡуйыу ихтималы бар бит... Икенсенән... Мәсетте тартып алдылар, муллаңы баструкка һалдылар... Хамматтар, Иштуғандар оҙаҡламай бөтә кешене рәшәткә артына тығып бөтәсәктәр тигән һымаҡ бер-ике ауыҙ ғына һүҙ ысҡындырып ебәрергә бик тә йәтеш булыр ине... Аръяғын бер ҡатлы халыҡ үҙе белер ине. Ҡеһ-кеһкеһ... Халыҡ бит ул — һарыҡ көтөүе. Бер өркһә, кәртәңде емермәйенсә туҡтауҙы белмәй. Өркөтөп кенә ебәреү шарт!..»

Шымбай ҡарт үҙенең йән аҙығы булған шундай зәһәрле уйҙар бәүетендә оҙаҡ ваҡытҡа ҡаты йоҡо эсенә инеп сумды, ә инде ул уянып күҙен асҡанда, эңер төшкән, өйгә шәм алынған, ә уның аяҡ осонда:

— Атай! Ата-ай! — тип бышылдап, Әхмәтшаһы баҫып тора ине.

Ҡарт, һаташҡандай, ырғып тороп ултырҙы. Тирә-яҡты уҡ күҙҙәре менән һөҙөп сыҡты. Өйҙә улынан башҡа кеше юҡлығына тамам ышанғас:

— Ә, ни бар? — тип һораны.

— Бына Моратшанан волкомға ялыу ҡағыҙы яҙҙырҙым...

— Нисек барып сыҡты? Йә, уҡы әле.

— Һөйләшкәнсә яҙылды. «Иштуған элек-электән мәсеткә ҡаныҡып йөрөй ине. Шуны алыр өсөн үҙенең комсомолдары менән бергәләп иҫке мәҙрәсәһен ут төртөп яндырҙы. Унан, мулла берәй саҡ мәсетен кире дауламаһын тип, шундай уҡ яман юл менән мулланы ла туҡмаған, ер аҫтына йыйыштырып ҡуйҙы...»

— Шуның менән бөттөмө? — Шымбай ҡарт иренен ҡыйшайтып көлдө. — Һин әле доностың иң шәбен яҙа белмәйһең икән, кеһ-кеһ...

— Нимә өҫтәр инең?

— Был эштәрҙе Иштуған яуыз ниәт менән эшләне. Халыҡты сәүиткә ҡаршы аяҡландырыу ниәте менән тигәнне өҫтәргә кәрәк. Үҙҙәренең һүҙҙәре менән үҙҙәрен

туҡмарға белергә кәрәк уларҙың! Аңланыңмы? Ҡеһ-кеһ-кеһ...

Ҡарт улына секерәйеп оҙаҡ теклəп, зəһəрле йылмайып ултыра бирҙе лə, тағы шыйылдап һөйлəп китте: — Волкомға яҙыу ғына етмəй, ГПУ-һына ла яҙырға кəрəк. Ул Зəки Вəлидиҙе гел маҡтап һөйлəй тигəнде ҡушһаң, бигерəк тə шəп була...

— Ҡултамғаһыҙ булғас, ышанмаҫтар шул, — тип мығырҙаны Əхмəтша. — Ышандырырлыҡ, алып ырғытырлыҡ булһын ине булғас...

— Ышанмаһалар ҙа, шик һалырға, Иштуғандың исеменə кер төшөрөргə етə ул. Бигерəк тə Вəлидигə бəйлəгəс... Уны кем баҙнат итеп яҡлаһын?.. Ҡонтр. Миллəтсе! Бөттө китте. Əйҙə, аҙаҡ хəленəн килһə, аҡланып ҡараһын!.. Ҡеһ-кеһ-кеһ...

Əхмəтшаның йəшел күҙҙəрендə зəһəрле ут тоҡанып китте:

— Иллə, атай, эт тə һуң үҙең!

— Атыу?! Бөтə донъяһы эт булғас...

Улар, бер-береһенə һөҙə ҡарап, оҙаҡ тынып торҙолар. Тирə-яҡҡа ҡуйырып, үтə тос булып эңер шəүлəһе ятты. Бер аҙҙан Əхмəтша ниндəйҙер бик ҡыуаныслы, яңы хəбəрҙəй итеп, кинəнеп:

— Атай! — тип бышылданы. — Таиба əбей үлгəн!

— Ҡасан, нисек? — тип тамам айнып китте Шымбай ҡарт.

— Бөгөн. Ҡапыл.

— Ҡапыл, тиһең, ə? Ауырымай үлгəн, тиһең, ə? — тип мығырҙанып, ниҙер хəтерлəргə, иҫ-аҡылын йыйырға тырышҡандай, тынып торҙо Шымбай ҡарт. Унан шкафтан тағы бер шешə алды. Ике стаканға бүлеп, береһен улына тотторҙо. — Йə, күтəрəйек. Был үлеүҙəн дə үҙебеҙҙең файҙаға берəй йөй сығарып булыр, тип уйлайым... Ҡеһ-кеһ...

* * *

Хисбулла аптырап ишек төбөндə туҡтап ҡалды:

«Нимə булған? Ниңə был ҡарсыҡтар йыйылған? Ниңə əсəйем һуҙылып төшөп ятҡан?! Мин йыйылышҡа киткəндə, мунса инеп, йылынып ҡарайым əле, тигəйне шикелле. Күрəһең, ауырып киткəндер. Еҫ тейҙеме икəн мунсала?» — тигəн борсоулы уйҙар менəн яҡ-яҡҡа күҙ йөрөтөп сыҡты.

Ҡатынының илап шешенеп бөткән күҙҙәрен күргәс, бөтөнләй ҙә хафаланып:

— Ни булды? — тип ҡысҡырып ебәрҙе. — Әсәйемә ни булған?!

— Бейем үлеп киткән дәбаһа...— тине Бибеш, илап.— Белмәй ҙә ҡалдыҡ табаһа!..

Хисбулла, дауыл осороп алып киткәндәй, өйөрөлөп, урындыҡ янына йүгереп килде.

Әсәһенең һыуынырға ла өлгөргән ҡулдарынан, яңаҡтарынан һыйпап ҡараны. Унан шунда, иҙәнгә үк бөгәлөп төштө лә бала шикелле үкһеп илап ебәрҙе.

— Әсәйем, әсәйем!..

Ҡарсыҡтар, шым-шым ғына һөйләшеп, бер ситтә торҙолар. Ахыр Бибисара абыстай әкрен, шомло тауыш менән уфылдап ҡуйҙы:

— Үлем ағас башынан йөрөмәй, әҙәм башынан йөрөй торған хәл инде ул, Хисбулла улым. Барыбыҙ ҙа үләбеҙ. Таиба ҡорҙаш ашарын ашаған, йәшәрен йәшәгән тигәндәй...

— Ҡуй, бушты һөйләп торма әле, инәй! Әсәйем бик аҙ йәшәне. Донъяның рәхәтен бигерәк тә аҙ күрҙе.

Хисбулла йән әсеүе менән һикереп торҙо. Урындыҡта ак япма аҫтында ғәҙәттәгенән дәү, бейек булып ятҡан әсәһенең йөҙөнә аптырап ҡараны.

— Нисек булды һуң әле был? Шулай бик ҡапыл, һис тә көтмәгәндә!..

Бибисара абыстай тағы һүҙгә ҡыҫылды.

— Үлем — ҡунаҡ түгел ул. Бер кемдән дә һорап, хәбәр итеп килмәй. Уны бер кем дә һағынып көтөп алмай, — тине. Унан ҡаты ғына итеп бойорҙо: — Һин ир кеше. Ебеп торма, бар, ерләү сараһын күр. Беҙ мәйетте әҙерләрбеҙ... Ҡәфенлеген дә, хәйерлеген дә — бөтәһен алдан әҙерләп ҡуйған икән, мәрхүмә. Үҙен йыуыусыларға, ҡәбер ҡаҙыусыларға, йыназа уҡыусыларға, ерләүселәргә — бөтәһенә лә бүләге, хәйер-саҙаҡаһы әҙер, ә һин, көтмәгәндә, тиһең... Белекле кеше ине шул, мәрхүмә. Бик белекле ине. Көткән. Әҙерләнгән...

Хисбулла түрбаш яҡта һаман илап торған ҡатыны янына барҙы.

— Нисек булды һуң әле был?.. Бибеш, һөйләп бирсе, зинһар! Шундай һау, таҙа әсәйем... Уның бер ҡасан эһ игәнен дә ишеткәнем юҡ ине ләбаһа!

— Башым ауырта, тип был арала йыш әйтә ине лә ул, — тине Бибеш, йәшле күҙҙәрен иренә төбәп. — Бөгөн иртәнсәк торғас, «мунса яҡ, эҫе мунсаға инеп сабынып ҡарайым», тине... Яҡтым... Тәүге мунсаға үҙем инеп, балаларҙы йыуындырып сығарҙым. Унан бейемде лә сабындырайым тиһәм, үҙем тип, миндек менән ҡат-ҡат сабынды. Ҡатыҡ менән йыуып, сәстәрен һәйбәтләп тарап үрҙе, өҫ-башын тотош ап-аҡтан, таҙанан кейҙе. Шунан ҡайтып киттек. Ул ятып торҙо. Мин самауыр ҡайнаттым. Сәй әҙерләнем. Шунан уятһам, өндәшмәй. Йоҡлайҙыр, ахыры, йә, ята бирһен, тим, көтәм, бер ҙә ҡуҙғалмай. Шунан, күңелемә шик төшөп, янына барһам... Йөрәгем ярыла яҙҙы. Үлгән!

Бибеш шулай өҙөлә-туҡтай һөйләп бөттө лә тағы сеңләп илап ебәрҙе.

— Бигерәк ҡапыл булды лабаһа!

— Ауырымай үлеүҙе ҡөрьән маҡтамай ҙа маҡтауын, — тип һүҙгә ҡатышты тағы Бибисара абыстай. — Ҡалай итәһең, хәл юҡ. Ауыр тупрағы еңел булһын инде, мәрхүмәнең. Үҙе һәйбәт кеше ине лә бит, күрәһең, берәй балаһының гонаһ шомлоғо арҡаһындалыр, ауырып-һыҙлап гонаһын йыуырға өлгөрмәй, бөтә гонаһын үҙе менән алып китте инде, бисара.

— Инәй! — тип өндәште Бибеш, ҡоро ғына итеп. — Мәйет өҫтөндә шундай шомло һүҙ һөйләүеңде ҡуйып торор инең, исмаһам...

Бибисара абыстай ғәжәпләнеүҙән хатта аһылдап ҡуйҙы.

— Ҡарағыҙ әле, ҡалай телдәргә әйләнгән! Мине өйрәтмәксе! Ҡалай, ҡайҙа һөйләшергә өйрәтмәксе бит, ә?! Ахыр заман етеүе ошолор инде... Күкәй тауыҡты өйрәтә башланы, — тип тамам йәберһенеп һөйләнде Бибисара абыстай. Унан тиҙ үк ҡайтымһаҡ тауыш менән Хисбуллаға өндәште: — Йә, балаҡай, бар, кешеләргә хәбәр ит. Йоҡларға ятмаҫ элек уларға белдер. Иртән иртүк ҡәбер әҙер булһын...

Хисбулла, башын баҫып, өнһөҙ-һүҙһеҙ сығып китте. Өйҙә ауыр тынлыҡ урынлашты. Өрлөктәге етеле лампанан таралған һарғылт яҡтылыҡ әсе һағыш өҫтәне. Оләсәләренә нимә булғанын, өлкәндәрҙең ниңә ҡайғырғанын тулыһынса аңлап етмәһәләр ҙә, күңелдәре менән низер һиҙенеп шымып ҡалған Һөйөндөк менән Йәнеш ултырған ерҙән ауып йоҡлап китте. Бибеш, йәшле күҙ-

үрен берсә балаларына, берсә ҡапыл ҡайғылы булып киткән Бибисара абыстайға төбәп, баяғы тупаҫ һүҙе өсөн үкенеп уйланды. «Йә, ни тип оло кешегә шулай ҡаты бәрелдем, алйот! Әлдә ул бар бит әле. Юғиһә Хисбулла менән беҙ хәҙер нимә эшләр инек?!

Эй-й, һөйләр һүҙең — көмөш булһа, тик тороуың — алтын тип белмәй әйтмәйҙәр шул... Бығаса, мин үҙем дә гел ошо мәҡәлде иҫтә тотҡан кеүек, бик тиҙ генә һөйләп, һүҙ әйтеп бармай инем дәһә... Әле ни булды һуң?.. Оло кешене, етмәһә, шундай ауыр мәлдә ярҙамға килгән изге кешене...» Эсенән ҡаты үкенеп ултырҙы. Унан ололау, ғәфү үтенеүҙе аңлатҡан баҫынҡы, йомшаҡ тауыш менән:

— Инәй! — тип өндәште. — Инәй, Хаммат ағайҙарға хәбәр итергә кәрәктер бит?

— Үәт диуана, онотоп та торам, — тип ҡабаланып китте Бибисара абыстай. — Хәбәр итергә кәрәк булмаған кайҙа ти ул! Кәрәк. Бик кәрәк. Унһыҙ һис тә ярамай, — тип һөйләнә-һөйләнә, ашығып кейенә башланы. — Туҡта, мин хәҙер генә, йәһәт кенә Иштуған кейәүгә барып киләйем. Әхәткә әйтеп, волоскә ат саптырһын, ә һеҙ, Бибекәй ҡорҙаш, һин дә, мәйет янында ултырып тороғоҙ. Сыҡын йөрөмәгеҙ. Йәштәрҙең яңғыҙын ҡалдырмағыҙ,— тип ишектән сыҡҡансы өйрәтеп китте. Бибеш уны, ауыр саҡта кешегә һәр саҡ ярҙамға әҙер торған телдәр ҡарсыҡты, ихтирамлы ҡараш менән оҙатып ҡалды.

— Инәй, аяҡ аҫты ҡараңғы. Ипләп кенә бар. Йығылып, имгәнеп ҡуйма.

* * *

Иртәгеһен Таиба әбейҙе бөтә ауыл ерләне. Һәр кем уның хаҡында тик яҡшылыҡ, яҡтылыҡ менән генә иҫкә алды.

— Бөркөт йөрәкле бисә ине.

— Улай-былай ирҙәрендә бәреп йығырлыҡ таҫыллы ҡатын ине. Эш өсөн үлер ине. Бер минут тик тороуҙы белмәҫ, бутәндәрҙең эшһеҙ тороуын да яратмаҫ ине. Урыны ожмахтың түрендә булһын, мәрхүмәнең.

— Намыҫ менән ғүмер итте. Зарланыу, һыҙланыу белмәне. Өнһөҙ-һүҙһеҙ китте...

— Эйе, күңел яраһын эсенә йотоп йәшәй белә ине шул... Закире өсөн аҙ өҙгөләндеме ни уның йәне?! Ә күҙ йәшен кем күрҙе? Эйе, шулай матур йәшәне, һыр бирмәне...

Тик бер Шымбай ҡарт ҡына халыҡтың ҡарашына ҡушылманы. Етмәһә, мәйетте ерләп ҡайтып килгәндә, Ғаббас мулланың батрагы Биктимерҙең ҡолағына:

— Ҡеһ-кеһ, ишеттеңме, ауырымай-һыҙланмай, ятҡан да үлгән. Ясинһеҙ үткән! — тип ысылданы. Тәрән ҡайғы эсендә үҙ-үҙен онотоп килгән Хаммат яғына эйәге менән ымлап:

— Ә-ә-ә, шул коммун улының гонаһ шомлоғонан иманһыҙ үтте инде, бисара, — тип өҫтәне. Биктимерҙең ҡыҫыҡ күҙҙәре шар асылып китте. Ул, ҡото осоп, ҡартҡа текләне.

— Шулайҙыр, тип уйлайһыңмы, олатай?

— Шулай булмай... Йоҡлағанда иман уҡып буламы ни? Ул бит йоҡлап ятҡанда үлгән...

Биктимер ҡурҡышынан ҡабаланып иман уҡып алды:

— Лә илаһи-илалла...

Шымбай тағы зәһәрле кеткелдәне:

— Ҡеһ-кеһ-кеһ, бына шул коммундар халыҡты артель итеп бөтһә... шулай иманһыҙ үтеүселәр көн дә булып торор әле... Күрерһегеҙ... Балаларының гонаһы арҡаһында аталары... әсәләре...

— Ҡуйсы, олатай, һин бигерәк ауырға юрайһың да,— тине Биктимер, шомланып.— Бына мин, һау булһам, ғүмерҙә коммун булмаясаҡмын.

— Үҙең булмау менәнме ни ул. Тирә-яғыңда коммун йәшәгәс... Гонаһы уның барыбер...

Биктимер электән дә ауырымай ҡапыл үлгән кешеләргә бында халыҡтың шомланып ҡарауын, алла ҡаршыһына гонаһлы көйө барып баҫасаҡ, тип иҫәпләүен ишетеп белһә лә, бөгөн Шымбай ҡарт әйткән хәтле итеп күҙ алдына килтергәне юҡ ине әле. Инде ул бөтөнләй өмөтөн өҙөп, аптырап ҡалды:

— Нимә эшләргә һуң, улай булғас, олатай?!

Шымбай ҡарт, төҫһөҙ ирендәрен саҡ ҡына ҡыбырҙатып:

— Эм-м... уйларға кәрәк, — тип бышылданы. — Уйларға, кәңәшергә...

## IX

Комсомол сафына инеү — Емештең тормошонда иң ҙур ваҡиға булып тора ине. Шуға күрә ул, хатта ғариза биргәс тә, үҙенең был ҙур эшкә әҙерме, ярарлыҡмы-ту-

телме икәнлеге хаҡында өҙләкһеҙ баш ватты. Комсомол булдың, тимәк, иҙелгән, кәмһетелгән хеҙмәтсән халыҡтың — эшсе-крәҫтиән синыфының тормошон яҡшыртыу, уны яңы, яҡты бәхеткә етәкләү өсөн көрәштең алғы сафына баҫтың. Дуҫлыҡ, туғанлыҡ, ғәҙеллек, бөтә яҡтан тоғаналылыҡ, намыҫлылыҡ яҡлы, кеше бәхете өсөн үҙ-үҙеңде аямай көрәшергә хаҡлы һәм һәләтле кешеләр генә йөрөтөргә тейеш бит был исемде. Бына Емеш әле үҙенең ошо үҫеш кимәле менән комсомолка була аламы? Халыҡҡа хеҙмәт итергә һәләтлеме? Кеше бәхете өсөн үҙ ғүмерен ҡорбан итергә әҙерме?!

Ул үҙенсә комсомолдың төп сифаты булырға тейешле бөтә яҡты шулай берәм-берәм тикшереп сыға. Берсә был сифаттарҙың бөтәһе лә үҙенә хас һәм яҡын икәнен тойоп ҡыуанып китә, берсә, үҙенең үтә ҡырыҫ ғәҙәтен хәтерләп, көйөнә башлай: «Көрәшсе булыр өсөн был ҡылыҡ яраҡлымы?» — тип икеләнә.

Һуңғы көндәрҙә ул «Гүзәл кешеләр тормошо» тигән циклдан китаптар уҡырға айырыуса әүәҫ булып китте. Уны бигерәк тә ҡатын-ҡыҙ революционеркалар тормошо ҡыҙыҡһындыра ине. Улар ниндәй булған, нисек йәшәгән, ниндәй көрәш юлы үткән? Бына әле лә ул уҡыу бүлмәһендә шул хаҡта уҡып, уйланып ултыра, һәр береһенә оҙаҡ-оҙаҡ туҡтап, дәфтәренә ҡайһы бер урындарын яҙып ала бара.

«...Лениндең ҡыҙ туғандары Мария, Анна — уның иң яҡын көрәштәштәре булған.

Мария Ильинична инглиз, француз, немец телдәрен үҙ теле кеүек белә икән! Эй-й, ни хәтле тел белһәң, күҙ күремең шул хәтле киңәйә бара инде ул!»

Надежда Крупскаянан Емешкә кешене, балаларҙы, йәштәрҙе яңы рухта, коммунистик рухта тәрбиәләү тураһындағы фекерҙәр айырыуса нык оҡшаны.

«Кеше аҡыл яғынан да, рух яғынан да үҫергә тейеш, — ти Крупская. — Бына шул һәр кешенең үҙенсәлекле үҫеше нигеҙендә, тора-бара беҙҙең «мин» һәм «беҙ» һүҙҙәре бергә ҡушылып, бер бөтөнгә әйләнгәс, ҡеүәтле социалистик коллективҡа хас булған өр-яңы кеше барлыҡҡа киләсәк», — ти.

Емеш, был фекерҙең мәғәнәһенә аныҡыраҡ төшөнөргә тырышып, оҙаҡ ҡына уйланып ултырҙы. Ошо ваҡыт уның хәтеренә ҡасандыр Байрастың Таиба әбей менән һөйләшкән бер һүҙе килеп төштө. Байрас ул көндө Але-

шаның атаһы Никита Иванович коммуна хаҡында уға нисек аңлатыуын һөйләгәйне... «Унда кешеләр «мин», «минеке» тип түгел, «беҙ», «беҙҙеке» тип кенә һөйләшәсәк. Сөнки бөтә кеше бер туған, берҙәм бер бөтөн ғаилә буласаҡ...»

Был һөйләшеүҙе тыңлағанда, Емеш ышанмағайны: «Булмаç... Бер кем дә уға күнмәç. Ана, минең үгәй әсәйгә берәй әйберен «беҙҙеке» тип әйтеп ҡара әле, тешеңде емерер!» — тип хатта Байрастың бер ҡатлылығынан эстән генә көлөп тә ҡуйғайны, ә хәҙер был һүҙҙе үҙе лә нисек кинәнеп әйтә:

— Беҙ! Беҙҙеке! Ысынлап та, ҡайһылай яғымлы, ғорур яңғырай был һүҙ. «Беҙ» тигән һайын, беләктә күмәктән йыйылған баһадирлек көсө арта, йөрәктә берҙәмлек дәрте тоҡанып китә ләбаһа!

Илдәге барлыҡ кешеләр ҙә ошондай тойғоға килһен өсөн, бығаса булған тормош шартын бөтөнләй үҙгәртеп, ҡайтанан төҙөргә кәрәктер, ахыры. Анауы, Иштуған ағайымдар төҙөй башлаған артелдәр, бәлки, шул кешеләр ғорурлыҡ менән «беҙ», «беҙҙеке» тип, күкрәк киреп йәшәй башлаясаҡ тормоштоң башланғысылыр ул...

Емеште ҡатын-ҡыҙҙарҙан беренсе дипломат Коллонтай образы бөтөнләй үҙенә ғашиҡ итте. Ун өс йәшендәсаҡта уҡ ул халыҡ бәхете өсөн ҙур батырлыҡтар эшләү хаҡында хыяллана башлаған! Ә инде ун һигеҙ йәшендә ҙур белемле бик һылыу ҡыҙ булып етешкән. Уны бигерәк тә ҡатын-ҡыҙ яҙмышы борсоған. Ҡатын-ҡыҙ азатлығы өсөн көрәштән башлап киткән ул үҙенең революцион юлын...

Коллонтай хаҡында уҡығас, Емеш тағы уйын үҙенә күсереп, бошоноп китте.

«Бына бит, ниндәй дәүерҙә ун өс йәшенән революцион көрәш юлына баçҡан ул! Ә мин ун алты йәштә бынауы заманда һаман комсомолға инергәме-инмәçкәме әле тип, икеләнеп ултырам! Эй аңһыҙлыҡ! Эй артталыҡ! Ана бит, үҙебеҙҙә генә түгел, бөтә донъя күләмендә хеҙмәтсән халыҡтың бәхете өсөн көрәш алып барған ниндәй ҡатындар бар! Их, шулар кеүек булһаң ине!.. Ҡайҙа һуң, ҡайҙа?!»

Ул, йәне түҙмәй, уҡыу бүлмәһенән сыҡты. Ашығып коридорға, унан ишеккә ташланды. Югерә-атлай, ҙур көҙгө ҡаршыһына барып баçты. Үҙен баштан-аяҡ

...кләп ҡарай башланы: «Нисек, төҫө-башы киләме уның комсомолка булырға?»

Емеш ҡасандыр, ауылда саҡта әле, Сәхибә туташтың маңлайына ҡырҡып төшөрөлгән сәсенә ҡыҙығып ҡарап:

«Моғайын, миңә лә шундай өлпөй килешер ине. Бына ... үтә киң, текә маңлайымды ҡаплап торор ине, исмаһам», — тип уйлағайны. Бына хәҙер уның да маңлай сәсе ... алға таралған. Килешә. Түңәрәтеп ҡырҡып, ... төшөрөп һалынған тулҡынлы ҡара сәстәр ҙә ... уға бик һәйбәт күренә. Дөрөҫ, ҡалын бөҙрә сәс, ... һылап-һыйпап ҡуйырға мөмкин булмағас, артыҡ ...рын, башты ҙурайтыбыраҡ ебәргән, ҡаҡса бите ... өҫтында бөтөнләй юғалып ҡалған һымағыраҡ булып ... ла тороуын, әммә Емешкә барыбер оҡшай.

Ул, йылмайып, көҙгөгә яҡын уҡ барып баҫты. «Ҡара һин уны!» — тип, хатта үҙ-үҙенә һоҡланып ҡуйҙы, сөнки ...лып киткән ҡалынraҡ ҡара ҡаштар ҙа, һөрмәле ... ҡара күҙҙәр ҙә, хатта үгәй әсәһенә «сиған ҡыҙы» тип ...рләүгә ерлек биргән ҡуңыр йөҙө лә уға хәҙер оҡшап. Бигерәк тә күҙҙәр... Улар, нисектер, элеккесә йә ..., уйсан, йә ҡырыҫ, текә генә ҡарамайҙар. Улар... индәйҙер наҙлылыҡ, үҙ-үҙенә ышанғанлыҡ, хатта ...лыҡ нурҙары ла сағылып китә һымаҡ...

— Ҡара һин уны! — тип тағы ла шатыраҡ йылмайып ...тланы Емеш. — Һин дә комсомолка булмағас, кем ...һын тағы?!

Ул, күкрәгенә һыймаған билдәһеҙ ҡыуаныстан көлә-..., баҫҡыстан югереп төштө.

Тышҡа сыҡҡас та, ҡырҡылған сәстең үҙенә килешеүе ...ндағы уй уны тиҙ генә ҡалдырып китмәне.

«Пә, оҙон сәсте йәлләп, хатта комсомолға инмәй йөрөйөм бит, ә! Шәмсиә дөрөҫ әйтә. Алйот мин! Бүтән кеше ... гел генә эшләй торған нәмәне лә мин мең төрлө кирешә аша үткәрәм, эй алйот ҡыҙыҡай, алйот ҡыҙыҡай!.. ... күпмегә, нимәгә еткереп бөтөрһөң һин уны — кирешә?! Алда бит әле йәшәлмәгән тип әйтерлек тотош бер ғүмер ята!»

Ул, сәс ҡырҡтырған көнөн эстән генә йылмайып хәтерләй-хәтерләй, бер аҙ тышта йөрөнө. Уҙған ял булды ... хәл. Ныҡыша торғас, яҡташы Хөрмәт уны тамам ...ерҙе.

— Үҙем матурлап ҡына ҡырҡам, — тип хатта ҡайсы ..., итәккә уҡ килеп инде.

— Әйҙә, ҡырҡ, — тине Емеш. Ултырғыс ҡуйып, иҙән уртаһындағы буш урынға ултырҙы. Ятаҡта булған ҡыҙҙар бөтәһе лә, ҡыҙыҡһынып, был ваҡиғаны ҡарарға йыйылды. Толомдо һүтеп таратып ебәргәс, бөтә кәүҙәһен болот кеүек ябып алған тулҡынлы ҡара сәсте, күрене тора, бөтәһе лә эстән йәлләй, әммә өндәшмәй тынып көтә ине. Хөрмәткә лә еңел түгел, күрәһең. Ул, нисектер, тирләй-бешә Емеш тирәһендә һаман әйләнгеләй, һис тә ҡырҡырға тотоноп китә алмай ыҙалана.

— Йә, нимә мыштырҙайһың тағы? Ҡырҡа һал, батыр! — тип күңелһеҙ генә көлә Емеш. — Алдан маңлайыма өлпөй яһа, башҡа яғын бик ҡыҫҡа итмә. Яурыныма төшөп ятһын!

Хөрмәт нисек итһә итте, сәсте мөнтәп ташланы. Емеш ҡырҡып алған сәсен, ике толом итеп үреп, карауатҡа һуҙып һалды. Ҡыҙҙар берәм-берәм килеп, тағы толомдарҙы тотҡолап ҡаранылар. Инде арала:

— Ҡит, шундай сәсте лә әрәм иткәс!

— Нисек йәлләмәй ҡырҡтырмаҡ кәрәк? Минең ундай толомом булһа, мин һис тә генә... — тип үкенепме, үкендерергә теләпме, һөйләнеүселәр ҙә табылды. Емеш инде бер ни ҙә өндәшмәне. Емеш уларҙы йәһәт кенә газетаға төрҙө лә тумбочкаға тығып ҡуйҙы:

— Бынан ары бер ҡасан да оҙон сәс үҫтермәйем. Үтте уның заманы. Үтһен!

— Хәҙер ғариза яҙаһыңмы инде?

Емеш, күңелле йылмайып, күтәрелеп ҡараны. Уның карауаты янында ҡайсыһын ҡулына тотҡан килеш Хөрмәт һаман китмәй тора, ә үҙенең төҫөндә кәйефһеҙлек, тауышында ғәйеплелек сағыла. «Яҙам, ти Емеш, үҙһүҙләләнеп». Тағы йылмая. Ә үҙенең күҙҙәре түңәрәкләнеп, хәҙер-хәҙер йәш түгеп ебәрергә тора... Нисек шулай булмаһын, ошо көнгә хәтле наҙлап, ҡәҙерләп үҫтергән сәсе бит!..

Шулай итеп, уның тормошондағы был ваҡиға киткәндән күп еңел үтте... Уф-ф! тип еңел һулап ҡуйҙы Емеш, аҙымын тиҙләтеп, тағы бер нисә ҡат ишек алдын әйләнде, ахыр уны уйҙары тағы комсомолка булыу мәсьәләһенә алып ҡайтты.

Туҡта әле, ни өсөн һуң Емеште һаман ячейка ултырышына саҡырмайҙар? Хөрмәт менән икәүләп сәс ҡырҡтырған көндө үк ғариза яҙып, рекомендациялар алып, ячейка секретаре Зиннурға тапшырғайнылар ҙабаһа. Хә-

...р Емештең түҙеме лә бөтә башланы. Тиҙерәк, йәһәтерәк ацһыҙлыҡ арҡаһында үткәндә юғалтылғандарҙы ...тарғыһы, комсомолка ғына түгел, хатта большевичка, революционерка булғыһы килеүен, халыҡ бәхете өсөн ...н аямай көрәшкә тотонорға ашҡыныуын белмәйҙәрме икән ни улар?! Ниңә һуҙалар?! Хөрмәттән һорашайым ..., белмәйме икән?

Емеш, түҙемһеҙләнеп, ятаҡ яғына йүгерҙе.

* * *

Яҡташы ҡайҙа караһа, тып итеп ҡаршыһына килеп баҫа торған Хөрмәт был юлы ла үҙенең ҡылығына тоғро булып ҡалды. Күрәһең, ҡыҙҙы тәҙрәнән күреп, ятаҡ ишегенән атылып килеп тә сыҡты. Улар Ҡаруанһарайҙың урам яҡ баҡсаһына инеп, эскәмйәгә ултырҙылар. Көн кискә һарҡкан булһа ла, март ҡояшы ҡыҙыу йылыта, ҡарабаш турғайҙар бөрөләре бүртенеп, тулышып еткән ...рень ботаҡтарында һикеренә, ҡайҙалыр яҡында ғына ...йырсыҡ һыҙғырыуы ла ишетелеп китә, аяҡ аҫтында, ...н йөрәктәргә бөткөһөҙ дәрт, моң һалып, ҡар һыуҙары ...лтырап аға. Бөтә әйләнә-тирәлә яҙ, йәшлек, шатлыҡ ...тана итә.

«Эй-й, ошондай көндө ауылда булһаң ине... Ҡар ...уына барһаң ине... Яланаяҡ, яланбаш арығансы йүгерең, уйнаһаң, көлһәң ине...» — тип һағыныу һағышы менән һыҙланып китә Емештең йөрәге. «Ауылға ҡайтып та ...лыр ул, әммә ялан аяҡлы, ғәмһеҙ бала саҡҡа ҡайтып ...ламы ни? Үтте бит инде ул, үтте... Яҙғы ҡар һыуы кеүек аҡты ла китте...» — Ул, аяҡ аҫтынан семберҙәп аҡкан ҡар һыуына текләп: «Хөрмәтте күрергә, һорашырға», — тигән уйын онотоп ултырҙы. Тегеһе лә өндәшмәне. ... да бөгөн үҙенә һис тә оҡшамаған — уйсан, бошонҡо. ... бына Емештең ҡырҡылған сәсенә ҡарағас, уның ... тағы ла бошоп китте: «Инде уға нисек әйтергә? Ҡа...дан бирле һөйөүен әйтә алмай йөрөй ине, инде кө...үен ҡалай итеп әйтһен?!»

Ахыр Емеш яҙҙың сихри ҡосағынан ысҡынып, яҡта...нан һорарға теләгән һүҙе иҫенә төшөп, боролоп ҡа...

— Хөрмәт!

— Ә?

— Минең ғаризамды ҡасан ҡарарҙар икән?

— Белмәйем әле...
— Нисек белмәйһең? Һин бит ячейкала ағза!
— Булһам да...

Емеш уның тауышында ниндәйҙер һүрәнкелек иште. Күҙен йәшерергә тырышып, аяҡ осона ҡарап ултырған һымаҡ та тойҙо.

— Ниңә һин, ҡыҙҙар кеүек, ҡыланып ултыраһың бөтөн! — тине Емеш, ҡырыҫ итеп. Ҡапыл һикереп торҙо. — Ултыр ҙа ҡал, мырҙам!..

— Туҡта әле, Емеш, ашыҡма әле! — тип, Хөрмәт уның артынан эйәрҙе. — Әҙ генә көт...

Әммә ҡыҙ, әйләнеп тә ҡарамай, ҡыр кәзәһе кеүек еңел югереп, ятаҡҡа инеп тә китте. Егет, уның аяҡ тауышы тынғансы, ишек төбөндә баҫып торҙо ла киренән баяғы эскәмйәгә барып ултырҙы.

«Әйткәндәй, ҡалай уңайһыҙ килеп сыҡты бит әле был. Башта ике ҡыш буйына Емеште комсомолға инергә димләнек. Ахыр килеп, үҙе теләп ғариза бирҙе. Хатта ебәк кеүек толомдарын да йәлләмәй ҡырҡтырып ташланы. Инде уның өҫтөнән ошаҡ бар. Емер Яшинскийҙең ошағы Емештең әсәһенең ҡанын алып, йәшләй үлемгә дусар иткән Әхмәҙулла мулланың улы Сәрүәретдиндең әйтеүенә ҡарағанда, Емештең атаһы аҡтар яғында Советҡа ҡаршы һуғышҡан, Ҡыҙыл Армия тарафынан үлтерелгән, имеш. Ошо хаҡта Сәрүәретдин мәхдүм, техникумдан сығарылғас, ҡайтыр алда Емер Яшинскийгә һөйләп киткән, имеш...»

«Һеҙ мине сығарҙығыҙ, ә бына аҡ бандит ҡыҙы Емеш Ирьегетова һеҙҙә уҡып йөрөй», — тип әйткән.

Күренеп тора: Яшинский Емештән үс алыр өсөн яҙған быны. «Һыуҙы буръяҡла, ниндәй ҙә булһа берәй балыҡ эләгер» тигән уйҙан сығып эшләгән инде ул быны. Ҡалай мәкерле бит әле! «Мин был һүҙ дөрөҫтөр тип ышанып яҙмайым. Шулай ҙа, ячейка ағзаһы булараҡ, сигналдың тикшереүһеҙ ҡалыуына түҙеп торорға ла йыйынмайым», — тип ҡуйған бит. Яла, дөрөҫ булмаһа ла, ҡайһы бер күңелдәрҙә шик уятырға ярай бит ул. Зиннур ағай был хатты тикшереп, дөрөҫөн яҙыуҙы һорап волосҡа хат ебәрҙе. Ҡасан уға яуап килер? Емеш был яланы белмәй торһа, яҡшы булыр ине лә бит. Түҙеме етмәҫ шул. Моғайын, хәҙер Зиннур ағайға югергәндер әле. Бер нәмәне алдына алһа, эшләмәй ҡуямы ни ул?..

Ни эшләргә? Нисек уны ауыр кисерештән һаҡларға?!.

Хөрмәт, уйының осона-башына сыға алмаһа ла, тағы Емеште эҙләп китте.

Ә Емеш, Хөрмәт уйлағанса, Зиннурға югермәне. Ғариффаны ҡарамай торорлоҡ ниндәйҙер сәбәп булыу мөмкинлеген башына ла килтермәне. Тик, һаман оҙаҡлатыуҙарына ғына эсе бошоп, ятаҡҡа ҡайтып инде. Унда, һәр саҡ тоҡ-томалға көлөп ебәрергә әҙер торған күк күҙҙәрен йомороландырып, ҡатай ҡыҙы Шәмсиә уны ҡаршы алды.

— Һин, ҡыҙыҡай, ништәп әллә ҡайҙа юғалып йөрөйһөң?

— Ниңә юғалайым?

— Мин һине уҡыу бүлмәһенән дә, китапхананан да эҙләнем дәһә. — Шәмсиә Емештең койкаһына килеп йәнәш ултырҙы, ғәҙәтенсә, биленән ҡыҫып ҡосаҡлап алды. — Тик һин ҡырыҫтанма. Көләгәс бул. Атыу һинең менән һөйҙәшкәндә минең телем тоттоға...

— Ә мин ҡосаҡлашып һөйләшергә яратмайым, — тине Емеш, шаян йылмайып. — Бик һөйләшкең килһә, ҡулыңды минең билдән ал да ҡаршыға, Нәфисә койкаһына, күсеп ултыр.

Шәмсиә көлә-көлә ҡаршыға күсте.

— Эй, әйкәйем, һинең менән һөйҙәшеүе ҡайһы саҡта ҡарап ҡыйын. Бына бөгөн, хәҙер... ҡайһы яғыңдан ғына тороп һөйҙәй баштарға ла белмәйем...

— Һөйлә-һөйлә, ике ҡолағыма һөйләһәң дә, ишетермен, — тине Емеш, көләмһерәп. — Тик үтә сөсө теллеләнмә генә...

Шәмсиә тағы әхирәтенең койкаһына күсте. Йәшерен серле тауыш менән:

— Беләһеңме, мин һиңә нимә әйтәм?! — тип ҡолағына бышылданы.

— Бышылдап, ҡолаҡтан-ҡолаҡҡа һөйләгәнде лә яратмайым, — тине Емеш, инде түҙемен юғалта башлап. — Ни һүҙең бар? Ап-асыҡтан, туп-тура әйт тә ҡуй!

Шәмсиә әхирәтенең шундай иғтибарһыҙлығына таңлап аптырап, үпкәле ҡараш ташлап алды ла ниндәйҙер тотолмаған үсәү тауышы менән:

— Яшинский һинең өҫтән ячейкаға ғариза биргән, ул! — тип әйтеп һалды.

— Ғариза? Яшинский? Нимә тип? — Емеш тамам аптырап китте.

— Емеш аҡ бандит ҡыҙы икән, миңә яҡташы Сәрүәретдин шулай әйтеп китте, тип...

Емеш, бер ағарып, бер ҡыҙарып, оҙаҡ телһеҙ ҡалып ултырҙы. Ахыр, көскә тауышын сығарып:

— Был бит ялған! — тине.

— Ҡайҙан беләһең?

— Үҙ атайымды белмәҫкә минең башыма тай типкәнме ни?

— Һин бит атайың үлгәндә бәләкәс булғанһың... Унан тағы...

Емеш уны ҡырҡа бүлдерҙе:

— Буш һүҙ! Мин бөтәһен дә беләм. Мин бер ҡасан да бәләкәс булманым.

Шәмсиә, әллә дуҫының ғорурлығы ҡаҡшап, бахыр булып ҡалыуын күрергә ашҡынып, әллә ысын ҡайғырып, күҙен мөлдөрәтеп, уға йәлләп ҡараны:

— Сәсеңде генә әрәм иттең. Инде үҙеңде комсомолға ла алмаҫтар... Уҡыуҙан да сығарырҙар.

Емештең тәүге ҡаушауы үтте, атылып сыға яҙып ярһып типкән йөрәге баҫыла төштө, һәм ул сер бирмәҫ ғорур тауыш менән:

— Мин барыбер комсомолка булдым инде! — тип яуап бирҙе. — Хәтерләйһеңме, былтыр һин миңә нимә тигәйнең?

— Иҫтәмәйем.

— Мин бит әле аллаға ышанам. Шуға комсомолга инмәйем, тигәйнем мин һиңә. Һин шул саҡта, әй, иҫең киткән икән! Эстән аллаға ышанаһың да, тыштан комсомолка булаһың да йөрөйһөң ул, тигәйнең. Хатта, бөтәһе лә шулай итә, тип тә раҫлағайның...

— Һис тә иҫтәмәйем...

— Ә мин һиңә, мин тик эстән дә, тыштан да бер төҫлө генә була алам, тигәйнем.

— Ул һүҙҙең бында ни ҡыҫылышы бар? Аңдамайым, дуҫҡай...

— Бар шул, дуҫ. Мин хәҙер йәнем-йөрәгем менән комсомолка. Улай ғына ла түгел, большевичка, революционерка булдым, белдеңме?

— Юҡ, бер ни ҙә аңдамайым. Шунан ни була? Нимә әйтмәксеһең?

— Коммунизм идеяһы хәҙер минең тотош йөрәгемде биләп алған. Ул бит — беҙҙең кеүек иҙелгәндәрҙең, кәмһетелгәндәрҙең идеяһы. Уны хәҙер минең күкрәктән йө-

рәктең үҙе менән бергә йолҡоп ҡына алырға мөмкин буласаҡ. Төшөндөңмө, әхирәт?!

— Шунан?

— Шул. Алмаһалар, хәл юҡ. Мин, билетһеҙ ҙә комсомолка булдым, тимәксемен. Улай ғына ла түгел, әйттем бит — большевичка! Аңланыңмы инде?!

— Бер ни ҙә аңдамайым, — тип нисәнселер тапҡыр бер һүҙҙе таҡылданы Шәмсиә. Унан, хатта йәберһенеп:— Һинең менән һөйҙәшеүе ҡайһы саҡта харап ҡыйын да ул, — тип ҡабатланы.

Емеш үҙ уйҙарын барлаған, һығымта яһаған тауыш менән ярһып дауам итте:

— Бер саҡ мин аллаға ышана, уға табына инем... Ауыр, бик ауыр саҡтарҙа шул ышаныс миңә көс, түҙем бирә, һис юғы теге донъяла рәхәтлек күреү өмөтө йәшәтә ине... Эйе, шундай алданыу булмаһа, минең ул саҡтағы тормошта кеше булып ҡалыуы ҡыйын булыр ине...

Ҡыҙыҡ, кеше ниндәй ҙә булһа бер нәмәгә ышанмай, табынмай йәшәй алмайҙыр, күрәһең. Беләһең бит, ҡасандыр ул ағасҡа, ташҡа, айға, ҡояшҡа, утҡа, һыуға... табынған. Үҙенсә нимәне көслө, ҡеүәтле тип һанаған — шуны алла иткән... Унан фирғәүендәр килеп сыҡҡан — ер аллалары!.. Аҙаҡ, кешеләрҙең аңы көсәйә, тәбиғәт серҙәренә төшөнә башлағас, аллалар ҙа алыҫлашҡан, бейеккә, күккә, күтәрелгән...

Емеш ғәйәт ғәжәпһенеп, ни әйтергә белмәй, үҙенә теклән ҡалған әхирәтенә яғымлы һәм тыныс йылмайып ҡараны.

— Бына шулай, минең хәҙер иң ҡөҙрәтле, иң ғәйрәтле аллам бар: ул — коммунизм идеяһы. Шулай булғас, миңә билет нимәгә? Мин билетһеҙ ҙә комсомолка, коммунистка булып үҙемдең ошо бөйөк алламдың тантанаһын тиҙләтеү өсөн йән аямай эшләп, көрәшеп йәшәйәсәкмен.

Коммунизм йәмғиәтен төҙөр өсөн, билетлеләр генә етмәҫтер... Моғайын, тотош халыҡтың тормошо менән генә түгел, рухы менән дә коммунист булып етешеүе кәрәктер. Бына мин шундайҙарҙың береһе булырмын...

Нисек кенә булмаһын, мин бик бәхетле хәҙер. Яшинскийҙең ялаһы ғына түгел, унан былайыраҡтарҙың көсәнеүе лә минең рухымды бер ҡасан да ҡаҡшата алмаясаҡ. Мин хәҙер, шундай бөйөк иманға эйә булып алғас, үҙемдә ниндәйҙер иҫ киткес көс, ҡеүәт, хатта ҡөҙрәт,

яңырыу тоям. Мин тыуғандан бирле хыял иткән бөйөк хәҡиҡәткә ирештем, әхирәт. Ул — ысын мәғәнәһендә бәхетле кеше — ысын кеше булыу!.. Аңлайһыңмы, әхирәт!..

Был көтөлмәгән ҡыйыулыҡҡа Шәмсиә, ахыры, тамам аптыраны, бүтән бер ни ҙә өндәшә алманы, ерән керпекле күкшел күҙҙәре менән был минутта төптө үҙенә оҡшамаған әхирәтенә тишә ҡарап торҙо. Ә Емеш, күрәһең, ниндәйҙер ҡыйыу ҡарарға килде, үтә ҡабаланып ятаҡтан сыҡты, тупһанан дөбөр-шатыр йүгереп төштө, атылып урамға ташланды... Шәмсиә, аңына килеп, әхирәтенә шундай ауыр хәбәрҙе ғәфү ителмәҫлек йәнһеҙлек, ғәмһеҙлек менән еткереүенә үкенеп эҙләп сыҡҡанда, ул бер ерҙә лә юҡ ине.

«Ҡайҙа юғалды шашҡан ҡыҙ?!»

Берәй ерҙән килеп сығырмы тип, ҡапҡа төбөндә оҙаҡ көтөп торҙо. Унан уҡыу залына, китапханаға инеп сыҡты, клубты, курс бүлмәләрен ҡараны. Ахыр Хөрмәтте эҙләп китте: «Ул күрмәнеме икән?»

Хөрмәт, яңағына таянып, койкаһы янында шиғыр яҙып ултыра ине. Башта ул Шәмсиәнең ни өсөн хафаланып Емеште эҙләүенә төшөнмәй торҙо. Унан ҡапыл, ниҙер һиҙенеп:

— Әллә һин уға берәй нәмә әйткәйнеңме? — тип һораны.

— Берәй нәмә тип ни... — тип ыҡ-мыҡ итеп торҙо Шәмсиә. Уға үҙенең рәхимһеҙ ҡылығын Хөрмәткә белдереүе еңел түгел ине. — Мин уға... Яшинскийҙең... Атайың аҡ бандит булған икән... тип кенә әйткәйнем...

— Их-х... һине... Етмәһә, дуҫ, әхирәт... Әйҙә киттек!

— Ҡайҙа?

— Эҙләргә. Моғайын, кеше күрмәһен тип, берәй мөйөштә ҡасып, илап ултыралыр әле.

Инде улар икәүләп Емеш була торған бөтә урынды тағы бер ҡат ҡарап сыҡтылар, баҡсаның да бөтә мөйөшөнә күҙ һалдылар, ахыр Хөсәйен Ямашев исемендәге китапханаға йүгерҙеләр. Емеш унда ла юҡ ине.

Берәй ерҙән үҙе килеп сыҡмаҫмы тип, ишек алдында өшөгәнсе көтөп йөрөнөләр. Көн кискә һарҡып, төньяҡтан иҫкән һалҡынса елдән ҡырыҫланып китте. Шәмсиәнең күҙендә әллә өшөүҙән, әллә үкенеүҙән йәш мөлдөрәне. Хөрмәттең күңелен хәүефле шиктәр торған һайын нығыраҡ өҙгөләй башланы. «Үтә ғәрсел ҡыҙ бит. Берәй тилелек эшләп ҡуймаһын...»

— Хөрмәт, — тип, ҡурҡынып бышылданы Шәмсиәлә. — Бәлки, Ғимранов ағайға әйтергә кәрәктер, ә? Емеш бит юҡ та юҡ...

— Үҙем дә шул хаҡта уйлап торам... — тине Хөрмәт тоноҡ тауыш менән. Унан: — Һин бар ятаҡҡа ҡайт, өшөгәнһең! — тип өҫтәне лә ашығып канцелярияға йүнәлде.

«Ҡайҙа булдың һин, Емеш?!»

## X

Әсәһенең ҡырҡын иҫкә алыу көнөнә, ғаиләһен тейәп, Хаммат та ҡайтып төштө.

— Ҡайта алмаҫһың тип, бошоноборак тора инем әле. Ҡалай һәйбәт иттең, ағай. Рәхмәт инде, — тип ҡыуанып ҡаршыланы Хисбулла. Туғандар һалмаҡ, баҫалҡы ғына һөйләшеп өйгә үттеләр. Аласыҡ яғынан тәмле аш еҫе таралды, бер биҙрә һыу һыйышлы еҙ самауырҙың ихлас шыжылдауы ишетелде. Бибеш, берсә аласыҡҡа, берсә ҡунаҡ өйөнә йүгереп, табын әҙерләп йөрөнө. Өммөгөлсөм, юлдан арып килгәнгә, ахыры, Һөйөндөк, Йәнеш янында үҙенең Алсәскәһе менән Гөлсәскәһенең нисек күбәләк кеүек осоп-төшөп уйнауын ҡарап, яңы ғына сәскә атып килгән муйыл күләгәһендә ултырҙы...

Тәүге көн тотошлай әсәне, оло йөрәкле, хөрмәтле кешене, иҫкә алыуға бағышланды. Иртәгеһенә Хаммат ауыл активе менән осрашты. Коллектив хужалыҡтың эш барышы менән танышты. Мәктәпте, кооператив магазине өсөн ҡулайлаштырылған келәтте ҡарап йөрөнө.

— Молодец комсомолецтәр. Яҡшы эшләгәндәр. Инде магазинде асыуҙы тиҙләтергә кәрәк, — тине, Әхәткә ҡарап. — Ҡасанға хәтле халыҡты нэпмандар лавкаһына бағындырып тоторға мөмкин?

— Йорт әҙер ҙә бит... — тип Әхәт ҡыйыуһыҙ ғына башланы ла, туҡталып ҡалды. «Ошаҡлашыу һымаҡ булып сыҡмаҫмы икән?..»

— Әҙер булғас? — тип иғтибар менән уға ҡараны Хаммат. — Тағы ни көтәһегеҙ?

— Хәҙер Әбделғасим ағай... волость потребкооперацияһының мөдирен әйтәм... һатыусығыҙ юҡ ти, — тип, ҡыйыуһыҙланып булһа ла, әйтәһе һүҙен башланы Әхәт.— Әлек, магазин асыр өсөн урынығыҙ юҡ, ти ине...

— Ә-ә... Әбделмөслимовмы? — тип көлөмһөрәп ҡуйҙы Хаммат. — Ул әйтер. Уға кооперация магазиндәре оҡшап етмәгәндәй күренә...

— Һатыусыбыҙ ҙа бар бит әле, — тип Иштуған да һүҙгә ҡушылды. — Тимербай ағайҙың кесе ҡыҙы Сәмиғәне, Мраковка кооперативенә йөрөтөп, һатыу эшенә өйрәтеп алдыҡ. Хәҙер ул Илсеғолда түгел, Мраковканың үҙендә бына тигән итеп һатыу итә белә.

— Шулай булғас?

— Әбделмөслимов иптәш, беҙ кооперация магазинен бала-саға ҡулына тапшыра алмайбыҙ, ти ҙә ҡуя. Бар һин уның менән һөйләш! Нисә барам, шунынса аптырап ҡайтам. Һис тә ярҙам итергә уйы юҡ... — тип һүҙен ослап ҡуйҙы Әхәт.

— Әбделмөслимов булһын да, кооперацияға ярҙам итһен, — тип тағы көлөмһөрәп алды Хаммат. Унан етди итеп: — Әхәт, һин иртәгә үк волоскә сыҡ, туп-тура үҙемә ин. Шунда бөтәһен дә хәл итербеҙ, — тине. — Күптән минә белдерергә кәрәк ине.

Әхәт һалдаттарса тып баҫып, Хамматтың бойороғон ҡабатланы:

— Булды, Хаммат ағай. Иртән иртүк һинең кабинеттә булырмын. Былай булғас, магазин асыла, ағай?

— Шулай, тип уйлайым... Тик бына шундай бәләкәс кенә эштәрҙе лә ҡаршылыҡһыҙ хәл итеп булмауы эсте бошора, — тине Хаммат, етди уйланып. — Янып, ҡыуанып эшләүсе үҙебеҙҙең кадрҙар, ысын коммунистәр етешмәй.

Хамматтар китер алдынан Бибештәргә күрше-тирә, туған-ырыуҙар йыйылды. Иштуған менән Айһылыу ҙа килде. Сәй янында һүҙ колхоз эштәре хаҡында барҙы.

— Беҙ, Хаммат ағай, үҙең күрҙең, көслөрәк була барабыҙ. Ширкәтте колхозға әйләндереп ебәрҙек бит,— тип был һүҙҙе Иштуған башлап ебәрҙе. — Яңы ағзалар алыу бара. Ауырһынып булһа ла, эштәр алға атлай...

— Тапҡанһығыҙ эш! — тип, ҡустыһына ҡашын төйөп, асыулы ҡараны Бибеш. — Башҡа ерҙә булмағанды һин соҡоп сығарырһың.

— Ниңә булмаһын?! — тип, йәберһенеп ҡараны апаһына Иштуған. — Бына күрерһең, тиҙҙән бөтә ауылда ла колхоз төҙөләсәк. Былдай ваҡ, хәйерсе тормоштан ҡотолор өсөн берҙән-бер сара шул икәнен бөтәһе лә төшөнөр. Шулай бит, Хаммат ағай?

— Төшөндө, ти! Ата-баба тапаған юл һиңә генә оҡшамай бит ул! Әйтерһең, һиңә ни ҙә булһа етмәй, әйтерһең, үҙең йәшәгән дәүерҙә донъяның аҫтын өҫкә әйләндереп, болартып китергә ҡәһәт иткәнһең...

— Эйе, дөп-дөрөҫ. Иҫке донъяның аҫтын өҫкә әйләндереп, өр-яңыһын төҙөп... — тип ярһып, рухланып, Иштуған апаһы менән һүҙ көрәштерергә керешеп китте. Хаммат өндәшмәҫ килененең шундай үҙһүҙле, ҡырҡыу телле булып китеүенә бер аҙ аптырап та, ҡыҙыҡһынып та, йылмая биреп тыңлап ултыра бирҙе лә:

— Иштуған, — тип йомшаҡ ҡына итеп өндәште. — Бик һәйбәт, бик кәрәкле һәм ваҡытлы эш башлағанһығыҙ, мырҙа. Йәгеҙ, шуны бөтә волоскә өлгө булырлыҡ итеп дауам итегеҙ. Ширкәт түгел, ә колхоз — коллектив хужалыҡ, йәғни берҙәм хужалыҡ. Һәйбәт.

Крәҫтиән түгел, ә колхозсы — тоже һәйбәт һүҙ. Яңы тормош менән ауылға өр-яңы, ҡолаҡҡа ятымлы һүҙ инә. Уңыш теләйем, Иштуған, яңы эшегеҙ, яңы һүҙ шикелле үк, ҡолаҡҡа ғына түгел, йөрәккә лә шулай яҡын, ятымлы булһын. Халыҡ уны үҙ һүҙе, үҙ эше итеп яратып ҡабул итһен. Шунда ғына беҙҙең эштәр яҡшы барасаҡ. Коммунизм идеялы — дөйөм халыҡ идеялы булып әүереләсәк.

— Тырышырбыҙ, Хаммат ағай.

Ғәҙәттә, бындай һүҙгә ҡатнашмаусан Хисбулла, күрәһең, был юлы тынып ҡала алманы, ҡатынына йыуаш ҡына ҡарап алды ла, шат йылмайып:

— Ағай, мин дә яҙылдым, — тип ҡуйҙы.

— Нимәгә, ҡайҙа яҙылдың? — тип аңламайыраҡ торҙо Хаммат. Күрәһең, ул Хисбулланан бындай үҙаллылыҡты көтмәй ине.

— Колхозға! Еҙнәм колхозсы бит хәҙер! — тип ҡыуанып ҡысҡырып уҡ ебәрҙе Иштуған. — Беҙ быны һиңә әйтмәгәйнекме ни әле, Хаммат ағай? Нисек һаман әйтмәгәнбеҙ һуң. Эйе, еҙнәм — колхозник! Ҡотлағыҙ уны!..— Иштуған берсә апаһына, берсә Хамматҡа йылмайып ҡараны. — Ҡотлағыҙ!..

— Хуплайым, ҡотлайым, Хисбулла, — тине Хаммат ҡәнәғәт тауыш менән. — Колхозсы булыуың өсөн дә, үҙаллы йәшәү юлына баҫыуың өсөн дә шатмын. Шулай дауам ит.

Бибеш, һөрмәле күҙҙәрен киң асып, иренә текләне: «Был һүҙ ысынмы, бушмы? Нисек ул уның менән һөйләшмәй-кәңәшмәй шундай ҙур эште эшләй алған? Нимә

мәжбүр иткән уны былдай ахмаҡлыҡты эшләргә?» — тип өнһөҙ һөрән һалып тора ине уның был ҡарашы.

— Бынауы Иштуған ҡурҡытып яҙҙырғандыр әле шуны... «Юҡ, Хисбулланың йөҙөндә быға булмаған ҡыйыулыҡ, үҙ-үҙенән ризалыҡ сағыла. Инде нимә эшләргә?!»

Ул төҫө ҡасып шулай оҙаҡ өндәшә алмай ултырҙы ла, ахыр:

— Ә мин барыбер колхозсы булмайым! — тип ҡырт киҫте. — Ул теләһә нимә эшләһен, ә мин...

— Бушты һөйләмә, килен, һиңә уйламай һөйләү килешмәй, — тине Хаммат тыныс ҡына. — Ирендең аҡыллы эшен кире ҡағырға һин алйот түгел дә.

— Булмайым тигәс, булмайым, үәт! Бейемем дә быға риза булмаҫ ине, — тип илай яҙып ҡарыулашты Бибеш.— Уның хаҡына мин үҙ һүҙемде итәсәкмен!

— Әсәйем хаҡынамы? — тип аптырап һораны Хисбулла. — Ул миңә күптән үк фатиха биргәйне. — Мин ҡарт кеше, ә һин, улым, заманыңа эйәреп йәшә,— тигәйне.

— Дөрөҫ, — тип раҫлап ҡуйҙы Хаммат, ҡыуанып. — Беҙҙең әсәй бер ҡасан да уландарының үҫешенә аяҡ салманы. Килен, һин уны аңлап етмәгәнһең...

— Улай булғас, улай булғас... — Бибеш артабан ни әйтергә белмәй тотлоғоп торҙо. — Улай булғас, мин барыбер колхозсы булмайым. Үҙалдыма тормош көтәм. Хисбулла теләһә нимә эшләһен!

— Бибеш! — тип Иштуған хатта ҡурҡып ҡысҡырып ебәрҙе. — Ни һөйләйһең һин, ахмаҡ!

Хисбулла ҡатынына иркә йылмайып ҡараны:

— Һин бит былай ғына, юрый ғына әйтәһең, Бибеш, ул һүҙҙе, эйеме? Беләм бит — сепаратор артеленә лә инмәйем тип ҡарышҡайның. Унан үҙең теләп барып яҙылдың, эйе бит?!

Хаммат ҡустыһы менән килененә яратып алмаш-тилмәш ҡарап алғас, һаман шул тыныс тауыш менән:

— Килен, — тип өндәште. — Мин әйттe тиерһең, иҫеңдә тот: һинән дә уңған колхозсы булмаясаҡ. Бына күрерһең, — тине. Унан, Иштуғанға боролоп: — Хәҙер ошо бөтә ил өсөн кәрәкле эште беҙ бөтә волость күләмендә эшләй башларға торабыҙ бит инде, — тип ҡуйҙы. — Әлбиттә, ул еңел генә, шыма ғына барыр тип ышанып булмай... Көрәш ауыр һәм ҡатмарлы булырға самалай...

— Бигерәк тә беҙҙең волостә, — тип өҫтәне Иштуған. — Ҡара көстәр әле етерлек бит беҙҙә...

— Эйе, шулай... — тип етди уйланып, бер аҙ тынып ултырҙы Хаммат. Унан ҡабаланып һикереп торҙо.

— Беҙгә китергә кәрәк. Әсәһе, һин әҙерме?

Түрбаш яҡта ҡыҙҙарын кейендереп маташҡан Өммөгөлсөм:

— Әҙер, атаһы, әҙер, — тип ашығып үҙе лә кейенә башланы.

— Йә, хуш иттек, — тине Хаммат, йәш саҡтағыса еңел тороп ишеккә юнәлде. — Һау булығыҙ. Матур йәшәгеҙ.

«Ҡайһылай нығынып, элеккесә баһадир кәүҙәле булып киткән әле Хаммат ағай, — тип ҡыуанып уйлап алды Иштуған. — Күрәһең, тән яралары ла, йән яралары ла уңала баралыр... Бәлки, көсөнә хас оло эш кешегә шундай тән һәм йән камиллеге, күңел көрлөгө... Матурлыҡ өҫтәйҙер...»

Ҡунаҡтарҙы оҙатҡас, Иштуған апаһы менән колхозға инеү хаҡында баяғы һүҙҙе оҙайтып, ныҡ ҡына һөйләшеп алмаҡсы булғайны ла, Айһылыу:

— Салауат көтәлер. Ҡайта һалайыҡ, — тип ашыҡтырҙы.

Урамға сыҡҡас, Иштуған ҡатынын ҡултыҡлап алды:

— Ярай, ҡайғы кешене яҡынлаштыра, ярштыра, тиҙәр бит. Үҙҙәре аңлашырҙар әле, ҡабат һүҙ ҡуҙғатмау яҡшы булды.

Айһылыу иренә шелтәле ҡарап ҡуйҙы.

— Ә һиңә ҡалһа — һүкһын да ҡупһын! Кешегә әҙерәк уйларға ла ваҡыт ҡалдырырға кәрәк тәһә! Мал түгел дә ул. Уны теләгән бер сәғәттә кәртәгә ҡыуып кертеп булмай ҙа.

— Дөрөҫ! Һүҙең аҡыллы. Ҡаршы әйтер әмәлем юҡ, бисәкәй! — тип күңеле күтәрелеп, шаярып алды Иштуған. — Их, бөтә кеше лә һинең кеүек булһа икән...

— Бөтә кешенең бер төҫлө булыуын да теләмә. Йәшәүе ҡыҙыҡһыҙ булыр,— тип Айһылыу ҙа уйынлы-ысынлы ҡарыулашты. — Минеңсә, колхоз бына ошо яғы менән күптәрҙе өркөтә лә. Унда бөтә кеше тормош яғынан да, уй, фекер, хатта яратыу-яратмау яғынан да бер төрлө генә булырға тейеш, имеш, тип аңлай бит улар... Хатта, Иштуған, һин үҙең дә уны шулай ғына аңлайһың, шикелле. Әҙ генә лә үҙаллы уй йөрөтөргә юл ҡуймаҫҡа әҙер

тораһың. Күреп торҙом, бая Бибешкә ҡалай асыуланып киттең...

Иштуған оҙаҡ ҡына өндәшмәй барҙы. Был һүҙҙә уйланырға ниндәйҙер урын бар һымаҡ ине. «Ысынлап та, моғайын, үҙенең уйын, теләгән ап-асыҡ әйтеп биреүе өсөн, үҙен икеләндергән, бошондорған нәмәләрҙе йәшермәүе өсөн кешегә асыуланырға ла кәрәкмәйҙер. Юкһа бер төрлө уйлап, икенсе төрлө һөйләп өйрәнеп китергә лә мөмкин бит ул! Ә был инде төптө ярамаған эш буласаҡ». Унан ҡатынынан бигерәк үҙ уйы менән бәхәсте дауам итте:

— Ярай, һинеңсә булһын. Асыуланмайыҡ, ашыҡтырмайыҡ, ти. Хатта үҙенсә уйлап, үҙенсә йәшәп ҡарарға ла ирек ҡуяйыҡ, ти. Әйтәйек, Бибеш нисек кенә киреләнмәһен, барыбер үҙ кеше. Барыбер аңлар, бер саҡ беҙҙең сафҡа баҫыр... Ә бына, клубты яндырып, мулланы туҡмап, бәләһен беҙгә ябырға маташыусы, коллектив хужалыҡҡа ҡарата отко таратыусы ҡаресле кешеләр менән нимә эшләргә? Тоже үҙҙәренсә эш алып барырға ирек ҡуйып ятырғамы?!

— Һин арттырып ебәрәһең дә...

Иштуған ҡатынының күҙенә төбәп ҡараны:

— Улай булһа, бына һин миңә шуны әйт әле, фронтта саҡта беҙ дошмандың беҙҙең теләкте аңлауын, үҙе теләп беҙҙең яҡҡа сығыуын көтөп ята инекме? Ә, юҡ шул. Бында ла — фронт. Фронттың ике яғында ике синыф! Тик бындағы фронт ҡатмарлыраҡ та, ауырыраҡ та, сөнки хәҙер бүре — һарыҡ тиреһенә төрөнгән... Бар, таны һин уны!.. Бына шулай, һылыу, Хаммат ағай әйтмешләй, ауыр һәм ҡатмарлы... Аңланыңмы инде?!

Ул тағы бер аҙ тынып, уйланып барҙы. Ахыр, күтәренке тауыш менән тамамлап ҡуйҙы:

— Ләкин, дошман ҡалай ғына мәкерләләнмәһен, беҙ барыбер йомғаҡты һүтеп, эсендә нимә йәшеренгәнен белербеҙ. Аҡты ҡаранан айырырбыҙ. Шулай бит, һылыу!

— Бына, ҡайтып та еттек, — тине Айһылыу, еңел һулап һәм, күрәһең, был осһоҙ-ҡырыйһыҙ бәхәстең өҙөлөүенә ҡыуанып, югереп өйгә инеп китте. — Салауатым көтәкөтә көтөк булғандыр, балам!

* * *

Өйҙә Иштуғанды тағы ла уйланырға мәжбүр иткән яңылыҡ көтә ине. Салауат янында Бибисара абыстай

менән Ҡәзә мәзин ултыра! Нисек былай? Иштуған уларҙың тупһаһына аяҡ баҫмаған кеүек, мәзиндең дә бында килгәне юҡ ине. Әле инде аяҡ бөкләп түргә менеп үк ултырған. Салауат олатаһының муйынынан ҡосаҡлап, апаҡ кәзә һаҡалын һыйпаҡлап шаяра. Күрәһең, Иштуган белмәһә лә, Салауат уларҙа йыш була. Ҡарттарға ныҡ өйрәнгән дә, ярата ла...

— Ата-аҡ, атайымдар килгән дәһә! — тип ҡыуанып китте Айһылыу. — Ҡалай һәйбәт иткәнһегеҙ... килеп.

Иштуған, нимә әйтергә белмәй, ишек төбөндә туҡтап ҡалды.

— Нихәл, кейәү. Һин беҙҙе ғәйеп итмә... Эҙләүһеҙ-һорауһыҙ килдек тә индек,— тип Ҡәзә мәзин, уңайһыҙланып, урынынан тора башланы. — Беҙ әҙгә генә... Бәләкәс кенә бер кәңәш һорап ҡына...

Иштуған, йоҡоһонан уянып киткән һымаҡ, ҡабаланып:

— Ултыр, ултыр... ҡайным... ҡуҙғалма... — тип ҡуйҙы. — Ултырығыҙ, ҡунаҡ булығыҙ, — тине. Унан, нисектер, ятыраҡ тауыш менән: — Айһылыу, сәй әҙерлә. Ҡайнымдарҙы ҡунаҡ итәйек, — тип тә өҫтәне. Үҙ тауышы үҙенә шундай ят, яһалма булып сыҡҡан һымаҡ булғанға, ахыры, ҡолағына хәтле ҡыҙыу ҡан йүгергәнен тойоп, тағы ла уңайһыҙланып китте. Шул уҡ ваҡытта үҙенә яратып та, ялбарып та, хатта ғәзиз балаһы кеүек аяп та төбәлгән һымаҡ был оло, хәлһеҙ ике ҡараш аҫтында үҙен нисек тоторға белмәй ҙә ыҙаланды. Ысынлап та, был хәлде ни төҫлө ҡабул итергә һуң уға? «Өйөңә килгән икән — дошманың булһа ла ҡунаҡ!» Ата-бабанан килгән ғәҙәт шулай. Ә хәҙер, яңы заман кешеһе, кешегә, тормошҡа үҙ ҡарашы, үҙ тәртибе булған аңлы кеше, Иштуған был ғәҙәткә ҡалай ҡарарға тейеш?! Етмәһә, дошман түгел, ә ҡатынының атаһы килгән! Мәзин! Их, ниңә уның Айһылыуы берәй батрак ҡыҙы ғына булмаған?! Ҡайһылай кинәнеп хөрмәт итер, нисек ҡатнашып йәшәр ине Иштуған улар менән. Үҙ атаһы кеүек яҡын күрер ине... Әйткәндәй, был уй һуңғы йылдарҙа ҡалай йыш ҡабатлана әле уның башында?! Бер уйлаһаң, Айһылыу әйткән һүҙ ҙә дөрөҫ һымаҡ. Мәзинлектә уның ата-әсәһенең ни ғәйебе бар? Дәүере шулай булған бит!..

Иштуған кәштәнән китап алып уҡыштырған һымаҡ булып торған арала, башында ҡойон булып өйөрөлгән ошо һорауҙарға яуап табырға тырышты, артабанғы мөнә-

сәбәттәрҙең ҡалай булырға тейешлеген асыҡларға теләне. Дөрөҫ, күңелгә күптән бирле тынғы бирмәгән, ҡасан да булһа бер төрлө хәл ителергә тейешлеге көн кеүек асыҡ булған был мәсьәләне Иштуған ошоғаса тышҡы ҡырыҫлыҡ менән йәки күрмәү ҙә белмәүгә һалышыу юлы менән һаман үҙенән ситкә тибәреп килде, ләкин хәҙер, күрәһең, уны бер төрлө хәл итмәйенсә, ҡотолоп булмаясаҡ. Тик ҡалай хәл итергә?! Дөрөҫ, уның өсөн иң еңел юл: «Мин коммунист кеше. Дин әһелдәре менән яҡын мөнәсәбәттә булырға теләмәйем», — тип ҡырт киҫеп кенә ҡуйыу булыр ине. Бығаса бит ул төбәп әйтмәһә лә, шулай йәшәп килде, ләкин был бит уның үҙ-үҙен алдау ғына булды. Үҙе ҡатнашмаһа ла, ҡатыны, улы ҡатнаша. Улай ғына ла түгел, малай бит уларҙың һөт-ҡатығын эсеп үҫә! Юҡ, артабан да былай булыуы мөмкин түгел. Тыйырға кәрәк Айһылыуҙы!

Иштуған, ҡырҡа боролоп, ҡатынына ҡараны: Айһылыуҙың йөҙө ҡояш кеүек яҡтырған. Берсә әсәһенә, берсә атаһына яратып, ҡыуанып ҡарай, көлә-һөйләшә сәй әҙерләп йөрөй. Бәхетле! «Туҡта, өҙөлөп һөйгән ҡатынын шундай бәхеттән мәхрүм итергә хаҡы бармы һуң әле Иштуғандың? Әгәр мәхрүм итһә, ҡатынының үҙенә булған мөхәббәтен һаман да һаҡлап ҡала алырмы һуң ул?! Ара һыуынмаҫмы?!»

— Иштуған, сәй әҙер. Әсәй, бына шунда, түргә, мендәргә ултыр. Атай, арҡаңды һөйәргә яҫтыҡ һалайыммы?

«Айһылыу күптән-күптән шундай иркә, яғымлы һөйләшеүен ташлағайны кеүек... Онотмаған икән дәбаһа».

Сәй янында күберәк Айһылыу менән Бибисара абыстай һөйләне. Уларҙың һүҙҙәре лә Салауатты һөйөүҙән, уның буй-һынын, ҡылығын, кемгә оҡшауын тикшереүҙән тора ине. Был һүҙҙәргә ҡолаҡ һалып ултырған Иштуған, тәү күргән кеүек, ентекләп улына текләне.

«Салауат төптө олатаһына оҡшаған дабаһа! Шуның һымаҡ ҡыҙыл ерән сәсле, сәкәй танаулы, йәшел зәңгәр күҙле... Ҡәүҙәгә лә, моғайын, уның кеүек тәпәш булыр әле... Һаҡалы ла, моғайын... Тауышы ла... оҡшар... Фу, тапҡан кемгә оҡшарға! — тип, ниндәйҙер екһенеү менән уйлап алды. — Эйе, тап олатаһы булған да ҡуйған. Бар һин, Иштуғандың улы Ҡәҙә мәзин тоҡомо түгел тип раҫлап ҡара!..»

Был уйҙан уның кәйефе бөтөнләйгә ҡырылды. Етмәһә, үҙенең ҡунаҡҡа илгәҙәклек күрһәтә алмауы ла, былдай

ҡылыҡтың килешмәүен тойоу ҙа йәненә тейә, уңайһыҙландыра, ә үҙе һаман томһалана ғына бара, башта «ҡайным» тип бер өндәшкәс, артабан һөйләшеп китеүе еңел булыр төҫлө тойолһа ла, ни тип һүҙ башларға белмәй ыҙалана ине.

Мәзин дә, ахыры, шундай уҡ хәлде кисерә ине. Ултырған еренән ҡуҙғалып, ҡалҡынып ала, өҙләкһеҙ тамаҡ ҡыра, йәки, бармаҡтарын тарбайтып, ике тубығына һуға ла:

— Шулай-й-й, — тип һуҙып ҡуя йәки бөтөнләй юғалып, тағы ла бәләкәсләнеп киткән һымаҡ була.

Айһылыу менән Бибисара абыстай, ирҙәрҙең хәленә ҡатнашмай, балаға әүрәп, ситтә ҡалырға теләһәләр ҙә, барып сыҡманы.

— Нисә йыл кейәү-ҡайны булып тораһығыҙ, — тип һалмаҡ һуҙып, ирҙәргә матур көләмһөрәп ҡараны Айһылыу, — үҙегеҙ һөйләшмәйһегеҙ ҙә, талашмайһығыҙ ҙа тигәндәй. Был ниткән ҡылыҡ? Йә, исмаһам, дөмбәҫләшеп алығыҙ. Беҙгә лә мәҙәк булыр...

— Әйтмә лә, — тип күтәрмәләне Бибисара абыстай.— Борон кешеләр һуғышыр ҙа ярашыр ине, ә былар һуғышмайҙар ҙа, ярашмайҙар ҙа... Әйтерһең, бер-береһенең аталарын үлтерешкәндәр ҙә хас дошманға әйләнгәндәр...

Мәзин тағы тамаҡ ҡырып алды. Унан нәҙек, ҡарт тауыш менән:

— Әйткәндәй, мин кейәүгә бер кәңәш һорарға килгәйнем бит әле, — тип Иштуғанға ҡыйыуһыҙ ғына ҡараш ташланы. Уныһы өндәшмәһә лә, тыңларға әҙер һымаҡ тының ултырғас, баҙнатлана төштө. — Колхозға мин инә аламмы, кейәү?

Иштуған быға саҡлы элекке мулла, мәзиндең колхозға инергә хоҡуғы бармы-юҡмы икәнлеге хаҡында уйлап та ҡарағаны юҡ ине. Шуға, ахыры, тамам аптырап:

— Колхозға?! Ни өсөн?! — тип ҡысҡырып ебәреүен тоймай ҡалды. Унан, бер аҙ уңайһыҙланып, төҙәтергә тырышты. — Һеҙ инде ҡарт кешеләр. Унда һеҙ нимә эшләй алырһығыҙ икән?

— Кеше эшләгәнде эшләп йәшәйбеҙ бит әле. Беҙҙең эште быға саҡлы бер кем дә эшләгәне юҡ,— тип һүҙгә ҡатнашты Бибисара абыстай. — Хатта кейәүем менән ҡыҙым да барып ярҙамлашҡаны юҡ.

— Беҙҙең, ҡартайған көндә булһа ла, берҙән-бер ҡыҙыбыҙ һайлаған юлға яҡын торғобоҙ килә бит әле, ке-

йәү, — тип ялыныслы тауышҡа уҡ күсеп китте мәзин. — Беҙгә инде оҙаҡ йәшәйһе ҡалмаған, ситкә тибәрмәгеҙ, кейәү... Колхозға умартасы кәрәкмәҫ тиһеңме ни, кейәү? Мин бит инде мәзинлекте лә ташланым...

Ул еләң кеҫәһенән газета алып, Иштуғанға һондо.

— Ышанмаһаң, мә, уҡып ҡара. Ҡайһы берәүҙәр кеүек күҙ буяу өсөн түгел... Теләп, тиң хоҡуҡлы гражданин булғым килеп...

Иштуған, ҡабаланып, газетаның һуңғы ваҡытта бындай иғландар йыш осрай торған бүлегенә ҡараны: «Эйе, иғлан! Ысын дабаһа!»

— Көтмәгәйнем... Уйламағайным... — тип ҡайныһына ғәжәпләнеп ҡараны. — Ысын уҡмы, теләп үкме, тим дә?! Шулай ҡапыл?

— Бына инде? Тағы шикләнә! — тип көрһөнөп ҡуйҙы Айһылыу. — Һиңә ҡапыл тойолһа ла, беҙ был хаҡта йылдар буйы аҙаплы уй кисерҙек...

— Беҙ, тиһең? — Иштуған һораулы ҡарашын ҡатынына күсерҙе. — Беҙ, тиһең, ә?

— Аһа, әллә ата-әсәмде үҙ артымдан эйәрткем килмәй тип беләһеңме минең?! Ана бит, һин үҙ туғандарың өсөн ҡалай ҡайышаһың!

— Дөрөҫ, — тип ҡуйҙы Иштуған. — Һин шәп агитатор икәнһең дә, Айһылыу... Мәзинде лә яңы юлға бора алғас...

— Мин генә түгел, тормош борҙо. Хәҙерге беҙҙең совет тормошо үҙе шәп агитатор... белгән, аңлаған кешегә... Ә минең атам-әсәм аңһыҙ кешеләр түгел дә инде...

Айһылыу, үҙһүҙлеләнеп, иренә ғорур ҡарап алды. Саҡ ҡына юғары күтәрелеп торған өҫкө иренен матур бүлтәйтеп, ҡымтып ҡуйҙы.

Иштуған, әлбиттә, риза ине был эшкә. Шулай ҙа ул үҙен ике ут уртаһында ҡалған кеүек тойҙо: «Ни эшләргә?!»

— Ғариза биреп ҡарайыммы, кейәү?— тип уның уйын бүлде ҡайныһы.— Алырҙармы икән?

— Бир, — тине ахыр Иштуған, ҡырт киҫеп. — Ниәтең саф булһа, бир. Мин ҡаршы түгел, ә алыу-алмауҙы колхоз йыйылышы хәл итә.

— Үәт, әйттем бит, беҙҙең кейәүҙең күңеле таш түгел тип, күрҙегеҙме? Алланың рәхмәте төшһөн, кейәү, үтенесебеҙҙе кире ҡаҡманың. Былай булғас, ҡарт көнөбөҙҙө

балаларыбыҙ менән тиң йәшәп уҙғарырга насип була икән, — тип Бибисара абыстай иламһырап алды.

— Өҫтән тау төшкән кеүек булды, — тип ҡыуанды Айһылыу.

Ошо ваҡыт Иштуған тәүтапҡыр ҡатынының күңел яраһы ни хәтле ҙур булыуын, ата-әсәһен ситләтеүҙе ни тиклем ауыр кисереүен бөтә тәрәнлеге менән тойҙо.

## XI

Емеш был ваҡытта ҡаланан сығып киткәйне инде. Дөрөҫ, ул быны һис тә алдан уйлап эшләмәне. Башта уның күңелен нисек тә ҡасыу, үҙенә, уның һөйөклө атаһына яла яҡҡан Емер йәшәгән ерҙән алыҫ ҡасыу, теләге солғап алды. Ул ҡайҙа барырын, нимә эшләрен белмәҫтән, бер ни уйламаҫтан, уҡтай осоп, ятаҡтан ишек алдына атылып сыҡты. Унан урамға ташланды. Ҡайҙа барырын, нимә эшләрен уйламаҫтан китте лә китте. «Ни өсөн? Ҡайҙа?!» Эйе, ул хаҡта уйламаны. Йорттар, урамдар бер-бер артлы тороп ҡала барҙы. Ахыр килеп, уның күҙ алдына икһеҙ-сикһеҙ иркенлек килеп баҫты. Дала юлы уны ҡала ситенә алып килеп сыҡҡайны. Ҡыҙ әллә үҙенең шул хәтле алыҫ китеүенә аптырап, әллә һис тә көтмәгәндә үҙен ауылға алып ҡайта торған юлға барып сығыуына ҡыуанып: «Эй-й!» — тип оҙон-оҙаҡ һуҙып, туҡталып торҙо. Күҙҙәрен сағылдыра-сағылдыра ҡояшҡа ҡарап алды, йоморҡка баҫҡан ала ҡаҙ шикелле ғорур ҡуҡырайып ятҡан яҙғы ер өҫтөнә һөйөп текләне...

«Ысын дабаһа... Беҙҙең яҡҡа ҡайта торған юлға килеп сыҡҡанмын даһа... Инде атларға ла атларға... Нисек һуң мин быны бая уҡ уйламағанмын!.. Эйе, уйламағанмын... Ә шулай ҙа аяҡтарым мине бында алып килгән... Тимәк, ҡайтырға?! Эйе, ҡайтырға. Ерәнес Емерҙән... Хатта Шәмсиәнән... бөтәһенән дә ҡасырға...»

Ул, ҡысҡырып илауҙан көскә тыйылып, алға атланы. Ат ялларға барыбер аҡса юҡ. Ала ҡар ваҡытында ниндәй ат булһын әле... Ә йәйәүлегә юл ҡайҙа ла, ҡасан да бер — аҙаплы, ә аҙап менең өсөн яңылыҡ түгел... Уға түҙергә була... Тик кешене ерле юҡҡа хурлаусы, кәмһетеүсе, яла яғыусы әҙәм аҡтыҡтары менән йәнәш йәшәргә генә яҙмаһын... Ундайҙарға хатта ҡәбереңдә яҡын булмаһын...

Эй һөйөклө дала, иркен, яҡты, саф дала, ҡабул ит ҡуйыныңа үҙ ҡыҙыңды!.. Ҡыйырһытма!..»

Шундай ярһыулы ла, әрнеүле лә уйҙар артынан ҡыуып, ғәҙәттәге ҡурҡаҡлығын, өркәклеген онотоп, барҙы ла барҙы Емеш. Аяҡ аҫтында юлдың ниндәйлеген дә, көндөң кисләүен дә тоймаңы, төндө ҡайҙа барып, нисек үткәреүен дә уйламаны. Шул хәтле яратҡан, ҙур өмөт бағлаған уҡыу йортон, яҡшы күңелле дуҫтарын ҡалдырып китеүе өсөн дә үкенмәне. Уның күңелендә хәҙер тик бер генә теләк — үҙен шул хәтле урынһыҙ ҡыйырһытҡан Емер кеүек ямандарға яҡшы кешеләрҙең башын ашарға юл ҡуйған ерҙән нисек тә алыҫыраҡ ҡасырға тигән сая теләк — хакимлек итә ине.

Бына әкренләп эңер төштө, төньяҡтан иҫкән әсе ел көсәйҙе, көндөҙ шәре кисеп һыуланған аяҡтар өшөй, тән ҡалтырай башланы, әммә Емеш һаман бер ни тоймаңы, еңел елпелдәп атлауын белде. Был ваҡытта уның бөтә йәнен-тәнен бығаса бер ҡасан да булмаған ҡоторонҡо ҡыуаныс, сая үҙһүҙлелек солғап алғайны. Төн түгел, хатта алдында тау-таш емерелеп ятһа ла, кире боролмаҫ ине ул хәҙер... Ҡурҡыуға ла, үкенеүгә лә, хатта уйлауға ла бикле ине уның күңеле...

Хөрмәт менән Ғимранов ҡасаҡ ҡыҙҙы тап бына шундай хәлдә, эңер ҡараңғыһы төшкән саҡта килеп тапты. Үҙ эсенә бикләнгән Емеш хатта уларҙың ҡыуып етеүен дә абайламаны, әйткән һүҙҙәренең мәғәнәһен дә ҡапыл ғына аңламаны: «Быларға минән нимә кәрәк икән?» — тигән һымаҡ, ситһенеп ҡарай биреп алды ла атлауын белде.

— Ай-һай, ҡайҙа ашығып китеп бараһың, ҡарындаш? — тип дала яңғыратып көлдө Ғимранов, уны ҡыуып еткәс. — Ҡайтып киткәндә, әйтеп китергә кәрәклеген белмәйһеңме ни һин? Былай, бөтә олоно-кесене аяҡҡа баҫтырып, үҙеңде эҙләтеү яҡшымы ни?

Емеш ҡапыл шаҡ ҡатып туҡтап ҡалды. Былай булырын ул башына ла килтермәне ләбаһа!.. «Уй, ысынлап та, ҡалай оят!»

— Ниңә өндәшмәйһең, ҡарындаш? — тине Ғимранов һаман шул асыуһыҙ, көләгәс тауыш менән. — Үҙеңдең хәҙер яңғыҙ түгеллегеңде, һине тәрбиәләгән, уҡытҡан, ҡараған уҡытыусыларың, бергә уҡыған иптәштәрең барлығын, уларҙың һинең өсөн хафаланырын белмәйһеңме ни?

«Эйе, был хаҡта ла уйлап торманы бит ул! Бына, бисәләш!..»

Емеш, һыуға бүртенгән ботинка баштарына теклəп, һаман һүҙһеҙ тора бирҙе. Ғимранов, унын ҡабарынҡы сәсенән аталарса һыйпап, ауыр ғына көрһөнөп алды:

— Ах ҡарындаш, ҡарындаш, Яшинскийгә үс итеп ҡайтып киттең инде, ә? Яманға, ялғанға ҡаршы шулай көрәшмәк булдың инде, ә? Был бит үтә бер ҡатлылыҡ, сабыйлыҡ, хатта, мин әйтер инем, мәғәнәһеҙ кирелек кенә!

Емештең башы тағы ла түбәнерәк эйелде: «Эйе шул... Нисек былай булып сыҡты һуң әле? Мин үҙемде хатта ысын большевичка итеп тоя башлағайным даһа... И-и... көрәшсе түгел шул әле мин...»

Емеш иларҙай булып үкенеп торҙо. Ғимрановтың шундай ябай һәм хатта бер ниндәй шелтәһеҙ әйтелгән һәр бер һүҙе, уның урынһыҙ ҡылығына әсе хөкөм булып, Емештең күңеленә һеңә барҙы. Эйе, уның аҡланырлыҡ бер сараһы ла юҡ ине. Шуға, ахыры, директорҙың:

— Йә, ҡарындаш, һине бүтәндәр ҙә эҙләйҙәр бит. Башҡа ыҙаланмаһындар, ҡайта һалайыҡ, — тип иплəп кенә әйтелгән һүҙенә бер ҙә ҡаршылыҡ күрһәтмәй, ырандасҡа менеп ултырҙы.

Быға тиклем бер һүҙ ҡатмай, кузлала тын ғына ултырған Хөрмәт сағыу тауыш менән:

— На-а! — тип ҡысҡырып ебәрҙе. — На, хайуан!

— Их-х, һеҙҙе... Етмәһә, яҙыусы булырҙар тигән өмөт уятҡан кешеләр... — тип әсенеп ҡуйҙы Ғимранов. — Иҙелгәнлек, кәмһетелгәнлек ҡылыҡтарынан ҡотолоп, үҙебеҙҙе ошо ерҙең төп хужаһы итеп тойорға, күкрәкте горур киреп, киң баҫып йөрөргә өйрәнергә бик күп кәрәк шул беҙгә... Ай-һай, күп кәрәк... Быуаттар буйы ҡанға һеңгән иҙелгәнлек, меҫкенлек ҡылығы шулай гел артҡа һөйрәргә тырышып әле лә оҙаҡ иҙер әле беҙҙе...

Бер аҙҙан тағы үҙенең шул киң, яҡты көлөүе менән даланы яңғыратып ебәрҙе.

— Йә, ҡарындаш, хәлең нисек? Инде ҡасмаҫһыңмы?

Емешкә был минутта ул атай кеүек яҡын һәм ҡәҙерле тойолдо. Инде лә өндәшмәй ҡалырға, яҡын күргән кешенән уйындағын йәшерергә мөмкин түгел ине. Ул, директорҙың үҙе кеүек үк күңелле йылмайып:

— Ҡасмам, — тип төбәп ҡараны. — Тик Яшинскийҙең ялаһын ул көйө ҡалдырырға ярамай, әлбиттә...

— Ялғандың бото ҡыҫҡа бит уның, ҡарындаш! — тип тағы рәхәтләнеп көлдө Ғимранов. — Һинең атайыңдың намыҫлы, батыр һалдат булыуын, йәш Совет республикаһын яҡлау юлында ҡорбан булыуын мин үҙемдең фронтташтарым Хамматтан, Никита Ивановичтән ишетеп, электән дә белә инем. Хәҙер инде шуны раҫлаған ҡағыҙҙар ҙа килде.

Емештең йөҙө айҙай яҡтырҙы.

— Былай булғас, мине комсомолға ла алырҙармы икән, ағай!

— Һине лә алмағас, кемде алырҙар! — тине Ғимранов, был ауыр холоҡло, ҡырыҫ ҡыҙҙың теле асылыуға шатланып. — Тик һиңә иптәштәреңде борсой торған бындай ҡылыҡтарҙы ташларға кәрәк булыр ул саҡта...

Емеш тағы башын эйеп тынып ҡалды. «Ҡылыҡ — сәс түгел. Уны ҡырҡып ҡына ырғытып булмайҙыр шул...»

Ҡыҙҙың ҡайтанан күңелһеҙләнә башлауын күреп, Ғимранов һуңғы фекерен асыҡларға ашыҡты.

— Ҡылыҡ тип, һинең, әлбиттә, комсомол әхлағына, пролетариат әхлағына хилаф ҡылығың юҡ. Киреһенсә, намыҫлы, ғәҙел, тоғро көрәшсе буласаҡһың, тип ышанабыҙ һиңә. Тик бына бөгөнгө кеүек бунтарлекте генә ҡабатламаҫҡа кәрәк, тим... Дөрөҫ әйтәм бит, ҡарындаш?

Емеш үҙенә яратып та, һынап та төбәлгән директорға, унан кузланан әленән-әле артҡа әйләнеп һөйөп тә, һөйөнөп тә йылмайған Хөрмәткә күҙ йөрөтөп сыҡты.

«Ысынлап та, донъяла ошондай һәйбәт кешеләр барында, ниндәйҙер төшөп ҡалған Емерҙәр өсөн шулай сығырҙан сығырға яраймы инде, ә?»

— Дөрөҫ шул...

— На-а, хайуан! — тип тағы ла шатыраҡ, саяраҡ ҡысҡырып ебәрҙе Хөрмәт. — Елдер, малҡай, елдер!

* * *

Ғәйепле башын түбән эйеп, ҡыҙ ятаҡҡа ҡайтып инде. Ишек төбөндә, өнһөҙ-һүҙһеҙ, бер аҙ торҙо.

— Сәғәт бит ун ике тулды, — тине ятаҡ дежурныйы етди тауыш менән. — Беҙ һине юғалтып, йоҡлай алмай ултырабыҙ. Күрәһеңме, бөтәбеҙ ҙә уяу, бөтәбеҙ ҙә һине эҙләнек... Шулай иптәштәреңде хафаға һалыу яраймы?

«Ярамай, ярамай!» — тип ҡабатланы Емеш күңеленән, ләкин өндәшмәне. Уның арыуҙан бигерәк үҙ ҡылығы

өсөн оялыуҙан йәһәтерәк үҙ койкаһына барып еткеһе, одеял аҫтына инеп йәшенгеһе килә ине хәҙер. Ул өнһөҙ-һүҙһеҙ, иплэп кенә тәҙрә яғына үҙен көткән йылы койкаһына табан атланы.

— Емеш, мин һиңә киске ашыңды алып ҡайтып ҡуйҙым. Бына тумбочкала, — тине Шәмсиә бошонҡо тауыш менән. — Ашап ят. Асыҡҡанһыңдыр...

Емештең күңелендә бер ҡатлыраҡ әхирәтенә ҡарата булған яратыуы ҡайтанан уянды, ләкин ул быны бер ни менән дә күрһәтә алманы. Ни ҙә булһа өндәшәм-һөйләшәм тигәнсе илап ебәреүҙән ҡурҡты. Көйөнөстән түгел, ә ошо минутта үҙенең бөтә йәнен-йөрәген солғап алған бөткөһөҙ ҡыуаныстан иларға... Уның бит шулай ҡыуанысты күтәрә алмай, ҡайһы саҡта илап ебәрә торған ғәҙәте бар...

Атаһы үлтерелгәнде ишетеп, ҡайғынан йәшһеҙ-телһеҙ ҡалып торған саҡта, Иштуған ағаһы менән еңгәһе ҡыҙылгвардеец булып ҡайтып төшкәндән һуң, шулай булманымы ни... Ул күтәргеһеҙ ауыр ҡайғы артынан килгән оло ҡыуанысты күтәрә алмай илап ебәрмәнеме ни...

Емеште был ауыр уйҙан Дәүериә тартып сығарҙы. Янына йәһәтләп килеп, лысма һыу кейемдәрен алмаштырырға ярҙамлашты. Һалҡын яурынынан ҡосаҡлап, яғымлы йылмайып ҡараны.

— Йәһәтерәк ят, йылын, һеңлем!

Был төндө Емеш бик тынысһыҙ йоҡланы, һаташыпыңғырашып уҙғарҙы. Бала саҡта бик йыш күрә торған, тик аҙаҡҡы ике йылда ғына онотолған хәтәр төштәре ҡабатланды.

...Имеш, бына тирә-юнде ҡара төн баҫҡан. Емеште кемдер ҡара урмандар, осло ҡаялар араһында аҙаштырып киткән. Тирә-яҡта өҙләкһеҙ зыйылдап ел һыҙғыра, бүреләр олой, айыуҙар үкерә, йөҙ йәшәр шыршылар шатырҙап һына... Емеш әләгә-тәгәрәй югерә, тыны быуылып йығыла, тағы тороп югерә, уның артынан әллә ниндәй ағыулы йыландар ыҫылдап шыуышып килә, үкереү, олоу, һыҙғырыу тауыштары көсәйә, яҡынлаша... Бына инде ҡыуып етә!..

— Инде йоторҙар! Аһ, бөттөм!..

Ул югереп барған ыңғайға бейек ҡая түбәһенән упҡынға йығыла... Тап шул ваҡытта уның ике ҡулы ҡанатҡа әйләнә. Һәм ул упҡын өҫтөнән талғын осоп үтә лә күккә, һаман бейеккә, күтәрелә башлай... Ҡурҡыныс.

һәләк ҡурҡыныс, әммә шатлыҡлы... Ул һаман юғарыға оса, үҙен йоторға, өҙгөләргә, йолҡҡоларға әҙерләнгән бөтә ҡот осҡос йыртҡыстар, ағыулы йыландар, төпһөҙ упҡындар — бөтәһе түбәндә, бик алыҫта, тороп ҡала, ә Емеш, шулай ҡул-ҡанаттарын талғын ғына ҡағындырып, йондоҙҙар араһында осоп йөрөй. Күк йөҙө ярты айҙар, тулған айҙар, арҡыры-буй һыҙылған йәйғорҙар менән биҙәлгән. Ул ғәжәп серле лә, бер тиклем хәүефле лә... Әммә Емешкә сикһеҙ рәхәт: ул оса!..

Ул һәр саҡ, ҡурҡыныс төш күргәндә, шулай ике ҡулын яҙып, аяҡтары менән ныҡ ҡына итеп ергә тибә лә осоп та китә, әле генә үҙен йоторға йыйынған яман йән эйәһе аҫта, алыҫта, тороп ҡала...

Емештең бөгөн күргән икенсе төшө лә яңы түгел ине. Ул үҙ ғүмерендә бер тапҡыр һыуға батты. Атаһы бар саҡта, яҙғы ташҡында, һыу алам тип, тумәргә баҫып ынтылғанда... Һыу тулы аҡ биҙрә уны ташҡын йылғаның төбөнә хәтле алып төштө... Унан Емеш, биҙрәне ҡалдырып, өҫкә йөҙөп сыҡты, тулҡындар менән көрәшә-тартыша ярға сыҡты. Күнәк һыу төбөндә ҡалғанға ҡурҡып, өйгә ҡайта алмай, туңғансы яр ситендә бөршәйеп ултырҙы. Шунан һуң бик оҙаҡ ауырыны. Үгәй әсәһе һыйыр һауған һайын:

— Күнәгемде батырғансы, үҙең батып үлһәңсе, — тип әрләне. Хатта, ташҡын ҡайтҡас, Емеш биҙрәне сумып табып алып биргәс тә, әрләү тынманы, һүҙҙәре генә үҙгәрҙе: — Күнәгем, ап-аҡ ҡына ҡалай күнәгем тутыҡҡан бит! Тишелер инде, оҙаҡҡа түҙмәҫ инде,— тип таҡмаҡлай-таҡмаҡлай битәрләне үгәй әсәһе. — Күнәгемде тутыҡтырғансы, үҙең шунда күгәреп ҡатып ҡалһаңсы, сиған балаһы! Ҡатамы һуң, етемгә нимә була ул! Етем тиреһе — ете ҡат, тип тиккә генә әйтмәҫтәр ине! — тип теҙҙе.

Бәлки, шул һыуға батҡан көндән башланғандыр — Емеш һәр саҡ төшөндә ташҡын йылғаға ауып төшә торған булды, әммә бер ҡасан да батып ҡалманы. Йөҙә-йөҙә йылға аръяғына барып сыҡты, ә аръяҡта шундай матур: сәскәле, ҡояшлы дала...

Бөгөнгө төшөндә ла тап шулай яҙғы ташҡын ваҡыт ине. Оло Эйек яр башына йәштәр йыйылған. Байрас гармун уйнай, ҡыҙҙар, егеттәр бейейҙәр. Бына Шәүрә, Заһира, Гөлйыһан... Һәр ҡайһыһы үҙенсә бейеп әйләнә. Бына Моратша, Собхан старшина ҡыҙы Алтынбикә ал-

дына баҫып, тыпылдап бейеп тора. Үҙе ҡысҡырып таҡмаҡ әйтә:

Тәңкәле ҡыҙ, тәңкәле ҡыҙ,
Тәңкәле ҡыҙ байҙарҙа.
Етәкләшеп йөрөһәң ине
Еләк бешкән айҙарҙа!..

Алтынбикә, тәңкәле еләнен, селтәрен, ҡашмауын йымылдатып, уға ҡаршы төшә. Улар дауыл шикелле өйөрөлөп бейейҙәр, бөтәһе лә уларға ҡарап һоҡланып торалар, хатта Байрас та Алтынбикәгә йылмайып ҡарай-ҡарай гармун уйнай. Емеш яңғыҙы бер ситтә, ярҙың ситендә генә, баҫып тора, уға ҡыйын, ул Байрасты Алтынбикәнән көнләй... Ә түбәндә тулҡын өйөрөлә, ажарланып ярға бәрелә, бына береһе, икенсеһе, өсөнсөһө... Тулҡын артынан тулҡын Емеш баҫып торған ярға һуға ла һуға, ярҙы аяуһыҙ йыуа ла йыуа... Бына тупраҡтар ҙа шыбырҙап һыуға ҡойола башланы, ә Емеш китә алмай, көмөш тәңкәләрен йымылдатып, һаман ҡойон кеүек өйөрөлөп бейегән Алтынбикәнән, уға яратып, һоҡланып ҡараған Байрастан күҙен ала алмай... Уға ҡурҡыныс, уға ауыр, уны ярҙы емереп килгән тулҡын ҡурҡыта, Байрастың ҡарашы ҡайғырта, Емеште быға са бер ҡасан да тойоп белмәгән ҡырағай көнсөлөк тойғоһо быуып ала. Тап шул саҡта ажарланып килеп бәрелгән айырата көслө тулҡын ярҙы Емеш менән бергә йыуып төшөрә... Болғансыҡ һалҡын һыу урғылып, уны баштан-аяҡ күмеп китә... Ләкин Емеш батмай, көс-хәл менән болғансыҡ һалҡын тулҡын ҡосағынан ысҡына, һыу өҫтөнә ҡалҡып сыға, тирә-яҡҡа ҡарай — йылға уртаһы! Теге яҡта — Алтынбикәләр, Моратшалар, Байрастар... Был яҡ ярҙа — һандуғаслы, кәкүкле туғай, ҡояш ҡыҙҙырған сәскәле дала. Ҡайһы яҡҡа ҡарай йөҙөргә?!

«Әйҙә, Байрас шул маҡтансыҡ Алтынбикәгә яратып ҡарап ултырһын. Минең тәңкәләрем, селтәр, ҡашмауҙарым юҡ шул. Мин ары йөҙәм...» — тип уйлай Емеш, үпкәләп, ярһыу тулҡындарға ҡаршы ҡолас ташлап йөҙөп китә. Оҙаҡламай, хәле бөтөп, әммә йәне һөйөнөп, аръяҡ ярға барып сыға... Унда уны сәскәле дала көтә...

Емеш Ҡарасәс инәһенән «төштө нимәгә юраһаң — шул була. Шуның өсөн уны гел яҡшыға ғына юрарға кәрәк» тигән һүҙҙе ишеткәне бар ине. Шуға, ахыры, башҡа ваҡыттағы шикелле, бөгөн дә төшөн яҡшыға юраны:

«Һыуҙы йөҙөп сығыу ул — маҡсатҡа ирешеү. Тимәк, тормош минең алға ни хәтле генә ҡаршылыҡтар ҡуймаһын, мин барыбер ҡасан да булһа маҡсатыма ирешермен...»

Емеш үҙ юрауынан үҙе ҡысҡырып көлөп ебәрҙе: «Маҡсатыма ирешермен, имеш. Нимә һуң һинең маҡсатың? Тәүге етди ҡаршылыҡ осрау менән ҡасып ҡотолорға маташыумы ни? Их, «көрәшсе»! «Большевичка»! Етмәһә, оҙаҡ йоҡлап, дәрескә лә һуңлап бараһың! Былай булғас, маҡсатыңа ирешерһең инде, ирешмәй ни?!»

Ул үҙ-үҙен шулай ирештерә-мәрәкәләй ашығып кейенде. Уның тәне еңел, башы яҡты, кисәге йәмһеҙ кисерештәр, бер ҙә булмаған кеүек, юҡҡа сыҡҡайны. Иҫ киткес шат, бәхетле булып уянғайны ул бөгөн. Эйе, үҙен яңылыш аҙымдан һаҡлап алып ҡалған яҡшы күңелле кешеләр булғаны өсөн дә, янында Шәмсиә, Хөрмәт, Дәүериә кеүек дуҫтары торғаны өсөн дә, яҙ ҡояшы иртәнсәктән үк донъяны нурға ҡойондороп балҡығаны өсөн дә шат ине ул. Ошо ярһыу бәхет тойғоһо көн буйы уның менән ҡушарлап йөрөнө. Һәр дәрес, яңы асыш булып, был тойғоно тағы ла арттырҙы. Дәрестән һуң уға тағы ла олораҡ ҡыуаныс өҫтәлде. Быны уға, бөтәһенән элек, тағы шул тынғыһыҙ яҡташы Хөрмәт алып килде. Төшкө аштан сығыуға, аһылдап югереп килеп етте, түҙемһеҙләнеп:

— Әйҙә, йәһәт бул, Емеш, ячейкаға! Һине бөгөн комсомол сафына алалар! — тип хәбәр итте. — Ғимранов ағай үҙе рекомендация биргән һиңә, белдеңме?!

Емеш ҡыуаныстан хатта телһеҙ ҡалды, ни әйтергә, ни эшләргә белмәне: шундай оло ҡыуаныс алып килгән яҡташын, ошонда дуҫтары алдында уҡ ҡосаҡлап, күкрәгенә ҡыҫып һөйгөһө, уның күкрәгенә үҙенең башын ҡуйып, ҡыуаныстан үкһеп-үкһеп илағыһы, иркәләнгеһе килде уның...

Хөрмәт, бер ни ҙә аңламай, ҡыҙға аптырап ҡараны.

— Йә, нишләп ҡатып ҡалдың әле?! Тиҙ бул, унда бит ячейка йыйылған!

— Эй-й, төптө алйотландым даһа мин! — тип Емеш, күҙҙәрен шаян көлдөрөп, Хөрмәткә һөйөп ҡараны: — Ҡалай матур ғына малаҡай әле һин, яҡташ! — тип, ҡасандыр әйтеп дуҫын үпкәләткән һүҙен тағы ҡабатланы.

— Мин һиңә ғүмергә шул малаҡай ғына булып ҡалырмын, ахыры,—тип Хөрмәт тә шул уҡ бер һүҙҙе ҡабатланы. Үҙе ауыр ғына көрһөнөп ҡуйҙы. «Нишләйһең

бит, көсләп яраттырып булмай...» тигәнен эстән генә уйланы. Емеш:

— Эйе шул, минең өсөн һин донъяла иң матур, иң яҡшы малаҡай булып ҡаласаҡһың да... Аңлайһыңмы, донъяла тиңе булмаған малаҡай... — тип, үҙенә хас булмаған йәнлелек менән уйнай-шаяра, яҡташы артынан йүгерҙе. Ул бөгөн донъяға яңы тыуған кеүек шат һәм бәхетле ине.

Ысынлап та, ауыр кисерештәр менән башланып та, аҙағы оло ҡыуаныс менән бөткән, Емеште комсомол ағзаһы иткән был көндәр уның йөрәгенә юйылмаҫлыҡ утлы хәрефтәр менән яҙылып ҡалды. Ғүмеренең иң яҡты, яңы сәхифәләре асылған был көндә күңелендә тоҡанған ҡыуаныстың, яҡты тойғоларҙың тылсымлы ялҡыны уның бөтә ғүмер юлын яҡтыртып барырға етер, моғайын. Эйе, шулай булыр. Ул бөтә ғүмере буйына үҙен ошо көн алдында бурыслы һанар, шул бурысты намыҫ менән үтәү өсөн ғүмеренең аҡтыҡ тамсыһын да йәлләмәҫ...

* * *

Был көндән һуң, аҙна ла үтмәй, Емер Яшинский юҡ булды. Емеш башта быны абайламаны. Бер көндө тәнәфес ваҡытында Шәмсиәгә көләп өндәште:

— Был арала ниңә беҙҙең курс бүлмәһе йәмләнеп, иркенәйеп киткән тиһәм, Емер юҡ икән. Ҡайҙа йөрөй икән ул ҡылйыуғыс?

— Өфөгә киткән бит ул! Шуны һаман ишетмәнеңме ни?

— Өфөлә ни бар икән ул һөмһөҙгә? Унда йылғырбайҙарҙы көтөп тороусылар бар тип белдеме икән ни?

— «Шағир кешегә матбуғаттан ситтә йәшәү килешмәй. Өфө техникумына күсәм. Газета-журналдарға яҡын барам», тип ғариза биргән булған, ти, — тип хәбәр итте Шәмсиә, мыҫҡыллы көләп. — Үҙенсә ялындырмаҡ булған инде. Йәнәһе, шундай шәп шағир киткәс, Ҡаруанһарайҙың ни йәме ҡалыр, тигәндер. Директор ағай китергә рөхсәт иткәс, бошоноп, теләмәй генә китеп барҙы, ти. Үҙенең дуҫы Хәләф шулай тип һөйләне... Ә Хөрмәт әйтә, уның үҙенең сығышы яман икән... Директор ағай ҙа, комячейка ла быны һиҙенә башлағас, йәһәт кенә шылған, ти, ул...

— Ярай, артына көл! — тип Емеш еңел һулап ҡуйҙы. — Ҡайҙа китһә лә, барыбер шул булыр... Ҡара көнделде, көмөшкә мансыһаң да, аҡ яһап булмай, ти торғайны беҙҙең Ҡарасәс инәй...

## XII

Яҙғы сәсеүҙе тамамлаған иң шатлыҡлы көндәрҙең береһе ине. Бөтә кешенең, бигерәк тә берҙәм хужалыҡ ағзаларының, күңелдәре күтәренке, йөҙҙәре яҡты ине был көндә. Яңғыҙ-ярым ыҙаланыуға ҡарағанда, бергәләп эшләүҙең күңеллерәк тә, еңелерәк тә булыуы, быға сә бер кем ҡулы теймәгән сиҙәм күтәреп бойҙай сәсеү, бик ваҡытлы ҡойоп яуған йәшенлә ямғыр ҡыуанысы — бөтәһе бергә ҡушылып, уларҙың йөҙөнә сыҡҡайны. Шул ҡыуаныстан бөгөн бөтә ауыл, сыр-сыу килеп, һабан һыуы һалыша, урамда бер туҡтауһыҙ көлөү, шаярыу тауыштары яңғырап тора ине. Ғәҙәттә, йыл һайын яҙғы һабан эше бөткәс уйнала торған был һыу һалышыу йолаһы быйыл айырата күңелле, уйынсаҡ үтте. Иртәнән кискә тиклем ауыл өҫтөнән көлөшөү-шаулашыу туҡтаманы. Айырата ҡыҙҙар, егеттәр урамда күренгән берәүҙе һыу менән ҡойондороп кинәнде, хатта Иштуған менән Әхәтте лә ҡоро ҡалдырманылар. Шаян Сабира, Иштуғандың өйҙән сыҡҡанын һағалап тороп, башы аша бер күнәк һыу ауҙарып ҡасты. Шунан Иштуған үҙе лә, күнәк күтәреп, урам буйлап йүгерешә-ҡыуыша һыу һибешергә керешеп китте. Әхәт кенә, өҫтө лысма һыу булһа ла, төҫөндә етдилек һаҡларға, был «бала-саға» уйынына ҡатнашмаҫҡа тырышты. Хатта күңеле менән саяланып уйынға ҡатнашҡыһы, бигерәк тә бынауы шаян Сабираны сәскә бәйләме шикелле күтәреп алып өйөнә алып ҡайтып киткеһе, шунан бер ҡасан да үҙ янынан ебәрмәй алып ҡалғыһы килһә лә, етди, олпат төҫөн ташламаны. Ҡыҙҙар, бигерәк тә Сабира менән Заһира, уны үткәнһүткән һайын һыу менән ҡойондороп кинәнделәр. Уға шул кәрәк, Илсеғолда үҙенә тиң юҡтай күреп, буйҙаҡ йөрөп ятмаһын үҙе! Председатель тип, уға ҡыҙҙар күҙ һалмай тора алмай ҙа!

Ә Йиштуған, бала-саға кеүек ҡыуана-көлә, биҙрә менән һыу күтәреп, йәшел үлән баҫҡан яҙғы, яҡты урам буйлап һаман югереп йөрөнө, башҡалар кеүек үк үткәнһүткәнде баштан-аяҡ ҡойондорҙо. Үҙе лә күшеккән бесәй

кеүек булды. Волостән килгән почтальон, уны яҙғы уйындың ошондай тап ҡыҙған сағында ҡысҡырып туҡтатып, көлә-көлә ҡулына пакет тотторҙо:

— Ҡара, нисек мәҙәк икән һеҙҙә. Бына бит, нимә эшләттеләр!

— Һине лә ҡуйондорорға өлгөргәндәр икән, шаяндар. Ярамаҫ ине, эш кешеһенә теймәҫкә ине лә бит,— тип уңайһыҙланып ҡалды Иштуған. — Нисек итәһең, шундай мәҙәк йола.

— Йә, ярар, көн ҡыҙыу бит. Ҡибенермен әле,— тине почтальон. Асыуланманы. Күренеп тора, был йола уға таныш ине. Шулай ҙа Иштуған, ниңәлер, уңайһыҙланып, уйланып оҙаҡ ҡына туҡтап торҙо. Унан яй ғына өйөнә йүнәлде — пакет Хамматтан ине: «Тиҙ генә килеп ет. Бик етди һүҙ бар».

Иштуған әҙ генә аптыранып ҡалды: «Нимә бар икән? Ниңә бик ашығыс? Әгәр волоскә эшкә күсеү хаҡында булһа, мин уға Илсеғолдан китергә теләмәүемде белдергәйнем, шикелле...» Шулай ҙа иртәгеһен иртүк тороп, волоскә сығып китте. Югерә-атлай Мраковка менән Яҡуп ауылы араһындағы борамға барып та етте. Ашығыс ҡына аръяҡҡа сығып китмәксе лә булды, ләкин, ҡарышҡан шикелле, борам арғы яҡта булып сыҡты. Көтөргә тура килде.

Элек был урында ике юллы, тирәсле ағас күпер тора ине. Граждандар һуғышы ваҡытында Федька Рябой бандиттәре үҙҙәренең ҡорбандарын ошо күперҙә атып төшөрә торған булғандар... Ҡышҡы ажғыр төндә кемдең дә булһа өйөнә баҫып барып инәләр ҙә, бала-сағаһын, ҡатынын, ата-әсәһен илатып, ир-атты алып сығып китәләр. Унан ошо күперҙән атып төшөрәләр. Шаҡылдап туңған Оло Эйек боҙо өҫтөнә ҡолап төшкәс, кешенең тәне йәнселә, башы ярылып, мейеләре, күҙҙәре сәсрәп сыға. Революция өсөн кемдән үс алырға белмәй ҡоторонған ҡырағай тоҡомға ҡыҙыҡ була. Улар, хахылдап көлә-көлә, нәүбәттәге ҡорбан артынан китәләр... Иртәгеһен уларҙың яуыз телле шымсылары: — Бына, Ҡыҙыл Армия халыҡты ҡалай иңрәтә! — тигән зәһәрле һүҙ тарата, ә ҡурҡытылған, иҙелгән халыҡҡа был яланың асылын аңларға ҡайҙа ти инде ул... Тағы ла өркөбөрәк боҫа ла үҙ нәүбәтен көтә лә ята... Эйе, ул ике юллы, матур тирәсле ағас күперҙең шундай ҡот осорғос тарихе булды шул...

Хәйер, ул йылдарҙа был күпер янында һәйбәт, ҡыйыу эштәр ҙә эшләнгән бит. Хаммат ағай етәкселегендәге Илсеғол дружинасылары Һатыбал бандаһын тәүтапҡыр тап ошо күпер янында ҡамап туҡмаған бит шул йылдарҙа. Иштуғандың атаһы Байгилде ағай, Тимербай ағай, хатта Закир ҙә ҡатнашҡан ул һуғышта. Иштуған, Әхәт, Айһылыуҙар хеҙмәт иткән Қаширин отряде Һатыбал, Федька Рябой бандаларын бөтөнләй туҙҙырғас, Белорет яғына юл тотҡанда ла, «Қонная Буденного»ны йырлай-йырлай, аттарҙы йыр көйөнә бейетеп, ҡылыстарҙы йылтыратып баш осонда болғай-болғай, ошо күпер аша уҙып киткәйнеләр. Шулай... граждандар һуғышы йылдарындағы киҫкен көрәштең күп ваҡиғаларын үҙ башынан кисергән күпер ине. Хәҙер ул юҡ. Ниндәйҙер билдәһеҙ ҡыйыу патриоттар уны яндырып, Қолчак ғәскәрҙәренең сигенеү юлын Оло Эйек менән быуған... Ҡыҙыл ғәскәргә дошманды ҡыйратырға булышҡан... Тик дошман ҡалдыҡтары бар әле... Улар йәшенә-боҫа һаман аяҡ салырға, революцияның баҙыҡ аҙымын нисек тә аҡрынайтырға тырыша. Эйе, революцияның аҙымын аҡрынайта алмаһа ла, айырым кешеләрҙең аҙымын туҡтатып та тора алалар шул ҡайһы саҡта. Бына шулар арҡаһында яндырылған бит күпер! Әгәр күпер булһа, Иштуған әллә ҡасан Оло Эйектән аша сығып ҙа волоскә барып ҙә етер ине, ә хәҙер, күпме ваҡыт борам көтөп, яр башында уйҙар өйөрмәһендә өйөрөлөп тора. Ҡасан борам ығышып был ярға килеп туҡтар? Унан бит әле ул бер Иштуған өсөн генә арьяҡ ярға кире сығып та китә һалмаҫ. Тағы көтөргә кәрәк. Етмәһә, бөгөн, ҡарышҡан шикелле, йөрөүсе лә аҙ. Баҙар көн булһа, әлбиттә, борамға һыйып булмаҫ ине...

Иштуған, күрәһең, ваҡытһыҙ ябырылған күңелһеҙ уйҙарҙан арып, аяҡтарын һалындырып, яр ситенә барып ултырҙы. Берсә йәшкелтләнеп ятҡан тәрән йылғаға өҫтөнә, берсә ҡыяҡ япраҡлы йәшел талдарға ҡарап, тормоштоң ҡыуанысл, яғымлы яҡтарын ғына уйлап, ял итеп алырға теләне. Булманы. Төрлө отҡо таралыу, клуб яныу ваҡиғаларына бәйләнешле күңелһеҙ уйҙар уны тағы был арала үҙен айырата нығ бошондорған йомаҡлы мәсьәләләргә алып инеп китте. Ысынлап та, уйламаҫлыҡ та, аптырамаҫлыҡ та түгел бит: тирә-яҡта дошман төрлөсә этләшеп ята. Бер Илсеғолда ғына күпме ваҡиға! Күпме йомаҡ?! Ә затының ниҙән икәнен һаман белгән, асҡан

кеше юҡ. Береһенән-береһе мәкерле эштәр эшләнеп кенә тора...

Бынауы халыҡ тәфтишсеһен генә алып ҡарайыҡ: «Кем ул? Кемгә кәрәк ундай тәфтишсе?! Әйләнә-тирәлә, шайтан белһен, нимәләр эшләнеп ята, ә уға, әйтерһең, барыбер?! Тикшергән, йөрөгән дә була, ә мәғәнә юҡ... Моғайын, шуға ла Хаммат ағай ҙа теге Хөснөлхаҡтарҙың, Апанастарҙың эҙенә һаман төшә алмайҙыр әле. Уның пландарын алдан еткереп, дошманды иҫкәртеп тороусылар ҙа юҡ түгелдер...

Их, ошоларҙың бөтәһен белергә, дошмандың яуыз ниәтен асырға ине... Ул саҡта беҙҙең эштәр еңелерәк тә, йәһәтерәк тә алға тәгәрәр ине...»

Иштуғандың күңелһеҙ уйҙарын өҙөп, борам ҡуҙғалды. Ярҙан-ярға һуҙылған тимер арҡан буйлап шағыршоғор был яҡ ярға табан яй ғына шыуыша башланы. Иштуған һикереп тороп борам яғына атланы.

«Тиҙерәк кенә барып етергә ине!.. Их, йә, ни тип йәйәү киттем икән? Артелдең аттары былай ҙа күп түгел. Йәйәү барып етерҙәй урында ниңә ат биләргә, тип уйлаған булдым шул. Йә, ярар, каникул ваҡыты бит әле, эштәр ашығыс түгел. Былай ҙа барып етермен».

Борамға был яҡта туҡтап торорға тура килмәне. Иштуған яр башында ултырған арала, биш-алты йөк менән Сергей Хитровтың улдары, кейәүҙәре килеп еткәйне. Улар, ҡысҡыра-шаулаша, йөктәрен борамға индереп тултырҙылар. Һырт буйҙары йылҡылдап торған көр аттар сыйылдаша-тешләшә теҙелешеп торҙолар. Иштуған да башҡа йәйәүлеләр менән бергә йөктәр араһына инеп баҫты.

«Нэпмандар Ырымбурҙан тауар тейәп ҡайталар инде... Ҡотороноп сауҙа итәләр бит, ҡороғорҙар. Төптө элекке заманса йәшәп киттеләр ҙәһә!.. — тип екһенеп торҙо ул. — Быларға шулай иркенлек булғанда, яңылыҡтың аҙымы нисек еңел булһын?!»

Борамдан сыҡҡас та, йәһәт кенә китеп барманы. Бөгөн оҙон юлы буйынса тынғы бирмәй елкәһен баҫып, яҙҙың ҡеүәтле йөрәк тибешен тойоп ғорур, шат атлап барырға ҡамасаулап күкрәген ҡыҫып килгән күңелһеҙ уйҙар иркенә бирелеп, борам янында оҙаҡ ҡына туҡталып торҙо, ә унда һаман баяғыса сыр-сыулы тормош дауам итә. Хитров байҙың улдары, кейәүҙәре, һүгенә-ҡысҡырына ауыр йөклө арбаларын дөһөр-даһыр борам-

дан сығарып маташалар. Иштуған уларға йәне көйөп тағы тора бирҙе лә туғай эсләп үткән берләм юлға боролдо. Йәш япраҡ, һутлы үлән еҫтәре аңҡып торған дымлы туғай һауаһын ғәжәп бер кинәнеү менән еҫкәй-еҫкәй, йәһәтләп китеп барҙы. Был яҡҡа сыҡҡас, күңелһеҙ уйҙар, нисектер, йылғаның теге яғында тороп ҡалғандай, күкрәк киңәйеп, тын иркенәйеп киткәндәй булғайны ла, оҙаҡҡа барманы. Үтә йылғыр сыулашып борамдан сығып киткән нэпмандар уның уйын тағы күңелһеҙ яҡҡа юнәлтте: «Сергей Хитровтың теге следователь улы ҡалай бынауы нэпман ағаһына оҡшаған... Тикшереү эше кулак тоҡомо ҡулында булғанда, ниндәй ғәҙеллек көтөргә мөмкин?!

Хаммат ағай ошоға бер сара күреүҙениңә һаман һуҙа икән? Шулай уҡ следователь булырҙай яҡшы, ышанысл кеше юҡмы икән ни?»

* * *

Волость үҙәгенә барып еткәс тә, Иштуған һаман уйҙар сырмауынан ысҡына алмай, тоҡ-томалға баҙар майҙанында ла туҡталып, тәү күргәндәй иғтибарлап ҡарап торҙо. Был юлы майҙан уға айырата буш та, үтә иркен дә күренде, ә бит ул майҙандың ғәйәт шаулы, хатта дәһшәтле саҡтарын да белә.

Февраль революцияһы көндәре ине... Иштуғандың атаһы Байгилде ағайҙың фронттан яңы ғына ҡайтҡан сағы. Ошо майҙанда ул атаһы менән Никитаның осрашыуын күрҙе, тап ошо майҙанда ул тәүтапҡыр синыфтар бәрелешенә юлыҡты. Бынауында, хәҙер ҡыҙыл байраҡлы трибуна торған урында, буш мискәгә баҫып, ул көндө берсә Һатыбал, Федька Рябой ҡарлыҡҡансы аҡырынды, берсә әле генә фронттан ҡайтҡан Никита, каторганан ҡайтҡан Тимербай ярһып-янып телмәр һөйләне. Майҙанға шыҡыршып тулған халыҡ төрлө телдә төрлө тауыш менән күс айырырға йыйынған умарта кеүек геүләне, Оло Эйектең яҙғы ташҡыны кеүек тулҡынды. Шул саҡ старшина улы Һатыбалды мискә өҫтөнән һөйрәп төшөргәс, Иштуғандың күңелен бығаса бер ҡасан да татылмаған ғорур ҡыуаныс солғап алғайны. Ул да, башҡаларға эйәреп, бик оҙаҡ:

— Ур-ра! Йәшәһен революция! Йәшәһен иптәш Ленин! — тип яңғырауыҡлы тауышы ҡарлыҡҡансы ҡысҡы-

рып торғайны. Шуның менән уға бөтәһе лә аңлайышлы, бөтәһе лә хәл ителгән һымаҡ булғайны... «Байҙар, ялсылар тормошо бөттө. Азатлыҡ, ғәҙеллек, яҡшылыҡ еңде!» Баҡтиһәң, әле булһа аңлашылып, хәл ителеп етмәгән яҡтар ҡалған икән...

Бынан һуң Февраль революцияһы менән Октябрь революцияһы араһында уҙған дауыллы көндәр Иштуғандың үҙен дә ҙур ваҡиғалар ҡосағына алып инеп китте. Йәш һуғышсы, ҡулға мылтыҡ тотоп, Октябрь ҡаҙаныштарын аҡтарҙан, интервенттәрҙән яҡлар өсөн сафҡа баҫҡас, ошо майҙанда ул үҙенең синфи дошмандары менән тағы бер ҡат осрашты. Ошо майҙанда уларҙың Ҡаширин отряде Федька Рябой бандаһын тар-мар итте. Уның атаһы Байгилде ағай мәкерле дошман Һатыбал бандаһына ҡаршы аҙаҡҡы үлемесле көрәшкә ташланыр алдынан да ошо майҙандан уҙып киткән... Шул китеүҙән әйләнеп ҡайтмаған... ҡорбан булған... Ҡыҙыҡ, бер уйлаһаң, күпме иҫтәлекле көндәрҙе үҙендә һаҡлап ята был кескәй майҙан!

Иштуған, шул данлы йылдарҙың тетрәткес гөрһөлдәүен тағы бер ишетерҙәй булып, ниҙер тыңлай-тыңлай тағы бер аҙ баҫып торҙо. Унан яй ғына ары китте. Майҙанды аша сыҡҡас, элекке волость йорто янында туҡтап торҙо. Хәҙер бында ВКП(б) һәм комсомол волкомдары урынлашҡайны, ә волисполком элекке купец Батыйма тутай йортон биләгән.

Иштуған волком йортоноң туҙан баҫҡан ҡараңғы коридоры буйлап төпкә үтте. Ундан иң һуңғы ишек — Хамматтыҡы. Секретарь кабинетенә өҙлөкһөҙ инеп-сығып торған кешеләргә ентекләп ҡарап, йәнә бер аҙ тынып торҙо. Бына бер саҡ, ҡуҙға баҫҡан бесәй шикелле тыбырсынып, Хаммат янынан волость потребкооперацияһы мөдире Әбделғасим Әбделмөслимов атылып килеп сыҡты. Тирле ҡыҙыл йөҙөн, зәһәр асыу сәсрәткән ҡыҙыл күҙен йәшерергә теләгән һымаҡ, ҡулъяулыҡ менән ҡаплай-һыпыра коридор буйлап юғерҙе.

«Быға ни булған? Күҙенә аҡ-ҡара күренмәй ҙәбаһа?! — тип ҡыуаныслы аптырап ҡалды Иштуған.— Башҡа ваҡытта шундай мөләйем йөҙлө, илгәҙәк һүҙле, үҙ баһаһын үтә яҡшы белгән тыныс ҡылыҡлы, хатта «изге күңелле» кеше ләбаһа ул!.. Кем уның кәйефен боҙорға баҙнат итте икән?!»

— Ин. Нишләп яйлап тораһың?!

Иштуған, тертләп, ҡүтәрелеп ҡараны. Ҡабинетенең ишеген асып, Хаммат йылмайып тора ине.

— Бер ҙә яйламайым, — тине Иштуған да, ҡәнәғәт йылмайып.

— Һаумы, Хаммат ағай? Мин бит эш сәғәте башланғаны бирле бында торам!

Улар кабинетҡа инделәр... Хаммат Иштуғандың ҡулын ҡаты ҡыҫып күреште.

— Ҡулың йомшара башлаған түгелме, мырҙа? — тип мәрәкәләне.

— Эйе, Хаммат ағай, минең ҡулдарым хәҙер һалдат ҡулдары түгел шул... — Ниңәлер бошоноп ҡуйҙы Иштуған. — Мылтыҡ тотоп, мәргән атып йөрөгән саҡтар әле кисә генә булған кеүек тә бит...

Хаммат оҙон-оҙон атлап ишекле-түрле йөрөп алды.

— Дөрөҫ, мылтыҡ ташлағанға күп ваҡыт уҙманы әле... Шулай ҙа уны ҡабат алырға тура килмәһен инде. Хәҙер беҙҙең өҫтә социализм нигеҙен һалыу бурысы тора. Оло эш. Әйткәндәй, был эш тә ҡулдарҙы үтә йомшартып ебәреүҙе яратмай...

Иштуған был һүҙҙәрҙең кинәйәһен төшөнөргә өлгөрмәне, секретарь:

— Һинең менән һөйләшәһе һүҙҙәр бар, — тип уның янына уҡ килеп баҫты.

Ярым хәрби, ярым ҡаласа кейенгән мыҡты кәүҙәле, яҡты ҡарашлы, оло йөрәкле был кешенең кабинеттә ултырып тороуҙы яратмауын, хатта килгән кешеләрҙе лә аяғүрә ҡаршы алып, аяғүрә оҙатыуын Иштуған белә. Уның теләгән бер сәғәттә атҡа һикереп менеп, волостең теләгән бер ауылына елдәй барып етеүе, халыҡ менән һәр саҡ күҙгә-күҙ ҡарашып үҙе һөйләшергә яратыуы ла уға таныш. Шулай ҙа был ғәжәп ябай, шул уҡ ваҡытта үҙ эшенә йән атып бирелгән ярһыу йөрәкле коммунисте ул һәр осратҡанда тағы ла яңыраҡ, яҡшыраҡ сифатта күрә һымаҡ ине. Бөгөн ул Иштуғанға ҡырҡыу йөҙлө һәм үҙенең тыныс, баҫалҡы холҡона хас булмағанса асыулы ла, әҙерәк аптыранып ҡалған да һымаҡ күренде. Шуға, ахыры, ул да, ҡабаланып:

— Берәй күңелһеҙ хәл бармы әллә, ағай? — тип һорап ҡуйҙы.

— Әбделмөслимовты күрҙеңме? Нисегерәк атылып сығып китте? — тип һорау менән яуап бирҙе Хаммат. — Әйткәндәй, Илсеғолда магазин астымы әле ул?

— Эйе, магазин эшләй,— тип хәбәр итте Иштуған, ҡәнәғәт йылмайып. — Сәмиғә һылыу бөтөнләй килештереп һатыу итергә тотондо. Әйтерһең, борондан ата-бабаһы һатыу итеп килгән!..

— Яҡшы. Йәштәр бөтә һөнәргә лә өйрәнергә тейеш. Беҙгә һәр тармаҡта үҙ кадрҙарыбыҙҙы булдырырға кәрәк. Юғиһә ҡайһы бер иҫке кадрҙар менән эшләү түгел, һөйләшеүе, аңлашыуы ла ҡыйын була башланы... Бына шул Әбделмөслимовты ғына алып ҡара... Ну төлкө!.. Әйткәндәй, был арала мин волостә кооперация эштәренең торошо менән ныҡлап танышып ултырам... Мине бигерәк тә «Ил һаҡлау фондына» тип, халыҡтан йыйылған байлыҡтың яҙмышы борсой башланы. Хөкүмәт ҡулына ингәнме шулар әллә Әбделмөслимовтар кеҫәһенә эләккәнме?.. Хәтерләйһеңдер, беҙҙең Илсеғолда ғына ла күпме көмөш әйберҙәр йыйылғайны? Беҙҙең ҡатын-ҡыҙҙарҙа быуаттар буйы быуындан-быуынға күсә килгән селтәр, ҡашмау, алмиҙеү, хәситә, йөҙөк, беләҙек, сулпы көмөштәре — бөтәһе лә шунда китте бит. Ил төкөрһә, күл була тигәндәй, күлдәй байлыҡ йыйылды...— Хаммат күңелһеҙ генә йылмайып алды. — Һин дә күпме кенә йыйып тапшырҙың, шикелле?

— Бер йәшник.

— Бына бит! — тип ҡуйҙы Хаммат, сабырһыҙланып. — Илсеғолдан ғына ла бер йәшник көмөш! Ә бүтән ауылдарҙан күпме? Шулар бит бөтәһе лә кооперацияға тапшырылған. Уларҙы бит халыҡ үҙенең яңы, йәш совет ватанына әҙ булһа ла ярҙам итәм, тип ышанып, ысын күңелдән теләп биргән! Әле инде тикшерә башлаһам, ул байлыҡтың эҙе лә юҡ. Ҡасан, кемдән күпме көмөш әйбер алынған, ҡайҙа тапшырылған? Билдәһеҙ. — Хаммат, йәнә көйөп, тағы ҡыҙыулап йөрөп алды. — Әле мин Әбделмөслимовтан шул хаҡта һораштым... Ә ул күҙ ҙә йоммай:

— Белмәйем, тәҡсир. Хәтеремдә юҡ, тәҡсир. Распискаһыҙ ҡабул ителгән икән, распискаһыҙ тапшырылғандыр, тәҡсир, — тип тутыйғош кеүек бер һүҙҙе ҡабатлап тик ултыра.

— Тәҡсир түгел — иптәш,— тип төҙәтәм мин уны, ә ул хатта ишетмәгәнгә һалыша. Һаман «тәҡсир, тәҡсир, тәҡсир...» ти. Күрмәй ҙә, белмәй ҙә. Ҡайҙан күпме көмөш тапшырылыуҙы раҫлаған документ минең ҡулда юҡлығын белеп, мыҫҡыл итә бит ул, дошман! Үҙенең

тамыры тәрәнлегән дә онотмай... Бына шулай йәшникләп, йөкләп йыйылған халыҡ байлығы кооперацияға ялаған кулактар ҡулына һеңеп торған. Былай ҙа байлыҡтан шашҡан Әбделмөслимовтар, Хитровтар тағы ла ҡотороп байып киткән. Халыҡтың Тыуған ил өсөн бөтәһен бирергә, бөтәһен эшләргә торған изге тойғоһонан бына кемдәр файҙаланған! — Хаммат, үҙ сәсен үҙе йолҡорҙай булып үртәнеп, иҙәнде арҡыры-буй йөрөп алды. — Ә бына шуны, Әбделмөслимовты, бөгөндән алыштырырлыҡ сауҙа эшен белгән беҙҙең кадр ҡайҙа? Юҡ бит! Ә булдырырға, һис һүҙһеҙ, булдырырға кәрәк!

Иштуған уға тағы бер ентекләп ҡараны. Ысынлап та, Хамматтың йөҙө бөгөн тынысһыҙ ҙа, үтә кәйефһеҙ ҙә ине. Яҡты ҡуңыр күҙҙәрендә арығанлыҡ билдәләре ята. Күҙ ҡойроҡтары ҡыҙарып, йоҡоһоҙ уҙған төндәр хаҡында һөйләп тора ине.

— Бик аҙ йоҡлайһығыҙ, ахыры, Хаммат ағай?

— Көндөҙ эш, ә кистәрен күп уҡырға тура килә. Үҙең беләһең, мәктәп күргән кеше түгел мин. Үҙаллы уҡыу менән генә, ә уҡыйһы, беләһе нәмәләрҙең иге-сиге юҡ. Шундай ҡыҙыҡлы һәм кәрәкле белем дарьяһы асылған бит беҙҙең алда. Шул дарьянан, тамсылап ҡына булһа ла, минең дә эске килә. Их-х, әҙерәк йәшерәк булһам, Байрасым менән бер партаға ултырып, бөтәһен ҡайтанан башларға һис тә ғәрләнмәҫ инем мин...

Ул, тыйнаҡ ҡына йылмайып, Иштуғанға төбәлеп ҡараны:

— Революция бит, туған! Үҙең белмәгән нимә бар? Икенең береһе: йә уҡы, өйрән, үҫ, эшлә, көрәш, ең! Йә юл бир, тайпыл! Урыныңа, заманға лайыҡ кеше баҫһын! Шулай бит, мырҙа!

— Шулай,— тип раҫлап ҡуйҙы Иштуған да. — Мин дә был хаҡта йыш уйлайым хәҙер, Хаммат ағай.

— Уйлауың һәйбәт. Кем уйлай, ынтыла, шул таба! Бая әйттем бит әле, бергәләп, етди уйлашып алаһы бар, тип. Бына шул уйлай белгән кеше булғаның өсөн дә бергәләп кәңәшергә саҡырҙым әле һине.

Хаммат, күрәһең, әҙерәк тыныслана төшөп, урынына барып ултырҙы.

— Мә әле... Башта шуны уҡы... Күптән килһә лә, буш нәмә менән һинең кәйефте боҙмайым тип, әйтмәй йөрөй инем... Ләкин хәҙер, әйткәндәй, тегендә кескәй Емешкә лә яла яғыусылар булғас... был осраҡлы хәл түгелдер

тип, белдерергә булдым... — тип өҙөп-өҙөп артабан һөйләне.— Унда, Каруанһарайҙа, ошо Әбделғасимдең улы пиндәйҙер икенсе фамилияла йөрөп ята, имеш, тигән дә сигнал бар... Тимәк, был яҙыу осраҡлы хәл түгел... Күренеп тора, дошман, күберәк яла ауы ҡора, бер ҡатлылар шунда үҙҙәре килеп эләгер тигән уй менән эш итә. Яланы ул Емештән башлап ебәреп, һиңә барып тотонорға юл асмаҡсы, күрәһең... Бая әйткәнемсә, дошмандың тамыры, күрәһең, бик алыҫ таралған... Ул беҙҙең төп кадрҙарға алыҫтан, бөтә яҡлап һөжүм әҙерләмәксе кеүек... Һин унда, техникумда, директор булып беҙҙең полк комиссары Ғимранов эшләй, тигәйнең шикелле?.. Шуға хат яҙып, ул бәндә хаҡында белешергә ине, ә, Иштуған? Әбделмөслимовтың улы хаҡында, тим...

Иштуған Хамматтың бер һүҙен дә ишетмәне. Йөҙө берсә көл төҫлө буҙарып, берсә, янып-ҡыҙарып, ҡағыҙға теклəп ултыра бирҙе. Әйтерһең, был кескәй генә дәфтәр бите уның ҡулын яндыра, йөрәген утлы торонбаш булып көргөй ине.

— Был яҙыуға ҡарағанда, мәҙрәсәне яндырған да, мулланы туҡмап үлтергән дә һин булып сығаһың! Етмәһә, үҙең контр ҙа, вәлидовсы ла! — Хаммат ҡысҡырып көлөп ҡуйҙы.— Хатта клубты яндырыр алдынан ҡатының сиккән шаршауҙы өйөңә алып ҡайтып ҡуйырға ла онотмағанһың...

— Эйе...

— Күрҙеңме, ҡалай килтереп ҡуймаҡсы бит мәсьәләне! Ҡайҙан, нисек тотоп һындырырға белә дошман, ә шулай ҙа ҡултамғаһын ҡуймаған, яуыз!.. Кем эше икән, ә?!.

— Белмәйем. Кем яҙыр тип тә әйтә алмайым,— тип, тамам юғалып ултырҙы Иштуған.— Мин, үҙемсә, халыҡҡа тоғро хеҙмәт итәм икән, ул да минән ҡәнәғәт икән тип ышанып-ҡыуанып йөрөй инем бығаса...

— Һәм шулай ҙа ул! — Хаммат, аҡыллы ҙур күҙҙәрен тултырып, Иштуғанға яратып ҡараны.— Халыҡ һинән риза, ә был ерәнгес ҡағыҙҙы бит уны синфи дошман яҙған. Халыҡтың нисек ҡарауын белгең килһә, мә, уҡы, уныһын да бел!

Хаммат, инде йөҙө яҡтырып, уға Илсеғол ауылы граждандарының йыйылыш протоколын тотторҙо. Былтыр, Иштуғанды волость мәғариф бүлегенә алыу мәсьәләһе ҡуҙғалғас, Илсеғол халҡы уны үҙҙәрендә ҡалдырыуҙы

һорап ҡарар сығарған протокол ине был. Үҙе теләмәгән өсөн түгел, ә халыҡтың үтенесен иғтибарға алып ҡалдырылғайны Иштуған ул саҡ Илсеғолда.

— Мин волоскә күсеүҙән баш тартып дөрөҫ эшләгәнмен икән, Хаммат ағай,— тип ҡуйҙы Иштуған, инде бер аҙ күңеле күтәрелеп.— Миңә Илсеғолда эшләргә кәрәк әле. Халыҡтың белемен генә түгел, синфи аңын да ныҡлап күтәрәһе бар. Ҡөс етһә, ышанһағыҙ, әлбиттә, эште дауам итәсәкмен.

— Дауам ит! Һиңә, революция һалдатына ла, ышанмағас, кемгә ышанырға?! Ә был яҙыуҙарҙы күрһәтеүемдең сәбәбен дөрөҫ аңла: ҡайһы бер нәмәләргә ҡарата күҙеңде нығыраҡ асыу, йәшлек ярһыуына таянып ҡына түгел, уйлап, етди, аңлап эш алып барырға кәрәклекте тағы бер ҡат төшөндөрөү өсөн генә. Ҡоллектив хужалыҡтар ойоштора башлау — ауылдарҙа синфи ҡаршылыҡтарҙы тағы ла киҫкенләштерә... Дошмандың тын алышын алдан белеп тороу кәрәк беҙгә.

Иштуған, тәрән уйланып, бик оҙаҡ бер ни ҙә әйтә алмай ултырҙы. Ахыр, ҡаты әсенеп:

— Хаммат ағай, дошмандың ни уйлағанын белеү генә етәме ни? — тип ҡуйҙы.— Уның томшоғон емерә һуғырға ла кәрәк тәһә... Минеңсә, бынауы Илсеғолдағы ваҡиғаларҙы ҡабаттан яҡшылап тикшерергә кәрәк ине. Ҡлуб яныу һәм башҡаларҙы әйтәм... Ғәйеплеләр асылһа, миңә лә еңел булып ҡалыр.

— Тикшерелер. Ошо арала следователь ҡайтанан барыр.

— Следователь тигәс, күңелгә бер шик килеп төштө әле,— тип Иштуған тағы бер аҙ бошоноп торҙо. Унан, ни булһа булыр тип, бая борам янында үҙенең күңеленә килгән шикте әйтеп һалды:— Волостә тикшереү эше кулак малайы ҡулында икән, тирә-яҡта эшләнеп ятҡан енәйәттәрҙе асыу хаҡында һүҙ ҙә булыуы мөмкин түгел, минеңсә.

— Улай уҡ ҡыҙып китмә әле һин, Иштуған,— тине Хаммат, һаман тыныс булырға тырышып.— Атаһына ҡарап, улын да дошмандыр тип уйларға ярамай бит! Етмәһә, уны бит беҙгә юғарынан ебәргәндәр. Белмәй, тикшермәй эш тапшырмағандарҙыр, тип уйларға кәрәк... Унан бит әле, хәҙер генә уны алмаштырырҙай үҙ кеше лә юҡ, ә Николай Хитров революцияға хәтле үк юрислеккә уҡып сыҡҡан...

— Мин уға барыбер ышанмайым! — тине Иштуған.

Ауыр тойғо менән секретарь кабинетенән сыҡты. Ул бая күрмәй ҙә уҙған ҡараңғы коридор уға хәҙер осһоҙ-ҡырыйһыҙ тойолдо. Әле һөйләшкән саҡта, нисектер, көсләп тыйылған үтә ауыр, сәмле тойғо уның бөтә йәнентәнен солғап алды, хатта һалҡын, сирҡаныс ҡулы менән тамаҡҡа үрелгән дә һымаҡ була башланы. Иштуған, ҡапыл бик ят һәм ҡырыҫ күренеп киткән тирә-яҡҡа һораулы һәм аптыраулы ҡараш ташлап, әленән-әле туҡтап торҙо, һабанда елһеп ярылған аҡһыу ирендәрен тауышһыҙ ғына ҡыбырҙатып, сабырһыҙ бер һорауҙы ҡабатланы: «Йә, кем уйлар?.. Кем уйлар!.. Һинең саф намыҫыңа шулай бысраҡ ырғытырҙар тип кемдең башына килер?! Етмәһә, тикшереүсеһе кем бит!»

Был ауыр уйҙар Иштуғанды юлда ла тыныс ҡалдырманы.

«Ярай әле Хаммат ағай беҙҙе, халыҡ әйтмешләй, әнәһенән ебенә тиклем белә. Шуға был ялаға уны ышандырып булмай, ә уның урынында кешегә түгел, ә ҡағыҙға ғына ышана торған берәй бөтәш күҙ ултырһа?! Аҡты ҡара тип раҫлап ҡуйыуҙары ла мөмкин бит?! Ә мин үҙемде аҡлар өсөн ниндәй дәлил килтерә алам? Ул хаҡта берәй тапҡыр булһа ла уйланыммы ни мин ошоғаса?! Хәҙер, беҙҙең көндәрҙә, кешегә бер ғәйепһеҙгә бысраҡ ырғытырға мөмкиндер тигән уйҙы башыма ла килтергәнем юҡ бит минең! Етмәһә, атайыма яла яғыу, Емештең юлына аяҡ салырға тырышыу. Эйе, кемдер бик етди дошманлыҡ эше алып бара, ләкин кем, кем?!»

Иштуған Йәлсеғолға еткәндә, оҙон көн үтеп киткән, эңер төшкән, йәштәр Оло Эйек буйына уйынға сыҡҡан... Ана, кемдер өҙҙөрөп гармун уйнай. Хәсәндер... «Уйна, мырҙа, уйна. Йөрәгеңдең ялҡынын, күңелеңдең аҡлығын гармун телдәренә һалып тибрәт. Яуыз йәндәр йөрәгеңде яраламаҫ элек, ысын бәхет ҡанатында талпынып ҡал... Юҡһа кем белә, кем белә...»

Көн буйы бер ни ашамай, бер йотом һыу йотмай хәлдән тайып ҡайтып ингән ирен Айһылыу хафаланып ҡаршы алды.

«Ҡайҙа йөрөнөң шул хәтле оҙаҡ? Берәй хәлгә осраныңмы әллә, йәнем?» — тип һорарға уҡталды, әммә иренең бошонҡо йөҙөнә ҡарап, һүҙен йотто.

— Сәй! — тине Иштуған, күтәрелеп ҡарамай ғына.— Сарсаным, һылыу!..

# ДҮРТЕНСЕ БҮЛЕК

## I

...Батыр үлде, үҙе үткән юлда
Хисе яҡтылығын ҡалдырып.

Р. Ниғмәти

Байрас менән Алеша бынан ике йыл элек, Өфө менән танышып, уның үткәнен иҫкә алып, бөгөнгөһө, киләсәге хаҡында ҡанатлы хыялдарға бирелеп, оҙаҡ-оҙаҡ урам ҡыҙырып йөрөгәйнеләр. Әле бына бөгөн тап шундай уҡ күренеш уларҙың тормошонда тағы ҡабатланды. Тик быныһы Өфөлә түгел, ә Ҡазанда. Быйыл көҙ улар икеһе лә Ҡазанға килеп урынлашҡайны. Алешаны бында Ленин уҡыған университеттә, хатта ул һайлаған факультеттә уҡыу теләге тартты, ә Байрастың күңеле хәрби хеҙмәттә ине. Шуға ул хатта рабфакты тамамлап та торманы. Ике ҡыш уҡығас та, бындағы татар һәм башҡорт хәрби училищеһенә килеп инде.

Байрастың был ҡалала дуҫы янына тәүләп килеүе ине. Ял көнө булғас, Алешаның да ваҡыты бар. Ул, ҡыуана-ғорурлана, дуҫына үҙенең уҡыу йортон күрһәтеп йөрөнө:

— Актовый залды ҡара! Нисегерәк, ә? Бына ошо бүлмәлә Володя Ульянов лекциялар тыңлап ултырған! Ә инде бына бында 1887 йылдың декабрендә университет студенттәренең сходкаһы үткән. Володя Ульянов етәкселек иткән сходка! Беләһеңме, унда, шул сходкала, беҙҙең яҡтан Мирсәйеф Биишев тигән башҡорт егете лә актив ҡатнашҡан. Ульянов менән бер курста уҡыған ул. Ул да бында гимназияны алтын миҙалға тамамлап килеп ингән... Әммә шул сходканан һуң университеттән ҡыуылған... — тип әҙерәк тарих тә һөйләп алды. — Аңлайһыңмы, башҡорт егете йәш Лениндең көрәштәше булған!..

Байрасҡа дуҫы бөгөн ғәҙәттәгенән дә аҡыллыраҡ, дәртлерәк, хатта буйға ла бейегерәк күренә. Ул һоҡла-

ып-ҡыуанып, хатта бер тиклем көнләшеп тә ҡарап ала уға: «Их, уның кеүек булырға ине!..» Шул саҡ уның уйҙары бер генә минутҡа Алеша менән бергә уҙған бала саҡтарына ла ҡайтып ала...

Илдә ҡаты граждандар һуғышы барған саҡ. Төн. Оло Эйек күпере янындағы туғайҙа, мөһабәт тирәк башында, юл яғына мылтыҡ тоҫҡап, ике малай ултыра... Дәһшәтле, ауыр кисерешле һуғыш төнө... Ҡанһыраған, хәүефле таң... Томра, эҫе көн... Ялан аяҡлы ике арыҡ малай ҡулынан атылған тәүге пуляләр... Синфи дошмандан алынған тәүге үс... Ысынлап та булған хәлдәрме былар?! Хәҙерге бынауы уҡымышлы, һылыу егет менән ул саҡтағы Алешаны бер үк кеше итеп күҙ алдына килтереүе ҡалай ҡыйын... Хатта ышанмаҫлыҡ... Ә бит был күптән түгел генә булып үткән хәлдәр!.. Был дауыллы йылдар Алеша менән Байрасты ла шулай танымаҫлыҡ итеп үҫтереп, үҙгәртеп ебәрергә өлгөрҙөләрме ни?! Уйлаһаң, бик-бик ғәжәп тә был!

Дуҫының күңелендә ниндәй уйҙар уяныуына төшөнөргә теләгәндәй, Алеша ла, туҡталып, уға ентекләп ҡарап тора.

Байрастың өҫтөндә килешле итеп, өҫтөнә үлсәп тегелгәндәй ултырған өр-яңы һоро шинель, аяғында ялтырап торған хром итек, киң күкрәкле, ҙур кәүҙәле булыуға ҡарамаҫтан, өҙөлөп торған нәҙек биленә киң ҡайыш та үтә килешеп тора... Ул бөтә торошо менән ғәжәп бөхтә, матур, мыҡты, хатта танымаҫлыҡ тип әйтерлек яңы күренде Алешаға. Һәм ул шатлығын йәшерә алмай ҡыуанакөлә, уның менән йәнәш барып баҫты.

— Йә әле, тыңлашәйек! Ҡара, һин минән тәпәшәгерәк инең дәбаһа! Ҡара, ҡара, уҙҙырғанһың бит хәҙер! Ай-яйяй, улай яраймы ни, дуҫ, ә?!

Байрастың уйы, ни өсөндөр, һаман ауыл яғынан әйләнеп ҡайта алмай ыҙалана. Был минутта уның күҙ алдына атаһы килеп баҫа. Уның ауыр, етди эшенә нисек тә ярҙам итә алмауына эсе бошоп тора. Унан ҡапыл яҡты өмөт саҡҡыһы ҡабынып киткән ҡарашын дуҫына йүнәлтә:

— Һинең юрислеккә уҡыуың бик һәйбәт әле! Юҡһа беҙҙең волоста әле булһа Хитровтар, Әбделмөслимовтар тоҡомо юрислек итә бит... — тип етди һөйләшеүгә күсеп китә. — Ауыр әле беҙҙә яңы, йәш көрәшселәргә...

— Атайым да миңә шулай тип яҙа, — ти Алеша ла, етди итеп. — Ничего, дуҫ. Тиҙҙән бөтә урында ла үҙ кадр-

ҙарыбыҙ ултырыр. Күрәһең бит, йәштәр нисек уҡырға кереште! — тип Байрастың яурынынан ҡағып ала.

Дуҫтар көлә-шаяра урамға сығалар. Тап бынан ике йыл элек Өфөлә йөрөгән шикелле, Ҡазан урамын ҡыҙырып китәләр. Ял көнө булғанғалыр, урамда халыҡ бигерәк күп. Ҡазан әлегә Байрас күргән ҡалалар менән сағыштырғыһыҙ ҙур һәм йәнле ине. Әленән-әле осрап торған сағыу, шат тауышлы йәштәр, студенттәр төркөмө был йәнлелеккә тағы ла йәм өҫтәй, ҡарт ҡаланы яңыртып, йәшәртеп ебәрә. Береһе яҙғы күк кеүек зәңгәр, икенсеһе муйыл кеүек ҡара күҙле, мыҡты кәүҙәле һомғол был ике егет тә, күрәһең, ҡалаға шундай уҡ яңы, яҡты төҫ өҫтәүселәрҙер. Үткән-һүткәндәр ҡыҙыҡһынып ҡарап китә, айырыуса ҡыҙҙар йылмайып керпек һирпмәй үтә алмай, ә был ике егет әйләнә-тирәгә һоҡланыулы һәм ҡыуаныслы ҡараш ташлап сәйәхәттәрен дауам итәләр. Йөрөй торғас, Байрас уҡыған хәрби мәктәпкә лә барып етәләр.

— Бығаса училище Ҡабан күле буйындағы Ҡарғапул казармаһында булған. Быйыл ғына Кремлгә күскән, — тип Байрас та ҙур ҡәнәғәтлек менән үҙенең уҡыу йорто хаҡында һөйләргә кереште. — Юҡһа һиңә барып йөрөргә бик алыҫ булыр ине.

Қазарма Алешаға үҙе үҫмер саҡта, граждандар һуғышы осоронда кисерергә өлгөргән хәрби тормошто бер тиклем хәтерләтеп ҡуйһа ла, бындағы ысын мәғәнәһендә урын-еренә еткереп ҡуйылған тәртип, таҙалыҡ, бөхтәлек сағыштырғыһыҙ, бигерәк тә бынауы көҙгөләй балҡып ятҡан паркет иҙәндәр баҫырға йәлләп торорлоҡ ине.

Байрас дуҫына үҙенең уҡыған урыны ла оҡшауын күргәс, тағы ла теремекләнеп, һөйләнсәкләнеп китте:

— Беләһеңме, ишеткәнең бармы, элек һалдаттар:

Қазарма бейек булһа ла,
Ҡоштар оя яһамай.
Ал булһа ла, гөл булһа ла,
Тыуған ергә оҡшамай, —

тип йырлағандар, ә бына миңә үҙебеҙҙең казарма оҡшай. Бик оҡшай, ниңә икән?! Тыуған ер кеүек яҡын!

Беләһеңме, граждандар һуғышы осоронда Ҡазан өсөн бик ҡаты һуғыштар барған. Шундай һуғыштарҙың береһендә ҡыҙылдар Ҡазанды ҡалдырып сығырға мәжбүр булғандар. Шул һуғышта Ишмурзин тигән бер башҡорт

ҡыҙыл командире үҙенең часе менән Ҡазан өсөн бик ҡаты һуғышҡан. Иң һуңғы патронғаса... Белдеңме... Үлгән, сигенмәгән...

Ҡоторонған аҡтар шул килеүҙә ялҡынлы татар революционере Мулланур Вахитовты ла язалап үлтергәндәр. Әлбиттә, ҡыҙыл ғәскәр аҡтарҙы тиҙҙән тар-мар итә... Ҡазан азат ителә... — тип ул да дуҫына синфи көрәш тарихе дәресендә ишеткән-белгәнен һөйләп алды. — Мин ул дәресте айырата яратып тыңлайым. Уҡытыусы бик шәп, һис тә ыҡ-мыҡ итеп, китапҡа, ҡағыҙға теклəп тороуҙы белмәй. Әйтерһең, ғилем уның ауыҙынан шишмә шикелле ағып сығып ҡына тик тора инде... Аптырарлыҡ... Ҡайҙан шул хәтле һүҙ табыла ла нисек шулай урынлы ғына килеп сығып тора икән уның ауыҙынан...

— Эй, дуҫ, һин дә тиҙҙән шулай телдәр булып китерһең әле! — тип мут көлөп ҡараны Алеша Байрасҡа. — Һөйләй белеүсегә был хәтле ғашиҡ булғас, һис шикһеҙ, үҙең дә шулай булырһың!

— Булмаҫ. Һөйләй белер өсөн күп күрергә, күп белергә кәрәк. Ә мин ни беләм?

— Өлгөрөрһөң әле, дуҫ!

Улар шулай көлөшә-һөйләшә хәрби училище менән дә танышып бөттөләр. Дуҫын оҙата сыҡҡанда, Байрас һүҙҙе үҙен күптән ҡыҙыҡһындырған шәхси яҡҡа борорға ла онотманы:

— Һин, дуҫ, кәләшеңде ҡасан күрһәтәһең әле? Ошо ҡалала врачлыҡҡа уҡый, тигәйнең, шикелле? Нисәнсе курста ул?

— Өсөнсөлә.

— Туйыңа саҡырырһыңмы?

— Һине лә саҡырмағас! — Алеша күңелле көлөп ебәрҙе. — Тик бик үк ашыҡма, дуҫ. Беҙ уҡыуҙы тамамламай тороп, өйләнешмәҫкә булдыҡ. Тормош талабы шулай.

Байрас дуҫына тағы бер яратып та, көнләшеп тә ҡарап алды:

«Бына бәхетле кеше. Уға һәр саҡ барыһы ла асыҡ, аңлайышлы...»

Алеша уға һынаулы ҡарап алды ла:

— Ә һеҙҙең Емеш менән ара нисек булып бөттө һуң әле? Аңлаштығыҙмы?

Байрас күңелһеҙ генә ҡул һелтәне.

— Әле үҙем дә шул хаҡта уйлап алдым... Һеҙ бәхетле, һөйөүегеҙ ҙа ябай, аңлайышлы, ә беҙ ирекле һөйөүгә өйрәнә алырбыҙмы-юҡмы, әйтеүе ҡыйын. Үҙҙәрен һатып, көсләп биреүҙе генә күреп үҫкән ҡыҙ үҙ ирке менән кейәүгә барыуҙы оятһыҙлыҡ, аҡылһыҙлыҡ һанамаҫмы? Был яңы ғәҙәткә өйрәнә алырмы ул? Бына шуға шикләнеп ҡуям әле мин.

— Ә һин уны онот. Давай, үҙеңде бына тигән бер рус ҡыҙы менән таныштырам! — тип шаяртты Алеша.— Беләһеңме, зәңгәр күҙле, һыу һылыуы кеүек мәрмәр һынлы... Етешмәһә, тик бер шул алтын тараҡ ҡына етешмәй... Юҡ-һа, әйтәм бит, һыуһылыу!..

Байрас дуҫына был юлы һоҡланып түгел, ғәжәпһенеп, хатта рәнйеп ҡараны.

— Ай-һай, һин ҡалай еңел генә...

— Бөттө, дуҫ. Һинең тойғоңдо һынау өсөн генә әйттем был һүҙҙәрҙе. Ғәфү ит... — тип, ҡабаланып кире сигенде Алеша. Унан бер аҙ тынып барҙылар. Унан Алеша тағы.— Һиңә бик сабыр булырға кәрәк улайһа. Бер тупаҫ аҙым бөтәһен селпәрәмә килтереүе бар. Емеште әҙерәк беләм бит мин... — тип һүҙ башланы. — Бер саҡ... Ялан аяҡлы малай саҡта, беҙ, сәүкә балалары шикелле баҫыу буйлап йүгереп йөрөгән бер көтөү ҡырағай малай, быҙау алып ҡайтып килгән Илсеғол ҡыҙҙарын пыр туҙҙырып ҡыуып киттек. Ҡыҙҙар белер-белмәҫ рус телендә беҙҙе әрләй-сырылдай ҡаса... Ә бер үтә арыҡ, кескәй генә ҡыҙ баҫҡан ерендә ҡатып ҡалған... Мин тал сыбыҡты болғай-болғай уға һуғырға, ҡурҡытырға тип югерәм, ә ул һаман тик тора! Мин һиңә әйтәйем, үҙе бәләкәс кенә, ҡара болот кеүек сәстәре арыҡ иңен ҡаплап ятҡан... Ә күҙҙәре... Был — Емеш ине. Мин атайыма эйәреп элек тә уларға барғылап сыға инем. Атайҙар дуҫ ине бит... Ул саҡта ла ошо кескәй ҡыҙҙың нәфрәтме, хәсрәтме тулы үтә моңһоу, иғтибарлы күҙҙәренә аптырап ҡарамай булдыра алмай инем... Ә был юлы мин шул күҙҙәр алдында ҡойолдом да төштөм бит, әй. Улар мине, әйтерһең, ергә ҡаҙаҡланы ла ҡуйҙы! Мин бер һүҙ ҙә әйтә алмай, сыбыҡты ҡайҙа йәшерергә белмәй, ошо өнһөҙ ҡараш алдында баҫып торҙом... Ә ул һаман ҡуҙғалманы ла, өндәшмәне лә... Шунан мин, үҙ ҡылығымдан үҙем оялып, ҡысҡыра-ҡысҡыра кире югерҙем:

— Малайҙар, теймәгеҙ ҡыҙҙарға! Хәҙер рус-башҡорт һуғышып йәшәр заман түгел!

Алеша, үҙенең көтмәгәндә балалыҡ иҫтәлектәренә бирелеп китеүенән уңайһыҙланған һымаҡ, уйсан ғына йылмайып ҡуйҙы.

— Хәҙер был күҙҙәрҙең магните тағы ла көслөләр, ә? Мин һинең хәлеңде аңлайым, дуҫ...

— Уны мин бик күптән, бала сағынан яратам, — тип ҡуйҙы Байрас та, уйланып. — Миңә бүтән бер ҡыҙ ҙа кәрәкмәй.

— Ҡәрәкмәһен дә! Емеш ул, минеңсә, тәрән, саф мөхәббәткә лайыҡлы ҡыҙ. Тик кескәйҙән ҡағылып-һуғылып үҫеү арҡаһында, кешеләргә ҡарата ситһенеү, ышанмау барҙыр унда... Шуға күрә ул һинән дә ҡурҡалыр, бәлки?

— Бәлки...

Байрас, бер аҙ тынып торғас:

— Әгәр Емеште ризалаштыра алһам, бынан ары уны бөтөнләй үҙ янымдан ебәрмәйем... — тип ҡуйҙы. — Ошонда уҡыр... Һин уҡыған университетҡа инер...

— Бик шәп булыр ине, дуҫ!

Байрас ҡапыл ҡабаланып китте:

— Бәй, минең увольнение сәғәте уҙып бара икән дә! Йә, хуш, һау бул, Алеша!

— Тағы кил.

— Есть, тағы килергә! — Хәрби курсант йылмайып честь бирҙе.

Был кисте Байрас Емешкә оҙон итеп хат яҙҙы.

«Емеш!

Һиңә хат яҙыу — стенаға борсаҡ бәреү менән бер бит. Яҙған бер хат яуапһыҙ ҡала. Шулай уҡ йәнһеҙме ни һин, Емеш!» — тип үпкә белдереп башлап китте ул хатын. Унан үҙенең хәрби мәктәпкә нисек килеп инеүе хаҡында яҙҙы. «Хәрби училищеғә алыу бара тигәс, беҙ, рабфактан унлап егет, ғариза бирҙек. Шулар араһынан бер мине генә алдылар. Бик ныҡ тикшереп, һайлап алалар икән. Командирҙәр мәктәбенә түгел, Ҡыҙыл Армия сафына ла бик һирәктәр генә эләгә хәҙер.

Ҡомиссиянан үтеп бөткәс, бер ҡарт врач хатта минең арҡамдан тыпылдатып һөйөп ҡуйҙы:

— Буйың-һының ҡойоп ҡуйған кеүек! Һәйбәт, ҡыҙыл командир шулай бөтә яҡтан матур булырға тейеш, — ти. Ул врач беҙҙең яҡ кешеһе икән. Башҡортостанда Совет власен урынлаштырыуға бик күп көс һалған. Ул инде хәҙер өлкән кеше. Ғаиләһе — ҡатыны, балалары рус кешеләре... Шулай ҙа ул ҡайһы бер ял көндәрендә йә бай-

рамдарҙа башҡорт йәштәренең йырсы, бейеүсе, ҡурайсыларын саҡырып ҡурай, йыр тыңлап, тыуған яҡтарын иҫкә төшөрөп алырға ярата икән. Мин дә бер тапҡыр унда булдым. Минең йырлауымды яратты... Емеш, бөгөн беҙ Алеша менән осраштыҡ. Ул миңә Владимир Ильич Ленин Ҡазан университетендә уҡыған саҡтарҙа унда беҙҙең яҡтан да бер егет уҡыуы, Ленин ойошторған студенттәр сыуалышында актив ҡатнашып, университеттән ҡыуылыуы хаҡында һөйләне.

Беләһеңме, Емеш, башҡорттарҙан да элек үк Ленин менән бер университеттә уҡып йөрөрлөк кешеләр булыуын белгәс, минең күңел ғорурлыҡ менән тулды...

Байрас хәҙер ҡалаға тәү килгән йылдағы кеүек нимә яҙырға, нисек яҙырға, тип аптырап ултырмай, һәр хат һайын уның уй-фекере камилләнә, ҡәләме ҡыйыуыраҡ, ышаныслыраҡ була бара. Шулай ҙа әле үҙенең төп уйын яҙырҙан алда оҙаҡ ҡына икеләнеп ултырҙы. Ахыр күңелендә һаман тәрәнерәк тамыр йәйә барған хыялын ҡыйыуланып ҡағыҙға төшөрҙө:

— Емеш, һиңә лә ошонда килеп уҡырға ине... Бер ҡалала булыр инек...»

## II

Үткән йәй, ширкәтте колхозға әйләндереп, яңы ағзалар менән ҙурайтҡан йыл, ямғырһыҙ килде. Яңы, йәш хужалыҡ төшөмдө башҡа йылдарҙағыға ҡарағанда кәм алды. Дөрөҫ, ширкәт ағзаларын, бер йыл төшөм кәм булыуға ҡарап, элекке замандағы шикелле аслыҡ, бөлгөнлөк йөҙәтмәй. Уларҙың күбеһенең кәм тигәндә тағы бер йылға етерлек игене бар. Тик бына артелгә яңы инеүселәрҙең кәйефенә, йәш артелдең авторитетенә уның кире йоғонтоһо һәр аҙымда күренеп кенә тора тиерлек. Бесәне лә үҫмәне бит әле, исмаһам, ә һуң көҙө ҡайһылай килде: август уртаһынан алып ҡар яуғансы ямғыр ҡойҙо. Барлы-юҡлы игенде йыйып алырға бирмәне. Инде хәҙер ҡышы һалҡын, оҙаҡ килә. Март аҙағы, ә яҙҙың тыны ла һиҙелмәй.

Етмәһә, һәр бер яңылыҡҡа яла яғырға торған яуыз ниәтле кешеләр һаман үҙ эшен итә. Бөтә революция өсөн һис юғы яңылыҡты башлап йөрөүселәрҙең береһенән генә булһа ла үс алып һыуһын ҡандырырға әҙер кешеләр бар...

Иштуған, тормоштоң ошондай ҡатмарлы яҡтары хаҡында уйлап, дәрестән һуң тәҙрә төбөндә буран олоуын тыңлап торҙо, ә бит ҡатыны:

«Эшең бөткәс тә ҡайт. Аш әҙерләйем. Атайымдарҙы саҡырҙым. Улыбыҙға исем ҡушыу хаҡында кәңәшербеҙ», — тип киҫәтеп ҡалғайны. Ысынлап та икенсе улдары тыуыуға ни һан көн үтте. Иштуған һаман уға исем хаҡында уйларға ваҡыт тапмай йөрөй. Дөрөҫөрәге, ҡатынының был уңай менән ата-әсәһен саҡырырға теләүе уның эсен бошора, ниндәй ҙә булһа сәбәп табып, был көндө һуңлатырға мәжбүр итә ине. Иштуған, үҙе өҫтөнән уҙған көҙ волкомға бирелгән ҡултамғаһыҙ яҙыуҙы хәтерләп, тағы бер әсенеп алды.

«...Ҡайны булғас, мәзинде артелгә алдырҙы. Артелдә уға иң йылы урын да табып бирҙе. Ҡәзә мәзин хәҙер ҡырын ятып айыу шикелле юкә балы менән һыйланып көн итә...» Уҡыусы ҡулъяҙмаһы. Тимәк, кемдер уның үҙ уҡыусыһын уға яла яҙырға файҙалана? Ни хәтле ҡәбәхәтлек! Әле ҡайтһам, «үҙе уҡытыусы, ә мәзин менән ҡунаҡҡа йөрөшә», тип яҙырҙар. Ни эшләргә?!

Эйе, шулай, тап хәҙерге кеүек ул көндө лә Иштуған уйланып-бошоноп йөрөнө-йөрөнө лә, ҡапыл түҙемен юғалтып, ҡайныһы янына умарталыҡҡа югереп китеп барҙы: «Барайым, яңғыҙ сағында күреп әйтәйем: үҙе теләп артелдән сыҡһын. Уның өсөн һүҙ ишетеп, халыҡ алдында абруй төшөрөп йөрөү етәр...»

Ул шулай ашыға-ҡыҙа барып еткәндә, Әхмәтсафа ҡарт умарталар янында ниҙер эшләп, нимәлер төҙәтеп йөрөй. Үҙе ямғырға күшегеп, өшөп бөткән.

— Ҡайным, бынауындай йонсоу көндә ниңә өйҙә генә ултырып тормайһың, — тип мөмкин хәтле йомшаҡ тауыш менән өндәште Иштуған уға.

— Умарталарға һыу үтмәйме тип, япмаларын ҡарап йөрөйөм. Яндарын таҙартам. Бал ҡорттары бит улар әҙәмдән дә наҙлыраҡ. Таҙалыҡ яраталар... — тип, Әхмәтсафа ҡарт кәпәсенән, кәзә һаҡалынан семберҙәп торған ямғыр тамсылары аша йылмайып, кейәүенә ҡараны. — Унан бында миңә рәхәт. Бал ҡорттары янында булыу, улар менән серләшеү оҡшай миңә, кейәү...

«Бахыр ҡарт, үҙ эшенән ҡәнәғәт, шат, ә уның өсөн кемдәрҙер минең партия билетемә тап төшөрөргә йыйына», — тип тағы һыҙланып алды Иштуған, ләкин, ниңәлер, бының өсөн ҡартҡа асыуы килмәне, киреһенсә, мә-

зинлеген ташлап, артель эшендә ихлас эшләп йөрөй башлағас, ул үҙ күңелендә ҡартҡа бер ниндәй ҙә екһенеү, ситһенеү ҡалмауын тоя. «Бына бит, бынауы бысҡаҡ ямғырҙа ла дөйөм эш өсөн тырышып йөрөй бит, бахыр...» Ул нуры һүнеп бөтөп барған күҙҙәрендә ниндәйҙер эске ҡыуаныс балҡытып йылмайып ҡараған саҡта, Иштуған выждан ғазабы һымаҡ тойғо һиҙеп уңайһыҙланып та китә: «Йә инде, ҡыҙын урлап ҡасҡан өсөн ҡарттар мине ғәфү итергә үҙҙәрендә көс таптылар, ә мин уларҙы нисәмә йыл ситкә тибәреп йөрөттөм...»

Әхмәтсафа ҡарт хәҙер үҙ тормошонан, ысынлап та, бик риза ине. Ҡолхоз ағзаһы булыу уға ике ҡыуаныс алып килде: беренсенән, уны хәҙер Ҡәҙә мәзин тигән ҡушамат менән түгел, ә ысын исеме менән Әхмәтсафа ҡарт тип атап йөрөтәләр. Үҙ исемен ишеткән һайын, ҡарттың башы күккә тейә. Икенсенән, ул үҙен хәҙер кәрәкле кеше итеп тоя. Ҡешеләргә кәрәкле эш башҡара. Дөрөҫ, әлегә умарталыҡ ҙур түгел. Бөтәһе егерме умарта. Башлап Әхмәтсафа ҡарт үҙенең ун умартаһын бирҙе.

— Артелдеке булһа — беҙҙеке лә булыр. Беҙгә, ҡарттарға, күпме бал кәрәк? — тине ул.

Бибисара абыстай ҡул ғына һелтәне.

— Бирә генә күр. Миңә тиһә, бөтә донъяңды ла бир. Тик Айһылыуымдан ғына айырма.

Хисбулла ла биш умартаһын тапшырҙы. Ҡалған умарталар башҡа ағзаларҙан йыйылды. Ана шулай артель умарталығына нигеҙ һалынды. Эш — нигеҙҙә. Нигеҙе булғас, йорто төҙөлә уның.

...Көн һаман томһалана барҙы. Ҡарт юкә ағастары, өҙлөкһөҙ һибәләгән бысҡаҡ ямғырҙың теленә төшөнөргә тырышҡандай, ботаҡтарын эйеп, шымып ултыралар. Ямғырға кинәнеп йәшәреп ҡалҡҡан ҡурпы ҡыяҡтарында көмөш тамсылар һулҡылдашып ята. Сауҡа төптәрендә ваҡ төҫһөҙ көҙгө сәскәләр йымылдай. Иштуған йәйге ҡоролоҡта ҡурылған ер өҫтөндә яңырыу, туйыныу тойоп кинәнеп тирә-яҡҡа күҙ ташлап тора. Сағылтау битенә сәселгән арыш баҫыуы йәм-йәшел хәтфә менән ябылған кеүек күпереп ята. Иштуғандың күңеле баяғы шыҡһыҙ уйҙарҙан арынғандай була.

— Алдағы йыл иген бик ныҡ уңасаҡ, кейәү. Ваҡытында сәсеп кенә ҡалырға кәрәк! — ти ҡарт.

— Шулай, тиһеңме? — тип һынап ҡарай уға Иштуған. Унан, күңеле күтәрелеп: — Ай-һай! — тип ҡуя. — Умар-

талыкты бик алыҫтан уратып алғанһығыҙ икән. Юкәлекте тотош биләгәнһегеҙ.

— Үҙең ебәргән уҡыусылар, комсомолдар шулай кәрҙәләп бирҙеләр, кейәү, — ти ҡарт, тағы ла кинәнеп. — Һәттигәнсе ҡойма әҙер булды ла ҡуйҙы. Күмәк көс бына ниш-ләтә?

Ҡайныһының үтә ихлас тәтелдәүе Иштуғандың кәйефен тағы боҙа яҙып ҡуйҙы. Ул күп һөйләнгәнде лә, татлы телләләнгәнде лә яратмай ине — «ихлас күңелдән ҡыуанамы был?!» тип ҡартҡа ҡырын ҡарап алды ла, бошонғандай итеп:

— Артыҡ киңерәк түгелме? Егерме умартаң бында күренмәй ҙә бит! — тип ҡуйҙы.

Ҡарт, күрәһең, кейәүенең кәйефендәге үҙгәреште тойманы, һаман баяғыса, бала кеүек ҡыуанып һөйләүен белде:

— Улай тимә, кейәү. Бал ҡорто бик үрсемле нәмә ул. Ҡарап тор, күп тә үтмәҫ, беҙ уны йөҙ башҡа еткерербеҙ. Ул саҡта юкәлегең тар ҙа булып ҡалыр. Әхәт улым әйтә, юкәлек тирәһенә көнбағыш, ҡарабойҙай сәсеп ебәрербеҙ әле, ти. Тағы шунда әллә ниндәй баллы үләндәр ҙә була, ти. Шуларҙы ла сәсербеҙ. Әйҙә, ти, элек юнләп шәкәр ҙә күрмәгән ярлы-ялпы артелдә тирләй-бешә баллап сәй эсеп кинәнһен, ти...

Иштуған уға тағы һынаулы ҡарап алды. «Юҡ, әйтә алмайым. Белмәйем. Айһылыу ҙа белмәһен, яла яҡҡан ҡағыҙ хаҡында әйтеп, уларҙың ҡыуаныcын бөтөрөүҙән мицә еңеллек киләме ни? Эйе-эйе, ни күрһәм дә, бер үҙем күрәйем. Һин артель ағзаһы була алмайһың тип, ҡарт күңелендә кешене рәнйетмәйем...» — тип уйлап, кире боролоп ҡайтып китте...

Әле шул саҡта, ҡатынының атаһын урынһыҙға рәнйетеүгә барып етмәүен, нигеҙһеҙ шиктәрҙән өҫтөн булып ҡала алыуын хәтерләгәс, Иштуғандың бошонҡо уйҙары тағы таралып киткәндәй булды, ул йәһәтләп мәктәптән сыҡты. «Ҡайтырға кәрәк. Унда бит мине бына тигән ике малай ҙа көтә ләбаһа!.. Үҙемдең малайҙарым...»

Өйҙә уны күптән көтәләр ине шул:

— Тағы оҙағыраҡ йөрөһәңсе! — тип шелтәләп ҡаршыланы Айһылыу. — Ҡит, әйтеп ебәрмәһәм ни асыу...

— Йә, ярар, кейәү бик ваҡытлы ҡайтты, — тип Биби-

сара абыстай уртаға төштө. — Ит тә әле генә бешеп сыҡты.

— Әйҙә, кейәү, түрҙән уҙ, — тип Әхмәтсафа ҡарт та, ҡуҙғала биреп, ғәҙәтенсә, һаҡалын семеткеләп алды. — Эш кешеһенең төрлө ваҡыты була инде уның.

Берәй нәмәне ҡаты кисереп, уйланып ала ла, аҙаҡ бер ҡарарға килгәс, күңеле күтәрелеп китә торған ғәҙәте был юлы ла Иштуғанды ҡотҡарҙы. Ул ҡатынының шелтәһен ишетмәгән һымаҡ асыҡ йөҙ менән аш янына уҙҙы.

— Йә, ейәнегеҙгә ниндәй шәп исем әҙерләнегеҙ? — тип, ҡарттарға уйынлы-ысынлы мөрәжәғәт итеп, һүҙгә тыныс юнәлеш биреп ебәрҙе. Бындай иғтибарға күңелдәре күтәрелгән ҡарттар бик ихласланып сабыйға исем эҙләргә керештеләр.

— Ҡейәү, беренсе улыңды Салауат батыр хөрмәтенә Салауат тинең, бик һәйбәт. Инде быныһын олатаһының исеменә оҡшатып ҡушыу фарыз, — тип тәүге һүҙҙе Бибисара абыстай башланы. — Олатаһының хөрмәтенә Әхмәтвафа тип атайыҡ. Әхмәтсафа — Әхмәтвафа. Ҡалай һәйбәт килеп тора!

— Минеңсә, ейәнде ҡартатаһының — Байгилде ҡоҙаның хөрмәтенә, ваҡытһыҙ донъя ҡуйған батыр һалдат исеменә оҡшатып, Яугилде тип атау фарыз, — тип Әхмәтсафа ҡарт әбейенә ҡаршы төштө. — Байгилде — Яугилде. Борон ошо беҙҙең яҡтарҙа Яугилде тигән бик шәп батыр ҙа булған. Батша-байҙарға ҡаршы яу сабып ғүмер иткән... Бәс, шулай булғас, беҙҙең ейәндең исеме тағы ла ҡәҙерлерәк булып китәсәк...

Иштуған баланан һуң айырыуса һылыуланып, яңы тулған ай кеүек нурланып киткән ҡатынына яратып ҡараны:

— Әсәй кеше ни әйтер бит әле...

— Мин ни әйтәйем... — тине Айһылыу, һаман иренә үпкәле ҡарап. — Улын табып биргәс тә еткән.

— Уныһы ла дөрөҫ, — тине Иштуған, ихлас көлөп.— Улы булғас, исемен табыуы ҡыйын булмаҫ та...

— Ҡейәү исемде табып та ҡуйғандыр әле, — тип Бибисара абыстай ҙа йәштәргә алмаш-тилмәш ҡарап алды, ә беҙ үҙебеҙсә баш ватып ултырған булабыҙ.

— Дөрөҫ әйтәһең, ҡәйнәм. Тапҡанмын. Азамат була уның исеме! — тине Иштуған. — Йә, Айһылыу, һиңә оҡшаймы?

Айһылыу иркә генә йылмайып ҡуйҙы.

— Матур исем.

— Һәйбәт исем, — тип Әхмәтсафа ҡарт та шунда уҡ риза булды. — Бер саҡ Уралда, Ирәндек буйында, Азамат атлы бик ғәйәр батыр йәшәгән. Илгә именлек, халыҡҡа ирек даулап бик батыр һуғышҡан. Ҡурайсылар, йырсылар уны данлап йыр сығарған. Ул йырҙы «Азамат» көйө тип атағандар. Ирәндек буйы башҡорттарында был әле лә телдән төшмәй йырланып йөрөй тиҙәр, — тип тағы бер тарих һөйләп алды. — Һинең улың да шундай аҙамат ир булһын, — тине.

Был һүҙҙән һуң Иштуғанға Азамат тигән исем тағы ла матурыраҡ, яҡыныраҡ тойолоп китте, ә Бибисара абыстай сәңгелдәктә ятҡан кескәй генә йомарсаҡты тынылдатып һөйөп уятырға тырышты:

— Азамат, эй, Азамат, уян! Исемеңде ишет, төшөн! Исемеңә хас булһын ҡылған эшең!

— Һин бәхетле кеше, кейәү, ике улың булды. Мин үҙем бер улһыҙ зарығып көн иттем. Ҡешеләр ул һөйгәндә, эстән көйөп ғүмер үтте, — тип көрһөнөп ҡуйҙы Әхмәтсафа ҡарт. — Ирҙәр уландары менән маҡтанғанда, миңә өндәшмәй генә көйөнөп түҙергә тура килде...

— Уның ҡарауы, хәҙер ике ейәнең булды! — тине Иштуған, шат көлөп. «Түҙгән — түш ейәр», — тип бушҡа ғына әйтмәгәндәрҙер боронғолар...

— Шулай булды. Аллаға шөкөр.

— Төклө аяҡтары менән килһендәр инде, балаҡайҙар, — тип ҡуйҙы Бибисара абыстай ҙа. — Бәхет менән, тигеҙлек, именлек менән үҫтерергә яҙһын.

* * *

Сәйҙән һуң Иштуған, ошо минутта күңелен солғап алған оло ҡыуаныстан үҙалдына һөйөнә-көлә, ауыл Советына югерҙе.

— Малайҙы тыуыу кенәгәһенә йәһәтерәк теркәтеп ҡуйырға кәрәк! Азамат Иштуған улы Ирьегетов! Ҡолаҡҡа ҡайһылай ятып ҡына тора бит әле. Салауат, Азамат! Ну, Айһылыу, шәп тә бисә һин! Ике малай таптың ла бирҙең бит, ә?

Бер уйлаһаң, хәҙер малай йәки ҡыҙ табыуҙың ул хәтле айырмаһы ла юҡ, әлбиттә. Барыбер бала. Бына беҙ тыуған саҡтарҙа ул малайҙың баһаһы ҙур ине. Ни өсөн

тиһәң, бирҙән, ғаиләгә эш ҡулы өҫтәлә, йәи башына ер артыҡ тейә, етмәһә, ун биш-ун алты йәшкә еттеме, кәләш ала — өйгә тағы бер эшсе ҡулы арттыра... Ҡыҙ нимә? Кеше ҡатыны. Үҫеп етә лә китә лә бара... Шулай уйлайҙар ине беҙҙең атай-олатайҙар.

Хәҙер малайҙың ундай өҫтөнлөктәре юҡ юғын. Кәрәкмәй ҙә. Шулай ҙа малай ғорур яңғыраған һымаҡ бит әле һаман да. Малай! Етмәһә, ике малай. Салауат, Азамат!»

Иштуған барып ингәндә, ауыл Советендә Баҙыян еңгә менән Әхәт кенә ултыра ине.

— Һаумыһығыҙ, дуҫтар! Бөгөн күрешмәгәйнек тә, шикелле. Әхәт, һинең кәйефең юҡ һымаҡ. Ҡыҙарынғанһың, — тип Иштуған көр тауыш менән һөйләшеп түргә уҙҙы. — Һалҡын алдырҙыңмы әллә?

— Алдырған. Тик һалҡын түгел, ә ялҡын! — тип көлөмһөрәп, Әхәт өсөн Баҙыян еңгә яуап бирҙе. Күрәһең, ике арала барған бәхәс ярһыуынан арына алмай дауам итте: — Ана, ҡара һин уға. Өйләнәм, ҡыҙыл туй яһайбыҙ, ти. Тапҡандар, алйоттар, туй яһар саҡты!

Иштуған аптырап та, көлөмһөрәп тә берсә Әхәткә, берсә Баҙыян еңгәгә ҡараны.

— Ниңә, өйләнеү ата-бабанан ҡалған изге эш бит, еңгә. Әхәткә, ҡарт һалдатҡа, күптән ваҡыт. Быны өсөн уны орошорға түгел, ҡотларға кәрәк. Әхәт дуҫ, бир ҡулыңды! Тик кем менән ҡотларға?

Баҙыян еңгә туҙып китте.

— Туйҙы борон-борондан көҙ яһайҙар. Аҙыҡ-түлек мул, мал көр саҡта... Хәҙер яҙ. Етмәһә, ниндәй яҙ? Һалҡын, һүрәнке. Мал-тыуар ағас ҡайырыһы кимереп, йәш ботаҡ сәйнәп йәшәй. Кеше йонсоу. Ҡалай итеп тамаҡ аҫырар әмәлен белмәй йөҙәй... Кисә Мөҡим менән Хатип: «Атымды бирегеҙ. Кәсеп эҙләп сығып китәм. Колхозсы булам тип, балаларҙы астан үлтерер хәл юҡ», — тип килделәр үҙенә, ә ул, алйотланып, өйләнәм, тип ултыра!

— Эйе, колхозга ҡаршы отҡо таратыусыларга ем бар быйыл, — тип бошоноп китте Иштуған да. — Дошмандар беҙҙең ваҡытлы ауырлыҡтан файҙаланып ҡалырға маташа... Мөҡим менән Хатип агайҙар ҙа, күрәһең, шул отҡоға ҡапҡандар...

Әхәт ялыныслы ҡарашын дуҫына юнәлтте.

— Йә, һин дә өркөп китмә әле, исмаһам.

— Ә мин һеҙҙе көҙһөҙ загс кенәгәһенә яҙмайым, — тип

һыкышты Баҙыян еңгә. — Минән һеҙгә аҙаҡҡы һүҙ был — белегеҙ!

— Загсһыҙ өйләнергә тура килер шул, — тине Әхәт, мут ҡына көлөмһөрәп. — Ҡалай итәһең... Ҡәйнәң власть булгас...

— Мин ҡыҙыма загсһыҙ кейәүгә барырға рөхсәт итмәйем!

Шул саҡ ҡына Иштуған был һөйләшеү буласаҡ кейәү менән ҡәйнә араһында барғанын төшөнөп алды. Һәм тағы ла ҡыҙыҡһынып һүҙгә ҡатнашып китте.

— Сабира хаҡында барамы ни һүҙ?! Былай булгас, Баҙыян еңгә, бөттө. Ҡарышма. Ризалығыңды бир. Бер нәмәгә ҡарамай, ҡыҙыл туй яһайбыҙ. Үҙем гөрләтеп өйөштөрам, Әхәт дуҫ! Тимербай ағайымдың ҡыҙын алырҙай берҙән-бер егет — ул минең Әхәт дуҫ. Аңланыңмы, еңгә! Йә, әйт, риза, тиген!

— Әсә күңеле таш түгеллеген һиҙәһегеҙ һеҙ, шайтандар! — Баҙыян еңгә лә, инде йомшара төшөп. — Тәки үҙ һүҙҙәрен итәләр бит, ә?! — тип ҡуйҙы.

— Тимәк, риза?

— Риза!

Дуҫтар ҡыуаныстан уҡтай атылып урамға сыҡтылар.

— Ҡара әле, Әхәт, һин бер саҡ, мин Айһылыу өсөн янып-көйгән саҡта: «Һөйөү ул — исәрлек! Ҡыҙҙар ҙа булған икән кеше. Мин бер ҡасан да ундай ахмаҡлыҡ менән баш әйләндермәйәсәкмен», — тигәйнең, шикелле, ә? — тип Иштуған дуҫының яурынынан ҡосаҡланы. — Хәтерләйһеңме?

— Йәшлек... — тип ҡуйҙы Әхәт. — Йәшлек — тилелек. Унан һуң, мин Сабирамды тапмағайным бит әле ул саҡта.

Иштуған дуҫына һынаулы ҡарап алды:

— Әхәт, ысынын ғына әйт әле, Заһираға һинең ҡараш нисек ине? Ул һиңә ғашиҡ икән, тип ишетеп ҡалғайным мин.

— Заһирағамы?.. Матур ҡыҙ...

— Шунан?

— Шул ғына. Минең тарафтан башҡа бер ни ҙә юҡ, а ул һуңғы ваҡытта хат артынан хат ебәреп йөҙәтте. Просто, уңайһыҙ...

— Ҡыйыу ҡыҙ...

— Хәҙер, Сабираға өйләнергә йөрөүемде белгәс, хатта ауырып йығылған, тиҙәр. Мин бит малай түгел. Унан

үҙемде яраттырырға ишара ла яһағаным булманы. Үҙең беләһең, мин синфи яҡтан сит тоҡомдо күралмайым...

— Шулаймы...

Иштуған уйсан ғына көлөмһөрәп ҡуйҙы:

— «Әсәһен бик маҡтамайҙар, ҡыҙын алаһымы икән?» — тигән йырҙы иҫеңдә тотаһың инде, ә?

— Заһираның әсәһе, киреһенсә, һәйбәт кеше ине. Оноттоңмо ни, Айһылыуыңды ҡулыңа кем тоттороп ебәрҙе?

— Дөрөҫ, һәйбәт кеше ине Шәмсиә еңгә. Бәхетһеҙ булды... Шулай ҙа һин Заһираны, сит тоҡом, тиһең инде, ә? — тип Иштуған һүҙҙе тағы үҙен борсоған яҡҡа борҙо.

— Әлбиттә, күрәләтә нисек шул Әхмәтша, Шымбай кеүектәр менән туғанлашаһың?

— Заһира һуңғы ваҡытта бик бойоҡто, баҫылды. Элек бит ул, үҫмер сағында, ут кеүек ине. Хәҙер танымаҫлыҡ... Баҡтиһәң, мөхәббәт үҙгәрткән икән, бахырҙы... Шулай бит?

— Белмәйем. Иғтибар иткәнем юҡ.

— Мине һәр кемдең яҙмышы ҡыҙыҡһындыра, ә Заһира — минең элекке уҡыусым да бит әле.

— Ә минең бер кемем дә түгел.

— Тимәк, һин, ысынлап та, уны яратмайһың? Юҡһа мөхәббәттә сығыш яғын уйлап тороп булмайҙыр ул...

— Булалыр. Тейештер. Мин хатта уны ятһам да, алмаҫ инем.

— Юҡ, һин уны яратмайһың.

— Дөрөҫ. Яратмайым.

— Шулай, тиген! Улайһа, Сабира өсөн шат. Һин уны ысын яратып өйләнәһең икән, сығышына ҡарап ҡына түгел...

— Ә һинең шигең бар инеме ни?

— Шикләнмәҫ өсөн белергә кәрәк бит.

— Белдереп һөйөшөп йөрөргә мин бит хәҙер йәш кеше түгел... Уңайһыҙ. Етмәһә, Заһираның ҡылығынан уңайһыҙ... Бына шуға өйләнеүҙе йәһәтләргә булдым да. Юҡһа ни, быға са түҙгәнде, Баҙыян еңгә ҡуйған срокка хәтле лә үленмәҫ ине.

— Дөрөҫ уйлайһың, дуҫ. Йә, хуш. Мин киттем.

— Ҡайҙа?

— Сельсоветка. Мин бит унда улымды яҙҙырырға тип барғайным. Һинең өсөн ҡыуаныстан уны ла онотоп сығып югергәнмен.

— Миңә лә тиҙерәк кәләштән һөйөнсө алырға кәрәк.
— Сабираны минең исемдән ҡотла. Иштуған ағайың ҡыҙыл туй ойоштороуҙы үҙ өҫтөнә алды, тиген.

### III

Емешкә бөгөн уҡыу сәғәттәре, ниңәлер, бик оҙаҡҡа һуҙылған кеүек, уҡытыусылар ҙа үтә һүҙсәнләнеп, сытырман шикелле, үҙ дәрестәренә сат йәбешеп ятҡан кеүек тойолдо. Етмәһә, дәрестәрҙең дә бит әле унын күңеленә ятып бөтмәгәндәре генә...

Һөңгө шикелле осланып барып бөткән ҙур танаулы, бәләкәс күк күҙле Цымлянский, дәү кәүҙәһен һалпаңлатып, ишекле-түрле йөрөй-йөрөй, логарифм линейкаһы менән нисек эш итергә икәнде аңлатырға тырыша. Линейка өҫтөндәге ҡауырһын һымаҡ ҡаптырманы төрлөсә шылдырып, кәрәкле һанды нисек еңел табыу юлын төшөндөрөп ыҙалана, ә Емешкә был линейка нәҙек, йоҡа таҡтанан башҡа бер нәмә лә түгел. Ғөмүмән, унын математикаға бер ҡасан да ихласлығы булманы. Был дәрестәр уға тормоштан алыҫ, хатта кәрәкһеҙ тойола. Шуға күрә ул алгебра, геометрия, тригонометрия дәрестәрен әҙәбиәт, тарих, истмат, диамат, политэкономия, йәки тәбиғәт фәндәрен яратҡан шикелле үк бирелеп уҡый алмай, ә насар билдәһе алмаҫ өсөн йәки икс, игрек, зет, параллелепипед, перпендикуляр, биссектриса, параллелограмм йәки синус, косинус, тангенс, котангенс кеүек әйтелеше мәҙәк тойолған һүҙҙәр күп булған өсөн ҡыҙыҡһынып ҡына өйрәнә ине. Әле инде бына логарифмдән ул бөтөнләй ҙә ҡыҙыҡ тапманы. «Уны ҡулланып эш итә торған ниндәй мәсьәләләр осрауы мөмкин әле беҙгә?» — тип екһенеп, ҡарашын тәҙрә үтә баҡсаға, бөрөләре тулышҡан һылыу тирәктәргә күсерҙе. Эйе, Емеште, бөтәһенән элек, кешелек тарихе ҡыҙыҡһындыра: кешеләр нисек йәшәгәндәр, нисек көрәшкәндәр, ниндәй философик ҡараштар булған, донъяға материалистик, диалектик ҡараш ниндәй ҡаршылыҡтар, көрәштәр аша барлыҡҡа килгән, бөтә яҡлап иң ғали юғарылыҡҡа күтәрелгән, иң бәхетле кешеләр йәшәй торған коммунизм йәмғиәте нисек булырға тейеш? Унын өсөн ниндәй көрәш бара?!

Емеш, уйланып ултыра торғас, уҙалдына ғына йылмайып ҡуйҙы. Тап ошондай яҙғы бер көндө, ҡояштың өҙөлөп тышҡа саҡырыуына ла ҡолаҡ һалмай, тырыша-

тырмаша Маркстың «Капитал»ын өйрәнеп ултыра ине ул былтыр. «Нимә ул рента?» «Өҫтәлмә ҡиммәт нимә?»

Эйе, кешелек йәмғиәтенең үҫеш тарихенә бәйләнгән бөтә нәмә үтә лә ҡыҙыҡһындыра шул Емеште, хатта утопист-социалистәр, уларҙың кеше тормошон яҡшыртыу тураһындағы матур хыялдары ла ят түгел уға. Улар ҙа бит был ауыр, хәйерсе тормошто яҡшыртыу, кешене бәхетле итеү хаҡында ысын күңелдән ҡайғыртып уйланғандар... Кеше һәр саҡ уйлаған, яҡшыға, яҡтыға ынтылған, шуның өсөн көрәшкән... Бер ҡасан да үҙенең ҡыҙғаныс хәле менән килешеп йәшәмәгән. Моғайын, тәүтормош кешеләре лә үҙҙәренсә матурҙы, яҡшыны, яҡтыны хыял иткәндәрҙер әле. Әгәр кеше, дин ҡушҡанса, бөтә ярҙамды алланан ғына көтөп, ҡул ҡаушырып ултырһа, янмаһа, көймәһә, көрәшмәһә, йәмғиәт хәҙерге үҫешкә килеп етер инеме ни...

Арттан кемдер бәләкәй кенә ҡағыҙ ырғытып, Емештең уйын бүлде. Унда болот һымаҡ ҡабарынҡы ҡалын сәс араһынан йомоҡ күҙҙәре менән суҡышы саҡ-саҡ ҡына күренгән турғай башы төшөрөп, аҫтына «философ!» тип яҙып ҡуйылған. Күренеп тора, Сабир йәки Хөрмәт һаман теге саҡта Ҡамилә апайҙан ишеткән һүҙ менән шаярта. Емеш, үҙенең ысынлап та онотолоп китеүенән уңайһыҙланып, ҡарашын уҡытыусыға күсерҙе. Шулай ҙа барыбер иғтибар менән тыңлай алманы. Уның уйҙары хәҙер Байрасҡа күсте...

Былтыр ҙа Емеш ауылға ҡайтманы. Тәү йыл уйлағанса, Шәмсиә менән икәүләп ҡалала ҡалдылар. Комсомолдың ҡала комитете уларға техникум шефлыҡ иткән пионер отрядендә вожатый эшен тапшырҙы. Байрас, тап беренсе йылдағы шикелле: «Ҡайтышлай Ҡаруанһарайға туҡтайым. Һине быйыл, һис һүҙһеҙ, үҙем менән алып ҡайтам», — тип яҙғайны. Ул килгәнсе, Емеш эшкә башланы. Күрәһең, Байрасты күреп тә, унан айырылып тороп ҡала алыуына ышанып етмәй ине.

Байрас әйткән көндә Ырымбурға килде, ҡыҙҙы киноға, театрға, баҡсаға саҡырҙы, йәйҙе ауылда, Оло Эйек буйында бергәләп үткәреүҙең ни хәтле күңелле буласағы хаҡында ярһып-ярһып һөйләне, уны бер нисек тә күндерә алмағас, бошоноп ҡайтып китте. Емеш, үҙ-үҙенә аптырап, эстән ут йотоп тороп ҡалды: «Ни өсөн шулай ҡыландым? Йә, бер тапҡыр, һис юғы бер генә тапҡыр урамдан ҡушлап үтһәмсе уның менән?!» — тип үкенде.

ь бер аҙҙан тынысланды. Үҙенең ҡылығына ҡыуанды: «Әлдә йөрөмәнем. Әлдә ауылға ҡайтманым», — тине. Бында Сабир, Хөрмәттәр менән ул теләгәнсә һөйләшә, теләгән ергә ҡурҡмай бара ала хәҙер. Үҙен улар янында тиң иптәш итеп иркен тота, ә бына Байрас — икенсе. Эйе, бөтөнләй икенсе. Уны күреү генә түгел, тауышын ишетеү менән үк, Емеш, ниңәлер, ҡойолоп төшә. Ни әйтергә, ни һөйләргә белмәй, элеккесә томһая, телһеҙ ҡала. Күрәһең, Емеш бик нык яраталыр уны. Үҙенең уға булған йәшерен һөйөүенән ҡурҡалыр... Эйе, етмәһә, Байрас үтә ҡыйыу ҙа... Шул ҡыйыулығы менән бер саҡ Сағылтауҙа ҡосаҡлап ҡурҡытты ла бит ул Емеште...

Быйыл да ҡайтышлай туҡтаясаҡ. Емеш, уның һуңғы хатын хәтерләп, көлөмһөрәп ҡуйҙы: «Инде, ҡыҙыҡай, был юлы ла сығынсы тай шикелле үрһәләнеп тороп ҡала алмаҫһың. Мин һине боғалаҡлап булһа ла, алып ҡайтасаҡмын, көт тә тор! Иштуған ағайым да шулай ҡушты...» — тигән Байрас... Емеш уны Ҡазанға киткәне бирле күргәне юҡ әле. Үҙгәрҙеме икән? Хәрби кейем килешәме икән?..

Ысынлап та, хәрби мәктәп уны нык ҡына үҙгәртте лә, ахыры. Хаттарҙы элеккегә ҡарағанда баҙнатлыраҡ та, яҡшыраҡ та яҙа. Был хәл Емеште ҡыуандыра ла, ҡурҡыта ла: «Үҙенә баш эйҙереп ҡуймаҫмы ул бер саҡ...» Ә Емеш ауырлыҡтар аша килеп тапҡан азатлығын кемдер, ни менәндер, хатта мөхәббәттең алтын сынйыры менән булһа ла сикләүен, ярһыу күңелен мөхәббәт, ғаилә көртәһенә индереп бикләүен һис тә теләмәй бит...

«Ҡазанға үҙ яныма уҡырға килерһең, — тип яҙа бит әле... Үәт, биғәләш... Ҡөтөп тор... Мин Мәскәү университетенә барам ул! Был — минең әлегә бер кемгә лә әйтмәгән, әммә бер ҡасан да иҫемдән сыҡмаған изге хыялым. Һөйәһең икән — көтөрһөң...»

Бына тағы кемдер Емештең сәсенә ҡағылды. Күбәләк кеүек тауышһыҙ осоп уның алдына «Сәсән» журналы килеп ятты. Емеш ҡыуанып артына боролдо. Хөрмәт менән ҡараштары осрашты: эйе, журналды ул биргән. Моғайын, ошо тәнәфес ваҡытында ғына уҡыу залынан алғандыр. Өр-яңы журнал бит!

Емеш өҫтәл аҫтында йәшереп кенә аҡтара башланы. Һуңғы биттәрҙең береһендә үҙ хикәйәһен күргәс, аптырауҙанмы, ояльтыуҙанмы, йөрәге тынысһыҙ тулап китте, сикәләренә, ҡолаҡтарына, хатта ҡалын сәс араларына хәтле ҡыҙыу ҡан йүгерҙе. Тәнәфес етеүен, үҙе һөймәгән

оҙон дәрес үтеүен белдереп шылтыраған ҡыңғырау тауышын да ишетмәне, әллә ишетһә лә, тора алмай юғалып ултырҙы.

Бына Хөрмәт уның янына килеп баҫҡан. Сабир ҙә, гәҙәтенсә, бер тиклем мыҫҡыллы йылмайып, кеҫәгә ҡулды тығып ҡарап тора ине.

— Бәй, ҡараҡай, ниңә шул хәтле ҡыҙарындың? Мунса индерҙеләрме әллә үҙеңде! — тине ул, тағы ла мыҫҡыллыраҡ көлөп: — Ҡыуаныстан илап ебәрмә тағы!

Хөрмәттең йөҙөндә ғорур кинәнес балҡый.

— Йә, Емеш, күрҙеңме? Ҡалайыраҡ, ә? Өлкә журналында хикәйәң сыҡҡан бит, ә?! Ә һин ебәрмәйем дә ебәрмәйем тип, ҡарышып бер булғайның!

— Һай, кире ҡыҙ, кире ҡыҙ! — тип мәрәкәләне һаман Сабир. — Шул килелегең булмаһа, һин, Емеш һылыу, әллә ҡасан әҙәм булыр инең!..

— Был журналды, беләһеңме, Ғимранов ағай бирҙе. «Үҙең уҡы ла Гөлйемешкә тапшыр. Алһын, үҙендә һаҡлаһын», — тине.

Емеш тағы ла ҡыҙарына төшөп, оялсан йылмайып, һаман өнһөҙ-һүҙһеҙ ултыра бирҙе. Журнал өсөн дә, шундай дуҫтары булған өсөн дә сикһеҙ шат ине ул. Шул уҡ ваҡытта үҙ тормошондағы был ҙур ваҡиғаға нисек ҡарауын әйтһә, маҡтаныу һымаҡ яңғырап, дуҫтары алдында уңайһыҙ хәлдә ҡалыуҙан да ҡурҡа ине. Ҡыҙ ашыҡмай ғына урынынан торҙо. Журналды ҡултығына ҡыҫтырып, гәҙәттәгесә, шау-гөр килеп торған коридорға сыҡты, ә егеттәр һаман уның артынан ҡалманылар.

— Тәки бер ни ҙә әйтмәйһеңме, ҡараҡай! Был хикәйәне беҙ бит Хөрмәт менән икәүләп ебәрҙек, — тип инде ярым етди, ярым шаярыу тауышы менән Сабир һаман ныҡышып арттан эйәрҙе. — Ә һин, исмаһам, рәхмәт тә әйтә белмәйһең! Бына бит һин нисек ҡырағай! Эйе, ағайыңдарға рәхмәт тә юҡ, ә?!

— Бер уйлаһаң, һорап тораһы бармы ни? — тип Хөрмәт тә һүҙгә ҡатнашты. — Өлкә журналында хикәйәң сыҡһын әле! Кем ҡыуанмаҫ? Эйе бит, яҡташ?

Емеш егеттәргә оялсан ғына йылмайып ҡараны:

— Дөрөҫөн әйтһәм, үпкәләмәҫһегеҙме?

— Әйт, әйт... Дөрөҫөн әйт. Ни хәтле ауыр булһа ла, дөрөҫөн белгән яҡшы, — тине Сабир, был юлы тамам етди итеп. Унан көлөмһөрәп өҫтәп ҡуйҙы. — Үпкәләп тә ни файҙа? Һине еңеп буламы ни?

— Эйе шул, әйт. Беҙ бит һинең берсисе уҡыпыц өсөн үҙеңдән яман ҡыуанған дуҫтарың даһа!.. — тине Хөрмәт.

Емеш тағы аҙ ғына икеләнеп торҙо. Унан ысын, ышанысл тауыш менән:

— Дөрөҫөн әйтһәм, ышанмаҫһығыҙ. Мин ҡыуанмаһым, — тине. — Ни өсөн, тиһегеҙме? Әҫәрҙең өлкә журналында сығыуы ғына түгел, уның шул журнал дәрәжәһендә булыуы шарт бит әле... Ә был... Уны мин былтыр яҙғанмын. Быйыл, һис шикһеҙ, унан яҡшыраҡ яҙыр инем...

Емеш ҡаршыһында торған егеттәрҙе бөтөнләй онотҡан, үҙ уйҙарын һөйләп уйлаған, күңел төбөнән килгән үҙ йөрәк тауышына ғына ҡолаҡ һалып торған һымаҡ итеп, етди, ҡаты һығымта яһап ҡуйҙы:

— Тамам өлгөрөп етмәй, яҙған әҫәрең үҙеңә үҙ йөрәгең кеүек яҡын һәм ҡиммәтле икәнен тоймай тороп, матбуғатҡа сығырға ярамай икән...

— Дөрөҫ түгел, — тип етди бүлдерҙе уны Сабир. — Үҙ ҡаҙанында ғына ҡайнап өлгөрөп буламы ни?

— Әлбиттә, кеше хаталана-яңылыша үҫә, ә матбуғатҡа сыҡмай, уҡыусы фекерен ишетмәй тороп, яҙыусы үҫә аламы ни? — тип Хөрмәт тә Сабирҙең фекерен ҡеүәтләне.

— Ә мин барыбер, етлекмәгән әҫәрҙәр менән матбуғат битен сыбарларға ярамай, тип иҫәпләйем... — тип ҡарыулашты Емеш.

— Эй, Гөлйемеш, Гөлйемеш! — тип шелтәле баш сайҡап ҡуйҙы Сабир... — Гөлйемеш ағасы бит үтә сәнскеле була. Бына һин дә тап шул исемеңә хас ҡылыҡлы бит, ә?! Тотош сәнскенән тораһың!..

Хөрмәт Сабирҙең һығымтаһын йомшартырға ашыҡты.

— Улай тимә, дуҫ. Беҙ бит уны «Емеш» тип йөрөтәбеҙ. Емеш! Әйтәйек, сейә емеше, йөҙөм емеше... Ҡыҫҡаһы, емеш бирә торған кеше бит ул!..

— Юҡ, — тип Сабир Хөрмәтте ҡырҡа бүлдерҙе. — Ул фәҡәт гөлйемеш ҡыуағы. Ваҡ, үткер сәнскеле ҡыуаҡ! Бер яғынан да яҡын барып булмай... Сәнскеләй... Дөрөҫтө әйтәм бит, Гөлйемеш?!

— Дөрөҫ! — тип раҫланы Емеш, үҙенә хас булмағанса шат, шаян йылмайып. — Шулай тип ата. Миңә үҙемдең тулы исемем күберәк оҡшай...

— Бына нисек?! — Әллә ғәжәпһенеп, әллә үпкәләп, баш сайҡап торҙо Сабир. — Мин бит былай ғына...

Әммә шул саҡ тәнәфес бөткәнде белдереп ҡыңғырау

зыңлап китте. Студенттәр шау-гөр килеп кабинеттәргә таралышты. Емеш тә, ярһыу-ҡыуаныстан йөҙө бешкән алма шикелле алланып, көлә-йылмая үҙ урынына югерҙе.

* * *

Һуңғы сәғәт — музыка дәресе ине. Музыка, рәсем дәрестәрен күптәр, шул иҫәптән Емеш тә, теләп көтөп ала, сөнки тәүгеһендә йырлап кинәнәһең, икенсеһендә, һүрәт төшөрә белмәһәң дә, ҡағыҙ һыҙғылап ултырыуҙан тәм табаһың. Әйтерһең, ниҙер ижад итәһең...

Революцион байрамдар был ҡалала һәр саҡ ҡаты тәртип менән үтә. Колонналарҙың һәр ҡайһыһы командаға баҫып, революцион йырҙар йырлап уҙа. Теҙемде боҙған, революцион йырҙарҙы яттан белмәгән бер генә кеше лә булмай тип әйтерлек. Һәр коллектив байрамдан кәмендә ай элек демонстрацияла йөрөргә әҙерләнә башлай. Бигерәк тә эшселәр коллективе, уҡыу йорттары үҙ сафтарының тығыҙлығы, матурлығы менән айырылып тора. Сафтарҙа тиң баҫып, революцион йыр менән урам яңғыратып йырлап үтеү Емештең күңелендә һәр саҡ бөткөһөҙ ҡыуаныс һәм ғорурлыҡ уята, ул үҙен яурынына мылтыҡ аҫҡан революция һалдаты итеп тоя башлай ине.

Музыка уҡытыусыһы — нәҙек оҙон буйлы, етен керпекле, йоҡа ғына сәсле, оялсан ҡиәфәтле йәш скрипкасы Шатов — бөгөн иң элек ҡара таҡтаға «Интернационал»дың нотаһын яҙып ҡуйҙы.

— Күсереп алығыҙ, — тине.

— Беҙҙә бар. Электән күсергәнбеҙ, — тип уның хәтеренә төшөрҙө студенттәр. Ә Шатов:

— Улай булһа, бына шул нотаға ҡарап бергәләп йырлайбыҙ, — тине лә скрипкаһын көйләргә тотондо. Башҡа ваҡыттағы шикелле «до, ре, ми, фа, соль, ля, си, до-о...» тип ноталарға төртөп һуҙып та, октаваларға һибелгән ноталарҙың үлсәүҙәрен төшөндөрөп тә торманы. Уның бөгөнгө бурысы — өйрәнелгән революцион йырҙарҙы хәтергә төшөрөүҙән тора. Сөнки беренсе май байрамы яҡынлаша ине бит.

«Интернационал», «Варшавянка», «Марсельеза», «Расстрел коммунаров» һәм башҡа бик күп йырҙарҙы скрипкаға ҡушылып, бүлмәне күтәреп сыға яҙып йырланылар студенттәр. Комсомол шағире Безымянскийҙең «Молодая гвардия»һы айырата ҙур дәрт менән яңғыраны:

Смелей вперед и тверже шаг,
И выше юношеский стяг!
Мы — молодая гвардия
Рабочих и крестьян...

Башҡа ваҡытта скрипканың үтә нәфис тауышы бындай һуғышсан йырҙарға килмәгән кеүек тойоп ыҙалана торған Емеш тә бөгөн быны һиҙмәне, уға хатта Шатовтың йыр ыңғайына һығылып-бөгөлөп торған нәҙекәй кәүҙәһе лә, балаларса нәфис йөҙө лә, хатта ҡыҙҙарҙыҡы шикелле ҡып-ҡыҙыл ирендәре лә мәҙәк тойолманы. Дөрөҫөн әйткәндә, бөгөн Емеш быларҙың береһен дә күрмәне. Уның ярһыу күңеле, быға са бер ҡасан да татылмаған яңы, ят ҡыуаныстан, дәртле йыр моңона ҡушылып, күҙ еткеһеҙ бейеклектә талпына ине хәҙер.

## IV

Ала ҡар ваҡыты. Көндөҙ тау ҡырастарына, тирәк остарына һырышып ятҡан һоро болот, кисен һалҡын ел хөкөм һөрә.

— Бер ҡарышһа, донъя шулай кире китә лә бара ул, ҡороғоро! Йә, яҙ тиген инде шуны! — тип тәҙрә үтә тышҡа күҙ ташлап көйөнөп тора Баҙыян еңгә. — Халыҡты көҙө, ҡышы ыҙалауы етмәгәйне тиерһең!

— Һин, еңгә, власть бит. Бойороҡ бирергә ҡулынан килгән кешегә һуҡраныу-зарланыу килешмәй... — тип урынһыҙ мәрәкәләп, Иштуған үҙе лә аңламаҫтан, Баҙыян еңгәне тағы ла көйөндөрөп ҡуйҙы. Ә үҙенең һис тә генә былай эшләргә иҫәбе юҡ ине. Сөнки ул быға са һөйләшеп-һөйләшеп тә ыңғай хәл итә алмаған бер мәсьәләне хәл итергә тип килгәйне.

— Йә, йәнемде яфалап, һин дә үртәмә, исмаһам, — тип көйөнөп ҡараны Баҙыян еңгә уға. — Моғайын, тағы шул ҡыҙыл туй хаҡында һөйләшергә килгәнһеңдер әле? Шуға аҡылһыҙ мәҙәкләнеп тә маташаһыңдыр.

Үҙе нисек һүҙ башлап ебәрергә белмәй ултырған теманы еңгә башлап телгә алғас, Иштуған еңел һулап ҡуйҙы. Һәм етди тауышҡа күсеп:

— Шулайыраҡ ине шул, еңгә! — тип һикереп торҙо.— Алдағы ялда, мәктәп буш көндө... Йәштәрҙе зарыҡтырмаҫҡа, туйҙы бик һәйбәт итеп үткәреп ебәрергә ине, еңгә. Үҫеп килгән йәштәрҙең хәтерендә ҡалырлыҡ итеп. Бынан ары йәштәр һәр ҡайһыһы шулай, яңыса ҡыҙыл туй менән

өйләнергә теләрлек итеп... Быныӊ бит сәйәси яғы бар, еӊгә!

— Туҡта әле, Иштуған, хыялбай!..

— Беләһеӊме, еӊгә. Мин уны нисек үткәреү хаҡында уйлап бөттөм... Комсомолецтәр концерт әҙерләне. Һөйләп бирәйемме нимәләр буласағын, ә?

Баҙыян еӊгә был юлы уға йылмайып ҡарап, баш сайҡай биреп торҙо ла, ҡасандыр үҙенеӊ һөйөклө ире Тимербайға, йәки ҡәйнәһе Ҡарасәс әбейгә әйтә торған, әле инде онотолоп бөткән тигәндәй һүҙен тағы ҡабатланы.

— Эй, хыялбай, хыялбай! Был хәтле лә Тимербай ағайыӊ кеүек сабыйлыҡтан сыҡмаҫһыӊ икән һин, Иштуған ҡәйнеш!

— Ниӊә сабыйлыҡ булһын, еӊгә? Ҡыҙыл туй — сәйәси әһәмиәтле сара, тип әйтеп торам бит!

— Дөрөҫ әйтәһеӊ, ҡәйнеш. Бик һәйбәт булыр ине. Әммә ваҡыты ул түгел.

— Нисек? Ваҡыты ла, кешеләре лә самай тура килеп кенә тора бит! Әхәт менән Сабира ла ҡыҙыл туйҙы башлап ебәрмәгәс...

Баҙыян еӊгә, ауыл Совете йортонда үҙҙәренән башҡа әлегә берәүҙеӊ дә юҡлығын белһә лә, тауышын баҫа төштө:

— Бөгөн төндә нимә булғанын беләһеӊме?

— Юҡ. Нимә булған һуӊ?

— Мөҡим, эҙләүһеҙ-һорауһыҙ, дөйөм аҙбарҙан атын алып менгән дә сыҡҡан да киткән...

— Булмаҫ та, еӊгә! — Хатта ҡысҡырып уҡ ебәрҙе Иштуған. — Булмаҫ!

— Булған шул бына. «Атым менән рудниктә руда ташып йөрөһәм дә, балаларым туғыраҡ булыр», — тигән. Хатибе лә шул юлды ҡыумаҡ, ти. Аӊланыӊмы? Башҡа ризаһыҙҙар ҙа бар.

— Ғәжәп, ғәжәп... Көтмәгәйнем...— тип, аптырап ҡалды Иштуған. — Ни өсөн Әхәт быны миӊә әйтмәне икән?

— Күрәһеӊ, өлгөрмәгән... бына шундай эштәр. Шулай булғас, һуӊлап-һуҙылып килә алмай ятҡан яҙға һуҡранмай ҡалай итәһеӊ?!. Ауыр ҡышы етмәгән, яҙы ла бит шәмәреп тора тим шул...

— Ғәжәп... — тине Иштуған, тағы бер оҙон һуҙып. — Мин ни иртән торҙом да мәктәпкә югерҙем. Әле

уҡытыуҙы бөтөрҙөм дә һинең яңға туй хаҡында һөйләшергә килдем. Ишетмәнем. Әхәтте лә күрмәнем...

Баҙыян еңгә ҙур ҡулын алдында ятҡан папкаға ауыр итеп һалып ҡуйҙы.

— Бына шулай. Туй булмаясаҡ.

— Ә йәштәр...

— Инергә яраймы?

Иштуған, ҡапыл һүҙен бүлеп, тауыш килгән яҡҡа боролдо, асҡан ауыҙын йоморға ла онотоп, тағы ла нығыраҡ аптырап ҡалды. Ишек төбөндә танымаҫлыҡ булып ябыҡҡан Заһира баҫып тора. Аяғында бейек күтәрмәле ҡара итек, өҫтөндә биш билле йәшел бәрхәт тышлы бишмәт, башында дебет шәл, ҡыҫҡаһы, бай, төҙөү кейенгән. Ә йөҙөндә кейеменә һис тә хас булмаған ниндәйҙер өмөтһеҙ саялыҡ, йәшел яҡут кеүек матур күҙҙәрендә атылып сығырға торған йәш...

— Уҙ, ҡыҙым, ултыр. Һине ауырыҡһына тиҙәр ине, — тип әсәләрсә йомшаҡ ҡына өндәште уға Баҙыян еңгә. — Ниндәй сиргә дусар булдың?

— Биҙгәк... — тине Заһира, ишетелер-ишетелмәҫ кенә итеп. — Бына әле лә биҙгәге тота башланы шикелле...

Заһира, теше-тешкә теймәй ҡалтыранып, өҫтәлгә табан бер-ике аҙым атланы ла, башы әйләнгән һымаҡ, туҡтап ҡалды.

— Ярай, еңгә, мин киттем. Ҡамасауламайым. Аулаҡлап һөйләшегеҙ, — тине Иштуған ҡабаланып һәм аптырай-уйлана тышҡа сыҡты.

«Ҡалай үҙгәргән. Ауыраймы? Әллә берәй бәхетһеҙлек кисерәме? Мөхәббәт тойғоһо, хатта һөйгәнең менән ҡауышырға тура килмәһә лә, кешене былай бөтөрөргә теүеш түгел ине һымаҡ... Нимә булған ҡыҙға?! Әллә, ғаиләһендәге берәй яман эште белеп, шикләнеп килгәнме?!»

Был уй Иштуғандың мейеһен Мөкимдең баш-баштаҡлығы менән берҙәй игәп барҙы. Өйгә ҡайтҡас та тынғы бирмәне. Ахыр ул арлы-бирле генә тамаҡ ялғаны ла тағы ауыл Советенә юғерҙе. Баҙыян еңгә һаман унда ине әле.

Иштуған, түҙемһеҙләнеп, уның ҡаршыһына килеп баҫты.

— Нимә һөйләне, еңгә?

— Бер ни ҙә.

— Нисек бер ни ҙә?

— Нимәлер әйтергә теләп бер нисә уҡталды ла: «Һөй-

ләй алмайым, ҡурҡам!» — тип илап югереп сыҡты ла китте.

— Ғәжәп, нимә һөйләмәксе ине икән һуң ул? Нимә хаҡында?!

— Бында ниндәй ғәжәпләнер урын булһын? Ҡыҙҙарҙың тилелеге бөтәме ни. Шул иҫәр мөхәббәт хаҡындалыр күп булһа... — тине Баҙыян еңгә был юлы ғәмһеҙ генә йылмайып алды. Унан, ауыр ғына көрһөнөп, алдында ятҡан ҡағыҙҙарға эйелде.

— Алда тауҙай эш. Ә көн әллә ни кәрәкһеҙ нәмәләр менән уҙып ҡына тора.

— Мөхәббәт хаҡында ғына инеме икән, еңгә? Берәй етди нәмә ятмаймы икән уның уйында, ә? Артыҡ борсоулы ине ҡыҙҙың ҡарашы, күрҙеңме, еңгә?! — тип хәүефләнеп ныҡышты Иштуған. — Яҡшылап һөйләшергә, һорашырға кәрәк булған...

Баҙыян еңгә бүтән өндәшмәне. Күрәһең, ул Заһираның Әхәтте яратыуын ишетеп белә, шуға күрә был хаҡта һүҙ оҙайтыуҙы үҙенә уңайһыҙ һанай ине.

Иштуған баягынан да тынысһыҙыраҡ уйланып сығып китте: «Ғәжәп, ғәжәп... Берҙән, Мөҡим... Икенсенән, бынауы ҡыҙыҡай... Былай булһа, кешеләрҙе һис тә аңлап булмай башланы түгелме һуң әле?.. Әхәтте күреп һөйләшергә кәрәк. Мөҡимдең китеүенә ул нисек ҡарай икән?»

## V

Ҡайһы саҡта шулай була. Әле генә тыйып торғоһоҙ шаян, шат бала ҡапыл баҫылып, ҡырыҫланып китә. Эйе, күҙ ҡарашы текәләнгән, нимәнәндер риза түгел, кемгәлер асыулы... Сәбәбен белергә теләп һүҙ өндәшһәң дә, һөйләштерә алмайһың йәки тупаҫ яуап алаһың. Аптырайһың: был балаға нимә булган? Уның күңел асҡысын эҙләй башлайһың. Ә ул һаман ҡырыҫлана, бөтә әйләнә-тирәнән биҙеү, екһенеү, ситһенеү тойғоларына бирелә генә бара...

Ә ҡайһы саҡта киреһенсә лә була: әле генә үтә аҙ һүҙле мыштым бала йондоҙ кеүек яҡтырып китә, тотоп тыйғыһыҙ шаян, илгәҙәк, һөйләнсәккә әүерелә, бөтә әйләнә-тирәгә ҡыҙыҡһыныу, һоҡланыу, ғашиҡ булыу дәрәжәһенә етеп ҡанатлана, ҡалҡына. Һин тағы аптырайһың: нимә булған был балаға? Аҡбуҙатҡа атланган тиерһең! Ҡайҙа барып бәрелергә, ни эшләргә, ни һөйләп, ни ҡуйырға белмәй ҙәбаһа! Баҡтиһәң, бында һис тә аптырар урын юҡ

икән! Балала үсмерлек осоро башланған икән дәбаһа! Кеше лә бит — тәбиғәт балаһы. Ул да бит тыуа, үсә, үҙгәрә. Бына тиҙҙән яҙғы ташҡын кеүек ярһып-ашҡынып йәшлек килеп етер. Ул да баяғы балаларына тағы үҙенсә үҙгәреш индерер, уны үҙенә генә хас тылсымлы буяуҙар менән биҙәр, матурлар, камилләштерер йәки... Һин тағы аптырарһың, тағы төшөнә алмай йөҙәрһең. Ә йылдар һаман үҙенекен итер...

Заһира менән дә бына тап шундай хәл булды. Ҡыйыу, ырҡыу холоҡло, үтә теремек ҡылыҡлы ҡыҙ, үсмер осоро етеү менән, аҫтан һөҙә ҡарап йөрөй торған аҙ һүҙле кешегә әйләнде. Бигерәк тә өйҙә бер кем менән юнләп һөйләшмәҫ, уйнамаҫ, көлмәҫ булды. Ҡайғылы йәки асыулы төҫтә генә йөрөй башланы. Хатта үсмерлекте ҡыуып, йәй йөрөгән тай шикелле елеп килеп еткән зифа буйлы, ак йөҙлө һылыу йәшлек тә уның был ҡылығына әллә ни үҙгәреш индерә алманы. Киреһенсә, ул тағы ла аҙ һүҙлерәк кенә булып китте.

Ейәнсәренең ҡылығы Шымбай ҡартҡа үтә лә оҡшамай башланы: «Нимәгә буҫығып йөрөй?..» — тигән һорау алдында йыш ҡына туҡталып ҡалды ул. «Ә-ә... кеһ-кеһ, был әллә беҙҙең ғаилә тормошонан риза түгелме? Үҙен аҫырап үҫтергән ҡарттарға асыу тотамы? Әллә, комсомолға инеп, урамда буҙлап йөрөгөһө киләме был дуңғыҙҙың да?!»

Шымбай ҡарт уйлап ҡына ҡалманы, үҙенең мейеһен быраулаған был һорауҙарға яуап алыр өсөн йыш ҡына башта көлөп-мәрәкәләп һүҙ асты:

— Кеһ-кеһ, был ҡыҙҙың балтаһы һыуға төшкәнме ни, ә? Ҡарасәле, әбей, ҡалай һөмөрө ҡойолған!

Аҙаҡ, тора-бара:

— Ә-ә, һиң-цә ни-мә етмәй? Ним-мәгә шулай күҙ ҡарашың менән беҙҙе йоторҙай булып йөрөйһөң? — тип тотлоғоп бик йыш бәйләнә лә башланы.— Мин һин-не тал сыбыҡ менән сыбыҡлап та телеңде астыра алырмын. Еткән ҡыҙ тип тор-р-мам! — тип янарға ла онотманы. Әммә ҡыҙҙы үҙгәртә алманы. Ул, әсәһе Шәмсиә мәрхүм шикелле, тағы ла өнһөҙөрәк, яуапһыҙыраҡ була ғына барҙы.

* * *

Заһира менән Моратшаны Шымбай ҡарт үҙ әсәһенән биҙҙереп тәрбиәләне. Шәмсиә өнһөҙ-һүҙһеҙ эшсе көстән

башҡа бер нәмә лә түгел ине улар өсөн. Ә уның әсәһе, Бибекәй әбей, Шымбайса, аҡылға бер төрлө — хыялый ҡарсыҡ. Уның менән һөйләшеү, ҡатнашыу балалар өсөн хәтәр. Ене ҡотороп китһә, быуып үлтереп тә ҡуйыр...

Был тәрбиә бала саҡта Заһираны бик ҡәнәғәтләндерә, ул үҙен ниндәйҙер юғары, көслө йән эйәһе итеп тоя, тауыҡ кетәгендәй өйҙә йәшәгән Бибекәй әбей менән туғанлыҡ мөнәсәбәтендә булыуҙы үҙенә ғәрлек һанай һәм үҙ көнкүрешенән ғорур, ҡәнәғәт булып, ғәмһеҙ йәшәй ине. Бына үҫмер саҡ килеп етте. Үҙе менән бергә Заһираға ла күҙ һәм уй алып килде. Тирә-яҡҡа ул да иғтибар менән ҡарарға, уйларға һәләтле була башланы. Ә инде бер саҡ, йәшлек уға йөрәк бүләк иткәс, күңелендә тәүге һәм иң ярһыу йәшерен мөхәббәт ялҡыны ҡабынып киткәс, уның күҙе тағы ла асыла төштө. Шунда инде ул быға саҡлы үҙенә насар, яман, ҡара тип аңлатҡан төшөнсәләрҙең бөтөнләй киреһен күрә башланы. Яңыға, яҡтыға тартылды күңеле. Башҡалар кеүек, уның да кис йәштәр араһында булғыһы, концерттәрҙә, йыйылыштарҙа ҡатнашҡыһы, комсомолка булғыһы, хатта коллектив хужалыҡҡа инеп, күмәкләп бергә эшләүҙең ҡыуанысын татығыһы килде. Ә инде ҡасан шул әлегә бик үк аңлашылып етмәгән, әммә нимәһе менәндер күңелде ярһытып, магнит кеүек үҙенә тартып торған был мауыҡтырғыс яңы тормошто башлап йөрөүселәрҙең береһе — һалдат Әхәт үҙенең йөрәгенә инеп ултырғас, быға саҡлы йәшәп килгән тормошо бөтөнләй ят, сит булып әүерелде. Ысынлап та, атаһы кем һуң уның? Заһираның әсәһенә — йәш, һылыу Шәмсиәгә — көн күрһәтмәгән, ахыр килеп, бынауы умарта кеүек йыуан, ҡарт Сәрбиямалға күсеп сығып киткән, балалары хаҡында бөтөнләй онотҡан кеше ләбаһа! Етмәһә... ҡасандыр «ат ҡарағы» тигән исеме лә сыҡҡан. Хәҙер нэпман...

Ҡәртсәһе Ғәйшә әбей көйә ашаған йөн бейәләй кеүек ҡойолоп төшөргә генә тора... Үҙ йөҙө лә, үҙ һүҙе лә юҡ, бахырҙың... Моратша — ҡурҡаҡ һәм һатлыҡ. Уның бөтә белгәне — кисен йәштәр, комсомолдар араһында ҡайнашып йөрөү, уларға ярарға тырышыу, яҡшатланып ниҙәрҙер эшләү, ярҙамлашыу, ә өйгә ҡайтҡас, түкмәйсәсмәй бөтәһен ҡартатаһына һөйләп биреү. Шымбай ҡарт шуның өсөн уны йәштәр, комсомолдар араһында йөрөүҙән һис тә тыймай. Дөрөҫ, ул башта Заһираны ла тыйманы. Унан да белгәнен-күргәнен һорашырға онотманы. Заһира ла башта ни күргәнен, ни ишеткәнен түк-

мәй сәсмәй һөйләне. Ләкин ҡартатаһының артыҡ бәйләнеск һәм оятһыҙ ҡыҙыҡһыныуы уны бик тиҙ екһендерҙе, тора-бара шикләндерҙе... Ул һөйләмәҫ булды. Шунан башлап ҡартатаһы менән уның араһында тартыш китте. Ҡартатаһы уны өйҙән сығармаҫҡа, кеше араһына ҡатнаштырмаҫҡа, һөйләштермәҫкә тырыша. Хатта бер саҡ күрше ауылдың ҡарсығы үлгән бер ҡартҡа көсләп иргә бирeп ебәрергә лә маташты. Әммә Заһираны еңә алманы.

— Хәҙер ҡыҙҙарҙы мал кеүек һатыр саҡ үтте! — тине уға ейәнсәре.— Һатып ҡына ҡара. Унан күрерһең! — тип ҡарттың үҙе кеүек янап та ҡуйҙы. Шымбай ҡартҡа был юлы теш ҡыҫып түҙергә тура килде.

Заһира кисәләргә йөрөүен, кешеләр менән осрашыуын дауам итте. Хатта бер көндө уның башына: «Ниңә һуң әле мин әсәйемдең әсәһен күрмәҫкә тейеш?!» — тигән кыйыу уй ҙа килде. Ғәҙәтенсә, уйланы — эшләне.

Төш ваҡыты ине. Бибекәй әбей менән Хәсбиямал, көлөшә-һөйләшә, сәй эсеп ултыра. Алдарында ҡабарып бешкән аҡ күмәс, май, шәкәр. Өҫ-баштары ла, өй эсе лә бер ҙә, Заһира ишетеп үҫкәнсә, теләнсе тормошона оҡшамай. Киреһенсә, йылы, яҡты, көләс...

Бибекәй әбей менән Хәсбиямал да, аптырауҙан, ҡыуаныуҙан аҙап, бер аҙ өндәшә алмай торҙолар. Ахыр Бибекәй әбей сеңләп илап ебәрҙе:

— Балам, Заһирам... Шәмсиәм...

— Килдеңме ни? — тине Хәсбиямал ҡыйыуһыҙ ғына.— Нисек киләһе иттең, һылыу? — тип Заһираның ҡаршыһына барып баҫты, ниҙер аңларға тырышып, күҙҙәренә теклəп ҡараны.

— Килдем, — тине Заһира, текә ҡарап. — Килергә ярамаймы әллә?

— Ниңә ярамаһын, һылыу, әйҙә, түрҙән уҙ, — тип, тары ҡоймағы шикелле түңәрәк, быжыр битле, яҡшы күңелле Хәсбиямал уның ҡулынан етәкләп алды.— Күрәһең бит, әсәйем ҡыуанысынан, бер һүҙ әйтә алмай, илап ебәрҙе. Ул бит һеҙҙе бер күрергә зар-интизар булып йәшәй... Йә, әйҙә.

Бибекәй әбей, күҙ йәшен тыйырға тырышып, балыҡ күҙе шикелле түңәрәк ҙур күк күҙҙәрен мөлдөрәтеп ейәнсәренә ҡараны.

— Килеп ҡалай һәйбәт иттең, ҡолонсағым!

Заһира, һаман шулай һөҙөп ҡарап, һөйләшмәй-өндәшмәй генә бер сынаяҡ сәй эсте, унан, килгәндәге кеүек үк,

хушлашмай ҙа сығып китте. Ләкин ошо килеүҙән һуң уның күңеле был өйгә йыш тартыла башланы. Һәм ул, шулай көтмәгәндә генә килеп, көтмәгәндә сығып китеп йөрөй торғас, был ғаиләгә ҡарата ошоғаса үҙ күңелендә йәшәп килгән фекерҙең дөрөҫ түгеллегенә тамам төшөндө.

Яңы тормошто бөтә йәне-йөрәге менән ҡабул иткән, үҙҙәренең хәҙерге хәленән ҡәнәғәт, бәхетле кешеләр йәшәй ине был өйҙә.

— Ширкәткә ингәс ни, көн күрҙек тә киттек беҙ, балам. Ни ашайым, ни кейәйем, тиһәк, бар. Аллаға шөкөр. Элек заман, беҙ йәш саҡта, олатайың менән икәүләп байҙар алдында сәсебеҙ менән ер һеперһәк тә, туя икмәк ҡаба алмай инек. Ә хәҙер бына Хәсбиямал бер үҙе эшләй, бурабыҙ тулы иген, — тип ҡыуана Бибекәй әбей. — Инде был ширкәт тигәненә аллаһы тәғәлә оҙон ғүмер генә бирһен, — тип ҡуя.

— Ширкәт түгел, әсәй, колхоз, — тип төҙәтә Хәсбиямал. — Берҙәм хужалыҡ тип атала хәҙер.

Бибекәй әбей, ҡыҙының иҫкәртеүен ишетмәгән дә һымаҡ, һаман үҙ һүҙен һөйләй:

— Быйыл, балам, йылҡы йылы ине. Ҡешегә лә, малдарға ла ауыр йыл була ул. Беҙ, ширкәттә торғас, ауырлыҡ күрмәнек тә... Яңғыҙ-ярым йәшәгәндәргә ауырға тура килде быйыл...

Ярай, ни булһа ла, уҙҙы инде ул йыл. Хәҙер бына ҡуй йылы башланды. Ҡуйҙың үҙе кеүек һимеҙ йыл буласаҡ быныһы. Ширкәт булғас... Һәйбәтләп ваҡытлы сәсеп тә ҡуйһаҡ, алла бирһә...

Хәсбиямал ипле генә көлөп ҡуйҙы.

— Әсәйем ширкәт тип мөкиббән киткән инде ул.

Бибекәй әбейҙең ширкәткә йәнле нәмәләй итеп ғүмер теләүе Заһираға ла мәҙәк тойолдо, ләкин ул көлмәне. Сөнки Бибекәй әбейҙең, әйләнә-тирәһен тамам онотоп, үҙалдына һөйләнеп китеүе уның бөтә иғтибарын биләп алды.

— И-и-и... Шәмсиәм мәрхүм тере булһа, хәҙер бер ҙә кәм-хур булмаҫ ине, тим. Ширкәттә эшләр ҙә йәшәр ине, тим... Әрәм генә иттеләр шул, балаҡайым... Һыу һылыуы кеүек ап-аҡ, матур көйө ине һыуҙан сығарып алғанда... Әгәр ҙә мәгәр һыуға үҙе тере көйө ташланһа, күбенеп, йәмһеҙләнеп бөтөр ине, тим... Йылғаға ташланған саҡта уҡ йәне булмағандыр балаҡайымдың, тим...

— Әсәй, ҡуйсәле, шул һүҙеңде нисә йыл һөйләйһең инде, — тип Хәсбиямал уның еңенән тартты. — Иҫеңде йый!

— И-и алла, — тип, бошоноп, битен-башын һыпырып алды Бибекәй әбей. Ҡурҡынып тирә-яғына ҡараны. — Шулай, ҡайһы саҡта хыялый булып, әллә нәмәләр һөйләй ҙә ташлайым шул мин, — тип, балыҡ күҙҙәрен тағы ла ялыныслы мөлдөрәтеп, ейәнсәренә ҡараны. — Һин, ҡолонсағым, ҡарт диуананың һүҙенә ҡолаҡ һалма, йәме.

Оләсәһенән күҙ ҙә алмай текләп ҡатып ҡалган Заһира ла, ауыр көрһөнөп, ҡарашын ситкә борҙо. Һиҙенә ине уның күңеле. Бала саҡтан, әсәһе юғалған төндән бирле, унда әрнеүле бер төйөн ята ине. Хәҙер бына ул ҡапыл, бик ҙур булып күбенеп, түҙгеһеҙ һыҙлауыҡҡа әйләнеп киткән һымаҡ булды: эйе, эйе, әсәһенең бер нисә төн буйы быуылып-быуылып илағанын, унан ҡайҙалыр, кемдеңдер тонсоҡҡан тауыш менән уһылдағанын төшөндә ишетмәне ләбаһа ул! Өн ине бит был! Эйе-эйе, атаһының ҡан баҫҡан, ҡот осҡос күҙҙәре лә хәтерендә. Унан, унан... Әсәһен йылғанан табып алдылар...

«Ҡөнләшеп, үҙен-үҙе һыуға ташлаған. Иманһыҙ үлгән. Уны йәлләү ҙә, уйлау ҙа гонаһ!..» — тине уның ҡартатаһы. Һәм Заһира уйламаны ла, хатта йәлләмәне лә. Сөнки әсәһе былай ҙа өйҙә күләгә кеүек кенә ине бит инде. Күләгәнең барлығы ни ҙә юҡлығы ни?!

Шулай ҙа бала күңеле ниҙер һиҙенде. Йөрәк төбөндә өнһөҙ төйөн һаҡланы. Әле инде оләсәһенең көтмәгәндә үҙалдына һөйләнеп киткән бәйһеҙ һүҙҙәренән ап-асыҡ төшөндө: әсәһен кемдер үлтергән!

Ошо һөйләшеүҙән һуң Заһираның күңеле ҡартатаһына, атаһына, гөмүмән, үҙҙәренең бөтә ғаиләһенә әсе нәфрәт менән тулды. Улларҙан, был шомло йорттан ҡотолоу юлдарын эҙләп, төн йоҡламаҫ булды. Былтыр йәй Емеш ҡаланан ҡайтып күренгәс: «Шулай уҡырға китә алһам, мин дә әҙәм булыр инем!» — тип талпынды. Әйләнгән һайын Емешкә:

«Әй, мин дә һинең кеүек етем булһамсы... Уҡып йөрөр инем, бәхетле булыр инем», — тип һыйыныуы ла, уның үйнап түгел, уйлап, үҙ хәленән ҡотолор юл эҙләп әйтеүе ине. Ләкин төрлө яҡлап яманаты сыҡҡан Әхмәтша балаһын кем уҡырға ебәрһен?! Тимәк, Емеш кеүек булырға теләү уның өсөн бойомға ашмаҫ хыял ғына... Ә йәш ку-

ңел һаман бирешергә, еңелергә теләмәне. Ҡиреһенсә, тағы ла сабырһыҙланыбыраҡ яңыға ынтылды. Инде уның күңелен Илсеғолда яңыны башлап йөрөүселәрҙең береһе — һалдат Әхәт тағы ла тәрәнерәк биләй барҙы. Көләс, тура ҡарашлы, бейеп китергә әҙер генә торған ҡупшы кәүҙәле, киң күкрәкле был егет тора-бара уның өнөндә лә, төшөндә лә күҙ алдынан китмәҫ булды. Эйе, ул ғына Заһираны бәхетле итәсәк! Яңы, яҡты донъяға алып сығасаҡ. Бүре шикелле, өңгә ышыҡланып йәшәү хурлығынан ҡотҡарасаҡ... Һәм ул ошо бәхет өсөн ҡулынан килгәнсе көрәште. Ҡыйыу көрәште. Өҙөлөп хаттар яҙҙы. Һөйөүен, уның өсөн үлергә әҙер тороуын белдерҙе. Мөмкин булған һайын Әхәттең юлына сығып күренергә, һөйҙөрөргә, һөйләшергә тырышты. Әммә ҡалай итмәк кәрәк. Ҡөсләп яраттырып буламы ни? Әхәт уны күрмәне лә, һөйләшмәне лә. Хаттарына ла яуап бирмәне.

«Ысынлап та, баламы, йәш-елкенсәкме ни инде ул ғишыҡ хаты яҙышып торорға! Һөйөүемде белгәс, бер көн килер ҙә: «Әйҙә, һылыу, миңә кәләш бул», — тип етәкләп алып сығыр ҙа китер әле», — тип йыуатты үҙен Заһира. Һаман көттө, һаман өмөт итте. Аҙаҡ, Әхәттең Сабираға өйләнәсәген, ошо арала ҡыҙыл туй булаһын ишеткәс, көнләшмәне. Әхәткә асыу ҙа, үпкә лә тотманы. Тик ҡайғынан ауырып ҡына йығылды. Ҡыҙыулығы күтәрелде, берсә янды, берсә туңды. Төндәрҙе һаташып, ҡурҡып үткәрҙе. Ҡайһы саҡта бөтөнләй онотолоп, иҫһеҙләнеп ятты. Тирә-яғында ни барын, ни юғын белмәне. Шундай аҙаплы төндәрҙең береһендә ул ҡапыл, ниндәйҙер ят тауыш ишетеп, уянып киткән һымаҡ булды. Ҡото осоп, ҡуҙғала алмай ятты. Өй дөм-ҡараңғы. Бер нәмә күренмәй. Әммә кемдәрҙер бышылдап һөйләшә. Ирҙәр тауышы. Атаһының тауышы, ә икенсеһе кем? Өсөнсөһө лә бар. Өс төрлө тауыш. Туҡта, нимә бышылдашалар улар?! Тағы берәй яуызлыҡҡа әҙерләнәләрме? Эйе, аһ яуыздар! Нисек баҙнат итәләр?! Ни өсөн иң яҡшы кешеләрҙе һәләк итмәксеrange?! Аһ-аһ...

Заһираның йөрәге шулай әсенеп туланы, ләкин үҙе ҡурҡышынан хатта тын алыуын да туҡтатты һымаҡ. Ярай әле улар оҙаҡ ултырманылар. Бесәй кеүек шым баҫып, сығып та һыҙҙылар. Юҡһа, Заһираның йөрәге ярылыр йәки үҙенең ишеткәнен, уяу икәнен белдерер. Ул саҡта, кем белә, әсәһе кеүек, был көндә һыу төбөндә лә ятыр ине...

Тегеләрҙең аяҡ тауышы алыҫлашты. Улар, күрәһең, ҡунаҡ өйөндә Шымбай ҡарт янында һыйланып ултыралар. Ә бында сығып кәңәшләшәләр генә... Тимәк, Ғәйшәләр йәшереп һөйләшәләр. Ә Зәһираны үлгәнгә йәки иҫтән яҙғанға һанайҙар...

Был төндө ҡыҙ ҡаты борсолоуҙан, ҡурҡыуҙан тағы ла нығыраҡ ауырып үткәрҙе. Шулай ҙа иртәнсәк торҙо. Ниңә көнгә беренсе тапҡыр сәй эсте, икмәк ҡапты. Унан, картатаһының өйҙә юҡлығын белгәс:

— Ҡәртсәй, мин йөрөп инәйем әле. Баш ауыртыуым, бәлки, еңеләйер, — тип кейенеп тышҡа сыҡты. Әйләнәтирәлеге бөтә әйберҙең бер ҡырынайып, бер турайып өҙләкһеҙ сайҡалыуына аптырап, тупһала оҙаҡ ҡына баҫып торҙо. Баш әйләнеүе үткәс, ауыл Советенә табан китте.

— Ҡыҙыл туй буласаҡ төндө һеҙҙе үлтерергә һөйләштеләр! Абай булығыҙ! Иштуған, Әхәт, Хаммат ағай, һеҙҙе! — тип урам буйлап ҡысҡыра-ҡысҡыра югергеһе, кәрәк икән, уларҙы үҙ тәне менән ҡаплап, ҡорбан булғыһы килде уның. Әммә аяҡтары тыңламаны. Ҡайыш кеүек бөгөлөп-һығылып ыҙаланды. Ә инде Баҙыян еңгә янына барып ингәс, унда Иштуғанды ла күргәс, тағы ла нығыраҡ ҡаушаны: «Ышанмаҫтар... — тип икеләнде. — Көнләшеүҙән өркөтөргә килгән, бахыр, тип көлөрҙәр», — тигән уй башына килгәс, бөтөнләй юғалып ҡалды, ҡапыл илап ебәрҙе лә кире югерҙе: «Көлөрҙәр, көлөрҙәр, көлөрҙәр!..»

* * *

Кискә табан Зәһира, ҡәртсәһенә аҙ булһа ла ярҙамлашырға теләп, һалма йәйеп торғанда, һеләүһен кеүек йомшаҡ баҫып, Шымбай ҡарт аш өйөнә килеп инде. Ғәҙәтенсә, ишекте тауышһыҙ ғына ябып, кейемдәрен дә йәтешләп кенә сөйгә элеп, түргә уҙҙы. Түрбаш яҡта ейәнсәренең эшләп торғанын күргәс:

— Ҡеһ-кеһ-кеһ, — тип, үҙенең ыҫылдаҡ тауышы менән көлөп, янына килде. — Бәй-бәй, һин тороп баҫтыңмыни, ҡыр кәзәһе? — тип һораны. Зәһира өндәшмәгәс, ҡаты итеп толомонан тартты. — Шәбәйҙеңме, тим, дуңғыҙ балаһы?

Ул ниңәлер бөгөн айырата бәйләнсек, асыулы.

— Ниңә һөйләшмәйһең, тим? Һөйләшәһеңме, юҡмы?

Заһираның түҙеме тамам бөттө. Ул, гәҙәттә гел түбән ҡарап йөрөгән күҙҙәрендә ҡаты асыу уйнатып, турайып баҫты:

— Беҙ бит, картатай, һарыҡ тиреһе бөркәнгән бүреләр... Ә бит бүреләр һөйләшмәйҙәр, олойҙар йәки талайҙар ғына, — тип төбәп ҡараны. — Йә, тешлә, тала, ҡанымды эс! Ни эшләп түҙеп тораһың һаман?! — тип тә өҫтәне.

— Аһ, ни һөйләүең был, балаҡайым? — тип, ҡото осоп, Ғәйшә әбей ҡулын йәйеп араға төштө. — Атаһы, ҡуйсәле, бәйләнмәсе балаға!

— Ә-ә, шулаймы?! Шулай һөйләшәһеңме ни әле минең менән?!

Шымбай ҡарт, ишек яҡ стенала эйәр, суҡмар, ҡайыш сбруйҙар менән йәнәш сөйҙә элеүле торған ҡайыш ҡамсыһын алып, тағы һалма йәйергә эйелгән ейәнсәренә табан атланы.

— Атаһы, тим!..

— Юғал!

Себештәрен ҡанат аҫтына йәшерергә йыйынған инә ҡаҙ шикелле, аҡ күлдәгенең киң еңдәрен йәлпелдәтеп, тағы араға төшкән әбейен Шымбай ҡарт бер һелтәүҙә ситкә алып ырғытты. Ҡаҡ һөйәктән дә киң аҡ ситса күлдәктән генә торған Ғәйшә әбей, ҡауырһын кеүек еңел осоп, иҙәнгә һуҙылып ятты.

— Һай аллам, һай баламды! Ҡыҙыҡайымды һәләк итмә, атаһы! — тип өҙәләнеп тороп баҫырға маташты. Әммә хәле етмәне. — Һай-һай-а-й! — тип әсенеп, ҡанаты һынған ҡаҙ шикелле ҡағынып, талпынып ултырыуҙан үтә алманы. Ә Шымбай ҡарт, ҡамсыһын юғары күтәреп, һеләүһен шикелле шым баҫып, ҡорбанына яҡынлашты. Заһира, бер ни булмаған кеүек, һалма йәйеүендә булды. Бына, беренсе ҡамсы арҡа буйын әсе ярып үтте, икенсеһе, өсөнсөһө... Ҡаты асыу, әсе нәфрәт тойғоһоноң көслөлөгөнән ауыртыуҙы тоймай башлаған Заһира турайып баҫты ла ҡартатаһына табан атланы:

— Үлтер! Үлтер! Әсәйемдең ҡанын эскән кеүек, минең ҡанымды ла эс! Күбен!

— Атаһы, ни эшләүең был?! Алла хаҡы өсөн, ҡалдыр... Үлтермә!..

Ғәйшә әбей, имгәкләп, әле береһенең, әле икенсеһенең аяғынан ҡосаҡлап тартты, береһен туҡтатырға, икенсеһен үҙ кәүҙәһе менән ҡапларға теләне. Әммә тапалып, типке-

лонсн үҙ тәненә тук̣мак̣ алыуҙан башк̣а бер ярҙам да итә алманы. К̣оторонк̣о асыуҙан кешелеген тамам юғалтк̣ан Шымбай к̣арт Зәһираны, хатта иҫтән ауып йығылғас та, бер аҙға хәтле аһылдап к̣амсылап торҙо.

## VI

Ауылға яңы культура, яңы ғөрөф-ғәҙәт индереү, иҫке йолаларға, дини сикләүҙәргә һәр көн ниндәй ҙә булһа берәй яңы көстө к̣аршы к̣уя барыу теләге менән янып йөрөгән Иштуғанға Баҙыян еңгәнең, вак̣ытлы ауырлык̣тарға һылтанып, к̣ыҙыл туйҙың әһәмиәтен баһаларға теләмәүе бер ҙә ок̣шаманы. Әхәттең дә к̣ыҙыл туйһыҙ ғына өйләнергә риза булыуын белгәс, бөтөнләй кәйефе к̣ырылды. Улар менән:

— Ауырлык̣тар булды, бар, булып та торор. Уға к̣арап, беҙ иҫкелеккә к̣аршы һөжүмде тук̣татырға тейешбеҙме ни? К̣ыҙыл туй бит ул — быға̇са йәшәп килгән к̣ыҙ һатыу кеүек иң хурлык̣лы йолаға к̣аршы ут асыу тигән һүҙ! — тип нык̣ к̣ына к̣арыулашып та к̣араны. «Шулай ҙа был хак̣та тағы бер һөйләшергә ине. Әйткәндәй, ял көнө етеп килә. Ошо ялда беҙ мәктәп йортонда, бөтә ауылды йыйып, к̣ыҙыл туй үткәрергә тейеш инек тәбаһа... Булмаҫмы икән ни?!» — тип бошоноп, уйлана-уйлана, Әхәтте эҙләп китте. Уны бер к̣айҙа ла осрата алмағас, Бибештәргә боролдо: «Тук̣та, еҙнәм ни эш бөтөрә икән? Мөкимдең к̣асыуына нисек к̣арай икән?»

Өйҙә Бибеш яңғыҙы. К̣улдан һырып, ниҙер тегеп, ғәҙәттәге урынында, түрбаш як̣та ултыра. К̣уйы к̣ыйғас к̣аштары к̣аты төйөлгән, ирендәр к̣ымтылған, күҙҙәрҙә уй, моң ята.

Иштуған апаһына оҙак̣ к̣ына текләп ултырҙы: «Ни уйлай икән Бибеш? Белһәң ине...» Унан, ғәҙәтенсә, Һөйөнлөк менән шаярып, уйнап алды. Әсәһенең янында к̣урсак̣ уйнатып ултырған кескәй Йәнештән донъяның бер генә рәхәтен дә татымай, күҙенән йәш кипмәй барып үлгән һеңлеһе Йәнештең һыҙаттарын эҙләп маташты. Ләкин исемдән башк̣а бер генә ок̣шашлык̣ та тапманы. Әйе, ерән сәсле, к̣ыҙғылт йөҙлө, иркә к̣арашлы был к̣ыҙ бөтөнләй башк̣а ине шул. Иштуған к̣ыуанып к̣уйҙы: «Был Йәнештең төҫө генә түгел, яҙмышы ла башк̣а буласак̣. Беҙҙең Йәнеш күргән кәмһетелеү, к̣ағылыу-һуғылыуҙарҙы белмәйәсәк. Бәхетле буласак̣, бәхетле...»

Бибеш, тегеүҙән туҡтап, ҡустыһына күтәрелеп ҡараны.

— Ниңә һин шулай гел миңә текләйһең дә тымһайып ултыраһың, — тип көләмһерәп өндәште. — Һөйләшер һүҙ тапмаһаң, исмаһам, апай, ни хәл, нисек йәшәйһең, тип һора!

— Беләкүрә ниңә һорап торорға? Һәйбәт йәшәйһең, — тине Иштуған. — Ә бына еҙнәмдең ҡайҙалығын әйтһәң, шәп булыр ине.

Бибеш тәҙрәгә ымланы:

— Ана, һарай баштарын ҡара. Ҡинән...

Иштуған, бында ла ниндәйҙер көтөлмәгән хәл тойоп, һикереп торҙо. Тәҙрә үтә мал аҙбарҙары яғына күҙ ташланы. Лапаҫ, һарай, аҙбар баштары дауыл осороп алып киткән шикелле яланғасланып, һайғауҙары ғына һерәйеп ҡалғайны. Ул, ни уйларға, ни әйтергә белмәй, аптырап торҙо. Бибеш ниндәйҙер ят, ҡырыҫ тауыш менән:

— Еҙнәңә лә хәҙер һинең енең ҡағылды, — тип ҡуйҙы. — Үҙ малын, үҙ эшен онотто. Конюх булғандан бирле дөйөм кәртәнән ҡайтмай. Үҙебеҙҙең бесәнде унда ташып бөттө. Хәҙер ана һарай башының ябыуын һыҙырып алып барып ашата. «Артелдең аттарын һаҡлап ҡына ҡалайыҡ. Унан игене лә, бесәне лә булыр», — ти. Аҙбар баштары ла үҙлегенән-үҙҙәре ябылыр, ти, ахыры.

Бибеш йәнә моңһоу ғына көлөп алды.

— Шулай йәшәйбеҙ хәҙер. Күңелең булдымы, мырҙа? Шатһыңмы?

Сәнскеле һөйләшеүҙә Иштуған апаһынан ҡалышырға тормай ине:

— Шатмын. Күңелем булды, апай, — тине, тап уның үҙенсә итеп. — Беләһеңме, ни өсөн шатмын? Яңы кеше тыуа! Донъяға яңыса ҡараусы кеше!

— Унан ни файҙа?

Иштуған инде апаһына аптырап текләне.

— Нимәнән?

— Шул яңы кешенән.

— Һин нимә һөйләйһең, алйот!

Бибеш тағы мыҫҡыллыраҡ көлдө:

— Ә һин, мырҙа, артель ағзаһының үҙ ғаиләһенә лә, үҙ малына ла аҙ-маҙ ашау хәләллеген белмәйһеңме ни әле?

— Эй ҡарышҡан! Һинең менән һөйләшеп торғансы!

Иштуған ишекте шарт ябып сығып китте. Ләкин күңе-

не тынысланманы. Эйе, яңы эштең ҡайҙалыр уйланып етмәгән урындары, көтөлмәгән ҡыйынлыҡтары килеп сығып тора шул. Ҡемдәрҙер шуны ҡабарта, ҡуйырта, аңһыҙҙарҙы үҙ артынан эйәртеп артелгә ҡаршы аяҡландыра. Ана бит, үҙ туғаныңа хәтле нимә һөйләп ултыра?!

Эйе, отҡо йөрөй. Яуыз отҡо. Ләкин кем тарата?! Һаман шуны төбәп кенә әйтеп булмай. Яңы тормош өсөн көрәштең төп ҡыйынлығы ла, моғайын, ошондалыр...

Иштуғанды өйҙә лә күңелһеҙ хәбәр көтә ине. Бибисара әбей Айһылыуға тағы үтә хәүефле сер һөйләп киткәйне.

— Ниндәйҙер өс һунарсы йөрөй, ти. Икеһе урыҫ, береһе мосолман, ти. Уларҙы был арала әле бер ауылда, әле икенсе ауылда күрәләр, имеш, ти. Арҡаларында ҡушкөбәкле мылтыҡ, билбауҙарында көртлөк, ти. Шулай әйтәләр, имеш, ти, был артель тип ойоштороп ятҡан нәмәләре тиҙҙән бөтәсәк. Уны башлап йөрөүселәрҙең көнө һанаулы. Бына, йәй етһен, урман япраҡ менән ҡапланһын әле, тип әйтәләр, ти.

Бибисара әбейҙең былдай хәтәр һүҙҙәр һөйләп китеүе бер бөгөн булмаһа ла, был юлы Иштуғанды ла ныҡ ҡына уйланырға мәжбүр итте. Ул, көн кисләп барыуға ҡарамаҫтан, ат эйәрләп менде лә волоскә сығып китте.

* * *

Ҡесаҙна кисте Мөслим ауылының иң бай йорттарының береһендә оло табын йыйылды. Волость потребкооперацияһы мөдире Әбделғасим Әбделмөслимов үҙе ҡайтып, йәнәһе, «әрүәхтәрҙе иҫкә алыу» мәжлесе йыйҙы. Ауылдың байҙары ғына түгел, бөтә ярлы-ябағаһы, хатта үҙенең хеҙмәтселәре лә табын янынан урын алды. Яҙ булыуға ҡарамаҫтан, ҡымыҙ ҙа яһап өлгөртөлгән, мискәләп буҙа ла әсетелгән, араҡыһы ла табылған... Иттең, ҡаҡлаған ҡаҙының, ҡаҙ, өйрәктең иҫәбе-хисабы юҡ. Әбделғасим үҙе, ең һыҙғанып, аяғүрә тороп хөрмәт итә.

— Ашағыҙ, эсегеҙ, был донъя ике килмәҫ! Ағағыҙҙың йомартлығын татығыҙ!

Ҡунаҡтарҙан берәү ҙә ялындырып, ҡыҫтатып торманы. Сөнки һәр ҡайһы үҙен был хөрмәткә лайыҡлы иҫәпләне. Был ысынлап та шулай ине. Әбделғасимде кем йәшәтә? Улар — ошо асыҡ ауыҙҙар, ғәмһеҙ бөтәш күҙҙәр

бит! Бында йөҙләгән йылҡыһы булған бай хужалығы, ҡарт ҡатыны барлығын, үҙе йәш кәләш менән совет работниге булып килештереп волостә тороуын һөйләп бирһәләр бит! Юҡ, һөйләмәйҙәр. Теш ҡыҫып йәшәйҙәр. Әйҙә, йөрөһөн, үҙ кеше бит! Унан аҡмаһа ла тама!

Төн уртаһы ауып, таң әтәстәре ҡысҡырыша башлағанда, Әбделғасим ҡунаҡтарҙы оҙатып, ҡапҡаға сабаталай йоҙаҡ элеп ҡуйғас, барлыҡ тәҙрәләре лә аҙбар яғына ҡараған кесе өйгә килеп инде. Унда бер төркөм ирҙәр ит ашап, араҡы эсеп ултыра ине. Әбделғасим ишектең элгесен шарт элеп эскә уҙҙы, ҡунаҡтарының иҫерек йөҙөнә, йомолоп бөткән күҙҙәренә ризаһыҙ ҡарай-ҡарай, тәҙрәләрҙең ҡалын ҡорғандарын тикшереп сыҡты, унан, был һаҫып бөткән әҙәм аҡтыҡтарынан ерәнеүен йәшерә алмай, ауыр эйәкле ҡыйыш ауыҙын тағы ла ҡыйшайта биреп, һытыҡ сырай менән урындыҡ ситенә килеп ултырҙы. Нисек тә мөләйемлек күрһәтергә көсәнеп:

— Йә, һый үтәме, әшнәләр? — тип һораны. — Изге ниәттәр баштан осоп китерлек булып ҡуймanымы?

— Ҡеһ-кеһ... юҡ, кем Әбделғасим, әф-фәнде, сам-май, тамман... ғына булып бара, — тип тотлоғоп һөйләнде Шымбай ҡарт. Күренеп тора, был табында ул иң өлкән һәм иң баш кеше.

Йәшел күҙҙәрен төпкә йәшереп, аҫтан өҫкә һөҙөп ҡарап ултырған Әхмәтша ла һүҙһеҙ ҡалманы:

— Әсене тағы өҫтәгәндә лә була, бай, — тине. — Беҙ бит һинең һалдаттарың. Һалдатты атака алдынан хатта батша ла һыйлаған...

— Ну, әйттең, ҡорҙаш, — тип Хөснөлхаҡ, оҙон үңәсен һуҙып, сыйылдап көлөп ебәрҙе. — Алтын һүҙгә — алты шешә шаймы ни, ә? Шулай бит, Әбделғасим аға?

— Нимә бытылдайһығыҙ, таҡыр баштар? Ниңә минеңсә һөйләшмәйһегеҙ, шайтан алғырҙары! — тип ауған ерәнән торорға маташты Ананас. — Давай, тим, араҡы давай!

Арала элекке урядник Алексейҙең улы Митрофан ғына, юлдаштарына ерәнеп ҡарап, бер ситтә айныҡ ултыра. Башҡаларға ҡарағанда уның өҫ-башы ла таҙараҡ, йөҙө лә кешесәрәк. Ләкин барыбер ул да элекке зыялы күркәмлеген юғалтҡан, хәҙер уның элеккесә башҡаларға һауалы, текә ҡарап, үҙен өҫтөн һанарға көсәнеп ултырыуы көлкө генә күренә. Эйе, граждандар һуғышының һуңғы атыш тауыштары тынған көндәргә лә байтаҡ йыл

урын киткәйне шул. Йәш совет власена ҡаршы көрәште ул Мраковка кулагы Сергей Хитровтың офицер улы Федька Рябой бандаһына ҡушылып башланы. Тимербай, Байгилделәрҙең дружинасыларына һеләүһен шикелле төндә, йоҡола, аңғармаҫтан һөжүм итеп, ҡулын хеҙмәтсән халыҡтың изге ҡанына мансыған һатыбал менән Федька Рябой бандаһын Қаширин отряде тар-мар иткән саҡта ҡасып ҡотолоп ҡалды. Ә унан һуң нисә йыл буйы алып барылған яуыз дошманлыҡ эштәре: унда — яндырыу, бында — үлтереү... Нисә тапҡырҙар уңышһыҙлыҡҡа осрап табан ялтыратыу, ҡайҙа барып бәрелер урын тапмай шатун айыу кеүек урманда ҡасып йөрөү... Минут һайын тотолоу ҡурҡынысы аҫтында йәшәү... Әле бит бына ошо һуңғы бер йыл эсендә генә улар нисә тапҡыр үҙ ауылдарында — Мраковкала уҡ тотола яҙҙылар?..

Хәҙер Митрофандың бар теләге — берҙәм хужалыҡ етәкселәренә ҡаршы һөжүм башлап ебәреү, шуның менән коллективлаштыреуҙе өҙөү.

Ул кеше төҫөн юғалтҡан эшнәләренә, ерәнеп, берәм-берәм ҡарап сыҡты.

«Был сусҡалар менән, белмәйем, берәй эш ҡырып булырмы икән?! Әгәр был юлы ла эш сыҡмаһа, ни эшләргә артабан?!»

Ул, әлбиттә, был һорауға яуап таба алмай. Сөнки уның өсөн артабан — упҡын, төпһөҙ ҡараңғылыҡ. Халыҡ теләгенә ҡаршы сыҡҡан кешенең алдын бер ҡасан да ҡояш яҡтыртмаған һәм яҡтыртмаясаҡ. Һатлыҡ — өмөттән мәхрүм...

Митрофан, ҡан баҫҡан күҙҙәрен зәһәрле йылтыратып, тирә-яғына тағы бер ҡарап алды:

— Етәр һеҙгә, сусҡалар!

Күҙҙәре тоноп, телдәре көрмәлеп бөткән бер нисә иҫерек мығырҙап ҡуйҙы:

— Ар-раҡы да-уай! Эс-сергә икән, эс-сергә!

— Бар-рыбер үл-лергә!

Әбделғасим табынға тағы шешәләр өҫтәтте.

— Эсегеҙ, ну, кәрәк саҡта, һәр кем айныҡ, һәр кем үҙенә йөкләнгәнде атҡарырлыҡ булһын! Бер һелтәнеүҙә үҙ ауылындағы коммундың тамырын ҡороторлоҡ булмаһа... Ҡарағыҙ! Аяу булмаясаҡ! — тип ҡаты иҫкәртергә лә онотманы. — Тауыҡ себештәре кеүек сырылдатып, ГПУ-ға тапшырып бөтәсәкмен, белегеҙ уны!..

Унан, һүҙ бөткәнде белдереп, ишеккә юнәлде. Иҫереп йығылғандар араһынан Биктимер шыуышып уның юлына арҡыры ятты.

— Ағай, ағай! Туҡта әле. Тыңла әле... Үтенесем бар...

Әбделғасим, сирҡанып, уны эт балаһы шикелле тибеп ырғытты:

— Был кем? — тип табындағыларға аҡайып ҡараны. — Таныш йөҙ түгел һымаҡ...

— Ҡеһ-еһ... — тип тағы шул үҙенең ерәнгес көлөүен ҡабатланы Шымбай ҡарт. — Был бит Биктимер. Беҙҙең Ғаббас муллаға ғүмере буйы тоғро хеҙмәт итте... Ҡеһ-кеһ... Ә хәҙер һин уға, Әбделғасим әфәнде, иң главный коммундың башын тапшырҙың... Оноттоңмо ни... Бер айғыр вәғәҙә иттең.

— Ах, шул егетме ни әле?! — тип яһалма илгәҙәк тауышҡа күсте хужа. — Дөрөҫ шул, бына тигән аҫау айғыр әҙер уға... Ҡолаҡ һалһын әле, ана ҡалай кешнәп, һарайға һыймай ажарланып йөрөй... Ҡылаһы эшеңде ҡыл да мен дә сап! Ел дә ҡыуып етә алмаҫ!.. Ха-ха, шулай бит, ә, егет?!

Биктимер тағы уҡталып уның яғына шыуышты.

— Ағай, тим... Булдыра алмам... Хаммат ағайға ҡул күтәрә алмам...

— Хаммат ағай түгел, ә кафыр — коммун! — тип иҫкәртте Шымбай ҡарт, инде айныҡ, уҫал ыҫылдап. — Һин бит, бер кафырҙы үлтереп кенә ожмахҡа инмәһәм, олатай, былай бер ҙә инер әмәлем юҡ, намаҙ, доға белмәйем, иманды ла онотоп ҡына торам, тип зарланғайның. Шуға ғына бит, һине йәлләп кенә бит беҙ, был бахыр донъяла рәхәт күрмәне, әйҙә бер бәндә икән, теге донъяла хур ҡыҙҙарын ҡосоп кинәнһен тип кенә был изге эште тапшырғайныҡ үҙеңә...

— Ул бит бәһлеүән! Минең көсөм етәме ни уға? — тип ыңғырашты Биктимер. Күрәһең, эсеп алғас, күңеле йомшарып китте. — Унан һуң мин уны...

— Ул бәһлеүән булһа, һинең ҡулда бүре һуга торған суҡмар, — тине Әбделғасим. — Етмәһә, төн. Ҡара төн, аңланыңмы? Ул бер ни уйламай, шикләнмәй эре генә эштән ҡайтып бара. Ә һин боҫоп көтөп тораһың... Шулай булғас, көс кем яғында?! Йә, уйлап ҡара әле? Ахмаҡ!

— Биктимер, иң главный коммун һиңә ышанып тапшырылған икән, бында иң главный ҡунаҡ һин! — тип мыҫҡыллы көлөп, араҡы һемереп ултырған Әхмәтша ла

һүҙгә ҡысылды. — Шыма башҡарһаң, был донъяла ла, теге донъяла ла дәрәжәң артасаҡ!

— Ә яҙа һуҡһаң — был донъяла ла, теге донъяла ла һиңә бер генә нәмә — тамуҡ! — тип өҫтәне Әбделғасим.— Үҙем төртөп төшөрәсәкмен һине ете йәһәннәм төбөнә! Кем менән һөйләшкәнеңде онотма!

Биктимер бүтән тауыш сығарманы, әллә иҫереп, әллә илап, шыңшый-шыңшый иҙәндә аунап ятып ҡалды.

Әбделғасим уның бөйөрөнә тағы бер тапҡыр өҙгәнсе типте лә:

— Ҡире ҡайтауыллаһаң — иҫәр башыңа бер пуля, — тип тағы бер иҫкәртеп сығып китте.

— Ҡеһ-кеһ-кеһ... — тип, һыны ҡатып, сыйылдап көлөп ҡалды Шымбай ҡарт. — Эс-сә-йек!

Бөтәһе лә ҡалтырана-ҡалтырана кружкаға үрелде. Әхмәтша Биктимерҙе яғаһынан һелкетә тартып торғоҙоп ултыртты ла ҙур тимер кружканы мөлдөрәмә тултырып араҡы бирҙе.

— Эс. Барыбер эшең бөткән. Йә Хаммат, йәки үҙең! Башҡа юл юҡ!

Бите-башы бысранып-шешенеп кеше төҫөн юғалтҡан Биктимер һоғаланып кружкаға йәбеште.

— Их-х, бөткән баш бөткән...

## VII

Быйыл күп урында ауыл хужалығы артелдәре, урмантаулы урындарҙа һөнәрселек артелдәре күпләп төҙөлә башланы. Волость етәкселәре алдында хәҙер ауыр ҡыштан һуң бик әкренләп, һуңлап килгән яҙғы сәсеүҙе ойошҡан рәүештә уҙғарыу, сәсеүгә тәүтапҡыр ширкәт йәки артель булып тотонасаҡ ярлы-батракка һәр аҙымда тейешле ярҙам ойоштороу бурысы тора. Шуның өҫтәүенә әлегә биле һындырылып бөтмәгән синфи дошмандың яуыз эшен алдан һиҙеп, тейешле сара күреп тә торорға кәрәк. Бына ошондай яуаплы эштәр менән ҡайнап үтә ине хәҙер Хамматтың көндәре. Ул хатта яҙғы ала ҡар ваҡыты булыуға ла, юлһыҙлыҡҡа ла ҡарамаҫтан, өҙлөкһөҙ ауылдарҙа йөрөй. Иртүк ер туңаҙыған саҡта ат эйәрләп менә лә ауылдарға сығып китә, төндә, юл туңаҙығас ҡына ҡайтып килә. Күп ваҡыт, алыҫ ауылдарға киткәндә, төнгә лә ҡайта алмай. Бына ул бөгөнгө кисен Ирмән ауылының ярлы-батрагы менән әңгәмә үткәреүгә арнаны.

Быгаса малсылыҡ, урмансылыҡ менән генә көн күргән был ауылда быйыл ул сиҙәм астырып, һис юғы үҙҙәренә етерлек бойҙай сәстерергә иҫәп тота. Шуның өҫтәүенә документтәренә ҡарағанда, Әбделғасим Әбделмөслимов ошо ауылдан бит. Шулай булғас, уның ысын йөҙөн белергә, уға яҡшыраҡ төшөнөргә кәрәк икән, әлбиттә, үҙ ауылында ғына быға ирешергә мөмкин дәбаһа... Юҡһа, ул кеше Хамматтың күңеленә бик шикле уйҙар һала башланы бит әле...

«Эйе, ул бөгөн бында ярлы-батрак менән яҡындан һөйләшергә тейеш. Яңы, йәш совет илен төҙөүҙәге ауырлыҡтар хаҡында ла, уның яҡты киләсәге хаҡында ла һөйләргә, уларҙың күңеленә революцион ҡараш орлоғо сәсергә, партияның, совет хөкүмәтенең ауылға ҡарата булған изге эштәренә аяҡ салырға маташыусы дошманлыҡ эштәре хаҡында әйтергә лә онотмаҫҡа кәрәк», — тип әңгәмәһенең йөкмәткеһе хаҡында ҡат-ҡат уйлап алды Хаммат. «Шул саҡ бәлки берәйһе тороп Әбделғасим хаҡында һөйләп бирер... Бәлки уның ҡара эшен белеүселәр барҙыр бында...» — тип тә өмөт итә. Ысынлап та, уҙған йыл ҡулға алынған урман хужалығы мөдире Әбделмөслимовтың ҡара эшен кемдер дауам итеүе асыҡ бит. Ә кем? Әбделғасим Әбделмөслимов уның туғаны түгелме? Үҙе раҫлағанса, ул ошо Ирмән ауылыныҡымы? Әллә буш һүҙме был?!

Ҡыҫҡаһы, ҡара урман, текә тауҙар араһында ҡыҫылып ҡалған был кескәй генә ауылда яуап табаһы һорауҙары бик күп ине Хамматтың. Тик бына нисек уларҙың күңел асҡысын табырға? Һин биргән һорауға яуап биреп кенә барамы ни улар. Һөйләшә белмәһәң, төптө лә ауыҙын астыра алмаҫҡа мөмкин уларҙың... Тик уларҙың ышаныусын, хөрмәтен ҡаҙана алһаң ғына, хөрмәт һәм ихтирам... Ышаныс яулаһаң ғына... Ә был эш бик үк еңел түгел... Халыҡ араһында эшләү тәжрибәһе талап итә...

Хаммат һуңғы ваҡытта был ауылда йыш була. Һәр кеше менән йыйылышта ғына түгел, айырым-айырым да әңгәмә үткәрергә, яҡшылап танышырға, ғаилә, тормош хәлдәренә хәтле ентекләп белергә тырыша. Бөгөн дә ул бына ашыҡмай, ҡабаланмай ғына улар менән яҡын итеп һөйләшеп ултыра. Әңгәмәгә ҡатнашыусыларҙың һәр береһенә оҙаҡ-оҙаҡ, ентекләп ҡарап ала. Һәр ҡайһыһы таныш, яҡын, асыҡ, аңлайышлы һымаҡ... Эш, нужа дарьяһын туйғансы кискән, әммә, сабый бала шикелле

доньяға ғашиҡ булып, яҡтырып йәшәгән кешеләр... Тик бынауы үтә дәү кәүҙәле, көйәнтә яурынлы, төрпә мыйыҡлы кешене тәүтапҡыр күрә һымаҡ... Йөҙө томһа, ҡашы төйөлгән... Иң артҡа, мөйөшкә боҫоп ҡына ултырып алған... Эйе, шулай, ҡараштары ризаһыҙ ҙа, ҡайғылы ла һымаҡ... Үҙен күрмәһендәр, һөйләшмәһендәр, тип боҫоп ултырған һымаҡ... Ысынлап та, уның берсә янып, берсә бошоноп киткән ҙур ҡара күҙҙәре ҡеүәтле кәүҙәһенә һис тә хас түгел шикелле. Етмәһә, ул үҙе бында ултырһа ла, күңеле ҡайҙалыр ситтә кеүек... Эйе, уның ниндәйҙер бөтөн бер көйөгә барҙыр, бындағыларҙы күрмәй ҙә, ишетмәй ҙә, бөтөнләй икенсе хаҡта уйланып, бошоноп ултыралыр ул... Шулай был кеше, күренеп тора, төптө үҙенә бикләнгән... Уның үҙенә, бер үҙенә генә билдәле булған ауыр хәстәре бар, шул хаҡта баш ватып ултыра ул... Һис шикһеҙ шулай... Ә ниндәй хәстәр? Ниндәй тос уй ята уның күңелендә? — тип, сабырһыҙланып баш вата һаман Хаммат та. — Нисек уның серен белергә?!.

Ҡара урманлы текә тауҙар араһында ятҡан, яраҡлы ере бик аҙ булған был ауылда, әлбиттә, колхоз төҙөп, игенселек эшен ойоштороп ебәреү хаҡында һүҙ алып барыуы ауыр ине. Ә бына малсылыҡ, урмансылыҡ, умартасылыҡ кеүек хужалыҡ тармаҡтарын берләштереп, көслө артель төҙөп ебәрергә мөмкинлектәр етерлек. Күпселеге ҡул һөнәре менән көн күргән ярлы-ябағанан торғанлыҡтан, артель хужалығына берләшеүгә бында киҫкен ҡаршылыҡтар булманы тип әйтерлек. Шулай ҙа ҡурҡып-боҫоп ситтә ҡалырға теләүселәр ҙә юҡ түгел ине. Бөгөнгө йыйылыш, асылда, шундайҙарға берҙәм тормоштоң өҫтөнлөгөн тағы бер ҡат аңлатып, уларҙы араға тартыу маҡсаты менән йыйылғайны. Артелгә инмәй ситләшеп йөрөүселәр араһында әле Хамматтың иғтибарын биләгән баяғы һоро сәкмәнле, терпе мыйыҡлы кеше лә бар ине. Артель файҙаһына алып барылған өндәмәләр уға әлегә һис тә тәьҫир итмәне. Ул йә төптө өндәшмәү, йә «өлгөрөрмөн әле...» тип ҡул һелтәү менән генә ҡәнәғәтләнә ине. Был юлы ла ул үҙенең шул ҡылығына тоғро булып ҡалды. Бер ни ҙә әйтмәне. Ә бит үҙе ауылда иң ярлының да ярлыһы...

«Миңә үҙемә һөйләшергә кәрәк уның менән... Һөйләшергә, айырым һөйләшергә...— тип уйлай тағы Хаммат.— Кем белә, бәлки, ауыр ҡайғыһы барҙыр, бәлки, берәй ашығыс ярҙам кәрәктер... Бәлки... Бәлки... Туҡта әле....

Әбделғасим хаҡында унан берәй нәмә белеп булмаҫмы икән? Аҙ һүҙлеләр, ғәҙәттә, күп уйлаусан, күп белеүсән кеше булалар...»

Йыйылыш бөткәс, артель председателенең үҙ өйөнә саҡырыуына ла, «төндә айыу, бүре беҙҙә уғата баҙнатлыланып китеүсән», — тип кинәйәләп, былай һуң юл сығыуҙың хәтәрлеген аңлатырға тырышыуына ла ҡарамаҫтан, Хаммат ҡалманы.

— Ер туңаҙыған саҡта ҡайтып ҡалайым, — тине. — Көндөҙ, үҙең беләһең, яҙ яҙлығын итә. Ҡар башына — ҡар етә. Яҙғы ташҡын юлсының юлына мең кәртә ҡора. Күрәһең, ул да минең ауылдарҙы тыныс ҡалдырыуымды теләй, — тип мәрәкәләне лә, хушлашып, атына һикереп менде. Әммә ул ҡайтып китмәне. Ауылды сыҡты ла, арт яҡлап, урам осондағы иң кескәй, емерек тип әйтерлек бер өйгә килеп туҡтаны. Иртәнсәк, был ауылға килеп ингән дә, баяғы бәһлеүән ирҙе ошо өйҙөң ишек алдында күреп ҡалғайны кеүек тойолдо уға хәҙер. Ни өсөндөр шул саҡта уҡ уның иғтибарын биләгәйне был кеше. Шул хәтле бәләкәс, тәпәш өйгә һис тә хас булмаған дәү кәүҙәле булғанғалыр, бәлки... Бәлки, үҙен әллә ниндәй бошонҡомо, хафалымы ҡараш менән оҙатып ҡалғанғалыр?..

— Хужа өйҙәме? Ҡунып китергә булмаҫмы? — тип ул әкрен генә тәҙрә ҡаҡты. Өйҙә саҡ ҡына ут быҙлай, кемдер мөңгөр-мөңгөр һөйләшә ине. Ҡапыл ут һүнде, тауыш тынды.

«Өйөнә лә индермәҫме икән ни был мыштым?! — тип йылмайып алды Хаммат. — Был бит беҙҙең ҡунаҡсыллыҡ ғәҙәтенә хилаф була лабаһа!.. Ә мин тағы өйөндә, яңғыҙ үҙе булғанда уның менән һөйләшеп булыр тип ышанған булдым...»

Әкрен генә шығырҙап солан ишеге асылды. Тәпәш өйҙән, дәү кәүҙәле, һоро сәкмәнле баяғы кеше ҡалҡып сыҡты.

— Ҡунып китергә мөмкин булмаҫмы? — тип ҡабатланы Хаммат. — Йыйылыштан һуң туҡтамай ҡайтырға сыҡҡайным да, һуң икән. Таңды көтөргә булдым.

Дәү кеше өнһөҙ-һүҙһеҙ генә тупһанан төштө, аттың юғәненән етәкләп алды. Был үҙенсә: «Рәхим ит, ҡунағым бул», — тигәнде аңлата ине. Ат алдына бер һәнәк бесән ырғытты.

Хаммат ҡыуыҡһыҙ лампаның һөрөмө һеңгән ҡараңғы өйҙөң ишек төбөндә туҡтала биреп торҙо. Әллә шыпа ят

өйгә инеүҙән аҙыраҡ шикләнде, әллә ошо хәтле ярлылыҡта ыҙа сиккән кешеләрҙе төндә лә мәшәкәтләп йөрөүе өсөн уңайһыҙланды.

— Түрҙән уҙ, — тине хужа, үтә баҫалҡы, үҙәк өҙгөс йомоҡло тауыш менән. — Бына түмәр, ултыр.

— Арыҫлан улым, самауырҙы яңыртайыммы?

— Яңырт.

«Әһә, егеттең исеме лә мәғлүм булды, — тип уйланы Хаммат. — Арыҫлан. Ҡәүҙәһенә, ҡарашына хас исем, ә тормошона?!»

Урындыҡта күмәге бер ҡорама юрған ябынып дүртбиш бала йоҡлай. Арала малай баштары ла, ҡыҙ баштары ла күренә. Түрьяҡ мөйөштәге урын буш. Күрәһең, ул атай кешегә әҙерләнгән. Уның янында ун-ун бер йәштәрҙә булыр, ҙур башлы арыҡ бер малай ҡолас ташлап йоҡлап ята. Һул яҡ мөйөштә өләсәһенең мендәренә танауын терәп, ике-өс йәшлек ҡыҙ бала йоҡлай: «Әсәләре ҡайҙа икән һуң быларҙың?!»

Урындыҡ менән усаҡ араһындағы һикелә әле генә әселгән сәй урыны тора. Хаммат, күрәһең, быуаттар буйы ултырғыс хеҙмәтен үтәп, һөйәк шикелле шымарып, ялтырап бөткән ҡарағас түмәргә ултырҙы. Урындыҡ яғына күҙ ташлап:

— Был ялбыр баштар етерлек кенә икән һиндә! — тип экрен генә көлөп ҡуйҙы. — Нисәү?

— Алтау ғына...

— Һәйбәт.

— Һәйбәтлеген һәйбәт тә ни... Үҫтереп китеп булырмы, юҡмы...

— Бынауындай бәһлеүән атай ҙа үҫтерә алмаһа?!

— Ҡалыбы ҙур булыу менәнме ни ул... Эсе буш булгас... — тип, күңелһеҙ кинәйәләп яуап бирҙе хужа.

— Һиңенсә, кем һуң уның эсен тултырырға тейеш? Һорау яуапһыҙ ҡалды.

Арыҫландың әсәһе алтмыш йәштәрҙәге еңел һөйәкле ҡаҡса әбей ҡолаҡ янынан үтә нык йәмшәйгән, һемәгенән һыу тамсылап торған еҙ самауырҙы шаулатып килтереп ултыртты. Көлгә күмеп бешергән сөсө икмәкте апаҡ итеп йыуылған киндер ашъяулыҡҡа ваҡ ҡына итеп бүлгеләп һалды. Янсыҡтай ғына киндер муҡсанан берничә шаҡмаҡ шәкәр ҙә тапты, сынаяҡтарға ҡуйы итеп һөттө сәй яһап ирҙәр алдына ҡуйҙы.

— Рәхим итеп кенә ашап-эсеп ебәрегеҙ. Һый-хөрмәт бар, аллаға шөкөр...

Хаммат әбейҙең йыйырсыҡлы тыныс йөҙөнә, әҙәпле, түбәнселекле ҡарашына иғтибар менән күҙ ташлап, күңеленән уның һүҙен ҡабатлап ҡуйҙы:

«Һый-хөрмәт бар. Аллаға шөкөр...» Юҡ, был һүҙҙе әбей юрый әйтмәй. Икмәк, сәй, шәкәр булғас, ул ҡәнәғәт. Йыш ҡына икмәкһеҙ көндәрҙе күреп йәшәгән кешеләрҙә генә була торған баҫалҡы ҡәнәғәтлек яҙылған уның йөҙөнә. Беҙҙең халыҡтың шулай үтә аҙ менән ҡәнәғәт булып, баҫылып, иҙелеп йәшәүгә күнегеп китеүенең һөҙөмтәһе түгелме икән был үкһеҙ ярлылыҡ?!.

Әбей үҙе лә улы шикелле үк һүҙгә һаран булып сыҡты. Хаммат халыҡтың күпселегенә хас ошо бөлгөнлөктө йәһәтерәк еңеү, аслыҡ, яланғаслыҡ күрмәй, кәмһетеү, ситләтеү татымай үҫкән шат, көләс йәш быуынды тиҙерәк күреү теләге менән тағы ла түҙемһеҙ уйланып, үҙе лә һөйләр һүҙен башлай алмай ултырҙы. Оҙаҡламай сәй урыны ла йыйылды. Әбей, күрәһең, үҙенең ғәҙәти булып киткән һүҙен:

«Алла, бисмилла... Ярабби, биргәнеңә шөкөр», — тип тыныс ҡына ҡабатланы ла урынына ауҙы. Мендәргә танауын терәп рәхәт мышылдап ятҡан өс йәшлек ҡыҙҙы тупылдатып һөйөп алды һәм шунда уҡ үҙе лә йоҡлап китте.

«Ни хәтле арығанлыҡ, өмөтһөҙ баш эйгәнлек хөкөм һөрә әле бында?! — тип тағы әсенеп уйланды Хаммат. — Уларҙы был мәңгелек ҡаты йоҡонан һелкетеп уятырҙай, тырышып-тырмашып яҡтыға, бәхеткә ынтылырлыҡ хәлгә килтерерҙәй көслө кешеләр кәрәк бит бында!»

— Һин бынауында, минең урында ятырһың.

Хаммат, был һүрәнке тауышҡа ҡапыл тертләп, хужаға күтәрелеп ҡараны.

— Юҡ, юҡ, ятып тормам. Оҙаҡламай таң атыр. Мин китермен.

— Мәйелең.

Арыҫлан, киң елкәһен тәпәш стенаға нығыраҡ терәп, йәтешләнеп ултырҙы ла тынды. Хаммат һөйләшәһе һүҙен уратыбыраҡ башларға тырышты:

— Был балаларҙың әсәһе берәй ергә ҡунаҡҡа киткәнме эллә?

— Киткән... — тине Арыҫлан, әсе йылмайып. — Икенсе, яҡшыраҡ донъяға...

— Шулай йәшләй?!

— Утыҙ йәшендә... Анау әсәйем янында ятҡан ҡыҙҙы тыуҙырҙы ла...

Һүҙ тағы өҙөлдө. Хаммат уны ҡайҙан, нисек ҡайтанан башлап ебәрергә, был аҙ һүҙле кешенең телен нисек асырға тип уйланып ултырған арала, Арыҫлан ҡапыл ҡурҡынған һымаҡ итеп уға төбәлде:

— Ағай, һинең беҙгә төшөүеңде берәйһе күреп ҡалманымы?!

Хамматтың күңеленә шик югерҙе. Ҡеҫәһендәге браунинген һиҙҙермәй генә ҡапшай биреп ҡуйҙы: «Берәһе лә күрмәһә, белмәһә, был кеше миңә нимә эшләргә уйлай, оллә... Булмаҫ та... Булһа ла, былдай ғына хәтәр эштәрҙе күргән баш бит әле...» — Шулай ҙа ул дөрөҫөн әйтте:

— Юҡ, бер кем дә. Мине ҡайтып китте тип иҫәпләйҙәр...

Арыҫландың бошонҡо төйнәлгән ҡаштары яҙылып, йөҙөнән ҡурҡыу шәүләһе юйылып киткән һымаҡ булды.

— Улай булһа... Таңдан, кеше күрмәҫтән, китәһе лә булһаң... Ағай, мин һиңә бер сер һөйләр инем... Тик ҡара, минән ишеткәнеңде хатта әсәңә лә әйтмә... Бынауы балалар хаҡына үҙең генә бел... Юҡһа, балалар үкһеҙ етем ҡалыр. Аңлайһыңдыр, тим?!

Томһа егеттең теле асыла башлауға кинәнеүен һиҙҙермәҫкә тырышып, Хаммат оҙаҡ ҡына тынып ултырҙы. Унан ғәмһеҙерәк тыныс тауыш менән:

— Ләм-мим, — тип ҡуйҙы. — Сер икән — сер булып ҡалыр.

Хужа ҡунаҡҡа яҡынырaҡ шылып ултырҙы. Өйҙә һис бер сит кеше булмаһа ла, яҡ-яғына шөбһәле ҡарап алды, унан үтә тоноҡ күкрәк тауышы менән:

— Әбделғасим Әбделмөслимов хаҡында әйтмәксе инем... — тип бышылданы.

— Ә, теге беҙҙең потребкооперация мөдире хаҡындамы ни? — тине Хаммат һаман һис ни белмәгән, бер ҙә ҡыҙыҡһынмаған тауыш менән. — Әбделғасим ағай... Ә, эйе, ул бит әле ошо ауылдыҡы!

— «Ағай», имеш... һин уның кем икәнен белһәң, ағай тимәҫ инең. Белмәйһең икән шул әле... — тип уйлап, бошоноп ултырҙы Арыҫлан. Унан ниндәйҙер сая өмөтһөҙлөк менән ҡул һелтәне лә:

— Был ауылдан түгел ул, — тип хатта асыуланып уҡ әйтеп һалды. — Мөслимдеке бит ул. Ундағы хужалығын

өлкән ҡатыны, үҙе кеүек үк ҡомһоҙ, йәнһеҙ бисә алып бара. Мөслимдә уның уландарының, ҡыҙҙарының иҫәбе-һаны юҡ... Өйөр-өйөр йылҡы, көтөү-көтөү ҡуй, һарыҡ, кәзә, һыйыр тиһеңме, уныҡы...

Уның инде әллә нисә улы-ҡыҙы Өфөлә, Ҡазанда уҡып йөрөй... Бер улы Ырымбурҙа, Башҡорт педагогия техникумында уҡый... «Емер Яшинский» тигән ҡушамат алған үҙенә... Бәлки ишеткәнең барҙыр, ағай? Йәйгелеккә ҡайтҡан һайын байлыҡтан шашып, әллә нисә ҡыҙҙы алдап китә... Ата-әсәләре ут йотһалар ҙа, ауыҙ асып бер ни әйтә алмай. Әбделмөслимовтарҙан ҡурҡа...

— Һин ошоларҙы белһәң дә, ҡурҡып әйтмәйһеңме?

— Мин генәме ни... Бөтәһе лә ҡурҡа. Ҡешенең башы икәү түгел бит... Әбделғасимдең ҡулында байлыҡ та, власть тә... Ана беҙҙең артель председателе лә әйтмәгәндер әле... ул да ҡурҡа.

— Шулай уҡ усал, көслөмө ни ул?

— Һе... уҫалмы?! Уҫал ғына тип әйтеүе аҙ. Эсе тулы мәкерлек, яуызлыҡ, ҡанһыҙлыҡ бит уның!.. Әгәр теләй икән, көпә-көндөҙ башыңды өҙҙөрөп ҡултығыңа ҡыҫтыртып ебәрер... Бер кем бер ни тип тынһын да сығармаҫ... Ә үҙе һаман шулай сихырлы йылмайып, татлы, йылы, йомшаҡ һүҙҙәр һөйләп, хатта кемгәлер, нимә менәндер ярҙам иткеләп йөрөй бирер... Әйтәм бит, үҙенә кәрәк кешеләр алдында һаман шулай иң яҡшы, тыйнаҡ, хатта тырыш хеҙмәткәр булып ҡалыр... Мин күреп торам, Хаммат ағай, ул һинең алдың да ла иң яғымлы, һәйбәт кеше. Шулай бит?!

— Күрәһең, һин уны бик яҡындан беләһең?

— Һе, бөтә ғүмерең шунда батраклыҡта үтһен дә, яҡындан белмә... Үҙәгеңә лә үтмәһен...

Теле асылғанға ҡыуанып, һөйләүҙән туҡтай алмаған сабый кеүек ҡапыл һүҙсәнләнеп киткән был сәйер кешене ниндәйҙер һаҡһыҙ хәрәкәт, урынһыҙ һорау менән өркөтөп туҡтатыуҙан ҡурҡып, ахыры, Хаммат һирәк-һаяҡ ҡына һүҙгә ҡатнашып, иғтибар менән тыңлап ултырыуҙы артыҡ күрҙе.

— Балаларҙың әсәһе менән беҙ икәүләп Әбделғасимдә ун йыл ялсылыҡ иттек, — тип Арыҫлан бошонҡо ғына дауам итте. — Йәш көсөбөҙҙө аямай түктек... Ә уларға беҙҙең көсөбөҙ генә түгел, йәнебеҙ ҙә кәрәк булып сыҡты... Ниндәй генә сир теймәһен, бисәм аяғүрә уҙғарып ебәрер ине. Тик бынауы кесе ҡыҙыбыҙ тыуғанда биреш-

— Нисек бирешмәһен, аҙ ғына ла ятып торорға бирмәне уның зәһәрле ҡарт бисәһе... Баланан бушанғандың иртәгеһенә үк төрткөләп-типкеләп торғоҙоп ебәрҙе. Ун-ун биш һыйыр һауырға, кер йыуырға, бай бисәне мунса ягып йыуындырырға ни хәтле көс кәрәк ине, бахырға... Шунан өҙлөктө...

Арыҫлан һүҙенең ошо урынында бик оҙаҡ тынып ултырҙы. Унан тағы ла ҡайғылыраҡ һәм ҡалтыранған тауыш менән:

— Өс йыл үтте, әммә ошоғаса һылыуымдың нисек ыҙаланып, аҙарынып ятыуы, «һай балаларым, балаларым...» тип өҙгөләнеп донъя ҡуйыуы әле булһа күҙ алдымда шул көйө тора... — тип үҙенең һағышлы хикәйәһен дауам итте. — Бахырҡайым, шулай, йән биргәнсе, балаларым, тип өҙөштө. Үҙенең ваҡытһыҙ өҙөлгән йәш ғүмере хаҡында телгә лә алманы... Бына ниндәй кеше ине минең бисәкәй... Йөҙө, һыны менән дә, йәне-йөрәге менән дә һылыуҙарҙың һылыуы ине, мәрхүмә...

Арыҫлан ҙур, тос ҡулын өмөтһөҙ һелтәп, тағы тынып ҡалды. Хаммат сабырлыҡ менән көттө. Бер генә һүҙ, бер генә хәрәкәт менән дә уны ҡыҫтаманы.

— Шунан, бына бер йыл инде, балаларымды алып, өйөмә ҡайтып килдем. Ҡәртсәләре янына ҡайтҡас, балаларға еңелерәк булды. Улар бит икмәккә генә түгел, йылы һүҙ, яҡты йөҙгә лә мохтаж. Үҙем ҡайҙа ла йән йылыһы таба алмайым... Онота алмайым балаларҙың әсәһен...

— Бик яратҡанһыңдыр шул?

— Һе, яратҡанһыңдыр... Улай ғына әйтеү аҙ... Уйлап-уйлап ҡарайым да, минеңсә, беҙҙең икебеҙҙә бер йән, бер йөрәк булған... Бергә яна, бергә һүнә торған...

Ул, үҙенең был һүҙенән тертләп киткән һымаҡ булып, ҡапыл Хамматҡа күтәрелеп ҡараны. Артыҡ нескәлеккә бирелеп йөрәк яраһын асып һалғанға уңайһыҙланып ахыры тағы туҡталып ҡалды.

— Улай-й икән... — тип Хаммат та ауыр ғына көрһөнөп алды: — Яратҡан ҡатынды юғалтыу яғынан беҙ ҡайғылаш икәнбеҙ, — тип өҫтәне. — Була торған хәл. Ни эшләйһең бит.

— Эйе шул... — тине Арыҫлан, — беләм. Шуға минең хәлемде аңларыңды тойоп һөйләйем дә...

— Нисек беләһең?! — тип, тертләп киткәндәй итеп, Хаммат Арыҫланға төбәп ҡараны. Һәм шунда уҡ, ҡайта-

нан тыныс, хатта ғәмһеҙ төҫ алып, — уныһын беләһеңдер ҙә, ҡустым, ә бына халыҡ бындай саҡта нимә ти, күрәм, белеп етмәйһең, — тип ҡуйҙы. «Үлгән артынан үлеп булмай. Тере кеше йәшәргә тырышырға, һәйбәт эш менән донъяны матурларға тейеш», ти бит халыҡ! Шулай бит, ә?

— Уныһы ла дөрөҫ шул...

— Икенсенән, һинең кеүек батрактарға хөкүмәттең ат, һыйыр алыр өсөн аҡсалата ярҙам биреүен дә белмәйһең, ахыры?

— Әбделғасим әйтә, ул закон булғайны ла, бөтөрөлдө, ти...

— Һин ниңә унан һорайһың? Уның кем икәнен белә тороп, ә?

— Башҡа берәүгә барып һөйләшеп йөрөүеңде һиҙеп ҡалһа, йәшәтәме ни ул? Ундай бер ҡатлылар булғыланы...

— Хәҙер булмаҫ. Ҡурҡма.

— Ҡурҡмаҫҡа ине лә бит...

— Әбделғасимдең кемлеген аңлатыуың өсөн ҙур рәхмәт һиңә, — тип Хаммат уның һүҙен өҙҙө. — Мин һиңә бына нимә әйтмәксе булам: ундайҙарҙан ҡурҡыр заман уҙғанын һин аңларға тейешһең... Бала түгелһең... Һөйләшеү әлегә сер булып ҡалһын тигән һүҙең дөрөҫ. Йыртҡыс та бит эҙенә төшә башлағанды һиҙһә, һағая... Һағая ла, ажарлана ла... Ә һиңә, ҡустым, кәңәш шул: иртәгә үк, нисек тә рәтен табып, волоскә сыҡ. Мин һиңә ат, һыйыр алырлыҡ ваҡытлы ярҙам бирҙертә алырмын, тип ышанам. Тик туп-тура үҙемә ин, яраймы?

— Һай-й, ат, һыйыр булһа, эшенә аптырамаҫ инем дә бит! — тип күңеле күтәрелеп китте Арыҫландың. — Үгеҙ кеүек эшләр, балаларҙы астан йөҙәтмәҫ инем...

— Икенсе кәңәш — артелгә ин. Һинең урының унда. Яңғыҙ башҡа тормошто рәтләп булмай ул. Беләм.

— Ярар, ағай. Кәңәшеңде тоторға тырышырмын.

— Вот, шулай артелгә инергә, уны нығытырға ярҙамлашырға кәрәк. Сөнки берҙәм хужалыҡтар бына һинең кеүек ярлы-батрактар тормошон нығытыу өсөн төҙөлә. Һинең балаларың да ҡалаларҙа уҡып йөрөрлөк тормошта йәшәһен өсөн... Үҙең әйтәһең бит, ана Әбделғасимдең балалары нисек ҡалаға урынлашып бөткәндәр... Ә бит ул уҡыу йорттары һинең кеүектәрҙең балалары өсөн асылған!

— Шулайҙыр, моғайын.

— Моғайын ҡүгел, төптә шулай, — тине Хаммат, ...оп. — Минеңсә, быны шулай икәнен һин үҙең дә яҡшы ...илайһың. Тик киреленкә генә һалышаһың... Беҙҙең ха...лыкта кирелек бар ул.

— Уныһы ла дөрөҫтөр, моғайын.

Хаммат уға яратып һәм ҡыуанып оҙаҡ ҡына ҡарап торҙо. Оҙаҡ йылдар һаҡлап килгән йәшерен серен асып һалғанғамы әллә әңгәмәнең шундай ябай һәм яғымлы булып сығыуынан ҡыуаныуҙанмы, Арыҫландың йөҙө генә түгел, холҡо ла үҙгәргән, яҡтыраҡ, өмөтлөрәк булып киткән һымаҡ ине.

— Йә, ярай, мин китәйем. Таң һыҙылған бит. Ҡара һин уны, оҙаҡ һөйләшкәнбеҙ... Волоскә барғанда туп-тура үҙемә төш. Тағы шулай һөйләшеп ултырырбыҙ. Булдымы? Ҡурҡма! Йә, хуш!

Баһадир кәүҙәле ике ир бер-берeһенә оҙаҡ итеп дуҫтарса ҡарап торҙолар.

— Әсәйегеҙ иҫәнме әле? — тип һорап ҡуйҙы шул саҡ Арыҫлан. — Бик мөләйем кеше күренә ине.

— Һин уны ҡайҙан беләһең? — тине Хаммат, аптырап. — Ҡара һин уны, белмәгән кешең юҡ икән дәһә!

Арыҫлан да баҫалҡы ғына йылмайып ҡуйҙы.

— Өсөнсө йыл Байгилде ағайҙың ҡыҙын ҡаланан алып ҡайтҡанда күреп ҡалғайным.

— Бәй, Емеште алып ҡайтҡан кеше һинме ни ул?! — тип тағы ла аптырабыраҡ китте Хаммат. — Әсәйем мәрхүм, ниндәйҙер бик сәйер, изге күңелле кеше ҡыҙыбыҙҙы иҫән-һау алып ҡайтып тапшырып китте, тип ҡыуанып һөйләгәйне. Тик сәй эсеп тә китмәне, шуныһы күңелгә ауыр булды, тип үкенгәйне...

— Мәрхүм булып ҡуйҙымы ни инде әсәйегеҙ?

— Былтыр ҡыш.

— Алла урынын ожмахта итһен...

— Атың да булмағас, нисек һуң һин ҡалаға барып сыҡҡайның? — тип үҙ нәүбәтендә Хаммат тағы уға һорау менән ҡараны. — Бал да һатҡанһың шикелле...

— Ул саҡта мин Әбделғасимдең әлеге шул ҡарт биәһендә ялсылыҡта инем бит әле... Улар минән гел шулай ҡалаға бал, май ебәреп һаттыралар ине...

— Быңа нисек?!

— Шунда Емеш мине үҙе килеп тапты. Йән тартмаһа ла, ҡан тарта, тигәндәр бит...

— Нисек, туғанлыҡ бармы ни?!

— Эйе. Байгилде ағай минең оләсәйем яғынан туған тейеш кеше ине. Емеш тә, бәләкәс кенә сағында, беҙҙең ауылға килеп, оләсәйемдә бер йәй йәйләп киткәйне... Ишбикә инәһе Емештең, моғайын, иҫендәлер әле... Оләсәйем мәрхүм уны, атаһын бик һағынғас, Илсеғолға йәйәүләп алып барып ҡайтҡайны...

— Нисек мин һуң быны белмәйем?

— Һин ул саҡта һуғышта булғанһыңдыр, ағай.

— Шулайҙыр. Ә һин Емеште ҡаланан алып ҡайтҡанда ошоларҙы һөйләнеңме уға?

— Юҡ. Һөйләшеү түгел, донъяһына күтәрелеп ҡарағы килмәй йөрөгән саҡ ине.

— Их, һине!.. — Хаммат был үтә сәйер өлкән сабыйҙы ысын-ысындан яратып та, йәлләп тә яурынынан дуҫтарса ҡағып алды. — Ах ҡырағай! Айыу!

Арыҫлан баҫалҡы ғына йылмайып ҡуйҙы:

— Урман төпкөлөндә йәшә лә, айыу булма.

— Йә, ярар, — тине Хаммат. — Хуш.

— Туҡта әле, ағай... — Арыҫлан ҡабаланып уның еңенә тотонғанын тоймай ҡалды. — Саҡ ҡына туҡта әле...

Хамматтың күңеленә йәнә шик югерә биреп ҡуйҙы.

— Ни бар тағы? — тип шөбһәләнеп ҡараны.

— Әйтәһе бик кәрәкле һүҙ ҡалған, — тип уны ишек янынан эскәрәк тартты Арыҫлан. — Мөслимдә, Әбделғасимдең ҡарт бисәһенең өйөндә... — тип, үтә шомло шыбырҙап, кесаҙна төндө Әбделғасим уҙғарған йыйын хаҡында һөйләй башланы.— Әбделғасим менең теш тығыҙлығын белә... «Үлһә лә һөйләмәҫ, ҡурҡыр...» ти. Кәрәк саҡта сақырып эшкә ҡуша. Ул көндө мин уға һарыҡтар һуйыу, ҡымыҙ, буҙа, араҡы ташыу эшенә кәрәк булдым. Шунда күрҙем, уның ҡунаҡ өйөндә Мөслим ауылының бөтә ирҙәре бар ине... Күбенгәнсе ашап-эстеләр... Ә кесе өйҙә әллә ниндәй шикле, яман кешеләрҙе таңға хәтле бикләп һыйланы... Мин уларҙы яҙа-йоҙа ғына күреп ҡалдым... Ни кәңәш ҡороуҙарын ишетмәнем... Әммә беләм, Әбделғасим бушҡа эсермәй ул... Ағай, һаҡлан! Яңғыҙяры юлға сыҡмаһаң да яҡшы булыр ине...

— Ҡурҡма, — тине Хаммат көр тауыш менән, — ундайҙарҙы ғына күргән баш. Аңла, Әбделмөслимовтарҙың түгел, беҙҙең хәкиҡәт, пролетар хәкиҡәт көслө хәҙер. Шулай бит, ҡустым?!.

Ошо ерҙә Арыҫлан түҙмәне, Хамматтың еңенән тота биреп, тағы туҡтатты ла, аҙаҡ, икенсе ваҡытта һөйләр-

мен әле, тип тағы өндәшмәй ҡалырға уйлаған хикәйәтен һөйләп ташланы. Был Закир хаҡында, үҙенең Петроградта ла, Польша фронтында ла Хаммат менән йәпәш полкта һалдат булып хеҙмәт итеүе хаҡындағы хикәйәт ине. Закирҙең һуңғы минуттары хаҡында ла өндәшмәй ҡала алманы. Унан тағы үҙенең фронттан ҡайтҡас, бында күргән аҙаптары, халыҡтың тамам бөлөүе, ярлылыҡтың һуңғы сиккә етеүен, байҙарҙың, нэпмандарҙың ҡотороп байыуы тураһында һөйләп китте. Ошоларҙы күреп, үҙенең рухы төшөүен, ғәҙеллеккә ышанысы юғалыуын, ҡайтанан кисерә-ярһый һөйләне.

— Бөтәһен дә юғалттым... Һуғышта өйрәнеп алған ҡыйыулыҡ та, ышаныс та бөттө... Бер кемгә лә, бер нәмәгә лә ышанмаҫ кешегә әйләндем... — тине.

Ябай хеҙмәт кешеһенең ауыр яҙмышы, зары-моңо хаҡында һөйләнгән был хикмәтле хикәйәтте Хаммат тын да алмай йотлоғоп тыңланы: «Их-х, кешеләрҙе белеп еткермәйбеҙ шул... Бер-беребеҙҙе аңлап еткермәйбеҙ... Үҙебеҙҙең йөрәк ярабыҙ хаҡында үҙ-ара аңлашып, һөйләшеп йәшәй белмәйбеҙ... Беҙҙең халыҡҡа хас булған ошо йомоҡ ҡылыҡ бигерәк тә йөҙәтә, хатта һәләкәткә илтә беҙҙе!..» — тип әсенә-һыҡтана тыңланы. Ә Арыҫланды көр тауыш менән орошто:

— Бының өсөн һине аҡылһыҙ малай кеүек итеп шыйыҡ сыбыҡ менән һуҡтырырға кәрәк ине. Һалдат ҡасан да һалдат булып ҡалырға тейеш бит ул. Көрәшергә кәрәк икән, һуғышырға — еңергә! Үҙе генә түгел, башҡаларҙы ла үҙ артынан көрәшкә ҡуҙғатырға! Ғәҙеллек хаҡлыҡ өсөн, үҙебеҙҙең Совет власе өсөн көрәшергә! Фронтта ғына түгел, бында, хатта ошо кескәй генә ауылда ла, көрәшсе булып, һалдат булып ҡалырға тейеш кеше! Аңлайһыңмы, Арыҫлан?! Йә, был хаҡта беҙ әле һинең менән тағы-тағы һөйләшербеҙ. Хәҙер миңә юлға сығырға ваҡыт...

— Эйе, ваҡыт... Таң һыҙыла...

Улар тәпәш ишектән эйелә-бөгөлә ҡабаланып тышҡа сыҡтылар. Был ваҡытта ысынлап та яҙғы ҡыҫҡа төн үтқайны. Офоҡта алһыу таң һыҙылып ята, өй артындағы ҡарт муйылдың ҡара ботаҡтарын ҡыштырҙатып иртәнге талғын ел иҫә. Ситән башында турғайҙар кемуҙарҙан сипылдаша... Тимәк, улар ҙа терелткес яҙ тынын һиҙә...

— Аһ, һәйбәт... — тип кинәнеп, күкрәк тултырып тын алды Хаммат. Бәлки һөрөмлө кескәй өйҙән тонсоғоп сыҡ-

ҡанғалыр, был таң уғата матур, һауа бығаса бер ҡасан да татылмаған кеүек саф һәм шифалы тойолдо уға. — Һай, һәйбәт тә һуң был донъя тигәнең! Шулай бит, ҡустым?

— Унығы ла дөрөҫ, — тип еңел күтәреп алды Арыҫлан һәм, югерә-атлай, йәһәтләп лапаҫтан атты алып сыҡты. Хаммат, еңел һикереп, эйәргә менеп ултырғас, ҡапҡаның тышына хәтле аттың теҙгенен тотоп, етәкләп барҙы, тар урман юлы менән таң тыуған яҡҡа китеп күҙҙән юғалғансы уны артынан ҡарап ҡалды. «Хәйерле юл һиңә, һәр саҡ хәйерле юл булһын һиңә... — тип үҙе күптән бирле эстән тәрән хөрмәт итеп йөрөгән ҡәҙерле ҡунағы менән хушлашты. — Аллаһы тәғәлә үҙеңде яуыз йәндәрҙән һаҡлаһын...»

Эйе, Оло Эйек буйында ҡасандыр көрәшселек менән дан тотҡан, унан ҡыҙыл командир булып аҡтарға ҡаршы аяуһыҙ һуғышҡан, бер нисә тапҡыр үлемесле яранан тере ҡалған был оло йөрәкле кешене ул бала саҡтан ишетеп тә, күреп тә белә, йөрәгендә уға ҡарата оло хөрмәт һаҡлай ине шул... Әле инде, был һөйләшеүҙән һуң, уғата яҡын һәм ҡәҙерле булып китте был коммунист. Үҙе лә аңламаҫтан, уның өсөн ҡаты хафаланып:

«Һай, атым булһа, менер ҙә артынан сабыр, өйөнә хәтле оҙатып ҡуйыр инем. Яңғыҙ ебәрмәҫ инем...» — тип көйөнөп ҡалды.

* *
*

Һунарсы кейемендә йөрөгән шикле кешеләрҙең, күпмелер юғалып торғандан һуң, тағы унда-бында күренә башлауы хаҡында волкомға хәбәр итергә килгән Иштуғанға секретарҙе арыу уҡ ҡына көтөп ултырырға тура килде.

— Уның янында кеше бар, — тине кабинет ишеге янында ултырған йәш кенә рус ҡыҙы. Ул йәшенә хас булмаған етди һәм эшсән төҫ менән ниҙер яҙа ине.

— Ярар. Көтөрбөҙ,— тип Иштуған күкрәгендә «КИМ» значогы балҡыған зәңгәр күҙле һылыу ҡыҙға һоҡланып ҡарап тыныс ҡына ултыра бирҙе. Оҙаҡламай секретарь янынан дәү кәүҙәле, һоро сәкмәнле бер кеше, терпе мыйығын һыйпай-һыйпай, килеп сыҡты. Һаҡлыҡ менән генә кабинет ишеген япты, һары сәсле ҡыҙ яғына үтә шат ҡараш ташлап, үҙенсә:

— Хуш, һылыу. Рәхмәт, — тине лә, етеҙ, еңел атлап сығып та китте. Хатта Иштуғанды күрмәне лә шикелле...

«Аһа-а!.. Был теге, Петроградта осраҡкан сәйер һалдат түгелме һуң?! Ҡайҙан килеп сыҡты икән ул?!. Шат... Аҡбуҙатҡа атланғанмы ни?!

— Инегеҙ, — тип ҡыҙ шул уҡ үтә етди төҫ, етди тауыш менән уның уйын бүлде. — Секретарь иптәш буша ны.

— Һе!.. — тип Иштуған күңелле генә йылмайып ҡуйҙы. Унан ҡабаланмай ғына кабинетҡа юнәлде. Күрәһең, ҡыҙҙың шулай йәп-йәш кенә көйө үҙен үтә етди һәм өлкәндәрсә ҡоро тота белеүе уға ғәжәп тойолдо.

— Үҙеңдең туған тейеш кешеңде — Арыҫланды күрҙеңме? — тип Хаммат ҡәнәғәт йылмайып ҡаршыланы Иштуғанды. — Мин уға ат, һыйыр өсөн кредитҡа аҡса алырға ярҙам иттем.

— Ниндәй туғаным? — тип аптыраны Иштуған. — Мин ниндәйҙер туған ағайым барын һис тә белмәйем...

— Ирмән ауылында Ишбикә тигән инәйегеҙ булғанмы?

— Эйе, бар ине шикелле... Бер саҡ килгәнен дә хәтерләйем. Беҙ ярлы, беҙҙән яман улар ярлы ине. Атайым ылына бер тапҡыр уға бүләккә күлдәк, яулыҡ алып барып, хәлен белеп ҡайта ине...

— Ошо Арыҫлан тигән егет ана шул Ишбикә инәйеңдең ейәне була,— тип йылмая биреп хәбәр итте Хаммат.— Бик сәйер, әммә намыҫлы кеше. Мөһим бер мәсьәләне асыҡлауҙа волкомға ҙур ярҙам итте...

— Ә мин уны граждандар һуғышы фронтында... Закир ағайҙың яҡын дуҫы итеп кенә белгәйнем... — тип, ниңәлер үтә уңайһыҙланып торҙо Иштуған. — Ҡыйыу феферле, батыр һалдат ине шикелле...

— Аҙаҡ уны бер тапҡыр иҫкә лә алманың, ә? Яҡшы түгел... Йә, ярар, ул хаҡта башҡа ваҡытта һөйләшербеҙ. Ә хәҙер һөйлә, ниндәй яңылыҡ менән килдең? Эштәр нисек бара? Һөйлә.

Иштуған, һөйләр һүҙен онотҡандай булып, әҙ генә уйланып торҙо. Ләкин Хамматтың талапсан, үтә етди ҡарашы аҫтында бик тиҙ иҫен йыйҙы.

— Һүҙ теге «өс һунарсы» хаҡында ине... Улар тағы ауыл һайын йөрөп ҡотҡо тарата башлаған тигән һүҙ йөрөй... — тип нәфрәтләнә биреп һөйләп китте. — Минең иңлауымса, Илсеғолда ла булалар һымаҡ. Дошман беҙ-

ҙең халыҡтың аңһыҙлығынан, бер ҡатлылығынан файҙаланмаҡсы, уның берәй нәмәгә риза булмаһа, күҫәк күтәреп һуғышҡа ташлана торған ғәҙәтен беҙгә ҡаршы ҡуймаҡсы шикелле, — тип бошоноп хәбәр итте. — Улар һөжүмде иң элек Илсеғол, Мраковка кеүек йәштәр актив эшләй башлаған ауылдарға юнәлтмәкселәр шикелле...

— Йә, ҡыҙыл туй ҡасан була әле? — тип Хаммат һүҙҙе бөтөнләй икенсегә бороп ебәрҙе.

— Булмай,— тине Иштуған, уның иғтибарһыҙлығына бошоноп. — Шундай саҡта ниндәй туй?!

Хаммат ғәҙәтенсә көслө тауыш менән ихлас көлөп ебәрҙе.

— Ә нимә була һуң? Һис юғында сәй булалыр ҙаһа?

— Баҙыян еңгә үҙ өйөндә генә йәштәр йыя.

— Ял көнө, кис тиһең, ә?

— Әллә барырға уйлайһыңмы?

Хаммат тағы ихлас көлөп алды:

— Ғәжәпме ни?! Ҡайһы саҡта йәштәргә ҡарап йәшлекте иҫкә төшөрөп алыу ҙа ярап ҡуя ул, мырҙа!

...Иштуған, эйәр өҫтөндә һалмаҡ ҡына бәүелеп, секретарҙең көлә-көлә һөйләшһә лә, йөҙөндә нимәнәндер ҡаты борсолоп уйланыу, һүҙендә әйтеп бөтөрмәгәнлек күренеп тороуы хаҡында уйланып барҙы. Эйе, Хаммат ағаһы ниңәлер был юлы бик үк асылып һөйләшмәне, унан ниҙелер йәшерҙе һымаҡ тойолоп китте уға.

## VIII

Ял көнө төшкә хәтле Емеш, Хөрмәт, Шәмсиәнең ваҡыты «Ҡыҙыл юл» газетаһының сираттағы һанын сығарыу менән үтте. Хәҙер уның редакторы Емеш, художниге Хөрмәт, ә секретаре Шәмсиә ине. Ғөмүмән, бында, техникумда, йәмәғәт эштәренең күбеһен икенсе төп курс студенттәренә йөкмәтеү ғәҙәт булып киткән. Сөнки өсөнсө курстар күберәк практикаға йөрөй, дүртенсе курс диплом эше яҙырға әҙерләнә, ә беренсе курстағылар әле йәшерәк. Шуға күрә хатта ячейка секретаре лә уларҙан һайланды: Зиннурҙы Сабир алмаштырҙы. Тик студком Сәләмовты ғына студенттәр алмаштырырға теләмәне. Уға уҡыуҙы тамамлап сығып киткәнсе студенттәр башлығы булып ҡалырға тура килде.

Шулай итеп, әле ҡасан ғына «фу-фу»лар тип мәрәкәләп ҡушамат тағып йөрөткән теремек үсмерҙәр бик тиҙ арала күтәрелеп, студенттәр араһында етәксе урынды биләргә лә өлгөрҙө. Уларҙың Зиннур, Дәүернә, Сәләмовтарға һәйбәт алмашсы булыуҙары көн кеүек асыҡ ине хәҙер.

Яҙ байрамына арнап, ҡыҙыл, йәшел хәрефтәр менән биҙәп эшләнгән яҙҙың үҙе кеүек көләс газета әҙер. Май байрамы хаҡында тантаналы мәҡәлә уҡырға теләйһеңме, кескәй нәсер, шиғыр кәрәкме, студенттәр тормошонан көлкөлө күренештәр, төртмә һүҙҙәр тиһеңме — барыһы ла бар.

Газетаны сығарып элеү булды, студенттәр һырып алып, көлөшә-көлөшә уҡырға ла кереште.

— Ҡара әле Хатипте, китап-дәфтәрҙәрен ҡоя-ҡоя югереп бара!

— Нимә ти шағирең:

> Уҡыу ауыр, арып бөттөм
> Звонок көтә-көтә.
> Дәрес ташлап, шиғыр яҙып
> Ултырыуға ни етә! —

тип югереп бара бит!

— Һай, егетең!

— Быныһы кем, әһә, Миңнулла!

«Йыйылыштарҙа студенттәрҙе таҙалыҡҡа, тәртипкә саҡырып һәйбәт телмәр һөйләргә, ә үҙе урынын йыйырға иренгән, етмәһә, кейенгән көйө уның өҫтөндә ятып аунарға яратҡан Миңнулла дуҫҡа бер кәңәш...»

— Йә, ни тип кәңәш бирә газета?

> Һүҙең яҡшы, йөҙөң яҡты,
> Һай, йәшәгер, Миңнулла.
> Тик һүҙеңдән эшең генә
> Айырылмаһа ни була?!

— Сәләмов ағайҙы ла ҡалай килештереп, сәстәрен үрә торғоҙоп, һөмөрөн ҡойолтоп төшөрөп ҡуйған Хөрмәт! Ну, шаян! Туҡта, ни һөйләп тора ул? Әһә:

— Мин, значит, иптәштәр, етәксе кеше көлмәҫкә, һөйләшмәҫкә, ҡыҙҙар һөймәҫкә тейеш, тигән принципта торам. Уйнап-көлөп, ҡыҙҙар артынан югереп йөрөгән, значит, несерьезный етәксенең абруйы булмай. Шулай бит, ағай-эне?— тип фәлсәфә һатып тора икән дәһә ағайыбыҙ.

— Ҡалай йәтеш эләктергәндәр! Шаяндар!..

Емеш, Хөрмәт, Шәмсиә, бер ситкәрәк китеп, иптәштәренең газетаны нисек ҡабул итеүҙәрен күҙәтеп торҙолар.

Төштән һуң Емеш йәнә уҡыу бүлмәһенә килде. Ул яңғыҙ ғына ҡалырға, ниҙер яҙырға-һыҙырға теләй ине был юлы. Күңеле тулы йыр, моң һымаҡ ине, ҡулына ҡәләм алғас, йәнен ярһытҡан хистәргә торош итерҙәй һүҙҙәр табылманы ла ҡуйҙы. Шунан ул иғтибарын уҡылған китаптарҙан күңеленә оҡшаған урындарҙы яҙып барған ҡағыҙҙарына юнәлтте. Уларҙы һайлап-һайлап махсус дәфтәренә күсерә башланы. Уны бөйөк кешеләрҙең эше, тормошо, фекере үтә ҡыҙыҡһындыра һәм ул шуларҙы, үҙенсә тәржемә итеп, дәфтәренә яҙып барырға ла тырыша ине. Бына әле лә ул шул эшкә тотондо:

«Ҡарл Маркс 1818 йылда уҡымышлы, хәлле ғаиләлә тыуа. Атаһы адвокат була. Маркс ете-һигеҙ тел белә. Үҙ заманында билдәле булған бөтә фән менән таныша».

«Ҡарл Маркстың иң бөйөк әҫәрҙәренән береһе «Политэкономияға тәнҡит» тигән китап. Был әҫәр уның иң мәшһүр хеҙмәтенә — «Ҡапитал»ға нигеҙ булды».

«Энгельс 1820 йылда Германияла фабрикант ғаиләһендә тыуа».

«1878 йылда Энгельстең мәшһүр әҫәрҙәренән береһе — марксизмдең нигеҙе — «Анти-Дюринг» донъяға сыға. Энгельс ун төрлө тел белгән».

«Ч. Дарвин 22 йәшендә саҡта «Тәбиғәтте өйрәнеүсенең донъяны әйләнеп сығыуы» тигән китабы менән тәүбашлап әҙәбиәт майҙанына сыҡҡан. Был әһәмиәтле әҫәренә уның 1881 йылда башланған биш йыллыҡ сәйәхәте нигеҙ булған».

«Ҡарл Маркстың «Политэкономияға тәнҡит» тигән әҫәре Дарвиндең «Төрҙәрҙең килеп сығыуы хаҡында теория» тигән китабы менән бер йылда сыҡты, һәм был ике әҫәрҙең донъяға сығыуы XIX быуаттың рухи тормошонда ҙур революция булды».

Маркстың төп ике асышы һөҙөмтәһендә, социализм фән булып әүерелде: 1. Гегелдең рух нигеҙенә ҡоролған диалектикаһын материализм нигеҙенә баҫтырып, йәмғиәтте тикшереү — диалектиканы социологияға кертеү, тарихи материализм теорияһын тыуҙырыу. 2. Өҫтәлмә ҡиммәт».

Емеш мәшһүр философтарҙың, бөйөк яҙыусыларҙың фекерҙәрен үҙенсә ҡыҫҡартып, һайлап дәфтәренә яҙып алырға ла ярата ине:

Мәшһүр шағир Гете әйтә:

«Тормош ул — диңгеҙ. Тыуыу һәм үлеү — мәңгелек диңгеҙ».

Ламеттри әйтә: «Әгәр ҙә кешеләр атеизм юлы менән бармаһалар, һис ваҡыт бәхетле булмаясаҡтар».

«Идеалың — һинең нурлы йондоҙоң. Идеалһыҙ тура юл булмай. Тура юлһыҙ тормоштоң ҡыҙығы юҡ».

«Ысын бәхет күктә түгел, ерҙең үҙендә. Бәхет — матдә менән бәйләнгән».

«Диалектика — һәр бер фәндең рухы».

*Гегель.*

Фейербах әйтә: «Фекерҙәрҙе тормош тыуҙыра, ә тормошто фекерҙәр түгел».

«Рух матдәне тыуҙырмай, ә матдә рухты тыуҙыра».

Фейербах мөхәббәтте алла дәрәжәһенә күтәрә: «Мөхәббәт — алла. Мөхәббәт донъяла булған һәр нәмәнән кали», — ти.

Фейербах: «Кеше — кешегә алла», — ти.

Энгельс: «Фейербах төптән материалист, өҫтән идеалист булды», — ти.

«Маҡсатыңа ирешәйем тиһәң, уға алып бара торған күперҙе үҙең һал».

*Эмерсон.*

«Кешеләр ҡыйырһытҡан кешеләр араһынан дуҫыңды эҙлә!»

*Шиллер.*

«Комһоҙлоҡҡа, йоҡоға, зиннәткә, асыуға хужа була белһәң — шунда булырһың кеше».

*Эмиал.*

Емеш «йоҡоға», «асыуға» тигән һүҙҙәрҙең аҫтына ҡалын итеп һыҙып ҡуйҙы. Тимәк, был уның:

«Минең алда ошо ике нәмәгә тамам хужа булып алыу бурысы тора әле!» — тип үҙенә иҫкәртеүе ине.

Бынан ары ул тағы күсерергә кереште:

«Һәр эштә ауырлыҡ ҡына күрә торған кеше — туғайҙа баҫырға үләнһеҙ урын эҙләп йөрөүсе ишәк кеүектер».

«Ял итеүҙе, буш йөрөүҙе белмәгән кеше генә ысын кеше тип һаналырға хаҡлы».

«Серҙе һаҡлаусы кеше — үҙенең иркен һаҡлай».

*Гете.*

«Ҡатын алыу, иргә барыу — бәхет менән бәхетһеҙлек араһындағы күпер ул».

«Ҡеше үҙенең тырышлығы, үҙ ҡул көсө менән йәшәгәндә генә йәшәү бәхетенең ҡәҙерен белә ала».

*Эмерсон.*

«Ҡешене кеше иткән — хеҙмәт».

*Энгельс.*

Һуңғы юлдарҙы яҙғас, ҡыҙ тағы оҙаҡ ҡына уйланып ултырҙы. Әйтерһең, унын йөрәге лә: «Хеҙмәт, хеҙмәт, хеҙмәт...» — тип, сәғәт теле шикелле, тик бер һүҙҙе ҡабатлай ине.

«Уф-ф!.. хеҙмәт хеҙмәт тә бит... Бына инде артабан күсерге лә килмәй башланы. Икенсе ваҡытҡа ҡалыр, ахыры, — тип күңелле генә йылмайып алды. — Бына бит ниндәй ялҡау ҡыҙ мин!»

Күрәһең, ул бөгөн, газета сығарып нык ҡына арығайны. Шуға күрә газета ла, күңеленә яҡшы нур өҫтәп, хыялына ҡанат ҡуйып ебәрә торған был эш тә уны бөгөн бик тиҙ ялҡытты. Етмәһә киң, бейек тәҙрәләрҙән түгелгән яҙ ҡояшының алтын нурҙары ла, йомшаҡ өйкөм болоттар менән биҙәлгән сағыу зәңгәр күк тә баянан бирле уны тышҡа саҡырып тора: «Яҙ етте бит, Емеш! Ни эшләп һаман бүлмәлә ултыраһың? Яҙ ғүмере — ҡыҙ ғүмере бит ул. Күҙ асып йомғансы йымылдап уҙыр ҙа китер. Күрмәй ҙә, һиҙмәй ҙә ҡалырһың, диуана ҡыҙыҡай!» — ти.

— Әйткәндәй! — тип Емеш күкрәгенә һыйғыһыҙ булып тулышҡан шатлыҡтан ярһып һикереп торҙо.— Яҙ ҙа, ял да!

Ул атылып бүлмәнән сыҡты, оҙон коридорҙы югереп үтте, тик түбәнге ҡатҡа төшөрҙән алда теге күлдәй көҙгө алдында ғына аҙымын әкренәйтте. Уға уҡырға тәү килгән көнөн хәтерләтеп, хәҙер нисек үҫеүен, үҙгәреүен, ер еләге шикелле алһыуланып бешә барыуын һөйләп кенә торған был өнһөҙ серҙәше алдында, бигерәк тә яңғыҙ саҡта, туҡталмай уҙа алмай Емеш. Ул әле лә бына уға яҡын уҡ килеп баҫты. Яурын баштарына төшөп ятҡан тулҡынлы сәстәрен тарап, нәҙекәй билле матур һынына килешеп торған юнгштурмаһын, портупеяларын һыпырғылап ҡараны. «КИМ» значогына күҙе төшкәс, күкрәген ғорур килеп:

— Ҡара һин уны! — тип аптыраған кеше булып торҙо. — Емеш, был ысынлап уҡ һинме?!

Көҙгөләге ҡыҙ ынйы кеүек аҡ тығыҙ тештәрен йылтыратып кинәнеп көлдө:

— Эйе шул! Комсомолка Емеш тәһә мин!

— Аһа, шулай икән дә! Ҡара һин уны!..

Емеш, үҙенән-үҙе рәхәтләнеп көлә-көлә, баҫҡыстан йүгереп төшөп китте. Уның талсығыуы ҡул менән һыпырып алғандай юҡҡа сыҡты. Йәшлек тә, мөхәббәт тә, яҙ ҙа, тау шишмәһе шикелле йырлап, уның былай ҙа ярһыу күңелен ҡыуаныс менән тултырҙы. Ә ятаҡта дуҫы Шәмсиә уны тағы ла ҙурыраҡ ҡыуаныс менән көтә ине:

— Емеш, һөйөнсө! — тип баш осона күтәреп ике конверт күрһәтте. — Бейе!

— Уй, хат!

— Бейе, бейе!

Бында ҡыҙҙар, мәҙәк өсөн, хатты бер-береһенә шулай бейетмәй бирмәйҙәр. Емеш тә был яҙылмаған законға баш әймәй булдыра алманы. Әхирәтенең таҡмағына осоп йөрөп бер-ике әйләнеп бейене лә хаттарҙы элеп алды.

* * *

Хаттың береһе Иштуғандан, икенсеһе Байрастан ине. Емеш башта ағаһының хатын асты. Уға тауҙай шатлыҡ алып килгән туғанлыҡ хаты ине был:

«Емеш!

Быйыл да ҡайтмаһаң, үпкә ҙур булыр. Һин, ахыры, һағына белмәҫ ҡыҙ булып сыҡтың. Ә беҙ һине бик һағындыҡ... Бибеш апайыңдың теленә исемең килеп инһә, күҙенән йәше атылып сыға.

Ишетәһеңме, ҡайт!

Бибеш тигәс, яҙайым әле, бер ҡыуаныс бар: апайың колхозға инде. Киләһе көҙҙән ликбезгә лә йөрөмәксе: «Аһа, тома һуҡыр булып йөрөргә мин кемдән кәм?!» — ти ул хәҙер. Шулай уйлағас — эшләй инде ул. Беләһең бит, һүҙҙе елгә елгәрмәҫ... Хаммат ағай менән Баҙыян еңгәнең йоғонтоһо бик ҙур булды уға. Уларға рәхмәт. Юҡһа ул мине һис тә тыңламай ине. Ҡалай итәһең, мырҙа кеше уға абруй була аламы ни, — тип күңелле йылмайып яҙғайны ул. — Бына шулай, беҙҙең Бибеш тә яңылыҡҡа, яҡтылыҡҡа табан юл алды. Ҡайт, күрерһең».

Байрастың хаты бер нисә юлдан ғына тора ине. Ул тағы шул уҡ һүҙҙе, ошо арала Ҡазандан Ырымбурға ҡайтып төшәсәген, Емеште, ай-вайына ҡуймай, үҙе менән ауылға алып ҡайтасағын белдереп яҙғайны. Хаттың аҙағында:

«Аңла, һиңә балалыҡтан сығырға ваҡыт! Мин яуап көтәм!» — тип уйынлы-ысынлы ҡаты ғына иҫкәртеп тә ҡуйғайны.

«Ҡайһылай анһат ҡына хәл итмәксе! — тип уйсан ғына көләмһерәп торҙо Емеш. — Әгәр бар кеше лә шулай еңел генә уйлай, ҡапыл ғына хәл итә алһа ине...»

Ҡыҙ хаттарҙы ҡабаланып мендәр аҫтына йәшерҙе. Йәне-йөрәге менән тотош яҡтырып, ярһыу уйҙарға бирелеп ултырҙы.

Байрастың хаттары уның күңелендә һәр саҡ шулай дауыллы уйҙар ҡуҙғатып ебәрә ине. Ул әле лә, тап шундай күңел көрләгәнән ярһып, Ҡарасәс инәһе һымаҡ:

«Эй-й-й... — тип һуҙып ҡуйҙы. — Ҡайҙалыр һине һөйгән, һинең өсөн янған-көйгән бер кешенең йәшәүе ҡалай ҙа һәйбәт! Әлдә һин бар, Байрас!.. Әгәр һин булмаһаң, моғайын, бынауы ҡояш та шул хәтле сағыу янмаҫ, яҙ ҙа шулай көләс, шат булмаҫ ине!»

## IX

Көҙгө төн шикелле шыҡһыҙ һәм ҡараңғы быйыл Сәрбиямалдың йөҙө. Ә күңеле унан да ҡараңғыраҡ, шомлораҡ. Айлап түгел, көнләп, сәғәтләп үҙгәрә барҙы ул. Бығаса ла яһалма ғына булған күркәмлеген юғалтып, бешеүе еткән ҡауын шикелле ләпшәйеп, шиңеп ҡалды. Әле ҡасан ғына берсә үтә һауалы, текә ҡарарға тырышып йәки бәйһеҙ асыу сәсеп баҙлап торған ҡоторсоҡ күҙҙәре лә һөрөм баҫҡан бишле лампалай һүрелде. Эйе, аяу белмәҫ ике ут уртаһында ҡурылып йәшәй ине ул хәҙер. Береһе уның ваҡытһыҙ ҡабынған бәйһеҙ көнсөлөк ине. Ғүмер юлын, эш һәм тормош мәшәҡәттәренә, бала, ғаилә хәстәрлектәренә күмелеп, намыҫ менән үткән ҡорҙаштары, инде бала-сағаны үҫтереп, килен алып, ҡыҙ биреп, олпат ғүмер һөргән бер ваҡытта уның йәне йәшенә хас булмаған көнсөлөк утында янды. Дөрөҫ, был ҡылыҡ уның йәшлегенә лә хас ине. Бөтә ярһыу йәшлеген ул ошо Әхмәтшаға булған ниндәйҙер ҡырағай һәм бәйһеҙ һөйөүгә бирҙе бит! Ошо ҡылығы арҡаһында нисәмә тапҡыр ир ташлап ҡасып ҡайтты. Хатта төҫ, буй-һын яғынан да, кеше булыу яғынан да Әхмәтшанан сағыштырғыһыҙ юғары торған Байгилдегә барғас та был ҡылығынан айный алманы. Дөрөҫ, уның айнырға, Әхмәтша менән бәйләнгән бөтә ҡара бәхетен онотторға, иренә тоғро булып

йәшәргә тырышҡан саҡтары ла булды. Байгилде йәшәгән ауыр, әммә намыҫлы, тоғро тормош юлын һайларға ла уйлап ҡуйғыланы. Ләкин, шомло төн тыуҙырған дейеү шикелле, ҡайҙандыр ҡара көйөп килеп сыҡҡан Әхмәтшаһының аҫтан һөҙөп ҡараған уҫал йәшел күҙҙәрен күреү менән, бөтә булған яҡшы уйы селпәрәмә килде. Байгилденең ҙур йөрәкле, көслө ирҙәргә генә хас ярһыу тойғоһонан Әхмәтшаның ҡырағай, тупаҫ иркәләүе, ҡағыу-һуғыуы һәр саҡ өҫтөн булып ҡалды.

Шулай үтте Сәрбиямалдың ҡоторонҡо йәшлеге. Ҡатын уртаһына еткәндә, яҙмыштың мыҫҡыллы бер шаярыуына юлығып, ул Әхмәтшаһы менән бөтөнләйгә «ҡауышты». Бына инде нисә йыл бер ҡыйыҡ аҫтында йәшәйҙәр, яңыға, яҡшыға ҡаршы бергәләп аҫтыртын яуызлыҡ эшләйҙәр, әммә үҙ-ара мөнәсәбәттәре шунан арыға китә алмай. Әхмәтшаға Сәрбиямал шунан бүтәнсә кәрәкмәй ҙә. Ғүмеренә бер сәскә атмаған, емеш бирмәгән ҡыу ағас кемде ҡыҙыҡтырһын?!

Шулай итеп, Сәрбиямалдың ҡуйыны буш, түшәге һалҡын көйө ҡалды. Элек лавкаһына ингән ҡатындар алдында, үҙен бәхет ҡошоноң йөрәген йотҡан әкиәт батыры кеүек тойоп, ни теләһә шуны эшләп, үҙен мөхәббәт ситләгендә тутыйҡош шикелле сутылдап ғүмер итеүсе бәхетле йән итеп һүрәтләп тәтелдәүҙәре лә һалҡын түшәкте үҙа ғына булһа ла йылытырға маташыуы ине. Ләкин теләп кенә төндө көн яһап буламы?! Өйөндө мең төрлө асыҡ буяуҙарға буяп, биҙәп күрһәтһәң дә, нигеҙе серек булһа, барыбер емерелеп төшөп бер саҡ үҙендә хур итәбит инде ул. Сәрбиямалдың Әхмәтшаға булған мөхәббәте менән дә тап шулай булды. Инде уны төрлө сағыу биҙәктәргә буяп күрһәтергә лә, тыштан ғына булһа ла, бәхетлелек, ҡәҙерлелек төҫөн һаҡлап ҡалырға ла уның быуыны етмәй башланы. Бигерәк тә һуңғы йылда Әхмәтшаһы менән бөтөнләй тип әйтерлек өйҙә булмай. Булғанда ла, һөмһөрө ҡойолоп, бер үҙе бер яҡта ята. Сәрбиямал элекке саҡтағы шикелле:

— Йәнем, һиңә ни булды? Нимәгә йәнең ҡыйылды? — тип наҙларға, иркәләнергә маташһа:

— Ҡит әле! — тип этәреп кенә ебәрә. — Йәш сағында йәшәрмәгәнде хәҙер йәшәрмәҫһең...— тип уның түлһеҙлегенә төрттөрә.

Был арала бөтөнләй ауылда ла тормай башланы.

— Мөслим ауылына барып ҡайтам. Минең өйҙә юҡ-

лыҡты, ҡара, бер кемгә әйтәһе булма, — тип ҡаты иҫкәртә лә ат эйәрләп китеп юғала. Төндә китә, таңда ҡайта. Хатта бер нисә көн юҡ булып та тора. Сәрбиямалдың көнсө күңелен талымһыҙ шик кимерә: «Моғайын, берәй бисәгә күҙе төшкәндер... — ти. — Нисек белергә? Нисек үс алырға ул бисәнән?!» — тип зәһәрләнеп көйөнә, ләкин бер сара ла таба алмай. Сөнки иренән ҡурҡа, уның рөхсәтенән тыш бер ергә бер аҙым атларға баҙнат итмәй ул хәҙер.

— Өйҙө ташлап сығып йөрөүеңде, ситтәргә минең хаҡта сер асыуыңды белеп ҡалһам, яҡшылыҡ көтмә! — тип ҡаты иҫкәртеп ҡуйҙы бит уны Әхмәтша. Хәйер, яҡшылыҡ көтмәҫкә кәрәклекте ул үҙе лә бик белә. Шәмсиәнең яҙмышы уға таныш ине.

Шулай ҙа был һуңғы китеүендә ул ирен бөтә көсө менән туҡтатып ҡалырға тырышты:

— Ауырып торам, мейем ҡойолоп килә, — тип ҡараны.

Быға ире тағы ла тупаҫыраҡ яуап ҡайтарҙы:

— Һинең һыу мейеңдең ауыртмаған сағы бармы? Башҡа ҡатындар кеүек бала тап. Ауыртмаҫ, — тине. — Бүтәнгә бик шәпһең бит!.. — тип мыҫҡыллап көлдө. Ысын уҡ ауырып ултырған ҡатынына әйләнеп тә ҡарамай сығып китте.

Сәрбиямалдың йөҙөн тотош ҡара болотҡа әйләндергән икенсе нәмә — Илсеғолда кооператив магазине асылыу булды. Сәй, шәкәр, тоҙ, шырпы тиһеңме, күлдәклек, мендәр-яҫтыҡ тышлыҡ тауар тиһеңме — бөтәһе лә бар. Етмәһә арзан. Шулай булғас, халыҡҡа Сәрбиҙең лавкаһы нимәгә кәрәк?!

Шулай ҙа ул лавкаһын һәр көн һайын аса, супай кеүек япырайып япа-яңғыҙы ҡағылып ултыра. Ҡайһы көндәрҙә күңел өсөн генә лә бисә-сәсә инмәй. Ингәндәре лә үсәп, уның яраһына тоҙ ғына һибеп сыға.

— Ниңә һиндә шырпы ун тин ул? Кәпирәттә бер тин генә ләбаһа.

— Ҡара әле, бынауы яулыҡты мин кәпирәттән ике һумға ғына алғайнымсы... Һиндә ун ике һум икән дәһә!

— Һин лутсы кәпирәттән арзан һат, бөтәһен дә алып бөтөрөрбөҙ...

Сәрбиямал нимә тиһен? Кооперативтән арзан һатҡас, уға ни табыш ҡала?! Табышһыҙ ул ҡалай йәшәй? Табыш бит хәҙер уның берҙән-бер табынған аллаһы!..

— Бөтөрөрҙәр инде, бөтөрөрҙәр. Һатып алып түгел, тартып алып бөтөрөрҙәр, үҙебеҙҙе арҡабыҙға тоҡ йөкмәтеп сығарып ебәрерҙәр, — тип үҙалдына һөйләнеп, илаусан ала ул хәҙер йыш ҡына. Унан ҡайһы ауылда ниндәй байҙың мал-тыуарын тартып алып, үҙен Себергә һөрөүҙәре, ҡасан, ҡайҙа, кемде төрмәгә ултыртыуҙары хаҡында ишеткән имеш-мимештәрҙе күңеленән теҙә башлай. Үҙенең бай булыуҙан бигерәк, бай булырға хыялланып не аҡылын юғалтҡан ҡомһоҙ бисә генә икәнлеген, сауҙаһының да, лавкаһының да бүтән нэпмандар менән сағыштырғанда бала уйынсығы һымаҡ ҡына булыуын башына ла килтермәй, ана-бына килеп ишек дөбөрҙәтерҙәр, бөтә мал-тыуарын, зат-йыһазын тартып талап алып сығып китерҙәр кеүек тоя башлай. Бындай саҡта ул тиреһенә һыймай, ситлектәге айыу шикелле ларç-лорç баçып, лавкаһында тапылдап йөрөп китә. Йәки кемдәргәлер күңеленән ләғнәт уты яуҙырып, буçығып ултыра. Бигерәк тә Ҡарасәс әбейҙең ике тамсы һыу кеүек үҙенә оҡшаған сейәнсәре Сәмиғә, шыңғыратып көлә-көлә килеп, кооператив магазинен асып ебәргән саҡта, ул көсһөҙ асыуҙан хатта быуылып йығылырҙай була. Ҡайһы саҡта, кемгә көс төшөрөргә белмәй, хатта алла менән әрепләшергә керешеп китә:

— Йә, ташҡа үлсәйем, кемдәр әҙәм булып йөрөй бит! Әй аллаҡайым, күҙҙәрең һуҡырайғандыр һинең, юҡһа, иң яҡшы бәндәләреңде хурлыҡҡа ҡалдырып, әҙәм аҡтыҡтарын шаштырып, аяҡ бөкләп ултырмаç инең унда, куктә!.. Һай, тонған күҙ!

Шулай үҙалдына үҙе буçығып, эсенән зәһәр сәсеп ултыра торғас, бер көндө ул ысынлап та баштан түҙмәй ауырып китте. Килененең хәлен белергә килгән Ғәйшә әбейгә:

— Мейем ҡуҙғалғандыр, кесе йәштән шундай өйәнәгем бар ине, — тип зарланды. — Мейемде ҡағыр инең.

Ғәйшә әбей былай им-том менән маташҡан кеше булмаһа ла, мейе ҡағыуҙы ғына белә ине.

— Ҡана һуң, үлсәп ҡарайым һуң, — тине.

Таçма кеүек яçы, таҙа шәлкем юкәһе лә табылды. Ғәйшә әбей, бик белдекле төç алып, аһ-уһ килгән Сәрбиямалдың башын шуның менән ҡоршаулап бәйләп ҡуйҙы. Унан һис тә ашыҡмай, эшләгән эшенең көлкөлөгөн башына ла килтермәгән етдилек менән юкәгә күмер менән дүрт һыҙыҡ яһаны. Һыҙыҡтарҙың береһе ике ҡаш араһы-

яна, береһе елкә соҡорона, ҡалған икеһе ике ҡолаҡ осона тура килә ине. Ғәйшә әбей һыҙыҡтарҙың дөрөҫ тура килеүен ҡат-ҡат тикшергәс, юкәне сисмәй генә баштан һурып алып, тәүҙә ике ҡолаҡ тәңгәлендәге, унан сикә менән маңлай тәңгәлендәге һыҙыҡтарҙы тотоп тартып, тиңләштереп ҡараны.

— Мейең арт яҡҡа төшкән, килен, — тип билдәләне Ғәйшә әбей. — Башыңдың арт яғы ҙур булып сыҡты.

Инде былай булғас, ҡағиҙә буйынса, башты таҫтамал менән ҡыҫып бәйләргә лә уның маңлай яғында ҡалдырылған оҙон осона йоҙроҡ менән ныҡ итеп бер нисә һуғырға кәрәк ине. Ғәйшә әбей шулай эшләне лә. Тешен ҡыҫып, нисек тә сыҙарға маташҡан Сәрбиямал ҡысҡырып-ҡысҡырып ебәрҙе. Бындай «дауалауҙан» һуң, йәнәһе, мейе урынынан кире төшөп ятырға, ауыртыу үтергә тейеш ине. Ләкин ауыртыу үтмәне, киреһенсә, көсәйҙе генә. Сәрбиямал, алла менән ҡара-ҡаршы ултырып һөйләшкәндәй итеп:

— Эй аллам, ниңә шулай миңә генә ҡаныҡтың! Бындай аҙаплы сирҙәреңде анауы ҡәһәр һуҡҡыры коммун Иштуғандарға бирһәң булмаҫ инеме ни?! — тип һуҡранды. Йәки:

— Бейем, тим, мин дә үлеп кенә әрәм булырмынмы икән ни? — тип, ҡоторсоҡ күҙҙәренең ағын әйләндереп, Ғәйшә әбейгә текләне.

Унан:

— Эй байлығым, барлығым! Ҡемгә генә әрәм итеп ҡалдырып китәм мин һеҙҙе, кемгә! — тип үҙәк өҙгөс тауыш менән сеңләргә кереште. Ахыр тағы ауырыуына күсте. — Сатнай бит, ярыла бит башҡайым, атыла бит күҙкәйем!..

Үҙенә бер ҡасан да хөрмәт күрһәтмәгән ҡаты бәғерле, көнсөл был ҡатындың ауырыуға шул хәтле сыҙамһыҙ булыуы Ғәйшә әбейгә һис тә оҡшаманы.

— Тынып ҡына ятып тор, үтер. Ул хәтле сабырһыҙ ҡыланыу беҙҙең ҡылыҡҡа хилаф бит ул, — тине лә ҡайтып китергә ашыҡты. — Ҡарт ебәрһә, һуңыраҡ тағы килермен,— тине.— Заһирам да бик ҡаты ята шул...— тип һыҙланды. — Ҡилә алмам шул, килә алмам... — Һәм килә алманы.

Сәрбиямалдың хәле ауырая ғына барҙы. Ул һаман:

— Башым, башҡайым... Башҡынайым... — тип төрлөсә таҡмаҡлап, аунап ятты йәки, бөтөнләй һаташып, уҡ-

лау менән бүрәнәләргә шаҡ-шоҡ һуға-һуға, өй уратып «әпсәләр» ҡыуып йөрөнө:

— Китегеҙ, ер биттәр! Иремде аҙҙырмағыҙ, йылтын күҙҙәр! Үлтерәм-м!

Ҡайһы саҡта ҡан баҫып, ағы әйләнеп торған кескәй генә күҙҙәрен шар асып, ниҙер тыңлап торҙо-торҙо ла:

— Килделәр! Бирмәйем, бирмәйем! Үҙемдеке! Мин... Мин... Минеке! — тип ҡысҡыра-ҡысҡыра әйберҙәрен «йоҡкарырға» керешеп китте. Тюк-тюк тауарҙарын, йөн-лөй еңел күтәреп, иҙән уртаһына ташыны, Николай батша, Керенский, Дутов, Колчактар заманынан ҡалған ҡағыҙ аҡсалар тултырылған тоҡтарҙы йәшергән ерҙән тартып сығарҙы, һандыҡтан тәңкә-еләң, селтәр-ҡашмау кеүек затлы әйберҙәрен дә өҙөп-йолҡоп, аһылдай-уһылдай шул бер өйөмгә өйҙө...

— Йәһәтерәк! Ат егегеҙ, ат! Китәм, алып китәм! У-у... Иблестәр, бирмәйем һеҙгә, бирмә-йем!..

Ахыр, иҙән уртаһына өйгән әйберҙәрен бер юлы күтәреп алмаҡсы булып, ҡулдары менән генә түгел, аяҡтары менән дә ҡалтырана-дерелдәй шыҡырҙатып ҡыҫып ҡосаҡланы. «Әһ!» — тип бер көсәнде лә, ҡан һура-һура ҡорбанының тәненә барып инеп киткән талпан шикелле ялпашып, өйөм өҫтөндә өнһөҙ ятып ҡалды...

Таң атыр алда, һеләүһен шикелле һаҡ баҫып, Хөснөлхаҡ менән Әхмәтша ҡайтып ингәндә, Сәрбиямал һаман шул хәлендә, ҡубәләй әйбер өҫтөндә ҡатып ята ине. Донъя матурлығын, ай, ҡояш нурын абайламай, яҡшы менән яманды айырмай, иң ваҡ, түбән тойғолар ҡоло булып йәшәлгән ғүмерҙең һуңы шулай тамамланғайны. Шомло һәм йән өшөткөс ине был күренеш. Тәҙрәләре ҡормалар менән томаланған тынсыу өй, кистән бирле яна-яна ҡара һөрөмгә әйләнгән унлы лампанан таралған ҡыҙыл һары тоноҡ яҡтылыҡ уға тағы ла шомлораҡ ҡәбер тынлығы өҫтәгәйне. Әйтерһең, ғүмере буйы үҙенсә тырышып-тырмашып та бәхеттең ни икәнен дә белмәй донъя ҡуйған тынғыһыҙ меҫкен ҡатындың ғына түгел, бәлки кешеләрҙе шулай аяуһыҙ һаташып йәшәргә, һаташып барып үлергә дусар иткән иҫке быуаттың да һуңғы минуты ҡатып ҡалғайны был өйҙә. Әйе, йән өшөткөс күренеш ине был. Әммә кешелек сифатын юғалтҡан Әхмәтшаға ул бер нисек тә тәьҫир итмәне.

— Әһә!.. — тип, бөйөрөнә таяна биреп, тарбайып ҡарап торҙо ул ҡатынына. — Һин, шулай бөтә байлыҡты

талап ҡасмаҡсы булдыңмы ни әле, сысҡан күҙ! Бирер-мен мин һиңә! Мә, ал, ал!!!

Ул, зәһәрле һүгенеп, Сәрбиямалдың һыуынып, ҡатып бөткән артына бер нисә типте лә, уның аҫтында ятҡан аҡсалы тоҡто һелкетә тартып алды. Әйбер өҫтөнән шыуып төшкән мәйет шаҡ итеп иҙәнгә бәрелде.

— Әллә дөмөккән инде был сысҡан күҙ? — тип, тап атаһына оҡшатып зәһәрле ыҫылдап көлөп ҡуйҙы Әхмәтша. — Бына һиңә кәрәкһә!.. Вот, шәп иткән!

Үҙенең биш-алты йыллыҡ берәҙәклек тормошонда бик күпте күрергә, бер нәмәгә лә аптырамаҫҡа өйрәнгән Хөснөлхаҡ, киреһенсә, был йән өшөткөс күренештән нисектер шомланып китте, көскә телен ҡыбырҙатып:

— Үлгән. Ҡатырға ла өлгөргән, — тип бышылданы.— Был ни ғәләмәт?!

Әхмәтшаның ғына һаман иҫе китмәне. Бер ни булмаған төҫлө, йән өшөткөс һалҡын тауыш менән:

— Һыу мейегә әйләнеп бөткәйне ул күптән. Шул алып киткәндер. Тик бына ваҡытһыҙыраҡ... — тип елкәһен тырнай биреп торҙо. Унан:

— Әйҙә, келәткә сығарып һалайыҡ. Беҙ ҡылаһы эште ҡылғансы, шунда ятып торор. Аҙаҡ күҙ күрер... — тип ҡатынын, утын ағасы һымаҡ, аяуһыҙ һөйрәкләй ҙә башланы.

Мәйет менән эште бөтөргәс, ул оҙаҡ ҡына юғалып торҙо. Унан бик ныҡ төрөлгән ауыр әйбер күтәреп инде:

— Теге ваҡыттан... Һатыбал отряденән ҡалған мылтыҡтар... — Аптыраған да, ҡурҡҡан да һымаҡ күҙҙәрен кепесләтеп үҙенә теклән ҡалған Хөснөлхаҡҡа ҡарап, Әхмәтша ауыҙын бер яҡҡа ҡыйшайтып мыҫҡыллы йылмайҙы. — Бәлки, таныйһыңдыр? Һин бит унда...

— Мылтыҡты танып буламы?

Хужа осло һары тештәрен тағы ла ҙурыраҡ асып күрһәтте:

— Ә мин таныйым... Был Иҫәнбәттә дружинасыларҙы ҡырғанда... Һин ташлап ҡасҡан мылтыҡ... Шул саҡта уҡ йыйып алып, майлап, һылап-һыйпап күмеп ҡуйғайным... Рәхмәт әйт...

— Бер ни ҙә аңламайым... — тип ниңәлер шөрләп китте Хөснөлхаҡ. — Мин ата ла белмәйем... Мин... мин, ни, кем, Әхмәтша дуҫ, тел менән көрәшеүсе... Йәғни мәҫәлән, халыҡтың күңелен ҡотҡарыусы... тәрбиәләүсе... Атыу, киҫеү — ул минең эш түгел... — тип, күҙен алартып,

мылтыҡтарға төбәлде. — Мин... Мин ата ла белмәйем бит...

— Белмәһәң, белерһең... — тине Әхмәтша йөрәк өшөткөс һалҡын тауыш менән.— Бында... ике коммун: береһен — һин, береһен мин... Мә, мылтығыңды әҙерлә! Һинең тел менән генә көрәшмәгәнеңде беләм! Мине иҫәүәнгә һанап маташма. Унан шуны аңла: миндә мылтыҡ етерлек. «Кәрәге булыр», — тип Һатыбал шул саҡ бер төндә килтереп ауҙарып киткәйне... Бер мылтыҡтан ата белмәһәң, икенсеһе менән атырһың, ха-ха!..

Хөснөлхаҡ, йөҙөн һытып, ерәнгән төҫ менән мылтыҡты майҙан таҙартырға кереште.

— Сирылма. Эшләмәгән эшең түгел бит. Беләм: һеҙ, һинәһе, уҡымышлы кешеләр, беҙҙең кеүек ҡараларҙан да яманыраҡ яуызлыҡ эшләйһегеҙ. Тик шуны таҙа ҡуллы кеше булып ҡыланып... Ни өсөн? Был бит, мин һиңә әйтәйем, көлкө, ытырғаныс!..

Әхмәтшаның самаһыҙ асыҡ һөйләшеүе, күрәһең, Хөснөлхаҡтың кәйефенә оҡшаманы, Ул да эре һирәк ат тештәрен күрһәтеп екереп ҡуйҙы:

— Йә, йә, күп һөйләнмә, эшеңде бел!

Бынан ары улар, тирә-яҡҡа ҡолаҡ һала-һала, шым ғына мылтыҡ таҙарттылар. Ишектәрҙең биген тағы бер кат тикшереп, киләһе төнгә хәтле тауыш-тын сығармай ятырға булып, түшәккә ауҙылар:

— Ҡара әле, Хөснөлхаҡ, — тип был юлы һағыраҡ тауыш менән бышылданы Әхмәтша. — Тегене, бисәне әйтәм, иртәнән һуң... туйҙан һуң... бер юлы күмелер, ә? Бер уйлаһаң, бик йәтеш килеп сыға түгелме һуң әле был? Теге коммундарҙы үлтергән кешеләр минең өйгә лә баҫып ингән, талаған, бисәне үлтергән, тип дау һалырға була түгелме, ә? — тип тағы ла мәкерлерәк план ҡороп та маташты. — Баштан сүп осорорға, тим, ә?

Йәшлеге дауыллы йылдарға тура килеүе, аҙаҡ үҙенең йығылыш юлға инеп китеүе арҡаһында, ғаилә, ҡатын, бала-саға бәхетен татый алмаған, әммә быны кеше өсөн иң оло бәхет итеп һанауҙан туҡтамаған Хөснөлхаҡҡа юлдашының шул хәтле оятһыҙ һөйләшеүе оҡшаманы:

— Йоҡлайыҡ, — тип бүлдерҙе уны. — Хәл йыйырға кәрәк. Иртәгә, кеше ял иткән кисте, беҙҙе бит ауыр эш көтә...

— Эш...— тине Әхмәтша, шомло ыҫылдап.— Үс, тиген!

Оҙаҡламай өй эсе төрлө тауыш — ғырылдау-сыйылдау менән тулды. Эсеп күбенгән юлбаçарҙар, бер ни булмаған кеүек, ҡаты йоҡоға сумдылар.

## X

Заһира берсә янып, берсә туңып тағы бик оҙаҡ ауырып ятты. Тау кеүек ауыр ҡара тиргә төшөп уянып киткәндә, әйләнәһендә тағы төн ине.

— Эй-й, алла, әллә һуҡырайҙыммы? Был ниткән үтмәç төн булды? — тип хәлһеҙ генә ыңғырашып ҡуйҙы, ҡулын көскә күтәреп, күҙҙәрен һыпырып ҡараны, әйләнә яҡтырманы. Тороп ултырырға теләне, арҡа буйҙарында, янбаштарында, беләктәрендә йөрәк өҙгөс ауыртыу, әрнеү тойҙо. Уның күлдәге ҡанлы тәненә уҡмашып ҡатҡайны.

— Эй-й, аллам, нимә эшләткән бит ҡанһыҙ!

Ул, тәне ауыртыуҙан бигерәк, йөрәк һыҙлауына түҙмәй һығылып илап ятҡанда, тауышһыҙ ғына ишек асылды. Ҡемдеңдер ҡалтыранған арыҡ ҡулдары уның башына ҡағылды.

— Баламды, бәпесемде...

— Ҡәртсәй, һинме?

— Мин, бәпесем, мин, иçеңә килдеңме ни, ҡолонсағым! — тип илаулап бышылданы Ғәйшә әбей. — Әрәм генә булдың бит, балаҡайым... Әйттем бит, өндәшмә, түҙ, тинем бит...

Заһира, ҡәртсәһенең илауынан бигерәк, ҡайҙалыр кемдәрҙеңдер шомло бышылдауын ишетеп, тороп ултырҙы.

— Ҡәртсәй, кемдәр улар? — тип ҡото осоп текләне ул ҡәртсәһенә. — Ҡемдәр, нимә тип бышылдаша?!

— Белмәйем, бәпесем, белмәйем. Ҡартатайыңдың ҡәҙимге төнгө ҡунаҡтары, балам. Нимәгә генә кәрәге бар уларҙың беҙгә...

— Ҡәртсәй, тим, әйт!

— Белмәйем, тим дәһә.

— Улай булһа, үҙем сығып ҡарайым.

Заһира, тәненең ут янып һыҙлап китеүенә лә, йөрәгенең атылып сыға яҙып туларға керешеүенә лә иғтибар итмәй, урындыҡтан төшә башланы.

— Балаҡайым, ҡуй, күреп ҡалһа, үлтерер! — тип, уның итәгенә йәбеште Ғәйшә әбей. — Һинең иçкә килеүеңде белә генә күрмәһендәр, алла һаҡлаһын.

— Уй! — тип ҡысҡырып ебәрә яҙҙы Заһира. Тәненә

...ап менән йәбешкән күлдәктең һыҙырылыуы уға түҙгеһеҙ ауыртыу өҫтәне. Шулай ҙа уға иғтибар итмәй һаман үҙ һүҙен һөйләне ҡыҙ: — Йәһәтерәк әйт, ҡәртсәй! Кемдәр улар? Әйтмәһәң, үҙем тороп beләм!

— Эй балаҡайым, ят, тим, һөйләшмә. Ату ишетерҙәр, ...булыр... — тип, тутыҡҡан тимер тауышы сығарып ...ды ҡарсыҡ. — Һәләк итерҙәр...

— Әйтмәһәң, торам, ҡарайым, — тине Заһира, тағы ла ...ырыраҡ киреләнеп. — Торҙом!..

— Туҡта... Һөйләйем... Әйтәм... — тип, ялыныслы бышылдап, ҡарсыҡ ейәнсәрененң биленән ҡосаҡлап алды. Уның асыу һәм үҙһүҙлелек менән янып торған зәңгәр күҙҙәренә төбәлеп ҡараны: «Эйе, уға ысынын һөйләп бирмәү мөмкин түгел... Һөйләмәһәң, ул үҙен һәләк итер...». Ҡарсыҡ ауыр көрһөнөп, ялыныслы тауыш менән:

— Йә, быларҙы белеү нимәгә кәрәк инде, балаҡай?! — тип һүҙ башланы. — Уларҙы белмәү ҙә, күрмәү ҙә бит беҙҙең именлек... Йә, ярар, һин уларҙы белергә теләйһең... Күрәһең, яҙмыштыр... — тип тағы көрһөнөп, уйланып алды. Ахыр, күрәһең, башҡа сара табыуҙан тамам өмөт өҙөп, артабан бышылданы. — Һин беҙгә юнле кешеләр килмәгәнен аңларға тейеш... Йә, нимәгә кәрәк инде улар һиңә? Юнле кешеләр тип белдеңме ни... Теге Ғаббас мулланың Хөснөлхағы менән атайың бит... Кисә Сергей ҡарттың Апанасы менән элекке урядник Алексейҙең улы кем әле, Митрапанмы, Метрейме шунда, төн буйы эсеп-ашап теңкәмә тейгәйнеләр... Бөтәһе лә бит шулар, ҡайҙалыр йәшенеп йөрөп яталар. Шуларҙы картатайың ни тип яҡын юлаталыр инде, белмәйем... Килтермә, тип әйтергә баҙнат итмәйем... Белмәйем инде, бәпесем, ...ға түгел был эш... Аңламайым да, аңламам да, ...ы, мин һинең ҡартатайыңды. Уны ғынамы һуң, үҙ улымды, Әхмәтшаны ла аңламайым... Төптө ете ят кеше һымаҡтар. Әле лә бына минән аш-һыу әҙерләттеләр ҙә үҙемде ҡыуып тигәндәй сығарып ебәрҙеләр...

Заһира тын да алмай тыңлап ултырҙы ла ҡапыл, нимәлер хәтерләп:

— Бөгөн ниндәй көн ҡәртсәй?! — тип ҡото осоп һорап ҡуйҙы. — Бөгөн мәктәптә уҡыу булдымы, тим?!

— Юҡ, балаҡай, уҡымаянылар. Йома көн бит бөгөн. Йома көн, балам. Йома көн, — тине ҡарсыҡ. Унан тағы ла ...өнөп китте. — Эй-й, шундай изге көндө лә кеше башына яуыз уйҙар килер икән, хоҙайым! — тип, тамам

ҡайғырып, баш сайҡап, бәүелеп ултырҙы Ғәйшә әбей. Унан, тағы ҡурҡынып, ейәнсәренең башын һыйпап ҡараны.

— Ай-һай, башың бик ҡыҙыу. Ят, торма, бәпесем.

Заһира тыңлаусан һуҙылып ятты. Бынан ары ҡәртсәһенең бер һүҙенә лә тауыш бирмәне. Ғәйшә әбей:

— Шулай йоҡлап, йәки хатта иҫтән ауып ятып тороуың хәйерле булыр, балаҡайым. Юҡһа уянғаныңды, кемгәлер, нимә эшләргәлер ҡамасауларыңды һиҙһәләр, алла һаҡлаһын... — тип аһылдай-уһылдай урынынан торҙо. — Туҡта әле, сығайым әле. Самауыр кәрәк, тигәйнеләр шикелле.

Ғәйшә әбей усаҡ янында күптән бирле ҡайнап, ташып ултырған ҙур еҙ самауырҙы аһылдай-уһылдай күтәреп, ҡунаҡ өйөнә сығып китте. Заһираға хәҙер шул ғына кәрәк ине. Ул, яралы тәненең сатнап ауыртыуына иғтибар итмәй, һикереп торҙо ла ҡабаланып тышҡа сыҡты. Ҡапҡаға барҙы — бикле. Баҫрау һалып ҡуйылған. Арт ҡапҡаға барҙы — унда ла баҫрау. Әммә ҡыҙ юғалманы. Лапаҫҡа һөйәп ҡуйылған баҫҡыс буйлап бесәй шикелле үрмәләп лапаҫ башына менде лә кәртә арты яҡҡа һикереп төштө. Тән тиреһе тағы ла сатнап йыртылған, һөйәкһаяғы сайрап ватылған кеүек түҙгеһеҙ ауыртыуҙан тағы ҡысҡырып ебәрә яҙҙы. Етмәһә, ҡайҙалыр бик яҡында ғына кемдер ҡытырмаҡ ҡарҙы вата баҫҡан, бышылдап һөйләшкән тауыш ишетелгән кеүек тә булды. Ул, йөрәгенең ҡурмас кеүек ҡурылып китеүенән бөтөнләй хәлһеҙләнеп, төшкән еренән ҡуҙғала алмай ултырҙы. Унан, әгәр белеп ҡалһалар, үҙенә лә, бер ни һиҙмәй туй яһап ултырыусыларҙан бер нисә кешегә лә үлем буласағын хәтерләгәс, йән әсеүе менән тағы һикереп торҙо: «Ҡайҙа барырға? Кемгә әйтергә? Бынауы төҫ менән туй барған ергә барып инһәм, кешеләр нимә уйлар? Ышанырҙармы уның һүҙенә?!» — тигән ауыр, аҙаплы уй кисерҙе. Ахыр уның башында йәшен тиҙлеге менән: «Оләсәйемдәргә барайым. Хәсбиямал аша әйттерәйем!» — тигән ап-асыҡ ҡарар тыуҙы һәм ул артына боролоп та ҡарамай, кәртә артлап үрге осҡа югерҙе.

«Тиҙерәк, йәһәтерәк барып етергә, әйтергә... Бер көн ишетте ләбаһа ул. Үҙ ҡолағы менән ишетте. Уны иҫһеҙ ята тип серләштеләр: «Туй көндө Иштуғанын да, Әхәтен дә, Хамматын да дөмөктөрәйек... Әйҙә шунан колхоз тип йөрөп ҡараһындар», — тигән мәғәнәлә һүҙ ҡуйыштылар!

Ошо зәһәрле ыҫылдау ҡасандан бирле Зәһираның ҡо... ... яңғырап тора. Ҡасандан бирле ул үҙенең йәш, тәжрибәһеҙ күкрәгендә үҙе яратҡан, хөрмәт иткән, үҙе... дә өҙөлөп улар кеүек булғыһы килгән кешеләрҙең ... үлтереләсәген белеп түҙеп йәшәп килә бит! Ләкин ... йәшәйме ни? Шул арҡала иҫтән яҙып ауырып ятмаймы ни ул?!. Әммә унан ни файҙа? Йә кисерҙем, ти... ауырып йығылдым, ти... Уға ҡарап яуызлыҡ кәменеме ни?

Аһ, ниңә һуң ул теге көндө, ауыл Советенә барғас, ... сығып югерҙе, ниңә шунда уҡ әйтмәне?!

Әхәт, Әхәт... Мин һинең үлемеңде теләйемме ни? Юҡ, юҡ! Йәшә. Көнләшмәйем дә хатта... Үҙем үлергә лә риза, бына, күрәһең бит!.. Тик һин йәшә... Яҡшы кешеләр йәшәһен. Яуызлыҡ тонсоҡһон!.. Эйе, шулай... Бына шул теләк өсөн хатта, хатта... Ярабби, уйлауы ла ҡурҡыныс! Атаһымды, ҡартатайымды тоттороорға ла риза бит!..»

Зәһира өсөн йыл кеүек аҙаплы был минуттар ҙа артта ҡалды. Ул, тыны-өнө быуылып, Бибекәй әбейҙәргә инде лә, урындыҡҡа барып йығылды:

— Оләсәй!.. Хәсбиямал апай!..

— Әү, ҡолонсағым! Ни булды? Ниңә шул хәтле төҫөң ҡасты, ейәнсәркәйем! Ниңә былай бик һуң? Төндә?!

— Ни генә булды һуң, һылыуҡайым?! — Өҙәләнеп, Хәсбиямал менән Бибекәй әбей Зәһираның өҫтөнә эйелделәр. Уның ҡанға буялған күлдәген күргәс, аптырауҙан ни әйтергә, нимә эшләргә белмәй:

— Әй-й-й! — тип һуҙып торҙолар. Унан икеһе бер юлы тағы: — Ниндәй йәнһеҙе һине ҡанға батырып туҡманы, һылыу?

— Ҡем һиңә шулай ҡул тейҙерергә баҙнат итте, балаҡайым?! — тип һорашырға керештеләр.

— Аҙаҡ, аҙаҡ, — тине Зәһира, ҡул һелтәп, — ҡағыҙ, ҡәләм бирегеҙ. Йәһәт булығыҙ!

— Йәнең ҡыл өҫтөндә торғанда, нимәгә кәрәк ул ҡағыҙ-ҡәләм, ҡолонсағым?

— Нимә яҙмаҡсыһың, һылыу?

— Тәҙрәне ҡороғоҙ!

— Ҡороулы бит!

— Ҡапҡасы ябыулы...

— Улай булһа ярай, — тине Зәһира, бер аҙ тынысланып. Аш өҫтәле янына барып ултырҙы. Ашығып-ҡалтыранып ниҙер һыҙғыланы, ҡағыҙҙы дүрткә бөкләп, Хәсбиямалға һондо.

— Мә, югер, ошоно Иштуған ағайға йәки Әхәткә бир.
— Туҡта әле, һылыу, улар бит...— тип уңайһыҙланып, тотлоғоп ҡалды Хәсбиямал.
— Беләм. Туйҙа ултыралар.
— Балам, ейәнсәрем, һин бит һыу һылыуы кеүекһең... Баш һау булһа, егеттең бына тигәне табылыр... — тип Бибекәй әбей ҙә һүҙгә ҡатышты. Улар Заһираның Әхәтте яратыуын ишетеп беләләр, хәҙер ул ҡыҙыулыҡ менән туйҙы боҙорҙай берәй килешмәгән яҙыу ебәрергә уйлай икән, тип ҡурҡалар ине.
— Мин унда барып йөрөй алмайым. Килешмәй, — тине Хәсбиямал иплән кенә. — Саҡырһалар ҙа, барманым әле. Һинең өсөн әсенеп барманым... Әйтерһең, һин Сабиранан кәм...
Бибекәй әбей тағы өгөтләргә кереште.
— Улай тимәгеҙ. Йәне теләгән — йылан ите ашаған, ти. Йәне Сабираны теләгәс, уның ни ғәйебе бар, ҡолонсағым! Һинең дә бәхетеңә яҙғаны яҡын-тирәлә генә йөрөп яталыр әле...
— Китегеҙ, йәнемде көйҙөрөп юҡты һөйләп тормағыҙ!— тип асыуланды Заһира.— Өгөтләрҙән элек, уҡып ҡарарға кәрәк, Хәсбиямал! Тегеһе яҙыуға күҙ йөрөтөп сыҡҡас, ҡото осоп:
— Абау, хоҙайым?! — тип ҡысҡырып ебәрҙе. Унан кейенер-кейенмәҫ сығып югерҙе.
— Оләсәй, хәҙер һин ишекте бикләә. Бер кемде лә индермә, — тине лә Заһира, ҡапыл бөтөнләй хәлдән тайып, оләсәһенең түшәгенә ауҙы. — Ошо ятыуҙан тормаһам да үкенмәҫ инем... — тип күҙен йомдо. Һәм шунда уҡ әллә ҡаты йоҡлап китте, әллә тағы иҫен юғалтты. Бибекәй әбей:
— Ҡуйсы, ҡолонсағым, улай тимәсе. Хәҙер бына мәтрүшкә сәйе эсерермен, иртән иртүк Хәсбиямал апайың мунса яғыр, май айында ғына яһаған ҡайын миндеге менән сабындырыр, йыуындырыр, таҙа күлдәктәр кейҙерер, һауығырһың... һөйәгең һау булһын — ите үҫер ул... Йәштән һә тигәнсе үҙ көсөнә ҡайтыр... — тип ҡулы менән тейергә баҙнат итмәй, күҙе менән генә иркәләп, ейәнсәренең янында һөйләнеп ултырҙы. — Һау ғына бул, ҡолонсаҡҡайым, Шәмсиәмдең бер мираҫы булып ғүмер ит. Үҙең төптө әсәңә оҡшап та бараһың хәҙер. Буйың-һының да, ҡылығың да... Ул да шулай-кеше өсөн йәнен бирергә әҙер ине, мәрхүмкәйем...

— Ә, нимә тиһең, оләсәй? Хәсбиямал ҡайттымы? — Заһира, тертләп, һикереп тороп ултырҙы, ҡурҡынып тирә-яҡҡа күҙ ташлап алды. — Мин һаман тереме нимә? — тип оләсәһенә тултырып бер ҡараны ла тағы урынға ауҙы. Бибекәй әбей, түңәрәк күҙҙәрен тағы ла түңәрәкләндереп, һәр һүҙҙе һаман шулай көйләп, оҙон һүҙын әйтеп, ҡыуанысын, көйөнөсөн һөйләне:

— Алла һаҡлаһын тиген, балам, яҡты донъянан туйырға яраймы һуң? Шымбай ҡороғорҙар ҡулында торорға ғына ярамай... Үҙемдә йәшәрһең бынан һуң... «Йәш ағас, ҡарт ағасҡа һөйәлеп, йөҙ йыл йәшәр» тигәндәр... Йәшәрһең...

* *
*

Хәсбиямал түбән осҡа, Баҙыян еңгәләргә барып еткәнсе туҡтамай югерҙе:

«Бара һалып етергә! Әйтергә... Белһендәр... Яуыздарының кәрәген бирһендәр!..»

Ләкин, арата ҡапҡаны асып инеү менән, бөтә ҡыйыулығы юғалды, ҡапыл хәле бөткәндәй булып, туҡталып ҡалды.

«Нисек инергә? Уңайһыҙ бит әле...»

Ул бик әкрен, йомшаҡ баҫырға тырышып, ҡыймай ғына тәҙрә янына барҙы. Үрелеп, аҡ ҡорма өҫтөнән өй эсенә күҙ ташланы:

«Туй бара... күңелле туй, бәхетле туй... Уның да бер саҡ шулай туйы булырмы икән? Ҡасан? Ҡем менән? Ошо пәшкә етеп, егет һөйөп тә ҡарамаған ҡыҙҙың ниндәй туйы булһын, биғәләштең!..»

Ул тағы ла үрелеберәк эскә ҡараны.

«Урындыҡты алып ташлағандар икән... Ҡарасәс инәй ғүмер иткән, үлер сәғәтендә һуҙылып төшөп ятҡан урындыҡ... Тимербай ағай итексе сағында йөҙлөгө сүкелеп бөткән ҡарт урындыҡ хәҙер юҡ... Булмаһын, кәрәкмәй ҙә... Ана, өҫтәл ҡалай һәйбәт. Дүрт яғынан теҙелешеп ултырғандар... Ҡара, бынауы һорнайған Моратша ла бында икән дәһә?!»

«Сабира ҡалай матур булып маһайып ултырған була... Әхәтен ҡара, ауыҙын йыйып ала алмай, нимәгә көлә икән?!»

Хәсбиямал, берсә һоҡланыу, берсә көнләшеү тойғоларына бирелеп, хатта үҙенең ни өсөн килеүен дә онотоп торҙо.

Сабира бөгөн, әллә әсәһе үҙенең ҡашмауын, еләнен, селтәрен кейҙереп ҡуйғанға, айырата матурланып киткән, унын ҙур ҡуңыр күҙҙәрендә бәхет нуры сағыла, һәр хәрәкәте һөйкөмлө, баҫалҡы. Ул, тыйнаҡ ҡына йылмайып, тыныс, аҡыллы итеп әленән-әле кейәүенә ҡарап ала. Был ҡараш аҫтында Әхәттең былай ҙа теремек күҙҙәре тағы ла нурланып китә, йоморо йөҙө, ҡалыныраҡ ирендәре йылмайыуҙан туҡтамай...

«Бәхетлеләр...» — тип күрһөнөп ҡуйҙы Хәсбиямал. Һәм тертләп уянып киткән һымаҡ булып, тәҙрә ҡаҡты:

— Еңгә, сыҡ әле!

Ҡунаҡ һыйлап, өҫтәл янында өйөрөлөп йөрөгән Баҙыян еңгә йәһәтләп ишеккә барҙы.

— Ҡем бар? Инегеҙ! — Ишекте ҡыҫып, ҡараңғылыҡҡа өндәште. — Йә?

— Инмәйем. Еңгә, сыҡ әле...

— Аһа, Хәсбиямал, һинме был?! — тип аптырай-һөйләнә Баҙыян еңгә тышҡа сыҡты.— Ниңә һуңланың? Әйҙә, түрҙән уҙ! Тиҙ генә бул!

— Юҡ, инә алмайым, — тине Хәсбиямал, тағы ла әкренерәк бышылдап, ҡағыҙҙы Баҙыян еңгәнең усына һалды. — Йәһәт кенә ошоно Иштуған ағайға бир! — тине лә сығып та югерҙе.

— Йә, был ни булды инде? — тип Баҙыян еңгә аптырап тороп ҡалды. — Ни тип аңларға быны? Бирергәме, юҡмы? Бәлки, ул туйҙың йәмен ебәрерҙәй, йәштәрҙең ҡыуанысын кәметерҙәй нәмә булһа?!

Һалҡын төньяҡ еле ҡапыл уның арҡа буйынан югереп үтте, айһыҙ ҡара төн үҙ өҫтөнә емерелеп килгәндәй хәтәр булып китте.

«Ни булһа ла бирергә кәрәк».

Ул һалмаҡ ҡына атлап өйгә инде.

— Иштуған ҡәйнеш, һиңә ниндәйҙер яҙыу...

* * *

Волостең иң аңлы, ышаныслы коммунистәренән, комсомолдарынан ҙур ғына бер төркөм, эңер ҡараңғыһы төшөүгә, алдан билдәләнгән урынға бик ҙур һаҡлыҡ менән берәм-берәм генә йыйылып килде. Бында уларҙың ҡулына ҡорал бирелде. Шунан бер өлөшө Хаммат етәкселегендә Илсеғолға, икенсе өлөшө волость милиция начальниге, элекке чапаевсы Алексеев етәкселегендә Мраковкаға

юнәлде. Алынған сигналдарға ҡарағанда, теге өс «һунарсыны» ла, уларҙың таяныстарын да бөгөн төндә ошо ауылдарҙа ҡулға төшөрөргә мөмкин ине.

Хаммат төркөмө, Илсеғолға килеп, Әхмәтша менән Шымбай ҡарт йортон ҡарауылға алғанда, ергә дөм һуыҡ таң алды ҡараңғыһы яткайны. Шулай ҙа Хөснөлхаҡ менән Әхмәтшаның ҡаса-боҫа Шымбай ҡарттарға юнәлеүе уларҙың иғтибарынан ситтә ҡалманы. Инде юлбасарҙарҙы енәйәт өҫтөндә тотаһы ғына ҡалды. Дөрөҫ, Хаммат уларҙы енәйәт урынына барып етмәҫтән, ошонда, өйҙә үк, тотоп алыр ине, ләкин был, берҙән, дошманға ҡаршы атышырға мөмкинлек бирәсәк, икенсенән, аҡлашыи маташырға юл ҡалдырасаҡ? Ә Хаммат эште икеләнергә, шикләнергә юл ҡалдырмаҫтай итеп эшләргә ярата. Шулай булғас, көтөргә, уяу, һаҡ көтөргә... Дошманды енәйәт өҫтөндә тоторға! Ләкин көтмәгәндә Заһираның сығып югереүе уның планын үҙгәртте: ҡайҙа югерҙе, ни өсөн? Атаһының яуыз ниәтен һиҙеп, шул хаҡта кешеләргә хәбәр итергә ашығып сығып ҡасыуы ла мөмкин бит. Ул ҡыҙҙан быны ла көтөргә була. Нисек кенә булмаһын, беҙҙең планды боҙоп, болартып ебәреүе мөмкин. Операцияны һуҙырға ярамай. Хәҙер, ошонда уҡ хәл итергә кәрәк...

Хаммат төркөмдө һөжүмгә алып китте. Улар ҙа тап бая Заһира үткән юлды һайланылар: ситән буйлап лапаҫ башына менделәр, баҫҡыстан ишек алдына төштөләр. Тәҙрәләр эстән ҡоролған, ҡапҡастар ябылған, өйҙә тауыш-тын ишетелмәй... Ләкин солан ишеге эстән бикһеҙ... Тимәк, дошман үҙен шул хәтле иркен һиҙә... йәки Заһира асыҡ ҡалдырған...

Хаммат ишек янында бер-ике кешене һаҡта ҡалдырҙы ла, башҡаларҙы эйәртеп, ҡапыл өйгә барып инде; арғы бөтәһе лә күҙ асып йомған арала эшләнде.

— Ҡуҙғалмағыҙ! Ҡулдарығыҙҙы күтәрегеҙ! — тип бойорҙо ул ҡаты итеп. Шул саҡ баш өҫтөнән генә пуля һыйлап үтте. Аяҡ аҫтынан кемдер боҫоп үтергә маташты. Хаммат уныһын ҡәһәрләнеп осора типте, урындыҡҡа менеп китеп мылтыҡтан йәнә атырға маташҡан Әхмәтшаны күҙ асып йомған арала ботонан тартып йыҡты, пуля, ҡолаҡ ярғыс шартлап, өрлөктө тишеп үтте. Хаммат тибеп ырғытҡас, тағы мылтығына ынтылып маташҡан Хөснөлхаҡты, хәнйәр алып ҡаршы торған Шымбай ҡартты бөтөндәр ҡоралһыҙландырҙы.

Иштуғандар, бөтә комсомол йәштәрҙе йыйып, ни етте шуның менән ҡоралланып, Шымбай ҡарт йортон ҡамап алғанда, бында эш бөткәйне. Хамматтар, Әхмәтша, Хөснөлхаҡ һәм Шымбай ҡартты ҡулға алып, юлға сығырға йыйынғайны. Иштуған менән Әхәт аптырап ҡалды:

— Ни өсөн улай, беҙҙән башҡа?!

— Дошмандың һиҙгерлеген томалар өсөн, — тип, ҡәнәғәт йылмайҙы Хаммат. — Туйҙан башҡа ғәме булмаған йәштәр ролен һәйбәт башҡарҙығыҙ. Молодец, дуҫтар! — тине. Унан егеттәрҙең яуабын да көтмәй:

— Заһира, ахыры, бик ауырыу хәлдә сығып югерҙе... Ҡарағыҙ, ситкә тибәрмәгеҙ, — тине лә, ҡулға алынған дошмандарҙы алып, юлға сыҡҡан отряде артынан ашыҡты. — Ничего, егеттәр, һеҙгә лә эш етерлек булыр әле!..

Волость милиция начальниге Алексеев етәкселегендәге төркөмдөң эше уңышлы сыҡманы. Ауыл активенән үс алырға тип, Мраковкаға килгән Митрофан менән Апанасты, күрәһең, был юлы ла кемдер иҫкәрткәйне. Улар тағы эҙ йәшерергә өлгөргәйне.

## XI

Һуңғы аҙналарҙа Емештең көндәре тулҡынландырғыс ваҡиғаларға айырата бай булды. Башта дәрестән һуң Май байрамына әҙерләнелде, лозунгылар яҙылды, транспаранттар эшләнде, колонна менән йөрөргә, йырға өйрәнелде. Техникумдың физкультурниктәре, парадта ҡатнашырға тейешле булғанлыҡтан, айырата ныҡлап әҙерләнделәр. Махсус кейемдәр ҙә тегелде: ҡыҙҙарға ҡыҫҡа еңле, киң түңәрәк яғалы аҡ кофта, күк сатин трусик, аҡ тапочка, егеттәргә билдәрен өҙөп торған ыҡсым, тар ҡара салбар, аҡ күлдәк. Яңы кейемдәрҙә уларҙың бөтәһе лә ҡолонсаҡ кеүек һылыу, зифа буйлы, шат йөҙлө булып китте... Емеш тә улар араһында ине.

Демонстрация ваҡытында физкультурниктәр, ғәҙәттәгесә, хәрби частәр артынан үтте. Колонналар, бер тигеҙ сафтарға теҙелеп, революцион йырҙар йырлай-йырлай ҡала ситенә, «Беренсе май майҙаны» тип йөрөтөлгән далаға, барып сыҡты. Киң, иркен дала ал байраҡтарҙан торған сәскәле туғайға әйләнде, күтәренке йыр, уйынкөлкө менән шауланы. Тынлы оркестрҙәр айырата ярһыу дәрт менән уйнаны, тотош майҙан дәррәү йыр менән уға ҡушылды. Түбәне аяуһыҙ ҡыҙҙырған ҡояш та, теш ара-

Һына шығырҙап ҡыҫылған ҡом туҙандары ла был йыр ташҡынын туҡтатырға йәки һүлпәнәйтергә көсһөҙ ине. Майҙанды ике яҡлап смирно баҫып торған икһеҙ-сикһеҙ колонналарҙың революцион йырҙарында ла, оркестрҙарҙың үтә сағыу сыңында ла бөгөн уғата оло тантана, ғорур шатлыҡ ишетелә. Күңел ирекһеҙҙән ниндәйҙер көтөлмәгән ваҡиға, күрелмәгән ҡыуаныс көтә. Һәм ул шулай булып сыҡты ла: Беренсе май парадын ҡабул итергә Мәскәүҙән Семен Михайлович Буденный үҙе килгәйне! Кескәйерәк, ләкин ғәжәп һылыу кәүҙәле, йоморо тояҡлы, ялтыр ҡара арғымағын маршҡа бейетеп, бөтә парадты сәләмләп үтте ул. Эйәр өҫтөндә егеттәрсә сая ултырған мыҫлай һынлы, ҙур ҡара мыйыҡлы, бөркөт күҙле легендар командир Емешкә батырлыҡтың да, матурлыҡтың да иң камил өлгөһө булып күренде. Уның шатлығы был ваҡытта күкрәгенән тулып ташты. Ул хатта, ғәҙәттәге ҡыйыуһыҙлығын онотоп, өҙлөкһөҙ «ур-ра» ҡысҡырҙы, үҙенең сағыу саф тауышы, күңелендә урғылған икһеҙ-сикһеҙ революцион дәрте менән бөтә майҙан ярһып йырлаған «Конная Буденного»ға ҡушылды.

...Никто пути пройденного у нас не отберет.
Конная Буденного дивизия, вперед.

Бына шулай ғәҙәттән тыш күңелле үтте быйылғы яҙ байрамы. Емештең күңелендә ул, моғайын, яҙ кеүек, йәшлектең үҙе кеүек йымылдап, мәңге йәшәп ҡалыр...

Ә һуң кисә техникумды тамамлап сығыусыларҙы оҙатыу кисәһе шундай уҡ күңелдә ғүмергә һаҡланырлыҡ булып уҙманымы ни?! Эйе, был кисә Емеш, үҙҙәре менән һөйләшеп, ҡатнашып йөрөмәһә лә, күптән инде үҙ йөрәгенән уларға биреп ҡуйған ике кешеһенән ғүмергә айырылышасағын аңланы. Дәүериә менән Зиннур быйыл техникумды тамамланы. Хәҙер ауылдарға уҡытыусы булып китергә әҙерләнәләр. Техникумдың директоры Ғимранов ағай йылдағыса, үҙе юл башлап, уларҙың курсын Мәскәүгә, Ленинградҡа экскурсияға алып барып ҡайтты. Үҙҙәре Кронштадт өсөн һуғышҡан тарихи урындарҙы күрһәтте.

— Мәскәүҙе, Ленинградты күреү йәш кешенең күңелендә революцион рух уята. Ә революцион рух — кешене мещанлыҡ, обывателлек сикләнеүҙәренән һаҡлай. Уның күңелендә һәр саҡ алға, яҡшыға, яҡтыға... кешелектең бөйөк идеалдарына дәртләндереп тороусы сығанаҡ булып

тора, — тип һөйләргә ярата Ғимранов ағай. Шуға ахыры һәр йыл, нисек тә мөмкинлек табып, был экскурсияны ойоштора.

Оҙатыу кисәһен, йылдағыса, «Ҡаруанһарай» көйөн студенттәр хор менән йырлап тамамланы.

Һай, Ырымбур ҡала, сәхрә-дала,
Ҡом тауҙарын киҫкән юлдарың.
Сүллектәргә тормош, йән өҫтәргә
Таралалар һинең улдарың.
Һай, Ырымбур ҡала, сәхрә-дала,
Йәйелеп ята иркен ҡырҙарың.
Киң ҡырҙарҙы баҡса, гөл итергә
Таралалар еткән ҡыҙҙарың...

Эйе, Емеш өсөн, әллә үтә яҡын күргән кешеһен — Дәүериәне оҙатҡанға, был кисә бигерәк тә күңелле лә, моңһоу ҙа тойолдо. Яңынан ике йылдан уның үҙен дә ошолай оҙатасаҡтарын, был инде уҡыу йорто менән генә түгел, йәшлек менән дә хушлашыу буласағын уйлағас, уға тағы ла моңһоурак булып китте. Эйе, һис тә генә үтмәҫ кеүек тойолһа ла, йәшлек тә мәңгелек түгел шул...

Оҙатыу кисәһенән ҡайтҡас, ҡыҙҙар ятағы тәүлектәр буйы ҡоторонған дауылда урғып-сайҡалып арып тынған күл өҫтө шикелле әкренләп тына барҙы. Ҡайҙалыр, кемдер һирәк-һаяҡ ҡына бышылдап ҡуйҙы, кемдер күкрәгенә һыймаған ярһыуын уф-ф-ф-ф! тип өрөп сығарҙы, ҡайһылары өҙөлөп ҡалған көлөүен тамамланы, ә Дәүериә серле скрипкаһын ҡулына алды һәм һуңғы тапҡыр дуҫтарын скрипка моңо аҫтында тибрәтеп йоҡлатырға булды:

— Быныһы һеҙгә иҫтәлек өсөн, ҡыҙҙар: «Сәлимәкәй»!

Дәүериә айырата ярһып, тулҡынланып уйнаны был кисте.

Икһеҙ-сикһеҙ иркен сихри моң — тылсымлы башҡорт моңо — үҙенең көмөштәй саф, иркә ҡанатында ҡыҙҙарҙы бәүелтә-тирбәлтә илаһи йыр донъяһына осороп алып инеп китте был кисте лә...

Күлдәй тәҙрә үтә, ғәҙәтенсә, алыҫҡа, ҙәңгәр бушлыҡҡа күҙ ташлап тынып ҡалған Емештең ҡаршыһына оҙаҡламай, Зөһрә йондоҙон эйәртеп, тулған ай ҙа килеп туҡтаны. Көмөш керпектәрен наҙлы елпеп, ҡыҙҙарҙы берәм-берәм ҡарап сыҡты: «Кемде эҙләйһең һин, моңһоу Айбикә? Моғайын, Дәүериәнелер? Ана бит ул, ҡара сәстәрен таратып, яланаяҡ иҙәнгә баҫҡан да моң донъяһына

сумған... Ҡарап, күреп ҡал. Һуңғы тапҡыр уйнай бит ул был булмаһа...»

Көтмәгәндә күңеленә килгән был уйҙан Емештең хәтеренә үҙе тәү уҡырға килгән йылғы бер төн килеп төштө. Унда ла Дәүериә тап бына шулай ярһып скрипка уйнағайны. Тулған ай ҙа, тап шулай тәҙрә үтә ҡарап, һоҡланып торғайны ул төндә лә... Тик әле яҙ... Унда ҡышҡы төллә ине... Шулай ҙа... Ҡайһылай был донъяла бөтә нәмә ҡабатланып, әйләнеп, береһенә икенсеһе оҡшап килеп тора түгелме һуң әле? Эйе-эйе, аҙ ғына үҙгәреш менән ҡабатланып, әйләнеп тик торған дүңгәләк кеүек... Улай булһа, бер кешенең яҙмышы икенсенән юнләп айырылмауы, бер кемдең дә шул өйрөлмәк дүңгәләктән ары китә алмауы мөмкин дәбаһа?! Улай булһа, улай булһа...»

Ул күңелендә өнһөҙ ҡабатланған был һорауға яуап таба алмай оҙаҡ йоҡоһоҙ ятты. Хәйер, ул бер ҡасан да ятҡас та йоҡлап китеүҙе белмәне инде. Төн уның өсөн — үҙенә башҡа тылсымлы бер донъя. Төндә ерҙе ете ҡат әйләнеп сығырға, кәрәк икән бына тигән алтын һарайҙар, мәрмәр ҡалалар һалырға һәләтле әкиәттәге дейеү пәрейҙәре шикелле, ул да уйы менән ерҙе генә түгел, тотош ғаләмде гиҙеп сығырға өлгөрә. Донъяның серенә, тәбиғәт күренештәренең айышына төшөнөргә, кеше бәхетенең асылын аңларға тырышып, оҙаҡ-оҙаҡ уйланып ятыуҙан тәм таба. Был уйҙар берсә моңһоу ҙа, хәтәр ҙә, берсә үтә өмөтлө лә, өмөтһөҙ ҙә булалар. Тик нисек кенә булмаһын, уның белергә, тойорға, төшөнөргә ашҡынып торған күңеленә ниндәйҙер билдәһеҙ яңы ярһыу тойғолар өҫтәп, байытып үтәләр...

Иртәнсәк, Емеш тәҙрә үтә битенә һирпелгән ҡояш нурҙарына иркәләнеп уянып киткәндә, ятаҡта бер кем дә юҡ ине. Ҡыҙҙар, урындарын йыйыштырып, ҡайҙалыр китеп бөткәйне.

«Бөгөн ял көнө ләбаһа! Ҡыҙҙар оҙаҡ йоҡлай торғайны ял көндө? Күрәһең, мин бигерәк тә арттырып ебәргәнмен», — тип тыныс ҡына уйланып алды Емеш. Үҙенең һаман торғоһо килмәне. Ул арала ятаҡҡа, йырлай-көйләй, Шәмсиә ҡайтып инде. Шаярып Емештең өҫтөнән одеялын тартып алды.

— Тор, йоҡосо! Иртәнге ашҡа һуңға ҡалаһың!

Ә инде ул ашыҡ-бошоҡ тамаҡ ялғап ашхананан сығыуға, Сабир, Хөрмәт, Шәмсиә ишек алдында уны көтөп торалар ине.

— Эй, ҡараҡай, тамаҡ туйҙымы? — тип ҡаршыланы Сабир. — Оят түгелме һиңә ағайыңдарҙы гел шулай һағынып көтөргә мәжбүр итеү? — Емештең улай һөйләшкәнде яратмауын белгән Хөрмәт дуҫына шелтәле ҡараш ташланы.

— Йә, Сабир, иртүк кешенең кәйефен боҙорға ашыҡма әле.

Емештең кәйефе көтөлмәгәнсә яҡшы ине бөгөн. Шуға ахыры ул Сабирҙең һүҙенән төртмәлек ишетмәне. Киреһенсә, сикһеҙ шат, шаян йылмайып дуҫтарына ҡараны.

— Ҡайҙа барырға йыйындығыҙ, тынмаҫ йәндәр?

— Яйыҡ буйына, — тип тағы бөтәһенән алда Сабир яуап бирҙе. — Сәскәләр йыйырға, күбәләктәр ҡыуырға. Һин, ҡараҡай, Яйыҡ буйын күргәнең дә юҡтыр әле, моғайын?

— Юҡ.

— Улай булғас, әйҙә, барайыҡ, күрәйек! — тип Хөрмәт тә ҡыуанып күтәреп алды. — Беҙҙең Оло Эйек буйынан бер ҙә кәм түгел ул.

— Ысын, әйҙә, Емеш! Минең дә яҙғы туғайҙы күргем килә, — тине Шәмсиә лә, ихласланып. — Барайыҡ, ә?!

— Барғым килмәй шул...

— Ниңә?!

— Белмәйем...

Емеш үҙ яуабынан үҙе лә көлөп ебәрҙе. Әммә ул бит быны ҡыланыу, ялындырыу өсөн түгел, ысын күңелдән әйтте. Шулай булғас, ниңә көлкө сыҡты һуң әле был һүҙ?.. Емештең, ысынлап та, хәҙер ниңәлер яңғыҙ ғына ҡалғыһы, уйланғыһы, ниҙәрҙер яҙғыһы килә ине.

— Улай булғас, мин дә бармайым, — тип Шәмсиә лә егеттәр янынан ситкәрәк күсеп баҫты.

— Һеҙ тәүҙә икәү генә барып ҡарап ҡайтығыҙ. Умырзая сәскә атҡанмы икән? — тине Емеш, серле йылмайып.

— Сәскәһен ҡойған инде ул, — тине Хөрмәт күңелһеҙ генә.

— Улай булғас, ҡырҙа ни йәм ҡалған? — тип яуапланы Емеш, тағы ла шаянырaҡ йылмайып. — Мин умырзая сәскә атҡан мәлде генә яратам...

— Ҡыҫҡа ғүмерле мәл бит ул... — тип Сабир тағы һүҙгә ҡатнашты, — уның нимәһен яратаһың?..

Емеш һаман кире һөйләште:

— Уның ҡарауы тиңһеҙ матур мәл...

— Был ҡыҙ бөгөн бөтөнләй ҙә һул яғы менән тор-

гын, — тип Шәмсиә Сабир яғына бошоноп ҡына ҡарап ҡуйҙы. — Йә, улай булһа, һеҙ, егеттәр, үҙегеҙ барығыҙ. Ә беҙ Емеш менән баҡсала ғына йөрөп торорбоҙ.

— Эйе шул, — Емеш әхирәтенең ҡулынан етәкләп алды, — баҡсала ҡалай һәйбәт!..

Ҡыҙҙар, наҙлы ғына йылмайып, баш эйҙеләр ҙә урам ҡапҡаһы яғына киттеләр. Егеттәр, үҙҙәренең уңайһыҙ ҡалдо ҡалыуҙарын белдермәҫкә тырышып, уларҙы шаян һүҙҙәр менән оҙатып ҡалдылар.

— Бахырҙар, — тип ауыр ғына көрһөнөп ҡуйҙы Шәмсиә.

— Ҡемдәр? — Емеш әхирәтенә йылмайып ҡараны. Уның күңеле ниңәлер бөгөн ғәжәп күтәренке, һәр нәмәнән мәрәкә генә табырға әҙер тора ине. — Беҙме?!

— Юҡ та. Малайҙарҙы әйтәм, — тине Шәмсиә, йәне көйөп. — Ҡайһылай ҡыуанышып көтөп торған булалар ине һине...

— Һинең дә бик тә барғың килә ине... — тип үртәне Емеш әхирәтен. — Бармай ҡалғанға хәҙер эсең боша.

— Боша шул. Йә, ошондай матур көндө Яйыҡ буйында йөрөп ҡайтҡандан ни булыр ине тиһең?!

— Ниңә барманың?

— Һин бармағас... Малайҙар менән, бигерәк тә Сабир менән, яңғыҙ йөрөгөм килмәй минең...

— Ҡара һин уны?! — Емеш, үҙенән өс йәшкә оло әхирәтен сабый бала һымаҡ күреп, иғтибар менән ҡарап торҙо. Уның шундай ҡылығы бар шул: ул ниңәлер үҙен һәр саҡ үҙ тиңдәштәренән өлкән һымаҡ күрә. «Ҡарасы, был томтоҡ Шәмсиә, быйыл ап-арыу үҫеп, баҫалҡыланып киткән дәбаһа!.. Моғайын, шул Сабирҙе ысынлап яратҡан булалыр әле?!»

Ул әхирәтен иплəп кенә ҡосаҡлап алды:

— Һин уны яратаһыңмы?

Бығаса үҙ серен һөйләргә лә, кеше серенә инергә лә тырышып бармай торған Емештең ауыҙынан был һорауҙы ишетеүе Шәмсиәгә бик тә сәйер тойолдо. Ул хатта ҡаршы яуап та таба алманы.

— Йә, әйт әле, Шәмсиә! — тип тағы ла иркәрәк тауыш менән ҡабатлап үтенде Емеш. Ул бөгөн шундай шат, көләс, күҙҙәрендә гел-гел иркә осҡон уйнап тора. Бындай саҡта уның һирәк була. Әммә тап шундай сағында Шәмсиәгә уның менән һөйләшеүе еңел, хатта ҡыҙыҡлы була. Улар йыш ҡына тормош хәлдәре, үҙҙәрен әйләндереп

алған тәбиғәт күренештәре, киләсәккә пландар хаҡында һөйләшеп алалар. Ә бына мөхәббәт хаҡында бер ҡасан да һөйләшкәндәре, серләшкәндәре юҡ... Шәмсиә ундай темаға һүҙ башлаған саҡта, Емеш томһая ла китә ине. Әйтерһең, күңел һандығын, кемдәндер ҡыҙғанып, шарт ябып ҡуя. Әле инде бына үҙе үк һорау бирә! Шәмсиәнең йөҙө балҡып китте. Күренеп тора, Сабир хаҡында, һөйөү-һөйөшөү хаҡында һөйләшкеһе, кемгә лә булһа йөрәк серен сискеһе килә уның! Шулай ҙа был хаҡта һөйләүе еңел дә түгел ине, күрәһең. Ул башта ауыр ғына көрһөнөп, тәрән генә уйланып алды. Ахыр бошонҡо ғына итеп:

— Мин яратам да бит ул... — тип әйтеп һалды.

— Ә ул яратамы?

— Әллә... Тик ул әллә ҡалай, тупаҫ...

Шәмсиә, әхирәтенә оялсан ғына ҡарап, тынып торҙо. Емеш тағы ни әйтер икән тип көттө. Уныһы бүтән өндәшмәгәс, ояла-ҡыҙара һөйләп китте.

— Бер саҡ кис, ошо баҡсала икәү генә йөрөй инек, ул ҡапыл минең ике битемдән ҡыҫып-тотоп алды ла үпмәксе булды. Ә мин ҡурҡышымдан, оялышымдан ауыҙымды астым да ебәрҙем... Шунан ул хатта миңә тупаҫ итеп:

— Кит, алйот, үбешә лә белмәйһең, исмаһам!— тине. Миңә шул хәтле оят булды. Шунан мин нисәмә төн одеялымды бөркәнеп, илап яттым. Бынан һуң уның менән һөйҙәшмәйем дә, йөрөмәйем дә тип, үҙ-үҙемә һүҙ бирҙем. Ә аҙаҡ, ул бер көлөп ҡарау менән, бөтәһен дә оноттом... Бәлки, һөйөү тигәндәре шулай булалыр, Емеш, ә?

— Моғайын, шулайҙыр...— тип, уйланып, тирәк ботағында ярһып һайраған сыйырсыҡҡа текләй биреп торҙо ла Емеш ҡапыл ҡарашын әхирәтенә күсерҙе:

— Һин Чернышевскийҙең «Что делать?» тигән китабын уҡығаның бармы?

— Юҡ әле...

— Уҡы. Үлһәң үл, әммә мөхәббәт икәнен белмәй тороп үптермә, тиелгән унда,— тип үҙенсәләп, ҡаты итеп иҫкәртте. Унан тағы уйсан, баҫынҡы тауышҡа күсте.— Вера Павловна, Кирсанов, Лопухов, Рахметов... Бына, исмаһам, улар уйлай ҙа, эшләй ҙә, һөйә лә белгәндәр... Уйлағандар... Әлбиттә, тик үҙҙәре, үҙ тормоштары хаҡында ғына түгел... Мин уйлай белгән кешеләрҙе яратам... Аңлайһыңмы, Шәмсиә?! Уҡы, йәме!..

— Йә.

Ҡыҙҙар, һәр ҡайһыһы үҙ йөрәк тибешен тыңлағандай,

тағы бер аҙ тынып торҙолар. Шәмсиә, өҙөлөп, тарҡалып киткән баяғы һөйләшеүҙе дауам итергә теләп, әхирәтенә һынаулы төбәп ҡараны:

— Ә һин яратаһыңмы?

— Кемде?

— Әй, әйтерһең белмәй! Хөрмәтте лә инде!

— Юҡ... Ә... Эйе...

— Яратаһың?! — Шәмсиәнең эре һары һипкелле аҡ йөҙөнә алһыу нур балҡып сыҡты. — Һин ҡалай бәхетле, Емеш! Ул да һине ярата, һин дә уны! Хөрмәт һинең өсөн үлергә әҙер бит ул!

— Ҡайҙан беләһең?

— Күренеп тора! Күҙ ҡарашы... Беләм инде, беләм! Һине күреү менән ҡойолоп төшә бит ул да...

— Мин уны һәйбәт күңелле, яҡшы кеше итеп кенә яратам бит, Шәмсиә! Әйтәйек, бына һине йәки башҡа бик күп яҡшы кешеләрҙе ятатҡан шикелле... Аңланыңмы? Ә мөхәббәт ул, моғайын, бөтөнләй башҡалыр... Әйтәйек, бына...

Емеш мөхәббәт ҡалай булырға тейешлеге хаҡында әйтеп бирер һүҙ тапмай туҡталып ҡалды. Шәмсиәнең эсе бошоп, Хөрмәт өсөн ысын күңелдән әсенеп китте.

— Шундай егетте лә яратмағас! Кит, һин дә шул төптө Сабир һымаҡ'таш бәғер!

Емеш уйсан ғына йылмайып ҡуйҙы:

— Эйе, кешене аңлап бөтөүе сикһеҙ ауыр. Хатта үҙеңде лә ҡайһы саҡ аңлай алмай аптырайһың: нимә теләй, кемде көтә, нимәгә ынтыла был күңел? Нимәгә ирешергә ашҡына? Нимә етмәй, һыҡтай-һыҙлана, нимә эҙләнә?.. Белмәçһең... Йә, ярай, Шәмсиә. Мин ҡала китапханаһына барам. Һин бармайһындыр?

«Бына бит, ысынлап та, аңла һин уны!.. Әле генә шундай шат, шаян, асыҡ ине... Һөйҙәшеп була ине... Ә инде бына тотто ла ҡырыçтанды ла ҡуйҙы. Хатта югереп китеп тә барҙы... Әйҙә барайыҡ, тип тә әйтмәне, исмаһам! Шулай яңғыҙ йөрөүен әллә ни күрә, диуана...— тип күцеленән аптырай-һуҡрана тороп ҡалды Шәмсиә. — Бер уйҙаһаң, дөрөçтө әйтә ул — кешене аңдауы һәлак ҡыйын шул...»

* * *

Эңер еткәс, дуçтар ишек алдында тағы осраштылар. Был юлы Хөрмәт менән Сабирҙең йөҙөндә ниндәйҙер ғо-

рур ҡыуаныс балҡый. Улар янында торған Шәмсиәнең дә күңеле күтәренке.

— Барығыҙ ҙа көндәй яҡтырып тораһығыҙ, әллә аҡбуҙат вәғәҙә иттеме берәйһе?— тип мәрәкәләне Емеш.

— Байрам!— тине Сабир. — Ҡыуаныс! Хөрмәт, йә инде күрһәт, ни эшләп тораһың?

— Бына, ҡара!

Хөрмәт ҡыймай ғына ҡулындағы газетаһын Емешкә һондо. Был «Йәш юҡһыл» газетаһы ине. Емеш уның ғәҙәттә әҙәби әҫәрҙәр баҫыла торған һуңғы битенә күҙ ташланы һәм оҙон-оҙон бер нисә шиғырҙың аҫтына яҙылған «Емер Яшинский» тигән яҙыуҙы күргәс, газетаны кире һондо.

— Ҡит, шул таҡмаҡсыны ни тип баҫалар икән? Шуның шиғырын уҡыу түгел, исемен ишеткем дә килмәй хатта.

— Бынан киткәне бирле тауышы-тыны ишетелмәй ине, тағы баҫа баштағандар икән, мөхәббәтһеҙҙе!— тип Шәмсиә лә әхирәтенең фекеренә ҡушылды.

— Туҡтағыҙ әле, сутылдашмай тороғоҙ,— тип бүлдерҙе уларҙы Сабир.— Ниңә һеҙ Емерҙең фамилияһына ғына иғтибар итәһегеҙ? Ә бынауы Таңгилдин тигән шағирҙе күҙгә лә элмәйһегеҙ!— тип шаяра-көлә, газетаны Хөрмәттең ҡулынан алып, әлеге битте ҡайтанан асып күрһәтте.— Бына, яҡшылабыраҡ ҡарағыҙ! Ниндәй шиғырҙар бит! Бер уҡыуы — үҙе бер ғүмер! Бына ул беҙҙең Таңгилдин иптәш ҡайһылай!..

— Улай уҡ маҡтап ебәрмәсе, дуҫ!— тип, ҡолағына хәтле ҡыҙарынып китте Хөрмәт. Һәм үтә оялсан тауыш менән. — Үҙ фекереңде көсләп таҡма... Бәлки, ҡыҙҙарға ул шиғырҙар төптө лә оҡшамаҫ...— тип өҫтәне.

— Мөмкин түгел, оҡшамауы мөмкин түгел!— тип, һаман уйынлы-ысынлы ҡаршы төштө Сабир. Һәм Емеш яғына ҡырын күҙ ташлап алды ла.— Әгәр ошондай шиғырҙар ҙа оҡшамаһа, беҙ ул ҡыҙҙарҙы, Шәмсиә әйтмешләй, «таш бәғерҙәр» тип атарбыҙ, йәме, дуҫ? — тип дауам итте.— Шулай бит, ҡаршы түгелһең бит!— тип, ҡарашын һаман әле оялсан ҡыҙарынып торған Хөрмәткә күсерҙе.— Яраймы?!

— Ярай... Һөйләштек, шулай тип атарбыҙ,— тип шаяра-көлә Емеш газетаны Сабирҙең ҡулынан алды. — Хөрмәттең шиғыры ла булғас, газетаны ҡайтанан уҡыйбыҙ...

Ул ашыға-шатлана газетаны ҡабат ҡарай башланы. Ысынлап та, унда Хөрмәт Таңгилдиндең бер шәлкем лирик шиғырҙары ла баҫылғайны. Ҡыҙҙың ҡарашы уларҙа оҙаҡ туҡталды, оҙон керпектәре, саҡ-саҡ ҡына йөрелдәп, газетанан күтәрелә алмай торҙолар. Оло йөрәкле ҡыйыу егеттең әйтелмәгән тәүге мөхәббәте, тау йылғаһындай саф, ярһыу тойғолары хаҡында ташты ла иретерлек итеп яҙылғайны был шиғырҙар. Емеш, үҙ йөрәгенең оло ҡыуаныстан өҙөлөп-өҙөлөп һулҡылдауына ҡолаҡ һала-һала, ашыҡмай ғына уҡып сыҡты...

— Шәмсиә, һин уҡыныңмы?— тип, бәхетле йылмайып, әхирәтенә ҡараны.— Йөрәктә тәсбих урынына ҡапланып торорҙай шиғырҙар. Мә, ятлап ал! Ҡабатлаған һайын йөрәгеңә ял булыр,— тип мәрәкәләне.

— Миңә уны Хөрмәт газетаға ебәрмәҫ элек үк күрһәткәйне инде,— тине Шәмсиә эре генә.— Шунда уҡ ятлап алғайным.

Ҡолағына хәтле ҡыҙарынып, ғәйепле кеше шикелле, уңайһыҙланып торған Хөрмәт уға тамам аптырап ҡараны: «Ҡайһылай шаян була һуң был ҡыҙҙар!.. Күҙ ҙә йоммай, төптө бушты һөйләп ебәрә бит, ә? Ниңә икән?!»

Ләкин ҡыҙҙың һүҙен кире ҡағып маташманы. Һүҙҙе икенсегә бороп ебәрергә генә ашыҡты:

— Беләһеңме, Емеш, бөгөн операға барабыҙ!

— Операға?!

— Әҙер тороғоҙ!— тип бойорҙо Сабир ҙә, еңел генә икенсе темаға күсеп. Күрәһең, был юлы улар ҡыҙҙарының теләү-теләмәүенә иғтибар итмәҫкә булдылар.— Киске аштан һуң ошо ерҙә көтөрбөҙ.

— Ярар,— тип икеһе өсөн дә яуап бирҙе Шәмсиә. Унан:

— Әйҙә, Емеш, ятаҡҡа ҡайтайыҡ. Әҙерләнәйек,— тип әхирәтен ҡултыҡлап алды.— Гел-гел генә ҡарышып тормаҫһың бит инде!

— Мин шулай ҡарышмал бит ул!—тип көлдө Емеш.— Ни өсөн? Үҙем дә белмәйем. Ә бына шулай ҙа операға бармай булмай. Тик шуныһы ғәжәп — билет алырға уларҙың аҡсаһы ҡайҙан булһын? Ҡонтрамарка таптылармы икән ни?..

— Уныһы беҙҙең эш түгел. Алып барғас — барабыҙ,— тине Шәмсиә, ҡырт киҫеп.— Мәскәү артистәре килгән. «Евгений Онегин» операһын ошонда, үҙебеҙҙең Тополь баҡсаһында йәйге сәхнәлә күрһәтәсәктәр, ти. Әгәр беҙ

шуны нисек кенә булһа ла күреп ҡалмаһаҡ, төптө диуана булырбыҙ!

— Һай, ҡалай уҫалланып киткән булды бынауы,— тип Емеш әхирәтенә үпкәле ҡараш ташланы. — Малайҙар ни һөйләһә, шуны хуплап тик торасы! — тине. Ә үҙе был яҙғы оҙон көндө кисләтә алмай йөҙәне.

* * *

Операны Емеш донъяла тиңе булмаған тылсымлы бер төшкә оҡшатты. Йөҙйәшәр һылыу тополдәр араһына ҡоролған йәйге сәхнәлә быға саҡлы китаптарҙан уҡып ҡына белгән шиғри тормош йәшәй. Ҡыллы оркестр йөрәкте өҙгөс аһәң менән баҫсаны, бөтә әйләнә-тирәне көмөш сыңдар менән тултыра. Әле генә япраҡ ярған һылыу тирәктәр араһынан ярты ай, ярһыуҙан йөҙө ҡыҙғылтланып, тынып ҡарап тора. Тотош аҡ ебәктән, селтәрҙән кейенгән фәрештә шикелле гүзәл, саф Татьяна йән һөйгәне Онегиндең үҙе менән йәки уға булған тиңһеҙ ғишҡы менән ошо серле тирәктәр араһында осраша: «Эй-й, нисек һөйә ул Онегинде! Ниндәй илаһи мөхәббәт уты яна унын йәш йөрәгендә... Нисек ғорур һәм саф унын тойғолары... Эйе, эйе, фәрештәләргә, пәйғәмбәрҙәргә генә хас илаһи мөхәббәт... Эй-й, ундай һөйөүҙе аңларҙай әҙәм заты бармы был ерҙә?!

Ҡандай бәхетле лә, бәхетһеҙ ҙә унын мөхәббәте!

Туҡта, бәхетһеҙме?! Әгәр Татьяна Онегин менән ҡауышһа, ошо илаһи мөхәббәте, бынауы ҡарт ире менән булған кеүек йәки бөтә башҡа кешеләргә хас рәүештә, төн һәм түшәккә барып етһә, ул бәхетлерәк булыр инеме ни? Мөхәббәт, илаһи мөхәббәт шул төн менән бергә Татьянанын ярһыу йөрәген ташлап төпһөҙ ҡараңғылыҡҡа инеп юғалмаҫ инеме? Бушап, мәңге утһыҙ булып ҡалмаҫ инеме унын йөрәге? Эйе, эйе, мөхәббәте үлер ине унын... Ә былай ул Татьянанын йөрәгендә мәңге йәшәйәсәк. Фәрештәгә хас саф, изге тойғоһо һәр саҡ унын менән бергә буласаҡ... Бәлки, бәхет тә шундалыр?! Шундай мөхәббәт кенә кешене мөғжизәләр тыуҙырырға һәләтле итәлер, бәлки?»

— Емеш,— тип бышылдай Шәмсиә,— бөттө бит!

Емеш, һаман аңына килә алмағандай, баҫҡан ерендә ҡатып тора бирҙе. Эйе, бөйөк Пушкиндең Татьянаһына

ул былай ҙа үлеп ғашиҡ ине бит. Әле инде сәхнәләге «тере» Татьяна уны бөтөнләй ҙә табындырып ҡуйҙы. Төҫө-башы, буйы-һыны, кейем-һалымы, йәне-йөрәге — бөтәһе лә һоҡланғыс, гүзәл һәм ғәжәп ине уның өсөн. Бигерәк тә уйсан, моңһоу, баҫалҡы ғәҙәте, кешеләргә, үҙен әйләндереп алған тәбиғәт, тормош күренештәренә булған саф, керһеҙ мөнәсәбәте, тәүге һәм ғүмерлеккә ҡабынған ярһыу мөхәббәте хаҡында Онегин кеүек был яҡтан «уҫ̌ты-һыуҙы» үтергә, кешеләр араһында ысын, саф тойғоларҙың оҙаҡ йәшәүенә ышанысын юғалтырға өлгөргән ҡаты бәғерле, тәкәббер егетте лә уйланырға, үҙенә тәрән ихтирам менән ҡарарға мәжбүр итерлек хат яҙып, үҙ тойғоһон бөтә етдилеге, ғалилеге менән тура-нан-тура әйтергә баҙнат иткән ғорур ҡыйыулығы Татьянаны Емештең күҙ алдында уй етмәҫ юғарылыҡҡа күтәрҙе. Ә инде уның һуңлап уянған мөхәббәте менән үҙенең аяҡ аҫтына килеп ауған Онегингә әйткән аҙаҡҡы һүҙҙәре кеше йөрәгенең ни хәтле түҙем, бөйөк була алыуын раҫлап, Емештең күңелен яҙғы ҡояш кеүек йылы, яҡты нур менән тултырҙы.

— Емеш, уәт биғәләш! — тип әхирәтенең инде беләгенән тотоп тартты Шәмсиә.— Был тиктем дә алйот булырһың икән. Ҡайтыуҙы белмәй, ҡатып тик торасы...

Емеш Шәмсиәне яратып, ҡосаҡлап уҡ алды. Бер ситтәрәк көтөп торған Сабир менән Хөрмәткә лә бәхетле йылмайып ҡараны.

— Эй, бөттө лә шул... Тағы-тағы ҡарар инем... Күреп тә, тыңлап та туймаҫ инем... Эй-й, егеттәр, был кисә өсөн һеҙгә мең-мең рәхмәт яуһын!..

— Ҡайттыҡ!— тип, күтәренке тауыш менән бойороҡ бирҙе Сабир.— Ятаҡҡа ҡайттыҡ! Һәм ҡыҙҙарҙың икеһен бер юлы ҡултыҡлап алды. Ә Хөрмәт үҙенең ғәҙәттәгесә тын, моңһоу йылмайған, яҡшы күңелле ҡарашын берсә дуҫтарына, берсә зифа, бейек тирәктәргә күсереп, һүҙһеҙ генә йәнәш атлап китте.

## XII

Байрас, ҡыҙҙар ятағының ишек төбөнә еткәс, саҡ ҡына туҡталып, тыңлап торҙо. Эстән әкрен генә һыҙылып скрипка тауышы килә ине: «Ҡем уйнай шул хәтле моңло, йөрәк өҙгөс итеп». Ул ҡыйыуһыҙ ғына ишек ҡаҡ-

ты. Яуап булманы. Байрас тағы бер аҙ тыңлап торҙо. Унан тағы ҡаҡты ла, бүтәнсә яуап та көтмәй, барып та инде.

— Мөмкинме?

Ятаҡта яңғыҙы ғына тороп ҡалыуға әҙерәк моңланып-уйланып алырға мөмкинлек тыуыуға ҡыуанып, күрәһең, скрипкаһына тотонған Дәүериә ҡағыуҙы ишетмәне йәки ишетергә теләмәне.

Инеүсегә әйләнеп тә ҡарамай:

— Ҡергәс, мөмкиндер шул,— тип ризаһыҙ тауыш менән генә яуап бирҙе.

— Миңә Гөлйемеш Ирьегетова тигән ҡыҙ кәрәк ине,— тине Байрас баҫалҡы ғына.— Уны ҡайҙа күреп булыр икән?

— Гөлйемештеме?!— Дәүериә ҡапыл тауыш килгән яҡҡа боролдо. — Һеҙгә Гөлйемеш кәрәкме?!

Ишек төбөндә оҙон буйлы бер йәш егет ҡарсыға шикелле яҡты ҡарашлы, теремек, ҙур ҡара күҙҙәрендә мут, шаян йылмайыу уйнатып, өҙә баҫып тора. Уның аяғында көҙгө кеүек йылтыратып кейгән хром итек, өҫтөндә һылыу кәүҙәһенә үлсәп тегелгән йәшел гимнастерка, күк галифе салбар. Яҫы ҡайыш менән ҡыҫып быуғанғамы, биле үтә нәҙек, күкрәге киң. Баҡырҙан ҡойоп эшләнгән һын кеүек ҡырҡыу ҡеүәтле йөҙөндә ҡыйыулыҡ сағыла. Егеттең әле егерме йәштәрҙән ары булмауына ҡарамаҫтан, үтә етди, олпат булып күренергә тырышыуы ла Дәүериәнең иғтибарынан ситтә ҡалманы...

— Уҙығыҙ, ул хәҙер ҡайтыр,— тип Емештең карауатына күрһәтте.— Шунда ултырып көтөгөҙ.

— Рәхмәт.

Байрас, иҙән уртаһындағы ҙур өҫтәл артынан бер ултырғыс алып, карауат янына барып ултырҙы.

Дәүериә былай артыҡ һүҙсән, ҡыҙыҡһыныусан ҡылыҡлы булмаһа ла, был егеткә иғтибар бирҙе. Уның менән һөйләшкеһе, кемлеген белгеһе килде. Сөнки өс йыл буйы бер ятаҡта йәшәүгә ҡарамаҫтан, Емешкә кем дә булһа килеүен хәтерләмәй ине ул. Ул Емештең китаптарын берәм-берәм алып ҡарарға керешкән Байрастың янына уҡ барып ҡарай биреп торҙо ла:

— Һеҙ уның кеме булаһығыҙ?— тип һораны.— Ағаһымы әллә?

— Эйе. Ағаһы,— тине Байрас, йылмая биреп.— Бер туған...

— Шулай уҡмы ни?!— тип ҡыуанып китте Дәүернә.— Улай булғас, мин эҙләп ҡайтарайым әле уны. Ҡитапханаға инһә, сығыуҙы онота торған. Хәҙер алып ҡайтырмын!— Ул йәһәтләп сығып китте.

Байрас тағы китаптарға эйелде: Толстой, Бальзак, Диккенс, Горький... Эйе, уҡый икән ҡыҙыҡай... Ә мин?..

Ул үҙенең аҙ уҡыуын, дәрестән, хәрби занятиеләрҙән ҡалған сәғәттәрҙе бейеп-йырлап, ҡурай уйнарға өйрәнеп уҙғарырға яратыуын хәтерләп: «Был ҡыҙ менән элек һөйләшеүе еңел түгел ине, хәҙер бөтөнләй ҙә һүҙ табып булмай торолор әле...»— тип көлөмһөрәп ҡуйҙы. Тағы китаптарға эйелде.

Береһен һалды, икенсеһен алды. Биттәрен асып уҡып ҡараны. Башына бер ни ҙә инмәне. Күңеленә ниндәйҙер шик, шөбһә лә килә башланы. «Бәлки, ул берәй егет менән сығып киткәндер? Бәлки, ул бөтөнләй икенсе егетте яраталыр?..»

Емештең карауат өҫтөндә лә, тәҙрә төбөндә лә, тумбочкала ла тулы китаптар ҙа дәфтәрҙәр генә... Ҡешенең, хатта һөйгән ҡыҙындың булһа ла, яҙмаларын рөхсәтһеҙ алып ҡарауҙың килешкән ғәҙәт түгеллеген Байрас, әлбиттә, яҡшы белә. Ләкин күңеленә килгән урынһыҙ шик уны был тәртипте онооторға мәжбүр итте: «Туҡта, ҡарайым әле, берәй егеттең хаты килеп сыҡмаҫмы?» — тип ул Емештең ҡалын бер дәфтәрен һонолоп алды. Уның әҙәбиәт, сәнғәт, философия, әхлаҡ, тәрбиә темаларына ҡағылған күсермәләрен ҡыҙыҡһынып ҡарай башланы: «Вот һин уны. Ленин әҫәрҙәренән диалектик материализмдең нигеҙҙәрен күсереп сыҡҡан. Философик системаларҙың схемаһын төҙөгән...» — тип күңелле йылмайып ҡуйҙы. Унан:

«Тарихи материализм — пролетариаттың социологияһы ул. Был тәғлимәт ярҙамында кешелек йәмғиәтендәге бөтә булған күренештәрҙе дөрөҫ аңлап һәм аңлатып була...» тип уҡый бирҙе лә, туҡта әле, был ҡыҙ бик тәрәнгә инеп китте. Тиҙ генә осона сығып булмаҫ, тип, биттәрҙең икешәрен-өсәрен бер юлы асып үтә башланы.

Дәфтәрҙе артабан ҡараған, уҡыған һайын Емеш нисектер үҙенән алыҫлаша, икенсерәк, алдынғыраҡ була бара һымаҡ ине. Әле үҙенең бик баҙнатлыланып, уны алып ҡайтырға, өйләнергә тип ҡырҡа уйлап ҡуйған ниәте ҡаҡшағандай ҙа булып китте.

«Эйе, Емеш үҫә, үҙгәрә...»— тип баш сайҡап, ныҡ ҡына уйланып ултырҙы. Үҙенең хәрби занятиеләрҙән буш ваҡытын күберәк уйын-көлкө менән уҙғарырға яратыуын тағы хәтерләп алды. Ул арала Дәүериә ҡайтып инде.

— Юҡ бит әле, үҙебеҙҙең техникум бинаһында юҡ,— тип хәбәр итте ул, ғәфү үтенгән тауыш менән.— Ҡала китапханаһына киткәндер. Шунда барып китапханасыға ярҙамлаша торған ул. Төшкө аш ваҡытына барыбер ҡайтып етер, көтөгөҙ,— тип йыуатып, тағы сығып китте.

Байрас бошоноп ҡына дәфтәрҙе тағы ҡулына алды. «Төрлө кешеләрҙең һүҙҙәре» тигән баш аҫтындағы яҙыуҙарға күҙ ташланы:

«Таланттың ҡеүәнән фиғелгә сығыуы, емеш биреүе һис шикһеҙ тормош шарттарына бәйләнгән».

«Бер үк орлоҡ төрлө ерҙә төрлөсә емеш бирергә мөмкин».

«Һөйөү изге нәмә. Саф мөхәббәт кешене ҡанатландыра, шатландыра, яҡшырта. Мөхәббәт ҡайғыһы — ләззәтле ҡайғы. Ләкин саф мөхәббәт юҡ тип әйтерлек, һирәк осрай».

«Мөхәббәт һәр ауырлыҡты еңә, бөтә ваҡлыҡтан юғары тора».

«Ниндәй генә бөйөк кешене алып ҡарама, уның янында уны шул бөйөклөккә күтәрелергә рухландырған бер һөйөклөһө була».

«Һәр бөйөклөк мөхәббәт тәьҫирендә тыуа».

Байрас, тағы көлөмһөрәп, баш сайҡап алды: «Ҡасан был ҡыҙҙың үҙ уйҙарын белергә һуң?!»

Ул бер нисә битте тағы уҡымай асты. Унан Емештең үҙ уйҙарын, үҙ моңдарын ғына яҙып барған урындарға барып еткәс, ниңәлер ҡапыл сабырһыҙ ҡабынып киткән йөрәк тибешенә ҡолаҡ һала-һала, онотолоп уҡырға кереште.

«Минуттар, минуттар, минуттар... Аға ла аға, үтә лә үтә... Һыу кеүек аға, ел кеүек елә... уҡ кеүек оса... ҡайҙа ашыға, ниңә ҡағына, талпына, уҙа ла уҙа?! Белһәң ине, ниңә аҙ ғына, саҡ ҡына, күҙ асып йомғансы ғына булһа ла туҡтап, көтөп тормай был минуттар? Миңә, бала сағын бөтөнләй икенсе донъяла йәшәп үткәргән кешегә, бөгөнгө көндөң, бөгөнгө дауыллы минуттарҙың артынан ҡалмай эйәреп барыр өсөн күпме көс, тырышлыҡ, һәләтлелек кәрәген белмәйме икән ни улар?!

Туктағыҙ, көтөгөҙ, ул хәтле ашыкмағыҙсы, күҙ алымдан юғалмай тороғоҙсо, минең кәҙерле минуттарым! Мин һеҙҙе күреп, һөйөп, аңлап өлгөрәйем! Һеҙҙең арттан бер иле лә калышмай мәңгелеккә табан юлға сығырлык көүәт, ғәйрәт, һәләт туплап алайым...

Көтөгөҙ, аҙ ғына, күҙ асып йомғансы ғына булһа ла туктальш, артка боролоп карағыҙ. Мине, һеҙҙең кәҙерегеҙҙе үтә нык белгән, һеҙҙе бер касан да елгә елгәрмәгән кескәй кыҙҙы, бер генә әйләнеп күрегеҙ! Белегеҙ, ул да бит һеҙҙең менән бергә мәңгелеккә осмаксы!..

Аһ, минуттар, минуттар! Минең кәҙерле минуттарым, тынғыһыҙ минуттарым! Ниңә шулай етеҙ, ниңә ярһыу, гәйәр һеҙ, минең йәшлек минуттарым, канатлы ак арғымактарым!..»

* * *

«Һин кем булырға теләр инең?»

Минең әхирәтем, серҙәшем Шәмсиә һуңғы вакытта йыш кына ошо һорауҙы бирә. Күрәһең, бөтә нәмәгә еңел, уйынсак, хатта ғәмһеҙ генә карай торған бала сак унан да уҙҙы. Ул да тормош хакында, киләсәк хакында уйлана башланы. Әммә был һорауға, укытыусы, инженер йәки врач булырға теләйем, тигән һымак еңел генә яуап бирә алмайым мин.

Укытыусы булып кешенең күңел күҙен асыуға, врач булып кеше йөрәгенә яңы нур, беләгенә яңы көс өҫтәүгә йәки инженер, архитектор, хатта ташсы булып яңы калалар, дворецтәр, завод-фабрикалар төҙөү эштәрендә катнашыуға ни етә? Ә һуң тукыусы кыҙ булып кояшлы сәскәләр төшкән тылсымлы тукымалар менән кешене һөйөндөрөү насармы ни? Икһеҙ-сикһеҙ далаларҙы каплаған кояш башлы көнбағыштарҙы сәсеп үҫтереүсе булһаң йәки, өйөр-өйөр йылкы көтөп, кышын-йәйен кырҙа, тәбиғәт куйынында йәшәһәң? Эйәрле ат өҫтөндә йырлаймөңгөрәй йылкы өйөрө артынан тауҙар, далалар гиҙһәң! Эй-й!..

Ләкин, минеңсә, эш һис тә кем булыуҙа түгел, ә ниндәй булыуҙа. Һин ниндәй кеше? Эйе, бөтә хикмәт, минеңсә, кешенең эске донъяһында: якшы кешеме һин әллә яманмы? Тоғромо, уғрымы? Ғәҙелме, батырмы әллә куркак, һатлык йәнме? Бер һүҙлеме әллә ике йөҙлөмө?..

Теге йәки был эшкә ниндәй теләк менән тотонаһың? Халыҡҡа хеҙмәт тигән изге теләк менәнме әллә ҡара ҡорһағыңды һыйлы йәшәтеү ниәте менән генәме?

Ауыр минуттарҙа һин иҙелгәнде, кәмһетелгәнде ғәҙел, тоғро, батыр яҡларға һәләтлеме, әллә ундай саҡта боҫоп ятып ҡалыусымы?

Бына шулай, Шәмсиә әхирәт. Ҡем булһаң да бул (хәҙер һинең алдыңда бөтә тарафҡа яҡты юл!), тик ысын кеше бул! Башҡаса булһаң, мин һине әхирәт итмәм!..»

* * *

«Мин үҙемде илгә, халыҡҡа хеҙмәт юлында ниндәйҙер оло эшкә һәләтле кеше итеп тоям. Ҡасан, ҡайҙа, ниндәй эштә үҙен төҫмөрләтер был һәләт? Әлегә билдәһеҙ. Ләкин шуныһы асыҡ — ҡаяны ярып ҡояшҡа ҡаршы атылып сыҡҡан тау йылғаһы диңгеҙгә етмәйенсә туҡталмай. Миллион-миллион йылдар буйы төрлө томанлыҡтарҙан уҡмаша-уҡмаша йондоҙға әйләнгән нур йомғағы ғаләмдә үҙ урынын биләмәй булмай.

Минең күкрәгемдә әлегә уянып етмәгән, әммә бер уянһа, бөтә ер шарына ишетелерлек күкрәү менән күкрәр янартау ята һымаҡ... Эйе, бығаса баҫтырыҡлап ҡуйылған янартау, мең-мең йылдар буйы гранит баҫрау менән баҫтырыҡлап, тонсоҡтороп тотолған, әммә бер ҡасан да һүнмәгән, һүрелмәгән, һәр саҡ ирекҡә, иркенгә юл ярырға тырышып ятҡан ҡеүәтле янартау! Хәҙер уның баҫрауы юҡ. Революция дауылы алып ырғытҡан ул ҡәһәрле баҫрауҙы. Инде, әйҙә, ян, йөрәгем, ян! Урғыл, көсөм, урғыл! Ҡояшҡа, яҡтыға табан үрмә гөлдәй үрелеп үҫ! Изге теләгеңә ирешеү алдында арыу-талыу, икеләнеү, сигенеү белмә! Дауыллы осош юлыңа һаман арҡыры ятырға маташҡан бөтә кәртәләрҙе ватып, емереп, ҡыйратып үт! Шунда ғына Ҡеше тигән мәғрур исемде йөрөтөргә хаҡлы булырһың һин, Емеш!»

* * *

«Шәмсиә мине «таш бәғер» тип атай. «Ништәп һин шундай егетте лә яратмайһың? Ниңә һин бер кемде лә һөймәйһең?!» — тип аптырай. «Таш бәғер! — Һине бит Хөрмәт, бахыр, ҡалай үлеп ярата! Ә һин?!»— тип асыулана.

Әй-й, әгәр ул минең нисек һөйгәнемде, берәү өсөн нисек янып-көйгәнемде белһә ине!.. Юҡ шул, минниңәлер башҡа ҡыҙҙар шикелле бышылдашып, ҡолаҡтан-ҡолаҡҡа сер һөйләшеүҙе яратмайым. Серҙәрем минең һәр саҡ ҡаты йоҙаҡ аҫтында...

Байрас... Бына бит кем үҙенә табындырған минең йөрәкте... Бик күптән, бик күптән... туғыҙ-ун йәшлек ялан аяҡлы, моңһоу күҙле, кескәй генә ҡыҙыҡай саҡтан... Ә ул быны белмәй ҙә... Белмәҫ тә... Белмәһен дә... Мин уға булған был тойғомдоң тик үҙ серем генә булып йөрәгемдә мәңге дөрләп янып йәшәүен теләйем...

Ниңә улай? Үҙем дә белмәйем. Йөрәгем минең бына нисә йыл инде: «Байрас, Байрас, Байрас!» — тип, зарығып, һыҙланып, ашҡынып тибә. Ә мин ҡурҡам... ҡасам... Ниңә? Үҙем дә белмәйем.

Ниңәлер мине мөхәббәттең һуңы ҡурҡыта. Ҡурҡыта бына ла түгел, хатта... хатта екһендерә, биҙҙерә...

Ҡыҙ бала, бахыр, һөйә, шуның арҡаһында еңелә, үҙ телә гененән тыш, елкәһенә ғаилә йөгө ала. Унан һуң инде, һау бул, йәшлек! Һау бул, уҡыу, үҫеү! Һау бул, бөйөк идеалдар! Һин инде бисә, әсә! Һинең бар тормошоң хәҙер һауыт-һаба, мал-тыуар... Юҡ, юҡ, кәрәкмәй! Мин уҡырға, уҡырға, күп, бик күп белергә, бөйөк маҡсаттар менән янып йәшәргә теләйем! Һәр минут, һәр сәғәт мин яҡтыға, яҡшыға табан үрләргә, быуаттар буйына күҙҙәре томаланып килгән халҡымдың күҙен асыуҙа ҡатнашырға, уның өсөн донъяны матурларлыҡ, алланың үҙе булған кешегә — тәбиғәттең иң ғәжәп хазинаһы булған кешегә, үҙенә хас бәхетле тормош төҙөп йәшәү бәхетенең ни хәтле бөйөклөгөн тәрән төшөндөрөрлөк көс менән йөрәгемдә нурларға теләйем мин.

Байрас, һөймә, ҡалдыр һин мине! Утлы мөхәббәтең менән быума минең барыр юлымды. Үтенәм! Өҙөлөп-өҙөлөп үтенәм, ишетәһеңме, Байрас?! Аңлайһыңмы, бына ни өсөн хаттарыңа яуап яҙмайым, бына ни өсөн һинең менән ауылға бүтән ҡайта алмайым. Эйе, һағынһам да, һарғайһам да, теләһәм дә ҡайта алмайым. Аңлайһыңмы, һинең ҡосағыңда юғалыуҙан ҡурҡам мин, Байрас!

Эйе, эйе, мәңге ирекле булырға, ҡаялағы бөркөт кеүек дауылдар менән көрәшеп йәшәргә теләйем мин! Ҡалдыр һин мине, Байрас! Мин үлеп, өҙөлөп яратҡан берҙән-бер егет — Байрас!..»

Байрас был юлдарҙы уҡығандан һуң дәфтәрҙе ябып оҙаҡ уйланып ултырҙы. Унан ашығып, ярһып шул уҡ дәфтәргә яҙырға кереште:

«Юҡ, булмай, һылыу, ҡалдыра алмайым! Етте, етте! Бүтәнсә ҡалдырып китә алмайым мин һине! Ишетәһеңме, бигерәк тә хәҙер, һөйөүеңде белгәс, күңелемдә шик бөткәс!

Мөхәббәт кешене шатландыра, ҡанатландыра, батырлыҡҡа, яҡшылыҡҡа етәкләй, тип яҙғанһың дабаһа үҙең! Дөрөҫ, дөп-дөрөҫ! Бына мин хәҙер тауҙар күтәрерлек, меҢ-меҢ кәртәләрҙе емереп үтерлек, һинең өсөн донъяла ниндәй бәхет, шатлыҡ бар, бөтәһен яулап алдыңа килтереп һалырлыҡ бәһлеүән көсө тоям үҙемдә!

Ышанам, мөхәббәтебеҙ беҙҙе һин теләгән ҡояшҡа, яҡтыға етәкләр, бынан ары беҙ бәхет юлын икәүләп яуларбыҙ. Уҡырбыҙ, үҫербеҙ, бөтә яҡты теләккә, изге маҡсатҡа ирешербеҙ! Ирекле илдең ирекле балалары бит беҙ, Емеш! Беҙ бәхетле булырға тейешбеҙ. Ә бит мөхәббәттән башҡа тулы бәхет бармы ни?!

Йә, әйт, һылыуым, һин ризамы ғүмер юлын бергә үтергә минең менән?! Риза, тиген! Киреһен әйтһәң, йөрәгем ярылыр, күтәрә алмаҫ. Аңла, саф мөхәббәтте, изге һөйөүҙе кире ҡаҡма! Үкенерһең — һуң булыр!..

Бына һин донъяла бар нәмәнән юғары ҡуйып һөйөүсе Байрасыңдың һуңғы һүҙе ошо булыр!»

Байрас дәфтәрҙе ябып урынына һалды ла йөрәгенә түҙмәй тороп китте. Тағы ултырҙы.

«Емеш мине һөйә!» — тип ҡысҡырып ебәргеһе, һөйгән ҡыҙының күҙҙәренә ҡарап, был һүҙҙәрҙең дөрөҫлөгөнә тағы ла яҡшыраҡ, йәһәтерәк ышанғыһы, һөйөлөү бәхетен туйғансы татығыһы килде уның. «Тик бына хәҙер уны ҡайҙан ғына табырға һуң? — тип һыҡтап сабырһыҙланып типте уның йөрәге. — Нисек?!»

Шул саҡ ятаҡ ишеге еңел генә шығырҙап асылып китте. «Емештер!..» тип уның күңеле тағы тауышһыҙ ғына ҡысҡырып ебәрҙе. «Емеш ҡайтты!..» Ул, ҡоштай осоп, талпынып һикереп торҙо. Күңеле тағы бәхет күгенән ергә ҡолап төштө: «Түгел дәһә!?» Эйе, унда төптә ят бер ҡыҙ килеп ингәйне. Был Шәмсиә ине. Әхирәтенең карауаты янында күрмәгән-белмәгән егет торғанға аптырап, әммә, ғәҙәтенсә, һис тартынмай, уның янына барып текләп ҡараны.

— Һин кем? Бында ни эштәп ултыраһың?

Капыл үҙен солғап алған ярһыу тойғоларҙан әҙерәк айнып ҡалған Байрас, ҡапыл-ғара яуап таба алмағандай, ҡыҙға өнһөҙ ҡарап торҙо. Ҡыҙ ҙа, баяғыса һис тә тартынмай, уны баштан-аяҡ тикшереп ҡарай, нимәгәлер төшөнөргә, белергә иткәндәй, ғәжәпһенеп тора кеүек ине. Ул бәләкәс йоморо ғына кәүҙәле, түңәрәк, эре һипкеле баҫҡан, ҡырлы танаулы, аҡһыл һары ҡашлы... Ҡыҫҡа кара юбка, ҡулдан бәйләнгән аҡ йөн кофта кейгән. Өҫ-башы ла үҙенә килешеп кенә тора. Балаларса шаян, асыҡ ҡарашы уның күңеленең дә яҡшылығы, алсаҡлығы хаҡында һөйләп тора...

Тап ошо ябай, асыҡ мөнәсәбәте күрәһең Байрасты ла бик тиҙ үҙ хәленә ҡайтарҙы. Һәм ул Шәмсиәнең үҙе шикелле алсаҡ, шаян итеп:

— Емеш тигән бер ҡыҙҙы көтөп тора инем,— тип яуап бирҙе.

— Ништәп уны көтәһең? Һин уның кеме?

— Минме?.. Ағаһы булам.

— Төптө оҡшамағанһың. Емеш ҡараҡай. Юҡ, ағаһы түгелһеңдер.

Яҡшы күңелле, көләгәс ғәҙәте төҫөнә сыҡҡанғамы, үтә ҡыҙыҡһыныусан тойолғанғамы, Байрас та һаман шаярып һөйләште.

— Улай ышанмагас, сер итеп кенә әйтәйем инде, мин Емештең буласаҡ кейәүе!

— Ысынмы?! — тип инде хатта ҡыуаныстан ҡулдарын сәпәкәйләп ебәрҙе Шәмсиә. — Үәт, әй-й! — тип егетте баштан-аяҡ тағы бер ентекләп ҡарап сыҡты. — Бына ни өсөн ул бында бер егеткә лә ҡарамай икән-н! Ә мин уны «таш бәғер» тигән булам тағы!

Байрастың күңеленә көнсөлөк югерҙе.

— Ә егеттәр һуң, яратыусылар, тим, бармы ни бында ла?

— Эй, һөйҙәп тораһың тагы! — тине лә Шәмсиә кире югерҙе. — Туҡта, мин табайым, һөйөнсөләйем әле! Ул бер ни белмәй ашханала ултыралыр, моғайын!

Байрас, тамам түҙемен юғалтып, иҙән уртаһына сығып ары-бире йөрөп китте:

«Ҡайҙа һуң был ҡыҙыҡай?!»

Ҡапыл дөбөр-шатыр югереп, ике бите ал янған Емеш килеп инде.

— Уй, Байрас... килгән!.. — тип тыны бөтөп, ишек төбөндә туҡтап ҡалды: — Байра-а-с...

— Ҡилдем, Емеш. Көтмәгәйнеңме ни? Ҡилмәҫ тигәйнеңме ни?

Ҡыҙ керпектәрен аяҡ остарына төшөрҙө, бүтән бер һүҙ ҙә әйтә алманы. Байрас та, баҫҡан ерендә ҡатып, һоҡланыулы ла, ярһыулы ла ҡарашын унан ала алмай, сихырланған кеүек теклəп торҙо. Ҡыҙ танырлыҡ түгел ине. Үҫкән, бешеп еткән... Ҡойоп ҡуйған кеүек зифа нәҙекәй һынға, яңы ғына өлгөрөп килгән кескәй йоморо күкрәктәргә үтә лә килешеп торған ябай ғына аҡ батист кофта менән ҡара ебәк сарафанмы, әллә йәйге болот шикелле тулҡынып, иңбаштарына төшөп ятҡан ҡалын ҡара сәстәрме, әллә бөтә торошона серле бер нур өҫтәгән илһамлы йөҙмө — уны бөгөн айырыуса һылыу итеп күрһәтә ине Байрасҡа. Әллә барлыҡ эске, тышҡы донъяһы менән тәүтапҡыр йәшлектең иң камил, ҡабатланмаҫ һыны булып, матурлыҡ, сафлыҡ, ғорурлыҡ, тағы әллә ни хәтле үҙенә генә хас гүзәл сифаттар аллаһы булып ҡапыл ҡаршыһына килеп баҫҡанғамы, Байрас әйтер һүҙ таба алмай юғалып ҡалдымы?

Бына Емеш торған ерендә аҙ ғына сайҡалып ҡуйҙы, йөҙөнә тағы ла ҡуйыраҡ булып ҡарағусҡыл ҡыҙыллыҡ йүгерҙе, керпектәре сабырһыҙ дерелдәп китте, матур, кескәй ҡулдар үҙҙәренә урын таба алмай ыҙаланды... Күренеп тора, ҡыҙ көсөргәнеп ниҙер уйлай, ниҙер хәл итә ине...

«Ҡире әйләнеп сығып ҡасмаһын тағы!.. Ҡасыр ҙа!.. Булыр унан!..»

Был хәүефле уй Байрасты ҡапыл аңына килтерҙе. Ул ашығып ҡыҙға табан атланы:

— Емеш, һылыуым!

Ул ҡыҙҙың иңбаштарынан ҡыҫып тотоп, күҙҙәренә төбәп ҡарарға тырышты:

— Емеш, тим, ишетәһеңме?

Бала кеүек иркәләп, ҡыҙҙың сәстәренән, ҡыҙыу яңаҡтарынан һыйпаны, эйәгенән тотоп, тағы күҙҙәренә төбәлеп ҡарарға, йөрәк тибешен аңларға теләне:

— Һылыуым, тим!

Оялыуҙан да, ярһыуҙан да, көтмәгәндә тауҙай булып өҫтөнә ауған оло бәхеттән дә аҙаған Емеш күҙҙәрен егеттең көслө күкрәгенә йәшерҙе.

— Байрас-с...

— Емешем, Гөлйемешем минең!..

Тау йылғаһы шикелле саф, дәртле ике йәш йөрәк ҡушылып, телһеҙ ҡалды...

Башҡаса нисек булһын?! Мөхәббәт алдында теҙ сүкмәгән, уның сихри ҡөҙрәтенә табынмаған кеше бармы ни донъяла?!

* * *

Был көндө Хөрмәт иртәнсәктән алып Емеште осрата алмай аптырап йөрөнө: ҡайҙа булды был ҡыҙ? Китапхана, уҡыу бүлмәһе, баҡсала ул китап уҡып ултырырға яратҡан эскәмйә... — бөтәһе лә бөгөн моңһоу, буш. Бөтәһе лә Емеште юҡһынып бойоғоп ҡалған һымаҡ. Хөрмәттең үҙенә лә унһыҙ был донъяның йәме лә, яҙы ла юҡ! Шуға ул йәйге каникулға ла ҡайтып китә алмай һаман ошо ҡом буранлы тынсыу ҡалала йөрөй. Йә, ни көтә, нимәгә өмөт итә инде ул? Күпме генә йөрөһә лә, Емешкә барыбер йөрәгендәге ялҡындың кескәй генә бер осҡонон да асып, аңлатып бирергә көсө етмәүен белмәйме ни ул? Емештең һөймәүен, тик былай, иптәш, дуҫ итеп, хөрмәтләп кенә ҡарауын аңлай тороп, йөрәк яраһын асып күрһәтергә башына тай типкәнме ни уның?!

Шулай ҙа бөгөнгө ҡыуанысын уға белгертмәй, уйын-фекерен уның менән уртаҡлашмай булдыра аламы ни ул? Кем белә, бәлки ошо, һуңғы тапҡыр күреп һөйләшеү уның артабанғы яҙмышын хәл итер, билдәле бер ҡарарға килергә көс бирер? Юҡһа былай күпмегә хәтле билдәһеҙлек аҫтында йәшәргә мөмкин?!

Хөрмәт ошондай тынғыһыҙ уйҙарҙың осона-башына сыға алмай, кешеләр араһындағы мөнәсәбәттәрҙең ҡатмарлылығына, мөхәббәттең бөйөк көсөнә аптыранып ултырған бер мәлдә, үрҙән югереп Шәмсиә килеп төштө. Ҡабалапып уның янына барҙы, ни әйтергә, үҙенең йөрәген ярырҙай булып тулышҡан, дауылдай осороп бында алып сыҡҡан яңылыҡты уға нисек белдерергә һүҙ таба алмай:

— Хөрмә-ә-т... — тип һуҙып торҙо. Йәтешле һүҙ тапмағас, уның ҡултығындағы журналға ынтылған булды: — Был ниндәй журнал ул?

— «Үктябрь». Башҡортостан яҙыусылар союзы сығара торған ҙур әҙәби журнал, — тине Хөрмәт.

— Бир әле, ҡарайым!

— Рәхим ит...

Шәмсиә, ярышта уҙышып килгән юртаҡ һымаҡ, йөрәгенең тибешенә баш була алмай, тыһылдай-тыһылдай, журналды аҡтарырға кереште, «Хөрмәт Таңгилдин шиғырҙары» тип башланған биткә килеп еткәс:

— И-и-и!.. — тип тағы һуҙып торҙо. — Һинең шиғырҙарың сыҡҡан даһа! Ҡотлайым, һинең өсөн сикһеҙ шатмын,— тип хатта егеттең ҡулын ҡыҫып ҡуйҙы. — Ә быныһы ниндәй яҙыу? Уҡырға яраймы?

Хөрмәт журнал менән бергә Емешкә күрһәтергә, уның ҡарашын белергә тип, үҙенең шиғырҙары баҫылған биткә Яҙыусылар союзынан килгән хатты ла һалып ҡуйғайны. Яҙыусылар союзының председателе ҡул ҡуйған был хат уны редакцияга эшкә саҡыра, риза булһа, бик тиҙ арала хәбәр итергә ҡуша ине. Шәмсиә инде бигерәк тә аптырап, Хөрмәткә әйтәсәк яңылығын да онотоп, тағы бик оҙаҡ:

— И-и-и! — тип һуҙҙы. — Бараһыңмы? Өфөгә китәһеңме, тим?! Һәм шунда уҡ төҫө үҙгәреп, ишек яғына ҡарап ҡатып ҡалды.

— Ана-а!

Хөрмәт тә, ялт итеп, шул яҡҡа боролдо, йөрәгенән ҡапыл үтә ҡайнар ут түгелеп, бөтә тәнен өтөп алған һымаҡ булып, сайҡалып ҡуйҙы. Ирендәре кибеп, күҙ алдары томаланып китте. Ҡыҙҙар ятағынан Емеш менән Байрас көлә-көлә югерешеп төшөп килә ине. Байрас бер ҡулына сумаҙан тотҡан, икенсе ҡулы менән ҡыҙҙы етәкләп алған...

Хөрмәт, үҙе лә һиҙмәҫтән, улар яғына бер-ике аҙым атлап ҡуйҙы. Емеш тә туҡтала биреп торҙо. Ниндәйҙер тәрән эске нур, ярһыу кисереш сағылған ҡараштарын уларға төбәп, һөйкөмлө йылмайҙы:

— Хушы-ғы-ыҙ... дуҫтар!

Байрас, ҡиммәтле йыһазына кемдер һөжүм итергә йыйынғанды һиҙенгән юлсылай, ҡыҙҙы ҡабаланып үҙ яғына тартты.

— Киттек, һылыу. Унда беҙҙе, ат яллап, Алеша көтә...

Улар югерә-атлай ҡапҡанан сығып киттеләр.

Был үтә ҡапыл һәм көтөлмәгән хәлдән аҙап, дуҫтар бик оҙаҡ ни әйтергә белмәй торҙолар. Ахыр Шәмсиә:

— Күрҙеңме? — тип егеткә боролоп ҡараны.— Емештең һөйгән егете, Ҡазанда уҡый икән... Командир була икән...

Төҫө көл кеүек күмгәкләнеп киткән Хөрмәт, теле ырғағына йәбешкәндәй, һаман бер ни тип тә өндәшә алманы. Яҡшы күңелле Шәмсиәгә ул шундай ҡыҙғаныс һәм бала кеүек яҡын булып китте, уны был ауыр хәленән ҡотҡарыу өсөн, һүҙҙе икенсегә борорға ашыҡты:

— Ә һин, Хөрмәт, Яҙыусылар союзына ни тип яуап бирҙең? Улар бит ашығыс яуап һорағандар. Моғайын, унда редакцияла буш урындары барҙыр... Шунда алмаҡсыларҙыр һине...

Хөрмәттең йөҙөнә ҡан югерҙе, әкренләп үҙ хәленә ҡайтты һәм Шәмсиәгә рәхмәтле ҡарашын төбәп, тағы бер аҙ уйланып торҙо ла, етди итеп:

— Иртәгә үк Өфөгә китәм. Хәбәр ебәреп тормаһым, — тип яуап бирҙе. «Мөхәббәттән бәхет булманы... Ижад бәхетен эҙләп ҡарарға кәрәк...» — тип эстән генә ауыр көрһөнөп ҡуйҙы.

Шәмсиәнең ғәҙәттә шаян, шат йөҙөнә тәрән моң ятты:

— Барығыҙ ҙа китеп бөтәһегеҙ. Сабир ҙә кисә ҡайтып китте... Минең ҡайтыр ерем дә юҡ...

— Ә һин бошонма, Шәмсиә,— тине Хөрмәт, инде ҡыҙҙы йыуатып. — Һәр бер көйөнөс артынан кешегә һөйөнөс килә. Сабырлыҡ менән шуны күтәреп ала белгән кешеләр генә бәхетле булалар, ти торғайны минең олатайым...— тип хатта шаян йылмайырға тырышты. Ысынлап та, уның ошо минутта ҡапыл үҙгәреп, ҡырҡыу, етди, хатта өлкәнерәк төҫкә инеп киткән илһамлы йөҙөндә тыныш хеҙмәт, ныҡыш ижад дәрте, яуланаһы уңыштарҙың шифалы нурҙары балҡый һымаҡ ине.

## XIII

Мәктәптәрҙә йәйге каникул да башланды. Һуңлап килгән ауыр яҙ ҡыйынлыҡтары артта ҡалды. Күпселек ауылдарҙа колхоз булып сәселгән баҫыуҙар йәшел бәрхәт менән ҡапланды. Туғай эстәре балан, ҡарағат, әлморон сәскәләренең хуш еҫе менән тулды. Һағынып, көтөп алған яҙҙың күҙ ҡамаштырғыс матур күренештәренә, йырлай-сырылдай күккә күтәрелгән һабан турғайҙарының оҫкорлоғона ҡыуана-һоҡлана йәйәү китеп барған Иштуғанды көньяҡтан, Сағылтау артынан, күгәреп ҡалҡҡан ямғыр болото тағы ла ҡыуандырып ебәрҙе. Бер тоташтан дөһөрҙәп торған күк күкрәү ҙә, офоҡто

арҡыры-буй сатнатып ебәргән йәшен салғылары ла унын күңелендә күтәренкелек уятты.

«Ваҡытлы яуа ямғыр, бик ваҡытлы... Иген уңыр быйыл... уңһын, диңгеҙ кеүек тулҡынып ятһын!..» — тип ҡыуана-дәртләнә атланы ул.

Был яҙ Иштуғандың шәхси тормошона ла һиҙелерлек үҙгәреш индерҙе: аҙна элек кенә волость башҡарма комитетенә председатель итеп ҡуйҙылар. Нэп осороноң яңы байҙарына юл ҡуйырға ятраҡан ғәмһеҙ председатель эшенән алынды.

Коммунист кешегә яуаплы эштән һәр саҡ баш тартып тороу килешмәҫен тойған Иштуған үҙе лә был юлы ризалыҡ бирҙе. Әле бына нисә көн инде эшкә Илсеғолдан йөрөп ята. Квартира табыу менән ғаиләһен дә күсереп аласаҡ. Ул, ҡатынының был яңылыҡты нисек ҡабул итеүен хәтерләп, көлөмһөрәп ҡуйҙы.

«Исмаһам, унда миңә лә эш булыр. Улай тигәс тә, мин бит әле фронтта медсестра булып хеҙмәт иткән кеше,— тип ебәрә. Тимәк, эшләгеһе килә. Дөрөҫ, эшләр ҙә, уҡыр ҙа... Йәше уҙғандарға киске мәктәп асып ебәрербеҙ...»

Был көндө волостә актив йыйылышы уҙғарылды. Һәр ауылдан, колхоздан, ширкәттән, урмансылыҡ артелдәренән вәкилдәр йыйылды.

Халыҡ үҙенсәләп «Батыйма тутай» тип йөрөткән элекке Ырымбур купеценең бындағы баҙар майҙанына һалынған тимер башлы, тимер ишекле бик ҙур кирбес келәте хәҙер клубҡа әйләндерелгән. «Таш клуб» тип йөрөтәләр уны. Клубҡа сәхнә эшләнгән, эскәмйәләр ҡуйылған, стеналары лозунгылар, плакаттар, портреттәр менән биҙәлгән. Волость комсомол ячейкаһы янында сығарыла торған стена газеталары ла шунда уҡ элеп ҡуйылған. Сәхнәнең иң түрендәге Ленин портрете, ай кеүек яҡтырып, клубҡа айырата тантаналы төҫ биреп тора һымаҡ.

Волостең комсомол йәштәре йыш ҡына ошо клубта халыҡҡа театр, концерт күрһәтә, кисәләр, йыйылыштар уҙғара, хатта бейеү, танса кисәләре ойоштороп ебәрә. Волость күләмендәге ҙур тантаналы кисәләр, йыйылыштар ҙа ошонда үтә. Бына әле партия, совет активенең йыйылышы ла ошо таш клубта бара. Актив бөгөн волостә быйылғы яҙғы сәсеү эшенең үтәлешенә йомғаҡ яһай, йәйге, көҙгө эштәргә әҙерлек мәсьәләһен тикшерә.

Тәүге докладты райком секретаре Хаммат Батыров һөйләй. Иштуғанға ул бөгөн ниңәлер арығанырак, йонсоғанырак күренде: «Эйе, уға быйылғы яҙ еңел булманы... Ул ауырлыктарҙы еңеп сығыу өсөн күпме көс, акыл, һәләт кәрәк булды уға?! Тамамлауға карағанда, башлап китеү ауырырак була бит ул... Бына шулай... ауыр булды уға коллектив хужалыкты башлап төҙөп ебәреүе...» — тип, әллә йәлләп, әллә ғорурланып, уйлап алды Иштуған. Ә Хаммат үҙе арыу-талыуҙы һис тә тоймаған һымак. Уның, элекке көрәшсенең, мыкты кәүҙәһе һаман да мөһабәт, күркәм, тауышы көр, ышанысла ине. Тик бына тағы, ни өсөндөр, ул Иштуғанға бөгөн уйсанырак, һүҙсәнерәк, хатта татлы хыялдарға бирелеүсәнерәк тә күренә башланы. Бына ул, алдында яткан кағыҙға түгел, ә залға, үҙенә төбәлгән күмәк күҙҙәргә иғтибарлап, яратып карап, әйтерһең, өлгөрөп еткән бойҙай башағындай тос, һәлмәк һәр һүҙҙе йөрәгенең иң тәрән, кәҙерле түренән алып уйлап-уйлап кына әйтеп тора. Тыңлаусыларҙы ла үҙе менән бергәләп уйларға, күрергә, тойорға, яңы еңеүҙәргә ынтылырға елкендерә. Дөрөҫ, алдан яҙып, ятлап әҙерләнгән, һөйләргә оҫтарған махсус докладсының телмәре түгел был. Ә халык менән уның тап үҙенсә, эшләнгән эштәр, алдағы бурыстар хакында ирҙәрсә, ололарса, етди һөйләшеү генә. Шул ук вакытта был һөйләшеүҙән йәштәргә хас кыйыулык та, тәрән ышаныс та, кеүәтле дәрт, дарман да аңкып тора... Ә Иштуғанға был юлы Хамматтың телмәре изге бер васыятты ла хәтерләтеп куйған һымак булды: «Ниңә икән?!» Ул, аптырап, янында ултырған дуҫына боролдо:

— Хаммат ағайҙың шулай һөйләгәнен тәүтапкыр ишетәм...

Әхәт өндәшмәне. Ул да, үтә етди уйланып, хатта һөйләүсенән күҙен дә алмай, онотолоп ултыра ине.

— ...Дөрөҫ, иптәштәр, ауырлыктар, каршылыктар күп әле. Иҫке, хәйерсе тормоштоң сафтан сыккан кире яктары күп урында һәр яңылыктың итәгенә сат йәбешеп артка тартып ята. Хатта күп вакыт юлды быуып та тора. Әммә яҙғы ташкынды тыйып, туктатып калырға кемдең, нимәнең көсө етә? Ярһыу яҙғы ташкын булып килә бит беҙҙең яңы тормош. Ергә йән биреүсе терелткес яҙғы кояш булып балкып килә.

Бына бит быйылғы яҙғы сәсеү алдында күпме каршылык торҙо? Ә беҙ уҙған йылдағыға карағанда биш

тапҡыр күберәк сәстек. Яҡшыраҡ эшләнек. Ниңә? Сөнки хөкүмәт беҙгә күп төрәнле һабандар, тимер тырмалар бирҙе. Сөнки беҙ сәсеүҙе күп урында берҙәм көс менән атҡарҙыҡ. Колхоздар төҙөп ебәрҙек...

Бына күрерһегеҙ, яҡын йылдарҙа беҙҙең баҫыуҙарҙа ла тракторҙар геүләр, комбайндар шаулар. Игенде елкә көсө менән генә түгел, ә аҡыл, белем көсө менән етештерербеҙ... Машиналарҙы эшкә егербеҙ... Тик бындай уңышҡа яңғыҙаҡ тормош аша ирешеп булмаясаҡ. Трактор ҙа, комбайн да киң, иркен баҫыуҙы ярата, ә ундай баҫыуҙар тик тотош коллектив хужалыҡҡа күскәндә генә буласаҡ. Бына ошо турала крәҫтиәндәргә яҡшылап төшөндөрөү кәрәк беҙгә, иптәштәр.

Төшөндөрөргә, түҙемле аңлатырға, ә бойорорға, ҡысҡырырға, баҡырырға түгел... Үҙегеҙ беләһегеҙ, бигерәк тә беҙҙең халыҡ менән юғарынан тороп, түрә булып, бойороп-ҡысҡырып һөйләшеү бармай. Ул бит шәхсиҡ иркен бөтә нәмәнән өҫтөн күреп өйрәнгән... «Ас тамағым— тыныс ҡолағым» тигән әмәтһеҙ мәҡәлде лә, моғайын, үҙенең шул ҡылығын аҡлар өсөн уйлап сығарғандыр әле ул!.. Шулай бит, иптәштәр?

Зал күңелле генә көлөшөп алды. Хаммат та йылмая биреп тынып торғас:

— Ә беҙгә хәҙер үҙебеҙҙең иң кешелекле яңы мәҡәлде төшөндөрөргә кәрәк: «Кем эшләмәй — шул ашамай!» Эйе, халыҡты уятырға, ярһытырға, берҙәм тормошто яратырға өйрәтергә кәрәк, — тип артабан һөйләп китте. — Халыҡ ул, әгәр һине, етәксене, яратһа, хөрмәт итһә, иң мөһиме — ышанһа, һинең арттан яланҡул менән тау-таш ярырға ла, кәрәк икән, дөрләп янған ут эсенә инергә лә әҙер. Ә ул һине яратһын, һиңә ышанһын өсөн, һин үҙең иң элек уны яратырға, уның өсөн янып көрәшергә, уны иҫке тормош ҡалдыҡтарынан, йәғни ярлылыҡ, ҡараңғылыҡ, иҙелгәнлек ҡосағынан тартып сығарыу тигән изге теләккә бөтә ғүмереңде һибә итергә тейешһең... Остазыбыҙ Лениндең бөтә тормош юлы беҙгә ошо хаҡта һөйләп тора.

Беҙ — ауылда социализм тигән яҡты киләсәктең нигеҙ ташын һалыусылар — Ленинддән өйрәнһәк, уның идеялары менән нык ҡоралланһаҡ, халыҡ менән ленинсә мөнәсәбәт итә белһәк кенә уңышҡа өлгәшә алырбыҙ, иптәштәр...

Үҙегеҙгә билдәле, хәҙер беҙҙең волостә лә үҫеш, алға китеш бик ҙур, иптәштәр. Аң-белем эшен алып ҡараныҡ — һәр ауылда тип әйтерлек мәктәп асылды бит хәҙер. Әле ҡасан ғына ауылынан ситкә сыҡһа, үҙенсә һөйләшергә ояла, кәмһенә, төрки телдә һөйләшә башлай торған башҡорттоң улдары-ҡыҙҙары хәҙер шул мәктәптәрҙә үҙ телендә уҡый. Уйлап ҡараһаң, был бит мөғжизә, иптәштәр! Быны тел осо менән генә түгел, йөрәк менән тойорға һәм был оло бәхетте һаҡлау, ишәйтеү, йәшәтеү өсөн барлыҡ көстө бирергә кәрәк.

Беҙҙең халыҡтың борон-борондан ата-бабаларҙан килгән һуғышсан батыр сифаты бар. Ул быны бер ҡасан да онотмай. Урыны килгәндә, батырлыҡ, һуғышсанлыҡ менән хаҡлы рәүештә маҡтанып ебәрергә лә ярата. Әйтәйек, рус ғәскәрҙәре сафында, Һаполеонды ҡыуып, Парижгә беренсе булып барып инеүен дә онотмай, Бүгәсәү батыр менән Салауат батырҙың Рәсәй батшалығының алтын тәхетен дер һелкетеүен дә беләә, Лениндең үҙ саҡырыуы буйынса барып, Петроградты ҡамаған Юденич яуҙарын тар-мар итеүҙә ҡатнашыуын да хаҡлы ғорурлыҡ менән иҫкә ала. Шул һуғышсылар шикелле ғәҙел, тоғро, батыр йөрәкле, саф намыҫлы ир булып үҫергә кәрәклекте иҫәпһеҙ-һанһыҙ тапҡыр әйтемдәре, көләмәстәре, мәҡәлдәре, йыр һәм легендалары, әкиәт-хикәйәттәре аша балаһының теле асылыр-асылмаҫтан мейеһенә һеңдерә башлай. Бик һәйбәт. Ә бына, үрҙә әйткәнемсә, үҙенең әсә теленә хөрмәт тәрбиәләргә кәрәклекте ул онота. Улай ғына ла түгел, хатта үҙенең туған теленән кәмһенә. Борондан, батша заманынан, ҡалған хата ҡараш... Бына ошо хата ҡараштан сығып, ул балаһын хатта хәҙер ҙә үҙ телендә асылған мәктәпкә бирергә теләмәй тора... Уныңса, төрки теле генә китап, белем теле... Ә үҙ теле — ҡара халыҡ теле... Бына бит ниндәй хата ҡарашҡа өйрәтелгән ул! Ә бит беҙҙең бик борондан йәшәп килгән ғәжәп бай, аһәңле, сәсән, йор телебеҙ бар. Үлмәҫ йырҙарыбыҙҙы, моңдарыбыҙҙы, хикмәтле хикәйәттәребеҙҙе, легендаларыбыҙҙы шул телдә тыуҙырған бит халыҡ!

Быны мин ни өсөн һөйләйем, иптәштәр? Беҙгә үҙебеҙҙең телдә асылған мәктәптәрҙең дәрәжәһен күтәрергә кәрәк. Милли мәктәптәр Бөйөк Октябрь революцияһы биргән иң оло ҡаҙаныштарҙың береһе булыуын халыҡҡа аңлатырға, үҙ телдәрендә уҡыу-яҙыу ғәрлек түгел, ә

бәхет икәнен ныҡлап төшөндөрөргә кәрәк, тимәксемен. «Теле юҡтың — үҙе юҡ» ти бит халыҡ мәҡәле.

Беҙ хәҙер батша заманында бөтөүгә йөҙ тотҡан халыҡтарҙың ҡайтанан тыуып, үҫеш юлына баҫҡан иң бәхетле осорҙа йәшәйбеҙ. Совет хөкүмәте беҙгә үҙ телебеҙҙә уҡырға-яҙырға ирек бирҙе, оло Рәсәйҙең бөтә башҡа халыҡтары менән яурынға-яурын торәп, үҙ еребеҙҙә социализм йәмғиәте төҙөргә шарт тыуҙырҙы... Рус пролетариатының быуаттар буйы алып барған ауыр көрәшенең гүзәл һөҙөмтәһе булып килеп тыуған Октябрь революцияһы арҡаһында беҙ ҙә ваҡ феодаль хужалыҡтан туп-тура социалистик хужалыҡ осорона килеп баҫтыҡ.

Бына ошо оло бәхеттәр хаҡында етди уйлайыҡ, иптәштәр. Халыҡты ла уны тейешенсә аңларға, баһаларға, үҙҙәренә хас батырлыҡ менән был ҡаҙаныштарҙы һаҡларға, яҡларға өйрәтәйек.

Килер бер саҡ, хеҙмәт кешеләре танымаҫлыҡ булып үҫер, үҙгәрер, илдә социализм, коммунизм йәмғиәте тантана итер. Беҙҙең ҡарт Уралда, күп һыҡтаған башҡорт ерендә лә яңы ҡалалар, завод-фабрикалар тыуыр, башҡорттан да докторҙар, профессорҙар етешер, уларға, әлбиттә, беҙҙең хәҙерге көйөнөстәребеҙ ҙә, һөйөнөстәребеҙ ҙә бик бәләкәс, ваҡ, бәлки, мәҙәк тә тойолор... Ләкин улар барыбер беҙҙе, ана шул яҡты киләсәктең тәүге нигеҙ таштарын һалыусыларҙы, дуҫтарса йылылыҡ менән, хөрмәт менән иҫкә алыр. Йәгеҙ, иптәштәр, ана шул киләһе йәш быуын алдында йөҙ ҡыҙармаҫлыҡ итеп эшләйек...

Тыңлаусылар шаулап ҡул сапты: «Дөрөҫ!» «Хаҡ һүҙ!» тигән тауыштар ишетелде. Хаммат етди уйланып тағы бер аҙ тынып торҙо ла волостә коллектив хужалыҡҡа ҡаршы аҫтыртын ҡотҡо алып барыусы синфи дошмандарға күсте.

— Беҙ уларҙың бер нисәһен енәйәт өҫтөндә тоттоҡ. Тиҙҙән улар совет хөкөмө алдына баҫасаҡ. Ләкин, минеңсә, атамандары әле иректә йөрөй. Беҙҙең бурыс — яҡын арала уларын да фашлауҙан, халыҡтың яңыға, яҡтыға булған ынтылышын быуырға, бәхет юлына арҡыры ятырға маташҡан барлыҡ кәртәләрҙе аяуһыҙ емереүҙән тора...

Йыйылыштан һуң Иштуған, волость башҡарма комитетенең атын егеп ҡайтырға сыҡҡас, бик үк ашығыс йомошо булмаһа ла, ниңәлер Хаммат менән тағы бер күреп һөйләшкеһе килеп, волкомға туҡтаны. Хәҙер Илсе-

юлға ҡайтып китәсәген, иртәгә ғаиләһен күсереп алып киләсәген әйтте.

— Иртүк килеп ет,— тип иҫкәртте Хаммат. — Иртәгә бюрола Әбделмөслимовтың отчетын тыңлайбыҙ, — тине. — Алексеев иптәш Мраковканан яҡшы кандидатура тапты. Тәжрибәле, махсус белемле кеше. Мраковкала кооператив магазине асып, нэпман Хитровтарға ҡаршы көрәшеп сыныҡҡан. Беләһеңдер әле, Степанов...

— Белмәй ни... Ул бит беҙҙең Сәмиғәне сауҙа эшенә өйрәтте, Илсеғолда кооператив магазине асырға ярҙамлашты. Әйе, ул ысын совет кешеһе.

Хамматтың бөгөн Иштуғандың иғтибарын айырата биләп алған ғәҙәттән тыш ярһыу һәм эшсән йөҙө ҡыуаныс менән яҡтырып китте:

— Бына шулай, мырҙа. Ҡулак Әбделмөслимовтар шайкаһынан кооперация системаһын таҙартыуҙы башлап ебәрәбеҙ! — тине ул, тауышын баҫып,— инде был юлы ла ялтартып ҡала алмаҫ, иблес!

* * *

Тап бына ошо минутта Әбделмөслимов Биктимерҙең ҡулына суҡмар тотторҙо, күкрәгенә наган төҙәне.

— Бөгөн төндә йә ул, йә үҙең!.. Аңланыңмы, ташбаш!

Был көндәрҙә Әбделғасимдең өйөндә бикле ятып эсә-эсә күбенеп, кеше төҫөн юғалтҡан Биктимер, нагандан да бигерәк, хужаһының зәһәрле ҡарашы аҫтында бөгөлөп төштө:

— Аң-ң-ланым... а-а-ағай... Ә-ә... айғыр-р?..

— Булыр. Ҡараңғы төшөүгә әйткән урында бул. Бел, мин күҙ яҙлыҡтырмам... Арҡаңа наган төҙәлгән булыр... Ер тишегенә ҡасһаң да, табырмын... Бөтөрөрмөн... Ишет...

Биктимер яраланған йыртҡыс кеүек шыңшып ҡуйҙы.

— Йә, бөткән баш — бөткән...

* * *

Актив таралып, яҙғы көн уҙып киткәс, Хаммат, югерә-атлай ҡайтып, тамағына арлы-бирле ҡапҡыланы ла тағы волкомға югерҙе. Бөгөн көн буйы йыйылышта ултырыу, доклад һөйләү, унан ҡалған ваҡытты кешеләр

менән айырым-айырым һөйләшеү, кәңәшсү, хужалыҡ һәм партия эштәре буйынса кисектергеһеҙ мәсьәләләрҙе хәл итеү кеүек иҫәпһеҙ-һанһыҙ мәшәҡәттәрҙән һуң да ул үҙендә арыу-талыу тоймай, ниңәлер күңеле бөгөн айырата ашҡынып, эш өҫтөнә'эш талап итеп кенә тора. Уны, бөтәһенән элек, иртәгә буласаҡ бюро ултырышы, унда ҡараласаҡ етди мәсьәлә ярһыта ине. Был бит бер Әбделғасимде, совет сауҙаһының йәш тәненә ҡаҙалған ҡомһоҙ бур талпанды һытыу ғына түгел, бәлки, бөтә кооперация системаһын синфи дошмандарҙан таҙартыу, волость күләмендә был эште ҡайтанан ҡороу өсөн аяуһыҙ көрәш башлау тигән һүҙ!

Хаммат был уңай менән үҙе алып барған тикшереү материалдарын тағы ҡарап, факттарҙы оҙаҡ, ентекле өйрәнеп, иртәгә бюрола һөйләйһе һүҙен әҙерләп ултырҙы. Ахыр үҙ эшенән ҡәнәғәт булып тороп китте.

«Факттар, бәхәсһеҙ факттар фашлай был кулакты! Дөрөҫ, уның яғында мең төрлө хәйлә, мәкер... Беҙҙең ҡулда факттарға нигеҙләнгән ғәҙел, тоғро совет законы... Көрәш ҡыҙыу буласаҡ...»

Ул ишекле-түрле шәп-шәп йөрөп алды, унан улының кисәге хаты иҫенә төшөп, тағы өҫтәле янына барып ултырҙы: «Туҡта әле, был малай, кәләш алам, тип яҙа түгелме һуң?!» — тип өҫтәл тартмаһынан хатты эҙләп алды. Ул һәр саҡ шулай Байрастың хаттарын үҙе янында йөрөтә, бер нисә ҡат уҡымайынса һалып ҡуймай ине. Был юлы хат бигерәк ҡыуаныслы булып сыҡты: улы ир еткән, ҡыҙ һөйөргә өлгөргән икән дәһә!

Ул, киң йылмайып, хаттан күҙен ала алмай ултырҙы:

«...Атай, хәтереңдәме икән, һин бер саҡ, аҡтарға ҡаршы һуғышҡа китер алдан минең арҡамдан һөйҙөң дә: «Улым, һин бәхетле булырһың. Уҡырһың... Беҙ елкә менән татып белгән хәҡиҡәтте ҙур аҡыл эйәләре, бөйөк революционерҙәр яҙған китаптарҙан уҡып белерһең», тип йыуаттың. Ә хәҙер бына, ысынлап та, һинең Байрасың уҡып йөрөй!

Шул саҡта әйткән икенсе бер һүҙең дә хәтерҙә, атай: «Улым, мине ун биш йәшлек малай сағымда әсәйем көсләп өйләндергәйне. Ғаиләгә өҫтәлмә эш ҡулы кәрәк ине. Ә мин һине улай итмәм. Һин үҙең теләгән ваҡытта, үҙең яратҡан ҡыҙға өйләнерһең...»

Бына бит, атай, һинең Байрасыңа ла өйләнер саҡ килеп етте, һөйгән ҡыҙы ла ипле... Емеш! Үҙебеҙҙең

күҙ алдында үҫеп, өлгөрөп еткән Гөлйемеш! Ышанам, атай, һин беҙҙең икебеҙҙе лә яратырһың, ҡыуанып ризалыҡ бирерһең... Ә беҙ бының өсөн һеҙҙең алда үҙебеҙҙе ғүмер буйы ҡайтарып бөтмәҫлек бурыслы һанарбыҙ, һеҙҙе ҡыуандырып, кинәндереп торорлоҡ итеп йәшәргә тырышырбыҙ...

Һөйләштекме, атай? Ризамы?!

Улай булһа, көтөгөҙ. Беҙ ошо арала икәүләп ҡайтып төшөрбөҙ. Килен алып ҡайтам һеҙгә, атай!..»

— Һай! — тип көлөмһөрәп ҡуйҙы Хаммат. — Ҡайһы арала үҫеп еткән дә, ҡасан шулай ҡыйыу, шаян һөйләшергә лә өйрәнгән!

Хаммат күңелле генә йылмайып тынып ултырҙы, етеп киткән ҡуйы һаҡал төпһәләрен һыйпаштырып алды:

— Ҡарасы, ҡайны булыр саҡ та еткән икән дә?! — тип хатта көлөп ебәрҙе. Унан тағы:

«Ысынлап та, ҡартайып та кителде шикелле. Мине хәҙер Сәлимә күрһә, танымаҫ та ине, моғайын... Яратмаҫ та ине, бәлки... Ә мин һаман яратам... Һаман һағынам... Их, ошондай арыған, талған саҡта йөрәгенә ҡыҫып бер һөйөр инең дә, бөтәһе лә онотолор ине...» — тип һис ваҡытһыҙ үкенесле мөхәббәтен хәтерләп алды. Ахыр уйы Алсәскә менән Гөлсәскәһенә күскәс, ашығып урынынан торҙо.

«Өммөжәй ҙә көтәлер... Эйе, көтә инде ул, көтә... Ҡайҙа, күпме йөрөһәң дә, риза булып көтә. Тик ҡайтмай ғына ҡалма. Ҡасан булһа ла ҡайт ҡына... Күрәһең, ул да бик һөйәлер. Һөйгән кешеңде көтөп алыуҙан да ҙур бәхет юҡтыр.

Бына бит минең Байрасым да һөйгән кешеһен көтөп алған... Бәхетле... һис шикһеҙ, бәхетле булыр Байрас...»

Йорттан сыҡҡас, Хаммат, күҙе ҡараңғыға өйрәнгәнсе, тупһала баҫып торҙо.

Томһа, айһыҙ төн ине. Тирә-яҡ, ниндәйҙер хәүефле ваҡиға көткәндәй, шомло тынып ҡалған. Эт тә өрмәй, этәс тә ҡысҡырмай. Ғәҙәттәгесә мал көйшәгән, йылҡы уҡтаған тауыш та ишетелмәй. Ни өсөндөр был тын төн Хамматҡа шуға оҡшаш икенсе бер төндө хәтерләтте. Эйе, ул төн дә тап ошондай ҡараңғы һәм тын ине. Ул төндә лә шулай Хаммат, тышҡа сығып тупһаға баҫҡас, тирә-яҡҡа ҡолаҡ һалып торҙо. Ауылды Колчак ғәскәре килеп баҫыр алдынан больницанан яңы ғына сыҡҡан һалдат Хаммат, ҡыҙыл ғәскәрҙәргә барып ҡушылыр өсөн,

яңғыҙы һыбай юлға сығып киткәйне ул төндө. Уны әсәһе менән Закир ҡустыһы, хәүефләнеп, ҡапҡаға хәтле оҙатып ҡалғайны... Хәҙер әсәһе лә, Закир ҙә юҡ... Һай, ғүмер тигәнең!.. Ҡыҫҡа ла, үкенесле лә бит, шайтан алғыры!

Ул тағы ауыр ғына көрһөнөп алды. Унан уйы тағы Байрасына күсте:

«...Туҡта әле, яңғыҙым сығып киттем, тим. Теге күперҙә торған аҡ һалдаттарҙы бөтөрөп, ҡоралланып алған сағымда, ул, молодец малай, минең менән ине ләбаһа! Эйе, тап шулай, һыбай оҙата сыҡҡайны... Мин дә, атай, һинең менән китәм, ҡыҙылармеец булам, тип артымдан ҡалмаҫҡа тырышҡайны...

Ҡасан ғына булды һуң әле был төн? Яңы ғына һымаҡ. Ә унан бирле нисәмә йыл үтте, күпме һуғыш-көрәш баштан кисте... Байрас кәләш алырлыҡ егет булып етеште... Һай, ғүмерҙәр... ғүмерҙәр...»

Хаммат, ул төндө өйҙән сығып киткәндән һуң, ҡыҙыл ғәскәргә барып ҡушылғанғаса, үҙенең ниндәй ауырлыҡтар, ҡурҡыныстар кисереүен хәтерләп алды. Үҙенең партизан отряден, уның аҡтар баҫҡан ерҙә, Уралдың тап йөрәк түрендә, ниндәй ҡыйыу көрәш алып барыуын кинәнеп иҫкә алды. «Ут күҙ» Сәғит тигән йәш партизандың һәләкәтен, Алыҫ Көнбайышта барған һуғышта ҡорбан булған батыр һалдат дуҫы Шаһиморатты хәтерләп йөрәге һыҙлап ҡуйҙы... Петроград фронтында, көнбайышта Польша сигендә барған ҡаты һуғыштарҙың айырым күренештәре шул хәтле асыҡ, яҡын булып күҙ алдынан үтте... Ул бөгөн, ысынлап та, үҙенә хас булмағанса, үтә ярһыу, уйсан ине... Ул яй, һалмаҡ ҡына атлап барған арала, осҡор уйҙары намыҫлы, ҡыйыу һалдат Хаммат батыр уҙған осһоҙ-ҡырыйһыҙ һуғыш, көрәш майҙандары өҫтөнән, ҡанатлы арғымаҡ шикелле, елеп үтте. Ә төн һаман ҡараңғыраҡ, шомлораҡ була барҙы. Өҙлөкһөҙ һибәләп торған быҫҡаҡ ямғырҙан ер үтә лә тайғаҡланып, аяҡҡа һырыша башланы.

«Ҡандай яҙғы ямғырға оҡшамай әле был... Шәмәреп тик тора! Их, күк күкрәп, йәшен йәшнәп, ерҙе дер һелкетеп яуып уҙһа ла китһәсе! Күңелгә лә еңел булыр ине!..» — тип уйлап алды Хаммат. Унан, күреүҙән бигерәк, тоҫмаллап, урам уртаһынан китте. Квартираһына етер алда ғына ҡоймалар, ҡапҡалар эргәләп үтте. Инде ҡайтып етергә лә күп ҡалманы. Ана тәҙрәлә ут бызлай.

Өммөгөлсөм, ғәҙәтенсә, шәмде һүндермәй ҡыҫып ҡына ҡуйған. Тимәк, йоҡламай, көтә... Бына хәҙер ул бынауы икс өйҙә генә үтәсәк тә ҡайтып етәсәк. Ҡатынын, ҡыҙҙарын һөйәсәк...

Сәлимәһе үлгәне бирле Хамматтың тәүтапҡыр шулай бик-бик өйөнә ҡайтҡыһы, нимәнәндер ғаилә йылыһына ынтыҡланғыһы килеп китте. Тик уға был бәхетте татырға тура килмәне. Бәләкәс ҡапҡаны асып инеүгә, ҡойма аҫтынан ниндәйҙер ҡараҫҡы уҡтай атылып ҡалҡты ла суҡмар менән йән-фарман һелтәнде. Мейеһе иҙә һуғылған дәү, ауыр кәүҙә, бысылған тирәк шикелле, гөрһөлдәп сүеш ергә ауҙы...

Өммөгөлсөм, шәм һүндермәй, ирен һағынып көттө лә көттө. Ә ҡара төн таңға хәтле, батырҙың өҫтөнә эйелеп, үкһеп-һығылып иланы: «Аһ, ҡанһыҙҙар, шәфҡәтһеҙҙәр!.. һәләк иттеләр бит кешене, аҫыл ирҙе?! Йә, ни өсөн, ни өсөн?!»

* * *

Яҙғы ҡыҫҡа төн үтеп, тәүге таң нурҙары һирпелеп ҡарағанда, Хаммат ҡолас ташлап ерҙә салҡан ята, әйтерһең, кинәнеп битен ҡояшҡа ҡуйған да күҙҙәрен йомоп ял итә... Йәнселгән мейенән аҡҡан ал ҡан тамырланып яҡ-яҡҡа таралған, төн буйы ямғыр йыуған йөҙө шундай аҡ, саф булып, айырата матурланып киткән һымаҡ...

Хамматтан бер нисә аҙым ары суҡмарын ҡосаҡлап Биктимер түкмәскән. Йөрәк тәңгәленә ҡаҙалған бысаҡ һабы уның арҡаһында сурайып тора. Тимәк, уның ҡулына суҡмар тотторған мәкерле дошман шулай эҙен йәшергән...

* * *

Төндә хафалы, аҙаплы кисерештәр менән керпек ҡаҡмай уҙғарған Өммөгөлсөм таң атыр-атмаҫтан тышҡа сыҡҡанда, Хаммат тере ине әле. Үҙ ғүмерендә бик күп һуғыш һәм тормош яралары алыуға ҡарамаҫтан, һаман көс-ҡеүәтен юғалтмаған батырҙың тәне, күрәһең, тиҙ генә бирешергә теләмәй, үҙе ысын, тоғро ир йөрәге менән өҙөлөп һөйгән, уның өсөн бөтә ғүмерен биргән яҡты донъялағы һәр һулыш өсөн көрәшә ине. Ләкин ул аңына килмәне. Волость больницаһының врачтары ҡулдарынан

килгәндең бөтәһен эшләпеләр, Ташлынан данлыҡлы хирург Ивановты ла алып килделәр. Ҡасандыр Хамматты бысаҡ яраһынан һауыҡтырған, ауыр граждандар һуғышы осоронда уның кеүек күпме батыр һугышсыларҙың ғүмерен һаҡлап ҡалған оҫта ҡуллы хирург, яҡшы күңелле кеше Иванов та был юлы ярҙам итә алманы.

Хаммат бер генә тапҡыр ҙа иҫенә килмәне. Ҡайғынан бөгөлөп төшкән ҡатынына, ҡурҡышҡан ҡыҙҙарына, үкһеп илап, аяғына килеп ауған Байрасына, исмаһам, бер күтәрелеп ҡарай ҙа алманы... һүнде... Эйе, йондоҙ атылған кеүек балҡыны ла һүнде был гүмер... Гранит ҡаяларҙы ярып, ҡояшҡа атылып сыҡҡан тау йылғаһы шикелле саф, таҙа, яҡшылыҡҡа, изгелеккә бай, яҙғы ташҡын шикелле бөтә кәртәләрҙе емереп алға, иркенгә, яҡтыға, киңлеккә табан шаулап, гөрләп ағып барған дауыллы шат ғүмер шулай мәңгегә өҙөлдө... Юҡ, юҡ, бөтөнләйгә түгел... Хатта мәкерле үлем дә уның ысын кешегә хас яҡты ғүмерен бөтөнләйгә үҙенең ҡомһоҙ боғаҙына йәшереп ҡуя алманы. Йыр кеүек гүзәл был ғүмер, икенсе рәүеш, икенсе яңғыраш ҡына алды хәҙер. Ул — халыҡ күңелендә тере ҡалды. Ул — яҡшыға, яҡтыға, кешелеклелеккә әйҙәгән, яуызлыҡ, боҙоҡлоҡ, мәкерлелек кеүек ысын кешегә хас булмаған яман ҡылыҡтарға эсе нәфрәт тәрбиәләүсе тылсымлы көс булып халыҡ күңелендә мәңге йәшәйәсәк хәҙер...

Ҡайһы берҙә тау йылгаһы ла бит шулай ҡапыл күҙҙән югала.

Бына ул бер саҡ шомло, текә ҡаялар аҫтынан шат, нурлы балҡып, шылтырап ағып сыға ла, тар, ҡырыҫ йырғанаҡтар төбөнән юл ярып, баш әйләнгес тиҙлек менән алға ынтыла. Һикәлтәле, сусаҡлы үҙәндәр буйлап һикерә-уйнай алыҫҡа, ҡояшлы далаларға, оло күк диңгеҙгә табан, ярһып-ашҡынып, аға башлай. Уның теремек, шат шылтырауы көнөн дә, төнөн дә тынмай. Арыуҙы-талыуҙы белмәй, эре-эре һуйырташтарҙы аҡтарып, төрлө төҫлө ҡырсындарҙы тәгәрләтеп, көмөштәй саф, теремек һыуы менән күҙҙәрҙе иркәләп, йөрәктәрҙә йәшәү һәм бәхет тойғоһо уятып аға ла аға...

Шулай ҡасандыр уның юлын быуырға, ҡыҫымға алырға маташҡан ҡырыҫ ҡаялар әкренләп артта ҡала, ярҙар тәпәшерәк, туғайҙар киңерәк, сәскәлерәк, ҡоштар һайрауы сағыуыраҡ була бара. Йылғаның ағышы тымығыраҡҡа, тәрәнерәккә, мөһабәтерәккә әйләнә. Уның

шылтырауында ла инде сабырһыҙ саялыҡ түгел, ә ҡәнәғәт, аҡыллы, баҫалҡы тылсымлы өн яңғырай... Сөнки ул бит инде маҡсатҡа яҡын — оло диңгеҙгә табан юл һаман ҡыҫҡара бара!..

Ҡайһы саҡта, тап бына ошондай бер бәхетле мәлендә, йылға һәләкәткә осрай. Мәкерле яҙмыштың ниндәйҙер бер зәһәрле көләүе һөҙөмтәһендә, ул ергә һеңеп юғала.

Шат, шаян, ғорур һәм ҡеүәтле йылға юҡ була. Тирәяҡ тын, буш, моңһоу булып ҡала...

Әммә бит был бөтөнләйгә түгел!.. Йылға бит ҡайҙандыр бер ерҙән тағы өҫкә ҡалҡып сығасаҡ! Тағы-тағы үҙен саҡырып торған оло диңгеҙгә табан ярһып, ашҡынып ағып китәсәк. Эйе, шулай, оло диңгеҙгә барып ҡушылырға, уның һис юғы бер кескәй генә көмөш тамсыһы булып йәшәп ҡалырға, шуның менән йәшәүҙең матурлығын, мәңгелеген тағы бер раҫлап ҡыуанырға тип ҡаялар ярып донъяға тыуған бит ул тау йылғаһы!..

Халыҡ өсөн йәшәп, халыҡ өсөн көрәшеп үлгән батырҙарҙың ғүмере лә, тап шул тау йылғаһы кеүек, тормоштоң үҙе, халыҡтың рухы кеүек үк үлемһеҙ бит ул...

## XIV

Бындай фажиғәле ваҡиғага хас төрлө юридик тикшереүҙәр үткәндән һуң, Байрас атаһын үҙ ауылына алып ҡайтып күмергә булды.

— Оләсәйем янында ятһын, — тине ул. — Һөйгән ерендә...

— Үҙ яныбыҙҙа булһын... — тине Өммөгөлсөм дә...— Исмаһам, ҡәбере үҙ яныбыҙҙа булһын...

Әбделғасим Әбделмөслимов Хамматты Илсеғолға оҙатыу эштәрен ойоштороуҙа сиктән тыш эшлекле ҡатнашлыҡ итте.

Бына әле лә ул Иштуған янына ел өрөп индергәндәй елеп килеп керҙе.

— Иптәш Ирьегетов! Ҡәбер ташы заказать иттем. Уға ошондай һүҙҙәр яҙырға ҡуштым, яраймы?.. — тип банкалағы һөлөк шикелле борғоланып торҙо. Иштуған уның «данлыҡлы революционер...» тип башлап киткән һөйләмен һыҙып, «большевик Хаммат Батыров...» тип төҙәтте лә:

— Эшләт! — тине.

— Булды, иптәш Ирьегетов. Рәхмәт. Хәҙер бөтәһе лә әҙер булыр... — тип һөйләнә-өтәләнә ишектән арты менән сығып киткән Әбделғасимгә һүҙһеҙ текләп ҡалған Емеш үҙенең бында, ағаһы кабинетенә ни өсөн килеп ингәнен дә онотоп, аптырап торҙо: «Ҡайҙа күрҙем мин уны? Шундай таныш, яһалма, ярамһаҡлы тауыш... Югерек күҙҙәр... Эйелеп-бөгөлөп торған ас эсле, оҙон кәүҙә... ысын, шундай таныш... Ҡемделер хәтерләтә лә кеүек...»

Ул ғәжәпләнеп ағаһына ҡараны:

— Был кем? Ниндәй кеше был, ағай?!

Телефон аша кем менәндер оҙатыу митингеһен ойоштороу хаҡында һөйләшеп ултырған Иштуған һеңлеһенә ҡарамай ғына:

— Ә улмы? Бындағы потребкооперация мөдире Әбделмөслимов,— тине лә үҙ эшендә булды.

«Был теге Емер Яшинскийҙең атаһы түгелме икән? Емер ҙә бит Әбделмөслимов булған. Эйе-эйе... Әбделмөьмин Әбделмөслимов... Аҙаҡ ҡына Емер Яшинский тип үҙгәртеп ебәргән... Шулай тигәйне Нәфисә. Хөрмәт тә: «Уның сығышы насар икән, Ғимранов ағай быны белә башлағанды тойоп, тиҙ генә Өфөгә һыҙған икән...» — тип һөйләгәйне бит! Ошо Әбделмөслимов түгелме икән уның атаһы?! Оҡшаған бит! Бөтә һыны, ҡыланышы... Хатта ярамһаҡлы сөсө тауышы...»

Иштуған төҫө ҡасып, аҡһыуланып киткән һеңлеһенә борсоулы ҡарап алды:

— Емеш, еңгәң һине ашамай ҙа, йоҡламай ҙа тип бошона. Бар ҡайтып әҙерәк ял итеп ал.

Ҡыҙ ағаһына аптырап ҡараны: «Шундай саҡта нисек ял хаҡында һөйләй ала?!» Һәм үҙе лә һиҙмәҫтән:

— Ағай, был бит яман кеше! — тип ҡысҡырып ебәрҙе. — Эйе, эйе, хәтәр кеше!..

— Ҡем?

— Бынауы әле генә сығып киткәнсе...

— Ҡайҙан беләһең?

— Беләм. Уның улы...

Иштуған Емеште ашығып бүлдерҙе:

— Емер Яшинский... Хаммат ағай менән Ғимранов араһында был хаҡта хат аша һөйләшеү бара ине...

— Шулай булғас?!

— Шулай булғас... — тип тағы уның һүҙен бүлде Иштуған, — был хаҡта хәҙергә ләм-мим! Аңланыңмы?!

Хаммат ағайҙы оҙатып Илсеғолға үҙенең дә барырға

теләүен, аҙаҡ шунда Бибеш апаларында ҡаласағын әйтергә тип килгән Емеш, ауыр, аңлайышһыҙ уйҙарға ҡалып, йомошон йомошламай сығып китте.

«...Хәҙергә ләм-мим... Юҡ, шулай ҙа Байрасҡа... Алешаға әйткәндә?! Әммә ағайым өндәшмәй торорға ҡушты бит. Ни өсөн икән?»

Бынан ары Әбделғасим Әбделмөслимов Емештең уйынан да сыҡманы, күҙ алдынан да китмәне. Хамматты һуңғы юлға оҙатыу митингеһендә уның мөҡәддәс революцион һүҙҙәрҙе майлы ирендәрендә иҙгеләп, урынлы-урынһыҙ теҙә-теҙә ниндәйҙер яуыз дошмандарға ҡарата төкөрөк сәсеп янай-ҡысҡыра һөйләгән телмәрендә лә Емер Яшинскийгә хас аҫтыртынлыҡты, эскерлелекте күреп аҙапланды.

— Революция дошмандарына тантана итергә бирмәбеҙ! Үҙебеҙҙең ағабыҙҙы, коммунисте, бөйөк революционерҙе, беҙ, большевиктәр, уның рухи туғандары, дошманға тейешле отпор бирербеҙ! Беҙҙең революцион пролетар синыфтың хас дошмандарын ҡырып бөтөрөрбөҙ! — тип, эйе, тап шул Яшинскийгә оҡшатып, төкөрөк сәсеп янап, ауыр ҡайғынан башы эйелгән кешеләр өҫтөнә һис бер йылылыҡ сағылмаған буш, яңғырауыҡлы, ҡабарынҡы һүҙҙәр яуҙырып бик оҙаҡ лыҡылдап торҙо Әбделғасим.

Емеш тағы ҡаты аптыранып ағаһына ҡарап алды. Ә Иштуған был боҙоҡ эсте һөйләүҙән туҡтатыу түгел, хатта бик бирелеп, кинәнеп тыңлап тора һымаҡ... Башҡалар ҙа иғтибар менән тыңлай кеүек... Ғәжәп...

«Бәлки, яңылышамдыр? Бәлки, был төптө бүтән кешелер, арыу әҙәмдер...» — тип үҙен тынысландырырға тырышып ҡарауы ла ярҙам итмәне Емешкә. Ҡиреһенсә: «Юҡ, был кеше бушҡа ғына өлтөрәп йөрөмәй. Бушҡа ғына кешенең күҙенә инеп килмәй ул! Эсе боҙоҡ уның. Ағайыма аңлатырға кәрәк!»— тигән ҡырҡа фекергә генә килде.

* * *

Хамматты күмгән көндө Иштуған кискә хәтле Бибештәрҙә ҡалды. Емеш тә, йәйге каникулды Илсеғолда уҙғарыу ниәте менән, Бибештәргә ҡайтҡайны. Шуға ла ахыры ул бөгөн, ағаһы китмәҫ элек, уның менән бик етди итеп һөйләшергә, аңлашырға теләй ине. Йәненә тынғы

бирмәгән баяғы шөбһәле уйын һөйләп бирергә кәрәк ине уға. Ләкин ағаһының аулаҡ ваҡытын тура килтерә алмай йөҙәне Емеш. Ауылдаштарҙың әле береһе, әле икенсеһе Иштуған янына төрлө һорау менән инеп-сығып ҡына тора. Улар сыҡһа, ҡайғынан тамам аптыранып, бөгөлөп төшкән еҙнәһе Хисбулланы йыуатыуға, Бибеш менән, балалары менән һөйләшеүгә керешеп китә. Шулай итеп, эңер ҡараңғыһы төшкәс кенә Емешкә ағаһы менән икәүҙән-икәү ҡалырға тура килде: Бибеш һыйыр һауыу, киске аш әҙерләү кеүек хужалыҡ эштәренә тотондо. Хисбулла ла, илай-һыҡтай, уға булышты. Шул саҡ Емеш ҡото осоп, югереп, ағаһы янына барып баҫты.

— Ағай, һин уға ышанма! Уның таҫма теленә алданма! Мин тоям... Ул һине лә... шулай... һәләк итер...

Иштуған был юлы уны иғтибарлап тыңланы, оҙаҡ ҡына уйланып торғас, әкрен генә итеп:

— Дөрөҫ әйтәһең һин, Емеш,— тип ҡуйҙы.— Дөрөҫ тояһың. Хаммат ағай ҙа шулай тойған... Әммә, бәхетһеҙлеккә ҡаршы, дошман алдан өлгөргән... Эйе, дошман барыбыҙҙан да алда өлгөрҙө...— тип көрһөндө лә, кеҫәһенән бер дәфтәр алып, Емешкә һондо.— Мә, уҡып ҡара, таныш, совет власенең дошмандарын фашлау, уларҙың мәкерле пландарын өҙөү өсөн Хаммат ағай ниндәй ныҡ әҙерләнгән... Был уның бюрола һөйләргә тейешле докллады...

Иштуған костюменең эске кеҫәһенән кескәй генә блокнот алып, уны ла Емешкә бирҙе:— Хаммат ағайҙың өҫтәл тартмаһынан алдым. Бында бөтәһе лә яҙылған...— тине, әсенеп.— Саҡ ҡына өлгөрмәй ҡалды шул!.. Үлер төндөң иртәгеһенә райком бюроһында Әбделғасимдәр шайкаһының йөҙөн тамам аса ине бит ул!.. Хәҙер инде был яҙмалар беҙгә Хаммат ағайҙан ҡомартҡы... васыят... булып ҡалды.

Эре, баҙыҡ хәрефтәр менән тигеҙ, асыҡ итеп яҙылған был яҙмаларҙан Емеш йәшле күҙҙәрен ала алмай бик оҙаҡ тынып ултырҙы.

Хаммат тәүҙә кулак элементтәрҙең волостә ниндәй енәйәттәр эшләүен, ниндәй отҡо таратыуын берәм-берәм яҙып сыҡҡан. Унан: Хөснөлхаҡ, Әхмәтша, Шымбай карттарҙың эҙенә нисек төшөүен, уларҙың ниндәй енәйәткә йыйынған саҡта ҡулға алыныуын яҙған да: «Әбделмөслимов — бына уларҙың төп тамыры ҡайҙа ятырға тейеш!»—тигән һүҙҙең аҫтына ҡалын итеп һыҙып ҡуйған.

Бынан ары Әбделмөслимовтың — хәйлә-мәкер, яуызлыҡ юлдары менән кооперация башына үрләп алған кулаҡтың — йөҙөн аса торған факттарҙы теҙеп киткән.

Шулай итеп һуңғы ҡаты алышҡа ентекләп әҙерләнгән...

Емеш был ҡәҙерле яҙмаларҙы тағы бер аҙ ҡулында тотоп уйланып торҙо ла, ағаһына туп-тура ҡарап:

— Хәҙер һин ул кешене ни эшләтергә уйлайһың?— тип һораны.— Беҙгә ҡайғынан ебеп-юғалып ҡалырға ярамай ҙабаһа хәҙер!

— Уныһы дөрөҫ. Ә һин нимә эшләтер инең?— тине Иштуған. Ошо минутта айырата етди, талапсан һымаҡ булып киткән һеңлеһенә оҙаҡ, һынаулы ҡарап алды: «Эйе, Емеш үҫкән, үҙгәргән... Ҡәҙәшсе лә, көрәшсе лә булырлыҡ кеше етешкән...» — Ниндәй кәңәш бирер инең?— тип ҡабатланы.

— Мин һис кисекмәҫтән Әбделмөслимовты ҡулға алыр инем,— тине Емеш, ҡырҡыу итеп.— Бөгөндән, хәҙерҙән үк!.. Ул тағы берәй яуызлыҡ ойоштороп өлгөрмәҫ элек!— тип ашығып теҙҙе.

Сөнки ул был минутта Хамматтың һәләкәтенә бөтәһенән элек Әбделғасим ғәйепле булыуға көн кеүек ышана, ағаһы өсөн дә хафалана башлағайны.

— Һай, ҡалай ҡыҙыу һин, Емеш!— тип көлә биреп ҡуйҙы Иштуған.— Ә быға дошман үтә мәкерле...

— «Уйлы — уйлап ултырғансы, уйһыҙ эшен бөтөргән!»— тиҙәр түгелме һуң, ағай?— тип Емеш ярһып ҡаршы төштө.— Хәҙер был мәҡәлде: «Яҡшы кеше, тағы ниндәй яҡшылыҡ эшләйем икән, тип уйлап алғансы — яман кеше енәйәттәр эшләп өлгөрә!»— тип үҙгәрткәндә һәйбәт булыр ине,— тип өҫтәне. Унан, ағаһына артабан да үтә һаҡ эш итергә тырышыуҙың хәтәрлеген тамам төшөндөрөргә теләп, тағы ниҙәрҙер әйтмәксе булып ауыҙ асҡайны ла, кемдер тыштан сәләм бирҙе:

— Әссәләмәғәләйкүм! Инергә яраймы?

Был Мөҡим ине.

— Бәй, һин ҡайҙан?— тип Иштуған уға аптырап ҡараны.— Юғалған мал кире ҡайта тигәндәй... Йә, һөйләп ебәр, Мөҡим ағай, ҡайҙарҙа йөрөп ҡайттың?

— Йөрөлдө инде шунда...— тип Мөҡим ҡул ғына һелтәп ҡуйҙы.— Иҫәр баш аяҡҡа ял бирмәй, тиҙәр бит... Йөрөмәгән ер ҡалманы...

— Шунан?

— Ширкәткә кире ҡайтырға ине...
— Ширкәт түгел, ағай, колхоз хәҙер...
— Ну, шул колхозға тим инде... Рөхсәт итһәгеҙ... Мин ни былай яман юлда йөрөмәнем дә ул... Анауы Әхмәтшалар, Шымбайҙар ни был колхоз тигән нәмә әҙәмде аҙҙыра, юлдан яҙҙыра торған нәмә ул тип бигерәк ҡурҡытып һөйләгәс, сығып кителгәйне шул... Етмәһә, сәүиттең үҙ нәсәлниктәре лә төрлөсә һөйләп торғас...
— Нисек төрлөсә? Ниндәй начальник?— тип һағайып һораны Иштуған.— Ҡайҙа һөйләне?
— Шул саҡта инде,— тине Мөҡим һаман яй, бошонҡо тауыш менән.— Мин шул китеүҙән алда ғаиләгә аҙыраҡ аҙыҡ-түлек әҙерләп ҡалдырайым тип ҡатындың туған-ырыуҙарына Ишем ауылына барғылап ҡайтҡайным. Шунда бер табында төптө ят ике кешегә юлыҡтым...— тип хәтерләп алды Мөҡим.— Улар Кананикульскийҙән ағас әҙерләү эше менән килгән вәкилдәр ине. Береһе рус, икенсеһе мосолман... Шулар ҙа бит: «Башҡортҡа колхоз нимәгә кәрәк ул?» — тип һөйләп ултырҙылар: «Башҡорт ул — тәбиғәт балаһы. Әйҙә, элеккесә мал аҫырап, ҡымыҙ яһап, йәйләүендә йөрөй бирһен!..» — тип ебәрәләр хатта...
— Ә һин уларҙы ысынлап та совет работниктәре тип ышандыңмы? — тип уның һүҙен бүлде Иштуған. — Документтәрен ҡараныңмы ни?
— БыҒаса кеше менән документенә ҡарап һөйләшкән бармы ни?.. Ғәҙәттәгесә, улар әйтте, мин ышандым...
— Шулай шул... Беҙ сабый кеүек бер ҡатлы... ышаныусан... Дошман быны бик яҡшы белә... Их, ағай-ағай... Һин шул саҡта уҡ быны беҙгә килеп әйтһәң, беҙ бәлки Хаммат ағайҙы ла юғалтмаған булыр инек... Иштуған әсенеп, ауыр көрһөнөп ҡуйҙы.— Йә, шунан артабан нимә булды. Тағы кемдәр менән осраштың?
— Шунан, Аҡмырҙала үҙемдең бер алыҫ туғанда ултырған сағымда, тағы бер сәүит нәсәлниге килеп инде. Быныһы һөнәрселек кооперацияһынан икән... Шунда эшләнгән табаҡ-һауыт, һәнәк-көрәк кеүек нәмәләрҙе һатыу эше менән ауыл һайын йөрөп ятам, тине. Хатта танытмаһын да күрһәтте:— Мә, ышанмаһаң, ҡара, ти. Ысын шулай, вәкил икән. Танытмаһында түңәрәк мисәте лә бар...
— Шунан һуң ул начальник һиңә нимә әйтте?— Ҡайғылы йылмайып ҡуйҙы Иштуған.— Ул да советҡа ҡаршы һүҙ һөйләнеме?

— Улмы?— Мөҡим әҙ генә хәтерләп алды.— Ул ни әллә ни оҙаҡ һөйләшмәне. Ашыға ине:— Һин Илсеғолдан тигәс килеп индем әле. Былай булғас, мин унда барып тормаҫҡа, кәрәк һүҙемде һинең аша әйтеп ебәрергә генә булдым, ти...

— Әйттеме һуң?

— Әйтмәй ни, әйтте. Сәүит хөкүмәте колхоздар төҙөүҙе туҡтатырға булған икән. Бөгөн гәзиттә уҡыным. Шуны ауылығыҙҙың халҡына еткер, колхозға инеп аҙапланмаһындар,— тине.

— Был һүҙҙе Илсеғолға еткерҙеңме инде?— тип текләп ҡараны Иштуған.— Халыҡ һиңә нимә тине?

— Еткермәнем,— тине Мөҡим, өмөтһөҙ ҡул һелтәп.— Хатта Нәғимә еңгәңә лә әйтмәнем. Сәүиттең үҙ нәсәлниктәре лә былай төрлөсә һөйләп торғас, рәт булмаҫ бында, тинем дә, атымды менеп сыҡтым да киттем...

— Алай икән... Шулай анһат ҡына хәл иттем дә ҡуйҙым тиген, ә?

Мөҡим, Иштуғандың һуңғы һүҙен ишетмәгән дә һымаҡ, эсендә янғанын һөйләй бирҙе.

— Рудниктә эшләнем. Атым менән руда ташып йөрөнөм... Дөрөҫ, унда ике ҡулыңа бер эш. Бындағы кеүек төрлө һүҙ менән баш ҡаңғыртыусылар ҙа юҡ тиерлек... Тик ғаиләңдән ситтә ҡыйын... Етмәһә, Нәғимә еңгәң, миңә зимак ир кәрәкмәй, тип әйтеп тә ебәрә. Үҙем колхозда эшләрмен дә, йәшәрмен дә... Балаларҙы ла кәм-хур итмәм, ти... Үҙең беләһең, минең Нәғимәм бер һүҙле бисә бит ул. Әйткән икән, минең арттан эйәреп сығып китмәй инде ул...

Мөҡим битенән ағып киткән күҙ йәшен ҡулының һырты менән тиҙ генә һөртөп алды ла тағы ла ҡайғылыраҡ тауыш менән:

— Иштуған, мырҙа,— тип ҡуйҙы.— Мин бит уны, бисәмде, яратам... Балаларҙы ла... Уларһыҙ йәшәй алмайым... Миңә ҡайтырға, колхозға... Үҙ ғаиләмә ҡайтырға рөхсәт итегеҙ!..

Иштуған оҙаҡ һәм шикләнеп уға текләп ултырҙы: «Ысын күңелдән илаймы? Әллә яман уй менән «тәүбә» итәме? Улай булмаҫҡа кәрәк ине... Элекке батрак бит... Намыҫлы, эшсән кеше ине... Шулай ҙа совет дошмандары менән осрашҡан... Һөйләшкән... ышанған... Бынан ары ул нисек булыр? Үҙен ҡалай тотор? Аһ, ҡайһылай ҡатмарлы әле был тормош... Ҡайһылай ауыр кешене

аңлауы... Хатта бынауындай иң ябай, бер ҡатлы кешене лә... Сөнки уны тағы шулай, дошман отҡоһона бирелеп ҡуймаç тип ышанып буламы ни?!. Ана бит ул ни ҡыланып сығып китте... Ә мин уны хөрмәт итә, ышана инем бит...»

— Нишләргә һуң инде миңә?— тип Мөҡим Иштуғандың уйын бүлде.— Мырҙа, һин Әхәткә әйтеп кит әле... Ситкә тибәрмәһен...

Иштуған уның тәтәйгә алданып эш боҙған сабый шикелле йыуаш, йонсоу йөҙөнә әсенеп ҡарап алды. Шулай ҙа ҡоро ғына тауыш менән:

— Ағай, һиңә был үтенес менән колхоз идараһына мөрәжәғәт итергә кәрәк, миңә түгел,— тип яуап бирҙе.— Колхозсылар йыйылышы ғына хәл итә ала быңдай мәсьәләне. Улар хужа. Һин бит элекке батрак. Әгәр Советкә ҡаршы эшең булмаһа, ғәфү итерҙәр,— тип тә өçтәне.

— Кире алырҙармы?— тип өмөтләнеп тороп баçты Мөҡим.— Һин дә әйт әле, мырҙа, уларға... Ситкә тибәрмәһендәр.

— Ниәтең саф булһа, ағай, һине кем ситкә тибәрһен!— тип көтмәгәндә Емеш тә һүҙгә ҡатнашып китте.— Колхозда тырышып эшләһәң... Хеҙмәттә үҙеңде күрһәтһәң...— тип өлкәндәрсә һәр һүҙҙе уйлап, үлсәп дауам итте.— Тормошта төрлө саҡ була... Хаталанған саҡтар ҙа... Сөнки кеше бит ул фәрештә түгел... Тик үҙ хатаңды ваҡытында күрергә, төҙәтә белергә генә кәрәк, минеңсә.

Иштуған ҡарындашының һүҙен ҡыҙыҡһынып тыңланы ла күңеленән генә баш сайҡап ҡуйҙы: «Бына һиңә Емеш!.. Шулай ҙа ул йәшенән алдараҡ уйсан булып киткән түгелме?!»

Ә Мөҡим:.

— Үәт, рәхмәт. Емеш ҡарындаш мине аңлап та алды, исмаһам!— тип, ҡыуанып китте.— Рәхмәт яуһын һиңә, ҡарындаш, был яҡшы һүҙең өсөн. Әлбиттә, мин бындай иçәрлекте ҡабатламаясаҡмын. Мине был иçәр эшем өсөн тормош бик ҡаты дөмбәçләне бит инде. Аңлатты, ҡабатламаçлыҡ итте...

— Шулай, ағай, идарага ғариза бир. Йә, хуш.— Иштуған ашығып тәҙрәгә ҡараны. Кемделер сабырһыҙланып көтә башланы. Тышта был саҡта эңер ҡараңғыһы тағы ла ҡуйырғайны.

Мөҡим китеп оҙаҡ та тормай, Иштуған янына Әхәт, Байрас, Алеша килеп инде. Емеш Бибеш апаһына киске

аш әҙерләшергә аласыҡҡа сыҡты. Аштан һуң ирҙәр ат эйәрләп юлға сығырға әҙерләнделәр. Емеш бер ситтә моңайып, тынып ҡарап торҙо. Байрас уның янына килде, иплән кенә сәстәренән һыйпап алды. Күҙҙәренә үтә ҡайғылы, моңһоу итеп ҡарап:

— Емеш, һөйөклөм... — тип әкрен генә иркәләп өндәште. — Мин хәҙергә волость үҙәгендә йәшәрмен... Шулай кәрәк, аңлайһыңмы?.. Дошмандың эҙенә төшөргә, тоторға, ғәҙел хөкөмгә тарттырырға кәрәк. Беҙ хәҙер бөтәбеҙ ҙә ошо эшкә саҡырылған кеше тип исәпләйбеҙ үҙебеҙҙе. Ошо эшкә мобилизовать ителгән... Ә һин хафаланма... Ныҡ бул... Минең бахыр әсәйемде лә онотма... Ҡайғылы көнөндә ул яңғыҙ ҡала... Минһеҙ. Аңлайһыңмы, Емеш?!

Емешкә ризалығын белдереп өнһөҙ-һүҙһеҙ баш ҡағып тороуҙан башҡа бер ни ҙә ҡалманы. Ни өсөндөр уның бөтә ҡыйыулығы, ҡатылығы ошо минутта ҡайҙалыр осоп юҡ булды. Хәҙер уға ҡайғылы, моңло ауыр тойғоларҙан башҡа донъяла бер нәмә лә ҡалмаған кеүек тойолдо. Ҡысҡырып-ҡысҡырып илағыһы, зарланғыһы ғына килде уның хәҙер. Эйе, иң-иң һәйбәт кешенең, ул тәрән хөрмәт иткән Хаммат ағайҙың шулай ваҡытһыҙ, шәфҡәтһеҙ өҙөлгән ғүмере өсөн дә, йәне-йөрәге менән өҙөлөп һөйгән Байрасының йөрәгенә ҡара ҡан һауҙырған, йөҙөнән дауылһыҙ ғорур ҡыуанысты, йән иреткес иркә йылмайыуҙы тартып алған шәфҡәтһеҙ яҙмыш өсөн дә, үҙе ҡыҙ кеше булған өсөн генә атҡа атланып, дошманды эҙәрләп китеүҙән мәхрүм булып, йән һөйгәненән айырылып ҡалырға мәжбүр булғанға ғәрләнеп тә, әсенеп тә үкһеп-үкһеп илағыһы килде. Ә бит уның да йөрәге көрәш, алыш-тартыш теләп, изге үскә атлығып ярһып тибә ләбаһа! Йә, кем аңлай шуны?!

## XV

Һуңғы йылдарҙа волостә йышайып киткән яндырыу, емереү, ҡотҡо таратыу факттарына таянып, Хамматтың дошман әле ойошоу осорон яңы башлаған, берҙәм хужалыҡтарға ҡаршы актив һөжүмгә күсергә йыйына тигән һығымтаға килеүе һәм уларҙың был яуыз ниәтен өҙөргә әҙерләнеүе ошондай фажиғә менән бөткәс, Иштуғандар һаҡ һәм берҙәм эш алып барырға булдылар. Дошманды ҡасырмаҫ һәм өркөтмәҫ өсөн, Иштуған да, во-

лость милиция начальниге Алексеев тә, көндөҙ бер ни булмаған кеүек көндәлек эш менән шөғөлләнеп, үҙ урындарында ултырҙылар. Әхәт волостәге хәлде белдергән һәм ГПУ-нан ашығыс ярҙам һораған пакет менән шул төндә үк кантон үҙәгенә сапты. Байрас менән Алеша тирә-яҡта күҙәтеү эше алып барырға, бигерәк тә Әбделғасимде күҙҙән яҙлыҡтырмаҫҡа, әгәр берәй шикле эше һиҙелһә, кисекмәй Иштуғанға йәки Алексеевкә хәбәр итергә тейеш булдылар.

Ҡантон үҙәге был волостән йөҙ километр ерҙә, тау-таш, ҡара урман араһында ята ине. Әхәт унда ҡасан барып, хәбәр итеп, унан ҡасан әйләнеп килгәнсе, бер нисә көн ваҡыт уҙып китте. Был көндәрҙә Әбделмөслимов волкомға — Иштуған янына әленән-әле йомош табып инеп кенә торҙо:

— Иптәш Батыров, мәрхүм, ошо арала бюрола минең отчетты тыңламаҡсы ине... Был хаҡта һеҙгә лә әйткәндер, тип уйлайым...

— Юҡ, иптәш Әбделмөслимов, мин быны һинән тәүләп ишетәм. Күрәһең, Хаммат ағай уны миңә әйтергә өлгөрмәгәндер. Үҙең беләһең, мин бит әле яңы кеше. Хатта әле волисполком эше менән дә кәрәгенсә танышып бөткән юҡ. Волком эше хаҡында һөйләшә, уйлаша башларға ҡайҙа ти ул...

— Йә инде... Былай булғас, миңә нисек итергә һуң хәҙер?— тип, тамам аптыранып, хатта бошоноп киткән булды Әбделғасим.— Докладты ла әҙерләп ҡуйғайным... Миңә бит шулай ҙа белергә ине: ҡасан тыңларһығыҙ икән минең докладты?

Иштуған да һаман шул ябай, хатта ғәмһеҙ тауыш менән яуапланы:

— Әбделғасим ағай, үҙең беләһең, мин бында ваҡытлы кеше. Һеҙгә, моғайын, яңы секретарҙе көтөргә тура килер. Мин бит кооперация эшендә әлегә бер ни ҙә белмәйем, ул эшкә төшөнмәйем тип әйтерлек. Үҙең уйлап ҡара, шулай булғас, мин ҡалай итеп шундай ҙур, политик мәсьәләне бюрола тыңлап маташайым. Нимә өйрәтә алам мин һиңә?!

Әбделғасим, Иштуғандың күңелендә ятҡанды үтә күрергә тырышып, секерәйеп текләне. Әммә төплө бер фекергә килә алманы. Шулай ҙа, һәләк булған дуҫ, иптәш, өҙөлөп ҡалған эш өсөн ысын күңелдән бошонған, ҡайғырған кеше ролен уйнауын дауам итте.

— Шулай тиһең, ә? Вакытлы тиһең, ә? Кем булыр икән һуң иптәш Батыров урынына? Кем булһа ла, уның кеүек яҡшы, боевой коммунист булмаç шул. Һай, нәп кеше ине бит ирең! Әрәм иттеләр, әрәм...— тип һыҙлапып, хатта күҙ йәштәрен дә түккеләп алды.— Минеңсә, уны шул иçеректәр генә һәләк итте буғай. Биктимерҙең эсенән врачтар бер батман араҡы алғандар икән тип һөйләйҙәр бит... Шул иçеректәр үҙ-ара һуғышып йөрөгәндә осрап, Батыров иптәш яҡшы күңелле кеше ине, уларҙы айырам тип араларына барып инеп һәләк булғандыр, тип һөйләй халыҡ. Халыҡ һүҙе дөрөç килә торған. Ул иçерек хулигандың икенсеһен, Биктимергә бысаҡ ҡаҙағанын, тиҙерәк эҙләп табырға ине бит, иптәш Ирьегетов! Һин быға нисек ҡарайһың, иптәш Ирьегетов?

...«Иптәш... иптәш... тип, тутыйғош кеүек туҡылдап тора... Бер саҡ Хаммат ағай уның иптәш һүҙе урынына «тәҡсир», «тәҡсир» тип тә тәтелдәп иçке буржуаз зыялылар һүҙен көсләп яңы кеше теленә индерергә тырышып йөҙәтеүен әйткәйне...» — тип йәне көйөп уйлап алды Иштуған. Әммә һаман баяғыса, йомшаҡ, ябай итеп яуап бирҙе:

— Мин дә быны шул иçеректәр, хулигандар эше булғандыр, тип уйлайым. Юҡһа, Хаммат ағайҙың ниндәй дошманы булһын!

Иптәш Алексеев тә, күрәһең, врач менән следователдең: «Иçерек хулигандар ҡулынан осраҡлы рәүештә һәләк булған»,— тип биргән справкаһы менән килешкәндәр. Шуға хулигандың икенсеһен бик үк тырышып эҙләп тороуҙы ла тейеш тапмайҙыр. Иçерек ҡайҙа китер тиһең, үҙе үк килеп ҡабыр әле, тиҙер. Ә инде миңә килгәндә, бюрола бер үҙемә ике эште йөкләтеп ҡуйғас... ҡайһыһына була алмай аптыранып ултырам әле. Бына бесән дә етә, арыш өлгөрә. Халыҡты эшкә ойоштororға кәрәк. Эйе, бөгөн бына заем таратыу эше менән танышып ултырам. Үҙең беләһең, мин бит кисә генә тигәндәй уҡытыусы инем... Бында миңә бөтәһе лә яңы, таныш түгел эштәр... Күп уҡырға, өйрәнергә кәрәк...

Ахыр килеп Әбделғасим үҙенең «гөнаһһыҙлығына» тамам ышанып, тынысланып, күңелдән генә мыйыҡты эре бороп сығып китте: «Танауы еç һиҙмәй... йәш әле... Былар шулай аптыранып, аңҡы-тиңке булып ултырған саҡта башҡараһы эштәрҙе башҡарып ҡалмаһам, мин төптө алйот булырмын...»

Ошо көндәрҙә осоавиахим ағзалары өсөн комсомол волкомына килгән боевой мылтыҡтар ҙа уға тынғы бирмәй ине. «Улар минең ҡулға төшөргә тейеш!» — тигән ҡаты ҡарарға килде ул хәҙер, һәм ошо төндә ат эйәрләп Мөслимгә ҡарай сапты. Унда, үҙенең йортонда, уны бер төркөм башкиҫәрҙәре көтөп ята ине. Әбделғасим шуларҙы ойоштороп, осоавиахим мылтыҡтарын баҫып алырға, унан волостә генә түгел, бөтә тирә-яҡта совет ҡоролошона тынғы бирмәҫкә иҫәп тота ине хәҙер: «Ҡулына ҡорал бирергә... Башлап ҡына ебәрергә.... Наҙан халыҡ аръяғын үҙе бөлә ул...» — тип ирәүән хыялдарға бирелеп план ҡора-ҡора ҡайтты ул. Шундай яуыз уйҙар менән үтә мәшғүл булғанға, йәки үҙенә шик-шөбһә төшмәүгә артыҡ ышанғанға, Әбделғасим үҙ артынса юлға сыҡҡан ике һыбайлыны абайламаны. Арҡаларына боевой мылтыҡ аҫҡан Байрас менән Алешаның малды, кешене тауҙан-тауға күреп өйрәнгән ҡарсыға күҙҙәренә уны бик яҡындан күҙәтеүҙең кәрәге лә юҡ ине. Ләкин ауылға етә-килә эш ауырлашты. Унан бик нык артҡа ҡалырға ярамай. Ҡайһы өйгә ингәнен күрмәй ҡалыуың бар. Ә һыбай яҡынлашһаң, ат тояғы тауышын ишетер. Ни эшләргә? Егеттәр әҙ генә туҡтап, кәңәшеп алды. Унан Байрас атының теҙгенен дуҫына тотторҙо ла, бесәй кеүек йоп-йомшаҡ баҫырға тырышып, уның артынан йәйәү эйәрҙе:

— Һин ошонда көт. Мин, ҡайһы өйгә ингәнен белгәс тә, әйләнеп килермен...

— Һаҡ бул! — тип иҫкәртеп ҡалды Алеша. — Кем менән эш итеүеңде онотма!

Әбделғасим дә тауыш-тынһыҙ ғына ҡайтып инергә теләптер, күрәһең, атын бик яй ғына атлатып бара ине.

Шулай улар береһе һыбай, урам уртаһынан, икенсеһе йәйәү, ҡоймаларға һырынып, ауыл буйлап оҙаҡ ҡына барҙылар. Ахыр Әбделғасим ауыл уртаһындағы матур, бейек йорт алдында эйәрҙән төштө, тирә-яҡҡа ҡаранып, оҙаҡ ҡына тыңлап торҙо. Унан тауыш-тынһыҙ ғына асылып киткән ҡапҡанан инеп юғалды. Эстә иренеп кенә бурҙай шыңшыған, ат бышҡырған тауыш ишетелеп ҡалды. Ләкин һис бер һөйләшеүсе, хатта мөңгөрҙәшеүсе лә булманы. Тәҙрәләрҙә ут та күренмәне. Ҡалын имән ҡоймалар ҙа, бейек ҡапҡалар ҙа йөйһөҙ эшләнгән кеүек нык һәм тын ине.

Байрас үҙен түҙемһеҙлек менән көтөп торған Алеша янына тыны бөтөп югереп килеп етте.

— Йә, нисек булды? — тип, хәүефләнеп ҡаршы алды уны Алеша. — Эҙенә төшә алдыңмы?

— Һин, Алеша, бар, волоскә сап, — тине Байрас, үтә ҡабаланып. — Мин уны артабан күҙәтәм... Һеҙ килеп еткәнсе унан күҙ яҙлыҡтырмам... Ишетәһеңме, уны бөгөн ҡулдан ысҡындырмаҫҡа кәрәк! Йәһәт бул, дуҫ! Минең ат ошонда бәйле ҡалһын!

Байрас һүҙен әйтеп тә бөттө, шунда уҡ кире лә югерҙе. Алешаның йөрәге сабырһыҙ тулап китте. Ҡурҡыныслы йыртҡыс өңө алдында яңғыҙ ҡалған дуҫы өсөн хафаланды ул. Ә Байрас, артына әйләнеп тә ҡарамай, ҡараңғыға инеп юғалды.

Алеша күҙ асып йомған арала кире әйләнеп сапты:

— Йәһәтерәк ярҙам алып килергә кәрәк! Юҡһа, кем белә...

* * *

Йәйге ҡыҫҡа төндөң таңы ла яҡынлашып килә. Байрас, ишек алдына инеп тикшереү, тәҙрәнән үрелеп өй эсен ҡарау ниәте менән янып, йорт янында ҡат-ҡат әйләнеп ҡараһа ла булманы. Әйтерһең, бейек ҡоймалар, уҫал бурҙайҙар һаҡлауына маһайып, ҡымшанмай ял итә ине был йорт. «Их, йәһәтерәк килеп етһендәр ине! Сығып ысҡыныуҙары бар бит, яуыздарҙың!» — тип, сабырһыҙланып көттө Байрас. Уға бында Әбделғасим яңғыҙы түгелдер, уның бөтә шайкаһы ошонда йәшенеп ятаһыр һымаҡ тойола башланы. Ә минуттар йылдай оҙон һәм яй үтте. Бына таң ҡараңғыһы төштө. Әбделғасимдең йорто артындағы йылға туғайында әлегәсә сыр-сыу килеп сутылдашҡан ҡоштар ҙа ниҙер тыңлағандай туҡтап ҡалды. Байрастың ҡуйы сәстәрен, үлән тип белеп ахыры, ысыҡ ынйылары һырып алды. Ҡаштары, керпектәре еүешләнде. Бәлки ысыҡтан түгелдер, артыҡ борсолоп, сабырһыҙланып көтөүҙән көс тирҙәре сығып шулай ҡаштарына, сәстәренә ысыҡ булып ҡуналарҙыр...

«Туҡта, эстә бик әкрен генә ишек асылды түгелме? Мөңгөрҙәшкән һымаҡ та булалар шикелле... Әллә үҙемдең йөрәгем шулай ярышта ярһыған ат кеүек дөпөлдәйме?!»

Байрас хатта тын алыуын да туҡтатып ҡатып ҡалды. «Юҡ, был йөрәк ҡағыуы түгел... Ҡемдәрҙер йөрөй... Эйе,

ат бышҡырған тауыш... Тояҡ тауышы... югән сылтырауы... — тип әйтерһең унының ҡолағына кемдер шыбырҙап әйтеп торҙо. — Бына кемдер ҡапҡаға яҡынлаша... Бер, ике... өс, ат атлауы шикелле. Эйе, ҡапҡаны асып маташа... Инде ни эшләргә?! Ҡулдан ысҡыналар бит!..»

Ул саяланып ҡойманан арыраҡ һикерҙе лә көслө, ҡалын тауыш менән:

— Әй, кулактар, урынығыҙҙан ҡуҙғалмағыҙ! Йорт ҡамалған! — тип ҡысҡырҙы. Шул ыңғайға бер нисә тапҡыр һауаға атып та ебәрҙе. — Ҡаршылыҡ күрһәтеү урынһыҙ! Үҙ ирке менән бирелгәндең закон алдында рәхимлек көтөргә урыны ҡала! — тип тә иҫкәртте.

Эстә тып-тын булып ҡалдылар. «Инде нимә эшләргә? Сыҡһалар, атып йығып бөтөргә генә тура килә...»

Байрас, ҡапҡаға мылтыҡ тоҫҡап, ҡаршы яҡтағы канау буйына ятты.

«Эйе, сыҡҡан береһен атып йығыуҙан башҡа сара ҡалманы... Беҙҙекеләр һаман килмәйҙәр бит...»

Ләкин уға дошман менән яңғыҙ алышырға тура килмәне. Тап шул саҡта ауылға бер төркөм һыбайлылар килеп инде. Күҙ асып йомған арала йортто ҡамап алды. Был кантон үҙәгенән ебәрелгән ҡоралды көстәргә ҡушылған Иштуған, Әхәт, Алеша, Алексеев ине. Улар ҙа боевой мылтыҡтар менән ҡоралланып алғайнылар.

Отряд командире бая Байрас әйткән һүҙҙе ҡабатланы.

— Йорт ҡамалған. Ҡаршылыҡ күрһәтеү файҙаһыҙ!

Дошман, күрәһең, быны үҙе лә аңлай ине. Ҡапҡа асылды. Әбделғасим ҡунаҡ ҡаршылағандай:

— Рәхим итегеҙ, тәҡсир! — тип, мыҫҡыллы йылмайып, ҡапҡаны үҙе асты.

Ҡапҡа эсендә элекке урядник Алексейҙең улы Митрофан менән кулак Сергей Хитровтың иҫерек Апанасы ла тора ине. Уларҙың граждандар һуғышы йылдарынан бирле ҡасып-боҫоп йөрөп тә, волостә халыҡҡа ҡаршы әллә ни хәтле яуызлыҡтар эшләп тә ошоғаса тотолмай йәшәй алыуының сере ана ҡайҙа ятҡан икән! Әбделмөслимов аҫыраған икән уларҙы!

Тентеү оҙаҡ барҙы. Таң атып, тирә-яҡты зәңгәр нур баҫҡанда, ялан кәртәнән, йәнәһе, баҫыуға сығарыр өсөн өйөлгән тиреҫ аҫтынан, кейеҙгә төрөп, йәшниккә һалып йәшерелгән биш-алты мылтыҡ табылды. Ҡулы артҡа шаҡарып бәйләнһә лә, үҙен ғәҙәттәгенән ҡыйыу ҙа, көслө

лә итеп тоторга тырышҡан Әбделмөслимов ауыҙын бер яҡҡа ҡыйшайтып, мыҫҡыллы йылмайып ҡуйҙы.

— Мылтыҡтар аҙыраҡ булды. Бөгөн төндә шуны күбәйтеңкерәргә иҫәп бар ине лә, барып сыҡманы, тәҡсир...

— Оятһыҙ! — тине Иштуған, ерәнеп. — Ҡара йөрәк! Исмаһам, өндәшмәй торор инең!

Әбделғасим бер ни ҙә булмаған кеүек тағы ла мыҫҡыллыраҡ йылмайҙы:

— Ә һин, мөғәллим, Хаммат батырҙан хәйләкәрерәк булып сыҡтың! Көтмәгәйнем... Ниндәйҙер бер ахмаҡтың минең эҙгә төшә алыуын башыма ла килтермәгәйнем...

— Етер һиңә, кулак! — тип ҡысҡырҙы Байрас, сабырлығын юғалтып. — Юҡһа, күрәһеңме бынауы штыкты!?

Әбделғасим майлы ирендәрен зәһәрле йырып ҡуйҙы:

— Әҙ генә өлгөрә алмай ҡалдым... Юҡһа арт һабағығыҙҙы уҡытырға иҫәп ҙур ине... Ха-ха... штык менән ҡурҡыта! Көсөк! Үлем нимә ул? Тфү!

Ул лас итеп аяҡ аҫтына төкөрөп тапап ҡуйҙы.

— Тик алаһы үстәр генә ҡалды — шуныһы ғына үкенесле...

— Ҡарағыҙ әле, үҙ төҫөндә был әҙәм төптө иргә оҡшап китте түгелме һуң? — тип Иштуған да ихлас көлөп ҡуйҙы. — Юҡһа ни «әҙәм тиһәң юне юҡ, бүре тиһәң йөнө юҡ» тигәндәй ине бит!

— Нимәһе иргә оҡшаһын! — тип, эсеп күбенгән Апанас менән күшеккән әтәскә оҡшап ҡалған Митрофан яғына ерәнесле күҙ ташлап алды Алексеев. — Аңламайһығыҙмы ни, ул бит әле лә ана шул имәнес йәндәргә өлгө күрһәтеп маташа ғына! Их, сәхнәнән ҡыуылған артист, етәр, күп уйнаның! Давай, атла! Атлағыҙ! Урамда һеҙҙе машина көтә!

Табылған ҡоралдар ҙа машинаға тейәлде. Ҡораллы коммунистәр, комсомолецтәр төркөмө машина артынан һыбай эйәрҙе.

## XVI

...Ул көндәргә өс ай ваҡыт уҙып киткәйне инде. Үтә һуңлап килгән, етмәһә, синфи дошмандарҙың тарҡатыу эше арҡаһында тағы ла ҡатмарлы һәм ауыр шарттарҙа үткән яҙғы эш мәле әллә ҡайҙа артта ҡалды. Хәҙер «Хаммат Батыров» исемен йөрөткән Илсеғол колхозсы-

лары үтә бай уңышын йыя ине. Ер битен әленән-әле шифалы дымға туйындырып торған йәшенле ямғырҙарға ла, ямғыр арты һайын ғәҙәттәгенән дә сағыуыраҡ балҡып сыҡҡан ҡояш йылыһына ла туйымлы булды был йәй. Тәбиғәттең шундай йомарт ярҙамына берҙәм, тырыш хеҙмәт ҡушылғас, Илсеғолда ғына түгел, Оло Эйек буйлап илле-алтмыш километрға һуҙылған тотош волость ерендә лә инде ғәжәп мул уңыш өлгөрҙө. Көҙө лә рәхимле булырға оҡшай был йәйҙең. Сентябрь уртаһы етеп килә, ә ҡояш, әйтерһең, берҙәм, тырыш эшкә кинәнеп һаман баҫыу өҫтөн ташлап китә алмай, йәйгесә ҡыҙҙыра ғына.

Колхозсылар был көндәрҙә таң ҡараңғыһынан төн ҡараңғыһына хәтле баҫыуҙан ҡайтманы. Байрас менән Емеш кенә түгел, Өммөгөлсөм дә башҡаларҙан ҡалышмай эшләне.

— Ҡайғыны эш менән генә еңеп була,— тип ҡабатларға ярата ул хәҙер, моңһоу ғына уфтанып.— Эштә, кешеләр янында, әсенеү баҫылып ҡалғандай була...

Емеш, ағаһы менән еңгәһе үҙ яндарында, волостә ҡалдырырға теләһәләр ҙә, Байрасы артынан Илсеғолға, Бибеш апаһына ҡайтҡайны. Ғәҙәттә йөрәк серҙәрен кешегә белдереүҙән оялыусан ҡыҙ был юлы Байрасҡа булған мөхәббәтенән тартынып маташманы. Киреһенсә, мөмкин хәтле уның янында булырға, ҡайғыһын таратырға тырышты, уның менән бергә янды, бергә көйҙө. Емештең аҙ һүҙле, ләкин шундай һаҡ, саф хәстәрлеге, кешелекле, яҡты иғтибары Байрас менән Өммөгөлсөмгә тиңһеҙ дауа булды был көндәрҙә. Үҙе лә көнләп түгел, сәғәтләп тигәндәй үҙгәрҙе Емеш. Бығаса күңел төпкөлөндә йәшерен һаҡланған кеше һөйөүсән, кеше өсөн ысын йөрәктән янып көйөүсән изге ғәҙәте хәҙер бөтә көсө менән яҡтырып тышҡа бәреп сыҡты, уны илгәҙәк, ярҙамсыл һәм хатта ҡыйыу кешегә әйләндерҙе.

Ауыр ҡайғы Байрасты ла танымаҫлыҡ үҙгәртте. Ул үтә етди, уйсан, хатта бөтөнләй аҙ һүҙле ине хәҙер. Ябыҡты, ҡуранысланды, ҡаш араларына тәрән һыҙаттар ятты, бөтә йөҙөнә нур бөркөп, Емештең күңелен тетрәтеп ғашиҡ иттерә торған тылсымлы йылмайыуы юғалды, әйтерһең, күҙ ҡамаштырғыс аҡ тығыҙ тештәрен күрһәтмәҫкә бөтөнләй бикләп ҡуйҙы... Эйе, Байрас хәҙер уйһыҙ-ғәмһеҙ, ҡыйыу-теремек егет кенә түгел ине. Ҡайғы уның йөҙөнә ирҙәргә хас етди ҡырҡыулыҡ, холҡона тимер түҙем-

лелек өҫтәне һәм ул ошо яңы төҫөндә Емештең күңеленә тағы ла яҡыныраҡ, ҡәҙерлерәк булып китте.

Улар был йәйҙең һәр көнөн ҡырҙа эштә үткәрҙеләр, кистәрен Оло Эйек ярына барып, ҡоштар һайрауын, йылға төбөндәге ҡырсынташтарҙың серле ҡыштырҙауын тыңланылар, тик инде икеһенең дә йөрәк түрендә һаҡланған ярһыу мөхәббәттәре хаҡында ғына ауыҙ асып һүҙ һөйләшмәнеләр.

Улының өйләнергә ниәтләп ҡайтыуын хат аша алдан белгән Өммөгөлсөм был хаҡта бер нисә тапҡыр ситләтеп һүҙ ҡуҙғатып ҡараһа ла, булманы. Байрас, гүйә, әсәһенең кинәйәһен ишетмәне лә, аңламаны ла. Шуның менән Емештең күңелендә тағы ла тәрәнерәк ихтирам яуланы. Әгәр ул, шундай оло ҡайғыһын онотоп, өйләнеү хаҡында һүҙ асһа, моғайын, Емеш уны кире ҡағыр ине. Ысын, оло тойғоға тиң булмаҫ ине был ҡылыҡ.

Тик быңа уҡырға китеү хаҡында ла уның әле'булһа бер ни ҙә әйтмәүе генә ҡыҙҙың эсен бошора ине. «Нимә уйлай икән? Ваҡыт етте бит!..»— тип йыш ҡына аптырана ине ул. Сөнки Емештең уҡымай ҡалырға һис тә иҫәбе юҡ ине.

* * *

Ҡолхоз быйыл өр-яңы молотилка һатып алды. Шуға ахыры ашлыҡ һуғыу еңеләйеп кенә ҡалманы, ә иң күңелле эшкә лә әйләнде. Асылда сабыр хәрәкәтле, уйсан, йырсан күңелле, эшләүгә ҡарағанда уйлауға, фекерләүгә яратыусан Илсеғол кешеләре ғәжәп теремекләнеп, күтәренке рух менән, арыу-талыу белмәй эшләр булып китте. Ырҙын табағында иртәнән кискә тиклем уйын-көлкө, йыр, йор һүҙ аҫтында тынмаҫ эш барҙы. Ҡүрәһең, машиналар шауының тәьҫире уларға шул хәтле ҙур ине. Быңа әле лә унда ҡыҙыу эш бара. Байрас, сәмләнеп, иртәнән бирле алмашсыһыҙ молотилкаға ашлыҡ биреп тора. Емеш елгәргес әйләндерә, Заһира менән Хәсбиямал тоҡтарға бойҙай тултыра, Бибеш менән Хисбулла молотилка янына яңынан-яңы көлтәләр ташый. Әхәттең кәләше Сабира, орсоҡ кеүек өйрөлөп, эҫкерт башында тора. Ул ҡәйнеше Хәсән менән икәүләп һалам өйә... Өммөгөлсөм дә, ашлыҡ һуғыусыларға аш бешереп, сәй ҡайнатып, ырҙында югереп йөрөй. Ә ҡояш һаман йәйгесә ҡыҙҙыра, ашлыҡ һуғыусыларҙы ҡара тиргә батыра. Бит, муйын, беләктәр

генә түгел, бөтә тәнгә саң, кәбәк һырый. Әммә уға бер кемдең дә иҫе китмәй. Һауа боҙолмаҫ элек ашлыҡты йыйып, һуғып алырға кәрәк. Һәр кемдең уйы ла, көсө лә шуға юнәлгән.

Ахыр килеп бына төшкө аш ваҡыты ла етте. Ашлыҡ һуғыусылар берәм-берәм ергә ҡағып эшләнгән оҙон өҫтәл янына йыйыла башланы. Емеш:

— Сәй менән генә һыуһын ҡанмаҫ,— тип эштән туҡтау менән шишмәгә йүгереп китте. Ә инде ул әйләнеп ҡайтыуға ашлыҡ һуғыусыларҙың бөтәһе лә һөйләшә-көлөшә өҫтәл янында ултыра ине. Тирә-яҡҡа бешкән картуф, һөт, ҡатыҡ еҫе таралған. Өммөгөлсөм ашығаҡабалана ҡаҙандан бешкән йомортҡалар алып булаша, Бибеш ире менән нимә хаҡындалыр бәхәсләшә-һөйләшә уның ҙур тимер кружкаһына сәй яһай.

— Һин, еңгә, ағайымды ғына ҡайғыртма әле унда. Давай, ҡәйнештәреңде лә ҡара,— тип шаяра Хәсән.— Колхоз булғас — колхоз булһын!

— Ағайыңды дөйөмләштергәнем юҡ әле минең,— тип мәрәкәләй Бибеш тә.— Бына күреп тор, сәйҙең иң шәбен иң элек ағайыңа, унан үҙемә, иң ахырҙан һеҙгә яһайым...

Ҡыҙыу ҡояш аҫтында айырата нык ҡыҙарынып, кәбәк-һалам саңы баҫҡан ҡаҡса ерән йөҙөнән шыбаҡшып тир ағып ултырған Хисбулла өндәшмәй, мәрәкәләшеүгә һис тә иғтибар итмәй шөбөрләтеп ҡайнар сәйҙе һемерә генә бирә. Уның сабыйҙарса бер ҡатлы мөләйем йөҙөндә һаман әле тәрән һағыш сағыла. Ағаһы үлгәне бирле нык ҡына үҙгәреп, үтә лә ҡаҡсаланып киткән һымаҡ ул да... Ә йәштәр үҙҙәренә хас онотоусанлыҡ менән һаман шаяралар, йор һүҙ әйтеп, уның күңелен дә асырға тырышалар.

— Хисбулла ағай сәйгә бер тотонһа, һөйләшер әмәле ҡалмай бит уның,— ти Хәсән, һаман мәрәкәләп.— Давай, егеттәр, ағайым самауырҙы туңҡайтмаҫ элек беҙ ҙә берәй сынаяҡ эләктереп ҡалайыҡ!..

— Хәсән, мыртый күп бытылдайһың!— тип бүлдерә уны Емеш. — Беләһеңме, аҡыллы кешеләр: «Күп һүҙ китапҡа ғына яҡшы», — тип әйтеп ҡалдырғандар!

— Эй, Емеш апай, һин ҡайтып еттеңме ни? Йәһәтерәк кил, үҙ яныма ултыр. Юҡһа, картуфты ашап бөтәбеҙ. Ас ҡалаһың! — тип, инде Хәсән шаярыуҙы уға бороп ебәрҙе. — Күрәһең бит, туйыу белмәйҙәр. Бер картуфты бер юлы оҙаталар ғына!

«Әле ҡасан ғына: «Әсәй, мәмәй...» — тип илай-мыжый Шәүрәнең елкәһенә атланып йөрөгән ҙур тажмыҡ малайҙан ошондай шаян, теремек бер егет етешер тип кем уйлаған?..» — тип, кинәнеп уйлап ала Емеш.— Бөтәһенән дә шәберәк һин оҙатаһың, эйе бит, Хәсән!— тип мәрәкәләп уның янына ултыра.— Бәләкәс саҡтан шулай өйрәк кеүек һоғалан булдың бит һин!

— Ул саҡта шулай һоғалан булмаһаң, астан да үлер инең!— тип шаяра һаман Хәсән.— Ни тура килде шуны һоғоноп ҡына тере ҡалынды бит, Емеш апай! Эйе, үҙең белмәгән-күрмәгән ни бар?!

— Һин тере ҡалмаһаң, был донъяның ни йәме булыр ине,— тип тағы мәҙәкләп һүҙгә ҡатнашты Бибеш. Ул хәҙер колхозда шаян, тапҡыр телле, етеҙ, эшсән ҡуллы иң һылыу килендәрҙең береһе ине. Һөйкөмлө быжыр битле, ҡыйыу ҡарашлы үҫмер егет Хәсән дә телгә Бибештән ҡалышманы.

— Шулай булмайсы... Ошондай ҡәйнештәре булмаһа, һылыу еңгәләргә ни һан ҡалыр ине!

— Һөйлән юҡты, Хәсән! Хисбулла ағайың бер ҡуҙғалһа, үҙеңдең арҡа һөйәгеңде һындырып та ҡуйыр, ҡара!

— Ниңә арҡа һөйәген һындырырға? Еңгәләрҙең ярты матурлығы ҡәйнештеке була тигән беҙҙең борон-борондан килгән шаян йоланы белмәйме ни ул?!

— Үәт, әйтте, исмаһам!

— Ха-ха, дөрөҫтө әйтте!

— Күп ләпелдәмәгеҙ. Хисбулла һындырмаһа, мин үҙем һеҙҙең арҡа һөйәген һындырмаҫлыҡ еңгә түгел дәһә!..

— Ха-ха, был да дөрөҫ! Молодчина, Бибеш еңгә!

Шулай көлөшөү-мәрәкәләшеү, бер-береһенең күңелен күтәрергә тырышыу аҫтында төшкө ял дауам итте. Тик Емештең генә күңеле һүрелгәндән-һүрелә барҙы. Сөнки өҫтәл янында Байрас юҡ ине: «Һуңлабыраҡ килер ахыры», — тип көтһә лә булманы. Тороп китеп, эҙләп алып килергә уңайһыҙланып та, күңеле ниҙер һиҙенеп хафаланып та ул оҙаҡ ҡына тынып ултырҙы. Ахыр түҙмәне. Һыуыра-онота бер сынаяҡ ҡына сәй эсте лә:

— Туйҙым, рәхмәт,— тип тороп китте.

Байрас һалам эҫкертенә һөйәлеп газета уҡып ултыра, үҙенең ниңәлер төҫө ҡасҡан, күҙҙәрендә хатта йәш тамсылары йымылдай...

Емеш уға аптырап ҡараны.

— Байрас, әйҙә... Сәй эс!— тигән булды.

Ә Байрас:

— Мә, уҡы...— тип газетаһын уға бирҙе лә, көтмәгәндә үкһеп илап, йөҙтүбән әйләнеп ятты.

— Аһ, атайым, атайым...

Емеш быйыл йәй икенсе тапҡыр уны ошондай хәлдә күрә. Яҙ көнө ҡаланан ҡайтып төшкәс, атаһын үлем түшәгендә күргәс, шулай үкһеп илап йығылғайны... Атаһының тынһыҙ ҡалған ҡеүәтле күкрәгенә ятып туҡтай алмай үкһегәйне... Ул саҡта ла Емеш йыуатыр һүҙ тапмағайны... Әле лә... Әйтерһең, теле көрмәлде. Бер ни ҙә әйтә алманы. Байрастың ҡайғыһын яңыртып ебәргән газетаға текләп, өндәшмәй тик ултырҙы. Унда Алешаның «Халыҡ дошмандары тейешле язаһын алды» тигән мәҡәләһе баҫылғайны.

Буласаҡ юрист Алеша Әбделмөслимовтар шайкаһының ҡара эшен тикшереү, асыуҙа быйыл йәй иң актив ҡатнашлыҡ итте. Һәм ошо эштәргә йомғаҡ рәүешендә хәҙер газетаға мәҡәлә яҙғайны. Мәҡәләлә ул волком секретаре Хаммат Батыровтың халыҡ өсөн хеҙмәт менән үткән данлы ғүмере, фажиғәле һәләкәте хаҡында ғәжәп ҙур йылылыҡ менән иҫкә алған. Волостең таш клубында өлкәнән барған суд коллегияһының асыҡ суд үткәреүе, Әбделмөслимовтар шайкаһының иң яуыз башлыҡтары булған Әбделғасим, Апанас, Митрофан, Әхмәтша, Шымбай, Хөснөлхаҡ һәм башҡаларға ҡарата сығарылған ҡаты, ғәҙел хөкөмдө халыҡтың хуплап ҡаршы алыуын әйткән.

Күрәһең, ошо мәҡәлә Байрастың ҡайғыһын яңыртып ебәргән. Нисек шулай булмаһын! Әлбиттә, бөтәһе лә асылды, дошман фашланды, тейешле язаһын алды. Әммә бит Хаммат ағай юҡ инде! Уны кире ҡайтарыр, ул ҡайғыны йөрәктән алып ырғытыр сара юҡ!.. Ҡалай итәһең... Тормош шулай инде ул... Көрәш — ҡорбанһыҙ булмай...

Мәҡәләлә Емер Яшинскийгә ҡағылған әсе факттар ҙа бар ине. Емеш был урынды ҡат-ҡат күҙҙән кисерҙе. Алеша был хаҡтағы фекерен:

«Халыҡтың иң яҡшы улдарының изге ҡанына ҡулдары буялған Әбделмөслимов кеүек ҡара йөрәктәрҙең улдарына совет әҙәбиәтендә, совет матбуғатында урын булмаҫҡа тейеш! — тигән һығымта менән тамамлап ҡуйғайны.— Улар нисек кенә игеп, яңы исем аҫтына йәшеренмәһен, асылда барыбер шул булып ҡалалар. Әйтәйек,

Емер Яшинский — Әбделмөьмин Әбделмөслимов — исеме менән генә түгел, бөтә ҡылығы, эше, эске донъяһы менән Әбделмөслимов булып ҡалған йылғырбай бит ул. Беҙҙеңсә яҙып маташа, ә төптө бүтәнсә, Әбделмөслимовса уйлап эш итә. Уның ике йөҙлө яҙмалары нимәгә кәрәк беҙҙең заман кешеләренә?!» — тигән.

Емеш һаман үкһеп ятҡан Байрасҡа йөҙө нурланып боролоп ҡараны. Ҡолағына эйелеп, иркәләп өндәште.

— Байрас... Йәнем... Иламайыҡ... Ярамай... Күрәһең бит, беҙҙең атайҙар... Хаммат ағай бөтә ғүмерен һалған хаҡлыҡ еңә, тантана итә! «Ҡырын эш — ҡырҡ йылдан һуң булһа ла асыла» тип халыҡ белмәй әйтмәй шул. Асылды бит дошмандарҙың ҡара йөҙө!..

Байрас, йәнем... Йәш менән түгел, эш менән Хаммат ағайға торош итер кеше булырға тырышайыҡ... Йәме!..

Байрас илауҙан туҡтаһа ла, оҙаҡ-оҙаҡ ҡуҙғалмай ятты. Хәҙер ул көттө... Тәүтапҡыр һөйгәненең ауыҙынан ишеткән «йәнем» тигән тылсымлы һүҙҙең ҡабатланыуын көттө... Ә Емеш һөйгәне өсөн саманан тыш әсенеүҙән йөрәкһеҙҙән тышҡа бәреп сыҡҡан был һүҙҙе шунда уҡ күңел түренә ҡабат бикләп ҡуйҙы ла бөтөнләй икенсе тауыш менән:

— Беҙгә уҡырға китер саҡ етте бит, Байрас, — тип өҫтәне.

Егеттең көтөүе бушҡа сыҡты. Ул, терһәктәрен тубығына терәп, ике сикәһен устары менән ҡыҫып тотоп, ҡайғыға бирелеп ултырҙы. Унан Емештең үҙе кеүек ҡоро итеп:

— Шундай саҡта әсәйемде, ҡарындаштарымды ташлап китергәме?! — тип һораны.

— Ҡайғы тип, ҡул ҡаушырып ятырғамы ни?

— Ә мин китмәһәм... Һин ҡалырһыңмы, һылыу?

— Юҡ, — тине Емеш, ҡырт киҫеп, — ҡалмайым.

— Мине ташлапмы?! — Байрастың йөҙө ҡара көйҙө. — Китәһеңме?!

Емеш, йөрәгенең түҙгеһеҙ өҙгөләнеүенә бирешмәҫкә тырышып, тағы ла ҡорораҡ тауышҡа күсте:

— Юҡ, һинең менән бергә булыр өсөн... Һинең мөхәббәтеңә тиң булыр өсөн... Атайҙарыбыҙҙың юлын дауам итер өсөн...

Егет ҡыҙға, тәү күргәндәй, аптырап ҡараны:

— Тимәк, китәһең?

— Китмәйем. Китәбеҙ. Мине ысын һөйһәң, һин уҡыу-

ҙы ташламаçһың. Ҡайғыға бирешмәçһең... Һайлаған юлыңдан кире сигенмәçһең... Бәлки, яңылышамдыр... Мин бит... шундай ныҡыш кешеләрҙе генә хөрмәт итәм... Шундай кешеләр генә ысын мөхәббәткә лә лайыҡлы булалар-ҙыр, тип ышанам...

— Шулай тиһең икән!..— тип Байрас бик оҙаҡ уйланып ултырҙы. Ысынлап та, Емештең, аҙ һүҙле, оялсан, хатта үтә баçалҡы ҡыҙҙың, был ҡылығы уға бөтөнләй яңы ла, ят та ине. Шул уҡ ваҡытта кире ҡаҡҡыһыҙ дөрөçлөгө менән үҙен еңә, баш эйҙерә барыуы ла асыҡ ине. Шулай ҙа ул үҙ уйын аҙаҡҡа хәтле яҡларға тырышты.

— Бәлки, берәй йылға уҡыуҙы ҡалдырып торорбоҙ, ә? Өйләнешербеҙ. Унан, ҡайғылар баçыла төшкәс... берәй бала һине миңә ныҡ ҡына бәйләгәс... уҡыуҙы дауам итербеҙ...

— Уйлап һөйләйһеңме әллә уйнапмы? — тип бүлдерҙе уны Емеш. Байрас ҡыҙып китте:

— Атайымдың ҡайғыһы етмәгән, инде һине лә юғалтырға торғанда, нисек уйнап һөйләшмәк кәрәк?!

Емеш тарҡау ғына йылмайып ҡуйҙы:

— Боронғо бер философ: «Ысын мөхәббәт ара алыçҡа ҡарап һүрелмәй, ә дөрләп ҡабына ғына бара...»— тигән...

— Мин бит философ түгел. Әкиәткә ышаныр бала саҡ та артта ҡалды, — тип һаман ҡарыулашты Байрас.— Мине хәҙер ҡаты бәғерле, рәхимһеҙ ысынбарлыҡ ҡына ҡыҙыҡһындыра!

Емеш уға иғтибарлап ҡарап алды ла, өндәшмәне. Байрас та Заһира яғына асыулы ҡараш ташлап тынып ҡалды. Ә Заһира, баянан бирле улар яғына ҡарай-ҡарай, тоҡтарға ашлыҡ тултыра ине.

— Ошо ҡыҙҙы күргән һайын ҡайғым да, асыуым да яңырып китә һымаҡ,— тип ҡуйҙы Байрас.— Үҙ-үҙемде тота алмай башлайым.

— Бик һәйбәт,— тине Емеш, етди итеп.— Тимәк, йөрәгең яныуға-көйөүгә лә, көрәшеү-еңеүгә лә һәләтле тигән һүҙ... Ә инде Заһираға килгәндә — ул бит үҙе яуызлыҡ ҡорбаны... Етмәһә, Бибекәй инәйҙә тора хәҙер. Колхоз ағзаһы.

— Һай, философ!— тип ҡайғылы булһа ла, йылмайып өндәште хәҙер Байрас.— Һиңә еңел, һылыу... һәр нәмәгә һинең үҙ философик ҡарашың бар... Үҙ фекерең... баһаң...

Мин бит үтә лә ябай, ер кешеһе бит! Ҡыҙыҡай, аңлайһыңмы һин шуны?!

Емеш мут ҡына йылмайып ҡуйҙы. Уға үҙен Хөрмәт менән Сабир үсекләп йөҙәткән «философ» һүҙен Байрастың ауыҙынан да ишетеүе ҡыҙыҡ ине.

* * *

Төшкө аштан һуң һауыт-һабалар йыуып эшен бөтөргәс, Өммөгөлсөм дә улын эҙләп китте. Һәм Байрас менән Емеште тап ошо әңгәмә ваҡытында килеп тапты.

— Аһа, һеҙ бергә икән дә!— тип ҡыуанып китте.— О мин һеҙҙе эҙләй-эҙләй көскә килеп таптым... Мә, улым, айран эсеп ебәр. Сарсағанһыңдыр,— тип улына туҫтаҡ һондо.

Байрас йотлоғоп-йотлоғоп эсте. Күрәһең, бик ныҡ һыуһағайны, Өммөгөлсөм йәштәргә алмаш-тилмәш ҡарап торҙо ла:

— Һеҙгә, балалар, минән берәй кәңәш кәрәкмәйме,— тип һорап ҡуйҙы.— Һеҙ ни хаҡындалыр бәхәсләшә инегеҙ түгелме?

— Юҡ, әсәй,— тине Байрас, шат, көр һөйләшергә тырышып,— былай ғына...

Ә Емеш үҙ ғүмерендә күпте кисергән, әммә бирешмәгән, әле лә унһыҙ ҙа бәләкәс, ҡаҡса кәүҙәһе ҡайғынан ҡурмас кеүек ҡурылып, тағы ла кесерәйеп китһә лә, илаузарланыу белмәй янып эшләп йөрөгән был ҙур йөрәкле әсә алдында үҙен борсоған серҙе йәшереп ҡалыуҙы тейешле тапманы. Үҙһүҙле ҡабарынҡы ирендәрен бүлтәйтә биреп, Байрас яғына шелтәле ҡарап тора бирҙе лә:

— Уҡырға китер саҡ етеү хаҡында һөйләшә инек тә беҙ,— тип әйтеп һалды.

— Шунан? — тип ҡыҙыҡһынды Өммөгөлсөм.— Ҡасан китәһегеҙ?

Емеш артабан һөйләүҙе егеткә тапшырғыһы килеп көткәйне лә — булманы. Байрас һаман шул айраның йотомлап әсә-әсә ситкәрәк ҡарап ултыра бирҙе. Ҡыҙ үҙенең яңаҡтарына, ҡолаҡтарына ҡыҙыу ҡан бәрә башлауын тойҙо. Уға, өлкәндәр менән бик үк һөйләшеп өйрәнмәгән кешегә, еңел түгел ине. Ләкин алдына алғанды ярты юлда ҡалдыра торған ғәҙәте лә юҡ ине уның.

— Байрас, уҡырға китмәйек, ти... Әсәйемде, һылыуҙарымды ҡарар кеше юҡ, ти...

Өммөгөлсөм моңһоу ғына көлөмһөрәп улына ҡараны:

— Шунан нисек килештегеҙ?

Байрас әсәһенең һорауын яуапһыҙ ҡалдырҙы. Ә Емеш тағы ла үпкәсел тауыш менән:

— Бер нисек тә....— тип ҡуйҙы.

Өммөгөлсөм, күрәһең, тағы низер һорашмаҡ булып та, фекерен йыя алмай:

— Ә-ә-ә-ә...— тип һуҙып торған арала, ырҙынға ат елдереп килеп ингән председателде күргәс:

— Ә-әхәт килде!— тип ҡыуанып китте. Һәм ҡабаланып уға ҡысҡырҙы:

— Ҡәйнеш, беҙҙең янға ла кил әле!

Байрас менән Емеш аяғүрә тороп баҫты.

— Һаумыһығыҙ, Әхәт ағай!

— Һаумыһығыҙ. Йәштәрҙе был арала күргән дә юҡ,— тине Әхәт, ғәҙәтенсә теремек, эшлекле тауыш менән.— Йә, ни хәлдә йәшәйһегеҙ?

— Йәштәрҙең уҡырға китер сағы етте бит әле, ҡәйнеш,— тип һүҙ башланы Өммөгөлсөм.— Ырымбурға саҡлы ат кәрәк ине...

Байрас әсәһенең һүҙен бүлде:

— Һин ни һөйләйһең, әсәй? Мин, һеҙҙе ташлап, бер ҡайҙа ла китергә йыйынмайым.

Әхәт Байрасҡа оҙаҡ ҡына һынаулы ҡарап торҙо ла Өммөгөлсөмгә боролдо.

— Дөрөҫ, еңгә, йәштәргә китергә ваҡыт. Хатта ылау ҙа әҙер,— тип үҙенең әле генә волостә булыуын, унда Арыҫланды күреүен һөйләп бирҙе. — Теге Ирмән ауылынан, Емештең Ишбикә инәһенең ейәне... Иртәгә ҡалаға артель өсөн кәрәк-яраҡтар алырға китә икән. Әҙер булһалар, Емеш һылыуымды ла, Байрас мырҙамды ла үҙем алып китер инем. Хаммат ағай алдында бик ҙур бурыслы кеше мин. Исмаһам, улына аҙ ғына ярҙам итә алһам да, күңелемә еңелерәк булыр ине, ти. Шулай булғас, мин ни ярҙамды кире ҡаҡманым. Былай беҙҙең үҙебеҙҙең дә ҡалаға ат сабыр рәт юҡ түгел дә... Теләһәгеҙ, бөгөн үк үҙ атыбыҙҙы егәбеҙ.

— Үҙең әйтмешләй, яҡшы кешенең ярҙамын кире ҡағырға ярамаҫ. Хәтере ҡалыр,— тине Өммөгөлсөм баяғыса сабыр тауыш менән: — Бик һәйбәт. Рәхмәт.

Емештең күңелендә Өммөгөлсөмгә ҡарата тағы ла тәрәнерәк хөрмәт тойғоһо уянды, уға «әсәй» тигән иң изге һүҙ менән өндәшкеһе, «ниндәй көслө ихтыяр һиндә,

әсәй!» тип ҡосаҡлап үпкеһе килде. Ләкин ҡыйыулығы уны ҡәҙерләп ҡултыҡлап алырға ғына етте:

— Ҡайтайыҡ, әҙерләнәйек, былай булғас...

Байрас әсәһен икенсе яҡтан ҡултыҡланы.

— Их, әсәй, һинең кеүек түҙемле булһам ине мин дә...

— Булырһың әле, балам... Донъя өйрәтә ул, — тине Өммөгөлсөм, ауыр ғына көрһөнөп.— Ҡешене түгел, айыуҙы ла өйрәткән донъя был, балам...

* * *

— Ҡөтөү төшөр саҡ та етә. Ҡайтайыҡ шул, балалар,— тине Өммөгөлсөм, ҡабаланып, ә үҙенең аяҡтары Оҙонғол башына, зыярат яғына боролдо:

«Атаһынан фатиха алмай китмәҫ тә балам...»

Әсәнең теләген һиҙгер күңелдәре менән шунда уҡ тойоп алған йәштәр ҙә ыңғай атлап шул яҡҡа юнәлде:

— Иҙрис олатайығыҙ менән дә, моғайын, шунда хушлашырһығыҙ... Шунда, Хамматтың ҡәбере янында, ултырырға яратыусан булып китте бит ул, бахыр...— тип, моңһоу ғына көрһөнөп һүҙ башланы тағы Өммөгөлсөм.— Рәхмәт яуһын инде уға... Аллаһы тәғәлә уға һаулыҡ бирһен... Беҙҙең атайҙы япа-яңғыҙ ҡалдырмай ул һис тә...

Ысынлап та, һуңғы ваҡытта ҡапыл ҡартайып, яурындары һығылып төшкән һымаҡ булып киткән Иҙрис ҡарттың Хаммат ҡәберенә барып оҙаҡ-оҙаҡ уйланып ултырыуы көндәлек ғәҙәтенә әйләнде, тиһәң дә хата булмаҫ ине. Ҡисә кис Иштуған Мөслим ауылынан кулактарҙы тамам туҙҙырыу, ярлы-батрактарҙы колхозға ойоштороу мәсьәләһен уңышлы хәл итеп ҡайтышлай Хаммат ағаһының ҡәберенә баш әйергә туҡтағанда ла ул бында ине.

— Улым, һин дә килдеңме? Хәлеңде, сереңде һөйләргә килдеңме ағайыңа? Һөйләш, кәңәшләш, улым. Хаммат ағайыңдың кәңәше, тауышы — халыҡ тауышы, халыҡ кәңәше булыр, улым... Шуны хәтереңдә тот... Һәр саҡ хәтереңдә...— тип ҡыуанып ҡаршылап тора ине. Әле инде бына бөгөн Арыҫлан килгәндә лә ҙур йөнтәҫ башын ҡәбер ҡартәһенә һалып тәрән уйға батып тора. Нимә уйлай, нимә һөйләй икән һуң был ҡарт һалдат Хаммат батырға? Батша хеҙмәтенә һалып ҡалдырған егерме биш йыллыҡ үкенесле йәшлеге хаҡындамы? Собхан бай ишек төбөндә аунап ятып ҡалған ҡыҙғаныс етем тормошо тураһында-

мы? Әллә үҙе ҡарт көнөндә булһа ла килеп юлыҡҡан оло бәхетте яҡлап баш һалған батырға үҙ күңелендә йәшәгән бөткөһөҙ хөрмәтте, рәхмәтте әйтергә киләме? Үҙҙәренән яҡшы булған өсөн генә лә Хаммат кеүек кешеләрҙе йәшәтмәҫкә ҡәһет иткән әҙәм аҡтыҡтарына ҡарата йөрәгендә урғылған нәфрәтте, ләғнәтте ошонда килеп һөйләй микән әллә? Эйе, ошоларҙың барыһы хаҡында ла бәйнә-бәйнә һөйләй ул батырға. Унан:

— Ирмен тигән кешенән ерҙә изге эш ҡала. Ямандан ни ҡала? Һинең яҡшылығың яҡшы кешеләр күңелендә йәшәп ҡалды, улым,— тип Хамматты йыуата, үҙе лә йыуана.— Ҡараңғы ҡәберең нурлы, тар ләхетең иркен булһын, улым,— тип изге теләк теләй. Самай йәшәр саҡта ғына ер ҡуйынына инеп ятҡан батырҙы йәлләп, ҡайтып киткеһе килмәй аҙаплана. Тик әле бөгөн ҡәбергә яҡын уҡ килеп туҡталған атлы кешене күргәс кенә иртәрәк ҡуҙғалды.

— Һиңә кемдер килә, улым. Мин китеп торайым. Иртәгә тағы килермен. Яңғыҙ итмәм. Минең ни, ҡарт кешенең ни, уйлар уйы ла, һөйләр һүҙе лә, форсаты ла тигәндәй, етерлек... Миңә түгел, һиңә йәшәргә ине лә бит шулай оҙаҡ... Тағы ни хәтле изге эштәр атҡарырға өлгөрөр инең бит, исмаһам...— тип һөйләнә-көйөнә китеп барҙы.

Арыҫландың да үҙенә ҡараңғынан яҡтыға сығыу юлын күрһәткән был оло йөрәкле кешегә әйтәһе рәхмәте лә, һөйләшер, кәңәшер һүҙе лә етерлек ине... Әммә һуң ине шул, һуң...

Ул да, йөрәгенең иң ҡәҙерле бер өлөшө өҙөлөп төшкән, донъяһы бушап, етемһерәп ҡалған һымаҡ булып, ҡәбер янында телһеҙ ҡатып торҙо. Ысынлап та, был арала ул да үҙ ғүмеренең ниндәйҙер иң ҡәҙерле бер өлөшө юғалған, йөрәгенең иң түре бушап ҡалған кеүек тойоп ыҙалана ине: «Их алйот, алйот, уға Закир хаҡында һөйләп бирер ҙә ваҡыт тапманым бит, исмаһам. Уның үҙе менән Петроград фронтында йәнәш һуғышыуымды ла белдерә алманым... Ә Польша сигендә, Варшау янындағы һуғышта ла унан алыҫ йөрөмәгәнемде һуң?.. Йә, береһен дә белмәй китте бит ул... Белһә, ҡалай ҡыҙыҡһыныр, ҡыуаныр, бәлки ғорурланыр ҙа ине... Ҡыҙыл Байраҡ ордене алыуымды әйтһәмсе, исмаһам...— тип, үкенеп, әсенеп торҙо ул.— Ә хәҙер инде үҙ-үҙенде өҙгөләүҙән ни файҙа? Беҙ һәр саҡ шулай инде, кәрәге бөткәс, ваҡыты уҙғас ҡына иҫ йыябыҙ... Ысын кешеләрҙе янда саҡта, һине

ҡайғыртып, хәстәрләп йәшәп ятҡанында аңламайбыҙ ҙа, баһаламайбыҙ ҙа... Беҙ аңлар, баһалар хәлгә еткәндә ул инде донъяла булмай. Ҡара төндө яҡтыртҡан сыра ни келле янып бөтөп һүнгән була... Шулай булған... Мәңгелек, гел шулай булыр... Сөнки ысын кешеләр бит улар үҙҙәренә иғтибар талап итеп күҙгә инеп килмәйҙәр... Улар диңгеҙ төбөндәге ынйы кеүек бик тәрәндә яталар... Беҙҙе үтә лә күп булып әйләндереп алған буш, еңел ялтыраҡ уыҡтар араһында улар күрәһең бөтөнләй күмелеп ҡалалар... Ә аҙаҡ... Һуңынан... их-х...»

Арыҫлан ниндәйҙер өмөтһөҙ әсенеү менән, хәлһеҙ генә ҡул һелтәне лә ашығып китеп барҙы. Өммөгөлсөм, Байрас, Емеш килеп еткәндә, ҡәбер кәртәһе янында бер кем дә юҡ ине инде.

* * *

Көҙ бында ла үҙенекен иткән: ҡәбер өҫтөндәге үләндәргә ҡыҙыл һары төҫ биргән, ҡасандыр һөйөп-көйөп Хаммат ултыртҡан Сәлимә ҡайынының йәш, йәшел япраҡтарын алтынға мансыған, суҡ ҡайын әллә йәй үткәнгә, әллә Хаммат батыр ҙа донъянан киткәнгә, моңайып, әйтерһең, көҙ еткәнгә генә түгел, ә ауыр һары һағыштан башын ергә хәтле эйеп, тынып ҡалған...

Өммөгөлсөм менән Байрас та, гүйә, был ҡайғылы мөһабәт тынлыҡты боҙоуҙан ҡурҡҡан һымаҡ, һәр ҡайһыһы үҙ уйына бикләнеп тынып торҙолар... Емеш тә, ҡәберлеккә килергә шикләнә торған ғәҙәтен онотоп, тәрән, ауыр уй эсенә инеп юғалды...

Ысынлап та, ниңә ҡурҡырға, ниңә екһенергә?! Уның йөрәгендә лә иң ҡәҙерле урынды биләгән иң һәйбәт кешеләр ята лабаһа бында! Улар менән бергә Емештең дә, ни хәтле генә ауыр булмаһын, ғүмеренең бала саҡ тигән иң матур өлөшөнә бәйләнгән ҡәҙерле иҫтәлектәре күмелгән ер бит! Эйе, эйе, Емештең күпме кисереше, ҡыуанысы, көйөнөсө бәйләнгәйне был мәрхүмдәргә.

Эй-й, әле күпме генә йәшәгән Емеш? Ғүмеренең әле бит сәскәле яҙы ғына... Күпме юғалтыу... Һөйөклө атаһы, үҙен күреп белмәһә лә, йөрәгендә һәр саҡ тере йәшәгән бәхетһеҙ әсәһе, әкиәт донъяһынан килгән изге йәндәр булып күңел түрендә һаҡланған Шәһит бабай, Сыуаҡай инәй, Ҡарасәс әбей, Тимербай ағай... Инде килеп Хаммат ағай...

Емештең рухын байытырға, рухтың алтын һандығын затлы мая менән тулыландырырға үҙҙәре лә һиҙмәҫтән, иҫәпһеҙ-һанһыҙ мая һалған яҡшы кешеләр ине бит улар!.. Йөрәктең иң түрендә һаҡлап, ғүмер юлына алып сығыр кешеләр...

Был үтә моңһоу уйҙан Емештең йөрәге хәлһеҙләнеп тетрәп китте, тамағына ниндәйҙер ҙур ҡаты төйөн ултырҙы. Күҙ алдары томанланды...

«Аһ, илап алһаң, еңелерәк булыр ине лә бит... Ярамай шул... Унан да ауырыраҡ ҡайғылы юлдаштары түҙеп тора лабаһа!»

Өммөгөлсөм ҡабаланып улы менән Емеште үҙе ҡултыҡлап алды.

— Хушлаштыҡ, балалар, ҡайтайыҡ.

Емеш үҙен тағы бер тапҡыр ауыр хәлдән тартып сығарған был һөйкөмлө тауыш эйәһенә рәхмәтле ҡарашын йүнәлтте:

«Ҡарасы, Өммөгөлсөм еңгә лә шундай сабыр, һиҙгер йөрәкле икән дәһә?! Бәлки, яҡшы кешеләрҙең рухы мәңгегә юғалмайҙыр, йәшәп ҡалған яҡшы кешеләргә генә күсәлер ул?»

Улар, килгәндәге шикелле, әкрен, тын ғына ҡайтып киттеләр.

* * *

Иртәнсәк, ҡояш ҡалҡып килгәндә, йәштәр, Көплө урманын үтеп, ялан яҡҡа сыҡҡайнылар инде. Алда осһоҙҡырыйһыҙ таҡыр юл, яҡ-яҡта башҡорт батырының уҡалы аҡ тула сәкмәне шикелле төҙөү, ҡылғанлы дала йәйелеп ята. Юлсылар һәр ҡайһыһы үҙ уйына батып, тынып бара. Шулай ҙа Емеш бөгөн үҙен ситлектән осҡан ҡош кеүек шат тоя. Ҡалаға яҡынайған һайын уның уйы, теләге, өмөтө киңерәк, ҡанатлыраҡ була бара: нисек кенә ғәжәп булмаһын, ҡаланы ярата ул хәҙер. Ҡала, уныңса, тылсымлы китаптар донъяһы, уҡыу, үҫеү, юғарыға, яҡтыға үрләү хаҡындағы татлы хыялдар төйәге, аң-белем таратыу эшендә ысын-ысындан белеп-бирелеп эшләрлек кешеләр етешә торған серле тимерлек...

— Их... йәһәтерәк техникумды тамамларға ла Мәскәүгә, университеткә китергә ине!— тип тауышланып уйлап ҡуйҙы ул, бара торғас.— Минең тик унда, Мәскәүҙә

генә уҡыгым килә. Башҡа бер ерҙә лә түгел. Беләһеңме, Байрас?

Байрас өндәшмәй. Һөйгәнен үҙенән һаман алыҫлаша барған кеүек тойоп, йөрәге һыҡтай. Ундай саҡта Байрастың күңеленә һәр саҡ йыр килә. Әле лә уның күңелендә үткән ҡыш Ҡазанда үҙе яратып бер нисә тапҡыр ҡараған «Ғәлиәбаныу» пьесаһынан бер йыр ҡабатлана:

> ...Ун ике йәштән бирле һөйөшөп,
> Күҙебеҙ күҙҙәрҙән китмәне,
> Хоҙайым насип итмәне, —

ләкин ул уны ҡысҡырып йырларға баҙнат итмәй. Ниңәлер Емештән уңайһыҙлана, көлөр, ти. Ә Емештең күңеле, ысынлап та, һаман күтәрелә, һабан турғайы шикелле юғарыға үрләй генә бара.

— Күрәһеңме, Байрас!— ти ул тағы ла ярһыбыраҡ. Үҙе, ҡуйы керпектәрен ҡыҫып, ҡояшҡа йылмайып ҡарай.— Күрәһеңме?!

— Нимәне?— ти ахыр Байрас та, моңһоу ғына йылмайып.— Әйт, күрермен.

— Ҡояшты... Даланы... Шыңғырҙап ятҡан икһеҙ-сикһеҙ юлды...— тип ҡыуанып теҙә Емеш.— Донъяның матурлығын!

— Шунан һуң!.. Күрһәм ни була! Һөйөнсөһөнә нимә бирәһең?— тип көлөп ҡарай Байрас. Күрәһең, уға ла Емештең ярһыуы күсә бара.— Һис юғы бер генә үбергә рөхсәт итерһеңме һуң?— тип ҡолағына бышылдай.

Емеш, әйтерһең, уның һуңғы һүҙен бөтөнләй ишетмәй.

— Күрһәң, бына шул: ҡеҙрәтле ҡояш та, күпте күргән боролмалы юл да, ҡылған баҫҡан ҡарт дала ла беҙҙе алыҫ юлға саҡыра,— ти ул, һаман рухлана барып.— Бәлки, ул юл бик ауыр ҙа, һикәлтәле лә, оңғорло-соңғорло ла... бәлки, үтә хәүефле лә булыр... Бәлки, беҙҙән дә көстән тыш ауыр көрәш, хатта ҡорбан да талап итер... Уның ҡарауы ул юл беҙҙе коммунизм тигән ғәжәп бер донъяға алып барып еткерер... Белдеңме?!

Байрас, Емештең үҙенән аша алыҫҡа төбәлгән илһамлы күҙҙәренә һоҡланып ҡарап, йылмайыбыраҡ бара бирҙе лә:

— Ә ғаилә? Мөхәббәт? Бала?!— тип теҙеп китте.— Уларҙы бер ситкә бырaҡтырып ташлайбыҙмы ни инде?

Емеш, ниңәлер үҙенең ҡанатлы хыялдарының ҡанатын мөнтәргә тейешле итеп тойған был кире ҡаҡҡыһыҙ

хәкиҡәт алдында тағы әҙ генә ҡаушап, тынып торҙо. Унан, бошонҡоланып: — Улары үҙ яйы менән барыр әле... — тип ҡуйҙы. Унан, етди тауышҡа күсеп:

— Уларҙы ситкә бырҡтырһаң, коммунизмде кем өсөн төҙөрбөҙ? Беҙҙең эште кем дауам итер,— тип өҫтәне.— Коммунизмде шәхси бәхеттән айырып ҡарау дөрөҫ булмаҫ ул...

Арба алдында шым ғына ултырып барған Арыҫлан, бер саҡ Емешкә бик мәҙәк тойолған ҡылығын ҡабатлап:

— Өс-өс-өс-с!.. тип дилбегә ҡағып ебәрҙе лә, артҡа боролоп, күңелле йылмайып ҡараны:— Үәт, исмаһам, дөрөҫ әйттең, ҡарындаш. Хаммат ағай ҙа миңә бер саҡ: «Коммунизм ул, мырҙам, һәр кеше үҙен бәхет тауының иң түбәһендә итеп тойған бер мәл буласаҡ. Беҙ, коммунистәр, ғаиләлә лә, йәмғиәттә лә кеше үҙен ысын бәхетле итеп тойһон өсөн көрәшәбеҙ»,— тигәйне... Ҡарындаш дөрөҫ әйтә, шундай изге теләккә ғүмерҙе һибә итеүҙәлер ул йәшәү йәме...

— Һеҙ еңдегеҙ!— тип ҡуйҙы Байрас, уйсан ғына йылмайып.— Атайҙар иҫтәлеге алдында йөҙ ҡыҙармаҫлыҡ итеп йәшәргә тырышырбыҙ. Ҡараңғынан яҡтыға табан юлға сыҡҡанбыҙ икән, түбәгә таш яуһа ла, кирегә боролоу булмаҫ. Шулай бит, Емеш?

Емештең илһамлы йөҙөнә иркә йылмайыу өҫтәлде:

— Шулай, Байрас... шулай!

— Өс-өс-өс-с!— тип тағы күңелле итеп дилбегә ҡағып ебәрҙе Арыҫлан. Ҡөр ат еңел елеп китте. Күҙ етеүгә ҡарамаҫтан, үтә сағыу, шат яҡтырып ҡалҡып сыҡҡан ҡояш, иген эҫкерттәре, бесән кәбәндәре менән сыбарланған түбәләстәргә, йәшел ҡурпылы уйһыулыҡтарға алтын нур тулҡындарын йомарт һибәләй-һибәләй, һаман юғарыраҡ, бейегерәк күтәрелде. Он шикелле йомшаҡ, һары ҡомо сығып ятҡан киң таҡыр дала юлы йәш йөрәктәрҙе мауыҡтырғыс алыҫлыҡҡа елкендереп алдан югерҙе. Убалар өҫтөндәге сал ҡылғандар ҙа, иртәнге талғын елгә уянып, һирпелеп ҡаранылар ҙа, гүйә, оло юлға сыҡҡан йәштәр өсөн ҡыуанып, баш сайҡанылар:

— Хәйерле юл һеҙгә, хәйерле юл!..

*Өфө — Малеевка — Өфө.*
*1967—1969*

# ФИЛОСОФИК ЯҢҒЫРАШЛЫ ТРИЛОГИЯ

Талантлы прозаик, драматург һәм шағирә Зәйнәб Биишеваның «Кәңәш» тигән шиғырында шундай юлдар бар:

Оло йөрәкле бул. Батырҙарҙы
Шөһрәт үҙе таба донъяла.
Осҡон һүнгән урынды көл ала,
Ҡояш уҙған юлда нур ҡала.

Оло йөрәк...

Халыҡ эше, ил хаҡына янған оло йөрәк — коммунист йөрәге тибә- яҙыусыла.

Бына илле йылға яҡын ул башҡорт әҙәбиәтенә яҡты идеалдар менән хеҙмәт итә. Шул осорҙа З. Биишева ҙур трилогия яҙырға, хикәйә һәм очерктәр, шиғри повесть һәм поэтик әҫәрҙәр, күп һанлы публицистик мәҡәләләр, балалар өсөн әкиәттәр, пьесалар, повестәр, хикәйәләр сығарҙы. Әҙәбиәттең һәм сәнғәттең үҫеше, актуаль проблемалары хаҡында мәҡәләләр баҫтырҙы. Яҙыусының әҫәрҙәре рус теленә тәржемә ителеп Бөтә союз уҡыусыһының күңелен яуланы.

Республиканың Салауат Юлаев премияһы лауреаты Зәйнәб Абдулловна Биишеваның ижады хаҡында һүҙ әйтер өсөн егерменсе быуат башынан бөгөнгө көнгәсә бөтә ил тормошон күҙ алдына баҫтырырға, башҡорт совет әҙәбиәтенең үҫеш этаптарына күҙәтеү яһарға тейеш булаһың. Сөнки уның әҫәрҙәрендә беҙҙең быуатта булып үткән социаль-тарихи хәрәкәттең, ижтимағи-политик үҙгәрештәрҙең, синфи көрәштең һәм революцион тетрәнеүҙәрҙең, шулай уҡ совет осоронда Коммунистәр партияһы етәкселегендә барған бөйөк үҫеш хроникаһы сағыла.

Әҙибәнең әҫәрҙәрен ваҡиға яғынан, тормош материалы йәһәтенән генә ҡарап сыҡҡанда ла идея-йөкмәтке байлығына, формалар төрлөлөгөнә иғтибар итергә мөмкин. Әйтәйек, фольклор мотивтәре нигеҙендә яҙылған әкиәттәрендә, «Һөнәрсе һәм өйрәнсек», «Мөхәббәт һәм нәфрәт» хаҡында хикәйәттәрендә, «Серле ҡурай» пьесаһында халыҡтың ҡыуанысһыҙ үткәндәре тасуирланһа, ә инде «Гөлбәҙәр», «Нәҙер» драмаларында, «Гөльямал» шиғри повесендә, «Яҡтыға» трилогияһында революция осороноң даулы һәм яулы ваҡиғалары, социалистик йәмғиәттең тыуыуы һәм яңы кешенең формалашыуы, бер төркөм хикәйәләрендә егерменсе-утыҙынсы йылдарҙағы яңы тормош төҙөү пафосы яҡтыртылды. Ә инде «Партизан малай», «Көнһылыу» повестәрендә һуғыш дәүеренең героикаһы һүрәтләнһә, «Сәйер кеше», «Уйҙар, уйҙар...», «Дуҫ булайыҡ», «Ҡайҙа һин, Гөлниса?» һ. б. әҫәрҙәрендә һуғыштан һуңғы йылдарҙағы һәм хәҙерге осорҙоң актуаль проблемалары күтәрелде.

Ә шағирәнең шиғыр һәм йырҙары — үҙе бер донъя ул.

Әҫәрҙәрен ошолай һанап ҡына сығыу ҙа З. Биишева талантының күп яҡлы, киң диапоҙонлы булыуын күрһәтә. Был — бер булһа, икенсенән, яҙыусының бөтә жанрҙарҙа ла тиерлек эшләүе уның ижадындағы әҙәби формаларҙың төрлөлөгөн, стиль алымдарының ҡатлаулылығын, тел йәһәтенән байлығын да билдәләй.

Бына ошо сифаттары менән З. Биишева ижады башҡорт әҙәбиәтенең оригиналь һәм яҡты өлөшө булып тора. Яҙыусы был ҡаҙаныштарға ҙур талант өҫтөнә, егәрлелек һәм алдынғы ҡарашлы кеше — коммунист булараҡ өлгәште. З. Биишева ижадының йөкмәтке байлығы, юғары идеялылығы һәм художестволылығы бер яҡтан авторҙың әҙәби яңылыҡты тоя, уны үҫтерә белеүенә бәйләнгән булһа, икенсе яҡтан, яҙыусы үҙенең бай биографияһына ла таяна.

* *
*

Күренекле рус совет яҙыусыһы М. Алексеев РСФСР яҙыусыларының III съезында һөйләгән «Хәҙерге прозаның ҡайһы бер мәсьәләләре» тигән докладында һуңғы йылдарҙа «Эпик һәм философик яңғырашлы әҫәрҙәр тыуҙырыуҙа» күренекле башҡорт яҙыусыһы З. Биишеваның ижадын, бигерәк тә уның «Яҡтыға» трилогияһын, айырыуса һыҙыҡ өҫтөнә алып үткәйне.

Ысынлап та, «Яҡтыға» — яҙыусының үҙенең генә түгел, бөтә башҡорт прозаһының ҙур уңышы, уны Бөтә союз аренаһына алып сығырҙай талантлы әҫәрҙәрҙең береһе булды. Шуның өҫтөнә, «Яҡтыға»ның башҡорт әҙәбиәтендә тәүге трилогия булыуын да билдәләргә кәрәк. Шуға ла башҡорт романистикаһында эпопея һыҙатының нығыныуында һәм проблемалылыҡтың, идея-художество концепцияның асыҡ һәм масштаблы була барыуында ла әҙибәнең ижади хеҙмәте ҙур.

Трилогия уғаса сыҡҡан әҫәрҙәргә оҡшамағайны. Әйтәйек, утыҙынсы йылдар романында тормошто иңләп-буйлап хикәйәләргә ынтылыу, шул арҡала кеше шәхесенә иғтибарҙың һүрәнләнә төшөүе, йә булмаһа һуғыштан һуңғы романдарҙа биографик элементтең көсәйеүе, тормош күренештәренең шул биографияны тултырыусы миҫал-эпизод рәүешен алыуы, ғөмүмән, жанр үҫешендәге төрлө сиктәргә һуғылыуҙарҙы сағылдыра ине. Ошондай осраҡта тарихи-революцион теманың ҡапыл күтәрелеп китеүе милли роман формаһын художестволы яҡтан камилләштереүгә нигеҙле бер ерлек булды. Сөнки ил яҙмышы, халыҡ тормошо һәм революция хаҡында тәрән уйланыу үҙе үк эпик хикәйәттең йөкмәтке һәм форма йәһәтенән масштаблы, характер һәм типтарҙың төрлө булыуын тәьмин итте. Халыҡ яҙмышын үҙенә һыйҙырған ысынбарлыҡтың ҡатмарлылығы ана шул характер һәм типтарҙың байлығын да сағылдыра. З. Биишеваның «Яҡтыға» трилогияһы жанр эсендәге ана шул үҙенсәлекле яңырыуҙың иң характерлө һөҙөмтәһе булып тыуҙы.

«Яҡтыға» трилогияһында төп ижади алым — эпиклек. Был З. Биишеваның тәүҙә үк киң һәм тәрән йөкмәткеле ваҡиғаларға нигеҙләнгән әҫәр яҙырға тотоноуына бәйләнгән. Әле Баймаҡ районының Билал ауылында уҡытыусы булып эшләгәндә үк З. Биишева «Бер ғүмерҙең тарихе» тигән әҫәр яҙа башлай. Унда йәш яҙыусы үҙ тормошона таянып, үҙе кеүек меңдәрсә ҡатын-ҡыҙҙар яҙмышын — йәғни уларҙың Совет власе арҡаһында кеше булыу тарихен күрһәтергә иҫәп тота. Ул йылдарҙа әле тәжрибәһеҙ тиерлек йәш, әммә

дәртле, илһамлы яҙыусы тарафынан башланған әҫәрҙең бөтөнө «Яҡтыға» трилогияһы менән ни дәрәжәлә һәм нисек характерҙа бәйләнеүен әйтеүе ҡыйын. Әммә үҙенең культура һәм әҙәби традициялары менән билдәле булған Ырымбур педтехникумында тәрбиәләнгән йәш әҙибәнең ошондай ҙур эпик темаға ҡыйыу тотоноуы — бик характерле күренеш.

Трилогия «төн» һүҙе менән асыла. Автор был һүҙҙе шул осор тормошо, социаль тигеҙһеҙлек, ауыр көнкүреш, хоҡуҡһыҙлыҡ, тамана наҙанлыҡ менән ассоциатив планда алып, ябай метафоранан ҙур социаль йөкмәткеле символик яңғырашлы образға әйләндерә. Яҙыусы «Төн» тигән атама һөйләмдән һуң ҡапыл уны ҡырт киҫеп «Башҡорт ҡыҙының тәңкәле еләне» менән сағыштыра. Йәнәшә ҡулланылған һәм трилогияны асып ебәргән, тәүгеһе — бер һүҙҙән, икенсеһе ҡатлаулы сағыштырыу — тасуирләмәләрҙән төҙөлгән был ике һөйләм башта әллә ни диҡҡәтте тартмай ҙа тиерлек. Әммә әҫәрҙең эсенә керә килә был ике һөйләмдең ныҡ уйланып, мәғәнә яғынан нигеҙләнеп төҙөлгәнлектәрен, яҙыусының идея-художество концепцияһына бөтә йәһәттән дә тап килеүҙәрен төшөнөп ғәжәпкә ҡалаһың. «Төн» һәм «башҡорт ҡыҙы». Был ике һүҙ уҡыусы алдына артабан ҙур теманың үҫеш стихияһын тәьмин иткән ике сығанаҡ булып, ике һүрәтләү предмете булып килеп баҫа: «Төн» һәм «башҡорт ҡыҙы», йәғни төн кеүек ҡараңғы, шомло тормош һәм шунда көн күреүсе башҡорт ҡыҙының яҙмышы дөйөм сюжеттең ике төп һыҙығы рәүешендә бирелә. Трилогия ошолай ҡараңғы картина менән башлана ла яҡты ҡояшлы көндә юлға сыҡҡан йәштәрҙең уй-тойғоларын ҡылыҡһырлау менән тамамлана: «Күҙ етеүгә ҡарамаҫтан, үтә сағыу, шат яҡтырып ҡалҡып сыҡҡан ҡояш, иген эҫкерттәре, бесән кәбәндәре менән сыбарланған түбәләстәргә, йәшел ҡурпылы уйһыулыҡтарға алтын нур тулҡындарын йомарт һибәләй-һибәләй, һаман юғарыраҡ, бейегерәк күтәрелде. Он шикелле йомшаҡ, һары ҡомо сығып ятҡан киң таҡыр дала юлы йәш йөрәктәрҙе мауыҡтырғыс алыҫлыҡҡа елкендереп алдан югерҙе. Убалар өҫтөндәге сал ҡылғандар ҙа, иртәнге талғын елгә уяныл, һирпелеп ҡаранылар ҙа, гүйә, оло юлға сыҡҡан йәштәр өсөн ҡыуанып, баш сайҡанылар.

— Хәйерле юл һеҙгә, хәйерле юл!..»

Трилогияны башлаған һәм тамамлап ҡуйған ошо ике контраст картина араһында ятҡан бөтөн бер дәүер үҙенең ижтимағи-тарихи һәм социаль-психологик үҙгәрештәре менән әҫәрҙең идея йөкмәткеһен барлыҡҡа килтерә. Ана шуға күрә лә «Бер ғүмерҙең тарихе» рәүешендә уйланған роман, ғаилә көнкүреше сиктәренән сығып, халыҡ яҙмышын һүрәтләүсе киң эпик полотноға әйләнә. З. Биишева трилогияның өсөнсө китабына яҙған «Авторҙан» тигән ҡыҫҡаса инеш һүҙендә был турала айырым-асыҡ, хатта баҫым яһап, әйтеп тә үтә: «Әҫәргә тәү тотонған саҡта мин үҙ алдыма: данлы Октябрь көндәрен яланаяҡ ҡаршылаған кескәй ҡыҙ Емештең һәм уның ҡорҙаштарының артабанғы бөтә тормошон байҡап сығыу аша революция ҡаҙанышларын күрһәтеүҙе маҡсат итеп ҡуйғайным. Аҙаҡ, йылдар үтеү менән, әҫәрҙә һүрәтләнгән осор ҙа, ваҡиғалар ҙа, алға ҡуйылған маҡсат та бер аҙ үҙгәреп китте: хәҙер инде, бөтәһенән элек, Октябрь революцияһы һөҙөмтәһендә, Ленин партияһы етәкселегендә тотош бер милләттең, йәғни башҡорт хеҙмәтсән халҡының, ҡараңғынан яҡтыға табан рухи үҫеш юлын һүрәтләү маҡсаты ҡуйылды» [1].

---

[1] З. Биишева. Яҡтыға. Өфө, 1970, 5-се бит.

Яҙыусының тәүге идея-эстетик маҡсатының үҙгәреүе тәбиғи. Сөнки романда һүрәтләнәсәк осорҙо, уның бөтә ҡаршылыҡтары, үҙенсәлектәре менән, ныҕыраҡ өйрәнгән һайын, авторҙың донъяға ҡарашы киңәйә, художество күреме асыҡлана барҙы. Ул «Бер ғүмерҙең тарихе» рәүешендә уйланған шәхси хрониканы тиҫтәләгән персонаждарҙың үҙ-ара мөнәсәбәттәренән тыуған ҡатмарлы һәм тормоштоң үҙе кеүек ҡаршылыҡтар нигеҙендә үҫеүсе художестволы сюжетҡа ҡорҙо. Әммә шул уҡ ваҡытта ҙур социаль йөкмәткеле тарихи-революцион теманы ул айырым шәхестәр яҙмышы аша күрһәтеүгә өлгәште. Ана шуға ла «Яҡтыға» трилогияһының конфликте йәмғиәттең революцион яңырыу процесендә айырым кешеләрҙең генә түгел, социаль төркөмдәрҙең дә киҫкен бәрелештәренә нигеҙләнә. «Конфликт кешенең нәҡ асылына тейә. Шуға ла ул хәл ителергә тейеш,— тип яҙа И. Бехер художестволы конфликттең тәбиғәте хаҡында һөйләп,— был — йәшәү һәм үлем мәсьәләһе... Ысын конфликтҡа һәр ваҡыт дөйөм кешелек һәм тарихилек сифаты хас була. Шуның менән бергә ул шәхси тормошто ла тетрәтә»[1]. Тимәк, яҙыусы социаль йөкмәткеле конфликттең хәл ителеүен асыу нигеҙендә үҙ геройҙарының шәхси яҙмышын күрһәтеүгә лә өлгәшә. Трилогия бер яҡтан халыҡтың оло тормошон, тарихи үҙгәрештәрҙе тасуирлаһа, икенсе яҡтан, яңы шәхестең формалашыуын да һүрәтләй. Әммә яҙыусы үҙ романын тамамлағас та әле уны ана шул ижтимағи яғын асыҡлау планында ҡабат-ҡабат эшләп сыҡты. Шул арҡала хатта әҫәрҙең атамалары ла үҙгәрҙе: «Уяныу», «Оло Эйек буйында» тигән киң эпик яңғырашлы исем менән, ә «Яҡтыға», бер яҡтан үтә лирик, икенсе яҡтан проблематик «Емеш» тигән исем менән алмаштырылды. Проблематик — сөнки унда яңы кешенең формалашыуын анализлау, психологик һәм философик нигеҙләү төп урында тора. Яңы, социалистик йәмғиәттең тыуыуы үҙенән-үҙе яңы шәхес проблемаһын, социалистик ил төҙөүсе яңы кеше проблемаһын алға ҡуйҙы. Ул — йәшлек хаҡындағы роман. Унда Емеш, Хөрмәт, Сабир, Байрас, Алешалар кеүек йәш быуындың яҡты күңеле тасуир ителә. Ошондай геройҙар хаҡында үҙ ваҡытында А. Фадеев былай тип яҙҙы: «Тарих сәхнәһенә яңы донъяның, социализм донъяһының яңы, йәш геройы сыҡты. Ул ниндәй ҡатламдан сыҡты һуң? Ул йәмғиәттең хеҙмәтсән ҡатламынан сыҡты: уның ата-әсәһенең һәм үҙенең биографиялары — хеҙмәт тәжрибәһенең һәм хеҙмәт бәйләнештәренең бөтөн бер донъяһы. Был — үҙ ата-әсәһенең балалары өсөн һәйбәт тормош яулап, элек ҙур бөлгөнлөктәр һәм ҡыйынлыҡтар кисергәнен белә торған кеше»[2].

Трилогия ҡатмарлы образдар системаһына нигеҙләнә. Характерҙәр, социаль типтар, ғөмүмән, персонаждар күплеге — әҫәр нигеҙенә ятҡан тормош материалының байлығын, ҡатмарлылығын күрһәтеүсе төп критерий ул. Был типтар араһында халыҡ бәхете өсөн көрәшеүсе легендар батырҙар ҙа (Хәбир һ. б.), рус революционерҙәре менән аралашып синфи көрәш юлына сыҡҡан коммунистәр ҙә (Байгилде, Тимербай, Хаммат, Ғимранов, Иштуған, Әхәт), аңдарын Октябрь революцияһы уятҡан, яңынан тыуҙырған шәхестәр ҙә (Урыҫ Иҙрис, Хәлим, Кәзә мәзин-Әхмәтсафа, Заһира, Баҙыян, Таиба, Хисбулла, Арыҫ-

---

[1] И. Бехер. Любовь моя, поэзия. М., 1965, стр. 302—303.

[2] А. Фадеев. За тридцать лет. М., «Советский писатель», 1959, стр. 173.

лан, Бибеш), оло тарихи осорҙа үҙ урынын таба алмай алйыған, аҙашҡандар ҙа (Закир, Сәлимә һ. б.), яңы ил төҙөргә ынтылыусы, иртәгә ҡарап атлаусы аңлы йәштәр ҙә (Байрас, Емеш, Алеша, Хөрмәт, Сабир, Дәүерйә, Зиннур. Автор уларҙы «ҡояшҡа ҡарап оло юлға сыҡҡан йәштәр»[1] тип атай), донъяның яңырыуына ҡаршы сығыусы һәр төрлө ҡиәфәттәге ҡара көстәр ҙә (Шымбай капитан, Әхмәтша ҡараҡ, Сергей, Апанас, Феропонт, Алексей урядник, Һитҡабил, Хоснолхаҡ, Федька Рябой, Ҡормош бай, Собхан старшина, Әбделғәлим, Митрофан, Степан тәфтишсе, Сәхибә туташ, Сәрүәретдин мәхдүм, Емер Яшинский, Ғаббас мулла) һәм киң донъяға үҙенең тар күңел күҙе менән генә ҡарап йәшәүселәр ҙә (Гөлйыһан, Ғәйшә әбей, Моратша, Мөҡим, Хәтип) бар әле.

Яҙыусы тормошто ана шулай төрлө яҡлап, киңлеккә лә, тәрәнлеккә лә айҡап-байҡап сыға. Тикшерә, анализлай, синтезлай. Ул үҙе яҙған дәүерҙе һәр йәһәттән яҡшы өйрәнгән. Шуға ла был осраҡта М. Горькийҙең: «Ҙур роман — эпоханы нигеҙле өйрәнеүҙе талап итә... Эпоханы нигеҙле өйрәнеп ҙур роман яҙыу өсөн бик күп белергә кәрәк»[2], — тигән һүҙҙәре иҫкә төшә. Ысынлап та, З. Биишева трилогияһы үҙенең идея-эстетик әһәмиәте, йөкмәтке байлығы, форма оригиналлеге һәм әҙәби алымдар төрлөлөгө менән уҡыусы күңеленә инә. Уның идея-художество концепцияһы В. И. Лениндең: «Түбәндән, йәғни капитализм тарафынан асыҡтан-асыҡ һәм көсләү юлы менән, ике йөҙлөлөк һәм алдау юлы менән белемдән ситләтелгән хеҙмәтсәндәр массаһынан яҡтыға һәм белемгә ҡеүәтле күтәрелеү бара. Беҙ ошо күтәрелешкә ярҙамлашыуыбыҙ һәм хеҙмәт итеүсебеҙ менән ғорурланырға хаҡлыбыҙ»[3], — тигән һүҙҙәренең бөйөк хәҡиҡәткә эйә булғанлығын раҫлай.

* *
*

З. Биишева геройҙарына ижтимағи активлек, ысын мәғәнәһендә көрәшсе характере хас. Был йәһәттән — Хәбирҙән башлап, Тимербай, Байгилде, Хаммат, Иштуған, Байрастарға тиклем — әҙибәнең «Серле ҡурай» әкиәт-пьесаһынан Ирәмәл батырҙың үҙ улдарына мираҫ-васыят итеп әйткән һүҙҙәрен ҡабатларға хаҡлылар:

> Көрәш булды аллам.
> Ғәҙеллекте
> Күҙ ҡарамдай изге һаҡланым.

Халыҡ бәхетен тик көрәшеп кенә ауларға мөмкин икәнлеген аңлаған тәүге бунтарь йөрәклеләрҙең берсһе — Хәбир. Донъяны аңларға теләп, ярһыу-яныу менән салпаланып, әле тегеләй, әле былай һуғылып ҡулына ҡорал алған был яңғыҙ бунттарҙың көрәше асылда эҙләнеүсән күңелдең стихияһы ул. Әммә В. И. Лениндең шундай һүҙҙәре лә бар: стихиялы хәрәкәт «...асылда, аңлылыҡтың башланғыс формаһын тәшкил итә»[4].

Хәбирҙең көрәш формаһын ысын мәғәнәһендә аңлы революцион юл тип баһалап булмай. Уның маҡсаты әле асыҡ түгел. Әммә хәҡиҡәт эҙләүсе был кешенең ошо юлда фиҙакәрлеге уның әле мосол-

---

[1] З. Биишева. Яҡтыға. Өфө, 1970, 7-се бит.
[2] М. Горький. О литературе. М., 1955, стр. 436.
[3] В. И. Ленин. Полн. собр. соч., т. 32, стр. 105.
[4] Шунда уҡ, т. 6, стр. 29—30.

ман диндарҙары, әле христиан руханиҙәре араһында төрлө төҫкә, ҡиәфәткә инеп тормоштоң асылын үҙенсә, шул осор йәмғиәт ҡоролошон яҡлап аңлатҡан бөтә теологик философияларҙың айышына төшөп диндәрҙән дә, һәр төрлө закондарҙан да, әхлаҡ-этик ҡанундарҙан да күңеле биҙеп, урманға китеп йәшәй башлауы бер ҙә осраҡлы түгел. Ул социаль тормоштан интуитив рәүештә тәбиғәттең үҙендәге гармонияны эҙләй. Ошо урман ышығынан тороп был ярһыу яңғыҙ романтик шул осор йәмғиәтенә ҡаршы үҙенсә көрәш аса. Уның ошо тиңһеҙ көрәштә йәнен фиҙа итеүен халыҡ легендаға әйләндерә. Эргәһендә ул һуңғы һулышын алған яңғыҙ тирәк Хәбир рухын кәүҙәләндереүсе символға әйләнә. Элек төбөнә сүп түккән халыҡ был тирәкте айырыуса бер хөрмәт менән, тере батыр һыны итеп ҡарай башлай. Халыҡ һөйөүе шул рәүешле үҙенсәлекле бер һәйкәлгә әйләнә. Автор уға сюжет үҫешен тиҙләтеүсе, конфликттең социаль асылын аныҡлаусы идея-эстетик йөкмәтке һалыуға ирешә.

«Быуын-быуын донъя»,— ти автор. Әле генә халыҡтың үс символы булып, «Үсбай» ҡушаматы тағып, тирә-яҡтағы байҙарҙы дер ҡалтыратып торған Хәбир батырҙың ғүмере лә йәшен кеүек ялтлап һүнә. Уның урынына Тимербайҙар, Байгилделәр килә. Саҡ ҡына һуңырaҡ Хамматтар, Иштуғандар ҡалҡып сыға. Әҫәрҙә ана шулай халыҡтың революционлашыу тарихен генә түгел, ә был процестең тамырҙарын да асырға ҡыйыу ынтылыш яһаны. Ижтимағи-социаль аң социаль активлек тыуҙырыуын күрһәтте. Ошо нигеҙҙә романдың социаль-көнкүреш йөкмәткеһенә тарихи-революцион анализ ҡушыла. Сөнки трилогия айырым кешеләрҙең тормош юлы, уларҙың бер нисә быуыны, хатта айырым ғаиләләр яҙмышы сиктәрен үтеп сыға. Автор айырым шәхестәр яҙмышын һүрәтләү аша ҙур художестволы дөйөмләштереүҙәр яһай. Әҫәр халыҡ тарихе, эшмәкәрлеге хаҡындағы киң эпик хикәйәткә әйләнә. Ошо хикәйәттә Ҡарасәс әбей образының ҙур идея-эстетик йөкмәткеһе бар. Романдың тәүге өлөштәрендә «бер ҡасан да зарланыу, яҙмышҡа ризаһыҙлыҡ күрһәтеүҙе белмәгән» Ҡарасәс әбей тормош-көнкүреш үҙгәрә килә ҡыйыу фекерҙәр әйтә. Хатта элек гел кинәйә менән һөйләгән һүҙҙәрен ул турараҡ, кешенең кемлегенә ҡарап тормай, әйтеп ҡуя башлай. Әйтәйек, уның бер купецкә ялланған башҡорттоң хәле хаҡындағы хикәйәте Сәрбиямалдың ҡомһоҙлоғона төрттөрөү рәүешендә бирелә. Ҡарасәс әбейҙең сәсәнлеген аңлағас, уның улы Тимербайҙың донъяға революционер һәм художник күҙе менән ҡарарға өйрәнеүе бик тәбиғи тойола. Шуға ла үҙендә халыҡтың аҡылын, уй-хистәрен, иң һәйбәт йолаларын. тормош тәжрибәһен туплаған киң күңелле Ҡарасәс әбейҙең хикәйәт һәм әкиәттәре, кинәйәле һүҙҙәре, оло йөрәге авторҙың иң оригиналь образдарының береһе. Уның үлеме лә, нахаҡҡа язаға тарыған улы Тимербайҙы һаҡларға тырышып, уны үҙ кәүҙәһе менән ҡаплап туҡмалыуҙан була. Иҫ киткес фиҙакәрлек, күңел байлығы, ирҙәрсә ҙур ихтыяр көсөнә эйә булған Ҡарасәс әбей үлеме менән дә легендаға тиң. Ул Тимербай менән Хәбир араһындағы бәйләнеште кәүҙәләндереүсе бер күпер һымаҡ. Сөнки Ҡарасәс әбей роман структураһында ғәжәп тәбиғи, тормошсан һыҙыҡты барлыҡҡа килтерә. Автор тарихи конкретлеккә, йә булмаһа легенданың ысынбарлыҡ менән бәйләнеше булыуына ғына түгел, романтик күренештәр менән реалистик картиналарҙың үрелеп китеүенә, ғөмүмән, стилдең байлығына ла ана шул Хәбир — Ҡарасәс — Тимербайҙар һыҙығын күҙәтеү — анализлау аша өлгәшә. Бына шуның өсөн дә иңде дөйөм сюжеттең Ҡарасәс

әбей образына бәйләнгән яғы күтәренке хикәйәткә тартыла. Тимербай ана шул һыҙыҡтағы һуңғы быуын. Романтизм менән һуғарылыуына күрә лә Хәбир — Ҡарасәс — Тимербай һыҙығында көнкүрешкә бәйле конкрет деталдәр, картина һәм күренештәр бик аҙ. Уның ҡарауы Байгилде ғаиләһенә ҡағылышлы һыҙыҡта көнкүрешкә баҫым яһала.

Тимербай — үҙалдына фекер итеп оло көрәшкә яңыны саҡырған ауыл революционерҙәренең тәүге аңлы быуын вәкиле.

«Халыҡ бит ул йылға. Тау йылғаһы. Ул бер таша, күтәрелә башлаһа, ай-яй-яй!.. Тик берҙәм генә күтәрелһен... Яңғыҙ-ярым күтәрелеүҙән генә мәғәнә юҡ» тигән һығымтаға килә ул халыҡ һәм шәхес яҙмышы хаҡындағы оҙайлы уйланыуҙарынан һуң. Хәбирҙе батыр итеп таныһа ла, Тимербай көрәштең былдай юлын инкар итә. Сөнки яңғыҙ-ярым күтәрелеп халыҡты азат итеп тә, хәҡиҡәтте табып та булмауын аңлай ул. Халыҡҡа, киләсәккә ышанғанға күрә лә ул Хәбир һымаҡ дыуамалланмай, ипле генә үҙ эшен — халыҡты көрәшкә өндәүен дауам итә. Себер каторгаһы ла, ауылдағы аяныс тормош та уның рухын һындырмай. Автор уны легенда геройына хас һыҙаттар менән һүрәтләһә лә реаль ерлектән айырмай.

Яҙыусы Тимербай менән Байгилде образын уҡыусыға һиҙҙермәй генә сағыштырып, параллель ҡуйып һүрәтләй. Тимербай аҡыл менән нигеҙле уйлап эшләүсе, йәш-елкенсәкте бәхет өсөн көрәшкә өндәүсе итеп тасуирләһә, Байгилденең, киреһенсә, бабаһы Бейеш шикелле, яңғыҙы баш күтәреүен, аҡылға ҡарағанда, хис менән эш итеүен һыҙыҡ өҫтөнә ала. Сөнки Тимербай Хәбир яҙмышын онотмай. Ә Байгилде үҙе лә етем үҫеү өҫтөнә, бисәһе үлгәс балалары етем ҡалыуы арҡаһында күңел төшөнкөлөгөнә бирелеп тә ала. Ундағы яҙмыштан зарланыу, тәҡдиргә ышаныу мотивтәре ана шуға барып тоташа. Әҫәрҙәге Ҡотләхмәт менән Байгилденең апаһы Гөлғәйшәнең өйләнешеү тарихе һәм яҙмышы хаҡындағы һөйкәлмә эпизод та Байгилдегә бәйле. Автор Гөлғәйшәнең үҙ иренә «әсмүхә сәйлек бабай» тип ҡушамат тағыуын «аяуһыҙ яҙмышҡа әсе мыҫҡыл булып яңғырай ине» тигән һығымта яһай.

Яҙыусы Байгилде образына трилогияның тәүге өлөшөндә ҙур урын бирә. Сөнки был персонаж шул осор башҡорт ауылының социаль аңы уяна башлаған осорҙоң иң типик вәкиле. Ул әле көрәш юлын белмәй. Әммә ҡул ҡаушырып тик ятырға ла теләмәй. Байгилденең япа-яңғыҙ көйө байҙарға ҡаршы тауыш күтәреүенең сәбәбе шунда. Ул шул арҡала үҙенең тыуған ауылынан һөрөлә.

Байгилденең Иҫәнбәттән һөрөлөүенә бәйләп автор уның кисерештәрен һүрәтләй. Әммә был кисерештәр уфтаныуҙарҙан ғына тормай, ә оло йөрәкле аҡыл эйәһенең уйланыуҙары рәүешендә бирелә.

Өйөн бикләп, яңы ҡатыны Сәрбиямалдың ауылы Илсеғолға күсенгән Байгилде үҙ хәлен өйҙө ташлап китергә теләмәгән эте Ҡашҡарҙың яҙмышы менән сағыштыра: «Эттең эте лә тыуған-үҫкән ерен ташлап китергә теләмәй бит! Ә беҙгә китергә тура килә...», «Эт кеүек ҡыуып сығарып ебәрҙеләр... Эт кеүек...» Уның уйы тағы Ҡашҡарға барып терәлде.

«Эт кеүек, тим. Унан да насарыраҡ. Эт әле, исмаһам, был ҡанһыҙ законға төкөрөп тә бирмәй. Ана, Ҡашҡар, китергә теләмәгәс, торҙо ла ҡалды. Уны бер кем дә ҡыуып ебәрә алмай».

Ошо урында автор Ҡашҡарҙың тыуған өйгә тоғролоғо хаҡында йән әрнеткес һөйкәлмә хикәйә бирә. Уның мәғәнәһе Байгилденең ауыр яҙмышын тағы ла аныҡлай төшә.

Байгилденең ҡыуылыу сәбәптәрен автор уның ерһеҙлеге йәки хоҡуҡһыҙлығы менән генә аңлатмай. Байгилденең ата-бабалары уҡ бәхет эҙләгән, әммә таба алмаған. Автор быны уның шәжәрәһенә һәм легендар Бейеш батыр тоҡомонан булыуына бәйләп нигеҙләй. Хәҡиҡәт эҙләү ҙә, ғәҙелһеҙлеккә ҡаршы яңғыҙ-яры ҡаршы сығыу ҙа Байгилдегә ҡапыл-ғара ғына килгән сифат түгел.

Ул үҙ ауылын тәүге тапҡыр ун ике йәшендә етем ҡалғас, ташлап китә. Күпте күреп, күпте белеп ҡайта ул Иҫәнбәткә. Донъяның социаль асылына төшөнөп алған Байгилдегә йәшәү тағы ла ауырлаша. Шулай ҙа автор уның тәүҙәрәк байҙарға ҡаршы һүҙ әйтеп йөрөүҙән уҙмауына иғтибар итә. Байгилде хатта яҙмышҡа буйһонорға, тәҡдиргә ышанырға тырышҡандай тойола. Балаларын Сәрбиямал менән килештереп йәшәтергә тырыша. Һуғышта ла ул «үлмәйенсә ҡотолоп булмаҫ, ахыры. Ҡарышҡан шикелле, пуляһе лә килеп теймәй бит әле» тип тә ебәрә. Әммә заман ағышы, революцион идеялар Байгилденең эҙләнеүсән күңеленә шифалы йоғонто яһайҙар. Байгилде менән Никита беренсе империалистик һуғышта күҙҙәре асылып ҡайталар, аҙаҡ Оло Эйек буйында Совет власе урынлаштырыуҙа актив ҡатнашалар.

Яҙыусы ҙур ихтыяр көсөнә, бөткөһөҙ энергияға, гуманистик ҡарашҡа эйә булған, үҙ эшенең хаҡлығына икһеҙ-сикһеҙ ышанған коммунистәрҙең образдарын яратып һүрәтләй. Тимербай, Хаммат, Иштуған, Ғимранов ана шундай кешеләр. Сығышы менән мулла малайы Ғимранов аҡтар лагерендә аҙашып йөрөүсе Закир полкында йәшерен аңлатыу эше алып бара. Автор уны «аҙашып йөрөүселәргә юл күрһәтеүсе» тип атай. Ә Арыҫлан Байғужин уның хаҡында «ул беҙҙең һәйбәт остазыбыҙ булды» ти. Автор Ғимрановты төҫкә-башҡа ла матур, ыҫпай, бөхтә, физик яҡтан көслө кеше итеп тасуирлай. Күп кенә персонаждарының портретенә социаль мәғәнә һалған кеүек, Ғимрановтың тышҡы ҡиәфәтен дә әҫәрҙең идея-эстетик асылын аныҡларҙай һыҙаттар менән бирә.

Ошо йәһәттән ауыл коммунистәре-Хаммат менән Иштуғандың образдары әҫәрҙең идея-эстетик йөкмәткеһендә ҙур урын тота. Шәхси тормошонда драматик, хатта трагик хәлдәргә осрауына ҡарамаҫтан, Хаммат ил ағаһы булып формалаша. Киләсәккә ышаныу, фиҙакәрлек был шәхестең идея йөкмәткеһен билдәләй.

Иштуған, бер яҡтан, атаһы Байгилденең, икенсе яҡтан, Тимербай менән Хамматтың эшен дауам итеүсе йәшерәк быуын вәкиле итеп бирелә. Автор Тимербай, Хаммат, Ғимрановтарҙың көрәшсе булараҡ формалашыу дәүерен артыҡ төпсөмәй. Ә бына Иштуған уҡыусы күҙ алдында үҫә, егет булып, шәхес булып формалаша. Автор уның художестволы биографияһына ныҡ туҡтала. Әйтәйек, тормош, ярлы көнкүреш, тигеҙһеҙлек хаҡында уйланып, көрәшселәр хаҡындағы хикәйәттәр менән тәрбиәләнгән Иштуғандың Батыйма тутай тотҡан «постоялый дворҙа» Никита менән Тимербайҙарҙың «самодержавие», «Петербург», «Ленин», «большевиктәр», «революция» тигән һүҙҙәрен тыңлай-тыңлай «их, миңә лә шул көрәштә ҡатнашырға ине!» тип хыялланып йоҡоға китеүе һәм йәш егеттең бөтә булмышына, киләсәгенә ишара яһаусы төш күреүе авторҙың ҡыҙыҡлы художестволы табышы булып тора. Был төштөң символик йөкмәткеһе шунда, автор Иштуғанды үҙен «яҙғы оло ташҡынға ҡушылып аҡҡан бер тамсы» итеп күреүен һүрәтләй. Тап ошо төшөнән һуң Иштуған баҙар майҙанына барғанында митингегә тап була һәм батша төшкән тигән хәбәр

ииетә. Шунда уға тиңдәше — Әхәттен ағаһы Хәлим ҡарт әйтә, балалар, атайығыҙ кеүек, минең кеүек иңгелен, үҙ илендә үҙ килмешәк булып һөрөлөп, кәмһетелеп йөрөмәҫһегеҙ. Бәхетле булығыҙ һеҙ!.. Аңларға, төшөнөргә кәрәк быны, балалар! Бөтә нәмәне һөрәтен менән төшөнөргә кәрәк»,— ти.

Иштуғандың үҙ өлөшөн даулай башлауы мөхәббәтен яҡлап Айһылыу менән ҡасыуында уҡ күренә. Аҙаҡҡа табан ул үҙ хоҡуғын ғына түгел, халыҡ бәхетен яҡларҙай көрәшсе булып үҫеп етә.

Трилогияның йөҙгә яҡын персонажы араһында халыҡ яҙмышын билдәле дәрәжәлә символик сағылдырыуы менән Хисбулла образы ҙур идея-эстетик әһәмиәткә эйә. Ул бәләкәйҙән мәҙрәсәлә үҫә. Әммә бер ниндәй ҙә мәғлүмәт ала алмай. «Донъя шулай була икән» тигән ихтыярһыҙ уй менән тик йөрөй. Ул бер туғандары Хәммәткә лә, Закиргә лә оҡшамаған. Әгәр Хәммәт йәштән үк үҙ аҡылы, үҙ иҫәбе менән көн күрһә, Хисбулла һуҡыр кеше кеүек кеше әйткәнсә йәшәй. Сөнки мәҙрәсә уны иҫәңгерәткән, шул осор тормошо уның ихтыярын һындырған. Таиба әбей уның ошо хәлен үҙенсә аңлай: «Был һәйбәт ҡылығына, — тип уйлай ул, — әҙ генә зирәклек өҫтәлһә, Хисбулла мулла булмағанда ла мәзинлеккә һис шикһеҙ яраҡлы кеше буласаҡ, ғалим-ғөләмә алдында шөһрәтле урынды аласаҡ ине». Ләкин яңы тормош йоғонтоһонда Хисбулла ла үҙгәрә, уның яңы сифаттары асыла. Автор уның хаҡында «үҙе лә аңғармаҫтан үҙгәрә, яңыра, йәшәрә» бара ти. Хатта уның күңелендәге был процесте уның менән инде оҙаҡ ҡына бергә йәшәгән Бибеш тә аңлап етмәй, ваҡыт-ваҡыт һуҡранып ала.

Автор ана шулай халыҡ үҫешенең, ил төҙөлөшөнөң, йәмғиәт ҡоролошоноң шәхес формалашыуы менән бергә барыуын күрһәтә.

* *
*

«Яҡтыға» трилогияһы Бөтә союз уҡыусыһының яратып уҡыған китабына әйләнде. Шуның менән ул коммунистик идеалдарҙың, Бөйөк Октябрь социалистик революцияһының башҡорт халҡы яҙмышында, уның артабанғы үҫешендә ниндәй ҙур роль тотҡанлығын күрһәтте.

Трилогия Ғ. Хәйри, А. Таһиров, Д. Юлтый, И. Насыри, А. Карнай, Һ. Дәүләтшина кеүек күренекле романсыларҙың бөтөн бер төркөмө тыуҙырған иң һәйбәт традициялар ерлегендә шул яҙыусыларҙың тәжрибәләренә таянып тыуҙырылды. Һәм, шуныһы бигерәк мөһим, «Яҡтыға» үҙе ана шул традицияларҙы үҫтерҙе, ғәжәп ҙур тәжрибә туплаНы. Бында ике үҙенсәлекле һыҙатты билдәләргә кәрәк. Беренсенән, яҙыу процесендә әҙибә Бөтә союз әҙәбиәте тәжрибәһенә лә таянды. Был осраҡта РСФСР яҙыусыларының III съезында «Яҡтыға» трилогияһын башҡа туғандаш әҙәбиәттәрҙең иң һәйбәт өлгөләре менән тиң ҡуйып һәм шул дөйөм процесс емеше итеп ҡарауы менән М. Алексеев бик хаҡлы ине. Тимәк, әҫәр, бер яҡтан, башҡорт прозаһының һуңғы йылдарҙағы иң һәйбәт ҡаҙаныштарының береһе булараҡ милли күренеш, икенсе яҡтан, бөтә совет әҙәбиәте күҙлегенән ҡарағанда дөйөм әҙәби процесс емеше. Ошо йәһәттән ул интернациональ йөкмәткегә эйә. Шуға ла роман русса тәржемә ителгәс, уның менән ҡыҙыҡһыныу тағы ла артты. Быға яҙыусыға илтифатлы уҡыусыларҙан килгән меңдәрсә хаттар шаһит.

*Әнүр Вахитов*